Ибраһим
АБДУЛЛИН

1





# Ибраһим АБДУЛЛИН

*Әҫәрҙәр*
*ике*
*томда*

**1**
*том*

ТОЛ ҠАТЫНДАР ИЛАМАЙ
*РОМАН*

ҠОШ ЮЛЫНАН БАРАМ
*РОМАН*

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1986

# Ибрагим
# АБДУЛЛИН

## *Сочинения в двух томах*

## *том 1*

ВДОВЫ НЕ ПЛАЧУТ

*РОМАН*

ИДУ ПО МЛЕЧНОМУ ПУТИ

*РОМАН*

УФА
БАШКИРСКОЕ КНИЖНОЕ ИЗДАТЕЛЬСТВО
1986

# ҮҘЕМ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘЕМ

...Бөтә ғаләм тынған. Йондоҙҙар төнө буйы күҙ ҡыҫышып шаярғандан һуң, берәм-берәм һүнеп, юғалып бөткән. Тальянкаһы менән серләшеп, ауыл ҡыҙырып йөрөгән гармунсы ла, кемдеңдер мендәренә башын төртөп, ҡаты йоҡоға талған. Хужаларын һаҡлап төнө буйы абалап сыҡҡан алабайҙар ҙа, морондарын алғы аяҡтарына ҡуйып, тынғыһыҙ йоҡоға сумғандар...

Бөтә ғаләм тынған. Тик һалҡынса таң еле елеп китә лә, шифалы таң шишмәһе генә сылтырап аға. Ҡапыл ошо сихри тынлыҡты ярып, бер йән эйәһе «сыр-рр!» итеп ҡысҡырып ебәргән. «Ни булды икән?» — тип төнгө ҡыҙыл яулығын һалырға ла өлгөрмәгән Ҡояш башын ҡалҡытып ҡараған. Уның тәүге нурҙары тәҙрә аша шаршау эсендә ятҡан ҡатындың иманлы йөҙөнә төшкән. Ҡатын ғазап һәм шатлыҡ йәштәре аша йылмайып: «Ҡояш сыҡҡанда тыуҙың, күҙ нурым, бәхетең ҡояштай булһа ине»,— тип балаһының лепкәһенән һыйпаған.

Ул ҡатын — минең әсәйем Кәримә булған.

Әсе тауыш менән ҡысҡырып, үҙенең яҡты донъяға килеүе тураһында һөрән һалған бала — мин булғанмын.

Әсәйем хәлләнә төшкәс, атайым бер өй ҡунаҡ саҡырған. Уртала аяҡтарын бөкләп хәҙрәт ултырған. Ул, аҙан әйтеп, минең ҡолағыма ғүмер буйына йөрөтөләсәк исемемде ҡушҡан — Ибраһим.

Әсәйем ҡөрьән ситенә: «1920 йыл, 20 сентябрь таңында Ибраһим тыуҙы. Атаһы — Абдулла уғлы Әхмәтвәли, әсәһе — Абдулла ҡыҙы Кәримә», — тип шәмәхә ҡәләм менән яҙып ҡуйған.

Икенсе көндө атайым, ауыл Советына барып, мине «рәсмиләштергән».

Ана шул көндән алып мин бөйөк Россияның кескәй генә гражданинына әйләнгәнмен һәм бөтә граждандарға тейеш булған хоҡуҡтарҙы талап итә башлағанмын. Дөрөҫ, тәүҙә ул талап әсә һөтө менән йылы биләүҙән артыҡ булмаған. Мин үҙемдең ул ваҡыттарымды, «ни эшләптер», хәтерләмәйем, ә бына йығылғаным әле лә иҫемдә. Күҙемдән шишмә булып аҡҡан йәштәремде йоҙроҡтарым менән битемә буяй-буяй, әсәйем итәгенә барып йәбештем дә уның йәлләүен көттөм. Ә әсәйем: «Үҙе йығылған иламаҫ»,— тип йомшаҡ ҡына итеп һуҡты ла ишек алдына сығарып ебәрҙе.

Бәлки, әсәйемдең шул һүҙҙәре күңелемә һеңеп ҡалғандыр, мин иң ауыр минуттарҙа ла иламаҫҡа, зарланмаҫҡа, һуҡранмаҫҡа тырыштым.

Кешенең тәүге ҡайғыһы әсә күкрәгенән айырылғас башлана, тиҙәр.

...Ул саҡта миңә биш-алты йәш булғандыр. Әсәйем миңә әйтмәй «йыраҡ әбейҙәргә» ҡунаҡҡа (бәлки, йомош менәндер) китеп барған. Күҙҙәремде йыртып йоҡомдан уянғас, эштең асылына төшөнөп алдым да, Зәкәриә ағайыма, Ғәзимә апайыма һиҙҙермәҫ өсөн, ҡапҡа аҫтынан арҡамды һыҙырып урамға сыҡтым һәм «йыраҡ әбейҙәремә»

һыпырттым. Алпай ауылын еңел үттем. Юлы ла таныш (атайым, һирәк-мирәк булһа ла, шаршамбы көндәрҙе мине баҙарга эйәртеп алып бара торгайны), ара ла алыҫ түгел — өс кенә саҡрым. Ә бына Алпайҙан һуң юлдар, ус төбөндәге һырҙар кеүек, төрлө яҡҡа тарала. «Шул юлдарҙың ҡайһыһы «йыраҡ әбейҙәргә» алып бара икән?..» Ни булһа ла булыр тип, бер юлдан киттем. Барам, барам, «йыраҡ әбейҙәр» ҙә юҡ, юл да борғоланды, борғоланды ла бесән кәбәне янына килеп туҡталды. Ҡорһаҡ асты. Етмәһә, күкте ҡара болот баҫты. Илағы килә. Ул арала ҡойоп ямғыр яуа башланы. Күктән генә түгел, күҙҙәремдән дә ямғыр ҡойолорға тотондо. Бесән кәбәнен соҡоном да, яҙмышыма баш эйеп, бөрөшөп ултырҙым...

Сәйәхәт менән мауығыу мине, етенсене тамамлағас, геологоразведка техникумына илтеп кертте, аҙаҡ Европаның, Азияның күп кенә илдәрендә йөрөттө.

Бала саҡтағы кеүек, мин әле һаман да күп йөрөргә, күпте күрергә тырышам. Был, минеңсә, иң күңелле һәм файҙалы эштәрҙең береһелер. Юҡҡа ғына халыҡ «күп йәшәгән ни белгән, күпте күргән шул белгән» тимәй бит.

...Мин тыуған яҡ — Башҡортостандың көнбайышы. Бында инде Урал тауҙары аҡрынлап һөҙәк һырттарға, һиҙелер-һиҙелмәҫлек ҡалҡыулыҡтарға әйләнә. Беҙҙең ауылдан көньяҡҡа ҡарай биш-алты саҡрым китһәң, Татарстан сәхрәләре йәйрәп ята. Ә ике туғандаш республиканы бик ипле холоҡло, көмөш һыулы Ыҡ йылғаһы айырып тора. Мин белә-белгәндән бирле йылғаның ике ярында йәшәүсе халыҡтарҙың бәйләнеше, дуҫлығы шул Ыҡ һымаҡ саф һәм матур булды. Ҡыҙ бирештеләр, бер-береһенә ҡунаҡҡа барыштылар, ярҙың бер яғында иген насар уңһа, йылға аша сығып, күршеләренә ярҙам ҡулы һуҙыштылар. Хатта яҙ көнө була торған «Йыуа йыйыны» ла бер йылды — Ыҡтың уң ярындағы Түбән Зайыт ауылы болонлогонда, икенсе йылды һул яғында үткәрелә башланы.

Ауылдан төньяҡҡа бер-ике саҡрым китһәң, уң ярына ҡарап мачталарына ярарлыҡ ҡарағай теҙелгән, һул ярын муйыл, ҡарағат, балан ағастары менән биҙәгән бик әҙәпле, саф һыулы Сөн йылғаһы аға.

Минең ауылым ошо ике даръя араһында ултыра. Ауылды урталайға ярып үткән исемһеҙ йылға Сөнгә һыуын ҡоя. Шул инеште тирәләй нахаҡҡа «файҙаһыҙ ағас» исемен алған ерек ағастары үҫә. Ауылым да Ерекле тип атала. Тик үҫә төшкәс кенә, мин ерек ағасының өсәр йөҙ йыл йәшәүен, тупраҡты ашлаусы, һауаны таҙартыусы файҙалы ағас икәнлеген аңланым. Ерек ағасы тәртәгә ярамаһа ла, унан бик матур мебель эшләп була икән... Әммә хәҙер ул ереклектән ауылымдың исеме генә тороп ҡалған инде.

Беҙҙең урамдың арғы башы «Ҡуян осо» тип атала. Урам да бөтә, аҡ күлдәк кейгән, йәшел шәл ябынған ҡайындар ҙа башлана. Ҡар иреп бөтөү менән, беҙ шул ҡояшлы ҡайынлыҡҡа китәбеҙ. Һынған салғынан яһалған бәке осо менән тишеп, һалҡын, баллы ҡайын һыуы эсәбеҙ. Ах, татлы, тәмле ине ул ҡайын һыуы! Кәүсәр һыуы бер яҡта торһон. Бала саҡта эскән ҡайын һыуының тәме, эсә һөтө кеүек, ғүмергә онотолмай икән. Инде бик күп йылдар үткәс, мин «Ҡайындар япраҡ ярғанда» тигән хикәйә яҙҙым, ә «Айһылыуҙың айлы кистәре» тигән драмама йыр индерҙем:

*Бөгөн сыҡтым ҡайынлыҡҡа*
*Ҡайын һыуы эсергә,*
*Ҡайын һыуҙары эсергә,*
*Серҙәремде сисергә.*
*Аҡ ҡайын,*
*Суҡ ҡайын,*

*Һинһеҙ йәшәү бик ҡыйын.*
*Бик ҡыйын...*

Ө инде сәсеүҙәр бөткәс (бесәнгә төшкәнсе), тирә-яҡ ауылдарҙың бөтөрө ошо ҡайынлыҡҡа йыйыла. Әйлән-бәйлән уйнайҙар, йырлайҙар, бейейҙәр һәм танышалар. Берәүҙәр яңы йәрҙәр таба, икенселәр йорҙоренән ҡолаҡ ҡаға. Ошо нигеҙҙә йоҙроҡтар худҡа китә, күҙ йәше генә түгел, ҡан да тамғылай, әммә беҙҙең ише малай-шалай өсөн — диңгеҙ тубыҡтан. Беҙ, тәрән соҡорға төшөп, ҡая күләгәһендә иремәй ҡалған ҡарҙы, май шикелле йомарлап, өҫкә алып менәбеҙ, тел менән генә ялап, ҙурҙарҙы ҡыҙыҡтырабыҙ, яй килһә, пәрәниккәме, берәй ус конбағышҡамы алмашабыҙ.

Әле лә, инде сәстәремә сал кергәс, ауылға ҡайтҡан һайын, мин шул «ҡайынлыҡҡа» барып киләм. Ә ни өсөн мин ҡайынлыҡ һүҙен ҡуш тырнаҡ эсенә алам? Сөнки гүзәл ҡайынлыҡты хәтерләтеүсе бер генә ҡайын да ҡалмаған унда — киҫеп, ығып бөтөргәндәр. Күҙҙәремдә йомһам, мин ҡайынлыҡҡа йыйылған йәштәрҙең һағышлы, матур моңдарын, гармун тауышын ишетәм, тел осомда бала саҡта эскән ҡайын һыуының тәмен тоям, ә күҙемде асһам, шыр ялан күрәм. Ауылым йылдан-йыл матурая: дүртәр, бишәр бүлмәле яҡты йорттар һалына; түбәләре ҡалай, таҡта, шифер менән ябыла; электр, радио, телевизор, газ... Хәҙер водопровод та бар инде, ә бына ауылдаштарым, ни эшләптер, ағастарға ҡарата миһырбанһыҙҙар. Йәл, бының өсөн балаларыбыҙ, уларҙың балалары рәхмәт әйтмәҫ беҙгә...

...Беҙ алты малай үҫтек. Иҫке сабатаға ҡом тейәп, таяҡты ат итеп атланып, сабышып йөрөгәндән алып, етенсене тамамлап, төрлөбөҙ төрлө яҡҡа таралғансы дуҫ булдыҡ. Йәй көндәрендә ат һаҡларға ҡуна барғас, ҡурпыға салҡан ятып, күктәге йондоҙҙарға ҡарап, хыял диңгеҙендә йөҙҙөк. Ҡаҙ Юлдарын буйлап, аҡыл етмәҫлек алыҫ сәйәхәттәргә сыҡтыҡ, һаҡалдарыбыҙ салланғансы дуҫ булырға һүҙ ҡуйыштыҡ.

Уй-хыялдарыбыҙ матур, теләктәребеҙ изге ине. Ләкин уларҙың ботәһен дә һуғыш селпәрәмә итте. Юҡ, мин, һуғыш булмаған булһа, алтыбыҙ ҙа ошо көнгә саҡлы ҡулға-ҡул тотошоп, Ереклелә йәшәгән булыр инек, тип әйтергә йыйынмайым. Беҙҙең холоҡтарыбыҙ, маҡсаттарыбыҙ алтыбыҙҙың алты төрлө ине. Ә шулай ҙа, бәлки, һирәк-мирәк булһа ла, һандуғаслы яҙҙарҙамы, сәтләүекле көҙҙәрҙәме, бергә йыйылышып, балалыҡты, йәшлекте иҫкә алып, ҡайынлыҡҡа сығыр инек...

Һуғыш беҙҙең быуынға ҡарата бигерәк тә аяуһыҙ булды. Алты малайҙан беҙ икәү генә тороп ҡалдыҡ: Фәтхелбаян һәм мин. Ауылға ҡайтҡас, ҡайынлыҡҡа барып, бала саҡта ҡаяға яҙылған исемдәребеҙҙе эҙләйем. Заҡуан, Нурыйәхмәт, Нурлығаян, Нурулла... Исемдәре генә ташта ҡалған уларҙың. Ә ҡәберҙәре ҡайҙа?.. Ә уй-хыялдары? Бәлки, Ҡаҙ Юлдары һуғышта үлгән һалдаттарҙың яҡты иҫтәлеге булып яналыр...

...Мин ҡояш сыҡҡанда тыуғанмын. Ләкин ғүмер күгемдә ҡара болоттар, йәшенле ямғырҙар ҙа күп булды.

...Иртә, бик иртә күрҙем мин ас яңаҡлы, һалҡын күҙле Нужа бабайҙы. Иртә, бик иртә һике ситенә ултырып, сабата яһай башланым мин. Уҡырға киткәнсе бер-ике парҙы ҡайтарам да, ҡайтҡас, шуларҙы ҡатлап сығам. Эргәлә китап. Икеһенә лә өлгөрөргә кәрәк: сабата ла үрелһен, дәрес тә әҙерләнһен. Ә сана шыуғым, ҡар бәрешеп уйнағым килмәгән тип уйлайһығыҙмы?..

Иртә, бик иртә бөктөң һин әле нығырға ла өлгөрмәгән минең арҡа һөйәгемде, Нужа бабай. Әммә... арҡам бөгөлһә лә, рухым бөгөлмәне! Йәшәү ни саҡлы ауыр булмаһын, беҙ ул ауырлыҡтар аша,

яҙғы ташҡын ваҡытында боҙҙан боҙға һикереп, арғы ярға сыҡҡан шикелле, алға ашҡындыҡ.

Ул йылдарҙы иҫкә төшөрөп, «Күңелдәргә пәрҙә ҡормағыҙ» пьесаһында Әмәт тигән персонажымдан шундай йыр йырлаттым:

*Саратский гармундарҙы*
*Ҡолас киреп уйнаныҡ.*
*Донъя ауыр тип торманыҡ,*
*Уйнаныҡ та йырланыҡ...*

Мин уҡырға кергән йылдарҙа ауылда әле китапхана ла юҡ ине. Беҙ Заҡуан дуҫым менән элекке мәҙрәсә, хәҙерге мәктәп сарҙағына «налет» яһаныҡ. Егерме туғыҙынсы йылды ғәрәп графигын латин хәрефтәре алмаштырҙы. Ә ғәрәп менән яҙылған дәреслектәр, әҙәби китаптар мәктәп сарҙағына мендереп ташланған икән. Беҙ, нисектер, быны белеп ҡалдыҡ та, ҡараңғы төшкәс, мәктәп сарҙағын «таҙартырға» тотондоҡ. Ун-ун бер йәштә инде минең кескәй генә китапханам бар ине. Мин уларҙы көнө-төнө һыу кеүек эстем. Етмәһә, әсәйем Ғабдулла Туҡай, Мәжит Ғафури шиғырҙарына ғашиҡ булған кеше ине. «Таһир-Зөһрә», «Йософ-Зөләйха» китаптарын да ихлас уҡый, Таһир-Зөһрәнең бәхетһеҙ, фажиғәле яҙмыштарын йәлләп, ҡайнар йәштәрен түгә торғайны.

Мәктәп сарҙағынан ташылып уҡылған китаптар үҙҙәренән-үҙҙәре мине үҙ донъяларына тарттылар һәм йыш ҡына: «Әсәй, мин дә шағир булам»,— ти торғайным. Әсәйем башымдан һыйпай ҙа: « Кәрәкмәй, улым, шағирҙар оҙаҡ йәшәмәй ул, ана, Ғабдулла Туҡай егерме ете йәшендә вафат булған», — тип минең ғәйрәтемде сигерергә тырышты.

Юҡ, минең тәүге «әҙәби әҫәрем» шиғыр ҙа, хикәйә лә булманы. Ул «Пьеса» ине. Ни өсөн пьеса, хәҙер асыҡ ҡына әйтә алмайым. Бәлки, коллективлашыу йылдарынан һуң драмтүңәрәктәрҙең йәнләнеп китеүе, үҙешмәкәр артистарҙың «Зәңгәр шәл», «Ғәлиәбаныу» кеүек пьесаларҙы ҡуйып, мине тетрәтеүенәндер... Бәлки, ауылға тәүге «томанлы картина» — кино килеп, бығаса ишетмәгән-күрмәгән донъяны асыуынандыр... Нисек кенә булмаһын, мин ике-өс битле пьеса яҙам да, уны Заҡуандарҙың мунсаһында ҡуябыҙ.

Оҙаҡламай аҡ мунсанан мәктәп сәхнәһенә, унан клуб сәхнәһенә күсәбеҙ. Ә алтынсы класта уҡығанда инде, шаҡтай ҙур, өс пәрҙәле пьеса яҙҙым. Хәтерләйем, ул үкһеҙ етемдәр тормошонан ине һәм ҡасандыр уҡылғанмы, күрелгәнме пьеса тәьҫирендә яҙылғайны. Беҙ ул пьесаны үҙебеҙҙең ауылда, Алпайҙа, Бурсыҡта, Күгәрсендә, Ҡыртүтәлдә ҡуйҙыҡ.

Алтынсы класта уҡ Ҡазанға китергә, Туҡай, Таҡташ йәшәгән ҡалаға барып, яҙыусы булырға хыялланған малай, етенсене тамамлағас, планын ҡапыл үҙгәртте. Уны алыҫ тауҙар, төнгө усаҡтар, палаткалар, геолог һуҡмаҡтары үҙенә саҡыра — ул, арҡаһына арыш сохариы менән тулған тоҡ аҫып, тәпәй-туратын Туймазыға йүнәлтә. Ҡапҡа бағанаһына һөйәлгән әсәйем: «Улым, тамсылап йыйған аҡсабыҙҙы бирҙек. Бер тинен дә әрәм итмә. Нисек тә уҡырға керергә тырыш. Инә алмаһаң, берәй эшкә урынлашырһың. Урап ҡайтырлыҡ аҡса әҙерләй алманыҡ инде...» — тип, яулыҡ осон күҙ төптәренә тейҙереп, оҙатып ҡалды.

Был йылдар башҡорт культураһының, талпынып осҡан ҡош кеүек, алға уҡталған, үҫкән сағы ине. Башҡортостанда тиҫтәгә яҡын колхоз-совхоз театрҙары эшләй; бик күп газеталар сыға; әҙәбиәткә, сәнғәткә, йылы яҡтан килгән ҡарлуғастар шикелле, яңы, йәш көстәр ағыла.

Тап ошо йылдарҙы бейек тау башында ултырған таш ҡалаға төрлө яҡтарҙан, төрлө юлдарҙан йәйәү һәм поезд менән, пароходта һәм ат менән Мостай Кәрим һәм Сабир Кинйәкәй, Назар Нәжми, Яҡуп Ҡолмой, Рәис Ғабдрахманов һәм Нәжиб Асанбаев, Әхмәт Шакири һәм Ғәли Ибраһимов, Кәтибә Кинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова һәм буласаҡ башҡа әҙиптәр килде. Оҙаҡламай пионер, комсомол газеталарында яңы исемдәр күренде. Радионан әле нығып етмәгән, яңы көр тауыштар ишетелде.

Мин ул йылдарҙа ваҡ-ваҡ хикәйәләр яҙғылаштыра инем. Шуларҙың бер нисәһе газеталарҙа баҫылды, «Октябрь» журналында сыҡты, «Тәүге йыр», «Икенсе йыр» тигән альманахтарға инде. Ләкин күңел театрға тартылды. Мин, барлы-юҡлы стипендия аҡсаһын янға ҡалдырып, ливер колбаса һәм сейә кеҫәле иҫәбенә экономия яһап, һәр яңы спектаклде ҡарарға ашҡынам. Бер һум етмеш биш тингә билет һатып алып, галеркаға менеп ҡунаҡлайһың да ике-өс сәғәткә сихри донъяға инеп юғалаһың.

Был ваҡыттан һуң илле йылға яҡын ваҡыт үтте. Тормошта, һуғышта булған күп кенә ҡыҙыҡлы һәм фажиғәле эпизодтар онотолдо. Ә бына театрҙа күрелгән тормош әле һаман да күңелдә йәшәй. Армиялағы, фронттағы ҡайһы бер командирҙарҙың, дуҫтарҙың һындары хәтерҙән сыҡты, томанға әйләнеп юғалды, ә бына театрҙа күргән артистар әле һаман да йөрәгем түрендә балҡып тора.

...Яҙ. Һуңғы спектакль. Театр йәй оҙонона гастролгә китәсәк. Сезонды ябыу уңайы менән, Башҡорт академия драма театры директоры, инде күренекле драматургка әйләнгән Сәғит Мифтаховҡа һүҙ бирелә. Бына ул ашығып сәхнәгә сыға. Тараҡҡа һәм косметикаға буйһонмаусы сәсен артҡа һыйпап ҡуя, ә терпе сәс, үс иткәндәй, нығыраҡ тырпая, бер яҡҡа ла ятырға теләмәй — хас үҙ һүҙле хужаһы инде!

Сәғит Мифтахов оҙаҡ һөйләмәй. Ул сезондың нисек үтеүе тураһында бер нисә һүҙ әйтә, газетала сыҡҡан рецензияларҙың авторҙары менән бәхәсләшә, театр сәнғәтен тар аңлаусыларҙы тәнҡитләй, алдағы сезонда пьесаларыбыҙ ҡыҙыҡлыраҡ, тәрәнерәк булыр, быйғаса күтәрелмәгән сиҙәмде күтәрерҙәр, асылмаған горизонттарҙы асырҙар, тип өмөт бағлай ҙа залда ултырыусыларға мөрәжәғәт итә.

— Һеҙ, иптәштәр, артабан тағы ла активыраҡ тамашасы булырһығыҙ, беҙ бит һеҙҙең өсөн янабыҙ, көйәбеҙ,— тип һүҙен тамамлай.

Ошо урында С. Мифтахов хаҡында бер генә һүҙ әйтеп үтмәк булам. Үткән дәүер эсендә миңә уттар-һыуҙар кисергә, донъяның сөсөһөн тамсылап, асыһын ҡуш услап эсергә тура килде, үҙебеҙҙең илебеҙҙең генә түгел, Ер шарының байтаҡ мөйөштәрен байҡап сығылды. Күп, бик күп яҡшы кешеләр менән танышырға, аралашырға, дуҫлашырға насип булды, ләкин, һис арттырмай әйтәм, Сәғит Мифтахов кеүек һәр ваҡыт янып, йылыһын һәм яҡтыһын кешеләргә йәлләмәй һәм кире ҡайтарып алырға иҫәп тотмай биреүсе ысын Кеше һәм Коммунист, Көрәшсе һәм Яҙыусыны һирәк күрергә тура килде. Кешеләрҙе маяҡ иткәндә, өлгө итеп ҡуйғанда, эталонға әйләндергәндә, минең беренсе кандидатурам Коммунист һәм Һалдат Сәғит Мифтахов булыр ине...

Оҙаҡламай мине Белорет районына, Юғары Әүжән алтын прискыһына, диплом практикаһына ебәрҙеләр. Иҫ киткес матур урындар, «Зимагорҙар» пьесаһын хәтерләтеүсе старателдәр. Дөрөҫ, хәҙерге алтын сығарыусыларҙың эш һәм тормош шарттары ла элеккесе түгел, әммә өлкән быуын старателдәрҙә «зимаклык» ҡылыҡтары сағылып киткеләй ине әле.

Ошо 1938 йылдың йәйендә мин дипломлыҡ материал туплап ҡына ҡалманым. Күптән уйлап килгән хыялымды ла тормошҡа ашыр-

ғым — «Аҡъяулыҡ» тигән тәүге пьесамды яҙҙым. Пьесаның темаһы бик етди һәм яуаплы ине. Башҡорт ауылы. Беренсе донъя һуғышы. Революция. Өҫәремде һабаҡташым — практикалашым Рифҡәт Сөләймановҡа уҡып сыҡтым. Ул өндәшмәй оҙаҡ ҡына тора ла һикереп тора: «Давай пьесаңды Офого конкурсҡа ебәрәбеҙ»,— ти. Мин аптырайым: «Ниндәй конкурсҡа?» «Белмәйһеңме ни? Күп шаршаулы пьесаларға конкурс иғлан ителгән бит».

Конкурс тураһында яҙылған газетаны эҙләп табабыҙ. Конкурс шарттары менән танышабыҙ һәм исем, адресты айырым бер конвертҡа һалып, пьесаны Офого оҙатабыҙ.

Шунан тыш «Алтын сығарыусылар» тигән ҙур очерк яҙып, «Коммуна» (Хәҙерге «Ҡыҙыл таң») газетаһына ебәрҙем. Ана шул замандан бирле мин «Ҡыҙыл таң» менән ижади элемтәмде өҙмәйем, яңы өҫәрҙәремде, публицистик һәм әҙәби-тәнҡит мәҡәләләремде йыш ҡына шунда баҫтырып киләм.

Практиканың срогы бөткәндән һуң, «хәлләнер өсөн» каникул иҫәбенә йәнә бер ай эшләйбеҙ. Аҡсаны бонаға алмаштырабыҙ, «алтын магазинынан» һатып алып, өҫ-башты бөтәйтеп ҡайтабыҙ, Хәҙер инде Офо урамынан йөрөргә лә, ҡыҙҙар янына барырға ла, быйыл беренсе курсҡа ингән «салагаларға» күренергә лә оялырлыҡ түгел.

Техникум ятағының тышында үҙгәреш булмаһа ла, эсе ялт итеп тора, иҙән — һары гәрәбә, түшәм — яңы яуған ҡар кеүек, бөтә нәмә, хатта беҙ кеҫәл өсөн йылы һыу ала торған титан да беҙҙе сәләмләп торған шикелле. Ана шул йылдарҙан бирле мин яңы буялған бүлмәгә, йортҡа инһәм, әллә ни эшләп китәм — ҡапыл студент йылдарым, каникулдан һуң техникумға уҡырға килгән көндәрем иҫемә келт итеп төшә лә йөрәгемде ярһыта.

Дөрөҫөн әйткәндә, донъя мәшәҡәте менән йөрөп, мин конкурсҡа ебәрелгән пьесамдың яҙмышы менән ҡыҙыҡһынманым да. Барып, һорашып йөрөргә ҡыйыулыҡ та етмәй. Рәхмәт һабаҡташым Рифҡәт Сөләймәновҡа, ул көндәрҙең береһендә: «Ибраһим, ниңә пьесаң тураһында һорашып белмәйһең? Һин бит уға аҙ көс һалманың»,— тип әйтә һалды.

Билдәле булыуынса, ул саҡта Башҡорт академия драма, Опера һәм балет театрҙары бер бинала, хәҙерге опера театрында ине. Мин, бер иптәштең тәҡдиме буйынса, театрға яҙыусы Баязит Бикбайҙы эҙләп киттем. Баязит Бикбай ул ваҡытта инде күренекле әҙип булып танылғайны. Уның «Ҡарлуғас» тигән драмаһы шаулап бара. «Ҡарлуғас» уға драматургия яҙын килтерҙе...

Театр вестибюлендә мине шат йылмайып бәләкәй генә кәүҙәле кеше ҡаршы алды.

— Һин Ибраһим Абдуллин булаһыңмы ни? Ҡайһылай йәш икәнһең! Мин һине бит...— Ул әйтәһен әйтеп бөтөрмәне, тел осо менән ирендәрен сылатып алды.— Ҡотлайым, Ибраһим! Пьесаңды билдәләп үтергә булдыҡ. Жюри һиңә дәртләндереү бүләге бирҙе.

—Бүләк?...

Башҡа һүҙ әйтә алманым. Шатлыҡ, тулҡынланыу бер юлы боғаҙыма килеп тығылды ла тын юлымды быуҙы. Хәҙер, күп йылдар үткәндән һуң, уйланам. Йыш ҡына тәүге аҙым — алыҫ сәйәхәтте, ауыр походты хәл итеүсе була, тиҙәр. Был һүҙҙәрҙе догма итеп алғанда, әйе, тәүге аҙым кешенең ҡайһылыр бер үҫеш мәлендә трамплин тип әйтәйемме, стимулмы булып торорға мөмкин. Ләкин тәүге аҙымдарҙы бынамын тигән итеп яһап та, абынған, һөрөнгән кешеләр ҙә аҙ түгел бит. Шул уҡ вакытта тәүге аҙымдары уңышһыҙ булып та, тора-бара оло юлға сыҡҡандар ҙа бар. Ләкин, нисек кенә булмаһын, догмамы был, түгелме, тәүге аҙымдың ҡыйыу, үҙ аллы булыуы хәйерлерәк, шул саҡта ғына ул кешегә ышаныс, тәүәккәллек,

дөрт бирә. Мин «Алъяулыҡ» тигән пьесамдың ана шундай әҫәр булыуы менән шат һәм бәхетлемен. Ул миңә ҡанат ҡуйҙы.

Театр вестибюлендә баҫып торған Баязит Бикбайҙы онотоп китә яҙҙым бит. Минең уны ситтән генә күргәнем булһа ла, ныҡлап танышҡаным юҡ ине. Ул бик яй ғына, ашыҡмай ғына, һәр һүҙен үлсәп һөйләшеүсе кеше икән.

— Театр ошондайыраҡ темаға татар драматургының әҫәрен ҡуймаҡсы булғайны, ләкин мин, завлит булараҡ, һинең пьесаңды тәҡдим иттем,— тине ул иплэп кенә, ауыҙын асыр-асмаҫ ҡына һөйләп. —Әйҙә үҙеңде режиссер Булат Имашев менән таныштырам. Әҫәр уға ла оҡшаған,— тип Бикбай мине ҡултыҡлап театрға алып кереп китте.

Шул көндә беҙ икәүләп Сәғит Мифтахов квартираһына барҙыҡ. Темпераментлы, теремек Мифтахов мине күреү менән һикереп торҙо.

—Һы! Да... Ә мин һине бер егерме биш-утыҙ йәшлек кешелер тип уйлағайным. Ә һин... һиңә нисә йәш һуң?

Мин ҡыҙарҙым, йәш булыуыма оялдым.

— Ун һигеҙ.

— Молодец!— тине ул, ҡулбашыма һуғып.— Әҫәрең оҡшаны! Но...— ул ишекле-түрле урап алды.— Но әле эше до черта.

Еңел булманы. Мифтахов пьесамды ҡырҡмаһа ҡырҡ тапҡыр төҙәттерҙе. Пьеса яҙыу ғына булһа ине! Бер яҡтан диплом буйынса етәксем инженер Носов ҡыҫа, икенсе яҡтан — Мифтахов. Революция йылдарын мин китаптарҙан уҡып та кинокартиналарҙан ҡарап ҡына беләм. Шуға күрә ҡайһы бер эпизодтарҙа, диалогтарҙа ул заманға хас булмаған һүҙҙәр китә. Мифтахов аҙ ғына фальшты ла яратмай. Мин, их, элегерәк тыумағанмын шул, тип үкенеп ҡуйғыланым. Ә Мифтахов, их, бер ун биш-егерме йылға һуңыраҡ тыумағанмын, тип көлә.

Пьеса яҙылып, сәнғәт идаралығына тапшырылды. Диплом яҡланып, техник-геолог исеме алынды. 1939 йылды Ҡыҙыл Армияға китеп барҙым. Фәҡәт фронт юлдарын тапап ҡайтҡас ҡына, «Алъяулыҡ»тың Ҡыйғы колхоз-совхоз театрында ҡуйылыуын белдем. Уны ҡуйыусы йәш режиссер Кәшфи Ғәҙелшин булған.

Икенсе пьесамды армияла, Тбилисиҙа, яҙҙым. Ул «Алыҫ ил сигендә» тип атала ине.

Пьесаның исеме үк әйтеп тора — мине пограничниктар ҡыҙыҡһындырған. Әҫәрҙе уҡыу өсөн мин Тбилисиҙән Өфөгә кайттым. С. Мифтахов, Б. Бикбай мине ҡолас йәйеп ҡаршы алдылар, пьесамды артабан камиллаштырыу буйынса кәңәштәр бирҙеләр. Мин, ҡанатланып, Тбилисиға ҡабат киттем. Пьесаны яңынан эшләгәс, Өфөгә ебәрҙем, әммә... Юҡ, юҡ, ошо шатлыҡлы, матур юлдарҙы дәһшәтле һүҙ менән бүлмәйем әле. Булмаһа, Тбилисиҙа хеҙмәт итеүем тураһында аҙыраҡ һөйләйем.

Әгәр ҡышҡы көндәрҙә һалҡынлыҡ илле градусҡа еткән Себерҙә хеҙмәт итеү ауыр булһа, йәйен эҫелек илле градусҡа еткән Тбилисиҙа һалдат лямкаһын аҫып йөрөү ғазап ине. Эленән-эле гимнастерканы йыуып торабыҙ, әммә ике-өс көн дә үтмәй, ул тағы тир тоҙона батып ағара, клеенкаға әйләнә. Эҫе... Хатта төн дә еләҫлек килтермәй. Ә походтар шундай ауыр була...

Ниһайәт, еләҫ көҙ етә һәм ҡышҡы квартираға ҡайтабыҙ. Ә Тбилисиҙа ҡыштар ҡарһыҙ, йылы була. Өҫтәүенә, көтөлмәгән шатлыҡ! Тбилиси гарнизонында минең яҡташым-ҡәләмдәшем, шағир Хәниф Кәримдең ҡустыһы Заһир Кәримов хеҙмәт итә икән. Ул — ҡағыҙ кеүек аҡ йөҙлө, бик баҫалҡы тауышлы, ипле холоҡло егет.

Ял көндәрендә осрашып, Тбилисиҙың боролмалы боронғо тар урамдарында буталып йөрөйбөҙ, Руставели, Плеханов исемендәге киң, йәшел проспекттарының асфальтын тапайбыҙ. Ижади пландарыбыҙ, хыялдарыбыҙ менән уртаҡлашабыҙ. Тәьҫиргә тиҙ бирелеүсән Зәһир мине беләгемдән эләктереп ала ла шаулы, лыбырлыҡ Кура йылғаһы ярына һөйрәй һәм, гранит парапетҡа таянып, хисләнеп шиғыр уҡырға тотона:

*Немного лет тому назад*
*Там, где сливаяся шумят,*
*Обнявшись, будто две сестры,*
*Струи Арагвы и Куры...*

Аңға өнө юлдарҙы башҡортса уҡый. Ул Лермонтовтың «Мцыри» поэмаһын башҡортсаға тәржемә итә ине.

— Ибраһим, о беҙ бит һинең менән бик бәхетле,— ти ул, Кураһан күҙен алмай. — Пушкин, Лермонтов, Грибоедов йөрөгән һуҡмаҡтарҙан йөрөйбөҙ. Армиянан ҡайтҡас, Илья Чавчавадзены башҡортсаға өйләндерәм әле. Бик яратам мин уның романтик поэзияһын, — ти Зәһир, ҡулын минең арҡаға ҡуйып.

Ләкин... Их, ләкиндәр бик күп булды шул беҙҙең ғүмерҙә... Зәһирга «Мцыри» ҙы тәржемә итергә һәм башҡа бик күп пландарын да гәмәлгә ашырырға тура килмәне. Аяуһыҙ һуғыш уның фәҡәт ижад менән янған йәш, саф йөрәген тибеүҙән туҡтатты.

Бер палаткала биш кеше йәшәйбеҙ: художник Ваня Рябаненько, Ырымбурҙан килгән уҡытыусы Виктор Червяков, Пенза «философы» Володя Глухов, Әлмәт татары Сарыйым Сабиров һәм мин. Төндәрен палатка салғыйҙарын күтәрәбеҙ ҙә трусикта ғына аунап ятабыҙ. Көнө буйы йүгереп эттәй арыһаҡ та, ятыу менән йоҡлап китмәйбеҙ. Һуң, көҙгә срок тула бит.

Берәүебеҙ Художество академияһы хаҡында хыяллана, икенсебеҙ Мәскәү университетына талпына, өсөнсөбөҙ «Алыҫ ил сиге» н театрҙа ҡуйҙырыу менән яна...

—Ә шулай ҙа, хлопцы,— ти Ваня Рябаненько, һағышланып,— беҙгә Адольф менән боғаҙлашырға тура киләсәк.

Китә бәхәс, китә һүҙ көрәштереү. Бөтәбеҙ ҙә тороп ултырабыҙ.

—Ә договор?

— Төкөрҙө ул һинең договорыңа! Күрмәйһеңме ни, әленән-әле Көнбайышҡа эшелон-эшелон ҡыҙылармеецтар ебәреп торабыҙ.

— Муйынын һындырғыһы килһә, башлаһын.

— Әлбиттә. Маршал Ворошилов нимә тине? «Бер ҡарыш та кеше ере кәрәкмәй, һәм бер табан да үҙебеҙҙең ерҙе бирәсәк түгелбеҙ».

— Гитлер көсәйҙе шул хәҙер.

— Ә беҙ көсһөҙмө ни! Беҙҙең самолеттарыбыҙ — донъяла иң бейеккә, иң алыҫҡа осоусы иң йылғыр самолеттар!

Тынысланып йоҡоға талабыҙ һәм тынғыһыҙ төштәр күрәбеҙ.

...Ул көндө ял ине. Подъем бер сәғәткә һуңыраҡ булды. Эҫе, томра иртә ине. Ләкин кәйеф шәп. «Катюша»ны йырлап ашханаға барабыҙ, тамаҡ туйғас, тағы ла дәртлерәк йырлап, роталарға ҡайтабыҙ. Инде үҙ донъяңа бирелеп, хаттар яҙырға ғына ултырғас, сигналсы тревога уйнай башлай. Кемдер: «Ял көндәрендә лә тынғылыҡ бирмәйҙәр», — тип һуҡрана, кемдер ашығып гимнастеркаһын кейә, ә художник Рябаненько:

— Иптәштәр, был һуғыш тревогаһы,— тип йөрәккә ут һала.

Ике-өс минут эсендә бөтә полк плацта була. Ауыр тынлыҡ. Ҡом һибелгән плац юлына полк командиры—граждандар һуғышы геройы майор Щадин сыға. Уның тауышы киҫкен, һәр һүҙе ҡойолған суйын һымаҡ сыңҡ-сыңҡ итеп тора.

— Иптәштәр, бөгөн таң менән Гитлер Германияһы, тыныслыҡ договорын мәкерле боҙоп, беҙгә ҡаршы һуғыш асты...

Ҡапыл асыҡ зәңгәр Грузия күге ҡара һөрөм менән ҡапланды, ҡояш тотолдо, ер тирбәлеп китте. Һуғыш! Һуғыш! Һуғыш!..

Полк, көндө төнгә тоташтырып, фронтҡа әҙерләнә башланы. Беҙҙең тау-уҡсы дивизияһы тулыһынса ҡоралланып, тейешле амуницияны алғас, Мәскәүҙән яңы приказ килеп төштө — Бакуҙы һәм коньяҡ сиктәрҙе хәүефһеҙләндереү өсөн, Иранға инергә. Тбилисиҙан Иранғаса ҡырҡ-илле градуслы эҫелә тау-таш араһынан оҙон, ауыр юл үттек беҙ.

Иран мине тетрәтте. Мин тәү тапҡыр социаль тигеҙһеҙлектең бөтә дәһшәтен — ярым феодал дәүләт Иранды күрҙем. Емеш ағасы эсенә күмелеп ултырған аҡ һарайҙар һәм шул һарай хужаларына буйһонған ҡот осҡос фәҡир ауылдар. Крәҫтиәндәр ерҙе, юҡ, һуҡа менән түгел, ә ботаҡлы ағас менән йыртып баралар. Өҫтәүенә, мейене иретерлек эҫе, үләндәрҙе көйҙөрөрлөк ҡоролоҡ. Иран, Иран... Бик боронғо культура иле, ә хәҙер шул ил феодализм дәүерен үткәрә...

Мин «Тауҙар һәм ҡолдар илендә» тигән публицистик мәҡәлә яҙып, «Коммуна» газетаһына һалдым.

1941 йылдың көҙөндә, дошман Ростовты алғас, беҙҙе ашығыс рәүештә тыуған илебеҙгә ҡайтарҙылар. 1942 йылдың яҙында беҙ Харьков янында яуға индек.

Беҙ, ике тәүлек йоҡламаған, бер тәүлек ашамаған булһаҡ та, егерме километр ауыр юл үтеп, тын да алмай, дошманға ташландыҡ һәм бер нисә ауылды азат иттек. Асығыу ҙа, арыу ҙа ҡул менән һыпырып алғандай булды. Сөнки беҙ дошмандың ҡойроғон һыртына һалып ҡасҡанын күрҙек. Дошмандың еңелеүен күреү ғәжәп ҙур шатлыҡ икән ул....

Һуғышҡа кергән тәүге көндә үк мин еңеү шатлығын татыным, тәүге көндө үк мин яҡын дуҫтарымды юғалттым. Их... ул ҡайғыны тел менән аңлатып буламы ни! Яныңда йыл буйы бергә ашап, бергә йоҡлап, уй-хыялдарыңды уртаҡлашып йәшәгән дуҫың ята. Әле генә ул һинән тәмәке көйрәтергә ут һорап алғайны. Шырпыңды кире алырға тип ҡулыңды һуҙһаң, ул үле. Ышанмай, ҡысҡыраһың, ҡуҙғатып ҡарайһың. Юҡ, дуҫың инде һинән башҡаса ут һорамаясаҡ, уның йөрәк уты мәңгелеккә һүнгән, тик ҡулындағы тәмәкеһе генә көйрәп тора...

1942 йылдың 20 сентябрендә пулемет уты һәм мина ярсығы мине лә эҙләп тапты. Ул саҡта мин Сталинградта һуғыша инем. Ә бит нәҡ егерме ике йыл элек, 1920 йылдың 20 сентябрендә, мин донъяға килеүем тураһында һөрән һалғанмын... Яҙмыш...

Өфө, дөрөҫөрәге, «соцгород», госпиталь.... Яҙыусылар союзынан алған тәүге хат Кирәй Мәргәндән ине. Ябай һарғылт открыткала: «Һуғыш тураһындағы хикәйәләрең булһа, миңә һал, альманах сығарырға йыйынабыҙ. «Октябрь» журналы күптән сыҡмай инде. Сәләм менән Ә. Кирәй»,— тип яҙылғайны унда.

Хикәйәләр... Ҡайҙа инде? Һуғышта саҡта ҡош телендәй хат яҙып ебәрергә лә әмәл булманы. Хәҙер тотонһаң инде әллә...

Госпиталдә яҙылған хикәйәләрем тәүҙә альманахтарҙа баҫылды, аҙаҡ «Ул Уралдан ине» тигән бик йоҡа, бик кескәй генә айырым китап булып сыҡты.

Госпиталдә өс ай ятҡандан һуң, «Выстрел» тигән офицерҙар курсын тамамланым һәм, уйламаған ерҙән, Башҡортостандағы полкка тура килеп, хәрби хеҙмәтемде шунда осланым. Яҙмыш...

Погондарымды һалғас, ете йыл буйы Туймазы, Шаран, Ҡандра, Баҡалы райондары, Октябрьский ҡалаһы буйынса «Совет Башҡортостаны» газетаһының үҙ хәбәрсеһе булып эшләнем.

1944 йылда асылған ҡеүәтле девон нефте, шул нефть өсөн булған драматик көрәш минең тәүге көндән үк мауыҡтыра башланы. Тәүҙә мин был турала «Икенсе Баҡуҙан хаттар» тигән очерктар серияһы яҙҙым, ә аҙаҡ пьеса яҙырға тотондом... Һәм донъяға «Девон фонтандары» тигән драма тыуҙы. Иң яҡшы драма әҫәрҙәренә үткәрелгән конкурста был пьесама икенсе бүләк бирелде.

Башҡорт дәүләт академия театрында 1947 йылдың ҡара көҙөндә, ҡарлы-ямғырлы көнөндә, булды минең премьерам, ләкин, шуға ҡарамаҫтан, театр шығырым тулы ине.

Ана шул көҙҙән алып был театрҙа бына ҡырҡ йыллап инде минең яңы пьесаларым ҡуйылып килә, ә «Бажалар» комедияһы талантлы артист, режиссер һәм драматург Шамил Рәхмәтуллиндың тырышлығы арҡаһында өр-яңынан, яңыса, музыкаль комедия итеп ҡуйылды һәм әҫәрҙең сирек быуаттан һуң да иҫкермәй, тамашасыны тулҡынландырыуы, яндырыуы минең өсөн шатлыҡ та, бәхет тә.

Ете йыл ғүмерем колхоздан колхозға, МТС-тан МТС-ҡа сабып, хәбәрсе булып үтте. Чехов геройы доктор Астров һүҙҙәрен бер аҙ үҙгәртеп әйтһәң, хәбәрсе өсөн көн дә юҡ, төн дә юҡ, ҡара көҙ ҙә юҡ, һалҡын ҡыш та юҡ, ә фәҡәт бер генә нәмә бар — ашығыс задание. Ҡайһы ваҡыт бер битлек мәҡәлә өсөн, осраҡлы атҡа йәки машинаға ултырып, йөҙәр километрҙарға китәһең. Һыуланаһың, туңаһың, әммә редакцияның заданиеһын үтәйһең. Ауыр эш, ләкин яҙыусы өсөн кәрәкле эш.

Ошо йылдарҙа мин байтаҡ ҡына хикәйәләр, бер шаршаулы һәм ҙур күләмле сәхнә әҫәрҙәре лә яҙҙым: «Вәғәҙә онотолмай», «Беҙ айырылышмабыҙ», «Йәмле Ағиҙел буйҙары», «Бажалар», «Гөлмәрфуға»...

1954—1956 йылдарҙа Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙа уҡыным һәм бер үк ваҡытта Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамланым. Юҡ, мин Мәскәүҙә теоретик белем генә алманым. Минең шәкерттәштәрем илдең танылған яҙыусылары булды: рус А. Салынский, ҡаҙаҡ А. Тажибаев, әрмәндәр Г. Эмин, А. Шираз, яҡут Н. Золоторев, карел А. Тимонен, осетин А. Таҡоев һ. б.

Беҙҙә атаҡлы ғалимдар уҡытты, танылған яҙыусылар семинарҙар алып барҙы: К. Симонов һәм В. Шкловский, К. Станиславскийҙың шәкерте, режиссер профессор Н. Горчаков һәм профессор В. Асмус, академик Б. Рыбаков һәм профессор Д. Благой... Беҙ ике йыл буйы Мәскәү культураһы менән таныштыҡ. Уның мәшһүр театрҙарына, музейҙарына йөрөнөк, әҙәби дискуссияларҙа ҡатнаштыҡ. Ә уҡыуҙы тамамлағас, Европаны әйләнеп сыҡтыҡ. Париж, Рим, Афина, Стамбул, Стокгольм һ. б. ҡалаларҙы күрҙек.

Һуңыраҡ Англияла, Венгрияла, Болгарияла, Югославияла, Румынияла, Чехословакияла, Сирияла, Ливанда, ГДР-ҙа булырға тура килде.

Артта ярты быуатҡа яҡын ижад... Дөрөҫ, арала оҙон-оҙон паузалар булды. Артта инде байтаҡ йәшәлгән ғүмер. Беләм, ни саҡлы оптимист булһаң да, йәшәгән саҡлы йәшәп булмай. Ғүмерҙең иң матур һәм емешле сағы үтеп киткән инде... Тәбиғәт берәүҙәргә ҡарата бик йомарт булған икенселәргә һәләт, талант тигән хазинаһын, әжәл дарыуы кеүек, мыҫҡаллап ҡына, биргән... Һәр бер яҙыусының да йә Пушкин, йә Шекспир кеүек булғыһы килер ине лә бит, дәрт бар, дарман юҡ... Бынан илле йыллап әлек алтын приискыһынан ебәргән очерегымды шулай тамамлағайным: «Кәрәк булһа, Ватан саҡырһа, старателдәр көрәк, кәйләләрен мылтыҡҡа алмаштырып, йәндәрен-тәндәрен аямай, тыуған илдәрен һаҡлаясаҡтар.»

Тәүге очерегымда яҙған һүҙҙәремә тоғро ҡалыуыма шатмын.

Юҡ, үҙем генә түгел, минең геройҙарым да тыуған ерҙәренә, тыуған илдәренә тоғро булды.

Мин үҙем ғүмерем буйы һәр көнөмдөң, һәр сәғәтемдең ҡәҙерен белеп файҙаланырға тырыштым. Ләкин, тағы бер әйтәм, минең ғүмерем дә, әҙәби яҙмышым да «таҡыр юллы» булманы. Алты йылға һуҙылған армия, унан һуң бик оҙаҡ һәм ҡаты ауырыу... Ләкин мин һәр саҡ бер генә минутҡа ла ҡойолоп төшмәҫкә, ниндәй генә ҡатмарлы холдәргә тарығанда ла, йөрәгемде үт ҡыуығына әйләндермәҫкә тырыштым.

Яҙыусы йәки ғалим өсөн «пенсия йәше» юҡ. Ижад кешеһе утыҙ-ҡырҡта ла ҡатып ҡалырға, туҡһанда ла ҡолас ташлап эшләргә мөмкин. Минең дә уй-пландарым, әле йәшәгән саҡлы йәшәһәм дә, бөтөрлөк түгел. Мин яҙмышыма зарлана алмайым. Бала сағымда бер телем ҡара икмәккә тилмерһәм дә, студент йылдарында көнөнө бер телем икмәктән башҡаны күрмәгән саҡтар байтаҡ булһа ла, Себерҙә туңһам, Кавказда көйһәм дә, һуғышта дошман менән боғаҙлашып йәһәннәм ғазаптары күрһәм дә, мин бәхетле. Сөнки былар бөтәһе лә илем һәм халҡымдың киләсәк яҡты яҙмышы өсөн ине.

...Ошо юлдарҙы яҙып ултырғанда, әсемдән генә иҫәпләп алдым: ошо йылдарҙа профессиональ һәм халыҡ театрҙары минең унлап пьесамды ҡуйҙы, театрҙарҙың портфелендә бер нисә драмам ята. Китапханаларҙа «Хуш, Рим!», «Тол ҡатындар иламай», «Ҡош Юлынан барам» романдарымды рус, башҡорт телдәрендә уҡыйҙар.

Радионан, сәхнәләрҙән минең һүҙҙәремә яҙылған йырҙар: «Бажалар», «Зөлфиә», «Ҡайҙа юғалдың һин, билдәһеҙ дуҫ», «Нисә тапҡыр муйыл сәскә атты...» һ. б. яңғырай.

Әгәр тәбиғәт минән йәнә ун-ун биш йыл ғүмерен йәлләмәһә, тамашасылар яңы пьесаларымды күрер, уҡыусылар яңы романдарымды, хикәйәләремде, нәҫерҙәремде уҡыр, яңы йырҙарымды ишетер әле тип өмөтләнәм.

Уҡыусыларыма ҙур ихтирам менән ИБРАҺИМ АБДУЛЛИН.

*20. IX. 1985*

## *Ибраһим Абдуллин ижады хаҡында ҡәләмдәше*

*...Ибраһим Абдуллиндың прозаһы оригиналь, романтикалы һәм яҡты буяуҙар менән яҙылған. Ни нәмә хаҡында ғына яҙмаһын И. Абдуллин — ул хикәйәме, повесмы, романмы — нескә лирикалы; унда авторҙың самимилығы, образдарҙың һәм ситуацияларҙың тәбиғилеге һиҙелә. Уның юмористик хикәйәләре көлөүгә ифрат бай. Мин бигерәк тә әҙиптең нәҫерҙәренә юғары баһа бирер инем.*

*Батырлыҡ һәм рухи матурлыҡ — бына нәмә характерлы Ибраһим Абдуллиндың әҫәрҙәренә.*

**Михаил Львов,** шағир
(Мәскәү)



# Тол ҡатындар иламай

Роман

*Бөйөк Ватан һуғышында ир-егеттәр менән бергә Тыуған илебеҙҙе дошмандан һаҡлаған Башҡортостан ҡыҙҙарына.*

## ҠАЙҘА АШЫҒАҺЫҢ, ӘЛФИӘ?

Урамдан ҡурсаҡ кеүек кескәй, нәфис ҡатын китеп бара. Уның хәрәкәттәре етеҙ, туфлиҙарының бейек үксәләре аҫтынан осҡон сәсрәй. Ул ҡайҙалыр ашыға, һөйгәне менән осрашырға, тиһәң... Хәҙер инде уның йөҙөндә ҡасандыр кешене үҙенә йәлеп итеп торған алһыу нур юҡ; киң, асыҡ маңлайынан һабанын һөйрәп Ваҡыт бабай үтеп киткән һәм бер ҡасан да шымармаҫлыҡ бураҙналар-һуҡмаҡтар ятып ҡалған; сәстәрҙең үҙ төҫөн ҡына йәшергән булһа ла, аҫтан аҡ ҡурпы төртөп сыҡҡан, тик һорғолт күҙҙәр генә бала саҡтағыса һоҡланып, ғәжәпләнеп ҡарайҙар. Әммә, абайлаһаң, ул күҙҙәр төбөндә ниндәйҙер әйтеп, аңлатып бирә алмаҫлыҡ һағыш барлығы сағыла.

Күңел күтәренке саҡта, шатлыҡ урғылып торғанда ла бөтмәүсе ниндәй һағыш икән ул? Бәлки, йәшлектең, ҡайын һыуы аҡҡан мәл шикелле, саманан тыш ҡыҫҡа булыуынандыр? Бәлки, ғүмер Ағиҙелдең текә яры башында, йылы айлы төндәрҙә уй-хыял иткәнсә барып сыҡмағандыр, ә бәхет ҡанатын ҡағып ҡына үтеп киткәндер? Юҡҡа борон-борондан, «яҙмыштан уҙмыш юҡ», тимәгәндәр бит...

Юҡ, Әлфиә (урамдан ашығып китеп барыусы сибәр ҡатындың исеме ана шулай) яҙмышының телһеҙ ҡоло булып йәшәмәне. Бер кешенең дә әйткәнен, кәңәшен көтөп тормай, уны үҙе яҙырға тырышты.

Әлфиә! Рөхсәт ит беҙгә һинең ул Дәфтәреңде асып уҡырға? Әгәр унда һинән башҡа бер кеше лә белергә тейеш булмаған биттәр-юлдар осраһа, беҙ уны уҡымабыҙ. Берәүгә лә һөйләргә ярамаған, хатта үҙеңдән дә йәшерәһең килгән серҙәр ҙә була бит.

Әлфиә... Әлфиә... һинең хаҡта һөйләгем килә. Һинең шатлығыңды, ҡайғы-хәсрәттәреңде уртаҡлашҡым килә...

## «ҺАУМЫ, АТАЙ! БЫЛ — МИН, ҺИНЕҢ УЛЫҢ ЗӨФӘР...»

Кеше өсөн иң мөһим һыҙат нимә? Юҡ-барға ваҡланмайынса, төп эшенә үҙенде йүнәлтеү. Будапештҡа килгән көндөң беренсе сәғәтендә үк ни эшләргә тейеш ине Зөфәр Ардыуанов? Геллерт тауына йүгерергә. Ә ул ни эшләне? Үҙе һымаҡ демобилизацияланған һалдаттар менән ярты көн Будапештты ҡыҙырып йөрөнө. Имеш, бөтә рота уң аяҡ менән һул аяҡты бутай, тик Ардыуанов ҡына дөрөҫ атлай, тип унан көләсәктәр. Дөрөҫ, Будапештта булып та, Геройҙар майҙанын күрмәһәң, бөтә донъяға мәшһүр парламентҡа һоҡланып ҡарап тормаһаң, дүрт йөҙ йәшлек Гюль-Баба мавзолейын усың менән һыйпамаһаң, берәй кафеға инеп, янып торған ҡыҙыл камзул кейгән сиғандарҙың йырын тыңламаһаң, тешеңде ҡамаштыра торған бикавер— «үгеҙ ҡанын» — тәмләп ҡарамаһаң... Будапештта булмаһың тигән һүҙ.

Ярты көн эсендә күрергә мөмкин булған бөтә экзотиканы ла күрҙе ул күреүен, үкенескә ҡалманы, тик бына Геллерт тауы...

Поезд китергә һанаулы сәғәттәр генә ҡалғас, тиргә батып, бер баҫҡыстан икенсеһенә һикерә-һикерә «Әсә-Венгрия» һәйкәле янына менә ул.

Ни өсөн ашҡына һуң Зөфәр Ардыуанов Геллерт тауы башындағы һәйкәл янына? Зөфәр үҙенең ҡайҙа хеҙмәт итеүе тураһында асыҡлап өйгә хат яҙғас та, әсәһе, улым, нисек тә атайыңдың ҡәберен табырға тырыш, тип үтенде. Нисек тә...

«Әсә-Венгрия» һәйкәле ҡаланың иң бейек еренә, Геллерт тауының түбәһенә, ҡуйылған. Ҡаланың ҡайһы мөйөшөнән генә ҡарама, ул һине күҙәтеп торған шикелле тойола. Бына шул Әсәне күрергә, уның менән «серләшергә» ашҡына ла инде Зөфәр Ардыуанов. Әйтерһең, гранит Әсә телгә килер ҙә уның атаһы хаҡында һөйләп бирер...

— Уф-ф... — Тағы биш-алты һикерһә (Зөфәр ҡул һырты менән маңлайына бәреп сыҡҡан эре тир бөрсөктәрен һөртөп ала), ун-ун биш ҡатлы йорт бейеклегендәге гранит Әсәнең аяҡ осонда буласаҡ.

Зөфәр туҡтай. Йыш-йыш һулай. Мундирының бөтә төймәләрен дә ҡаптыра, үҙе лә һиҙмәҫтән, еңе менән козырегын һөртөп, фуражкаһын кейә һәм, ашыҡмай, тантаналы төҫ менән һәйкәл янына күтәрелә башлай. Аңлай ул — Әсә, таштан яһалған булһа ла, миллионлаған тере әсәләрҙең символы, тимәк, уға ла тереләргә күрһәткән ихтирамды күрһәтергә кәрәк.

Бына ул — күккә күтәрелгән ҡулдары менән пальма бо-тағы тотҡан мөһабәт Әсә. Тыуған Венгрияһын фашист үлә-тенән азат иткән Россияға табан ҡарап тора.

Зөфәр Ардыуанов, командиры ҡаршыһына килеп баҫ-ҡандағы шикелле, уң ҡулын сикәһенә терәне. Боғаҙҙы ни-мәләр ҡытыҡланы, күҙҙе йоҡа томан ҡаплап алды.

Һәйкәлдең постаментына мәңгегә юйылмаҫлыҡ итеп: «Совет геройҙарына — беҙҙе азат итеүселәргә рәхмәт уҡыу-сы венгр халҡынан», — тип уйып яҙылған. Ә аҫта, Әсә-Венгрия аяғы осонда, уның бәхетен һәм именлеген һаҡлаған шикелле, муйынына автомат аҫҡан, ҡулына байраҡ тотҡан совет һалдаты баҫып тора. Зөфәр һалдатты, танырға теләгәндәй, текләп ҡарай. Будапешт өсөн булған иң һуңғы, иң ҡаты һуғыштар бынауында, Геллерт тауы башында һәм Көньяҡ вокзал янында булған, тиҙәр. Ихтимал, шуға күрә лә һәйкәлде Геллерт тауы башына ҡуйғандарҙыр ҙа.

Күҙ тағы байраҡ тотҡан һалдатҡа төшә, һәм ҡапыл Зөфәр тертләп киткәндәй итә. Һалдаттың яңаҡ һөйәктәре, йыйырыла төшкән ҡаштары, асылмаҫлыҡ ябылған ауыҙы бик таныш, үтә яҡын тойолдо. Туҡта, туҡта... был бит уларҙың взвод командиры Кравченко! Шул шул. Зөфәр фотоаппаратын алғанын һиҙмәй ҙә ҡалды (ФЭД-ты армияға киткәндә, поезд ҡуҙғалырға ҡысҡыртҡас, вокзалға оҙата төшкән һабаҡташтары уның муйынына аҫҡайны). Ул, объектив аша ҡарап, һүрәт өсөн уңайлы позиция самалай башланы һәм йәнә әллә ни эшләп китте. Был ни хәл? Гранит һалдат уға фронтта яраланып ҡайтып, оҙаҡ йылдар сырхап йөрөп үлгән әсәһенең ағаһын хәтерләтә башланы. Зөфәр бер нисә аҙым алға үтте, сүгәләне... Сеү! Байраҡ тотҡан ҡул һелкенеп ҡуйҙы түгелме һуң? Зөфәр күҙҙәрен сытырлатып йомдо. Ә инде күҙҙәрен асҡанда, байраҡ тотҡан һалдат, гранит аяҡтары менән ауыр атлап, уға табан килә ята ине.

Зөфәр: «Атай!» — тип ҡысҡырғанын һиҙмәй ҙә ҡалды һәм шул минутта уҡ үҙ тауышынан айнып китте. Торҙо, тирә-яғына ҡаранып алды. Бәхеткә ҡаршы, янында берәү ҙә юҡ ине. Ул һалдат аяғы төбөнә, киртләскә, ултырҙы. Башын ҡайырып һалдатҡа ҡарап алды. Йылмайҙы. «Ә һин ысынлап та минең атайыма оҡшағанһың бит, һалдат...»

Атай... Атай... Малайҙарҙа, үҫеп етеп, үҙҙәре атай, хатта олатай булғас та, аталарына ҡарата йылы хис кәмемәй. Киреһенсә, йылдан-йыл ул тойғо арта һәм, ҡайһы саҡта гөлт итеп ҡабынған янғын кеүек, көсәйеп китә. Малай кеше йыш ҡына, балаһы өсөн йәнен фиҙа ҡылырға торған әсәгә ҡарағанда, булыр-булмаҫ атаны яҡыныраҡ итә, көнбағыш ҡояшҡа тартылған һымаҡ, атаһына һыйынырға ты-

рына. Ихтимал, инде, алланы, тыуған илде алмаштырған матриархат аҡрынлап «үҙ позицияһын» ирҙәргә-атайҙарға биреү ҙә бына сәбәпсе булғандыр. Юҡҡа ғына балаға атай фамилияһы ҡушылмай бит. Юҡҡа ғына тыуған илде атабабаһы ере, отечество, тимәйҙәр бит...

«Азат итеүсе совет геройҙарына...» Шул геройҙар араһында уның атаһы капитан Ардыуанов та булған. Ҡайҙа ята икән хәҙер уның һөйәктәре? Нимә үҫә икән уның ҡәбере өҫтөндә? Бер ҡарыш башаҡлы бойҙаймы? Йәнгә рәхәт, тәнгә сихәт биреүсе мәшһүр шараптар эшләнә торған виноградмы?

«Нисек тә атайыңдың ҡәберен эҙләп табырға тырыш, улым...» «Их, әсәй, әгәр ул туғандар ҡәберенә күмелгән булһа, әгәр уның мавзолейы, шағир әйтмешләй, Ер шары булһа?..»

Ҡапыл Зөфәрҙең күҙҙәре һәйкәлде ике яҡлап әйләндереп алған гранит ҡоймаларға — стелаларға төштө. Ә ул стелаларға ниндәйҙер һүҙҙәр соҡоп яҙылған түгелме һуң? Һә тигәнсе, Зөфәр стела янында булды. Атаҡайым! Бында ни саҡлы исемдәр!.. Урыҫтар... Украиндар... Грузиндар... Ҡаҙаҡтар... Үзбәктәр... Әрмәндәр... Ана башҡорт фамилияһы ла бар — Ишбирҙин.

Зөфәр ярһып, аңһыҙ рәүештә ашҡынып, атаһының фамилияһын эҙләй башланы. Ардыуанов... Ардыуанов... И(ршат). У(сманович)...

Атай... Һин бер ҡасан да уны күрмәгәнһең һәм уның тубығында ултырмағанһың. Бер ҡасан да ул һинең башыңдан һыйпамаған һәм усы менән һинең йомшаҡ ереңә шапылдатып һуҡмаған... Ләкин донъялағы иң яҡын, иң ҡәҙерле кеше... Хәҙер уны бер күрер өсөн ярты ғүмерең бирер ине... Бирер ине, ләкин... Стелала Ардыуанов фамилияһы юҡ ине. Ә икенсе яҡтағыһында? Йәнә ярһып, ашҡынып күҙ йүгертеү...

Юҡ, уның атаһы «үлемһеҙҙәр» исемлегенә эләкмәгән. Ни эшләйһең бит, һуғышта меңдәр үлә, ә шуларҙың береһе мәңге ҡала. Ашығырға кәрәк. Бер сәғәттән улар вокзал алдындағы майҙанға йыйылырға тейеш.

Инде боролғас, инде ҡуҙғалғас, күҙгә нимәлер салынып китте. «Капитан Ордуванов». Зөфәр, күҙҙәренә ышанмай, усы менән ҡаплап алды. Юҡ, «Капитан Ордуванов» үҙ урынында ине. Ордуванов И. У. Иршат Усманович! Үҙе! Тик тәүге хәрефте генә бутағандар — А урынына О яҙғандар. Бик мөмкин. Мадьярҙар өсөн ят фамилия бит.

Күҙҙәрҙе йоҡа пәрҙә ҡапланы. Баш әйләнә башланы. Ул хатта сайҡалып китте. Ҡөтөлмәгән шатлыҡ шул саҡлы көслө ине, әйтерһең дә, Ер, орбитаһынан сығып, билдәһеҙ

ыкка сабырға тотондо. Зөфәр атаһы исеме яҙылған стела янына — ергә ултырҙы һәм ҡапыл онотолоп китте. Өнөндәме, төшөндәме, теле менәнме, уйҙары менәнме атаһына өндәште: «Иҫәнме, атай! Был — мин, һинең улың Зөфәр... Һин азат иткән илде һаҡланым мин, атай...»

Эй, алла, булһаң, эшлә мөғжизә! Ошо урында Ер ярылһын да бер генә, юҡ, ярты ғына минутҡа Зөфәрҙең атаһы пәйҙа булһын. Ул уның янына барыр ине лә ҡулын маңлайына, сәстәренә тейҙереп алыр ине. Зөфәрҙең сәсе, әсәһенең әйтеүенә ҡарағанда, атаһының сәсенә бик оҡшаған, тереһенеке һымаҡ ҡаты, тырпайып тора.

Бәлки, алла барҙыр, әммә мөғжизәләр булмай, ишектәр теге яҡтан асылмай.

Зөфәр, атаһының маңлайынан һыйпаған шикелле, усын һалҡын гранитҡа ҡуйҙы, баш бармағын хәрефтәр яҙылған уйым буйлап йөрөттө, яңағын гранитҡа терәне.

Ошо хәлдә ул күпме ултырғандыр, хәтерләмәй. Ҡайҙандыр ишетелгән дәртле музыка уны фани донъяға ҡайтарҙы. Зөфәр һиҫкәнеп китте. Һикереп торҙо. Хәҙер генә ул ҡулдарының гранит кеүек һалҡынайғанын, биттәренең күҙ йәштәренән еүешләнгәнен белде. Күҙ йәштәре һөртөлдө, бармаҡтар мундир төймәләрен барлап сыҡты, фуражка рәтләп кейелде. Тышҡы ҡиәфәт кенә түгел, «эске хәл» дә тәртипкә килтерелде — Зөфәр йәнә сентименталь малайҙан теләһә ниндәй бойороҡто үтәргә әҙер торған һалдатҡа әйләнде. Пленка бөткәнсе стелаға яҙылған атаһының фамилияһын карточкаға төшөрҙө. Фотоаппарат аҙаҡҡы тапҡыр сыртлап алғас, ул, ҡулын күтәрә төшөп, беләгендәге сәғәтенә күҙ һалды. «У-у, йүгереп барғанда ла таптаман буласаҡ».

Зөфәр Ардыуанов һикерә-атлап баҫҡыстан төшөп бара. Тор-ор! Ҡапыл уның башына ниндәйҙер уй килде. Ул бик ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа ҡатып торҙо һәм, кире боролоп, үргә табан йүгерҙе.

Ул, атаһының исеме яҙылған стеланың артына сыҡты ла тубыҡланып ултырып, бармаҡтарын ергә батырҙы. Салбар кеҫәләре тулғансы тырнаҡтары менән атаһының ҡайнар ҡаны аҡҡан изге тупраҡты соҡоно. Был беҙҙең Башҡортостанда ла осрай торған көрән ер ине. Ошо бәрәкәтле тупраҡта бойҙай үҫә, һутлы алмалар бешә, виноград өлгөрә...

Ихтимал, меңәр йылдар буйы түгелгән ҡандан был кескәй генә Дунай иленең тупрағы шундай көрән төҫкә кергәндер. Һуңғы һуғыш ваҡытында ғына Венгрияны фашизмдан азат итер өсөн йөҙ ҡырҡ мең совет һалдаты башын һалды бит. Йөҙ ҡырҡ мең! Ҙур бер ҡала!

Хәҙер инде Зөфәр Ардыуанов горур атлап, дәртле һыҙғырып Геллерт тауынан төшөп килә. Әйтерең бармы! Беренсенән, ул атаһы ерләнгән урынды тапты, икенсенән, салбар кеҫәләрендә бүлтәйеп, һалҡын, әммә сикһеҙ ҡәҙерле тупрағы ята. Әсәкәйе шатлығынан ни эшләргә белмәйәсәк инде! Улар был тупраҡты балсыҡ сүлмәккә һаласаҡтар ҙа бер ҡасан да һарғаймаусы, япраҡ ҡоймаусы гөл ултыртасаҡтар...

Ошо яҡты уй-хыялдарҙан Зөфәр Ардыуановҡа донъя тағы ла күңеллерәк тойолдо. Ул инде, үҙе лә һиҙмәҫтән, «Зәңгәр Дунай» вальсын һыҙғыра башлағайны.

Дунай... Көнсығыш Европаның үҙәк проспекты. Гүзәл, мөһабәт даръя. Һалҡын һыуын ашыҡмай ғына, теләр-теләмәҫ кенә гранит ярҙарға бәреп, диңгеҙгә ашыға. Ә ниңә диңгеҙгә ашығаһың һин, Дунай? Тағы ла көслөрәк, тәрәнерәк булыр өсөнмө? Ул сағында һин бит үҙеңдең исемеңде лә, бәйһеҙлегеңде лә юғалтасаҡһың. Хәйер, шишмә, инештәр — йылғаларға, йылғалар — даръяларға, даръялар диңгеҙҙәргә ҡушылып, тотош бер донъя океанын хасил итәләр ҙә инде.

Дунай... Кемдер һиңә, Зәңгәр Дунай, тип исем ҡушҡан. Һинең ярҙарың буйында тыуып үҫкән Штраус, Легар, Кальман һәм башҡа бик күп мәшһүр композиторҙар һине маҡтап йырлаған... Бәхетле һин, Дунай. Башҡа бер даръяға ла шундай «музыкаль дан» тәтемәгәндер. Хәйер, һин ул данға лайыҡлы ла, Дунай. Һине иҫкә алғанда, Германия һәм Австрия, Чехословакия һәм Венгрия, Югославия һәм Румыния күҙ алдына килеп баҫа. Европала һинең кеүек уртаҡ иркә булған башҡа даръя юҡ та бит. Уртаҡ иркә балалар бәхетле була ул!

Зөфәр Көнбайыш вокзалға барып еткәндә, уның юлдаштары-яҡташтары инде барлау үткәрәләр ине. Старшой уға күҙенең ағы менән ҡараны ҡарауын, әммә артыҡ бер һүҙ ҙә әйтмәне — теп-теүәл килеп етте бит — асыуланырға урын юҡ. Кемдер, Зөфәр Ардыуановтың йылтырап торған күҙҙәренә ҡарап, теле менән семтеп алды.

— Ардыуанов буш ваҡытты бушҡа үткәрмәгәнгә оҡшаған. Моғайын, берәй сибәр мадьярканы ҡаптырғандыр. Ул бит...

Зөфәр уға әйтеп бөтөргә ирек бирмәне.

— Дөрөҫ, бушҡа үткәрмәнем! — Ул устары менән бүлтәйеп торған салбар кеҫәләренә шапылдатып һуҡты.

— Нимә ул? — тип яҡында торғандар уны һырып алды.

— Геллерт тауынан тупраҡ.

Ул атаһын табыуы тураһында ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе. Зөфәрҙең хикәйәһен берәү ҙә тыныс ҡына тыңлай

йылманы. Сөнки һалдаттар араһында һуңғы һуғышта яҡындарын юғалтмаған берәү ҙә юҡтыр. «Точнее прицел!» тигән батарея газетаһының элекке редакторы хатта шатлығынан ҡысҡырып ебәрҙе.

— Егеттәр, был бит бер повеслыҡ сюжет!

Билеттар иртәгәге көнгә алынғайны. Зөфәр старшойҙан рөхсәт һорап, төндө Геллерт тауы башында, атаһы янында, үткәрергә булды. Кемдер, әйҙә мин дә һинең менән барам, минең дә ике ағайым фронтта үлеп ҡалған, тип уға эйәрмәксе иткәйне, Зөфәр ипләп кенә ҡаршы төштө: «Йөрөмә. Минең атайым менән яңғыҙ ғына ултырғым килә».

Зөфәр, бөртөгөн әрәм итмәй, Геллерт тауынан алынған тупраҡты әле бер тапҡыр ҙа кейелмәгән ҡар төҫлө ап-аҡ майкаға һалды. Майканы газета менән төрҙө, шпагат менән арҡыс-торҡос бәйләп, сумаҙанының төбөнә ҡуйҙы. Сумаҙанын бикләп, асҡысын медальон һала торған кеҫәһенә тыҡҡас, ни өсөндөр, старшойҙы иҫкәртмәк булды.

— Ҡара, берәһе лә сумаҙанға ҡағылмаһын.

Старшой был киҫәтеүҙең урынһыҙ икәнлеген аңлаһа ла, йылмайманы, ҡаршы әйтмәне, ярар тигәнде аңлатып, эйәген генә ҡаҡты.

## ГЕЛЛЕРТ ТАУЫНДА АТАЙ МЕНӘН ҺӨЙЛӘШЕҮ

Зөфәр атаһы менән беренсе (ихтимал, берҙән-берҙер) төндө керпек ҡаҡмай үткәрмәксе булғайны, ләкин көнө буйы Будапешт ҡыҙырып йөрөү, ата менән осрашыу тәьҫораты үҙенекен итте, ул аҡрынлап йоҡоға талды. Юҡ, быны ысын мәғәнәһендә йоҡо тип тә әйтеп булмай, сөнки ул сит ил туристары күңел аса торған рестарандар яғынан яңғыраған музыканы ла ишетте, шул уҡ ваҡытта төш тә күрҙе. Бер ҡарағанда, уның атаһы аҡ күлдәк кейеп, Ҡама буйында балыҡ ҡаптырып ултыра, икенсе ҡарағанда, хәрби кейемдә Зөфәрҙе тубығына ултыртып, башынан һыйпай, иркәләй. Зөфәр атаһының күкрәгенә һыйына, ләкин уның йөрәк тибешен, йылыһын тоймай. Атаһы бар ҙа, юҡ та. Өндәге шикелле тәбиғи ҙә, төштәге кеүек тә...

— Атай, һөйлә әле миңә үҙең хаҡында.

— Үҙем тураһында... Нимә генә һөйләргә икән, улым?

— Шулай уҡ һөйләр һүҙең юҡмы ни? Һин бит яҡты донъяла егерме биш йылға яҡын йәшәгәнһең.

— Беҙҙең быуын тыуған ерен күкрәге менән ҡапланы. Һин бына һорашып ҡара, улым, егерменсе йылда тыуған кешеләр күп ҡалғанмы икән Россияла? Ә иҫән-һау ҡалған-

дарҙың тәндәрендә пуля йәки мина ярсығы йөрөтмәгәне, яра йөйҙәре булмағандары бармы икән? Беҙҙең быуын — Тыуған иле өсөн һәләк булған быуын ул, улым.

— Һеҙ беҙҙең өсөн һәләк булдығыҙ, атай.

— Һуғышта һәр ваҡыт шулай бер быуын башҡа, киләсәк быуындар өсөн йәнен фиҙа ҡыла.

— Ә Будапешт шундай матур ҡала икән. Төндә уның үҙ матурлығы бар. Геллерт тауы башынан ҡараһаң, шул саҡлы ут... Әйтерһең, күк ергә төшкән. Музыка, йыр... Күңелле ҡала.

— Мин төнгө Будапештты күрә алманым, улым. Юҡ, алдайым. Күрҙем. Тик ул саҡта шаян уттар — йондоҙҙар юҡ ине. Будапешт яна ине. Һауа төтөн, көйөк еҫе менән тулғайны, хатта тын алыуы ла ауыр ине. Шау-шыу ҙа бик күп ине. Тик музыка, көлөү генә ишетелмәне. Ҡайҙа ҡарама — һыҡтау, ләғнәт, күҙ йәштәре һәм ҡан. Ҡан, ҡан, ҡан...

— Ә Зәңгәр Дунай шундай һөйкөмлө даръя, атай...

— Ул саҡта һалҡын, ҡурҡыныс ине ул. Минең иң яҡын дуҫтарымдың береһен, Мәскәүҙән алып Будапештҡа саҡлы бер котелоктан ашап йөрөгән окопташымды, йотто ул Дунай. Уны ғына булһа икән...

— Атай, гел һуғыш, гел үлем хаҡында ғына һөйләшмәйек. Һин миңә үҙең хаҡында һөйлә. Бала сағың нисек үтте? Йәшлегең? Ниндәй хыялдар менән йәшәнең? Миңә бөтәһе лә, әнәһенән ебенә саҡлы, ҡыҙыҡ, ғибрәтле.

— Минең ғүмерем — тормошҡа ашмаған хыялдар ул, улым.

— Тимәк, һин бәхетһеҙ булдың, атай?

— Бер һүҙ өсөн, бер ауыҙ һүҙ өсөн мин йәнә бер тапҡыр йәшәр инем, улым.

— Ниндәй һүҙ ул, атай?

— Әсәйеңдең мине «яратам», тип әйткән һүҙе.

— Һөйлә әле миңә шул хаҡта, атай. Ҡасан, ҡайҙа, нисек итеп әйтте ул?

— Мөхәббәт хаҡында һөйләүе ҡыйын. Ул — музыка һымаҡ. Уны тыңлап була ла йырлап була.

— Ә мин ундай музыканы белмәйем әле, атай.

— Белерһең әле. Тик һин уны ваҡытында ишетергә тырыш. Башҡа мондар менән бутама.

Ошо минутта ата ап-аҡ күлдәк кейгән балыҡсы егеткә әйләнде. Ҡирелеп, ҡармағын һыуға ташланы.

— Атай, һин Ҡама буйында тыуып үҫкәнһең түгелме? Беҙҙең Ағиҙел һеҙҙең Ҡамаға ҡоя бит.

— Эйе, Ҡама буйынан. — Оҙон ҡолғалы ҡармаҡ юғала, ата улын һыңар ҡулы менән ҡосаҡлап, күкрәгенә ҡыҫа.

Был юлы Зөфәр уның йөрәк тибешен дә ишеткәндәй бу-
ла. — Эйе, Қаманан, — тип ҡабатлай ул. — Беҙҙең ауыл
кескәй генә, күркәм генә, күп тигәндә, егерме-егерме биш
йорттан тора. Текә яр башында. Шуға күрәлер, ауылыбыҙ-
ҙы Текәяр, тип атала.

Хәҙер Зөфәр атаһын да, Қаманы ла күрмәй, яр башына
теҙелеп ултырған йорттар ғына күҙ алдына килә. Шул
йорттарҙың береһе, ни эшләптер, уның олатаһының йорто-
на оҡшаған. Бына гел шулай, ул төшөндә атаһының ба-
лалығы үткән кескәй генә ағас йортто күрә.

— ...Яҙҙарын, сейә сәскә атҡанда, бөтә ауыл сәскәгә
күмелеп ултыра. Әйтерһең, беренсе ҡар яуған. Умарта
ҡорттары безелдәй, бал еҫе аңҡый. Ҡапҡа бағанаһына бәй-
ләнеп ҡуйылған оҙон ҡолға башындағы кескәй генә уйын-
сыҡ йорт һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә һелкенә. Уйынсыҡ йорт
ҡыйығына ҡаҙалған сатлы-ботло сыбыҡҡа ҡунған ҡош
ҡанаттарын ҡаға-ҡаға осоноп һайрай — был йорт уның
имениеһы, йортта уның буласаҡ тоҡомдары мамыҡ оя эсен-
дә йылынып ята. Шулай булғас, ниңә уға шатланмаҫҡа!

Иртәнге ҡояштың беренсе нурҙары беҙҙең тәҙрәгә тө-
шөү менән, мин йылыға, яҡтыға иркәләнеп, ашыҡмай ғы-
на уянып китәм. Тораһы килмәй — аяҡ осонда йоҡлап ят-
ҡан бесәйҙең мырлауын тыңлап, юрған аҫтында рәхәтлә-
неп ята бирәм, әммә атайымдың: «Ҡояш менән бергә тор-
ған кеше генә бәхетле була», — тигән һүҙҙәре иҫкә төшә.
«Торорға ваҡыт, йоҡо сүлмәге!» — тип юрғанымды тартып
алыуҙы көтөп ятмай, һикереп торам да асыҡ тәҙрә аша
урамға һикерәм. Ә аҫта Қаманан пароходтарҙың ҡысҡыр-
ғаны ишетелә. Мин уларҙы асығыраҡ күрер өсөн ҡапҡа ба-
шына менеп атланам. Баҙарға, ҡунаҡҡа, йомоштарын йо-
мошларға барыусы атлы, йәйәүлеләрҙе ҙур яҫы паром Қа-
ма аша сығара. Паромды бер яҡ ситтән кескәй генә катер
һөйрәп килә. Үҙемде белә башлағандан алып миндә шун-
дай теләк тыуғайны: текә ярҙан йүгереп төшөргә лә паро-
ходҡа һикереп менергә, штурман ҡулынан ҙур тәгәрмәсте
тартып алырға ла аҫҡа, Волгаға табан йөҙөргә, ә унан
диңгеҙ киңлектәренә сығырға... Унан океанға. Йөҙөргә лә
йөҙөргә... һис туҡтамай, тын алмай. Донъялағы бөтә диң-
геҙҙәрҙе, бөтә океандарҙы йөҙөп сығырға...

Зөфәр атаһының муйынына һарылды.

— Алыҫ сәйәхәттәр капитаны булам, тип хыялланған-
һың, ә үҙең геолог-разведчиклыҡҡа уҡығанһың.

— Шулай тура килде. Урал тауҙарын байҡап йөрөнөм.
Алтын булмаһа, тимер, тимер булмаһа, күмер табырға хы-
яллландым, ләкин күп тә үтмәне, геологтар сүкешен «трех-
линейка»ға алмаштырырға тура килде...

— Үкенәһеңме, атай?

— Халыҡта шундай мәҡәл бар: «Ил яҙмышы ирҙәр ҡулында». Ә минең хәрби хеҙмәтем бик яй башланып китте. Тәүҙә Себерҙә хеҙмәт иттем, унан Лениндың иң яҡын шәкерттәренең береһе ер аҫтында типографиялар ойоштороп йөрөгән ҡалала хеҙмәтемде дауам иттем. Хеҙмәтемдең икенсе йылының һуңғы яртыһы килеп етте. ДСО тураһында уйлана башланыҡ.

— Ә нимә ул ДСО, атай?

— Запасҡа китеүҙе элек шулай йөрөтәләр ине. Долгосрочный отпуск. Беҙҙең сейә төҫөндәге петлицаларҙа икешәр, өсәр өсмөйөш...

— Ә ул өсмөйөштәр ни аңлата ине?

— Ике булһа — сержант, өс булһа — өлкән сержант, дүрт — старшина. Юҡ, беҙгә гимнастеркаларыбыҙҙы һалырға тура килмәне. Күптән һағайып, әҙерләнеп көтөлгән булһа ла, йәйге селләлә төшкән ҡырау шикелле тәьҫир иткән һуғыш башланды. Урта белемле сержанттарҙы хәрби училищеға уҡырға оҙаттылар. Ә инде бер нисә айҙан беҙҙең петлицаларыбыҙҙа кескәй генә кубиктар хасил булды — лейтенанттар.

— Беренсе һуғыш... сирҡаныс ҡайҙа алдығыҙ, атай?

— Мәскәү янында. Ҡырҡ беренсе йылдың һалҡын көҙөндә.

— Тәүге һуғыш ҡурҡыныс булдымы?

— Юҡ, тәүге сәғәттә мин ҡурҡыуҙың, үлемдең ни нәмә икәнен аңламаным. Ә кискә табан, ҡаты яраланған, үлгән иптәштәремде үҙ күҙҙәрем менән күргәс, һуғыштың нимә икәнлеген аңлай башланым... Ә тора-бара... күнегеп киттем.

— Үлемгә лә күнектеңме, атай?

— Юҡ, үлемгә күнегеп булмай, Зөфәр. Ул бер генә тапҡыр килә.

— Әсәйем һөйләгәйне. Һин Мәскәүҙән алып Будапештҡа саҡлы һуғыш юлы үткәнһең, тәнеңдә пуля ла сыйып үтмәгән.

— Ә бына Будапештты алған көндө, ун өсөнсө февралдә, мине үлтерҙеләр. Егерме биш йәшем тулырға һанаулы көндәр генә ҡалғайны.

— Үлеүе ҡурҡынысмы, атай?

— Белмәйем. Мин уны һиҙмәй ҙә ҡалдым.

— Ә әсәйем һине көн һайын, сәғәт һайын иҫенә төшөрә...

— Мәңге рәхмәт уға. Онотһа ла, мин уға үпкәләмәҫ инем. Мин үлгәндән һуң бик күп елдәр иҫте, бик күп һыуҙар аҡты бит инде. Ерҙәге юлдарҙы, йөрәктәге яраларҙы ваҡыт елдәре тигеҙләп, шымартып бөтөрҙө. Ә тигеҙләнмә-

гән юлдар, бөтәшмәгән яралар юҡ ул, Зөфәр. Беҙ бит берберебеҙҙе бик аҙ яратыштыҡ. Көндәр менән түгел, сәғәттәр менән генә һанарлыҡ...

— Атай, өйгә ҡайтып эшләй башлау менән, тәүге хеҙмәт хаҡтарымды йыя барам да әсәйемә ҡиммәтле пальто һатып алып бирәм. Драп тышлы, шәшке яғалы...

— Нимә, нимә?

— Ирле ҡатындар... ирҙәре күп алып эшләүсе ҡатындар шундай ҡиммәтле пальтолар кейәләр... Яғалары — шәшке, еңдәрендә — шәшке... ҡайһы берәүҙәренең хатта итәктәренә лә шәшке тегелгән. Минең әсәйем дә батша ҡатындары шикелле затлы кейемдәр кейергә хаҡлы. Ул Тыуған иле өсөн көрәште, ҡан ҡойҙо... Ул...

— Эйе, ул бөтә донъя рәхәтлектәренә лә лайыҡлы, улым. Ул — әсә, әсә генә түгел, һалдат та. Һалдат ҡыҙҙар легендаға, һәйкәлгә лайыҡлы...

Иртәнге шифалы ел Зөфәрҙең яңаҡтарынан иркәләп иҫеп китте. Ҡолаҡҡа таныш булмаған тауыштар керҙе. Зөфәр, күҙҙәрен йомоп, башын сайҡап алды. Һикереп торҙо. Кирелде, һуҙылды, ойой башлаған быуындарын яҙҙы һәм, дөрөҫөн генә әйткәндә, аңламаны: әллә ул төш күрҙе, әллә төш менән өн аралаш атаһы менән һөйләшеп ултырҙы. Сөнки әсәһе уға атаһы тураһында шул саҡлы күп, йыш һөйләй торғайны, ул атаһын бер ҡасан да күрмәһә лә, Текәярҙа бер ҡасан да булмаһа ла, уларҙы һүрәткә дөрөҫ итеп төшөрә алыр ине. Ә атаһының карточкаһы һәр ваҡыт стенала эленеп тора, шул карточканан төшөрөп алған карточка копияһы һәр ваҡыт уның комсомол билеты эсендә йөрөй.

Төштәме, өндәме — уныһы мөһим түгел, әммә Зөфәр бөгөн төнө буйы атаһы менән һөйләшеп сыҡты. Был уны дәртләндерҙе лә, ҡеүәтләндерҙе лә. Ул япраҡтарға төшкән ысыҡҡа ҡулъяулығын сылатып, күҙҙәрен һөртөп алды ла юлға ҡуҙғалды. Ләкин бая ҡолаҡҡа кергән ят тауыштар көсәйгән, яҡынайған һымаҡ тойолдо. Юҡ, был ябай, тәртипһеҙ тауыштар түгел, был — йыр ине. Уны ҡатынҡыҙҙар ҙа, ирҙәр ҙә йырлай. Зөфәр йырға ҡолаҡ һалды. Таныш моң түгелме һуң? Юҡ, таныш түгел. Матур кеше таныш күренгән һымаҡ, моңло музыка булғанға ғына шулай таныш тойола торғандыр. Юҡ, таныш музыка. Валлаһи, таныш! Һуң ул бит был музыканы кистән дә ишетеп ҡалғайны. Әлбиттә, шул көй. Хәҙер, хәҙер иҫенә төшөрә ул уны... Зөфәр, аҡрын ғына һыҙғырып, көйҙө «эҙләй» башланы. Бәй, был «Шаян тол ҡатын» тигән оперетта музыкаһы ла! Ҡапыл уға, ниңәлер, күңелһеҙ булып китте. Күҙ

алдына ҡыҫҡа буйлы, һәр ваҡыт бөхтә кейенгән, һәр ваҡыт ҡайҙалыр ашығыусы ҡатын — әсәһе килеп баҫты. Ул әсәһенең бер ҡасан да асыуланғанын, һуҡранғанын, кемгәлер, нимәгәлер зарланғанын күрмәне лә, ишетмәне лә. Доктор Әлфиә Ҡамалова һәр ваҡыт алсаҡ йөҙлө, шат күңелле, йылы һүҙле булды. Ә бына һорғолт күҙҙәренә абайлабыраҡ ҡараһаң, бер ҡасан да бөтмәүсе, бер ҡасан да һүнмәүсе һағышты күрер инең. Тимәк, тол ҡатындар ғәмһеҙ, шаян булмай. Уларҙың күҙҙәре көлһә лә, күңелдәрендә һағыш, кешегә күренмәгән хәсрәт ҡала...

Ул арала, пенсионер ҡарттар шикелле, йылылығын күптән юғалтыуына ҡарамаҫтан, һаман бирешмәҫкә тырышыусы асыҡ йөҙлө көҙгө ҡояш күренде. Шуны ғына көткәндәй, киң баҫҡыстарҙы тултырып, аҫтан бер төркөм егеттәр, ҡыҙҙар пәйҙа булды. Зөфәр гидтың һүҙҙәрен иҫенә төшөрҙө. Йыш ҡына йәштәр, бигерәк тә яҙҙарын, йәйҙәрен, Геллерт тауы башында, Әсә-Венгрия янында Ҡояш сыҡҡанды ҡарап торорға яраталар, ти. Инде көҙ етһә лә, йәштәр был матур ғәҙәтте оноторға теләмәйҙәрҙер, күрәһең.

Зөфәр сәғәтенә күҙ һалды. Вокзал яҡын түгел, ашығырға кәрәк. Ул эсенән генә атаһы менән хушлашты ла түбән төшә башланы. Венгр йәштәре, ҡояш сыҡҡанда яңғыҙы ғына тауҙан төшөп килеүсе совет һалдатын күреп, һағайҙылар, туҡтап, үҙ-ара һөйләшеп алдылар, ә инбашына ирҙәр пинжәге һалған ҡыҙыҡай, ҡыйыу атлап, Зөфәр янына килде лә саф рус телендә һораны:

— Атайың? Ағайың? — Ҡыҙыҡай бармағы менән стела торған яҡҡа күрһәтте.

Зөфәр ҡыҙыҡайҙың ни хаҡында һорауын аңланы.

— Атайым! — тине ул ғорур, юлын дауам итеп.

Ҡыҙ, иптәштәренә боролоп, мадьярса нимәлер әйтте. Шул уҡ минутта Зөфәрҙе мадьяр егеттәре, ҡыҙҙары һырып алды. Ҡапыл ул үҙен һабан туйында бөтә көрәшселәрҙе лә еңгән батыр һымаҡ хис итте. Ә, дөрөҫөрәге, Әсә-Венгрия аяғы осонда автомат аҫып, байраҡ тотоп торған совет һалдаты кеүек тойҙо.

Тәүге минут, юҡ, секунд дауыл алдынан булған тынлыҡты хәтерләтте. Ләкин ҡыйынлыҡ-тынлыҡ тиҙ таралды: егеттәр, ҡыҙҙар бер юлы һөйләшә башланы. Зөфәр уларға асыҡ йылмайып ҡарап торҙо ла муйынына сиған гитараһы аҫҡан малайға ҡулын һуҙҙы:

— Мөмкинме?

Малай, башын эйеп, тиҙ генә гитараһын һалды.

— Пожа-луйста, пожа-луйста!

Зөфәр, аҙ ғына уйланып алғас, бармаҡтарын гитара

ҡылдарына тейҙерҙе һәм ишетелер-ишетелмәҫлек итеп йырлап ебәрҙе.

Расцветали яблони и груши...

Бер төрлө командаһыҙ-дирижерһыҙ йәштәр йырҙы күтәреп алды.

Поплыли туманы над рекой...

Йәштәр үргә менә башлағайны, Зөфәр, башын һелкеп: «Аҫҡа!» — тип команда бирҙе. Йәштәр ҡаршы килмәне.

Иртәнге саф тынлыҡта ҡояш боронғо гүзәл Будапештты шифалы нурҙары менән иркәләп йыуғанда, мәңге йәш, үлемһеҙ «Ҡатюша» тауыш бирҙе. Дегейтер «Интернационал»ынан һуң «Ҡатюша»нан да бәхетлерәк яҙмышлы йыр юҡтыр. Уны Советтар Союзында тиҫтәләгән телдә тиҫтәләгән йылдар буйы йырлайҙар. Беҙҙең «Ҡатюша» Югославия һәм Чехословакия, Польша һәм Болгария патриоттарына дошмандары менән көрәшкәндә медсестра ғына түгел, һалдат та булды. Төньяҡ Италия тауҙарынан алып Неаполгә саҡлы «Ҡатюша» итальян партизандарының һуғышсан дуҫы ине. «Ҡатюша» көйөнә тиҫтәләгән яңы йырҙар сығарылды. Һөйгәнен көтә белгән батыр ҡыҙ Ҡатюшаның яҙмышы матур булды. Тоғро көтә белеүселәрҙең яҙмышы һәр ваҡыт шулай буласаҡ та.

Пусть он землю бережет родную,
А любовь Катюша сбережет...

Берреһе лә иҫкә алманы — ҡайҙандыр, ағас аяғы менән шаҡ-шоҡ баҫып, боронғоса мыйыҡ үҫтергән оло йәштәрҙәге мадьяр ҡарты килеп сыҡты. Бәлки, төнө буйы иҫән аяғы һыҙлап интектергәндер ҙә, ҡояш менән бергә уянғандыр. Бәлки, бөтөнләй улай түгелдер. Ул ҡайҙалыр яҡында ғына төнгө ҡарауылсы булып хеҙмәт итәлер. Алмашсы килгәс, ҡарсығы янына ҡайнар кофе эсергә ҡайтып баралыр. Нисек кенә булмаһын, дуға кеүек һалынып төшкән мыйыҡлы ҡарт, шаҡ-шоҡ баҫып, былар янына килеп баҫты.

— Здрастуй, тауариш! Сервус! — Ул Зөфәргә ҡулын һуҙҙы.

Унын киң, ҡытыршы усын ҡыҫҡанда Зөфәрҙең башына дыуамал уй килде: «Әгәр теге йылды, Будапешт өсөн һуғыштар барғанда, уның әсәһе ошо мадьяр менән разведкаға йөрөгән булһа? Ни исемле булған әле ул мадьяр? Хәҙер, хәҙер хәтерләйем...»

— Һеҙҙең исемегеҙ Андраш түгелме? — тип һораны ул, дыуамал уйҙарына ышана төшөп.

Мадьяр ризалашып башын сайҡаны.

— Хат, хат. (Яҡшы, яҡшы.) Мин есть Андраш.

Зөфәр инде унын ябыҡ беләктәренән ҡыҫып тотоп алды.

— Һеҙ... Андраш ағай... — Зөфәр ашыҡты, һүҙҙәренән сәсәне. — Беҙҙең менән, рустар менән, бергә фашистарға ҡаршы һуғышманығыҙмы?

Андраш, күңелһеҙләнеп, башын ҡаҡты.

— Юҡ. Һуғышманым. Киреһенсә, мин рустарға ҡаршы һуғыштым. Теге, беренсе донъя һуғышы ваҡытында. Ун бишенсе йылда пленға төштөм. Уралда йәшәнем.

— Уралда? — Зөфәрҙең күҙҙәренә йәнә шатлыҡ сатҡылары сыҡты. Ҡулдарын унын беләктәренән алып, һөйәктәре сығып торған ҡулбашына һалды. — Мин дә Уралдан бит, Андраш ағай.

— О-о... Урал... Матур ҙа унда, һалҡын да...

— Былай ярайһы, түҙәбеҙ, туңып үлмәйбеҙ, — тип шаяртты Зөфәр. — Йә, ярай, хушығыҙ, Андраш ағай, — ул хушлашырға ҡулын һуҙҙы, ләкин мадьяр унын ҡулын ҡыҫырға ашыҡманы.

— Туҡтәле, тауариш... — Ҡарт киң балаҡлы салбар кеҫәһенә ҡулын батырып һәрмәнде лә төрөпкә тартып сығарҙы. Ағастан юнып эшләнгән төрөпкә күпте күргән ине. Үҙ ғүмере эсендә нисәмә янсыҡ тәмәкене төтөнгә әйләндергәндер ҙә хужаһынын ниндәй генә уй-хыялдарынын, ҡайғышатлыҡтарынын шаһиты булмағандыр ул...

Төрөпкә-ветеранды Андраш Зөфәргә һуҙҙы.

— Ал. Һинеке булыр.

Зөфәр юғалып ҡалды: ни эшләргә, алырғамы, юҡмы?

— Ал, ал, — тип ҡыҫтаны ҡарт. — Үҙемдең производство.

— Әллә ул сағында инде... — Зөфәр төрөпкәне алды, ирендәрен сутылдатып әйләндереп ҡараны. — Матур. Иренмәгәнһең. — Бүләкте инде кеҫәһенә һалдым тигәндә, үҙ халҡынын ғәҙәтен иҫенә төшөрҙө — байрам ашы — ҡара ҡаршы була. Тимәк, ҡартҡа ла бүләк бирергә кәрәк. Ул кеҫәләрендә нимәләр барлығын хәтерләргә тырышты. Ә һалдаттың ни нәмәһе булһын инде? Ҡулъяулыҡ, барлыюҡлы һалдат хеҙмәт хаҡы һалынған аҡса янсығы, өс йәпле, штопорлы бәке... ә... өйгә ҡайтырға документтар алғас, унын яҡташы — сверхсрочник старшина уға плексигластан яһалған бик матур зажигалка биргәйне бит. Бүләкте бүләк итмәйҙәр, ләкин... мадьярҙар алдында оятҡа ҡалырға ярамай.

Ул, мундир кесәһенән алып, Андрашҡа зажигалкаһын һуҙҙы.

— Ә был һеҙгә, Андраш ағай, — Зөфәр баш бармағы менән кнопкаға баҫты, шунда уҡ кескәй генә тел — күгелйем ут хасил булды.

Ҡарт, балалар шикелле, ҡыуанды. Ялҡынды, ирендәрен ослайтып, өрөп һүндерҙе. Ҡаушап, кнопканы бик тиҙ генә таба алмай, зажигалканы үҙе ҡабыҙҙы, ҡулын күтәреп йәштәргә мөрәжәғәт итте.

— Егеттәр, кем рус уты менән тәмәкеһен көйрәтә?

Гитара йәнә хужаһының муйынына эленде. Егет «Катюша»ны уйнай башлағайны, Зөфәр ҡулын гитараның ҡылдарына ҡуйҙы.

— Теге... «Шаян тол ҡатын» көйөн...

— Ә... Легар. Тол ҡатындар һәр ваҡыт шаян була ул. Улар бер ҡасан да һыҡтамай, иламай. — Егет ҡылдарға сиртеп алды һәм «Шаян тол ҡатын»дың моңо Будапешт киңлегенә таралды.

Зөфәр эсенән генә гитаристың һүҙҙәрен ҡабатланы: «Тол ҡатындар бер ҡасан да иламай...»

## ӘЛФИӘ ВОЕНКОМАТ ТУПҺАҺЫН ТАПАЙ

«Ҡисә минең түшемә икенсе «Батырлыҡ өсөн» миҙалын ҡаҙанылар...»

Әлфиә әхирәте Наташаның хатын, бөтә асыуын, сәмен ҡағыҙҙан алырға теләгәндәй, йомарланы ла өҫтәлгә ташланы. «Икенсе миҙал, ә ул...» Ә ул, тар, тығыҙ бүлмә буйлап, өйөрсөк һымаҡ, өтәләнеп йөрөнө. Иҙән таҡталары баҫҡан һайын, былай ҙа ҡабарған асыуҙы тағы ла ҡабартып, шығыр-шығыр итте. Әйтерһең, улар: «Наташа инде ике миҙал алған, ә һин... ә һин...» — тип Әлфиәне ирештерәләр.

Әлфиә күптән буялмаған ишек яңағына арҡаһы менән һөйәлде. Ишек яңағы уларҙың «Ғаилә хроникаһы» ине. Бында бөтә балаларҙың да ҡасан, ниндәй оҙонлоҡта булыуҙары бысаҡ осо менән «тарих өсөн» киртеп ҡуйылған. Бына уның буйы. Әлфиә, ишек яңағына һылашырҙай булып, төп-төҙ баҫты, башын күтәрә төштө, ләкин улай үҙүҙенде алдау була, тип башын ғәҙәттәге хәлгә килтерҙе.

Усын тип-тигеҙ итеп түбәһе тәңгәленән үткәрҙе лә, ишек яңағына терәтелгән ҡулын ҡыймылдатмай, сүгә төштө, бынан бер ай элек яһалған билдә менән бөгөнгө араға күҙ һалды. Айырма — беленер-беленмәҫлек кенә ине шул. Ул бөгөн үлсәнгән урынға киртләс тә яһап тормай, стенаға

эленеп торған көҙгөгә ташланды. Мөйөштәрендә инде һарғылт таптар хасил булған, әммә әле һаман үҙ вазифаһын ғәҙел үтәгән боронғо көҙгө бөтә йәштәге балалар ҙа карай алһын өсөн өҫкө яғы ауыш эленгән. Ағас рамы, ҡулъяулыҡ һымаҡ, матурлап сигеп-соҡоп эшләнгән көҙгөнән кәзә ҡойроғо шикелле тырпайып торған ике толомло, осло эйәкле, үтәнән-үтәгә тишеп ҡараусы үткер һоро күҙле ҡыҙыҡай иламһырап баҫып тора ине. «Әлфиә, әйт әле, һин былтырлы-быйыллы ғына пионерға кергән баламы әллә «Өлгөргәнлек аттестаты» алған, еткән ҡыҙмы? Ғәрлек!» Ул хатта үҙенең шундай сибек булыуына кемде ғәйепләргә лә белмәй. Һуң! Атаһы Октябрь революцияһы менән Цюрупа урамдары мөйөшөндәге пожар каланчаһы шикелле оҙон, таҙа кәүҙәле; әсәһе күрше ҡатындары янында баҫып торғанда себештәр араһындағы тауыҡ һымаҡ... Туғандары ла инде... Ана төпсөк бала Азат, йәше менән сабый ғына әле, ә кәүҙәгә Әлфиә апаһын ҡыуып етеп бара... Уф-ф... Яҙмышты үҙең тыуғансы уҡ яҙылып ҡуйыла тигәндәре дөрөҫтөр шул.

Ул, тау кеүек күпереп торған йомшаҡ карауатҡа һикереп менеп ултыра ла, аяҡтарын аҫтына бөкләп, бөтә көсөнә һелкенергә тотона.

«Ниңә үҫмәйһең? Ниңә үҫмәйһең һин, Әлфиә? Берәй витамин етешмәйме? Ә Азатҡа етешәме? Бер табаҡтан ашайҙар бит...» Карауат пружиналары, Әлфиәгә үпкәләгәндәй, ыңғырашып шығырлай. Әлфиә лә, быны аңлағандай, карауаттан һикереп төшә лә өҫтәлдә йомарланып ятҡан хатты барып ала. Сеңләй-сеңләй кескәй генә нәфис устары менән уны тигеҙләй: «Ғәфү ит, Наташаҡайым, кисер, Наташенька, минең үҫмәүемдә һинең мыҫҡал да ғәйебең юҡ бит...»

Хат уҡыу дауам итә.

«...Ә икенсе миҙалды миңә ни өсөн бирҙеләр, тиһең? Майор өсөн. Ҡаты яраланғас, һуғыш яланынан плащ-палаткаға һалып, һөйрәп алып сыҡтым. Ах, белһәң ине, Әлфиәкәйем, шундай ауыр ине ул...»

Хәрефтәргә йән керә, Әлфиә инде уларҙы уҡымай, ә тыңлай. Әйтерһең, уның янында «Беренсе номерлы» әхирәте баҫып тора һәм фронтовой тормошо менән уртаҡлаша.

«...Һинән йәшереп булмай, Әлфиә, ҡайһы саҡта шундай күңелһеҙ, ауыр була — ҡан атылып сығырлыҡ итеп аҫҡы иренеңде тешләп алғаныңды ла һиҙмәй ҡалаһың. Ә үлем йыш ҡына, яҙ көнө Дим буйында бызылдап йөрөгән серәкәйҙәр һымаҡ, тирә-яғында йөрөй. Ә бит үләһе килмәй, чорт побери. Миңә бит ун туғыҙ ғына йәш әле. Уның да үҙем хәтерләгәне ун ике, ун өс йыл ғыналыр. Их, белһәң ине,

Әлфиәкәйем, иҫән-имен әйләнеп ҡайтһам, тормоштоң, йәшәүемдең ҡәҙерен шул саҡлы беләсәкмен... бер сәғәтен дә бушҡа, әрәмгә үткәрмәйәсәкмен...

Ә ғөмүмән алғанда, фронтҡа эләгеүемә ҡәнәғәтмен... Ә һин ниндәй институтҡа инергә йыйынаһың? Миңә һуғыштан һуң һине ҡыуып етергә тура килер инде. Иҫән ҡалһам, әлбиттә. Ә ниңә, әлбиттә? Мин барыбер иҫән ҡаласаҡмын. Беҙ әле һинең менән Ағиҙелде иңләп-буйлап йөҙәсәкбеҙ, Әлфиәкәйем...»

«Ә ғөмүмән алғанда, фронтҡа эләгеүемә ҡәнәғәтмен...» тигән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙҙы Әлфиә. Ә һин бер ҡасан да унда эләкмәйәсәкһең, Әлфиә. ВЛКСМ райкомы аша юллап йөрөгәндә, уныңсыны тамамла, унан күҙ күрер, тип өмөтләндерҙеләр. Аттестат алғас, беҙ һине күҙ уңында тотабыҙ, тип тынысландырҙылар. Әлфиә бер ҡатлы ҡыҙыҡай түгел, аңлай, уларҙы уның себеш кеүек сибек, бәләкәй кәүҙәһе өркөтә. Һуң бөтә ҡыҙҙар ҙа, Наташа шикелле, оҙон буйлы, таҙа, көслө булмай бит инде. Улайға китһә, ҡатын-ҡыҙға артыҡ таҙа кәүҙә килешмәй ҙә.

Наташаны хәтерләү уның хатын иҫкә төшөрҙө. Хат был юлы оҙон, шаҡмаҡлы дәфтәр битенә юл ҡалдырылмай ваҡ хәрефтәр — сәйләндәр менән яҙылғайны, күрәһең, ялға сыҡҡан ваҡыты булғандыр.

«...Эргәмә генә мина килеп төшкәс, бөттөм, шуның менән бәхил бул, яҡты донъя, тип уйланым. Юҡ, алдайым, Әлфиәкәйем, мина ярылманы. Әгәр ул шартлаған булһа, һинең Наташаң башҡа һиңә хат яҙып маташмаҫ ине. Тәүҙә ул сусҡа балаһы шикелле мороно менән ерҙе йыртып керҙе. Мин нимә булыуын абайламай ҙа ҡалдым. Берәй ерҙән таш-маҙар килеп төштөмө икән, тип уйланым. Ә инде аңыма килгәс, эргәмдә генә самауыр торбаһы һыйырлыҡ тишек күрҙем. Ҡуҙғалырға ғына түгел, тын алырға ла ҡурҡып ятам. Бына-бына ул мина шартлап ярыласаҡ та Наташанан он-талҡан ғына тороп ҡаласаҡ. Ошо туңған, ташҡа әйләнгән хәлдә күпме ятҡанмындыр, — әйтә алмайым, ҡапыл аңыма килдем. Тилекәй, мина шартлағансы тиҙерәк тороп йүгер. Пуля яуып тороуға ҡарамаҫтан, һикереп торҙом да яҡындағы соҡорға һыпырттым. Шуныһы ҡыҙыҡ, ярылмаған minанан ҡотолам тип, пуля ямғырына ла иғтибар итмәнем. Ана шулай икән ул һуғыш тигән тамаша...

Ярай, пуля-миналар сәнселеп китһен, шунһыҙ һуғыш булмай торғандыр, хәҙер уҡ, һөңгө заманаһы түгел. Әлфиә, үҙеңә генә әйтәм, әле бығаса береһенә әйткәнем, Өфөгә береһенә хат яҙғаным юҡ. Мин ғашиҡ булдым, ахры. Ә һин? «Аһа, ирҙәрҙе ен күргән Наташа ла ғашиҡ бул-

ғас...» — тип ауыҙыңды турһайтма. «Любовь нечайно нагрянет, когда ты ее совсем не ждешь...» Күр ҙә тор, һуғыштан һуң ирем менән парлашып ҡайтырбыҙ. Ә һин уны күрһәң, Әлфиәкәйем, аҡылыңдан яҙырһың. Ярай, был хаҡта башҡа ваҡытта һөйләрмен, былай ҙа бер романға етерлек хәбәрҙәр яҙҙым. Ҡомбат саҡыра. Ах, уҫал кеше. Ләкин үтә ғәҙел. Үбәм. Бөтәгеҙҙе лә. Натка».

Бына һиңә ҡараңғы төшкәс ишек алдына ла сығырға ҡалтырап торған ҡурҡаҡ ҡуян Наташка. Ҡойма артында өргән эттән дә ҡурҡҡан байғош... Тимәк, үҙ-үҙен еңгән. Әҙәбиәт уҡытыусыһы Иван Андреевич, үлемде бар тип тә белмәгән мотлаҡ батыр кешеләр юҡ, һәр йән эйәһе лә үлемдән ҡурҡа, тик кәрәк ваҡытта үҙ-үҙенде еңеп, «булдыра алмайым» тигәнде «ҡурҡыу һыҙығын аша атлап үтә белергә кәрәк», тип өйрәтә торғайны. Әлфиә ана шул «критический рубежды» үтеп сыға аласаҡ. Хәйер, ул бер ҡасан да ҡурҡаҡтарҙан һаналманы.

Күрше малайҙары менән яҡында, соҡор битләүҙәрендә урынлашҡан алма баҡсаларына сапҡындар яһауҙа ҡатнашты. Бер тапҡыр хатта ярты итәген умырып та ҡайтты. Әшрәфкә рәхмәт, хан заманынан ҡалған тегеү машинаһында (машинаның «Зингер» тигән маркаһынан ике генә хәреф тороп ҡалғайны: «З...р») итәкте шундай оҫта итеп текте, хатта «осло күҙ» әсә лә бер нәмә һиҙмәне.

Әшрәф, Әшрәф... Ҡайҙарҙа йөрөйһөң икән һин хәҙер?..

Әшрәф иҫкә төшкәс, уйҙар башҡа йүнәлешкә боролдо.

«Туҡта әле, әгәр ҙә мин военкоматҡа хәрби кейемдә барһам? Хәрби форма кешене олпатыраҡ күрһәтә бит...»

Ул ирҙәр йоҡлай торған кескәй генә бүлмәгә инде. Ҡулдан яһалған таҡта инсәнән Сафуан ағаһының бер генә тапҡыр йыуып үтекләнгән кизе-мамыҡ гимнастеркаһын алды. Миҙалдары, беҙ бында тигәндәй, көмөш тауыш сығарып, шат сылтырап ҡуйҙы. Әлфиә гимнастерканы яурындарына ҡуйып, үлсәп ҡараны, ыһ, тип көрһөндө, ләкин гимнастерканы кире элмәне. Миҙалдарҙы ашыға-ашыға бороп ала башланы. Юҡ, ул был эште ҡурҡа-өркә шым ғына эшләмәне, ә ауыҙ эсенән ниндәйҙер көй көйләп, шатланып башҡарҙы. Сөнки үҙ ваҡытында килгән «иҫ киткес» уй уны бөтөнләй яңы, оптимистик тулҡынға күсерҙе.

Ғәҙәттә иркә балалар хәлле йәки аҙ балалы ғаиләләрҙә була, тиҙәр. Бәлки. Ләкин иркә балалар күп балалы йорттарҙа ла, аҡсаны тартып-һуҙып йәшәүсе ғаиләләрҙә лә осраштыра икән. Ә нилектән? Бер... ике генә бала булғанда иркәбикәләр, иркәбайҙар үҙенән-үҙе хасил була. Ата-әсә, ай, ай, тип ҡан ҡалтырап, ғәзиздәрен өрмәгән ергә ултыртмай, ҡайнамаған һыу эсермәй, бармағына шырау ҡаҙалһа

ә, ашығыс ярҙам» саҡыра башлайҙар. Был бик тә аңлашыла. Иксенең береһе менән ул-был булһа, берәү генә була, ә берҙән-бер балаға бәхетһеҙлек килһә, ғаилә бөтөнләй етем ҡала. Ә бына күп балалы ғаиләләрҙә иркә, ҙорорәк балалар ҡайҙан килә һуң?

Дүрт, биш, хатта алты баланың береһе үҙенең тышҡы ҡиәфәте йәки холҡо менән башҡа ҡәрҙәштәренән айырылып тора. Йә ул сирләшкә, йә артыҡ иpле, баҫалҡы була, йәки, киреһенсә, саманан тыш хәтерле, теремеклеге менән ата-әсәһенең айырым иғтибарын яулай. Тора-бара ул «алтынан ҡашҡа тәкәһенә» әйләнә. Йоморҡа тултырылып тауыҡ бешерелһә, «ҡашҡа тәкәгә» ике боттоң береһе эләгә, бәлеш бешерелһә, төбөнөң уртаһы — иркәбайға... Магазиндан кейем-һалым алынһа, башҡаларға йә аҡса етмәй ҡала, йә тейешле кейем осрамай, ә иркәбикәгә аҡса ла табыла, күңелгә оҡшаған фасон да осрай, размеры ла тура килә.

«Ҡашҡа тәкә» ата-әсәнең күҙ ҡараһы булһа ла, башҡа туғандарынан уға шаҡтай эләгә. Дөрөҫ, был «иғлан ителмәгән» йәшерен һуғыш әллә ни хәтәр түгел, ә шулай ҙа ашыуҙы килтерә, ҡайһы сағында күҙҙән йәштәрҙе аттырып сығарта. «Ҡашҡа тәкә» ситкә боролғанда, ашына услап тоҙ һалалар; йә яңы ғына башлаған дәфтәренә (онотмағыҙ, һуғышҡа саҡлы ла ҡағыҙға бик ҙур ҡытлыҡ ине) сәстәрен үрә торорлоҡ төрлө һүрәттәр төшөрәләр — дүрт башлы ат, ҡырҡ аяҡлы йылан... Йә төндә пальто кеҫәләрен тегеп ҡуйырҙар; муҡсаға йәки портфелгә дәреслектәр урынына китек ҡашыҡтар, үксәһеҙ ботинкалар һалырҙар... Ҡыҫҡаһы, этлектең сиге лә юҡ. Иркәбайҙар юҡ-барға ла, себен тешләһә лә, шыңшырға, ошаҡлашырға өйрәнәләр, илаҡ, тиҫкәрегә әйләнеп үҫәләр. Шунлыҡтан, тормош юлында уларҙы төрлө уңышһыҙлыҡтар һағалап тора һәм йыш ҡына, һәләттәре, аҡылдары булһа ла, холоҡтарының сытырыҡлығы арҡаһында теләктәренә ирешә алмайҙар. Әлфиә лә биш бала араһында ана шулай үҫте. Ләкин ул йәне-тәне менән үҙенең «махсус положение»һына ҡаршы килде, иркәбикә булырға теләмәне: бала саҡтан уҡ ҡыҙҙар уйнай торған магазин ҡурсаҡтарынан баш тартты; ағайҙарына эйәреп, малайҙар уйынына, малайҙар ғөрөф-ғәҙәтенә күнегергә, өйрәнергә тырышты. Яҙҙарын «тәмлекәй» тип бо-ҙорок һурҙы; өй ҡыйыҡтары буйлап күгәрсендәр артынан йүгерҙе; ағас нагандар яһарға, тештәре аша төкөрөргә лә өйрәнде. Әммә эсенән генә көрһөнә торғайны: «Их, ниңә мин дә башҡа туғандарым шикелле малай түгелмен икән?..» Ә инде үҫә төшкәс, был көрһөнөүҙәрҙең, әсенеүҙәрҙең мәғәнәһе юҡлығын аңлай башлағас, уның башҡа хәсрәте башланды.

Әлфиәнең һабаҡташтары-тиҫтерҙәре күҙ алдында буйға еттеләр, йомроланып киттеләр, һигеҙенсе класта инде парта аҫтынан малайҙар менән хат алыша башланылар, ә Әлфиәгә күтәрелеп ҡараусы ла булманы — әйтерһең, ул юҡ, ҡыҙ кеше түгел. Ул, себеш кеүек сибек, таҡта һымаҡ яҫы ине. Ул быға саҡлы ла «ҡойроҡта һөйрәлеүселәрҙән» түгел ине, ә һигеҙенсе класта, велосипедсы үргә табан йән көсөнә машинаһының педалдәренә баҫҡан шикелле, Әлфиә лә бөтә һәләтен, тырышлығын усына алды ла, туғыҙынсыға «а», «б», «в» класс уҡыусылары араһында беренсе шәкерт булып күсте. Берта Альбертовнаның әйтеүенә ҡарағанда, ул немец телендә Пруссия немецтары кеүек саф һөйләшә. Сит телгә һәүәҫлек, һәләтлек, әйтергә яраһа, уларҙың ҡанында. Беренсе донъя һуғышы ваҡытында атаһы Германияла бер йыл әсирҙә йөрөгән. Уның менән бергә булғандар «битте» ,«данке»нан башҡа һүҙ белмәйҙәр, ә атаһы немецса «татылдап» тора.

— Булдыҡай! — тине Әлфиә, гимнастеркаһынан ағаһының миҙалдарын сисеп, ике тапҡыр яраланыу тураһында әйтеп тороусы ҡыҙыл һары таҫмаларын һүтеп алып. Миҙал, нашивкаларҙы боронғо йыуан ҡорһаҡлы комодҡа һалғандан һуң Әшрәфтең әсәһе урынына ҡалған әсәһенең апаһы Суфия апай янына инеп, гимнастерканы тарайтырға, ҡыҫҡартырға булды. Их, Әшрәф үҙе булһа, ыһ тигәнсе эшләп бирер ине. Ул бит «трактор-универсал». Бәлеш бешерә белә, тәҙрә рамдары яһай, велосипед камералары ямай, сәйнүк-кәстрүлдәр төпләй. Ә үҙе йыйған приемник аша ниндәй ҡалалар менән генә һөйләшмәй торғайны! Ҡазан, Свердловск, Ырымбур, Куйбышев «коротковолновиктары» ғына түгел, Алыҫ Себерҙән, Урта Азиянан уның сигналдарын тоталар ине. «Пип-пип-пипп! Мине ишетәһегеҙме? Мин һеҙҙе ишетәм...»

«Ҡайҙа йөрөйһөң һин, етди ҡарашлы, нескә күңелле, алтын ҡуллы Әшрәф? Иҫән-һаумы һин?.. Ҡасан күрешербеҙ икән? Һағындым мин һине, Әшрәф...»

Бәхеткә ҡаршы, Суфия апай өйҙә ине. Йомғаҡ һымаҡ бәләкәй, киске ҡояш шикелле һағышлы, нескә тимер ҡыҫалы оваль формаһындағы боронғо күҙлек кейгән Суфия апай тәҙрә төбөндә ниндәйҙер ҡағыҙ уҡып ултыра ине.

— Уҙ, уҙ, Әлфиә ҡыҙым, — тине ул, Әлфиә тупһаны атлап үтеү менән, урынынан тороп, ҡарсыҡтарға ғына хас ашығыс хәрәкәттәр яһап. — Күптән күҙгә-башҡа күренгәнең юҡ. Әшрәф тә китте, һин дә юғалдың. Ә мин, ай һымаҡ, япа-яңғыҙ тороп ҡалдым. — Күҙлек аҫтынан ике бөрсөк йәш тәгәрәп сыҡты.

Әлфиә ҡыҙарҙы. Әлфиә ояллы. Әлфиә аҡланырға һүҙ эҙләне.

— Тын алырға ла ваҡыт юҡ, Суфия апай. Әле генә имтиҳандар бөттө. Өйҙә лә эш етерлек... госпиталгә лә йөрөйбөҙ...

— Эйе, эйе, хәҙер беребеҙҙең дә ваҡыты юҡ, — ҡарсыҡтың үпкәһе тиҙ бөттө, инде тауышы, элеккесә, асыҡ, бер сыҡты. — Уҙ, ниңә ишек яңағын һөйәп тораһың. Сит кеше түгелһең дә.

Әлфиә, уҙып, ултырғыс ситенә ултырҙы.

— Һин ниндәйҙер яҙыу уҡый инең түгелме, Суфия апай?..

— Әшрәф улымдың элекке хаттарын баштан-аяҡ уҡып сыҡтым. Һуңғы ваҡытта, ни эшләптер, хаты-хәбәре килмәй. Әллә ваҡыты юҡ, әллә... — Ҡарсыҡтың тауышында нечкә һағыш һиҙелде. — Һиңә яҙамы һуң, Әлфиә ҡыҙым?

Әлфиә сөгөлдөргә әйләнде.

— Килгеләй, — тине ул ишетелер-ишетелмәҫлек кенә.

— Ҡурҡам, Әлфиә ҡыҙым. Ул бит минең берҙән-бер таянысым да, аяныcым да. Мин уға ата ла, әсә лә, ҡыҙ туғаны ла, ир туғаны ла... — Ҡарсыҡтың тауышы йәнә эшлекле әйләнде. — Ҡулыңда нимә? Берәй кейем тегергәме?

— Бына... — Әлфиә тартынып ҡына гимнастерканы һуҙҙы. — Бынауыны бәләкәйләтергә ине. Миңә таман булырлыҡ итеп...

— Бәләкәйләтергә була... Бәләкәйләтергә ҙур эш түгел, — тип ҡарсыҡ һөйләнә-һөйләнә машинаһы өҫтөнә ҡаплаған яманы алды — инде «йәшлек» төҫөн юғалтып, уңған ситсаға бер төрлө сәскәгә лә оҡшамаған сәскәләр, төрлө шаҡмаҡтар төшөрөлгәйне. Оҙаҡламай ашын ашаған, байтаҡ йәшәгән «Зингер» келтер-келтер итте. Машина янында инде етмеште үткән Суфия апай ҡапыл йәшәрҙе лә китте. Гүмергә һыҙлаған аяҡтары машина педаленә шундай етеҙ, матур баҫа, майҙанға бейергә сыҡҡан йәш ҡыҙмы ни. Хатта машинаның тауышы ла үҙгәрҙе — шат, дәртле келтерләй башланы. Әле генә киске ҡояшты хәтерләткән Суфия апай, машинаға эйәреп, көйләп ебәрҙе.

> Агиҙелкәйҙәргә барҙыңмы,
> Эйелеп-бөгөлөп һыуын алдыңмы?
> Һөйөп кенә йөрөгән егетеңдән,
> Ҡарасәскәй, тороп ҡалдыңмы?

Бер-ике сәғәттән гимнастерка әҙер ине. Суфия апайҙың тамырланып торған ябыҡ бармаҡтары мөғжизә эшләне: илле икенсе размер гимнастерка ҡырҡ дүртенсе размерға әй-

ләнде. Дөрөҫ, уның тарайтылғанлығы, ҡыҫҡартылғанлығы һиҙелеп тора, әммә кейергә ярай ине.

Өйөнә ҡайтышлай, ул Әҡлимә янына кереп сығырға теләне. Әлфиә әхирәттәрен, ниңәлер, беренсе, икенсе, өсөнсө номер, тип «разряд»тарға бүлә ине. Наташа — әхирәт № 1, Әҡлимә — № 2.

Әҡлимә ихласлығы, бер ҡатлылығы менән № 1-гә лә лайыҡлы ине, әммә ул характеры, ҡиәфәте менән Әлфиәгә оҡшамай.

Әҡлимә, ҡышлау умарта һымаҡ, йыуан, аҡылдан яҙырлыҡ тыныс (дөрөҫөрәге, ғәмһеҙ) холоҡло ҡыҙ. Һуғыш дауам иткән һайын кешеләр тартылып, ябығып китте, ә бына Әҡлимә, элек нисек булһа, әле лә шулай: умарта. Һин уға: «Әҡлимә, өйөгөҙ яна бит», — тип әйт, ул: «Шулаймы? Яна икән, янһын. Өй менән бергә мин дә яна алмайым бит инде», — тип әйтәсәк һәм урынынан да ҡуҙғалмаясаҡ.

— Әҡлимә! — тип шат ҡысҡырҙы Әлфиә ишекте асыу менән. — Давай, киҫ!

Ә Әҡлимә әхирәтенең ярһыу тауышына күтәрелеп тә ҡараманы тиһән, яңылыш булмаҫ.

— Нимәне?

Әлфиәнең түҙемлеге бөттө.

— Нимәне — сәсемде!

Әҡлимә торҙо. Әлфиә янына килде. Уның кәзә ҡойроғо кеүек толомдарын ҡыбырлатты.

— Нимә, мишайт итәме? — Әҡлимә боролоп китте. — Аяғыңа ураламы?

— Уралыуын уралмай, әммә... — Әлфиә көрһөнөп алды... — Бөгөн алтынсы тапҡыр военкоматҡа барам. Ни булһа ла була, — ул ҡулын бик йәһәт кенә башына тейҙереп алды. — Ҡырҡ сәсемде. Парикмахерскийға барғым да килмәй, йыраҡ та, ғөмүмән... Ярай инде, аңлайһындыр...

— Аңлашы-ыла. Оҙаҡламай һуғыш бөтәсәк, ә һин.. һаман фронтҡа ашҡынаһың. — Әҡлимә йәнә уның янына урап килде, йәнә уның сәсен ҡыбырлатты. — Малайҙарҙыҡы кеүек ҡалдырырғамы әллә егерменсе йылғы комсомолецтарҙыҡы кеүек эшләргәме?

«Малайҙарҙыҡы кеүек!» — тигәнде Әлфиә үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

— Шулаймы? — Әҡлимәнең матур, күпереп торған ирендәре мыҫҡыллы йылмайҙы. — Үҙенде әрәм итәсәкһең, йән киҫәгем.

— Йәл түгел. Тик армияға ғына алһындар.

Әҡлимә ҡарап тороуға иренсәк, бошмаҫ йән булһа ла, парикмахерлыҡ эшенә изге эшкә ҡараған кеүек ҡарай ине. Әле лә, Әлфиәнең үтенесен тыңлап бөтөрмәне, өҫтәлгә

төрлө ҙурлыҡтағы һәм конфигурациялы ике ҡайсы, ҡыҫҡа теште оҙон алюмин тараҡ-бысҡы, береһе түңәрәк, икенсеһе, бөтә мөйөштәре лә кителеп төшөүе арҡаһында ниндәй рәүештә икәнен әйтеүе ҡыйын булған, әммә әле үҙенең бороңғо, «аҫыл заттан» булғанлығын юғалтмаған көҙгө, щетка, бер нисә шешә, ҡыҫып сығара торған һауытҡа-тюбиктарға һалынған кремдар килтереп ҡуйҙы. Уларҙы, хирургия сестраһы инструменттарын операция алдынан бер тәртип менән теҙгән шикелле, һәр береһен үҙ урынына ҡуйып сыҡты. Этикеткаһыҙ йәшкелт түңәрәк шешәнән ус төбөнә бер нисә тамсы одеколон тамыҙҙы ла (Әлфиәнең танауы шунда уҡ һиҙеп ҡалды — тройной одеколон. Ә уның донъяла ике яратмаған әйбере булһа, береһе тройной одеколон ине, ләкин был юлы уға ҡарата булған нәфрәтен һиҙҙертмәне) бармаҡтарын йыуҙы, ҡулына тараҡ-бысҡыны алғас, көҙгөгә ҡарап, сәтәкәй бармағы менән маңлайына төшкән сәс бөртөктәрен төҙәтте лә, будда монахы ғибәҙәткә тотонғандағы кеүек, изге эшенә тотондо.

Тәүҙә Әлфиәнең кәзә ҡойроҡтарын-толомдарын һүтте. Алюмин тараҡты одеколонға, ҡырлы стакандағы йылы һыуға тығып алды ла сәсен алға һәм артҡа тараны. Әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа сығып, башын ҡырын һалып, нимәлер самалап торҙо. Унан кескәйерәк ҡайсыны алып, тәжрибәле парикмахерҙар шикелле, сыҡырт-сыҡырт итте. Тараҡлы ҡулы менән сәсте ниндәй оҙонлоҡта ҡалдырырға кәрәклекте күрһәтте.

— Бына ошолай, немка Берта Альбертовнаныҡы кеүек ҡалдырабыҙ. Артыҡ оҙон ҡырҡырға ярамай, ату бөтөнләй бала-саға һымаҡ буласаҡһың, һинең былай ҙа йөҙөң «аристократический».

Әлфиә урынынан һикереп торҙо.

— Юк, юҡ, бала-саға итмә.

Әклимә күпереп торған устары менән уның тар яурындарына баҫып, урынына ултыртты.

— Аңлашыла. Тын да алма. Башыңды сайҡама, һин сапсан ит түгел. Башыңды әйә төш. Шулай. Аҙ ғына күтәрелә төш. Етте. Тимәк... — Әклимә, ҡарсыҡтар шикелле, шыҫта итеп «бисмилла-ирахман-ирахим», тине лә ҡайсы сырк-сырк итә башланы.

Ҡайсы үткер ине, Әлфиә сәсенең ҡырҡылғанын һиҙмәне, ләкин быға саҡлы уның башын йәмләп йөрөгән мамыҡтай йомшаҡ ҡарағусҡыл сәс бөртөктәренең иҙәнгә тауышһыҙ ғына төшкәнен йөрәге менән һиҙҙе. Бер генә минутҡа уға үҙе, юҡ, сәстәре йәл тойолдо. Уның, һикереп тороп, Әклимәнең ҡулынан ҡайсыны тартып алғыһы килде.

— Матур булғың килһә, йәһәннәм ғазабына ла түҙергә тура килә, Альфа, — тине Әҡлимә бер генә минутҡа ла эшен туҡтатмайынса, унын тауышында мыҫҡыллы «саҡкылар» һиҙелә ине. — Етмәһә, үҙе фронтҡа ашҡына. Фронт ул һиңә үтмәҫ ҡайсы менән сәс ҡырҡыу ғына түгел...

— Әйҙә, көл, иптектер. Хоҙай үҙеңдән минең үсте алыр әле, — тине Әлфиә инде тынысланып; фронт тураһында уйлай башлаһа, ул ҡапыл үҫеп, ҡөҙрәтләнеп китә торғайны.

Ә Әлфиә ун һигеҙ йыл үҫтереп йөрөткән толомдар, Яңы йыл ҡарҙары шикелле, тауышһыҙ ғына, береһенә лә үпкәләрен белгертмәй, иҙәнгә һибелеп төштө. Әлфиә инде уларҙы күрҙе. Йәнә хистәр ташып урғылды.

Иҙәнгә, әйтерһең, сәстәр түгел, һарғайған япраҡтар ҡойола ине. Тик айырма шунда, япраҡ һарғайғас ҡойола, был инде көҙ килеү, ҡыш яҡынлашыу ғәләмәте, ә был осраҡта киреһенсә ине — балалыҡ, мәктәп йылдары бөттө, йәшлек башлана. Ҡапыл Әлфиәнең күҙ алдына ҡалҡыу күкрәкле, беләк йыуанлығы оҙон толомло ҡыҙҙар килеп баҫты. Бала саҡтан уҡ оҙон сәс толомдарына ҡыҙыҡты ул һәм эсенән генә, «минең дә шундай толомдар йөрөтөр көнөм булырмы икән?» тип хыяллана торғайны. Ә бына хәҙер ул барлы-юҡлы толомдарын да киҫтерҙе.

Унын тулып ташҡан хистәрен йәнә Әҡлимә өрөп һүндерҙе.

— Наташканан хат-хәбәр бармы? Миңә, ни эшләптер, күптән яҙғаны юҡ...

Әлфиә ирәйеп, яйлап ултырҙы. Ул да бит, уй-планы барып сыҡһа, оҙаҡламай фронтта буласаҡ. Әҡлимәгә хаттар яҙасаҡ...

— Бөгөн генә алдым. Һиңә сәләм әйткән.

— Ә миңә яҙмай, суҡынмыш ҡыҙ. Әллә үпкәләгән инде... Үпкәләргә минең уға энә саҡлы ла насарлыҡ эшләгәнем юҡ. Ғөмүмән, мин кешеләргә насарлыҡ эшләй белмәйем...

«Насарлыҡ эшләй белмәйем...» Әлфиә ошо һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөргә тырышып уйға сумды, ә Әҡлимә ашыҡмай ғына, ирендәрен сутылдата-сутылдата, ҡайһы саҡтарҙа ауыр көрһөнөп (теләгәнсә килеп сыҡмағандыр), эшен дауам итте. Ул йә бер аҙ ситкә китеп, башын ҡырын һалып ҡарап торҙо, аҫҡы иренен тешләп алды, йә уңға сыҡты, йә — һулға. Әлфиәнең сәсен йә тараны, йә йомшаҡ усы менән һыйпап төшөрҙө. Әлфиәнең түҙемлеге бөтә башлаһа ла, өндәшмәне, тик тиҙерәк үҙенең кемгә оҡшағанын күрергә ашыҡты. Ниһайәт, ул минут та килеп етте.

— Бөттө, буғай, — тине Әҡлимә ҡайсыһын, тарағын өҫ-

тәнә ҡуйып. Тик уның ҡарашы нимә аңлата ине, Әлфиә йылмайып алманы — мыҫҡыллауҙымы, үҙ эшенән ҡәнәғәтлә-неүҙеме...

Әлфиә һикереп торҙо, муйынына бәйләнелгән аҡ япма-һын сисеп ташланы ла, әхирәтен яңағынан супылдатып үбеп, ишеккә ташланды.

— Рәхмәт, Әҡлимәкәйем!

— Көҙгөгә лә ҡарап тормайһыңмы ни? — тине Әҡлимә, мөйөштәге ватылған трюмо киҫәген алып.

— Ашығам. Тәнәфес башланғансы военкоматҡа өлгө-рөргә кәрәк. — Дөрөҫөн әйткәндә, ул военкоматҡа һуңлау-ҙан да бигерәк үҙенең тағы ла йәмһеҙерәккә әйләнеүенән ҡурҡты. Быға саҡлы ул гел үҙен класта, урамда йәмһеҙ ҡыҙҙарҙан һанап йөрөнө.

— Ярай, улайһа, — тине Әҡлимә, көҙгөһөн урынына ҡу-йып. — Юлың уң булһын.

Әлфиә, мәктәп гәҙәте буйынса, «иди к черту!» тип әйт-мәксе булғайны, әхирәтен үпкәләтеүҙән ҡурҡып, «амин!» тине.

— Тик... — тине Әҡлимә ашыҡмай ғына.

Әлфиә ишек тотҡаһынан ҡулын алды.

— Нимә тик?

— Тик юҡҡа фронтҡа ашҡынаһың. Һуғыш — ирҙәр эше. Ә беҙҙең эш...

Ҡул йәнә ишек тотҡаһын тотто.

— Меңләгән ҡыҙҙар ирҙәр менән йәнәш һуғыша.

— Уныһы шулайын шулай. — Әҡлимә ауыр көрһөндө. Әлфиә әхирәтенең был көрһөнөүендә ниндәйҙер тормошҡа ашмаған хыялмы, бер кемгә лә әйтергә ярамаған теләк-[illegible]ышмы һиҙҙе. Бәлки, ул да, төндәрен йоҡламай, фронт хаҡында хыялланалыр, тик кемдер йәки нимәлер ҡамасау-лайҙыр...

— Сәләм! — Әлфиә ҡулын болғаны.

— Сәләм... — тип яуапланы Әҡлимә инструменттарын ашыҡмай ғына йыйып.

Өйгә ҡайтҡас, Әлфиә Сафуандың гимнастеркаһын кей-ҙе. Хәҙер инде ул Әлфиәгә, үлсәп теккән һымаҡ, таман ине. Фронтта хәбәрһеҙ юғалған ағаһы Мәсғүттең ПВХО, ГСО * значоктарын таҡты. Ашығып, энәне бармаҡтарына сәнсә-нене, Сафуандың пилоткаһын ике яҡтан тегеп, бәләкәйләт-те, уның ҡайышына сәнске осо менән яңы тишек тишеп, билен ҡыҫып быуҙы, туфлийының үксәләренә ике иле ҡа-[illegible]ғы ҡатырғы ҡуйҙы һәм, туҡ-туҡ баҫып, ишек-

* *ПВХО* — противовоздушная и химическая оборона.
*ГСО* — готов к санитарной обороне.

ле-төрле йөрөргә тотондо. Әленән-әле уң ҡулын пилоткаһы янына килтереп, честь бирҙе: «Здравья желаю, товарищ военком!»

Ярты сәғәтләп муштра үткәндән һуң, үҙенән ҡәнәғәт ҡалды. Әммә әле һаман көҙгөгә барып ҡарарға батырлығы етмәне. Ни саҡлы ул үҙен «ҡыҙ-малай» тип мыҫҡыллап йөрөтмәһен, күңел төбөндә ҡыҙҙарға ғына хас нескәлек һәм ғорурлыҡ ята ине. Әгәр ул көҙгөгә ҡараһас, үҙенән-үҙе ҡурҡып китһә? Юҡ, военкоматҡа барып ҡайтмайынса, ул көҙгө янына яҡын да барып ҡарамаясаҡ. Иң ҙур бәхетһеҙлек — үҙ-үҙеңдән күңелең ҡайтыу, үҙ-үҙеңде күрә алмау.

Ярай, бар, юлға сыҡ, Әлфиә! Ҡыйыу бул! Тәүәккәл бул! Тамсы ла ташты тишә. Ә һин — бахыр тамсы, военком — йәнһеҙ таш түгел. Был юлы ла ҡыуып сығармаясаҡ. Ҡулынан килмәйәсәк! Ул сағында Әлфиә рөхсәтһеҙ-ниһеҙ фронтҡа ҡасып китәсәк.

Бына ул, үҙенең ниндәй ҡиәфәттә икәнлеген аңламайынса, военкоматҡа китеп бара. Үксәләре менән туҡ-туҡ баҫып, башын, ата ҡаҙ һымаҡ, күтәреп, ҡулдарын йыш-йыш һелкеп, ҡуҡырайып китеп бара Әлфиә. Осраған кешеләрҙең ҡайһыһы уға мыҫҡыллы йылмайып, ҡайһыһы йәлләгән һымаҡ ҡарай. Ә Әлфиә уйлап та бирмәй. Һе-ей! Кемдең унда эше бар. Тик военком ғына: «Ә... тағы килдеңме, ут бөрсәһе?» — тип мыҫҡыллы көлөп, ҡыуып сығармаһын. Юҡ, ул бер ҡасан да ҡыуып сығарманы, мыҫҡыллы көлмәне, ә йәлләп: «Бар өйөңә ҡайт, һинән башҡа ла Гитлерҙың муйынын һындырырбыҙ. Һинең урының еүеш, һалҡын окопта түгел, мейес башында», — тип, иркәләп әйтте. Был иркәләү һүҙҙәренән уның күҙҙәренә йәш атылып сығыр ине. Күҙ йәштәрен күрһәтмәҫ өсөн ул тиҙ генә боролор ҙа ишеккә йүнәлер... Был юлы ла шул уҡ хәл ҡабатланырмы икән ни?

Военкоматта һуңғы тапҡыр булғандан һуң инде ярты йыл үтте. Ишек яңағындағы киртләүгә ҡарағанда, ул биш миллиметрға үҫә төшкән. Әгәр бейек үксәле туфлиҙы, үксәләргә һалынған ҡатырғыны ла иҫәпләһәң, ул, кәм тигәндә, биш сантиметрға үҫкән булып сыға. Әгәр ҡалыныраҡ тауыш менән дә һөйләшһәң, бер-ике урында ирҙәргә хас һүҙҙәр ҙә әйтеп ташлаһаң... Юҡ, был юлы уны военком ҡыуып сығармаясаҡ. Ҡыуырға тейеш түгел! Әгәр инде ишектән ҡыуып сығарһа, ул тәҙрәнән килеп керәсәк, тәҙрәнән ҡыуып сығарһа, мөрйәнән төшәсәк... Ышҡылып, йыртылғылап бөткән дерматин менән көпләнгән ишекте ҡаҡҡансы, Әлфиә, тынысланыр өсөн, унға саҡлы һанап алды; тамаҡ ҡырҙы; имән бармағын ҡаш араларына ҡуйып пилот-

аһының дөрөҫ кейелеүен тикшерҙе лә кескәй генә йоҙроғо менән ишекте дөбөрләтте.

— Рөхсәт итегеҙ, иптәш военком?

Военкомдың рөхсәтен алып та тормай, иҙәнде емерерҙәй туп-туп баҫып өҫтәл янына килде. Уның үксәләренең туҡылдауынан графин янындағы стакан ыңғырашыпмы, йырлапмы алды. Военком: «Ә... ут бөрсәһе тағы килденме инде...» — тип әйтергә ауыҙын асҡайны, Әлфиә уға һөйләргә ирек бирмәне.

— Был енәйәт, иптәш военком! — тип ҡысҡырҙы ул бөтә көсөнә. Тауыш, көткәндәгегә ҡарағанда ла нескәрәк, серәкәй безелдәүенә оҡшап сыҡты. Ләкин һүҙҙәрҙең мәғәнәһе военкомдың ҡолаҡтарына, башына барып етте. Уның шаян йылмайған күҙҙәренә ҡапыл етдилек сыҡты.

— Нимә енәйәт? — Ул иҫән ҡулына таянып, өҫтәл артынан торҙо. Әлфиә батырая төштө.

— Нимә енәйәт, тип һорайһығыҙмы? Немецса һөйләшә белә торған кеше тылда һерәндәп йөрөй. Ә тегендә, фронтта, моғайын, немец телен белеүсе тәржемәселәр етешмәйҙер әле. Разведчиктар...

Был һүҙҙәрҙән подполковниктың күҙ ҡаралары ҙурайып китте. Әлфиә тәү тапҡыр военкомат ишеген асып кергәс, военком, был йоҙроҡ саҡлы ҡыҙыҡай мажаралы китаптар уҡып, мейеһен подвигтар менән төйөп тултырған да фронт хаҡында хыяллана, тип еңел генә уйлап ҡуйғайны һәм юҡ, ҡыҙым, батырлыҡ еңел бирелмәй, улар китаптарҙа ла кинофильмдарҙа ғына анһат була, ә тормошта... ай, ауыр ул, тип уға өгөт-нәсихәт биргәйне, ләкин ҡыҙыҡай уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалманы, киҫәтеүҙәренән ҡурҡманы. Ул икенсе тапҡыр ҙа, өсөнсө тапҡыр ҙа уның ишеген асып керҙе. Ул военкомат тупһаһын тапай башланы.

— Был нисәнсе тапҡыр килеүең, Әлфиә? — Военком уның исемен генә түгел, төҫөн-башын, ҡыланыштарын да хәтерендә ҡалдырғайны инде. Йомшаҡ, ҡарағусҡыл сәс... (юҡҡа сәсен ҡырҡҡан, сиңерткә, кескәй генә булһа ла, толомдар йөрөткәндә нығыраҡ килешә торғайны. Хәйер, сәс оҙон булһа, пилотка кейеүе уңайһыҙ.) Әйткәндәй, ни эшләп әле бөгөн гимнастерка, пилотка кейеп килгән икән? Тимәк, ул был юлы, үлһәм үләм, һүҙемде һүҙ итәм, тип килгән. Ай-яй-й... уйлағанын эшләргә ярата торған үҙ һүҙле ҡыҙ... Күҙҙәре көнсығыш халыҡтарына хас ҡыҫыҡ түгел, әммә ниндәйҙер, аңлатып бирә алмаҫлыҡ үҙенсәлеге уның башҡорт ҡыҙы икәнлеген әйтеп тора: осо аҙ ғына өҫкә ҡарап, «мин бында!» тигән кескәй генә танауы башҡорт ҡыҙҙарыныҡына ҡарағанда рус ҡыҙҙарыныҡына нығыраҡ оҡшаған; ауыҙы, уймаҡ кеүек, кескәй генә; аҫҡы ирене өҫ-

көз иренenә ҡарағанда бер аҙ ҡалыныраҡ, һәм, аҙ ғына, хужаһын тыңларға теләмәгән төҫлө, аҫҡа төшкән; бите көнсығыш Европа ҡыҙҙарыныҡына тартҡан. Кәүҙәһе, оҙон булмаһа ла, иҫ киткес зифа ине. Һиҙелеп тора, ата-бабаларының ҡанында башҡа милләттәрҙең дә йоғонтоһо бар — ғәҙәттә, ундай балалар матур ҙа, һәләтле лә булалар.

Бер ҡарағанда Әлфиәнең күҙгә бәрелеп торған «айырым билдәләре» юҡ та кеүек. Башҡа бик күп ҡыҙҙарҙа була торған сәс, йөҙ, күҙҙәр... Үтеп киткәндә, күтәрелеп тә ҡарамаҫһың. Әгәр ҙә инде күңел күҙең менән дә ҡараһаң, Әлфиәлә башҡа бер ҡыҙҙа ла булмаған һыҙаттарҙы, нескәлектәрҙе табырһың.

Әлфиәгә күҙ йүгертеп алғандан һуң, военком шундай һөҙөмтәгә килде. Ул үҙенең был фекеренән ҡыҙарҙы ла, ахры. Уның үҙенең дә Әлфиә кеүек, хатта бер-ике йәшкә өлкәнерәк ҡыҙы бар, ләкин ирҙәр бер ҡасан да ҡатын-ҡыҙҙарға ҡыҙына йәки ҡәрҙәшенә ҡараған кеүек кенә ҡарамай. Бәлки, бының өсөн уларҙы ғәйепләп тә булмайҙыр. Ҡатын-ҡыҙға ғәмһеҙ, ирҙәргә ҡараған шикелле ҡараған ир ир түгел инде. Ә военком ир ине, уға ҡырҡ биш тә юҡ ине әле.

Военком йә протез ҡулын өҫтәл аҫтына йәшерҙе, йә өҫтәл өҫтөнә ҡуйып, иҫән ҡулы менән иләп кенә һыйпаны. Терһәктән юғары ҡырҡылған ҡулы һыҙлай башлаһа, йыш ҡына шулай итә ул. Военкомдың был хәлен Әлфиә лә аңлай, күрәһең. Ул был кабинетҡа ситән башына менеп ҡысҡырған әтәс һымаҡ ҡуҡырайып керһә лә, военкомдың «тишеп» ҡараусы күҙҙәренән юғалып ҡалды. Әле өҫкө, әле аҫҡы иренен тешләп, илай яҙып бытырланы.

— Иптәш... под... полковник... Шундай бәләкәй булыуыма мин ғәйепле ме ни... Минең дә оҙон кәүҙәле, таҙа булғым килмәйме ни...

Военком уның йәш аралаш әйткән һүҙҙәрен яуапһыҙ ҡалдырҙы. Иҫән ҡулы менән өҫтәл йәшниген тартты һәм үҙ алдына ғына һөйләнде.

— Әлфиә, һин ни эшләп баҫып тораһың әле? — Уның тауышы яғымлы, йомшаҡ ине. Ул өҫтәл тартмаһынан түңәрәк йәлпәк ҡалай һауыт тартып сығарҙы ла Әлфиәгә һуҙҙы. — Ал. Һур. Тыныслан, унан...

Был йылы, йомшаҡ һүҙҙәрҙән Әлфиә саҡ ҡысҡырып илап ебәрмәне. Ҡалай һауытта уның бала сағынан уҡ яратҡан кәнфите — монпаси ине. Ауыҙға һалаһың да, ашыҡмай ғына һурып, кәнфитте тел осоң менән ауыҙыңдың әле бер, әле икенсе яғына күсерәһең. Монпаси аҡрынлап йоҡара, шунан кәнфитте тел осона йәбештереп, теленде сығарып,

...нфитко ҡарайһың, уның шулай тиҙ иреп бөтәүенә үкенә-
һен. О әсәй тағы ҡасан бирә әле...

Әлфиә аңһыҙ рәүештә ҡулын һуҙҙы һәм, эҫе нәмәгә тей-
гәндәй, шунда уҡ тартып алды. Әле генә йөҙөнә сыҡҡан
балалыҡ саткыларын ҡотоң осорлоҡ етдилек алмаштыр-
ды. О уға артыҡ етди булыу килешә лә, килешмәй ҙә ине.

— Һеҙ мине кәнфит менән һыйлап, кәнфитләнергә уй-
лаһығыҙмы? Юҡ! Ризалыҡ һүҙегеҙҙе ишетмәйенсә, уры-
нымдан да ҡуҙғаласаҡ түгелмен. Теләһәгеҙ, милиция са-
ҡыртығыҙ. — Ул, диванға барып, лап итеп ултырҙы та ҡул-
дарын тубыҡтарына ҡуйҙы, күҙҙәрен инде туҙып, уңып
бөткән суҡлы ебәк абажурға йүнәлтте. Был бер ҡараған-
да, оҫтән уйлағанда, көлкө, балалыҡ һымаҡ та, икенсе ҡа-
рағанда, ныҡлабыраҡ уйлаһаң, һоҡланып туя алмаҫлыҡ
ышаныҡлы хәл дә ине.

Күбәләк бит, өрһәң, осоп китерлек. Ә үҙе бөркөт яҙмы-
шын татып ҡарарға теләй. Һуғыш бит күбәләктәр өсөн тү-
гел, бөркөттәр өсөн. Ә үҙебеҙ, үҙебеҙ һуң?.. Революцияны
күкрәктәребеҙ менән һаҡлар өсөн ун алты, ун ете йәше-
беҙҙә ҡулыбыҙға мылтыҡ тотоҡ түгелме һуң? Хәтерләй,
ҡайһы бер малайҙар штык кейҙерелгән винтовканан да бә-
ләкәйерәк ине. Ну, ул саҡта башҡа эш. Революция. Ә ре-
волюциялар, ҡыҫҡа эҫе йәй оҙон һалҡынса йәйгә ҡараған-
да игенде тиҙерәк өлгөрткән кеүек, кешеләрҙе рухи һәм
физик яҡтан тиҙерәк етлектерә. Ә хәҙер, хәҙер һуң? Шун-
дай ҙур, бөтә халыҡты йәлеп иткән афәт катализатор була
алмаймы ни?

Һуғыш... Ҡот осҡос уҫал, аяуһыҙ көс. Ләкин ул кеше-
ләрҙең беләктәрен һәм йөрәктәрен, холоҡтарын һәм рухта-
рын һынай торған тимерлек усағы ла. Быға аса ялтырап тор-
ған, «үтә ҡыҙыл» тойолған кешеләрҙең ҡайһы береһе бик
тиҙ уңа, ә уй-хистәрен бер ҡасан да башҡаларға һиҙҙер-
мәүсе баҫымсаҡ кешеләр тыуған илдәре өсөн йәндәрен фи-
да ҡылырға әҙер икәнлектәрен иҫбат итә.

Һуғыш... һуғыш... бер ҡараһаң, сикһеҙ ҙур афәт, ҡот
осҡос ҡайғы, икенсе ҡараһаң, кешеләр характерын һынау-
сы бөйөк сар ҙа икән ул. Бәлки, атаҡлы немец философы
хаҡлылыр? Нимә тигән әле ул? Һуғыш халыҡҡа, кешегә
ҡан алдырыу әленән-әле кәрәк булған кеүек, кәрәк нәмә.
Юк, был ҡот осҡос әшәке философия!

Таҙа, йәш организмда ҡан үҙенән-үҙе алмашынып, йә-
шәреп тора. Беҙҙең илебеҙ донъялағы бөтә дәүләттәр ме-
нән сағыштырғанда ла иң йәш һәм иң таҙа организмлы
ил...

Военком, протез ҡулына таянып, уй диңгеҙенә батып
ултыра. Эйе, эйе, һәр кеше лә, бер ҡасан да философия

фәнен өйрәнмәһә лә, хатта ундай фәндең барлығын белмәһә лә, тәбиғәте менән философ һәм экономист. Бөтә бөйөк философтар һәм экономистар халыҡтарҙың йөҙәр, меңәр йылдар буйы йыйылып килгән аҡылын туплағандар, дөйөмләштергәндәр, нимәлер өҫтәгәндәр һәм нимәнелер һыҙып ташлағандар. Ә бына «халыҡтарға һуғыш әленән-әле кәрәк», тигән философ, моғайын, үҙе бер ҡасан да халыҡ тормошо менән йәшәмәгәндер һәм, мылтыҡ тотоп, атакаға бармағандыр. Окоп «тәмен» татыған, дары еҫен еҫкәгән философ, моғайын, бөтөнләй башҡаса һайрар ине...

Подполковник протез ҡулын өҫтәл аҫтына йәшерә һәм таҙа ҡулы менән ыуа, һалҡын ҡара резинка бер нәмә лә тоймай, әлбиттә, ләкин бер нисә секунд дауам иткән массаж тәнгә рәхәтлек бирә.

Военком һаман бер ҡиәфәттә абажурға теклəп ҡарап ултырған Ҡамаловаға ҡарап ала — нимә бар һуң шул абажурҙа. Абажур суҡтарына бер нисә себен йәбешеп үлгән. «Иҙән йыуыусыға әйтергә кәрәк, таҙартһын...» Ләкин уйҙар шунда уҡ абажурҙан Әлфиә Ҡамаловаға күсә.

...Ә беҙ уларҙы, хәҙерге йәштәрҙе, ниндәй әрләй торғайныҡ. Ялҡау хөрәсәндәр, дәртһеҙҙәр, бар белгәндәре киң балаҡлы салбар ҙа («Чарльстон»), сыбар галстук... Ә беҙ ун бер, ун ике йәштә һабан һөрҙөк, ер тырматтыҡ, көтөү көттөк, ә ун алтыла революцияны эске һәм тышҡы дошмандарҙан һаҡлап йөрөнөк. Бер телем икмәккә интегеп үҫтек, ә һеҙ, елғыуарҙар, беҙ иккән игендең икмәген генә ашайһығыҙ. Фәлән дә фәсмәтән... Ә бына ошо «елғыуарҙар» ҡот осҡос, быға саҡлы Россия тарихында булмаған яуыз дошмандан һаҡлар өсөн, боепристары бөтһә, самолеттарын таранға алып баралар, билдәренә гранаталар бәйләп, танк аҫтына ташланалар, күкрәктәре менән амбразураларҙы ҡаплайҙар...

«Ғәфү итегеҙ беҙҙе, ғәзиз балаларыбыҙ, артыҡ ҡаты күңелле, миһырбанһыҙ булғанбыҙ, ахрыһы...»

Ә шулай ҙа һуғыш ҡыҙҙар эше түгел. Дөрөҫ, меңләгән ҡыҙҙар үҙҙәре теләп һуғышҡа китте. Разведчиктар, радисткалар, телефонисткалар, зенитчицалар, прожектористкалар, санитаркалар... Хатта летчиктар, танкистар ҙа бар. Ә шулай ҙа... һуғыш бит атышыу, атакаға барыу ғына түгел. Һуғыш кешенән батырлыҡ, тапҡырлыҡ, түҙемлек һәм ҡөҙрәт кенә түгел, арымаҫ-талмаҫ аяҡтар, көслө ҡулдар ҙа талап итә. Ул командалыҡ иткән полкта телефонистка, санитарка ҡыҙҙар бар ине. Уларҙың иҫ киткес, ирҙәр таң ҡалырлыҡ батырлыҡтарын ғына түгел, кешегә күрһәтмәй, бармаҡтарын тешләп, тауышһыҙ ғына илағандарын да күрҙе. Юҡ, улар ҡурҡыуҙарынан, йәрәхәттәренән иламайҙар

ине, ә яраланған һалдаттарҙы һуғыш яланынан һөйрәп сығарырға көстәре етмәгәнлектән, телефон катушкаһын күтәреп йүгерә алмағанлыҡтан күҙ йәштәрен ағыҙалар ине.

Әлфиәнең һикереп тороуы, военкомды ауыр, ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар йөгөнән арындыртты. Ул, ихтимал, военкомды ойоп китте, тип уйлағандыр. Юҡ, улай уйламағандыр Әлфиә. Ҡемдәндер ишеткәне бар: подполковник, ҡу-



Ибраһим Абдуллин. 1944 йыл.

лының һыҙлауына сыҙаша алмай, төндәрен йоҡлай алмай, ыҙаланып үткәрә, ти. Ә бында, эш ваҡытында, ҡаршыһында кеше ултырғанда эсендә йәне булған кеше йоҡлай алмаҫ. Әлфиәнең башына быға са, ни эшләптер, ситтә йөрөгән аҡыллы уй килде. Шул уй уны һикереп торорға мәжбүр итте.

Ни өсөн Әшрәф иптәштәренән ун айға алдан армияға китте? Ә... иҫеңә төштөмө, ҡыҙыҡай? Әлфиә өҫтәл янына килеп, военком ҡаршыһына баҫты.

— Иптәш подполковник! Ә беләһегеҙме, мин бит радиолюбитель дә.

— А-а... — Был «а-аа» нимә аңлатҡанды әле Әлфиә аңламаны.

— Эйе, эйе, ысынлап әйтәм. Һуғышҡа саҡлы радио ратыусылар түңәрәгенә йөрөнөм, — тип алдашты ул, дәлилен көсәйтергә тырышып. Хәйер, юҡ, алдашманы. Уның дуҫы, урам аша торған Әшрәф, радио өсөн йәнен бирергә әҙер ине. Буш ваҡыты булһа, дүрт-биш кеше инһә, шығырым була торған бүлмәһендә-мастерскойында сәғәттәр буйы приемниктар, репродукторҙар йыйҙы, һүтте. Ә Әлфиә уның янында ултырҙы, Әшрәфкә булышты, уның «штаттан тыш» ярҙамсыһы булды. Әшрәф йыш ҡына ҡысҡырып һөйләнә-һөйләнә эшләргә ярата торғайны. «Быныһын бында ҡуябыҙ, ә быныһын иретеп йәбештерәбеҙ...» Теләһә, теләмәһә лә, Әлфиәнең башына керҙе, хәтерендә ҡалды. Ә Әшрәф шундай кеше ине, үҙе белеү генә етмәй, башҡаларҙы ла өйрәтергә ярата ине. Көндәрҙең береһендә ул ҙур ҡара тәрилкәне-репродукторҙы Әлфиәнең алдына ҡуйҙы ла: «Ҡара, тикшер, ни өсөн репродуктор һөйләмәй?» — тип задание бирҙе. Әлфиә тәүҙә ҡулбаштарын һелкетеп алды: «Әлләсе!» Әшрәф «әлләсе» менән генә ҡәнәғәтләнмәне. «Киләсәк заман — радио заманы. Һәр кем радио менән эш итә белергә тейеш. Давай, төҙәт». Ул хатта «мастерскойынан» сығып уҡ китте.

Әлфиә тәки репродукторҙағы етешһеҙлекте тапты һәм төҙәтте. Әшрәф уға иң юғары балды — «5» ҡуйҙы...

Әлфиә йәшереп кенә военкомға ҡарап алды — уның йөҙөндә бер төрлө лә үҙгәреш юҡ ине. Шатланманы ла, ғәжәпләнмәне лә. Ә бына уның һорауы Әлфиәне аяҡтан йыға яҙҙы.

— Атай-әсәйең беләме һуң?.. — Һәм шунда уҡ йәнә һорау өҫтәне. — Улар ризалармы? — Военком һуңғы һорауының урынһыҙ икәнен үҙе лә аңланы. «Һуғышҡа ата-әсә рөхсәтен алып ҡына китәләрме ни? Кәрәк — бына ни өсөн китәләр».

— Рөхсәт итмәһәләр, ҡасып китәм! — Әлфиәнең был һүҙҙәрендә шул саҡлы тәүәккәллек, шул саҡлы ҡыйыулыҡ бар ине, хәҙер уның күңелендә аҙ ғына ла шикләнеү, икеләнеү ҡалманы — эйе, рөхсәт итмәһәң дә, был бөрсә барыбер фронтҡа китәсәк.

— Ҡасып китергә ярамай, Әлфиә, — тине военком дуҫтарса, тыңдаштарсә. — Улар һине аңлар.

Әлфиәнең күңел күгендә өмөт йондоҙо балҡып китте. «Был бит инде «рөхсәт» тигәнде аңлата!»

— Аңларҙар, иптәш гвардия подполковнигы. Фронтҡа киткән бер кеше һәләк булмай ҙа.

Военком өҫтәл өҫтөндә торған никель ҡыңғырауҙың кнопкаһына протез бармағы менән баҫҡылап алды. Күп тә үтмәй бик ҡалын быялалы күҙлек кейгән йәп-йәш лейтенант пәйҙа булды.

— Иптәш лейтенант, Ҡамалованы Алтынсы командаға яҙығыҙ һәм иртәгә үк комиссия үткәрегеҙ.

— Тыңлайым, иптәш гвардия подполковнигы! — Лейтенант шунда уҡ башын Әлфиәгә табан борҙо. — Сәғәт ун ноль-нолгә военкоматта бул.

— Тың-лайым, ип-тәш лей-тенант! — тип ижекләп, өҙөп яуапланы Әлфиә, һәм ошо минутта уҡ уның күңеле тулды — бына-бына сайпыласаҡ та күҙҙәрҙән рәхмәт, шатлыҡ йәштәре атылып сығасаҡ. Хәленең мөшкөллөгөн һиҙҙертмәҫ өсөн, Әлфиә әлеге лә баяғы, уңып, үҙ төҫөн юғалтҡан ебәк абажурға ҡараны. Ә инде лейтенант артынан ишек ябылғас, атылып сығырға торған йәштәр юҡ булғас, ул, ҡыланысыҡ һалдаттар һымаҡ, саманан тыш ҡыландырып (кинолар̧ҙа, театрҙарҙа аҙ күрергә тура килмәне) честь бирҙе.

— Китергә рөхсәт итегеҙ, иптәш гвардия подполковнигы?

— Рөхсәт.

— Есть! — Ул ҡабаланыуынан хата ебәргәнен аңлап, шунда уҡ һүҙен төҙәтте. — Тыңлайым, иптәш гвардия подполковнигы!

Үксәләре менән туҡ-туҡ баҫып ишеккә генә йүнәлгәйне, военком уны туҡтатты.

— Ҡамалова...

Уның йөрәге тибеүҙән туҡтаны — ни булды икән? Әллә кире уйланымы? Әлфиә шым булды. Устав буйынса боролдо, ләкин бейек үксәләр ҡамасауланы — саҡ-саҡ йығылманы.

— Тыңлайым, иптәш подполковник!

— Ә һиңә хәрби кейем килешә, Әлфиә, — тине военком, аталарса йылмайып.

Әлфиә аяҡ бармаҡтарына саҡлы ҡыҙарғандай булды.

— Шулаймы? Рәхмәт инде, — тине ул, бер аҙ ҡыйшаңлап.

Шаулап ишек асылды ла шунда уҡ шапылдап ябылды. Әлфиә юҡ булды.

Йәнә бер кешенең яҙмышында яңы боролош башланды. Әлфиәне аяҡ үрә оҙатып ҡалған военком бик боронғо (моғайын, ул ҡасандыр берәй байҙыҡы булғандыр йәки мөһим учреждениела хәтәр түрә аҫтында торғандыр) арҡа, беләктәр ҡуя торған урындары һырлап, биҙәп эшләнгән креслоға ултырҙы. Ғәҙәткә кергән хәрәкәт менән протез ҡулын ыуып алды.

«Балалар һуғышҡа ана шулай ашҡынып, ярһып китәләр, ә бына нисек әйләнеп ҡайтырҙар?»

Уның фронттағы улынан өс ай инде хат та, хәбәр ҙә юҡ ине...

## «ӘРЛӘМӘ МИНЕ, САФУАН АҒАЙ...»

Ишек башына эленгән боронғо ҡыңғырау күңелле итеп сылтыраны. Тәүҙә ике тапҡыр ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына итеп иҫкәртеп, ә унан һуҙып, оҙаҡ итеп: «Сылтыр! Сылтыр! Сылты-ыррр...» Был Сафуан ағай ине. Тәүҙә Әлфиә туңып ҡалды, унан ялҡынға әйләнде. Күҙ асып йомғансы ул өҫтөндәге гимнастерканы һалды ла постель аҫтына тыҡты, ҡул аҫтында торған пинжәкте яурынына һалып, соланға ишек асырға сыҡты.

«Нимә, көпә-көндөҙ йоҡлап ятаһығыҙмы әллә бөтәгеҙ ҙә бер юлы мәрткә киттеме?» — тигән ризаһыҙ тауыш ишетелде тыштан.

— Ойоп киткәнмен... Ай! — тип иҫнәгән булды Әлфиә.

Тышҡы ишек асылды, арыуы йөҙөнә сыҡҡан Сафуан күренде.

— Ну йоҡларға ярата һың да, Иркәбикә, — инде уның тауышы асыулы түгел ине. — Тиҙ генә сәй ҡайнат, картуф ҡыҙҙырып ал. Ҡапҡылап алам да ДКА *-ға барам. Киров районы пионерҙары менән фронтовиктар осраша. Хәрби кейемдә, булған орден-миҙалдарҙы тағып килергә ҡуштылар.

Әлфиәгә, әйтерһең, ҡапыл паралич булды. Сафуан тиҙ генә «ирҙәр яғынан» урап сыҡты.

— Минең гимнастерканы күрмәнеңме?

— К-күрмәнем...

* *ДКА* — Дом Красной Армии. Хәҙерге офицерҙар йорто элек шулай атала ине.

— Әсәй йыуғандыр тиһәң, гимнастерка йыуып, утекләнгән көйгә ине. Миҙалдарҙы ла тағып ҡуйғайным.

— Ә м-миҙалдар к-комодта, — тине Әлфиә тағы ла ныгыраҡ тотлоғоп.

— Ҡомодта? — Сафуан ошо һүҙҙәрҙән һуң ғына һеңлеһенә күтәрелеп ҡараны, башына бәйләгән көтөк косынкаһына иғтибар итте.

— Һал әле косынкаңды!

— Әрләмә мине, Сафуан ағай... — Ул ашыҡмай ғына косынкаһын һыҙырып төшөрҙө.

Баҙарҙа барышник атты ҡараған шикелле, Сафуан аҫҡы иренен һалындырып, мыҫҡыллы йылмайып, ашыҡмай ғына Әлфиәне әйләнеп сыҡты. Ни өсөндәр, сәсенә ҡулын да тейҙереп алды. Ҡырҡылған сәстең остары усҡа сәнселеп тора ине.

— Былай ныгыраҡ килешә икән, — тине ул, Әлфиә көтмәгән һөҙөмтәгә килеп, билдәренә таянып. — Тегеләй ни малай, ни ҡыҙ түгел инең, ә былай настоящий малай.

Был һүҙҙәрҙән ҡанатланған Әлфиә ялт итеп постель аҫтынан ағаһының гимнастеркаһын килтереп сығарҙы. Сафуандың сәстәре үрә торҙо.

— Был кемдеке... минең гимнастеркамы?

— Һ-һинеке, — тине Әлфиә, тағы тотлоғоп.

Сафуан гимнастерканы тартып алды.

— Ә мин... ДКА-ға мин хәҙер нисек барам?

— Ә уға бер ни ҙә булмаған, Сафуан ағай. Мин уны тарайттым, ҡыҫҡарттым ғына. Хәҙер һүтәм дә живо үтекләп бирәм.

Ағаһы уны муйынынан ҡосаҡлап алды, сөнки ул Сафуандың ҡултыҡ аҫтынан ғына ине.

— Һуғыш тураһында берәй нәмә әҙерләйһегеҙме әллә?

Әлфиә йәшермәй, тамсыһын да ҡалдырмай, ентекләп бөгөн башынан үткәндәрҙе һөйләп бирҙе. Ул, Әлфиәнең хикәйәһе бөткәнсе бер һүҙ әйтмәй, бүлдермәй, тәҙрәгә маңлайын терәп, өндәшмәй баҫып торҙо. Һөйләп бөткәс, Әлфиә тын алырға ҡурҡып көттө. Хәҙер ағаһы уны өгөтләй, тиргәй башлаясаҡ, уның иң нескә ҡылдарына сиртергә тырышасаҡ, ләкин ул һаман, маңлайын тәҙрә быялаһына терәп, һүҙһеҙ торҙо, әйтерһең, тәҙрәнән аҡыллы кәңәш көттө.

Сафуан бөтә туғандары араһында Әлфиәне ныгыраҡ иҫләй, яҡын күрә, һәр ваҡыт, һәр эшен яҡлай, мөмкин булғанда ел-ямғырҙан һаҡлап алып ҡалырға тырыша, ә бына был юлы, күрәһең, ул һеңлеһенең аҡылһыҙ ҡыланышын хупламай, буғай. Әлфиә ағаһының шул саҡлы оҙаҡ, ғәмһеҙ баҫып тороуына түҙә алманы, уны ҡосаҡлап алды.

— Сафуан ағай... Нисә бер һүҙ әйтмәйһең? Әрләмәйһең дә, маҡтамайһың да.

Сафуан уға табан боролдо. Уның зәңгәр күҙҙәре (арала ул, кемгәлер оҡшап, зәңгәр күҙле ине) ҡараһыуланып, һорғолт төҫкә кергәйне. Ул ологайып киткән төҫлө тойолдо.

— Ниндәй команда ул Алтынсы команда?

— Белмәйем, — тип бышылдап яуапланы Әлфиә. — Һорарға ҡыйманым. Хәйер, һораһаң да әйтмәҫтәр ине.

— Уныһы шулай... — Сафуан уртаһына ике тишек тишелгән артһыҙ ултырғысты, баш бармағы менән әләктереп, аҫтына ҡуйҙы. Ҡеҫәһенән тәмәке янсығы алды. Гармун шикелле төрөлгән газетанан бер папирослыҡ ҡағыҙ йыртты, «кәзә тояғы» яһаны. Йөрәк һүрәте, ә йөрәктә «Ф. У.» тигән хәрефтәр сигелгән ҡыҙыл янсыҡтан (Сафуанға уны госпиталдә ятҡанда витамин заводының ҡыҙҙары бүләк иткән) «самосад» семтеп алып, бөртөгөн төшөрмәй генә «кәзә тояғының» йыуан башына тултырҙы, заводта үҙе яһаған зажигалканан көйрәтте һәм шул минутта уҡ бүлмәгә әсе төтөн таралды. Ә Әлфиә, уға ҡарай-ҡарай, гимнастерканың бөкләнгән итәген һүтте, тарайған яғаһын, ҡулбаштарын киңәйтте.

Шундай оҙаҡ итеп төргән тәмәкене Сафуан ике-өс кенә һурҙы ла һүндереп, тәҙрәнән тышҡа ырғытты. Торҙо. Һеңлеһенең эшенә ҡарап, һүҙ башланы.

— Аңлайым мин һине, туғанҡайым. Хәҙер Ҡамаловтар ғаиләһе һалдаттар ғаиләһе түгел. Мәсғүт хәбәрһеҙ юғалды, мин — инвалид, атайҙы трудармияға ла алманылар... Ә һуғышта һәр ғаилә лә ҡатнашырға тейеш. — Ул тағы ултырғысҡа ултырҙы. Устарын шапылдатып алды. — Ә әсәй... әсәй хаҡында уйланыңмы һин?

Әлфиә ағаһына военкомға әйткән һүҙҙәрҙе ҡабатланы.

— Һуғышҡа киткән бер кеше үлмәй бит, ағай.

— Үлеүен үлмәй... һәр кем дә һуғышҡа, мин үлмәм, тип керә... — Ул Әлфиә янына килде. Ипләп кенә уның тар, нәфис яурынына ҡулын һалды. — Мин һине ҡурҡытырға, өркөтөргә уйламайым, Әлфиә, әммә тағы бер тапҡыр киҫәтәм. Һуғыштың иң еңел, анһат тигәне лә кинокартиналарҙағыға, китаптағыға ҡарағанда йөҙ, мең тапҡыр ауырыраҡ. Әгәр ҙә инде һин Ҡамаловтар ғаиләһенән фронтҡа китергә уйлаһаң, Ҡамаловтар исеменә тап төшөрөрлөк булма. Ни генә күрһәң дә! Тағы шуны әйтәйем, юҡҡа әтәсләнмә, һәм бер ҡасан да шыңшыма. Шыңшырлыҡ булһаң, үҙең теләп китмә. Минең өгөт-нәсихәтем шул, — Сафуан ҡулын уның яурынынан алды.

Әлфиә был фатиха һүҙҙәренән ҡапыл талпынып китте, ағаһын ҡосаҡлап алғанын үҙе лә һиҙмәне.

— Аңланым... Рәхмәт яҡшы һүҙҙәреңә, Сафуан ағай. Әтәсләнмәм дә, шыңшымам да. — Эшлекле тауышҡа күсеп өҫтәп ҡуйҙы. — Хәҙер һүтеп бөтөрәм дә үтекләп алам.

— Ә был... — Сафуан, уның янынан китеп, боронғо, ситтәре һырлап эшләнгән күпкән «ҡорһаҡлы» комодтың уң яҡтағы өҫкө тартмаһын тартты һәм унан шырпы ҡабы алды. Ҡапты һеңлеһенә һуҙҙы. — Тот. Юғалтма.

Әлфиә, ғәжәпләнеп, бер аҙ шикләнеберәк, шырпы ҡабын алды.

— Нимә ул? — Әлфиә ҡапты асты. Унда автомат патроны ята ине. Әлфиә, күҙҙәрен ҙурайтып бер ағаһына, бер сәтәкәй бармаҡ саҡлы ҡурғаш башлы һалҡын нәмәгә ҡараны. Йөрәге ҡапыл әллә ни эшләп китте.

— Ниңә һин уны миңә бирәһең?

— Мин уны автомат магазинында түгел, йөрәгем янында, гимнастерка кеҫәһендә йөрөттөм. Ул-был булһа тип.

Әлфиә, аңлайым тигәндәй, башын ҡаҡты.

— Һуғыш бит, уйын эш түгел, — тип өҫтәп ҡуйҙы Сафуан.

— Эйе, эйе, уйын эш түгел, — һәм һис шикләнмәҫлек итеп ағаһын ышандырҙы. — Ни генә күрергә тура килмәһен, башымды эймәм, Сафуан ағай.

— Ышанам. Ышанам мин һиңә, Әлфиә. Һин үлһәң үлерһең... — Сафуан был һүҙҙең урынһыҙ булыуын аңлап, телен тешләне. Барып һеңлеһен ҡосаҡланы. Ҡорһонөп ҡуйҙы, бер кемгә лә туғанын, яҡын кешеһен һуғышҡа оҙатыуы еңел түгелдер. — Хәҙергә әсәйгә бер һүҙ ҙә әйтмә, комиссия үтәһең бар әле... Һуңғы минутта әллә ни булып ҡуйыуы бар. Давай, гимнастерканы үтеклә. Мин бәрәңге ҡыҙҙырып алам.

Әлфиә бөгөн иртән уң аяғы менән торғандыр, ахрыһы, иртәнән алып яҙмыш уға гел йылмайып ҡына тора. Әгәр иртәгә комиссия «отказ һуҡмаһа»... һуғырға тейеш түгел, ул бит былай ҡарап тороуға ғына сибек, ә үҙенең ғүмере эсендә йүтәл төшкәне лә юҡ, өҫтәүенә, немец телен белә, әгәр ошоноң өҫтөнә радионы белеүҙе лә өҫтәп ебәрһәң... Юҡ, кире ҡағырға тейеш түгелдәр. Хаҡтары юҡ!

Әлфиә үҙ дәлилдәренә үҙе шул саҡлы ышанды, хатта ауыҙ эсенән көйләй-көйләй үтекте ҡыҙҙыра башланы. «Иң мөһиме — алдыңа ҡуйған маҡсатыңа ирешермен тип ышанырға, шуға ынтылырға кәрәк. Ул сағында кеше өсөн бер төрлө кәртә юҡ, упҡындар ваҡ-төйәк соҡорға әйләнә һәм уларҙы һикереп сығырға була».

Әлфиә үтеккә, төкөрөп, бармаҡ бите тейҙереп алды. Төкөрөк шунда уҡ сыж-ж итеп парға әйләнде. Әлфиә өҫтәлдәге одеял өҫтөндә еңдәрен айырып ятҡан гимнастерка-

ға тиҙ генә һыу бөрктө лә ҡыҙған үтекте ары-бире йөрөтә башланы. Шул секундта уҡ бүлмәгә көйөк еҫе таралды.

— **Эй, ҡыҙыҡай,** — тине Сафуан асыуһыҙ тауыш менән, — һин минең мундирҙы ҡойҡаға әйләндереп ҡуйма тағы.

Әлфиә, үтекте күтәрә төшөп, буш ҡулын гимнастеркаға тейҙереп алды — ҡурҡырлыҡ бер нәмә лә юҡ ине.

— Сафуан ағай, ә һеҙҙең полкта ҡыҙҙар бар инеме?

Ағаһы яуап бирергә өлгөрмәне, ишек ҡыңғырауы шалтыраны. Әйткәндәй, һәр кемдең үҙ «почеркы» бар ине. Атаһы эшлекле итеп, рәттән ике тапҡыр шалтыратып алыр ҙа, өндәшмәй, түҙем генә көтөр, асмаһалар, йәнә шул уҡ сигналды ҡабатлар. Азаттың звоногы быҙау муйынына тағылған ҡыңғырауҙы хәтерләтә. Фидан бармағын алмай, оҙаҡ итеп, үҙ тауышына үҙе һоҡланған йырсы һымаҡ, ҡыңғырауҙың тауышын тыңлап, шалтыратырға ярата. Сафуан ағаһы, әллә һуғышҡа саҡлы шофер булып эшләгәнгә, арала иң «профессионал» сигнальщик ине. Уның сигналында йә ашығыу, йә шатлыҡ, йә кәйеф юҡлығы һиҙелә ине. Шоферҙар бит юл уртаһында таш ятҡанды күрһә, ашыға-ашыға йыш-йыш сигнал бирә, боролманан ҡапыл килеп сыҡҡан кешене күрһә, пожар сигналы кеүек хәбәр итә, юл буйында дуҫын осратһа, эшләпәһен һалып, «сәләм-әм!» тигән алсаҡ кеше һымаҡ иплəп кенә, көйләп кенә ҡысҡырта.. Ә Мәсғүт ағаһы... Хәбәрһеҙ юғалған Мәсғүт ағаһы нисек шалтырата ине әле?

— Әлфиә, нимә, ишетмәйһеңме әллә? — тип Сафуан ағаһы уны уйҙарынан бүлде һәм ул үтеген дә ҡуйып тормай, ашығып ишек алдына сығып китте. «Хәҙер, әсәй!» — тип кире кереп, үтеген тимер селтәргә ҡуйҙы, башына косынкаһын элде лә ишек асырға сыҡты.

— Сафуан ағайҙың гимнастеркаһын үтекләй инем, — тип ул, аҡлана-аҡлана, әсәһенең ҡулынан сумкаһын алып, уға юл бирҙе, өйгә ингәс, сумканы ултырғысҡа ҡуйҙы ла кухняға инеп юғалды, әсәһенә ҡырҡмыш тай ялы һымаҡ башын күрһәтергә баҙнат итмәне ул.

Ниһайәт, гимнастерка йәнә элекке рәүешенә керҙе.

— Кейергә мөмкин, — тине Әлфиә тантаналы тауыш менән, гимнастерканы ике ең осонан йәйеп тотоп, әйтерһең, ул үҙе боҙған гимнастерканы элекке хәленә ҡайтармаған, ә иҫкене яңы иткән.

— Ултырғыс арҡаһына ҡуй, — тине ағаһы сыжлап маргаринда ҡыҙыусы йоҡа бәрәңге киҫәктәрен бысаҡ осо менән әйләндереп. Әсәһе Әлфиәгә өндәште. Әлфиә косынкаһын тарта-һуҙа һәйбәтләп бәйләне лә әсәһе янына сыҡты.

Ҡыҙыҡ яратылған да инде был кеше. Иң түҙемһеҙ кешеләр ҙә, күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғы баштарына төшкәндә, тыштан тыныс ҡына ҡала беләләр, холестеринды ҡанда иреткән шикелле, ҡайғы-хәсрәттәрен йәшереп ҡала алалар, ә бына иң тотанаҡлы, бәләкәй генә шатлыҡтары булһа ла, түҙә алмай. Юҡ, тыштан улар ҙа тыныс күренергә тырыша: хәрәкәттәре лә, һөйләшеүҙәре лә, ҡыланыштары ла шул уҡ кеүек, ә бына күҙҙәре — күңел көҙгөләре... Әлфиә лә, шатлығының түгелеп торғанын һиҙенеп, әсәһенең ҡушҡанын эшләне лә, ишек алдына йүгереп сығып китте.

— Әсәй, мин Әклимә янына кереп сығам!

Әммә әсәһе... Әсә йөрәге тәбиғәттең иң бөйөк камиллығы бит ул — бына әле лә. Әсә ҡыҙының, ғәҙәттәгесә, түгелгеген һиҙенеп ҡалды.

— Сафуан... Беҙҙең Әлфиәгә ни булған икән? Ихтимал, беренсе мөхәббәт саҡҡыһы өттөрөп алғандыр. Ваҡыт. Хәҙер бит инде ул ун һигеҙ йәштә.

Сафуан, бер нәмәгә иғтибар итмәй, тәмле еҫ сығарып ҡыҙыусы картуф киҫәктәрен әйләндереүен дауам итте. Бәлки, ул да йөрәгендә ҡайнап торған тулҡындар менән әсә күңелен көйҙөрмәҫкә теләйҙер.

— Белмәйем, — тине ул, башын күтәрмәй генә, бысаҡ осо менән иң матур булып ҡыҙарған картуф киҫәген ауыҙына ҡабып.

— Күҙҙәре йылтырай.

— Ә... ә... Ихтимал, Әшрәфтән «ҡарлуғас ҡойроғо» * алғандыр.

— Иншалла! Суфия, байтаҡтан инде ҡустымдан хәбәр юҡ тип, көйәләнеп йөрөй ине...

Ә Сафуан һаман картуф киҫәктәрен әйләндерҙе лә әйләндерҙе. Һуғыш ваҡытында маргаринда йәки көнбағыш майында ҡыҙҙырылған картуфтан да тәмлерәк тағы ниндәй аҙыҡ булды икән?..

Ә ошо ваҡыт Әлфиә тәҙрә рамына «туҡ-туҡ-туҡ!» итеп шаҡыны ла, Әклимәнең башы күренгәс, «әйҙә!» тигәнде аңлатып, башын ҡаҡты. Әклимә, ризалашып, икеләнеп, эйәген һелкте.

Әлфиә, тәҙрә ҡапҡасына арҡаһын терәп, осо күккә терәйеп торған ҡарт тирәк ботаҡтарына ойлаған ҡара ҡарғаларҙың «манёврҙарын» күҙәтә башланы. Ҡарғалар өҙлөк-

---

* «Ҡарлуғас ҡойроғо» тип һуғыш ваҡытында өс мөйөшләп бөкләнгән хатты әйтәләр ине. Бәлки, конверттың ҡарлуғас ҡойроғона оҡшауынан ғына түгел, уның зарығып көтөлгән хәбәр алып килгәне өсөн шулай әйткәндәрҙер.

һөҙ шаулайҙар, ҡарҡылдайҙар, ояларын тирәләй осоп йөрөйҙәр, күрше ағасҡа ҡуныпһ ояларын күҙәтеп торалар. Кешегә аңлашылмай, әллә улар ғәйбәт һөйләшәләр, әллә бәхәсләшәләр...

Әлфиә хәтерләй. Март урталары ине булһа кәрәк. Яҙ хәбәрселәре — ҡара ҡарғаларҙың килгән генә сағы. Һәр бер парлашҡан ғаилә үҙенә оя өсөн уңайлы ағас эҙләй, былтырғы ояға «капремонт» яһап, яраҡлаштырырға самалай. Ҡыҫҡаһы, ҡарғаға эш муйынынан. Һуң! Улар нисәмә мең километр араны кескәй генә ҡанаттары менән талпынып, бала сығарып үҫтерер өсөн, бында килгән бит. Дөрөҫ, бөтә ҡарғалар ҙа оя хәстәрләмәй ине. Һуңлаған йәки ҡылыҡтары менән талымсан булған ата ҡарғалар, бөтә һәләттәрен, көстәрен һалып, кәләш эҙләй ине. Бигерәк тә бер инә ҡарға өсөн ҡаты тартҡылаш барғайны. Көндәш кейәүҙәрҙең һауала ҡауырыйҙары оса, «ҡар-ҡа-арр!» тигән йәмһеҙ тауыш тирә-яҡҡа тарала. Ниһайәт, ике кейәүҙең берәһе бирелде — ҡанаттарын ауыр, һалмаҡ елпеп китеп барҙы. Әгәр ҙә ата ҡарға оя яһағансы үҙенә кәләш таба алмаһа, меңләгән километр ара (ҡарғалар араны ниндәй үлсәү менән үлсәйҙәр — Әлфиә әйтә алмай) юҡҡа үтелгән, яҙ, йәй заяға китте тигән һүҙ. Әлфиәнең был турала уҡығаны бар ине. Уға буйҙаҡ ҡарға ҡыҙғаныс тойолдо. Осоп менеп, уны йыуатҡыһы килде. Эйе, кешеләр донъяһында ғына түгел, йәнлектәр, ҡоштар донъяһында ла яңғыҙҙар, буйҙаҡтар, толдар күп. Ә был һуғыштан һуң кешеләр донъяһында тағы ла күберәк буласаҡ. Көн һайын военкомат мисәте баҫылған хаттар килеп тора бит. Фәҡәт улар урамында ғына ун ғаилә «похоронка» алды. Ә һуғыш бөтөргә ай-яй күп әле. Немец Ленинград янында һәм Ростов ҡапҡаһы төбөндә. Харьковты фашист итеге тапай... Ихтимал, ҡарғалар үҙҙәренә пар табырҙар ҙа, ә бына тол ҡатындар...

Әле ҡарғалар шат ҡарҡылдайҙар ине. Хәйер, ҡарға телен, ҡарға тауышын ҡайҙан айыраһың, нисек аңлайһың инде! Мөхәббәт тураһында һөйләшәләрме улар әллә нәфрәттәрен белдерәләрме... Беҙҙең «туң» ҡолаҡ өсөн барыбер: «Ҡар-ҡар-р...» Бәлки, «һинең тауышыңдан ҡарға тауышы танһыҡ», тигән әйтем дә урынһыҙҙыр...

«Ҡыҙыҡ, ни нәмә хаҡында улар гәпләшәләр, ниндәй ҡайғы-шатлыҡтар менән яналар икән?» Бәлки... улар ҡайғыра ла, шатлана ла белмәйҙер... Белмәйҙер... Ә ни эшләп тәбиғәт тигән алла кешеләрҙе генә телле, шатлана-ҡайғыра белә торған итеп яратты икән? Бөтә йән эйәһен, тауҙарҙы, таштарҙы, урмандарҙы, һыуҙарҙы, ер аҫтындағы байлыҡтарҙы кешегә буйһондорор өсөн яратҡан... Улайһа, ни нәмә етмәй кешегә? Донъя киң, ер сикһеҙ бай бит...

Болдор башында Әҡлимә күренде. Ул уйҙары менән күккә олғашҡан әхирәтенә ҡарап алды ла мыҫҡыллы һораны:

— Ҡарғалар тормошона ҡыҙығаһыңмы?

Әлфиә, атылып килеп, уны ҡосаҡлап алды.

— Булдыҡай, Әҡлимәкәйем!

— Ҡасан беҙҙе ташлап китәһең?

— Иртәгә комиссия. Ә комиссиянан һуң оҙаҡ тотмайҙар ииде ул.

— Көнләшәм...

Был Әлфиә өсөн яңылыҡ ине. Ул әхирәтен бер нәмәгә иҫе китмәй, донъяға төкөрөп ҡараусы, бөгөнгө көн менән генә йәшәүсе ғәмһеҙ бер йән эйәһе тип уйлай ине.

Ә Әҡлимә күңел ишеген тағы ла нығыраҡ аса төштө.

— Мин бына идеалһыҙ кеше, Әлфиә. Маҡсатһыҙ. Сәмһеҙ. Әсәйем, ундай кешеләр бәхетһеҙ була ул, ти...

Әлфиә уны нығыраҡ ҡосаҡланы... Ҡапыл Әҡлимә уға ҡыҙғаныс булып тойолдо.

— Һөйләмә юҡты, Әҡлимәкәйем. Кемдең бәхетле, кемдең бәхетһеҙ буласағын әйтеүе ҡыйын әле. Беҙҙең серҙәрҙе эсенә йыйып торған «Серле таш»ыбыҙ янына барабыҙмы?

Ғәҙәттә ун һүҙгә бер һүҙ менән яуап биреүсе, бер аяғын атлағансы, икенсе аяғын эттән ашатҡан Әҡлимә был юлы гел Әлфиәнән алдан барҙы, юл буйы һөйләнде.

— Үлем хаҡында уйлайһыңмы, Әлфиә?

— Башыма кергәне юҡ. Сафуан ағай, һуғышҡа кергәндә һәр кем, пуля мине урап үтәсәк, мин иҫән ҡаласаҡмын, тип уйлай, ти.

— Ә һин ысынлап та иҫән-һау ҡаласаҡһың, Әлфиә, — ул туҡтаны ла Әлфиәне ҡосаҡлап алды. Әҡлимә өрөп ҡабартылған кеүек, тулы, таҙа ҡыҙ ине. Әлфиә гел эсенән генә уның түмһәләк шикелле ҡалҡып торған ҙур, тығыҙ күкрәгенә ҡыҙыға ине. — Һин үлһәң, мин дә һағышымдан, ҡайғымдан үләсәкмен, Әлфиә.

Әлфиә иләп кенә уның эҫе ҡуйынынан сыҡты.

— Ярай, һине иҫән ҡалдырыр өсөн булһа ла, үлмәҫкә тырышырмын, — тине ул әхирәтенең йомшаҡ, шалҡан кеүек аҡ ҡулынан тотоп.

Һүҙҙәр бөткәндәй булды. Һөйләшмәй генә барҙылар. Ә ҡарғалар һаман ҡарҡылдандылар ҙа ҡарҡылдандылар... Һәм бына ул әхирәттәрҙең серҙәрен һаҡлаусы «Серле таш». Ағиҙелгә тәгәрәп төшөрҙәй булып текә яр башында саҡ ҡына эләгеп тора. Бер бармағың менән төрт, юлындағы ваҡтөйәк таштарҙы вата-емереп аҫҡа, Иҙелгә тәгәрәйәсәк. Ә бына үҙен бер кем дә тәгәрәтә алмай. Бер, ун, йөҙ кеше

генә түгел, йөҙәр йылдар ҙа уны тыуған еренән айыра алмай. Нык йәбешкән. Бәлки, мәңгегә береккәндер.

Был таш янына тәү тапкыр уларҙы Әшрәф алып килгәйне. Әлфиә ул сакты иҫенә төшөрөп, ике бармағын ауыҙына тығып, малайҙарса асы итеп һыҙғырып ебәрҙе. Ағиҙелдә яҫы төплө такта кәмәлә утынға, өй һалырға бүрәнәләр йыйып йөрөүсе ике малай Әлфиәнең һыҙғырыуын ишетте, ахрыһы, нимәлер кыскырып, багурҙарын күтәреп болғанылар.

Әклимә лә һыҙғырырға итте, тик ауыҙҙан һыҙғырыу урынына шышылдау ғына сыкты. Ә бына нықыш йән Әлфиә ни етте малайҙарҙан оҫтарак һыҙғыра. Капыл Әклимә көтөлмәгән һорау бирҙе.

— Ә һин уны яратаһыңмы, Әлфиә?

— Кемде ул «уны»?

— Белмәмешкә һалышма.

— Ә мин алдаша, хәйләләшә белмәйем, Әклимә.

— Мин дә бит уны яратам... — Әклимәнең тауышы ишетелер-ишетелмәҫ сыкты, әйтерһең, уның тыны кыҫылды йәки ул таш ишетмәһен тип куркты. Әклимә, әхирәтенең тар, ябык яурынына калын бөҙрә сәсле башын куйып, үкһеп иларға тотондо.

Әлфиә өсөн был аяҙ көндө йәшнәгән йәшен менән бер булды. Каушап китте. Бер генә йылы, йыуатыу һүҙе лә таба алманы. Шул саклы көтөлмәгән, уйланмаған һүҙҙәр ине был...

— Йә... Кит әле... Малайҙар өсөн дә ила... — Был һүҙҙәр хак та, ялған да ине. Ул бит әлегә саклы дуҫлык менән мөхәббәтте, мөхәббәт менән мауығыуҙы айыра алмай.

Улар Ағиҙелгә карап, аяктарын һалындырып, йомарт йәй кояшы кыҙҙырған ташта ултырҙылар. Тағы һүҙ бөттө. Ә аҫта, Ағиҙелдә, ике батыр малай багурҙар менән һалдан айырылып калған бүрәнәләрҙе «абордаж»ға ала ла яр ситенә һөйрәп алып китә. Быйыл һыу күп булды. Ағиҙел, йәрминкәлә типтергән купец һымак, ярҙарынан сыкты, Нижегородканы, Сиған полянаһын баҫты. Күпселек йорттар «теҙҙән», «күкрәктән» болғансык һыу аҫтында калды. Үҙ һүҙлеләр, нықышырак кешеләр һыу баҫмай торған йорттарға күсеп китмәне, сарҙакта булһа ла йәшәй бирҙе. Хәйер, Сиған полянаһында күпселек өйҙәрҙең сарҙактары ла йәшәргә кулайлаштырып эшләнгәйне. Дөрөҫөн әйткәндә, күсер урын да әллә ни юк ине. Өфө халкы бермә-бер арткайны — Киевтан, Мәскәүҙән эвакуацияланып килгән рустар, украиндар, еврейҙәр менән тулған. Уларҙы кейемдәре, атлап йөрөштәре, һөйләшеү манералары менән Өфө кеше-

ләренән еңел айырып була ине. Бигерәк тә һуғыштың тәүге йылында. Тора-бара уларҙың да кейемдәре туҙа башланы, ботинка, туфли үксәләре ашалды, ҡыйшайҙы, аҡса запасы бөттө, һатылыр кейем-һалым һатылып, аҙыҡ-түлеккә алмашынды һәм «эвакуированныйҙарҙы» урындағы халыҡтан айырып булмай башланы. Ул ғына ла түгел, баш ҡаланан килгән кешеләрҙәге тәкәбберлек тә айҙан айға, йылдан йылға кәмер һәм улар ҙа, провинция кешеләре һымаҡ, ябайлашыр, бер ҡатлыланыр. Ул ғына түгел, һуғыш бөтөр, күсеп килеүселәр йәнә үҙ ҡалаларына, үҙ яҡтарына ҡайтып китер, әммә ауыр эвакуация йылдары йөрәк төбөндә, аҙашҡан кешегә осраған маяҡ уты һымаҡ, торор. Ҡәһәрле йылдарҙа йылы урын биргән Өфө кешеләре, һағынып, ихтирам менән иҫкә алыныр...

Һуғышҡа саҡлы Нижегородканы, Сиған полянаһын (уға Кооператив полянаһы тигән исем ҡушһалар ҙа, яңы исем тәки йәбешмәне) һыу баҫҡан йылдарҙа, йәштәр өсөн һабантуй була торғайны. Бигерәк тә кистәрен. Йөҙләгән кәмәләр. Алты-ете кеше һыйырлыҡ яҫы төплө «диңгеҙ» карантары, соҡоп бүрәнәнән яһалған бер генә кеше ултырырлыҡ байдаркалар... Һәр кәмә башында йә электр фонары, йә «летучая мышь» тип аталған фонар. Гармун, мандолина, балалайка, йыр, шат ауаздар төн уртаһына саҡлы дауам итә...

Әлфиә йыш ҡына, их, ниңә беҙҙең яр бейек булды икән, ниңә беҙҙең яҡты ла һыу баҫмай икән тип, Сиған полянаһы йәштәренә көнләшеп тә ҡуя торғайны.

Дөрөҫ, ташыу йәштәргә шатлыҡ килтерһә лә, ололарға, йорт хужаларына йәй буйына етерлек мәшәҡәт тә ҡалдырып китә: өйҙө, һарайҙы, мунсаны төҙәтергә, ҡапҡа-ҡоймаҡны буярға. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар башҡа урынға, һыу баҫмай торған ергә күсергә теләмәйҙәр. Күрәһең, мәшәҡәте генә түгел, төшөмө лә барҙыр ул урындың. Өфө баҙарҙарында тәү күренгән йәшел һуғанды, бәрәңгене, ҡыяр-помидорҙы, ғәҙәттә, Сиған полянаһы кешеләре килтерә. Ҡыҙыл сырайлы йыуан ҡатындар, боронғоса ҡалдырып һаҡал үҫтергән ҡарттар иртә өлгөргән йәшелсәләренә сәстәр үрә торорлоҡ хаҡ һорайҙар, ләкин барыбер һатып алыусылар табыла: берәүгә ҡунаҡ килгән, икенсеһенең туйы, өсөнсөһөнөң кемелер больницала ята... Сиған полянаһы кешеләре үҙҙәренең һаранлыҡтары менән Өфөнөң башҡа халҡынан нык айырылып торһа ла, быны спекуляция, тип әйтеп булмай — үҙ ҡул көстәренең емеше бит. Аяҡ-ҡулдарың тәпелдәмәһә, ауыҙың сәпелдәмәй, тиҙәр.

Быйыл Ағиҙел шаҡтай ташһа ла, йәштәр өсөн һабантуй булманы. Дөрөҫ, һирәк-мирәк кенә йә тегендә, йә бын-

да гармун моңо, йыр ишетелгеләне, әммә һуғышҡа саҡлы булған ғәмһеҙ көләүҙәр, шат йырҙар яңғырамаңы. Һуғыш халыҡтың елкәһенә һәм күңеленә сикһеҙ ауыр йөк булып төштө. Артыҡ күп ҡорбан талап итте был һуғыш, ә түгелгән күҙ йәштәрен бергә йыйһаң, ихтимал, ташҡан Ағиҙел һыуынан да күберәк булыр ине. Ләкин һуғыш ваҡытында халыҡтың бөтә эше илау ҙа уфтаныу ғына ине тиһәң, һис тә дөрөҫ булмаҫ. Ана, кескәй генә кәмәлә бот буйы малайҙар багур менән бүрәнәләр «аулап» йөрөй. Тимәк, улар өйҙәрен һипләргә самалайҙар. Тимәк, өмөт менән йәшәйҙәр. Ә өмөтһөҙ, халыҡ әйтмешләй, шайтан ғына булыр, ти.

Был уйҙарҙан Әлфиәнең күңеле күтәрелеп китте һәм ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, йырлай башланы.

Ағиҙелгә ағып төшә
Топориндың йылғаһы...

Әлфиәнең тауышы әллә ни моңло түгел, әммә ихлас сыҡҡан йыр күңелдең иң нескә ҡылдарын да тирбәтә ине. Әклимә уны хисләнеп ҡосаҡлап алды.

— Һин ни эшләп әле күптән онотолған йырҙы иҫеңә төшөрҙөң?

Әлфиә, оноттоңмо ни, был бит Әшрәфтең яратҡан йыры, тип әйтмәксе булғайны, тыйылды.

— Ә... былай ғына. Әллә ни эшләп иҫемә килеп төштө инде, — тип хәйләләште ул. Понтон күпер аша һирәк-мирәк иҫкереп бөткән «газик»тар, «зис»тар үтеп киткеләй. Улар, майламаған арба соҡор-саҡырлы юлдан барған шикелле, шалтырайҙар, сөскөрәләр, күпер бер һығыла, бер күтәрелә: бына-бына бергә бәйләнгән кәмәләр — понтондар өҙөлөп китер ҙә машиналар һыуға барып төшөр төҫлө тойола. Күпер аша сығыусыларҙың береһе — йәйәүлеләр һәм шаҡтай ябыҡ аттар егелгән арбалылар. Бричка еккәндәр ҙә күҙгә салынып ҡала.

Әлфиә ҡапыл һикереп торҙо.

— Әклимә, әйҙә аҫҡа төшәбеҙ ҙә, Ағиҙелдең аръяғына сығабыҙ, — тине ул янып.

Әклимә матур күҙҙәре менән уға тултырып ҡараны.

— Әйҙә...

Әклимә әхирәтенең йөрәген ниндәй уйҙар яндырғанын аңланы.

— Өфөнө ғүмерлеккә күңелеңдә ҡалдыраһың киләме?

— Яратам мин Өфөнө, — тине Әлфиә Әклимәнең һорауына тура ғына итеп яуап бирмәй. — Минең Өфөнән башҡа бер ҡалала ла булғаным юҡ тип әйтерлек, әммә минең өсөн беҙҙең Өфөнән дә матурыраҡ, көҙерлерәк ҡала юҡ-

тар төҫлө тойола. Ленин, Надежда Константиновна янына килгәс, Ағиҙел яры башына баҫып, туғайҙарға ҡарап торорға яратҡан, ти.

— Их, Ленин ултырып торған ташты табырға, — тине Әклимә янып, әйтерһең, уның өсөн Ленин ултырған таштан да ҡәҙерлерәк башҡа нәмә юҡ ине. Әлфиә ошо минутта әхирәтенең йәнә бер битен асты — юҡ, Әклимә тыштан ғына ғәмһеҙ, флегматик күренә, ә эсендә океан саҡлы теләктәр йәшәй икән.

— Табасаҡбыҙ беҙ ул ташты, — тине Әлфиә, ышаныслы итеп, Әклимәнең ҡулынан етәкләне лә, «кәзә һуҡмағы» буйлап һикергеләй-һикергеләй аҫҡа йүгерҙе. Был баш әйләндererлек урындарҙан борғалана-борғалана барыусы һуҡмаҡ уларға бала саҡтан уҡ таныш ине, шуға күрә ул күҙен йомоп та юлдан яҙмаясаҡ. Юҡ, был «кәзә һуҡмағы» түгел, уларҙың «балалыҡ һуҡмағы». Күп йылдар үткәс тә, инде сәстәрҙә аҡ бөртөктәр күренә башлағас та, ваҡыт табып, Әлфиә ошо һуҡмаҡ буйлап Ағиҙел янына серләшергә төшәсәк. Телһеҙ даръяға ҡарап бик оҙаҡ уйланып ултырасаҡ, алыҫтағы башҡа даръяны, Дунайҙы хәтерләйәсәк...

Арғы яҡтан, һул ярҙан Өфө, ысынлап та, бик гүзәл, ниндәйҙер серле булып күренә ине. Дөрөҫ, яр баштарында түбәһе менән күкте терәп тороусы бейек йорттар юҡ, текә яр буйҙарына, тарлауыҡтарға ҡарлуғас оялары — бер ҡатлы бүрәнә йорттар урынлашҡан. Улар һис ниндәй планһыҙ, хужалары нисек теләһә, шулай һалынған. Шул йорттар араһында, осланған ҡәләм шикелле, мәсет манараһы күренеп тора. Күперҙән уңдараҡ, Сутолока йылғаһы артында, сиркәү көмбәҙе ҡояшта сағыла, Ҡариҙел Ағиҙелгә ҡойған урындан селтәрле тимер юл күперенә саҡлы күҙенде йөрөтөп сыҡһаң, гел бер ҡатлы йорттар, йорттар, йорттар... Ағастар араһынан йорттарҙың йәшел, ҡыҙыл түбәләре генә күренә. Өфө халҡы ағас үҫтерергә ярата. Ҡыштарҙың оҙон, һалҡын булыуына ҡарамаҫтан, Иҫке Өфөлә алмағастар ҙа бик күп. Ҡара ҡуйы төтөн борҡоп торған завод-фабрика торбалары күренмәй. Бөтә заводтар ҙа ҡаланың төньяҡ өлөшөндә тип әйтерлек. Тәүҙә ул яҡ соцгород тип йөрөтөлдө, тора-бара Черниковск тигән исем алып, «башҡа» сыҡты. Дөрөҫ, һуғыштың беренсе йылында уҡ Өфөлә яңы заводтар хасил булды. Ауыл хужалығы институтының элекке аҡ корпустарында көнбайыштан күсерелгән ниндәйҙер завод фронт өсөн продукция эшләп сығара. Сутолока йылғаһы Ағиҙелгә ҡойған урында мелькомбинат көнө-төнө төтәй. Ул үҙе лә, тирмәнсе кеүек, тыштан онға батып бөткән. Ләкин был завод торбалары Өфөнөң патриархаль йөҙөн

боҙмай, киреһенсә, ниндәйҙер ҡабатланмаҫлыҡ штрихтар ғына өҫтәй.

— Ә мин Өфөнө яратмайым, — тине Әлфиәнән бер-ике аҙым арттараҡ килгән Әҡлимә.

Был ваҡыт улар күперҙе сыҡҡайнылар инде. Әлфиә уны көтөп алды, ҡулынан тотоп, Өфө яғына борҙо. Әҡлимәнең был һүҙҙәре уны аптыратты.

— Нисек? Тыуып үҫкән ҡаланды яратмайһыңмы?

— Артыҡ күңелһеҙ ул. Ауыл кеүек, күбеһенсә бер ҡатлы ағас йорттар.

— Ә-ә... — Әлфиә инде еңелерәк һулап ҡуйҙы. — Һуғыш ҡына бөтһөн, небоскребтар һала башларбыҙ, — ул кескәй, нәфис ҡулын уның итләс яурынына һалды. — Давай, һин архитекторлыҡҡа уҡырға кит, әхирәт.

— Унан күктең етенсе ҡатында йәшәрбеҙме? — Әҡлимә мыҫҡыллы йылмайҙы.

— Эйе, бәхетебеҙҙең етенсе ҡатында, — тине Әлфиә, бышылдап, ә үҙе бөтөнләй башҡа нәмә тураһында уйланы.

## АҒИҘЕЛ КҮПЕРЕ — ҠЫЙЫН ИКӘН ҮТЕҮЕ...

Комиссия һәм башҡа мәшәҡәттәр тиҙ ҙә, шыма ла үтте. Ә бер аҙнанан юлға йыйыныу башланды. Хәйер, йыйыныу ҙа әллә ни ваҡытты алманы — юл алыҫ, ҡайтыу срогы билдәһеҙ булһа ла, һалдат сәфәргә оҙаҡ йыйынмай бит ул, һәм бына улар: әсәһе, Сафуан ағаһы, игеҙәктәр һымаҡ бер-береһенә оҡшаған ике ҡустыһы — Азат менән Фидан вокзалға төшөп баралар. Ә иң арттан, әйләнгән һайын ҡулъяулығы менән тирен һөртә-һөртә, һөйрәлеп Әҡлимә килә. Ул йылдарҙа әле трамвайҙар вокзал янына уҡ төшөп етмәй, Пермь урамы туҡталышынан кире китә торғайны.

Әлфиә һәм уны оҙатыусылар бөгөн юлдың уңайһыҙлығын һиҙмәнеләр. Август көнөнөң йылы, яғымлы, күктең күҙ сағылырлыҡ зәңгәр булыуынан ғына түгел. Бишенсе августа беҙҙең ғәскәрҙәребеҙ Орел менән Белгород ҡалаларын дошман тырнағынан азат итте. Ил тәү тапҡыр радионан еңеү салютын ишетте. Был тел менән һөйләп, аңлатып бирә алмаҫлыҡ шатлыҡлы, тантаналы көндәр ине. Дөрөҫ, без «Курск дуғаһы»на тиклем үк еңеүҙең тәмен татый башлағайныҡ инде: ҡырҡ беренсе йылдың ҡара көҙөндә дошманды Мәскәү янында ҡыйратыу, донъяны таң ҡалдырған «Сталинград ҡаҙаны»... Ә шулай булһа ла, беҙ был бөйөк бәрелеште һағайып, тынды ҡурып күҙәтеп торҙоҡ. Сөнки дошман тәүге көндәрҙә беҙҙең ғәскәрҙәребеҙҙе бер аҙ ҡыҫырыҡланы. «Шулай уҡ быйыл да ҡырҡ икенсе йылдың

фажиғәле йәйе ҡабатланырмы икән ни?» Юҡ, ҡабатланманы! Ҡыҙыл ғәскәр Гитлер һалдаттарын бөтә фронт буйлап ҡыуа китте. «Тигр», «пантера» тигән ҡорос йыртҡыстар ҙа еңеүгә ашҡыныусы беҙҙең һалдаттарҙы өркөтә, туҡтата алманы.

Йәнә бер нәмә Пермь туҡталышынан вокзалға саҡлы булған уңайһыҙ юлды еңеләйтте. Әлфиәнең һуғышҡа китеүе тураһындағы хәбәрҙе әсәһе тыныс, әйтергә яраһа, һалҡын ҡан менән ҡабул итте. Йөҙөндәге бер генә тамыры ла ҡыбырламаны. Тик күҙҙәргә күренер-күренмәҫлек һағыш сыҡты ла шунда уҡ һүнде. Ә инде Әлфиә, Алтынсы команда радистар мәктәбенә китә торған команда, ә радистар ғәҙәттә ут эсенә кермәйҙәр, штабтарҙа ғына ултыралар, тигәс, әсә бөтөнләй тынyслана төштө. «Яҙмышың шулайҙыр инде, ҡыҙым», тип ашығып юл хәстәрлеген күрә башланы. Ә бына атаһы... Ике һуғыш ветераны, һәр ваҡыт тыныс, тотанаҡлы кеше, эҫе һыу һибелгән гөл кеүек, ҡойолдо ла төштө.

Киске ашты ашап ултырғанда, алдан һөйләшеп ҡуйыу буйынса, «бомбаны» Сафуан ағаһы ташланы. Атаһы ауыҙына килтергән ҡалағын кире тәрилкәгә ҡуйҙы. «Нисек инде ул? Ҡыҙҙарҙы, үҙе теләмәһә, алмайҙар бит?» «Дөрөҫ, алмайҙар, — тине Сафуан атаһының реакцияһын күреп, ҡаушап, әммә шунда уҡ үҙен ҡулға алып. — Әлфиә немец телен белә. Ә тегендә, — ул һуғыш барған яҡҡа ҡулы менән төртөп күрһәтте, — тел белеүселәргә ҡытлыҡ». «Ҡытлыҡ булғас...» Атаһы әйтәһе һүҙен әйтеп бөтөрмәне, өндәшмәй генә көнбағыш майына буталған тары бутҡаһын ашауын дауам итте. Күренеп тора, хәҙер уның аппетиты юғалды, тик тулҡынланыуын һиҙҙермәҫ өсөн генә ашай. Бутҡанан һуң ул дегет кеүек ҡаты итеп сәй яһаны (иң ауыр ваҡытта ла улар бөртөклө сәйҙән өҙөлмәйҙәр ине), сахарин һалып, уның иреп бөткәнен дә көтөп тормай, ауыҙын бешерә-бешерә эсергә тотондо. Ғаилә башлығы өндәшмәгәс, башҡалар ҙа ауыҙ асырға баҙнат итмәне. Дегет төҫлө сәй эсселеп бөттө. Ауыҙ-моронн етен таҫтамалға һөртөлдө. Ул гәҙәттәгенән ауырыраҡ торҙо һәм гәҙәттәгенән һалмағыраҡ атлап ишеккә табан йүнәлде.

Ә бына бөгөн, Әлфиә китәһе көндө, ул ашыҡмай ғына ҡырынды, күл төҫөнә ингән мыйығын матур итеп ҡырҡты, кисә генә йыуып үтекләнгән күлдәген комодтан алып кейҙе. (Атай бик иртә мине оҙатырға йыйына башланы, тип уйлана Әлфиә.) Ул хатта йәшәреп киткәндәй булды. Хәҙер уға алтмыш дүрт йәште юрый ҙа бирмәҫһең! Ә бына китер сәғәт килеп еткәс, ул, һул яҡ ҡалаҡ һөйәге аҫты һыҙлай, тип зарланды. Оҙата барырға сыҡҡас, ҡапҡа төбөнән ары

китмәне. Әлфиәне күкрәгенә ҡыҫып, эйәген уның башына ҡуйҙы ла бер һүҙҙе ҡабатланы: «Ҡыҙым... ҡыҙыҡайым... Ҡыҙым... ҡыҙыҡайым...» Шунан иҫләп кенә Әлфиәне күкрәгенән айырҙы һәм, бер кешегә ҡарамай, өйгә йүнәлде. Бына ошо минутта Әлфиә бөтә йөрәге менән аңланы — биш бала араһында ул атаһының иң ҡәҙерлеһе икән. Йөрәге ауыртыуҙанмы, түҙалмай, күңелем тулыр тиҫме, атаһы вокзалға төшмәне. Ә ирҙәр илауҙан да хәтәрерәк тағы ни мә бар? Ирҙәр илауы ҡояш тотолоу менән бер бит ул.

Һәм бына вокзал. Революцияға саҡлы һалынған ике ҡатлы таш бина. Ҡарап тороуға былай йәмһеҙ түгел, әммә ҡала үҫкән һайын вокзал бәләкәйләнә. Әлфиә вокзалға бик һирәк төшә. Дөрөҫөн әйткәндә, ул вокзалдарҙы яратып та бөтмәй: һәр ваҡыт халыҡ мыжлап тора, һәр кем ашыға, әленән-әле иҙәнде һеперһәләр ҙә, барыбер сүпле. Тир һәм төрлө тоҡтар еҫе. Хәйер, Әлфиәнең әле әллә ҡайҙа барғаны ла юҡ. Бер нисә йәй Туймазыға, әсәһенең апаһына барҙы ла, етенсене бөтөргәс, Ҡуйбышевтан урап килде. Һуғыш башланаһы йылды класс менән Мәскәүгә барыу планлаштырылғайны. Ҡәһәрле егерме икенсе июнь ҡамасауланы, бөтәһен дә селпәрәмә килтерҙе.

Ә был юлы инде ул алыҫ һәм билдәһеҙ сәфәргә сыға ине.

Алтынсы команда ҡыҙҙары утыҙға яҡын булыр. Беренсе юлда буяуҙары ҡубып, таушалып бөткән йәшел вагондарҙы таҡҡан пассажир поезы тора. Тимәк, хәрби эшелонда оҙатмайҙар. Үҙенән бигерәк, әсәһе өсөн был аяныс ине. Әсә, күп йыуыуҙан, ҡояштан уңған яулыҡ осон тешләп, ҡайҙалыр алыҫҡа, офоҡҡа ҡарап тора. Азат менән Фидан йә бер-береһен бүлә-бүлә бәхәсләшә, йә телдәрен тешләп, һүҙһеҙ ҡала. Сафуан бөтә көсөнә һурып тәмәке тартты, ситкә боролоп төтөнөн танау тишектәренән, ауыҙынан борҡотто. Ә ғәмһеҙ Әклимә, ниңәлер, бер паровоздан, бер ҡойроғонан башлап составтағы вагондарҙы һананы. Күрәһең, уға ла әхирәтен һуғышҡа оҙатыуы еңел түгелдер.

Перрон буйлап госпиталдән һауығып сыҡҡан, запас полкка, сәләмәтләнеү батальонына, ҡыҫҡа сроклы ялға китеүсе ҡыҙыл армеецтар йөрөй. Уларҙың күбеһенең өҫтөндә «Б/у» * гимнастерка, салбар, обмотка, ботинка, арҡаларында биштәрләп аҫҡан һалдат тоғо, мөйәтләнгән шинель. Арала аҡһаусылар, ҡултыҡ таяҡлылар ҙа бар. Ҡайһы береһенең йөҙө көл төҫлө — яраһы ҡаты булғанлығы, госпиталь һауаһын оҙаҡ еҫкәгәне күренеп тора. Ә, ғөмүмән, һәр береһенең дә күҙендә дәрт, ашҡыныу һиҙелә — өйгәме, сәләмәтләнеү батальонынамы, запаснойғамы — барыбер, гос-

---

* *Б/у* — бывшее в употреблении, кейелгән кейем.

питаль түгел, ирекқә, стройға, ә унан ҡабат һуғышҡа. Ҡырҡ өсөнсө йылдың йәйе ҡырҡ беренсе генә түгел, ҡырҡ икенсе йылдың йәйе лә түгел ине. Хәҙер беҙҙең дә танкылар етерлек, самолеттар ҙа онотолғанда бер генә күренмәй, ә ҡорал булһа, һуғышыуы ла күңеллерәк.

Оҙон сандыр старшина, ике-өс минут һайын тирә-яғына ҡаранып, украин акценты менән ҡысҡырҙы: «Степанюк! Степанюк! Де ты?»

Инде беренсе түгел, икенсе йәшлектәре тау артында ҡалған, майланып бөткән куртка кейгән ҡатындар вагондарҙың туалеттарына һыу ағыҙып йөрөйҙәр, ауыр резина шлангыларҙы һөйрәп, тупаҫ һүҙҙәр менән бер-береһенә ҡысҡырышалар. Чапаев кеүек мыйыҡ үҫтергән ағай, оҙон һаплы кескәй генә сүкеше менән вагон тәгәрмәстәренә һуғып, уларҙың төҙөклөгөн тикшереп йөрөй.

Әлфиәнең түҙемлеге бөтә башланы, ниңәлер, берәү ҙә уларҙы оҙатырға ашыҡмай төҫлө тойолдо уға. Унан да бигерәк әсәһенә ҡыйын. Тыштан һиҙҙермәһә лә, эсенән яна торғандыр әле. Юҡҡа ғына, эсең тулы ут булһа ла кеше алдында уф тимә, тип уларҙы иле, тотанаҡлы булырға өйрәтеп үҫтермәне бит ул. Ниһайәт, вагон ишектәре төбөнә проводницалар килеп баҫты. Ҡулдарында торбаланып төрөлгән һары, ҡыҙыл флагтар, йөҙҙәрендә, тигеҙләп өләшһән, ун кешегә етерлек етдилек. Әлфиәнең нисә тапҡыр поезға ултырғаны бар, әммә әле бер ҡасан да проводница апайҙарҙың пассажирҙарҙы йылмайып ҡаршы алғандарын күргәне юҡ. Юл йөрөп арыйҙармы, төрлө характерлы пассажирҙар уларҙың да холҡон боҙамы, әллә... проводниклыҡҡа гел етди, уҫал кешеләрҙе генә алалармы икән?..

Әлфиәләр командаһының старшойы — связистар погоны таҡҡан кесе лейтенант күренде. Ул пилоткаһын күтәреп болғаны: «Алтынсы! Алтынсы команда, унынсы вагон янында сафҡа теҙелергә!»

Әлфиә оҙата килеүселәрҙе тиҙ-тиҙ генә үбеп сыҡты. Бәлки, әсәһен ҡосаҡлағас, башҡалар менән хушлашҡанға ҡарағанда, оҙағыраҡ туҡталып торғандыр. Сафуан менән хушлашҡанда ағаһы иләп кенә киҫәтте: «Мин әйткәндәрҙе һәр ваҡыт иҫеңдә тот, Әлфиә...» Ә Әҡлимә: «Бәхетле кейне һин, Әлфи», — тип көрһөндө. Фидан менән Азат икеһе лә бер наказ бирҙе: «Герой булып ҡайт!» Әсә түҙмәне, күҙ йәштәре атылып сыҡты. «Иҫән-һау йөрөп ҡайтырға яҙһын, ҡыҙым. Минән фатиха шул, ҡыҙым...»

Тревога менән йыйылған һалдаттар шикелле, Алтынсы команда ҡыҙҙары йүгерешеп килеп сафҡа баҫты. Исемлек буйынса, кесе лейтенант уларҙы барлап сыҡты һәм вагонға тейәлергә команда бирҙе. Ҡыҙҙар вагонға кереп, әйбер-

ҙәрен шүрлектәргә ташлап та тормай, асыҡ тәҙрәләргә ябырылдылар.

Әлфиә күҙҙәренә ышанманы. Әҡлимә, береһенән дә оялмай, үкһеп илай ине. Ә әсәһе, иллә түҙемле кеше лә инде уның әсәһе, яулыҡ осон ауыҙынан ҡапҡан да һүҙһеҙ генә баҫып тик тора. Күңел ҡанаттары һынған ҡатын-ҡыҙҙарҙың кәйефен күтәрер өсөн Әлфиә ул замандағы иң полуляр шиғырҙы уҡып ебәрҙе:

Жди меня, и я вернусь,
Только очень жди...

Паровоз, сәфәр сығыусыларҙың һәм оҙатыусыларҙың кәйефен аңлағандай, оҙон итеп хушлашыу сигналы бирҙе. Әлфиәнең иҫләгәне бар — машинистарҙың да сигнал биргәндә үҙ «почерктары» була. Хас бына сиркәү ҡыңғырауын ҡағыусы звонарҙарҙыҡы шикелле. Бик аҡрын, ҡарт һөйәктәрен яҙа алмаған кеше һымаҡ, вагон тәгәрмәстәре ҡуҙғалды. Ошоно ғына көткәндәй, ниндәйҙер бер ҡыҙ көслө тауыш менән ихлас йырлап ебәрҙе:

Крутится, вертится шар голубой,
Крутится, вертится над головой...

Йыр бөгөнгө көндә йырлана торған Бөйөк Ватан һуғышы йыры ла, граждандар һуғышы моңо ла түгел, ә «Максимдың йәшлеге» тигән кинофильмда артист Чирков йырлап йөрөгән шаян, дәртле йыр ине. Ҡыҙ ниңә ҡапыл был йырҙы йырларға булды — Әлфиәгә аңлашылманы. Бәлки, «Максимдың йәшлеге» уға бик ныҡ оҡшағандыр, бәлки, артист Борис Чирковҡа ғашиҡ булып йөрөгәндер, ихтимал, уның да алыҫ юлға сыҡҡанда күңеле тулғандыр ҙа тамағына тығылған төйөрҙө иретер өсөн ошо йырҙы башлап ебәргәндер.

Ул арала йырҙы башҡалар ҙа күтәреп алды.

Крутится, вертится, хочет упасть,
Кавалер барышню хочет украсть...

Ана шулай, Питер эшсеһе Максим яратҡан йырҙы йырлап, Өфө ҡыҙҙары тыуған ҡалалары менән хушлашты. Юҡ, тыуған ҡалалары менән генә түгел, йәшлектәре менән дә хушлаша ине ул ҡыҙҙар...

Инде бөтә вагон йырлай ине. Батырлыҡ эшләргә, еңеүҙе яҡынайтырға ашҡынған йәш ҡыҙҙар хистәрен йыр аша түгә. Юҡ, быны бер вагон йәш ҡыҙҙар ғына түгел, утлы йылдарҙа тыуып үҫкән яңы, йәш быуын йырлай ине. Ә бит уларҙың бөтәһенә лә ана шулай шатланышып, йыр менән

өйләнеп ҡайтырға яҙмаған. Иҫән-һау ҡайтһалар ҙа, бөтәһенә лә бәхет ҡанаттарын йәйеп көтөп тормаясаҡ. Ҡемдәләр ҡуйынына аласаҡ, кемгәләр ҡанат ҡағып ҡына китәсәк, ә ҡайһы берҙәре ул ҡанаттарҙың елеп генә тойоп ҡаласаҡ... Әммә ҡыҙҙар был минутта ул хаҡта уйламанылар. Улар онотолоп, дәртләнеп, ашҡынып йырланылар.

Поезд Ағиҙел аша һалынған селтәрле күпер аша сыға башланы. Ул йылдарҙа күпер берәү генә ине, ҡаршы килгән состав йә Иҙелдең һул ярында, йә уң ярында көтөп тора. Ул күперҙең дә бер тороғо башҡа өлөшөнән архитектураһы менән айырылып тора. 1919 йылда Колчак ғәскәрҙәре Өфөнән табандарын ялтыратҡанда күперҙе емереп киткән. Ул йылдарҙа ғына түгел, хәҙер ҙә Самара — Өфө— Силәбе тимер юлының әһәмиәте әйтеп бөткөһөҙ ҙур. Шуға күрә, Өфө күпер төҙөүселәре емерелгән тороҡто өр-яңынан һалып, күперҙе билдәләнгән сроктан алда эксплуатацияға тапшырғас, Владимир Ильич Лениндан ҡотлау телеграммаһы алалар.

Ағиҙел күпере, ҡыйын икән үтеүе... Ағиҙел... Әлфиәнең балалығы, йәшлеге ошо даръя буйында үтте.

Әгәр даръяның аңлай, ишетә торған мөмкинлеге булһа, Ағиҙел уларҙың күпме серҙәрен, уй-хыялдарын күңелендә һаҡлаған булыр ине...

...Бына улар Әшрәф менән Ағиҙелдең текә яры башында, Салауат баҡсаһы артында ултыралар. Ә Ағиҙелдә боҙ китә. Боҙ китеүҙе ҡарауҙан да тулҡынландырғыс, елкендергес тағы ниндәй күренеш була икән тәбиғәттә? Йылғала боҙ киткәнде күрмәгән кеше бер бәхеттән мәхрүмдер...

Ҡеҫкәй генә утрау һымаҡ эре, ҡуш ус шикелле ваҡ, ҡалын, инде селтәрләнеп бөткән йоҡа боҙҙар бер-береһен этеп, төртөп, кешегә аңлайышһыҙ тауыштар сығарып, тотош бер масса булып ағалар ҙа ағалар. Әлфиәгә был мәктәптәге «ҙур тәнәфес» ваҡытын хәтерләтә ине. Унда ла, дежурныйҙың ҡыңғырауы сыңлай башлау менән, бөтә класс ишектәргә бер юлы асылып китә. «Ҙур тәнәфес» алдынан уҡытыусылар әйтәһе һүҙҙәрен дә әйтеп бөтөрмәй, дәресте туҡтаталар, сөнки уҡыусылар тамаҡ ялғап, хәл йыйып алырға тейеш. Йөҙләгән бала-саға бер-береһен этешеп, шаулашып, ҡолошоп коридорға, тышҡа ынтыла. Бер минут эсендә әле генә тып-тын торған коридор мәхшәр көнөн хәтерләтә.

Яр башында Әлфиә йыш ҡына Әшрәф менән, ҡайһы саҡта Наташа, Әклимә — дүртәү киләләр. Аҡрын ғына йырлайҙар, йә хыялға батып, Иҙелгә ҡарап ултыралар. Яңғын утҡа, аҡҡан даръяға, тулҡынланған диңгеҙгә ни саҡлы ҡараһаң да туйҙырмай бит. Ә Ағиҙел... Юҡҡа ғына

халыҡ: «Йәмле Ағиҙел буйҙары, бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы», — тип йыр сығармағандыр.

Тынлыҡты ғәҙәттә Әшрәф боҙа. Уның фантазияһы төпһөҙ-ҡырыйһыҙ. Әшрәф янында бер ҡасан да эсең бошмаç, күңелһеҙлеккә, яңғыҙлыҡҡа бирелмәçһең.

Ул урам аша әсәһенең апаһында — Суфия апай менән бергә тора. Йорттары тышҡы яҡтан таҡта менән көпләнгән, ҡасандыр буялған буяуҙы ел, ямғыр, ҡояш, һалҡын ашаған, хәҙер өйҙөң ниндәй төçтә икәнлеген әйтеүе лә ҡыйын. Ишек алдында ике алмағас үçеп ултыра. Уларҙы кем, ҡасан ултыртҡандыр, Әшрәф түгел, Суфия апай ҙа белмәй — өйҙө һатып алғанда алмағастар алма биргән булған. Хәҙер инде улар алманы һирәк бирәләр, аҙ бирәләр, әммә яҙҙарын шундай берҙәм сәскә аталар, әйтерһең, етмешкә еткән Суфия апай балитәкле туй күлдәген кейгән.

Өйҙөң кескәй генә бер бүлмәһе Әшрәфтең универсаль мастерскойына әйләнгән. Әшрәфтең бармаҡтары һәр ваҡыт йә утта көйгән, йә буяуға буялған, йә бинтҡа уралған булыр. Хатта ул дәрес ваҡытында ла (әгәр уның һөйгән предметы булмаһа) ҡулдарын парта аçтына йәшереп, мышнай-мышнай нимәлер әтмәләп ултырыр.

Улар бик наҡыç йәшәйҙәр. Суфия апайҙың пенсияһы, ҡул эше менән арендаға бирелгән ике кескәй генә бүлмә өсөн алған аҡса иçәбенә көн күрәләр. Шуға ҡарамаçтан, Әшрәф кәстрүлдәр ямаған, электр үтектәрен төҙәткән һәм башҡа шундай ваҡ-төйәк хеҙмәт өсөн бер тин аҡса алманы. Әгәр берәйһе йәшереп кенә бер нисә көмөш аҡса ҡалдырып китһә, Әшрәф, ул кешене ҡыуып етеп, аҡсаһын тегенең кеçәһенә һалыр. Бәлки, тора-бара тормош уны аҡса алырға ла, аҙ бирһәләр, һатыулашырға ла өйрәтер, ләкин әле ул «аҡса өсөн» эшләү тигән нәмәне белмәй ине. Ғөмүмән, шундай ваҡ-төйәк эш өсөн дә аҡса алырға ояла торғайны ул. Әшрәфте алтын ҡулдары өсөн, ярҙамға мохтаж булған һәр кешегә ҡулын һуҙырға әҙер торғаны өсөн бөтә урам яратты, балаларына өлгө итте, ә юҡ-барға ла әтәсләнергә торған һуғыш суҡмарҙары уның ҙур булмаған, әммә бер тондорһа, берәгәйле тондора торған «тимер» йоҙроҡтарынан шөрләйҙәр ине.

Ул үҙ намыçы өсөн генә түгел, ә үҙ урамдарында йәшәүсе ҡыҙҙарҙың намыçы өсөн дә һөжүмгә ташланырға һәр ваҡыт әҙер булды. Ә уларҙың урамы ҙур түгел — мәсет янында башлана, боронғо сиркәү ҡаршыһында ослана. Ни бары өс-дүрт квартал. Мәсет әле һаман аллаға хеҙмәт итә, сөнки уның бәпкә үләне үçкән йәшел ишек алдында Россия мосолмандарының диниә назараты урынлашҡан.

Сиркәү, мәсеттәрҙә теге донъяла буласаҡ бәхет тураһында намаҙ уҡылһа, табынылһа, инде мәктәпкә, клубҡа әйләндерелгән мәсет-сиркәүҙәрҙә был донъяның рәхәте хаҡында дәрес бирелде, спектаклдәр ҡуйылды, доклад-лекциялар уҡылды. Әлфиә йәшәгән урам башындағы сиркәү ҙә кинотеатрға әйләндерелгәйне. Йыш ҡына Әлфиә менән Әшрәф шул сиркәүгә бара торғайнылар. Әшрәф шаяртып: «Киттек сиркәүгә никахлашырға», — тип уны кино ҡарарға саҡырыр, ә Әлфиә шунда уҡ утҡа әйләнер ине.

Сеанстан һуң сиркәүҙең колонналы ишеге төбөндә ниндәйҙер малайҙар, юҡ сәбәпте табып, бәхәс күтәрерҙәр, ә ҡайһы саҡта йоҙроҡтарын да ходҡа ебәрергә теләйҙәр. Хәтерләй. «Щорс» картинаһын ҡарап сыҡҡас, үҙе бот буйы, теле ҡолаға буйы бер малай Әшрәфте «семетте». «Ә... кейәү егете әпәт кәләше менән килгән». Малай клоундарса танауын тартты. Әшрәф, ишетмәмешкә һалышып, үтеп китмәксе булғайны, икенсе бер «көҙгө әтәс» алға йүгереп сыҡты ла былар ҡаршыһына килеп баҫты. «Әй, жених, тартырға бир әле!» Әшрәф: «Юлдан кит, кит, мин тартмайым», — тип ҡулы менән ишараланы ла атлауын дауам итте. «Көҙгө әтәс» сигенергә теләмәне. Артҡа бер-ике аҙым һикерҙе лә тағы юлға арҡыры төштө. «Алдашма! Кисә ҙур тәнәфес ваҡытында бәҙрәфтә кем паровоз һымаҡ төтәтте?» Әшрәфтең инде ҡаны ҡыҙа башланы. «Һин, мин тартмайым, тигәнде аңлайһыңмы, юҡмы?» Малай һаман үсекләште. «Тартыуың, тартмауың мине ҡыҙыҡһындырмай, һин миңә тәмәке генә бир». Әшрәф һүҙҙе дауам иттереүҙең файҙаһы юҡлығын белдертеп ҡаты әйтә һалды: «Яҡшы саҡта кит юлдан, өтөк! Атыу...» Өтөк Әшрәфтең йоҙроғо юҡҡа төйнәлмәгәнлеген күреп, «маневр» яһай һәм сигенә.

Ә бына ҡайһы саҡта йоҙроҡһоҙ эш барып сыҡмай.

Ояттыҙ күҙле, ҡолағалай оҙон малай килә лә, Әлфиәнең беләгенән тота. «Ҡамалова! Ә һин бит кисә «Салауат» кинотеатрына бер ерән малай менән барғайның». Әлфиә оятһыҙ күҙле малайҙың уҫал шаярыуынан ҡыҙара. «Алдашма. Кисә кис мин хор түңәрәгенә барҙым». Ҡолаға сайҡала-сайҡала көлә. «Ха! Һеҙ минән алда ғына ултырҙығыҙ. Өсенсе рәттә. Сеанс барғанда сут-сут... үбештегеҙ».

Әлфиә гәрләнеүенән мышҡылдай башлай. Ә Әшрәф, Әлфиәне юҡҡа рәнйеткән малай янына килеп, һәр һүҙен ижекләп әйтә: «Валлаһи, биллаһи, тиң!» — «Ә мин аллаға ышанмайым». — «Улайһа, честное комсомольское, тиң!» — «Ә мин комсомол түгел. Алманылар. Танауың бесәй танауына оҡшаған, тинеләр. Һа-һа-һаа!..» — «Ә бына мине комсомолға алдылар», — Әшрәф ҡолағаның яңағына шундай ныҡ сапты, теге сайҡалып китте, янында «ишәйе» баҫып торма-

һа, ихтимал, ерҙе лә ҡосаҡлаған булыр ине. Ләкин ошо уҡ минутта бер нисә малай бер юлы Әшрәфкә килеп йәбеште. Юҡ, Әлфиә бармағын тешләп, өтәләнеп сырылдап йөрөмәне, юҡҡа ул дүрт малай араһында үҫтеме ни, бер хулигандың аяғын салды, икенсеһенең оҙон сәсенән һөйрәне, өсөнсөһөнөң ҡабырғаларын «һананы». Малайҙар һан яғынан күберәк булһа ла, конфликт һәр ваҡыт «агрессорҙың» хурлыҡлы сигенеүе менән тамамлана ине. Дөрөҫ, Әшрәфкә лә эләккеләй: йә күҙ төбө күгәреп сыға, йә танауынан ҡан китә. Ундай саҡта Әлфиә уны йыуатҡан һымаҡ итә: «Әшрәф, башҡаса был сиркәүгә килмәйек. «Октябрь»ға йә «Салауат»ҡа барайыҡ. Унда һауа ла һәйбәт», — ти.

— Юҡ! Киләбеҙ, — ти Әшрәф, күгәргән күҙенә колонка һыуында еүешләтелгән ҡулъяулығын тейҙереп. — Бер шөрләрһең, икенсе тапҡыр ҡурҡып ҡасырһың, ә унан торабара ҡурҡаҡ ҡуянға әйләнерһең. Ә минең иң яратмаған кешем — ҡурҡаҡ йән.

— Һуң улар бит күптәр...

— Булһын. Тора-бара беҙ ҙә күбәйербеҙ.

Ысынлап та, урынһыҙға бәйләнеүҙең мәғәнәһе юҡлығын аңлап, малайҙар тора-бара битарафҡа, дуҫҡа әйләнә башланы. Ғәҙәттә кеше дошманлыҡ түгел, дуҫлыҡ, әрләшеү түгел, серләшеү эҙләй. Ана шулай итеп, Әшрәф бер төрлө йыйылышһыҙ һәм мандатһыҙ, ӘЗ — Әшрәф Зонаһының авторитетына һәм атаманына әйләнеп китте.

Хәҙер инде сәкәшеүҙәр булһа ла, бот буйы йәш үҫмерҙәр менән түгел, Иҫке Өфөнөң тыйнаҡһыҙ, шуҡ, дөрөҫөрәге, хулиган малайҙары менән була торғайны. Улар, үҙҙәренең бынамын баҡсалары булһа ла, ата-әсәләре көнөнә икешәр биҙрә һөт бирә торған яҡшы тоҡомло һыйыр тотһалар ҙа, йыл һайын ҡыш башында һәр береһе берәр центнер тарта торған сусҡа һуйып һатһалар ҙа, Әшрәфтәр зонаһындағы алма баҡсаларына сапҡын яһай торғайнылар. Был сапҡындың нигеҙендә ике нәмә ята ине: йә шуҡлыҡ, йә ата-әсәләрҙең һаранлығы. «Алма һеҙҙең өсөн түгел, баҙар өсөн үҫтерелә. Һеҙгә, ана, кеше алмалары ла бөтмәгән». Ни генә тимә, хулиган малайҙар «ябырылыуынан» һуң алма ботаҡтары һынған, түтәлдәр тапалған була. Ә бит бер алмағасты әрәм итмәҫ өсөн генә күпме көс, түҙемлелек кәрәк: ҡышҡы һалҡындарҙан һаҡла; яҙын сәскәләрен ҡырауҙан иҫән-имен алып ҡал; йәй буйы төрлө бөжәктәр, ҡортҡостар менән көрәш, ерҙе әленән-әле йомшартып тор, ашла, иң тәрән тамырҙарына ла етерлек итеп ике-өс тапҡыр һуғар... Ә бына Иҫке Өфө малайҙары шул көстө ҡайһы сағында бер төн эсендә юҡҡа сығарып китәләр. Яҡ-

ны түгел, кешенең хеҙмәте менән иҫәпләшмәү, кешене һанға һуҡмау була бит был...

Шуға күрә Әшрәфтәр ундай «баҫҡынсыларҙы» төндә, улар килергә тейешле баҡса янында һағалап торалар, әгәр илан барып сыҡмаһа, алыштар Ағиҙел буйында була. Ситтән күҙәтеп тороусылар был алышты малайҙар шуҡлығы, тип уйлар, ә асылда «шуҡлыҡ» емерелгән танауҙар, һынған тештәр менән тамамлана. Байтаҡ ҡына ваҡыттар «теге» яҡ та, «был» яҡ та әлеге пляжға ҡыҙынырға килмәй, зона «хәтәр зона»ға әйләнә.

Был алыштар, ягалашыуҙар оҙаҡ дауам итер ине, билдәһеҙ.

Әммә ил өҫтөнә ишелеп төшкән ҡара ҡайғы, ҡот осҡос афәт дошманлашып йөрөгән малайҙарҙы бер көн эсендә татыулаштырҙы, хатта дуҫлаштырҙы. Осрашҡанда улар бер-береһенә ҡул бирештеләр, ҡулдарҙы ирҙәрсә ҡаты итеп ҡыҫыштылар. (Беҙҙең арала бер нәмә лә булмаған, булһа ла, бөткән, киткән, елгә осҡан.) Тәүге минутта уҡ фронттағы хәлдәр тураһында һөйләштеләр. Гитлерҙы һүктеләр. Бөтә кластары менән военкоматҡа барыуҙары тураһында маҡтаныштылар. Шулай итеп, йылдар буйына һуҙылған, әйтергә яраһа, «быуындан-быуынға» килгән «дошманлыҡ» бер нисә көн эсендә юҡҡа сыҡты. Хәҙер бөтә йәштәге кешеләр, бөтә халыҡ, бөтә ил өсөн бер генә дошман бар ине — фашизм.

Бәхәстә һәр ваҡыт өҫтөн сығыусы, алышҡанда беренсе булып «дошманына» ташланыусы, фантазер һәм хыялый Әшрәф Әлфиә менән яңғыҙ ҡалғанда әйтәһе һүҙен әйтә алмай интегә һәм сабый балаға әйләнә торғайны. Сиркәүҙә кино ҡарағанда ҡулы яңылыш Әлфиәнең ҡулына тейһә, шунда уҡ тартып алыр, ҡурылыр, шыбыр тиргә төшөр ине.

Ә кем булырға ғына хыялланмай ине ул самаһыҙ фантазер, сикһеҙ ҡыйыу һәм ҡыҙҙар шикелле оялсан Әшрәф? Слесарь, врач, алыҫ сәйәхәттәр капитаны, локомотив машинисы... Ә көндәрҙең береһендә, Ағиҙелдең текә яры башынан багорҙар менән «аҙашҡан» бүрәнәләрҙе «абордаж»-ға алырға маташыусы сая малайҙарҙы һүҙһеҙ генә күҙәтеп торғандан һуң, Әшрәф Иҙелгә яҫы таш осорҙо ла тәүәккәл әйтә һалды.

— Әлфиә, beләһеңме, мин кем буласаҡмын? Күперҙәр һалыусы! Ағиҙел аша һалынған селтәр күпер минең проектым буйынса эшләнәсәк. Эйе, эйе, ә ниңә көләһең? Өфөлә сирек миллион халыҡ йәшәй, ә тимер юл күперен иҫәпләмәгәндә (ул да бер генә юллы), башҡа тимер-бетон күпер юҡ. Понтон күпер үҙе уңайһыҙ, үҙе ышанысһыҙ, — ҡапыл Әшрәф тынып ҡалды һәм хисләнеп өҫтәп ҡуйҙы. — Быға

саҡлы тоташмаған ярҙарҙы тоташтырасаҡмын. Йә, әйт, бынан да ҡыҙығыраҡ тағы ниндәй эш бар?..

Әлфиә һиһелдәп көлдө.

— Ышанмайһыңмы инде? — Әшрәфтең күҙҙәрендә тәүәккәллек кенә түгел, саялыҡ сатҡылары сағыла ине.

— Ышаныуын ышанам, — тине Әлфиә, етди булырға тырышып. — Ләкин һинең пландарың әтәс ҡысҡырған һайын үҙгәреп тора бит, Әшрәф.

Әшрәф һикереп торҙо, йәнә Ағиҙелгә яҫы таш осорҙо, уның һыуға барып төшкәнен күҙәтеп торғандан һуң, һүҙен дауам итте.

— Быныһы инде... — Ниңәлер, ул ҡапыл рус теленә күсте. — Окончательно! Решительно! — Ул йәнә Әлфиә ҡаршыһына ултырҙы, ҡулына сыбыҡ алды.— Һинең Нью-Йорктағы Бруклин күпере хаҡында ишеткәнең бармы? Оҙонлоғо, беләһеңме, нисә километр? Өс. Бер свайы, бер аралығы юҡ. Күперҙең конструкцияһы фәҡәт ҡоростан ишкән арҡандарҙан тора. Тәүҙә кәтүк ебе йыуанлығындағы ҡорос сыбыҡтар ишелгән, унан килеп шунан бау ишелгән... Унан тағы, тағы... Бруклин күпере донъялағы берҙән-бер күпер. — Әшрәф үҙе һөйләне, үҙе ҡомда һыҙып күрһәтте. Шунан һикереп торҙо. — Беҙҙә лә ундай күперҙәр буласаҡ!— Уның йөҙрөгө өҫкә күтәрелде. — Ундай күперҙәрҙе мин һалдырасаҡмын!

— Аһа! — тине Әлфиә ышанып та (һуң Әшрәфтең теләгәнен эшләмәй ҡалғаны бармы ни!), шикләнеп тә (Әлфиә өсөн Бруклин күпере салауат күпере — йәйғор кеүек артыҡ фантастик тойола ине).

— Ә ниңә аһа? Большевиктар ала алмаған крепость юҡ, тип кем әйткән әле? Дөрөҫ, мин әле большевик түгел, комсомолец ҡына, әммә йәшем етеү менән барыбер большевик... коммунист буласаҡмын. — Әшрәф Әлфиә янына ултыра. Хатта ғәҙәттәгенән яҡыныраҡ ултыра. Әлфиә уның тынын һиҙә.

— Беләһеңме, ул күперҙән беренсе булып һин сығасаҡһың, иптәш Ҡамалова!

Әлфиә был һүҙҙәргә ышана, әммә аптырап һорай.

— Мин? Ә ни өсөн мин?

Әшрәф һорауҙы яуапһыҙ ҡалдыра, үҙенекен дауам итә.

— Ә мин күпер аҫтында ултырасаҡмын.

Әлфиә инде бөтөнләй аптырай.

— Ә ниңә күпер аҫтында?

— Сөнки борондан килгән йола бар. Күпер һалынып бөткәс, конструкторҙы күпер аҫтына ултырталар, ти. Әгәр күпер халыҡты, транспортты күтәрә алмаһа, конструкторға хана.

Әлфиә инде Әшрәфтең шаярткамын аңлай, кескәй генә йомро башын, һелкә-һелкә, рәхәтләнеп көлә.

— һе-һе-һһ... Ай, үлтерҙең! Мине лә күтәрмәгәс, ул ниндәй күпер була? Тал сыбығынан эшләнгәнме?

Әшрәф һикереп тора, ҡулындағы ташты Ағиҙелгә ырғыта (ул бер генә минут та эшһеҙ тик тора алмай ине), уның һыуға барып еткәнен, сутылдап сумғанын көтөп, күҙәтеп тора. (Үҙ ғүмере эсендә Ағиҙелгә нисә таш ташланы икән инде ул!)

— Беләһеңме, Әлфиә, мин һалдырған күперҙәр теләһә ниндәй ауырлыҡты, йөктө күтәрәсәк. Мин уларҙы йөҙ, биш йөҙ йылдан һуң да йөрөрлөк итеп һалдырасаҡмын. — Реалист Әшрәф йәнә фантазер Әшрәфкә әйләнә. — Мең йылдан һуң да мин һалдырған күперҙәр аша йөрөйәсәктәр. Мин үлеп туҙанға әйләнәсәкмен, ә күперемдән машиналар, кешеләр йөрөйәсәк. Осрашасаҡтар һәм айырылышасаҡтар. Бәхет, киләсәк тормош тураһында хыялланасаҡтар. Күктәге йондоҙҙарҙы һанаясаҡтар... Шәп бит, ә? — Ул Әлфиәнең янын торған һоро күҙҙәренә текләп ҡараны. Күренмәгән ток Әлфиәнең йөрәгенә үтеп керҙе. Әлфиә башын эйә төштө.

— Шәп... тик... — Әлфиә иҫләп кенә уның ҡулына ҡағылып ала. — Тик... һин туҙанға әйләнмә, Әшрәф, мәңге йәшә.

— Был һалҡын ай аҫтында бер нәмә лә мәңгелек түгел, — тип кемдеңдер һүҙҙәрен ҡабатлай Әшрәф. — Хатта меңәр йыл йәшәй торған ағастар ҙа үлә...

Үҙ теләктәре менән армияға китеп барыусы ҡыҙҙар теләгән составтың һуңғы вагоны селтәре күперҙе үтеп сыҡты. Күпер, йылға, тыуған ҡала артта тороп ҡалды. Сентименталлекте яратмаусы Әлфиәнең йөрәге ҡапыл ҡыҫып алды. Әйтерһең, йылға уның ғүмерен ҡап урталайға бүлде: йәшәлгән һәм йәшәләсәк ғүмер. Ағиҙелдең арьяғында балалыҡ, алма баҡсалары, айлы кистәр, һалҡынса сиркәүҙә ҡаралған кинофильмдар, боҙ киткәндә күҙәтеп, һоҡланып ултырыуҙар... Ә Ағиҙелдең был яғында — һуғыш һәм билдәһеҙлек...

Тәҙрәнән башын сығара төшөп барған Әлфиә янына ике яҡтан ике ҡыҙ килеп, ҡулдарын уның яурынына һалды. Ул бер уңға, бер һулға боролоп ҡарап алды. Был ҡыҙҙар менән Әлфиә комиссияла танышҡайны. Береһе, ҙур зәңгәр күҙлеһе, батша ҡыҙҙары шикелле, горур атлап йөрөй. Ғәлиә Байкова. Ул, яңылышмаһам, Өфө янындағы Шишмә районынан, буғай. Ҡайҙа, кем булып эшләгәнен белмәй, ныҡлап танышырға өлгөрмәне. Икенсеһе — башҡорттарға

хас яҫы битле, яңаҡ һөйәктәре сығып тора, ләкин аҡ йөҙлө, һоро күҙле, яңағында һөйкөмлөлөк миңе лә бар, һиҙелеп тора, ул «гибрид», ләкин ике яҡтан да гел матурлыҡты ғына алған. Мәрйәм Сафарова. Уҡытыусы булған, колхоз-совхоз театрында уйнап йөрөгән.

Улар һағышланып баҫып торған Әлфиәне үҙҙәренә табан ҡаратты. Ғәлиә Байкова был кескәй генә ҡыҙҙы йәлләп, апаларса, юҡ, әсәләрсә һорай һалды.

— Моңаябыҙмы, сабыйым?

— Юҡ та... — тине Әлфиә, мөмкин тиклем көрөрәк яуап бирергә тырышып. Сит кешегә генә түгел, иң яҡын кешеләргә лә ул үҙенең көсһөҙлөгөн, йомшаҡлығын күрһәтергә тырышмай ине. — Һуңғы тапҡыр ҡараған киноны иҫемә төшөрөп уйлайғайным, — тип хәйләләште.

— Туҡта, туҡта, аҙаҡҡы тапҡыр мин ниндәй картина ҡарағайным әле? — тип Ғәлиә киң текә маңлайына йыйырсыҡтар сығарҙы. — Ә, бәлеһегеҙме, мин йыш ҡына картиналарҙы йырҙарына ҡарап хәтерләйем, һәм ул көслө күкрәк тауышы менән йырлап ебәрҙе. «Эх бы дожить бы до свадьбы-женитьбы...»

— «Пархоменко!» — тип ҡысҡырып ебәрҙе Мәрйәм, Өфөлә ҡарағайным, Сәнғәт идаралығына йомош менән килгәс.

Ә Әлфиә ул картинаны көмбәҙ түшәмле сиркәүҙә ҡарағайны. Ул, Әклимә һәм уларҙың даими эйәрсәне һәм һаҡлап йөрөүсеһе — Әшрәф.

Ҡыҙҙар өсәү ҡосаҡлашып ултырҙылар ҙа «Пархоменко»лағы йырҙы йырларға тотондолар. Тора-бара башҡа ҡыҙҙар ҙа йырға ҡушылды. Ә поезд көнбайышҡа, тимер юлдан утлы юлға, ашыҡты...

## УТ БӨРСӘҺЕ

Әлфиә Ҡамалова алғы һыҙыҡҡа — фронтҡа барып еткәнсе, йылдан артыҡ ваҡыт үтеп китте. Радистар мәктәбендә уны төрлө рацияларҙа эшләргә өйрәттеләр. Эшләргә генә түгел, матчасты биш бармағың шикелле белергә, кәрәк булһа, ваҡ-төйәк ремонт яһарға ла. Ниңәлер, бигерәк тә «Белка» тигән кескәй генә, һалдат котелогына оҡшаған, ләкин унан ике-өс тапҡыр ҙурыраҡ рацияға айырыуса иғтибар иттеләр. Рацияларҙан башҡа ул автоматтан, пистолеттан атырға, граната ташларға өйрәнде, немец телен камиллаштырҙы. Был эштә һуғыштың тәүге айында Смоленск янында үҙе теләп беҙҙең яҡҡа сыҡҡан немец Генрих ярҙамлашты.

Әлфиә айырыуса рацияларҙы ныҡышмалы өйрәнде. Занятиенан һуң ярты ғына сәғәткә булһа ла тороп ҡалып, рацияны һүтеп-йыйырға, башҡаларҙан уҙҙырырға тырышты. Дөрөҫ, уның башҡаларҙы уҙырға тырышыуы кәүҙәһенең бәләкәй булыуына асыу итеп тә, фронтҡа тиҙерәк эләгергә ашҡыныуҙан да ине. Әлфиә менән бергә бер взводта хеҙмәт итеүсе ҡыҙҙар, «Ҡамалова төшөндә лә пи-пи-пи тип ята», тип көлдөләр. Ысынлап та, ҡайһы саҡта, үҙе лә һиҙмәҫтән, уның бармаҡтары рация асҡысында эшләгәндәге шикелле ҡыбырлап ятҡылай торғайны. Күрәһең, ҡыҙҙар юҡҡа унан көлмәгәндәрҙер.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, уға антифашист Генрихты берҡеткәс, йөрәктә ниндәйҙер осҡон тоҡанғайны: «Әллә үҙен дошман тылына ебәрергә самалайҙармы икән?» Һуғыш бит инде үҙебеҙҙең ерҙән дошман еренә күсте. Ҡыҙыл Армия Польшаны, Чехословакияны фашизмдан азат итә, Гитлерҙың берҙән-бер союзнигы Венгрия еренә бәреп инде. Ләкин йөрәктәге осҡон ялҡынға әйләнмәне. Резервта бер айға яҡын ятҡандан һуң, уны дивизия командованиеһы ҡарамағына ебәрҙеләр. Ә был дивизия Венгрия ерендә һуғыштар алып бара ине.

Бына «хәрәкәттәге армия». Гвардия исемен алған данлыҡлы дивизия штабы. Шып-шыма итеп ҡырынған тулы битле, хуш күңелле писарь уның документын алып, күҙ йүгертте лә, ым-мм, тип күрше бүлмәгә инеп китте. Шул минутта уҡ эске яҡтан күҙҙәре ҡыҙарған, ҡаҡса йөҙө ағарынған оҙон кәүҙәле йәп-йәш майор сыҡты. Күрәһең, уға йоҡо, ял бик аҙ тейә торғандыр. Майор «биш ҡарыш» буйлы, һөйкөмлө ҡыҙыҡайға йәлләгәндәй күҙ ташлап алды ла уның документына күҙ һалды. Ысынлап та, Әлфиәгә йылмайып, юҡ, һоҡланмай ҡарап булмай ине.

Нескә биленән ҡыҫып торған горчица төҫөндәге инглиз шинеле, көҙгөләй ялтлап торған күн итек. Ҡыҙыл йондоҙ ҡаҙалған берет аҙ ғына ҡырын кейелгән. Берет аҫтынан ҡараһыу сәс бөркөләп тора...

Кескәй генә, нәҙек кенә бармаҡ остарын сикәһенә терәп, Ҡамалова честь бирҙе.

— Ҡыҙыл армеец Ҡамалова!

Оҙон, сандыр майор ҡарап тороуға ғына артыҡ етди тойолдо — арыу, йоҡламау уны шулай күрһәтәлер — асыҡ йөҙ менән уға ҡулын һуҙҙы, дуҫтарса Әлфиәнең усын ҡыҫты.

— Һаумыһығыҙ, иптәш Ҡамалова, — майор уға ултырырға урын күрһәтте. — Тимәк, радистка?

Ҡамалова, утҡа ултырған кеше шикелле, һикереп торҙо.

— Так точно, йыл буйы өйрәттеләр, — унан үҙе лә аңлап етмәй, ни өсөндөр, маҡтаныбыраҡ, хәйер, ни өсөн икәне аңлашыла инде, «ихтимал, тегендә ебәрерҙәр» тип, өҫтәп ҡуйҙы. — Мин немец телен дә яҡшы беләм, иптәш гвардия майоры.

Майорҙың арыған йөҙөндә йылмайыу хасил булды.

— А-аа... быныһы тағы ла яҡшы, — ул шыма ҡырылған тулы битле писарь менән шыбырлашып алды, теге «под-бокс» ҡырылған түмәр шикелле ҙур башын ҡаҡты.

— Ошо көндәрҙә разведротаның радисы стройҙан сыҡты, — тип Әлфиә менән кәңәшләшкәндәй һөйләй башланы майор. — Әгәр беҙ һеҙҙе шунда ебәрһәк? Командиры ла, ротаһы ла «во!». Бөтә армияла дан тота, — майор баш бармағын тырпайтты.

Әлфиә йәнә, итәгенә ут ҡапҡандай, һикереп торҙо: «Мин — һалдат, ҡайҙа бойорһағыҙ, шунда...» — тип татылдай башлағайны, майор әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәне, «ултыр, тыңлап бөтөр» тигәнде ишараланы.

— Һеҙҙе дивизия штабы ҡарамағына ебәргәндәр, Камалова. Беҙ һеҙҙе бында, штабта ла ҡалдыра алабыҙ, әммә һеҙҙең немец телен яҡшы белеүегеҙ, ихтимал, оҙаҡламай кәрәк тә булып ҡуйыр, — тип майор һүҙен серле итеп, йәнә Әлфиәнең күңеленә осҡон һалып тамамланы.

Майор эйелә төшөп, писарға ниҙер әйтте, ә теге трофей машинкала бер бармағы менән хәрефтәр «сүпләп» баҫа башланы. Әлфиә: үҙе писарь, үҙе машинкала ла яҙа белмәй, тип тегегә шелтәле ҡараш ташлағайны, машинканың трофей икәнлеге, шрифтарҙың латинса булыуын күрҙе лә писарҙы ғәфү итте.

Майор үҙ бүлмәһенә инеп китте. Писарь үҙе бер бармағы менән машинка клавиштарына һуҡҡыланы, үҙе «урлап» ҡына Әлфиәгә күҙ ташланы.

— Фронтта булғанығыҙ бармы?

— Юҡ шул әле, — тине Әлфиә, ҡырҡ дүртенсе йылдың көҙөнәсә дары еҫе еҫкәмәүенә ғәфү үтенгәндәй.

— Ҡайғырма. Бында бик ҡуйы бутҡа бешерергә самалайҙар. Гитлер Венгрияны тиҙ генә ҡулынан ысҡындырырға уйламай. Ошо көндәрҙә генә үҙенең күптәнге ғәҙел дуҫын тибеп осорҙо ла икенсе бер лакейҙы — Салашиҙы «фюрер» тип ҡуйҙы. — Ҡапыл писарь темаһын үҙгәртте, эшлекле интонация серле тауышҡа, бесәй мыраулауына оҡшаны. — Теләһәгеҙ, Камалова, беҙ һеҙҙе штабта ла ҡалдыра алабыҙ. Рация бит еңел түгел. Ғөмүмән, разведрота...

Әлфиә писарҙың тел төбөн аңлап етмәне: ул Әлфиә тураһында ҡайғыртамы әллә башҡа маҡсаты бармы?

— Рәхмәт инде, — тине Әлфиә, өйҙә, сәй эсеп, өҫтәл артынан ҡуҙғалған бала шикелле. — Минең разведротаға барғым килә.

— Ҡара инде, — писарь машинканан ҡағыҙҙы тартып алды ла майор кергән бүлмәгә йүнәлде, әммә ишекте асырға ашыҡманы. Күҙҙәрен майландырып йылмайҙы. — Разведрота малайҙары, беләһеңме, ниндәй? Тереләй ашаясаҡтар.

— Мин дә йыуаштарҙан түгел, — тине Әлфиә, саялаңып, ләкин писарь уның һүҙҙәрен ишетмәне, ул инде майор янына инеп киткәйне.

Әлфиә тороп, ҡайышын төҙәтергә, котомкаһын яурынына аҫырға өлгөрмәне, писарь йылт итеп килеп тә сыҡты.

— Булды! — тине ул күңелһеҙ генә. Һиҙелеп тора — Әлфиәнең тиҫкәрелеге уның кәйефен ҡырған.— Оҙаҡламай разведротаның старшинаһы киләсәк, шуға эйәреп китерһең.

— Миңә тышҡа сығырға мөмкинме? — тип һораны Әлфиә, ниңәлер, ҡапыл тартынып.

— Теләһәң, бында ла ултырып тора алаһың, — тине писарь дуҫтарса. — Һин миңә ҡамасауламайһың.

— Рәхмәт, минең һауаға сыҡҡым килә.

Дөрөҫөн әйткәндә, Әлфиәнең саф һауа еҫкәүҙән бигерәк һуғыш һулышын тыңлап ултырғыһы килә ине.

Әлфиә ботаҡтарын төрлө яҡҡа йәйеп ебәргән бейек, йыуан алмағас төбөнә барып ултырҙы. Күрәһең, был ҡарт ветеран ҡышҡы сорт алмалар бирә торғандыр. Ағас баштарында, иң өҫтәге ботаҡтарҙа, груша формаһындағы ҡыпҡыҙыл алмалар күҙҙе ҡыҙҙырып бына-бына өҙөләм тип һалынып тора ине. Шунда уҡ күҙ алдына башҡа ағастар, алыҫ Уралда, Өфөнөң «онотолған» бер урамының соҡор биттәрендә үҫеүсе алмағастар килеп баҫты. Иҫке Өфө малайҙарының алма баҡсаларына налет яһауҙары, әле һаман да ыҫмала еҫе килеп торған һалҡынса сиркәүҙә кино ҡарау... Хәтер тигәнең иҫ киткес механизм бит ул, секундтың йөҙҙән бер өлөшөндә йондоҙҙар янына менеп етәһең, меңәр йылға артҡа йәки алға китәһең. Кеше бер ҡасан да хәтерҙе алмаштырырлыҡ машина уйлап таба алмаясаҡ.

Әлфиә һағышлы йылмайҙы. Әле генә күҙ алдына килгән күренештәр бик йыраҡта ғына түгел, бик күптән дә булған шикелле тойолдо. Ҡапыл уның ҡарыны асып китте. Ләкин ул, ниңәлер, часовойҙан, штабҡа инеп-сығып йөрөгән офицерҙарҙан, связнойҙарҙан тартынды: «Түҙергә тура килер. Тегендә ашармын».

Ул писарҙың мәғәнәле әйтелгән һүҙҙәренә анализ яһай башланы. «Бында бик ҡуйы бутҡа бешерергә самалайҙар».

Ләкин ептең осопа сыға алманы, писарҙың йылтырап торған шыма бите күренде. Ул, бер бармағын бөгә-бөгә, уны янына саҡырҙы.

— Разведчиктар яғына связной бара, теләһәң, шуға эйәр.

— Рәхмәт, иптәш писарь! — тигәнен Әлфиә һиҙмәй ҙә ҡалды.

Писарь ҡаштарын емерҙе. Һуғыштың башынан алып ул писарь булып эшләһә лә, ошо батша заманынан ҡалған һүҙҙе әйтһәләр, ене ҡуҙғала. Бөтәһе лә үҙгәрҙе: фельдфебелде старшинаға әйләндерҙеләр, поручиктар, төрлө вахмистрҙар есаулдар, бөттө, ә писарь һүҙе тороп ҡалды. Бер ҡараһаң, писарь һүҙенән ғәрләнәһе лә юҡ, секретарь тип йөрөтһәләр, матурыраҡ яңғырар ине.

— Между прочим, — тине писарь ҡоро ғына, погонына төртөп, — минең званием бар. Өлкән сержант!

— Ғәфү итегеҙ, иптәш өлкән сержант, — тине Әлфиә, честь биреп, яғымлы йылмайып. Писарҙың да асыуы ҡасты. Йылмайҙы.

Бына ул, ҡараңғы сырайлы, таҙа кәүҙәле килбәтһеҙ ефрейтор артынан йүгерә-атлап разведротаға китеп бара. Көн йонсоу. Әсе ел иҫә. Фронт яғынан тоташ геүләү, пулеметтар татылдауы ишетелә. Былай ҙа күңелһеҙ офоҡто шомландырып, бер нисә урындан ҡарағусҡыл төтөн өйөрмәһе борхолдай. Ҡайҙандыр ҡурғаш кеүек ҡара, ауыр болоттар аҫтынан бомбардировщиктарҙың ҡалын тауыш менән геүләгәне ишетелә, Әлфиә резервта фронтҡа ебәреүҙе көтөп зарығып ятҡанда, истребителдәрҙе бомбардировщиктарҙан, үҙебеҙҙең самолеттарҙы немец самолеттарынан айырырға яҡшы өйрәнгәйне инде. Немец бомбардировщиктары күкрәкте ҡыҫа торған ауыр, йәмһеҙ тауыш менән геүләйҙәр...

Ә был юлы беҙҙең бомбардировщиктар оса ине. Уларҙың тауышы күңелде күтәрә, Әлфиәнең аяҡтарын еңеләйтә, аҙымдарын етеҙләтә. Хәҙер инде ул тумһыҡ ефрейтор менән эре-эре атлап бара. Ә ефрейтор бер һүҙ ҡушһа икән. Оҙон аяҡтары менән йәнәш атлап мышнап тик бара. Әлфиәнең башына төрлө уйҙар килә. Ул бер һөйөнә, бер күңелһеҙләнеп ҡуя. Сөнки һалдат Ҡамалова радистар мәктәбендә үк башҡа разведка хаҡында хыялланғайны. Ярай, хәҙергә ошо, ғәскәри разведка ла уны ҡәнәғәтләндерә. Ни генә тимә, штабта билде ойотоп ултырыу түгел, разведка — армияның күҙҙәре һәм ҡолаҡтары. Ә һуҡыр, һаңғырау әҙәм — ярты, юҡ, сирек кеше. Тимәк... тимәк, уны фронттағы иң яуаплы эшкә тәғәйенләнеләр. Бына ул күҙенә төртһәң күренмәҫлек ҡараңғы төндә дошман тылына китеп бара. Арҡаһында «Белка». Еңел әйбер түгел, әммә Әл-

фиә уның ауырлығын тоймай. Ул фәҡәт бер генә нәмә хаҡында уйлай: тиҙерәк фронт һыҙығын үтеп сығырға ла, «теге» яҡтан дошман тураһында мәғлүмәттәр, боевой донесение тапшырырға... Ул минуттар Әлфиәнең ғүмерендә иң тулҡынландырғыс, иң шатлыҡлы минуттар буласаҡ. Әлфиә уларҙы бер ҡасан да онотмаясаҡ. Йөҙ йыл йәшәһә лә.

Ефрейторҙың ҡоро, хатта һалҡын тауышы уны хыял диңгеҙҙәренән тартып сығарҙы — елкәнле кәмә шунда уҡ юҡ булды.

— Әй, ҡыҙый, — тине ул, бүренеке һымаҡ йыуан, таҙа муйынға ултыртылған дүрткел башын бороп. Анауы ярым емерелгән ике ҡатлы ҡыҙыл кирбес йортто күрәһеңме?

— Күрәм, — тине Әлфиә, уның ҡаршыһына баҫып, ефрейторҙың ауыҙына ҡарап.

— Күрһәң, ана шунда разведчиктар урынлашҡан. Һыныр. — Связной хушлашып та тормай, китеп барҙы.

«Вәт, кеше тиһәң дә кеше. Кеше түгел, буға, тип башын һелкеп, ни көлөргә, ни асыуланырға белмәй ҡарап ҡалды Әлфиә. Һөйләшергә яратыусы Әлфиә, юл буйы теләп тешләп килеп, саҡ-саҡ шартлап ярылманы. Ярай әле кешенең уйлай торған иҫ киткес сифаты бар. Ана шул сифат иң ауыр минуттарҙа ла, яңғыҙ булғанда кешегә һәр ваҡыт ярҙамсы һәм йыуатыусы иптәш була. Ләкин ошо минутта кемдеңдер, Максим Горькийҙың булһа кәрәк, аҡыллы һүҙҙәре уның хәтеренә килде. «Кешеләрҙең мин, иң элек, яҡшы, матур яҡтарын күрергә тырышам». Бәлки, был тумһыҡ, һөйләшергә яратмаусы кеше лә тәбиғәте менән бик һәйбәт бәндәлер. Бәлки, бөгөн уның кәйефе генә юҡтыр: командирынан эләккәндер, йә өйөнән күңелһеҙ хәбәр алғандыр. Уның һөйләшергә яратмауы, бер ҡарағанда, һәйбәт тә булды — Әлфиә юл буйы уйланып килде. Лығырлағыраҡ кеше булһа, ихтимал, йыйын туҙға яҙмаған һүҙҙәр һөйләнеп, асыуҙы килтереп, кәйефте боҙор ине.

Был һығымтанан ҡапыл Әлфиәнең күңеле күтәрелеп китте. Ул аҡрын ғына көйләй башлағанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды, ахрыһы.

Йырла, егет, киреп киң күкрәгең,
Яңғыратып Уралдың буйҙарын...

Тик шуныһы аңлашылманы, ни эшләп әле ул ҡапыл боронғо оҙон көйҙө — «Һандуғас»ты йырларға тотонды? Шулай уҡ бер йыл эсендә тыуған яҡтарын һағынырға ла өлгөрҙөмө ни? Ә һуғыштың тәүге көндәренән армияға алынғандар ни эшләй икән? Ә уның биш йыл буйы армияла хеҙ-

мәт итеүсе Туймазылағы ике туған ағаһы көҙгө япраҡҡа әйләндеме икән? Әллә тора-бара күнектеләрме икән? Әллә ирҙәр һағыныу-һағыштарҙы ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда еңелерәк кисерәме икән? Хәйер, кеше күңелен ҡайҙан беләһең инде! Йөрәк... Ҡулыңды ҡуйһаң, уның типкәнен тояһың, ә бына үҙе иң алыҫ йондоҙҙарҙан да алыҫыраҡ.

Ул йәшәгән урам «ғүмере» эсендә бер ҡасан да асфальт түгел, булыжник йәйелгән тротуар ҙа күрмәгән. Мөйөштәрҙәге ике ҡатлы кирбес йорттарҙы иҫкә алмағанда, бөтә йорттар ҙа йә бер ҡатлы, йә ҡат ярымлы. Яҙын, көҙөн урам батып үлерлек бысраҡ була, ҡыштарын тайғаҡ, ҡар күп яуған йылдарҙа көрт баҫа, тротуарҙан (тротуар, тимәһәң, хәтере ҡалыр) барғанда, тәрән траншеянан барған кеүек.

Улар йорто ҡаршыһында яңы Россияның беренсе халыҡ мәғарифе наркомы Луначарскийҙың исемен йөрөткән баҡса бар. Уны йәштәр ҡыҫҡартып, иркәләп, «Лунный» тип йөрөтә.

Май урталарынан алып йәй аҙағынаса баҡсанан кистәрен музыка ишетелеп тора. Йә тынлы оркестр, йә эстрада оркестры вальстар, фокстроттар уйнай. Баҡса бөтә яҡтан да ике метрлы ҡойма менән уратып алынған. Таҡталарҙың өҫкө баштары, ҡәләм кеүек, осланған — бына хас боронғо баструк инде. Әммә Әлфиәләрҙең үҙҙәре генә белгән йәшерен тишектәре була торғайны — ике таҡтаны аҫтан ике яҡҡа айыраһың да — шылт! — баҡсаға инеп юғалаһың. Был тишекте Әшрәфтән һәм өс әхирәттән башҡа берәү ҙә белмәй ине...

Ошо ваҡыт Әлфиә яртылаш емерелгән ике ҡатлы ҡыҙыл кирбес йортҡа килеп еткәнен иҫләне. Дүрт мөйөшлө колонна менән һалынған йорттоң парад ишеге өҫтән емерелеп төшкән кирбестәр менән ҡапланған — урталайға бөкләнмәһәң, йорт эсенә инерлек түгел. «Ә подвалға ҡайҙан, нисек керәләр икән? — тип уйларға өлгөрмәне, ул йорттоң арғы башында подвалға төшә торған ишекте күрҙе. Дөрөҫөрәге, тишекте. Әлфиә шатланып китте. Был бит хас «Луначарский» баҡсаһына ҡасып кергән шикелле. Тишек-ишек янында аҡрын ғына һыҙғырып, муйынына трофей автомат аҫҡан часовой ары-бире йөрөй ине. Ул нисек етте шулай ғына кейенгән: ҡолаҡсындары өҫкә күтәрелеп бәйләнгән бүрек ҡырын тора, кирза итектәре бер ҡасан да вакса күрмәгән. Яңаҡтарын шырт баҫҡан. Партизандар шикелле һаҡалмыйыҡ үҫтерергә самалаймы әллә ҡырынырға иренәме икән? Бәлки, ул заданиенан ғына ҡайтҡандыр? Улай тиһәң, заданиенан ғына ҡайтҡан кешене посҡа баҫтырмаҫтар ине. Күрәһең, үҙе шундай иренсәк, әрпеш кешелер.

Әлфиә ҡуныстары көҙгө урынына файҙаланырлыҡ күн итектәренә, нәҙек инглиз сукноһынан тегелгән ҡупшы шинеленә ҡарап алғас, үҙен мәж килеп эшләп йөрөгән кешеләр араһына килеп төшкән ҡунаҡ кеүек тойҙо. Уға ятып йөнап, шинелен бысратҡыһы, итек ҡуныстарына мәте сәпәгеһе килде.

Әлфиә тиҙ генә тар урамды киҫеп сыҡты ла часовой янына килде.

— Һаумыһығыҙ! — тине Әлфиә дуҫы-иптәше менән иҫәнләшкән шикелле.

Часовойҙың ауыҙы ҡолаҡтарына етте. Ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, усы менән шырт баҫҡан яңағын һыйпап алды.

— Шаяртмаһағыҙ, һаумыһығыҙ! — тип унын сәләмен алды часовой һәм бер Әлфиәнең, бер үҙенең итектәренә күҙ йүгертте.

— Разведрота ындамы? — тине Әлфиә, ниңәлер, ҡыҙарып.

— Әлләсе, — тип яуапланы часовой, ниңәлер, йылмайып.

— Ә минең документым бар, — тип Әлфиә, ашығып, шинель төймәһен ысҡындырып, гимнастерка кеҫәһенән йылтыр битле писарь биргән ҡағыҙҙы тартып сығарҙы. — Ышанмаһағыҙ, бына.

— Ана, ротный үҙе лә килә ята, — тине часовой айыу һымаҡ алпан-толпан атлап килеүсе ике метрлы һонторға башы менән ишаралап.

Һонтор былар янына килеп етте, папиросын яйлап һүндерҙе лә ҡайҙа ташларға белмәй торҙо.

— Кем ул? — тине, бер нәмә лә аңламаусы ҡарашын бер часовойға, бер Әлфиәгә ташлап.

— Пополнениеға оҡшаған, — тине лә часовой, мыҫҡыллы йылмайыуын йәшерергә теләп, башын ситкә борҙо.

— Пополнение? — Рота командирының йөҙөнә аҙ ғына ла үҙгәреш сыҡманы — был һүҙгә ышанманымы ул әллә эсендәгеһен тышҡа сығармай торған кешеме. Капитан — уның званиеһы шулай ине — Әлфиәнең ҡағыҙын алды. Ә Әлфиә уны күҙәтте. Өс кеше башын ҡуйһа ла һыйырлыҡ киң, көслө күкрәк; япраҡтары киңәйеп торған оҙон, төп-төҙ танау; икеләнеп торған эйәк, ҙур ҡуңыр күҙҙәр, ә устары бына хас һалдат биләндә аҫылынып йөрөүсе көрәк инде. Һәр хәрәкәтендә, ҡыланышында, һүҙендә ғәйрәт һәм тәүәккәллек һиҙелеп тора.

«Абау, бигерәк шөкәтһеҙ», — тип һығымта яһаны Әлфиә, тәүге тәьҫирҙән һуң.

Әлфиә уға ҡараған арала капитан уның ҡағыҙын уҡыны ла дүрткә бөкләне, бер нәмә аңлатмаусы күҙҙәре менән ҡа-

рап алғас, «киттек», тине. Был караштан Әлфиә курылды. Бындай командир кул аҫтында хеҙмәт итеүе еңел булмаясаҡ уға...

Улар подвал ишегенән эйелеп кереп, кирбес ватыҡтары, түшәмдән, стенанан кубып төшкән штукатур киҫәктәре, ҡом, балсыҡ менән капланған баҫҡыстан һаҡ кына аҫҡа төшә башланылар. Әлфиә бер-ике тапҡыр саҡ-саҡ абынып йығылманы. Рота командиры «ипләберәк!» тип уны яй ғына киҫәтте һәм уның тар, бәләкәй ҡулын үҙенең көрәк кеүек усына алды. Капитандың ҡулы ҡытыршы һәм бик көслө ине. Ошо уҡ секундта Әлфиә Әшрәфте хәтерләне. Дөрөҫ, уның ҡулы капитандыҡы һымаҡ ҙур түгел, әммә шундай уҡ ҡытыршы, көслө ине. Был хәтерләүҙән Әлфиә ҡапыл ҡыйыуланып, хатта саяланып китте.

— Иптәш капитан, ә ниңә был сүп-сарҙы йыйыштырмайһығыҙ? Ялҡаулыҡ көсләмә, әллә шулай йәшәргә күнектегеҙме? Өйҙә, моғайын, болдороғоҙҙо ғына түгел, ишек алдығыҙҙы ла былай тотмайһығыҙҙыр әле, эйе бит?

— Өйҙә... (Ул капитандың тауышында ирония һиҙҙе.) Беҙ бит йырҙағыса: бөгөн бында, иртәгә тегендә. Әле беҙ бында осраҡлы рәүештә генә шулай оҙаҡ туҡталып торабыҙ, — ул яурыны менән эскә асыла торған ишекте этәрҙе. — Бына беҙҙең һарай.

Ватыҡ кирбестәр менән ярым-яртылаш ҡапланған тәҙрәләрҙән подвалға болотло көндөң һаран яҡтыһы төшә. Әлфиә күҙҙәрен сытырлатып йомоп асты — подвал яҡтыра төштө һәм үҙ эштәре менән мәшғүл булған разведчиктарҙы шәйләне. Береһе, каскаһына ҡағыҙ ҡуйып, хат яҙа; икенсеһе тынын өрә-өрә автоматын таҙарта, ә икәүһе подвалды һелкетеп, хырылдап йоҡлап ята. Берәү тәҙрәнән төшкән яҡтылыҡта кескәй генә китап уҡый. Ул, ирендәрен ҡыбырлатып, уҡып ала ла, күҙҙәрен йомоп, уҡығанын ҡабатлай, көрәшһенең, шиғыр ятлайҙыр...

Ғәжәпкә ҡаршы, берәү ҙә Әлфиәгә иғтибар итмәне, күтәрелеп ҡаранылар ҙа эштәрен дауам иттеләр. Әллә уның ҡыҙ кеше икәнен айырманылар, әллә йомош менән килгән связной-фәлән тип уйланылар. Был Әлфиәне бер аҙ сәмләндерә төштө. Ул бит төндәрен керпек ҡаҡмай тәүге осрашыу тураһында уйлап ятҡайны. Нимәнәндер ҡурҡҡайны, нимәгәлер өмөтләнгәйне... Ә асылда — иҫ киткес вайымһыҙлыҡ. Ҡапыл уның илағыһы килде.

— Старшина, — тине капитан һаҡ ҡына, йоҡлап ятыусыларҙы уятмаҫ өсөн.

Ике плащ-палатканан ҡоролған шаршау артынан, ҡулдарын майланып бөткән сепрәккә һөртә-һөртә, старшина күренде. Әлфиәнең күҙенә ташланған тәүге нәмә уның ту-

шендәге ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм гвардия значогы ине.

Старшина төпөш, киң яурынлы, һәр бер ағзаһы килешеп торған һөйкөмлө кеше ине. Күҙ төптәрендәге йыйырсыҡтар уның характерына хәйләкәрлек һәм шаянлыҡ һыҙаты өҫтәп тора.

— Мин бында, иптәш капитан, — тине старшина, йәһәт кенә ҡулын сикәһе янына яҡын килтереп, шул уҡ ваҡытта уның хәйләкәр күҙҙәре Әлфиәне лә барлап алды. Әлфиә старшинаның күҙҙәрендә һағайыу ҙа, мыҫҡыллау әҫәре лә күрмәне.

— Иван Федорович, — тине капитан, старшинаға дуҫына йәки ағаһына мөрәжәғәт иткәндәй (ысынлап та, старшина капитандан шаҡтай өлкәнерәк ине, ихтимал, шуға күрә ул уға званиеһы менән түгел, исеме, атаһының исеме менән өндәшкәндер). — Яңы килгән разведчикты һәйбәтләп урынлаштыр.

Әлфиә егеттәрсә честь бирҙе.

— Рядовой Ҡамалова!

Валлаһи, подвал уртаһында снаряд йәки мина гөрһөлдәп ярылһын, разведчиктарға шул саҡлы тәьҫир итмәҫ ине. Үҙ эштәре менән мәшғүл булған һалдаттар, команда ишеткән шикелле, берҙәм баштарын күтәрҙеләр, берҙәм эштәренән айырылдылар. Хатта йоҡлап ятыусылар ҙа уянып, һикереп торҙо. Кемдер ауыҙын асып, таң ҡалды, кемдер ауыҙын йырҙы, ә ҡыйыуыраҡтары Әлфиә янына килде.

— Был ҡыҙ беҙгә пополнениемы? — тине Әлфиә ҡаршыһына уҡ килеп баҫҡан сержант. — Ә мин уны, «полк малайы»лыр, тип уйлағайным.

— Радистка, — тине капитан, ауыҙҙарын йырып шикләнеп ҡараусыларҙың шиген бөтөрөп. Аҙаҡ дуҫтарса өҫтәп ҡуйҙы. — Үтенәм... — Ул мәғәнәле тыныш яһап алды. — Әҙәпле булығыҙ, ихтирам итегеҙ, — һәм алпан-толпан атлап китеп барҙы.

Әлфиә уны күҙҙәре менән ишеккә саҡлы оҙатып ҡуйҙы. Ул, капитан сығып киткәс, ямғыр аҫтында ялан өҫ ҡалған кеше кеүек, үҙен шыҡһыҙ тойҙо. Торған ерендә тапанды, котомкаһын бер яурынынан икенсеһенә күсерҙе.

Капитан сығып китергә өлгөрмәне, разведчиктар уны ҡамап та алдылар. Әлфиәгә хатта һауа етмәгән кеүек тойолдо.

Дөрөҫөн әйткәндә, һалдат фронтта бөтәһенә лә күнегә: окоптарға төшөүсе һалҡынға, елгә-ямғырға, асығыуға, арыуға, ҡанға, хатта үлемгә лә. Әммә йәш, һылыу ҡыҙҙы күрһә, һалдат түҙемлегеп юғалта, ҡаушап ҡала, үҙе лә һиҙмәҫтән, төҙәтенә, өҫ-башын тәртипкә килтерә башлай: мөмкин саҡ-

лы батыр һәм матур күренергә тырыша. Бына улар, бәлки, йөҙәр тапҡыр дошман тылына барған, унар, бәлки, йөҙәр тапҡыр үлем менән күҙгә күҙ осрашҡан, ҡанға батып, һушһыҙ ятҡан, үлеп терелгән һәм тағы, тағы сафҡа баҫҡан һәм беренсе көндә үк дошман тылына ебәреүҙе үтенеп һораған батыр разведчиктар уртаһында кескәй генә, әле ҡанаттары яңы сығып килеүсе бәпкәне хәтерләткән һалдат ҡыҙыҡай баҫып тора.

Бер ҡул менән генә ҡосоп тоторлоҡ нескә бил. Осо тәкәбберләнеп өҫкәрәк ҡарап торған нескә, тура танау. Аҫҡы ирене өҫкөгә ҡарағанда аҙ ғына ҡалыныраҡ һәм аҙ ғына, наҙланып аҫҡа һалынып тора, әйтерһең, кемдер уны үбергә тейеш. Ғәҙәттә, ундай ирендәрҙе, «һиҙгер ирендәр», тип йөрөтәләр.

Әгәр маңлай күҙе менән түгел, ҡара һөрөңкө күңел күҙе менән ҡараһаң, был миниатюр ҡыҙыҡайҙың эсендә ниндәйҙер ғәйрәт йәшеренгәнлеге һиҙелә.

Юҡ, йөрәге генә түгел, тышҡы ҡиәфәте лә уның ирҙәрҙе йәлеп итерлек ине. Аҙ ғына алһыуланып торған таҙа, шыма бит. Юҡ, биттән дә бигерәк күҙҙәр. Был күҙҙәрҙә саялыҡ та («Ни күрһәм дә түҙәсәкмен!»), сәм дә («Мин дә һеҙҙән кәм түгел!») һәм иретерлек наҙлылыҡ («Һеҙ ана ни саҡлы, ә мин яңғыҙым ғына!») бар.

Был йәш, көслө ғәйрәтле ир-егеттәр араһында һуғыш алдынан ғына өйләнеп, ҡатындар тәненең сихри йылылығын тойған һәм устарына бер ҡасан да йомшаҡ, нәфис ҡыҙҙар ҡулын алмаған баҫалҡы малайҙар ҙа бар ине. Һуғыш уларҙың ҡулдарын, холоҡтарын тупаҫландырҙы, ләкин йөрәктәрен мүкләндерә алманы. Ихтимал, улар ҡатын-ҡыҙҙар енесенә тағы ла һиҙгерерәк һәм хислерәк була башлағандарҙыр.

Һалдаттар ҡоршауы эсендә тороп ҡалған яңғыҙ ҡыҙыҡай диңгеҙ уртаһындағы берҙән-бер пальмалы утрауҙы ла, овчарка эттәр ҡыҫырыҡлаған һарыҡ бәрәсен дә хәтерләтте. Бына шул «һарыҡ бәрәсе» йылт итеп яурынынан котомкаһын ергә ҡуйҙы ла бик ябай, бик ихлас тауыш менән: «Малайҙар, ә һеҙҙең һепертке бармы?» — тип һораны.

Ҡоршау ҡапыл бер нисә урындан өҙөлдө, разведчиктар бер-береһенә ҡарашып алды. Бая Әлфиә ҡаршыһына беренсе булып килеп баҫҡан мут күҙле сержант, «егеттәр, аврал» тип һөрән һалды.

Һәм шул уҡ минутта кем нисек етте шулай: көрәк менән, ҡулдары менән, иҫке сылғау менән подвалды таҙартырға тотондо. Шаян һүҙҙәр, көлөү, йыр һалҡынса, ярым ҡараңғы подвалды ҡапыл йылы, яҡты һәм йәмле өйгә әйләндереп

ебәрҙе. Ә старшина, Әлфиәнең котомкаһын алып, ике плащ-палатка менән айырылып ҡуйылған бүлмәгә алып китте.

— Өйҙәге һымаҡ уңайлы булмаһа ла, бында һинә яйлыраҡ булыр.

— Рәхмәт, Иван Фед...рович, — тип әйтеп бөтөрмәне, Әлфиә телен тешләне. — Миңә лә һеҙгә шулай өндәшергә яраймы, иптәш старшина?

— Ярай, ярай, ниңә ярамаһын. Мин, моғайын, һиңә атайығыҙ кеүек буламдыр әле?

— Атайым кеүек түгел, — Әлфиә инде үҙен иркенерәк тота. — Минең атайым инде алтмышты үтте.

— Ә-ә... Ә үҙең ҡайһы яҡтан?

— Өфөнән. Ишеткәнегеҙ бармы?

— Ни эшләп ишетмәй ти инде! — Ул быға саҡлы үҙе ятҡан урынды күрһәтте. — Хәҙер был һинең мөйөшөң булыр.

Ҡараңғыла Әлфиә постелдә һәрмәп ҡараны һәм саҡ ҡысҡырып ебәрмәне.

— Ай, был ни? — Уның ҡулдары йомшаҡ, шыма нәмәгә тейҙе. Мендәр тиһәң, ҡот осҡос ҙур, үҙе шыма.

— Был ҡош мамығынан һырылған юрған, Ҡамалова. Тышы атлас. Венгрияла, беҙҙәге шикелле һалҡындар булмаһа ла, мадьярар йылы яраталар. Ошо особняктың хужаһы бөтә мөлкәтен ташлап, ҡайҙалыр ҡасып киткән, — тип һөйләнде һәм аҙыраҡ аҡланды ла старшина. — Ә мин... э беҙ... Һалҡын подвалда туңа алмайбыҙ бит инде. Капитанға, үҙемә ике юрған алып төштөм. Хәҙер береһен һин ябынырһың, капитан бик йылы ябынып йоҡларға яратмай, э был мамыҡ юрған аҫтында шыбыр тиргә төшәһең. Үҙе ҡалын, үҙе еңел, үҙе йылы, — тип шаяртып һүҙен ослаңы старшина.

Әлфиә котомкаһын сисеп, кәрәк-яраҡ әйберҙәрен алып, тиҙеп ҡуймаҡсы булғайны ла, шинелен һалып, дөйөм «аврал»ға ҡушылды ла китте.

Бая уның янына беренсе булып тып итеп килеп баҫҡан сержант, ә уның исеме Виктор икән, Әлфиәне ситкә этәрҙе, эшләргә ирек бирмәне.

— Һин бында, әжәл дарыуы кеүек, берәү генә, — тине ул, мәғәнәле йылмайып, яғымлы итеп.

— Булһа, мин бит бында ҡунаҡҡа килмәгән дә, — тине Әлфиә шаҡтай ҡырҡа. — Мин — һеҙҙең һымаҡ уҡ һалдат.

— Ә һин капитан нимә тигәнде ишетмәнеңме ни? Ихтирам итегеҙ! — Һуңғы һүҙҙәрҙе әйткәндә, Виктор баш бармағын өҫкә күтәрҙе.

Ә Әлфиә һаман үҙенекен итте — был ныҡышмалыҡ, тип әйтәйекме, тиҫкәрелекме, уның ҡанында инде: кем Әлфиә-

неӊ теләгенә ҡаршы төшә, ул енгә әйләнә, һүҙен һүҙ итмәй туҡтамай.

— Улайһа, мин баҫҡысты таҙартам, ату унда аяғыңды һындырырһың, —Әлфиә подвалдан сыҡты. Ул ишекте ябырға өлгөрмәне, Виктор мыҫҡыллы ҡысҡырҙы: «Бөрсә!» Һәм, уның бәхетһеҙлегенә ҡаршы, шунда уҡ ишек шар асылды, Әлфиәнең зәңгәр береты күренде.

— Ябай бөрсә түгел, ә ут бөрсәһе, — тине лә ишекте шапылдатып япты.

Подвалда берҙәм көлөү ишетелде.

— Ну ҡаптың, Витька.

— Күн бирсәткәһеҙ тоторлоҡ түгел уны.

— Беҙ ала алмаған крепостар юҡ... — тип Виктор маҡтана башлағайны, әммә һүҙен әйтеп бөтөрмәне, старшина уның ҡаршыһына килеп баҫты.

— Ҡабатла әле шул һүҙеңде!

Виктор иһаһайлап көлдө.

— Шаярттым ғына, Иван Федорович. Әллә ышандыңмы тағы?

— Ҡул һуҙып ҡара, ату, — Викторҙың танауы төбөндә старшинаның шаҡтай һалмаҡ йоҙроғо йәшен шары кеүек уйнаны.

Бер ҡасан да юғалып ҡалмаусы Виктор старшинаның ҡолағы янына ауыҙын килтереп, ярым бышылдап, әммә башҡалар ҙа ишетелерлек итеп һөйләнде.

— Старшина, ә ут бөрсәһе ниндәйерәк йәнлек һуң ул?

— Ә һин уны Ҡамалованан һора.

Ҡемдер шикләнеүсән тауыш менән һораны.

— Иптәш старшина, ә уны беҙгә ниңә ебәргәндәр икән? Ул бит рацияны ла күтәрә алмай.

— Ебәргәс, күтәрә алалыр инде, — был Виктор тауышы ине. Ул ҡапыл ут бөрсәһе яғына күсеп, уны яҡларға тотондо.

— Аһа, Виктор үҙенә партнерша ла табып өлгөрҙө, — тине әлеге скептик.

— Ярамһаҡлана.

— Виктор эште ҡайҙан, нисек башларға белә ул.

— Тел сарлағансы, йәһәтерәк ҡыбырлағыҙ, — ти Виктор, үҙенең иғтибар үҙәгендә булыуына маһая төшөп. — Ысынлап та, мал аҙбарында йәшәгән һымаҡ йәшәйбеҙ. Ана, немецтар бер-ике көнгә землянка ҡаҙып инһә лә, ниндәй биҙәйҙәр, йыһазлайҙар: стеналарҙы таҡта менән көпләйҙәр, төрлө ояткыһыҙ карточкалар элеп ҡуялар.

— Ә шул кәнтәйҙәр араһында сәсен маңлайына эт ҡойроғо һымаҡ һалындырып төшөргән Гитлер һүрәте эленеп тора.

— Рәсеме генә шәрә ҡатын-ҡыҙҙар араһында тормаһа, үҙенең ирлеге юҡ, ти бит уның.

— Хоҙай биргән рәхәтлекте татый белмәгәнгә күрә ул каи еҫен ярата ла.

— Ҡуйығыҙ әле шул йыртҡыс хаҡында һөйләп тел әрәм итергә. Ә һалдат ҡыҙыҡай һөйкөмлө бит, ә?

— Ҡурсаҡ!

— Ә хәрби форма үҙенә ҡайһылай килешә! — тип түҙмәй өҫтәп ҡуя Виктор ҙа.

— Күҙең дә төшөп өлгөрҙөмө?

— Ауыҙыңды самалап ас, ишек артында ғына бит.

— Беҙҙең халыҡ, майҙан бутҡа боҙолмай, ти. Маҡтағанға үпкәләмәҫ әле.

— Минең Себерҙә тап ана шундай ҡарындашым тороп ҡалды...

— Ә минең ике ҡарындашым бар. Бәләкәйҙәр әле.

— Һин дары еҫе йотоп йөрөгән арала кәләш булырлыҡ булғандарҙыр инде.

— Эйе... — тип көрһөнә теге, — мин бит Холхин-Голдан бирле һалдат лямкаһын тартам. Алтынсы йыл...

Һалдат гәптәренең темалары бик тиҙ үҙгәреүсән, әйтергә яраһа, күп жанрлы була. Ә шуларҙан иң популяры — хәтирәләр, «мемуарҙар». Сөнки һалдат ни саҡлы хеҙмәт итмәһен: бер йылмы, биш йылмы — барыбер, армияны ғүмеренең бер эпизоды итеп кенә ҡарай.

— Ә мин, — ти баяғы каскаһына ҡағыҙ ҡуйып хат яҙып ултырған разведчик, — һуғыш алдынан обмотканы нисә метр урайһы, һүтәһе ҡалғанын ҡәләм менән сутлағайным, Гитлер бөтә иҫәп-хисапты бутаны.

— Һин әле яраланғандан һуң өйөңә ҡайтып килдең, исмаһам, ә минең ҡайтыр өйөм дә юҡ — өс йыл оккупациянан һуң бер кем дә ҡалманы.

— Әй, дүрт йылға ике аҙна өйҙә булыу — ас кешене бер һыныҡ икмәк менән туйҙырырға тырышыу менән бер ул. Ҡайтмаһам, лутсы була ине. Киткәндә әсәйҙе күкрәгемдән айыра алмай ыҙаландым...

Виктор әллә быларҙың «һағыш тулҡынына» күсеүен ишетмәй, әллә ул тулҡынды ҡыуып ебәрер өсөн көр тауыш менән ҡысҡырҙы: — Әй, егеттәр, халтураға эшләмәҫкә! — Ул үҙе ике ҡулына ике сепрәк тотоп (берсеһендә дымлы, икенсеһендә ҡоро) туҙан һөртөп йөрөнө.

— Беҙҙең Виктор туйға әҙерләнә бит, — тип көлдө скептик. — Телегеҙ менән иҙәнде ялағыҙ.

— Ул ҡыҙҙарға ике ҡарап тормай, бер ҡарай, муйынынан мөхәббәткә сума, — тип скептиктың һүҙҙәрен хуплай

Халхин-Голдан бирле һалдат лямкаһын һөйрәгән разведчик.

Һалдаттар Викторҙың бер ҡасан да шаяртыуға асыуланмағанлығын һәм бер шаяртыуҙы ла буш ҡалдырмағанлығын белә. Ә бына был юлы ул шаяртыуға бик етди яуап ҡайтарҙы.

— Ә минең тәбиғәтем шулай, егеттәр, әгәр кеше миңә бер ҡарауҙа оҡшаһа, ғүмерлеккә ул минеке, оҡшамаһа, баста, бер кем дә яраттыра алмай.

Тап ошо ваҡыт ишек асылды. Зәңгәр берет күренде.

— Малайҙар, сүп-сарҙы сығарып түгергә ярҙам итегеҙ әле, — тине Әлфиә, ҡустыларына йомош ҡушҡан шикелле.

— Хәҙ-ҙер! — Виктор бер-ике һикереүҙә ишек янына барып етте.

Ҡискә подвал ялт итеп тора ине инде. Бөтә ерҙә таҙалыҡ, бөхтәлек. Разведчиктарҙың кейемдәре, котомкалары тыныс ваҡытта, казармалағы шикелле тәртип менән элеп, теҙеп ҡуйылған. Виктор особняктың икенсе ҡатынан боролмалы-һырылмалы киң, ҡалын рамдарға тарттырылған ике картина ла алып төшөп элеп ҡуйҙы. Бер рамда упҡын ситенән ике тәгәрмәсле арбаға ишәк еккән, башына осло бүрек-папаха кейгән ҡарт китеп бара, икенсеһендә — түше орден-миҙалдар, йөҙө йыйырсыҡтар менән тулған ҡупшы, тәкәббер генерал, ҡылысының һабына ҡулдарын ҡуйып, әтәсләнеп ултыра. Кемдер: «Ә генералы ниңә кәрәк инде?» — тип ҡаршы төшөп ҡарағайны, Виктор, әйҙә, ашарға һорамай бит, подвал йәмлерәк булыр, тип ҡулын һелтәне.

Ҡиске аш кескәй генә банкетты хәтерләтте. Ғәҙәттә, һәр кем үҙ урынында, үҙ котелогынан ашыҡ-бошоҡ ҡына ашап, һауыт-һабаһын йыуып ҡуя торғайны. Ә был юлы боеприпастан бушаған йәшниктәрҙән тар, оҙон өҫтәл яһанылар, уны иҫке газеталар менән ҡапланылар. Алдан уҡ алюмин ҡалаҡтар, котелок ҡапҡастары теҙелеп ҡуйылды, икмәк теленде. «Ужин!» тигән ҡырҡа команда бирелмәне, ә, «өҫтәл янына рәхим итегеҙ», тип әйтелде. Разведчиктар, әҙәпле генә атлап, өҫтәл янына килеп ултырҙы, ҡаҙаҡ Байсәйетов хатта, әллә ысынлап, әллә шаяртып, «бисмилла» тип әйтә һалды. Старшина, ҡайҙа ятҡанлығын үҙе генә белә торған фляганы алып килеп, йөҙ грамм һыя торған ҡырлы стаканга — үлсәмгә ҡойоп, һалдаттарға «нарком паегы» өләшә генә башлағайны, Виктор атылып килеп инде.

— Айн момэнт! — тип ҡысҡырҙы ул ишек төбөнән һәм өҫтәл янына килгәндә үк кеҫәһенән, багет рамкалары кеүек, һырлы-мырлы бокалдар сығара башланы. Бокалдар өҫтәлгә ҡуйылып бөткәс, Виктор, ҡыҙҙар биленән тотҡан һымаҡ,

һаҡ ҡына ике бокалдың өҙөлөп сығам-сығам, тип торған биленән тотто ла сәкәштерҙе. Подвалға матур сыңлау таралды.

— Саф хрусталь! — тине ул тантаналы. — Фон граф-барон йәшәй белгән.

— Бынан киткәндә бөтәһен дә, һеперткегә саҡлы йортҡа кертеп, урынына ҡуйырға, — тине капитан шаҡтай ҡырҡа.

Ҡемдер, ҡәнәғәтһеҙләнеп, һуҡранды.

— Могайын, ул фон граф-барондың улы беҙгә ҡаршы һуғышалыр әле.

— Бөтәһен дә йортҡа кертеп, урынына ҡуйырға!

— Тыңлайым, иптәш гвардия капитаны! — тине Виктор, буйһоноп.

Банкеттарҙағы шикелле алдан уҡ һәр кемдең урыны билдәләнеп ҡуйылмағайны, кем ҡайҙа теләй, шунда ултырҙы, әммә, һуңлап килһә лә, Виктор, ни эшләптер, Әлфиә янына тап булды.

Әлфиә бына хәҙер генә ҡырҡ биш миллиметрлы пушка гильзаһынан эшләнгән коптилка, электр фонарҙары яҡтыһында «подвал кешеләрен» күҙәтә башланы. Ә был, подвалда бер взвод разведчиктары ғына йәшәй ине, ҡалғандары күрше подвалдарҙа торалар.

Әлфиәнең иҫе китте: рота командиры менән старшинанан башҡалары бөтәһе лә бер-береһенә оҡшаған. Юҡ, тургай төҫлө бөтәһе лә һоро түгел, ә бөтәһе лә бөркөт кеүек. Һайлап йыйған шикелле, һәммәһе киң яурынлы, оҙон кәүҙәле, асыҡ йөҙлө, ҡыйыу күҙле баҙыҡ егеттәр ине. Тәүҙә уға, әллә бында бер туғандар йыйылдымы икән, тигән дыуамал уй ҙа килде. Тора-бара Әлфиә уларҙың һәр береһенең үҙенә генә хас шәхес икәнен аңлаясаҡ, ә хәҙергә...

Виктор, «саф хрусталь», тигәс, Әлфиә үҙе лә һиҙмәҫтән бокалға бармағын тейҙереп ҡараны — уның әле ошо йәшенә етеп хрусталде тотҡаны ғына түгел, күргәне лә юҡ ине. Дөрөҫ, ниндәйҙер бер археология ҡаҙылмаһы кеүек ҡарсыҡ күп киҫәктәргә ватылған бокалын, йыйып йәбештерергә тип Әшрәфкә алып килгәйне. «Баккара, баккара, саф хрусталь», — тип тешһеҙ ауыҙҙары менән шашылдағаны уның хәтерендә ҡалған. Ул саҡта Әлфиә ҡарсыҡҡа ла, уның ваҡ киҫәктәргә ватылған баккараһына ла иғтибар итмәгәйне. Ә бына хәҙер уның ҡулында саф хрусталь — аҫыл быяла. Ғәжәйеп матур, ауыр ул, ләкин һалҡын, ҡулды өшөттөрә. Ихтимал, уға ғына шулай тойолалыр, хужа оҡшамаһа, уның малы ла оҡшамай бит. Ә бокалдарҙың хужаһы «фон барон-граф» Ҡыҙыл Армиянан ҡасып, гитлерсылар биләп торған зонаға шылған.

«Баккара»ға хәмер ҡойолоп сыҡҡас, капитан старшинаға башы менән ишара яһаны. Теге торҙо. Бокалды ике бармағы менән генә ҡымтып тотто. «Ҡапитан үҙенән элек һүҙҙе старшинаһына биргәс, Иван Федоровичтың ротала авторитеты ҙурҙыр, күрәһең», тип уйланы Әлфиә.

Старшина, һәр мыйыҡлы кеше һымаҡ, һүҙ башлар алдынан тәүҙә мыйығын һыпырып алды (ә мыйығы уның аллаға шөкөр ине, ысын гвардия мыйығы), тамағын ҡырҙы, ҡаушабыраҡ торҙо.

— Бына шулай... Был өҫтәл артында ултырыусыларҙың күбеһе Сталинградтан алып венгр еренә саҡлы һуғыш юлын үтте... Һуғыштың һуңғы көнөнә тиклем шулай бергә булырға яҙһын. — Ул һуңғы һүҙҙәрен көсәйтә төштө. — Еңеү көнөнә саҡлы бергә һуғышырға яҙһын! Иҫән-һау көйгә өйгә әйләнеп ҡайтырға яҙһын! Һиңә лә, ҡыҙыҡайым! — Старшина өлөшөн тын алмай эсеп бөтөрҙө лә, урынына ултырып, ашарға тотондо. Әлфиә, береһе менән дә сәкәшеп тормай, бокалын кире өҫтәлгә ҡуйҙы. Быны бөтәһе лә күреп ҡалды.

— Улай ярамай, радистка, — тинеләр разведчиктар. Ҡемдер уға бокалын һондо. Старшина һалдатҡа күҙенең ағы менән ҡарап алды.

— Ул әле бала ғына.

Старшинаның был һүҙҙәренән Әлфиә уңайһыҙланды, һикереп тороп, бокалдағы шыйыҡсаның тамсыһын да ҡалдырмай ауыҙына ҡойоп бөтөргөһө килде. Ләкин нимәлер уны тыйып ҡалды. Әгәр шулай эшләһә, уның авторитеты күҙ алдында емереләсәк ине. Бала түгеллегеңде өҫтәл артында, хәмер эскәндә түгел, башҡа урында, башҡа эш атҡарғанда иҫбатларға кәрәк, Әлфиә.

Хәмер парҙары мейегә менгәс, тамаҡ ялғанғас, Виктор гитара алып килде. Гитара быға саҡлы Әлфиә күргән ете ҡыллы ябай инструмент түгел ине. Тауышы ла бөтөнләй башҡа — һәр бер ҡылының зыңлауы йөрәк ҡылдарын да сиртә. Матур тауышлы разведчик Викторҙың гитараһына ҡушылды. Оҙаҡламай башҡа һалдаттар ҙа хистәрен йырға һалды.

Әлфиәне ҡапыл алмаштырҙылар ҙа ҡуйҙылар. Хистәре, Сиған полянаһын, Нижегородканы баҫып, Ағиҙел ташҡандағы һымаҡ сайпыла башланы. Ул, тулҡынланыуын һиҙҙермәҫ өсөн, яңағын усына ҡуйып, өҫтәлгә ҡарап ултырҙы.

> Вдоль по улице метелица метет,
> За метелицей мой миленький идет...

Әлфиә ҡаш аҫтынан ғына разведчиктарға ҡарап ала. Старшина йырламай. Ул Әлфиәнең котомкаһын тотҡан да

һүҙһеҙ генә баҫып тора. Ҡапитан онотолоп ихлас йырлай. Тик ике кеше генә йырға ҡушылмай: Әлфиә һәм старшина. Әлфиә ояла, ә старшина ниңә йырламай: йырлай белмәйме әллә башҡалар йырлағанды тыңлағыһы киләме... Был йырҙы ситтән тыңлап торған кеше, йырсылар дүртәр-бишәр йыл буйы һалҡын мылтыҡтан башҡаны ҡосаҡламаған, мина-снаряд ярылыуынан, пулемет-автомат тақылдауынан башҡаны ишетмәгән, дары еҫе, һуғыш юлдарының туҙандары һеңеп бөткән, биттәре әсе елдәрҙән, ҡаты һыуыҡтарҙан тутланған һалдаттар түгел, ә киске уйынға күңел асырға, күҙе төшөп йөрөгән ҡыҙы менән осрашырға сыҡҡан йәш-елкенсәк, тип уйлар ине.

Йыр ғибәҙәт кеүек, кешенең йәнен таҙарта, яҡтырта. Дөрөҫ, кәрт уйнаған шикелле үлем менән уйнаусы разведчиктар йыш ҡына хәрби йырҙар, марштар йырлай. Мәҫәлән, Виктор «Дан приказ: ему — на запад, ей — в другую сторону»ҙы уйнап йырларға ярата, ә капитандың яратҡан мелодияһы — «Изге һуғыш»... Был юлы разведчиктарҙы «лирик тулҡынға» Әлфиә күсерҙе. Ҡаты, аяуһыҙ окоп тормошона, усаҡтан осҡон сәсрәп ҡараңғы төндө яҡтыртҡан шикелле, кескәй генә Әлфиәнең уларҙың ҡараңғылы-яҡтылы подвалында пәйҙа булыуы ҡапыл ҡанды ҡайнатып ебәрҙе, йөрәктең төпкөлөнә йәшеренгән хистәрҙе уятты.

Әлфиә, ҡаты ҡайрыны, ныҡлы туҙҙы тишеп сыҡҡан ҡайын һуты һымаҡ, тәьҫир итте уларға. Хәҙер инде Әлфиә ҡаршыһында йөҙ тапҡыр утты-һыуҙы кискән, үлемгә төкөрөп ҡараған «ас»тар түгел, ә ябай, оялсан, күбеһе «яратам» һүҙен әйтергә лә өлгөрмәгән йәш-елкенсәк ултыра ине. Уларҙың һағышлы ҡарашынан Әлфиәгә рәхәт тә, ҡыйын да булды.

Ты постой, постой, красавица моя,
Дозволь наглядеться, радость, на тебя...

«Дозволь наглядеться, радость, на тебя...» тигәнде старшина шундай моңһоу тенор менән йырлап ебәрҙе, Әлфиәнең арҡаһынан «ҡырмыҫҡалар» сабышып китте. Әлфиә разведчиктарҙың өҙөк-өҙөк һүҙҙәренән старшина тураһында ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе ишеткәйне инде.

Ул Әстрхан өлкәһенән. Балыҡ хужалығы (рыбхоз) артеленең председателе урынбаҫарымы, завхозымы булып эшләгән. Уның донъяла бер кешелә лә булмаған ҡатыны — Дашенькаһы һәм бер-бер артлы тыуған береһенән-береһе сибәр, уңған өс ҡыҙы бар икән. Дүртеһенең дә бергәләшеп төшкән карточкаһын партбилеты эсендә йөрөтә, ти. Әленән-әле шул карточканы алып, аҡрын ғына: «Ты постой, постой,

красавица моя...» — тип ауыҙ эсенән көйләй, ти... Бәлки, шуға күрә Виктор Ванюшин «Метелица» менән концертты башлап ебәргәндер. Хәҙер ул һәр блиндажда, һәр землянкала йырланған йырҙы гитарала уйнай башланы. Разведчиктар ошо көйҙө генә көткәндәй берҙәм күтәреп алдылар.

«Синенький, скромный платочек, падал с опущенных плеч...» Ә Виктор, эйелә төшөп, Әлфиәнең ҡолағына шыбырланы:

— Альфа, ә нимә ул ут бәрсәһе? Ҡошмо, йәнлекме?

Әлфиә уға йылмайып ҡараны, бик үткер генә яуап эҙләне, ләкин үткер яуап ваҡытында килеп өлгөрмәне, ишек төбөндә автомат аҫҡан һалдат күренде. Ул рота командиры янына килде лә, йырҙы бүлмәҫ өсөн, бышылдап ҡына бойороҡто тапшырҙы.

— Иптәш капитан, һеҙҙе штабҡа саҡыралар.

Йыр бүленде. Йыр «Что не забуду радостных, ласковых встреч» тигән фразала өҙөлдө...

## «ДОШМАНҒА ТЫН АЛЫРҒА ЛА ИРЕК БИРМӘЙБЕҘ...»

Бына шулай итеп, ниһайәт, уның хыялы тормошҡа ашты. Радистар мәктәбендә ул дошман тылына ебәрелеү хаҡында өмөтләнеп йөрөгәйне, әлбиттә, ләкин ғәскәри разведкаға эләгеү ҙә насар түгел. Дивизия разведчиктары ла йыш ҡына дошман тылына үтеп инәләр, «тел» алырға йөрөйҙәр. Тик ни эшләп һуң уны заданиеға алмайҙар икән? Аҙна булды бит инде. Һынау срогын үтәме икән? Ә кешенең характерын бынауы ҡараңғылы-яҡтылы подвалда тик ятҡанда йәки ҡыты-мыты йомош үтәгәндә һынап буламы һуң? Бөгөн кис капитан алдына мәсьәләне, Әшрәф әйтмешләй, «ҡабырғаһы» менән ҡуйырға кәрәк: «Әгәр бында минең кәрәгем булмаһа, кире штабҡа ебәрегеҙ. Мин подвалда бәҫәреп ятыр өсөн радислыҡҡа уҡыманым».

Ә ошо минутта ул хаттар яҙып ултыра. Өйгә һәм Әклимәгә. Наташа менән Әшрәфкә. Иң элек өйгә, ата-әсәһенә, туғандарына, әлбиттә.

Ул подвалда яңғыҙ. Подвалда тынлыҡ. Разведчиктар заданиеға, төрлө йомоштар менән төрлө яҡҡа таралып бөткән. Өҫтәлдә ҡырҡ биш миллиметрлы артгильзаға тығып ҡыҫтырылған филтә сытыр-сытыр итә лә, старшина «каптерка»һында, нимәлер иҫәпләп, ҡыштырлай һәм ауыҙ эсенән «Вдоль по улице»ны көйләй. Ә алыҫ мөйөштә сысҡан ҡыштырлай, шикелле. Бына хас өйҙәге кеүек. Өйҙә лә...

ҡайһы саҡта төндә уянып китә лә мейес артында нимәнеңдер ҡыштыр-ҡыштыр иткәнен тыңлап ята торғайны. Ә һунарсылыҡ һөнәрен ташлап, тулыһынса өй тәьминәтенә күскән бесәй-пенсионер Азаттың аяҡ осонда түшәүндә сысҡандар күрә-күрә рәхәтләнеп йоҡлай, ә өндә сысҡандар мейес артында нимәлер кимерә. Әлфиә, иңәлер, аяғын тарта төшөп, бөгәрләнеберәк ята, әйтерһең, сысҡандар карауатҡа сабышып менә лә уның аяҡтарын кимерергә тотона. Атаһы файҙаға ярамаған әрәмтамаҡ бесәйҙән арынып, башҡаны алырға кәрәк, тип һуҡранһа ла, Азат ҡарт бесәйҙе ҡосаҡлап, бөгәрләнеп ята, шыңшырға, иларға тотона. Шулай итеп, ҡарт бесәй «пенсия» ашай, ә сысҡандар ағас һауытһабаны кимерә...

Ә Әлфиәнең хаты дауам итәлә.

«...Бында һимертергә ябылған малды ашатҡан шикелле итеп ашаталар. Мин йыуанайа ла төштөм, күрәһең, өйҙән алып килгән ҡайһы бер кейемем ярамай, ҡыҫа...» Фу, нимә яҙам мин, тип һыҙып ташланы ул һуңғы һөйләмдәрҙе. Өйҙә бәтәһе лә карточкаға бирелә, бөтәһе лә әжәл дарыуы менән бер бит. Лимит! Элек, һуғышҡа саҡлы, халыҡтың күпселеге был һүҙҙе белмәй ҙә торғайны. Фидан, магазинда сират торғанда, икмәк карточкаларын юғалтҡас, аҙна буйы картуф менән генә көн күрергә тура килде. Рәхмәт әле картуфҡа (юҡҡа ғына уны «икенсе икмәк» тип атамағандар), ул йылды уңғайны — кескәй генә участканан йөҙ биҙрә эре ҡыҙыл картуф йыйып алдылар.

Ә нимә хаҡында яҙырға һуң? Бер төрлө яңылыҡ та юҡ, Әклимәгә йәки Наташаға булһа, әллә оҙонораҡ та яҙыр ине, хәйер, уларға ла оҙон яҙырға ярамай, һуғыш ваҡытында хаттар цензор аша үтә, тимәк, иңә уларға артыҡ эш яһарға. «Сәләм, иҫән-һау, һеҙ нисек йәшәйһегеҙ, мин шулай... һәм шуның менән амин».

Ә күршеләр Әлфиә хаҡында һорашһа, әсәһе ни һөйләр? Ә Азат менән Фидан урамда, мәктәптә ни һөйләп маҡтанып? Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уның ата-әсәһенә һөйләр һүҙ, ҡустыларына маҡтанырға сәбәптәр юҡ. Әлфиә тәрән көрһөнөп ҡуя, уйланып тора... Шәмәхә ҡәләм шаҡмаҡлы дәфтәр бите буйлап йүгерә башлай.

«Мин хәҙер передовойҙа. Мин һуғышҡан илде ярып, ҙур, мәшһүр йылға аға. Беҙҙең Ағиҙел ише генә түгел. Уның хаҡында бөтә донъяға билдәле вальс та бар». Хатты уҡып сыҡҡас та, Азат менән Фидан, Европа картаһына ташланып, мәшһүр йылғаны эҙләй башлаясаҡ. Ҡемдер: «Әлфиә Австрияла һуғыша!», кемдер: «Белдең, Венгрияла!» — тип бәхәс ҡабынып китәсәк. Ҡустыларын ҡыҙҙырмаҫ өсөн, ул координаталарын асыҡлай төшә. «Беҙ алырға тейешле

ҡала ана шул йылғаның ике ярына урынлашҡан. Элек ул ике ҡала булған, хәҙер тоташҡан. Ул — ошо дәүләттең баш ҡалаһы...» Инде лә төшөнмәһәләр, Будапешт, тип асыҡ әйтеп кенә бирмәне бит. Ә асыҡ яҙырға ярамай.

Хат дауам ителә.

«Дошманға тын алырға ла ирек бирмәйбеҙ, арт һабағын уҡытабыҙ, әммә ул бирелергә самаламай». Йәйә эсенә өҫтәп ҡуйҙы. «Бер үҙем генә ундан артыҡ дошман һалдатын теге донъяға оҙаттым». Алдашҡас, алдашырға кәрәк. «Командир мине орденға күрһәтте. Награданы алыу менән, карточкаға төшөп, рәсемемде һеҙгә ебәрермен...»

— Хат яҙабыҙмы?

Әлфиә йәһәт кенә усы менән хатты ҡапланы. Ҡаршыһында, таң ҡояшы кеүек яғымлы йылмайып, старшина баҫып тора ине. Әлфиә, «Ванька-встанька» шикелле, һикереп торҙо.

— Так точно, иптәш...

— Ә һин миңә былай, туғандарса, Иван ағай, тип кенә өндәш, — тине ул. — Әйҙә минең менән складҡа барабыҙ, Әлфиә. Разведчиктарға белье алып ҡайтырға кәрәк. Иртәгә мунса ойошторам.

Склад, белье һүҙҙәренән Әлфиә саҡ-саҡ шартлап ярылманы. Һикереп торҙо, ҡыҙарҙы, бүртенде, ниндәйҙер ҡаты, ауыр һүҙ әйтмәксе булды, ярай әле, аҫҡы иренен тешләп, тыйылып ҡалды. Ул иларҙай булып, старшинаның аҡыллы, тыйнаҡ күҙҙәренә мөлдөрәп ҡараны.

— Иван Федорович... Иван ағай, ни өсөн капитан мине заданиеға ебәрмәй? Былай тик ятыу ялҡытты бит.

Старшина аңлай: уның йәшендәге бөтә һалдаттар ҙа запастағы полктан тиҙерәк передовойға ашҡыналар, ә передовойға килгәс, йә разведкаға, йә башҡа берәй хәтәрерәк заданиеға барырға ярһыйҙар. Ни эшләйһең, йәшлек — ярһыу, ашҡыныу бит. Ул үҙе лә, ҡырҡты үтеп киткән булһа ла, теше-тырнағы менән запас полктан ысҡынырға тырышты һәм моратына иреште. Был йәшлек ярһыуы ғына түгел, башҡа бик ҙур, изге ашҡыныу ине. Шуға күрә ул Әлфиәне өгөтләмәне лә, йыуатманы ла, ә: «Уныһын инде капитандың үҙенән һора», — тип кенә ҡуйҙы.

Ә Әлфиә ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы.

— Мин бында подвал ҡарауылларга, белье таскать итергә килмәгән. Мин бында һугышырға килдем! —Ул хатын ваҡ киҫәктәргә йыртҡылаһы ла өҫтәлгә һипте.

— Ә хаттың бында ни ғәйебе бар? — тине старшина, шелтәле йылмайып.

— Ә мин хатымда оятһыҙ алдаштым, — тине Әлфиә ихлас күңелдән. — Тын алырға ла ирек бирмәй, дошмандың

арт һабағын уҡытабыҙ. Мин үҙем генә унлап...— Бәхеткә ҡаршы, тағы тормоз эшләне — ҡалғанын әйтергә баҙнат итмәне — алдашыу бер бизмәнгә һыйырлыҡ та түгел ине.

Иван Федоровичтың диҡҡәт менән ҡараусы тәжрибәле күҙҙәре, һиҙгер йөрәге Әлфиәнең характерын шаҡтай ныҡлап өйрәнгәйне инде.

Әлфиә ҡайһы ере менәндер, дөрөҫөрәге, ҡылығы менән, уның баш балаһына — Леночкаға оҡшағайны. Ул да, Әлфиә шикелле, ҡабыныуға ғына тора; ҡырҡыу, бәләкәй генә ғәҙелһеҙлеккә, алдашыуға ла түҙә алмай. Кешеләргә генә түгел, үҙенә лә ҡәтғи талапсан. Әгәр берәй нәмә уйлаһа, маңлайы менән стенаны ярһа ярыр, эшләмәй ҡалмаҫ. Ярата Иван Федорович шундай холоҡло кешеләрҙе — ғәҙәттә уларҙан эшлекле, тәүәккәл етәкселәр сыға. Ә яҡшы етәкселәрҙе табыуы еңел түгел. Сөнки бик аҡыллы, һәләтле кеше лә, ихтыяр көсө етешмәй, етәксе була алмай. Ә командир кешегә был уғата кәрәк. Шуға күрә, ҙур етәкселәрҙең ҡайһы саҡта ҡаты, хатта миһырбанһыҙ булыуын да аҡларға мөмкин. Ләкин уларҙың бөтәһе лә аҙаҡ аҡланырға тейеш. Иван Федорович йәшәгән рыбхозда председатель булып Камалованан аҙ ғына ҡалҡыуыраҡ, әммә бик теремек, сая ҡатын эшләгәйне. Ә артелде, бигерәк тә ирҙәрҙе, ҡайһылай ҡулда тота торғайны. Әгәр көндөҙ эш ваҡытында берәй ирҙең ауыҙынан араҡы еҫе килһә, тегене эшенән генә ҡыумай, ә яңағына сабып ебәрә ине. Әгәр шул уҡ кешенең ғаиләһендә берәйһе сырхап киткәнен белеп ҡалһа, ете төн уртаһында килеп етер, шофер өйҙә булмаһа, баранка артына үҙе ултырып, ауырыуҙы больницаға илтеп ҡуйыр. Юҡ, уҫаллыҡ менән уҫаллыҡ араһында айырма ер менән күк кеүек ул.

— Әлфиә, — тине старшина, уның тауышы дуҫтарса, кәңәш формаһында яңғыраны. — Һуғышырға ла, яраланырға ла, хатта... — Старшина башҡаһын әйтергә батырсылыҡ итмәне, ун туғыҙ йәштә булһа ла, Әлфиә әле бөтөнләй бала булып ҡына күренә ине, ә балалар үлмәҫкә тейеш, балалар йәшәргә тейеш. — Өлгөрөрһөң әле...

Ләкин хәҙер Әлфиәне бер төрлө өгөтләү, йыуатыу ҙа тынысландыра, фекерен башҡа яҡҡа бора алмай ине. Киреһенсә, уның һүҙенә арҡыры төшөү енен генә ҡуҙғата. Бына әле лә ул ҡыҙарҙы, күҙҙәре ике уҡҡа әйләнде.

— Өлгөрөрһөн... бөтәһе лә, өлгөрөрһөң, тип көйләй. Ә һеҙ минен фронтҡа нисек эләгеүемде беләһегеҙме, иптәш старшина? Йөҙ төрлө соҡор-кәртә аша һикерергә тура килде. Минең кәүҙәмә ҡарайҙар ҙа ауыҙҙарын турһайталар. Имеш, был себештең урыны фронтта түгел, тауыҡ кетәгендә.

Старшина, яй ғына уның яурынынан ҡосаҡлап, эргәһенә ултыртты.

— Һин мине аңламаның, — тине ул, ҡыҙы менән серләшкән кеүек. — Һин себеш түгел. Әйткәндәй, себештәр ҙә үҙ-ара һуғыша. — Иван Федорович уның арҡаһынан шапылдатып һөйҙө лә торҙо. — Минең Леночкам һин...

Әлфиә лә торҙо. Ҡаштарын һикертте.

— Леночка? Минең исемем Леночка түгел дә...

— Беләм... — Старшина ҡапыл уйсанға әйләнде, уның хәйләле йылмайыуында әйтеп бөтөрә алмаҫлыҡ һағыш күренде. — Ҡайһы саҡта мин һиңә боролоп ҡарайым да тертләп китәм. Ике тамсы һыу кеүек оҡшағанһың һин минең Леночкама. Холҡоң-ҡылығың менән дә... — Әгәр Әлфиә булмай, башҡа бер ҡыҙ булһа, был һүҙҙәрҙән һуң Иван Федоровичтың ҡосағына ташланыр ҙа үкһергә тотонор ине, ләкин Әлфиә һәр ваҡыт Әлфиә булып ҡаласаҡ һәм һәр ваҡыт, һәр ерҙә йомшаҡлыҡ күрһәтмәй, үҙ-үҙен еңеп сығасаҡ.

— Ҡыҙығыҙға оҡшағанға күрә мине янығыҙҙа бәйләп тотаһығыҙмы, иптәш старшина? — тине ул әсе сәнскеле тауыш менән. — Бына капитан ғына ҡайтһын, бөтәһен дә мин уға һөйләп бирәм...

— Нимә һөйләмәксе булаһың, рядовой Ҡамалова?

Әлфиә, ялт итеп, тауыш килгән яҡҡа боролдо. Уның ҡаршыһында, тештәрен ыржайтып, капитан баҫып тора ине. Ни эшләп ул ишек тауышын ишетмәне һуң әле?..

— Нимәне? Мин себеш түгел, мин... мин... —Суҡышырға әҙерләнгән әтәсте хәтерләткән Әлфиә, ни эшләптер, ҡойолоп төштө һәм... тәү тапҡыр шуны иҫләне: ҡиәфәте — буйы-һыны, төҫө-башы менән аҙ ғына ла Әшрәфкә оҡшамаған капитан ҡайһы яғы менәндер, тотоп ала алмаҫлыҡ ниндәйҙер һыҙаттары менән уның балалыҡ дуҫын хәтерләтә ине. Ихтимал, ана шул оҡшашлыҡ уны юғалып ҡалырға мәжбүр иткәндер ҙә.

— Мин киттем, иптәш капитан, — тине старшина, буш тоҡтарын алып, ишеккә йүнәлеп.

Ҡапитан уның артынан ҡысҡырып ҡалды:

— Бер-ике кисәк еҫле һабын алып ҡайтырға тырыш, — капитан патрондарҙан бушаған йәшниктәр өҫтөнә ултырҙы. — Йә, һөйлә, нимәнән ҡәнәғәт түгелһең, Ҡамалова? Бәлки, берәйһе рәнйеткәндер? — Ул Әлфиәгә һиҙҙермәй генә кирбестәре ҡарайған подвал стенаһына ҡарап алды. Унда кемдер: «Ҡатын-ҡыҙҙарҙы рәнйетмәгеҙ. Улар беҙҙең ер тормошона ожмах йәме бирә», — тип күмер менән яҙып ҡуйғайны. Кем һүҙҙәре ул, стенаға уны кем яҙып ҡуйған — капитан белмәне.

— Мине бер кем дә рәнйетмәне, — тине Әлфиә кәзәләнгән бала тауышы менән.

— Рәнйетмәгәс?

Ҡапыл ул оборонанан һөжүмгә күсте.

— Йыл буйы мине хәрби һөнәргә өйрәттеләр. «Морзянкала» минутына йөҙләгән билдә тапшыра алам. Автоматтан, пистолеттан мәргән атам, ә һеҙ...

— Ни әйтереңде аңланым, — капитан урынынан торҙо. — Мин үҙем дә һуғыштың тәүге көнөндә үк фронтҡа, фронтҡа килгәс тә, алғы һыҙыҡҡа ашҡынғайным, — ул эре ни-аҡ тештәрен йылтыратып йылмайҙы, подвал яҡтырып киткәндәй булды.

Әлфиә килгәндән бирле тәү тапҡыр уның йылы, ягымлы йылмайғанын күрҙе һәм капитан уға бер ҙә йәмһеҙ тойолманы. Киреһенсә, ул ҡайһы ягы менәндер кешене үҙенә тартып тора.

Капитан йәнә йәшниккә ултырҙы,, кеҫәһенән папирос алып, уны усында тәгәрәтте, ауыҙына ҡапты, зажигалкаһын ҡабыҙҙы ла кескәй генә зәңгәрһыу һары телде өрөп һүндерҙе, папиросын кире портсигарына һалып ҡуйҙы. Әлфиә капитандың ниңә тартмаҫҡа булыуын аңланы, әлбиттә, минрәү түгел дә. Сафуан ағаһы ла ата-әсәһе алдында тартырға ҡыймай. Тимәк, капитан да уның янында...

— Тартығыҙ, тартығыҙ, иптәш капитан, — тине ул, ҡустыларына өндәшкән һымаҡ. — Беҙҙең ғаиләлә биш ир затынан өсөһө тарта торғайны. Мин тәмәке төтөнөнә күнеккәнмен инде.

— Аҙаҡ, — тине лә капитан торҙо. — Бына нәмә, Ҡамалова. Һиҙеүемә ҡарағанда, оҙаҡламай Будапешт өсөн һуғыштар башланасаҡ. Гитлер был районға бик ҙур көсөн туплаған. Бигерәк тә техникаһы күп: танкылары, артиллерияһы. Аҙым һайын терәк пункттары: ҡорос бункерҙар, доттар — капитан көрһөнөп ҡуйҙы. — Будапешт еңел бирелмәйәсәк. Ә беҙ, разведчиктар, армияның күҙҙәре һәм ҡолаҡтары. Хәҙер минең ни әйтергә теләгәнемде аңланыңмы инде, Ҡамалова?

Әлфиә ҡәнәғәтләнеп башын ҡаҡты һәм ғәфү үтенгәндәй аңлатты:

— Түҙерлек әмәл юҡ, иптәш капитан, үҙемде һынап ҡарағым килә.

— Һынарһың әле... — Ҡапитан алпан-толпан атлап ишеккә йүнәлде. Инде ишек тотҡаһына ҡулын ҡуйғас, уға табан боролдо. — Һәр минут әҙер тор.

Әлфиә шатлығынан үрле-ҡырлы һикерерҙәй булды.

— Рәхмәт, иптәш капитан! — Инде үпкәнән, һағыштан

тамсы ла ҡалмағайны. «Һәр минут...» Хәҙер уның шаярғыһы килде.

— Иптәш капитан, — тине ул, ишек төбөнә осоп барып етеп.

— Шунан?

Уның капитанға: «Эсемдән генә мин һеҙҙе, Михаил Михайлович Топтыгин, тип йөрөтәм, сөнки һеҙ хас айыу һымаҡ йөрөйһөгөҙ», — тип күңелендәгеһен түкмәксе булғайны, тыйылды. Бәлки, ул һүҙ күтәрмәйҙер. Ә подчиненный командирын ирештергән, мыҫҡыллаған өсөн баштан һыйпамайҙар .Асыуланмаһа ла, хәтере ҡалыуы бар. Былай ҙа ул гел болотло көн һымаҡ йөрөй. Бәлки, холҡо шулайҙыр, бәлки, сәбәп барҙыр. Әлфиә инде уйлағанын түгел, бөтөнләй башҡаны әйтә һалды.

— Һеҙ... — беҙҙең күрше икән, иптәш капитан...

— Шулайыраҡ. Мин Татарстандан, — капитан инде тулыһынса уға табан боролдо. — Ә Өфө матур ҡаламы? — Тәүтапҡыр рота командиры уның менән татарса һөйләште, папиросын көйрәтеп, башын ситкә бороп, төтөнөн усы менән таратты.

— Минең өсөн бик тә матур. Ағиҙелдең бейек текә яры башында. Ә Ағиҙел уны ике яҡтан ҡосаҡлап алған. Өсөнсө яҡтан Ҡариҙел аға. Ҡариҙелдең ярҙары Ағиҙелдекенән дә йәмлерәк. Тау йылғаһы һымаҡ шәп аға. Йәйге селләлә һыуы әллә ни йылы булмай. Тимер юлы күпере янында Дим тигән иҫ киткес матур йылға Ағиҙелгә ҡоя. — Әлфиә капитанға аҫтан өҫкә ялт итеп ҡарап алды. — «Дим» тигән йырҙы ишеткәнегеҙ бармы? Ана шул беҙҙең Дим хаҡында инде ул. Һуғыштан һуң килеп сығығыҙ, иптәш капитан, үкенмәҫһегеҙ, — тине ул балаларға ғына хас бер ҡатлылыҡ һәм ихласлыҡ менән. — Үҙегеҙҙе Дим буйҙарында йөрөтөрмөн. Ағиҙелдә һыу инерһегеҙ, Ҡариҙелдә балыҡ ҡаптырырһығыҙ...

Ҡапитан ауыҙын асмай ғына йылмайҙы, әммә тағы подвал яҡтырып киткәндәй булды.

— Ҡилермен. Обязательно.

Ул был һүҙҙәрҙе күңел табыр өсөн генә түгел, ә ышаныслы итеп, ихлас әйтте. Әлфиәлә капитанға ҡарата ихтирам тағы ла артты.

«Был кеше уңға-һулға һүҙ биреп йөрөй торған ҡоро ҡыуыҡ түгелдер», — тип уйланы Ҡамалова.

— Пароходта килермен. Мин бит Ҡама буйында йәшәйем.

Был һүҙҙәрҙән Әлфиә балалар һымаҡ шатланды.

— Шулаймы? Һуң беҙҙең Ағиҙел Ҡамаға ҡоя бит.

— Эйе... Һеҙҙең Ағиҙелдең һыуы, Ҡамаға ҡушылырға теләмәгәндәй, оҙаҡ ҡына айырым аға. Ағиҙелдең һыуы Ҡаманыҡынан ағыраҡ бит.

Әлфиә инде дәртләнеп, осоноп китте.

— Юҡҡа ғына уны, Ағиҙел, тип атамағандар ҙа. Ә һеҙ «Ағиҙел» йырын беләһегеҙме, иптәш капитан? — Әлфиә яуап та көтөп тормай, йөрәк тауышы менән йырлап ебәрҙе.

Йәмле Ағиҙел буйҙары,
Бөтөрәләр хәсрәтле уйҙарҙы...

Капитан уға йәш үсмер малайҙарға ғына хас фиҙакәрлек һәм тынаҡлыҡ менән ҡарап торҙо. Был ҡараш икенсе бер ҡарашты күҙ алдына килтерҙе. Сиркәүгә «культпоходка» барып ҡайтҡандан һуң, ғәҙәттә, Әшрәф урам уртаһында ҡулын күтәрә торғайны ла, «пока», тип үҙҙәренең ҡапҡаһына ыңғайлай ине. Ә бер саҡ ул Әлфиәне ҡапҡаға саҡлы оҙата килде, хушлашырға тип ҡулын һуҙҙы. Әлфиәнең ҡулын үҙ ҡулында башҡа ваҡыттарға ҡарағанда оҙағыраҡ тотто. Әлфиә быға иғтибар ҙа итмәҫ ине, бәлки. Ул Әшрәфтең күҙҙәренә күтәрелеп ҡараны. А... Әшрәфтең күҙҙәрендә әйтеп бирә алмаҫлыҡ һағыш ине. Ана шундай һағышты әле ул капитан Ардыуанов күҙҙәрендә лә күреп ҡалды. Ниндәй һағыш ул? Кем, нимә тыуҙырған ул һағышты?.. Эйе, эйе, Ардыуанов менән Әшрәф араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡ, оҡшашлыҡ бар шул. Ниндәй?.. Әшрәф сандыр йөҙлө, оҙон нескә танаулы, һәр ваҡыт борсоулы күҙле, ә капитан килбәтһеҙ, бошмаҫ йән. Киң маңлай, алғараҡ сығып торған соҡорло әйәк. Ә күҙҙәре... күҙҙәре ни төҫлө һуң әле уның? Ҡуңыр. Улар уҫал да, бик йыуаш та түгел, дөрөҫөрәге, ғәмһеҙерәк ҡарайҙар. Юҡ, ғәмһеҙ түгел, ә... иғтибар менән һәм... яғымлы ҡарайҙар. Эйе, эйе, яғымлы. Әшрәф тә шулай ҡарай торғайны. Ул да аҫтыртын хәстәрлекле, тыштан һиҙҙертмәй торған яғымлы кеше.

Капитан янында үҙенең ниндәй анализ менән шөғөлләнгәнен һиҙҙермәҫ өсөн Әлфиә бөтөнләй башҡа темаға күсте.

— Иптәш капитан, ә разведкаға барғанда, автоматты алырғамы? Капитан да был ҡәһәрле, аяуһыҙ донъянан бер генә минутҡа айырылып, башҡа нәмә, башҡа донъя: Ҡама буйындағы тыуған ауылы, һөйгән йәре тураһында уйланып-һағышланып торғандыр, күрәһең. Әлфиәнең һорауы уны ҡаушатып ебәргәндәй булды.

— Нимә? Автомат? Ниндәй автомат?.. Ә... Ә... Әлбиттә. Һабантуйға бармайбыҙ ҙа. — Ул үҙен ҡулға алды. — Ярай, сығайым әле, минең ҡайһы бер кешене күрәһем бар. — Алпан-толпан атлап, капитан подвалдан сығып китте. «Хас айыу. Атлап йөрөшө лә, ҡыланышы ла. Ҡиәфәте лә. Ә үҙен

дивизияла ғына түгел, армияла иң батыр разведчиктарҙың береһе, тиҙәр... Командующий уға исеме менән генә өндәште, ти».

Әлфиә стеналағы ырғаҡтан автоматын алды. Уның ағас төйҙәһенә бәке осо менән соҡоп ике хәреф яҙылғайны: «М. Х.» Был — Әлфиә ротаға килер алдынан ғына ҡаты яраланып, госпиталгә оҙатылған разведчиктың инициалдары ине.

Әлфиә, затворҙы артҡа шыуҙырып, көбәктең эсенә күҙ һалды, мөгөҙ һымаҡ магазинға тултырылған патрондарға бармағы менән баҫып алды — тулыһынса ҡоролғанмы икән? — Прикладты күкрәгенә терәп, прицел ярығы аша тәҙрәгә тоҫҡап ҡараны. Автомат йөҙ проценты менән уға хеҙмәт итергә әҙер ине. «Хур итмәҫһеңме?» — тине ул, тере кешегә мөрәжәғәт иткән шикелле. «Ҡыҙыу һуғыш барғанда, туҡтап ҡалмаҫһыңмы?» Башҡа разведчиктар шикелле автоматты бер ҡулынан икенсеһенә ташламаҡсы булғайны, саҡ ҡына ергә төшөрмәне. Ни генә тимә, уның көсһөҙ беләктәре өсөн автомат шаҡтай һалмаҡ ине. Ә бына Виктор Ванюшин, иңәлер, беҙҙең автоматҡа ҡарағанда немец автоматын артығыраҡ күрә. Ғөмүмән, ул үҙе лә баштап-аяҡ «трофейный». Пистолеты — ауыр, ҡурҡыныс «парабеллум», сукно менән тышланған фляғаһы ла, котелогы ла, зажигалкаһы ла, авторучкаһы ла... Әлфиә автоматын ырғаҡҡа элде лә, подвалда бер кем дә юҡ сағында, гимнастеркаһын һалып, инде керләнә башлаған яға аҫтын умырып алып, күҙең сағылырлыҡ аҡ таҫма тегә башланы. Уның атаһынан ишеткәне бар. Һуғышҡа ингәндә, өҫтөңдәге кейем өр-яңы булмаһа ла, тап-таҙа булырға тейеш. Кәфен кеүек.

Аҡ таҫма тағылып бөттө. Ә был эш оҫталыҡты талап итә — аҡ таҫманы — бер-ике миллиметр ғына сығарып, тип-тигеҙ итеп тегергә кәрәк. Аҙ ғына йыйырсыҡланып та торорға тейеш түгел. Йыш ҡына һалдаттың кемлеген фуражка кейеүенә, ҡайыш быуыуына һәм яғаһы таҙалығына ҡарап билдәләйҙәр, тыныс ваҡытта, әлбиттә. Әлфиә йәнә хат яҙырға ултырҙы. Дөрөҫөрәге, яңы хат яҙырға. «Атай, әсәй, Сафуан ағай һәм Азат менән Фидан ҡустылар! Иртәгә мин, беләһегеҙме, ҡайҙа барасаҡмын?..» Юҡ, уларҙы алдан уҡ борсорға ярамай. Атаһы менән Сафуан разведканың нимә икәнен яҡшы белә бит. Булмаһа, тәүҙә Әклимә-умартаға яҙайым, тип ул дәфтәрҙән яңы бит йыртып алды. Бер бит хат яҙырға ла, мөйөшләп конверт яһарға ла етә ине. А, ул өс мөйөшлө хаттар — улар тураһында күпме йыр сығарылғандыр ҙа, шиғыр яҙылғандыр...

«Әклимә, әхирәткәйем! Бына ун туғыҙ йыл донъяла юҡҡа йәшәмәгәнлегемде иҫбатлай торған сәғәт килеп етте.

Юкка ҡыҙыл галстук тағып, дружина алдында ант итмәгәнлегемде, юкка биш йыл буйы йөрәгем янында комсомол билеты йөрөтмәгәнлегемде иҫбат итер минуттар килеп етте. Мин быларҙың бөтәһенә лә лайыҡлымы? Беҙ бит, баш особоҙҙа пуля һыҙғырмағанда, янъбыҙҙа мина-снарядтар ярылмағанда, үлем тирә-яғында һағыҙаҡ һымаҡ бышылдап осмағанда, батыр ҙа, ҡыйыу ҙа. Ә бына үлем менән күҙгә-күҙ осрашҡанда, һин үҙеңде нисек тотаһың? Һин дә Жанна д'Арк шикелле йәнеңде, тәнеңде аямаусы батырмы...» Хәйер, ниңә шул саҡлы йыраҡҡа китергә әле? Чапаев Анкаһы ҡыйыу булмағанмы ни? Ә Зоя Космодемьянская? Ә Лиза Чайкина?

«Мин инде ҡан күрергә лә, үлгәндәр янынан үтергә лә өлгөрҙөм. Ләкин ул ҡан минең ҡаным, ул үлем — минең үлемем түгел ине. Башҡаларҙың ғазабы, үлеме ни саҡлы ауыр булмаһын, һин ауыртыу һиҙмәйһең, һин ҡурҡыу тоймайһың. Ә бына үҙ башыңа төшһә... Бөгөн-иртәгә мин ана шуларҙы үҙ башымдан кисерәсәкмен, Әклимә. Шунан һуң мин үҙемдең кемлегемде аңлаясаҡмын...»

— Хат ижад итәбеҙме?

Әлфиә теләр-теләмәҫ башын күтәрҙе — тағы бүлдерҙеләр. Ә уның фәлсәфәгә бирелгеһе, әхирәте менән асыҡтан-асыҡ һөйләшкеһе килгәйне. Кем һуң уны тағы бүлдерҙе?.. Ә... Виктор Ванюшин. Роталағы иң сибәр, иң батыр, гитарала иң оҫта уйнаусы... ҡыҫҡаһы, бөтә яҡтан да «иң, иң һалдат» Виктор оҙаҡ йүгергән кешеләй йыш-йыш һулай, күҙҙәре яна.

— Ҡайҙан шулай сабып килдең? Тының бөткән дә, — тине Әлфиә, аптырапмы, йәлләпме.

— Юҡ та... — Виктор ҡулын куртка кеҫәһенә тыҡты. — Ҡара әле, үҙеңә нимә алып килдем.

— Яңы пистолетмы?

— Пистолет кешеләрҙе үлтерә, ә был — матурлай, биҙәй. — Уның баш бармағында әстрхан ситләүегенән саҡ ҡына ваҡыраҡ ҡарағусҡыл шариктарҙан теҙелгән муйынса эленеп тора ине.

— Нимә ул? — тине Әлфиә, күҙҙәрен йылтыратып.

— Ҡара гәрәбәнән яһалған муйынса.

— А-аа... тотоп ҡарарға мөмкинме? — Әлфиә муйынсаны алды. Уның әсәһенең дә оҙаҡ йылдар тағып йөрөүҙән ашалып, шымарып бөткән гәрәбә муйынсаһы бар, ләкин ул һары, ә был... Ҡара гәрәбә тураһында уның ишеткәне лә, күргәне лә юҡ ине. Ул гәрәбәне ҡул сугына элеп, алға һуҙҙы ла муйынсаға һоҡланып ҡарап торҙо. — Матур, затлы әйбер, — Әлфиә муйынсаны Викторҙың ҡулына кейҙерҙе.

Виктор, муйынсаны ҡулынан алып, Әлфиәгә һуҙҙы.

— Ал. Мин уны һинең өсөн ҡулға төшөрҙөм. — Ҡапыл Әлфиәнең күҙҙәрендә шаян шайтандар бейей башланы ла шунда уҡ юҡ булды.

— Әлеге лә баяғы шул фон барон-граф һандығынанмы? Виктор, балалар һымаҡ, ҡаштарын емерҙе.

— Һин мине кемгә һанайһың, Альфа? Мародёрмы ни мин! Белгең килһә, был настоящий беҙҙең гәрәбә. Латвиянан. Фәҡәт беҙҙең Балтика буйында ғына шундай «ҡарағай йәштәре» табыла.

Әлфиәнең күҙҙәрендә ҡабат осҡондар хасил булды.

— Ҡарағай йәштәре?

— Ҡарағай йәштәре шул, — Виктор инде яйлап ултырҙы. — Ҡарағай һағыҙы ҡомға ағып төшөп, бик күп йылдарҙан һуң гәрәбәгә әйләнә, ти. Беҙ бер латыш менән Ржев янында бер ротала хеҙмәт иткәйнек. Ах, батыр ине, суҡынмыш. — Виктор тороп, Әлфиә ҡаршыһына килеп баҫты. — Гәрәбә хаҡында шундай легенда бар икән.

— Ниндәй легенда ул? — Әлфиә хат хаҡында онотто ла, буғай, инде.

— Ҡарағай имәнгә ғашиҡ булған, имеш. Ә имән имән булып ҡалған, мөхәббәткә мөхәббәт менән яуап бирмәгән. Ҡарағай, терпе башын һелкеп, һыҙғырыуға оҡшаған тауыш сығарып, аҡрын ғына бәүелгән һәм илаған. Ә күҙ йәштәре ҡойолоп, ҡомға күмелгән, имәнде күрергә теләмәгәндәй, йылдан-йыл тәрәнгә төшөп йәшенгән. — Виктор легендаһын һөйләп бөтөрмәй, теманан ситкә китте. — Гәрәбәне ҡырҡ төрлө сирҙән дауалай, тиҙәр. Мә, ал. Мин уны ОВС складының кладовщигына «беретта» пистолеты биреп алдым.

— Рәхмәт, — тине Әлфиә, ишетелер-ишетелмәҫлек итеп, аҙ ғына икеләнеп торғандан һуң, ул аҙҙырып-ымһындырып тороусы «ҡара иблесте» ҡулына алды, ҡаптырмаһын ысҡындырып, муйынына кеймәк булды, ләкин серле ҡаптырма тиҙ генә асылырға теләмәне. Көсөргәнешле минуттарҙа Әлфиә аҫҡы иренен тешләй, был юлы ла ул иренен тешләгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды, ҡыҙарҙы, хатта тирләне — шундай пустякты ла булдыра алмай, тип Виктор эсенән генә көләләр әле. Ә Виктор көлмәне, киреһенсә, муйынсаның тиҙ генә асылмауы уға файҙаға ғына булды.

— Бир әле, — тип ул муйынсаны алды ла ыһ тигәнсе ҡаптырманы систе. — Ә хәҙер килтер, муйынына тағам.

— Үҙекәйем! — Әлфиә, яңы уйынсыҡ күргән бала һымаҡ, гәрәбәне Викторҙан тартып алды ла ултырма яға менән ҡапланған муйынына ҡуйҙы һәм, тағы бәлә, ҡаптыра алмай ҙа ҡуя.

— Бирсе, үҙем ҡаптырам, — тине Виктор, тәҡәтһеҙләнеп.

Әлфиә рөхсәт итте. Викторҙың көслө ҡулдары Әлфиәнең кескәй генә йылы ҡулдарына тейеп китте. Әлфиәнең тәне буйлап ток йүгерҙе, йөрәк, «сығам-сығам», тип тибә башланы.

— Һин нимә унда соҡсонаһың? — тине Әлфиә, йөрәгенең йыш тибеүенән тыны бөтөп.

— Бына... ҡапмай ҙа ҡуя... — Викторҙың ҡайнар һулышы Әлфиәнең биттәрен көйҙөрөп алды, эҫе ирене уның ирендәренә яҡынлашты. Әлфиә уның ҡосағынан ысҡынмаҡсы булды, әммә Викторҙың көслө ҡулдарын айыра алманы.

— Ебәр!

— Альфа...

— Ебәр, тим, юҡһа ҡысҡырам!

Виктор ҡулдарын йәйҙе. Ул биҙгәк тотҡандағы шикелле ҡалтырана ине.

— Әлфиә... Алюша... Мин һине яратам... Беренсе күреүҙән үк... Әйҙә...

Әлфиә уға шундай зәһәр ҡарап алды, Виктор бахыр ҡойолдо ла төштө.

— Нимә «әйҙә»?

— Ну...

— Йә, йә?

— Ну, дуҫ булайыҡ. Ә һуғыштан һуң...

— Һин батыр разведчик ҡына түгел, йүләр ҙә икәнһең, Виктор, — Әлфиә уның усына гәрәбәне ташланы ла үҙ мөйөшөнә йүнәлде.

— Ниңә йүләр? Йүләрләнеп мин ни эшләнем?

Әлфиә боролоп, йәнә уға асыулы, юҡ, был юлы инде мыҫҡыллы ҡараш ташланы.

— Ә мине ҡара гәрәбәгә һатып алырға тырышыу йүләрлек түгелме икән? — Ул бер-ике һикереүҙә Виктор янына килеп баҫты ла тыны менән ҡурып өҫтәне. — Ә мин һине, ихлас ҡыланаһың, тип уйлағайным...

— Валлаһи, биллаһи... ысын күңелдән... саф йөрәктән... Һуғыш бөтөү менән беҙгә, Себергә, ҡайтып китербеҙ... — Ҡаушаған күҙҙәргә инде ихласлыҡ, яныу уттары сыҡты.— Ә, беләһеңме, беҙҙә шундай кедрҙар үҫә... ҡайһы берҙәренә меңәр йәш...

— Ә миллион йәшлектәре юҡмы? — тип мыҫҡыллы һораны Әлфиә.

— Белмәйем... ундайҙарын күргәнем юҡ. Миллион йыл йәшәгән ағас юҡтыр, — тине Виктор ысын күңелдән, балаларса.

— Йәл! — Әлфиә хатын сытырлатып йомарланы ла тышҡа сығып китте.

— Әлфиә... — Виктор унын артынан уҡталғайны, ишек танауы төбөндә генә шап итте.

«Ә һин разведкаға һабантуйға барған кеүек бараһын, Әлфиә...»

Бер ергә лә, бер ҡасан да Әлфиә тәүге разведкаға барған шикелле ашҡынып, түҙемһеҙләнеп һәм ентекләп әҙерләнмәгәндер. Был унын ғүмерендәге иң тантаналы, тулҡынландырғыс ваҡиға булды.

Ваҡыт шул саҡлы аҡрын үтте, әйтерһең, арыған ат йөклө арбаһын үргә табан һөйрәй. Тик быға бер нәмә аңлашылмай: ни өсөн капитан, хәҙергә рация кәрәк булмаясаҡ, тине. Ни өсөн? Ҡайҙа, ниндәй маҡсат менән улар разведкаға баралар икән? Был һорауҙарҙы ул капитанға бирергә баҙнат итмәне. Ваҡыты килеп еткәс, үҙе һөйләр әле. Разведкала тәртип шундай. Капитан дүрт кешенән торған төркөмдө заданиега үҙе алып барасаҡ. Тимәк, задание еңелдән түгелдер.

Ул гимнастеркаһын һалып, өҫтөнә таҙа эске күлдәк кейҙе, Әклимә бүләк иткән ойоҡбаштарҙы кейгәс, иренмәй, казарманан ҡалаға сыҡҡандағы һымаҡ, итектәрен таҙартты, бәрхәт киҫәге менән ялтыратты. Өҫ-баш менән эш тамамланғас, иңәлер, автоматының магазинын алмаштырҙы. Төйҙәһенә «М. Х.» хәрефтәре янына «Ә. К.» тип сыйып яҙырға ла иткәйне, тыйылды — иртәрәк, унын был автоматтан бер тапҡыр ҙа атып ҡарағаны юҡ бит әле.

Байыр алдынан бер нисә минутҡа ҡояш күренеп алды ла йәнә ҡара ҡуйы болоттар аҫтына йәшеренде. Әйтерһең, ул үҙенең күп балалы ғаиләһе араһында иң ҡәҙерле, иң иркә балаһын — Ерҙе күрергә теләмәй ине.

А, беҙҙең берҙән-бер батшабыҙ Ҡояш. Әйт, тыңламаһалар, бойор, туҡтатһындар улар был иң әшәке, ҡанлы эште!

А, Ҡояш, кешеләрҙе яралтҡанда, һин бит уларҙы шундай миһырбанһыҙ, аяуһыҙ булыҒыҙ, тимәгәнһеңдер. Һин уларға: «Ер минең миллионлаған йондоҙҙарым — балаларым араһында иң яратҡаным, иң бай, иң гүзәл балам, мин уны ағастар үҫһен, ҡоштар осһон, йәнлектәр йәшәһен. Кеше ҡул һәм аҡыл көсө менән үҙенә бәхет ижад итһен тип, миллиард йылдар буйы иренмәй тыуҙырҙым, иркәләнем, тәрбиәләп үҫтерҙем. Өҫтөн тауҙар һәм урмандар, туғайҙар һәм сәхрәләр, даръялар һәм диңгеҙҙәр менән биҙәнем. Ул ғынамы! Икһеҙ-сикһеҙ байлыҡтарҙы Ерҙең ҡарынына йәшерҙем. Ҡәҙерен белеп кенә, ҡомһоҙланмай ғына файҙаланһаң, миллион йылдарға етерлек ул хазиналар... Ә кешеләр тимерҙән һабан, ураҡ яһайһы урынға һөнгө, туп яһа-

һылар. Мин йоҡлағанда яндырып, төндө көнгә әйләндерер өсөн, Ергә һалҡын килгәндә йылытыр өсөн яратылған нефтте, күмерҙе әлеге лә баяғы үҙ баштарына етә торған машиналарға яғып харап итәләр...

Былай дауам итһә, һин үҙ башыңа үҙең етәһең бит, Кеше. Һуңға ҡалғансы, аҡылыңа кил, йәшел бишегеңдең ҡәҙерен белеп кенә йәшәй бир, минең йылылығым йәнә миллиард йылдарға етерлек әле... А, Кеше, һин быны аңлайһың, беләһең, тик белмәмешкә һалышаһың. Бөтөр һин был һуғыштарҙы. Бишегең һинең иркен, байлыҡтарың етерлек... — тигәнһеңдер.

Дөрөҫ, даһи Ҡояш та бутай, дөрөҫөрәге, белмәй: кеше менән кеше араһы — һинең менән Ер араһы кеүек ҙур. Әлеге барған бөйөк яуҙа бер яҡ һинең васыяттарыңа төкөрөп ҡарап, ергә тотош төн алып килергә тырыша, икенсе яҡ ерҙе ожмахҡа әйләндереү өсөн көрәшә.

Яҡла һин һинең изге теләктәреңде тормошҡа ашырыр өсөн көрәшкән аҡыллы, батыр, ғәҙел кешеләрҙе, Ҡояш...

Аҡрынлап булһа ла, кис килде. Үҙе менән бергә һуғыш еҫен һәм һалҡынлыҡ алып килгән әсе ел дә тына төштө. Тәбиғәттең иң күңелһеҙ миҙгеле — ҡара көҙ яҡынлашып килә ине.

Кис булыу менән, һуғыш та бышылдап һөйләшеүгә күсте, тик пулеметтар ғына, хужаһын да, сит кешене лә айырмай, төнө буйы өргән эт шикелле, ырылдай ҙа ырылдай. Мина, снарядтар бик һирәк, «онотмағыҙ, һуғыш бара», тип киҫәтер өсөн генә ярылғылай. Әммә офоҡтоң көнбайыш яғы ҡан менән буяған төҫлө ҡып-ҡыҙыл ине. Һуғыш барыбер төндә лә, әкиәттәге аждаһа һымаҡ, утлы һулышын сәсә.

Ниһайәт, көҙгө кис һиҙҙермәй генә төн менән тоташты. Ә төн йондоҙһоҙ, күңелһеҙ, шыҡһыҙ.

Ҡапитан үҙе менән бергә барасаҡ разведчиктарҙы янына йыйҙы. Әлфиә менән Викторҙан башҡа бында йәнә бер һалдат — ҡаҙаҡ бар. Әлфиә ул ҡаҙаҡ егете менән ныҡлап танышып өлгөрмәне әле. Беренсенән, Байсәйетов улар менән түгел, күрше подвалда йәшәй, икенсенән, артыҡ һөйләшеп бармай, осрашҡанда йоҡа ирендәре һәр ваҡыт тығыҙ йәбешеп тора. Тик ҡайһы сағында ғына оҙон дала йырын ауыҙ эсенән көйләй.

Ә задание бик ябай, еңел икән дә баһа. Нейтраль полосаға сығып, ике төркөмгә бүленергә һәм... — Ҡапитан планшетынан «километровка» тигән картаһын алып, былар алдына йәйеп һалды — бына ошо күпер янына мөмкин саҡлы яҡыныраҡ килергә... (Күпер картала зәңгәр тамыр — йылға аша ике арҡыры һыҙыҡ булып күрһәтелгәйне. Һы-

ҙыҡтарҙың «мөгөҙҙәре» ситкә, тышҡы яҡҡа ҡайырылып тора.) Йылға ҙур түгел, әммә тәрән һәм көнбайыш яры бейек. Беҙгә ошо күперҙе күҙәтеп ятырға кәрәк. Дошман, беҙ һөжүм итә башлағас, күперҙе шартлатып өлгөрмәҫкә тейеш — бына төп бурыс. Бының өсөн ни эшләргә? Ике кеше, бая әйткәнемсә, күпер янындағы ҡарауыл хеҙмәтен күҙәтеп ята, ә икенсе группа, йәғни Ванюшин менән Байсәйетов, «тел» алып ҡайта. Бөттө. — Ҡапитан картаһын бөкләп, планшетына һалды ла кнопканы шартлатып ҡаптырҙы. — Ә хәҙер сәғәттәрегеҙҙе дөрөҫләгеҙ. — Ул тужуркаһының сиген ҡайырып, сәғәтенә ҡарап алды. — Туғыҙ минут туғыҙынсы.

— Ах, шайтан, — тип хоҙайҙың иң яратмаған йән эйәһен иҫкә алды Виктор. — Минең сәғәт әпәт артта ҡалған.

— Трофейный бит, — тип Байсәйетов төрттөрөп алды.

— Ә уны Германияла түгел, Швейцарияла яһағандар,— тип Виктор Байсәйетовтың һүҙҙәрен кире ҡаҡты.

...Бына улар, бер-бер артлы теҙелешеп, дошман тылына китеп баралар. Һөйләшкән кеше лә юҡ, аяҡ тауыштары ла ишетелмәй, әйтерһең, кешеләр түгел, өрәктәр. Алдан, айыу һымаҡ ашыҡмайынса, капитан бара. Унан бер нисә аҙымға артараҡ сапер килә. Унан, көскә-көскә өлгөрөп, Әлфиә йыбырлай. Төркөмдөң арьергардында Виктор бара. Бына хас йылы яҡтан килеүсе ҡыр ҡаҙҙары шикелле. Улар тубын да иң тәжрибәле, иң көслө ҡаҙ — вожак алып бара бит. Ә арттан «запас» вожак бара. Ул артта ҡалыусы ҡоштарҙы, дәртләндереүсе тауыш сығарып, әйҙәләй, алдағы вожак арыһа йәки ул-был булһа, уны алмаштыра. Әммә Әлфиәгә ҡаҙҙар түгел, башҡа нәмә тынғылыҡ бирмәне: ни өсөн ошондай ябай заданиеға капитан үҙе бара, етмәһә, Әлфиәне лә эйәртә? Ихтимал, уны һынап ҡарар өсөндөр? Ҡапитан, алда ҡаты һуғыштар көтөлә, тип киҫәтте бит. Әлфиә, күңеленде киң тот, алда ҙур эштәр көтөлә торғандыр әле. Ҙур эштәр...

Был һығымтанан уның күңеле күтәрелеп китте, аяҡтары еңеләйҙе. Әйтерһең, ниндәйҙер мөғжизәүи көс уны осороп алып бара. Әйтерһең, ул разведкаға түгел, һабантуйға бара.

Һабантуй... Һабантуй Әлфиәнең иҫенә төшөү менән ҡапыл әллә ни эшләп китә, балаға әйләнә. Һабантуйҙан да күңеллерәк, ҡыҙығыраҡ тағы ниндәй байрам бар икән? Һуңғы тапҡыр ҡасан, ҡайҙа һабантуйҙа булды әле ул? Һуғыш сыҡҡан йылда. Туймазыла әсәһенең апаһы Шәмсинур апайҙар ауылында. Һабантуй ауылдан бер аҙ ситтә, уба буйында, булды. Әлфиә лә ярыштарҙа ҡатнашты. Ауыҙына ағас ҡалаҡтың һабын ҡапты, ҡалаҡҡа сей йомортҡа ҡуй-

ҙы һәм мөмкин тиклем тиҙерәк, мөмкин тиклем һағырак атлап финишҡа йүгерҙе. Йомортҡаны төшөрһәң, ватылмаһа, кире алып ҡашыҡҡа ҡуйырға мөмкин, ватылһа, бөттө, дистанциянан сығаһың.

Ә бесән тултырылған тоҡ менән һуғышыу? Бер метрҙар бейеклегендәге ике бағанаға бурәнә ҡуйылған. Ике кеше бесәнле тоҡ тотоп, ҡара-ҡаршы ултыра ла бер-береһен тоҡ менән дөмбәҫләргә тотона. Тирә-яҡта баҫып тороусылар көләшә, һуғышсыларҙы дәртләндерә, прештерә, сәмләндерә, ғәрләндерә. Үткер, шаян һүҙҙәр... Көлә-көлә эсенде ҡатыу ала. Ә көрәш! Бында ете йәшлек малайҙарҙан алып етмеш йәшлек бабайҙарға саҡлы үҙҙәренең көстәрен һынаша. Көрәштә ҡан айырыуса ныҡ ҡыҙа. Ҡыҙыу ғынамы? Майҙан тирәһендәгеләр үҙ-ара саҡ-саҡ алышып китмәй. «Әй, Мөхәмәтйән, аяҡ салма! Аяҡ!» «Йәнтимер, билбауҙы дөрөҫ тотмайһың...» «Бик дөрөҫ, кешене һаташтырма!» «Һин үҙең һаташма». «Ә һин теленде тешлә лә ауыҙыңды яп...» «Ә һин минең ауыҙыма хужа булма...» һәм башҡалар һәм башҡа шуның кеүек әсе, ҡырҡа һүҙҙәр. Дөрөҫ, йыш ҡына «аҡыллы юл бирә, ә уҫал еңә...»

Ә шулай ҙа һабантуйҙың иң ҡыҙығы, үҙәге ат сабыштырыу була. Әлфиә бала саҡтан уҡ ялҡындай ярһыу атҡа атланып, дауыл булып финиш һыҙығын үтеп киткән малайҙарға көнләшә торғайны. Их, ниңә ул да малай кеше түгел икән!

Аҡһаҡал олпат ҡына атлап, бейеп торған ат янына килә, ә һыбайлы малай кеше күрмәгәндә аттың ҡорһағына үксәләрен тейҙереп ала ла, йүгәнен тартып, тырр тигән була. Аҡһаҡал аттың яңағынан һөйә-һөйә (маладис, саптар, был юлы да хур итмәнең) муйынына сигелгән боронғо таҫтамал бәйләй, һыбайлыға бүләкте тоттора. Малай, бүләкте алғас, майҙан тирәләй «почет кругы» яһап сыға. Ә һин ул малайҙың танауына ҡараһаң, йығыл да үл, күкте һөрөп барамы ни. Донъяла унан да бәхетлерәк кеше юҡтыр. Их, ниңә ул да ауылда тыуманы икән! Ҡыҙ булһа ла, валлаһи, сабыштарҙа ҡатнашыр ине...

Ҡара, шомло күктә бер юлы ике ракета ҡабынды. Шул уҡ минутта яҡында ғына мина шартлағаны ишетелде. Улар таш кеүек ергә яттылар. Бөтөнләй башҡа һабантуй башланды. Ракеталар тәкәтте ҡоротоп оҙаҡ яндылар. Ниһайәт, улар бәләкәйләнде, һүрелде һәм, майы бөткән лампа һымаҡ, ашыҡмай ғына һүнеп бөттө.

Разведчиктар шунда уҡ һикереп торҙолар, ятып әрәм ителгән ваҡытты «ҡыуып» етер өсөн тағы ла шәберәк атланылар. Ләкин ун биш-егерме аҙым да китергә өлгөрмәгәндәрҙер, йәнә үлгән кеше йөҙө һымаҡ аҡһыл ракеталар

тирә-яҡты һалҡын нур менән яҡтыртты. Йәнә улар тирәһендә мина шартланы. Әлфиә, капитандың битенә тынын өрөп, һораны:

— Беҙҙе күреп ҡалдылармы икән ни?

— Юҡ, был «ыҙалаусы ут» * тип атала. Беҙҙең нервыларҙы ҡытыҡларға теләйҙәр.

— Ә ниңә беҙҙекеләр атмай?

— Ә ниңә юҡҡа боеприпас әрәм итергә!

Немецтарға ғына хас методик теүәллек менән ракеталар, тейешле ваҡыт үткән һайын, сыжлап ҡабынып торҙо. Ләкин разведчиктар ҙа уларҙың ҡоло булырға, ергә һеңеп ятырға ғына теләмәне. Ракеталар һүрелә башлау менән, һикереп торҙолар ҙа йүгерә-атлап юлдарын дауам иттеләр.

Бына улар сатыры күккә тейеп торған йыуан ағас төбөнә килеп еттеләр. Ниндәй ағас икәнен Әлфиә олононан һыйпап, еҫкәп ҡараһа ла, белә алманы, ни генә тимә, ул ҡала ҡыҙы бит, урманды насар белә. Капитан аҡрын ғына һуҡранды.

— Ниңә кәрәкмәгәндә «фонарь» асалар, ә бына кәрәк сағында оноталар...

Виктор ҙа һүҙ ҡыҫтырҙы.

— «Ҡәбәхәтлек законы» ** буйынса янмай ул ракеталар.

Көндөҙ үтеләсәк маршрутты картанан ни саҡлы өйрәнмәһендәр, урында, ориентирҙарға ҡарап барыуы еңелерәк, ышаныслыраҡ ине. Капитан, куртка еңен күтәрә төшөп, яҡтырта торған циферблатлы сәғәтенә күҙ һалды, «ҡуҙғалырға ваҡыт», тип әйтергә лә өлгөрмәне, бер юлы бер нисә ракета тирә-йүнде энә табырлыҡ итеп яҡтыртып ебәрҙе. Быныһында инде разведчиктар ракетаға ихлас шатландылар.

— Һай, маладис, фриц, беҙгә ут кәрәкте һиҙеп торалыр ғуй, — тине Байсәйетов.

— Немецтың да беҙҙең уй-теләгебеҙҙе аңлар көнө бар икән, — тип өҫтәне Виктор. — Ух, үлтереп тәмәке тартҡы килә.

— Иғтибар итегеҙ, — тип һәр һүҙен өҙөп һөйләй башланы капитан. — Һулға ҡарағыҙ. Бер өс йөҙ метр алыҫлыҡтағы урманды күрәһегеҙме? («Күрәбеҙ, күрәбеҙ»). Полоса уртаһынан асфальт үтә. Юл күпергә бара. Юлды киҫеп үтергә лә алға китергә. Һулда, уйһыу урында, күперҙән бер-ике йөҙ метр алыҫлыҡта күпер ҡараусының йор-

---

* «Ыҙалаусы ут» — ҡаршы яҡты тынысландырып ял иттермәҫ өсөн әлеһән-әле прицелһыҙ ғына атыу.

** «Ҡәбәхәтлек законы» — закон подлости, эштең тиҫкәре килеп тороуы. Кәрәкмәгәндә булыу, кәрәк ваҡытта булмауҙы шаяртып ана шулай тиҙәр.

топ — сторожка күрерһегеҙ... — Ул арала ракеталарҙың «майы» бөттө. Әммә капитан һүҙен дауам итте. Яҡты ваҡытта күрһәтәһе ориентирҙар күрһәтелгәйне инде. — Шул ҡарауылсы йортона үтеп керергә лә обстановканы белергә. Саперға задание бирелгән.

Сапер, ризалашып, башын ҡаҡты.

— Бер тәүлектән бына ошо урында осрашабыҙ. Ә хәҙер — хәйерле юл! Бөтәһе лә ал да гөл булыр.

Разведчиктар ике төркөмгә бүленде. Капитан менән Әлфиә туп-тураға, «45,5» билдәһенә саҡлы барырға ла, таң атҡансы, уңайлы урынлашып, йәшеренергә һәм күперҙе ентекләп күҙәтеп ятырға тейеш.

Разведчиктар ике яҡҡа айырылып китте. Ракеталар, бәхеткә ҡаршы, башҡаса ҡабынманы. Капитан һаҡ, әммә ашығып атланы. Ҡапыл Әлфиә капитандың еңенән сытырлатып тотто.

— Ни булды? — тине капитан, бышылдап.

— Ишетәһегеҙме?

Капитан туҡтаны.

— Юҡ.

— Аяҡ тауыштары килә.

Капитан бүркен күтәрә төштө. Ысынлап та, ашығып атлаусы аяҡ тауыштары бик яҡында ишетелде. Капитан, Әлфиәне етәкләп, һулғараҡ ҡайырҙы. Шым ғына ятып, ергә йәбештеләр. Ошоно ғына көткәндәй, беҙҙең ракеталар ҡабынды. Әлфиә немецтарҙы күреп ҡалды. Улар өсәү ине. Немецтар, ракеталар янығу менән, көлтә һымаҡ, ергә ауҙылар ҙа имгәкләп барыуҙарын дауам иттеләр. Немецтар, үс иткән кеүек, туп-тура уларға ҡаршы килә ине.

«Бына ни өсөн немецтар күккә шәм яндырмай башлағандар икән», тип уйлап алды капитан. Ошо минуттарҙа уларҙың разведчиктары фронт һыҙығын үтеп сығырға тейеш булған. Ә беҙҙекеләр, дошмандың ниәтен белгәндәй, тап ошо мәл күккә ракеталар осорҙо.

Капитан ҡаранып алды. Улар ҙур калибрлы авиабомбанан хасил булған тәрән воронка янында яталар икән. Ракеталар һүнгәс тә, капитан Әлфиәне түңкәртелгән конусты хәтерләтеүсе соҡорға һөйрәне. Соҡорға төшөү менән, капитан, немецтар яғына ҡарап, автоматын тоҫҡап ятты. Әлфиә лә командиры эшләгәнде эшләне.

Соҡор уларҙы ҡотҡарып ҡалды. Немец разведчиктары улар танауы төбөнән генә мышнай-мышнай ашығып үтеп китте. Соҡор булмаһа, ихтимал, осрашыу ҡоро ғына тамамланмаҫ ине.

Немецтар шаҡтай алыҫлашҡас, капитан Әлфиәнең ҡолағына шыбырланы:

— Хәҙер һин ни эшләр инең, Ҡамалова?
— Улар разведчиктармы?
— Шулайға оҡшаған. «Тел» алырға бараларҙыр.
— И-их, рация янда булһа, — тип әрнеп ҡуйҙы Әлфиә.
Капитан уны бүлде.
— Юҡ хаҡында уйлама. Хәҙер үк Ванюшиндар артынан сап. Тиҙ генә кире ҡайтһындар. Немецтарҙың артынан төшөргә кәрәк. Тороп тор. Сигналды онотманыңмы?
— Онотманым. Бүлеп-бүлеп тартай булып ҡысҡырырға.
— Ос!
Әлфиә, моғайын, бер ҡасан да шулай етеҙ йүгермәгәндер. Ул былай ҙа еңел кәүҙәһенең ауырлығын бөтөнләй тойманы. Дөрөҫ, муйынға аҫылған автомат ҡамасауланы, уны көбәгенән һәм төйҙәһенән ике ҡуллап тоторға кәрәк ине, ә ҡулдарҙы һелкмәгәс, йүгереүе ауыр, ул күренмәгән түңгәккә һөрөндө, йығылды, урылған ашлыҡ ҡамылына ҡулдарын сәнскеләне, йәнә тороп йүгерҙе. «Тиҙерәк, тиҙерәк урман полосаһына барып ингәс, Ванюшиндарҙы ҡыуып етергә кәрәк». Ул автоматының көбәген аҫҡа эйҙе лә уң яғына тарта төштө — былай йүгереүе еңелерәк ине. Бер-ике секундҡа ғына туҡтап тын алды, бер нисә тапҡыр тартай булып ҡысҡырҙы, бәхеткә ҡаршы, ул һыҙғыра ла, төрлө ҡоштарға оҡшатып һайрай, ҡысҡыра ла белә ине. Юҡҡа ғына дүрт малай араһында үҫмәне.
Әлфиә, тартай булып ҡысҡырғандан һуң, тынын ҡурып, ҡолаҡтары менән генә түгел, йөрәге менән дә яуап көттө, ләкин бер ни ишетелмәне.
Йәнә «йөҙ метрға» йүгереш-бросок. Дөрөҫ, мәктәптә ҡыҙҙарҙы йөҙ метрға түгел, һикһән метрға йүгертәләр ине, әммә ғүмере буйы малайҙарға ҡыҙыҡҡан Әлфиә гел йөҙ метрға йүгерә торғайны.
Йәнә тартайҙың өҙөлөп, кемделер саҡырып ҡысҡырыуы. Ышанмаҫлыҡ, иҫ киткес тынлыҡ. Әйтерһең, фронт түгел. «Әллә берәй яҡҡа ҡайырҙымы икән?» Үс иткән кеүек, бер яҡ та «шәм» яндырын, күккә аҫырға теләмәне. Әлфиә ятып, һалҡын, туң ергә ҡолағын ҡуйҙы. Ер ҙә йоҡлай, бер төрлө тауыш та сығармай ине. Ни эшләргә? Туп-тураға йүгерергәме, берәй яҡҡа ҡайырылырғамы? Ә ҡайһы яҡҡараҡ китергә: уңғамы, һулғамы? Ул һикереп торорға өлгөрмәне, күпер яғынан күккә ракеталар осто. Әлфиә лап итеп ҡоланы. Юҡ, ул аҙашмаған, дөрөҫ йүгергән. Ванюшиндар урман полосаһына етеп баралар ине инде. Әлфиә бөтә көсөнә тартай булып ҡысҡырырға тотондо. Хатта теле талды, ләкин уны береһе лә ишетмәне, әллә ҡысҡырыуы шундайыраҡ булды, әллә ара йыраҡ ине. Ул, ни эшләгәнен үҙе лә белмәй, ракета һүнгәнде көтөп тормай, һикереп торҙо

ла разведчиктарға табан йүгерҙе. Әгәр автомат, урылған ашлыҡтың ҡамылы ҡамасауламаһа, ул, моғайын, ошо дистанция буйынса донъя рекорды ҡуйған булыр ине.

Ракета һүрелде, тоноҡланды, ҡыҙарҙы ла юҡ булды. Әлфиә тағы нимәгәлер абынды, ҡайһылыр ерен ауырттырып йығылды, һикереп торорға итте, әммә, сигнал бирергә кәрәклекте иҫенә төшөрөп, тартай булып ҡысҡыра башланы. Был юлы уны ишеттеләр. Ҡемдер, бик үк килештерә алмаһа ла, тартай булып ҡысҡырҙы. Әлфиә, «ишеттем, ишеттем», тип яуап ҡайтарҙы. Теге яҡтан да шундай уҡ сигнал ишетелде. Әлфиә, «кире килегеҙ!» тигәнде аңлатып, сигнал бирҙе. Тегеләр, «аңланыҡ», тип яуапланы.

Оҙаҡ та үтмәне, улар инде бөтәһе лә бергәләшеп ҡайтыр яҡҡа йүгерә-атлайҙар ине.

Йөрәк ни эшләргә белмәй шашып тибә. Әлфиә бала саҡтан уҡ күп йүгерҙе, Ағиҙелдең текә ярына тын алмай йүгереп менә торғайны, әммә был юлы... әллә урылған ашлыҡ ҡамылы, ҡараңғы төн, автомат ҡамасау булды, уның бик тиҙ тыны бөттө. Туҡтағыһы, аҙ ғына хәл йыйғыһы килде. Бер генә минутҡа ла туҡтап тормаҫҡа, юҡһа немец разведчиктарын ҡыуып етә алмаясаҡтар. «Шәберәк... шәберәк», — тип ул үҙен генә түгел, башҡаларҙы ла ҡамсыланы. Ул йәнә абынып йығылып, усын ҡамылға сыйҙы. Ә алдан йүгергән Виктор аҙымдарын аҙ ғына ла аҡрынайтырға уйламаны. Йығылып торғас, Әлфиә тартай тауышын ишетте. Ә Виктор тәүҙә быға иғтибар итмәне, күрәһең, аяҡ тауыштары ишетергә ҡамасаулағандыр. Әлфиә тороу менән «тартайға» тартай булып яуап ҡайтарҙы, Виктор, уны ишетеп, туҡтаны. Теге яҡтан йәнә тартай тауышы ҡабатланды. Күп тә үтмәне, разведчиктар капитан янына барып етте.

Бойороҡ ҡыҫҡа булды «Немецтарҙы ҡыуып етергә. Пленға алырға. Алып булмаһа, юҡ итергә».

— Ә күпер янына кем бара? — тине Виктор.

— Ҡамалова менән беҙ барабыҙ. Сапер һеҙҙең менән китәсәк. Немецтар өсәү. Башҡа баш булһын.

— Егеттәр, һыпырттыҡ! — тине лә Виктор килгән яҡҡа тороп йүгерҙе.

Виктор һәм уның иптәштәре ҡараңғылыҡҡа инеп юғалғас, капитан ипләп кенә Әлфиәнең ҡулынан тотоп шыбырланы: «Маладис!» Унан өҫтәп ҡуйҙы: «Ҡиттек!»

Әлфиә быйна хәҙер генә уң аяғының тубығын бәргәнлегән һиҙҙе. Атларға, йүгерергә әллә ни ҡамасауламай, шулай булғас, төкөрҙө! Иң мөһиме капитан уға, «маладис», тине. Ә бит задание телгә алып торорлоҡ та түгел, йомошсоға ҡушыла торған ваҡ эш кенә. Ә шулай ҙа... Ул аҙашып,

разведчиктарҙы таба алмаһа, хәҙер Викторҙар немецтар артынан баҫмаҡлап бара алмаҫтар ине. Ул сағында, ихтимал, уларҙың үҙҙәренә немецтар артынан төшөргә тура килер ине. Юҡҡа ғына радистар мәктәбендә боевой уставты уҡытыусы офицер: «Армияла, бигерәк тә фронтта, эштең вағы-эреһе юҡ, бөтәһе лә мөһим», — тип өйрәтмәне.

Ашыҡмай ғына, теләр-теләмәҫ кенә, күҙҙе ирkәләүсе шандаҡһыҙ яңы көн тыуҙы. Был Әлфиәнең һуғыш эсендә үткәргән тәүге «боевой көнө» ине. Ундай көндәр, төндәр, беренсе мөхәббәт шикелле, бер ҡасан да онотолмай. Был көн бик күп йылдар үткәс тә, Әлфиәнең төшөнә керең интектерер һәм ул, ете төн уртаһында тертләп уянып китеп, шыбыр тиргә төшөр, һағышланып ятыр...

Яңы көн менән бергә һуғыш аллаһы ла уяна. Ҡара көҙҙөң һалҡын, ҡәһәрле һуғыштың ҡайнар һулышы яңы көнгә бер төрлө шатлыҡ та вәғәҙә итмәй.

Улар нисек етте шулай өйөлгән һалам сүмәләһенә йәшенеп ятты. Ә бер аҙ ситтәрәк ниндәйҙер фантастик энәғараҡҡамы, үрмәксегәме оҡшаған нәмә бот-саттарын айырып ята. Абайлабыраҡ ҡарағас, Әлфиә таныны — был урғыс машина ине. Әлфиә уны ауылда күп күрҙе, хатта еҙнәһе уны тишекле-тишекле тимер ултырғысына ултыртып, баҫыуҙан ауылға алып ҡайтҡаны ла булды. Еҙнәһе урғыс янынан дилбегә тотоп йәйәү бара, аттар ҡайтыр яҡҡа бышҡырабышҡыра етеҙ атлай, ә машина келтер-келтер килә. Күңелле!

Ул арала капитан ҙур ҡосаҡ һалам алып, урталайға бөгөлөп, урғыс машина янына йүгерҙе. Әлфиә лә шулай эшләне. (Разведкаға сыҡҡансы уҡ капитан Әлфиәне ҡаты киҫәтеп ҡуйғайны: «Әгәр мин бер һүҙ ҙә әйтмәһәм, һин дә мин эшләгәнде эшлә».)

Улар урғыс машина янына һалам түшәнеләр ҙә һуҙылып яттылар. Урғыстың өҫтөндә һуғылмаған һалам усмаһы һәм ике ҡамыт ята ине. Ҡамыттарҙан дегет еҫе килә. Был еҫ Әлфиәгә һәр ваҡыт бала сағын иҫенә төшөрә. Тәүтапҡыр Шәмсинур апаларына каникул ваҡытында ҡунаҡҡа барғас, еҙнәһе уны урманға дегет ҡыуған ергә алып киткәйне. Әлфиә, ә ниңә һалам сүмәләһе артында йәшенмәнек, тип капитандан һорамаҡ булғайны, тыйылды, юҡ-бар һорау, артыҡ ҡыҙыҡһыныу разведкала ғына түгел, башҡа ерҙә лә урынһыҙ.

Ҡапитан бинокль аша алдағы баҫыуҙы — полосаны оҙаҡ ҡына ҡарап, тикшереп ятҡандан һуң, биноклнән айырылды. Урғыста ятҡан һаламдан ике-өс башаҡ өҙөп алып, уларҙы усында ыуҙы, кәбәген өрөп осорҙо ла бойҙай бөртөктәрен ауыҙына һипте.

Тап ошо минутта, улар алғы һыҙыҡты үтеп, нейтраль зонаға сыҡҡан урында йәшен йәшнәп китте, шартлау ишетелде. Ошоно ғына көткәндәй, беҙҙең пулеметтарҙың «теле» асылды. Немецтар ҙа ашығып ут асты. Бүре еҫен һиҙгән эттәр төрлө остан ҡапыл берҙәй өрә башлаған шикелле, ике яҡтан да пулеметтар тыҡылдарға тотондо. Капитан һағайҙы. «Әллә...» тине лә ҡалғанын тел төбөндә ҡалдырҙы. Әлфиә борсолоп уға ҡарап алды. «Нимә — әллә?..» тип капитандың ни әйтергә теләгәнен белергә теләне ул. Ә капитан башҡа һүҙ әйтмәне. Әлфиә капитандың холҡона бер аҙ төшөнә башлағайны инде. Ул үҙенең фараз, ниәттәрен һөйләп, кешеләр менән уртаҡлашырға бик яратмай. Ләкин Әлфиә уның «әллә...» тигән аңлайышһыҙ һүҙенән һуң ниндәй һүҙҙәр әйтеләһен төшөндө. Ул, Ванюшин һәм уның иптәштәре тураһында уйлап, «әллә» тине. Виктор — капитандың иң яратҡан, иң яҡын күргән разведчигы. Был мөхәббәт Викторҙы аҙым һайын маҡтауҙан, уға айырым иғтибар итеүҙән тормай. Капитан бөтә разведчиктарҙы ла тиң күрә, береһен тартып, икенсеһен ситкә типмәй. Әммә Виктор хаҡында һүҙ сыҡҡанда, уның менән ҡара-ҡаршы һөйләшкәндә, рота командирының күҙҙәрендә беленер-беленмәҫлек йылы осҡондар хасил була, тауышы ғәҙәттәгенән яғымлыраҡ, йылыраҡ сыға. Хатта Викторҙы берәй этлегешуҡлығы өсөн тимер тараҡ менән тарағанда ла, капитандың тауышында уҫаллыҡ һиҙелмәй. Капитан Сталинградтан алып Виктор менән йәнәш һуғышып килә. Тәүҙә Виктор лейтенант Ардыуановтың взводында рядовой булған, тора-бара капитан Ардыуановтың ротаһында отделение командиры, взвод командирының ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә. Беренсе көндө, юҡ, беренсе минутта уҡ Виктор Ардыуановҡа оҡшай башлай.

Виктор кешеләргә: «Бына мин, эсемдәге тышымда», тип тура, ихлас ҡарай. Ул уртасанан аҙ ғына оҙонораҡ кәүҙәле, шул кәүҙәгә таман киң күкрәк, көслө ҡулбаштар. Таҙа муйынға ултыртылған аҡһыл һары сәсле баш. Һәр ваҡыт шаян, майланып тороусы ҡуйы зәңгәр күҙҙәр, оҙон ҡара керпектәр, рустарҙыҡына ҡарағанда Балтика буйындағы кешеләрҙең танауына оҡшаған тура оҙон танау, күпереп торған дымлы ирендәр һәм... кешене кеше йәки быҙау иткән нәмә — тел. Викторҙың теле үткер, тауышы көр, дикцияһы үтә аңлайышлы ине. Ә ҡайҙандыр разведчиктар «ете ҡыллы музыка ҡоралы» — гитара табып килтергәс, Викторҙың быға сасаа беленмәгән яңы һөнәре асылды.

Буш минуттарҙа Виктор ҡара грифлы гитараны муйынына аҫыр, тырнаҡтары менән «юрамал ғына» ҡылдарына сиртеп алыр ҙа, күңел түренә барып етерлек серле тауыш

менән иплән кенә, үҙе өсөн генә «Славное море, священный Байкал» тип йырлап ебәрер. А... был йыр, был тауыш бәгерҙәре ташҡа әйләнгән һалдаттарҙы ла иретә, тамаҡҡа төйөр тығыла. Бер рәт шулай Байсәйетов түҙмәй ҡысҡырып ебәрҙе: «Ой-бой-бой, ниңә мин ҡыҙ түгелмен икән! Үҙенде ҡара гүргә кергәнсе һөйөр инем».

Ә бына разведкала уның менән еңел түгел. Ул иң киткес батыр ғына түгел, ә дыуамал батыр ине. Үлем менән, ҡулында гел «уйындар» булған картежник һымаҡ, шаяра. Бер төрлө кәңәш, киҫәтеү, «разведканан ҡыуабыҙ», тип янау ҙа уға тәьҫир итмәй. Ҡайһы саҡта рота командиры уны туғандарса өгөтләп тә ҡараны: «Виктор, ихтимал, һин минең тәнем тире менән түгел, пуля алдыра алмай торған броня менән әйләндереп алынған, — тип уйлайһыңдыр?» Теге бөтөнләй йыуашланып яуап бирә: «Юҡ, улай уйламайым». «Уйламаған, ниңә дыуамалланаһың һуң?» «Дыуамалланмайым мин, иптәш капитан, — тип Виктор йәшереп тормай, ихлас әйтә. — Һуғыш ваҡытында үлемде иҫемдән сығарам да ҡуям. Гел дошман ғына күҙ алдымда була.— Ә аҙаҡ мут йылмайып өҫтәп ҡуя: — Мин бит сихырланған, иптәш капитан». Һүҙҙәренең шаярып түгел, ысынлап әйтелгәнен раҫлар өсөн гимнастерка яғаһын сисеп, муйынына аҫылған индәйҙер бетеүҙе тартып сығара. «Нимә һуң ул?» — тип һораһаң, һәр саҡ шаяртып яуап бирер: «Үлемһеҙлек сере». Ысынлап та, ошо ике йыл ярым эсендә ниҙәр генә күрмәне улар, арала яраланыусылар ғына түгел, үлеүселәр ҙә әллә ни саҡлы булды, ә бына Виктор һәр ваҡыт һыуҙан ҡоро, уттан көймәй сыҡты. Егеттәр уның күҙ алдында ла, күҙ артында ла: «Сибиряк бит, ә сибиряктар, кедр һымаҡ, оҙаҡ йәшәүсән», — тип һоҡланалар. Ә дөрөҫөн әйткәндә, ул тыумыштан сибиряк түгел. Яҙмыш еле уны шундай алыҫҡа һәм һалҡын яҡҡа осороп алып илтеп төшөрҙө, әммә был турала берәү ҙә белмәй ине.

Берәү ҙә, хатта капитан да.

Ниһайәт, яңы көн башланды. Ауырыу кешенең йылмайыуын хәтерләткән ҡояш болоттар араһынан бер нисә минутҡа ғына күренеп торҙо. Әллә ул моторҙарҙың шомло геүләүенән, мина-снарядтарҙың өҙлөкһөҙ шартлауынан, пулеметтарҙың ләңкелдәүенән ҡурҡып, әллә асыуланып, ерҙе шифалы нурҙары менән иркәләргә теләмәне. Иртән, ғәҙәттә, әтәстәр, көр ҡысҡырып, күп һанлы ғаиләһен кәңәшмәгә саҡыра, ҡоштар яңы көндө ҡотлап һөнәрҙәрен күрһәтә, япраҡтар серләшеп ҡыштырлай... Ә бөгөн... Ә был иртәлә... Ҡояш кискә саҡлы башҡа күренмәне, ә ҡояшһыҙ, һалҡын көн сикһеҙ оҙон тойолдо.

Улар көнө буйы тик яттылар: бинокль аша күперҙе кү-

ҙәттеләр ҙә дошмандың ҡарауыл хеҙмәтен өйрәнделәр, хәрәкәттәрен хәтерләнеләр. Тағы күңелдә шикләнеү, борсолоу уты тоҡанды. Ни өсөн капитан уны шундай ябай һәм күңелһеҙ заданиеға алды икән? Бәлки, үс итептер. Әлфиә, «мине разведкаға, заданиеға ебәрегеҙ», тип уның тәҡәтен ҡоротто бит. Бына хәҙер һин заданиела. Тауышһыҙ-тынһыҙ ғына ята бир әйҙә. Етмәһә, һалҡын үҙәккә үтә. Башҡа урында булһа, ул тороп һикергеләр, йүгерер ине, ә бында һинең һәр бер һаҡһыҙ хәрәкәтеңде дошмандың күреп ҡалыуы бар. Әйткәндәй, немецтар артыҡ күренеп тә йөрөмәнеләр, күрәһең, улар йылы блиндаждан бинокль аша ғына күҙәтеп яталарҙыр һәм лар-лар мығырлайҙарҙыр, ә бында... ни ҡыймылдап, ни һөйләшеп булмай... Капитан уның һиҙҙермәҫкә тырышып, һалҡындан бөрөшөүен күрҙе, шикелле. Биноклен маңлайынан алды ла Әлфиә яғына боролдо.

— Өшөнөңмө?

— Ю-юҡ... Әллә ни түгел.

— Ә тештәрең шаҡ-шоҡ итә.

Капитандың күҙҙәренә ҡарап нимә уйлағанын белде Әлфиә. Ул күҙҙәр: ниңә инде миңә был себеште үҙем менән алырға тигәнде аңлаталар ине. Уның урынында Ванюшин һымаҡ берәй ир заты булһа, бер-ике тапҡыр араҡы йоттороп ине лә шуның менән эш бөтөр ине. Ә Әлфиәнең әле әсеткән балды ла ауыҙ иткәне юҡтыр.

— Шыуышып сүмәлә янына бар ҙа ҡапҡылап ал. Йылынырһың. Унан һаламды соҡоп сүмәлә эсенә кер, — тине капитан, уны йәлләгәндәй, йәнә биноклгә йәбешеп.

— Ә һеҙ?

— Ә мин күҙәтеп ятам әле. Күпер янына бишекле мотоциклдар килеп туҡтаны. Ниңә килеүҙәрен белергә кәрәк.

— Ихтимал, ҡарауыл алмашыналыр.

— Юҡ, бишектәрҙән нимәлер бушаталар.

— Биноклде бирегеҙ әле, мин дә күҙәтәм.

— Аҙаҡ. Бар, йылын, — капитан биноклде маңлайынан алырға йыйынманы.

Әлфиә түше менән шыуышып, уның янынан китә башланы. Бәлки, ул ни бары ун аҙым шыуышҡандыр, шунда уҡ йылынды — терһәктәр ярҙамында пластунса шыуышыу еңел эш түгел ул. Ә инде һаламға күмелеп, сусҡа салоһы — шпиг ҡапҡас, бөтөнләй иҙрәп китте. Аҡрынлап ул ойой башланы һәм шунда уҡ тертләп уянды. «Йоморармаҫҡа, бирешмәҫкә. Оҙаҡламай кис булыр һәм улар өйгә табан йүнәлер». Ярым емерелгән, ярым ҡараңғы подвал хәҙер уға ожмах кеүек тойолдо. Егеттәр уны инде дары еҫен еҫкәгән һалдат итеп ҡабул итәсәк, ә үҙеңде үҙеңдән өлкәнерәк, көс-

ләрәк кешеләр араһында уларға тиң күреү — ҙур бәхет. Иртән торғас, тәүге эше — өйгә хат яҙыу буласаҡ. Ә нимә яҙыр икән һуң ул?.. Нимә... Ул йәнә ойоп китте. «Әлфиә!» тигән һүҙҙе ул йоҡо аралаш ишетте лә һикереп тормаҡсы булды, капитан ғына тотоп ҡалды.

— Ойоп киттеңме? — тине капитан, уның янына ултырып, бышылдап.

— Юҡ.. уйға сумып, онотолоп киткәнмен, — тип алдашты Әлфиә.

— Мә бинокль, күҙәт, ә мин ҡапҡылап алам. Ә ҡараңғы төшөү менән, күпер янына яҡыныраҡ барырбыҙ, бынан бөтәһен дә күреп, иҫләп булмай.

— Тегендә, урғыс янына барырғамы, — тине Әлфиә, ә үҙенең һис тә сүмәлә янынан киткеһе килмәй ине.

— Юҡ, һаламды аҙыраҡ йырғылаштыр ҙа ошонан ғына күҙәтеп ултыр.

Әлфиә сүмәлә эсенә нығыраҡ күмелде лә, бите тураһынан кескәй генә тишек-тәҙрә яһап, биноклдән күҙәтә башланы. Ә ошо ваҡыт капитан котомкаһынан ҡапҡыларға аҙыҡ-түлек алды. Һалҡын икмәкте, таш кеүек ҡаты, әммә ҡабырға тәмле салоны ҙур итеп тешләп, сәйнәй генә башлағайны, күпер яғынан моторҙар геүләүе ишетелде.

— Ниндәй тауыш унда?— тине капитан, ҡапҡанын ашығып сәйнәй-сәйнәй.

— Күпер янына машиналар килеп туҡтаны.

— Нисәү?

— Хәҙер икәү генә.

Капитан ҡапҡанын тиҙ генә йотто ла Әлфиәгә яҡынайҙы.

— Биноклде бир әле.

Машиналарҙан нимәлер бушаттылар, әммә нимә икәнен асыҡ ҡына күреп булмай. Йәнә ике йөк машинаһы килеп туҡтаны. Капитан маңлайынан биноклде алмай ғына шыбырланы.

— Бынан ике-өс йөҙ аҙымдар самаһында, алда юғары көсөргәнешле электр линияһының ауған металл бағанаһы ята. Күрҙеңме?

— Күрҙем, — тине Әлфиә. Ул бағанаға ҡарап ята-ята ялҡып бөткәйне инде.

— Ҡараңғы төшә башлау менән ана шул бағананың бетон нигеҙе артына барып ятабыҙ. Ә хәҙер... — Ул биноклде Әлфиәгә һуҙҙы. — Күҙәт. — Йәнә тоғонан һалҡын икмәк, ҡаты сусҡа майы алып киҫ, көслө тештәре менән шытырлатып тешләп ашыға-ашыға сәйнәргә тотондо.

Ул арала Әлфиә:

— Еңел машина килеп туҡтаны, — тип хәбәр итте.

Капитан тағы унан биноклде тартып алды.

— Күрәһең, улар күперҙе беҙгә тиҙ генә бирергә йыйынмайҙарҙыр, — ул биноклде ҡабат Әлфиәгә бирмәне, муйынына кейҙе лә ашай-ашай күҙәтеүен дауам итте.

— Ә-ә... бер нәмә лә күренмәй, — тип һуҡранып капитан маңлайынан биноклен алды ла икмәк тоғона һалды. (Барыбер башҡа кәрәк булмаясаҡ.) Капитан арты менән сүмәләнән сыҡты ла Әлфиәгә шыбырланы. — Үрмәләп, минең арттан бар. Мин эшләгәнде эшлә. — Капитан тоғон арҡаһына аҫып, бесәй йылғырлығы менән ауған электр бағанаһы яғына ҡарап үрмәләне. Ҡапыл Әлфиәгә көлкө тойолоп китте — шундай һонтор кеше, тәпәй йөрөргә өйрәнә башлаған бала шикелле, дүрт аяҡлап үрмәләй. Ләкин шуҡ уй шунда уҡ юғалды — хәҙер уның үҙенә лә, ике аяҡлап йөрөй белмәгән борonғо бабаларыбыҙ һымаҡ, имгәкләп хәрәкәт итергә тура киләсәк.

Хәл йыя-йыя дүрт аяҡлы электр бағанаһының бетон нигеҙенә барып еткәнсе инде күҙ бәйләнде. Ошо ваҡыт эсендә күпер янындағы йөк машиналары ла китеп барҙы. Ел күпер яғынан ниҫә ине — немецтарҙың һөйләшкән тауыштары ишетелә, ләкин һүҙҙәре аңлашылмай. Тәмәке төтөнөнөң әсе еҫе Әлфиәнең танауын ҡытыҡлай. «Һәр һүҙҙәренә ҡолаҡ һал, иҫеңдә ҡалдыр», — тип шыбырлай капитан.

Ике немец блиндаждан сыҡты ла һөйләшә-һөйләшә туптура былар яғына йүнәлде. Капитандан берәй метрға ситтәрәк, арттараҡ ятҡан Әлфиә командирына ҡараны — капитан күҙ эйәрмәҫлек хәрәкәт менән биленән финкаһын һурып алды, автоматын атырға әҙерләне. Әлфиәнең финкаһы юҡ ине, шуға күрә ул автоматы менән генә командиры эшләгән хәрәкәтте ҡабатланы. Ә немецтар бағананың арғы башында туҡталып, йомоштарын йомошланылар ҙа китеп барҙылар. Немецтар инде шаҡтай алыҫлашҡас, капитан финкаһын ҡынына һалды ла Әлфиәгә табан боролоп һораны.

— Берәй һүҙҙәрен аңланыңмы?

— Былай ғына... әсе елде әрләнеләр... Ә ғыжылдаҡ тауышлыһы бер үк һүҙҙе ҡабатланы: «шиксаль, шиксаль...»

— Нимә әле ул шиксаль?

— Яҙмыш.

— Яҙмыштары иҫтәренә төшкән, ҡәбәхәттәрҙең.

Улар яйлап ятырға өлгөрмәне, блиндаждан (ихтимал, дзоттыр *) тағы ике немец сыҡты ла, магнит тартҡан шикелле, былар яғына йүнәлде. Йәнә капитан баяғы хәрәкәт-

---

* *Дзот* — дерево-земляная огневая точка. Ағастан, тупраҡтан эшләнгән ут нөктәһе.

тәрҙе ҡабатланы. Был юлы инде Әлфиә артыҡ ҡурылманы. Немецтар, күрәһең, саф һауа һулар өсөн генә сыҡҡандарҙыр — ары-бире ашыҡмай ғына йөрөйҙәр, тыныс ҡына һөйләшәләр. Береһе: «Әйҙә бынауы ауған бағанаға ултырайыҡ», — тип тәҡдим итте. Икенсеһе: «Тимер бит, һалҡындыр», — тип ҡаршы төштө. «Ә бына беҙгә йылы, мөртәттәр», — тип ҡуйҙы эсенән Әлфиә. Немецтар һаман уларға табан килә. Йәнә ун-ун биш аҙым, немецтар уларҙың баш осонда буласаҡ. Ләкин улар был һәләкәтле ун-ун биш аҙымды атламаны. Ауған бағананың осона яйлап ултырҙылар. Гәп тегенән-бынан, тартып-йолҡоп ҡына барҙы.

«Бөгөн тағы Берлинды бомбаға тотҡандар».

«Берлинды бөтөнләй харап итәләр инде...»

Диалог өҙөлдө. Береһенең тауышы, астма сире менән интеккән кешенеке кеүек, ғыжылдап сыға.

«Беҙ бында күкте оҙаҡ төтәтербеҙме икән?»

— Фюрер, Будапештты бер ҡасан да рустарға бирмәйәсәкмен, тип ант иткән.

«Бер ҡасан да... Хәҙер алла беҙҙең менән түгел шул инде *, алла рустар менән», — тип яуапланы ғыжылдауыҡ. Әлфиә хатта уның әсе йылмайған йөҙөн күргәндәй булды. «Ҡасан бөтөр икән был ҡәһәрле һуғыш?..»

Ғыжылдауыҡтың мыҫҡыллы яуабы ишетелде:

«Беҙ бөткәс, бөтөр әле...» Ошо һүҙҙәрҙән һуң Әлфиәнең бәрелгән аяғына ниндәйҙер ҡаты нәмә килеп төштө. Ул «ай!» тип ҡыҫҡырып та алды, буғай. Немецтар һикереп торҙолар, һағайҙылар.

«Берәй нәмә ишеттеңме?»

«Юҡ. Ә һин?»

«Ә мин ишеткәндәй булдым».

Ғыжылдауыҡ:

«Һинең төшөңдә лә, өнөңдә лә гел рустар ғына. Киттек. Өшөтә башланы», — тине. Немецтар блиндаждарына йүнәлделәр. Ғыжылдауыҡ (Әлфиә икәүҙең ҡайһыһы астма сире менән сирләгәнде билдәләгәйне инде — оҙоно, көмрө арҡалыһы) туҡтап артына боролдо ла кеҫә фонары менән тирә-яҡты байҡап сыҡты. Фонарҙың зәғиф уты улар баш осонан үтеп китте — рәхмәт бетон нигеҙгә, ул разведчиктарҙы ҡотҡарып алып ҡалды. Немецтар, шикләнерлек бер нәмә лә күрмәй, өңдәренә төшөп киттеләр. Әлфиә ун туғыҙ йыл ғүмерендә, ихтимал, тәү тапҡыр үлемдең һалҡын һулышын тойғандыр.

---

* Немец һалдаттарының ҡайыш бляхаһына, «готт мит унс» — «алла беҙҙең менән», тип яҙылғайны.

Бер аҙҙан улар ҡайтыр юлға ыңғайланылар.

Ҡапитан күперҙең был яғында: юлдың һулында ла, уңында ла дзоттар барлығын үҙ күҙҙәре менән күрһә лә, күперҙең шартлатыуға әҙер булыу-булмауын белә алманы. Ә был бит уға тапшырылған төп бурыс. Күперҙең һаҡланыуы, тегеләй-былай ғына түгел, нык һаҡланыуы, уны шикләндермәй ине, ә бына ниндәй ысул менән шартлатырға әҙерләнгән ул? Нисек уны емерелеүҙән һаҡлап алып ҡалырға? Ана шул уйҙар капитанды юл буйы борсоп килде. Дөрөҫ, һуғышта тиҙ генә сисә алмаған икс-игректар күп була, ләкин капитан разведканан да, үҙенән дә бөгөн ҡәнәғәт түгел ине. Бәлки, уға сапер менән Байсәйетовты ғына кире ебәрергә лә Ванюшинды үҙҙәре менән алырға кәрәк булғандыр? Ул сағында улар, һис шикһеҙ, «тел» менән ҡайтҡан булалар ине. Ниңә уның ротаһына был себенһте төртөп тыҡтылар икән? Әлфиә арҡаһында улар саҡ-саҡ харап булманылар...

Әлфиә, капитандан арттараҡ йыбырлап килһә лә, уның уйҙарын аңлап бара ине. Улар, хәтәр араны үтеп, пуля алдыра алмаҫлыҡ зонаға кергәс (хәрби телдә уны, «мертвое пространство», тиҙәр), Әлфиә командирын ҡыуып етте лә ғәфү үтенгән тауыш менән һораны:

— Һеҙ миңә асыуланаһығыҙмы, иптәш капитан?

— Ни өсөн?

— Һуң мин бит... фриц таш ырғытҡас, — Әлфиә капитан әрләр, киҫәтер, тип түгел, уның ҡылығын аҡлар, уны йыуатыр, тип шөрләне. Үҙен йыуатҡанды, иркәләгәнде ене һөймәй уның. Әрләһәләр әрләһендәр, әммә иркәләмәһендәр. — Разведкаға ярамайым мин, иптәш капитан, йомшаҡмын.

Ҡапитан уның менән килеште.

— Эйе, разведка — ирҙәр эше. Уға көслө кешеләр кәрәк. Йөрәктәре менән генә түгел, беләктәре менән дә.

— Улайһа, ниңә мине разведкаға алдығыҙ? Мин рация кәрәк булыр, тип уйлағайным, ә бында... аяҡ-ҡулдарымды ойотоп тик яттым.

— Уның өсөн иде һин начальствонан һораш, Ҡамалова, — тине рота командиры ҡоро ғына. Һөйләшергә уның әллә ни дәрте юҡ ине. Әлфиәнең иһә башлаған һүҙен туҡтатҡыһы килмәне. Былай ҙа улар көнө буйы, кис буйы телдәрен тешләп яттылар. Ә ул һөйләшергә ярата. Әклимә уның менән берәй ярты сәғәт ултырһа, һинең менән осраш һам, эстәрем бушап ҡала, ти торғайны.

— Иптәш капитан!

— Шунан?

— Ә ниңә һеҙ иртәнсәк НП *-ны һалам сүмәләһе янында түгел, ә урғыс машина артында һайланығыҙ?

— Ә һиненсә ни өсөн? — Был юлы уның тауышы йомшағыраҡ сыҡты.

— Бәлки... сүмәлә янынан тирә-яҡ насар күренгәнгәлер... — тине Әлфиә, яуабының дөрөҫлөгөнә үҙе лә ышанмай.

— Дөрөҫ әйтмәнең. Немецтар ҙа ахмаҡ түгел. Сүмәләне улар, моғайын, күптән ориентир итеп тоталыр. Әгәр улар сүмәлә янында шикле хәрәкәт күреп ҡалһалар, пулеметтан яндыра торған пулялар менән бер генә очередь бирәсәктәр. Ул сағында сүмәләнән көл генә тороп ҡаласаҡ. Ә беҙҙән?..

— Бер ҡасан да башыма килмәҫ ине, — тине Әлфиә ихлас.

— Деталь, пустәк, ә бик мөһим пустәк.

— Эйе... Радистар мәктәбендә лә, һуғышта пустәк нәмә булмай, тип өйрәтә торғайнылар.

— Шул, шул. Ҡайһы сағында ана шул «пустәккә» иғтибар итмәү башты ла харап итә.

— Йәнә бер һорау, иптәш капитан, тик, зинһар, көлмәгеҙ, йәме? — Хәҙер инде Әлфиә командиры менән һөйләшкән шикелле түгел, ә ике иптәш гәпләшкән кеүек һөйләшә башланы.

— Йә, йә.

— Немецтар беҙҙең өҫкә килә ятҡанда, һеҙ нимә уйланығыҙ?

— Нимә?.. Валлаһи, оноттом инде.

— Шаяртмағыҙсы.

Ошо минутта беҙҙең «боевой охранение» уларҙы туҡтатты.

— Туҡта! Кем килә?

— Үҙебеҙҙекеләр.

— Пароль?

— Танымаһыңмы ни, Сафронов. Мин бит, капитан...

— Таныуын таныным. Аяҡ баҫыуығыҙҙан уҡ. Тәртип шулай бит. Үтегеҙ. — Әлфиә Сафроновтан Виктор Ванюшин тураһында һорашмаҡсы булғайны, капитан ашыҡты — уларға был урындан тиҙерәк үтеп китергә кәрәк. Инде беҙҙең окоптар рәтен үтеп китеп, тылға кергәс, капитан уға бойорҙо: «Бар, подвалга ҡайт. Мин штабтан урап киләм». Ҡапыл Әлфиә уның һалдат көрәге кеүек яҫы усынан тотоп алды.

— Иптәш капитан... — Бер секунд һуҙылған пауза. — Мин үлемдән ҡурҡмайым. Тамсы ла. Мин теге ваҡытта

* *НП* — наблюдательный пункт, күҙәтеү урыны.

ҡысҡырып ебәргәнемдә үҙем дә һиҙмәй ҡалдым. Ауыртыуҙан бигерәк көтөлмәгән хәлдән...

— Ә аяғың ауыртмаймы? — Ҡапитандың тауышында асыу ҙа, үпкә лә юҡ ине.

— Тамсы ла ауыртмай, — тип алдашты Әлфиә.

Ҡапитан уның ни әйтәһен ярты һүҙҙән үк аңлағайны. Тегендә, штабта, Ҡамалова «сирҡансыҡ» алыуҙы иисек үтте, тип һорашһалар, ул, ҡыҙыҡай разведкаға ярамай, тип әйтмәһен.

Ардыуанов бик һаҡ, сабый бала ҡулын ҡыҫҡан шикелле, уның усын ҡыҫты ла дуҫтарса киҫәтте.

— Ә үлемдән ҡурҡырға кәрәк, Ҡамалова.

— Ванюшин ҡурҡмай ҙа.

— Ул да ҡурҡа, тик үлем хаҡында уйламай. Һин дә һуғышҡа кергәндә үлем тураһында уйлама, — ул усын асып, Әлфиәнең ҡулын ебәрҙе лә китеп барҙы.

Әлфиә яңғыҙ тороп ҡалды. Болоттар аҫтынан кәмеп барыусы ай күренде. Ул һағышлы, моңһоу ине. Бәлки, Әлфиә һымаҡ япа-яңғыҙ булғанғалыр. Күп тә үтмәй, уның янында бер нисә шаян йондоҙ күренде. Был командирҙы һаҡлап йөрөүсе һалдаттарҙы хәтерләтте.

Әлфиәнең подвалға ҡайтҡыһы килмәне. Ул алан-йолан ҡаранды ла ҡоймаһы емерелгән ишек алдында ҡоластарын сатлы-ботло йәйгән сатырлы ағас аҫтындағы бер аяғы салышайған беседкаға барып ултырҙы. Ҡайҙандыр төтөн һәм тары бутҡаһының еҫе килә. Моғайын, яҡында ғына полевой кухня урынлашҡандыр. Үлтереп ашағы килә башланы. Арҡаһынан тоҡон алып, унан икмәк, сало тартып сығарҙы ла тәмләп ашарға тотонды. Ашыҡмай ғына сәйнәй һәм үҙ-үҙенә анализ яһай. Әле алғы һыҙыҡта күргән күренештәр уға таныш һәм, әйтергә яраһа, ғәҙәти ине. Өфөлә кино ҡарағанда тойған, китап уҡығанда кисергән бер төрлө романтика ла юҡ ине бында. Шулай уҡ бөтә һуғыш та ғәҙәти, күңелһеҙ бер эшме икән ни? Окоп ҡаҙырға. Разведкаға йөрөргә. Ашарға. Йоҡларға... Һуң был бит эс бошорғос бер төрлөлөк... Ул хатта сәйнәүен онотто. Уның иркенән тыш башында иҫәр уй хасил булды. «Ни өсөн шул саҡлы фронтҡа ашҡындым? Хәҙер институтта уҡыр, лекцияларға йөрөр инем. Буш ваҡытта киноға, театрға барыр инем...» — тип уйлап бөтөрөргә өлгөрмәне, үҙ уйҙарынан үҙе өркөп китте. Тиҙ генә икмәген, салоһын тоҡона һалып, уны бәйләне лә һикереп торҙо. Тирә-яғына ҡаранып алды, әйтерһең, кемдер уның уйҙарын тыңлап тора ине. Айға ла күҙ ташланы — ул ашыҡмай ғына аҡһыл болоттар аҫтына кереп бара ине. Ай артынан уның һаҡсылары ла тотам ҡалмай. Ҡапыл Әлфиә, халыҡ йырын хәтерләп, йылмайып ҡуйҙы: «Бик һағын-

һаң, айға ҡара, ай ҙа яңғыҙ минең күк...» Болоттар айҙы бөтөнләй йәшерҙе. Ай артынан уҡ шаян һаҡсылар ҙа юғалды. Ләкин Әлфиә күктән күҙен алманы. Ихтимал, ошо минутта Әшрәф тә уны, Өфөнө, Ағиҙелдең текә ярҙарын иҫенә төшөрөп, Айға ҡарап торалыр... Был уйҙарҙан уға рәхәт булып китте, хатта Әшрәфтең яратҡан йырын йырламаҡ итте. «Ағиҙелгә ағын төшә Топорнидың йылғаһы...»

Әлфиә ротаһы урынлашҡан йортҡа ҡарай атланы. Ә Әшрәфтең йыры дауам итте: «Йәшәһен Совет власы, рәхәт уның донъяһы...» Әлфиә ҡапыл туҡтап ҡалды. «Ҡыҙыҡ. Уны нисек ҡаршылар ҙар икән?» Йәнә кәмеп барыусы моңһоу ай күренде. (Ә ниңә Ай гел моңһоу, гел һағышлы тойола икән? Йәнһеҙ бер нәмә бит инде...) Ай яҡтыһында ул үҙенә ҡаршы килеүсе Викторҙы күреп ҡалды.

— Әлфиә! — тине ул, шатланып-тулҡынланып.

— Виктор! — Әлфиә уға табан йүгерҙе.

— Ә капитан... ҡайҙа? — Викторҙың тауышы хәүефле сыҡты.

— Штабҡа китте. Ә һеҙ иҫән-һаумы? Фрицтарҙы ҡыуып еттегеҙме?

— Береһе фью! — Виктор һыҙғырып алды. — Валгаллаға * фәрештәләр янына осто. Яңылыш минаға баҫҡан. Ә ҡалғандарын штабҡа илтеп тапшырҙыҡ.

— Ә мин шартлау ишеткәс, ҡурҡтым, — тине Әлфиә ысын күңелдән. Виктор әллә ни уйламаһын өсөн аҙаҡ өҫтәп ҡуйҙы. — Мин генә түгел, капитан да һағайып ҡуйҙы.

— Ә мин күлдәктә тыуғанмын, Альфа (Наташаның Әлфи, Викторҙың Альфа тип өндәшеүе, ниңәлер, уға Әлфиә тигәнгә ҡарағанда ла ныҒыраҡ оҡшай ине). — Виктор уның автоматын тотто. — Бир пушканды, арығанһыңдыр, ҡыҙҙар өсөн еңел әйбер түгел. — Әлфиә автоматын муйынынан һала башлағайны, кире уйланы. Уның автоматын Виктор күтәреп ҡайтһа, разведчиктар ни әйтер?

— Ярай, үҙем генә, — тине ул, яғымлы итеп. — Автомат йөрөтөрлөк кенә хәлем бар әле.

Улар, гулянкаға сыҡҡан кешеләр кеүек, йәнәш, ашыҡмай ғына атланылар... Аҙыраҡ һүҙһеҙ барҙылар.

— Йә, нисек? — тине Виктор, уратыбыраҡ.

— Нимә «нисек»?

— Билдәле, разведка. Оҡшанымы?

— Әй, ниндәй разведка ул, — тип ҡул ғына һелтәне Әлфиә. — Көнө буйы ҡыймылдарға ҡурҡып күҙәтеп тик ятаһың. Хатта күҙ тала, аяҡ-ҡул ойой. Әгәр инде «тел» алырға барһаң йәки дошман тылына китһәң.

---

* *Валгалла* — һуғышта үлгән һалдаттарҙың «ожмахы».

— «Тел» алырға барыу ҙа әллә ни түгел инде, Альфа. Күҙәтеп ятаһың да, уңайлы ваҡыт табып, янғыҙ фрицты эләктереп алып, ауыҙына сепрәк тығаһың, ҡулдарын артҡа шаҡарып бәйләйһең. Йә, бының ни ҡыҙығы бар инде? Ғөмүмән, һуғыш күңелһеҙ эш ул. Ҡан, үлем... — тип иҡрар итте Виктор.

Ә Әлфиә уның хаҡында бөтөнләй башҡа уй-фекерҙә ине. Күрәһең, һуғыш киноларҙа ла китаптарҙа ғына «ҡыҙыҡ» тойолалыр...

Әлфиәне бөтәһенән бигерәк шат, хуш күңел менән старшина Иван Федорович ҡаршы алды.

— Иҫән-һау... һай ҙа молодец беҙҙең Алечка! Эҫе бутҡа ашайһыңмы? Әле генә кухнянан алып ҡайттыҡ.

— Йоҡлағым килә, — тине Әлфиә, әле генә арығанлығын тойоп, автоматын ырғаҡҡа аҫып.

— Ҡайнар сәй эс, исмаһам, йылынырһың.

— Сәй эсергә мөмкин, — тине Әлфиә, арҡаһынан тоғон һалып, шинелен сисә-сисә.

Старшина тәүҙәрәк, разведчиктар заданиеға киткәс, улар иҫән-имен урап ҡайтҡансы бойоғоп йөрөй торғайны, тора-бара күнекте, разведкаға барыу күрше ауылға йомошҡа барып ҡайтыу кеүек тойола башланы. Ә бына тәү тапҡыр Әлфиә заданиеға киткәс, старшинаны йәнә хәүефләнеү, борсолоу тойғоһо баҫҡайны...

## «ҺЫНАУҘЫ ҮТТЕҢ, ӘЛФИӘ...»

Әлфиә йоҡоһонан уянып, күҙҙәрен асҡанда, һөймәлекле Иван Федорович уның баш осонда ултыра ине. Старшинаның ҡулында котелок, ә котелоктан шундай тәмле аш еҫе килә, Әлфиә тамшанып ҡуйҙы. Өнөммө, төшөммө, тип күҙҙәрен йомоп асты.

— Хәйерле кис, ҡыҙым, — тине Иван Федорович, котелок тотоп ултырып ҡыҙа төшкән усы менән уның йомшаҡ сәсенән һыйпап. — Ниндәй төштәр күрҙең?

— Кис?.. — Әлфиә һикереп торҙо һәм, үҙенең эске күлдәктән генә икәнлеген иҫләп, шунда уҡ ятты ла әйәгенәсә ҡалын, йылы мамыҡ юрғанды тартты.

— Эйе, кис булып килә инде, Әлфиә, — старшинаның тауышы яғымлы, хатта иркә сыҡты.—Һин бер ятҡан яғыңда... — ул, кеҫә сәғәтенән ҡул сәғәтенә әйләндерелгән «будильнигына» күҙ һалды. — Теп-теүәл... ун алты сәғәт йоҡланың.

— Ун алты? — Әлфиәнең күҙҙәре маңлайына менгәндәй булды. Ғүмерендә уның шул саҡлы йоҡлағаны юҡ ине. — Иван Федорович, ситкә боролор инегеҙ. — Ул башы-

нан йоҡлағанда бәйләп ята торған косынкаһын систе, сәсен артҡы яҡтан төҙәткеләне, бер усмаға йыйып, ҡара резинка ҡоршау эсенә тығып ҡуйҙы. (Ә сәс Әклимә ҡырҡҡандан һуң шаҡтай оҙонайғайны. Хәҙер инде Әлфиә уны бер ҡасан да киҫтермәйәсәк.) Гимнастеркаһын кейҙе, өҙөрҙәй итеп офицерҙар ҡайышы менән билен быуҙы. Ул үҙе кейендс, үҙе, ҡарсыҡтар һымаҡ, асыуһыҙ ғына һуҡранды.

— Йоҡо сүлмәге. Өйҙә мине Сафуан ағайым да, ну йоҡоно «бешергә» яратаһың, шуға күрә әллә үҫмәйһең, тип көлә торғайны. Башҡалар менән бергә мине лә уятырға кәрәк ине, Иван Федорович. Былай бит килешмәй. Оят.

— Разведканан һуң ял бирелә. Һиңә генә түгел, башҡаларға ла, — старшина торҙо, үҙе ултырған патрондар йәшнигенә котелогын ҡуйҙы. — Йыуын да эҫе ваҡытта борщ аша. Һин бит разведканан ҡайтҡас, сәй менән эсәктәреңде генә йыуҙың. Режимды өйҙә генә түгел, фронтта ла һаҡларға тырышырға кәрәк. Ҡорһаҡ һинең ҡайҙа икәнлегеңде тикшереп тормай, «даешь кушать» ти. — Старшина өгөтләүҙән эшлекле тонға күсте. — Йылы һыу эмаль биҙрәлә. Виктор һин йоҡонан тороуға йылытып, фуфайкаһы менән төрөп ҡуйҙы. — Иван Федорович Әлфиә «бүлмәһенән» сығып китте.

Әлфиә, разведкаға барғандағы шикелле, галифе кеймәксе булғайны (галифеның уға килешеүен, галифе кейгәс, ирҙәрҙең уга ымһынып ҡарауҙарын белә), кире уйланы. Зәңгәр диагональ юбкаһын аҫтан кейгәс (ул башҡа ҡатынҡыҙҙар кеүек юбканы башы аша түгел, аяҡтары аша кейергә, һалырға ярата), Әлфиә плащ-палатканан яһалған шаршауҙы икегә айырып, «кают-компаниянан» (Виктор ҡушҡан исем) сыҡты. Подвалда өс-дүрт һалдат ҡына ине. Әлфиә һүҙһеҙ генә уларға «хәйерле кис» тигәнде аңлатып, эйәк ҡаҡты ла Виктор әҙерләп ҡуйған биҙрәгә бармағын тейҙереп ҡараны, ҡашын йыйырып, һалҡын биҙрәне алып сығып китте. Разведчиктар Викторға мәғәнәле итеп ҡараныл ар ҙа, ауыҙҙарын устары менән ҡаплап, пырх иттеләр. Ләкин Ванюшиндың йөҙөндә бер тамыры ла һелкенмәне — нисауа, тамсы таш тишә, ти.

Әлфиә һуған, ҡыҙыл борос һалып усҡа майына бешерелгән ҡара бойҙай буткаһын ауыҙын өттөрә-өттөрә ашағанда, уның янына капитан килеп ултырҙы.

— Һалдат буткаһы оҡшаймы? — тине ул, Әлфиәнең ауыҙын асып өрә-өрә ашағанын күреп.

— Боросто йәлләмәгәндәр. Ауыҙ ут кеүек яна.

— Беҙҙә картуф ни саҡлы булһа, мадьярҙарҙа ҡыҙыл борос шул тиклем. Юҡ хаҡҡа ғына һаталар. Ә повар үзбәк

малайы, үзбәктәр боросло, үткер аш яраталар, — тине капитан, аҡланғандай.

Әлфиә бер нисә ҡалаҡ бутҡа ҡапҡандан һуң, алюмин көрөшкәгә һалынған сәйен йотоп алды ла котелок ҡапҡаһын этәрә ҡуйҙы.

— Етте, башҡа бер ҡалаҡ та үтмәй. Йә шартлап ҡуйырмын.

— Ашап бөтөр. Һәр ваҡыт һиңә Ташмөхәмәдовтың бутҡаһын ашарға тура килмәç, — тине капитан, серле итеп. Әлфиә ниҙер һиҙенде.

— Ә ниңә тура килмәç. Ташмөхәмәдовты башҡа ергә күсерәләрме ни?

— Һинең менән мине дивизия штабына саҡыралар, — тине капитан, ул ғына иштерлек итеп.

Әлфиә, ҡорт саҡҡан шикелле, һикереп торҙо.

— Шулаймы? Ниңә уны башта уҡ әйтмәнегеҙ, иптәш капитан? — Ул өйҙән алып килгән ситтәре селтәрләнгән батист ҡулъяулыҡ менән ауыҙ-моронон һөртөп алды. Ҡайышын сисеп, горчица төçөндәге йоҡа, ҡупшы шинелен кейҙе. «Берет кейергәме, бүрекме?» — тип бер нисә секунд уйланып торҙо ла берет кейергә булды. Дөрөç, уға бигерәк тә ҡырын һалып кейелгән пилотка айырыуса килешә ине. Әлфиә быны үҙе лә белә, радистар мәктәбендә уҡығанда, ҡыҙҙар ҙа әйтә торғайны. Ләкин хәҙер «килешә-килешмәй»ҙе тикшереп тора торған саҡ түгел — ни нәмә уңайлы, шуны кейергә кәрәк. Кейенеп бөткәс, ҡайһылыр еренән алып, ат күҙендәй түңәрәк көҙгөгә күҙ ташланы ла: «Мин әҙер, иптәш капитан!» — тип честь бирҙе.

Ә капитан ошо ҡыçҡа ғына ваҡыт эсендә уны күҙәтеп ултырҙы. Быға саҡлы ла, һирәк-мирәк булһа ла, уға һынап күңел күҙе менән ҡараштыра торғайны, ләкин һалдаттар (һалдаттарҙан да бигерәк Әлфиә үҙе) әллә ни уйлар тип, был ҡараш гел «юл өçтөндә» генә булды. Ә хәҙер уға иғтибар итеүсе юҡ, Әлфиә лә үҙ эше менән мәшғүл, теләгәнсә ҡарарға, күҙәтергә мөмкин.

Беренсе сағыштырыу — Әлфиә бер генә минут та тик тормауһы шаян көҙә бәрәсе кеүек теремек ҡыҙ ине. Ә күҙҙәре... Күҙҙәрен бына башҡа нәмә, башҡа күҙҙәр менән сағыштырырға мөмкин түгел. Бәлки, бер нисә миллиард кешенең һәр береһе үҙенсә булыуы күҙҙәрҙән башланалыр ҙа. Ике бер төрлө (төçкә бер төçлө булһа ла) күҙ юҡ бит ул. Әлфиәнең күҙҙәре, бер ҡарағанда, яңы уйынсыҡ күргән баланыҡы кеүек, тоҡанып китә, икенсе ҡарағанда, өтөп алыусы ҡара осҡондарға әйләнә. Йә улар, сикһеҙ яуаплы

эш башҡарған кешенеке һымаҡ, үтә етди, йә киске уйында бейеүсе шаян ҡыҙҙыҡы кеүек дәртле, хатта ҡылансыҡ. Күрәһең, Әлфиә әле бер ҡасан да юғалтыу ҡайғыларын кисермәгәндер, кешеләрҙең әшәкелегенән күңеле төңөлмәгәндер, мөхәббәт ғазаптарында янмағандыр. Уның күҙәрендә, яҡты донъяға килгәс, әсәһенә тәү тапҡыр баҡҡан бала сафлығы, донъяны сикһеҙ күп белергә тырышыу дәрте һәм һоҡланыу тойғоһо бар ине. Һоҡланыу... Кемдер әйткән: «Әгәр кеше донъяға һоҡланмай башлаһа, уның тормошо ҡороған ағасты хәтерләтә».

Иршаттың атаһы һәр йыл яҙ, ер ҡарҙан әрселгәс, әйтеп бөтөрә алмаҫлыҡ шатлыҡ менән генә түгел, ә ниндәйҙер болоҡһоу менән парланып торған тупраҡты усына алып, ләззәтләнеп еҫкәр ҙә: «Икмәк еҫе килә! Быйыл мул уңыш аласаҡбыҙ, алла бирһә», — тип ҡысҡырыр, ә игендең морон төртөп сыҡҡан сағын күрһә, бала-саға шикелле һикергеләр ине. Ә өлгөргән арыш шаулап ултырғанда? Бер яҡтан икенсе яҡҡа һелкенеп, ҡысҡырып йырлап ебәрә торғайны. Былай ҡарағанда ниңә уға болоғорға, шатланырға? Ул бит ғүмере буйы ер һөргән, сәскән, урған, һуҡҡан... Бөтәһе лә күптән таныш, ғәҙәтигә әйләнгән икенсе эше. Юҡ, ул бер ҡасан да һоҡланып туйманы: умарта ҡорттарының иҫ киткес оҫта итеп эшләнгән кәрәҙҙәргә бал йыйыуына ла.. Ҡарлуғастарҙың оя яһауына ла, ҡырмыҫҡаларҙың «Египет пирамидаларына» ла... Тоҡҡа һалып, «ер ситенә» олаҡтырылған бесәйҙең, тауҙар, урмандар кисеп, ҡабат әйләнеп ҡайтыуына ла... ҡоштарҙың аҙашмай йылы яҡтан килеүенә лә... алыҫ Ҡош юлдарына ла... Бәлки, шуғалалыр уның атаһы бер ҡасан да, иң ауыр, күңелһеҙ минуттарҙа ла бойоҡманы, донъяға асыуланып ҡараманы. Атаһының донъяға һоҡланып, хайран ҡалып ҡарауы Иршатҡа ла күсте. Бына өс йыл инде уның өйө — окоп, ҡулында һалҡын металл — автомат, күргәне — төтөн, күҙ йәше һәм ҡан, ишеткәне — мина-снарядтарҙың йөрәкте ярғыларлыҡ һыҙғырыуы ла гөрһөлдәп ярылыуы, ә йөрәк һаман, элеккесә, хисле, күҙҙәр һаман донъяға һоҡланып, ғәжәпләнеп ҡарай. Ошо көндәрҙә ул өҙөлөп төшмәй тороп ҡалған һары, һоро, ҡыҙғылт, сейә көрән, ҡыҙғылт һары ағас япраҡтарын йыйып, букет яһаны. Күңелде һағышландырыусы был букетҡа оҙаҡ ҡына ҡарап торғандан һуң, Иршат, үҙе лә аңламаҫтан, уны ергә һипте. Күрәһең, һалдаттарынан тартынғандыр. «Ә беҙҙең рота командиры бер ҡасан да, бер ситуацияла ла юғалып, ҡаушап ҡалмаһа ла, ҡыҙҙар кеүек, нескә күңелле икән» тип әйтеүҙәре бар. «Ҡыҙыҡ, кемде нығыраҡ яраталар икән: тотош ҡая таш кеүек китек-ҡотоҡһоҙ кешенеме, әллә, кәмселектәре булһа ла, йомшаҡ күңелле кешенеме?»

— Мин әҙер, иптәш капитан! — тип Әлфиә йәнә бармаҡ остарын сикәһенә тейҙереп алды. Капитан был юлы ла уны ишетмәне. Юҡ, тауышын ишетте, һүҙҙәренең мәғәнәһенә төшөнмәне. Әлфиә капитанға текләп ҡарап торҙо. Уның күҙҙәре, киске күл шикелле, тәрән һәм серле ине. Әлфиәнең йөрәген ярып ток үтте. «Был һонтор ҙа шулай моңая беләме икән ни?» Шунда уҡ ул үҙен битәрләп алды. «Ә ниңә, ул йәнһеҙ хайуанмы ни!»

Әлфиә өсөнсө тапҡыр, был юлы бышылдап: «Мин әҙер, иптәш капитан», — тине.

Ардыуанов башын ҡалҡытты. Оялып, ғәфү үтенгәндәй, йылмайҙы ла бик етеҙ торҙо. Була шундай ҡараштар — ҡапыл кешенең донъяһын аҫтын өҫкә килтерә, һәм ғүмергә йөрәк төбөндә һаҡланып ҡала. Был юлы ла ана шулай булды. Нисәмә тапҡыр Ағиҙелдең боҙҙары бер-береһен ярҙан этәреп сығарырға тырышып ағырҙар, ваҡыт ҡырау булып Әлфиәнең сикә сәстәренә төшөр, ә бына Ардыуанов Иршаттың был серле ҡарашы, һағышлы йылмайыуы тағы уның донъяһын аҫтын өҫкә килтерер, бығаса таныш булмаған хистең — мөхәббәт тойғоһоноң ҡасан тыуыуы тураһында һөйләр.

Штабҡа барғанда Әлфиәнең ауыҙы ябылманы. Йөрәге һиҙенә — уны яңы, мөһим задание көтә, шуға күрә кәйеф тә, Виктор Ванюшин әйткәндәй, «норманан артығыраҡ». Ә бәлки, капитандың серле ҡарашы, һағышлы йылмайыуы уға тел аҫҡысы биргәндер? Хәйер, ҡайһы сағында үҙең дә кәйефеңдең ҡапыл «һикереп» киткәнен йәки «ҡолап» төшкәнен аңламайһың бит.

— Иптәш капитан, — ти ул һоҡланып. — Һеҙ бик көслө кешелер, эйе бит?

— Ниндәй яҡтан? — ти капитан ғәмһеҙ генә.

— Бөтә яҡтан да.

— Ундай кешеләр буламы икән?

Һүҙ өҙөлә. Һүҙһеҙ генә атлайҙар. Әлфиә капитан артынан саҡ-саҡ өлгөрә. Юрғалап бара. Йәнә көтөлмәгән һорау бирә:

— Иптәш капитан, һеҙ беләһегеҙме, миңә кемде хәтерләтәһегеҙ?

— Кемде?

— Әшрәфте.

Капитан аҙымдарын аҡрынайта.

— Ә кем әле Әшрәф? Туғаныңмы, әллә...

Әлфиә түҙемһеҙләнеп уны бүлә:

— Беҙҙең урамда... беҙгә ҡаршы ғына йәшәй... Йәшәй ине... Хәҙер ул да фронтта.

— Ә-ә...

Нимәне аңлатты был «ә-ә...», Әлфиә төшөнә алманы.

— Ул, беләһегеҙме, иптәш капитан, һеҙҙең кеүек... дөрөҫөрәге, һеҙ унын кеүек... Юк, дөрөҫ әйтмәнем. Һеҙ былай ҡарағанда бөтөнләй бер-берегеҙгә оҡшамағанһығыҙ. Ә бына йөрәктәрегеҙ... йөрәктәрегеҙ, тип... характерҙарығыҙ бер-береһенә оҡшаған...

Капитан туҡталды. Әлфиәгә үтәнән-үтә ҡарап торҙо.

— Ә һин минең йөрәгемде... ну, һинеңсә булһын ти, характерымды ҡайҙан беләһең?

— Беләм инде, — тине Әлфиә хәтәр генә.

— Кешене ныҡлап белер өсөн бер тоҡ тоҙ ашарға кәрәк, тиҙәр урыҫтар.

— Ә ҡайһы саҡта бер сәғәт тә, бер бәрелеш тә етә, — тип Әлфиә командирына ҡаршы төштө.

Капитан еңел килеште.

— Уныһы ла дөрөҫ.

Уларҙы часовой туҡтатты.

Штабта капитан оҙон, зифа кәүҙәле майорға килеүҙәре тураһында әйтергә өлгөрмәне, телефондарының береһе зыңғырланы.

Майор трубканы алып, кнопкага баҫты.

— Ун алтынсы тыңлай!

Әлфиә был оҙон, ҡаҡса майорҙың фамилияһын да, вазифаһын да белмәй ине, армияла бер йыл хеҙмәт итеү практикаһы һәм интуиция өйрәтеп тора: майор запастан килгән офицер түгел. Ул һәр һүҙен ҡабатламаҫлыҡ итеп, асыҡ һәм өҙөп әйтә. Хәрәкәттәре иҫәпләнелгән һәм етеҙ. Күкрәгендә, уң яҡта, гвардия знагы, һул яҡта — төрлө төҫтәге орден колодкалары. Ике рәт. Ниндәй орден-миҙалдар кавалерылыр ул, Әлфиә әйтә алмай, сөнки орден-миҙал таҫмаларын әле һаман айыра алмай. Майорҙың асыҡ зәңгәр күҙҙәре бер аҙ шикләнеп ҡарай. Майор, күп тигәндә, бер-ике йәшкә генә Ардыуановтан өлкәнерәктер. Күренеп тора, ул тышҡы ҡиәфәтенең ҡәҙерен белә.

Әлфиә боролмай ғына бүлмәне күҙҙәре менән байҡап сыҡты һәм алыҫ мөйөштә, ҡараңғыла ултырған кешене күрҙе. Был штатский кейем кейгән оло йәштәрҙәге кеше ине. Байтаҡтан ҡырынмаған, эскә кереп торған яңаҡтарын йөн баҫҡан. Мыйыҡтары, башҡорт крәстиәндәренеке шикелле, дуғалай һалынып тора. Күҙҙәре уйсан, эскә батҡан. Киң маңлайын тәрән йыйырсыҡтар — йәшәлгән йылдарҙың, кисерелгән ауырлыҡтарҙың эҙҙәре йырғыслаған, бик ныҡ һирәкләнгән сәсе агара башлаған. Был таныш булмаған кеше ҡайһы ере менәндер уның атаһын хәтерләтте. Юҡ, былай ҡарағанда бер төрлө лә оҡшашлыҡ күренмәй, ләкин тотоп ала алмаҫлыҡ ниндәйҙер һыҙаттар Әлфиәне әллә ни

эшләтте. Әйткәндәй, Әлфиәнең, ҡыҙыҡ, тиһәң ҡыҙыҡ бер гәҙәте бар — ул таныш булмаған кешеләрҙән һәр саҡ таныш һыҙаттар, штрихтар эҙләй. Был, ихтимал, һәр бер кешене яҡын итергә, дуҫ күрергә тырышыу ғәләмәтелер. Әгәр шулай булһа, был иң ҙур маҡтауға лайыҡлы сифат бит: һәр кеше йөҙөндә дуҫ табырға ынтылыу. Бына бөгөн ул капитан Ардыуановтан Әшрәфкә хас һыҙаттар эҙләп табырға тырышты, ә анауы сит мадьярҙы (ә ул «дуға мыйыҡ»тың мадьяр икәнлегенә тамсы ла шиге юҡ) атаһына оҡшатырға самалай.

Арыған йөҙлө, һынаусан күҙле оҙон майор, баш бармаҡтарын йәйеп, устарын өҫтәлгә ҡуйҙы ла ҡулдарына ҡарап алды: тейешле урынға ҡуйылдымы икән?

— Шулай итеп, бер мәшһүр яҙыусы әйткәндәй, геройҙар һауаһын һуланыҡмы, Ҡамалова? — тине ул, ауыҙ ситтәре менән генә йылмайып.

Әлфиә, әнә менән сәнскәндәй, һикереп торҙо.

— Так точно, һуланым, иптәш гвардия майоры.

Майор театрҙағы һымаҡ бик матур хәрәкәт яһаны — уң ҡулын күтәрә төшөп, ишараланы:

— Ултырығыҙ. Ә һеҙ минең яҡташ икәнһегеҙ, Ҡамалова.

Әлфиәнең бала саҡтан уҡ оло йәштәгеләр, өлкәндәр менән һөйләшкәндә баҫып һөйләшеү ҡанына һеңгәйне. Тегендә, өйҙә был әҙәплелек, яҡшы тәрбиә билдәһе булһа, бында, армияла — закон. Шуға күрә ул рядовой башы менән майорға ултырған килеш һорау бирергә баҙнат итмәне — һикереп торҙо ла күҙҙәрен яндырып һораны:

— Һеҙ ҙә Өфөнәнме ни, иптәш гвардия майоры?

— Юҡ, мин Ҡуйбышевтан. Самарский, — һәм эшлекле тауыш менән һөйләп алып китте. — Капитан Ардыуанов «обкатка» һәйбәт үтте, Ҡамаловаға ышанырға мөмкин, тине. Шулаймы?

Капитан Әлфиәгә ҡарап алды. Күҙ төптәрендә генә күренер-күренмәҫлек һөйкөмлө йыйырсыҡтар хасил булды.

— Эйе, уның менән ат урлап була, — тине капитан. Майор ҙа йылмайҙы, тағы ла матурая төштө.

— Ат урлап?

— Эйе, — тип раҫланы һүҙҙәрен капитан. — Элек иң ышаныслы кешегә бер һүҙ менән генә характеристика бирергә тура килһә, «уның менән ат урлап була», тигәндәр. Ә хәҙер, фронтта беҙ, «уның менән разведкаға барып була», тибеҙ.

Әлфиә шатлығынан ҡыҙарҙы, мөлдөрәп капитанға ҡарап алды. Капитан, бәхеткә ҡаршы (бәлки, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршылыр), быны иҫләмәне. «Тимәк, ул йә Әлфиәнең хатаһына иғтибар итмәгән, йә оноҡҡан».

Ә майор һүҙен дауам итте.

— Иптәш Гобар, бындарак, яҡынырак килегеҙ ҙә апайығыҙҙың «ҡыҙы» менән танышығыҙ.

Хәҙер Әлфиә бөтәһен дә аңланы. Ни өсөн уны «бүстәк» заданиеға капитан үҙе алып барған, ни өсөн уны бында алып килгәндәр. Был шатлыҡтан ул ҡурылды һәм ҡот осҡос энергиялы шартлатҡыс матдәгә әйләнде. Ауыр тороп, һалмаҡ баҫып, Гобар Әлфиә янына килде лә ҡулын һуҙҙы.

— Андраш Гобар.

— Камалова Әлфиә.

Андраш ағайҙың ҡулы ҡытыршы, ҡан тамырҙары борғоланып ярылып ята ине. Әлфиәнең атаһыныҡы шикелле.

— Иптәш Гобар, «племянницағыҙ» ҡаршыһына ултырығыҙ ҙа бер-берегеҙҙе өйрәнегеҙ, күнегегеҙ. Ә беҙ капитан менән төтәтеп алабыҙ.

Әлфиә үҙенең «ағайына» керпек аша, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына ҡарап алды. Ә бит ул йәшкә артыҡ оло түгел. Үҙе генә ҡарт сырайлы. Күп түгәндә, илле биш-илле алты булыр, ләкин яңаҡтары буйлап төшкән тәрән траншеялар — йыйырсыҡтар уны Әлфиәнең атаһынан да өлкәнерәк күрһәтәләр. Гобарҙың йөҙөндә оҙаҡ, һыҙып сирләгән кешеләргә хас һарылыҡ бар. Ә бына эскә батҡан зәңгәрһыу күк күҙҙәре теклән, ҡыйыу ҡарайҙар.

...Будапешт эргәһендәге Эржебет биҫтәһендәге кескәй генә завод (завод, тимәһәң, хәтере ҡалыр, дөрөҫөрәге, мастерской ине) электригы һәм слесары Андраш Гобарҙың тормошо сөсө булманы, ә әсеһе ҡуш услап эселде.

Ғүмер юлының шундай текә боролған тар, ҡараңғы һуҡмаҡтары булды... Гобар саҡ-саҡ аҙашып юлдан яҙманы.

Ҡатын алып, үҙ ҡыуышын ҡорорға йөрөгән йәш электрикты (ул саҡта электр монтерҙары врачтар, инженерҙар шикелле ҡәҙерле ине) беренсе донъя һуғышы башланыу менән рус фронтына ебәрҙеләр. Тәүҙә, мейеһе шовинизм менән томаланған йәш Андраш Франц Иосифтың «Бөйөк Австро-Венгрия» империяһы өсөн ҡан ҡойорға үҙе лә ашҡынып тора ине. Дөрөҫ, ул буласаҡ «бөйөк империя»-ла нисек йәшәйәсәген күҙ алдына килтерә алмай ине әле. Элеккесә таңдан алып ҡараңғыға саҡлы завод хужаһына эшләп йөрөрмө, әллә үҙенең дә кескәй генә булһа ла заводы булырмы?.. Баштараҡ ул ихлас һуғышты, «тел» алырға разведкаларға барҙы, атакаға ла беренселәр булып күтәрелде, ләкин тәүге йәрәхәттән һуң госпиталдә дауаланғас, часына башҡа Андраш булып ҡайтты: разведкаға ашҡынып торманы, атакаға беренселәр булып түгел, һуңғылар булып күтәрелергә тырышты. Ә инде икенсе тапҡыр госпиталгә эләккәс (контузия алғас), ул трансформатор аша

үткән ток шикелле бөтөнләй үҙгәрҙе. «Бөйөк Австро-Венгрия» тигән һүҙ — миф; һуғыштан һуң һәр бер мадьяр йә фабрикант, йә алпауыт буласаҡ тигән һүҙ — рәшә; һуғыштың осо-ҡырыйы ла күренмәй, ә халыҡ ҡырылғандан-ҡырыла, тормош ауырайғандан-ауырая. Шуныһы ҡыҙыҡ, врачтар уны һаңғырау булып ҡалырһың тип ҡурҡыттылар, ә ул, киреһенсә, аңлыраҡ, зирәгерәк булып госпиталдән сыҡты. Хәҙер инде Гобар мөмкин тиклем разведкаға бармаҫҡа, атакаға күтәрелмәҫкә тырыша ине. Бөйөк «Австро-Венгрия»нан үҙ башы ҡәҙерлерәк икәнлеген яҡшы аңланы ул. Нисек тә башы-аҙағы күренмәгән был ҡәһәрле һуғыштан ысән-имен ҡотолоп ҡалырға кәрәк. Ә һуғыш бына өсөнсө йыл бара инде. Шинелде ун йыл елләтһәң дә дары еҫе бөтмәйәсәк. Шинелгә генә һеңдеме икән? Тәндең һәр күҙәнәгенә лә һеңмәнеме икән ул һаҫы еҫ?.. Дары еҫе генә булһа бер хәл ине. Мундир аҫтында окоп һалдатының айырылмаҫ юлдаштары — күҙгә күренер-күренмәҫлек кенә януарҙар мыжлап йөрөй — көнөн дә, төнөн дә тынғылыҡ бирмәй. Тәнде бет ашаны, йөрәкте шикләнеү, икеләнеү ҡорто кимерҙе: «Нисек ҡотолорға был йәһәннәм ғазабынан?.. Бәлки, был һуғыш мылтыҡ-пушка яһаусы фабриканттар, алпауыттар, полковник-генералдар өсөн генә кәрәктер?» Йөрәккә ҡортто госпиталдә һалдылар, ә окопта ҡоторттолар. Дөрөҫ, ул ҡортто һалыусылар ҙа һуғышты нисек туҡтатырға бик белеп еткермәй ине, әммә Андраштың аңы көндән-көн артты, асыуы көндән-көн ҡабарҙы. Юҡ, уларға ҡаршы окоптарҙа ятҡан рустарға ҡарата түгел, ә үҙ мадьяр байҙарына, офицерҙарына ҡаршы. Тора-бара был асыу ни эшләр ине: һүнерме, шартлармы — әйтеүе ҡыйын, рустар уны был тамуҡтан ҡотҡарҙы.

Йәйге эҫе көндәрҙең береһендә рустар бөтә фронт буйынса һөжүм итә башланы (дөрөҫ, аҙаҡ ул уңышһыҙлыҡ менән тамамланған, ти). Андраш хеҙмәт иткән полк ҡамауҙа тороп ҡалды. Уға, ни өсөндөр, туғандарса ҡараған рота командиры, бер нисә һолдат менән «бүре һуҡмаҡтарынан» ҡасып, ҡамауҙан сығырға тәҡдим итте. «Юғиһә йә рустар ҡырып бөтөрәсәк, йә пленға аласаҡтар. Ә был үлем менән бер — ҡот осҡос һалҡын Себер», — тип ҡурҡытты ул. Йыуаш Андраштан яуап йыуан сыҡты: «Мин Бөйөк Австро-Венгрия империяһы өсөн һуңғы һулышыма саҡлы һуғышасаҡмын!» Рота командиры уны «ахмаҡ» тип мыҫҡылланы ла төндә шым ғына ротаһынан шылды. Ә иртән рустар Андраште әсир алды.

Һалдат Гобарҙың уйланмаған, төшкә кермәгән яңы тормошо башланды. Юҡ, был һүҙҙәр бик үк дөрөҫ түгел. Өсөнсө йыл дауам иткән мәғәнәһеҙ һуғыш Андраштың

мейеһенә байтаҡ яңылыҡтар өçтәгәйне инде. Ул һуңғы ваҡытта үҙе лә әсиргә төшөү тураһында уйлап йөрөй ине. Бына уның төшө өнгә әйләнде — ул сит яҡтарҙа, «миһырбанһыҙ, ярым ҡырағай рустар» ҡулында.

Ул, башҡа мадьярҙар менән бергә, алыç, һалҡын Уралға эләкте. Юлда бер һалдат-студент уларға һөйләп барҙы: Уралда башҡорт тигән халыҡ йәшәй. Улар бынан бик күп быуаттар элек мадьярҙар Ҡама — Урал яғында йәшәгәндә күрше булған, ти. Тимәк, уларҙы элекке күршеләре янына «ҡунаҡҡа» алып баралар.

Бер нисә айҙан һуң рустар Николай тигән батшаларын тәхеттән ҡыуып төшөрҙөләр. Ә ул етенсе йылдың һалҡын көҙөндә эшселәр, һалдаттар власты үҙ ҡулдарына алды. Был ваҡытта инде Андраш бөтөнләй булмаһа ла ярым-яртылаш «ҡыҙыл» ине инде.

Октябрь революцияһын Андраш шикләнмәй, икеләнмәй ҡабул итте һәм уны аҡгвардеецтарҙан һәм интервенттарҙан һаҡлар өсөн ҡулына мылтыҡ алды. Ә инде 1919 йылдың йылы мартында (асығыраҡ әйткәндә, 21 мартта) уның тыуған илендә, Венгрияла ла, Совет власы төҙөлгәс, Андраш мадьяр дуçтары менән көнбайышҡа ҡарай юл тотто. Уралдан Дунайғаса юл сикһеҙ оҙон ғына түгел, ауыр ҙа булды. Улар Венгрия сигенә барып еткәндә инде, милли буржуазия, Антанта ярҙамында, революцияны бишектә саҡта уҡ быуып үлтергәйне. Беренсе август, 1919 йылдың беренсе августы, Венгрия эшселәре һәм крәçтиәндәре өсөн ҡара көнгә әйләнде. Гобар эле «Ҡыҙыл Россия»ға кире китә ала ине, ләкин ялҡынлы революционер Бела Кун Андрашҡа Венгрияны ташлап китмәçкә кәңәш итте. «Беҙ эле үҙебеҙҙекен ҡайтарып аласаҡбыҙ, иптәш Гобар!», — тип өмөтләндерҙе ул уны. Юҡ, Андраш ул саҡта ла, аҙаҡ та бер төрлө партияла ла торманы. Ләкин ул йәне-тәне менән ҡот осҡос ауыр шарттарҙа, подпольела ябай хеҙмәт халҡы өсөн көрәшеүселәр яғында булды, кәрәк сағында, икеләнеп, ҡурҡып-өркөп тормай, ярҙам күрһәтте.

Бына ул көндәр килеп етте. Дөрөç, сирек быуат үтеп китте. Гобар был һуғышта «Мең йыллыҡ рейх» өсөн (теге ваҡытта, исмаһам, «Бөйөк Австро-Венгрия империяһы» өсөн, тип алдағайнылар) ике улын ҡорбан итте, ә ҡатыны, был ҡайғыларҙы күтәрә алмай, параличтан йығылды һәм мандый алманы.

Рустар Венгрия еренә кергәс, Гобар Будапешттағы йәшерен компартия ойошмаларының береһенә үҙе теләп барҙы. «Партия ни ҡушһа, шуны үтәргә әҙермен», — тине ул бер төрлө пафосһыҙ, ябай эш тураһында һүҙ барған ши-

келде. Был ваҡыт инде Хортиҙы Гитлерҙың ышаныслы лакейы һәм ҡотороған эте фашист Салаши алмаштырғайны.

Гобарға фронт һыҙығын үтеп, Ҡыҙыл Армия командованиеһы менән аралашырға ҡуштылар.

Будапештта тыуып үҫкән Андраш ҡала тирә-яғындағы һәр урманды, һәр соҡорҙо, һәр һуҡмаҡты яҡшы белә ине, шуға күрә фронт һыҙығын ул еңел үтте. Дөрөҫ, еңел тигән һүҙ еңел әйтелгән. Һәр аҙым хәтәр булды, һәр дүңгәләк артында уны үлем һағалап торҙо, ә бер-ике тапҡыр саҡ-саҡ һәләк булманы, әммә, ғөмүмән алғанда, юл уң булды. Уны тикшерҙеләр.

Бер-ике көндән Гобарҙың исеме ысын, теләге изге икәнлеге раҫланды. Һәм бына хәҙер ул Әлфиә ҡаршыһында ултыра.

Икенсе көндө майор уларға хәрби задание бирҙе. Задание биргәнсе майор һағайып ҡына Әлфиәгә ҡарап ултырҙы. Шунан бер башы ҡыҙыл, икенсеһе зәңгәр «тактика» тигән күп ҡырлы йыуан ҡәләмде алып, әйләндереп, уйнап торҙо ла юл уңайында ғына һорай һалды:

— Ҡамалова, әгәр беҙ һеҙҙе тегендә ебәрһәк? — Ул башы менән Будапешт яғына күрһәтте.

— Мин шуның өсөн уҡыным да, иптәш гвардия майоры, — тип өҙә әйтте Әлфиә Ҡамалова.

— Радистар мәктәбендә уҡығанда һеҙҙе дошман тылына ебәреү тураһында әйткәйнеләрме ни? — тип һораны майор әллә аптырап, әллә ҡыҙыҡһынып.

— Асыҡтан-асыҡ әйтмәнеләр, әммә тел төптәренән... уҡытыу профиленә ҡарап һиҙенә торғайныҡ. Беҙгә бит рациялар ғына өйрәтмәнеләр, иптәш гвардия майоры, парашют менән дә һикерҙек, немец телен дә камиллаштырҙыҡ.

— Ә самолеттан парашют менән һикерергә тура килдеме?

— Бер тапҡыр... — Әлфиә баҙарын арттырыр өсөн өҫтәне. — Юҡ, ике тапҡыр. — Ә дөрөҫө уның бер тапҡыр ҙа самолеттан һикергәне булманы.

— Бына шулай итеп, командование Гобар менән һеҙҙең икегеҙҙе Будапештҡа ебәрергә булды, — тине майор устарын уҫҡа һуғып, аҙаҡ бармаҡтарын аралаштырып.

Әлфиә шатлығынан һикереп торғанын һиҙмәй ҙә ҡалды, әммә майор ултыр тип ишара яһаны. Ә Әлфиә шундай ҡәҙерле, ашҡынып көткән һүҙҙәрҙе ултырып тыңларға булдыра алмай ине.

— Маҡсат. Өсөнсө көн инде беҙҙең Будапешттағы радисткаһың тыны сыҡмай. Ни булғанын әйтә алмайбыҙ. Рацияның батареяһы бөткәндер тиһәң, запасы ла бар ине. Тимәк... йә уны эләктергәндәр, йә радистка менән ул-был

булған. Һеҙҙең бурыс, — майор торҙо, әммә Әлфиәгә торорға рөхсәт итмәне. — Будапештҡа барып етеп, радистканы табыу. Беҙ һеҙҙе «кукурузник» * менән фронт аша сығарып ташларға уйлағайныҡ та, иптәш Гобарҙың бер ҡасан да осҡаны юҡ, өҫтәүенә, йөрәге шәптән түгел икән. Шулай булғас, был вариант төшөп ҡала.

Фронтты һеҙгә күпер янынан үтеп сығырға тура киләсәк. Һеҙ икмәк карауайҙарына йәшерелгән батареянан башҡа нәмә алмайһығыҙ, — тип һүҙен бөтөрҙө майор.

— Ә рация? — тине Әлфиә түҙмәй.

Майор йәнә торҙо.

— Рацияны самолеттан ташлаясаҡбыҙ. Ҡасан һәм ҡайҙа ташланасаҡ, ул хаҡта иптәш Гобар беләә. Шифр, эфирға сығыу ваҡыттары, диапазон һәм башҡаларҙы Камалова заданиеға китергә бер сәғәт ҡала алыр. — Майор устарына таянып ултырҙы ла сер һөйләгән һымаҡ өҫтәп ҡуйҙы. — Бөгөндән алып, Камалова, һеҙ һаңғырау-телһеҙ мадьяр ҡыҙына әйләнәһегеҙ. Исемегеҙ — Жужа, фамилияғыҙ, Андраштыҡы шикелле, Гобар. Ни өсөн телһеҙ һәм һаңғырау? Сөнки һеҙ немец телен беләһегеҙ, мадьярса аңламайһығыҙ. «Ҡайсы» килеп сыға. Күпер ҡараусы булып оҙаҡ йылдар иптәш Гобарҙың элекке окопташы бер ҡуллы Ласло эшләй. Ул һеҙгә йылғаның аръяғына сығырға ярҙам итергә тейеш. (Гобар был һүҙҙәрҙе раҫлап, «Хат, хат», тип башын ҡаҡты.) Беҙҙең мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Ласло йәшәгән йорт буш, мөрйәһенән төтөн сыҡҡаны күренмәй. Йә ул, иптәш Гобарҙың раҫлауына ҡарағанда, көнө-төнө эсеп ята, йә тынысыраҡ урынға шылған. Ул сағында һеҙгә йылғаны йөҙөп сығырға тура киләсәк. Йылға киң түгел, әммә тәрән. Етмәһә, хәҙер көҙ. Һеҙ йөҙә белә торғанһығыҙҙыр бит инде, Камалова? — Майор уға ҡарап алды. Әлфиәнең йөҙә белеүендә уның шиге юҡ ине — Ағиҙел буйында тыуып үҫкән бит.

Әлфиә, майорҙың уйын ҡеүәтләр өсөн, «беләм» тип яуапланы һәм ҡапыл тауышы бөтөүгә үҙе лә аптыраны.

Ул арала майор, ҡыҙыл һәм зәңгәр башлы ҡәләмен алып, усында тәгәрәтте лә, урынына ҡуйҙы — был уның ғәҙәтенә кереп киткәндер инде. Бәлки, мәктәптәге ғәҙәтен ташлай алмайҙыр.

— Бик яҡшы. Һеҙҙең легендағыҙ ** шулай, Камалова, — майор терһәктәрен өҫтәлгә ҡуйҙы ла, шунда уҡ алды. Күрәһең, ул кадрҙағы офицер булһа ла, элекке, бала саҡ-

---

* «Кукурузник» тип «У-2» (хәҙерге «По-2») самолетын йөрөтәләр ине.

** Разведчиктарҙың ялған биографияһы.

тағы гәҙәттәренән ҡотола алмайҙыр. — Бынан ике аҙна әлек иптәш Гобар фәлән ауылға (ниндәй икәнен ул белә, ә беҙ телһеҙ һәм һаңғырау, һиңә кәрәге юҡ) ауырыу апаһының хәлен белергә килә. Бер-ике көн йәшәгәс тә, апаһы вафат була. Астмананмы, үпкәһе шешеүҙәнме — өҙөп кенә әйтә алмай, тыны ҡыҫыла торғайны инде. Апаһын ерләп, башҡа мәшәҡәттәрҙән һуң, апаһының телһеҙ-һаңғырау ҡыҙын алып (сөнки бала хәҙер япа-яңғыҙ тороп ҡалды), кире Будапештҡа ыңғайланы. Дөрөҫөрәге, Будапешт янындағы Эржебет тигән пригородкаға. Әммә ҡапыл рустар һөжүм башлай һәм улар ике ут араһында тороп ҡала. Аҙна буйы урманда аҙашып йөрөйҙәр, һалам кәбәнен соҡоп ереп, төндәрен үткәрәләр, йә ташландыҡ ҡыуыушта йоҡлар урын табалар. Кире әйләнеп, ауылға ҡайтырҙар ине, рустарҙан шөрләйҙәр, Будапештҡа барыр өсөн фронт һыҙығын үтергә кәрәк. Ә өйҙә ҡатыны ауырып ята. Ҡарар кешеһе лә юҡ. Бөтә ышаныс һеҙҙә — союзниктарҙа, йәғни немецтарҙа. Хәлдәренә кермәҫтәрме икән ни? — Майор көйрәтмәксе булғайны, «Ҡазбек»ты салбар кеҫәһенә кире тыҡты. — Адресығыҙҙы дөрөҫ әйтегеҙ, иптәш Гобар. Кәрәк булһа, әйҙә, тикшерһендәр. Яҡшы. — Майор устарын өҫтәлгә һуҙып һалды. — Эржебетҡа һеҙ иҫән-имен барып еттегеҙ, ти. Әгәр рация һәм радистка менән ул-был була икән, икегеҙ ҙә Будапештта ҡалаһығыҙ. Әгәр радистка иҫәнһау булһа, Будапештта Жужа ғына тороп ҡала. Ә һеҙ, иптәш Гобар, кире әйләнеп ҡайтаһығыҙ. Адрестарҙы, пароль һәм башҡаларҙы юлға сығыр алдынан иптәш Гобарға әйтәсәкбеҙ, — майор тынды, «тактика» ҡәләмен алып, усында тәгәрәтте. Әлфиә-Жужа Гобарға ҡарап алды. Андраш та уға күтәрелеп ҡараны. — Әгәр аҙаҡ һорауҙар тыуһа, яҙып ҡуйығыҙ ҙа һорарһығыҙ. Тартынмағыҙ, һәр бер «ваҡ» нәмәне лә төбө-тамырына саҡлы белергә, асыҡларға тырышығыҙ, — тине майор ҡәләмен урынына ҡуйып.

Ошо ваҡыт Әлфиә, мәктәп ғәҙәте буйынса, ҡулын күтәрҙе. Майор ауыҙ сите менән йылмайҙы.

— Ә ни өсөн беҙ рацияны үҙебеҙ менән алмайбыҙ, иптәш гвардия майоры?

— Беренсенән, ул, һиңә билдәле, еңел әйбер түгел. Питаниелары менән ярты боттан артыҡ. Икенсенән, ауыр тойолмаһа ла, рацияны күтәреп, Эржебетҡа саҡлы юртырға кәрәк. Ә Эржебетҡа йылғанан һуң да утыҙ километрҙан артыҡ. Ә һеҙҙе аҙым һайын тикшерәсәктәр, тентейәсәктәр. Аңлашыламы?

— Аңлашыла, иптәш гвардия майоры, — тине Әлфиә, үҙенең шуны лә уйлап белә алмауына асыуы килеп.

— Ә хәҙер, — майор Гобарға мөрәжәғәт итте, — башҡорт ҡыҙы Әлфиәне мадьяр ҡыҙы Жужаға әйләндерегеҙ. Бөтә кейеме энәһенән ебенә саҡлы мадьярҙыҡы булырға тейеш. Шунда, юл ыңғайында, ауыл ҡыҙҙарының ҡыланышын да күрһәтегеҙ. Телһеҙ-һаңғырауҙар һәр илдә лә бер төрлө булалыр, кем белә, ихтимал, һеҙҙә ниндәйҙер үҙенсәлектәре барҙыр.

Биш сәғәттән һуң майор алдында «энәһенән ебенә» саҡлы мадьяр ҡыҙы Жужа баҫып тора ине. Дөрөҫ, Әлфиә-Жужаға кейҙергән бөтә кейем дә уның кәүҙәһенә таман, һылашып тормай: курткаһының еңдәре оҙон, яурындары киң, һалынып тора, еңдәрҙе тышҡы яҡтан ҡайтарып ҡуйырға тура килде; аяҡ кейеме лә бер-ике размерға ҙурыраҡ — Әлфиә үҙенең өйҙән алып килгән ойоҡбаштарын кеймәксе булғайны, Андраш ағай ҡаршы төштө. Бер аҙҙан ҡайҙандыр бәйләп ямалған мадьяр ойоҡбаштары табып алып килде. Андраш ағай бүлмәнән сыҡҡас, Әлфиә гимнастерка кеҫәһенән Сафуан ағаһы биргән иҫтәлекле патронды алды ла курткаһының кеҫәһен тишеп, салғыйына һалып ҡуйҙы. Аҙаҡ, иң ауыр минуттарҙа ул сепрәккә төрөлгән патронды бармаҡтары менән һәрмәп ҡараясаҡ та эсенән генә күңелһеҙ йылмаясаҡ: ә ниңә һуң был патронды йөрөтә әле ул? Барыбер янында бер ҡоралы ла юҡ та...

Гражданский кейем кейгәс, Әлфиә бөтөнләй бала ғына булып күренде. Хатта майор уны йәлләп тә ҡуйҙы: «Баласағаны шундай яуаплы, хәтәр эшкә ебәреү хата булмаҫмы икән?» Майор ихлас һораны:

— Теҙ быуындары ҡалтырамаймы, Ҡамалова?

Майор көтмәгән яуапты ишетте.

— Ҡалтырай, иптәш гвардия майоры, — тине ул балаларға хас бер ҡатлылыҡ менән.

Хәҙер инде майорға һүҙҙе икенсе яҡҡа бороп ебәрергә кәрәк ине.

— Ә беләһеңме, боронғо бер философ нимә тигән?

— Нимә тигән?

— Үлемдән ҡурҡырға ярамай. Мин барында Ул юҡ, ә Ул килгәс, мин юҡ тигән.

— Ә мин үлемдән тамсы ла ҡурҡмайым. Мин, әйттерәһегеҙ килһә... — Әлфиәнең теле телгә йоҡмай башланы. Майор уны бүлдерҙе.

— Ә нимәнән ҡурҡаһың? — Майор инде «һин»гә күсте.

— Һалҡын һыуҙан шөрләйем. Мин, әллә кемгә оҡшап, өшөүсән булып тыуғанмын. Бөтә туғандарым ҡара көҙгә саҡлы Ағиҙелдә һыу инә торғайнылар, ә мин... Сыныҡтырға ла тырышып ҡараным, юҡ, барыбер һалҡындан бөрөшәм дә төшәм...

— Ҡәрәк булһа-итһә, тип Гобар өс һауыт паленка алды.

— Ә нимә ул паленка?

— Беҙҙеңсә әйткәндә, көмөшкә. Өйҙә ҡайнатылған араҡы. Бик үткер.

— Ә...

— Өйөңә хат яҙҙыңмы? — тип майор унан хәстәрлекле һораны.

— Ә яҙырға яраймы һуң?

— Ниңә ярамаһын! Алдағы хатты тиҙ генә көтмәгеҙ, тип тел төбөндә белдерт. Аңларҙар.

Аҙ ғына уйланып торғандан һуң Әлфиә башын сайҡап алды.

— Юҡ, яҙмайым, — инде йылмайып өҫтәп ҡуйҙы. — Үлергә китмәйем дә мин, иптәш майор.

— Ярай, улайһа, ни пуха ни пера, — майор уға ҡулын һуҙҙы. Әлфиә: «Иди к чорту!» — тигәнде үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Шунда уҡ усы менән ауыҙын ҡапланы. Сөгөлдөргә әйләнде.

— Ғәфү итегеҙ инде, иптәш гвардия майоры.

Майор дуҫтарса йылмайҙы.

— Мәктәп йылдарын иҫемә төшөрөп ебәрҙең... — тине майор, ҡапыл йәшәреп киткәндәй булды — һәр ваҡыт ҡыҙарып торған арыған күҙҙәрендә шаянлыҡ сатҡылары күренеп ҡалды.

Ах күҙҙәр, күҙҙәр, юҡҡа ғына һеҙҙе «күңел көҙгөһө» тип атамағандарҙыр... Кешенең мейеһе ҡабул иткән сигналдарҙы күҙҙәр секундтың йөҙҙән, меңдән бер өлөшөндә сағылдыра. Әлфиәгә лә йән керҙе. Ул да йылмайҙы. Ә һуғышта йылмайыу төн уртаһында күк ҡабағы асылып китеү менән бер ул.

Ауыр кәүҙәһен еңел күтәреп капитан Ардыуанов килеп керҙе, Әлфиәне танымайыраҡ торҙо. Уға тағы-тағы ҡарап алды. Әлфиә тере кешегә түгел, күҙҙәрен асып йома торған ҡурсаҡҡа-матрешкаға оҡшағайны. Әлфиә лә капитандың сәйер ҡарашын һиҙенде. Стеналағы сәғәткә күҙ һалған булып, уның күҙҙәренә ҡарап алды. Ә стенала «ходики» тип аталған ябай, хатта примитив сәғәт текелдәй ине. Циферблат өҫтөнә ҡулына ауыр сүкеш тотоп, һандал янында торған эшсе — тимерсе төшөрөлгән. Күренеп тора — беҙҙә эшләнгән сәғәт. Тимәк, кемдер уны, ташлап ҡалдырмай, үҙе менән алып йөрөтә. Уларҙың өйөндә лә шундай сәғәт бар. Тик циферблат ҡалайына тимерсе түгел, муйынына тубал аҫҡан сәсеүсе төшөрөлгән.

Ҡалын таш стена аша һуғыштың асыулы геүләгәне ишетелә. Ә стенаның был яғында, күңелгә тынысльҡ биреп,

ябай сәғәт «тик-тик-тик» итә. Юк, был шыршы тубырсығы формаһындағы гер асылған ябай, арзанлы сәғәттең тауышы түгел, ә ҡулына сүкеш тотҡан эшсе — тимерсенең йөрәк тибеше ине. Ул, әйтерһең, «Әлфиә, шөрләмә, мин Гитлерҙы анау һандалға һалып иҙәсәкмен», — тип уны дәртләндерә, батырландыра.

— Гү-ү-ү...

«Тик-тәк, тик-тәк, тик-тәк...»

Ҡалын таш стена артындағы һуғыш аллаһы, «донъяны емерәм», тип уҫал геүләй, ә стенаның был яғындағы ваҡыт бизмәне: «тик тәккә шашма, тарих ҡуласаһы барыбер беҙҙең өсөн әйләнә», тип уны мыҫҡыллай.

Майорҙы күрше бүлмәгә саҡырып алдылар.

— Армияға тиклем ана ниндәй булғанһың икән һин, Әлфиә! — тине капитан майор артынан ишек ябылыу менән, һоҡланыуын йәшерә алмай.

Әлфиә өҫтөндәге кейемдең, уға таман булмауына ҡарамаҫтан, хәрби формаға ҡарағанда ныҡыраҡ килешкәнен аңлап, бер аҙ ҡыйшаңланып һорай бирҙе.

— Ә ниндәй булғанмын, иптәш капитан?

— У, мин һине былай заданиеға ебәрмәҫ инем, Әлфиә, — тине ул, һүҙҙе ситкә бороп.

Ҡапыл Әлфиәнең күҙҙәре ҙурайҙы, ауыҙы асылды һәм аҫҡы ирене ғәҙәттәгенән ныҡыраҡ һалына төштө.

— Ниңә улай тиһегеҙ, иптәш капитан? Булдыра алмаммы?

Капитан уның һорауын яуапһыҙ ҡалдырҙы.

«Боевой охранение»ға саҡлы уларҙы Виктор Ванюшин менән Байсәйетов оҙата барҙы. Капитан уның кескәй генә нәфис ҡулын ҡыҫып хушлашты: «Хәйерле юл. Бөтәһе лә ал да гөл булыр». Унан, инде ҡулын алғас, шаярмай етди өҫтәне: «Йөрөгән юлдарыңа фәрештә ҡанатын йәйеп торһон». Был һүҙҙәрҙән һуң ҡапыл Әлфиәнең башына ҡот оҫҡос уй килде: «Бәлки, улар бер-береһен һуңғы тапҡыр күрәләрҙер?» Әлфиәгә капитандың муйынына һарылаһы, ҡолағына ниндәйҙер бик йылы, бик аҡыллы һүҙҙәр әйткеһе килде, әммә Ардыуанов, оҙон аяҡтары менән киң-киң атлап, китеп бара ине инде.

Сәйәхәт урман полосаһына тиклем тыныс булды. Әллә йәкшәмбе көн булғанга, әллә башҡа сәбәптән, немецтар ҡараңғы күк көмбәҙенә ракета осороу менән артыҡ мауыҡманылар, үҙ-үҙҙәрен «ғәйрәтләндерер» өсөн пулемет-автоматтарҙан һирәк тырылдаттылар.

Хәйер, немецтар ҡырҡ дүртенсе йылдың көҙөндә ҡырҡ беренсе йылдағы шикелле һуғышмай ине. Хәҙер генералдарға ғына түгел, рядовойҙарға ла һуғыштың үҙгәрмәҫлек

булып отторолоуы асыкланғас, немецтар бәйҙән ыскынырға тырышкан эт һымаҡ ҡыландылар. Бигерәк тә Будапешт тирәһендә. Тәүлектең бер генә минуты ла пулеметтар тыкылдауынан, мина-снарядтар ярылыуынан арынып тора алманы. Ә бына бөгөн төн сағыштырмаса тын ине. Яҡшығамы был, яманғамы? Юҡ, яҡшыға. Әлфиәнең әсәһе, әллә ниндәй күңелһеҙ төштәр күрһә лә, һәр ваҡыт яҡшыға юрар ине. «Төштө нисек юраһаң, шулай килә, ти, торғайны ул. Тимәк, улар Будапештҡа иҫән-имен барып етәсәк. Тимәк, бөтәһе лә ал да гөл буласаҡ».

Хушлашыр өсөн Викторға ҡулын һуҙғас, Әлфиә әйтә һалды:

— Бер өс көндән беҙҙе хәрби оркестр менән ҡаршы алығыҙ.

Виктор бер һүҙ ҙә әйтмәне. Уң ҡулы менән уның ҡулын ҡыҫты, ә һул ҡулы менән уның беләген һәрмәне лә, ҡулындағы сәғәтен сисеп, уға һуҙҙы.

— Ал. Разведкала сәғәтһеҙ ҡыйын. Циферблаты яҡтырта торған. Швейцар сәғәте.

— Рәхмәт, — тип бышылданы Әлфиә.

— Ә разведканан ураП ҡайтҡас, миңә гитарала башҡорт көйҙәрен уйнарға өйрәтерһең...

— Өйрәтермен, Витя... — Әлфиә бармағын уның ҡулына тейҙереп алды.

## ҺЫҢАР ҠУЛЛЫ ЛАСЛО

Юҡ, Әлфиә уйлағанса еңел барып сыҡманы сәйәхәт. Баштан алып тип әйтерлек план боҙолдо, уйланылғанса булманы.

Үкһеҙ етем бала шикелле япа-яңғыҙ ултырған ҡарауылсы йортоноң ишеге бикләнмәгән, әммә эстә бер кем дә юҡ ине. Өйҙә һалҡын, күңелһеҙ һәм күңелде болғатырлыҡ тынсыу һауа. Хәйер, һәр ваҡыт күңелһеҙ кешеләр, уҫал, һалҡын йорттар йәмһеҙ күренә бит. Йорттоң хужаһы, күрәһең, йә былай ғына сыҡҡандыр, йә бик ашыҡҡандыр: бер нәмә менән ҡапланмаған өҫтәл өҫтөндә күп ҡулланыу арҡаһында бер яҡ сите шымарып, ашалып бөткән алюмин ҡалаҡ (өй хужаһы, күрәһең, һулаҡай, ҡалаҡтың уң яҡ сите нык ашалған), үткерләй-үткерләй хәнйәр рәүешенә кергән шымарған һаплы бысаҡ; майға, ҡоромға батҡан тимер селтәр өҫтөндә ниндәйҙер маймы, маргаринмы ирен, көйөп ситенә уҡмашҡан таба; кәм тигәндә ике йөҙ илле грамм һыу һыймалы сатнаған шәшке; ашыҡ-бошоҡ асылған ит, балыҡ консервалары; ташҡа әйләнгән икмәк һыныҡтары...

Таба янында ҡоромға буялған газета ята. Газетаның беренсе битендә Гитлер менән шар күҙле ниндәйҙер ир кеше баҫып тора. Әлфиәнең Гитлер янында баҫып торған кешегә абайлап ҡарағанын иҫләгән Гобар, һурәткә бармағы менән тишерҙәй итеп төртөп: «Салаши», — тине. Был һүҙҙә шул саҡлы нәфрәт ине, һүҙҙәрҙең дә ут кеүек температураһы булһа, өй шунда уҡ гөлтләп янып китер ине.

Быялалары бер нисә урындан сатнаған берҙән-бер тәпәш киң тәҙрә күптән йыуылмаған; тәҙрә төбөндә тәмәке төпсөктәре, бер баштары янған шырпылар өйөлөп ята, хужа тәҙрә янында төтөн һурып, уйланып ултырырға яраталыр. Шуға күрә лә өйгә бер ҡасан да елләнмәҫлек булып тәмәке төтөнө, никотин һеңгән. Еҫе шул саҡлы ауыр ине, өйгә килеп кергәс тә Әлфиәнең күңеле болгана, һарыуы ҡайнай башланы, уҡшыны.

Гобарҙың был өйҙә хәтһеҙ генә булғаны бар. Йорт хужаһы һыңар ҡуллы Ласло бер ҡасан да ауыҙынан тәмәкеһен төшөрмәне. Ул әсе төтөнлө ҡаты тәмәке тартты. Бер-ике һурыу менән, усын яҫы күкрәгенә ҡуйып, һүгенә-һүгенә бик оҙаҡ һәм бик ҡаты йүтәлләне. Был ваҡыттарҙа Гобар уға йәлләп тә, ерәнеп тә ҡарап тора торғайны. Ласло, йүтәле бөткәс, атылып сыҡҡан күҙ йәштәрен усы менән һөртөп алғас, Гобар уны шелтәләй ине.

— Ташла һин шул ағыуҙы, пан Ласло, үҙеңде гүргә илтеп еткергәнсе ташла. Төтөн ашап әлегәсә берәү ҙә байымаған да, таҙармаған да.

Ласло иҫән ҡулын ғына һелтәне.

— Эй... Барыбер ҡара гүргә керәһе.

Ласло менән Гобар ҡасандыр бер окопта ыҙаланып, туңып, күшегеп, асығып ятһалар ҙа, Гобар уға һәр ваҡыт ихтирам менән пан ҡушымтаһын әйтеп, ололап өндәште.

Ысынлап та, бер ҡуллы Ласло дан, шөһрәт яратыусы, ҡыҙыл яулыҡ күргән ата күркә һымаҡ ҡуҡырайыусы бер бәндә ине. Беренсе донъя һуғышында үҙе теләп, офицер булырға хыялланып киткәйне. Һуғыштан һуң Франц-Иосифтың батыр офицерына ер, утар бирәсәктәр, уның юртаҡ аттары, көн һайын икешәр биҙрә һөт биреүсе һыйырҙары, хеҙмәтселәре, һөйәркәләре буласаҡ. Буласаҡ... хыялда. Ә асылда? Офицер булырға уның отҡорлоғо ла етмәне, белем яғы ла, ныҡлабыраҡ ҡараһаң, төбө күренерлек һай ине. Өҫтәүенә, снаряд ярсығы уң ҡулын сайратты. Шулай итеп, йәш, көслө ҡул урынына яҫы ең генә тороп ҡалды, юртаҡ аттар, һөтлө һыйырҙар урынына — күпер янында яңғыҙ өй һәм ғүмергә яңғыҙ, буйҙаҡ тормош... Ә эшкә ашмаған хыялдар, үтәлмәгән пландар йыш ҡына кешеләрҙе эгоист һәм туң күңелле итә. Ласлоға шундай характерис-

тика бирһәң, бик үк дөрөç булып бөтмәç, әлбиттә. Ләкин гүмере буйы төштәрендә һәм хыялы менән өндәрендә ул юртаҡ аттар күрҙе, һөйәркәләре ҡосағында аунаны. Венгрияның элекке «фюреры» Хорти Гитлер менән дуçлашып, илде «Бөйөк Һунгария» өсөн ҡанлы яуға ылыҡтырғас, Ласло ҡыҙмаса баш менән әйтә һалғайны: «Их, бөгөн уға егерме йәш булһа, уң яғында буш сң түгел, көслө ҡул аçылынып торһа, ыһ та итмәй, мылтыҡ алып, Хорти өсөн утҡаһыуға инер ине...» Ә айыҡ сағында ауыҙынан бер һүҙҙе ҡыпһыуыр менән тартып та ала алмаçһың. Ҡаштарын емереп, башын эйеп, көнө буйы күперен ҡараны, һеперҙе, буяны, тирә-яҡта соҡор-саҡыр хасил булған булһа, тигеҙләне... Бер яҡты яҡлап та, яманлап та һүҙ әйтмәне — күңеле ҡараңғы, һалҡын мөгәрәп ине.

Ләкин... айыҡ кешенең башында ни булһа, исеректең телендә шул булыр, тигән төшөнсә лә бар. Ана шул һүҙҙәрҙән һуң Гобар окопташ иптәше менән артабан һаҡ булды, һирәк-мирәк осрашырға тура килгәндә, политика тирәһенә яҡын да килеп ҡараманылар, ситләтеп кенә һуғышты һүктеләр (ә һуғышты кем маҡтай икән?). Ғөмүмән, һуғыш ваҡытында күңелеңде ете йоҙаҡ менән бикләһәң дә бик таманға килә.

Ана шул «Бөйөк Һунгария»ның патриоты, үҙенең «виллаһын» да бикләп тормай, ҡайҙалыр һыпыртҡан.

— Шула-аай... — тине Андраш ағай мәғәнәле итеп. Нимә аңлаталыр был һуҙып әйтелгән «шула-ааай...», яҡшылыҡтымы, яманлыҡтымы — Әлфиә төшөнә алманы.

Әлфиә менән Гобар таңды салыш аяҡлы ҡаҡ ултырғыстарҙа ҡаршы алдылар. Йоҡлап киттеләр ҙә тертләп уяндылар. Ни йоҡо, ни ял булманы. Ишекте юрый бикләмәнеләр.

Бына бер мәл ыңғырашып тышҡы ишек асылды, солан-да нимәлер шатыр-шотор итеп иҙәнгә төштө. Әлфиә лә, Гобар ҙа һикереп торҙо. Ләкин Андраш шунда уҡ Әлфиәгә төртөп алды ла үҙенең ҡолағы менән ауыҙына күрһәтте: был һин бит телһеҙ, һаңғырау ҙа, тимәк, бер төрлө тауышты ла ишетмәйһең, тигәнде аңлатты.

Ишек шар асылды. Инеүсе, ишек яңағына ауыр һөйәлеп, нимәлер мығырланды. Гобар уны таныны — ашыҡмай ғына инеүсе, дөрөçөрәге инә алмаусы, имгәк янына барҙы, уны ҡултығынан тотоп, өйгә һөйрәне. Был һыңар ҡуллы Ласло ине. Ул — әллә исерек, әллә ҡаты ауырыу. Ласло окопташ дуçын таныны: «Ә... Андраш... сервус!» — тип сәләмләне.

Күпер ҡараусы ләх исерек булып сыҡты. Ул, Андрашты ҡосаҡламаҡсы булып үрелгәйне, таҡта ҡарауатҡа ҡоланы. Шул минутта Ласло Әлфиәне иçләп ҡалды.

— Һин кем? — тип һораны ул мадьярса, ҡулын уның эйәгенә тейҙерергә теләп.

Араға Андраш ағай керҙе.

— Жужа ул. Минең ауылдағы ҡәрҙәшемдең ҡыҙы. Әсәһе күптән түгел параличтан үлде. Ә Жужа... аяҡлы имгәк: ни ишетмәй, ни һөйләшә белмәй. Бәреп үлтереп йәки япаңғыҙын ҡалдырып булмай бит инде үҙен, бына Эржебетҡа алып китеп барам. Аҙна буйы киләбеҙ, ә ни бары энә буйы юл үттек. Ух был ҡәһәрле һуғышты! Ҡайҙа етте, шунда ҡундыҡ, йәшендек, боҫтоҡ. Асыҡтыҡ, туңдыҡ. Эт булдыҡ. Инде һинең йылы өйөңә килеп еттек тигәйнек, бында ла ел һыҙғыра ла сысҡандар ғына ҡыштыр-ҡыштыр килә... (Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен Әлфиәгә аҙаҡ Андраш һөйләп, аңлатып бирәсәк.)

— Эйе... — тип күңелһеҙ генә һуҙҙы һыңар ҡуллы Ласло. — Сысҡандар иҙән аҫтында ғына түгел, бынауында ла тырнай. — Ласло йөрәк тәңгәленә иҫән ҡулы менән төртөп күрһәтте.

Ул торҙо, стенаға ҡаҙаҡлап ҡуйылған шкафтан дүрт ҡырлы йәлпәк шешә алды.

— Йылынаһың киләме? Әйҙә, һинең фичке * ла бер-ике йотһон. Бынамын паленка. Боғаҙҙан ут һымаҡ төшөп китә, — һәм ул «эйе», «юҡ» яуаптарын көтөп тормай, болғансыҡ шыйыҡсалы шешәне ауыҙына килтерҙе. Шешә ауыҙҙан алынды, ең менән ирендәр һөртөлдө. — Һалҡын, — тине Ласло ҡалтыранып, — бөтә тән... хатта еләктәр боҙға әйләнде... Юҡ, еләктәр генә түгел, бөтә донъя боҙға әйләнде... Ә рустар Будапештты алғас, «Бөйөк Һунгария»ға капут. — Ласло шешәне Андрашҡа һуҙҙы.

Гобар шешәне алып, уның боғаҙын еңенә һөрттө лә бер нисә тапҡыр ғотғолдатып йотто.

— А... уҫал икән, шайтан, — ул шешәне Ласлоға һуҙҙы. — Бел, Будапештты рустар бер ҡасан да ала алмаясаҡ, — тине ул окопташының йөрәк серен белергә теләп.— Гитлер, Будапештты рустарға бирмәйәсәкмен, тип ант иткән.

— Гитлер... Гитлер! Гитлер Россияны ла өс аҙна тигәндә бөгә һалам тип шапырынғайны, ә хәҙер Сталин үҙен стенаға килтереп терәне: йә биреләһең, йә башың менән стенаны емерәһең. Ә стенаны емереп булмай... стена гранит... — Ласло хихылдап көлөп алды.

— Ипләберәк, пан Ласло, — тип Гобар уны тыймаҡ булғайны, әммә теге ҡыҙып, әсе һүгенде.

---

* *Фичке* — мадьярса тургай тигән һүҙ.

— Богаҙыңды йыртып аҡырһаң да, беҙҙе берәү ҙә ишетмәйәсәк. Етмәһә, ел дә күпер яғынан. Ғөмүмән, немецтәр мадьярса бер һүҙ ҙә аңламай. — Ласло һаман әтәсләнде. — Аңлаһалар, уларҙан кем ҡурҡа? Хәҙер барыбер уларға ла, беҙгә лә капут, — аҙаҡ әсенеп өҫтәп ҡуйҙы. — Будапештта Салаши ҡотора, ә беҙҙең Хортиҙы әллә ҡайҙа олаҡтырҙылар, — Ласло илап аңлатып бирә алмаҫлыҡ ауаздар сығара башланы: был тоҡҡа һалынған сусҡа балаһының мырҡылдауына ла, көҙгө әсе ел һыҙғырыуына ла, майһыҙ арба тәгәрмәстәренең шығырлауына ла оҡшай ине. Андраш килеп, уның аяҡтарын карауатҡа күтәреп һалды. «Ни булған был Ласлоға? Ул быға саҡлы Гитлерҙы, донъялағы иң бөйөк шәхес, ә Германияны иң ышаныслы союздаш, тип маҡтай ине бит... Был Гитлерҙың «бөйөк авантюраһының» селпәрәмә килеү ғәләмәтеме? Бик һуңлап булһа ла, баштағы томандың таралып, аҡылға ултырыу һығымтаһымы? Бәлки, берәй немец офицеры үҙен йәберләгәндер ҙә шуға үс итеп «союзниктарҙың» тетмәһен тетәлер?.. Нисек кенә булмаһын, уны бөгөлә башлаған яҡҡа нығыраҡ бөгөргә кәрәк. Уларға файҙа эшләп ташлауы бар...»

Әлфиә-Жужа Андрашты, еңенән тотоп, соланға табан йәлеп итте. Соланда бер кемдең дә булмауына ышанғас, улар бышылдап һөйләштеләр. — Хәҙер ни эшләйбеҙ? — тип шыбырланы Әлфиә Гобарҙың ҡолаҡ төбөндә.

— Йоҡлап торһон әле, айнығас берәй юлын табырбыҙ, — тине Андраш аҙ ғына ла көйәләнмәйенсә.

— Әгәр ул кискә тиклем йоҡлаһа?

— Ә беҙ уға йоҡларға ирек бирмәбеҙ, — тине Гобар, хәйләле йылмайып.

Ласло кискә саҡлы йоҡламаны. Ул ҡояш менән бергә торҙо. Күрәһең, оҙаҡ йылдар ҡояш менән бергә уяныу уның ҡанына һеңгәндер. Көн бөгөн аяҙ булмаҡсы — таң алдынан яҫтыҡ саҡлы ла болот ҡалманы, ҡайҙалыр таралып бөттө. Болотло көн фронтта тағы ла шомлораҡ, йәмһеҙерәк тойола. Ләкин ҡояшлы көн дә аҙ ғына ла яҡшылыҡ вәғәҙә итмәй ине — ике яҡтан да самолеттар үлем һибәсәк...

Һыңар ҡуллы Ласлоның тәүге һүҙе: «Һыу!» — булды. Бер көрөшкә һалҡын һыуҙы тын да алмай ҡомһоҙланып эсеп бөтөргәндән һуң, ул, шешенгән ҡабаҡтарын көскә асып, үҙенең элекке полкташына, тәү тапҡыр күргән шикелле аптырап, ышанмай ҡарап торҙо. «Туҡтәле, ҡайҙа һуң мин? Ни эшләп килеп сыҡты әле был электрик Гобар?» Андраш мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуйҙы.

— Танымайһыңмы әллә, пан Ласло?

— Ниндәй пан, ти, мин? Просто Ласло, тиң. Беҙ бит һинең менән еүеш, һалҡын окоптарҙа ике йыл бет ашатҡан кешеләр... Ах, шул йылдар иҫемә төшһә, әле лә тәнем сымыр-сымыр итеп китә.

«Просто Ласло...» Был инде ниндәйҙер алға китеш, боролош ине. Хәҙер ҡармаҡты арыраҡ, ярҙан алыҫыраҡ ташларға кәрәк.

— Һин, ни эшләптер, Гитлерҙы яман һүктең, Ласло, — тине Гобар, әрпеш полкташы янына ултырып. — Мин һинең өсөн ҡурҡа башланым. Аҡыраһың, баҡыраһың.... Немецтар ишетеп ҡалһа бит...

— Эй-й... — Ласло өҙөлгән ҡулының ҡалдығы менән һелтәнеп алды. — Немецтар мадьярҙарға бәлә-ҡазанан, ҡайғы-хәсрәттән башҡа нәмә килтермәне. Бер иҫергәнсе эсеп алам да һыуға сумам. Барыбер, мин үлгәс, илар кешем юҡ... Тормоштан шул саҡлы туйҙым... — Ул башын артҡа ташланы ла, яр буйына ташланған балыҡ һымаҡ, ҡомһоҙланып һуланы, — ыш! Ыһ!.. — Йә әйт, Андраш, алла мине ниңә яратҡан? — Ласло дүрт ҡырлы шешәгә үрелде, әммә Гобар шешәне унан алданыраҡ алды.

— Өлгөрөрһөң. Батып үлергә лә, аҫылынырға ла... ҙур эш түгел. — Ласло ни саҡлы һәпрә булмаһын, Гобар ҡулын уның яурынына ҡуйырға мәжбүр булды. — Әгәр һеҙ... һин минең иҫке дуҫым-окопташым булһаң, беҙгә күпер аша үтергә ярҙамлаш. Ҡатын хәл эсендә: бөгөн-иртәгә китеп барыуы бар. Ҡуралмай ҡалһам, мәңге үҙемде ғәфү итмәм.

— Ә ниңә? Ярҙамлашам! — Ласло тағы дүрт ҡырлы йәлпәк шешәгә үрелде. Тағы уның ҡулын Гобар тотто.

— Аҙаҡ. Мин һиңә йүнлерәген эсерермен. Эшлә, Ласло! Мәңге онотмам.

— Ласло ике һөйләмәй. Һин уны үҙең беләһең, — төйөрөм кәүҙәле әрпеш Ласло ашыҡмай ғына торҙо, ниндәй төҫтә, нисә «йәштә» икәнлеген белеүе ҡыйын булған эшләпәһен батырып кейҙе.— Улар минең һүҙҙән сыҡмайҙар,— тип шапырынды күпер ҡараусы. — Мин бит уларҙың ышаныслы союздашы. — Ласло Әлфиәгә-Жужаға табан боролдо, йылмайғандай итте, ҡырынмаған яңағын һыйпап алды. — Бахыр фичке ҡайһылай мөйөшкә боҫҡан, үҙен ҡарсыға ҡыҫырыҡлағанмы ни. Йә, йә, ҡалтыранма, әгәр берәйһе үҙеңә ҡул һалһа, һыңар ҡулым менән эт балаһы кеүек быуып үлтерәсәкмен. — Ласло ишекте асманы, Андраш янына килде. — Ҡарале, полкташ, һин бит йәй көнө, ҡатыным үлде, тигәйнең?

Мейенең бер кемгә күренмәгән аппараты хәрәкәткә килде — Гобар үҙенең уйламай әйткәнлеген һиҙеп ҡалды. Эйе, эйе, июлдәме, июнь аҙағындамы ул ярты сәғәткә Ласло

яйына кереп сыкты һәм шунда үҙенең ҡайғыһын уртаҡлашты. Хатаны мейенең ниндәйҙер мөйөшө һиҙеп кенә ҡалманы, шунда уҡ төҙәтте лә.

— Һуң ҡартайған көнөмдә буйҙаҡ йәшәй алмайым бит инде. Аш-һыу әҙерләргә, йыуырға, таҙартырға ҡулымдан килмәй... — Андраш йәнләнеп китте. — Бер беше генә тол катынға йортҡа керергә тура килде. — Беше һүҙенең урынһыҙ әйтелгәнен тағы мейе һиҙеп ҡалды — бая ҡатын хәл эсендә ята, тигәйне бит. — Ҡарап тороуға таҙа ғына тойолғайны ла, йөрәге сырхау булып сыҡты. Улының үлеүе тураһында хәбәр алғас, уһылдап барып ятты ла хәҙер, тороп аҙ ғына йөрөһә, тыны ҡыҫыла, һалҡын тиргә бата, көнө-төнө дарыу ашай...

— Ҡыҫҡаһы, тере мәйет инде, — тип Андраш өсөн һығымта яһаны Ласло. — Ә мин... яңғыҙлыҡҡа өйрәнгәнмен инде, ҡатыны ла, чурты ла кәрәкмәй. Үҙем ашарға әҙерләйем, үҙем таҙартам, йыуам... — Ул йәнә күптән йыуылмаған ҡулының һырты менән терпеләнеп торған яңағына тейҙереп алды, тирә-яғына күҙ һалды. Күрәһең, «үҙем әҙерләйем, үҙем таҙартам, йыуам», тигән һүҙҙәр уның үҙенә лә ҡыҙыҡ тойолғандыр.

Ласло ишекте шапылдатып ябып сығып китте лә кире боролоп керҙе.

— Ә һинең берәй ҡағыҙың... аусвайс * кеүек нәмәң бармы? — тип һораны ул Гобар ҡаршына килеп баҫып. — Тегеләрҙең минең һүҙемә генә ышанмауы бар бит.

— Ни эшләп булмаһын! Хәҙер документһыҙ бәҙрәфкә лә барып булмай. — Андраш ағай һөйләнә-һөйләнә кеҫәләрен аҡтара башланы. — Ҡайҙа тыҡтым һуң әле? Бая ғына ҡарап алғайным бит... Ах, бына икән! Хәтер...

Ласло дүрткә бөкләнгән ҡағыҙҙы алып, ҡарап та тормай, кеҫәһенә һалды.

— Ә фичкеныҡы бармы!

— Уның аусвайсы юҡ, әммә урындағы начальствонан алған ҡағыҙы бар. Немецтар аңламаҫ та әле, мадьярса яҙылған.

— Миңә тимәгәйе төрөксә яҙылһын, тик ҡағыҙы ғына булһын.

Гобар Әлфиә-Жужаға бармаҡтары менән телле кеше аңламаҫлыҡ хәрәкәттәр яһаны, теге ауыҙын аса төшөп кеҫәһен һәрмәй башланы.

Ласло икенсе документты ла алғас, «Хат!» тип кеҫәһенә һалды, ымһынып дүрт ҡыялы ялпаҡ шешәгә ҡарап ал-

* *Аусвайс* — справка, шәхес танытмаһы.

ды, көрһөнөп ҡуйҙы ла ишеккә йүнәлде. Гобар уны оҙата сыҡты. Ласло байтаҡ алыҫлашҡас, өйгә керҙе.

— Хәҙергә бөтәһе лә майлаған шикелле бара, — тип Андраш тоғон сисә башланы.

— Әгәр немецтар менән тоҡто аҡтара башлаһа? — тине Әлфиә-Жужа, үҙе лә һиҙмәҫтән ултырғыс аҫтындағы тогона туфли башын тейҙереп алды.

— Аҡтарасаҡтар. Һәр валсыҡ икмәкте тикшерәсәктәр, улар төпсөнөүсән, ваҡсыл халыҡ. — Андраш уйға ҡалды.— Тоҡто Ласлоға тотторабыҙ ҙа, уны күперҙең теге яғына саҡлы оҙата барырға ҡушабыҙ.

— Әгәр уның тоғон да сисеп ҡараһалар?

— Ҡарамаҫтар. Ул бит бында «үҙ кеше».

— Ә бына сисә-нитә ҡалһалар? — тип ныҡышты Әлфиә-Жужа — ул һәр ваҡыт эштең еңел түгел, ауыр, ҡатмарлы хәл ителеүен күҙ алдында ла тота торғайны. Гобар ҙа шикләнә башланы, ләкин бирелергә теләмәне.

— Шыма ғына үтеп китер тип өмөтләнәм. Рацияның батареяһы карауайға йәшерелгән бит, ә запчастар менән салбар балағы эсендә. Ул-был бәйләнә башлаһалар, минең өс шешә бынамын тигән паленка бар...

— Ә шулай ҙа юҡҡа был вариантҡа ризалаштығыҙ, Андраш ағай.

Тәүҙә Гобар был һүҙҙе аңламайыраҡ торҙо.

— Нимәгә ризалаштың, тиһең?

— Күпер аша сығыу вариантына.

Гобар уйға сумып торҙо.

— Ашыҡма, Жужа. Әгәр күпер аша үтә алмаһаҡ, кәмә менән сығып була. Ласлоның бүрәнәнән соҡоп яһалған бер генә кешелек «канонерка»һы бар. — Андраш тоғон систе. — Ваҡыт барында ҡорһаҡты тултырырға кәрәк. Төйгөсләп. — Ул тоҡтан мадьяр карауайы, ҡыҙыл борос оно ышҡылған сало-шпиг, ике баш һуған, бәке алды. Ҙур итеп ҡыйырсыҡ киҫеп алды ла уны урталайға һындырҙы, ялпаҡлап салоны телгеләне, Әлфиә-Жужа алдына ҡуйҙы. — Аша. Ныҡ итеп. Тағы ҡасан ашарға тура килер.

Һөйләшмәй, ашығып сәйнәп ашанылар. Ашап бөткәс, Андраш плитә өҫтөндә торған биҙрәнән көрөшкәһен тултырып һыу алды, тамсыһын да ҡалдырмай эсеп бөтөрҙө, тамағын ҡәнәғәт ҡырып ҡуйҙы, Әлфиә-Жужаға һыу һоҫоп алып бирҙе, әммә теге эсмәне, әллә ерәнде, әллә эскеһе килмәне.

Ашалып бөткәс, икмәк валсыҡтары һеперелеп, ҡул йыуғыс аҫтындағы биҙрәгә һибелгәс, күп тә үтмәне, Ласло ҡайтып керҙе. Әйтерһең, ул быларҙың тамаҡ ялғағанын ғы-

на күтәп торған. Ласло асыулы ине. Һаҡал-мыйыҡ баҫҡан йөҙө тағы ла һөйкөмһөҙләнеп киткән, уң яңағы тартыша — Гобарҙың иҫкә алғаны бар, бик ярһыһа ғына Ласлоның яңағы тартыша торғайны, тимәк, был юлы ла...

Ласло инеү менән бер һүҙ әйтмәй түргә уҙҙы, дүрт ҡырлы ялпаҡ шешәһен алып ике тапҡыр ғотғолдатып боғаҙынан йотто ла таҡта караватҡа лапылдап ултырҙы һәм һүҙен дауам итте, күрәһең, ул юлда уҡ үҙ-үҙе менән һөйләшеп килгәндер.

— ...Мин әйтәм: Гобар минең туғаным. Ә улар: туған булғас, ниңә фамилиялар башҡаса? Мин әйтәм: эт йыҡҡырылар, шуны ла аңламайһығыҙмы ни, әсәләр бер, аталар башҡа. Ә улар: белмәйбеҙ. Ә мин: һеҙ белмәһәгеҙ, мин беләм. Ышанмаһағыҙ Эржебетҡа барып, адрестарҙы тикшерегеҙ... Һин бит немецтарҙы беләһең инде, һәр приказ — улар өсөн закон, «Айн-цвай-драй». Белергә лә теләмәйҙәр... — Ласло тағы ялпаҡ шешәне ирендәренә терәп алды. Тыныслана төштө. — Элек һүҙсәнерәк, ыҡҡа барыусанырак була торғайнылар, рустар үҙҙәрен Дунай ярына килтереп терәгәс, телдән яҙҙылар.

— Тимәк... барып сыҡмаған, — тине Гобар әсе йылмайып. — Мадьярҙы үҙ күперенән дә йөрөтмәйҙәр. Замана...

— Юҡ! — тине Ласло һикереп тороп, еңеүсе кеше һымаҡ, — мин уларҙы күндерҙем. Тик кейемдәрегеҙҙең һәр йөйөн һәрмәп сығасаҡтар, ә мине аманат итеп тотасаҡтар. Әгәр һинең һөйләгәндәрең раҫланмаһа, һине шпионлыҡта гәйепләһәләр, — Ласло усының ҡыры менән күмәгәйле боғаҙына һыҙҙы һәм телен шартлатты. — Капут. Дар ағасында бәүелеп торасаҡмын.

— Ә Жужаны ҡайҙа ҡуйырға? — тине Гобар борсолоуын йәшерә алмай.

— Кире өйөнә ҡайтып китһен, — тине Ласло бер ни булмаған шикелле.

— Нисек инде — ҡайтып китһен?! Улар ауылында рустар. Ғөмүмән... ул унда яңғыҙы ни эшләйәсәк? — Андраш бүртенеп торған ҡан тамырҙары менән йәмһеҙләнгән ябыҡ, әммә әле һаман көсөн юғалтмаған ҡулын Ласлоның арҡаһына ҡуйҙы. — Ике йыл окопта сыныҡҡан дуҫлыҡ хаҡына һорайым, Ласло, төндә Жужа менән икебеҙҙе теге яҡҡа кәмә менән сығар.

Ласло башын сайҡаны.

— Ҡурҡам. Иҫләп ҡалһалар, бөтәбеҙҙе лә эт балалары шикелле ҡырып бөтөрәсәктәр, — Ласлоның был һүҙҙәрендә ихласлыҡ тә, әсенеү ҙә бар ине.

— Бына һиңә майлаған шикелле бара...

Әлфиә-Жужа былар һөйләшеүенән бер нәмә лә аңламаны, әлбиттә, ләкин күңеле һиҙә — эштәр шәптән түгел. Ә шулай ҙа ул ғәмһеҙ булырға тырышты — туҙанлы тәҙрә аша урамға ҡарап тик ултырҙы.

Көн күптән булмағанса тыныс, ҡояшлы, йылы ине. Ҡайҙалыр уға таныш түгел ҡоштар ҡояшты һағынғанлыҡтарын аңлатып сырылдайҙар, һыҙғыралар, сутылдайҙар. Уралда, Әлфиә тыуып үҫкән яҡтарҙа, күптән инде ҡара көҙ, китәһе ҡоштар әллә ҡасан йылы яҡтарға осоп китеп бөткәндер, ҡарлы ямғыр яуалыр... Ә бында, Венгрияла... бәрәкәтле тупраҡлы, йомшаҡ климатлы ил... бөгөн пинжәксән йөрөрлөк, йылы, ҡояш ҡыҙҙыра, дөрөҫ, бында ла былтыр ҡыш һалҡын, күңелһеҙ булды, ямғыр яуҙы, туңдырҙы, тағы ирәтте...

Әлфиә хатта бик аҙға ғына онотолоп, был шомло донъянан китеп торҙо, тик ишек шапылдағанды ишеткәс кенә йәнә һыңар ҡуллы Ласло өйөнә «әйләнеп» ҡайтты.

Ласло сығып киткәйне. Андраш уны тағы бер тапкыр немец часовойҙары менән һөйләшеп ҡарарға ебәргән икән. Гобар немецтарҙың бойороҡтар, закондар ҡоло икәнлеген белә: улар бойороҡтоң бер хәрефен дә боҙоп, өҫтәренә яуаплылыҡ алмаясаҡтар — был инде немец милләтенә генә хас һыҙат, әммә уға Ласло юҡта яңы ситуация хаҡында Әлфиә-Жужа менән кәңәшергә, ашығыс ҡарарға килергә кәрәк, шуға күрә Андраш Ласлоны күпергә ебәрҙе.

Әлфиә-Жужа Андраш ағаһының хәбәрен тыңлап бөтөрмәҫ борон уҡ:

— Ә йылғаны мин төндә йөҙөп сығам, — тип әйтә һалды. — Йылға киң түгел, ыһ тигәнсе арғы ярҙа булырмын...

Гобар икеләнде.

— Уныһы... шулай ҙа, һыу бит боҙ кеүек, — уның был вариантҡа риза булғыһы килмәне. Дөрөҫ, тегендә, штабта, майор был вариантты ла күҙ алдында тотҡайны. — Беләһеңме, Жужа, — тине ул уға яҡыныраҡ килеп, ҡытыршы ҡулын уның кескәй ҡулына ҡуйып, һыйпап.

— Ласло беҙгә кәмә генә бирһен. Ҡалғаны беҙҙең эш.

— Әгәр кәмәһен бирмәһә?

— Ул саҡта күпер аша мин үҙем генә сығам.

— Ә рацияға батареялар, лампочкалар?

— Улар ҡала инде. Радистка иҫән-имен булһа, инсек тә батарея табылыр. Будапештта беҙҙең кешеләр аҙ түгел.

— Ә мин ни эшләргә тейеш? — тип күңелһеҙләнеп һораны Әлфиә-Жужа.

— Һиңә кире ҡайтырға тура килер.

— Заданиены үтәмәйме? — Әлфиә уның ҡулы аҫтынан ҡулын тартып алды, һикереп торҙо, хатаһын аңлап, шунда

уҡ буйһонон ултырҙы. — Мин һеҙҙе бында көтөп торасаҡмын.

— Мине көтөргә кәрәкмәй, Жужа, — Андраш уның сәсенән һыйпаны, — минең ҡасан урап ҡайтыуым билдәле түгел. Будапештҡа бер көнлөк юл. Ҡайтырға бер көн. (Әгәр тотҡарлыҡ булмаһа? Әгәр тотҡарлыҡ булһа?) Будапештта күпме булам? Ниндәй юлдан әйләнеп ҡайтам. Майор бит беҙҙе барған юлдан әйләнеп ҡайтмаҫҡа өйрәтте...

Андраш ағайҙың дәлилдәре аҡыллы һәм нигеҙле ине, әммә Әлфиә үҙенекен итергә тырышты. «Мин һеҙ ҡушҡан яуаплы һәм мөһим заданиены үтәй алманым», — тип буш ҡул менән ҡайтып инеү уға үлем менән бер ине. Начальство ни уйлаясаҡ уның хаҡында? Разведкаға башҡа ебәрмәйәсәктәр — бына шул. Штабта «морзянка» туҡылдатып тик ултыр...

— Яҡшы, — тип килешә төштө Әлфиә-Жужа. — Һеҙ мине йылғаның теге яғында билдәле бер урында ҡасып көтөп тораһығыҙ, ә мин ҡараңғы төшөү менән һыуҙы йөҙөп сығам да һеҙҙе эҙләп табам. — Әлфиә инде хәйләгә күсте, тауышы ялындырғыс сыҡты. — Мин бер үҙем генә ҡайтырға шөрләйем, Андраш ағай. Юлды ла иҫемдә ҡалдыра алманым. Әгәр минаға барып менһәм... — был һүҙҙәр Гобарҙы бөтөнләй иретте.

— Әйҙә, әләйһә, йылғаны һин йөҙөп сығыр урынды һайлайбыҙ. — Улар ашыҡтылар. Тиҙҙән Ласло әйләнеп килергә тейеш.

Күпселек Европа йылғалары шикелле был йылғаның да көнсығыш яры һөҙәк, ҡамыш, тал үҫкән, ә көнбайыш яр текә, таҡыр ине. Әммә, бәхеткә ҡаршы, бер сирек километрҙар түбәндә ике яҡ яр ҙа ҡыуаҡлыҡтар, ағастар менән ҡапланғайны.

— Ана-а тегендә... — тип эйәге менән күрһәтте кәрәкле урынды Гобар. — Ул өйгә арты менән, ә Әлфиә-Жужа йөҙө менән баҫып тора ине. Әлфиә-Жужа өйгә килеүсе кешене күҙәтә, ә арты менән торған Гобарҙың һөйләшкәнен өйгә килеүсе кеше күрмәй — бына бөтә хәйләнең сере.

— Әгәр теге ярҙа немецтарҙың ут точкалары булһа?

Ласло, йылғаның теге яғында немецтарҙың запас окоптары, дзоттары ғына бар, ә үҙҙәре хәҙергә күренмәй, тине. Был уларҙың оборонаһының запас һыҙығылыр, күрәһең.

Ысынлап та, ярҙың теге яғында бер төрлө хәрәкәт тә күренмәй ҙә, һиҙелмәй ҙә ине. Әлфиә-Жужа тынyслана төштө.

— Ә һеҙ рацияның запас частарын тоҡҡа һалығыҙ ҙа бәлдор аҫтына йәшерегеҙ, Андраш ағай. — Ул һәр һыңар

ҡуллы кеше һымаҡ бер яҡҡа янтая төшөп атлаусы Ласлоның ҡайтып килгәнен күрҙе. Уға арты менән боролдо. — Ласло ҡайта ята. Һеҙ минең муҡсаны алырһығыҙ, ә мин һеҙҙең тоҡто аҫырмын. Йөҙөргә йәтешерәк булыр.

Гобар ҡулдарын бутаған булды — телһеҙ ҡәрендәше менән һөйләшә, имеш.

— Әгәр мин дә һинең менән бергә барһам, Жужа, — тип Гобар яңы вариант тәҡдим итте.

Әлфиә-Жужа ҡырҡа ҡаршы килде.

— Юҡ. Ул-был булһа, беҙ икебеҙ ҙә ҡапҡанға ҡабасаҡбыҙ. Икебеҙ ҙә һәләк буласаҡбыҙ. Ә былай һеҙ Эржебетҡа ап-анһат барып етәсәкһегеҙ. Ҡеҫәгеҙҙә ышаныслы аусвайс бар.

Гобар Әлфиә-Жужаның дәлиле менән килеште. Шуның менән һүҙ бәттө. Улар өйгә табан атланы. Гобар юрамал бер нәмә аңлатмай торған хәрәкәттәр яһап, ҡулдарын бутап, ҡәрҙәшенә ниҙер «һөйләне». Болдор янына еткәс, ул тиҙ генә эйелде лә салбар балаҡтары эсенә йәшерелгән рацияның запас частарын алып баҫҡыс аҫтына тыҡты.

Бер нисә секундтан Ласло улар ҡаршыһына килеп баҫты. Ул окопташының болдор аҫтында ни эшләгәнен күрмәне, әлбиттә.

Ә Гобар, аҙ ғына ла тотлоғоп тормай, алдашты.

— Илай бит әле, байғош. Бер үҙе ҡайтырға йөрәге етмәй. Ах, ниңә миңә уны эйәртергә ине инде! Күршеләре менән йәшәй бирер ине шунда... Турғайға һәр кәрниз аҫты оя. Хәҙер миңә уны ни эшләтергә?.. Ай-һай, вәт яфа. Үҙ башымды ҡайҙа ҡуйырға белмәйем, өҫтәүенә, ул — аяҡлы бәлә...

Ласлоға был һүҙҙәр тәьҫир итмәнеме, әллә аңлайым, ләкин мин бер ни эшләй алмайым, типме ул ҡул ғына һелтәне.

— Улар «найн» да «нихт»тан башҡаны белмәйҙәр, — тине лә болдорға ултырҙы. Буш кеҫәһенән янып, ашалып, шымарып бөткән төрөпкәһен алып, тәмәке төйөп тултырҙы. Шырпы ҡабыҙғас, көйрәтмәне, инңәлер өрөп һүндерҙе. — Әйҙә, тегеләр кире уйлағансы, мин һине күпер аша үткәрәм, — тине ул тәүәккәлләнеп.

Гобар, хәҙер сығам, тип әйберҙәрен алырға өйгә инеп китте. Ласло төрөпкәһен көйрәтте һәм Әлфиә-Жужаны әсе, зәңгәр төтөнгә күмде. Әлфиә-Жужа йүтәлләй башланы. Ласло усы менән төтөндө таратты ла ситкәрәк китеп ултырҙы.

Ә Әлфиә-Жужа уйланды. Икеләнде. «Гобарҙың, йылғаны икәүләп йөҙөп сығайыҡ», тигән тәҡдимен кире ҡағып,

дөрөҫ эшләнеме? Әгәр эгоист булараҡ уй йөрөткәндә — дөрөҫ түгел. Икәү йылға аша сығыуы еңелерәк, уңайлыраҡ булыр ине. Әгәр инде төптәнерәк уйлаһаң? Гобар тәҡдиме менән килешмәй ул дөрөҫ эшләне. Сөнки был вариант, хәтәрерәк булһа ла, ышаныслыраҡ: икәүҙең береһе иҫән ҡаласаҡ.

Тоғон арҡаһына аҫып, өйҙән Гобар сыҡты. Әлфиә уға ташланды ла, Андраш ағаһының күкрәгенә башын ҡуйып, үкһергә тотондо. Гобар ҡәрҙәшенең ихлас аҡҡан күҙ йәштәрен күреп, ҡаушап ҡалды, әммә шунда уҡ үҙен ҡулға алды. Әлфиә-Жужаның башын күтәреп, маңлайынан үпте, ситкә этәрә биреп, китеп барҙы. Уның артынан төрөпкәһен төтәтеп ашыҡмай ғына Ласло атланы һәм ауыҙ эсенән мығырланы: «Ҡөйәләнмә, полкташ, был мәхшәр бөткәнсе Жужаң миндә йәшәп торор, дөрөҫ, минең үҙемдең дә ауыҙымды асһам, үпкәм күренерлек, немецтарҙан теләнеп кенә көн күрәм.

Ярай, бер кешегә еткән фичке менән икебеҙгә генә етер әле...» «Юҡ, — тип уға ҡаршы әйтте Гобар. — Жужа төндә юлға сығыр. Бәлки, иҫән-имен ауылдарына ҡайтып етер». Ласло ризалашты: «Үҙе теләгәнсә эшләһен. Ҡаршылығым юҡ».

Әлфиә күҙҙәрен пәрҙәләгән йәштәрен йоҙроҡтары менән һөртөп, уларҙы күҙәтеп торҙо. Бер яҡтан икенсе яҡҡа бәүелеп Ласло алдан атлай. Бер нисә аҙым бара ла боролоп, Гобарға нимер әйтә. Ә Андраш ышаныслы баҫып, киң-киң атлай. Ул танауын һемгергән булып, туҡталып артына боролдо ла, ирендәрен ҡыбырлатып, уға ҡул болғаны. Әлфиә-Жужа уға ҡул болғаны ла өйгә атылып кереп китте, Андраш ағаһы ҡалдырған тоҡто алып сыҡты — ул хәҙер шаҡтай һәлмәкләнгәйне. Әлфиә-Жужа, Гобар болдор аҫтына тыҡҡан рацияның запас частарын алып, тоғона һалды, ҡыҫып ауыҙын бәйләне, сүп-сар әрҙәнә өйөмө аҫтына илтеп йәшерҙе. Үҙе, ситтән күҙәтеп тормайҙармы икән тип, алан-йолан ҡаранды. Хәйер, ҡарауылсы йорто уйһыу урында, бер нисә акация ағасы ышығында ултыра, ситтән уны күҙәтеүе бик үк йәтеш түгел ине.

Гобар менән Ласло, ниһайәт, күпер янына барып еттеләр. Бер аҙ тынысланһа төшөп, Әлфиә-Жужа утын яра торған түмәргә барып ултырҙы.

Әлфиә-Жужаның йөҙөнән, ҡояш нуры һымаҡ, йылмайыу сағылып китте. «Бына ошондай һуғышта ҡатнашырға теләгәйнеңме, балаҡай? Улайһа, теләгең тормошҡа ашты, шатлан».

Ваҡыт туҡтаны. Күрәһең, Ер менән бер-бер хәл булғандыр: йә әйләнеүенән туҡтағандыр, йә, орбитаһынан сығып, Йыһан бушлығына төшөп аҙашҡандыр. Әгәр шулай булмаһа, Ҡояш һалҡын, төҫһеҙ күк көмбәҙенә йәбештереп ҡуйылған алюмин таба һымаҡ бер урында ҡатып тормаҫ ине. Юҡҡа ғына, донъяла көтөп алыу менән ҡыуып етеүҙән дә ҡыйыныраҡ эш юҡ, тимәйҙәрҙер.

Туҙан менән ҡапланған, бер нисә урындан сатнаған тәҙрә янында күперҙе күҙәтеп ултырған Әлфиә-Жужа ана шулай уйланы.

Ваҡыт барыбер үҙенеке итте — сәхрә йылғаһы шикелле, күренмәй генә аға бирҙе. Ҡояш та, һиҙелер-һиҙелмәҫлек кенә ҡыймылдаһа ла, алға — йоҡо булмаһына үрмәләне. Әлфиә-Жужаның нескә беләгенә бәйләнгән сәғәт тә ишетелер-ишетелмәҫлек кенә текелдәп, артҡа түгел, алға барҙы: секунд стрелкаһы ата-әсәһе артынан йыбырылған бала һымаҡ ашығып сапты, минуттыҡы олпатыраҡ атларға тырышты, ә сәғәт стрелкаһы инде бөтөнләй ҡыймылдарға теләмәһә лә барыбер алға шыуышты: «Тик-тәк, тик-тәк... тәк, тәк...» Әлфиә-Жужа сәғәтте ҡолағына ҡуйып тыңлап тора. Ниндәй тигеҙ, зеңләп йөрөй ул, әйтерһең, ниндәйҙер көй сығарырға тырыша. Сәғәттең тигеҙ, дәртле текелдәүе Әлфиә-Жужаға аҡрынлап тыныслыҡ килтерә. Гүйә ул: «Тик-тәк, тик-тәк» тип зәңгелдәмәй, ә «бөтәһе лә ал да гөл... ал да гөл булыр», тип уның күңеленә ышаныс йыры йырлай. Ҡапитан иҫкә төшә. Ә нинә ул: «Бөтәһе лә ал да гөл булыр», — тигәндән һуң, «йөрөгән юлдарыңа фәрештә ҡанатын йәйеп торһон», тип өҫтәне? Шаяртып әйттеме ул был һүҙҙәрҙе, әллә ысынлап та аллаға ышанамы? Хәйер, уларҙың физика уҡытыусыһы Ғәли ага Лутский: «Аллаһыҙ кеше юҡ ул. Тик ул алла күктә түгел, һәр кемдең йөрәгендә. Аллаһыҙ кеше — сүп кеше», — тип әйтергә ярата торғайны.

«Тик-тәк-тик-тәк...»

Әлфиәнең быға саҡлы бер ҡасан да үҙ сәғәте булманы. Ә бына беше Әҡлимәнең беләгендә «Зиф». Көмөш. Ун һигеҙ йәше тулған көндө атаһы бүләк иткән. Бәй! Ғаиләлә берҙән-бер бала бит — баш та, төпсөк тә.

«Тик-тәк, тик-тәк...»

Әйтерһең, уның янында Виктор Ванюшин ултыра һәм аҡрын ғына йырлай. Шәп егет Виктор, тик бына күҙҙәре генә майлы. Разведканан ҡайтҡас, ул Викторҙы гитарала башҡорт көйҙәрен уйнарға өйрәтәсәк. Ә һыңар ҡуллы Ласлоҙ ҡайҙа олаҡты? Шулай уҡ Гобар менән бергә киттеме



**Ибраһим Абдуллин тормош иптәше Рәйхана ханым менән. 1959 йыл.**

икән ни? Бигерәк яҡшы. Әлфиә-Жужа ҡараңғы төшкәнде көтөп алыр ҙа иркенләп уның кәмәһендә теге ярға йөҙөп сығыр...

Мығырланып, үҙ алдына һуҡранып, юғалған Ласло ҡайтып инде. Ул лаяҡыл иҫерек ине. Тәнтерәкләп атлап, ул мейес янына килде, биҙрәне күтәреп, эйәгенә, түшенә ағыҙа-ағыҙа ҡомһоҙланып һыу эсте, буш еңе менән ауыҙын һөрттө, ҡамырға әйләнгән аяҡ быуындарын пружиналандырып, таҡта карауаты янына ыңғайланы, барып етер-етмәҫтән лапылдап йөҙ түбән карауатҡа ҡоланы. Ләкин шунда уҡ, иҫән ҡулына таянып, торорға маташты, ә үҙе өҙләкһеҙ һуҡранды, мығырланды: «Эй, фичке... Эй, шайтан балаһы...»

Әлфиә-Жужа сирҡанып һәм шул уҡ ваҡытта ҡыҙғанып та Ласлоны күҙәтеп ултырҙы. Ул, ниһайәт, торҙо, тештәрен ыржайтып Әлфиә-Жужаға ҡараны, эйелеп, иҫән ҡулы менән карауат аҫтынан нимәлер эҙләп һәрмәнде. Эҙләгәнен тапты — дүрт ҡырлы ялпаҡ шешәне тартып алды, тештәре менән бөкөнө тартып сығарып, бер-ике тапҡыр ғотғолдатып паленка эсте, кикерҙе, унан эсемлекте Әлфиә-Жужаға һуҙҙы: «Фичке, һемер!» Ласлоның тауышы иҫерек булһа ла, шаҡтай яғымлы ине. Әлфиә-Жужа йылмайҙы ла ҡулбаштарын һелкетеп алды: «Ни әйтергә теләгәнегеҙҙе аңламайым».

— Эс! — Был юлы инде Ласлоның тауышы бойороҡ һымағыраҡ ишетелде. Ул, кәүҙәһен һелкеткеләп, һалҡын бит, өшөгәнһең, тигәнде аңлатты.

Әлфиә-Жужа башын сайҡаны: «Юҡ, мин өшөмәнем». Ласло Әлфиә-Жужаны күндерә алмағас, үҙе эсергә тотонդо. Ул, кемдер сыбыҡлаған шикелле, ваҡ-ваҡ йотоп, ашыға-ашыға паленканы готголдатты. Көмөшкә башҡа үтмәй башлагас, Ласло майлы еңе менән шешәнең ауыҙын һөрттө лә Әлфиә-Жужаға һондо.

— Эс!! — Уның тауышы инде бойороҡ булып ҡына түгел, ҡурҡыныс булып яңғыраны. Ул киң, һары тештәрен ыржайтты (өҫтәге бер теше нык ҡына кителгәйне), ҡулдары менән хәрәкәт яһап, кәмәлә ишеүҙе ишараланы, һуңынан күкрәгенә төртөп, билдәһеҙ яҡҡа күрһәтте. Әлфиә-Жужа дөрөҫ аңлаған булһа, был «мин һине теге яҡҡа кәмәлә сығарып ҡуйырмын», тигәнде аңлата ине. Улайһа, ни өсөн ул Әлфиә-Жужаға көсләп көмөшкә эсерергә маташа? Юҡ, Ласлоның һирәгәйеп, ҡойолоп бөткән сәсле башында ниндәйҙер ҡара, әшәке уйҙар барлыҡҡа килде, буғай. Әлфиә-Жужа, үҙен йәлләтергә тырышып, саҡ-саҡ илап ебәрмәне. Ә Ласло уйынан ҡайтырға йыйынманы. Ике-өс атлауҙа ул Әлфиә-Жужа янына килеп баҫты, өҙөлгән ҡулының ҡалдығы менән ҡыҙҙы үҙенә ылыҡтырҙы һәм дүрт ҡырлы яҫы шешәне уның ауыҙына тығырға уҡталды. Һалҡын, һаҫы шыйыҡса ауыҙ ситтәренән ағып төштө, яға аҫтына кереп, тәнде сымыр-сымыр иттерҙе. Әлфиә-Жужа Ласлоның тимер ҡоршауынан арынып, алыҫ мөйөшкә барып боҫто, еңе менән ауыҙын һөрттө. Үҙе дер-дер ҡалтыранды. Ә һыңар ҡуллы Ласло өйҙө һелкетеп кешнәп көлдө.

— Һо-һо-һоо... Йә, паленка тәмлеме?

Әлфиә-Жужа уның нимә әйткәнен аңламаһа ла, илаған тауыш сығарып, «э-э-э» тип башын сайҡаны. Ласло йәнә нимәлер әйтте, шешәһен өҫтәлгә ҡуйып, томапланған күҙҙәрен алартып, ашыҡмай ғына Әлфиә-Жужаға табан йүнәлде. «Ни эшләмәк була икән ул?» — тигән ҡот осҡос уй уның йөрәген ярып үтте. Ә һыңар ҡуллы һәпрә Ласло һалам аяҡтары менән тауышһыҙ ғына баҫып уға яҡынлашты. Әлфиә-Жужала шик ҡалманы: был бәндә уның менән «шаярырға» теләй. Ул ялт итеп Ласлоның ҡулы аҫтынан шыуып сығып, ишеккә ташланмаҡсы булғайны, теге иҫән ҡулы менән Әлфиә-Жужаның яғаһынан эләктереп алды ла ниндәйҙер ҡаты һүҙ әйтте.

— Ай!.. — тип әсе тауыш менән Әлфиә-Жужа ҡысҡырып ебәрҙе. Ул Ласлонан ҡотолорға теләп, йән көсөнә тартылды, әммә Ласло, иҫерек булһа ла, ҡыпһыуыр шикелле уны ҡыҫҡайны, тик куртка яғаһы ғына шытыр-р итте. Лас-

ло ашыкмай, көсө менән маҡтанғандай, Әлфиә-Жужаны карауатҡа һөйрәне. Өҫтәл ауҙы. Төрлө тауыштар сығарып, иҙәнгә сәйнүк, сәнске-бысаҡтар, буш кәнсирҙәр тәгәрәне. Әлфиә-Жужа йән асыуы менән Ласлоның сатына типте, һәм һонтор Ласло гөрһөлдәп иҙәнгә ҡоланы. Аҡылдан яҙа яҙған Әлфиә-Жужа ишеккә ташланды һәм.. ишек төбөндә ҡатып торған немец һалдатын күреп, ташҡа әйләнде. Әлфиә-Жужа ҡаушауынанмы, көсһеҙләгәнәнме аҡрынлап иҙәнгә ултырҙы. Немец, терһәктәренән тотоп, уға ултырырға ирек бирмәне. Әлфиә-Жужа, ни булғанын, ни булырға тейешлеген асыҡ аңламай, һалдатҡа мөлдөрәп, йәлләтеп ҡараны.

— Ҡурҡма, мин һиңә теймәм, — тине һалдат, уны ултырғысҡа ултыртып. Ә был ваҡыт танауын тарта-тарта, мығырланып Ласло иҙәндән күтәрелә ине.

— Телһеҙ бүкән, — тине Ласло немец телендә.

Ә немец, башын уның яғына бороп, өҙә әйтте:

— Телеңде тый, сусҡа.

Немец, Әлфиә-Жужаны ҡулбашынан тотоп, ишеккә йүнәлде. Улар артынан бүл-бүл иткән тауыш ишетелде. Күрәһең, Ласло тағы паленка һемерәлер. Ә һалдат Әлфиә-Жужаны йыуатты.

— Минән ҡурҡма, себеш, мин һиңә ҡағылмам.

Тышҡа сыҡкас, немец ҡулын уның арҡаһынан алып, тишерҙәй итеп күҙҙәренә ҡарап торҙо. Уның ҡайын көлө төҫлө аҡһыл күк күҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу ҙа, шикләнеү ҙә бар ине. Ҡамалова башын эйҙе.

— Ә һин бер ҙә ыпыҡ ҡыҙға оҡшамағанһың, — тине немец, хәйләле йылмайып. — Минең һеңлем Герта ла ыпыҡ, әммә уның ҡарашы бөтөнләй башҡаса — мәғәнәһеҙ, һалҡын, тап ҡоҙоҡ шикелле. Ә һин телһеҙ-һаңғырау булһаң да, үткергә оҡшағанһың.

Әлфиә-Жужа һалдатҡа ғәмһеҙ, мәғәнәһеҙ ҡарап тороуын дауам итте. Ләкин ул телһеҙ-һаңғырау ҡыҙ ролен бик оҫта башҡара алмағандыр. Һалдат һаман лығырланы.

— Ныҡлап ҡарағанда, һин минең ҡәрҙәшем Гертаға бер аҙ оҡшағанһың, себеш. Ул да, һинең кеүек, осло танаулы, һоро күҙле. Беҙ уны шаяртып, славянка, рус ҡыҙы, тип ирештерә торғайныҡ. Ә ул, тилекәй, үпкәләп, ихлас илай ине. — Ҡапыл немецтың күҙҙәренә хәсрәт пәрҙәһе төштө. — Хәҙер юҡ инде беҙҙең Гертабыҙ. Американдар бомбаһы аҫтында ҡалды. — Һалдат Ҡамалованың беләктәренән һындырырлыҡ итеп ҡыҫып алды, йылан һымаҡ ыҫылданы. — Ҡараңғы төшкәс, янына килермен. Хәҙер минә посҡа сығырға. — Һалдаттың күҙҙәре, хужаһының ҡалъяһын урлаған ата-бесәйҙеке һымаҡ, майлы йылтырай, йоҡа

ирендәре еүешләнгәйне. — Ә һин теге ғәриптән шөрләмә, ул-был булһа, мин уны... — Һалдат баш бармағын пистолет итеп ишеккә тоҫҡаны, телен шартлатып, мадьярса өҫтәп ҡуйҙы: — Хат? Улайһа, гут. — Немец Ҡамалованың муйынынан һыйпаны ла һыҙғыра-һыҙғыра китеп барҙы.

Әлфиә ике ут араһында тороп ҡалды. Ә оҙон, саңдыр майор уларға инструктаж яһағанда бөтәһе лә күҙ алдында тотолғайны, бәтә деталдәр, булырға тейешле һәм «туҙға яҙмаған» ситуациялар ҙа уйланылған, иҫәпләнелгән кеүек ине... Ә бына хәҙер уға ни эшләргә? Башҡа килгән тәүге уй — бынан ҡасырға, бер генә минут та тормай юғалырға... Һыңар ҡуллы әрпеш Ласлонан, ҡайын ағасы көлә тәҫлә аҡһыл күк күҙле немецтан алыҫҡараҡ китергә... Юҡ, һиҫә ҡасырға ярамай, Әлфиә-Жужа. Йылғаның теге ягында һине Андраш көтөп ултырасаҡ. Ә ни эшләргә һун? Ни... Бәлки, ун туғыҙ йыллыҡ ғүмерендә Әлфиә тәү тапҡыр үҙен шундай яңғыҙ һәм көсһөҙ тойғандыр... Ҡысҡырып илағыһы, ҡанга батҡансы ирендәрҙе тешләгеһе килде, ләкин бынан уның хәле яҡшырмаясаҡ. Ул Ласло утын яра торган түмәргә ултырҙы. Бынан уга өй ишеге лә, күпергә бара торған һуҡмаҡ та һәйбәт күренә. Хәҙер тынысланып һалҡын баш менән уйларға кәрәк. Ләкин уйҙар бер-береһен уҙып китә, бутала. «Немец уның телһеҙ-һаңғырау түгеллеген ҡайҙан һиҙенде? Ихтимал, ул Әлфиәнең мадьярка түгел, ә рус ҡыҙы икәнлеген дә һиҙенгәндер? Улай тиһәң, ниңә үҙе менән алып китмәне? Немец, ҡараңғы төшкәс килермен, тине. Тимәк, ҡараңғы төшә башлағас, уға ҡыуаҡлыҡтар эсенә инеп йәшенергә лә, төн етеү менән, теге яҡҡа йөҙөп сығырға кәрәк».

Ә ҡараңғы төшөргә бик оҙаҡ ине әле. Тик кенә ултырғас, тәнгә һалҡын үрмәләне. Өшөткәс, ашағыһы килә башланы. Сүп-сар аҫтына йәшергән токто алаһы килмәй. Ирендерә лә, хәтәр ҙә, күҙәтеп тороуҙары бар. Ҡамалова таушһыҙ ғына атлап тәҙрә янына килде лә ҡарауылсы йортоноң эсенә күҙ һалды. Ласло таҡта карауатҡа йөҙ түбән ятҡан, бер аяғы иҙәнгә һалынып төшкән. Ҡыймылдамай, йоҡлайҙыр, ахры.

Әлфиә-Жужа, тештәрен ҡыҫып (әйтерһең, тештәрҙе ҡыҫһаң, ишек шығырламай), һаҡ ҡына ишекте асты, иртәнге аштан тәҙрә төбөндә тороп ҡалған икмәк, салоны тиҙ-тиҙ генә кеҫәһенә тыҡты ла тышҡа сыҡты. Утын яра торған түмәргә барып ултырҙы. Инде ҡата башлаған икмәк ҡыйырсығын ҙур итеп ҡабып, салоны тешләмәксе булғайны, илаҡ бала һымаҡ, ыңғырашып, тышҡы ишек асылды — Ласлоның һонтор кәүҙәһе күренде. Әлфиә-Жужа һикереп тороп, ҡаушап Ласлоға теклән ҡараны. Теге, асыуһыҙ ғы-

на һуҡранып, иҫән ҡулы менән болдор аҫтына ишараланы. Был хәрәкәт нимәне аңлатҡандыр, Әлфиә-Жужа төшөнә алманы. Ласло бер-ике аҙым атланы ла, ауыр кәүҙәһе менән гөрһөлдәп, ергә йығылып төштө. Әлфиә-Жужа ҡурҡыуынан, ҡаушауынан бер нисә аҙым артҡа һикерҙе, тын алырға батырсылыҡ итмәй, «ни булыр икән?» тип күҙәтә башланы. «Ҡыҙыҡ, болдор аҫтынан нимә күрһәтергә теләне ул? Баяғы тоҡ йәшергәнде күреп, ҡурҡытмаҡсы булдымы, әллә...» Ә Ласло хәрәкәтһеҙ ята бирҙе. Әлфиә-Жужа, ниңәлер, шөрләй башланы. Ласлоға табан атланы. Ласло ҡыймылдаманы. Әлфиә-Жужа ҡаушап китте. «Әллә ҡапыл үлдеме?» Ул инде, тәүәккәлерәк атлап, Ласло янына уҡ килде, эйелеп, уның һулышын тыңланы. Ласлоның тын алғаны ишетелмәй ине. Әлфиә-Жужа сирҡанып, һаҡ ҡына уның ҡулын тотоп пульсын һәрмәп ҡараны. Бер төрлө лә реакция юҡ ине. Ҡапыл баяғы йән асыуҙары бәттө, һәм ғүмерен яңғыҙлыҡта үткәргән был ғәрип, бәхетһеҙ кеше уға үтә йәл булып китте. Әлфиә-Жужа уны көс-хәл менән салҡан әйләндерҙе. Ласло ухылдап һуланы, был һулыш алыуға ҡарағанда ғырылдауға оҡшай ине, бик аҡрын ғына күҙҙәрен аса башланы, ләкин ҡабаҡтар сикһеҙ ауыр ине, Ласлоның уларҙы асырлыҡ хәле ҡалмағайны — ана шулай, асылыр-асылмаҫ күҙҙәрен зәңгәр Венгрия күгенә текләп, йәнә бер мадьяр был донъяны ташлап китте. Әле генә кескәй ике күкте хәтерләткән күҙҙәр ҡапыл йәнһеҙ, һалҡын быяла киҫәктәренә әйләнде. Ҡапыл Әлфиә-Жужа Ласло кәүҙәһе янынан тороп йүгерҙе. Ниңә, ҡайҙа йүгерә ул? Әлфиә-Жужа хәрәкәттәренә иҫәп-хисап бирмәне. Хатта, уның ҡапыл һалам сүмәләһе яғына сапҡанын немецтарҙың күреп ҡалырын да башына килтермәне. Сүмәләгә барып ауғас, аҙыраҡ тын алғас ҡына, ул уйланды: «Ә тоғо ҡайҙа?» Әлфиә-Жужа йәнә, һикереп тороп, өйгә ҡарай йүгерҙе. Ташҡа әйләнгән Ласлоның кәүҙәһен күргәс, Әлфиә-Жужаның күңеле йомшарып китте. Өйгә инеп, йөҙ төрлө боҫҡаҡтан тегелгән юрған алып сығып, Ласлоны башынан аяғына саҡлы бөркәп ябып ҡуйҙы. Инде уның янынан киттем тигәндә, Ласлоның болдор аҫтына күрһәткән хәрәкәте иҫенә төштө. Ҡыҙыҡ, ни әйтергә, нимә күрһәтергә иткәйне икән һуң ул? Әлфиә-Жужа болдор янына килеп, уның кескәй генә ишегенә башын тыҡты — ҡараңғы ине, бер нәмә лә күренмәне. Әлфиә-Жужа күҙҙәрен йомоп алды. Болдор аҫты яҡтырыбыраҡ китте. Ишкәкте тартып сығара башлағайны, аҡылына килде: әгәр немецтар биноклдән уны күҙәтеп торһа? Тормағайы! Ул хәҙергә ишкәкте урынына ҡуйҙы ла, сүп-сар, юнысҡылар түгелгән өйөм янында йәһәт кенә эйелеп, йәшерелгән тоғон алды һәм һалам сүмәлә-

һенә йүнәлде. Тоғон мөмкин тиклем сүмәлә эсенәрәк йәшерҙе, ҡулдары менән бесәнде тырнап, үҙенә өн әҙерләне. Нервылар көсөргәнешенән, ашығыс хәрәкәттәрҙән ул йылынып китте, тән йылынғас, күңел дә бер аҙ күтәрелә төштө. Сүмәлә эсенә инеп, яйлап ултырырға ла өлгөрмәне, ойота башланы. Ләкин Әлфиә-Жужаға йоҡларға ярамай ине — ул боттарын семтене, бармаҡтарын ауырттырып тешләне, әммә йоҡо үҙенекен итте...

Күпме йоҡлағандыр, ул сәғәткә ҡарамағайны, йоҡонан уянғанда, ҡояш офоҡ артына инеп йәшенгәйне. Күкрәк, ниңәлер, һулҡылдай, буш ҡорһаҡ аҙыҡ талап итә. Ләкин ул тоҡто алып сисергә иренде, хәрәкәтһеҙ ултырыуын дауам итте. Күҙ бәйләнә башлау менән, ул ишкәкте болдор аҫтынан алып киләсәк, ә ҡараңғы төшкәс, кәмәне эҙләп китәсәк. Бына ул саҡта, капитан Ардыуанов әйткәнсә, «бөтәһе лә ал да гөл булыр». Әгәр капитан уның янында булһа, Әлфиә үҙен тынысыраҡ, тәүәккәлерәк тойор ине. Ҡапитанда Урал тауҙарына хас ҡеүәт һәм... бына нисек әйтергә инде, үҙ көсөнә ышаныусанлыҡ бар. «Теләһә ниндәй хәлдән дә сығырға юл табып була, тип өйрәтте уны Әшрәф. Мәҫәлән, йорт яна, ти. Һин бишенсе ҡатта йәшәйһең. Ишек бикле. Ни эшләргә? Пожар һинең бүлмәңә лә килеп еткәнде көтөп ултырырғамы? Ҡөтмәҫкә. Ямғыр һыуы аға торған торбанан шыуып төшөргә. Әгәр ундай торба булмаһа, иҙән таҡталарын ҡутарып, аҫҡы ҡаттағы түшәмде емереп, түбән төшөргә. Йәки башҡа миҫал. Йылға уртаһында, иң тәрән урында, аяғыңды көҙән йыйыра башланы, ти. Ҡаушама. Арҡаңа әйләнеп ят. Көҙәндән ташҡа әйләнгән аяғыңды ҡанағансы семте...»

Сафуан ағаһы ла, фронтта бер ҡасан да ҡаушап, юғалып ҡалмаҫҡа, паникаға бирелмәҫкә кәрәк, тип йыш ҡына ҡабатлай торғайны. Ҡаушаның, хана, һиңә билдәләнмәгән пуля ла һине эҙләп табасаҡ.

Ашыҡмай ғына билдәһеҙ, серле һәм хәтәр төн килде. Был уның ғүмерендә сит ерҙә, дошмандар араһында япа-яңғыҙ үткәреләсәк тәүге төн ине. Ниңәлер, фронтта эңер ваҡыты бигерәк тә шомло тойола: артиллеристар төндә утҡа тотоласаҡ объекттарға пристрелка яһап ҡалырға тырыша; пулеметчиктар башланған магазиндарын бушатырға ашыға... Атыш-дуэль ике яҡтан да ҡыҙғандан-ҡыҙа һәм теләр-теләмәҫ кенә һүлпәнләнә, һүнә. Оҙаҡламай старшиналар, ауыр термостарҙы арҡаларына аҫып, эҫе аш ташый башлай; боеприпастар килтерелә; разведчиктар заданиеға китергә әҙерләнә; һалдаттар көнө буйы эшләп ҡоромланған, ҡыҙған ҡоралдарын таҙарта; ваҡыт һәм мөмкинлек булһа, өйгә өс мөйөшлө хаттар-ҡарлуғастар әҙер-

ләнә, адрестар ҡағыҙға тел менән сылатылған күрән ҡә-ләм менән яҙыла; ҡайһы берәүҙәр, был һүҙҙәрҙең файҙа ит-мәҫлеген белһә лә, шаярта төшөп, «срочно!» тип адрес өҫ-төнә яҙып, аҫтына һыҙып ҡуя. Ләкин «ҡарлуғастарҙың» юлдары алыҫ, ҡанаттары аҡрын талпына, тыныс ваҡытта бер аҙнала барып еткән хаттар, хәҙер берәр ай сәйәхәт итә.

Был хаттарҙа сәстәр үрә торорлоҡ та, шатлыҡтан йәш-тәр атылып сығырлыҡ та яңылыҡтар булмай: туған-тыума-саға, күрше-күләнгә, дуҫ-ишкә берәмтекләп сәләм әйтелә һәм хат яҙылған число, сәғәт яҙыла. Ләкин был «ҡарлу-ғастар» фронттан алыҫта, тылда йәшәүселәр өсөн иң ҡим-мәтле посылкаларҙан да ҡәҙерлерәк, иң күңелле хәбәрҙәр-ҙән дә ҡыуаныслыраҡ. Разведканан урап ҡайтҡас, ул да хаттар яҙасаҡ. Өйгә. Әшрәфкә. Әклимәгә. Наташаға. Һәм... һәм мәктәпкә. Хәҙер инде яҙырға һүҙ бар.

Әлфиә-Жужа, һаламды асып, сүмәләнән сыҡты. Инде төн көндө еңгәйне. Ишкәктәрҙе килтерергә лә була. Булы-уын була... Әгәр уны теге көл төҫлө күҙле немец һағалап торһа? Юҡҡа майор уға бер төрлө ҡорал да, хатта финка ла алырға рөхсәт итмәне.

«Их, ни булһа ла булыр!» — тине лә Әлфиә-Жужа йән-фарманға өйгә ҡарай йүгерҙе. Туҡтап тын алып тормай, уңға-һулға ҡарамай ҡулын болдор аҫтына тығып бутанды, бер ишкәкте тапты, икенсеһен һәрмәнһә лә таба алманы, башын тыға биреп эҙләне, ләкин башҡа ишкәк юҡ ине. Эсенән: «Черт с ним!» — тине лә сүмәләгә табан йүнәлде. Ишкәкте ул сүмәлә артына ташланы, үҙе өҫөнә инеп йә-шенде. Хәҙерныҡлап ҡараңғы төшкәнде көтөргә кәрәк. Ай ғына ҡалҡмаһа ярар ине. Әгәр айҙың тулып килгән сағы булһа... Бәлки, ул ғүмерендә тәү тапҡыр тулған айҙан ҡурҡҡандыр. Ә элек... айлы төндәрҙә... Башҡа шундай ма-тур уйҙар килә торғайны, хистәр таша, йыр үҙенән-үҙе күк-рәктән ағыла ине. Бигерәк тә улар ҡапҡаһы төбөндәге эс-кәмйәлә, муйылдар сәскә атҡан мәлдә...

Бәхеткә ҡаршы, ай күренмәне, ҡараңғылыҡ ҡуйырған-дан-ҡуйырҙы, әйтерһең, кемдер күк көмбәҙен ҡоромға буя-ны, ә йондоҙҙар артҡандан-артты, яҡтырғандан-яҡтырҙы. Әлфиә-Жужа Етегән йондоҙҙо эҙләп тапты. Әлфиә-Жужа Етегән йондоҙҙоң башындағы йондоҙҙан өҫкә табан тура һыҙыҡ һыҙҙы ла Тимер ҡаҙыҡ йондоҙон эҙләй башланы. «Кәрәк булыуы бар. Ят ер, төн, бик тиҙ аҙашыуың бар».

Ул арҡаһына тоғон аҫты, ҡултыҡ аҫтына ишкәкте ҡыҫ-тырҙы ла йылғаға ҡарай ашыҡты. Тиҙерәк теге яҡҡа сы-ғырға ла, Андраш ағайҙы эҙләп табырға кәрәк. Көтә-көтә көтөк булып бөткәндер, бисараҡай.

Йылға әллә ни киң түгел ине — Димдән, күп тигәндә, ике-ике ярым тапҡыр ҙурыраҡтыр. Дим кеүек тымыҡҡа ла оҡшаған. Йылға буйлап түбәнгә төшкән һайын яр батҡаҡлана, ҡамыш, күрән ҡуйыра бара ине. Был ваҡытта тегендә, Уралда, бындай тымыҡ йылғаларҙың яр ситтәре селтәрле бөҙҙәр менән ҡаймалана, ә бында, көнбайышта, әле даръялар «ҡышҡы формаға» күсергә йыйынмай ине. Ә кәмә — юҡ... Ҡайҙа йәшергән уны Ласло? Әллә йылғанан һөйрәп сығарып, аулаҡ урынға индереп ҡуйҙымы икән? Юҡ, улай эшләмәҫ, сөнки кәмәнең уға көтмәгәндә ашығыс кәрәк булыуы бар бит. Етмәһә, Ласло һыңар ҡуллы. Ҡыҫҡа, ҡуйы ҡыҙыл таллыҡ башланды. Тал араһында кәмә түгел, пароход та күренмәҫ. Әлфиә-Жужа, кәмәне күрмәүем бар, тип яр буйынан, һыу эсенән бара — ботинкалар эсендә һалҡын һыу лас-лос итә.

Ул йә бер аяғы менән — һыуға, икенсеһе менән батҡаҡ ергә баҫып барҙы, йә, ярҙан ситкәрәк китеп, сүгәләп ултырып, күҙҙәре ауыртҡансы таллыҡтан кәмәне эҙләне. Юҡ, бер нәмә лә күренмәй...

Инде өмөтөн өҙөп, ботинкаларын һалып, курткаһын сисеп тоғона тултырырға йыйынғас, йылғаға буй янтайған йыуан өйәңке янында һыуға арҡыры ятҡан бер бүрәнә күренде. Әлфиә-Жужа абына-һөрөнә ҡарт өйәңке янына йүгерҙе. Бүрәнә кәмә булып сыҡты.

Кескәй генә, күп тигәндә ике кешене күтәрерлек, бүрәнәнән соҡоп яһалған, йәмшек моронло, осло ҡойроҡло боронғо «карап» ине ул. «Карап» сылбыр менән өйәңкегә бәйләп ҡуйылған. Әлфиә, шатлығынан ни эшләргә белмәй, тоғон кәмәгә ырғытты, ишкәкте һуҙа һалды ла сылбырҙы сисә башланы. Ә ул, үс иткәндәй, сиселмәй ҙә ҡуя. Тынысланыр өсөн, «егерме бер, егерме ике, егерме өс, егерме дүрт» тип һанарға тотондо. Әлфиә-Жужа тыныслана төштө. Сылбыр, ниһайәт, сиселде. Ул кәмәне йән көсөнә һыуға этте лә үҙе кәмәгә һикереп ултырҙы. Кәмә төбөндә байтаҡ һыу бар икән. Башҡа урында, башҡа саҡта булһа, ихтимал, ул кәмәне ҡыйшайтып, һыуын түккән булыр ине, ләкин хәҙер уның ҡайғыһы юҡ ине. Ишкәк менән этәреп, тиҙерәк һай ерҙән сығырға ла... Ул аяҡ үрә әле уң яҡтан, әле һул яҡтан иште. Йылғаның ағышы һиҙелер-һиҙелмәҫлек кенә; еңел йылдам кәмә, ул ни теләһә, шуны эшләй. Иҫән-имен генә йылғаның уртаһына еткәс, күпер яғынан бер юлы ике ракета күккә атылды, Әлфиә ялт итеп еүеш кәмә төбөнә ятты. Сыланыуы әллә ни түгел, ҡолағанда ишкәкте ҡулынан төшөрөп ебәрҙе ул. Ятҡан килеш, ҡулдарын кәмә ситенән һалындырып, устары менән иште. Ишкәкте ҡыуып етеп тотоп алам тигәндә, саҡ-саҡ кәмәһен ауҙар-

маны. Никәкте табып алғансы, ракеталар аҡрынлап һүнде. «Күк фонарҙары» һүнеү менән, Әлфиә-Жужа йәнә аяҡ үрә баҫты ла ҡабаланып ишергә тотонды. Ракеталар янынан ҡабынғанда, уны ҡаршы ярҙың ҡыуаҡтары ышыҡлай ине инде.

Әлфиә-Жужа, кәмәнен мороно ярға тәртәләү менән, һикереп төштө лә, тоғон алып, текә ярҙан өҫкә үрмәләне. Ә кәмә? Уны ағастарҙың ҡуйыраҡ урынына ныҡлабыраҡ йәшерергә ине лә, ләкин уның кире төшкөһө килмәне — хәтәр урындан китергә кәрәк.

Текә яр аҫта ҡалды. Ул шыбыр тиргә төштө. Йөрәге минутына йөҙ илле булмаһа ла, йөҙҙән артыҡ тибәлер. «Егерме бер, егерме ике, егерме өс, егерме дүрт...» Ул үҙе һананы, үҙе тирә-яҡҡа ҡараны. Әммә ағастарҙан, ҡыуаҡлыҡтарҙан башҡа бер нәмә лә күренмәй. Ул яҡындағы бер ағас янына барып, уның олонона һыйынды ла, устарын ауыҙына ҡыуышлап ҡуйып, өс тапҡыр өкө булып ҡысҡырҙы: «Һө-һу, һө-һу, һө-һу». Аҙ ғына тынып алғандан һуң, йәнә ҡысҡырҙы: «Өһүүү!» Тыңлап торҙо. Яр буйындағы ағастар, ҡыуаҡтар серле тынлыҡта ҡарайып тора. Әлфиә-Жужа, ун-ун биш аҙымдар ситкәрәк китеп, сигналын ҡабатланы. Яр буйы уға яуап бирергә теләмәне. «Әгәр Андраш ағай уны һыу буйында көтөп торһа? Ул сағында Андраш Әлфиә-Жужаның яр буйына килеп туҡтағанын йә күрергә, йә ишетергә тейеш ине. Әгәр ул көтә-көтә ойоп киткән булһа?..»

Әлфиә-Жужа, шыуып, текә ҡом ярҙан аҫҡа, һыу буйына, төштө. Бер йылға ағышы менән өҫкә менеп, бер аҫҡа төшөп, Андраш ағаһына сигнал бирҙе: «Һө-һу, һө-һу, һө-һу...» Яр ҙа уның тауышына ҡолаҡ һалманы. Тик ҡайһы сағында ҡамыштар ғына ҡыштырлап ҡуя ла, йоҡлай алмаған балыҡтармы, тәлмәрйендәрме һыуҙы сутылдатып ала. Әлфиә-Жужа йәнә, тыны-көнө бөтөп, текә ярҙан үрмәләп күтәрелде, ары-бире йүгереп Андрашҡа шартлы сигнал бирҙе, ләкин теге, ниңәлер, яуапларға теләмәне. Ни булған уға? Шундай ҡаты йоҡоға талғанмы? Йоҡларға тейеш түгел. Ул бит тегендәй-бындай еңелтәй кеше түгел. Оҙон юл үтеп, ауыр эш эшләп арымаған... Улайһа, ниңә яуап бирмәй?..

Әлфиә-Жужа, үҙенең юлдашын эҙләп, таң атҡансы өкө булып ҡысҡырып йөрөнө, тамағы бөттө, әммә бөтәһе лә юҡҡа ғына ине. «Әллә немецтар, ниҙер һиҙенеп, үҙен ҡулға алдымы икән? Ысынлап та, һыңар ҡуллы Ласлоның ҡылығы шикле ине, бик оҙаҡ юғалып торҙо... Иҫереп ҡайтты... Окопташ дуҫының һеңлеһенә бәйләнде...»

Хәҙер ни эшләргә инде уға? Ни эшләй ала инде уның хәленә төшкән кеше? Берҙән-бер эш — түҙеп көтөү.

Таңға табан тағы ла һалҡынайта төштө. Еүеш кейем тәнгә йәбешә, ҡалтырата. Ә уның янында бер нәмәһе, хатта шырпыһы ла юҡ. Хәйер, шырпы булыуҙан ни файҙа? Усаҡ яғып булмай бит инде.

Ҡойолоп төшмә, Әлфиә-Жужа. Әшрәф һине, теләһә ниндәй хәлдән дә сығыр өсөн юл табырға мөмкин, тип өйрәтте бит. Сафуан ағайың, бер ҡасан да, бер ерҙә лә башыңды юғалтма, тип кәңәш бирҙе. Тәүәккәл, тапҡыр кешеләр бер ҡасан да юғалып ҡалмай. Әле һинең эшең бөтөнләй мөшкөл түгел. Көтөргә кәрәк. Әгәр Андраш ағай ҡулға алынмаһа, иҫән-имен булһа, иртәме-һуңмы, барыбер эҙләп табасаҡ...

Әлфиә-Жужа тоғон серегән агас төбөнә йәшерҙе лә йылға буйына тәгәрәп-шыуып төшөп китте — яҡтырғансы кәмәне ышаныслыраҡ урынға йәшерергә кәрәк ине. Ҡамышлыҡта һыу ағышы һиҙелмәһә лә, кәмә һыу эсенәрәк киткәйне, Әлфиә-Жужа, балтырына саҡлы сыланып, кәмәне һөйрәп килтерҙе, яртылаш ярға сығарып, йөҙ түбән әйләндерҙе лә ишкәкте кәмә аҫтына йәшерҙе. Хәҙер инде ситтән түгел, яҡындан да уны кәмә түгел, бүрәнә тип уйларға мөмкин ине.

Әлфиә-Жужа текә ярҙан өсөнсө тапҡыр күтәрелә. Ашыҡма! Әллә төндө ошонда, һыу буйында, әрәмәлектә генә үткәрәһеңме? Бында хәүефһеҙерәк бит. Юҡ, бында, яр башындағыға ҡарағанда, һалҡыныраҡ. Етмәһә, йылға ашыҡмай ғына аҡ томан юрғанын ябынып ятһа — тағы ла һалҡынайтасаҡ. Яр башына күтәрелергә лә ышығыраҡ урын эҙләргә кәрәк. Ихтимал, берәй ташландыҡ шалаш табылыр. Туҡта, туҡта, был яҡ яр буйлап дошмандың запас оборона һыҙығы үтә, тигәйнеләр түгелме һуң? Немецтар бөтә нәмәне лә ныҡлап, еренә еткереп эшләргә ярата, ә Гитлер: «Будапештты ер менән тигеҙләһәм тигеҙләйем, әммә рустарға бирмәйем», — тип ант иткән, ти. Тимәк, бында окоптар, блиндаждар ғына түгел, дзоттар, доттар * ҙа барҙыр. Был фекер ҡапыл Әлфиә-Жужаны йәнләндереп ебәрҙе. Ул серегән төп аҫтынан тоғон алды ла немецтарҙың ут нөктәләрен эҙләргә тотондо. Хәйер, эҙләү тигән һүҙ бик дөрөҫ тә булмаҫ ине, сөнки бая ул өкө булып ҡысҡырып сәбәләнеп йөрөгән урындан егерме-утыҙ аҙымдар ғына арыраҡ немецтарҙың окоп теҙмәләре, пулемет оялары, дзоттары башлана ине. Пулемет өсөн әҙерләнгән дзотты күргәс,

---

* *Дот* — долговременная огневая точка, тимер-бетондан эшләнгән оҙаҡҡа сыҙарлыҡ ут нөктәһе.

ул, аҫка төшөргәме-төшмәҫкәме, тип шикләнеп торҙо. Дзотта төндө үткәреү дөрөҫ булырмы икән? Әгәр унда пулемет янында дежур итеүсе һалдаттар булһа? Булмаҫ, булһа, уның ары-бире сабып йөрөгәндәрен күрерҙәр, һиҙерҙәр ине. Ә шулай ҙа һаҡлыҡ кәрәк, Әлфиә-Жужа, һаҡлыҡ.

Ул бесәйҙәргә генә хас һаҡлыҡ менән таҡта баҫҡыстарҙан дзотҡа төшә башланы. Бер атлай ҙа ҡолаҡ һала, бер атлай ҙа тыңлап тора. Тынлыҡ. Хәҙергә шылт иткән тауыш та юҡ. Ҡыйыуыраҡ бул, Ҡамалова. Ул эскә асыла торған ишеккә бөтә кәүҙәһе менән ятты, ишек бер тауышһыҙ еңел асылды (әллә майлағандар ҙа инде, мөртәттәр). Дзот-блиндаж буш ине. Их, кесәһендә шырпыһы булһа... Бынан һуң ул аҡыллыраҡ буласаҡ, юлға бер ҡасан да шырпыһыҙ йәки зажигалкаһыҙ сыҡмаясаҡ. Һәм бәкеһеҙ. Туҡта, туҡта, тоҡта бысаҡ булырға тейеш түгелме һуң?

Шул минутта уҡ ул әллә ни эшләп китте. Аҡылһыҙ, ахмаҡ һин, Ҡамалова. Әгәр ошо минутта немецтар килеп керһә, уның тоғон аҡтарһалар, икмәген урталайға һындырһалар?!. Бындай хата йыш ҡына кешенең башына етә. Ул тиҙ генә тоғонан икмәкте, сусҡа майын алды ла дзоттан сыҡты, баяғы серек ағас төбөнә илтеп тоғон йәшерҙе, япраҡтар менән маскировка яһаны. «Беленмәйме?» тип төрлө яҡтан төпкә ҡарап алды, тынысланып, ашыҡмай ғына яңы табылған «өйөнә» йүнәлде. Япраҡтар йыйып, дзотҡа алып төштө. Дзоттың боеприпас ҡуйыр өсөн эшләнгән урынына һалам түшәп, бөрөшөп ятты. «Ни булһа ла була».

Нисек йоҡлап китеүен, күпме йоҡлауын ул хәтерләмәй ҙә, белмәй ҙә. Сәғәте булһа ла, быға саҡлы сәғәт йөрөтөп гәҙәтләнмәгәс, еңен ҡайтарып беләгенә ҡарарға онота. Өшөүҙән уянып китте ул. Бөтә тәне ҡалтырана, тештәре шаҡылдай. Ул тиҙ генә һикереп торҙо ла һикергеләй, ҡулдарын ыуа башланы. Амбразуранан һөҙөлөп ҡояш нуры көлтәһе төшә — тимәк, бөгөн дә көн аяҙ буласаҡ.

«Чечетка»ға тыпырлап бер аҙ йылынғас, Ҡамалованың башына йәнә баяғы ҡырағай уй килде — әллә тағы таяҡтарҙы бер-береһенә ышҡып ҡарарғамы? Туҡта, баяғы таяҡтарҙы ҡайҙа ҡуйҙы әле ул? Ә дзот уртаһында нимә ул — көл-күмер, торонбаштар түгелме һуң? Бәлки... бәлки.. Әлфиә бер һикереүҙә көл өйөнтөһө янына барып етте, аяҡтары менән көлдө-күмерҙәрҙе бутаны, һәм ниндәйҙер ҡыҙыл нөктәләр күренеп китте. Әлфиә-Жужа эйелде, ҡулдарын көлгә тыҡты. Көл йылы ине. Иплән кенә ул көлдө аҡтарҙы, бармаҡтары, әле һүнеп бөтмәгән торонбаштарға тейеп, бешеп алды. Юҡ, ул «ай!» тип ҡысҡырманы. Ул ошо минутта үҙен сикһеҙ бәхетле хис итте. Тиҙ генә бая үҙенә яҫтыҡ булган ҡоро япраҡтарҙы торонбаштар өҫтөнә һалды

ла, ергә һуҙылып ятып, бөтә көсөнә өрҙө. Япраҡтар, ҡоро булһа ла, тиҙ генә тоҡанырға теләмәне, әммә ут үҙенекен итте — тәүҙә бер һары япраҡты уртаһынан тиште, тора-бара япраҡты бөтөнләй көлгә әйләндерҙе, ә Әлфиә-Жужа һаман өрҙө лә өрҙө. Ниһайәт, тырышлыҡ бушҡа китмәне — һары, ҡыҙғылт һоро, бронза төҫөндәге япраҡтар сытыр-сытыр яна башланы. Әлфиә ҡалған япраҡтарҙы тоҡанып килеүсе усаҡҡа тиҙ генә ташланы ла тыштан ҡоро сыбыҡ-сабыҡ йыйып алып керҙе. Ул ашыҡты, ул усаҡ һүнер тип ҡурҡты, тыштан алып кергән сыбыҡтарҙы ташлағас, тағы дзоттан сығып китте. Был юлы инде бер ҡосаҡ сыбыҡ алып төштө һәм... йәнә төптән уйлап еткермәүен аңлап, үҙ-үҙенә сәмләнде — һуң усаҡ шәп янһа, төтөнө лә ныҡ сыға бит. Хәҙер усаҡҡа бик шәбәйеп китергә лә ирек бирмәҫкә, һүндермәҫкә лә кәрәк.

Әлфиә-Жужа яйлап ултырҙы, ботинкаларын сисеп, аяҡтарын усаҡҡа һуҙҙы — ут йылыһы шунда уҡ аяҡ буйлап быуындарға таралды, юғарыраҡ күтәрелде. Рәхә-әт! Бәлки, уның ғүмерендә бынан да рәхәтерәк, шатлыҡлыраҡ минуты булмағандыр. Ул устарын төтөнлө-ялҡынлы усаҡ өҫтөнә ҡуя, ҡул бешә, ләкин алаһы килмәй. Туҡта-туҡта, ә тоҡта уның көрөшкәһе бар ҙа. Ул тиҙ генә ботинкаларын кейҙе лә, дзоттан йүгереп сығып, тоғо йәшерелгән ағас төбө янына сапты. Ыһ тигәнсе тоҡ төп аҫтынан алынды, сиселде, йәнә бер-ике секунд, һәм һалҡын алюмин көрөшкә уның йылы ҡулында. Әле томан күтәрелеп бөтмәгән, йылғаға төшөп һыу алып менергә мөмкин... Уйланған эш — эшләнгән эш. Тоҡ йәнә үҙ урынына инеп ятты. Әлфиә-Жужа яр башына килде лә, артына ултырып, тауҙан сана шыуған шикелле, аҫҡа шыуып төшөп китте. Был хатта уға ҡыҙыҡ булып китте. Ә бына менгәндә иләп кенә, яй ғына менергә кәрәк ине — көрөшкәләге һыуҙың тамсыһы ла түгелмәһен.

Ҡескәй генә усаҡта алюмин көрөшкәгә һалынған һыуҙың ҡайнап сыҡҡанын көтөп, Ҡамалова уйға ҡалды. Ни нәмә хаҡында уйланы һуң ул? Дошман ере, дошман блиндажы, һәр минуттың һәр секундында немец килеп кереп, уға автоматын тоҫҡарға мөмкин — ана шундай хәтәр мәлдә ҡескәй генә ҡыҙыҡай ни нәмә хаҡында уйларға тейеш һуң? Күңелһеҙлеккә бирелергәме? Юҡҡа фронтҡа ашҡындың, аҡылһыҙ ҡыҙыҡай, тип эш эшләгәндән һуң үкенергәме?

Юҡ, Ҡамалова был турала уйламаны. Сафуан ағаһының «Аҡыллы фекерҙәр хазинаһы...» тигән йөҙ битле дәфтәрендә: «Эшләгән эшең өсөн үкенеү — ихтыярһыҙ кешеләр эше» тип яҙылған. Тимәк, тәүҙә ныҡлап, нигеҙле итеп уйларға, унан эшләргә кәрәк. Эшләгәс, үкенмәҫкә. Бына көслө, тәүәккәл кешеләрҙең һыҙаты нисек була!

Ә Сафуан ағаһының «хазина»һында нимәләр генә юҡ икән! Афоризмдар, әйтемдәр, мәҡәлдәр, төрлө заманда төрлө илдә йәшәгән аҡыллы кешеләрҙең «ҡанатлы һүҙҙәре» ...Әлфиәгә бигерәк тә бер әйтем оҡшағайны: «Үткән менән генә йәшәһәң, йәшәмәүең артыҡ. Киләсәк менән генә йәшәһәң, йәшәүҙең ҡыҙығы, тәме юҡ. Бөгөнгө менән йәшә, үткәнде хәтерлә, киләсәкте онотма. Бына — йәшәүҙең мәғәнәһе!»

Ә шулай ҙа Әлфиә-Жужа ошо минутта ни нәмә хаҡында уйланды һуң? Кеше уйланмай бер генә минут та йәшәй алмай бит. Юҡҡа ғына: «Мин фекер йөрөтә алам, тимәк, мин әле йәшәйем», — тимәгән боронғо философ.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Әлфиә-Жужаның бөтә иҫе-уйы Будапештта ине. Будапештҡа тиҙерәк эләгергә лә командованиеға мөһим мәғлүмәттәр тапшырырға. Оҙон, матур майор: «Ҡамалова шундай мәғлүмәттәрҙе ҡайҙан ала икән?» — тип шаҡ ҡатһын. Ә асылда ул немец блиндажында алюмин көрөшкәгә һалынған һыуҙы ҡайнатып ултыра. А... һыу ҡайнап сыҡҡан да баһа! Ул, куртка салғыйы менән тотоп, кружканы ситкә алып ҡуйҙы. Тоғонда сәй булһа, ул хәҙер дегет төҫлө итеп сәй ҡайнатыр ине лә ауыҙын бешерә-бешерә ләззәтләнеп эсер ине. Өйҙә саҡта ул бит сәй яратмай торғайны. Әсәһе мунсанан ҡайтҡас йәки бәлеш ашағандан һуң бер үҙе бер самауыр сәй эсер, ә Әлфиә: «Әсәй, ағып китәһең бит инде», — тип уйнан көлөр ине. Әсәһенең быға хәтере ҡалманы. «Ашыҡма, ҡыҙым, һин дә сәйҙең тәмен дә, сорттарын да аңлай башларһың. Сәй ул бөтә дарыуҙарҙан да шифалыраҡ нәмә», — тип уны сәйгә күнектерергә тырышты. Их, әсәкәйем, булһын ине әле бына ошо блиндажда һинең һөтлө сәйең... Ҡыҙыҡ, әсәһе ошо минутта ҡыҙының ҡайҙа икәнлеген һиҙенәме икән? Ҡайҙан һиҙенһен инде.. Әлфиә-Жужа йылмая, бармағын кружкаға тейҙереп ҡарай — әле эсерлек түгел — эҫе. Ҡапыл ул тына. Һулышын ҡура. Йөрәге тибеүҙән туҡтай. Сеү! Тыштан аяҡ тауыштары ишетелә түгелме? Ул, тиҙ генә тороп, усаҡты тапап һүндерә. Аяҡ тауыштары юғала. Әллә ҡурҡҡанға ҡуш тигәндәй, шулай тойолдомо икән? Юҡ, тойолманы. Һөйләшәләр. Ниндәй телдә һөйләшеүҙәрен айырып булмай. Немецтармы, мадьярҙармы? Кемдәр генә булмаһын, уны бында тапһалар, башынан һыйпамаясаҡтар. Ул бер патрондар ҡуя торған урынға инеп йәшенмәксе, бер амбразуранан сығып шылмаҡсы булды, әммә береһен дә эшләргә өлгөрмәне, ишек яңағы урынына ҡуйылған бағана артына йәшенде. Аяҡ тауыштары яҡынайҙы, инде ниндәй телдә һөйләшкәнде айырып була ине. Немецтар!

«Төтөн еҫен тояһыңмы?» — ти гырылдыҡ тауыш. «Һинең

танауың һәр ваҡыт ниҙер тоя инде. Һиңә кеше түгел, овчарка булырға кәрәк ине», — ти икенсеһе мыҫҡыллап. «Овчарка, овчарка... минән көлгәнсе, әйҙә төшәбеҙ ҙә ҡарайбыҙ», — тип ныҡышты ғырылдыҡ. «Блиндажда ятыу туйҙырмаған булһа, бар, төш тә ҡара, ә мин берҙе көйрәтеп алам», — ти икенсеһе ҡәнәғәтһеҙләнеп. Әлфиәнең йәне табанына төштө. Бына-бына ишек асыласаҡ, ғырылдаҡ тауышлы һалдат кеҫә фонары менән блиндаж эсен яҡтыртып ебәрәсәк һәм... һәм бөгөнгө ҡояшлы-томанлы көн Әлфиә Камалованың һуңғы көнө буласаҡ. Бер кем, бер ҡасан уның ҡайҙа, нисек һәләк булыуын белмәйәсәк. Мәғәнәһеҙ үлем...

Ашыҡма, Әлфиә-Жужа, үлергә, ғырылдаҡ һалдат блиндажға төшөргә ирендеме, шөрләнеме: «Әй, миңә генә кәрәкме», — тине. Аяҡ тауыштары алыҫлашты. Камаловаға йән инә башланы. Һалдаттарҙың был диалогы, күп булһа, ярты минут дауам иткәндер, ләкин ул Әлфиә-Жужаға йәшәлгән ғүмере саҡлы оҙон тойолдо. Ғырылдаҡ һалдат блиндажға төшкән булһа, ни эшләр ине икән ул? Сығып йүгерерме, ҡулында бер ҡоралы булмаһа ла, немецҡа ташланырмы әллә ҡулдарын күтәрерме... Юҡ, юҡ, ҡулын күтәрмәҫ ине. Ул дошманы ҡаршыһында бер ҡасан да ҡулын күтәрмәҫ... Инде аяҡ тауыштары бөтөнләй ишетелмәй башлағас, Әлфиә-Жужа әле генә булған ҡыланышына ревизия яһаны һәм «икеле» билдәһе ҡуйҙы. Һуң ул бит һаҡғырау һәм телһеҙ. Шулай булғас, ниңә уға бөтөнләй юғалып ҡалырға ине? Һин бит разведчик. Ябай разведчик ҡына ла түгел. Тимәк, һәр ваҡыт, һәр ерҙә үҙ ролеңде уйна. Быны өсөн теләһә ниндәй ситуацияла ла ҡаушамаҫҡа, башыңды юғалтмаҫҡа кәрәк. Дөрөҫ, тәжрибәле разведчиктар ҙа ҡайһы саҡта айыҡ иҫәп менән генә эш итмәйҙәр, интуицияларына ла ышаналар. Бөтәһен дә алдан күреп, белеп торор һәм, көтөлмәгән хәл килеп сыҡҡанда, берҙән-бер дөрөҫ ҡарар ҡабул итер өсөн отҡор һәм тәжрибәле разведчик кына түгел, разведчик-автомат та булырға кәрәк, Әлфиә Камалова. Һин әле тәү тапҡыр дошман тылына индең. Иң мөһиме, ҡаушамаҫҡа, һалҡын ҡан менән эш итергә өйрән. Ә хәҙер усаҡтың көл-күмерҙәрен тапап һүндер, тарат, ләкин... ашыҡма, Камалова, бер нисә торонбашты ана тегендә, боеприпас ҡуя торған урынға, йәшереп ҡуй, уның әле һиңә кәрәк булыуы бар. Ут табыуы һиңә еңел булманы бит. Ә утһыҙ, кем белә, һин, бәлки, һалҡын тейҙергән булыр инең. Һиңә хәҙер сирләргә түгел, сөскөрөргә лә ярамай.

Усаҡтан эҙәр ҙә ҡалманы. Хәҙер уға ни эшләргә? Башҡа блиндажға күсергәме әллә ошонда боҫа бирергәме? Ҡайһыһы дөрөҫөрәк, ышаныслыраҡ булыр?..

...Һуғыш Ҡамалова һымаҡ йомортҡанан яңы сыҡҡан себештәрҙе генә түгел, уттарҙы-һыуҙарҙы кискән тәжрибәле һалдаттарҙы, командирҙарҙы ла аптырашта ҡалдыра, ҡаушата, хаталар эшләтә. Мәҫәлән, бына әлеге хәлде генә алайыҡ. Ни капитан Ардыуанов, ни дивизия разведкаһы бүлеге начальнигы: «Әгәр һеҙгә айырылышырға тура килһә, шулай, шулай эшләгеҙ», — тип өҙөп кенә әйтмәне бит.

Дөрөҫ, Сафуан ағаһының «Аҡыл һандығы»нда шундай һүҙҙәр бар: «Кеше алла түгел, ул бер ҡасан да бөтәһен дә һиҙеп, белеп бөтөрә алмай. Ә бына көтөлмәгән хәлгә юлыкһа, сығырға ишек эҙләргә тейеш. Отҡорлоҡ, тапҡырлыҡ — кешенең иң яҡшы һыҙаттарының береһе».

Отҡорлоҡ, тапҡырлыҡ... Ҡамалованың барыр юлы бер генә — кире ҡайтырға. Их, заданиены үтәмәй «буш» ҡул менән уның һис тә ҡайтҡыһы килмәгәйне. Ни эшләйһең, ни эшләйһең, ул ғәйепле түгел, башҡаса әмәл юҡ...

Немецтар, бәхеткә ҡаршы, урап килмәне. Ҡамалова блиндаждан сығып ҡарамаҡ булды. Һуң ғүмергә ул ҡасып ята алмай бит инде. Ни булһа ла була, тәүәккәлләргә кәрәк.

Инде томан таралғайны. Йылы яҡҡа китеп өлгөрмәгән йәки Венгрия ҡышын көньяҡ йәйенән артығыраҡ күргән ҡоштарҙың һыҙғырыуы, сутылдауы, сырылдауы ишетелә. Баш осонан ғына оҙон фюзеляжлы самолетты хәтерләтеп һайыҫҡан осоп китте. Ҡайҙалыр ҡороған ботаҡ һынып төштө... Уның тыуып үҫкән яҡтарында ла көҙгө урман ана шундай һағышлы гүзәл була торғайны.

Ҡайҙалыр, кемгәлер асыуланып, пулемет тырылдап, дөрөҫөрәге, ырылдап алды. Көҙгө идиллия шунда юҡ булды.

Һуғыш... Ҡамалова әҙәбиәттән, тарих дәреслектәренән уҡып белә ине — кешелек донъяһы бер генә көн дә һуғышһыҙ йәшәмәгән. Ә бына әлеге һуғыш, моғайын, бер ҡасан да булмағандыр.

Баш осонан ғына йөрәкте ярырлыҡ итеп һыҙғырып ике немец истребителе осоп китте. Патрулдәрҙер, күрәһең. Ҡанаттарында, фюзеляждарында ҡаралы һары тәреләр. Тәреләр... Бөтә әшәкелектәр изге тәре һәм алла исеме менән эшләнгән. Тәре йөрөтөүсе рыцарҙар, аҡ шалабайҙарына ҡара тәре, ҡара ҡалҡандарына аҡ тәреләр төшөрөп, гәрәп ерҙәрен ҡанға батырғандар...

Ҡамалова һуғыш тураһында уйларға теләмәне. Ул ниндәйҙер күңелле, яҡты ваҡиғаны иҫенә төшөрөргә тырышты. Әшрәф хаҡында. (Ул да һуғышта.) Наташа тураһында. (Ул да фронтта.) Улар урамындағы бер таныш малай, уның менән уҡыған бер һабаҡташы юҡ — бөтәһе лә дошман менән боғаҙлаша. Бер нисәһенең похоронкаһы килде,

ҡайһы берәүҙәре хәбәрһеҙ юғалды... Ә улар, киләсәк хаҡында уйлап, нисек хыялланалар ине! Бер-береһен бүлеп, ҡыҙышып китеп бәхәсләшәләр, һүҙ көрәштерәләр, берәү геолог профессияһын үлтереп маҡтай, икенсеһе — агрономлыҡты, өсөнсөһө — уҡытыусылыҡты... Хәҙер бөтәһенең дә профессияһы бер генә — һалдат. Ә һуғыштан һуң улар йәнә бергә йыйылышырмы икән? Йәнә бер-береһен бүлдерә-бүлдерә ярһып бәхәсләшерҙәр, ҡосаҡлашып йырлашырҙармы икән? Күпмеһе иҫән-һау ҡайтыр, күпмеһе аяғын, ҡулын өҙҙөрөп... Әлфиә Ҡамаловаға һабаҡташтары, бер урам егеттәре шундай йәл тойола — туйғансы илаһа ла, күңеле бушамаҫ, күҙ йәштәре бөтмәҫ ине. Һуғыш яланында ятып ҡалғандар башҡа бер ҡасан да Ағиҙелдә боҙ киткәнде, алмағастар сәскә атҡанды күрмәйәсәк.

Баяғы истребителдәр әйләнеп ҡайтып киттеләр, күрәһең, ягыулыҡтары бәткәндер. Әлфиә-Жужа, һикереп тороп, өкө булып ҡысҡыра башлағайны, келт итеп иҫенә төштө — өкө төнгө ҡош бит, көндөҙ ул йоҡлай, ҡысҡырмай. Әгәр баяғы немецтар өкө тауышын ишетеп ҡалһа, һағаясаҡтар, тауышты эҙләп киләсәктәр. «Әй, эҙләмәгәйҙәре!» Ҡамалова йәнә сигнал бирә башланы: «Һө-һу, һө-һу, һө-һу...» Бәлки, Андраш ағай әле генә билдәләнгән урынға килеп еткәндер, бәлки, ул немецтарҙан ҡотола алмағандыр... «Һө-һу, һө-һу...» Әммә Әлфиә-Жужа яуап ишетмәне. Ҡапыл уның башына сая уй килде: «Әгәр уға Гобарҙан башҡа, үҙ алдына Эржебетҡа ыңғайлағанда? Адресты белә: Етемдәр тыҡрығы, алтынсы йорт, икенсе ҡат, дүртенсе квартир. Өс тапҡыр рәттән туҡылдатырға ла, тыңлап торғандан һуң, йәнә оҙаҡ итеп ҡағырға. Пароль: «Ҡайҙа бында етемдәр йорто?» Яуап: «Ә ул йорт күптән юҡ инде. Һүттеләр». Былярҙың бөтәһен дә мадьярса һорарға кәрәк, ә ул мадьярса ун һүҙҙән артыҡ белмәй. Был һүҙҙәрҙе уға мадьярса ятларға кәрәк ине. Хәйер, былар ҡыҫыр хыял. Ул төн килгәнде көтөп торасаҡ та, йылғаның теге яғына сығып, ҡайтып китәсәк. Ә кискә саҡлы, ай, күп көтөргә кәрәк әле. Көн тиҙерәк үтһен өсөн, нимә уйлап табырға һуң? Нимә?.. Ул, бая йәшереп ҡуйған торонбаштарының бөтөнләй һүнеп бөтөүен иҫенә төшөрөп, ашығып блиндажға төштө. Торонбаштарҙы усаҡ урынына кире алып килеп, өҫтөнә ҡоро япраҡтар, ҡалған сыбыҡ-сабыҡты ташланы, ергә ятып өрҙө. Был юлы усаҡ оҙаҡ ялындырып торманы, тиҙ тоҡанды, ләкин Әлфиә-Жужа уға осонорға ирек бирмәне — усаҡ тоҡаныу менән сыбыҡ-сабыҡтарҙы, япраҡтарҙы сиркәрәк этәрҙе лә, янып ыуылып төшөүсе япраҡтарға, күмергә әйләнеп, быуынланып һыныусы сыбыҡтарға ҡарап, ниңәлер, үҙен ошо һүнерһүнмәҫ янған усаҡҡа тиңләне. Хәҙер ул да ошо усаҡҡа оҡ-

шаған бит... Моғайын, донъяла иң хәтәр нәмә үҙендә яңғыҙ һәм көсһөҙ итеп тойоуҙыр. Бына ошо ваҡыт Виктор уның беләгенә таҡҡан сәғәттең текелдәгәнен ишетте ул. «Тик-тик, тик-тик...» Әлфиә-Жужа, еңен ҡайтарып, яҡтырта торған циферблатҡа ҡарап ултырҙы. Ҡояш байырға әле дүрт сәғәттән артыҡ ваҡыт бар. Ҡараңғы төшөргә унан да артығыраҡ. Сәғәттең ғәмһеҙ генә текелдәүе, циферблат тирәләй һибелгән фосфор нөктәләрҙең зәғиф яҡтылығы Әлфиә-Жужаны тынысландыра башланы. Иҫән-имен өйгә ҡайтып етһә, бөтә һалдаттар алдында, капитандан да, старшинанан да тартынып тормай, Виктор Ванюшинды ике яңағынан супылдатып үбеп аласаҡ. Уның ауыр минуттарын еңеләйтеүсе, яңғыҙ саҡта иптәш булған яҡтырта торған сәғәт өсөн... Һәм ул ғүмерендә тәү тапҡыр шиғыр сығара башланы. Хәйер, шиғыр хистәр ташҡанда яҙыла ла бит инде.

Дуҫым миңә бүләк итте
Яҡтырта торган сәғәт.
Ул сәғәттең һәр минуты,
Һәр секунды сәғәҙәт...

Дөрөҫ, сәғәҙәт һүҙе хәҙерге йәштәргә бик аңлашылмай, әммә ниндәй матур һүҙ ул сәғәҙәт — бәхет, шатлыҡ, рәхәтлек...

Минең сәғәтем күрһәтер
Йөҙ түгел, меңәр йылды.
Мәңгелектә, сикһеҙлектә,
Бөтмәҫ-төкәнмәҫ юлды...

Мең йыл... Америкала бер нисә мең йыл йәшәй торған ниндәйҙер ағас бар, ти. Нисек атала һуң әле? Хәйер, меңәр йыл йәшәй торған кедрҙар ҙа бар, тиҙәр. Ҡайҙалыр уҡығайны. Ливан тауҙарында кедр урманы үҫә, ти. Шуларҙың ҡайһыһына икешәр мең йыл, ти. Заманында, бынан бер нисә мең йылдар элек, Сирия, Ливан ерҙәрендә балта тыға алмаҫлыҡ мөһабәт кедр урмандары булған. Еврейҙәр батшаһы Соломон үҙен мәңгеләштерер өсөн бүрәнәләрҙән һарай һалдырған. Бының өсөн ул бишәр йөҙ йәшлек ағастарҙы ҡырҡтырған. Соломон үлеп тупраҡҡа әйләнгән, кедрҙан һалдыртҡан һарайы ла сереп емерелгән, ер менән аралашҡан, тик кедр урмандары ғына юҡҡа әрәм булған...

Меңәр йыл... Әгәр кеше лә шулай йәшәһә икән. Ул сағында ерҙә халыҡ, мискәләге балыҡ һымаҡ, бер-береһенә йәбешеп торор ине. Хәйер, башҡа планеталарға, Айға, Венераға, Марсҡа, күсеп китергә мөмкин бит әле. Марста телескоптан күренерлек каналдар бар, ти, тимәк, унда кешеләр

ҙә бар, цивилизация бар... Ана шулай үлемһеҙлек тураһында уйланып, Әлфиә-Жужа йоҡлап киткәнен дә һиҙмәй ҡалды. Иҫ киткес төш күрҙе ул был ҡыҫҡа ғына арала. Ҡамандың бейек текә ярында сейәләр сәскәгә күмелгән, имеш. Әлфиә менән Ардыуанов яр башынан йылғаға ҡарап ултыралар. Арттан, ҡарағусҡыл күк итәктәрен һуҙып, пароходтар үтә. Ардыуанов та, Әлфиә лә сейә ағастары шикелле, ап-аҡ күлдәк кейгәндәр. Ҡапыл Ардыуановтың ҡыйыҡ яғалы аҡ күлдәге һалдат гимнастеркаһына әйләнде, ә яурынында — генерал погондары. Аҫтан, Ҡаманан, пароход ҡысҡырған тауыш ишетелде, Ардыуанов, гимнастеркаһын һала-һала, пароход янына, түбән, төшөп йүгерҙе. Әлфиә лә уның артынан йүгермәксе булғайны, абынып йығылды һәм терт-ләп уянып китте. Уяныу менән, төшөн дауам иттерергә теләпме әллә үҙенең ҡайҙалығын аңлап етмәйме, күҙҙәрен йомоп алды. Бына ошо минутта ул, күңеленең Әшрәфкә ҡарағанда Ардыуановҡа нығыраҡ тартылғанын тойоп, ҡурҡып китте. Ә ни өсөн ҡурҡып китте ул? Ни өсөн Иршатты яҡыныраҡ күрә башланы? Был һорауға Әлфиә үҙе түгел, алла ла яуап бирә алмаҫ ине.

Көскә ҡояш байыны, һәм йәнә бер мәғәнәһеҙ, эшһеҙ көн үтеп китте. Дөрөҫөн әйткәндә, фронтҡа килеүенә байтаҡ үтһә лә, телгә алып һөйләрлек бер эш эшләй алғаны юҡ әле. Ә үлемһеҙ батырлыҡтар эшләргә ашҡыныуҙың сиге юҡ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул белмәйме әллә уйланғаны юҡмы — фронтта күптәр бәләкәй генә батырлыҡ та эшләмәй сафтан сығалар, хатта үләләр ҙә. Батырлыҡ ерәүгә лә ят нәмә түгел, әммә уны эшләү бик һирәктәргә насип була. Хатта ҡайһы сағында йөрәге урынында ҡуян ҡалтырап торған кешеләр ҙә уйламағанда геройға әйләнә. Кеше шундай ситуацияға эләгә, башын ҡотҡарыр өсөн, уйлап-нитеп тормай, утҡа керә һәм еңеп сыға. Ихтимал, батырлыҡтың ҡайһы бере үлемдән ҡурҡыу арҡаһында эшләнә торғандыр ҙа.

Ҡараңғы төшә башлау менән, Ҡамалова, блиндаждан сығып, өкө булып ҡысҡырырға тотондо. Ләкин яр буйы урманы уның өҙөлөп ҡысҡырыуына ғәмһеҙ тынлыҡ менән яуап бирҙе. Ҡапыл Әлфиә-Жужа ауыр итектәрҙең дөп-дөп иткәнен һәм ҡысҡырып һөйләшкән тауыштар ишетте. Шик тә юҡ, был немецтар ине. Аяҡ тауыштарына, шау-шыуға ҡарағанда, улар ике-өс кеше генә түгел, күмәктәр ине. Тимәк... улар ошо блиндаждарҙа, окоптарҙа оборона тоторға киләләр. Әлфиә-Жужа серегән төп янына йүгерҙе. Ашыҡма, Ҡамалова! Һин бит хәҙер шундай мәғлүмәттәр йыя алаһың... Ул ҡуйы ҡыуаҡлыҡҡа инеп боҫто. Пулеметтар, танкыға ҡаршы ата торған мылтыҡтар — ПТР-ҙар тотҡан һалдаттар уның танау төбөнән үтә башланы. Әлфиә-Жужа

һалдаттарҙан бигерәк уларҙың пулеметтарын, ПТР-ҙарын һананы. Иң аҙаҡтан боеприпас йәшниктәре күтәргән һалдаттар үтеп китте. Ҡамалованың иҫәбе буйынса, бында кәм тигәндә, бер рота һалдат бар ине. Һалдаттар, ул йәшәгән блиндажға төшмәй, ары атланы. Әлфиә ҡолаҡ һалды. Башҡа килеүсе юҡ ине. Хәҙер сығырға ла мөмкин. Әллә сабыр итергәме? Ул арала танкылар геүләгәне ишетелде.

Улар бик яҡында ине. Тимәк, ҡайҙалыр ошо тирәлә булғандар. Әлфиә-Жужа, йәшенгән урынынан сығып, танкылар геүләгән яҡҡа ыңғайланы. Биткә ағас ботаҡтары бәрелде, ҡулды сыйҙы, ләкин Ҡамалова быға иғтибар итмәне. Ул танкыларҙың һанын белергә тейеш!

Ҡараңғыла сағылға барып еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Аҫта, уйһыулыҡта, тиҫтәләгән танкылар тупланғайны. Берике танкының ғына фаралары зәғиф яҡтырта, шуға күрә танкыларҙың һанын белеүе еңел түгел ине. Ҡамалова машиналар янына бөтөнләй яҡын барып етеүен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ҡапыл уның морон төбөндә ҡот осҡос ҡорос ҡуңыҙ хасил булды. Әлфиә-Жужа ҡаушауынан бәрөшөп китте, арты менән иләп кенә сигенде лә, ҡыуаҡ артына йәшенеп, ергә ултырҙы. Ҡамалова боҫорға ла өлгөрмәне, уның морон төбөндәге танкыға табан атлап килеүсе бер нисә кеше күренде. Арала береһе, командирҙыр ахыры, өҙөп-өҙөп ҡырҡа һөйләшә. Тауышы асыулы. Янында барғандарҙы әрләй. Ҡамалова уның һүҙҙәренең башын ишетмәгәнлектән, командирҙың нимәгә ҡәнәғәт булмауын, кемде әрләгәнен аңламайыраҡ торҙо.

— ...Блиндаждар әштер-өштөр генә эшләнгән. Блиндаждар кеше буйы тәрәнлегендәге траншеялар менән тоташтырылмаған... Фюрерҙың бойороғо барығыҙға ла мәғлүм. Будапештты рустарға бер ҡасан да, Дунай ҡыҙыл ҡанға әйләнһә лә, бирмәйәсәкбеҙ. Мин, танкыларҙы яр буйлап күмеп, дотҡа әйләндерергә нөктәләр билдәләнем. Бөгөн үк эшкә тотонорға. Ә көндөҙ ҡырмыҫҡа йөрөгәне лә күренмәһен. Рустар беҙҙең бында оборонаның икенсе һыҙығы барлығын белергә тейеш түгел...

Немецтар, тындары менән Ҡамалованы көйҙөрөп, сағыл буйлап киттеләр. Хәҙер Әлфиә-Жужаға тиҙ генә танкыларҙы һанарға ла тайырға кәрәк. Әле генә үтеп киткән төркөмдән берәү айырылды ла кире килде. Танкыға керҙе. Уның фараларын ҡабыҙҙы, ләкин моторын эшләтмәне. Моғайын, ул сағыл буйлап киткән немецтарҙың юлын яҡыртталыр. Хәҙер Ҡамалова бармағын ҡыймылдатһа ла, танкылағы немецтың уны күреп ҡалыуы бар. Ул, тын алырға ҡурҡып, күпме ятыр ине — билдәһеҙ, бәхеткә ҡаршы, танкист утты алыҫҡараҡ йүнәлтте. Әлфиә-Жужа ҡараңғыла

тороп ҡалды. Хәҙер Ҡамалова уйпат ергә тупланған танкыларҙы асыҡ айыра башланы. Һананы. Ун туғыҙ.. егерме... егерме бер... Бая киткән һалдаттар ун биш пулемет, ун ике ПТР күтәргәйне. Бында егерме бер танк... Әгәр былар бөтәһе лә бер юлы йылғаны кисеүсе ҡыҙыл армеецтарға ҡаршы ут асһа... мәхшәр буласаҡ. Ҡамаловага хәҙер, тиҙерәк был тоҙаҡтан ҡотолоп, кәмәһе йәшерелгән ергә ысҡынырга кәрәк ине. Ләкин ул, ниңәлер, ашыҡманы. Йөрәге һиҙә, тағы ниҙер булырға тейеш.

Һәм, ысынлап та, күп тә үтмәне, аҫта тылдан килеүсе һалдаттар колоннаһы күренде. Уларҙың да ҡулбаштарында пулеметтар, ПТР-ҙар ине. «Тимәк, немецтар беҙҙең һөжүмгә йыйыныуҙы һиҙенә». Һиҙенә генә лә түгел, ҡайһы урындан төп удар буласағын да белә. Хәҙер Ҡамаловаға мөмкин саҡлы тиҙерәк ҡайтып етергә лә күргәндәрен һөйләп бирергә кәрәк.

Икенсе рота артынан өсөнсө, дүртенсе рота ла китте. Таңкыға инеп ултырған һалдат, фараларҙы һүндереп, машинаһынан сыҡты ла танк янында ниҙер эшләй башланы. Әлфиә-Жужа, ҡараңғылыҡтан, сағыштырмаса тынлыҡтан файҙаланып, сағылдан өҫкә үрмәләне. Аҙ ғына үрмәләне лә, тынып, тыңлап торҙо. Эҙәрлекләүсе ишетелмәгәс, тағы үрмәләне. Әгәр көндөҙ булһа, яҡында ғына немецтар мыжлап тормаһа, ул уйһыулыҡтан туп-тура йылғаға сыҡҡан булыр ине лә бит, ләкин әлеге осраҡта тура юл иң енел түгел, ә иң хәтәр юл ине. Хәҙер уға сысҡан булып ҡына блиндаждар янынан үтеп китеп, һыу буйына төшөргә кәрәк.

Ҡыҙыҡ бит был яҙмыш тигән нәмә, бер юлың уң килһә, гел һин тигәнсә генә булып тора, бер уңмаһа... Ә бына был юлы Ҡамалованың юлы уң булды. Оборонаға ятыусы дошман һалдаттарын, ҡоралдарын, танкыларын иҫәпләне, блиндаждары янынан иҫән-имен генә үтеп, һыу буйына йомғаҡ булып тәгәрәне — береһе лә уны һиҙмәне лә, шәйләмәне лә. Дөрөҫ, яҡындағы блиндаждар әлегә буш ине.

Хәҙер тиҙ генә кәмәне табырға ла... Хәйер, уны эҙләйһе лә юҡ, ана ул. Ҡамалова һә тигәнсе кәмәне систе, йөҙө менән эйләндерҙе, ярҙан этте лә, һикереп ултырып, ашығып ишә башланы.

Ләкин яҙмыш гел битен генә күрһәтмәй шул. Ярҙан ун-ун биш аҙымдар китергә лә өлгөрмәне, тап уның баш осонда ғына ракета тоҡанды, һәм шул секундта уҡ йылғаны төрлө төҫтәге эҙ яһаусы пулялар киҫкеләне. Ҡамалова әле «мертвое пространство»ла ине — пулялар баш осонан осто. «Һиҙеп, күреп ҡалдылармы икән ни?» Ракета һүнеү менән, Ҡамалова тағы ярһып ишә башланы. «Әгәр ракета башҡа тоҡанмаһа, уны күрмәгәндәр булып сыға, әгәр ҡабат ҡа-

быйһа...» тип уйлап бөтөрмәне, йылға өҫтөн бер юлы ике ракета яҡтыртты. Ракета яҡтыһында һыу тағы ла шомлораҡ һәм... матурыраҡ булып күренде. Йәнә пулемет һәм бер нисә автомат тырылданы. Был юлы инде пулялар уның баш осонан османы, ә, кескәй генә фонтандар яһап, кәмәнең уң яғынан да, һул яғынан да бүл-бүл итте. Юк, был «ғәйрәтләнер» өсөн атыу түгел, ә сәпте күреп, тоҫҡап атыу ине. Ҡамалова быға иғтибар итмәне, кәмә төбәнә ятыу түгел, башын да эймәй, бөтә көсөнә иште лә иште. Ярға өс-дүрт аҙым ҡалғас, һыуға һикерҙе, бәхеткә ҡаршы, йылға тәрән түгел ине — тубыҡ та күмелмәне. Ашығыуы, ярһыуы менән ул кәмәләге тоғон онотоп ҡалдырҙы, кире килеп алырға тура килде. Ярға сыҡтым тигәндә, ташҡамы, батҡан ағасҡамы абынып, йөҙ түбән ҡоланы. Һикереп торҙо, алан-йолан ҡаранды ла ҡуйы ҡыуаҡлыҡтарға табан йүгерҙе. Бишалты аҙым һикермәгәндер, йәнә һөрөндө. Был юлы ул һикереп торманы, ҡыймылдамай ята бирҙе. «Әйҙә, үлтерҙек, тип уйлаһындар». Ысынлап та, пулеметтар хәлһеҙләнде, оҙаҡламай бөтөнләй тындары бөттө, тонсоҡто.

Ракеталар һүнеү менән, Ҡамалова һикереп торҙо ла бесән сүмәләһенә ҡарай йән-фарман һыпыртты. Бесән өйөмөнә барып йығылғас, инде аңына килгәс кенә, ул усында елем һымаҡ шыйыҡлыҡ һиҙҙе. Ҡулын танауына тейҙерҙе — сөсө ҡан еҫе уҡшытты. Моғайын, берәй нәмәгә усын сыйғандыр. Улай тиһәң, йылы шыйыҡлыҡ өҫтән, терһәк тирәһенән, аҡҡандай тойола ине. Тимәк, ул яраланған — йөҙләгән пуляларҙың береһе уның тәнен тишеп киткән. Ул еңен ҡапшап ҡараны — курткаһының еңе ике урындан тишелгәйне: пуляның ингән һәм сыҡҡан ере. Әлфиә тиҙ генә курткаһын һалды, тоғонан косынкаһын алып, яраһын ураны, иҫән ҡулы һәм тештәре менән ҡыҫып бәйләне. Шуныһы ғәжәп, пуля тәнен тишеп үткәндә лә, әле лә ул ауыртыуфәлән тойманы. Яраһы еңелсәме әллә үлем ҡурҡынысы яранан көслөрәк булғанмы?

Яра бәйләнеп, куртка кейелгәс, тоғон бәйләр алдынан ул яулыҡтарға төрөлгән карауайҙарҙы тотоп ҡараны. — Икмәк ебегән, ҡамырға әйләнгән. Ташлаһаң... йәл (иҙәнгә төшкән икмәк валсығын да эйелеп алырға өйрәтеп үҫтерҙеләр уны), етмәһә, карауайҙар эсенә батареялар ҙа йәшерелгән. Батареяларҙы ҡайҙа ҡуйҙың, тип уны шелтәләүҙәре бар. Эш шелтәләүҙә түгел, шундай ҡәҙерле әйберҙе ташлап әрәм итәһе килмәне уның. Ҡамалова сусҡа майы алып, бер нисә тапкыр ҡырт-ҡырт итеп тешләп, ауыҙында иретеп йотто. Ҡапыл йылынып, хәлләнеп киткәндәй булды. Ярай, торорға, юлға ҡуҙғалырға кәрәк. Юл алыҫ булмаһа ла, ҡурҡыныс. Хәйер, үтеләсәк юл, әле генә үтелгән юл

менән сағыштырғанда, прогулка һымаҡ ҡына ине. Улай еңел уйлама, Әлфиә, фронтта «прогулкалар» булмай. Һиңә әле миналар ҡуйылған яланды үтергә кәрәк. Миналар ҡуйылмаған хәүефһеҙ коридорҙы таба алырһыңмы, ихтимал, «коридорҙы» бөтөнләй ябып ҡуйғандарҙыр. Юҡ, насарлыҡҡа юрама, Әлфиә! Дөрөҫ, Әшрәф иң еңел эшкә лә, иң анһат юлға ла етди ҡарарға, бөтә көсөңдө тупларға өйрәтә торғайны. «Ул сағында, — тип тыҡыны Әшрәф, — ауыр эш тә еңел бирелә, оҙон юл да тиҙ үтелә».

Хәтәр юл бәлә-ҡазаһыҙ ғына үтелде. Маршруттан ситкә сыҡманы, аҙашманы — ни генә тимә, ул ошо юлдан дүртенсе тапҡыр үтә бит инде — иҫтә ҡалдырырға ваҡыт. Немецтар ҙа, үҙебеҙекеләр ҙә күккә ракеталар осороп шаярманы. Дошман пулеметтарының очередтары һирәк-мирәк кенә ишетелде, әйтерһең, немец һалдаттары гашеткаға йоҡо аралаш ҡына баҫтылар. Ә шулай ҙа яңғыҙ ағас янына барып еткәс, Ҡамалова, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡурылды — бына хәҙер юлдың иң хәтәр өлөшө — миналы ялан башлана. Ҡайҙа уны үлем һағалап тора икән? Пулялар ямғыр шикелле яуғанда, ул үлем хаҡында уйламағайны, дөрөҫөрәге, уйларға форсат булманы, тик күҙҙәрен йомоп, мәлйерәп бесән өҫтөндә ятҡас ҡына, әле генә ҡот осҡос хәлдән иҫәнимен ҡотолоуын аңына килтерҙе. Әгәр ҙә теге йәшел, ҡыҙыл, зәңгәр «бөжәктәрҙең» береһе уның йөрәген йәки башын саҡҡан булһа, ул ҡамыштар араһында ятып ҡалыр ине. Бер кем, серле ҡыштырлауы ҡамыштарҙан һәм сикһеҙ алыҫта йымылдауы йондоҙҙарҙан башҡа, уның ҡайҙа, нисек һәләк булыуын белмәҫ ине. «Ә ниңә немецтар һаман ракеталар яндырмай әле? Бына хәҙер уға юлдан яҙмаҫ өсөн яҡтылыҡ кәрәк. Ә ул юҡ. Ике яҡ та тып-тын. Таң йоҡоһо уларҙың күҙ ҡабаҡтарын ҡурғашҡа әйләндерҙеме, ҡулдарын ойоттомо? Хәҙер иң татлы йоҡо сәғәте бит».

Әлфиә, туң ерҙә ҡырын ятып, эсенән генә немецтарға ла, үҙебеҙҙекеләргә лә һуҡранды. «Таң атҡанды көтөп ятырға тура килерме икән ни?..» Юҡ, көтөргә тура килмәне, ниһайәт, немецтар яғынан бер юлы өс «күк фонары» тоҡанды. Әлфиә күҙҙәрен ауырттырып алға, үтәһе юлына, текләп ҡараны. Бер төрлө ориентир — иҫтә ҡалырлыҡ нәмә лә юҡ ине. Иң ышаныслыһы, бер яҡҡа ла борғоланмай, туп-тура йүгерергә, ни булһа ла була, фонарҙар һүнеү менән, һикереп торорға ла сабырға. Бәлки, уның бәхетенә, «коридорҙы» япмағандарҙыр әле. Ракеталар һарғылт ҡыҙыл төҫкә инеп һүнә башлау менән, ул нисек һикереп торғанын, күпме йүгергәнен үҙе лә иҫләмәне. Тик «Стой! Кто идет?» тигән асыулы тауышҡа ғына һиҫкәнеп китте. Туҡтаны. Әлфиәнең күҙ йәштәре атылып сыҡты. «Свой! Свой!» — тине

ул, көскә-көскә һулап, шатлығынан, шәп йүгереүенән сәсәп. Билдәһеҙ урындан: «Пароль?» — тип ҡысҡырҙылар. «Паролде белмәйем. Үҙебеҙҙекеләр инде...» Уның тауышында ялбарыу ишетелде. Һуң уны немецҡа һанап, очередь бирһәләр, ишек төбөндә һәләк булыуың бар бит. Күрәһең, «боевой охранение»ла ятыусылар уның һүҙҙәренә ышандылар — яндарына яҡыныраҡ ебәрҙеләр. Аралар граната ташларлыҡ ҡына ҡалғас, тағы туҡтаттылар: «Кем һин? Ҡайҙан киләһең?» Әлфиә инде ҡыйыулана төштө. «Аҙаҡ, аҙаҡ әйтермен. Тиҙерәк үткәреп ебәрегеҙ!» Ул сәменән саҡ-саҡ иламаны. Моғайын, уның тауышында шундай ихласлыҡ, ялбарыу булғандыр, окоптан: «Немецтар шәм аҫҡансы, тиҙерәк һыпырт!» — тип ҡысҡырҙылар. Тулы профилле * окопҡа һикергәндә, уны кемдер күтәреп алды.

— Бында ни эшләп буталып йөрөйһөң?

— Буталып йөрөмәйем, приказ үтәп йөрөйөм, — тине Ҡамалова инде шаҡтай сая.

— Яңғыҙыңмы?

— Башҡа һорауҙарығыҙға яуап бирмәйем. Миңә үҙебеҙҙекеләр янына барып етергә ярҙам итегеҙ, — тине ул бойорғандай.

— Ун минуттан смена килә. Ә һин беҙҙең менән ҡайтырһың, — тине икенсе һалдат яғымлыраҡ тауыш менән. — Беҙ тәүҙә һине малай-шалай тип уйлағайныҡ, ә һин ҡыҙыҡай икәнһең дә баһа.

— Ә мин, хәҙер мине бәреп йығалар инде, тип шөрләнем, — Әлфиә шатлығынан көлдө, әле бер, әле икенсе һалдаттың һалҡын ҡулдарынан тотто.

— Ә беҙ һине яңғыҙ ағас төбөндә ятҡанда уҡ шәйләнек, — тине «Стой, кто идет?» тип уҫал ҡысҡырған һалдат. Был юлы уның тауышы ипле ине. — Тәүҙә, аҙашҡан һарыҡмы, быҙаумы, тип уйланыҡ.

— Ә ниңә һарыҡ? — Әлфиәнең тауышында үпкә һиҙелде. — Ниңә бүре түгел?

— Сөнки... — Уҫал тауышлы әйтәһен әйтеп бөтөрмәне, икенсеһе уны бүлде.

— Кудряшев, телеңә һалышма. Хәҙер иң хәтәр ваҡыт.

— Ә минең бармағым һәр ваҡыт гашеткала, иптәш сержант, — тип аҡланды тегеһе.

Майор серем итергә ятҡанлыҡтан, Ҡамалова, ул йоҡоһонан торғансы, ротаһына ҡайтырға булды.

Ҡайҙалыр йәшенгән часовой, ер аҫтынан ҡалҡып сыҡҡан шикелле, уның ҡаршыһында пәйҙа булды. «Туҡта! Кем

* Кеше эйелмәй йөрөрлөк окоп хәрби телдә шулай атала.

килә?» тип уны нескә, әммә ҡырҡа тауыш менән туҡтатмаҡсы булғайны, Әлфиәне танығас, ауыҙы ҡолаҡтарына етте. «Аля, был һинме ни? Танымай ҙа торам». Әлфиә ҡаршыһында Рязань егете Костя Петрухин баҫып тора ине. Уны «почти» һүҙен әйләнгән һайын әйткән өсөн дуҫтарса «Почти Петрухин» тип йөрөтәләр. Ә Костя быға үпкәләмәй, хәтәр генә итеп: «Почти түгел, ысын Петрухин», — тип яуаплай. Костя Әлфиәгә ғәҙел, тоғро ҡарап һорай:

— Ҡайҙа юғалып торҙоң, Аля?

— Ҡайҙа булһам, хәҙер мин унда юҡ инде, Костенька, — тине Әлфиә шат тауыш менән... Будапештҡа әләгә алмау уның кәйефен ҡырһа ла, тыуған өйгә әйләнгән подвалға иҫән-имен ҡайтып етеү күңелде күтәргәйне.

— Ротала бөтәһе лә иҫән-һауҙармы, Костенька?

— Иҫән тип әйтерлек.

— Капитан өйҙәме?

— Өйҙә тип әйтерлек.

— Хәйерле дежурство һиңә, Почти Петрухин! — Камалова уның автоматына ҡулын тейҙерҙе лә подвал ишегенә йүнәлде.

Элек Өфөлә шулай була торғайны. Башҡортостандың көнсығыш райондарында, таулы яҡтарҙа походтарҙа йөрөп йәки ауылда Шәмсинур апайҙарында ҡунаҡта булып, яңы һауған һөт эсеп «йомроланып», бер ҡатлы урамын, бүрәнә өйөн һағынып, ул юҡта әллә ниҙәр булған шикелле ярһып ҡайта торғайны. Ә ҡайтһа, бөтәһе лә элеккесә: болдор янындағы яҫы таш та, уның карауатында йоҡлап ятыусы мырмырбикә лә... Янып торған кикрекле ҡыҙғылт һары әтәс тә элекке һымаҡ емеш-йәшелсә баҡсаһын ишек алдынан айырып тороусы ҡойма башына менеп: «Бисә-сәсәләрем, һеҙҙең батшағыҙ бында, алыҫ китеп аҙашмағыҙ, аҙыптуҙып йөрөмәгеҙ!» — тип көр тауыш менән һөрән һала. Әсәһе лә элекке шикелле ауыҙ эсенән һөйләнә-һөйләнә гел ҡайҙалыр ашыға. Әсәһе, саңғысы кеүек, аяҡтарын ерҙән айырмай, шыуып ҡына йөрөй. Бөтәһе лә ике аҙна, бер ай элек нисек булһа, шулай һәм... шулай түгел дә. Әсәһенең йөрөшөндә тотоп ала алмаҫлыҡ үҙгәреш һиҙелә. Әтәстең аҙанында ла яңылыҡ бар һымаҡ тойола. Бына был юлы ла шулай тойолдо Әлфиәгә. Ихтимал, бөтәһе лә бынан ике көн элек нисек булһа, шулай ҡалғандыр. Ләкин ошо ярым яҡты подвалды ул өҙөлөп һағынды. Ә подвал һауаһы вакса (разведчиктар, ҡағиҙә булараҡ, итектәрен көн һайын таҙартып, көҙгө кеүек ялтыраталар ине. Әрпеш кешеләрҙе капитандың ене һөймәй), сылғау, мылтыҡ майы һәм башҡа аңлайышһыҙ еҫтәр менән тулғайны. Ҡыҙыҡ был кеше тигәнең, Әлфиәгә ана шул еҫтәр «букеты» ҡарағай урманы,

сәскәле болоп еçтәренән дә яҡынырак, ҡәҙерлерәк тойолдо. Подвалдың түрендә, старшинаның «резиденцияһында», ҡырҡ биш миллиметрлы пушка гильзаһынан эшләнгән баҙлауыҡ ем-ем итә. Әммә старшина үҙе күренмәй. Тынғыһыҙ кеше — бер генә минут та тик ултырырға яратмай.

Әлфиә яцылыш баçып шаулауҙан түгел, тын алырға ла баҙнат итмәй, өçтәл янына килде. Уны сак-саҡ харап итмәгән йүнһеҙ тоғон һалды. Ултырҙы. Ҡөрһөндө. Йылы яулығын сисеп, иçән ҡулы менән сәсен һыйпаны. Ҡул ҡамырға әйләнгән, хәрәкәте һалмаҡланғайны. Әгәр ул көн яҡтыһында көҙгөгә күҙ һалған булһа, сикәһендә бер бөртөк аҡ еп — сәс күргән булыр ине. Ун туғыҙ йәшендә... Әммә ул тәүге ҡырау эҙҙәрен байтаҡ ваҡыт үткәс, ҡаты яраланып, госпиталгә ингәс кенә күрәсәк һәм... һис иçе китмәйәсәк. Сөнки ул бер нәмәнең дә юҡҡа бирелмәгәнен һәм эҙһеҙ юғалмағанын аңлай ине. Ә әле.. әле ул разведчиктарҙың ғырылдауына, йоҡо аралаш мығырланыуҙарына, күкрәк төбөнән сыҡҡан ыңғырашыуҙарына, төштәрендә команда биреүҙәренә ҡолаҡ һалып ултыра. Роталағы иң йәш разведчик — Пенза егете «лапотник» * Володя Глухов төшөндә әленәнәле: «Люба... Люба, һин мине яратаһыңмы?» — тип һөйләнә. Виктор Ванюшин йыш ҡына уны: «Ҡарәле, Володька, һинең Любаң әллә ҡасан кейәүгә сығып киткән бит инде», — тип ирештерә. Володя сөгөлдөргә әйләнә. «Әй, һөйләнмә әле!» — тип ҡулын һелтәй ҙә ситкә китә. Шаян Виктор бот сабып көлә.

Әлфиә алан-йолан ҡаранды ла тиҙ генә курткаһын һалды, иçән ҡулы һәм тештәре ярҙамында йәрәхәтте ҡыçып бәйләгән косынканы систе, ҡан башҡа аҡмай ине инде. Әлфиә шунда уҡ еңен һыҙырып төшөрҙө — күреп ҡалмаһындар тағы; карауат аçтынан һалдат тоғон тартып сығарҙы, индивидуаль пакет алып, күренер-күренмәçлек еп осон тешләп тартты, махсус состав менән эшкәртелгән кожух шытырлап йыртылды. Еңен өçкә һыҙырып, тиҙ генә беләген бәйләй башланы. Дөрөç, йәрәхәтте йыуырға, йод тейҙерергә кәрәк ине, ләкин Әлфиә яраланыуын бер кемгә лә һиҙҙерергә теләмәне. Беренсенән, ул госпиталгә ебәреүҙән ҡурҡты, икенсенән... һөжүм иткәндә яраланған булһа, бер хәл, немецтан ҡасҡанда пуля «тешләне» бит уны. Ғәрлек!

Ә шулай ҙа унда ғорурлыҡ тойғоһо уянды, — ни генә тимә, хәҙер инде ул һуғыштың тәмен татыған. Фронтовиктар әйтмешләй, «стреляный воробей». Дөрөç, Ҡамалованың әлегәсә ауыҙ тултырып һөйләрлек бер нәмә лә эшләгәне

---

* Пенза яғы кешеләрен элек «лапотник» — сабатасы тип ирештергәндәр.

юҡ. Хәйер, бер ҡасан да үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәт булмау, мәңге ризаһыҙлыҡ — уның ҡанында. Мәктәптә уҡығанда «бишле» алыр ине, әммә «ҡаушаным, буталдым, әҙәм рәтле яуап бирә алманым» тип үҙен әрләй торғайны.

Әлфиә, йәрәхәтен бәйләп, курткаһын кейергә өлгөрмәне, таныш булмаған һалдат эйәртеп старшина ҡайтып керҙе. Арҡаларында — термостар. Иртәнге аш килтергәндәрҙер. Старшина инеү менән Ҡамалованы күреп ҡалды. Ашығып арҡаһынан термосын һалды. «А-а... Алечка!..» тип бышылдап, ҡулдарын һуҙып, шатланып, түҙемһеҙләнеп уға табан ашыҡты. Ул хистәренә хужа була алмай Ҡамалованы ҡосаҡлап алды. «Иҫән-һау, ҡыҙыҡайым... Ә капитан шундай борсолдо... Ул ғына түгел, бөтәбеҙ ҙә борсолдоҡ...» Шунда уҡ Әлфиәне ҡалдырып, ишек төбөнә китте, термосты алып килде. «Хәҙер мин һине теленде йоторлоҡ тәмле бутҡа менән һыйлайым. Ташмөхәммәдовтың бер ҡасан да бындай тәмле бутҡа бешергәне юҡ ине. Һинең ҡайтырыңды һиҙенгәндер, ахрыһы...» Старшина термостың «мөгөҙҙәрен» — гайкаларын бороп, дүрт яҡҡа ятҡырҙы, ауыр ҡапҡасты асты һәм танауға тары бутҡаһының тәмле, таныш еҫе килеп бәрелде. Әлфиәнең ауыҙ һыуҙары аҡты. Старшина бөртөклө сәйҙең ҡурғашлы ҡағыҙына төрөлгән ағас ҡалағын итек ҡуңысынан алды, таҙа таҫтамал менән һөрттө лә котелок ҡапҡасына эҫе бутҡа һала башланы. Ә үҙе шат һөйләнде: «Туйғансы аша, ҡыҙым, гел ҡоро аш ялҡытҡандыр. Эҫе ашһыҙ ҡорһаҡ тулмай, күңел булмай ул. Ашап бөтөргәс, тағы һалырмын».

Әлфиә күптән түгел бешкән йылы икмәкте һындырып алды ла ауыҙын бешерә-бешерә, ҡомһоҙланып бутҡаны ашай башланы. Балаларҙыҡы һымаҡ уның ике яңағы ла бүлтәйеп сыҡты. Ташмөхәммәдовтың боросонан ауыҙ яна, әммә бутҡа, ожмах ризығы һымаҡ, тәмле, ашаған һайын ашайһы ғына килә.

— Ә миңә хат-фәлән юҡмы, Иван Федорович? — Әлфиәнең һүҙҙәре буталып сыға. Ауыҙ тулы бутҡа.

— Тәүҙә аша, унан һорашырһың. — Әлфиә сәйнәүенән туҡтай. Старшинаның тел төбөн һиҙеп ҡала.

— Ә минең хаттар кемдә?

— Тәүҙә ике туҫтаҡ бутҡа аша, унан хаттарыңды алырһың.

Әлфиә ҡаршы һүҙ әйтмәй. Йәнә ике яңағын да бүлтәйтеп, ашығып ашарға тотона. Ләкин һүҙһеҙ түҙә алмай.

— Ҡапитан өйҙәме?

— Өйҙә, өйҙә.

— Виктор разведкаламы?

— Тәүҙә аша әле, аҙаҡ һораүҙарың менән ҡаңғыртырһың, — тип старшина асыуһыҙ ғына, дуҫтарса шелтәләп.

Әлфиә ҡашығын өҫтәлгә ҡуйҙы.

— Һеҙ мине бала-саға һымаҡ иркәләйһегеҙ, Иван Федорович.

— Һин бит берҙән-бер генә, Алечка, — старшина был һүҙҙәрҙе шундай йылы, шундай ихлас әйтте, әгәр Әлфиә Әлфиә булмаһа, сая, шуҡ малайҙар араһында үҫмәһә, моғайын, түҙә алмаҫ, күңеле тулыр ине. Ләкин Әлфиә һәр ерҙә лә Әлфиә булып ҡала, ни саҡлы уны йыуатһаң, иркәләһәң, ул шул саҡлы етдиләнә. («Берҙән-бер генә!» Ә дивизияла юбка кейгән һалдаттар — быуа быуырлыҡ.)

Ул ҡашығын алып, ҡалған бутҡаһын ашарға тотонд͏о. Бутҡа ашалып бөткәс, өйҙәге һымаҡ, икмәк һыныҒы менән котелок ҡапҡасын ышҡып таҙартты ла һынынҡты ашыҡмай, айырым бер ләззәт менән сәйнәп йотто. Старшина уның һәр хәрәкәтен, бесәй балаһының ашағанын сабый бала мөлдөрәп, ҡыҙыҡһынып ҡарап торған кеүек, күҙәтте.

— Тағы һалайыммы, Алечка?

Әлфиә усының ҡырын боғаҙына ышҡып алды.

— Рәхмәт! Во туйҙым.

Ул бала саҡтан уҡ малайҙарҙың ҡыланышын үҙләштергәйне. Ә армияла һалдат ғәҙәттәре бигерәк тиҙ йәбешә. Радистар мәктәбендә ҡайһы бер ҡыҙҙар тәмәке тартырға ла, ҡаты-ҡаты һүҙҙәр әйтергә лә бик тиҙ өйрәнделәр. Ләкин ул хеҙмәт иткән взвод командиры: иҫ киткес йомшаҡ күңелле, башынан алып аяғына саҡлы интеллигент, һәр көндө иртән бәке осо менән тырнаҡтарын таҙартып, кескәй генә йәлпәк игәү менән шымартыусы һәм шуның өсөн ҡыҙҙар тарафынан «маникюрщик» ҡушаматы алған Петр Петрович, тәмәке төтәтеүсе берәй радистканы күреп ҡалһа, арыҫланға әйләнер, ғәфү-фәлән үтенеп тормай, ауыҙҙан тәмәкене тартып алыр ине.

— Әгәр йәнә ауыҙыңда тәмәке күрһәм, сәсеңде бритва менән ҡырҙыртырмын, — тип янар, ә унан, ҡапыл тынысланып, өгөт-нәсихәткә күсер: — Һуғыш һеҙҙең тәнегеҙҙе яралар, хатта үлтерер, әммә йөрәгегеҙҙе тупаҫландырырға, бәгерегеҙҙе ташҡа әйләндерергә тейеш түгел. Һеҙ тәбиғәттең иң гүзәл, иң татлы емештәре. Тәмәке тартҡан ҡыҙҙы үбеү — көл һауытын ялау менән бер.

Ҡыҙҙар ҡыҙаралар, шыбыр тиргә баталар һәм, баштарын эйеп йәки честь биреп, ғәфү үтенәләр ине.

Юҡ, Әлфиә Ҡамалова төтөн «ашарға» ла, һүгенергә лә өйрәнмәне, ә шулай ҙа һалдат ғәҙәттәренең ҡайһы береһе уға йәбеште. Дөрөҫөрәге, ул үҙе йәбештерҙе — армияла йомшаҡ ҡуллы, нескә күңелле һытыҡтарҙы яратмайҙар.

һалдат — һалдат булырға тейеш. Уның ҡоралы ҡәләм дә, скрипка ла түгел — мылтыҡ. Уның бурысы шиғыр яҙыу ҙа йыр сығарыу түгел, ә дошманға атыу. Яралау. Үлтереү. Ҡаты, миһырбанһыҙ һөнәр ул һалдат профессияһы. Әммә ул профессия булмаһа, башҡа профессия булмаясаҡ. Старшина Әлфиә алдына алюмин көрөшкәгә һалынған сәй ҡуйғас, «Иплэп, үтә эҫе», тип киҫәткәс кенә, ул айнып китте, хәтирәләрҙән арынды. Устары менән эҫе көрөшкәне тот-то — тәнгә рәхәт йылы таралды.

— Иван Федорович, — тине ул, старшинаның асыҡ зәңгәр күҙҙәренә өмөтләнеп ҡарап. — Ғазапламағыҙ мине, хаттарҙы бирегеҙ. Үтенәм...

Старшинаның йөрәге майға әйләнде. Ул, ята торған урынына барып, матрасы аҫтынан разведчиктар «талмуд» тип йөрөткән ҡатырғаһын тартып сығарҙы. Ә Әлфиә үҙ-үҙенә һорауҙар бирҙе: «Ә кемдән нығыраҡ ашҡынып хат көтәһең? Өйҙәнме? Умарта Әҡлимәнәнме? Наташкананмы әллә... Әшрәфтәнме? Бөтәһенән дә, әммә беренсе сиратта...»

Старшина уның ҡулына ике «ҡарлуғас» — өс мөйөшлө хат ҡуйҙы. Әлфиә ялт итеп ҡарау менән хаттарҙың кемдәрҙән икәнен белде. Береһе — Әҡлимәнән, икенсеһе — Әшрәфтән. «Ҡайһыһын элек уҡырға?» Баш икеләнгәндә, ҡулдар Әшрәф хатын астылар ҙа.

Хат, Әшрәфтең башҡа хаттары шикелле, ҡоро һәм ғәҙәти башланғайны: «Әлфиә — сәләм! Шулай итеп, һин дә һуғышаһынмы? Алла ярҙам итеп, һуғыш аллаһын — Марсты еңергә яҙһын...» Артабан Әшрәф күңеленең ишеген аса. «Әлфиә, мин ҡәтғи һәм үҙгәрмәҫлек ҡарарға килдем — бөтә ғүмеремде армияға бирәсәкмен. Һалдат профессияһы, ҡарап тороуға ялыҡтырғыс бер төрлө булһа ла, ҡыҙыҡлы эш, һалдат хеҙмәте — ауыр хеҙмәт, әммә изге хеҙмәт. Донъяла дошмандар күп әле. Ә улар мылтыҡ, пушка теленән башҡа телде аңламай. Ҡикрегең һәр саҡ янып, тырпайып торһон. Һинең һуғышсан ҡулыңды ҡыҫам. Сәләм! Әшрәф.»

Сәләм... Әшрәф... Зарланыу һүҙе лә, һағыныу һүҙе лә юҡ. Әйтерһең, Өфө тирәһендәге районға аҙна-ун көнгә походҡамы, ҡунаҡҡамы киткән... Ә бына һағына. Өйөн, уны һағына. Әшрәфтең аҡыллы күҙҙәрен, оҫта ҡулдарын күргеһе, һыйпағыһы килә.

Әлфиә икенсе хатты аса ғына башлағайны, бүлдерҙеләр.

— Кемдән хат алдың?

Әлфиә тертләп китте. Әле генә старшина баҫып торған урында капитан тора ине. Ардыуановтың күҙҙәрендә шундай шатлыҡ, әйтерһең, был һәр саҡ етди, хатта уҫал ҡараусы ике сәтләүек түгел, гел йылмайып, йымылдап тороусы таң

йондоҙо ине. Әлфиә һикереп торҙо. Честь бирергә ҡулын күтәргәс, капитан, уның беләктәренән һаҡ ҡына тотоп, урынына ултыртты.

— Иҫән-һау... — капитандың тауышы шатлыҡлы ҡалтыранып сыҡты.

— Ә һеҙ мине ерләргә лә өлгөрҙөгөҙмө ни? — Әлфиәнең дә тауышында һағыш һиҙелде.

— Мин... Беҙ... Тегендә — штабта бик борсолдолар... — Әлфиә капитандың шундай ҡаушап, юғалып ҡалғанын тәү тапҡыр күрҙе. Ардыуановтың эске хәле уға ла күсте — Әлфиә тағы ла ныҒыраҡ тулҡынланды.

— Ә... ә Андраш ағай юғалды.

Ҡапитан уны йыуатты.

— Иҫән, иҫән ул!

— Иҫән?! — Әлфиә һикереп торҙо ла, аяҡ остарына баҫып, капитанды яңағынан үбеп алды. Юҡ, был үбеү яҡшы хәбәр өсөн һөйөнсө генә түгел, ә... тәүге һәм һуңғы бөйөк шатлығының, мәңгелек һағышының башланғысы ла ине. Ул был мәлде ғүмере буйы йөрәк төбөндә йөрөтәсәк һәм, ихтимал, һуңғы һулышын алғанда ла иҫенә төшөрәсәк. Бер ҡасан да бер ҡыҙҙы ла үпмәгән һәм үҙе лә үбелмәгән Ардыуанов был изге минуттың бөйөклөгөн аңланымы икән? Дөрөҫ, уның үпкәне лә, үбелгәне лә булды, ләкин улар дуҫтары, әсәһе ине, ә бына ҡыҙҙарҙы... юҡ, үбешкәне булманы. Баҫалҡылыҡтан, оялсан булыулыҡтан түгел... Йә күңеленә оҡшаған ҡыҙ тура килмәгәндер, йә тура килһә лә, үбешеүгә изге тойғо менән ҡарағандыр. Ә бына әле... Башҡа урында булһа, ул Әлфиәне һөйәктәре шытырларлыҡ итеп күтәреп ҡосаҡлар ҙа өҙләкһеҙ иркәләр, үбер ине...

Ошо изге минутта подвалға Байсәйетов төштө. Уның йөҙө көл төҫлө, ике яурынында — ике автомат. Ҡапыл Әлфиәнең йөрәге өҙөлөп төшкәндәй булды. Ҡапитан теләр-теләмәҫ кенә Байсәйетовҡа ҡарай атланы. Подвалда зыярат тынлығы урынлашты. Был күкрәкте ҡыҫыусы тынлыҡтан Володя Глухов уянып тороп ултырҙы.

— Виктор... минаға баҫып һәләк булды... — тине Байсәйетов, автоматтарын һалып. — Ыһ тигәнсе Викторҙан көлкүмер генә тороп ҡалды... — Байсәйетов инде күҙ йәштәрен ағыҙып илай ине. — Ә автоматы бөтөн. Бер ни булманы...

Подвалда йәшәүсе бөтә разведчиктар ҙа уянды. Ҡемдер, яңылыш ҡағылып, Викторҙың гитараһын сөйҙән төшөрҙө. Гитара шат сылтырап ҡуйҙы. Йәнә бер-ике аҙым, һәм капитан Байсәйетовтың ҡулынан Викторҙың трофей автоматын алды. Әлфиә, атылып килеп, капитан ҡулынан автоматты алды ла ишеккә ташланды.

Тәүге минутта кемдер уның йөрәген усына алып ҡыҫҡандай булды, тыны ҡурылды, унан ҡапыл ҡамырға әйләнде, һәм, башын автоматҡа ҡуйып, һулҡылдап иларға тотондо. «Виктор... Виктор...»

Әлфиә Викторҙың әсәһен осратып, Виктор уға бүләк иткән яҡтырта торған сәғәтте тапшырғансы, күп һыуҙар ағасаҡ, күп елдәр иҫәсәк. Һәм был церемония бөтөнләй көтөлмәгәндә буласаҡ.

Көндәрҙең береһендә доктор Ҡамалова Викторҙың атаһы генерал Ванюшин тыуып үҫкән ҡалаға командировкаға киләсәк. (Армияла бер кем Викторҙың граждандар һуғышының легендар геройы комкор Ванюшиндың улы икәнлеген белмәне.)

Ҡамалова урамдан үтеп барғанда кескәй генә баҡсала йөҙләгән кешеләрҙең бер урында тупланыуын күреп туҡтаясаҡ. Ҡыҙыҡһынып, баҡсаға инәсәк. Ошо ваҡыт һалдаттар тынлы оркестрҙа уйнай башлаясаҡ. Штатский костюм кейгән оло йәштәрҙәге кеше билдәһеҙ нәмәне ҡаплап торған аҡ күлдәк-сарафандың шнурынан тартасаҡ, һәм аҡ япма ашыҡмай ғына йыйырылып аҫҡа төшәсәк. Ә япма аҫтынан ҡыҙғылт гранит постаментҡа ҡуйылған генерал бюсы пәйҙа буласаҡ. Киң, текә маңлай, тәүәккәл ҡараш. Түшендә — өс Ҡыҙыл Байраҡ ордены. Оркестр тынды. Тәүге һүҙ ҡар кеүек аҡ сәсле, аҡ ҡашлы генералға бирелде. Генералдың түшендә бер буш урын юҡ ине: тиҫтәләгән һуғышсан ордендар, миҙалдар күкрәген броня һымаҡ ҡаплаған. Ул ике-өс һүҙ әйтә лә тына, әллә артыҡ тулҡынлана, әллә йөрәге ҡыҫа. Генералдан һуң муйынына янып торған галстук таҡҡан пионер һөйләне. Уның телмәре барабан ҡаҡҡан һымаҡ булды. Пионерҙан һуң һүҙҙе комкорҙың тормош иптәше Клавдия Федоровнаға бирҙеләр. Тантаналы митинг тамамланғас, баҡсала ике ҡатын ғына тороп ҡалды. Комкорҙың тормош иптәше һәм Әлфиә. Комкор ҡатыны, ауыҙ эсенән ниҙер һөйләнә-һөйләнә, һәйкәл янына ҡуйылған веноктарҙың таҫмаларын рәтләне — яҙыулы яғын өҫкә әйләндерҙе. Әлфиә тауышһыҙ ғына уның янына килде.

— Клавдия...

Ҡарсыҡ бирен яҙҙы, башын ҡалҡытты. Күҙҙәре уның ҡоро булһа ла, сикһеҙ һағышлы ине.

— ...Федоровна, — тип өҫтәне ул.

Әлфиә беләгендәге сәғәтте сисеп, бер һүҙ әйтмәй, Клавдия Федоровнаға һуҙҙы.

— Кем һеҙ?

— Мин һеҙҙең улығыҙ Виктор менән бергә һуғышҡайным. Был уның сәғәте...

Һәйкәл янындағы гранит эскәмйәлә оҙаҡ серләшеп, ҡайғы-шатлыҡтарын бүлешеп ултырҙылар улар. Клавдия Федоровна уның рөхсәтенән башҡа фронтҡа ҡасҡан Викторы тураһында бик оҙаҡ, бик ентекләп һорашты. Викторҙың байтаҡ хәбәре килмәй торған. «Батырлыҡ өсөн» миҙалы алғас ҡына, Виктор хәбәр биргән. Тик шатлыҡты ҡайғы баҫҡан — шул көндәрҙә генерал Ванюшин үҙе һәләк булған.

Һөйләшер һүҙ бөткәс, инде баҡсанан сыҡҡас, Викторҙың әсәһе ғәфү үтенгәндәй һораны:

— Һеҙ бер-берегеҙҙе яраттығыҙмы?

Әлфиә алдашты. Әлфиә әсәнең былай ҙа йөҙгә телгеләнгән йөрәген ғазаптарға теләмәне.

— Эйе, яратышҡайныҡ...

Әсә бик ҡәнәғәт булды.

— Эйе, уны яратмаҫҡа мөмкин түгел ине. Онотма һин уны, Әлфиә. Ул сағында миңә лә йәшәүе еңелерәк булыр. Яҙ... ҡыҙым... — һәм өгөтләгән кеүек өҫтәп ҡуйҙы: — Ирҙәренән тол ҡалған һалдаткалар ғорур булырға тейеш.

## СИКҺЕҘ АЛЫҪТАН ЯҠТЫРТҠАН ЙОНДОҘ

Кемдер Камалованың ҡулбашына ҡағылды. Әлфиә, автоматын ҡыҫып тотоп, тертләп һикереп торҙо. Подвалға төшә торған коридорҙағы яҡтылыҡ эңер ваҡытындағы кеүек булһа ла, Әлфиә таныны: ҡаршыһында капитан Ардыуанов баҫып тора ине. Ардыуанов һаҡ ҡына уның автоматын үҙенә тартты. Әлфиә тағы ла нығыраҡ, ике ҡуллап, автоматҡа йәбеште.

— Бирмәйем! — тине ул йән асыуы менән. — Ул автомат үлгәнсе минең янымда буласаҡ.

— Һиңә автомат кәрәк булмаясаҡ, Әлфиә, — тип йыуатты уны капитан.

Ә Камалова оторо ярһыны.

— Ни өсөн? Мин яраланмаған! Ул былай ғына... пуля сыйып ҡына китте. — Әлфиә, ҡапыл серен асыуын аңлап, телен тешләне. Капитан был һүҙҙәргә ҡолаҡ һалманы, автоматты унан алды.

— Йыйын, — Ардыуанов подвалга төшөп китте.

«Башҡа кәрәк булмаясаҡ... Йыйын...» Был нимәне аңлата? Ҡайҙа йыйынырға? Госпиталгәме? Әлфиә рота командирын ҡыуып етте.

— Иптәш капитан, ни булды? Зинһар...

— Бер ни булманы. Майор: «Ҡайтыу менән Камалова минең яныма килһен», — тине. Һине яңы задание көтәлер,

күрәһең, — был һүҙҙәрҙе капитан шаҡтай күңелһеҙ әйтте. Ә Әлфиә шатлығынан саҡ үрле-ҡырлы һикермәне.

— Шулаймы?! Улайһа, мин... — Әлфиә баҫҡыстан, тәгәрәп төшөп, подвалға инеп китте лә ҡашығын, котелогын тоғона һалды, үҙе лә иҫләмәҫтән, карауат аҫтына күҙ ташланы. Йәнә бер минут, тоҡ арҡаға аҫылды. — Мин әҙер, иптәш капитан!

Инде ишек төбөндә, инде ишек тотҡаһын тотҡас, ул боролоп ҡараны, дүрт мөйөштө лә барлап сыҡты: был подвалға башҡа төшөргә тура килерме-юҡмы? Ошо штукатуркаһы ҡупҡылаған таплы стеналы, усаҡ төтөнөнән ыҫланған түшәмле, ҡараңғылы-яҡтылы подвал ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ун һигеҙ йыл йәшәлгән өй кеүек яҡынға әйләнде, ә бер-береһенә аҙ ғына ла оҡшамаған шаян, шат, батыр егеттәр... уның менән ун йыл бергә уҡыған малайҙарҙан да ҡәҙерлерәк ине. Айырылышыу йөрәкте һулҡылдатһа ла, Әлфиә берәүгә лә бер һүҙ ҙә әйтмәне. Хушығыҙ ҙа, хәҙергә һау булығыҙ, егеттәр, тип тә өндәшмәне. Кәрәкмәй. Ҡайҙа, күпмегә китә — билдәһеҙ: ниңә артыҡ һүҙҙәр, һағышланыуҙар... Ә шулай ҙа, ишекте асҡас, ул эсенән «Хуш, подвал!» тип һаубуллашты.

Коридор баҫҡысынан күтәрелгәндә капитан һорай һалды:

— Күнеккәйнеңме?

— Күнеккәйнем, — тип көрһөндө Әлфиә. — Мин кешеләргә тиҙ эйәләшәм, эйәләшһәм, оҙаҡ онота алмайым.

Капитан уның тоғон алмаҡ булды.

— Аһа, ни эшләп шул саҡлы ауыр ул?

— Ә унда рация батареялары.

Капитан йылмайҙы.

— Ә һин уларҙы ташламаныңмы ни?

— Ташламаҡсы булғайным да, йәлләнем. Өр-яңылар бит.

Битте семтеп иртәнге һалҡын ел иҫә ине. Ер менән күк тоташҡан урында, көнсығышта, ҡояштың ҡыйырсығы күренде. Ул ғәҙәттәгенән ҡыҙылыраҡ һәм шомлораҡ тойолдо Әлфиәгә. Ҡайҙалыр, иртәнге иҙге тынлыҡты боҙоп, ауыр снаряд ярылды. Әле генә ерҙән айырылған баҡыр батмус аҫҡа тәгәрәп киткәндәй булды. Әлфиә «ай!» тип ҡысҡырғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Капитан аҙымын аҡрынайтты, боролоп Әлфиәгә ҡараны, әммә бер һүҙ ҙә әйтмәне. Һүҙҙе Әлфиә үҙе башланы.

— Ниңәлер, ҡояш кире тәгәрәгән һымаҡ тойолдо...

Әлфиәнең башына ниңә ундай уй килгәнлеген еңел аңланы капитан. Ул бына өс йыл инде фронтта, яҡын дуҫтарын, яратҡан һалдаттарын бик күп юғалтты. Бер ҡараған-

да, үлемгә лә күнегергә мөмкин — һуғыштың һабантуйы түгеллеген фронтҡа килгәнсе үк беләһең; тәү ҡаҙыған окобыңдың һиңең ҡәберең булырын да аңлайһың; эсеңдән генә туғандарың, яҡындарың менән бәхилләшеп атакаға күтәреләһең, әммә үлемгә, ояһы туҙҙырылған һағыҙаҡтар һымаҡ тирә-яғыңда бызылдап йөрөһә лә, күнегеп булмай икән. Сөнки һуғышта үлеү — бөтөнләй башҡа үлем. Тыныс ваҡытта кеше тәне ҡартайғас, аҡылы зәғифләнгәс, фани донъяны ҡалдырып китә, ә бында — фронтта... әле генә анекдот һөйләп көлдөргән, әле генә хыял диңгеҙендә йөҙгән, әле генә хисләнеп йырлаған, һөйгәненә йәки ата-әсәһенә хат яҙған әзмәүерҙәй йәш егет ҡапыл юҡҡа сыға ла ҡуя. Ышанғы килмәй. Нисек инде — әле генә бар ине, күрә, һөйләшә, йөрөй, уйлай ине, һәм ҡапыл шул кеше йәнһеҙ-тынһыҙ мәйет була ла ҡуя: нур сәсеп торған күҙҙәр — һалҡын протездарға, янып торғанирендәр — көлһыу балсыҡҡа, һәр ваҡыт хәрәкәттә булған бармаҡтар — ағас таяҡтарға, ә йөрәк ташҡа әйләнә...

Виктор капитандың йөрәгенең иң түрендә ине. Өс йыл эсендә кемдәрҙе генә юғалтманы, ниндәй генә үлемдәр күрмәне ул — иламаны, ә бына Байсәйетов ҡулынан Викторҙың автоматын алғас, түҙмәне, — күҙенән йәштәр атылып сыҡты. Һуғыштан һуңғы тормош тураһында ниндәй матур, татлы хыялдар менән йәшәй ине ул! Үлем менән бергә уның уйҙары ла, хыялдары ла һәләк булды... Үлем, үлем, мәгәнәһеҙ, әшәке, ҡот осҡос нәмә...

— Һин Викторҙы ярата инеңме? — тип һораны капитан һәм, һорауының урынһыҙ икәнлеген аңлап, үкенде.

Әлфиә, уның һорауын ишетмәгәндәй, яуап ҡайтарманы. Капитан Әлфиәнең өндәшмәүен үҙенсә аңланы.

— Эйе... уны яратмаҫҡа мөмкин түгел... — ул «түгел ине» тимәне, ә «түгел» тине, сөнки Викторҙың һәләк булыуын башына һыйҙыра алмай ине.

— Иршат ағай... — Әлфиә беренсе тапҡыр уға исеме менән өндәште. Капитан туҡтаны.

— Тыңлайым.

Әлфиә һүҙен дауам итмәне. Ни әйтергә теләне һуң ул? Ә бына ни әйтергә теләгәйне ул: «Иршат ағай, ә һеҙҙең берәйһен яратҡанығыҙ булдымы?» Әммә Әлфиә ваҡытында тыйылып ҡалды. Һораһа, саялыҡ ҡына түгел, әҙәпһеҙлек тә булған булыр ине: Ардыуанов иһә һаман Әлфиәнең ни һорарға теләүен белергә тырышты.

— Ни һорамаҡсы булдың, Әлфиә?

— Оноттом да ҡуйҙым, — тине Камалова.

Ардыуановтың бөгөн, ниңәлер, өҙлөкһөҙ һөйләшәһе килде. Бәлки, Викторҙы юғалтыу ҡайғыһын баҫыр өсөндөр,

бәлки, Әлфиәнең балаларҙыҡы һымаҡ йомшаҡ һөйләшеүен, күгәрсендәй гөрөлдәп көлөүен һағынғандыр. Әммә, гәҙәттә, һүҙсән булған Әлфиә бөгөн аҙ һөйләште. Ихтимал, Викторҙың үлеме уның зиһенен тараҡҡандыр, ихтимал, башҡа сәбәп булғандыр.

Ҡояш, эшкә һуңлаған кеше һымаҡ, ҡапыл ашығып күтәрелә башланы. Ләкин һуғыш бөгөн ҡояш менән бергә эшен башлап ебәрмәне. Ике яҡта ла шомло тынлыҡ. Ғәҙәттә, хәйләкәр, йыртҡыс ҡорбанына ташланыр алдынан ана шулай боҫа. Эйе, дошманға ташланырға ваҡыт инде. Бөтә мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Гитлер Будапештты еңел бирергә йыйынмай. Йылға буйлап һуҙылған оборона ҡоролмаларын, һөжүмгә тупланған ҡорос ҡуныҙҙарҙы Әлфиә үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Юҡ, был боронғо гүзәл ҡала Гилтерға ҡәҙерле булғандан ул уны ҡулында тоторға теләмәй, ә муйынына һалған муйынсаҡты бушата төшөп, әжәл сәғәтен сиктерергә маташа. Ләкин... ҡояш бер сыҡҡас аҫҡа тәгәрәмәй, өҫкә күтәрелә, алға бара. Ер ҙә кирегә әйләнмәй.

Йоҡо аҙ тейеү арҡаһында күҙҙәре ҡыҙарған майор (ә һөжүм алдынан разведчиктарға бигерәк тә көсөргәнешле эшләргә тура килә. Оҙаҡламай һөжүм башланасағы һәр һалдатҡа билдәле) Ардыуанов менән Ҡамалованы асыҡ йөҙ менән ҡаршыланы.

— Яҡташты иҫән-һау күреүемә шатмын, — майор Әлфиәне диванға ултыртты, үҙе лә уның янына ултырҙы.

Һүҙҙе Әлфиә башланы.

— Андраш ағай менән ни булған? — тип борсолоп һораны ул. Дөрөҫ, бая Ардыуанов: «Гобар иҫән-имен», — тине. Бәлки, ул Әлфиәне йыуатыр өсөн генә әйткәндер.

— Күрәһең, көтөлмәгән хәл килеп сыҡҡандыр, — майор аҡланғандай итте. — Ни саҡлы ныҡлап, ентекләп планлаштырһаң да, дошмандың бөтә уйын да белеп булмай. Етмәһә, ул беҙгә буйһонмай ҙа, — тине майор, инде шаяртып.

Әлфиә лә майор һөйләшкән «тулҡынға» күсте.

— Ә ул беҙгә буйһонһон.

— Буйһондорорбоҙ. Нисек буйһондорорбоҙ әле, — майор урынына барып ултырҙы. — Йә, күргән мажараларыңды һөйләп бир. Бер генә детален дә төшөрөп ҡалдырма.

— Иҫ китерлек мажаралар булманы, — тип башланы хикәйәтен Ҡамалова тоноҡ тауыш менән. — Ә бына немецтар беҙгә һөжүм итергә әҙерләнә.

Майор һағайҙы.

— Кем әйтте?

Ҡамалова йылғаның арғы яғында күргәндәрен ашығатотлоға һөйләргә тотонды. Майор уны бүлдермәне, тик өҫтәлдә ҡаршыһында ятҡан картаға ҡәләм менән ниндәй-

ҙер билдәләр генә яһай барҙы. Ҡамалова рапортын тамамланы. Ярһып һөйләүенән хатта уның тамағы кипте, әммә һыу һорарға баҙнат итмәне. Майор башын ҡалҡытты.

— Бөттөмө?

— Бөттө, иптәш гвардия майоры.

Майор йылмайҙы.

— Ә һин иҫ китерлек бер нәмә лә булманы, тиһең, Ҡамалова, үҙең бик мөһим мәғлүмәттәр алып ҡайтҡанһың. Хәҙер үк мин был хаҡта дивизия командирына хәбәр итәм. Бының өсөн генерал һине «буш» ҡалдырмаясаҡ.

Был һүҙҙәрҙән Әлфиә батырланып китте.

— Был мәғлүмәттәрҙе мин осраҡлы рәүештә генә белдем бит, иптәш майор.

— Осраҡлы белгәнһеңме, үҙең эҙләп тапҡанһыңмы, барыбер мәглүмәттәр бик мөһим, — майор Ардыуановҡа мөрәжәғәт итте: — Бөгөн үк Ҡамалова булған ергә разведка ебәрергә! Нисек тә «тел» алып ҡайтырға! Немец оборонаһын нығытамы әллә ысынлап та контрһөжүмгә әҙерләнәме — асыҡларға!

Ҡапитан торҙо.

— Үҙем барам.

Майор ҡырт киҫте.

— Өлгөрөрһөң, — майор Әлфиәгә табан боролдо, — һин, Ҡамалова, ротаңа башҡа ҡайтмайһың. Гобар урап килгәнсе, беҙҙең радисткалар, телефонисткалар янында йәшәрһең... Ҡыҙҙар менән ауыҙыңды самалап асып һөйләш. Артыҡ бер һүҙ ҙә әйтмә. Һиңә «Белка» рацияһын бирерҙәр. Рацияны әнәһенән ебенә саҡлы тикшереп сыҡ. Бармаҡтарыңды бейестә тор. — Майор уға дуҫтарса күҙ ташланы. — Беҙҙең уйыбыҙса, һин дошман тылында эшләй алаһың. — Майор ултырҙы. Өҫтәл өҫтөндә йәйелеп ятҡан карта аҫтынан икенсе картаны алды. Әлфиә иҫләне. Был ҙур ҡала планы ине. Уртанан зәңгәр таҫма китә, — һис шикһеҙ, Будапешт ҡалаһының планы. Ҡамалова торҙо ла, хәрби кейемдә булмаһа ла, честь бирҙе.

— Ышанысығыҙға рәхмәт, иптәш гвардия майоры. Китергә яраймы?

— Миңә лә китергә мөмкинме? — тип һораны капитан да.

— Һин аҙ ғына тороп тор, — тине майор уға.

Шатлыҡ шул саҡлы көслө ине — Әлфиә бүлмәнән нисек сығып киткәнен дә һиҙмәне.

Оҙон сандыр майор һәм һонтор гәйрәтле капитан, күҙҙәрен текләшеп, икәүҙән-икәү тороп ҡалдылар. Аҙ ғына һүҙһеҙ торҙолар. Тынлыҡты майор боҙҙо.

— Ә Ҡамалова күҙ алдында етлегә, етдиләнә.

— Ҡыҙҙан бынамын һалдат сығасаҡ, — ти өҫтәнe капитан.

Йәнә улар бер-береһенә ҡарашып алдылар.

— Капитан, әгәр һине дивизия штабына алһаҡ, нисек ҡарайһың? Минең урынға.

— Ә һеҙҙе ҡайҙа? — тине Ардыуанов, артыҡ шатлығын белдермәй.

— Юғарыраҡ! — майор бармағын түшәмгә төрттө. — Подполковник званиеһына приказға ҡул ҡуйылған.

— Ҡотлайым!

— Рәхмәт. Йә?

— Мин егеттәрҙе ташлап китә алмайым.

Майорҙың ауыҙ ситтәрендә мыҫҡыллы йылмайыу хасил булды.

— Хатта майор итһәләр ҙәме?

— Штаб эшенә күнегә алмамдыр. Һәм... ғөмүмән... Ултырырға рөхсәтме?

— Ултыр, ултыр, беҙ бит бында рәсми һөйләшмәйбеҙ.

Капитан ултырғас тәмәке көйрәтте.

— Егеттәремә күнектем мин, иптәш майор, — капитан әле һаман Ванюшиндың үлеүе хаҡында әйтергә баҙнат итә алмай. Майор Викторҙы айырыуса яратыуын берәүҙән дә йәшермәй ине. Ардыуанов күренеү менән, тәүге минутта уҡ: «Йә, беҙҙең бөркөт нисек?» — тип һораша башлай. Ә бына был юлы ул, ниҙер һиҙенгән шикелле, Викторҙы иҫкә алманы. Әллә Әлфиәнең килеүе уны онотторон торҙо.

Майор башлаған темаһын дауам итте.

— Һинең кандидатураны генерал үҙе тәҡдим итте.

— Командующий үҙе тәҡдим итһә лә ризалығым юҡ.

Майор ҙа ултырҙы. Капитан майор папиросынан тоҡандырып, тәмәке көйрәтте.

— Әгәр бойорһаҡ? — тине майор инде ҡырҡа тауыш менән.

— Ә һин, яҡташ булһаң, бойормаҫлыҡ эшлә.

— Миңә үҙемдең урынға кеше табырға ҡушылды. Ату һуғыш бөткәнсе ошо эштә ҡатып ҡаласаҡмын.

Капитан йылмайҙы.

— Шулаймы... ни?

— Һуғыш әле тиҙ генә бөтмәйәсәк. Ун тапҡыр үлергә өлгөрөрһөң.

— Ә минең бер тапҡыр ҙа үлгем килмәй.

— Тимәк, дуҫтарса һөйләшеп килешә алманыҡ, — майорҙың тауышында үпкә һиҙелде.

— Тәүҙә Будапештты алайыҡ, унан күҙ күрер.

— Ах был Будапешт... тамаҡҡа ҡаҙалған ҡылсыҡ менән бер.

Һалҡын күҙгә күктә тәүге разведчиктар — йондоҙҙар берәм-һәрәм күренә башланы. Радистка, телефонистка ҡыҙҙар өҫтәмә шәмдәр тоҡандырҙылар. Әлфиә тороп баҙлауыҡ яндырырға иренде. Юҡ, иренмәне. Ул һуңғы көндәрҙә рацияны һағынғайны. Ә бына хәҙер уның алдында өрянъы, әле бер тапҡыр ҙа эштә булмаған «Белка» тора. Бына хәҙер уның бармаҡтары күҙ эйәрмәҫлек хәрәкәт менән нөктә, тире, нөктә, тире сығаралар.

Ныҡлап ҡолаҡ һалмағанда, был серәкәй безелдәүендә бер мәғәнә лә, моң да юҡ һымаҡ. Ләкин ошо нөктә, тиреләр менән Ҡамалова көнө буйы өйөнә, дуҫтарына оҙон-оҙон хаттар яҙҙы, яратҡан йырҙарын иҫенә төшөрҙө. Дөрөҫ, тәүҙә ул радиомәктәптә имтиханда туҡылдатҡан саҡлы етеҙ булдыра алманы. Мәктәптә ул иң етеҙ ҡыҙҙарҙан һаналды. Ул башҡа радисткалар шикелле «хәрефтәрҙе» бер-беренә ҡушып бутаманы, «почергы» асыҡ һәм аңлайышлы булды. Нөктә, тиреләр менән һуңғы хат Әшрәфкә яҙылды.

...«Әшрәф, разведканан ҡайтыуыма, мине ике хат һағынып көтөп тора ине. Һинеке. Әклимәнеке. Боевой заданиенан ҡайтыуыңа, өйҙән, яҡын кешеңдән хат килеп тороуҙың ниндәй ҙур шатлыҡ икәнлеген һиңә һөйләп тораһы юҡ. Әйтерһең, өс мөйөшлө хаттар-ҡарлуғастар түгел, ә һин Әклимә менән етәкләшеп мине көтөп тораһың.

...Әшрәф, ә һуғыш беҙ киноларҙа күргәнсә, китаптарҙа уҡығанса түгел икән. Бөтөнләй башҡаса. Бер ҡыҙығы, романтикаһы юҡ. Һуғыш уйыны ысын һуғышҡа ҡарағанда ҡыҙығыраҡ та, мауыҡтырғысыраҡ та...»

Ошо урынға еткәс, Әлфиә гел нөктәләр генә төртә башланы, гүйә, ул һуңғы юлдарҙы һыҙып ташларға теләне. Әшрәф, был ҡыҙҙың һуғыштан бик тиҙ ғәйрәте сиккән, тип уйламаһын әле. Әшрәф үҙе, бер ҡасан да кешегә көсһөҙлөгөндө күрһәтеп, йәлләтергә тырышма, тип өйрәтә торғайны бит. Дөрөҫ, Әлфиәнең ҡайҙалыр уҡығаны бар — көслө кеше үҙенең йомшаҡ яҡтарынан ҡурҡмай, хаталарын йәшермәй. Көслө кеше! Ә бына ул ниндәй кеше? Уй-фекерҙәр, ел ваҡытында сыуалған үрмәксеептәре һымаҡ, буталды.

...«Әшрәф, күрһәң икән һин беҙҙең рота командирын! Ҡалтырамай, йылмаймай мин уға ҡарай алмайым. Ул шундай...»

Һөйләм яҙылып бөтмәне, уның янына телефонистка Поля Неговорова килде. Ул бына хас Әклимәнең копияһы — йоморт ҡа, ҡаймаҡ һалып бешерелгән булка, күҙҙәре урынында — ике йөҙөм. Ул Ростовтанмы, Ростов тирәһенәнме. Әклимә кеүек үк хуш күңелле, хәйләһеҙ, гәмһеҙ ҡыҙ. Бик илгәҙәк. Теләһә ниндәй ҡыҙға танышыу менән «һин» тип өндәшә. Һәр кемгә лә уның күңел ишеге шар асыҡ,

Ирҙәр затына бер күреүҙә үк ғашиҡ була. Ғазаплана. «Мөхәббәт объектын» ауыҙынан төшөрмәй һәм ике-өс көндән «һүнә». Үҙенең шундай булыуына ҡайһы саҡ көйәләнеп тә ҡуя.

Бына әле ул тауышһыҙ ғына килде лә арттан Әлфиәне ҡосаҡлап алды.

— Етер һиңә, тәҙрә карнизена ҡунған беснәк шикелле, көнө буйы туҡылдап ултырырға. Мә ирен буяуы, һөрт, — һәм ул, Әлфиәнең риҙалығын көтөп тә тормай, уның башын үҙенә табан борҙо ла иплэп кенә һөйләнде: — Ай, ауыҙҡайың ниндәй бәләкәй! Уймаҡ! Ирҙәр бәләкәй ауыҙлы ҡатын-ҡыҙҙарҙы үлеп ярата. Ростовта минең бер дуҫ ҡыҙым бар ине. Ул төҫ-башҡа, ул кәүҙәгә — витринала ғына торорлоҡ, ә бына ауыҙы һинең башың һыйырлыҡ. Бахырҡайыңдың көйәләнгәнен күрһәң икән. Елем булһа, йәбештереп, бермә-бер бәләкәйләтер инем, тип зарлана торғайны, байғош.

Әлфиә Поляға ирендәрен буяп бөтөргә ирек бирмәне.

— Поля... Кәрәкмәй. Минең әле бер ҡасан да иренемде ҡыҙартҡаным юҡ.

Поля уны тыңламаны.

— Ҡыҙартмаған булһаң, ҡыҙартырһың. Фронтта ҡыҙ-ҙар тылдағыға ҡарағанда ла сибәрерәк булырға тейеш. — Ул ике бармағы менән Әлфиәнең түңәрәк эйәген өҫкәрәк күтәреп аҫҡы ирене буйлап помаданы йөрөттө лә, һоҡланып, «Килешә-ә!» тине.

Әлфиә торҙо.

— Беҙҙең халыҡ, көтөүсе ҡатыны кис биҙәнә, ти, һин дә мине...

Поля уны бүлдерҙе.

— Ә һине әкиәт геройы көтә, бәпесем, Илья Муромец. Юҡ, Никита Добрынин. Мин уға, инегеҙ, беҙ һеҙҙе ашамайбыҙ, каннибалдар түгелбеҙ, тим, ә ул ҡунаҡ ҡыҙымы ни, ҡыҙара, уңайһыҙ, үҙе генә сыҡһын, тип тартына.

Әлфиә кем килгәнлекте шунда уҡ аңланы, әлбиттә, ләкин һиҙҙермәне.

— Ниндәй Никита Добрынин икән ул?

Поля Неговорова, тиҙ ышаныусан, бер ҡатлы ҡыҙ булһа ла, Ростовта тыуып үҫкән бит әле, тиҙ генә алданмай. Һиҙенә.

— Нимә, бәпесем, мөхәббәтме әллә суррогат ҡынамы?

Әлфиә ҡапыл тоҡаның китте, ҡаты һүҙ әйтмәксе булды, әммә Поляның, Әҡлимәнеке кеүек, хуш күңелле йөҙөн күреп йомшарҙы. Йылмайҙы.

— Мөхәббәт тә, мауығыу ҙа түгел.

— Һуң?

— Кейәүгә сығам.

Поля был юлы ышанды һәм уны ҡыҫып ҡосаҡланы.

— Бәхетле йән. Миңә тәтеһә ине шундай Никита Добрынин.

Әлфиә инде этләшә башланы.

— Бынауы йондоҙонд бирһәң, Добрынинды башы-аяҡтары менән үҙеңә тапшырам. — Ул Поляның, кескәй генә тау кеүек, ҡалҡып торған күкрәгенә тағылған Ҡыҙыл Йондоҙ орденына төрттө.

Поля Әлфиәнең шаяртыуын аңланы.

— Йә, бар, бар. Көттөрмә, зарыҡтырма. — Поляның тауышы яғымлы һәм серле ине.

Ардыуановҡа йылмаймай ҡарарға мөмкин түгел ине. Ул кейәү егете һымаҡ кейенгән, яһанған, үҙен саманан тыш оялсан тота. Башында һоро ҡаракүлдән тегелгән кубанка, тужурка аҫтынан яңы диагональ гимнастеркаһының яғаһы күренә, тылда кейә торған яңы погондар, күҙгә кеүек ялтыратылған күн итектәр... Дөрөҫ, капитан бер ҡасан да әрпеш йөрөмәй, әммә был юлы ул, парадҡа йыйынған һалдат кеүек, бөхтә кейенгәйне.

Ардыуанов Әлфиәне күреү менән бер-ике аҙым уға табан атланы, ҡапыл ҡойолоп төштө, хатта иҫәнләшергә лә онотто. Әлфиә: «Сәләм!» — тип тәүләп өндәшкәс кенә, ярым бышылдап: «Хәйерле кис!» — тине. Ни эшләптер ҡапыл Әлфиә ҡыйыуланып, хатта саяланып китте!

— Һеҙ туйға барған егет кеүек кейенгәнһегеҙ, иптәш капитан.

Капитан был төртмә һүҙҙәрҙе ишетмәмешкә һалышты. Күҙ ҡаҙырға теләгәндәй, ул туң ерҙе итек үксәһе менән төйөргә тотонд: таҡ-тоҡ, таҡ-тоҡ...

— Беләһеңме, Әлфиә... бер нисә минуттан мин... разведкаға китәм...

— Хәйерле юл! Изге сәғәттә! — тине Әлфиә көр тауыш менән.

Капитан шул уҡ тоноҡ, хатта моңһоу тауыш менән дауам итте.

— Әгәр мин әйләнеп ҡайтҡансы, һине теге яҡҡа оҙатһалар...

Дөрөҫөн әйткәндә, көнө буйы рация менән шөғөлләнеп, Әлфиә онотоп ташлаған — иртән Ардыуанов: «Разведкаға үҙем барам», — тип майорҙан һорағайны бит әле. Ә разведка еңел түгел — йылға аша сығып, «тел» алып ҡайтырға.

— Майор һеҙҙең үҙегеҙгә барырға рөхсәт иттеме ни? — Әлфиә уға аҫтан өҫкә ҡараны, тауышы етди, һағайып сыҡты.

— Эйе. Ул, был һинең һуңғы разведкаң булыр, тип киҫәтте. Штабҡа аласаҡтар. Генерал ныҡыша, ти.

Хәҙер инде Әлфиә лә кескәй генә уксәһе менән «ҡоҙоҡ» ҡаҙый башланы. Ҡапыл ерҙе төйгөсләүҙән туҡтап, ике ҡул-лап капитандың еңенән тотто.

— Үҙегеҙ менән мине лә алығыҙ. Мин бит юлды яҡшы беләм.

— Һине башҡа задание көтә, Әлфиә, — капитан ярты аҙым алға атланы — хәҙер инде улар терәлешеп торалар ине. Ардыуанов йыш-йыш һулай, ниҙер әйтергә теләй. Ҡулдарын бер куртка кеҫәләренә тыға, бер ала, йә ҡайышын, йә кубанкаһын төҙәтеп ҡуя. Капитандың шундай ойлсан булғанын Әлфиәнең бер ҡасан да күргәне юҡ ине. Ул уға хатта ҡыҙғаныс булып китте. Капитан уның кескәй генә йылы ҡулдарына ауыр көслө ҡулдарын тейҙереп алды.

— Әлфиә... хоҙай өсөн, һаҡ бул...

Әлфиәнең ҡапыл өнө бөттө.

— Ярар, — тине ул бышылдап.

Болот аҫтынан бөтә күренештәргә, бөтә кешеләргә лә бер төрлө ҡыҙыҡһынмай һәм гәмһеҙ ҡараусы йәнһеҙ ай күренде. Нисәмә мең, миллион кешеләр уның һалҡын нурҙары аҫтында һөйгәндәренә үҙҙәренең йөрәк хистәрен түкте икән?.. Күпме һөйөшөүҙәрҙең һәм айырылышыуҙарҙың телһеҙ регистраторы булды икән?..

— Әйҙә, мин һине оҙата барам, — тине Әлфиә, кескәй генә ҡулын уның ҡултыҡ аҫтына тығып.

Күпме йылы, иркәләү һүҙҙәре уйланылғайны, татлы хыялдар-пландар ҡоролғайны ошо ашҡынып көтөп алынған тәүге осрашыуға саҡлы, ә бына осрашҡас... бөтәһе лә буталды, баштан сыҡты. Хәйер, уй-хыялдар күңел төбөндә һаҡланһа ла, моғайын, Иршат Әлфиәгә бер һүҙ ҙә әйтмәҫ ине. Мөхәббәт күп һүҙгә мохтажмы ни! Әлфиә былай ҙа уны бик яҡшы аңланы. Юҡ, һүҙһеҙ барыуға башҡа сәбәп тә бар ине. Әйтәйек, һин йылы, иркәләү һүҙҙәрен теҙеп һалдың, ти, ә бына Әлфиә быға нисек ҡарар? «Викторҙың йәне күккә күтәрелергә лә өлгөрмәне, ә һин, капитан Ардыуанов, уның командиры, үҙеңдең мөхәббәтең тураһында лығырлайһың...»

Был бит мәрхүмде мәсхәрәләү! Их капитан, ҡурҡыу-өркөү белмәүсе батыр һалдат, ҡыйыу разведчик, ә бына ҡыҙҙар йөрәгенә разведка яһарға тәүәккәллегең етмәй. Хәйер, кем белә, бәлки, һин үҙеңдең әҙәплелегең, гиффәтлегең менән Әлфиәнең йөрәген тулыһынса яулап алғанһыңдыр ҙа. Ана Виктор Ванюшин. Ул бит Әлфиә Камаловаға ысынлап, бөтә йөрәге менән ғашиҡ булғайны, ә дыуамал ҡыланышы, тотанаҡһыҙлығы арҡаһында ҡыҙҙы үҙенән биҙҙерҙе лә ҡуйҙы. Дөрөҫ, Әлфиә уны дошман күрмәне,

үлеү хәбәрен ишеткәс, йөрәге меңгә телгеләнде, әммә ғиниәте уты уның йөрәгендә ҡабына алманы.

Мөхәббәт... Ул һәр ваҡыт үҙенең романтикаһы, ғиффәтлеге, серлелеге һәм күк һымаҡ бейеклеге менән гүзәл булған һәм буласаҡ та. Ошо дүрт нәмәнең береһе генә етешмәһә лә, ул мөхәббәт түгел, уның күләгәһе, суррогаты була.

— Етте. Һиңә башҡа барырға ярамай, — тине Иршат, Әлфиәнең боҙға әйләнгән бармаҡтарын ҙур йылы устарына йәшерен. Әлфиәнең бармаҡтары шунда уҡ йылынды. Иршаттың тамырҙары буйлап саманан тыш ҡайнар ҡан йүгергеләй ине ошо минутта. Ҡапитан Әлфиәнең ҡаршыһына баҫты: — Һуғыштан һуң беҙ Текәярға ҡайтырбыҙ. Сейәләр сәскә атҡанда, бал ҡорттарының бызылдағанын, һитә йыйғанын ҡарап, тыңлап ултырырбыҙ...

Ә Әлфиә был һүҙҙәргә иҫ киткес ҡыйыулыҡ менән яуапланы. Дөрөҫөрәге, һорау бирҙе.

— Һеҙҙең берәйһен һөйгәнегеҙ булдымы, Иршат ағай?

— Мөхәббәт ике тапҡыр буламы ни? — капитан был һүҙҙәрҙе шул саҡлы ихлас һәм ябай итеп әйтте, Әлфиә, уның күкрәгенә башын ҡуйып, бәхетенән үкһеп иларға тотондо.

Артынан ҡыҙыл пурлы һуҡмаҡ ҡалдырып йондоҙ атылды һәм мәңгегә юҡ булды. Бәлки, был үлгән йондоҙҙоң һуңғы юлы булмағандыр. Ихтимал, күк төбөндәге алыҫ йондоҙҙоң нуры миллиард йылдар буйы беҙгә килеп еткәндер. Әлфиә ул яҡтылыҡты күрмәй ҡалды. Ә Ардыуанов уйланды: «Бәхеткәме был әллә... Юҡ, юҡ, бәхетһеҙлеккә юрамаҫҡа. Бәхеткә. Фәҡәт бәхеткә!..»

Эйе, мөхәббәт йыш ҡына алыҫ галактиканан килгән йондоҙ нуры һымаҡ килә, килә, килеп етә лә, утлы һуҡмаҡ ҡалдырып, юғала...

Мөхәббәт, мөхәббәт... Иҫ киткес гүзәл лә һин, йәһәннәм ғазабы кеүек, ауыр ҙа һин...

## «ӘШРӘФ, МИНӘН ТИҘ ГЕНӘ ХАТ КӨТМӘ, ЙӘМЕ?»

Әлфиә ете төн уртаһына саҡлы керпек ҡаҡманы. Уның башында шундай буталсыҡ уйҙар, йөрәгендә бер-береһен ҡыуып сығарыусы хистәр буталды. Ул үҙен аҡылһыҙлыҡта, енел елбәҙәклектә, Әшрәфкә хыянат итеүҙә ғәйепләне. Дөрөҫ, улар араһында бер ҡасан да бая Иршат менән булған хәл булманы. Ә Иршат менән уның араһында ни булды? Ғәйепләрлек, үкенерлек бер ни ҙә эшләмәне бит ул. Барыбер, барыбер уға йөрәген биктә тоторға кәрәк ине. Ул, бына нәс йәшлегенән иң яҡын дуҫын битәрләгән тура һүҙле

комсомолка-активистка һымаҡ, үҙ-үҙен әрләне, асыуланды, хатта күрә алманы. Һуңынан, хуш күңелле әсә кеүек, үҙен аҡларға, йыуатырға тотондо: «Йә, шунан ни булған ти? Һуң ул бит ғәйеп итерлек бер нәмә лә эшләмәне. Иртән Гобарҙың иҫән-һау икәнлеген ишеткәс, һөйөнөстән үбеп алды, ә кис менән, хистәренә хужа була алмай, капитандың күкрәгенә башын ҡуйып үкһеп иланы. Ни генә тимә, уның өйҙән сығып китеүенә йылдан ашты. Дөрөҫ, яңы таныштар, дуҫтар табылды, әммә улар иҫке дуҫтарҙы, балалыҡ, мәктәп дуҫтарын бер ҡасан да алмаштыра алмаясаҡ. Эйе, эйе, үбеү ҙә, илау ҙа ғашиҡ булыуҙан түгел, күңел нескәлегенән генә ине. Ул бит һалдат ҡына түгел, ҡыҙ кеше лә әле. Ә уның Шәмсинур апаһы, ҡыҙ сағында күңел алтмышлы кәтүк ебе менән бер, өҙөлөргә генә тора, тип шаярта торғайны.

Ярай, бынан һуң ул башҡа алабарманлыҡ эшләмәйәсәк. Ҡыланыштарына аяуһыҙ хөкөм сығарырға ғәҙәтләнгән Әлфиә үҙенең бөгөнгө ынтылыштарын ахмаҡлыҡҡа, дыуамаллыҡҡа һананы. Капитан разведканан әйләнеп ҡайтҡансы, уны, моғайын, фронт һыҙығының теге яғына, Будапештка, ташлаясаҡтар, ә унда инде мөхәббәт ҡайғыһы булмаясаҡ — тәүге хистәр тоҡанғансы уҡ һыуынасаҡ, һүнәсәк. Һүнһен! Һуғышта йөрәк хистәренә, сентименталлеккә урын булырға тейеш түгел. Һуғыш — һуғыш инде. Ул мөхәббәт менән нәфислектең дошманы.

Әлфиә, үҙен йыуатып, икенсе яғына боролоп ятты. Рәхәтләнеп һуланы. Иртәгә тороу менән Әҡлимәгә һәм Әшрәфкә хат яҙырға кәрәк. Тәүҙә Әшрәфкә яҙасаҡ, әлбиттә. Хат былай башланасаҡ: «Сәләм, минең ҡәҙерле дуҫҡайым!..»

Әгәр Әлфиәгә капитан Ардыуанов менән башҡа осрашырға тура килмәһә?.. Әлфиә был уйҙарынан эҫеле-һыуыҡлы булды, юрғанын тибеп осороп, тороп ултырҙы. Карауат янындағы ултырғысҡа төрөп ҡуйылған гимнастеркаһын алып (бында һәр ҡыҙҙың да үҙ карауаты, простыняһы, юрғаны бар ине), башын яғаһына тыҡҡас, баҫыла төштө, ҡыланышының дөрөҫлөгөнә шикләнде, хатта аҙаҡ «Тиле!» тип асыуланып та ҡуйҙы. Устарын баш аҫтына ҡуйып салҡан ятты ла (Сафуан ағаһы шулай йоҡларға ярата, имеш, матур төштәр күрә) Әшрәфкә хат «яҙыуын» дауам итте.

«...Белһәң ине, Әшрәфкәйем, шундай минуттарым була: шикләнә, икеләнә башлайым. Фронтҡа ашҡынып китеп мин дөрөҫ эшләнемме икән? Бына йылдан артыҡ инде мин армияла. Бына ике аҙнанан артыҡ инде мин ут эсендә, ә минән ни файҙа? Ошо көнгә саҡлы бер фашисты ла дөмөктөргәнем юҡ...»

Әгәр Ардыуановты йылға аша сыҡҡанда үлтерһәләр? Һуғышта юлда осраған йылғанан да хәтәрерәк кәртә юҡ бит ул.

Переправа, переправа!
Берег левый, берег правый.
Снег шершавый, кромка льда...
Ни приметы, ни следа...
Кому память, кому слава,
Кому темная вода —

Әлфиә, Твардовскийҙың шиғырын уҡый-уҡый, кейенә башлағанын үҙе лә иҫләмәне. Ә башында, һабантуйға килеүселәрҙең ҡыңғырауы сыңлаған кеүек, яратҡан шағирының шиғыры яңғыраны.

Ты ей только не перечь,
Той любви, что вправе
Ободрить, предостеречь,
Осудить, прославить...

Ул, тревога ваҡытындағы һымаҡ, ике-өс минутта кейенеп бөттө лә, шинелен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, бесәй булып, тышҡа сыҡты. Тышҡа сыҡҡас, шинелен кейҙе, билен өҙөп сығарырҙай итеп быуҙы ла ҡыланышының дөрөҫлөгөнә шикләнә башланы. Аҡыл: «Әлфиә, бар ин, сисен, бөркәнеп ябын да йоҡла. Иртәнсәк бер нәмә лә ҡалмаясаҡ», — ти. Ә йөрәк... һуң ун һигеҙ-ун туғыҙ йәшлек ҡыҙҙың йөрәге баштың айыҡ һүҙҙәренә ҡолаҡ һаламы ни? Киреһенсә, баш ни әйтһә, йөрәк ҡапма-ҡаршыны эшләй. Әммә баш та үҙенекен итергә тырыша, ныҡыша. Ана шул саҡ килештереүсе хаким — компромисс килә. Дөрөҫөрәге, хаким түгел, ә үҙ-үҙеңде алдау. «Барып килһәң ни булған ти? Хушлашырһың... Күрше йәшәһәк тә, беҙгә башҡа осрашырға ярамай, тип өҙөп әйтерһең. Һөйгән йәрем булмаһа ла, дуҫым, һабаҡташым бар, тиерһең... Беҙ бәләкәйҙән үк бер беребеҙгә эйәләштек... Беҙ... ыы... ғөмүмән, һуғыш... передовой — алғы һыҙыҡ ғишыҡ-мишыҡ урыны түгел... ыы... Ғөмүмән, иптәш капитан, былар бөтәһе лә йүләрлек...» тип һөйләп бирерһең.

Әлфиә нисә часовой уны туҡтатыуын, нисек итеп үтеп китеүен иҫләмәне. Бәлки, береһе лә уны туҡтатып тормағандар, иҫкә алмағандыр, ни генә тимә, уның бит хәҙер часовойҙар янынан шым ғына, күләгә һымаҡ, үтеп китә торған тәжрибәһе бар. Ул тик «тыуған йорто» янындағы часовойҙың «Туҡта! Кем килә?» тип ҡырҡа ҡысҡырыуынан ғына айнып китте. Часовой Әлфиә яуап биргәнсе үк уны танып алды.

— Ә, һинме ни, Аля? Әйҙә үт! — тауыш яғымлыланды.

— Рәхмәт, — тине Әлфиә, өйҙәге шикелле ябай, дуҫтарса. — Мин бик аҙға ғына килдем. Ҡапитан өйҙәме?

— Ҡапитан юҡ. Ул ҡайҙалыр китте.

— Оҙаҡҡамы әллә былай ғына сыҡтымы? — тип асыҡларға тырышты Әлфиә.

— Юҡ, былай ғына сыҡты, — тине часовой ғәмһеҙ.

— Ә разведкаға ҡасан... — тип төпсөнә башлағайны, аяҡ тауыштарын ишетте. Ауыр итектәр туң ергә һалмаҡ ҡына баҫалар. Йөҙләгән аяҡ тауыштарынан Әлфиә Ардыуановтың аҙымдарын айырыр. Эйе, был — Иршат ине. Әлфиә ҡапыл тороп йүгермәксе, төнгө ҡараңғылыҡҡа инеп юғалмаҡсы булды ла, үҙенең бәхетенә һәм бәхетһеҙлегенә табан йүнәлде.

— Был һинме, Әлфиә? — тине капитан, ғәжәпләнеп.

— Мин һинән башҡа йәшәй алмайым, Иршат... — Әлфиә, часовойҙан да тартынып тормай, Ардыуановтың күкрәгенә башын ҡуйҙы.

Улар төндә, дөрөҫөрәге, төндөң бер өлөшөн флигелдең икенсе ҡатында, «фон барон-графтың» йоҡо бүлмәһендә үткәрҙеләр. Карауат һике кеүек киң, диван һымаҡ йомшаҡ ине. Әлфиә ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас отҡорлоҡ менән, ҡараңғы булһа ла, простынялар һалынған шкафты эҙләп тапты; караватҡа ниндәйҙер тәмле еҫ килеп торған (әллә еҫле май һибеп үтекләгәндәр инде) япма йәйҙе, түшәк һымаҡ ҙур мамыҡ мендәрҙәрҙең тышын алмаштырҙы, йоҙроҡтары менән төрткөләп, уларҙы күпертте һәм, урын йәйелеп бөткәс, ашығып сисенергә тотондо... Әлфиәнең бөтә хәрәкәттәре, ҡыланыштары аңһыҙ, дөрөҫөрәге, кеше аңынан тыш булған бойороҡ буйынса эшләнде: ул ашыҡты, йөрәге ярһып типте, әйтерһең, ошо изге сәғәт башҡа бер ҡасан да ҡабатланмаясаҡ. Сисенеп бөтөп, эске күлдәктә генә ҡалғас, Әлфиә юрған аҫтына сумды.

— Иршат... йәнем... миңә һалҡын, — тине ул, бышылдап, үҙ тынынан үҙе ҡурылып.

...Әлфиә, инәһенең аяҡтары араһында мырлап ятҡан бесәй балаһы шикелле, Иршаттың ҡуйынына һылашып ятты. Иршат уны: «Бәләкәсем... Шатлығым. Бәхетем... Ниндәй елдәр һине был яҡҡа осороп килтерҙе?.. Ниндәй һуҡмаҡтар беҙҙе ҡауыштырҙы?..» — тип окоптар ҡаҙый-ҡаҙый ҡытыршыланған ҡулдары менән йомшаҡ сәсенән һыйпап иркәләне...

...Һуғыш бөткәс, улар Текәярға ҡайтасаҡтар... Бер-береһен ҡыуышып Ҡама буйына төшәсәктәр. Пароходтарҙы ҡаршы аласаҡтар, ҡул болғап, оҙатып ҡаласаҡтар. Йыл-

таға йәлпәк таштар ырғытасаҡтар ҙа нисә тапҡыр һикереүен һанаясаҡтар.

Әлфиә йәбешерҙәй, һеңерҙәй булып Иршатҡа һыйына ла тәҡәтһеҙләнеп уны бүлдерә.

— Унан пароходҡа ултырып Өфөгә ҡайтасаҡбыҙ.

Иршат һүҙһеҙ ризалаша.

— Эйе, эйе. Урал минең күптәнге хыялым. Урал — геологтар өсөн ожмах. Унда бит Менделеевтың периодик системаһының бөтә элементтары ла бар тип әйтерлек. Менделеев үҙе лә шул яҡтаныраҡ бит.

— Урал аръяғынан, Тобольскиҙан, — тип асыҡлай Әлфиә.

Улар тағы ла нығыраҡ ҡосаҡлашалар, әйтерһең, икеһе бер кешегә әйләнергә теләйҙәр. Әлфиә йәйге ҡояш кеүек эҫе, Иршаттың йөрәге көслө мотор һымаҡ дөрөлдәй. Беләктәге сәғәт ашҡынып ваҡытты иҫәпләй, ашыҡтыра.

— Ә һин нимә эҙләмәк булаһың? — ти Әлфиә тынып, иркәләнеп ятҡандан һуң.

— Кешеләргә нимә кәрәк, шуны.

— Ә шулай ҙа?

Иршат ҡапыл көтөлмәгән һорау бирә.

— Әгәр миңә ғүмерлеккә армияла ҡалғанда?

Әлфиә ҡырҡа ҡаршы төшә.

— Юҡ, юҡ. Һин — геолог. Һин ер аҫты байлыҡтары эҙләргә тейеш.

— Мин эҙләгәнемде таптым инде, Әлфиә.

— Таптың? Нимә: алтынмы, көмөшмө?

— Алтындан да, көмөштән дә ҡәҙерлерәк — һине!

Әлфиә, Иршаттың йөрәгенә башын ҡуйып, йоҡоға тала. Ул сабый һымаҡ тәмләп мышнай, йөрәге ашыҡмай ғына тибә. Иршат, уның һулышын тыңлап, хыялға сумып ята...

Ҡапыл Әлфиә тертләп китә, уяна, ҡайҙа ятҡанын төшөнөп, ялангас эҫе ҡулы менән Иршатты муйынынан ҡосаҡлап ала, ниндәйҙер шом һиҙгәндәй, уны маңлайынан, биттәренән, күҙҙәренән, ирендәренән һурып үбә. «Иршат... Ир-шат. Шатлығым минең... Хәсрәтем генә булмаһаң ярар ине... Мең йөрәгем булһа, мин уларҙың меңе менән дә һине яратыр инем... Һуңғы һулышыма, һуңғы йөрәк тибешемә саҡлы...» Ҡапыл ул Иршаттың муйынын ҡосаҡлаған ҡулын һурып ала, тороп ултыра. «Бөттө! Етте! Торорға ваҡыт!»

Иршаттың был ожмах рәхәтлектәрен бүлгеһе килмәне. «Әле иртә, йәнем». Ул Әлфиәне ятҡырырға теләне. «Юҡ, иртә түгел... Ваҡыт...» Әлфиәнең дә иркәләнгеһе, төн буйы түгел, ғүмер буйы шулай ләззәтләнеп ятҡыһы килә, әммә ул үҙ-үҙен еңә, юбкаһын үрелеп ала.

«Ә миңә разведкаға бармаһам да була. Ярҙамсым Байсәйетов — ышанныслы егет, заданиены минән кәм үтәмәйәсәк», — ти Иршат, теләр-теләмәҫ кенә тороп. «Барам, тип һүҙ биргәнһең икән, бар», — тип ныҡыша Әлфиә. Иршат бер ҡасан да Әлфиәне көндерәп булмаясағын аңлай, әммә үҙенекен итмәксе була. «Майор миңә разведкаға барырға рөхсәт итмәне». — «Һин үҙең, үҙем барам, тип ялындың бит». — «Әгәр белгән булһам...» Әлфиә быны үҙенсә аңланы. «Әгәр мин дә белгән булһам икән...»

Иршат та тороп кейенә башланы. Ҡараңғыла уның аҡ эске күлдәге ҡапыл Әлфиәгә кәфен булып күренде. Әлфиә ҡобараһы осоп: «Юҡ!» — тип ҡысҡырҙы ла Иршатты ҡосаҡлап алды. Уның йөрәге шартларҙай булып ярһып тибә ине. «Юҡ, ебәрмәйем!..» Әммә үҙе шунда уҡ ҡулдарын бушатты, Иршат тороп киткәс, простыняны һыҙырып алып йомарланы ла шкафтың иң аҫҡы шүрлегенә йәшерҙе...

Ҡулға-ҡул тотоношоп, боролмалы баҫҡыстан төшөп килгәндә Иршат ҡапыл Әлфиәне туҡтатты: «Бер генә минутҡа!» Ул куртка кеҫәһенән электр фонары алып, уның йәшел утын яҡтыртты.

— Ни эшләргә булаһың?

Яуап бирмәй, Иршат гимнастерка кеҫәһенән күн бумажнигын алды. Ғәҙәттә, унда партбилеты, ордендарының документтары була, ә хәҙер разведкаға китер алдынан, әсәһенең һуңғы хаты ла һуңғы фотоһүрәте генә ҡалған. Был фотоны фронт газетаһының фотокорреспонденты төшөргәйне. Газетала уның хаҡында «Геолог-разведчик фронтта ла разведчик» тигән шаҡтай ҙур мәҡәлә баҫылғайны. Мәҡәләнең уртаһында—түше орден-миҙалдар менән ҡапланған капитан Ардыуановтың фотоһы. Ҡарашы, ғәҙәттәгесә, артыҡ етди түгел, күҙҙәре аҙ ғына йылмайып тора. Иршатҡа фото оҡшаны. Өйгә ебәрергә, дуҫтарына бүләк итергә ул фотографтан үҙенә лә бер нисәне эшләтеп алды.

Ардыуанов фонарҙы Әлфиәгә тотторҙо. Үҙе карточканың арт яғын теле менән еүешләп, шәмәхә ҡәләм менән ашығып нимәлер яҙҙы. Карточканы кире бумажникка һалды ла Әлфиәгә һуҙҙы.

— Юғалтма. Донъя хәлен белеп булмай.

— Юҡ, алмайым. Был насарлыҡҡа юрау, — тип Әлфиә ҡулын артҡа йәшерҙе. Иршат шаяртты:

— Ә мин төрлө юрауҙарға ышанмайым. Мин һинең мөхәббәтеңә генә ышанам, Әлфиәкәйем, — капитан уның маңлайынан үпте.

Әлфиә күнде, бумажникты алды.

— Ә һин карточканың артына ни яҙҙың?

— Ҡайтҡас уҡырһың.

Нидә Әлфиә лә шаяртты.

— Өфөгә ҡайтҡасмы?

— Юҡ, ҡыҙҙарың янына ҡайтҡас, — Иршат, уның ҡулын тотоп, боролмалы баҫҡыстан төшөп китте. Баҫҡыс штопорҙы хәтерләтте. Баҫҡыс ҡынамы икән?..

Әлфиәнең аҙыраҡ башы әйләнде — ул бәхеттән, шатлыҡтан иҫергәйне.

Подвалға төшә торған ишек түбәндә нидә икенсе часовой баҫып тора ине. Әлфиә Иршат менән бер генә көнгә айырылышҡан шикелле ҡыҫҡа хушлашты. «Хәҙергә, Әлфиә!» — «Хәҙергә, Иршат!» — «Көт!» — «Көтөрмөн». Бармаҡтар яҙылды, ҡулдар айырылды. Әлфиә Ардыуановтан оҙаттырманы — төнгө ҡараңғылыҡҡа яңғыҙы кереп юғалды.

Күк ул төндә йондоҙҙарға фәҡир ине. Әсе декабрь еле иҫә. Әммә Әлфиә елдең һалҡынлығын һиҙмәне. Ул янып бара. Уның һирәк-мирәк емелдәүсе йондоҙҙарға ишетелерлек итеп йырлағыһы килә: «Мне в холодной землянке тепло от моей негасимой любви...»

Бына ул — быға саҡлы күренмәгән йондоҙҙоң нуры алыҫ галактиканан ергә килеп етте лә уны яҡтыртты һәм үтеп алды.

Әлфиә йүгерергә тотондо. Карточканың арт яғына яҙылған һүҙҙәрҙе тиҙерәк уҡыйһы килде уның. Ә ниңә ул һүҙҙәрҙе уҡырға ашҡына әле ул? Эштең иң ҙурыһы эшләнгән бит инде. А... әле хәҙергә Әлфиә үҙенең ашҡынып йүгереүен ацына һыйҙыра алмай, ә бына йылдар үткән һайын, ул яҙыуҙың әһәмиәте артасаҡ, ҡәҙерлерәк буласаҡ.

Торлаҡҡа инеү менән ул шинель кеҫәһенән йомшаҡ күн бумажникты тартып сығарҙы. Ҡалтыранып яныусы шәм янына килде. Карточканы бумажниктан алып әйләндерҙе. «Минең катыным Әлфиә Камаловаға. Мәңгегә һинеке мин. И. Ардыуанов. XII. 44. II Укр. фронты».

«Минең ҡатыныма...» Күҙҙәр томаланды, бит буйлап йәштәре тәгәрәп төштө. Ул был сикһеҙ ҡәҙерле һүҙҙәрҙе йәнә уҡымаҡсы булғайны, тәҙрәгә тамған ямғыр тамсылары кеүек, хәрефтәр бер-береһенә ҡушылып буталды. «Мәңгегә һинеке...» Мин дә мәңгегә... уныҡы...

Әлфиә Поля Неговорованың үҙенең янына килеп ултырғанын ишетмәне лә, иҫләмәне лә.

— Нимә, бәпесем, өйөңдө һағындыңмы әллә... — тип һүҙен осламай тамамланы.

Әлфиә уға карточканы һуҙҙы.

— У-у... Никита Добрынин! — Ул Ардыуановты шунда уҡ таныны. — Арт яғына ла күҙ һалырға мөмкинме?

— Мөмкин! — тине Әлфиә, уйлап еткермәй, аҙаҡ аңы-

на килде. — Юҡ, юҡ... — Ҡапыл ризалыҡ бирҙе. — Әйҙә, уҡы.

Поля бер ҡарауҙа яҙыуҙы уҡып алды ла, Әлфиәне ҡыҫып ҡосаҡлап, сеңләп иларға тотондо.

— Ай, ниндәй бәхетле һин, Аленька... Ниндәй бәхетле... Ул бит дивизияның иң батыр офицеры — бәһлеүән... — Поля, балалар һымаҡ, йоҙроҡтары менән күҙҙәрен һөрттө. — Ә мин берәүҙе лә бер ҡасан да ярата алмамдыр, күрәһең...

— Ни эшләп? — Әлфиә күҙҙәрен ҙур итеп асып уға ҡараны.

— Тәбиғәтем шулай. Бер күреүҙә үк ғашиҡ булам. Янам, көйәм һәм, күп тә үтмәй, һүнәм.

— Мин дә бик тиҙ ғашиҡ булдым, — тине Әлфиә, һағышлы йылмайып. — Әммә гел уны ғына яратасаҡмын. Мең йыл йәшәһәм, мең йыл буйы яратырмын.

— Мең йыл буйы... — Поля ауыр көрһөндө. — Миндә шундай йөрәк булһа икән...

Әлфиәнең төшөнә сәскәгә күмелгән сейә баҡсаһы, сейә сәскәһе төҫлө ап-аҡ күлдәк кейгән Иршат керҙе. Ләкин, ниңәлер, ул Әлфиәнең ялынып саҡырыуына ла килергә, яуап бирергә теләмәне. Йылмайҙы ла ҡул болғаны. Ул килмәгәс, Әлфиә үҙе Иршат янына йүгерҙе. Ҡапыл сейәләр улар өйө ҡаршыһында үҫкән муйыл ағасына әйләнде. Ә Иршат Туҡ-туҡ бабай ҡиәфәтенә инде. Әлфиә беләбелгәндән бирле ул ҡарт гел таяҡ менән йөрөй, шуға уны балаға «Туҡ-туҡ бабай» тип йөрөтә. Ҡарт асыуланмай, аҡ һаҡалын һыйпап йылмая ғына: «Бына минең йәшемә етегеҙ әле, бер түгел, ике таяҡ менән йөрөй башларһығыҙ». Ә Туҡ-туҡ бабай күптән һикһәнде үткән. Ә бына муйыл сәскә атҡанда, ул колонканан һыу алырға таяҡһыҙ килә. Ана шундай йылы, айлы төндәрҙең береһендә шул муйыл ағасы аҫтында Әшрәф менән Әлфиә, сәтәкәй бармаҡтарын элмәкләштереп, бер-береһенә һүҙ бирештеләр: «Ғүмер буйы дуҫтар булырға!»

Ғүмер буйы...

Әлфиә уяныу менән һикереп торҙо ла, эске күлдәге өҫтөнә шинель ябынып, Әшрәфкә хат яҙа башланы.

«Әшрәф, сәләм!» Артабан ул бер кешегә лә һөйләргә ярамаған йөрәк серен систе, аҙаҡ унан ғәфү үтенде. «Ғәфү... ни өсөн? Ул Әшрәфте ҡыҙ егетте яратҡан шикелле яраттымы ни? Һабаҡташ ҡына түгел инеме ни улар?» Ошо фекергә ул үҙен ышандырғас, хатты ваҡ киҫәктәргә йыртҡыланы ла ҡайҙа ташларға белмәй торҙо, — эйтерһең, ул үткән ғүмеренән ваз кисеп, уны өҙгөләне лә ташларға йәлләне. Кеҫәһенә, Иршаттың фотоһы янына, һалырға ла ҡыйманы. «Булмаһа, яндырып көлгә әйләндерәйем...» Хат ки-

ҫәктәрс көлгә әйләнгәс, ул Әшрәфкә яңы хат яҙа башланы. О быңа хыянат эшләүе хаҡында (ул Иршат менән булған хәлде хыянат тип уйланы) яҙырға йөрәге етмәне. Хат ҡыҫҡа һәм ҡоро булды. «Әшрәф, сәләм! Минән тиҙ генә хат көтмә, йәме? Ниңә, тиһеңме? Аңларға тейешһең, һуғышта төрлө хәлдәр була. Ғәфү ит мине, Әшрәф. Әлфиә.»

Эйе, фронтта төрлө хәлдәр була.

## ГОБАРҘЫҢ ХИКӘЙӘҺЕ. БУДАПЕШТҠА ЮЛ

Гобар дивизия штабында көтөлмәгәндә пәйҙа булды. Көпә-көндөҙ. Быға майор, юҡ, хәҙер уның погонында ике ҙур йондоҙ ине инде, подполковник та ғәжәпләнде.

Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡандан һуң, тәүге һүҙ «Фронтты нисек үтеп сыҡтың?» булды.

— Ә мин күренмәй торған кеше, — тине Гобар, биттәрен тағы ла ныҒыраҡ йыйырсыҡландырып, серле йылмайып. — Әгәр дөрөҫөн беләһегеҙ килһә, фронтты таң атҡанда үтеп сыҡтым. Ә Жужаның иҫән-һаулығын ишеткәс, ҡамырға әйләндем дә киттем. Мин бит һуңғы көндәрҙә бөтөнләй йоҡламаным. Берәй сәғәт кенә серем итеп алам да көнө буйы телемде һалындырып сабам. Ә Жужаның иҫәнлеген ишеткәс, сиселеп тороп ятып йоҡланым. Уянып китһәм, дүрт сәғәттән артыҡ үлек кеүек йоҡлағанмын. Хатта мине ҡарауыллап торған һалдатты уятмағаны өсөн орошоп алдым.

Подполковник шатланды ла, аптыраны.

— Жужаның иҫән-һаулығын ҡайҙан белдең?

— Рустар әйтмешләй, ерҙең дә ҡолағы бар бит. Ә фронтта сыбыҡһыҙ телефон яҡшы эшләй, — Гобарҙың күҙҙәрендә йылы осҡондар хасил булды. — Батыр ҡыҙ ул — Жужа. Өткөр, тапҡыр ҡыҙ.

Подполковник та ҡәнәғәт йылмайҙы. «О» ауазы булған һүҙҙәрҙе Гобар, Волга буйында тыуып үҫкән рустар һымаҡ, пренцдәрен ослайтып, ҡаты итеп әйтә.

— Иптәш Гобар, ҡайҙан волгарҙар һымаҡ оҫта һөйләшәһең?

— Ҡайҙан? — Гобарҙың йыйырсыҡтары йәнә тәрәнәйҙе, күҙҙәре йылтыраны. — Мин ике йыл буйы Россияла Нижний Новгород кешеһе Иван Сомов менән йәнәш йәшәнем. Хәҙер ул ҡала Максим Горький тип атала түгелме һуң?

— Максимы юҡ. Горький тип атала. — Подполковник уның янына барып ултырҙы. — Ә хәҙер мажараларығыҙҙы һөйлә.

— Һуғышсан донесениемы? — тине Гобар.

— Эйе, эйе, боевое донесение, — тип хатаһын төҙәтте подполковник. Хатта аҙырак ҡыҙарҙы ла. «Мажара» тип ул Гобарҙың хеҙмәтен кәмһеткән кеүек тойолдо.

Гобар ашыҡмай ғына, ҡайһы ваҡыт кәрәкле рус һүҙҙәрен онотоп, туҡталып тороп, үҙенең сәйәхәтен хикәйәләне.

— ...Күперҙе сығыу менән мин Эржебеттағы күршем Ференц Фаркашҡа тап булдым, дөрөҫөрәге, ул — осло күҙ мине күреп ҡалды. Ул һыра бары тота. Элек һыраға һыу ҡатыштырыуҙан башҡаны белмәне, политиканы теленә лә алманы. Ә бына тәүҙә Хорти кешеләре, һуңынан Салаши молодчиктары, рустар һинең һыра барыңды ла, ҡатыныңды ла тартып аласаҡ, тип ҡотҡо һалғас, Фаркаш иҫке «шкода»һына ултырып, үҙе теләп мобилизация пунктына китә.— Гобар оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо, дуғаланып торған мыйығын һыпырып ҡуйҙы, мыҫҡыллы йылмайҙы. — Фаркашҡа көлмәй ҡарап булмай. Бына хас цирктағы клоун: башында немец фуражкаһы, өҫтөндә мадьяр мундиры, аяғында үксәләре ашалып бөткән ҡара ботинка, балтырҙарын асыҡ һары инглиз крагаһы ҡыҫып тора. Ана шул клоун күперҙе ҡарауыллаусы һалдаттарға үҙенең машинаһында ашарға ташый икән.

Фаркаш, мине күргәс, шатлығынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне. Мин уға күҙ ҡыҫтым. Ул аңлап ҡалды. Әйҙә, Андраш, ти, ултыр, Эржебетҡа саҡлы өсөнсө тиҙлектә апҡайтам. Ә мин ыҡ-мыҡ итәм, миңә бит кисен Жужа менән осрашырға кәрәк. «Ярар, юҡҡа борсолма, йәйәү ҙә ашыҡмай ғына ынғайлармын. Йәйәү ҡурҡынысһыҙыраҡ...» һәм башҡалар... Ә ул, ай-вайға ҡуймай, көсләп тигәндәй кабинаға ултыртты. Ҡайһы сағында яҡшылыҡ эшләйем тип насарлыҡ эшләгәнеңде һиҙмәй ҡалаһың бит ул. Был юлы ла шулай булды. Үҙем Будапештҡа елдерәм, ә йөрәгем күпер янында тороп ҡалды. Жужа ни эшләр? Мине эҙләп йөрөп, немецтарға барып ҡапмаһа ярар ине... Ә Фаркаш баранкаһын борғолай, телен саҡлай: «Рустар ни эшләй унда? Таламайҙармы, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләмәйҙәрме?» — «Мин үҙем,— тип алдашам, — рустарҙы күреүен күрмәнем, ә бына рустар менән аралашҡан таныштарҙы күрҙем». — «Йә, йә?»— «Зарланмайҙар, — мин әйтәм. — Бер ҡуҙаҡ борос алһалар ҙа аҡса түләйҙәр икән». Фаркаштың күҙҙәре тәгәрәп төшөрҙәй булды. «Бер ҡуҙаҡ борос өсөн дә түләйҙәр, тиһеңме? Ә нимә менән түләйҙәр: доллар менәнме, үҙҙәренең аҡсалары менәнме?» — «Уныһын асыҡ ҡына әйтә алмайым,— тип шыттырам, — беҙҙең аҡса — феллер менән иҫәпләшмәйҙәрме икән?..» Фаркаш, тымау төшкән малай шикелле, оҙаҡ итеп танауын тарта, әшәке һүҙҙәр менән һүгенә. Ғө-

мүмән, ул ете ҡатлы итеп һүгенергә оҫта. «Ә һин белмәйһеңме, — ти Фаркаш, — рустар Будапештты алырмы икән?» — «Ә, һинеңсә, — мин әйтәм, — улар мәңге Будапешт ҡапҡаһы төбөндә һинең немецтарға гуляш ташығаныңды күҙәтеп ятырҙармы ни?»

Фаркаш йәнә кемдәрҙеңдер ата-әсәһен иҫенә төшөрөп алды. «Әгәр рустар минең үҙем теләп Салашиға хеҙмәт итеүемде белһәләр, мине ни эшләтерҙәр икән: аҫырҙармы, Дунайға ташларҙармы?» — «Аҫыуын, — мин әйтәм, — аҫмаҫтар, әммә стенаға терәп, «пух-пух» итерҙәр». Был юлы Фаркаш һүгенмәне, бер ҡулын баранканан алып, суҡынды: «Аve Мария...» Бер аҙ һүҙһеҙ барғандан һуң миңә ҡарап ала ла ҡапыл һорай: «Ә һин шпион түгелме, Андраш?» — «Юҡ, шпион түгел, — мин әйтәм, тегене ирештереп, — ә разведчик. Рустар миңә задание бирҙе: «Нисә мадьяр Гитлерға һәм уның ҡотorған эте Салашиға хеҙмәт итә?» Беләһеңме, Фаркаш ышанды. «Һәм һин үҙеңдең күршеңде рустарға тотоп бирерһеңме?» Ул хатта педалгә баҫты, карт алашаһы — «шкода»һы шатыр-шотор итте лә туҡтап ҡалды. «Һин нәмә, — мин әйтәм, — шаярғанды аңламайһыңмы? Мин шпион да, разведчик та түгел. Сырхау ҡәрҙәшем янына ауылға барғайным, ике ут араһында ҡалдым». Фаркаш ашыҡмай ғына аяғын педаленән алды: «Йәл, разведчик түгелһең», — ти ихлас, әсенеп. «Әгәр мин разведчик булһам, ни эшләр инең, — тим, — гестапоға илтеп тапшырыр инеңме?» «Етте, салашистарға үҙем теләп барып та төҙәтә алмаҫлыҡ ахмаҡлыҡ эшләнем инде. Ә хәҙер ҡойроҡто һыртҡа һалырға яй таба алмайым. Терһәк яҡын, тешләп булмай». — «Ә һин, — мин әйтәм, — ҡайҙа йәшәйһең — өйөңдәме, ҡаҙармаламы?» — «Өйҙә лә, ҡаҙармала ла түгел, — ти Фаркаш, мығырланып, — күп менән ер араһында». — «Ә һыра барың асыҡмы һуң?» «Асы-ыҡ... Үлә алмаған кеше һымаҡ, көскә-көскә йәшәй. Бөгөн кис инеп сыҡ. Лейтенант миңә бер-ике сәғәткә өйҙән урап, ғаиләнең хәлен белеп килергә рөхсәт итте».

— Ҡыҫҡаһы, —тип осланы Гобар хикәйәһен, — Фаркаш хәҙер минең ҡулымда. Уның аша күп нәмә белергә була. Һөйләүенә ҡарағанда, ул немецтарҙы һыра менән генә һыйламай, ҡатыраҡ эсемлектәр ҙә биргеләй.

Бер ҙә бүлдермәй, Гобарҙы ҙур иғтибар менән тыңлап торған подполковник устарында бер башы ҡыҙыл, икенсеһе зәңгәр алты ҡырлы йыуан ҡәләм тәгәрәтеп алды ла һаҡ ҡына һораны:

— Ә һин Фаркашҡа үҙеңдең кемлегеңде әйттеңме?

Гобар үпкәләгәндәй итте.

— Һеҙ мине кемгә һанайһығыҙ, иптәш ма... — Андраш тегенең погондарында икешәр йондоҙ күреп ҡалды. — Ә ике йондоҙ подполковник буламы?

— Подполковник була.

— Хăт *. Ҡотлайым!

— Рәхмәт. Ә радистканың хәле нисек?

— Шәптән түгел, — тине Гобар, йәшереп тормай. — Яҡшы дарыуҙар тапһам да, һаман бөтә тәне яна — температура. (Гобар ғүмер буйы йөрөткән «Пауль — Буре» сәғәтен дарыуға алмашыуы тураһында ауыҙ асып бер һүҙ әйтмәне.) — Ә төндә радистка һаташып сыҡты. Гел әсәһен саҡыра, бахырҡай, — Андраштың тауышы болоҡто.

Аңлайышһыҙ геометрик фигуралар яһап, подполковник бүлмә буйлап йөрөнө.

— Уны үҙең менән бергә был яҡҡа алып сығырға кәрәк ине...

— Мин уға әйтеп ҡарағайным, ишетергә лә теләмәне, приказһыҙ китә алмайым, — ти.

Подполковник урынына барып ултырҙы.

— Бер тәүлек ял һәм ҡабат юлға. Ә хәҙер Жужа менән осрашырға мөмкин.

Гобар еңел торҙо.

— Юҡ, юҡ, ҡараңғы төшөү менән ҡуҙғалабыҙ.

— Һин бит бер нисә тәүлек йоҡламағанһың.

— Һуғыштан һуң туйғансы йоҡлармын,— тип ҡырт киҫте ул. — Будапештта салашистар ҡотора. А-а... — Гобар үҙ күҙҙәре менән күргән ҡот осҡос күренештәр тураһында һөйләне: — ...Ыһ! Гитлер менән әшнәлек мадьярҙарға бик ҡиммәткә төшә. Дон ҡалаларында Икенсе венгр армияһы ҡыйратылып, бер маҡсатһыҙ, бер ғәйепһеҙгә меңләгән егеттәр ятып ҡалды. Беҙҙекеләр юҡҡа утҡа инергә теләмәһәләр, гитлерсылар уларҙы «ҡурҡаҡ һарыҡ мадьярҙар» тип мыҫҡыллланылар. Ә ҡоторған эт Ференец Салаши (ябай халыҡ уның исемен боҙоп, немецлаштырып, Фриц, тип йөрөтә) гитлерсыларҙан да уҙҙырырға тырыша.

Салаши ** ун алты йәштән алып алтмыш йәшкә саҡлы бөтә ирҙәрҙе армияға ала. Һәр приказы бер төрлө ҡурҡытыу һүҙҙәре менән тамамлана: «Кем миңә буйһонмай, шул тураҡланасаҡ». Венгрияның иң афәтле йылдарындағы кеүек, урамдарҙа, майҙандарҙа дар ағастары ҡалҡып сыҡты. Патриоттарҙың һәм дезертирҙарҙың үлек кәүҙәләре бер ни-

---

* *Хăт* — яҡшы (*венгерса*).

** *Ференец Салаши* — нилашистар партияһының етәксеһе. 1944 йылдың 15 октябренән алып 1945 йылдың 27 мартына саҡлы Венгрияның диктаторы. 1946 йылда Венгрия суды уны үлем язаһына хөкөм итә.

Ә көн әсе елдә тирбәлеп тора. Йорт подъездарында туҡмап, газаплап, атып үлтерелгән йәш мадьярҙарҙың мәйеттәре аунап ята... — Ҡарап тороуға үтә ипле, хатта йыуаш тойолған Гобарҙың күҙҙәрендә ҡара осҡондар тоҡана, йыйырсыҡлы, ҡан тамырҙары бүртенеп торған ҡулдары йомарлана. — Их, Салаши һуғыштан һуң минең ҡулға эләкһә! Мин уның менән, мәжүси мадьярҙар монах Геллерт менән иҫәпләшкән һымаҡ, иҫәпләшер инем...

Подполковник был һүҙҙәрҙән һуң ҡәләмен ҡуйҙы, башын күтәреп, Гобарға ҡарап алды. Ул Геллерт тауы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе белә: бейеклеген, ниндәй яҡтан менергә уңайлылығын һәм башҡалар, ә бына монах хаҡында ишеткәне юҡ.

— Ә фанатиктар Геллертты ни эшләткән?

Гобар, йоҙроҡтарын яҙып, ҡулдарын тубығына аҫлы-өҫлө ҡуя.

— Күптән булған хәл. Бынан мең йыл элек тип әйтерлек. Алыҫ Италиянан, ә дөрөҫөрәге, Венециянан Геллерт исемле монах мәжүси мадьярҙарҙы христиан диненә әүерелдерер өсөн йәйәү килә. Ә фанатик мадьярҙар уны эсено ҡаҙаҡтар ҡағылған мискәгә төйгөсләп тығалар ҙа әле Геллерт тип аталған тау башынан Дунайға тәгәрәтеп төшөрәләр. — Гобар торҙо. — Будапештты алғас, Геллерт тауына менербеҙ. Унда монахҡа ҡуйылған кескәй генә һәйкәл бар...

— Эй-йе... — подполковник йоҙроҡтарын төйнәне, ауыр һуланы. Ул тағы ниҙер әйтмәксе булғайны, тыйылды. Бәлки, ул, Геллерт тауына менгәнсе, ах, күп ҡан ҡойоласаҡ әле, тип әсенгәндер. Йоҙроҡтар яҙылды, һәм ул инде тыныс, эшлекле тауыш менән һүҙен дауам итте. — Хәҙер мин Жужаны саҡыртам. Уны юлға әҙерләргә кәрәкһеҙ инде был юлы, беҙ Будапештты алмайынса әйләнеп ҡайтмаясаҡһығыҙ. Был юлы, теге саҡтағы кеүек, айырылышып, буталышып йөрөмәҫһегеҙ тип ышанам. — Подполковник йылмайҙы ла телефонға үрелде. — Утыҙ өстө.

Әлфиә һуңғы минутҡа саҡлы көттө: бына-бына Иршат килеп керер ҙә, киң көслө ҡулын уға һуҙып: «Аҡ юл һиңә. Йөрөгән юлдарыңа фәрештә ҡанатын йәйеп торһон», — тип әйтер. Әммә был донъяла мөғжизәләр булмай — капитан Ардыуанов килмәне. Ул разведканан ҡайтып етмәгәйне әле. Подполковник улар янына инде лә бышылдап: «Ваҡыт»,— тине. Әлфиә уйҙарынан арынды, көрһөндө, бай булмаған һалдат мөлкәте һалынған тоғон подполковникка һуҙҙы.

— Ошо тоҡто капитан Ардыуановҡа бирһәгеҙсе.

— Тапшырырмын.

— Унда хат бар... Асып уҡыһын... — Әлфиә-Жужаның тауышы ҡалтырана башланы, ә ул мөмкин тиклем тулҡынланыуын һиҙҙермәҫкә, тыныс, ғәмһеҙ булырға тырышҡайны бит.

Подполковник уның кисерешен аңлап, йыуатырға тырышты.

— Бөтәһе лә уң булыр, Ҡамалова.

«Уң булыр — в порядке» — разведчиктарҙың юлға сығыр алдынан яратып әйтә торған һүҙе.

— Эйе, эйе, бөтәһе лә беҙ тигәнсә булыр, — тине Ҡамалова инде ышаныслыраҡ һәм көрөрәк тауыш менән.

Подполковник уларҙы алғы һыҙыҡҡаса үҙе оҙата барҙы. Һалдаттар Гобар менән Ҡамалованы, алғы һыҙыҡтан үткәреп, йылға аша сығарырға тейештәр. Йылғаны кисәһе урынды был юлы Гобар һайланы. «Ике тапҡыр иҫән-имен кисеп сыҡҡас, шул уҡ урындан өсөнсө тапҡыр ҙа сығырбыҙ әле», — тине ул, подполковникты күндереп.

Мәскәү ваҡыты менән төнгө ун ике нуль нулдә беҙҙең артиллерия «йүгерек ут» * асты. Ҡамаловалар баш осонан шыжылдап, һыҙғырып снарядтар, миналар осто, һәм шул уҡ минутта дошман яғында ләүкеү-ялҡындар күренде, һәм «бух, бух, бух!» иткән шартлау тауыштары ишетелде. Ҡамаловаларҙы оҙата барыусыларҙың өлкәне — старшойы ҡырҡа ғына «киттек!» тине һәм эйелеп рацияны алмаҡ булды, әммә Ҡамалова ризалашманы — үҙ арҡаһына аҫты, ә запас батареялар Гобарҙың брезент сумкаһына еүешләнмәҫлек итеп төрөлөп һалынғайны.

Ҡамалова, Гобар һәм бер һалдат кәмәгә ултырҙы, ә өлкәне кәмәне ныҡ ҡына этте лә кәмәгә һикерҙе. Һалдаттар кәмә эскәмйәһенә йәнәш ултырып, һыуҙы сутылдатмаҫҡа тырышып бөтә көстәренә ишә башланылар. Дөрөҫ, был зилзилә ваҡытында донъя емерелһә лә ишетелмәҫ ине, әммә һаҡлыҡ бер ҡасан да зыян итмәй. «Тиҙерәк, тиҙерәк!» тиһ һалдаттар бер-береһен ҡамсыланылар. Әлфиә — кәмәнең морононда, Гобар ҡойроғонда — кормаһында ултырып бара. Ишкәк булһа, улар ҙа ишер ине, әммә кәмә бер генә пар ишкәккә иҫәпләнгән. Һалдаттар, немец «шәм» яндырһа, йәшенергә, ышыҡланырға уңайлы булыр тип, арҡа һөйәге урталайға һынған күпер эргәһенән йөҙөп барырға тырыштылар.

Улар теләгәнсә бөтәһе лә уң булды: немец «шәм» яндырманы, ут асманы; дошман, беҙҙең артиллерия утынан һәм ҡарлы ямғырҙан шөрләп, блиндаждарына, дзоттарына боҫто, күрәһең. Инде йылғаның яртыһынан күбеһе үтелде...

---

* Хәрби телдә «беглый огонь» тип атала.

Ҡаршы ярға ун-ун биш метр ғына ҡалды... Ҡапыл бер-бер артлы бер нисә мина һыуға төшөп ярылды. Ҡарлы-боҙло һыу фонтаны Ҡамалованы башынан ҡойондорҙо.

— Тиҙерәк, тиҙерәк! — тип ярһып ашыҡтырҙы өлкән һалдат. — Беҙҙе күреп ҡалдылар шикелле. Әй ҡыҙыҡай, кәмә төбөнә ят.

Ә миналар йышайғандан-йышайҙы, яҡынайғандан-яҡынайып ярылды. Кәмәләгеләр инде миналарҙан хасил булған фонтан тамсыларынан манма һыу булдылар. «Һыу сәсрәүе әллә ни түгел, кибер, тик мина ярсыҡтары ғына өҫкә һибелмәһен». Бер юлы ике-өс ракета ҡабынды. Шулай уҡ немецтар беҙҙең планды — хәйләне һиҙенделәрме икән ни? Ҡаршы ярға ла алыҫ түгел, күп тигәндә, биш-алты метр булыр. Йәнә бер-ике шытылыш... Ошо минутта кәмә һикереп ҡуйҙы һәм йөҙ түбән мәтәлләне. Ҡамалова, таш кеүек, һыу төбөнә китте. Ул аяҡтары, ҡулдары менән иште, әммә арҡалағы ауыр йөк һыу өҫтөнә ҡалҡып сығырға ирек бирмәне, төпкә тартты. «Тоҡто сисергә кәрәк» тигән уй уның мейеһен ярып үтте. Ул, аяҡтары, буш ҡулы менән хәрәкәтләнеп, тоҡтоң бер бауын яурынынан ысҡындырҙы, унан — икенсеһен. Тоҡ шул минутта уҡ төпкә китте, әммә Ҡамалова уны эләктереп тоторға өлгөрҙө. Тоҡто бауынан тешләне лә салҡан әйләнде, ҡулдары менән иште, аяҡтары менән алмаш-тилмәш һыуға һуҡты. Шулай ике-өс аҙым йөҙөп китергә өлгөрмәне, ни эшләптер ауыҙы асылды, тоҡ йәнә һыу төбөнә китте. Әлфиә-Жужа һыуға сумды, ләкин ҡулына тоҡ теймәне. Ул һыу йотто, сәсәй башланы, өҫкә ҡалҡырға теләп, аяҡтары менән этенмәксе булғайны, нин-дәйҙер ҡаты нәмәгә тейҙе — был йылға төбө ине. Әлфиә-Жужа йылға төбөнә тишерҙәй итеп типте һәм ҡалҡыуыс һымаҡ өҫкә ҡалҡты, тәрән итеп һуланы ла йәнә сумды. Тоҡ уның тураһында аҫта ғына булған икән, тиҙ табылды.

Бер-ике минуттан инде ул яр ситендә ине. Гобар уны тотоп алды. Ул, тоҡто алып, Әлфиә-Жужаға һыуҙан сығырға ярҙам итте.

— Батареялар батманымы? — булды Ҡамалованың тәүге һүҙе.

— Юҡ.

Гобар «һеңлеһен» етәкләне.

— Саптыҡ!

— Ә һалдаттар?

— Береһе теге яҡҡа йөҙә, икенсеһе күренмәй. Кәмәгә йәбешеп йөҙәме әллә...

— Аҙыраҡ көтөп торайыҡ, бәлки, ул...

— Немецтар аңдарына килгәнсе, беҙгә бынан юғалырға кәрәк. Бынан алыҫ түгел ерҙә йәшеренерлек урын бар.

— Әгәр икенсе һалдат яраланған булһа? Әгәр уға беҙҙең ярҙам кәрәк булһа?

— Беҙҙең задание башҡа.

— Юҡ, мин бынан китә алмайым, — Әлфиә-Жужа сүгәләп ултырҙы ла, күҙҙәрен секрәйтеп, һыу өҫтөнән йөҙ түбән ауған кәмәне эҙләне. Немецтар йәнә «шәм» яндырҙы. Әлфиә-Жужа ауған кәмәне һәм уны аҡрын ғына этеп барыусы кешене күрҙе. Икенсе һалдат, күрәһең, ярға сыҡҡандыр. Ҡамалованың эсенә йылы керҙе. «Шәм» һүрелә башлағас, ул торҙо, «киттек!» тине.

Ҡөнбайыш яр шаҡтай бейек һәм, ҡая кеүек, текә ине. Һыу ағышына ҡаршы илле-алтмыш аҙымдар үткәс, текә ярҙы тар, тәрән тарлауыҡ икегә айыра. Тарлауыҡ төбөндә көмгәлер асыуланып, шишмә сылтырай. Ошо урында немецтар менән салашистар оборонаһының флангылары тоташа ине, дөрөҫөрәге, тоташып етмәй ине. Стык. Ошо тарлауыҡ Гобарҙы ике тапҡыр ҡотҡарҙы, өсөнсө тапҡыр ҡотҡарырмы икән? «Тоҡто бир», — тип бышылданы Гобар. Был юлы Ҡамалова ҡәҙерле йөк һалынған тоҡто икеләнмәй сит кешегә бирҙе. Дөрөҫ, ул тоҡтан башҡа нуль. Тоҡ ҡулында булып та, Гобарҙан башҡа ул барыбер бер ни эшләй алмай.

Беҙҙең артиллерия утты дошман позицияларының төпкөлөнә күсерҙе. Алғы һыҙыҡтағы немец пулеметтарының, минометтарының «теле» асылды. Ихтимал, улар ошо мәхшәр ваҡытында тарлауыҡтан хәтәр зонаны үтеп китерҙәр, тик немец һалдаттары шишмәгә һыу алырға ғына төшмәһен. Ә шишмә буйлап өҫкә күтәрелһәң, күптән емерелгән ташландыҡ күпергә тап булаһың. Был күперҙән күптән инде атлы түгел, йәйәүле лә йөрөмәй.

Улар тарлауыҡ буйлап абына-һөрөнә күпергә ҡарай йүгерҙеләр. Аҙ ғына тын алалар ҙа йәнә йүгерәләр. Инде Гобарҙың ғына түгел, Ҡамалованың да тыны бөттө. Улар туҡтайҙар ҙа йыш-йыш һулайҙар, ә йөрәктәрҙең тибеше дошманға ишетелгәндәй тойола; маңлайҙан тир ямғыр кеүек яуа.

— Һа-а-ыһ-һаа... һы-һы... Барып етәбеҙме әле?

— Күп... ҡалманы... Ярты... километр... самаһы ғына....

— А-а-а...

— Түҙ, түҙ.

— Киттек.

Улар йүгерә генә башлағайны, һыу супылдаған тауыш ишетелде.

— Сеү!

Йәнә һыу суп-суп итте. Улар йүгереүҙән туҡтаны. Йәнә, йәнә һыу супылданы. Немецтар һыу алырға төштөләр-

ме икән ни? Гобар ятып, ергә ҡолағын ҡуйып тыңланы — аяҡ тауыштары ишетелмәй. Бәлки, тегеләр ҙә уларҙың килгәнен ишетеп шымғандыр. Их, ҡәҙерле минуттар әрәм була, ә икенсе яҡтан уйлаһаң, йөрәк хәл йыя. Гобар торҙо. «Моғайын, һыу ҡомағылыр». Улар һаҡ ҡына атлап юлдарын дауам итте. Башҡа супылдаған тауыш ишетелмәне. Улар өлкөлдәп елә башланы. Тарлауыҡ өҫтөнән ат тояҡтарының туҡылдағаны, һөйләшкән тауыштар ишетелеп ҡала. «Салашистар!» — ти Гобар. Аҙыҡ-түлек, боеприпас килтергәндәрҙер, күрәһең. «Их, бына хәҙер пар ат егелгән бричка булһа... ике-өс сәғәттә Будапештҡа барып етер инек... Әгәр, ысынлап та, ошо ылауҙарҙың береһен ҡарауыллап торғанда? Салашистарға аҙыҡ-түлекте, боеприпасты йүнләп мылтыҡ та тота белмәгән ҡарт-ҡоро ташый бит... Юҡ, дыуамалланырға ярамай. Йә мадьярҙар янында немец һалдаттары ла булыр. Иң ышаныслыһы — емерелгән күпер аҫтында Фаркаштың әйләнеп ҡайтҡанын көтөп ултырыу. Ул бит көн һайын алты менән ете араһында, машинаһын бушатып, әйләнеп ҡайта. Теге көндө Фаркаш Гобарҙы көсләп тигәндәй ултыртып алып ҡайтты, ә бына бөгөн ул үҙе «ултырт» тип ялынасаҡ. Әгәр Фаркаш: «Андраш, һин ни эшләп ут араһында тағы буталып йөрөйһөң?» — тип мығырланһа, әйтергә һүҙ бар: «Күрмәйһеңме ни, үлгән ҡәрҙәшемдең телһеҙ-һаңғырау ҡыҙын үҙемә алып ҡайтып барам». Хәйер, Фаркаш ҡыҙыҡһынып һорашып торормо икән? Теге көндө, һыра барында паленка парҙары уның мейеһен томанландыргас, күҙ йәштәренә битен сылатып: «Андраш күрше, рустар килгәс, мине яҡла, буш итмәм, мәңге онотмам», — тип ялбарғайны. Ә салашистарҙан ҡасып китергә шөрләй. Эҙләп тапһалар, урамдағы дар ағастарының береһенә, эт кеүек, аҫып ҡуясаҡтар. Гобар уға бер нәмә лә вәғәҙә итмәне, әммә: «Донъя хәлен белеп булмай, ихтимал, йәнә юлдар осрашыр әле», — тип кинәйәле әйтеп ҡуйҙы. Гобар унан, ҡасан күпер ҡарауыллаусы һалдаттарға аҙыҡ, боеприпас илтәһең, ҡасан әйләнеп ҡайтаһың, кабинала яңғыҙың ғына булаһыңмы әллә янына берәйһен ултырталармы, гел бер үк юлдан йөрөйһөңмө әллә маршруттан ситкә лә тайпылаһыңмы, тип һүҙ ыңғайында һорашҡан булып, үҙенә кәрәкле мәғлүмәттәрҙе алды. «Ҡарап ҡарайыҡ, Фаркаш уның күтәрелгән ҡулын күреп, тормозына баҫырмы әллә танымаған булып «ҡарт алашаһын» туҡтатып тормай, шатыр-шотор үтеп китерме? Бәлки, теге ваҡытта ул күптән күрмәгән игелекле дуҫын хәтәр урында осратҡас, Андрашты йәлләп, күңеле йомшарып киткәндер ҙә, ултыртып алып ҡайтҡандыр. Бәлки, барҙа паленка эсеп алғас, Фаркаш уны һайрандырырға йәки «һатып алырға» теләгән-

дер, иҫермәгәндер, ә иҫереккә һабышҡандыр. Ауыр, иҫ киткес ҡатмарлы: «Ҡасан кешегә тулыһынса ышанырға, ҡасан шикләнеп ҡарарға?»

Күпер аҫтында шымып ятҡанда, ана шундай уйҙар Гобарҙың мейеһен телгеләне. Ә Әлфиә-Жужа өшөнө, ҡалтыранды. Бирешмәҫкә тырышып һелкенгеләһә лә, мускулдарын бер ҡатырып, бер йомшартһа ла, әллә ни файҙаһы теймәне — еүеш кейем, һалҡын үҙенекен итте — тән генә түгел, һөйәк тә өшөй башланы. Их, бына хәҙер әсәһенең тамаҡты бешерерлек ҡайнар сәйе булһа!

— Йотаһыңмы? — тине Гобар, Әлфиә-Жужаның хәленең мөшкөллөгөн күреп.

— Ҡурҡам. Минең эскәнем дә юҡ.

—Ату сирләүең бар. Бер-ике йотомдан бер ни булмаҫ, — Гобар сумкаһынан шешә алды, тештәре менән уның бөкөһөн тартып сығарҙы ла Ҡамаловаға һуҙҙы.

— Эскәс, тын алмай тор. Ҡаты нәҫтәкәй, сәсәрһең.

Әлфиә-Жужа шешәнең һалҡын боғаҙын ауыҙына килтерҙе, танауға таныш булмаған тәмһеҙ еҫ килеп бәрелде, ләкин ул батырайҙы, тәрән итеп һуланы ла ғотғолдатып ике тапҡыр йотто. Тамаҡ буйлап ут-йылан төшөп китте. Һуламаҫҡа тырышһа ла, булдыра алманы, йүтәлләргә тотондо. Гобар тиҙ генә уның ауыҙын усы менән ҡапланы — йүтәлләүҙе ишетеп ҡалыуҙары бар ине. Ҡамалова йүтәлләүҙән туҡтаны.

— Үтеп киттеме?

— Китте буғай. Фу, ниндәй тәмһеҙ. Нисек шуны эсәһегеҙ?

— Дарыу тәмле булмай,— тип шаяртты Андраш ағай.— Тағы йотаһыңмы?

— Юҡ, ҡайҙа ул!

Ҡапыл Әлфиә-Жужа йылынып китте, хатта аҙыраҡ башҡа ла менде, хәл еңеләйгәндәй булды.

Гобар үҙе лә бер нисә апҡыр паленканы йотто ла еңен еҫкәп торҙо.

— Бындай ваҡытта паленканан да шифалыраҡ дарыу юҡ ул, Жужа, — тине, шешәһен муҡсаһына йәшереп.

Ул арала фронт яғынан тар ғына яҡтылыҡ күренде — ниндәйҙер автомашина еләэ ине.

— Ә һеҙ Фаркаш машинаһының номерын хәтерләйһегеҙме? — тип һораны һағайып Ҡамалова, яҡынайыусы яҡтылыҡты күргәс.

— Машинаһын нисә тапҡыр күргәнем бар, ә бына номерын иҫкә алғаным юҡ, —тине Гобар үкенгәндәй.

— Ә улайһа нисек беҙ уны...

— Фаркаштың «ҡарт алашаһын» мин бер саҡрымдан танырйым, — тине ул, күпер аҫтынан сығып, өҫкә күтәрелеп.

— Ҡараңғыла ламы?

— Рустар нисек тиҙәр әле: «Алла бирмәһә, сусҡа ашамаҫмы?» — Әлфиә-Жужа ла Гобар артынан үрмәләне. — Һин тороп тор, Жужа.

— Әгәр Фаркаш бөгөн килмәһә?

— Килер.

Әлфиә-Жужа үҙенекен итте.

— Мәҫәлән, килмәне ти.

— Тоҡтарҙы бында ҡалдырабыҙ ҙа үҙебеҙ Будапештҡа китәбеҙ. Аҙаҡ Фаркаш «шкода»һына ултырып килеп, тоҡтарҙы алып ҡайтырмын.

— Әллә хәҙер үк шулай итәбеҙме? — Камалова ҡыйыулыҡты, тәүәккәллекте генә түгел, әйтергә яраһа, аҙыраҡ авантюраны ла ярата ине.

— Аҡылың бармы? Төндә беҙҙе юлда осраған беренсе часовой уҡ тәпегә ҡаптырасаҡ.

Әлфиә-Жужа әле һаман һәр аҙымын уйлап еткерә алмауы, еңеллеге өсөн үҙен шелтәләп алды. Был өҫтән уйлау ғәләмәте генә түгел, һуғышта аҙ булыуҙың һөҙөмтәһе лә ине. Ваҡыт, бик ваҡыт инде һиңә, Әлфиә Камалова, тәүҙә ныҡлап, ентекләп уйларға, унан ғына икеләнмәй-шикләнмәй эшкә тотонорға. Тәүҙә эшләп, һуңынан уйлау тыныс ваҡытта үкендерһә, хатаға дусар итһә, фронтта һәләкәткә еткереүе бар...

Машина тарлауыҡҡа параллель юлдан, илле-йөҙ метр алыҫлыҡтан үтеп китте — был Фаркаш түгел ине. Бер сәғәт, ике үтеп китте, әммә Фаркаш машинаһы күренмәне. «Бәлки, мин уның машинаһын танымай ҡалғанмындыр», — тип шикләнә башланы Гобар, әммә шиген Әлфиә-Жужаға һиҙҙермәне.

— Сәғәт нисә, Жужа?

Камалова, еңен күтәрә төшөп, сәғәтенә ҡараны. Виктор бүләге, алыҫ йондоҙ шикелле, зәғиф кенә яҡтыртып, келт-келт итә ине, тимәк, механизмына һыу үтмәгән.

— Тиҙҙән алты була.

— Оҙаҡламай Фаркаш үтергә тейеш.

Быға саҡлы ваҡыттың үткәне, нисектер, һиҙелмәгәйне, ә бына алты тулырға һанаулы минуттар ғына ҡалғас, һәр минуты — ай, сәғәте йыл кеүек һуҙылды. Әлфиә-Жужа сәғәт бәйләнгән ҡулын ҡолағына терәне. (Ул, Виктор нисек бәйләгән булһа, шулай — беләгенең эске яғында.) Юҡ, сәғәт башҡа көндәрҙәге кеүек ашыҡмай ҙа, иренмәй ҙә үҙ яйына, бер ритмда йөрөй бирә ине: «Тик-тәк-тәк...» Сәғәт, әйтерһең, «уны тиккә көтәһегеҙ» тип ирештерә. Камалова,

беләген ҡолағынан алып, инде нисәнсе тапҡырҙар сәғәтенә күҙ һалды.

— Нисә?

— Етенсе ун минут... — Әлфиә-Жужаның күкрәгенән тәрән көрһөнөү ишетелде.

— Бошонма, барыбер килмәй ҡалмаясаҡ ул.

Тәҡәтһеҙлеге өсөн Әлфиә-Жужа йәнә үҙен әрләп алды. Түҙемһеҙлек — тотанаҡһыҙлыҡтың бер туған ҡәрҙәше, ә һуғышта үтә түҙемле булырға, нервыларыңды онотоп, тимергә әйләнергә кәрәк. Иң батыр кеше лә, түҙемлеге, тотанаҡлығы етмәһә, эште һәм үҙен харап итергә мөмкин. Харап итмәһә лә, зыян килтереүе бар. Беренсе разведканан ҡайтҡас, Иршат уға өйрәтте. Иршат... әлегә саҡлы онотолоп торған кеше ҡапыл иҫкә төштө. Иршат... ҡайҙа һин? Иҫән-имен ҡайтып еттеңме? Ул хыялына сумырға өлгөрмәне, Будапешт яғынан ярыҡтан төшкән ут һымаҡ яҡтылыҡ күренде. Гобар йәнә имгәкләп өҫкә күтәрелеп, юл буйындағы канауға йәбешеп ятты. Әле хәҙергә белеп булмай: йөк машинаһымы, еңел машинамы? Яҡтылыҡ яҡынлаша төшкәс, асыҡланды — юлдан йөк машинаһы килә ине. Машина ашыҡмай, яй ғына килә. Тиҙҙән машина бөтөнләй яҡынлашты, улар янына килеп етте. Моторҙың эшләүенә, соҡор-саҡырҙа ниндәйҙер деталдәрҙең шатор-шотор килеүенә ҡарап, Гобар таныны — был Фаркаш ине. Машина уның менән тигеҙләнгәс, Гобар баранкаға бөгөлөп ултырған күршеһен — Фаркашты танып ҡалды. Гобар, малайҙарға ғына хас йылғырлыҡ менән һикереп тороп, ҡулын күтәрҙе лә, ниңәлер, немецсә «һальт!» тип ҡысҡырҙы. Фаркаш бер нисә метр үтеп китеп туҡтаны.

— Кем ул? — тип һораны Фаркаш мадьярса, кабинаһының ишеген асып, үрелеп.

— Күршеңде таныманың мы ни, Фаркаш? Эреләнгәнһең, — тине Гобар мыҫҡыллы.

— Андраш! — Фаркаш ергә һикереп төштө. — Һин ни эшләп бүре һымаҡ төндә япа-яңғыҙың йөрөйһөң?

— Мин яңғыҙ түгел, телһеҙ һеңлекәшем менән. Мин бит һиңә уның хаҡында теге көндө һөйләгәйнем. Оноттоңмо ни? Әсәһе үлде, ә ул, янғындан тороп ҡалған яңғыҙ ағас һымаҡ, бер үҙе генә...

— Хәт, хәт, — тип Фаркаш күршеһенең һүҙҙәрен ҡеүәтләне, ә үҙе башын борғолап Жужаны эҙләне. — Ә апайыңдың ҡыҙы ҡайҙа һуң?

— Тегендә, емерек күпер аҫтында.

— Улай-й... — тип аңлайышһыҙ һуҙҙы Фаркаш. — Утыҙ-ҡырҡ минуттан урап килермен. Ошонда көтөп тороғоҙ.

— Тик һин ҡара уны... — тип Гобар уны киҫәтә башлағайны, Фаркаш тыңлап бөтөрмәне, машинаһына ултырҙы.

— Киттем, — ишек шапылдап ябылды, ниндәйҙер частар-деталдәр шылтырап алды.

Һаҡлағандың һағы ятыр, тигән аҡыллы мәҡәлде иҫкә алып, улар Фаркаш күҙҙән юғалғас, башҡараҡ урынға, шишмә ағышынан түбәнерәк табан төшөп ҡыуаҡлыҡ аҫтына инеп йәшенделәр. Хәҙер минуттар айға түгел, йылға тиңләште — тик алда билдәһеҙ көтөү түгел, ә ышаныслы көтөү ине. Шуға күрә, утыҙ-ҡырҡ минут артыҡ оҙаҡ та, күңелһеҙ ҙә тойолманы. Андраш паленкаһын алып йәнә берике йотто. Әлфиә-Жужаға ла тәҡдим итте, әммә теге эсмәне, тештәре менән ҙур сало-шпиг өҙөп алып, уны сәйнәмәй, ауыҙында иретте. Салоға йәлләмәй ҡыҙыл борос һибелгәйне, шуға күрә ул ауыҙҙы ғына яндырманы, аяҡ-ҡулды ла йылыта төштө. Әлфиә-Жужа, ҡала ҡыҙы булараҡ, үлән-ағастарҙы бик яҡшы белмәһә лә, таныш ағастарҙы тиҙ айыра. Ә бына әле улар йәшенеп ятҡан ҡыуаҡлыҡ ниндәй ағас һуң? Дөрөҫ, хәҙер, декабрь уртаһында, төндә ағастарҙы бер-береһенән айырыуы еңел түгел. Әлфиә-Жужа ағасты еҫкәп ҡарай, ауыҙындағы салоһы иреп бөткәс, ботаҡты сәйнәп, тәменән белергә теләй, ләкин дөрөҫөн генә әйтә алмай. Был уны сәмләндерә: ял көндәрендә, каникул ваҡыттарында урманда аҙ булырға тура килде шул. Һуғыштан һуң... Туҡта, был сейә ағасы ла... Сейә шул! Сейә... Иршат... Ҡама буйҙары... Улар ишетмәй ҙә ҡалды, Фаркаш күпер янында машинаһын ҡырҡа туҡтатты ла, кабина ишеген асып, һаҡ ҡына һыҙғырҙы. Һуңғы минуттарҙа Әлфиә-Жужанан ситтәрәк, өҫтәрәк, Фаркашты һағалап ятҡан Гобар «ишеттем», тигәнде аңлатып йүтәлләп алды ла, ярым бышылдап: «Жужа!» — тине. Һә тигәнсе улар машина янына барып еттеләр.

— Кузовҡа сумығыҙ! — тине Фаркаш. — Тикшерә-нитә ҡалһалар, һин — минең ағайым, ә теге телһеҙ — һинең ҡыҙың. — Ишек ябылды, машина ҡуҙғалды ла... шунда уҡ туҡталды. Фаркаш бер аяғын кабина баҫҡысына ҡуйып, кузовҡа үрелеп һораны:

— Ә һеҙҙе ҡайҙа ауҙарырға?

— Барың янында.

— Бар әле ябыҡ бит, — тип шаяртты Фаркаш.

— Ә беҙ уны асырбыҙ, — тине Гобар ҙа шаяртып. — Аҫҡыстар кеҫәңдәлер бит, әллә ҡатының һаман һиңә ышанып етмәй, төнгөләккә бар аҫҡысын янына алып ятамы?

— Ышанмай ҡараһын, — тине Фаркаш эре генә. — Бөгәрләнеп ятығыҙ. Үҙегеҙҙе брезент менән ҡаплайым.

Гобар менән Камалова, арҡаларын терәшеп, бөрөшөп ятҡас, Фаркаш, кузовҡа һикереп менеп, уларҙы бензин, һыра еҫе килеп торған күнгә әйләнгән ҡаты, ҡалын брезент менән ҡапланы, тирә-яҡтарына канистрҙар, термостар ҡуйҙы.

Эржебетҡа барып еткәнсе машина бер генә тапҡыр туҡтаны, унда ла бик тиҙ ҡуҙғалды, күрәһең, машинаның номеры, алдағы быялаға ҡуйылған пропуск часовойҙарҙа шик тыуҙырғандыр. Икенсе тапҡыр туҡтағанда уларҙы Фаркаш торғоҙҙо.

— Эй! Төшөгөҙ. Ҡайтып еттек.

Гобар менән Камалова кузовтан төштөләр.

— Туңманығыҙмы? — тине Фаркаш ҡайғыртыусанлыҡ менән.

— Һин булмаһаң, тегендә, күпер аҫтында, ҡатып үлә инек. Рәхмәт, Фаркаш. Үлгәнсе онотмам,— тине Гобар уның бирсәткә кейгән ҡулын ҡыҫып.

— Улайһа, мин саптым.

Гобар уны беләгенән тотто.

— Стоп! Ә бар аҫҡыстары?

Ул хәҙер инде Гобарҙың ниндәй «донъя мәшәҡәте» менән йөрөгәнен һәм Жужаның кемлеген аңланы, буғай. Ҡала буйлап ҡолаҡтан ҡолаҡҡа йәшерен компартия ойошмалары, немецтарға, салашистарға ҡаршылыҡ күрһәтеүсе патриоттар хаҡында ғына түгел, Будапештҡа ташланған рус разведчиктары, радисткалар тураһында ла хәбәр йөрөй ине. Эйе, Фаркаш бөтәһен дә аңланы, буғай, һәм үҙенсә һығымта яһаны. Хәҙер инде «мең йыллыҡ герман рейхының» емерелеүе, Гитлерҙың муйыны һынасағы бер кемгә лә сер түгел, берәүҙе лә шикләндермәй. Тимәк... Тимәк... Фаркаш салбар кеҫәһенән аҫҡыстарын алып, нимәлер, шылтыратты ла Гобарға һуҙҙы, әммә киҫәтте.

— Мин һеҙҙе күрмәнем, — тине, һәр һүҙҙе ижекләп, — аҫҡыстар бирмәнем. Барҙы аҫҡыстар яратып асҡанһығыҙ.

Гобар аҫҡыстарын барланы.

— Ҡайһыһы артҡы ишектеке?

— Ҙурыһы. — Фаркаш ҡуҙғалды.

— Стоп! Әгәр ҡатының күрһә?

— Ул да һинең «апайыңдың ҡыҙы» һымаҡ һаңғырау һәм телһеҙ булыр, — тине Фаркаш, әммә «апайыңдың ҡыҙы» һүҙен мыҫҡыллап әйтте. — Шәм, шырпы ултыртып ҡуйылған ҙур мискә өҫтөндә яталыр. — Фаркаш йәнә мыҫҡыллы тауышҡа күсте. — Инде китергә ярайҙыр бит, пан Гобар? Ату һуңлайым.

Фаркаш машинаһына ултырҙы ла, газға бөтә көсөнә баҫып, ҙур тиҙлек менән ҡуҙғалып китте.

Фаркаштың һыраханаһы ике ярым ҡатлы йорттоң «цоколь» тип аталған ҡатында ине.

Ошо уҡ йорттоң икенсе ҡатында һырахана038ның хужаһы йәшәй. Ә бер-ике йорт аша ергә һеңә төшкән, күптән ремонтланмаған бер ҡатлы кескәй генә өйҙә Гобар көн күрә.

Был ваҡыт Будапешт, дөрөҫөрәге, уның ҡала яны — Эржебет халҡы, шомло төштәр күрә-күрә, йоҡлай ине әле. Улар әленән-әле ҡурҡып, тертләп уянып китеп «Ауе Мария» тип йыуаналар, баштарынан бөркәнеп, был мәхшәр тамамланғансы мәрткә китергә, уянмаҫҡа теләйҙәр. Сөнки тыуасаҡ көн, сығасаҡ ҡояш уларға бер төрлө шатлыҡ, рәхәт вәғәҙә итмәй — тик ҡан-йәш тә илау-ыңғырашыу ғына.

Был районда харабалар, емерек йорттар әле әллә ни күп түгел ине, әммә барыбер Эржебет фронт яғындағы ҡаланы хәтерләтә.

Гобар барға ишек алдынан инде. Аллаға шөкөр, ул һыраханаға парад ишегенән дә, артҡы яҡтан да керә белә. Ни генә тимә, егерме биш йыл буйы эштән ҡайтышлай ошо барға инеп, бер-ике бокал һыра һемереп, эсәктәрен йыуҙы, кәрт һуҡты, урам ғәйбәттәрен тыңланы, донъя хәлдәрен тылҡыны бит ул. Һырахана Фаркашҡа атаһынан ҡалды. Атаһы, ауыр тупрағы еңел булһын, ысын мәғәнәһендә һыра мискәһе ине — ауырлығы, кәм тигәндә, йөҙ кило, ә кәүҙәһе, күп тигәндә, йөҙ етмеш сантиметр булыр. Ул, һәр йыуан кеше һымаҡ, йомарт һәм асыҡ йөҙлө булды. Һатыулашмай, һуҡранмай, аҡсаһыҙҙарға һыраһын үтескә эсерҙе, әммә һыраһына һыу ҡатыштырыуҙан бер ҡасан да тайшанманы. Өлкән Фаркаш барҙа мискәнән насос менән һыра һурҙыртҡанда ҡапыл йығылып үлде — бахырҙың кескәй генә йөрәге ҡот осҡос ауырлыҡты — нагрузканы артыҡ күтәрә алманы. Фаркаш атаһын ерләгәндең икенсе көнөндә үк, аҙ төшөмлө инкассаторлыҡ эшен ташлап, атаһының дерматин алъяпҡысын бәйләне лә бар артына баҫты. Арттырмай-кәметмәй дөрөҫөн әйтергә кәрәк — кесе Фаркаш өлкән Фаркашта булған бөтә һыҙаттарҙы һәм ғәҙәттәрҙе лә ныҡ үҙләштергәйне: атаһыныҡы кеүек яғымлы йылмайыу, үтескә һыра һатыу һәм... һыраны һыу менән «өйләндереү». Ҡесе Фаркаш атаһының тик бер генә ғәҙәтен үҙләштерергә теләмәне — һыраны эсеү түгел, еҫкәп тә ҡараманы. Ул паленка эсте лә теште ҡамаштыра торған «бикавара» — үгеҙ ҡаны һемерҙе.

Бына шулай итеп, ниһайәт, Гобар менән Ҡамалова йылы торлаҡҡа килеп инеү бәхетенә ирештеләр.

Барға ингәс тә Гобар цинк ҡалай менән көпләнгән ауыр ишекте биклән алды.

— Ә бында подвалмы, баҙмы бармы? — тип шыбырланы Әлфиә-Жужа.

— Бында бөтәһе лә бар: подвалы ла, һыуы ла, бәҙрәфе лә...

— Улайһа, мине тиҙерәк подвалға алып төшөгөҙ, — тине Ҡамалова, тоғон арҡаһына һалып. — Рацияны һөртөп, батареяларҙы киптерергә кәрәк.

— Хәҙер, хәҙер... — Гобар ниҙер эҙләне. — Ах, ҡабалан ҡыҙ ҙа һин, Жужа, — тип эскерһеҙ генә һуҡранды Гобар.

Һәрмәнеп шырпы тапты, һыҙҙы, тәүгеһе тоҡанманы, әллә яндырылған, әллә дымланған шырпы булды. Икенсеһе сыжлап ҡабынды. Оҙаҡламай шәмдең һарғылт уты барҙы яҡтыртты. Әлфиә-Жужа һыраханаһы абайлап ҡарарға ла өлгөрмәне, Гобар, бер ҡулына — шәм, икенсеһенә рацияһы тоҡто тотоп, подвалға төшә торған баҫҡысҡа ынғайланы. Ҡиң, һөҙәк баҫҡыстан аллы-артлы һаҡ ҡына төштөләр. Ауыр һыра мискәләрен тәгәрәтеп төшөрөү өсөн баҫҡыстың бөтә киңлегенә өҫтән аҫҡа саҡлы ҡалын таҡталар йәйелгән, таҡта цинк ҡалай менән көпләнгән, тик бер яҡ ситтән генә бер кеше һыйып йөрөрлөк итеп ара ҡалдырылған. Подвалда өҫтәгегә ҡарағанда һалҡынығыраҡ. Һауа дым һәм һыра еҫе менән тулған. Әлфиә-Жужа ятҡырылған, ултыртып ҡуйылған мискәләргә, цемент иҙәнле подвалға күҙ һалып алды ла ашығып һораны:

— Ә бында тәҙрә-маҙар бармы?

— Юҡ. Гел таш стена ғына. Бында фәрештә ҡанаты аҫтындағы шикелле тыныс. — Гобар, шәм менән яҡтыртып, выключателде эҙләне. Выключатель шылт итте, ә лампочка ҡабынманы. Гобар ултыртып ҡуйған мискә өҫтөндәге шәм төпсөгөн ҡулындағы шәмдән тоҡандырмаҡ булды, әммә теге янырға ашыҡманы: сытырланы, бер һүнде, бер ҡабынды — филтә подвалда дымланғайны. Ә Әлфиә-Жужа ошо ваҡыт, тоғон сисеп, «Белка»һын алды. Штабҡа иҫән-имен килеп етеү тураһында тиҙерәк хәбәр итергә кәрәк. Ул ҡабаланды һәм шуға күрә хаталар эшләне: йә берәй элмәкте ысҡындырырға онота, йә антеннаны тартып сығара алмай ыҙалана. Гобар, ике ҡулына ике шәм тотоп, уны күҙәтеп торҙо ла, шәмдең береһен мискә төбөнә ҡуйып, ипләп кенә уның ҡулбашына һуҡты.

— Ә һин, Жужа, ҡабаланма. Тәүҙә, мә паленка йот. Ату сирләүең бар. Һыу керҙек. Төнө буйы ҡарлы ямғыр аҫтында яттыҡ.

— Аҙаҡ, аҙаҡ, — тип себен ҡыуған һымаҡ ҡулын ғына һелтәне Әлфиә-Жужа.

Гобар үҙенекен итте.

— Юҡ, хәҙер. Сирләһәң, мин һинең менән ни эшләйем?

— Иҫереүем бар, унан йә тапшырыуҙы бутармын.

— Сирләһәң, бөтөнләй тапшыра алмаҫһың, — тип ыҡышты Андраш. Ул түңәрәк агас өҫтәл өҫтөндәге ауыр һыра бокалына утыҙ-ҡырҡ грамм паленка ҡойҙо ла Әлфиә-Жужаға һондо. — Хәҙер мин һиңә сало, ҡыҙыл борос бирәм. Ауыҙың янһа ла аша, һалҡындан ингәс, бер юлы эсеп ҡуй. Шунһыҙ файҙаһы булмаясаҡ.

Әлфиә-Жужа, Гобар әйткәнсә, паленканы ауыҙына түкте лә сәсәй-сәсәй йотто, эре калибрлы пулемет патронын хәтерләтеүсе ҡыҙыл боростоң башын ҡабып алды ла, устарын бер-береһе өҫтөнә ҡуйып, ауыҙын ҡапланы.

— Нимә, янамы? — тине Гобар, ҡәнәғәт йылмайып.

— Пожар!

— Бик һәйбәт. Ә хәҙер аша. Ә мин рацияны һөртәм.

— Рацияға бер ни ҙә булмаясаҡ. Уға һыу үтерлек түгел.

Тик бына ошо ваҡыт ҡына ул ирҙәр усына һыйырлыҡ кескәй генә «беретта»ны иҫенә төшөрҙө. Был уйынсыҡ пистолетты уға Иршат биргәйне. Пистолетты запас магазины менән уның ҡулына тотторғас, Ардыуанов ғәйепле кеше һымаҡ йылмайҙы: «Ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙға балдаҡ, алҡа, беләҙек бүләк итәләр. Ә минең бында пистолет менән автоматтан башҡа бер нәмәм дә юҡ. Хәҙергә ошо «уйынсыҡты» алып тор. Кем белә, бәлки, кәрәк булып ҡуйыр». Әлфиә пистолетты кеҫәһенә һалғас, Иршат Әлфиәне күкрәгенә ҡыҫып, яныл әйтте: «Һуғыш бөткәс, Текәйәрға ҡайтҡас, мин һиңә беҙҙең өйҙә булған иң ҡәҙерле, иң зиннәтле нәмәне — әсәйемдең көмөш беләҙеген бүләк итермен, йәме? Уға ҡара көмөш менән шундай биҙәктәр төшөрөлгән — һис ҡарап туйып булмай. Һатып алған түгел, атайымдың үҙ эше. Ул тирә-яҡта дан тотҡан көмөшсө ине. Атайым ул беләҙекте мин тыуған көндө әсәйемә бүләк иткән. Ә әсәйем уны дини байрамдарҙа ғына кейә торғайны. Киленемә булыр, тип һаҡлай. Тимәк, һиңә, Әлфиә...»

Әлфиә курткаһының йәшерен кеҫәһенән «беретта»һын тартып сығарҙы, ниндәйҙер кнопкаға баҫып, магазинын алды, дөрөҫләк өсөн патронникка күҙ һалды. Уның сәтәкәй бармағының бер быуыны саҡлы кескәй патрондарҙы магазиндан берәм-берәм этәреп сығарҙы. Ашауын онотоп, сепрәк эҙләргә тотонҙо. Мискәләр араһынан иҫке фланель күлдәктең еңен табып, пистолетын таҙартырға кереште. Ә Андраш берәмләп патрондарҙы таҙартты. «Пистолеттың өҫтөн таҙартыуы ҙур эш түгел, ә бына көбәген нисек һөртөргә?» Камалова йәнә подвалды байҡап йөрөй башланы.

— Нимә эҙләйһең, Жужа? — тип һораны Гобар уға кү-

тәрелеп ҡарамай ғына. Уның бик күптән патрондар таҙартҡаны юҡ инде, шуға күрә был эште ул яратып эшләне.

— Берәй тимер сыбыҡ кәрәк. Пистолеттың көбәген таҙартырға. Тутығыуы бар, майланмаған бит.

— Хәҙер берәй нәмә табырбыҙ, — Гобар патрондарҙы өҫтәлгә ҡуйып торҙо. Гобар подвалды байҡап йөрөнө һәм ҡайҙандыр, булдыҡһыҙ хужабикәнең уҡмашҡан туҡмасы шикелле, йомарланған тимер сыбыҡ тапты. Тәжрибәле электрик-слесарь ҡулдары уны тиҙ генә һүтеп турайтты. — Барамы? — Ул Ҡамалованан пистолетты алып, уның борсаҡ һыйырлыҡ ҡына тишегенә ҡараны, йылмайҙы. — Ха! Был уйынсыҡ менән турғайҙарҙы ғына сиртергә мөмкин.

— Ә ниңә турғайҙарҙы? Улар йәшәй бирһен, ә бына фашистарҙы сүпләгәндә зыян итмәҫ. — Әлфиә-Жужа тоғонан индивидуаль пакет сығарып, уны асты, биш-алты сантиметр оҙонлоғо бинтты йыртып алып, тимер сыбыҡ башына ураны ла пистолеттың көбәген ышҡырға тотондо — бинтта һарғылт ҡыҙыл таптар күренде — көбәк тутыға башлағайны инде. Радистар мәктәбендә взвод командиры йыш ҡына ҡабатлай торғайны: «Ҡыҙҙар, бер ҡасан да иҫегеҙҙән сығармағыҙ: һуғышта һеҙҙең иң ышаныслы дуҫығыҙ — янығыҙҙағы ҡоралығыҙ. Шуның өсөн уны үҙегеҙҙән ҙә таҙараҡ тотоғоҙ». Ә Әлфиә-Жужаның әсәһенә рәхмәт, ҡыҙын биләүҙән алып таҙалыҡҡа, бәхтәлеккә өйрәтеп үҫтерҙе. Иртән генә түгел, кисен дә ентекләп йыуынмаһа, яҫтыҡтан торғоҙоп, ҡарап тороп «тәһәрәт» алдырта торғайны. — Ә һеҙ ниңә ҡоралығыҙҙы таҙартмайһығыҙ? — тине ул «беретта» патрондарын һөртөп бөтөрөп, рацияға күскән Гобарға ҡарап.

— Минең ҡоралым юҡ, — тине Гобар ғәмһеҙ генә. — Ҡоралһыҙ көйө йәнем тынысыраҡ буласаҡ.

Әлфиә-Жужа ашыҡты. Тиҙ генә пистолет магазинына таҙартылған патрондарҙы тултырҙы ла рацияһы янына барып ултырҙы.

«Белка» (радистар уны, иркәләп, «Белочка» тип йөрөтәләр) — бик йыйнаҡ рация. Ул формаһы менән һалдат котелогын хәтерләтә торған йәшел алюмин футлярға һалынған, тик күләме менән котелоктан бер-ике тапҡыр киңерәк, бейегерәк, ҡалынураҡ.

— Андраш ағай, һеҙ запас батареяларҙы ҡарағыҙ. Дөрөҫ, уларға һыу үтерлек түгел, пергаментҡа төрөлөп, резина тоҡҡа һалынған, ә шулай ҙа тикшереү зыян итмәҫ. Мин эфирға сығам, — тине Әлфиә-Жужа рацияны яйлап ҡуйып, панелде үҙенә ҡаратып. Был Ҡамалова өсөн иң изге эштәрҙән дә изгерәк һәм ҡәҙерлерәк тойолдо — ярһып, ашҡынып, түҙемһеҙләнеп көткән минут килеп етте.

Тәүҙә ул рацияның ҡапҡасын тығыҙ итеп бикләгән йоҙаҡтарҙы асты. Защелкалар һыуҙа сыланғандан һуң тығыҙлана төшкәйне. Футлярҙың ҡапҡасын алып ҡуйҙы. Уның хәбәрен алаһы кеше йыраҡ булмағанлыҡтан, шыршы антеннаны ғына тартып сығарҙы. Футляр ҡапҡасы аҫтына ҡуйылған «ҡолаҡ телефонын», «морзянканы» алды. Уларҙың «сәнскеләрен» тейешле розеткаларға тыҡты. Һул ҡулы менән батареяға тоташтыра торған тумблерҙы шылт итеп борҙо — диапазонды күрһәтә торған шкала яҡтырып китте, ә уң ҡулы менән настройканың түңәрәк эбонит башынан тотоп, үҙенә кәрәкле тулҡынды эҙләй башланы. Бына уның тулҡыны. Хәҙер ул ике бармағы менән телеграф аҫҡысының башынан тотасаҡ та, эфирға нөктәләр, тиреләр осасаҡ. Ҡамалова был минутты йыл буйы, дөрөҫөрәге, өс йыл буйы көткәйне. Ул бит һуғыш башланған көндән алып радистка булырға хыялланғайны. Бына ул тантаналы сәғәт һуҡты, әммә ҡапыл уның бөтә тәнен көҙән йыйырғандай булды — йөрәге ҡурылды, бармаҡтары тотош һөйәккә әйләнде. Быны дошман тылында тәү тапҡыр эфирға сыҡҡан кеше, үҙ башынан кисергән радист ҡына аңлай ала торғандыр. Рацияны асып, эфирға сығыу менән, һине дошман пеленгаторы эҙләргә тотона һәм, бер-ике минутта координаталарыңды табып, облава башлай. Ана шундай хәтәр шарттарҙа эфирға сығып, мөһим мәғлүмәттәр тапшырырға һәм... тотолмай ҡалырға кәрәк. Еңел эш түгел.

Шок бөттө, бармаҡтар йәнә элеккесә тыңлаусанға әйләнде, һәм Ҡамалова күренер-күренмәҫлек хәрәкәттәр менән «морзянка»ны туҡылдатты. Ике генә һүҙ осорҙо ул эфирға: «Эштәр уң. Бөрсә».

Был урында шуны ла әйтергә кәрәк. Дивизия штабында задание биргәндә килешеү булды: донесениеларҙы ул шифрофкаһыҙ, асыҡ текст менән башҡортса тапшыра. Сөнки штабта татар егете Османов Зәли дежур итәсәк. Был Ҡамалованың эшен еңеләйтәсәк тә, тиҙләтәсәк тә. Әгәр донесение үтә ашығыс булһа, тел менән микрофондан тапшырасаҡ. Дошман яғында башҡорт телен аңлаусыларҙың булыуын да иҫкә алып, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе код менән йәшерәсәк. Мәҫәлән, немец, штаб, танк, пушка, самолет, ут нөктәһе... һәм башҡалар. Ә «Бөрсә» тигән имзаны Ҡамалова үҙе тәҡдим итте. Сөнки уны өйҙә лә, урамда ла, мәктәптә лә кескәй генә кәүҙәһе, терегөмөш һымаҡ теремеклеге өсөн «ут бөрсәһе» тип йөрөттөләр. Һәр донесениенан һуң ул нөктә төртәсәк тә «Бөрсә» тип имза ҡуясаҡ.

Тәүге тапшырыу бер нисә секунд ҡына дауам итте, шуға күрә уны эт шикелле еҫкәнеп, эҙләнеп йөрөүсе немец пеленгаторы экрандарында «вилкаға» ала алмағандарҙыр.

Радиодонесение өсөн иң уңайлы вакыт — иртәнге сәгәт. Был мәл иң түҙемле кешеләрҙе лә таң йоҡоһо баҫа, иҙә, һиҙгерлек кәмей.

Әлфиә-Жужа, баланы һөйгән кеүек, рацияны усы менән иркәләп алды: «Рәхмәт, Белочка!» Ул бик тиҙ, әммә ҡауҙырланмай рацияһын йыйҙы ла Гобар янына килде.

— Батареялар дымланмаған, — тине Андраш, уларҙы, аяҡҡа сылғау ураған шикелле, яйлап, тығыҙ итеп пергаментҡа төрөп.

— Ә беҙ рацияны, батареяларҙы ҡайҙа йәшерәбеҙ, Андраш ағай?

— Ҡайҙа тиһеңме? — Гобар алан-йолан ҡаранды.— Хәҙер уларға «өң» табабыҙ. — Ул бер-берсһенә терәлешеп баҫып торған мискәләргә һуғып ҡыймылдатып сыҡты. — Әһә, бынауһы буш. — Ул буш мискәне аралап алды, икенсе башына әйләндерҙе — был башта бала ҡулы һыйырлыҡ түңәрәк тишек бар ине. — Хәҙер беҙгә ломмы, балтамы табырға кәрәк.

Подвалда лом булманы, ә балта тиҙ табылды. Гобар, тыштан тауыш-тын ишетелмәйме, тип ҡолаҡ һалып торҙо ла, шикләнерлек нәмә ишетелмәгәс, киҙәнеп һуғып, мискә төбөнөң бер таҡтаһын төшөрҙө, әммә хасил булған ярыҡ әле тар, рация һыйырлыҡ түгел ине — тағы бер таҡтаны һуғып төшөрөргә кәрәк. Гобар ишек янына барып, ҡолаҡ һалып тыңлап торҙо ла мискәнең икенсе таҡтаһын һуғып эскә төшөрҙө. Рацияны көйә киҫкеләп бөтөргән, ҡулдан бәйләнгән кофтаға төрөп, мискә төбөнә төшөрҙөләр. Батареяларҙы ла рация янына ҡуйҙылар. Иплəп кенә мискәне икенсе башына әйләндерҙеләр, маскировка өсөн уның өҫтөнә иҫке-моҫҡо ташланылар.

— Ә һеҙ отҡор ҙа, йылгыр ҙа, Андраш ағай, — тине Әлфиә-Жужа, Гобарҙы күҙәтеп торғандан һуң, һоҡланып.

— Мин күргәнде күрһәң, минең саҡлы йәшәһәң, һин минең ише генә булмаҫһың әле, — тип Гобар Әлфиә-Жужаны арҡаһынан усы менән һөйҙө. — Тик мин күргәнде һиңә күрергә яҙмаһын. — Андраш төҙәтенеп алды, усы менән һаҡал-мыйыҡ баҫҡан яңағын һыйпаны. — Оҙаҡламай барға Фаркаштың ҡатыны төшөр. Шау-шыу күтәргәнсе уны иҫкәртергә кәрәк.

— Ә хужа ҡатынының исеме нисек?

— Марица.

— Матур исем.

— Үҙе лә йәмһеҙ түгел ул, тик артыҡ сыпрандаҡ, күп һөйләнә.

— Беҙҙе һатмаһа, уныһы зыян итмәҫ.

— Һатмаç. Ул иренән, уттан ҡурҡҡан шайтан шикелле, ҡурҡа. Ире, телеңде тешлә, тиһә, үлһә үлер, бер һүҙ тартып ала алмаçһың.

— Ә миңә көнө буйы ошо мискәләрҙе ҡарауыллап ултырырға тура киләсәк, — Әлфиә-Жужа күңелһеҙ йылмайҙы, мискәләрҙең бер-икеһенә тибеп алды. — Буш мискәләр араһында үҙеңдән-үҙең телһеҙгә әйләнерһең.

— Будапештты азат иткәс, ҡала ҡыҙырып йөрөрбөҙ, алла ҡушһа, — Гобар, ишек төбөнә барғас, кире килде — башына көтөлмәгән уй килде, ахры. — Ә беләһеңме, Жужа, һин Марицаға һыра һатырға булышырһың.

— Нисек? Мин бит мадьярса биш-алты һүҙ генә беләм.

— Ә һиңә мадьярса белеү кәрәкмәй ҙә. Һин — телһеҙ. Үҙеңә көн үткәреү еңелерәк буласаҡ. Унан... иртәме-һуңмы подвалда билдәһеҙ кешенең барлыҡҡа килеүен һиҙеп ҡаласаҡтар, ә былай һин Марицаның яңы ярҙамсыһы. — Гобарҙың дәлилдәре менән Ҡамалова килеште.

— Марица риза булһа, мин ни...

— Хәҙер һәр бер кеше алтын бәрәбәренә, — Гобар асҡысын йоҙаҡ тишегенә тығып, ике тапҡыр бороп асты ла подвалдан урамға сыҡты. Әлфиә имән мискәләр араһында яңғыҙ тороп ҡалды. Ниңәлер, ул мискәләрҙе һанап сыҡты ла түңәрәк өçтәл янына барып ултырҙы.

— Яңы профессия менән ҡотлайым, Жужа! — тине ул, мыçҡыллы йылмайып. — Һыра һатыусы!

Ҡамалова ҡапыл шуны ап-асыҡ аңланы: фронтҡа ул патриотик тойғонан бигерәк мажаралар эҙләп ашҡынған икән. Юҡ, һуғыш мажараларға, көтөлмәгән ваҡиғаларға бай булһа ла, романтика түгел ине. Һуғыш — ҡаты, миһырбанһыҙ уйын. Кемдең рухы һәм ҡоралы көслөрәк, шул еңеп сыға. Ҡамалованың рухи байлығы етерлек. Уның быуыны күкрәк һөтө менән Ватанға фиҙакәр булып үçте. «Ленин», «Сталин» һүҙҙәре ниндәйҙер тулҡынланыу, илһам менән әйтелде. Буденный, Чапаев образдары һәр малайҙың йөрәгендә йәшәне. Ә тормош иç китерлек түгел ине бит әле ул йылдарҙа: фәҡәт мең туғыҙ йөҙ утыҙ дүртенсе йылдың аҙағында ғына икмәк карточкаһын бөтөрҙөләр, әммә икмәк магазиндары төбөндә сират, магазин асылғансы уҡ, йылға булып һуҙыла торғайны. Ҡулға бер буханка ғына бирелде. Был сираттар һуғыш башланырға өс-дүрт йыл ҡала ғына бөттө, ә бына кейем-һалым магазиндары элеккесә шалтырап тора ине.

Ауырлыҡтарға, төрлө хаталарға ҡарамаçтан, халыҡтың рухы күтәренке, күңеле көр булды. Әлфиә-Жужа, ата-әсәһенә эйәреп, тәү тапҡыр һайлау участкаһына барғанын әле лә хәтерләй. Үҙенең бәләкәй булыуына, һайлауҙа ҡатнаша

алмауына ул иларҙай булды, ә шулай ҙа әсәһенең бюллетенен ҡыҙыл ситса менән көпләнгән урнаға ул төшөрҙө. Һуңынан көнө буйы, ҡайҙа баҫҡанын белмәй, күбәләк һымаҡ осоп йөрөнө, ә үҙе бер һүҙҙе өҙмәне лә ҡуйманы: «Мин дә тауыш бирҙем! Мин дә! Советтар Союзы Геройы полярник Эрнест Кренкелде депутат итеп һайланым!»

Ҡамаловтар ғаиләһендә гел саф, шифалы атмосфера булды. Улар бик самалы йәшәнеләр, аҡсаны тартып-һуҙып ҡына еткерҙеләр, әммә, теге йәки был нәмә етешмәй, тип өйҙә ҡәнәғәтһеҙләнеү, һуҡраныу, етәкселәргә, власҡа тел тейҙереү булманы. Атайҙары: «Бары менән ҡәнәғәт булығыҙ. Тормош артҡа түгел, алға бара, оҙаҡламай ҡолас киреп йәшәрбеҙ», — тип дәртләндерҙе. Әгәр өйгә көтөлмәгән «ҡунаҡ» — бәлә-ҡаза килеп төшһә, атайҙары бөгөлмәҫкә, башты эймәҫкә бойорҙо. «Хоҙай ауырлыҡты кешеләрҙе һынар, сыныҡтырыр өсөн ебәрә. Был фани донъяла бер нәмә лә мәңгелек түгел, балалар. Бөтәһе лә: ауырлыҡтар ҙа, ҡайғы-хәсрәт тә үтеп китә». Атайҙары ҡомһоҙ, нәфселе кеше түгел, аҙ менән дә ҡәнәғәтләнә, шөкөр итә белә һәм балаларға ла ошо һыҙатты һеңдерергә тырышты. «Аллаға шөкөр, тамағығыҙ туҡ, өҫтөгөҙ бөтөн. Башҡаларҙан кәм йәшәмәйбеҙ, тора-бара ишшу ҙа шәберәк буласаҡ».

Ун һигеҙ йыл йәшәп, Әлфиә өйҙә ыҙғыш-талаш, күҙ йәше күрмәне. Әсәйҙәре, берәйһе вафат булғас йәки башҡа ауыр хәсрәттән илаһа ла, балаларына күрһәтмәй, аулаҡта, тауышһыҙ ғына күҙ йәштәренә ирек бирҙе.

Әлфиәнең атаһы, ағайҙары ҙур эштәрҙә эшләмәһә лә, бөтә урам уларҙы ихтирам итте, өлгөгә ҡуйҙы. Әгәр Әлфиәгә лә балалар табырға тура килһә, ата-әсәһе уларҙы нисек тәрбиәләп үҫтергән булһа, ул да балаларына шундай тәрбиә бирәсәк...

Ошо урында Әлфиә ҡапыл йоҙроҡ һымаҡ йомарланды. Хатта ҡалтырана башланы. Ә бит уның ысынлап та Ардыуановтан балаһы булыуы бар. Уға ғәрлек тойолдо, илағыһы килде. Ниңә, йә ни өсөн ул уның янына барҙы? Үҙе теләп уны ҡуйынына алды? Бөтәһенә лә ирек ҡуйҙы?.. Ниңә тороп сығып йүгермәне? Ниңә?.. О... был һуңлап үкенеүҙәр, терһәккә үрелеүҙәр... Хәйер, ә ниңә үкенергә, әрнергә? Улар бер-береһен яратышалар. Тимәк, ул тулыһынса Иршаттыҡы, Иршат — уныҡы булырға тейеш. Әлфиә ғүмере буйы Ардыуановты ятатасаҡ, уны ут эсендә эҙләп табыуы менән ғорурланасаҡ. Улар оҙаҡ, бик оҙаҡ, ап-аҡ сәсле әбей менән бабай булғансы йәшәйәсәктәр. Уларҙың дүрт балалары буласаҡ: ике ҡыҙ, ике малай. Малайҙар, аталары кеүек, таҙа, көслө, ғәйрәтле буласаҡ, ә ҡыҙҙары.. уға оҡшаясаҡ, тик кәүҙәгә оҙонораҡ һәм төҫкә-башҡа сибәрерәк... бул-

һа ниң... Ә нипә булмаһын? Ғашиҡтарҙың балалары матур була, тиҙәр. Матур ғына түгел, бәхетле лә буласаҡ улар. Ә ниңә булмаһын? Улар бит бәхетле тормош өсөн, бөтә халыҡтың да бәхете өсөн һуғышалар.

Ә бына бер үк ваҡытта бөтә кеше лә бәхетле була аламы икән?..

Уйҙар-хыялдар өҙөлдө — ишек йоҙағының скважинаһында ике тапҡыр асҡыс боролдо, ауыр ишек асылды. Марица менән Гобар күренде. Бер генә минутҡа улар бер-береһенә һағайып, шикләнеп ҡараштылар. Аҡрын ғына Марицаның йөҙөнә ҡояш сыҡты, Әлфиә-Жужаға ҡарай берике атланы һәм, күптәнге танышы менән иҫәнләшкәндәй, ҡулын һуҙҙы.

— Сәрвус, Жужа!

Әлфиә-Жужа, оялсан ғына йылмайып, уның ҡулын ҡыҫты.

— Мин уға дөрөҫөн һөйләп бирҙем, — тине Гобар бер Марицаға, бер Ҡамаловаға ҡарап. — Һин — рус ҡыҙы. Һин үҙеңдең немец хужаңдан ҡасҡанһың. Ҡыҙыл Армия килгәнсе бында йәшәрһең. Ә кеше барында һин телһеҙ булаһың. Уның апаһының һеңлеһе.

— Ә ул... — тип Ҡамалова ауыҙын асҡайны, Гобар уны ярты һүҙҙән аңланы.

— Ә Марица, библияға ҡулын ҡуйып, бер кемгә бер һүҙ әйтмәйәсәкмен, тип ант итте. Ә хәҙер ксскә тиклем айырылышырбыҙ. Оялсан булма, ашағың килһә, һора, аҙаҡ мин улар менән иҫәпләшермен. Уларҙың запасы етерлек, һине ашатыуҙан ғына ҡорһаҡтары шиңерлек түгел, — Гобар уның башынан һыйпаны ла Марицаға ниҙер әйтеп сығып китте. Марица уның артынан сыҡмаҡсы булғайны, тыйылды, Әлфиә-Жужа янына килеп, ҡулдарын болғай-болғай ашығып ниҙер һөйләргә тотондо.

Әлфиәнең, мадьярса әйтһәк, Жужаның, подпольелағы тормошо ана шулай башланды һәм Пештты тулыһынса азат иткәнсе, йәғни 1945 йылдың ғинуары аҙағына саҡлы, дауам итәсәк.

Ә хәҙер Әлфиә-Жужа сигелгән алъяпҡыс бәйләп ярҙамлашып йөрөй. Марицаның, әйтергә яраһа, «йомшаҡ» яғы бар — бөтә нәмәне сигергә ярата: таҫтамалдарҙы, мендәр тыштарын, кофталарҙы, алъяпҡыстарҙы, хатта уның ситтәре сигелгән простыняһы бар, әммә уны бер ҡасан да бер кемгә йәйгәне юҡ.

Фаркаштарҙың балалары юҡ — кем ғәйепле: ирме, ҡатынмы, дөрөҫөн генә белмәйҙәр. Бәлки, шуға күрә Марица сигеү менән мауығалыр. Ошо ҡәһәрле һуғыш ҡына бөтһөн,

тәрбиәгә берәй ҡыҙыҡай аласаҡтар — һуғыштан һуң етемдәр күп булыр әле.

Көндөҙ бар буш була тип әйтерлек. Кисен, ҡараңғы төшөү менән, комендант сәғәте башлана. Барҙың даими «клиенттары» күршелә йәшәүсе ҡарт-ҡоро ла һалдаттар ғына була. Һалдаттар оҙаҡ ултырмай, аяҡ үрә бер-ике стакан һыра һемерәләр ҙә сығып китәләр. Дөрөҫ, улар һыра һемерер алдынан берәй стакан паленка менән эстәрен ҡыҙҙырып алалар. Ҡайһы берҙәре ауыҙҙарын асмай, бер кемгә күтәрелеп ҡарамай, тумһаҡ була. Парлашып кергәндәре, яҡ-яҡтарына ҡаранып, үҙ-ара быш-быш киләләр. Көлөшөү, ҡысҡырып шаян һүҙҙәр һөйләшеү бик һирәк ишетелә. Күрәһең, бөтәһенең дә эстәрен ҡорт кимерәлер. Тик бер ҡыҙмаса һалдат ҡына, Марица күрмәгәндә, Әлфиә-Жужаның биленән түбән тотмаҡсы булғайны, Әлфиә-Жужа, кәүҙәһен йәһәт кенә ситкә бороп, һалдатҡа телен күрһәтте, йоҙроғон янаны. Һалдат асыуланманы: «Ай, суҡмарың менән үлтерә күрмә тағы», — тип кешнәп көлдө.

Ҡискә табан, сәғәт биштәрҙә, бер ҡыҙҙы етәкләп, Гобар подвалға инде. Ҡыҙыҡай өҫтөнә сигелгән мадьяр курткаһы кейгән, яғаһын күтәргән, башын йылы йөн яулыҡ менән урап бәйләгән — күҙҙәре лә танауы ғына күренеп тора. Әлфиә-Жужа ҡыҙыҡайҙың тын алыуынанмы, ингәс тә ултырғысҡа барып ултырыуынанмы һиҙеп ҡалды: ул ҡаты ауырыу ине. Гобар Марицаға үҙҙәренсә ниҙер әйтте, теге һүҙһеҙ сығып китте. Ҡыҙыҡай битен аса төшкәс, Ҡамалова һораны:

— Һин «Ҡарлуғас»мы әллә?

— Элек ҡарлуғас инем, хәҙер күшеккән турғайға әйләндем, — тине ҡыҙыҡай төҫһөҙләнгән йөҙөнә йылмайыу сығарырға тырышып,

— Уны тегендә оҙатырға кәрәк, — тине Гобар, беҙҙең ғәскәрҙәр яғына эйәге менән күрһәтеп.

— Ә нисек оҙатаһың? Үҙебеҙ ҙә саҡ-саҡ батып үлмәнек бит, — тине Әлфиә-Жужа ҡыҙыҡайҙың шәлен сисергә булышып.

Һүҙҙәренең тормошҡа ашмаҫлығын Гобар үҙе лә аңланы ахры.

— Уныһы шула-ай... Дарыу ҙа таба алмаҫһың... Бер пачка кальцекс өсөн алтын сәғәт һорайҙар...

Ҡамалова саҡ ҡысҡырып ебәрмәне.

— Ай! Андраш ағай, минең кальцексым бар ҙа. — Әлфиә-Жужа тоғон аҡтарырға тотондо. — Ә һин, «Ҡарлуғас», ят, ят.

«Ҡарлуғас», бер һүҙ әйтмәй, стенаға терәтеп ҡуйылған ҡаты эскәмйәгә һуҙылып ятты.

— Ғүмеремдә сирләгәнем юҡ ине, — тип аҡланды ул, — ә был ҡәһәрле Вен... — ул ҡаршыһында баҫып торған Ғобарҙы шәйләп, Венгрия, тип әйтеп бөтөрмәне. — Бында бит һауа көнөнә бишәр тапҡыр үҙгәреп тора: йә ямғыр, йә ҡар, йә ауыр томан... Ә мин Ашхабадта тыуып үҫтем.

— Һин төрөкмән ҡыҙымы ни?

— Юҡ. Йөҙ проценты менән рус ҡыҙы. Минең бабаларым ун туғыҙынсы йылда уҡ Төркөстанға күсеп килгән. Олатайым доктор булған...

Ул арала Әлфиә-Жужа кәрәкле дарыуҙарҙы тапты.

— Мә, бер юлы ике таблетка аспирин, бер таблетка кальцекс эс тә бөркәнеп ят.

Тиҙҙән Марица горчичниктар килтерҙе. Дөрөҫ, улар шаҡтай иҫкергән, оно ла ҡойолоп тора, әммә барыбер иш янына ҡуш булды. Төндә «Ҡарлуғас» шыбыр тиргә батып уянып китте. Тән ниде элекке кеүек уттай янмай ине. Марица менән Әлфиә-Жужа уны шәп-шәрә ҡалдырып сисендерҙеләр, тәнен ҫуҡлы таҫтамал менән ҡороттолар. Марица, «Ҡарлуғас»тың һүрәттәрҙә генә була торған иҫ киткес нәфис кәүҙәһен күреп, өҙлөкһөҙ бер һүҙҙе өҙмәне лә ҡуйманы. «Хорош, хорош, ой, хорош», күрәһең, ул русса «хорош»тан башҡа һүҙ белмәйҙер. Ысынлап та, «Ҡарлуғас»тың һыны һоҡланып туймаҫлыҡ гүзәл ине: сынаяҡ төҫлө аҡ-аҡ тән, нәфис түңәрәкләнгән ҡулбаштар, аҡҡоштоҡо һымаҡ оҙон муйын, ҡуш йоҙроҡ саҡлы матур имсәктәр, һирәгәр һиҙелмәҫлек кенә йыуанайған оҙон аяҡтар, нескә бил, ифрат матур бомрайған янбаш... Ҡул бармаҡтары, бөрөмдән токарь станогында ҡырып эшләгән һымаҡ, осланып тора... Әйтерһең, һинең ҡаршыңда тере ҡыҙ түгел, ә бөйөк художниктар төшөргән мадонна ята...

Марицаның да кәүҙәһе йәмһеҙ түгел, бала иммәгән имсәге тырпайып тора, биле һәм янбашы ла ҡыҙҙарҙыҡынан кәм түгел, әммә «Ҡарлуғас»тың гүзәл, нәфис һыны уның һушын алды.

— Хорош, ой, хорош, ауе Мария...

Марица «клиенттарын» һыра менән һыйларға өҫкә менеп киткәс, Ғобар Ҡамаловаға «эфирға сығырға ваҡыт» тип ишара яһаны. Әлфиә-Жужа ла был минутты ашҡынып көттө — әленән-әле сәғәтенә ҡараны, ҡолағына «морзянка»-ның ишелдәгәне ишетелде. Бындай тулҡынланыу һөйгән кешең янына барғанда ғына була торғандыр. Ә бер ҡарағанда, «морзянка»ла эшләүҙең әллә ни ҡыҙығы ла юҡ бит инде: нөктә-тире, тире-нөктә... гел бер төрлө билдәләр. Юҡ, улар ябай нөктә-тиреләр генә түгел шул — улар беҙҙең командованиеға мөһим мәғлүмәттәр илтеп еткерә. Дөрөҫ, мәғлүмәттәрҙе Әлфиә-Жужа үҙе тапманы, әммә уның ҡулы

аша үтә. Унан тапшырыу ваҡытын ашҡынып көтөүҙең башҡа сәбәбе лә бар ине, Ҡамалованың башы, ҡулдары нәмә менән генә мәшғүл булмаһын, ул бер генә минутҡа ла капитан Ардыуановты иҫенән сығара алманы.

Әлфиә-Жужа үҙе уйлап сығарҙы һәм тора-бара үҙ фантазияһына үҙе ышана башланы: бына-бына цинк ҡалай менән көпләнгән ишек асылыр ҙа, һалмаҡ атлап, яғымлы йылмайып Иршат килеп керер. Их, әгәр кеше үҙенең хыялдарын тормошҡа ашыра белһә икән!

Әлфиә-Жужа һәр тапшырыуҙан һуң «Мишәр» Ардыуанов хаҡында берәй һүҙ булһа ла әйтмәҫме икән тип өмөтләнә, ләкин хәҙергә ул ашҡынып көтөлгән һүҙ эфирҙан осоп килмәй.

Ҡамалова һуңғы ваҡытта үҙен шул тиклем етеҙлеккә өйрәтте, хатта ҡулдары эшләгәндә күҙҙәре күрмәй, мейеһе ишетмәй кеүек. Ыһ тигәнсе рацияның шкалаһы яҡтыра; һанаулы секундтар, минуттар, һәм йәнә рация, көйә ҡырҡып бөтөргән кофтаға төрөлөп, мискә эсенә йәшерелә. Әйтерһең, ул кеше түгел, робот, автомат. Уның был етеҙлеге бер нисә тапҡыр, әйтергә яраһа, үлемдән дә алып ҡалды.

Рация тапшырыу башларға әҙер, тумблерҙы бораһы ғына ҡалды: бына-бына эфирға нөктә-тиреләр оса башлаясаҡ.

Һәр бер тапшырыуҙа тип әйтерлек ҡаршылыҡ күрһәтеү нөктәләре тураһында хәбәр ителде. Хәҙергә улар әле өнһөҙ, «ҡасып» яталар, үҙ сәғәттәрен көтәләр. Гобар был мәғлүмәттәрҙе подпольела эшләүсе Коммунистар партияһы ойошмалары, Фаркаш аша белде. Һырахана тотоуы, тәүлек буйына ҡалала йөрөргә ярай торған пропускыһы булыу арҡаһында Фаркаш күпте ишетә, күпте күрә ине. Гобарҙың ентекле инструкцияһынан һуң ул элек иҫкә алмаған, ҡолаҡ һалмаған нәмәләрҙе лә күңеленә «киртә» бара. Ә беҙҙең командование донесениеларҙың дөрөҫлөгөнә шик тотмаһа ла, һәр ваҡыт дөрөҫләргә, асыҡларға ҡуша. Бына бөгөнгө тапшырыуҙан һуң Зәки Османов «Ҡарлуғас» тураһында һораны. Ә «Ҡарлуғас» был ваҡытта Ҡамалованың йылғыр хәрәкәттәренә һоҡланып, көнләшеп ҡарап ултырҙы.

Әлфиә-Жужа «Мишәр»ҙең һорауына «Яҡшыраҡ» тип яуапланы ла «Бөрсә» тип донесениеһын түңәрәкләне. Бөттө. Тулҡындарҙы күрһәтә торған шкала һүнде, ҡолаҡ телефоны, «морзянка»ның шнурҙары розеткаларҙан тартып алынды, футлярҙың ҡапҡасы аҫтына йәшерелде. Йәнә берике секунд — ҡапҡас футлярға кейҙерелде, йоҙаҡтар шалтшолт итте. Бәхеткә ҡаршы, Әлфиә-Жужаның тәүге радиотапшырыуҙары хәүефһеҙ үтте. Әммә Гобар үҙ күсәрендә

һөйләшеүсе әрекмән ҡолаҡлы машиналарҙың башҡа урамдарҙа ҡыҙырып йөрөгәнен күргеләне. Тимәк, немецтар нимәлер һиҙенә. Ҡамалованы булмаһа, башҡа радисты эҙләйҙәрҙер. Гобар ҡаушатмаҫ өсөн Әлфиә-Жужаға бер һүҙ ҙә әйтмәне, әммә радиосеанс тамамланғас, бынан һуң тапшырыуҙарҙы яңы урындан алып барырға тура килер, тип иҫкәртте. Ә быны нисек эшләргә, хәҙергә ул үҙе лә белмәне. Ихтимал, белгәндер ҙә, Ҡамаловаға алдан уҡ асылырға теләмәгәндер — ни генә тимә, Гобар конспирация мәктәбен теге йылдарҙа, граждандар һуғышы ваҡытында уҡ үткән кеше бит — ҡасан телен тешләргә, ҡасан кемгә серен сисергә белә.

Фәрештәме ни был Гобар, Ҡамалова рацияны мискәгә йәшереп, мискәне әйләндереп ҡуйырға ла өлгөрмәне, дағалы һалдат итектәренең туҡ-туҡ иткәне ишетелде. Подвалдағылар тымып, үлеп ҡалдылар. Подвалдағы кешеләрҙең шым булып һағайғанын ауыр итекле кеше лә һиҙенде ахры. Ул үҙенең кемлеген белдерер өсөн, ҡараңғы, бер ни күреп булмай, тип зарланды. Һуҡранған кеше — Фаркаш ине. Подвалға кереү менән ул мадьярса татылдарға тотондо. (Әлфиә-Жужаның һынағаны бар, аңлашылмаган телдә һөйләшеүселәр һәр ваҡыт йыш һөйләшкән кеүек тойола.) Гобар Фаркаштың һүҙҙәрен руссаға тәржемә итте: «Немецтар беҙҙең районды байҡап йөрөй».

— Ә беҙгә ни эшләргә? — Ҡамалованың тауышында ҡаушау булмаһа ла, һағайыу һиҙелде.

— Ни эшләргә? — Гобар уның һорауын ҡабатланы. — Рацияны төрөп Фаркаш машинаһына ташлайбыҙ. — Әммә ул шунда уҡ үҙ-үҙенә ҡаршы төштө. — Юҡ, улай ярамай. Уларҙың машинаны ла тикшереүе бар. Мадьяр һалдаттары рустар яғына күмәкләп сыға башлағас, немецтар беҙгә лә бик ышанмайҙар, «союзник киҫәктәре» тип кенә йөрөтәләр.

— Ул сағында ни эшләргә?

— Ә рация ҡайҙа һуң? — тип һораны Фаркаш.

Гобар мискәләргә табан эйәк ҡаҡты.

— Алып бирегеҙ әле уны миңә, — тине Фаркаш шиҙер уйлап.

— Ҡайҙа йәшерергә уйлайһың? — Гобар рацияны бир-гәнсе тәүҙә уның уйын белергә теләне.

— Сүп-сар түгә торған йәшниккә йәшерәм.

— Ә ҡыҙҙарҙы ҡайҙа ҡуябыҙ? — тине Гобар, радист-ҡыҙҙарға күҙ ташлап.

— Жужаны Марица янына урынлаштырырбыҙ... Һөй-ләшкән булһанса, ул Мариցаның апаһының ҡыҙы. Ә бына уны... — Будапешт өсөн утлы, фажиғәле көндәрҙә күршенең, таныш-белештең кереп ҡуныуы, бөтөнләй сит кешеләрҙең

дә ҡасыр урын һорап инеүҙәре хәҙер Фаркаш өсөн яңылыҡ түгел ине. Ә подвалға төшөп, артиллерия, миномет утынан ҡасыу өсөн, зиннәтле әйберҙәрен дә йөлләмәйҙәр ине. Шуға күрә Фаркаш «Ҡарлуғас»тың кемлеген һорашып та торманы. Фаркаш тәү тапҡыр «Ҡарлуғас»ҡа күтәрелеп ҡараны, һәм уның нур һибеп тороусы эскә батҡан асыҡ зәңгәр күҙҙәре йөрәген үтәнән-үтә тишеп үтте. Венгрия сибәр ҡыҙҙарға ярлы түгел, хатта уларҙа: «Һәр бер өсөнсө мадьяр ҡыҙы — ожмах һылыуы» тигән әйтем дә бар. Ә бына «Ҡарлуғас»тың күҙҙәре нурҙан ғына яратылғандыр. Биргән бит хоҙай матурлыҡты — ғүмер буйы ҡыймылдамай, ашамай-эсмәй күҙҙәренә генә ҡарап ултырырһың.

Фаркаш, рацияны иҫке одеялға төргәс, Әлфиә-Жужаны етәкләне лә ишеккә йүнәлде, әммә ишекте асҡансы түҙмәне, йәнә бер тапҡыр «Ҡарлуғас»ҡа күтәрелеп ҡараны. «Их, шундай сибәр ҡатының булһа!» «Ҡарлуғас» ауырлыҡ менән һөйләшһә лә, мадьярса аңлай ине, Фаркаш менән Ҡамалова сығып киткәс, Гобарға күңелһеҙ генә өндәште:

— Андраш ағай, мине бында алып килергә кәрәк булмаған икән...

Гобар уға ғәйепле кеше һымаҡ ҡарап алды.

— Хәҙер был хаҡта уйлау һуң инде. Әгәр ул-был булмаһа, Жужаны башҡа квартирға күсерәм.

— Юҡ, мине күсерегеҙ, Андраш ағай. Жужаға бында ҡулайлыраҡ булыр. Фаркаштың үҙ машинаһы бар.

— Уныһы ла дөрөҫ, — тип еңел килеште Гобар.

Был юлы бөтәһе лә имен генә үтеп китте. Фаркаш «үҙ кеше» булғанлыҡтан, немецтар бутанып, квартирын байҡап торманылар, берәр стакан паленка, берәр бокал һыра һемерҙеләр ҙә юлдарын дауам иттеләр. Арала йәше һәм чины менән өлкәнерәге башҡаларҙы киҫәтте:

— Ошо кварталды һағаларға. Экранда хасил булған нөктәне мин үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, тик «сатрашҡа» ала алманым, бик тәжрибәле радисткалыр, күрәһең, тиҙ һүнде.

СС погонлы ҡолға кеүек оҙон ефрейтор тағы ла оҙонораҡ булырға тырышып күкрәген киреҙе, башын күтәрҙе.

— Иртәгә мин ул «ҡошто» тереме-үлеме барыбер тоҙаҡҡа ҡаптырам.

Әммә уларҙың локатор экранында Әлфиә-Жужа башҡа күренмәне — сираттағы радиосеанс немецтарҙың танау төбөндә, Фаркаш машинаһынан — Эржебет менән күпер араһында булды.

Будапешт өсөн оҙаҡҡа һуҙылған ҡаты, ҡанлы һуғыштар башланды. Гитлерҙың һуңғы союзнигы Венгрияның баш ҡалаһын сирек миллион немецтар һәм салашистар һаҡлай

не. Ҡала йөҙләгән ҡаршылыҡ күрһәтеү нөктәләре, таяныс пункттары менән көслө оборона һәм нығытма районына әйләндерелгәйне. Тар урамдар, боронғо йорттар, бер метр ҡалынлығындағы стеналы храмдар гитлерсыларҙы һәм салашистарҙы пулянан ғына түгел, мина-снарядтан да ышаныслы һаҡланы. Беҙҙең һөжүмгә дошман контрудар менән яуап бирҙе. Гитлер утлы ҡоршауҙа ҡалған ғәскәрҙәрен нисек тә азат итеп, ҡоршауҙы умырып сығырға тырышты. Гитлер: «Будапештты рустарға биреүгә ҡарағанда ер менән тигеҙләүҙе артығыраҡ күрәм», — тип ант итте. Юҡ, фюрер үҙенең һуңғы сателлиты Салашиҙы «өҙөлөп» яратыуҙан шулай тимәне, ул хатта ҡасандыр бер әйтә лә һалды: «Мин бер Венаны ун Будапештҡа ла бирмәйем». Гитлер әле һаман үҙенең «мөғжизәле» ҡоралына — вундерваффеға ышанды, һаман Германияға ҡаршы ойошҡан блоктың тарҡалыуына, үҙ-ара ыҙғышыуына өмөтләнде; ләкин кеше уйлай, э алла үҙенсә эшләй, ә беҙҙең аллабыҙ — беҙҙең изге эшебеҙ ине.

Будапешттың архитектура шедеврҙары харабаларға әйләнде, арҡа «һөйәге» урталайға һынған гүзәл күпер Дунайға һалынып төшкән, бөтә донъяға дан тотҡан Венгр парламентының бинаһы күҙҙәре соҡоп алынған кешене хәтерләтә.

Совет командованиеһы гуманизм һәм баһалап бөтөргөһөҙ архитектура ҡомартҡыларын һаҡлап ҡалыу маҡсатынан ҡаршы яҡҡа бер нисә тапҡыр почетлы капитуляция тәҡдим итте. Ошо маҡсат менән 29 декабрҙә капитан Миклош Штейменц менән капитан И. А. Остапенконы аҡ флаг күтәртеп, парламентер итеп ебәрҙеләр. Әммә фашистар уларҙы яуыздарса атып үлтерҙеләр. Боронғо халыҡтар: «Илсегә үлем юҡ», — тигән, ә фашистар — үҙҙәрен кешелек цивилизацияһының иң бейек пьедесталына ҡуйыусы милләт ошо изге васыятты аңламаны һәм аңларға теләмәне.

Салаши һәм уның шайкаһы күптән Будапешттан ҡойроғон һыртына һалып, хәүефһеҙерәк урынға йәшенһә лә, мәғәнәһеҙ һәм маҡсатһыҙ ҡан ҡойоуҙы дауам итә.

«Ҡарлуғас»ты баронессамы, графинямы тип аталған бер ҡарсыҡҡа эстерәпкә итеп урынлаштырырға тура килде. Ҡарсыҡ йүнле-башлы күрмәй ҙә, ҡолаҡ төбөндә аҡырмаһаң, ишетмәй ҙә. Һуғышҡа саҡлы Гобар ике-өс тапҡыр уның йортонда һыу крандарын, люстраларын төҙәткәйне. Өрәкте хәтерләтеүсе боронғо ҡарсыҡ, Гобарҙы күргәс, эре-эре йәш бөрсөктәрен ағыҙып, шатланып иланы: «Ауе Мария! Бер ниңы ерҙә, икенсеһе гүрҙә торған ҡарсыҡты онотмаған өсөн хоҙай оҙон ғүмер бирһен үҙеңә», — тип бик оҙаҡ уҡынды.

«Ҡарлуғас» аҡрынлап сихәтләнде: температураһы төштө, башы ауыртыуы бөттө, тик еп өҙөрлөк тә хәле юҡ ине. Хәҙер уға ашарға ла ашарға кәрәк, ә туҡлыҡлы аҙыҡты ҡайҙан табырға? Элек Фаркаш һалдат паектарынан тартып-йолҡоп алып ҡайта торғайны, ә бына машинаһы аварияға эләккәндән һуң, унан да ярҙам өмөт итеп булмай.

Көндәрҙең береһендә Фаркаш менән бына нәмә булды.

Теге ваҡыттағы облаванан һуң, Ҡамалова, Фаркаш машинаһына ултырып, Эржебетты сыҡҡас, машинанан төшмәй генә донесениены тапшыра торған булды.

Радиосеанс бөткәс, билдәле бер урында төшөп, Әлфиә-Жужа юл буйына ултыртылған ағастар араһына инеп йәшенеп ҡала, ә Фаркаш уны ҡайтышлай ултыртып алып китә. Байтаҡ ҡына ваҡыттар эштәр ана шулай «ал да гөл» барҙы. Ә был насар. Эшең гел шыма барһа, һиҙгерлегең юғала, ғәмһеҙлек көсәйә.

Сираттағы тапшырыуҙарҙың береһендә, донесение тамамланғас, «Мишәр» «Бөрсә»гә ике шатлыҡты бер көндө хәбәр итте: Гобар һәм ул Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградланған — бер, Иршат сәләм ебәрә — ике. Был шатлыҡлы хәбәрҙәрҙән Әлфиә-Жужаның башы әйләнеп киткәндәй булды. Ул рацияны ғәҙәттәгенән аҡрыныраҡ һүндереп, ҡабаланмайыраҡ йыйыштыра башланы. Бер-ике минутҡа һуҙылған ғәмһеҙлек саҡ-саҡ уның башына етмәне.

Ул, ғәҙәттәгесә, тапшырыуҙы брезент аҫтына йәшенеп, кузовтан алып барҙы, ә Фаркаш «шкода» ҡапатына баҫып, күҙәтеп торҙо. Күрәһең, гел төндәрен йөкләмәү, насар юл, көсөргәнешле эш үҙенекен иткәндәр — арыҡҡандыр, Фаркаш кабинала ултырып, башын баранкаға ҡуйып ойоп киткән был юлы.

Фронтта шулай була торғайны. Шофер янында йәки кузовта ултырған кеше дошман самолеттарының яҡынлашҡанын ишетмәй, ә бына шофер, мотор геүләүенә, эш менән мәшғүл булыуына ҡарамаҫтан, дошман самолетын беренсе булып ишетеп ҡала. Был юлы ла Фаркаш, кемдер елкәһенә тондорған кеүек, тертләп уянып китте һәм башын кабинанан тығып, алға, артҡа ҡараны — Будапешт яғынан «сит» машина елдерә ине. Ябай йөк машинаһы булһа бер хәл — «әрекмән ҡолаҡлы» пеленгатор. Немец бурҙайынан ҡасып ҡотолоу хаҡында уйларға ла ярамай — ул Фаркаштың «шкода»һына ҡарағанда күп көслөрәк. Ҡасырға тырышыу аҡылһыҙлыҡ та, барыбер немецтар ут асасаҡ. Берҙән-бер сара... Былар бөтәһе лә Фаркаштың башына секундтың йөҙҙән бер өлөшөндә килде. Берҙән-бер сара... Ул ялт итеп брезенттың мөйөшөнән тартты һәм Әлфиә-Жу-

жыға команда бирҙе: «Машинанан һикер ҙә әрәмәлеккә һыпыр!»

Ҡамалова эште аңлап, шунда уҡ һикереп төштө лә, ранияһын һөйрәп, канау аша һикерә-атлап сығып, әрәмәлек яғайын торған яҡҡа һыпыртты. Ә Фаркаш, иҫерек кеше һымаҡ уңға-һулға тайпылып, машинаһын кюветҡа төшөрҙө, канистрҙар, термостар шалтыр-шолтор итте. Шул минутта уҡ немец бурҙайы йөрәкте өҙөрлөк һыҙғыртып (тормоз!) әле генә «шкода» торған ергә килеп туҡтаны. Ҡабинанан һәм кузовтан һалдаттар һикереп төшөп, аҡырышып «шкода»ға ташланды. Бер һалдат, артҡы тәгәрмәскә баҫып, кузовҡа һикереп менде, икенсеһе кабина ишеген шапылдатып асты.

Кузовҡа менгән һалдат ҡарлыҡҡан тауыш менән ҡысҡырҙы:

— Бында канистрҙарҙан һәм термостарҙан башҡа шайтан да юҡ.

— Ә кабинала шоферҙан башҡа (ул да дөмөккән, буғай) этем дә юҡ, — тине нескә әсе тауышлыһы.

— Тимәк, ул булманы.

— Миңә кемдер кузовтан һикереп төшкән кеүек тойолдо.

— Шоферҙың арт сүмесенә бер пуля ебәр ҙә ысҡындыҡ, — нескә әсе тауышлы немец (ул, күрәһең, өлкәнерәгелер) аҙ ғына тынып торҙо. — Шрамм, һин бында ҡалаһың. Әгәр берәйһе машинанан һикереп төшөп ҡасҡан булһа, барыбер урап киләсәк. Шоферға, үлмәгән, булһа, ҡағылма. Ҡәрәк булыуы бар. Дөрөҫ, бөтә мадьярҙар ҙа — ҡурҡаҡ сусҡалар.

Шрамм тигән немец, кабинаға инеп, машинаның төҙөклөгөн тикшерҙе: ҡул һәм аяҡ тормозы иҫән-һау, мотор ярһып эшләй, бензин һәм май етерлек... Шрамм ер аҫтынан килгән кеүек ыңғырашыу ишетте. Ул тиҙ генә шоферҙың ҡоралы барлығын тикшерҙе. Иҫке карабины, машина бағанаға бәрелгәндә, ишектән төшөп ҡалғайны. Шрамм кабинанан төшөп, сүгәләп тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалды.

Камалова, машинанан һикергәндә, тубығын бик ныҡ ауырттырҙы. Тәүге минуттарҙа ул аяғының ауыртыуын һиҙмәне, ә немец машинаһы ҡуҙғалып киткәс, ҡурҡыу кәмей төштө һәм аяҡ ауырта башланы. «Һынмаған, ҡаймыҡмаған булһа ғына ярар ине...» Ул, ирендәрен ҡанатырҙай теңләп, машинаға ҡарай шыуышты. Ә бына машина янында уны немец һағалап торор тип уның башына ла килмәне. Их, Әлфиә... Жужа, немецтарҙың уҫал, ҡанһыҙ ғына түгел, мәкерле икәнен дә белмәйһеңме ни? Белә-белә, уҡығаны

ла, күп тапҡыр ишеткәне лә бар, әммә ошо минутта, ниңәлер, ул хаҡта уйламаны. Ихтимал, ул Фаркашҡа ярҙам итергә ашығалыр? Ихтимал... Нисек кенә булмаһын, Ҡамалова үҙенең әжәленә ҡаршы илай-илай шыуып бара ине.

Йыш ҡына шулай ҙа була бит: үҙеңдең бәләгә дусар булыуыңды уйламай, бөтөнләй сит кешене ҡотҡарырға ашҡынаһың. Ә Фаркаш хәҙер инде уға сит кеше түгел ине. Ул, үҙен һәм Марицаны Салаши балтаһы аҫтына ҡуйып, Әлфиә-Жужаны өйөндә йәшереп тота, ултыртып, фронт полосаһына алып бара... Шулай булғас, нисек инде Ҡамалова уны ташлап китһен. Бәлки, Фаркаш ҡаты яраланғандыр, уның ярҙамына мохтаждыр, шулай булғас, тиҙерәк машина янына барып етергә лә ярҙам итергә, ярҙам...

Немец Шрамм хәҙер Ҡамалованың ҡыштырлағанын асыҡ ишетте. Йыл буйы пеленгаторщик янында ултырып, Шраммдың ҡолаҡтары, музыканттыҡы кеүек, зирәкләнгәйне. Шрамм автоматын атырға яйлап, машинаның артҡы тәгәрмәсе янына сүгәләп ултырҙы. Мышнау, ҡыштырлау яҡынайғандан-яҡынайҙы. Хатта ул шыуып килеүсенең ыңғырашҡанын да ишеткәндәй итте. Шрамм бер-ике һикереүҙә алғы тәгәрмәс янына күсеп ултырҙы — шайтан белә, ихтимал, шофер иҫенә килер ҙә машина аҫҡысы менән елкәһенә тондорор. Иң еңеле шоферҙы дөмөктөрөү ине, фельдфебель «кәрәк булыуы бар» тип ҡағылмаҫҡа ҡушты бит, шайтан. Ҡамалованың инде хәле бөттө, тыны ҡыҫылды. Шыуырға рация ҡамасауланы, ҡаты балсыҡ киҫәктәренә тейеп, шатыр-шотор итте. Рацияны хәҙергә ҡалдырып торорға тура килер. Әлфиә-Жужа «Белка»ның лямкаһын муйынынан һалды, «беретта»һын барланы. Ул һул кеҫәһендә ята ине, ә «лимонка»һы — уң яғында. Ул, әйтергә яраһа, «универсал» кеше — ике ҡулы менән дә ата, ә бына гранатаны тик уң ҡулы менән генә алыҫ ырғыта ала. Туҡтап тын алғас, рацияны һалып ҡалдырғас, шыуыуы еңелерәк булды. Үрмәләп ул бер нисә аҙым да үтә алманы — бәрелгән тубыҡтың ауыртыуы йөрәккә төштө, ыңғырашмай түҙеп булманы, ә ҡараңғыла, таныш булмаған ерҙә (әленән-әле йә таш, йә ҡатҡан балсыҡ осрай) түш менән шыуыу үтә ауыр. Ике-өс метр шыуаһың да, туҡтап, хәл йыяһың. Шыуғанда ул бер нәмәгә лә ҡолаҡ һалманы, хәл йыйырға туҡтағас, Фаркаштың ыңғырашҡаны ишетелмәйме, тип тыңлап, һағайып ятты. Ипләп кенә йүтәлләгән тауыш ишетелде. Ҡамалова ҡапыл йәнләнеп китте — тимәк, Фаркаш иҫән. Шыуыу туйҙырҙы, ул тороп атлап бармаҡсы булды, тик шунда уҡ йығылды. «Их, көндөҙ булһа, яҡында берәй таяҡ табып алған булыр ине». Ул әле лә, кеҫә фонарын яҡтыртып, таяҡ эҙләп таба ала, әммә батырлығы ет-

мәне, күреп ҡалыуҙары бар. Әйҙә, ауыр булһа ла, аҡрын булһа ла, шыу, Камалова, былай ышаныслыраҡ.

Шрамм машина янына кеше шыуып килеүенә инде аҙ ғына ла шикләнмәне. Рустар, ғәҙәттә, тылға радист ҡыҙҙар ташлайҙар. Шундай ҡыҙҙарҙың бер нисәһен улар эләктерҙәләр ҙә инде. Әгәр был юлы ла ҡыҙ кеше булһа, уға еңелгә тура киләсәк.

Әлфиә-Жужа һаҡ ҡына ҡысҡырҙы: «Фаркаш!» Их! Тағы хата. Уларға, ул-был булһа, тип шартлы сигнал тураһында һөйләшеп ҡуйырға кәрәк икән. Камаловаға машина янында нимәләр күренгәндәй тойолдо. Кем генә булмаһын, хәҙер уға кире тороп йүгерергә мөмкин түгел ине — бәрелгән аяҡ бер-ике атларға ла ирек бирмәйәсәк. Берҙән-бер юл — дуэлгә әҙерләнеү. Ул тороп ултырҙы. Һул ҡулына «беретта»һын алды, уңына «Ҡарлуғас» биргән «лимонка»-һын тотто.

Әгәр немец уны тере көйгә эләктерергә самалаһа, теге яҡынлашҡас, гранатаның балдағын һурып аласаҡ та фашист менән бергә... ҡапыл ул үҙен шундай йәлләне, күҙәренән йәштәр тәгәрәп сыҡҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Көндөҙ, асыҡ урында, һинең батырлығыңды күреп торһалар, үлеүе лә еңелерәк булыр төҫлө, ә бында, сит илдә, төн ерҙә... үҙен ерләүсе кеше лә булмаясаҡ. Хәйер, граната шартлағандан һуң, ерләрлек кәүҙәһе ҡалырмы икән?..

Әгәр «лимонка»ны немецҡа ырғытҡанда? Бәлки, ярсыҡтары уға теймәҫ? Ә һин машина янында ятҡан кешенең Фаркаш булмауына ышанаһыңмы? Әгәр Фаркашты үлтерһәң? Ни эшләргә?

Шрамм да тын алмай, һағайып ултырҙы. Уның радисты тере көйгә алғыһы килде. Үрмәләп, машинаның икенсе яғына сыҡты, Камалова быны иҫләмәй ҡалды — үҙен артыҡ һаҡлыҡта, ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләп, ул ашығып шыуа башланы. Ни генә тимә, уның бер ҡулында «лимонка», кеҫәһендә пистолет бит әле — иҫән көйө бирелмәйәсәк. Шуна ошо ваҡыт уның билендә разведчиктарҙың һалҡын ҡоралы — финкаһы барлығы иҫенә төштө. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул финка менән оҫта эш итә белмәй. Беләктәре шабыйыҡ, үлтерә сәнсә алмаясаҡ.

Поронон аҡрынайтмай, юлдан йөк машинаһы үтеп китте. Фараның тар ярығынан һибелгән ут Фаркаштың машинаһын яҡтыртты. Машина янында берәү ҙә күренмәне. Тимәк, ҡурҡҡанға ҡуш тигәндәй, машина тәгәрмәсе кеше булып тойолғандыр. Был юлы инде ул «Фаркаш!» тип ҡы-быуырап ҡысҡырҙы. Шрамм ыңғырашҡан булды. Әлфиә-Жужа ҡабаланды, һалдат менән радистка араһы бөтөнләй аҙ ҡалды. Йәнә выж итеп машина үтеп китте. Быныһы еңел

машина ине. «Офицерҙар, ахрыһы, их, үҙҙәрен «лимонка» менән һыйларға, ул сағында үлемең дә үкенесле булмаç ине».

Ҡамалова тиҙ генә, «лимонка»ның кесәһенә һалып, финкаһын ҡынынан тартып алды... Ошо минутта көтөлмәгән хәл булды. Немец, машинаның алдынан Ҡамалова яғына сығып, автоматын күтәрергә өлгөрмәне, кабинанан уның өçтөнә Фаркаш ауҙы. Ҡаушауынан немецтың ҡулынан автоматы төшөп китте. Ә Әлфиә-Жужа һалдатҡа ташланды...

Аҙаҡ, күп йылдар үткәс, Ҡамалова ғәжәпләнеп һәм ҡалтырап хәтерләйәсәк: нисек ул — кескәй генә, көсһөҙ генә башы менән ҡалын кейем кейгән һалдатты финка менән үлтерә алды икән? Күрәһең, кеше ут кеүек ҡыҙған, асыулы ваҡытында сикһеҙ көслө була торғандыр.

Ә хәҙер... хәҙер уға нисек тә машинаны канауҙан сығарып, йән-фарман Будапештҡа елдерергә кәрәк. Бәхеткә ҡаршы, ҡала алыç түгел, күп тигәндә, ун биш минутлыҡ юлдыр. Ләкин... Фаркаш аяғында ла баçып тора алмай, ә Ҡамалованың бер ҡасан да машина йөрөткәне юҡ. Их, йәнә хата, йәнә ныҡлап уйланылмау. Һуң Сафуан ағаһы уны йыш ҡына, янына ултыртып, кабинала йөрөтә торғайны бит. Дөрөç, бәтә нәмәне белергә тырышыусы Әлфиә ағаһының ҡыланыштарын иçендә ҡалдырырға тырыша ине. Ә ағаһы, Әлфиәнең йотлоғоп күҙәтеп торғанын белепме әллә ҡанына һеңгән ғәҙәте буйынсамы, һәр хәрәкәтен һөйләнә-һөйләнә яһаны: «Хәҙер ҡабыҙабыҙ. Хәҙер тормозды бушатабыҙ ҙа газға баçабыҙ...» Әлфиә-Жужаға әле шуларҙың бөтәһен дә иçенә төшөрөргә, баяғы немец бурҙайҙары әйләнеп ҡайтҡансы, нисек тә машинаны канауҙан сығарып, Будапештҡа һыпыртырға кәрәк. Ул ялт итеп сәғәтенә ҡарап алды. Радиосеанстан һуң ни бары ун минут үткән, ә уға был ваҡыт ғүмеренең иң оҙон көнө (төнө) һымаҡ тойолдо. Ул нисек етте шулай Фаркашты кабинаға ҡултыҡлап индереп, баранка артына ултыртты. Уның еп өҙөрлөк тә хәле юҡ, башын күтәрә алмай, күрәһең, маңлайын ҡаты бәреп, мейеһен һелкеткәндер, хәле мөшкөл булһа ла, ул үҙен юғалтмаған, аңы һәйбәт. Бәхеткә ҡаршы, мотор ҙа иçән. Фаркаш ярым бышылдап, Әлфиә-Жужаға командалар бирҙе.

— Стартерға баç!

— Хәҙер. Аяҡ етмәй... Баçтым.

— Сцеплениены ҡыç!

— Ҡайҙа ул сцепление тигәне? Әһә, бына. Ҡыçтым.

— Тиҙлекте ас та газовать ит!

Ә машина Ҡамалованың ҡулдарына буйһонорға теләмәне, хәйер, ул Фаркашты ла бик тыңламаç ине — тәгәрмәстәр бер урында зырылдап әйләнде — кювет стеналары шыйғалаҡ ине.

— Газға нығыраҡ баç!

— Баçтым...

— Тағы ла нығыраҡ!

Ниһайәт, машина, оҙаҡ ялындырып, тиçкәреләнеп торғандан һуң, кювет буйлап китте. Хәҙер инде уны юлға сығарырға кәрәк. Аумаһа ғына ярар ине...

— Иплəп кенә, ашыҡмай ғына...

— Юҡ, ҡапыл сығырға кәрәк. — Әлфиә-Жужа ундай осраҡта Сафуан ағаһының нисек итеүен иçенә төшөрҙө.

Мөғжизә! Туҙып, таушалып бөткән «шкода» тәүге ынтылышта уҡ юлға сыҡты. Ҡамалова баранканы үҙ ҡулына алды ла бора башланы — ҡайтыр юлға ыңғайлар өсөн уға машинаны йөҙ һикһән градусҡа борорға кәрәк ине. Ошо көсөргәнешле минутта ул фронт яғынан елдереүсе машинаның утын күреп ҡалды. Ә ул машинаның теге «бурҙай» булыуы бик ихтимал ине. Уйланырға, варианттар һайларға ваҡыт юҡ — бөтә көскә (газға!) алға ҡарай ысҡынырға кәрәк. Әгәр немец машинаһы уларҙы ҡыуып етеп, уҙып китә башлаһа йә туҡтарға сигнал бирһә, ул сағында... ул сағында... Әлфиә-Жужа кеçәһендәге гранатаның һалҡынлығын тойҙо... Ике яралы кеше бер иçән кешегә лә тормай шул — машинаны алып барыуы уңайһыҙ, ауыр. Фаркаш хәҙер бөтөнләй хәлдән тайҙы. Фронт яғына барыусы машиналар ғына осрамаһа ярар ине! Ни эшләп осрамаһын, хәҙер уларҙың «сезоны» — ҡараңғы төн.

Ҡапыл Ҡамалованың йөрәге шыу-у итеп китте. Ә рация? Рацияһыҙ ул таяҡһыҙ нуль бит. Ҡамалова ҡырҡа тормозға баçты, машина ырғығандай итеп туҡтаны. Ҡамалова кабинанан сыҡты ла, ауыртҡан тубығын ҡулы менән тотоп, илай-илай рацияһы ҡалған урынға йүгерҙе. Ошо ваҡыт ҡотороп сабып, аллы-артлы ике машина Будапештҡа табан китте. «Их, шуларҙың ҡойроғона тағылырға...»

Әлфиә-Жужа әйләнеп килгәндә, Фаркаш һушын юғалтҡайны. Ул Фаркаштың ҡамырланған ҡулдарын баранканан алды, кәүҙәһен үҙенә табан шыуыштырҙы ла уның аша шофер урынына ултырҙы. Хәҙер иң мөһиме — педалдәрҙе бутамауҙа. Стартер... Сцепление... Тиҙлек... Тормозды йомшартырға ла... Ҡарт «шкода» тыңлаусан ҡуҙғалып китте. Әлфиә-Жужа иркенләп тын алды, әммә шунда уҡ тормозға баçты — хәҙер ҡалаға барыусы машинаны көтөп алырға кәрәк. Тик әлеге лә баяғы «әрекмән ҡолаҡ» ҡына булмаһын, ул сағында бөтәһе лә елгә осасаҡ.

Һиңә кәрәк булмағанда машиналар йыш ҡына үтеп торҙо, ә бына кәрәк сағында... «Әшәкелек законы ана шул инде ул — кәрәкмәгәндә бар, кәрәк булғанда — юҡ. Һуғышта ла был яҙылмаған закон йәшәй икән, күрәһең». Иғтибар... машина! Әлфиә-Жужа башын баранкаға эйҙе. Тынды, һуламай башланы. Йөрәк тә тибеүенән туҡтаны, буғай. Әгәр ул теге пеленгаторлы машина булһа, Ҡамалова уның менән төкөшәсәк. Үлһә үлер, әммә иҫән көйөнә дошманға эләкмәҫ. Нисек тә ҡаушамаҫҡа, нисек тә тегенең моторына төкөтөргә. Был юлы ла фәрештә уның башы өҫтөндә ҡанатын йәйҙе. Немец машинаһының әрпеш «ҡолаҡтары» юҡ ине. Машина түгел, машиналарҙың. Улар икәү булып сыҡты. (Яңғыҙ ғына йөрөмәйҙәр «арыҫлан» йөрәктәр!) Алдағы машина «шкода»ны уҙып китеү менән, Ҡамалова тегенең артына йәбеште. Хатта ул икенсе машинаның шоферының һүгенгәнен ишеткәндәй булды. Әйҙә, һүгенә бирһен! Хәҙер ул Эржебетҡа саҡлы алдағы машинанан аҙым да ҡалмаясаҡ, тик теге, берәй сәбәп табып, туҡтала ғына күрмәһен. Арттағы машина өтәләп бөткән «шкода»ның әҙәпһеҙлеген күреп, уны уҙып китмәксе булғайны, Ҡамалова уға юл бирмәне — немец машинаһы саҡ уның кузовына маңлайын төкөтмәне. Немец сигнал бирә башланы. Алдағы машина, быны ишетеп аҡрынайҙы, әммә ошо ваҡыт уларға бронемашиналар осраны, туҡтаһаң, хәҙер пробка хасил буласаҡ. Фронтҡа беҙҙекеләр менән һуғышырға китеп барһалар ҙа, Әлфиә-Жужа уларға рәхмәт әйтте — хәүефтән ҡотҡарҙылар. Ә Фаркаш дыңғырлауҙарҙан, тормозға ҡапыл баҫыуҙан һушына килде, һыу һораны. Марица менән йәшәгән арала Әлфиә-Жужа байтаҡ ҡына мадьяр һүҙҙәрен ятлап алғайны инде — мадьяр теле уға рус, немец теленә ҡарағанда ла еңелерәк бирелде. «Түҙ, күп ҡалманы инде», — тип ул Фаркашты йыуатырға тырышты.

Ҡамалованың бөтә иҫе-уйы аяҡтарында ла ҡулдарында булыуға ҡарамаҫтан, математика уҡытыусыһы «лилипут» Шамарин әйткән «аналитик баш» айыҡ эшләне. «Немец халҡы — теүәл, педант халыҡ. Тыныс ваҡытта ғына түгел, фронтта ла улар меңәр йыл буйы мейеләренә һеңгән ғәҙәттәрен ташламайҙар. Бая улар, моғайын, «шкода»ның номерын иҫләп ҡалғандарҙыр, яҙып алғандарҙыр. «Шкода» урынында юҡ, етмәһә, кюветта үлек һалдат ята... Иртән иртүк улар Фаркашты эҙләй башлаясаҡтар, тимәк, Фаркаш өйөнә ҡайта торған күпер емерелгән. Фаркашты берәй аулаҡ урында ҡалдырырға ла машинаны емерек ишек алдына кертеп ташларға кәрәк. Шунан Марицаға хәбәр итергә — ҡасһын, рустар килгәнсе, өйөндә күренмәһен. Маладис, Ҡамалова, бөтәһен дә дөрөҫ һәм аҡыллы уйланың.

Дөрөçләккә дөрөç, ә бына Фаркашты ҡайҙа, кемгә ҡалдырырға? Гобарҙың квартиры бикле. Асыҡ булһа ла, унда индерергә ярамай. Шулай уҡ бөтә кварталда ышаныслы кеше юҡмы икән ни? Табылыр. Хәҙер Ҡыҙыл Армия Будапештты бөтә яҡтан ҡыҫып алды бит, мадьярҙарҙың күҙе ныҡыраҡ асыла башланы. Ә ышаныслы кешене ошо ваҡытһыҙ ваҡытта нисек табырға? Хәҙер урамда патрулдәрҙән башҡа берәү ҙә юҡ. Машинаның «маңлай» быялаһына тәүлек буйына ярай торған пропуск йәбештерелгән булһа ла, патрулдең, баранка артында ултырған ҡыҙҙы күреп, туҡтатыуы, тикшереүе бар. Шулай булғас, ишек алды булған тәүге йортҡа инергә лә...» Һәм Әлфиә-Жужа шулай эшләне лә.

Бәрелгән аяҡты ергә тейҙереү менән, бысаҡ менән йөрәккә сәнскәндәй итә, әммә башҡа әмәл юҡ, атларға, ишек ҡағырға кәрәк.

Тәүҙә ул, йоҙроғон саҡ-саҡ тейҙереп алып, тартынып ҡына ҡаҡты, эстән тауыш-тын ишетелмәгәс, ишеккә ныҡыраҡ дөпөлдәтә башланы, әммә өндәшеүсе булманы. Һуң кем бындай шомло төндә ишеген асһын инде! Ишектәрен ватһалар ҙа, сығыусы булмаясаҡ. Ҡамалова икенсе ишекте шаҡылдата башланы. Зыярат тынлығы. Бәлки, был йортта йәшәүсе юҡтыр — һуғыштан ҡасып, ауылғамы, хәүефһеҙерәк башҡа ергәме күсеп киткәндәрҙер?.. Әлфиә-Жужа, ҡул аҫтында торған таҡтаға таянып, өсөнсө ишеккә алпан-толпан атланы ла ҡапыл машинаһына табан йүнәлде. Тәүҙә кабинанан Фаркашты сығарырға кәрәк. Ә был еңел булманы, һыра һатыусы, еңел тиһәң дә, бер биш бот тарта ине. Етмәһә, Ҡамалованың бер аяғы зәғиф. Ә Фаркаштың аяҡҡулдары иҫән булһа ла, мамыҡ ҡурсаҡ һымаҡ атлай.

«Жужа, һин мине ҡайҙа илтмәксе булаһың? Өйгәме?» — тип һораны Фаркаш көскә-көскә һулап. «Өйгә ҡайтырға ярамай, иптәш Фаркаш. — Ҡамалова тәү тапҡыр уға «иптәш» тип өндәште. — Хәҙер мин һеҙҙе берәйһенә индереп ҡуям да үҙем машинаны алыҫҡараҡ илтеп йәшерәм». — «Ә был ниндәй урам һуң?» Фаркаш ҡаранды. Әлфиә-Жужа ишек ҡаҡҡан йортто таныны булһа кәрәк. «Анауында... Күрше йортта... Беренсе ҡатта... Алтынсы квартирҙа... Минең ҡәрҙәшем йәшәй...» Ҡамалова һөйөнөп китте. «Былай булғас, бигерәк яҡшы. Хәҙергә мин һеҙҙе ишек алдында ҡалдырам да машинаны олаҡтырам».

Ул кабинанан рацияны алып, муйынына кейҙе лә телеграм бағанаһы кеүек оҙон Фаркашты биленән ҡосаҡлап, бая шаҡыған ишек янына алып китте.

Фаркаш болдорға ултыртылды, «Белка» болдор аҫтына тығылды. Хәҙер машинаны арка аҫтынан арты менән сыға-

рырға кәрәк — ишек алды оҙонса, тар, яйлап боролоп булһа ла, Ҡамалованың ҡулынан килмәйәсәк.

Фаркаш уның кабинала ыҙаланғанын күреп: «Ташла шул ҡарт алашаны. Ни булһа ла булыр», — тип күңелһеҙ ҡысҡырҙы. Ҡамалова арканың стеналарына машинаның борттары менән бәрелеп, сыйып, нисек етте шулай урамға сыҡты. Ә хәҙер таныш булмаған ҡалала, ҡараңғылы-яҡтылы ваҡытта ҡайҙа йүнәлә ала ул? Оҙаҡ уйлап торорға ваҡыт юҡ ине.

Ҡамалова, моторы яна башлаған самолеттың летчигы кеүек, сая ҡарарға килде — газға бөтә көсө менән баҫып, алға елдерҙе лә, машинаһын боролмалағы бейек йортҡа йүнәлтеп, кабинанан һикереп төштө. Ҡот осҡос ауыртыуҙан ул аңын юғалтты һәм көслө шартлауҙан шунда уҡ һушына килде. Ярым емерелгән сиркәүгә килеп бәрелгән машина шәм һымаҡ сытыр-сытыр яна ине.

Әлфиә-Жужа бик ҙур ауырлыҡ менән торҙо һәм, ҡолап, йәнә һушын юғалтты. Һушһыҙ күпме ятҡандыр, бер минутмы, унмы, әйтә алмай, аңына килеү менән, ботон ҡапҡаға ҡыҫтырған маъмай һымаҡ, дүрт аяҡлап үрмәләне, юҡ, дүрт аяҡлап түгел, өс аяҡлап, хәҙер ул имгәнгән тубығын ҡыймылдата ла алмай. Ул йығылып төшкән урындан Фаркаш тороп ҡалған ара, күп тигәндә, йөҙ-йөҙ илле метр булғандыр, әммә ниндәй ауыр... йәһәннәм ғазаптары шикелле ауыр, алыҫ булды ошо барлы-юҡлы ике йөҙ аҙым юл.

Күптән инде, ун ике-ун өс йәшендә, Әлфиә дуҫ ҡыҙҙары менән Ҡариҙелгә һыу ҡойонорға барғайны. Әсәһе ҡәтғи рәүештә: «Ҡариҙел Ағиҙел түгел, шәп аға, һыу инәһе булма», — тип киҫәтһә лә, ул аҡыллы кәңәшкә ҡолаҡ һалманы һәм үҙһүҙлелеге арҡаһында саҡ башына етмәне. Башҡа ҡыҙҙарға эйәреп, ул да Ҡариҙелдең арғы ярына йөҙөп сығырға булды. Ярға ун-ун биш метр ҡалғас, ул соңғолға эләкте. Төпһөҙ һыу упҡынынан ул нисек етте шулай сыҡты, әммә ҡулды күтәрерлек тә хәл ҡалманы. Ҡулды һуҙһаң, бармаҡтар ярға тейер, әммә ул ара шундай оҙон, ауыр тойолдо уға. Бына әле лә шулай. Йөҙ метр ҡалғандыр Фаркаш янына барып етергә... Әммә һәр метр ғазап менән бирелә.

Кеше аяҡтарынан, машина тәгәрмәстәренән шымарған булыжниктарҙа тир һәм ҡан тамсылары ҡалдырып, йөҙ метр араны үтеүгә ҡарағанда ул башҡа ваҡытта, башҡа урында йөҙ километр үтергә лә риза булыр ине.

Онотма һин быны, гүзәл, боронғо Будапешт. Кескәй генә башҡорт ҡыҙы һинең гражданиның, һинең киләсәгең өсөн урам таштарыңды тир һәм ҡан менән йыуа. Оҙаҡ йылдар үткәндән һуң, ҡара йөрәкле, уҫал ниәтле кешеләр,

был ҡанды ҡырып бөтөрөп, халыҡ хәтеренән совет һалдатының изге эшен алып ташларға тырышасаҡтар, ләкин халыҡ хәтере янмай ҙа, көймәй ҙә, ул — мәңгелек.

Әле һалҡын декабрь таңында һинең ҡала ситендәге урамдан кескәй генә, сибек кенә алыҫ Урал ҡыҙы түше менән шыуышып бара: «Бирешмә, бирешмә, Ҡамалова. Инде күп ҡалманы... Йәнә биш-ун аҙым һәм һин...»

Бына — арка. Ҡамалова, тештәрен ҡыҫып, стенаға тотоноп торҙо... Телдәре кипте, ауыҙы ҡом сүленә әйләнде. Сарсау аяҡ ауыртыуға ҡарағанда ла хәтәрерәк ине. Исмаһам, бер тамсы... бер генә тамсы һыу булһа... Ул теле менән бәҫ ҡапланған таш стенаны ялап алды — еңелерәк булып китте. Тағы яланы, тағы... хәл кергәндәй булды. Ҡулдары менән алмаш-тилмәш таяна-таяна, Ҡамалова көскә Фаркаш ултырып ҡалған болдор янына барып етте. Ә Фаркаш болдорҙоң цемент иҙәнендә хәрәкәтһеҙ ята ине. Йөрәк шыу-у итеп китте. Әллә үлгәнме? Юҡ, иҫән! Әлфиә-Жужа уның ауыр-ауыр һулағанын ишетте. Хәҙер нисек тә уны йылыға алып керергә ярҙам итергә кәрәк... Әлфиә-Жужа бая ҡаҡҡан ишеккә асыуланып, хатта енләнеп һуҡты, әммә ишек өнһөҙ ҡалды. Шаҡып астыра алмаҫлығын аңлағас, ул болдор янындағы ватыҡ кирбестәрҙең береһен алды ла тәҙрәгә тондорҙо. Сылтырап быяла ватылды, һәм тиҙҙән эстә ҡыштыр-ҡыштыр атлаған аяҡ тауышы, бышылдау ишетелде. Ҡото осҡан кеше мадьярса: «Кем унда? Һеҙгә кем кәрәк?» — тип һораны.

Ҡамалова немецса яуап бирҙе.

— Алла хаҡына асығыҙ, бында кеше үлеп ята.

Ҡараңғынан тешһеҙ ауыҙлы кеше шышылданы.

— Хәҙер көн һайын йөҙәрләп үләләр.

— Ә был Фаркаш, — тине Ҡамалова, иларҙай булып, ул хужа ишекте асмаҫ, уларҙы индермәҫ тип ҡурҡты. — Аварияға эләкте ул.

— Фаркаш? Ә-ә... Фаркаш. Айн момэнт, — ҡарттың тауышында элек ишетелгән һағайыу, шөрләү юҡ ине инде. Оҙаҡламай өй алдында ҡарттың аяғын һөйрәп атлағаны, ишеккә арҡыры һалынған тимер келәнең алынғаны ишетелде.

— Ҡайҙа ул Фаркаш?

— Бына, болдорҙа ята.

Улар көс-хәл менән Фаркашты өйгә ҡултыҡлап алып керҙеләр.

Әлфиә-Жужаның тәүге һүҙе «һыу!» булды. Өрәкте хәтерләткән хужа ҡайҙандыр һыу килтереп бирҙе. Тын алмай, ҙур туҫтаҡ һыу эскәндән һуң, Ҡамалова аҙлап ҡына Фаркашҡа ла эсерҙе.

— Уға ни булған? — тине хужа.

— Немецтар уның машинаһын канауға бәреп төшөрҙөләр, — тип алдашты Ҡамалова.

— Ә һин үҙең кем? Немец ҡыҙымы? — Был юлы ҡарттың тауышында һалҡынлыҡ һиҙелде. Әлфиә-Жужа уның һүҙҙәрен ишетмәмешкә һалышты.

— Яҡын-тирәлә доктор юҡмы?

— Бөтә докторҙар ҙа армияла... ҡаршылағы йортта бер фельдшер йәшәй йәшәүен, әммә уның бер ай инде урынынан торғаны юҡ. Астма.

— Бәлки, ул, ялынып һораһаң, керер?

— Кермәç! Үҙенең хәле мөшкөл. Уның үҙенә доктор кәрәк.

— Улайһа, һеҙ унан һорағыҙ: мейе һелкенгәндә ни эшләргә? Ниндәй дарыу бирергә кәрәк? — Ошо ваҡыт ул үҙенең бәрелгән аяғын да иçенә төшөрҙө. — Булһа, үҙенән берәй шешә йод һорағыҙ.

— Йод? Йод минең үҙемдең дә бар, тик ҡайҙа ҡуйғанымды хәтерләмәйем, — ул, шырпы һыҙып, иҙәнгә, фарфор тәрилкәгә ҡуйылған, ситтәренә ирегән парафин тамып бөткән шәмде тоҡандырҙы. Ә тәрилкә тәмәке көлө менән тулғайны. Шәм янында уҡ иҙәнгә йоҡлар өсөн урын йәйелгән. Йорт хужаһы — ул үтә ябыҡ һәм ҡарт ине — күптән етмештә үткәндер, һирәк сәстәре ағарған, оҙонса йөҙөн арҡырытորҡоро һыҙылған йыйырсыҡтар йәмһеҙләгән, ә бына кәүҙәһе, егеттәрҙеке кеүек, төҙ, зифа, бәлки, элек офицер булғандыр.

Хужа һалҡын күҙҙәре менән бер Ҡамаловаға, бер Фаркашҡа текләп ҡараны. Унан йод эҙләй башланы. Әлфиә-Жужа ошо ваҡыт өй эсен күҙәтте: тар, оҙон бүлмә, арзанлы, йорт хужаһы кеүек ҡартайған, таушалған мебель, ҡасандыр модала булған киң карауат. Ул уртанан шикле ҡабарып тора. Карауат өçтөнә уңып, төçөн юғалтҡан иçке юрған ябылған; ике ултырғыс, комод — бына бөтә мебель.

Әлфиә-Жужаның күҙе Фаркашҡа төштө. Ул әллә йоҡлай, әллә ярым һушһыҙ ята ине. Йыш-йыш ғырылдап һулыш ала. Ҡамалованың ишеткәнеме, уҡығанымы бар — мейеһе ныҡ һелкенгән кешеләр ана шулай ғырылдап тын ала, ти. Фаркашҡа һис киçектермәй ярҙам итергә кәрәк. Ә нисек ярҙам итергә? Үлеп ҡуйһа... Ул саҡта...

— Бабай, йод булмаһа ла ярар, тиҙерәк фельдшерҙы саҡырығыҙ, — тип ашыҡтырҙы ул хужаны. — Фельдшерға әйтегеҙ, Фаркаштың мейеһе бик нык һелкенгән.

— Таптым, — тине хужа тоноҡ тауыш менән, ҙур шешә тотоп килеп. Шешәнең төбөндә генә ҡара болғансыҡ шыйыҡса бар ине. Шешәне Әлфиә-Жужа алдына ҡуйғас, ҡарт

иңбашына иҫке генә пальто һалды ла (ул, күрәһең, сиспмәй генә йоҡлағандыр — ишек асҡанда уҡ өҫтөндә ҡалын свитер, салбар ине) башына кейеп тә тормай ишеккә йүнәлде. Сыҡҡанда киҫәтте: — Ишекте элмә, тыштан үҙем бикләрмен.

— Бикләмәгеҙ! — тип ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе Әлфиә-Жужа. Сөнки болдор аҫтында уның «Белка»һы ята, бөтөнләй яҡтырғансы уны алып кереп, йәшерергә кәрәк. — Минең тышҡа сыҡҡым килә, — тип хәйләләште ул ҡарттың аптырап ҡарауына.

— Ярай, бикләмәм, — хужа тиҙ килеште. — Тик береһенә лә асма. Хәҙер ҡала тулы дезертирҙар, мародерҙар.

Тышҡы ишек ябылғас та, Ҡамалова, юбкаһын күтәреп, ойоғон һыҙырып төшөрөп, бәрелгән тубығын ҡарамаҡсы булғайны, шунда уҡ ойоғон күтәреп, ултырғысҡа таянып баҫты, стенаға ҡулдары менән тотона-тотона өй алдына, унан болдорға сыҡты. Ҡараны. Ҡоҙоҡто хәтерләтеүсе ишек алды элеккесә буш һәм тын ине. Болдор аҫтынан рацияһын алды, яурынына һалды. Сатанлап өйгә керҙе. «Ә бына ҡайҙа йәшерергә уны?» Ул, шәмде алып, бүлмәнең мөйөштәрен ҡараштыра башланы. Йәл, бүлмәлә рацияны йәшererлек «серле» урын юҡ ине. Туҡта, анау ишек ҡайҙа сыға? Өс кеше инһә, шығырым булырлыҡ кескәй генә кухня икән. Беренсе ҡат бит, ихтимал иҙән аҫтына төшә торған ишеге-маҙары барҙыр... Кухняла ундай бункер ишеге табылманы. Бүлмәгә урап кергәс, ул, бер ни уйламағандай, иҙәнгә йәйелгән матрасты күтәрҙе һәм шатлығынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне: дүрт таҡта ике яҡтан да киҫелгәйне. Шик тә юҡ, был баҙға төшә торған ишек. Юҡҡа хужа матрасын ишек өҫтөнә йәймәгән. Ҡамалова ике уйлап тормай, матрасты ситкә этәреп, йәшерен ишекте асмаҡ булды, әммә ул асылырға теләмәне. Туҡта әле, уның финкаһы бар ҙа баһа. Сәнселеп китһен, бысаҡ немецтың тәнендә тороп ҡалған бит. Кухнянан ул бысаҡ алып килеп, йәшерен ишекте асты. Ҡулын аҫҡа төшөрөп, шәм менән баҙҙы яҡтыртмаҡсы булғайны, ут шунда уҡ һүнде — күрәһең, һауа етмәйҙер. Әлфиә-Жужа, шәмде ҡуйып, кеҫәһенән фонарь алып яҡтыртты. Серле баҙҙа шикләнерлек бер нәмә лә күренмәне — теләһә нисек ташланған кейем-һалым, сепрәк-сапраҡ ҡына. Ҡамалова һаҡ ҡына «Белка»һын шул өйөм өҫтөнә төшөрҙө. Рация баҙға йәшерелгәс, баҙ ишеге ябылып, матрас элеккесә йәйелгәс, Әлфиә-Жужа, тыныслана төшөп, Фаркаш янына килде.

— Хәлдәр нисек, иптәш Фаркаш? — тине ул, кескәй усын уның киң маңлайына ҡуйып.

— Баш әйләнә.

— Хәҙер хужа фельдшер алып килер, — тип алдашып йыуатты Ҡамалова Фаркашты. Юҡ, алдашманы. Әгәр ул ысын медик булһа, йөрәге булһа, түҙмәйәсәк, киләсәк.

— Ә Марицаға... минең былай булыуым хаҡында әйтмәгеҙ, Жужа... — тип үтенде Фаркаш, быуыла-быуыла.

Эһ, Марица бөтөнләй иҫтән сығып киткән бит. Уға йәһәтерәк хәбәр итергә кәрәк. Тиҙерәк йортон бикләп, сығып ҡасһын, юғиһә немецтар эләктереп аласаҡ. Хужа ҡайтыу менән, уны күршегә, Фаркаштың ҡәрҙәшенә, ебәрәсәк. Ә хәҙер... ул ултырып юбкаһын күтәрҙе, ойоғон төшөрҙө.

Ай!.. Тубығының тиреһе һыҙырылған, шешкән, ҡанлы сей ит күренеп тора... Ул, хужа биргән шешәне асып, уның эсендәге шыйыҡсаны тамсылап ҡына тубығына тамыҙа башланы. Йод, ут көйҙөргән һымаҡ, эсеттерә — аҡыр ҙа ила. «Түҙ, түҙ, һалдат Ҡамалова, заражение булһа, эшең хөртәйер» тип ул үҙен батырландырҙы. Их, бинт юҡ, бәйләргә булыр ине. Ә ниңә фронттағы һалдат кеүек, ул кеҫәһендә һәр ваҡыт индивидуаль пакет йөрөтмәй һуң? Ғәмһеҙлек. Бынан һуң аҡыллыраҡ буласаҡ. Аҡыллыраҡ... Бына нисә тапҡыр инде ул үҙен ғәмһеҙлеге, ныҡлап уйлап еткермәүе өсөн тиргәй, ә барыбер нимәлер онотола, ниҙер иҫтән сыға. Әгәр һин бөтәһен дә алдан күрә, иҫәпләй алмаһаң, һинән яҡшы һалдат сыҡмаясаҡ, Ҡамалова. Дөрөҫ, беҙ барыбыҙ ҙа янғандан һуң, хаталар эшләгәс, аҡыллана башлайбыҙ. Ә һин ҡасан аҡыллы, төплө кешегә әйләнерһең икән, Жужа?

Әгәр уны Әшрәф йәки туғандары күрһә, Әлфиәнең ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә танымаҫлыҡ булып үҙгәреүен һиҙерҙәр ине. Юҡ, Ҡамалованың характеры ғына үҙгәрмәне. Ул кәүҙәгә лә үҫеп китте.

Өй алды ишеген ҡаҡтылар. Ҡамалова, бүлмә ишеген асып, мадьярса һаҡ ҡына һораны: «Кем бар?»

— Мин, мин, Ференец, — тине хужа.

Әлфиә-Жужа бына ошо ваҡыт ҡына ҡарттың исемен белде. Йәл, Салаши менән аҙаштар икән. Ә ҡарт, күңелһеҙ, ҡараңғы сырайлы булһа ла, һәйбәт кешегә оҡшаған. Хәйер, был көндәрҙә Будапештта кем асыҡ күңелле, яҡты сырайлы икән?..

Бүлмәгә икәү инде: береһе хужа, икенсеһе мыҡты кәүҙәле кеше. Әлфиә-Жужа аҙ ғына ваҡытҡа ҡаушап китте. Бындай минуттарҙа башҡа бер юлы төрлө уйҙар килә: шикләнеү, өмөтләнеү, ҡурҡыу, һөйөнөү...

Һағайыу урынһыҙ булды — ҡарт үҙе менән бергә фельдшерҙы алып кергәйне. Фельдшер ауыр һулай, үпкәһенән һыҙғырған тауыш ишетелә — астма. Халыҡ араһында ундай кешене, ғыжылдаҡ, тиҙәр. Фельдшер әле ҡарт түгел

ние, күп тигәндә, ҡырҡ-ҡырҡ биш йәштә булыр. Байтаҡтан ҡырынмау уны үҙ йәшенән олораҡ күрһәтә. Төпкә батҡан күҙҙәре аҡыллы, һағышлы ҡарайҙар. Ул ҡулъяулығын әле-нән-әле кеҫәһенән алып, маңлайына бәреп сыҡҡан тирен һөртә.

Фельдшер, шәмде тотоп, Фаркаштың йөҙөн яҡтыртты. Фельдшер Фаркашты шунда уҡ таныны. Уның бит йыш ҡына Фаркаштың барына инеп, күрше-күлән менән ләстит һатып, һыра һемергәне бар.

— Ҡоҫтомо? — тип һораны ул, Әлфиә-Жужаға ҡарап, ике бармағы менән Фаркаштың беләгенән тотоп, пульсын һанап.

Әлфиә-Жужа уның ни һорағанын аңламаны.

— Ул мадьярса аңламай, — тине Ференц ҡарт.

Фельдшерҙың ҡаштары маңлайына менде.

— Ә кем һуң ул?

— Үҙем дә белмәйем, — тип яуапланы хужа. — Минең менән немецса һөйләшә. Ә йөҙө менән немец ҡыҙына оҡшамаған.

Фельдшер тыныслана төштө. Тик уның һыҙғырып һулауы ғына ишетелде. Ошо тынлыҡты боҙоп, бик ауырлыҡ менән һәр һүҙен күкрәгенән ҡыҫып сығарғандай, Фаркаш телгә килде.

— Ул... беҙҙең кеше ул... рус ҡыҙы... Ҡурҡмағыҙ...

Был һүҙҙәргә фельдшерҙың иҫе китмәне, тик күҙҙәрендә һоҡланыу осҡондары ғына сағылып ҡалды. Ул немец теленә күсте.

— Пульсы аҡрынайған. Хәҙер уға фәҡәт ҡуҙғалмай ятыу, тыныслыҡ кәрәк. Әйҙәгеҙ, беҙ уны карауатҡа һалабыҙ. — Өсәүләп улар Фаркашты иҙәндәге матрасҡа һалдылар. Шунан фельдшер Фаркашҡа ауыртыуҙы баҫа, тынысландыра торған дарыуҙар, бром менән пирамидон бирҙе. Дарыуҙарҙы эсергәс, фельдшер, аҡрын ғына башын сайҡап, Фаркашҡа ҡарап торҙо, хәлһеҙләнеп ултырғысҡа ултырҙы. — Эҙһеҙ генә үтеп китергә тейеш. Ҡоҫмаған булһа, бик хәтәр түгел, — фельдшер башын Әлфиә-Жужаға табан борҙо. — Ференц һеҙҙе лә, яраланған, тине.

Ҡамалованың бәрелгән тубығын күрһәтәһе килмәгәйне. Ғөмүмән, ул, ниңәлер, яраһын кешегә күрһәтергә оялды. Теге ваҡытта беләк итен пуля тишеп киткәс тә ул бер кемгә лә һиҙҙертмәне, яраһын үҙе спирт менән йыуып, йод һөртөп бәйләгәйне. Ә хәҙер тубыҡты күрһәтмәй әмәл юҡ, бәйләргә кәрәк, югиһә хәленең мөшкөлләнеүе бар.

Ул ҡыймай ғына тубығын асты. Фельдшер ике бармағы менән баҫа-баҫа: «Ауыртамы, ауыртамы?» — тип һораны.

— Һөйәк һынмаған да, сатнамаған да булырға тейеш. Хәҙер бына бәрелгән ергә боҙ ҡуйырға кәрәк тә бит, уны ҡайҙан алаһың. Ференц! — тип өндәште ул, комод янында ҡыштырлап маташҡан хужаға мөрәжәғәт итеп. — Бер ҙур, ялпаҡ шешәгә һалҡын һыу ағыҙып бир.

Ференц, бер һүҙ әйтмәй, кухняға сығып китте.

Фельдшер йәнә Әлфиә-Жужаға табан боролдо.

— Ә аҙаҡ аяҡты йылыла торорға кәрәк.

— Был бәлә оҙаҡҡа барырмы икән? — тип һораны Ҡамалова, шештең тиҙ генә ҡайтмаçлығын аңлаһа ла, фельдшерҙан йылы һүҙ өмөт итеп.

Фельдшер уны шатландырҙы.

— Йәш организм, оҙаҡҡа бармаç, аҙна-ун көндә өр-яңы аяҡҡа әйләнер.

— Аҙна-ун көн... һеҙ ни һөйләйһегеҙ?.. — Улар һөйләнгән арала, Ференц дүрткелле яçы шешәгә һыу һалып, Әлфиә-Жужаға һуҙҙы. Ҡамалова шешәне тубығына ҡуйҙы, һалҡын шунда уҡ аяҡҡа таралды. Фельдшер туҙып-таушалып бөткән сумкаһын аҡтара-аҡтара һөйләнде:

— Бәхеткә ҡаршы, минең биш-алты таблетка анальгиным ҡалғайны. Мә, ике таблетканы бер юлы эс. Ауыртыуы баçылһа, ҡабат эсмәй тор, кәрәк булыуы бар. — Дарыуҙы биргәс, фельдшер, башын артҡа һалып, ғыжылдап һуланы. Ференц, фельдшерға саф һауа етешмәүен аңлап, ҡалын, ауыр тәҙрә пәрҙәһен тартты — танауға тәүҙә пәрҙәнән осҡан туҙан, унан һалҡынса иртәнге һауа килеп бәрелде. Юҡ, һауа иртәнге булһа ла, саф түгел: унда төтөн, көйөк еçе бар — ҡалала тиçтәләгән урында йорттар яна ине. Фельдшер керле ҡулъяулығы менән маңлайын һөртөп алды ла, башын артҡа һалып, тамаҡ төбөнә ниндәйҙер дарыу ташланы, ҡыйынлыҡ менән йотто. Күҙҙәрен йомоп, һүҙһеҙ ултырҙы.

— Бәлки, ятып торорһоғоҙ, доктор? — тине баянан бирле ауыҙ асып бер һүҙ әйтмәгән Ференец.

— Юҡ, юҡ. Бер ярты сәғәттән еңеләйәсәк. Бигерәк тә бынауындай ҡәһәрле һауа ыҙалай: томан, өçтәүенә, ҡарлы ел. Хәҙер һеҙҙә һалҡын ҡыштыр инде? — Был һорау Әлфиә-Жужаға бирелгәйне.

— Ҡыш инде, — тине ул, һағышланып. — Ә беҙҙең Уралда ноябрҙең икенсе яртыһында уҡ ҡар ята.

— Урал?.. — Фельдшер һыҙғырыу тауышы сығармай башланы. Ҡапыл уға еңел булып китте. — Унда, Уралда, мадьярҙарҙың алыç нәçелдәре — башҡорттар йәшәй түгелме һуң? Ҡасандыр, бик күп быуаттар элек, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа Ҡама буйҙарында йәшәгән, ти бит. Ихтимал улар башҡорттар менән аралашып, бергәләшеп йәйләүҙәргә

күсеп йөрөгәндер... — Фельдшер һуңғы һүҙҙәрҙе һағышланып әйтте.

Әлфиә-Жужа әҙәпле генә көлдө. Фельдшер, күҙҙәрен асып, уға табан боролдо.

— Ниңә көләһегеҙ? Минең һүҙҙәремә ышанмайһығыҙмы? Үҙемдең уҡығаным бар. Төрлө сығанаҡтарҙа ла бер төрлө яҙалар.

— Һуң мин үҙем башҡорт ҡыҙы ла. Өфөнән.

— Башҡорт ҡыҙы? Ысынлапмы? Бына һиңә осрашыу! — Фельдшер, бик йәһәт кенә тороп, Әлфиә-Жужа янына килде, уны оҙон бармаҡлы ябыҡ ҡулдары менән арҡаһынан ҡосаҡлап алды. — Ҡәрҙәшем, — уның хатта күңеле тулды, буғай, — әйҙә миңә күсәбеҙ. Салашистар минән шикләнмәй. Ағайым бөтә Будапештҡа билдәле доктор. Әйтергә яраһа, лейб-медик. Дөрөҫ, беҙ холҡобоҙ менән дә, донъяға ҡарашыбыҙ менән дә антиподтар — ҡапма-ҡаршылар, ләкин хәҙерге шомло заманда уның исеме артына йәшенеү оят түгел. Ә һеҙ Ференец бабай, Фаркашҡа күҙ-ҡолаҡ булығыҙ. Минеңсә, ул оҙаҡ ятмаҫ, торор. Фаркаштар — таҙа нәҫел. Йөрәге таҙа, беләктәре көслө.

Ошо ваҡыт Әлфиә Фаркаштың ҡатынын иҫкә алды.

— Марицаны киҫәтергә кәрәк. Немецтар... — Ҡамалова туҡталды, хәйлә эҙләне. — Фаркашты армиянан ҡасҡан тип уйлап, йә ҡатынын ҡулға алыр...

— Борсолмағыҙ, — тине фельдшер. Инде уның астма өйәнәге бөткәйне, тауышы, көслө булмаһа ла, шаҡтай көр сыға башланы. — Ҡайтыу менән ҡатынымды Марицаны киҫәтергә ебәрермен. Инде фельдшерҙың тауышы көр генә түгел, тәүәккәл ишетелде. — Салаши Гитлерҙың иң һуңғы союзнигы булғас та, рустар бөтә мадьярҙарҙы ла, немецтарҙың ҡурҡаҡ ялсыларылыр, тип уйлайҙарҙыр. Тотһон! Беҙҙә 1919 йылдың [1] рухы һүнмәгән әле. Көн һайын гитлерсыларға ҡаршы йә диверсия, йә башҡа берәй акция ойоштороло. Беҙ юҡҡа түгелгән мадьяр ҡаны өсөн фашистар менән иҫәпләшәсәкбеҙ әле. Беҙ... — ул Әлфиә-Жужаны терһәгенән тотоп торғоҙҙо. — Әйҙә, ҡәрҙәш. Беҙҙә һиңә йәтешерәк булыр.

Әлфиә-Жужа аҙ ғына икеләнеп торҙо. «Ә рацияны ни эшләтергә? Сиселергәме? Юҡ, ашығырға ярамай. Тәүҙә ул Андраш ағай менән кәңәшәсәк».

Ә Гобар уны өс көндән һуң ғына эҙләп тапты. Тәжрибәле подпольщик, оҫта конспиратор Гобар, Фаркаш һыраханаһының ишегендә эт башы саҡлы йоҙаҡ эленеп торғанды

---

* 1919 йылдың 21 мартында Венгрияла Совет республикаһы иғлан ителде.

күрсү менән, тертләп китте. Тимәк, көтөлмәгән бер-бер хәл булған. Ул ике көн ситтән Фаркаш йәшәгән йортто күҙәтеп торҙо, тик өсөнсө көндө генә аяҡтарын күтәрмәй ҡыштыр-ҡыштыр атлап килгән Ференц ҡартты шәйләне. Был ваҡыт урам буш ине. Декабрҙең башҡа көндәрендәге кеүек, елеккә үтеп инә торған ҡар көрпәһе ҡатыш ел иҫте, ҡала төбөндә генә фронт геүләп торҙо. Халыҡ подвалдарға, йорттарҙың беренсе ҡаттарына йәшеренеп (ә тәҙрәләр ҡом тултырылған тоҡтар менән томаланған), урамға сығыу түгел, морондарын күрһәтергә лә ҡурҡҡан саҡта, ҡарт Ференц, әжәлен эҙләгән кешеләй, стеналарға һыйынып, ашыҡмай ғына ҡайҙалыр китеп бара. Гобар Ференцҡа өндәште. Теге тауыш килгән яҡҡа теләмәй генә боролдо һәм полицейский будкаһы артына йәшенгән Гобарҙы күрҙе. Гобар һуңғы ваҡытта бик ныҡ үҙгәрһә лә (ҡартайып киткән, тартылған — һуғыш бераүгә лә еңел бирелмәй), Ференц уны шунда уҡ танып алды: «А-а... кемде күрәм!»

— Ференц, һин үҙеңде пуля алдыра алмай, тип уйлайһыңмы? — булды Гобарҙың сәләмләшеү һүҙе.

— Берәй бокал һыра эсергә ине, һағындырған, күптән уртлаған юҡ. Белмәйһеңме, Фаркаштың бары асыҡмы икән?

Гобар үҙен ни саҡлы оҫта конспиратор, тәжрибәле подпольщик тип уйлаһа ла, был юлы тоҙаҡҡа эләкте — Ференцтың һүҙҙәренә ышанды.

— Аҡылдан яҙғанһың, ҡартлас. Хәҙер ниндәй һыра булһын! Уның һыраханаһы өс йоҙаҡ менән бикләнгән.

— Улайһа... — ҡарт боролоп китә башланы. Бына ошо ваҡыт ҡына Гобарҙың интуицияһы эшләй башланы: «Юҡ, был ҡарт һыра эҙләп йөрөмәй...» Ул Ференцтың ҡаршыһына баҫып, уның йәшләнеп торған күҙҙәренә тишеп ҡараны.

— Фаркаш ҡайҙа? Иҫәнме?

— Ә мин уны ҡайҙан беләйем, ти?

— Ференц, һин мине миңрәүгә һанайһыңмы? Һин мине һиҙенмәй тип беләһеңме?

Ференц Гобарҙың күҙҙәрен ҡарап торғандан һуң, еңенән эләктерҙе лә:

— Киттек! — тине бойорған һымаҡ. — Тик һинең минең янға килгәнеңде бер эт тә белмәһен. — Ул алғараҡ китте лә арка аҫына инеп юғалды. Бер аҙҙан, ватыҡ йәшник тотоп, арка аҫтынан сыҡты, имеш, мейескә яғырға утын эҙләп йөрөй.

Икенсе көндө Әлфиә-Жужа фельдшер торған йорттоң сарҙағынан, дүрт көн бүленеп торғандан һуң, эфирға сыҡты. «Мишәр» менән «Бөрсә» араһы әллә ни алыҫ булмаһа

ла, көрпә ҡарлы декабрь томаны радио тулҡындарына ҡамасаулай ине. Уны радистар «радиопомеха» тип йөрөтә. Шуға күрә Ҡамалова, радистар мәктәбендә өйрәткәнсә, штырь антеннаны рация корпусынан тартып алғас, ҡәләм осон антеннаның төбөнә тейҙергеләп алды — настройка шкалаһы яҡтыраҡ яна башланы, һәм асыҡ текст — хәрефтәр менән эфирға сыҡты. Хәрефтәр менән тапшырыу һандар менән тапшырыуға ҡарағанда ваҡытты аҙыраҡ ала, шул уҡ ваҡытта күберәк һүҙ тапшырып була. Дөрөҫ, бында башҡа шарттар, башҡа көсөргәнеш, әммә, ике тапҡыр харап була яҙғандан һуң, Әлфиә-Жужа ғәҙәттәгенән дә зирәгерәк һәм етеҙерәк ҡыланырға тырышты. Ә урамда йә ҡарт Ференц, йә ауырыу фельдшер күҙәтеп һаҡта торҙо.

Был урында шуны әйтеп китеү ҙә урынлы булыр. Теге ваҡытта Әлфиә-Жужа «Белка»һын баҙға төшөрөп йәшергәйне. Тап ана шул баҙҙа Салаши армияһынан ҡасҡан өс һалдат Ҡыҙыл Армияның килгәнен көтөп йәшенеп ята ине. Ә бына карауатҡа бик ҡаты яраланған (шул көндө вафат булған) гонвед * яткырылғайны, шуға күрә карауаттың уртаһы ҡабарып торған.

Бөтәһе лә улар тигәнсә уңышлы барҙы. Беҙҙекеләр аҡрынлап булһа ла Пештҡа яҡынлашты; бәрелгән аяҡ төҙәлә башланы. Фаркаш та аяҡҡа баҫты. Ҡәһәрле астма ебәргәндә, фельдшер Матьяш Лако «һеңлеһенә» мадьяр телен өйрәтте. Ошо уҡ ваҡытта Лако Әлфиә-Жужаға мадьяр халҡының, тау йылғаһы һымаҡ, боролмалы-боролмалы тарихын, Ҡама буйҙарында йәшәгән алтын замандар (үткән заман, алыҫтағы тауҙар шикелле, һәр ваҡыт зәңгәр, күңелле тойола) тураһында һөйләне. Бөтәһе лә йәйланып алғайны һымаҡ, дошман тылында эшләү романтикаһы мажараһыҙ ябай, ғәҙәти эшкә әйләнеп китте: Андраш ағай үҙенә генә билдәле сығанаҡтарҙан бик мөһим мәғлүмәттәр табып килтерә, ә Әлфиә-Жужа уларҙы «Мишәр»гә тапшыра. Ҡамалованың бөтә эше ана шул. Иҫ китерлек бер нәмәһе лә юҡ. Әллә ни ҡыҙыҡ та, ҡурҡыныс та түгел.

Әммә... бер көндө, юҡ, радиосеанс ваҡытында түгел, ә көпә-көндөҙ, Ҡамалова мадьяр телендәге журналдарҙы аҡтарып ултыра ине, немецтар һәм салашистар улар йәшәгән йортто ҡамап алды. Был хәл шул саҡлы көтөлмәгәндә булды, хатта иҫ киткес тыныс, һалҡын ҡанлы Лако ла ҡаушап ҡалды. «Был ни хәл: хатамы? Хыянатмы?» Тәүҙә Лако, йә йортто бутағандарҙыр, йә «профилактикалыр» тип уйланы, әммә ишек артынан: «Фельдшер Лако бында йәшәйме? — тип аҡырған тауыш ишетелгәс, фельдшерҙың

* *Гонвед* — Ватанды һаҡлаусы, һалдат-һуғышсы.

өйәнәге тота башланы. Бына һәр ваҡыт шулай — ҡаушаһа, ярһыһа, астма өйәнәге тота, йөрәк ҡотороп тибергә тотона, маңлайҙан ямғыр булып һалҡын тир аға...

— Ни булды? — тип һораны ул, мөмкин саҡлы тыныс булырға тырышып.

— Тәүҙә ишегеңде ас, унан ахмаҡ һорауҙарыңды бирерһең, — тип екерҙе тупаҫ тауышлы кеше.

Матьяш Әлфиә-Жужаға сарҙаҡҡа менеп йәшеренергә ишара яһаны. Бәхеткә ҡаршы, улар сарҙаҡ аҫтындағы ҡатта йәшәйҙәр ине, ә квартир хужаһы ниндәй маҡсат менәндер сарҙаҡҡа бер генә кеше һыйырлыҡ ишек тишкән. Әлфиә-Жужа, ялт итеп курткаһын алып, башына йөн яулығын япты ла сарҙаҡ ишегенән сығып китте. Ә тыштағы һалдаттар енләнеп ишек ҡаҡтылар.

— Һин асаһыңмы-юҡмы, әҙәм аҡтығы? Юғиһә беҙ ишегеңде емерәбеҙ!

— Айн момэнт, әфәнделәр... мин бит сырхаулап ятам... Хәҙер... салбарҙы ғына кейәм дә... Хәҙер... түҙеп тороғоҙ, әфәнделәр...

Ишек асылды, һәм бүлмәгә өсәү атылып керҙе: ике салашист, бер немец. Улар инеү менән бүлмәнең аҫтын өҫкә килтерә башланылар.

— Ҡайҙа ул?

— Ҡайҙа йәшерҙең? — Балыҡ күҙле салашист автоматының көбәген Матьяштың ҡорһағына төрттө.

— Кем, әфәнделәр? Минең ҡатынымдан башҡа бер кемем дә юҡ, әфәнделәр. Ул да бомбежка ваҡытында подвалға... — тип аңлата башлағайны, хатаһын аңлап, тотлоҡто, сөнки бөгөн ҡаланы бомбаға тотманылар — ҡалын, ауыр томан немец самолеттарына ла, рустарға ла осорға мөмкинлек бирмәне. Әммә һалдаттар Матьяштың хатаһына иғтибар итмәне.

— Ағайыңды ҡайҙа йәшерҙең?

— Ниндәй ағайымды?

— Ҡара, диуанаға һалышҡан була. Доктор Лок кемдең туғаны? Һинекеме, минекеме?

— Доктор Лок? — Матьяшҡа һулауы еңелерәк булып китте. — Уның бында килмәгәненә йыл була инде. Ә уға ни булды?

— Ну булды? — Ас яңаҡлы, уҫал күҙле салашист аҡырмай ғына аңлатты: — Доктор Лок, иң дефицит дарыуҙарҙы, хирургия инструменттарын урлап, госпиталдән шылған. Ә тегендә кеше үлергә ята. Полковник!

Матьяш хәле бөтөп диванға ултырҙы.

— Булмаҫ! Ышанмайым... Ул бит Салаши әфәндегә һуңғы һулышына тиклем тоғро кеше.



Ибраһим Абдуллин дуҫтары менән (һулдан уңға): летчик, подполковник З. Шәймәрҙәнов, Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғ. Фәтҡуллин һәм автор.

— Булмаҫ! Хәҙер бөтәһе лә мөмкин, — тип сәбәләнде балыҡ күҙле салашист. — Мадьярҙар аҡылдан яҙҙы.

Салашистар ишеккә йүнәлгәс, һүҙһеҙ һәм хәрәкәтһеҙ баҫып торған немец һалдаты башы менән сарҙаҡҡа сыға торған ишеккә ишараланы. Матьяш ҡаушауынан һикереп торҙо һәм шуның менән эште боҙҙо, ахрыһы. Һалдаттар, кәүҙәләрен ҡырынайтып сығып, сарҙаҡҡа ташландылар. «Бөттө... харап булды Жужа...» тигән уй Матьяштың йөрәген ярып үтте.

Ҡамалова, баҫҡыстан дөбөр-шатыр менгән һалдаттарҙың аяҡ тауыштарын ишетеп, сарҙаҡтың тәҙрәһенән сығып, бесәй йылғырлығы менән ҡыйыҡҡы үрмәләп менеп, черепица түбәгә һуҙылып ятты. Ошо ваҡыт уға, әйтерһең, ҡайнар һыу һиптеләр: «Әгәр сарҙаҡта «Белка»ны тапһалар? Уға ла, фельдшерға ла капут. Радистарҙы, ҡыҙыл армеецтарҙы йәшереп тотҡан өсөн судһыҙ-ниһеҙ, тотолған ерҙә үк атып үлтерәләр.

Бутайҙар, байҡайҙар... табалар инде, табалар... Их, ниңә ныҡлабыраҡ йәшермәҫкә! Таптылар... Тапманылар. Төшәләр, буғай...» Ошо ваҡыт береһе сарҙаҡ тәҙрәһенән башын тығып, фонары менән (томан бит, насар күренә) черепица ҡыйыҡты һәрмәне. Ярай әле ул йорт ҡыйығына түгел,

ә мезонин ҡыйығына һуҙылып ятты. Күрмәнеләр. Һалдаттар баҫҡыстан төшә башланылар. Аяҡ тауыштары юғалды. Хәҙер Ҡамаловаға ла төшөргә кәрәк, юғиһә әсе елдән ҡулдар боҙға әйләнде.

Оҙаҡламай машиналарҙың ишектәре шапылдап ябылды. Әлфиә-Жужа тәрән итеп һуланы ла мезонин ҡыйығынан төшә башланы, әммә, аяғы ҡатыға теймәгәс, шөрләне. Нисек ул ҡыйыҡҡа менә алған икән, ә бына төшөргә батырлығы етмәй, тайып китерһең дә таш тротуарға осоп барып төшөрһөң. Бишенсе ҡат... аҫта таш тротуар... Ул тештәрен ҡыҫып, бармаҡтарын батырырҙай итеп ямғыр үтмәһен өсөн ике ҡыйыҡ тоташҡан ергә, буйға ҡапланған черепицаға («конек»), тотоноп торҙо. Нимәлер шытырлай, әллә черепица ҡубамы? Әлфиә-Жужаның аҡырып илағыһы, ярҙамға Матьяшты саҡырғыһы килде. Бармаҡтары хәҙер бер ни тоймай, бына-бына улар яҙылып китәсәк тә... Әлфиә-Жужа аҫҡа шыуып төшәсәк. Ул, аяҡтарын шыма черепицаға ҡуйып, терәк эҙләне. Бер нисә черепица ҡубып, аҫҡа төшөп китте. Хәҙер ни эшләргә? Ғүмергә атламаға тотоноп, мезонин ҡыйығында һуҙылып ята алмай бит инде, нисек тә төшөргә кәрәк. Ни булһа ла була. «Егерме бер, егерме ике, егерме өс...» Ул ҡулын аҡрынлап ысҡындыра башланы, аяҡ остары менән терәк эҙләне, әммә аяҡтар бушлыҡта аҫылынып ҡалды. Бына-бына уның боҙға әйләнгән бармаҡтары ысҡынасаҡ һәм... Кемдер һаҡ ҡына уның аяҡтарынан тотоп алды. Ул ҡурҡыуынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне, Әлфиә-Жужаны үлемдән ҡотҡарған кеше Матьяш булып сыҡты. Ул Ҡамаловаға мезонин түбәһенән йорт түбәһенә төшөргә ярҙамлашты ла тәҙрәнән үҙенә тартып алды.

— Рәхмәт, иптәш Матьяш, — тине Әлфиә-Жужа мадьярса, сарҙаҡ эсенә кереп тын алғас. — Бөттөм, тип уйлағайным.

— Өшөнөңмө?

— Ә мин һеҙҙе алып киттеләр тип ҡотом осҡайны.

— Улар минең ағайымды эҙләйҙәр. Ул салашист полковникҡа операция яһамай госпиталдән һыҙған.

— Ә мин, эҙемә төшкәндәр икән, тип торам тағы.

Ҡамалова, кәрнизгә сығып, иҫке-моҫҡо, сепрәк-сапраҡ менән ҡапланған «Белка»һын эҙләне. Ҡулы ҡаты нәмәгә бәрелгәс, түбәһе күккә тейгәндәй булды. Иҫән-һау уның «Белка»һы! Һуңғы ваҡытта Әлфиә-Жужа яҙмышына ышана башланы. «Белка»һы менән ул-был булһа, уның да көнө бөтәсәк, имеш.

Ул ҡулына рацияны тапшырған кешегә «Белка»ны бөтөн көйөнә ҡайтарып бирергә хыялланды. Ә рацияны тапшыр-

ған лейтенант, васыят әйткәндәй, уны киҫәтте: «Рацияңды күҙ ҡараһы шикелле һаҡла, унһыҙ һин һанһыҙ». Бына уның ҡәҙерле «Белочка»һы. Туҙан, сысҡан тиҙәге аңҡып торған, көйәнән ҡырҡылып бөткән кейемдәр аҫтында рәхәтләнеп ғәмһеҙ «йоҡлап» ята. Ҡилер бер ваҡыт, ул уянып ҙа Ҡамаловаға йәшел күҙе менән яғымлы ҡарар, һәм эфирға күренмәгән билдәләр осорор...

Хәҙер был йорттан тапшырыу алып барыу хәтәр ине. Тағы яңы нөктә, яңы резиденция табырға кәрәк.

Яңы резиденция ваҡытлыса «Ҡарлуғас» эшкә урынлашҡан ҡарт графиня Порпаци йорто булды.

Ә Будапешт өсөн, асыҡлабыраҡ әйткәндә, Пешт өсөн һуғыштар ҡыҙғандан-ҡыҙҙы, һуҙылғандан-һуҙылды.

Шартлау һәм ялҡындар аҫтында, ҡан һәм үлем менән аралашып, Яңы йыл — 1945 йыл тыуҙы. Ҡешелек донъяһы белгән иң ҡаты, иң ҡанлы, иң аяуһыҙ һуғыштың һуңғы йылы.

Немецтар артабан ҡаршылыҡ күрһәтеүҙең аҙ ғына ла мәғәнәһе булмағанлығын аңлаһалар ҙа, ерҙең ирегә әйләнеп, ҡырҡ беренсе йыл түгел, ҡырҡ дүртенсе йылдың да урап ҡайтмаясағын белһәләр ҙә, немец ғәскәрҙәре, инде аҡылын юя башлаған фюрерҙарының приказына тоғро булырға тырышып, икенсе һәм алтынсы ғинуарҙарҙа контрһөжүмгә күсеп, «Будапешт ҡаҙанынан» сығырға ынтылыш яһанылар. Әммә ҡыҙыл армеецтар бер аҙым да сигенмәнеләр, ә боронғо гүзәл Пештты бик ауырлыҡ менән дошман тырнағынан тартып алдылар, һәр квартал ғына түгел, һәр йорт өсөн аяуһыҙ алыш барҙы. Немецтар менән Салаши ҡотҡоһона бирелеп алданған ун биш-ун алты йәшлек маңҡа малайҙар—левегтэ * ағзалары ла һуғышты. Уларҙың ҡайһы берҙәре винтовканың затворын да көскә-көскә генә аса ала ине. Салаши менән бергә «тыныс урынға» ҡасҡан тотальный министр Ҡоварцтың (шундай министерство ла булған Салаши кабинетында) һуңғы приказы нигеҙендә ун дүрт йәшлек малайҙарҙан алып етмеш йәшлек бабайҙарға саҡлы мобилизацияға эләгә ине. Хатта ҡыҙҙарҙы ла һалдатҡа алалар.

Венгрия үҙенең мең йыллыҡ тарихында иң фажиғәле һәм шомло көндәрҙе кисерҙе.

Һәр нәмәнең осо-ҡырыйы һәм сиге була.

Һәм бына һалҡын, күңелһеҙ 18 ғинуар көнө килеп етте. Беҙҙекеләр Пештҡа бәреп инделәр. Иртән бер нисә минутҡа Гобар графиня Порпаци (ул әжәлен көтөп, ҡош мамығынан эшләнгән өс ҡат юрған аҫтында көпө-төнө ятты) йор-

---

* *Левегтэ* — йәштәр ойошмаһы.

ҡона һуғылып сыҡты. Уның өҫтөндә ҡыҙыл армеецтар курткаһы, башында офицерҙар кейә торған ҡолаҡсынлы йылы бүрек, маңлайында ҡыҙыл йондоҙ, муйынында автомат. Ҡырынған, одеколон һөрткән һәм, кәм тигәндә, ун йылға йәшәргән.

Күҙҙәре ут, тауышы ярһыу, һүҙҙәре атылып ҡына тора.

— Подвалға! Барығыҙ ҙа подвалға төшөгөҙ! Яңылыш ҡына атылған снарядтың йәки фауст-патрондың да килеп инеүе бар. Ҡисен көтөгөҙ. Үҙегеҙҙән һөйөнсө алырға керермен, — Гобар хушлашып та тормай, егеттәргә хас етеҙлек менән сығып йүгерҙе.

Ләкин уларға башҡа осрашырға тура килмәне.

Андраш ағай киҫәткән булһа ла, подвалға төшөп йәшеренергә бойорһа ла, Ҡамалова менән «Ҡарлуғас» аҡыллы кәңәшкә ҡолаҡ һалманы. Ә графиняның подвалын бер ниндәй ҙә снаряд алырлыҡ түгел ине.

Ҡыҙҙар һуғыш барғанды, беҙҙекеләр, фрицты һалҡын Дунайға ҡыуғанды тәҙрәнән күҙәтеп тормаҡсы булдылар. Тәүҙә кинолағы кеүек, ҡыҙыҡлы тамаша һымаҡ тойолдо. Ләкин кинола юрамал ғына йығылалар, юрамал ғына үләләр, ә һуғышта...

Тәүҙә ҡыҙҙар сәпәкәй итеп, беҙҙекеләрҙе ҡыҙҙырып, ҡойроҡтарын һырттарына һалыусы фрицтарҙы, салашистарҙы мыҫҡыллап күҙәтеп торҙолар, хатта яҡында ғына снаряд йәки мина ярылһа ла йәшеренмәнеләр. Ах, аҙаҡ, ҡайтҡас, һөйләргә һүҙ буласаҡ...

Бына бер нисә ҡыҙыл армеец улар торған йорттоң арҡаһы аҫтына ҡырҡ биш миллиметрлы (һалдатса әйткәндә, «сорокопятка») пушканы тәгәрәтеп кертә башланы. Күрәһең, ҡаршылағы йортҡа «оялаған» фрицтарҙы «төтәҫләп» сығарырға самалайҙарҙыр. Тап бына ошо ваҡыт, артиллеристар үҙ эштәре менән мәшғүл булған саҡта, ҡаршы йорттоң асыҡ тәҙрәһенән сусҡа балаһының моронона оҡшаған тупаҡ, шөкәтһеҙ фауст-патрон күренде. Йәнә секунд — артиллеристарҙан он-талҡан ғына тороп ҡаласаҡ. Ҡамалова йәшен тиҙлеге менән һурып, бөтә көсөнә гранатаны аҫҡа, фауст-патрон күренгән тәҙрәгә, ырғытты һәм... үҙе лә төпһөҙ упҡынға төшөп китте.

## ТӨПҺӨҘ УПҠЫН

Әлфиә Ҡамалова өс көндән һуң ғына госпиталдә һушына килде.

Тәү күргән нәмәһе аҡ түшәм, ишелгән шнурға аҫылған абажурһыҙ лампочка булды. «Ҡайҙа ул? Графиняның ту-

шәме барокко стилендә сыбарланғайны, ә түшәмдә йөҙлә-гән хрусталь тамсылар эленгән барокко стилендәге люстра аҫылғайны бит. Ҡайҙа ул түшәм? Ҡайҙа ул люстра? Ни эшләп ул бында таныш булмаған урында ята?»

Әлфиә яй ғына башын әле бер, әле икенсе якҡа борҙо — уң яҡта ла, һул яҡта ла ап-аҡ стена. Ҡайҙа ҡарама күҙҙе ялҡтырғыс бер төҫ — аҡлыҡ... Аҡлыҡтың да шундай йәм-һеҙ, туйҙырғыс булыуын Әлфиә тәү тапҡыр аңланы.

Уның янына тауышһыҙ ғына атлап бер ҡатын килеп баҫты. Күҙҙәрен ҡыҫып йылмайҙы, ирендәрен ҡыбырлатты, әммә Әлфиә бер ни ишетмәне. Баш, артканонада ваҡытын-да ҡолаҡтарынды усың менән ҡаплаған шикелле, геүләй, тубал кеүек ҡабарған.

— Ҡайҙа ятам мин? — Әлфиә үҙ тауышын үҙе ишет-мәне.

Аҡ халат кейгән апай йоҡа, алһыу ирендәрен ҡыбыр-латты. «Ишетмәйем», — тип Әлфиә ҡолаҡтарына бармағы менән төрттө.

Апай рецепт яҙа торған бланкының артына нимәлер һыҙ-ғыланы ла уға һуҙҙы. «Һин госпиталдә ятаһың, һеңлекәш».

— Минең ҡайһы ерем яраланған?

Апай фасоль ҙурлығындағы тимерҙе уға һуҙҙы. «Ошо ҡурғашты кисә һинең башыңдан алдылар».

Бына хәҙер генә Әлфиә һуңғы минуттарын хәтерләй башланы. Ә һуң ул, «лимонка»ны ташлап, артиллеристарҙы ҡотҡарырға өлгөрҙөмө? Өлгөрҙө буғай, граната тап тупаҡ башлы фауст-патрон өҫтөндә шартланы. Әлфиә ҡәнәғәтлә-неп күҙҙәрен йомдо ла шунда уҡ асты. «Ә Ардыуанов уның ҡайҙалығын белмәй бит. Хәҙер үк уға хәбәр итергә, хат яҙырға кәрәк». Күрәһең, ул һуңғы һүҙҙәрҙе эсенән түгел, ә ҡысҡырып әйткәндер. Сестра ултырғысты карауат яны-нараҡ шыуыштырып ултыртып, ҡағыҙын тумбочкаға ҡуйып яҙҙы. «Һиңә болоҡһорға ярамай. Бер нәмә хаҡында уйла-май, тыныс ҡына ят».

— Иршат мине юғалтҡандыр...

«Табылыр, табылыр».

Әлфиә аҡрынлап аңын юғалтты. Ихтимал был йоҡо булғандыр. Дөйөм наркоз менән яһаған операциянан һуң кешенең йоҡлағыһы килә бит. Ә уға операцияны кисә генә яһағандар.

Фәҡәт бер тәүлектән һуң ғына Әлфиә күҙҙәрен асты. Баштың шаулауы кәмегәйне, әммә бөтә донъя уның өсөн телдән яҙғайны. Ул сестраныммы, санитарканыммы саҡырҙы. Халатының түш кеҫәһенә «Н. Н.» тигән вензель сиккән оло йәштәрҙәге ҡатын пәйҙа булды.

— Нимә кәрәк, ҡыҙым?

Әлфиә уны ишетмәһә лә, ирендәренең ҡыймылдауына ҡарап, ни әйткәнен аңланы.

— Йөҙ һикһән дүрт... дробь туҡһан дүрт... «Г»... Ардыуанов Иршат... Минең ҡайҙа икәнлегемде әйтеп, ҡош теләндәй генә хат яҙып ебәрегеҙ... Юғиһә ул борсоласаҡ... — Түшенә «Н. Н.» хәрефтәре сигелгән ҡатын ризалыҡ белдереп башын ҡаҡты. — Тик... зинһар, мине ҡаты яраланған тип яҙмағыҙ. Юғиһә ул көйәләнер... ҡайғырыр...

«Н.Н.» асығын белмәһә лә, Ардыуановтың Әлфиә өсөн сикһеҙ яҡын кеше икәнлеген йөрәге менән тойҙо.

Бер аҙҙан «Н.Н.» инеп, Әлфиәгә асыҡ хат-открытка һуҙҙы. Унда ирҙәр почерғы менән Әлфиәнең әйткән теләктәре яҙылғайны. Әлфиә, рәхмәт белдереп, уның һалҡынса ҡулын ҡыҫты.

— Рәхмәт, апай. Миңә һеҙ операция яһанығыҙмы? Ул, «Н. Н.»дың хирург икәнлеген белмәһә лә, күңеле менән һиҙенде. Хәйер, «Н. Н.»дың ҡулдары уҡ әйтеп тора ине шул. Әлфиәнең быға саҡлы бер ҡасан да больницала ятҡаны булмаһа ла, уҡығаны, ишеткәне бар — хирургтарҙың ҡулдары көслө, зирәк һәм һиҙгер була, ти. «Н. Н.», күҙҙәре менән генә йылмайып, үҙенең хирург икәнлеген раҫланы. Әлфиәгә рәхәт булып китте. Бындай ҡатындың ҡулдары ғына түгел, күҙҙәре лә шифалылыр.

Әлфиә Ҡамалова яуап хатын көтөп ала алманы. Һуғыш юлдары ғына түгел, полевой почта һуҡмаҡтары ла боролмалы, соҡорло-саҡырлы бит. Ә Әлфиә тилмереп, ашҡынып хат көттө. «Минең хатымды алмаған булһа, өйгә, Өфөгә, яҙырға башы етмәйме икән ни? Иршат уның өй адресын белә бит. Штабына яҙып ҡарарға кәрәк. Хәҙер инде ул үҙе лә ҡәләм тотоп яҙа ала». Уй-хыял тормошҡа ашманы — Ҡамалованы шул көндө Советтар Союзына эвакуацияланылар.

Оҙаҡ барҙы санитар поезд, эс бошорғос оҙаҡ барҙы, ләкин барыбер бараһы еренә барып етте. Уларҙы Россияның үҙәгендә урынлашҡан ҙур ҡалала, вагондарҙан бушатып, элек мәктәп булған дүрт ҡатлы йортҡа урынлаштырҙылар. Тышта саф һауалы һалҡын ҡыш ине. Һулауы еңел, рәхәт.

Стационар госпиталгә урынлашҡан көндө үк Ҡамалова ике-өс һүҙҙән генә торған хаттар яҙып, өйгә һәм дивизия штабына ебәрҙе.

Инде буранлы февраль килде. Инде Әлфиә киң мәктәп коридорына сығып йөрөй башланы.

Беҙҙең ғәскәрҙәр Дунайҙың көнбайыш ярына сыҡтылар — бына-бына Будапешттың икенсе яртыһы — Буда ла тулыһынса азат ителәсәк.

Дүрт йылға яҡын ял белмәй, хәл йыймай көнө-төнө эшләгән кешеләрҙең эскә батҡан күҙҙәрендә шатлыҡлы йылмайыу, тауыштарында дәрт-илһам. Мәскәү радиоһы дикторының тауышы Верховный Башкомандующийҙың приказын уҡығанда микрофонды ярырлыҡ ярһыу ишетелә. Бигерәк тә «Верховный Башкомандующий Сталин» һүҙҙәрен тантаналы әйтә.

Еңеү, еңеү килә илгә!

Буранһыҙ көндәрҙә ҡояш яҙғыса йылыта, ҡыйыҡ ситтәренән шаян тамсылар сутылдаша. Яҙ килә, яҙ илгә!

Быйыл урмандарҙа һандуғастарҙың һайрауы ла, кәкүктәрҙең ҡысҡырыуы ла бөтөнләй башҡаса буласаҡ.

Тыныс тормошло яҙ килә илгә! Яҙ.

Ана шундай тулҡынландырғыс, шатлыҡлы февраль көндәренең береһендә, дөрөҫөрәге, һуңғы аҙнаһында, штабтан күптән көтөлгән хат килеп төштө. Хат түгел — боҙ, боҙ түгел — бомба.

«Будапештты алғанда... 1945 йылдың 13 февралендә... капитан Ардыуанов Иршат Усманович батырҙарса...»

Ҡапыл сығып ҡына килгән яғымлы февраль ҡояшы, кире тәгәрәп, томан аҫтына кереп юғалды. Ошо сәғәттән алып Әлфиә Ҡамалова өсөн томанлы көндәр, айһыҙ төндәр башланды. Тотош томан. Көнө-төнө, көнө-төнө, ә төндәр йоҡоһоҙ, йоҡолар һаташыуҙар менән үтә. Йә ул ҡапыл төпһөҙ упҡынға төшөп китеп, үҙен үҙе атып уяныл китә, йөрәк ярырлыҡ итеп ҡысҡырып ебәрә. «Юҡ! Юҡ! Юҡ! Ышанмайым! Ышанмайым! Ышанмайым!»

Хат машинкала бланкыға яҙылһа ла, Әлфиә ышанманы. Аңына һыйманы. Уның башы, йөрәге генә түгел, һәр күҙәнәге был хаттың дөрөҫлөгөн ҡабул итә алманы. «Шулай булырға мөмкин түгел! Ул үлергә тейеш түгел, хаҡы юҡ. Унан башҡа Әлфиә нисек йәшәйәсәк? Нисек?..»

Хаттың аҫтында Әлфиәне «яҡташ» тип йөрөткән, Ҡуйбышевта тыуған оҙон сибәр подполковник Лукиндың имзаһы торһа ла, Ҡамалова барыбер ышанманы. Ул Байсәйетовҡа һәм старшина Иван Федоровичҡа бер үк һүҙҙәрҙән торған хаттар ебәрҙе: «Капитан Ардыуановҡа ни булды? Хоҙай өсөн, дөрөҫөн йәшермәй яҙығыҙ».

Яуап хаттары оҙаҡ көттөрөп, ялындыртып торманы. Хаттар икеһе лә бер көндө килде. Бына уның ике ҡулында — ике хат. Икеһе лә шаҡтай ҡалын. Хәҙер уларҙы нисек асып уҡырға? Юҡ, юҡ, ул хаттарҙы бөгөн асмаясаҡ. Хаттар мендәр аҫтына тығылды. Ә йөрәк... «Ни эшләйһең, йөрәккәйем? Шартлап ярылаһың бит». Ҡулдар бер боҙға әйләнде, бер ойоп ташҡа әйләнде. Ул бармаҡтарын бер йомарланы, бер яҙҙы. Ике доза тамыҙып, валерьянка эсте. Ике йөҙгә саҡлы

һананы... Ниһайәт, мендәр аҫтындағы хаттар алынды. Тәүҙә старшинаның хаты асылды. Шунда уҡ күҙ алдына зәңгәр күҙле, хуш күңелле Ҡаспий балыҡсыһы килеп баҫты. Әлфиәгә аҙ ғына еңел булып китте.

Старшинаның почерҡы бишенсе-алтынсы класс уҡыусыһыныҡы кеүек: һәр бер хәреф еренә еткереп, эре итеп айырым-айырым яҙылған.

«Ҡыҙыҡайым...» Старшинаның шулай иркәләп өндәшеүенән үк хаттың эстәлеге аңлашылып тора ине инде — Әлфиә өсөн ҡыуанырлыҡ хәбәр булмаясаҡ. Ошоно һиҙепме әллә Иван Федоровичтың яғымлы һүҙенәнме уның күҙҙәрен пәрҙә ҡапланы.

«...Беҙҙең командирыбыҙ, дуҫыбыҙ һәм атайыбыҙ юҡ инде хәҙер. Ул минең ҡулымда йән бирҙе...»

Ҡапыл Әлфиәлә көнсөлөк уты тоҡанды. Юҡ, көнсөлөк түгел, ә... аңлатып бирә алмаҫлыҡ ниндәйҙер ҡырағай уй килде уның башына. «Әгәр Иршат уның ҡулында йән бирһә, бәлки, шул саҡлы үкенесле лә булмаҫ ине. Уның һуңғы һүҙҙәрен ишетер, һуңғы һулышына ҡолағын ҡуйып торор ине... Дөрөҫ, кем ҡулында йән бирһә лә, үлем — үлем инде. Ҡайтыр юл юҡ».

Әлфиә хатты уҡыуын дауам итте.

«...Был ҡара көн Будапештта булды. Ҡаланы тулыһынса азат итергә, атыш тамамланырға, күп тигәндә, бер сәғәт ҡалғас. Сиркәү каланчаһында беҙҙең һәр аҙымды күҙәтеп, дошман корректировщигы ултырған. Ә беҙҙең артиллеристарҙың ҡаланчаны бәреп төшөрөргә выжданы етмәй — каланчанан әленән-әле бер нисә баланың башы күренеп ҡала. Немецтар, сволочтар, ул балаларҙы каланчаға юрамал алып менгәндәр икән: рустар бала йәнле халыҡ, күрәләтә атмаясаҡтар. Ә корректировщикты дөмөктөрмәй, беҙҙекеләр бер аҙым да алға бара алмай — артиллериянан ҡыйратып ҡына торалар. Шул саҡ, күп уйлап тормай, иптәш капитан ике разведчигын ала ла, йәшенеп сиркәүгә барып етеп, каланчаға күтәрелә башлай. Немец үҙе лә дөмөгә дөмөгөүен, әммә аҫҡа граната ташларға өлгөрә... Беҙҙекеләр шул минутта уҡ алға ынтыла. Ә унлап бала иҫән-һау ҡала.

Ҡапитанды үлгәндән һуң өсөнсө тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланылар...»

Әлфиәнең күҙҙәре кипкәйне инде. «Үлектәргә орден-миҙал кәрәкмәй...» тип уйланы ул хатты уҡып бөтөрөп, элекке эҙенән бәкләп конвертҡа һалғас.

Йөрәктә шундай һағыш, әрнеү ине — унан һыу боҙға әйләнә, сәскәләр ҡапыл һулый, сәстәр ағара...

Йылдар үткәс, был хәсрәт йөрәк төбөнә инеп йәшенәсәк, әммә уның күләгәһе һоро күҙҙәрҙә һаҡланып ҡаласаҡ — игтибарлы кеше быны һиҙеп әсенән генә: «Был ҡатындың күңелендә онотолмаҫлыҡ яра барҙыр», — тип әйтәсәк.

Разведка начальнигы подполковник Лукин Ардыуановты, йөрәге һиҙгәндәй, үҙе урынына ҡоҙаланы. Һуғыш бөткәнсе майор буласаҡһың, тип ҡыҙыҡтырҙы, әммә капитан йә юҡ сәбәпте табып, ыҡ-мыҡ итте, йә шаяртты: «Тәүҙә Будапештты алайыҡ, унан штаб ҡомағына әйләнермен».

Йыш ҡына, кеше аңлы рәүештә үҙ һәләкәтенә бара, тиҙәр. Әгәр теге ваҡытта Ардыуанов подполковниктың дуҫтарса кәңәшен тыңлаған булһа, ихтимал ул әле лә йәшәп ятыр ине. Ихтимал Урал тауҙарын байҡап йөрөр, нефть йәки тимер ятҡылыҡтары тапҡан булыр ине. Ул сағында был роман да яҙылмаҫ ине...

Әлфиә Камалова, былай ҙа ауыртҡан башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, госпиталь карауатында аунап ятты. Ә Мәскәү көн һайын, ҡайһы саҡта көнөнә икешәр тапҡыр еңеү салюты бирҙе. Ҡыҙыл Армия, Көнсығыш Европаны фашизм ҡоллоғонан азат итеп, йыртҡысты өңөнә ҡыуҙы. Гитлер һәм уның «тәре йөрөтөүселәре» менән тулыһынса иҫәпләшеү сәғәте көндән-көн яҡынлашты.

Ана шундай ҡайғылы һәм шатлыҡлы (ә Әлфиә Иршаттың үлеменә һаман ышанып етмәй әле. Уның уйынса, Ардыуанов һымаҡ баһадирҙы бер нәмә лә алдыра аласаҡ түгел ине. Иршат һәм үлем — бер-береһенә ҡушылырға мөмкин булмаган төшөнсә) көндәрҙә Әлфиә тертләп уянып китте. Ни эшләп уянды ул: төшөндә мина йәки снаряд ярылдымы? Санитарка ҡауҙырланып ишекте шапылдатып яптымы? Юҡ. Һуғыштан һуңғы тыныс тормош гражданины, кескәй аяғы менән әсәһенең туптай тығыҙ ҡорһагына тибеп, үҙенең яҡты донъяны күрергә әҙерләнеүе хаҡында сигнал бирҙе. Тыуасаҡ балаға йән керҙе. Әлфиә бәхетле йылмайҙы һәм, мендәргә ҡапланып, тауышһыҙ ғына иланы. Ул әсә булыуҙың бөйөк шатлыгынан, тыуасаҡ бәпестең бер ҡасан да атаһы булмау хәсрәтенән күҙ йәштәрен мендәргә ағыҙҙы...

## БӨТӘҺЕ ЛӘ АРТТА ҠАЛДЫ, Ә КИЛӘСӘКТӘ НИМӘ КӨТӘ?..

Поезд күперғә инә башланы. Тимер күперҙең селтәрле фирмалары тәҙрә янынан үтеп китә... Йылы ҡояшлы ямғыр яуа... Әлфиә Камалова ташыуҙан һуң ярҙарынан сыҡҡан Ағиҙелгә ҡарап бара. Ямғыр тамсыларынан һыу өҫтөндә

меңләгән микрофонтандар хасил була. Әлфиәнең күҙ алдына һалҡын һыулы, күңелһеҙ Дунай килеп баҫа. Әлфиә күҙҙәрен йомоп ала — Дунай юғала, йәнә балалыҡ, йәшлек дуҫы Ағиҙел пәйҙа була.

Ошо селтәрле күперҙән Ағиҙелдә һуңғы тапҡыр сығыуына ике йыл да үтмәгән әле. Ҡолаҡта уның юлдаштары Ғәлимә Байкова, Мәрйәм Сафарова йырлаған дәртле йыр һаман ишетелеп тора әле:

«Крутится, вертится шар голубой,
Крутится, вертится над головой...»

Ә уйлап ҡараһаң, баштан кисергәндәрҙе бер епкә теҙһәң, сикһеҙ күп йылдар үтеп киткән һымаҡ тойола. Хатта Өфө ултырған тауҙар ҙа тәпәшләнә төшкән кеүек...

Бөтәһе лә артта ҡалды.

Бала саҡ та, йәшлек тә, окоптар ҙа...

Уларҙы илһамландырыусы, хыялландырыусы Ағиҙелдең текә ярҙары... һалҡынса заллы, ыҫмала еҫе аңҡып торған бейек көмбәҙле клуб-сиркәү...

Имтихандар һәм тәнәфес ваҡытында шыш-быш һөйләшеүҙәр, көлөүҙәр...

Бөтәһе лә артта тороп ҡалды, ә алда ни нәмә көтә уны?..

Туҡта, ниңә уның күңеле шулай нескәрҙе әле? Ниңә һағышҡа бирелде ул? Хәрби яҙмышы ул уйлағанса барып сыҡманымы? Ни эшләп барып сыҡмаһын ти? Разведчица-радистка булырға хыялланды — моратына иреште. Дөрөҫ, ул дошман самолетын бәреп төшөрмәне, танк яндырманы... Яндырманы... I дәрәжә Ватан һуғышы һәм Ҡыҙыл Йондоҙ ордендарын юҡҡа ғына бирмәйҙәр бит. Ҡешенең нәфсеһе сикһеҙ, әлбиттә. Бәлки, ул һуғышты Берлинда тамамларға, түшенә Алтын Йондоҙ тағып ҡайтырға хыялланғандыр...

Өҙгөләнмә, Әлфиә, һинең замандаштарыңдан миллиондар икешәр орден тағып түгел, бер орден да ала алмай һуғыш яланында ятып ҡалдылар. Берәүҙәр — һуғыштың тәүге сәғәтендә, ә икенселәре, уныһы бигерәк тә аяныс, һуғыштың һуңғы сәғәтендә һәләк булдылар.

Юҡ, Әлфиәне тулыһынса тормошҡа ашмаған уй-хыял түгел, ә йөрәк төбөндә ҡыймылдаған йән киҫәге борсой, һағышландыра ине. Нисек итеп ул ата-әсәһенә, бигерәк тә ҡустыларына, ҡайтып күренер? Ә урамда нисек йөрөр?.. «Ана тағы бер пэпэжэ * ҡайтҡан» тип ауыҙҙарын йырмаҫтармы? Ундай уҫал, әсе һүҙҙәр ағыуланған уҡтан, тутыҡҡан бысаҡтан да аламараҡ, кешене үлтереүен үлтермәй,

* *Пэпэжэ* — полевая походная жена, һуғыш ваҡытында тыуған мыҫҡыллы һүҙ.

ә йөрәк төбөнә ҡаклы йәрәхәтләй бит. Ә донъяла күпме ғаилә, никах ҡағыҙына йәшенеп, мөхәббәт белмәй, бәхет татымай йәшәй икән... Ә бына шул союз мөхәббәт менән беркетелһә лә, герблы мисәт һуғылған ҡағыҙ булмаһа, законһыҙ йәшәү һанала, уларҙың балаһын, уйнаштан тыуған, тип ирештерәләр... Кем белә, бәлки, ут эсендә, үлем араһында тыуған мөхәббәт тыныс ваҡыттағы мөхәббәткә ҡарағанда йөҙ, мең тапҡыр көслөрәк һәм сафыраҡтыр ҙа...

Нисек кенә булмаһын, Әлфиә Ҡамалованың биографияһында яңы, үткәндәренә ҡарағанда ҡатмарлыраҡ һәм оҙаҡҡараҡ һуҙыла торған бүлек — глава башлана. Әгәр Ҡамалова был «глава» өсөн үҙендә көс, ҡыйыулыҡ һәм түҙемлек тапмаһа, ғүмере әрәм булды тигән һүҙ. Әгәр ул, яҙмыштан уҙмыш юҡ тип бирелһә, ел ағына йүнәлһә, ғүмере буйы йөрәген әрнеү һәм үкенеү ҡорттары кимерәсәк.

Ваҡытынан элек сәстәре салланған проводник апай (ике «похоронка» эҙһеҙ генә онотолмай шул) Әлфиәгә вагондан төшөргә ярҙамлашты.

«Һаумы, тау башындағы таш ҡала!» — тине Әлфиә эсенән генә.

Перронда ҡаршы алыусылар күп ине — армиянан демобилизациялау башланды.

Ҡыуаныстан көлөшөү, илашыу... шатлыҡлы ауаздар, һүҙҙәр. Ихтимал, Өфө вокзалы бындай тантаналы көндәрҙе бер ҡасан да күрмәгәндер.

Әлфиәне берәү ҙә ҡаршыламаны. Ул, ҡайтам, тип береһенә лә хәбәр итмәгәйне. Хатта Әҡлимә эхирәтенә лә. Берәү ҙә уның ҡасан ҡайтып төшөүен белмәй, берәү ҙә, ул ҡорһаҡҡа уҙғандыр, тип уйламай. Бәлки... кәрәкле поезды көтөп, вокзалда ултырырға ла, өйгә кереп тә тормай, туптура ауылға, Шәмсинур апаһы янына, ыңғайлар ғалыр, ә бала тыуғас, өйгә хат яҙыр, теләһәләр килеп алырҙар, теләмәһәләр... уларҙың эше.

Инде билет кассаһы янына барып еткәс, инде билет алырға тип аҡса һуҙғас, Әлфиә кире уйланы. «Ә ни өсөн ул ата-әсәһенән, туғандарынан, яҡындарынан ҡасып китергә тейеш әле? Ул бит енәйәтсе түгел. Юҡ! Уның үҙе алдында, тыуасаҡ балаһы алдында намыҫы саф, иманы камил. Ә уның — тол, баланың етем булыуына бер кем ғәйепле түгел, һуғыш ҡына ғәйепле...»

Ул, беренсе һанлы трамвайға ултырып, өйөнә ҡайтып китте. Пассажирҙар һуғышсан ордендар һәм миҙалдар, гвардия билдәһе таҡҡан кескәй генә һалдат ҡыҙыҡайға һоҡланып ҡына түгел, ихтирам менән ҡаранылар. Ул трамвайға инеү менән, бер ниҫә кеше, шул иҫәптән шаҡтай оло

йәштәге офицер, һикереп тороп, үҙ урындарын тәҡдим иттеләр.

Ә трамвайҙан төшөп, Октябрь революцияһы урамына йүнәлгәс, уны атаһына йәштәш булырлыҡ ағай ҡыуып етте.

— Ҡана, сумаҙаныңды күтәрәйем, ҡыҙым, мин дә шул яҡта йәшәйем.

Әлфиә ғәрләнеүенән ҡыҙарып киткәндәй булды — ул бит, кешеләр уға мыҫҡыллап ҡарар, тип насар уйлағайны.

Бына уның ҡыҫҡа ғына, соҡор-саҡырлы ағас өйлө урамы. Уның һәр йорто, ҡапҡаһы таныш, яҡын.

Бына уның хәстәрлекле атаһы һыу ала торған колонка янына ташлаған ҙур яҫы таш. Дөрөҫ, таш Әлфиә юҡ ваҡытта икегә ярылған...

Ана таныш сыйырсыҡ ойялары... Ҡарт тирәктәр башындағы ҡарға «өйҙәре»...

Ана таныш Шарик өрә...

— Шарик, Шарик! — тип яғымлы ҡысҡырҙы уға Әлфиә.

Шарик уның тауышын таныны, өрөүҙән туҡтап: «Ҡайттыңмы ни?» тигән һымаҡ шыңшыны. Бәләкәй ҡапҡанан Азаттың башы күренде. Уның күҙҙәре ҡапыл ҙурайҙы, маңлайына һикереп менде.

Баш юғалды, һәм тиҙҙән бер юлы ике баш пәйҙа булды: Азаттыҡы һәм Фидандыҡы. Улар икеһе лә бер юлы кескәй ҡапҡанан — калитканан урамға атылып сыҡтылар ҙа: «Әлфиә апай ҡайтты! Әлфиә апай!..» — тип урам бөтөрөп уға ҡарай саптылар.

Өйҙә әсәһе генә ине. Ул, Әлфиәне күргәс, ағарҙы, ҡулы менән ишек яңағына тотондо — башы әйләнеп киткәндер, күрәһең. Әлфиә уны ҡосаҡланы ла: «Әсәй... әсәкәйем...», — тип рәхәтләнеп иларға тотондо. Ә шул ваҡыт малайҙар, бер-береһен этешеп-төртөшөп, сумаҙанды асырға маташтылар.

Әлфиә карауай һымаҡ күпереп торған карауатҡа әсәһен ултыртты, үҙе уның ҡаршыһына теҙләнеп ултырҙы ла тубыҡтарына башын ҡуйҙы.

— Ҡыҙым... ҡыҙыҡайым... — әсә ҡаршыһында иҫән-һау ултырған кешенең ҡыҙы икәнлегенә һаман ышанып бөтмәй ине әле.

Малайҙар, сумаҙанды аса алмауҙарына ышанып, Әлфиә янына килделәр ҙә уның наградаларын барлай, баһалай башланылар.

— Ватан һуғышы ордены...

— Беренсе дәрәжә. Алтын бит!

— Ә Ҡыҙыл Йондоҙ ниндәй балҡып тора!

— «За от-ва-гу»... Дүрт миҙал.

— Ә һин гвардия значогын да иҫәплә.

— Ул бит миҙал түгел.

— Гвардия значогы ни етте миҙалдан былайыраҡ ул.

— Әлфиә апай... миңә бер миҙалыңды биреп тор әле... Бер генә сәғәткә.

— Миңә лә, Әлфиә апай!

Малайҙар, ҡош түше һымаҡ тар күкрәктәренә икешәр миҙал тағып, сабышып сығып киткәс, әсә, ҡыҙын ҡосаҡлап, бышылдап һораны.

— Балаңа нисә ай?

— Оҙаҡламай алты була.

— Малай булыр, — тине әсә, уның ҡорһағынан һыйпап. Алты айлыҡ булһа ла, Әлфиәнең ҡорһағы йәмһеҙ бүлтәймәгәйне.

— Малай! Юҡ, малай булмаһын. Гел атаһын иҫемә төшөрөп торор.

— Ҡорһағыңдың рәүешенә ҡарағанда малай буласаҡ — һынағаным бар.

— Ай, әсәй... әсәкәйем... — Әлфиә, башын әсәһенең күкрәгенә ҡуйып, ярһып, тыйыла алмай иланы: — Әсәй, әсәй... ни эшләрмен икән мин? Нисек йәшәрмен?.. Әсәй, әсәй... Кешеләр ни әйтер?.. Атайым нисек ҡарар?.. Әсәй, әсәй... минең үләһен килә... Йә, ниңә теге пуля туп-тура маңлайыма килеп теймәгән икән?.. Хәҙер мин алыҫта... сит ерҙә ятҡан булыр инем... Ә һеҙ илар-илар инегеҙ ҙә тора-бара онотор инегеҙ... Минең менән бергә балам да үлер ине...

Әсә ҡыҙына валерьянка тамыҙып бирҙе. Әлфиә тыныслана төштө, битен һалҡын һыу менән һөрттө. Сумаҙанын асып, бай булмаған һалдат кейемдәрен, ябай бүләктәрен алды.

— Быныһы һиңә, әсәй, — Әлфиә уға сигелгән аҡ кофта һондо. — Ошо кофтаны кейеп, мин тәү тапҡыр Гобар менән разведкаға барғайным... Ә быныһы Иршаттың гимнастеркаһы. Уны миңә Байсәйетов госпиталгә ебәрҙе. — Әсә, гимнастерканы ең остарынан тотоп, ҡулдарын йәйҙе.

— Ҡайһылай таҙа... бәһлеүән булған ул...

— Мине кеҫәһенә һалып йөрөтөрлөк ине... Сафуан ағайға офицер гимнастеркаһы алып ҡайтырға вәғәҙә иткәйнем. Бына... килтерҙем...

— Ә ул өйләнергә йыйына, — тип хәбәр һалды әсә.

— Кемгә?

— Наташаның апаһына.

— Ә Наташанан хат-хәбәр бармы? Ни эшләптер ул һуңғы ваҡытта ауыҙына һыу ҡапты. Һуңғы ике хатымдың береһенә лә яуап яҙманы. Әллә адресы алмашынған...

— Башҡа хат яҙа алмаҫ инде ул, ҡыҙым, — тине әсә сикһеҙ һағыш менән.

— Әсәй-әй! Һин ни һөйләйһең!

— Дөрөҫөн һөйләйем, ҡыҙым. Уны һуғыш бөткәс, унынсы майҙа Прага тирәһендә үлтергәндәр.

— Һуғыш бөткәс... — Әлфиә хәлһеҙләнеп карауатҡа ултырҙы. — Һуғыш бөткәс.... Еңеү килгәс... ниндәй үкенесле үлем...

Бер аҙ тыныслана төшкәс, Әлфиә әсәһенә Ардыуановтың карточкаһын күрһәтте.

— Бына ул һинең кейәүең, әсәй. Тик һин уны бер ҡасан да күрә алмаясаҡһың.

Аллы-артлы ҡыуышып — Азат менән Фидан, улар артынан аталары Ахшам ағай инде. Ата ингәс, ишек төбөндә туҡтап, ҡыҙына ҡарап алды. Һуғышҡа саҡлы һатып алынған эшләпәһен — ветеранды һалды, сәсен, мыйыҡтарын һыпырҙы, һалмаҡ баҫып, ике-өс аҙым атлағас, атылып сыҡҡан күҙ йәштәрен баш бармағының быуыны менән һөртөп, ҡыҙыл ҡосаҡлап алды. Әлфиәнең дә күҙ йәштәре атылып сыҡты. Әлфиә, бәлки, тәү тапҡыр атаһының шундай ҡаушағанын, болоғоуын күргәндер. Ул һәр ваҡыт хәстәрлекле, ҡайғыртыусан һәм йомшаҡ күңелле булды, әммә бер ҡасан да үҙенең йомшаҡ, нескә күңелле икәнлеген һиҙҙермәне.

— Ниңә ҡыйыҡ башынан ишелеп төшкән ҡар шикелле?.. Ни хат, ни телеграмма. Аҡсаң булманымы ни? — тине атаһы, үпкәһен белдертеп.

— Һеҙҙе мәшәҡәтләгем килмәне, атай... Поезд көндөҙ килә... Һеҙ эштә... — тип Әлфиә аҡланырға тырышты.

Ә Әлфиәнең хәбәр итмәү сәбәбе башҡа ине — поездан төшкәс тә, уның йөклө икәнен күреп, ғәйрәттәре ҡасмаһын.

Сәй эсергә өҫтәл янына йыйылышҡас, Сафуан ағаһы ҡайтып керҙе. Барлы-юҡлы ике йыл эсендә ул олоғайып, таҙарып киткән. Сафуан егерме алтынсы йәш менән бара — был ваҡытта ирҙәрҙең иң көслө сағы була.

— Батыр һалдатҡа сәләм! — тине ул кисә генә айырылышҡан кешеләрсә.

Әлфиә лә шул нотала яуапланы.

— Элекке батыр һалдатҡа сәләм!

— Ә уның дүрт наградаһы бар! — тине Фидан, һәнәк йәптәре һымаҡ бармаҡтарын айырып, Әлфиә алып ҡайтҡан күстәнәсте — Америкаhан килгән быҡтырылған итте сәйнәп.

Сафуан, эш кейемен алмаштырып, йыуынып, һеңлеһе ҡырына килеп ултырҙы. Әлфиә уға, әсәһе яһаған сәйҙе һуҙҙы.

— Өйләнәһең икән, ҡотлайым, — тине Әлфиә уға, серле йылмайып.

— Иҫәп бар... һин ҡаршы килмәһәң. — Әсә уға Ардыуановтың фотоһүрәтен һуҙҙы.
— Әлфиәнең ире.
— А-а... Геркулес! Ниңә, кейәүгә сыҡтым, тип яҙманың? Ҡасан бында килә? Ҡапитан бит?
— Уны үлтерҙеләр...
Бүлмә тып-тын булып ҡалды, тик герле сәғәт кенә ваҡытты үлсәп текелдәне. Малайҙар, бышылдашып, терһәктәре менән төрткөләшеп, карточканы ҡарапылар. Күкрәкте ҡыҫа торған, томан шикелле ауыр тынлыҡты ата бүлде.
— Ни эшләмәк кәрәк... Яҙмыштан уҙмыш юҡ. Аллаға шөкөр, үҙең иҫән-һау ҡайтҡанһың әле. — Ул торҙо, усы менән ауыҙын һөртөп, бөгөлгән баш бармағы менән мыйығын һыпырҙы. — Күстәнәсең өсөн рәхмәт, ҡыҙыҡайым. Һарайға сығайым әле мин, — ул, өҫтәл артынан тороп, эшләпәһен кейҙе лә сығып китте. Уның артынан уҡ әсә лә сыҡты. Ишек алдында ул ирен туҡтатты.
— Һин нимә, карт, ҡыҙың янында ла ултырманың, ҡапҡыланың да...
— Нимә, нимә? Ейәнгә бишек йүнәтергә кәрәк. Әллә ҡасандан бирле ейәндәр һөйөргә ҡыҙығып йөрөйөм, — уның күҙҙәре йылынды, битте йәмһеҙләп тороусы йыйырсыҡтар яғымлыланып китте.— Минең йәштәштәрҙең күптән икешәр, өсәр ейәне бар инде, ә беҙ һинең менән һаман кисә өйләнгән кешеләр һымаҡ...
Әсәнең йөҙөнә лә һағышлы йылмайыу сыҡты.
— Малай булыр, — тине ул ышаныслы.
— Амин! Ҡартайған көнөмдә дуҫым-кәңәшсем булыр. Ә өйҙә... Әлфиә, өҫтәл артынан сығып, ағаһына Иршаттың гимнастеркаһын һуҙҙы.
— Һүҙемдә торҙом, вәғәҙәмде үтәнем, — тине ул, оялып, дөрөҫөрәге, ғәйепле йылмайып. — Дөрөҫ, гимнастерка ҙурыраҡ... Аҙыраҡ ҡыҫҡартырға, тарайтырға тура килер...
— Уныҡымы? — ти Сафуан, өр-яңы гимнастерканы алып.
— Уныҡы... Иршат уны складтан ғына алғайны. Бер ҙә кейергә өлгөрмәгән.
Сафуан, гимнастерканы йәйеп, ҡарап торҙо.
— Ныҡлы материал...
— Ал, ал.
— Иҫтәлек итеп һаҡла. Ә миңә... баш иҫән булһа, бүрек табылыр, — ул гимнастерканы Әлфиәнең беләгенә һалды. Әлфиә гимнастерканы яйлап төрҙө, тубығына ҡуйҙы. Һыйпаны.
— Ә Мәсғүт ағайҙан элеккесә хат та, хәбәр ҙә юҡмы?

— Юк... ә әсәй һаман өмөтләнеп көтә. Ихтимал, пленда булғандыр, ти. Хәҙер өсәр йыл хәбәре килмәгәндәр йә ҡайтып төшә, йә хаттары килә...

Ҡолаҡтарын тырпайтып, һәр һүҙҙе «йотоп» ултырған малайҙар ҙа һүҙгә ҡыҫылды.

— Мәсғүт ағай үлһә үлер, пленға төшмәҫ! — тине Азат, буш сынаяғын түңкәреп.

— Ҡурҡаҡ кешеләр генә пленға төшә ул, — тип туғанын яҡланы Фидан.

— Һәй, күп беләһегеҙ ҙә инде, — тип Сафуан уларға ҡул һелтәне. — Һәр һуғышта ла әсирҙәр була. Дөрөҫ, пленға төшмәҫкә тырышырға кәрәк. Плен — хурлыҡ. Ләкин... Әгәр яраланған булһаң, ҡамауға эләгеп, һуңғы патроныңды ла атҡан булһаң... Үлге килмәй бит... Ә бөтә әсирҙәргә лә ҡурҡаҡ тип ҡарау хата.

— Ә бына мин бер ҡасан да пленға төшмәйәсәкмен, — тип Азат бәхәсләшә башлағайны, тыны-көнө бөткән Әклимә йүгереп керҙе лә Әлфиәгә ташланды. Ул үҙе илай, үҙе көлә. Йә йоҙроҡтары менән йәштәрен һөртә, йә Әлфиәне суп-суп үбә. Нисә йылдар дуҫ булып, Әлфиә әхирәтенең шундай нескә күңелле икәнлеген белмәй ине.

Уның һүҙҙәре бутала, бер-береһенә бәйләнмәй, бер теманы башлай, икенсеһен ташлай, йә көтөлмәгән һорауҙар бирә. Йә үҙе сәсәй-сәсәй һөйләргә тотона.

— Хәҙер мәңге бергә буласаҡбыҙ, эйе бит? — Әклимә ҡапыл һүрелде, йөҙөнә һағыш сыҡты. — Ә һин Наташа хаҡында ишеттеңме? — Йәнә уның күҙҙәре нурланды. — Ай, һин шундай матурайғанһың, әхирәткәйем.

Улар ишек алдына сыҡтылар. Ҡояш, көнө буйы эшләп, ялға китеп бара ине. Ҡис йылы, тымыҡ. Ҡайҙалыр әтәс-командир, киске тикшереүҙән һуң «зорька» уйнаған сигналист һымаҡ, көр ҡысҡырып, тауыҡтарын ҡунаҡларға саҡыра. Күршеләрҙең Шаригы һирәк-мирәк сәңгелдәп ҡуя.

— Көнләшәм мин һинән,— ти Әклимә, әхирәтенең кескәй генә усын үҙенең ҡоймаҡ һымаҡ йомшаҡ, киң устарына алып.

— Көнләшәһең?

— Эйе. Һин бөтә яҡтан да малатчина.

— Ә мин үҙемдән ҡәнәғәт түгелмен...

Әклимә уның ни әйтергә теләгәнен аңлай.

— Төкөр. Көлөрҙәр тип ҡурҡаһыңмы? Берәйһе төрттөрөп кенә ҡараһын, бынауы ҡулым менән яңаҡтарынан ут сығарасаҡмын, — ул усын һелкетеп, янап алды.

Әклимә ғүмергә Әклимә булып ҡаласаҡтыр инде: бер минут эсендә өс хәлгә керер, биш темаға күсер.

— Ә Әшрәфтән хат алаһыңмы? Ул һинең был хәлеңде беләме? — тип башылдап, ғәфү үтенгәндәй һораны.

— Әшрәф бер нәмә лә белмәй, — Әлфиәнең тауышы күңелһеҙ, төшөнкө ине.

— Ә һин уны бик ныҡ яраттыңмы?

— Кемде? — Әлфиәнең ҡаштары һикерҙе.

— Теге... Ни исемле әле?

— Иршат... Ардыуанов.

— Яратмаһам, уға бирелмәҫ... уның ҡатынына әйләнмәҫ инем.

Әлфиә Әклимәне хисләнеп ҡосаҡланы.

— Ә хәҙер һин бер кемдән тартынмай Әшрәфкә кейәүгә сыға алаһың, әхирәткәйем.

— Ҡит әле, ни һөйләйһең?

— Һин бит уны яратаһың, Әклимә. Үҙең әйттең.

— Ә ул мине? Юҡ инде, улай иткәнсе мин... Мине яратмаған кешегә сыҡҡансы, үҙем һөймәгән кешегә сығам...

— Бәлки, һин хаҡлылыр, Әклимә. — Әлфиә елкәһенән йөк ташлағандай һуланы ла әхирәтен ҡосаҡланы.— Йә, уҡыуҙар нисек бара? Бик ауыр түгелме?

— Ә һин ниндәй институтҡа самалайһың?

— Ныҡлап ҡына уйлағаным юҡ. Миңә баламды үҫтерергә кәрәк әле.

— Көйәләнмә. Ҡарар кешең бар.

— Медҡа инергә уйлайым.

— Врач эше оҡшаймы?

— Белмәйем... Теләһәм, оҡшар.

Әлфиә, Азат, Фидан үҫкән иҫке бишекте күтәреп, атаһы өйгә инеп китте.

— Ә һин ҡурҡмайһыңмы? — тип һораны Әклимә, серле итеп бышылдап.

Әлфиә әхирәтенең тел төбөн аңламаны.

— Кемдән, нимәнән?

— Бала табырға ҡурҡмайһыңмы, тим.

— Ниңәлер, ул хаҡта уйлағаным юҡ.

— Ай, ҡасан мин дә әсә булырмын икән? — Әклимә көрһөнөп ҡуйҙы.

Әлфиәнең әсәһе Сабира апай сығып Әлфиәне өйгә саҡырҙы.

— Әйҙә ин, ҡыҙым, һыу йылыттым. Йыуын.

Ҡарауаттар ике кешегә тар ине, шуға күрә, ирҙәрҙе бөтәһен дә залға ҡыуып сығарып, улар «малайҙар булмаһен дә» иҙәндә ятырға булдылар. Әсә, «ҡаты булмаҫмы?» тип тотоп ҡарай-ҡарай, аҫҡа ҡат-ҡат һалды, комод төбөнән алып, ҡәҙерле ҡунаҡ килгәндә генә тотола торған просты-

няны йәйҙе, баш аҫтына иң йомшаҡ мендәрҙәрҙе һалды.

— Сисен, ят, ҡыҙым.

Әлфиә әсәһенең халатын кейгәйне. Уны һалып ташланы ла ятты.

— Ҡаты түгелме, ҡыҙым?

— Ю-ҡ... һин дә ят инде, әсәй, көнө буйы аяҡ өҫтөндәһең.

«Хәҙер, хәҙер ятам» тигәс тә әсә бер ярты сәғәт ҡыштырлап йөрөгәндер әле. Әлфиә әсәһе ятасаҡ урынды ла йылытып торҙо. Ниһайәт, әсә лә ятты. Әлфиә уны, бала сағындағы шикелле, муйынынан ҡыҫып ҡосаҡлап алды.

— Күпме хыялландым мин ошо көндө күрергә, әсәй.

— Төшөңә кергән сағым булманымы?

— Ҡайһы саҡта көн һайын тип әйтерлек инден. Ә арыған көндәрҙә төш күреү ҡайғыһы булманы: яттым — үлдем. Бер рәт хатта уянмай ярты тәүлек йоҡлағанмын. Аҙаҡ «йоҡо сүлмәге» тип ирештерерҙәр тип малайҙарҙан оялып йөрөнөм.

— Шул саҡлы арый инеңме ни?

— Булғыланы...

Әсә иплəп кенә усын уның бүлтәйеп торған ҡорһағына ҡуйҙы.

— Ҡыймылдай, бәпескәйем, — ти ул, шатланып.

— Үтә тынғыһыҙ. Ҡайһы сағында ҡорһаҡты тишерлек итеп тибә, — тип көлә Әлфиә.

— Иҫкә алдыңмы, атайың ҡапыл йошәреп китте. Бая кухня яғына инде лә минең ҡабырғама төртә. «Оҙаҡламай һин — өләсәй, мин олатай булам. Баланың балаһы балдан да татлыраҡ була, ти бит». Ә мин әйтәм, өләсәйем мине: «Баламдың балаһы — йөрәгемдең парәһе», — тип һөйә торғайны. Атайың ишшу осоноп китә, алла бойорһа, ейәнемде үҙем тәрбиәләп үҫтерәм. Береһенә лә бирмәйем, — ти.

— Ә Суфия апайҙар иҫән-һау йәшәйҙәрме? — тип һораҡ Әлфиә, бер аҙ һүҙһеҙ ятҡандан һуң.

— Күҙ алдында һыҙа бахыр ҡарсыҡ. Ҡартлыҡ шатлыҡ түгел шул. Һикһәнгә етеп килә бит инде.

— Иртәгә инеп, хәлен белеп сығырға кәрәк.

— Инмә, ҡыҙым.

— Ниңә инмәҫкә ти? Ул минең өсөн үлеп тора торғайны, мин дә уны...

— Ана шул-шул. Ул бит һине килене итеп күрергә хыялланы. Беҙ ҙә һине Әшрәфкә...

Әлфиә уны бүлдерҙе.

— Етте, онот, әсәй. Үткән-бөткән.

— Һиңә егерменсе йәш кенә әле, ҡыҙым.

— Егерме генә... — Әлфиә тынды. Ҡарында тыуасаҡ гражданин ҡыймылдап алды — яйлабыраҡ ятты, күрәһең. Әлфиә йылмайып ҡуйҙы. — Әсәй, ә бесәй ни эшләп күренмәй?

— Үлде. Ҡартайғайны инде.

— Эйе, эйе, ҡартайғайны... Әсәй, ә бала табыуы ауырмы?

— Һине еңел таптым.

— Әсәй... Ә һинең... һине...

Донъялағы иң көслө батша — йоҡо үҙенекен итте. Әлфиә йоҡлап китте. Әсә уның татлы мышнап йоҡлауын оҙаҡ ҡына тыңлап ятты. Ҡасан ғына әле ул төймә кеүек танауын уның күкрәгенә ҡуйып, ирендәрен сутылдата-сутылдата йоҡлай торғайны. Йоҡо аралаш имсәк башын эҙләп табып, рәхәтләнеп һурыр ине... Оҙаҡламай хәҙер үҙе балаһын имеҙә башлаясаҡ... Әсә йылмая, иҫнәй һәм йоҡоға тала.

Юҡ, бөтәһе лә шыма, ал да гөл барманы.

Бер көндө Азат танауын ҡанатып керҙе. Азаттың алышырға, йоҙроҡлашырға яратыуын өйҙә генә түгел, урамда ла беләләр ине. Шуға күрә уның кейемен йыртып, берәй ерен сыйып инеүенә бик иғтибар итмәнеләр. Үҙе лә бер ҡасан ошаҡлашманы, шыңшыманы. Кейеме йыртылһа, еп, энә алып, танауын тарта-тарта текте, күҙе-башы ҡанаһа, мейес артына инеп йыуынды ла йәнә урамға сығып китте. Ә бына был юлы ул, ситлектәге арыҫлан балаһы кеүек, ҡайҙа баҫҡанын белмәй ине.

— Ни булды, улым? — тине әсә, Азаттың танауын еүеш таҫтамал менән һөртөп.

— Тағы шулай бер әйтһен әле... мин уны бәреп үлтерәм, — тине Азат, кескәй генә суҡмарын — йоҙроғон һелкетеп.

Әсә ауыҙ ситтәре менән генә йылмайҙы.

— Кемде бәреп үлтерәһең? Ни өсөн?

— Әсәй, еҙнәйҙең карточкаһын бир әле.. Мин ул малайҙарға капитан Ардыуановтың кем булғанын күрһәтәм.

Әлфиә уны тыйырға, тынысландырырға тырышты.

— Кәрәкмәй, Азат. Кеһөҙ, ғәйепле кешеләр генә аҡлана. Ә беҙ һинең менән бер кем алдында ла ғәйепле түгел, туғанҡайым.

— Тағы шулай әйтеп кенә ҡараһындар, мин уларҙы, — Азат йоҙроғон уйнатып сығып китте.

Әлфиә тауышһыҙ ғына ултырғысҡа ултырҙы. Торҙо. Стенаға эленгән көҙгөгә барып ҡараны. Сәсен төҙәтеп ҡуйҙы.

— Әсәй... Мин ауылға Шәмсинур апай янына китәм.

— Ирегең. Мин дә шулай уйлап йөрөй инем. Сөн буйҙарында рәхәтләнеп йөрөрһөң. Иртән яңы һауған һөт эсерһең. Шәмсинур һинең өсөн үлеп тора.

Әлфиә карауат аҫтынан фронттан йөрөп ҡайтҡан фанер сумаҙанын тартып сығарҙы, кейем-һалымын тултыра башланы. Әсә лә ҡыҙын юлға әҙерләргә кереште. Һалынаһы нәмәләр сумаҙанға һалынып бөткәс, Әлфиә сумаҙанын кире карауат аҫтына этәреп ебәрҙе.

— Юҡ, әсәй, мин бер ергә лә китмәйем. Кешеләрҙән ҡасып була, ә үҙ-үҙеңдән ҡасырға мөмкин түгел. Ә мин үҙ-үҙемдән ҡасырға теләмәйем. Мин уны һеҙгә лә, үҙемә лә оят килтермәҫлек итеп тәрбиәләп үҫтерәсәкмен.

## «ҺАУМЫ, БӘПЕСЕМ!»

Мин бәхетле буласаҡмын, әсәй... Бәхетле... Ә яңғыҙ ҡатындар, ирҙәре фронттан әйләнеп ҡайтмаған тол бисәләр бәхетле була аламы икән?.. Ә нимә һуң ул бәхет? Уны ниндәй бизмәнгә һалып үлсәргә мөмкин?..

Әлфиә ғүмерҙәре буйы ир менән йәшәп тә бәхеттең ни икәнен татып ҡарамаған ҡатындарҙы ла белә... Тимәк... Тимәк, бәхет ирең булыу-булмауға бәйләнмәгән. Ә нимәгә бәйләнгән һуң ул? Бәхет тигән нәмә? Ул саҡта әле Әлфиә ҡарап тороуға бик ябай һәм шул уҡ ваҡытта аңлатып бирә алмаҫлыҡ ҡатмарлы һорауға яуап таба алмай ине. Дөрөҫ, Әлфиә бәхетлеләр тураһында күп уҡыны, бәхетле кешеләрҙе китап биттәрендә генә түгел, тормошта ла осратты. Кеше бәхетен аңлауы бер нәмә, ә бына үҙеңдең бәхетле-бәхетһеҙ булыуыңды төшөнөү... ай, ауыр икән.

Йөклө ҡатындарға көйәләнеүҙең, ярһыуҙың зарарлы икәнлеген Әлфиә аңлаһа ла, яңғыҙ ҡалғанда, төндәрен түҙә алманы, берәүгә лә ишеттермәй, эсе бушағансы илаштырғыланы. Юҡ, ул тол ҡалыуына үҙен йәлләп иламаны, ул атаһын бер ҡасан да күрмәй етем үҫәсәк балаһын, балаһын бер ҡасан да күрмәйәсәк ирен ҡыҙғанып иланы. Уның ғүмер эсендә бер генә тапҡыр ҙа «бисмилла» һүҙен әйткәне булмаһа ла, хоҙайҙан малай теләне: «Төҫө-башы менән генә түгел, холҡо менән дә атаһына оҡшаһа ярар ине, ярабби...»

Һәм аллаһы тәғәлә уның теләген ҡабул итте. Малай тыуҙы. Ике айға элегерәк. Акушерка бәпесте алып ингәс, Әлфиә, бесәй балаһынан саҡ ҡына ҙурыраҡ ҡып-ҡыҙыл йән эйәһен күреп, шатлығынан ҡысҡырып илап ебәрҙе — малай хас атаһы ине: күҙҙәре, танауы, текә маңлайы, эйәге... Оҡшаһа оҡшар икән...

А, әсәләр шатлығын, мең ғазаптарҙы еңеп, бер генә тапҡыр булһа ла бала тапҡан ҡатын ғына аңлай ала торғандыр.

Ана ул, бәһлеүән атаһы менән сағыштырғанда, микроскопик йән эйәһе генә, ә күпме бәхет, шатлыҡ, һағыш тупланған ошо сабыйҙа; уның тығыҙ имсәгенән шифалы әсә һөтөн һурып, ишетелер-ишетелмәç кенә мышнап йоҡлап ята. Ҡайһы сағында уймаҡ ауыҙын имсәк башынан айырып, шундай матур итеп иçнәп ала ла йәнә танауы менән имсәкте эҙләргә тотона. Ул әле күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә, еç тә тоймай.

Бала тыуҙы һәм билдәһеҙ зарығып көтөүҙәр, Иршат менән булған бәхетле минуттар, ашҡыныуҙар... бөтәһе лә онотолдо. Ошо кескәй генә йән эйәһе онотторҙо уларҙы.

Ғәрләнеү, үкенеп әрнеү, намыçланыу... бөтәһе лә, бөтәһе лә артта ҡалды. Уларҙы һуғыштан һуң тыуған тәүге гражданиндарҙың береһе, атаһының ғүмерен йөрәгендә дауам иттереүсе сабый, алмаштырҙы.

Сабый, сабый... күпме шатлыҡ, күпме өмөт, күпме борсолоуҙар алып киләһең һин...

Шатлыҡ ни саҡлы оҙон ғүмерле, болотһоҙ булмаһын, уның артында хәсрәт һағалап тора. Әйтерһең, ул шатлыҡтан көнләшә, уның урынын алырға ашҡына.

Тәүге күңелһеҙлек загста башланды. Ул, роддомдан алған справканы keçәһенә һалып, бәпесен күкрәгенә ҡыçып, метрика ҡағыҙы алырға барҙы.

Ирҙәргә оҡшаған йөҙлө, мыйыҡлы ҡатын, роддомдан алған ҡағыҙға күҙ һалғандан һуң, ҡоро ғына: «Ә никах ҡағыҙы бармы?» — тип һораны.

Әлфиә был һорауҙы ишетәсәген алдан уҡ белә ине, хатта ул яуабын да әҙерләп килде, әммә ҡапыл ҡойолоп төштө, ҡыҙарҙы.

— Никах ҡағыҙым юҡ минең...

Арыған йөҙлө ҡатын төпсөнөп торманы.

— Ә Ҡамалов кем фамилияһы?

— Минеке.

— Тимәк, прочерк була?

Әлфиә уның нимә әйтергә теләгәнен аңлап етмәне.

— Ниндәй прочерк?

— Баланың атаһының исеме яҙыла торған юл буш ҡала, һыҙыҡ ҡуйыла. Шул, прочерк, тип атала.

Әлфиә ҡапыл тоҡанып китте.

— Ә ниңә прочерк? Уның атаһы бар! Иршат Ардыуанов...

— Ә хәҙер ҡайҙа? Ташлап киттеме, ҡәбәхәт?

Әлфиә инде шартлар хәлгә етте.

— Хаҡығыҙ юҡ... уның тураһында улай әйтергә хаҡығыҙ юҡ... Ул... ул... — Әлфиә күҙ йәштәрен күрһәтмәҫ өсөн ситкә боролдо.

Квадрат йөҙлө ҡатын, ике урындан еп менән уралған боронғо күҙлеген маңлайына күтәреп, күрәш күҙҙәрен ҡыҫып Әлфиәгә йүнәлтте.

— Фронтовик инеме ни?

— Эйе. Икебеҙ ҙә разведчик инек.

— Икегеҙ ҙә?.. Ордендарың да бармы?

— Бар. Ике орден, өс миҙал.

— Балаҡайым... — Мыйыҡлы ҡатын, өҫтәл артынан сығып, Әлфиәне килеп ҡосаҡланы. Мыйыҡлы апай уны болдорға тиклем оҙата сыҡты.

— Ҡистәрен килеп ултыр, Әлфиә. Минең ирем дә һуғыштың беренсе айында уҡ хәбәрһеҙ юғалды. Ҡайғырма, фронтовиктар маркаһын төшөрмә. — Инде тәрән мәғәнәле итеп иләп кенә өҫтәп ҡуйҙы: — Әсә булыу бөйөк бәхет ул, Әлфиә. Фәҡәт әсәләр генә донъяның бөтә йәмен аңлай беләләр. — Инде уның йөҙө лә квадратный тойолманы, мыйығы ла күренмәне. Әлфиәнең ҡаршыһында Россиялағы меңләгән, миллионлаған фажиғәле тол ҡатын-һалдаткаларҙың береһе баҫып тора ине.

— Рәхмәт һеҙгә, апай, ҙур рәхмәт.

— Гөлйыһан минең исемем. Хәрби городокта, «Галя» тип йөрөтәләр ине.

— Һеҙҙең ирегеҙ ҙә офицер инеме ни?

— Майор. Танкист. Килә йөрө. Ихлас әйтәм. Иптәшемдең карточкаларын күрһәтермен. Ул Хасан күлендә, Фин кампанияһында уҡ ордендар алған кеше. Күрһәң ине һин уны, Әлфиәкәйем, алпамыша ине... Ә холҡо...

— Минең Иршатым да мине кеҫәһенә һалып йөрөтөрлөк баһадир ине...

— Гел ҡайғырып ҡына йәшәмә, Әлфиәкәйем. Эсеп-иҫереп, һуғышып һәләк булмаған, Тыуған иле өсөн һуғышып шәһит булған. Тол ҡатындар иларға тейеш түгел. Тол ҡатындар ирле бисәләрҙән дә... хатта ирҙәрҙән дә көслөрәк булырға тейеш. Көслө кешеләр генә бәхетле була. Башыңды юғары күтәреп, күкрәгеңде киреп, ғорур йөрө. Аҡыллылар аңлар, ә ахмаҡтарға иғтибар итмә. Улыңды, Зөфәреңде, иҫән-һау үҫтереп, кеше ит. Бер ҡасан да үҙен етем, атаһыҙ итеп тоймаһын. Дәрәжәһен белеп үҫһен.

— Рәхмәт, Гөлйыһан апай, ҙур рәхмәт.

— Килеп ултыр.

— Килермен, Гөлйыһан апай.

Әлфиә улына иренең исемен, Иршат, тип ҡушмаҡсы булғайны, әммә ата-бабалар йолаһын тотоусы әсә ҡырҡа

ҡаршы төштө. «Халыҡта, үлгән кешенең исемен ҡушһаң, бала оҙаҡ йәшәмәй, тигән хөрәфәт бар, аллам һаҡлаһын, ҡыҙым...» Был дәлил Әлфиәне сигендерҙе, ҡурҡытты, һәм Советтар Союзының яңы гражданины ЗӨФӘР тигән исем алды.

...Ай буйы ауыл һауаһы, яңы һауған һөт эсеп ятыу Әлфиәгә файҙаға булды. Ул йомроланып китте, бит остары бешкән алмаға әйләнде, кәүҙәһе, умарта ҡортоноҡо һымаҡ, зифаланды: быға саҡлы беленер-беленмәҫ торған күкрәк тулыланды, биле нескәрҙе, янбаш һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә киңәйеп, уға ҡатындар ҡиәфәте бирҙе. Гел һағышлы, хатта йылмайғанда ла, көлгәндә лә хәсрәт саткылары һүнмәгән һоро күҙҙәрҙә быға саса күренмәгән яңы нур сағылды. Сабый йәмшек танауын әсәһенең тығыҙ күкрәгенә терәп, ҡыҙыл ирендәрен сутылдатып имсәк һурғанда, һөт имсәктән генә түгел, бөтә тәндән: аяҡ, ҡул бармаҡтарынан, йөрәк төбөнән килгән кеүек тойола. Әлфиәнең күҙҙәренә иман нуры сыға, рәхәтлектән һәм бәхеттән томанлана төшә. Бер аҙҙан әсә ойоп китә, бала ла иҙрәп хәсрәтһеҙ, төшһөҙ йоҡоға тала, тик йоҡо аралаш ҡына ирендәрен сутылдатып ҡуя, имсәктән ауыҙы сыға; әсә бер нәмә белмәй, матур төштәр күрә-күрә йоҡлай. Күкрәк кенә әленән-әле ҡалҡынып ала. Әсәнең ошо изге минуттарҙағы ләззәтен һәм бәхетен аңлар өсөн әсә булырға кәрәк.

Бала етлекмәй тыуһа ла, ашау-эсеү бик ҡыҫынҡы булһа ла, айлап түгел, көнләп үҫте. Һиҙелеп тора, ул әсәһе кеүек сибек, бәләкәй булмаясаҡ — атаһы яғына тартҡан. Тартҡан ғына түгел, ҡойоп ҡуйған атаһы. Был әсә өсөн сикһеҙ рәхәт тә, ҡыйын да. Үҫә-үҫә ул гел атаһын, Иршатты, ғына хәтерләтеп торасаҡ. Ләкин малайҙарҙың төҫ-башы, холоҡ-ҡыланышы менән атайҙарына тартыуы хәйерле. Ирҙәр холоҡло ҡатын-ҡыҙҙы, ҡатын-ҡыҙ холоҡло ирҙәрҙе ене һөймәй уның.

Әсәнән башҡа бер кем иҫләмәҫлек кескәй генә яңылыҡ та Әлфиәне сикһеҙ шатландырҙы, иртәнге ҡояш һымаҡ уның тормошон байыта, ҡыҙыҡландыра төштө. Хатта ғәмһеҙ Әҡлимә лә Зөфәргә һоҡланып ҡарағандан һуң: «Их... ҡасан мин дә әсә булырмын икән», — тип көрһөнгөләне.

Эвакуированныйҙарҙан ҡала һарҡый төшкәс, Әлфиә, ата-әсәһенә, туғандарына йөк булып, ҡамасауламаҫ өсөн, военкомат аша юллап, ҡасандыр гостиница булған оҙон, тар коридорлы йорттан бер бүлмә юллап алды. Ата-әсә, бигерәк тә атаһы, Әлфиәне ебәреүгә теше-тырнағы менән ҡаршы торҙо.

Һарғылт сәсле, сәтләүек төҫлө күҙле айыу балаһы — Зөфәр олатаһының бөтә шатлығы, бәхете ине. Ингән бер

кешегә: «Ә-ә, үҙ балаң әллә ни түгел икән ул, ә бына баландың балаһы балдан да татлыраҡ була икән», — тип маҡтанды, Зөфәрҙе тубығына ултыртып, таҡмаҡлай-таҡмаҡлай һикертте.

Зөфәр улым, йондоҙом,
Йоҡла, минең күҙ нурым.
Йоҡлап туйғас торорһоң,
Батыр малай булырһың,
Аргымаҡҡа менерһең,
Тау-таштарға елерһең.

Әлфиә һуғыш буйы ремонтланмаған, ағартылмаған бүлмәне үҙе буяны. Ҡайҙандыр табып, обой йәбештерҙе; салышайған, асылһа — тиҙ генә ябылмай, ябылһа — бик еңел асылмай торған ишекте туғандары күтәртте; ватылған тәҙрә өлгөләрен алмаштырҙылар, эвакуированныйҙар ҡуптарып алып киткән йоҙаҡ урынына яңы йоҙаҡ ҡуйҙылар, ҡағыҙға яҙып йәбештерелгән номерҙы бысаҡ менән ҡырып, ҡалай ромбик ҡаҙаҡланылар. Күңелһеҙ, ташландыҡ өйҙө хәтерләтеүсе бүлмә йәмләнеп, йәнләнеп китте.

Зөфәр бер тимер карауаттан, артһыҙ ике ултырғыстан ғына торган ҡола ялан бүлмәлә рәхәтләнеп сабып йөрөнө лә, ҡапыл Әлфиәне етәкләп: «Әсәй, әсәй, киттек олатай янына», — тип уны ишеккә һөйрәне.

— Хәҙер беҙҙең өйөбөҙ ошо инде, улым, — тине әсә, улын күтәреп алып.

— Эйе, минең олатайым янына ҡайтҡым килә.

Ҡөйһөҙләнгәндә, кәйефе боҙолғанда, Әлфиә бер ҡасан да балаһын иркәләмәне, йыуатманы, ә уның иғтибарын башҡа нәмәгә йүнәлтергә тырышты.

— Ә һин ошо бүлмәнең хужаһы булаһың инде, Зөфәр.

— Хужа? Ә нимә ул ху-жа?

— Хужамы?.. — Әсә төртөлдө. — Хужа — ул начальник... командир.

Ҡөйһөҙләнеү шунда уҡ юғалды, бала тағы бүлмә буйлап сабып йөрөй башланы.

— Ура-а! Мин командир! Командир!..

Әлфиә көндөҙ больницала эшләп йөрөнө, ауырыуҙарҙы регистрацияланы, кистәрен институтта лекциялар тыңланы, ә Зөфәр олатайҙарынан ҡайтманы. Тик шәмбе көн кис, ял көндәрендә генә ул әсәһе менән бергә булды.

Юҡ, бала кәмһенеп, етем үҫмәне. Хәҙергә ул атайһыҙлыҡтың нимә икәнен белмәне лә, аңламаны ла.

Ғүмер нәк улаҡ аҫтындағы биҙрә кеүек ине. Биҙрә тулғас, һыу бакка ҡойола, бактан мискәгә бушатыла... Көндәр-

зәп аҙна йыйыла, унап ай хасил була, тора-бара йыл ойоша...

Яҙғы ташҡындар, киске тынлыҡта урам остарына таралып юғалған гармун моңо шикелле, туғайҙарға йәйелделәр ҙә, хәлһеҙләнеп, ярҙарына ҡайттылар, ә текә яр ситтәренә ҡарлуғастар оя яһанылар. Ҡайын һуты ла тора-бара асый, бала-саға инде уға тел осон тейҙереп: «Эх! Тәмлекәй!» — тип шатланмай; тик ҡырмыҫҡалар ғына мыжылдап йөрөй. Ҡөрәнһыу зәңгәр яҙ күркен һарғылт йәшкелтем «күке башы» алмаштыра. Туғайҙарҙа ҡуҙғалаҡ күренә. Урман-аҡландарҙы яңғыратып кәкүктәр һағышлана...

Әбейҙәр, аҡ ҡалай таҫма менән шаҡмаҡлап бәйләнгән боронғо һандыҡтарын асып, байрамдарҙа ғына кейә торған калуштарын алып кейәләр, үҙҙәре менән йәштәш артыш таяҡтарына таянып, сәхрәгә сығалар. «Зәңге ҡас, Иҙел кис, иҫке ҡорһаҡ, яңы аш» тип тәүге ҡуҙғалаҡтан ауыҙ итәләр, бармаҡтары таралып торған ус һымаҡ япраҡлы балтырғанды йыйып алып ҡайтып, йоморҡа һытып ыумас ашы бешерҙеләр. Күп тә үтмәҫ, тирә-яҡҡа хуш еҫ бөркөп торған муйылдарҙың сәскәләре ҡойолор, уларҙы сирень, гөлйемеш сәскәләре алмаштырыр, тирәктәр мамыҡ осорор, ҡуҙғалаҡтар һабаҡҡа үрләп, орлоҡҡа йомарланыр...

Әбейҙәр ун алты сәғәт менән ун ете сәғәт араһындағы сәскә-үләнде йыйып ҡайнатып эсер, шифалы һыуға һыҙлаған аяҡтарын тығып, йәшлектәрен хәтерләр.

Эҙләгәнен таба алмаған кәкүк тә тора-бара һаҡауланыр, өнө бөтөр. Ә бал ҡорттарына һабан туйы башланыр — йүкәләр сәскә атыр.

Болондарҙы яңғыратып, салғы яныр ҙар; һағыштарын, әйтелмәгән йәки ярты юлда өҙөлгән мөхәббәттәрен йырға һалып, бесән йыйыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың моңо менән туғайҙар йәмләнеп, моңланып китер.

Бесән кәбәндәре ҡойолоп бөткәс, һөйгәндәре, ирҙәре яу юлынан әйләнеп ҡайтмаған ҡатындар, ҡыҙҙар кәбәнгә ҡапланып һулҡылдап илар. Уларҙың ҡайғы-һағышын ур-таҡларға теләгәндәй, ҡайҙалыр алыҫта яңғыҙ тальянка моңайыр... О, был ваҡыттағы моң-һағышты бергә йыйһаң, йөҙләгән үлемһеҙ опералар хасил булыр ине, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уларҙы йыйып һаҡларлыҡ һауыт юҡ, улар эҙһеҙ юғалалар...

Арыштың һабаҡтары төптән һарғая башлар, башаҡтары ҡыуырылыр. Дингеҙҙәй шаулап, кеше аңламаҫлыҡ телдә серләшеп, ҡыштырлашып үҫкән арыш-бойҙай урынында күңелһеҙ-йәнһеҙ ҡамыл баҫыуҙары ғына тороп ҡалыр. Борсаҡ баҫыуына, ҡойолған бөртөктәрҙе эҙләп, оҙон аяҡлы, оҙон муйынлы торналар осоп төшөр. Оҙаҡламай тәүге һары

япраҡ өҙөлөп, ыңғырашҡанын берәүгә лә ишеттермәй, тирбәлә-тирбәлә ергә төшөр ҙә ашламаға әйләнер. Әбейҙәр сыуағы килеүен белдертеп үрмәкселәр ағастан ағасҡа антенналар һуҙыр; иртән уларға күренер-күренмәҫ кенә ынйы бөртөктәре теҙелер. Инде йәйге зәңгәрлеген юғалтҡан күктән йөрәктәрҙе ҡыҫып алырлыҡ моңло тауыштар ишетелер. Йәше-ҡарты, башын ҡайырып, күккә ҡарар.

«Торройоҡ-торройоҡ!..»

«Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ!..»

О, тәбиғәттә торналар, ҡыр ҡаҙҙары киткәндәгенән дә ямапһыуыраҡ башҡа мәл бармы икән?..

Иң аҙаҡтан, ҡайғыһынан ҡарағусҡыл бронза төҫөнә кереп, имән һарғайыр. Ҡыш һулышын белдереп, ел йүнәлешен үҙгәртер; ҡайғы кеүек күпереп торған дәһшәтле ҡара болоттарҙы аҡһыл ҡыш болоттары алмаштырыр.

Ер менән осрашыуҙарына шатланып, дәртле бейей-бейей тәүге ҡар бөртөктәре күренер. Бала-саға, телдәрен сығарып, уларҙы тотоп ауыҙҙарында иретер.

Ер оҙаҡҡа һалҡын аҡ юрғанын ябыныр. Күк, ерҙе йәлләгәндәй, бик түбән төшөр, ҡояш, эшкә сыҡманы, тип тиргәмәһендәр өсөн, конторaһына килеп күренеп кенә киткән ялҡау түрә шикелле, тоноҡ көҙ көмбәҙендә бер нисә сәғәт моңайып йөрөр ҙә хушлашмай ҙа юғалыр.

...Усын яңағы аҫтына ҡуйып, йоҡлап ятҡан бала сут-сут иткән дәртле музыкаға уянып китер. Тәүҙә бер нәмә аңламай, иҫәңгерәп торор... Стенаға ҡаҙаҡланған йыуынғыстан тамсы тамамы икән әллә, тип мейес артына йүгереп керер. Юҡ, хәстәрлекле әсә, йыуынғыстың һыуын түгеп, тутыҡмаһын өсөн мейес башына ҡуйған. Ә сут-сут иткән дәртле музыка һаман яңғырай. Бала, һалҡын иҙәндән сирҡанып, аяҡ бармаҡтарын бөкләп, һикерә-атлап тәҙрәгә ташланыр. «Әсәй! — тип ҡысҡырыр ул, өй ҡыйығынан тамған тамсыларҙы күреп. — Яҙ килә! Яҙ!» Оҙаҡламай шаян гөрләүектәр гөрөлдәй башлар...

Зөфәр ҙә бер ваҡыт ана шулай әсәһен уятыр. Әсә уға батыр атаһы тураһында һөйләр. Хәҙергә ул атаһы юҡлыҡты әллә белмәй, әллә, олатаһы янында үҫкәс, һиҙенмәй. Был турала һис һүҙ ҡуҙғатҡаны юҡ.

Өрөп, быяланы парландырып, тәҙрәгә бармағы менән «Зөфәр» тип яҙып, һағышланып торған әсә ишектең шапылдауына тертләп китте. Ишек төбөндә, сәтләүек күҙҙәренән зәһәр осҡондар сәсрәтеп, Зөфәр баҫып тора ине.

— Балаҡайым, һиңә ни булды? — Әсә улын күтәреп алды.

— Әсәй, атайым ниңә һаман командировканан ҡайтмай?

Зөфәр ҡапыл ҙурайып, ауырайып киткәндәй булды, әсә уны иҙәнгә төшөрҙө. Иртәме, һуңмы улының был һорауҙы бирәсәген әсә көткәйне, яуап та әҙерләнеп ҡуйылғайны. Ләкин, шул тиклем ҡаушап, юғалып ҡалырмын, тип уйламағайны. Ҡапыл ҡояшты туҙған бүрек менән ҡапланылар, ҡапыл йөрәк туңып китте!

— Һинең атайың капитан Иршат Усман улы Ардыуанов Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булды, улым. Ул батыр разведчик ине. Ул бик батыр ине. Тыуған иле өсөн йәнен дә, тәнен дә аяманы. — Әсә Зөфәрҙең терпеләй сәнскеле сәсенән һыйпаны. — Уның йөрәге тулы мөхәббәт, түше тулы орден ине, улым.

Зөфәр ауыҙын турһайтты:

— Алдашма! Алдашма! Минең атайым юҡ. Булмаған да!

Әлфиә улын янына тартты.

— Әсәгә, алдашма, тип әйтмәйҙәр, улым. Был әҙәпһеҙлек. Атаһыҙ бала донъяға килмәй.

— Ә ниңә мине малайҙар үсектерә?

— Улар йә бер нәмә лә белмәй, йә алама малайҙарҙыр. Әгәр улар һинең атайыңдың фронтта һәләк булыуына ышанмаһалар, керһендәр ҙә бынауы карточкаға ҡараһындар. — Әлфиә стенала элenеп торған фотоһүрәткә төртөп күрһәтә. — Бына ул атайың. Уны разведканан ҡайтҡас, фронт газетаһының фотокорреспонденты төшөргәйне. — Инде ул дүрт йәшлек улы өсөн түгел, үҙе өсөн һөйләне. — Иршат һис тә орден-миҙалдарын тағырға теләмәне: «Кеше разведкаға ордендар менән барамы ни?» — тип шаяртты. Фотокорреспондент: «Ә мин һүрәт аҫтына «Уңышлы разведканан һуң» тигән имза ҡуясаҡмын», — тип ныҡышты. Зөфәр үҫкәс уны аңлар һәм, ғәйепле тапһа, бәлки, ғәфү итер. Ә хәҙер бер ниндәй документ та уға тере атайҙы алмаштыра алмаясаҡ. Иң аҡыллы, мөһим документтар ҙа йәнһеҙ.

Зөфәр, ултырғыстан өҫтәлгә менеп, атаһына текләп бик оҙаҡ ҡарап торҙо ла карточканы алмаҡсы булды.

— Ни эшләйһең, улым?

— Мин ул малайҙарға атайымды күрһәтәм.

— Ҡуй. Күргеләре килһә, инеп ҡараһындар.

— Әсәй, минең атайым батырмы?

— Бик батыр ине, улым.

— Һин дә батыр. Бик! — Ул әсәһенең муйынына һарыла. Әсә, өҫтәлдәге түңәрәк ҡалай һауытҡа үрелеп, кәнфит ала.

— Күҙҙәреңде йом.

— Йомдом.

— Ауыҙыңды ас.

— Астым.

Зөфәр әсәһен әп итеп, урамға сығып йүгерҙе.

Әсә һағышлы йылмайып ҡала. Сәғәт биштә микробиологиянан консультация буласағы иҫенә төшкәс, ашығып институтҡа әҙерләнә башланы. Өҫтөнә текә, киң яурынлы пинжәк кейә, ҡатаһын карауат аҫтына шыуҙырып ебәреп, үксәләре йәмшәйә төшкән туфлиҙар эләктерә лә ишеккә ташлана. Кире килеп, йыуынғыс өҫтөндәге тимгелле-тимгелле көҙгөгә күҙ ташлай. Көҙгөнән уйсан күҙле, йәш, сибәр ҡатын күренеп ҡала. «Бирешмә, Әлфиә!» — ти ул эсенән.

## «ҺИҢӘ—ДУҪ, УЛЫҢА АТАЙ БУЛЫРМЫН, ӘЛФИӘ...»

Дөбөр-шатыр баҫҡыстан төшкәндә, кемдер уның еңенән эләктереп ала.

— Әлфиә!

— Ғәфү итегеҙ, ашығам.

— Әлфиә, танымайһыңмы ни?..

Әлфиә күтәрелеп ҡараны. Уның ҡаршыһында оҙон, зифа кәүҙәле, ҡыҙҙарҙыҡы һымаҡ нәфис йөҙлө, күкрәге орден-миҙалдар менән тулған майор баҫып тора ине.

— Әшрәф?! — Әлфиә ташҡа әйләнде. Тауышы ҡарлыҡты.

— Әшрәф, — тине майор, йылмайып. — Һин мине саҡ бәреп йыҡманың, Әлфиә.

— Кисер, лекцияға ашығам, — тине Әлфиә аҡланып. — Иң ауыр предмет...

— Улайһа, һуңыраҡ киләйемме ни?

Әлфиә ни әйтергә белмәне. Уның Әшрәфте, бында ни эшләп йөрөйһөң, тип ҡыуып сығарғыһы ла, муйынына һарылып илағыһы ла килде.

— Юҡ... — тине ул ишетелер-ишетелмәҫлек кенә, әллә үҙ-үҙенән, әллә күршеләренән ҡурҡып. — Лекциянан мин бик һуң ҡайтам...

— Улайһа, иртәгә килермен.

— Иртән һигеҙҙән мин эшкә китәм.

— Ә ҡасан бушайһың?

— Белмәйем шул. Сәғәт биштә партйыйылыш...

— Әлфиә! — Әшрәф уның ҡулынан тотто. Ул ҡул уға бала саҡтан уҡ таныш ине. Һәр бармаҡ быуыны, устағы һәр һыр, һәр һыҙыҡ... Әммә бөгөнгө Әлфиәнең ҡулында ул ниндәйҙер һалҡынлыҡ, ирҙәр ҡулына хас көс тойҙо. — Мин фәҡәт һине күрер өсөн генә ҡайттым, Әлфиә...

Әлфиә уның күҙҙәренә күтәрелеп ҡараны һәм ҡапыл йәш үҫмер саҡтары иҫенә килеп төштө. Улар ҡара-ҡаршы

ултырыҙар ине лә бер-береһенең күҙҙәренә теклəп ҡарап торорҙар ине. Ҡем элегерәк күҙен йома, маңлайына шалт — сиртеү ала. Әлфиә, үҙе лә һиҙмәҫтән, йылмайып ҡуйҙы. Әшрәф тә йылмайҙы.

— Ярай, бөгөнгә микробиологияһыҙ ғына йәшәрбеҙ, — тине ул, Әшрәфте эйәртеп, баҫҡыстан менә башланы.

— Күптән ҡайттыңмы?

— Иртәнге поезд менән.

— Оҙаҡҡамы?

— Нисек әйтергә инде?.. Үтеп барышлай ғына. Министерствоға саҡыралар.

— Әллә быға бер ҙә ҡайтҡаның булманымы?

— Тура килмәне...

— Рәхим ит, — Әлфиә бүлмә ишеген асты.

Әшрәф, элекке ғәҙәте буйынса, тәүҙә фуражкаһын һалды, унан бүлмәгә атланы. Әлфиә, дөйөм кухня кранынан һыу алып кереп, электр плиткаға сәйнүген ҡуйырға өлгөрмәне, бот буйы бер нисә бала-сағаны эйәртеп, Зөфәр мышнай-мышнай килеп инде.

— Әсәй... — тип ауыҙын тултырып ул нимәлер әйтмәксе булғайны, түше орден-миҙалдан балҡып торған офицерҙы күреп телен тешләне. Бер әсәһенә, бер майорға ҡарап алды ла «атай!» тип уны барып ҡосаҡланы. Әшрәф уны күтәреп алды. Малайҙың түбәһе күккә тейҙе. Ул үҙе артынан, көтөүсе сыбыртҡыһы кеүек, эйәреп кергән малайҙарға өҫтән аҫҡа эре генә ҡарап ҡуйҙы. Ҡараш «Вәт минең атай, исмаһам, атай» тигәнде аңлата ине. Малайҙар, танауҙарын тартып, берәм-берәм ишеккә йүнәлде. Әлфиә, түңәрәк ҡалай һауыттан алып, уларға кәнфит өләшеп сыҡты. Ә бәхетенең түбәһенә менеп атланған Зөфәр Әшрәфтең орден-миҙалдары менән шаярҙы.

— Берәү, икәү, өсәү... дүртәү... — Ул һанауынан туҡтай. Әллә дүрттән артыҡ һанай белмәй, әллә башына башҡа уй килә. — Атай, ә һин ниңә шул саҡлы оҙаҡ ҡайтмай торҙоң? Мин һине һағынып бөттөм, — тип үпкә ҡатыш һораны.

— Ә мине генералдар ебәрмәне, — ти Әшрәф, шат, балаларса ирендәрен турһайтып.

— Ә һин хәҙер китмәйһеңме?

— Китмәйем.

— Бер ҙәме?

— Бер ҙә.

Әшрәф, нимәлер иҫенә төшөп, кеҫәләрен ҡапшай. Кеҫәһенән уйынсыҡ сығара... Шул саҡ Зөфәр, көтөлмәгән һорау биреп, эште боҙа.

— Атай, ә һинең исемең нисек? Иршатмы?

— Әшрәфтең беләктәре ни эшләптер йомшарып китте, сикә тамырҙарына ҡан урғылды.

— Юҡ... Минең исемем Иршат түгел, сабыйым, Әшрәф.

— Әшрәф? — Малай һыҙырылып иҙәнгә төштө. Майорҙың орден-миҙалдары сылтырап алды. — Улайһа, һин минең атайым түгел. Минең атайымдың исеме... — малай стеналағы карточкаға төрттө, — Иршат. — Бер аҙ уйлап торғандан һуң, ул өҫтәне: — Иршат Усманович Ардыуанов.

— Улым, бар, уйна, — тине әсә, уның терпе сәсенән һыйпап.

Малай теләр-теләмәҫ кенә ишеккә йүнәлде. Ишек тотҡаһына үрелгәс, ул, артына боролоп, шундай һағышлы, шелтәле ҡараны, Әшрәфтең тәне сымыр-сымыр итеп китте. Әйтерһең, был ҡараш, «Их, һин, ниңә минең исемем, Иршат, тип әйтмәҫкә инде» тигәнде аңлата ине. Әшрәф барып Әлфиәнең беләктәренән тотто ла ашығып, янып һөйләргә тотондо.

— Әлфиә, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп, бер ҡасан да берберебеҙҙе йәберләмәбеҙ. Мин улыңа үҙ балама ҡараған кеүек ҡарармын. Һин мине беләһең бит, мин бала йәнле кеше...

— Беләм, Әшрәф... — Әлфиә уның ҡулдарынан беләктәрен алманы.

— Белгәс?

— Ҡапыл бер һүҙ ҙә әйтә алмайым, Әшрәф... — Зиһенем таралып китте.

— Ә мин ошо минутта уҡ яуап көтмәйем...

— Яҡшы. Иртәгә кисен... Һигеҙҙә паркка кил. Матросов һәйкәле янындағы эскәмйәлә һине көтөп ултырырмын. — Инде ҡаушауын еңергә тырышып, ғәмһеҙ генә өҫтәп ҡуйҙы: — Минең яратҡан урыным ул.

Әшрәф уны үҙенә тартты. Әлфиә ҡарышманы, әммә үптермәне.

— Ҡуй.

— Яҡшы. Иртәгә һигеҙҙә, — Әшрәф фуражкаһына үрелде.

— Сәй эсмәйһеңме ни? Былай бигерәк ҡоро була бит әле.

— Иртәгә сылатырбыҙ. Ресторанда, — тине ул честь биреп. — Китергә рөхсәт итегеҙ?

— Рөхсәт...

Ишек ябылырға өлгөрмәне, Әлфиә, карауатына йөҙ түбән ятып, күңеле бушағансы иланы. «Ниңә килдең, ниңә мине эҙләп килдең, Әшрәф? Тынысланып, йыуанып йәшәгән саҡта... Ниңә һүнгән утҡа май түктең? Ниңә бөтәшкән яраға тоҙ һиптең?»

Ҡапыл хистәр күкрәккә һыймай башланы: сәскәгә күмелгән муйыл ағасы күҙ алдына килеп баҫты, икәүләп кинокартина ҡараған сиркәүҙең ыҫмала еҫе танауға килеп бәрелде.

Ул Әшрәфтең һулышын тойҙо... Ә ниндәй үҙгәргән ул! Буйға үҫкән... Ә күкрәге... Бына хас Иршат.

Әшрәф уға тағы ла яҡыныраҡ тойола башланы.

Әлфиә Зөфәрҙе эйәртеп урамға сыҡты. «Ҡайҙа юл тотто һуң әле ул? Атай-әсәй менән кәңәшләшергәме?»

Әллә Гөлйыһан апай янына барырғамы?

Бер ҡараһаң, ғәжәп. Бына тигән йәш, матур ҡыҙҙар, «ҡарт ҡыҙҙар» исемлегенә кереп, ирһеҙ тороп ҡалды. Ә ҡарап тороуға ен төҫлө Гөлйыһан апай үҙенә пар тапты. Хәҙер бына тигән йәшәп яталар.

Әлфиә береһе менән дә кәңәшләшмәне. Ул ата-әсәһенең дә, Гөлйыһан апайҙың да нәмә әйтәсәген белә ине: «Үлгән артынан үлеп булмай. Бәхетең ҡош булып осоп килгән. Ҡыуан, ҡурҡытып, кире осороп ебәрмә. Үҙеңә иптәш, улыңа атай булыр. Әле һинең ғүмерең башлана ғына».

Башлана ғына... Юҡ, ул Будапешт янында, һалҡын Дунай буйында башланды инде. Сөнки кешенең ысын ғүмере тәүге мөхәббәт менән бергә башлана. Ә икенсе мөхәббәт бәхет, йән шатлығы килтерә аламы икән? Әшрәфте ул Иршатты яратҡан шикелле ярата алырмы?..

Әлфиә таң атҡанда ғына йоҡоға талды. Улы, үҙ карауатынан күсеп, уның ҡуйынына инеп сумғас, уянып китте. Зөфәр әсәһенең яланғас муйынынан ҡыҫып ҡосаҡланы, йылы битенән, маңлайынан супылдатып үпте. «Әсәй, атайағай тағы киләмс? Миңә шоколад алып киләме?» — тип төпсөндө.

Икеләнеү-шикләнеүҙәргә Зөфәр сик ҡуйҙы — бала аталы булырға тейеш. Ул Әшрәфте бала саҡтан уҡ белә. Әлфиә йәнә үҙенең бәхетен табасаҡ.

«Килер, килер», — тине ул улының шәрә йомшаҡ еренән һөйөп. Шунда уҡ тағы, тағы ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар башҡа килде. «Ә ниңә ул быға саҡлы Әлфиәгә бер ҙә яҙманы? Һирәк-мирәк булһа ла ул Суфия апайҙы осратҡылаﾠны бит. Суфия апай хат аҙағында булһа ла Әлфиә Камалова фронттан ҡайтҡан, тип яҙғандыр бит... Ул яҙмаһа ла, Әшрәф үҙе һорашҡас, һорауын яуапһыҙ ҡалдырмағандыр. Ярай, Әшрәфтең хат яҙмауы принциптән, ғәрләнеүҙән, асыуҙан, үпкәнән дә булһын, ти. Йылдар үткән, йөрәк яраһы бөтәшкән һәм хыянат өсөн балалыҡ дуҫын ғәфү иткән, ти. Ә һуң бергә тора башлағас ул асыуын, үпкәһен берәй килтереп сығарып, уның йәнен ҡыйратмаҫмы? И-ин Әлфиә, әгәр бөтәһен дә уйлай башлаһаң, бөтәһен дә бизмәнгә һа-

лып үлсәһәң, һин бер ҡасан да тормош иптәше таба алмаçһың. Гөлйыһан апай: «Ҡоҙалаусылар юҡмы?» — тип һорағас, ул: «Бар ҙа, шикләндерә», — тип яуаплай ине. Гөлйыһан апай, ирҙәрҙеке кеүек таҙа, көслө ҡулын уның яурынына ҡуйыр ҙа шаяртыр: «Ярҙан һыуға һикергәндә бер ҡасан да йылғаның тәрәнлеген, төбөн тикшереп тормайһың. Башың менән һыуға бултых! Йә шунда уҡ пробка шикелле ҡалҡып сығаһың, йә төптә ятып ҡалаһың. Ҡейәүгә сыҡҡанда ла шулай тәүәккәл булырға кәрәк, Әлфиә. Бишәр йыл дуç булып йөрөгәндәр ҙә биш ай ҙа тормай айырылышалар. Бына беҙ мәрхүм иптәшем менән кинола билет алғанда таныштыҡ, икенсе көндө яҙылыштыҡ. Ә ниндәй татыу, бәхетле йәшәнек беҙ. Ҡитаптарҙа яҙған шикелле». «Минең бит балам бар, Гөлйыһан апай», — тине ул бышылдап, уның менән бәхәсләшкәндәй. «Һин — әсә. Әсәләр үҙ балаларын ғына түгел, сит балаларҙы ла ҡаҡмаçҡа тейеш. Тәбиғәт беҙҙе әсә булыр өсөн яратҡан бит». «Әллә атай, әсәй менән дә кәңәшергәме?» Хәйер, ниндәй әсә ҡыҙын башлыкүҙле итергә теләмәһен инде. Ә атаһы: «Зөфәр ейәнем минең янымда үçер, борсолма», — тип әйтер. Әшрәфте маҡтар, ул бит уны элек тә: «Бына тәүфиҡле бала, исмаһам. Ҡыҙҙарҙан да былайыраҡ», — тип теленән төшөрмәй торғайны.

Татлы хырылдап йоҡлаусы улын уятмаç өсөн, Әлфиә ипләп кенә юрғанды аса, бер ҡулы менән карауат башына тотоноп, аяғын Зөфәр аша иҙәнгә терәй ҙә һикереп тора. Сәсен ике усы менән артҡа һыйпағас, трюмо ҡаршыһына килеп баçа. (Ҡуптән түгел арзанға ғына комиссионканан һатып алды.) Өçтән ике ебәк таçма менән эләктереп ҡуйылған теҙҙән юғары төнгө күлдәк. Ул кәүҙәнең бик аҙ урынын ғына ҡаплап тора... Ә тубыҡтары ниндәй матур, йомро, йомшаҡ. Ҡыҙҙарҙыҡы кеүек зифа кәүҙә, төнгө ялдан, йоҡонан һуң янырып, ҡыҙарып торған түңәрәк йөҙ, киң асыҡ маңлай, һоро күҙҙәр һәм, ҡуйы тешле тараҡ менән тарап, күпертелгәндәй ҡалын сәс... Сынаяҡтай аҡ муйын. Уң яңаҡта — шырпы башылай ҡара миң. Ҡояштың иң бейек, эçе сағы төшлөктә булған шикелле, Әлфиә лә ғүмеренең төшлөгөнә еткәйне. Ул, бәлки, быға саҡлы бер ҡасан да үҙенән шулай ҡәнәғәт булмағандыр. Дөрөçөн әйткәндә, уның ярым шәрә кейөнә ҙур көҙгөгә ҡарағаны ла юҡ ине. Тыуып үçкән өйҙә ундай көҙгө лә булманы. Хәйер, ул һуғышҡа саҡлы үҙен яратманы ла — ҡыҙ бала булып тыуыуына, себештәй бәләкәй булыуына йыш ҡына үкенеп илай торғайны. Армияла бер йыл эсендә өс-дүрт йыллыҡты үçте. Ҡуптәр уны тәүҙә танымай торҙо. «Етер. Йә үҙ-үҙеңә күҙ тейҙерерһең», — тине лә ул, көҙгөләге двойнигына йоҙроҡ күрһәтеп, артына боролдо. Төнгө күлдәген һалып, ултыр-

ғыс башына ырғытты. Түҙмәне, йәнә көҙгөгә йөҙө менән боролдо һәм, үҙенән-үҙе оялып, күҙҙәрен сытырлатып йомдо. Сәғәт етене һуҡты. Ул ашығып кейенә башланы. Зөфәрҙе балалар баҡсаһына илтергә лә, һигеҙ тулыуға, больницала булырға кәрәк. Ул хәрби сумкаһына (Иршат бүләге) төш ваҡытында ҡапҡылар өсөн май буялған ике телем икмәкте бергә йәбештереп, аҡ ҡағыҙға төрә, дәреслектәрен һала. Ауырыуҙар аҙыраҡ булған көндәрҙә ара-тирә дәреслеккә күҙ йүгертеп алырға мөмкин. Ул арала электр плиткаға ҡуйылған алюмин көрөшкәләге һыу ҡайнап сыға. Әлфиә таҡта сәйҙе ике бармағы менән мөйөшөнән һындырып ала, ыуып, эсе һыуға ташлай. Бығырлап ҡайнап торған һыу бер генә минутҡа тына ла шунда уҡ ҡабарып сыға. Шнурҙы тартып ала. Ялҡын төҫөнә ингән спираль сытыр-сытыр итеп аҡрынлап ҡарала һәм уралып ятҡан йылан төҫөнә инә. Көрөшкәгә бармаҡ башы саҡлы ике киҫәк шәкәр ташлана. Сәй шамаһы аҡрынлап төпкә бата. Өҫтә көрөшкә ситенә йәбешеп ҡалғанын Әлфиә, ҡалаҡ менән йыйып алып, тасҡа ташлай.

— Улым, ғәзизем, — ти ул, Зөфәрҙең сәсенән һыйпап. — Ҡикрикү-үк! Таң атты, ҡояш ҡалҡты, Зөфәргә балалар баҡсаһына барырға ваҡыт етте...

Сабый уяна. Ҡулдарын баш аҫтына ҡуйып, арҡаһына ята, күҙҙәрен сытырлатып йомоп, кирелә лә һикереп тора, теп-теүәл һигеҙенсе яртыла улар өйҙән сығалар. Әсә улын ҡулына алмаҡсы итә. Бала риза булмай, «үҙекәйем» ти ҙә алдан йүгерә. Эшкә ашығыусылар, йомро, теремек баланы, әле үҙе лә бала һымаҡ йәп-йәш әсәне күреп, «бәхетле бәндәләр» тип һоҡланып йылмаялар.

Бәхетле...

Ә ҡайҙа башлана ла ҡайҙа бөтә ул бәхет? Даръя шикелле, уның башы һәм аҙағы, ярҙары бармы әллә ул, һауа кеүек, күҙгә күренмәй, ауырлығы һәм тәме һиҙелмәй торған берәй нәмәме?

Бәхет... тамсылай кескәй генә һәм океандан икһеҙ-сикһеҙ нәмә.

Бәхет....Икс-игрек һымаҡ мәңге билдәһеҙ һәм ике икең дүрт булған шикелле ап-асыҡ нәмә...

Мөхәббәттең нимә икәнен аңлатып булмағандай, бәлки, бәхетте лә аңлатып булмайҙыр? Дөрөҫөрәге, һәр кем уны үҙенсә аңлай, үҙенсә ҡабул итәлер... Бына ошо минутта ул бәхетле. Ул ҡәнәғәт. Улының йомғаҡ кеүек тәгәрәп барыуына, үтеп китеүселәрҙең уларға ҡарап, шат йылмайыуына, иртәнге һауаның һулап бөтөргөһөҙ саф булыуына һәм... һәм... кисен бронза Матросов янында Әшрәф менән осрашыуына...

Әлфиә кисте көтөп ала алманы. Етмәһә, йыйылышта уны президиумға һайланылар, протокол яҙырға ҡуштылар. Былай булғас, ул йыйылыш бөткәнсе ултырасаҡ. Ә бит ул өйгә ҡайтып өҫ-башын алмаштырырға теләгәйне. Ниңәлер, Әшрәф янына уның хәрби кейемдә, орден-миҙалдарын тағып барғыһы килде.

Партбюро секретары уның ҡолаҡ төбөнә эйелеп: «Нимә энәлә ултырған шикелле ултыраһың? Әленән-әле сәғәткә күҙ һалаһың. Берәй ергә бараһың бармы ни? — тип шыбырланы. Әлфиәнең ҡолаҡтары утҡа әйләнде. «Юҡсы. Ҡайҙа ашығайым ти мин», — тип алдашты.

Ҡешенең тәнен генә түгел, йәнен дә яҡшы белеүсе тәжрибәле «хирург» — партбюро секретары йыйылышты түңәрәкләргә ашыҡты. Бер үк һүҙҙе һуҙып сәйнәүсе ораторҙарҙы ярты юлда туҡтатты: «Аңлашылды. Ҡабатлама. Тағы кемдең нимә әйтәһе килә? Башҡа һөйләүселәр юҡмы?

«Хирург» уны үҙенең трофейный «оппель»ендә өйөнә илтеп ҡуйҙы. Әлфиә, ике баҫҡысты бер итеп, өсөнсө ҡатҡа йүгереп менде. Тревога ваҡытындағы шикелле, эһ тигәнсе сисенде, һә тигәнсе кейенде: зәңгәр юбкаһын, йәшел гимнастеркаһын кейҙе, йондоҙло офицерҙар ҡайышы менән билен өҙөлөрҙәй итеп ҡыҫып быуҙы. Бейек үксәле хром итеген шинель боҫҡағы менән ялтыратты, еңе менән орден-миҙалдарын ышҡып алды. Устав ҡушҡанса, пилоткаһының йондоҙон ике ҡашы араһына тура килтереп, уң яҡҡа ҡырын кейҙе. Хәҙер ул балалы ҡатынға түгел, ун ете-ун һигеҙ йәшлек ҡыҙыҡайға оҡшап ҡалды. Урамда уға иғтибар итмәгән ирҙәр, боролоп-боролоп ҡарамаған ҡатындар булмағандыр. Ә бер йәш капитан тәү башлап уға үҙе честь бирҙе. Ә бер лейтенант юрый туҡтатып: «Һалдат, ниңә устав ҡушҡанса кейенмәнең?» — тип бәйләнгән булды. «Ә мин үҙ-үҙемә устав яҙҙым!» — тип Әлфиә шыҡылдатып честь бирҙе лә хәтәр генә китеп барҙы.

Әшрәф уны көтөп, Матросов һәйкәле тирәләй йөрөй ине. Ҡулында — янып торған өс ҡыҙыл тюльпан. Тюльпан — Әлфиәнең яратҡан сәскәһе. Ул белә-белгәндән бирле өйҙәре ҡаршыһындағы кескәй генә баҡсала яҙҙарын тюльпандар сәскә атты. «Рәхмәт, онотмаған», — тине ул, Әшрәфтең иғтибарлылығына һөйөнөп.

Әшрәф уға сәскәләрҙе һуҙҙы. Ултырҙылар. Әлфиә, бер аҙ ослайып торған матур танауын тюльпан таждары араһына ҡуйып, сәскәне еҫкәне. Әшрәф һүҙ башларға ҡурҡып ултырҙы.

— Һинең орден-миҙалдарың ике кешегә етерлек, Әлфиә... — тине ул, ҡыҙҙарҙыҡы шикелле ҡалҡыу, матур күкрәгенә күҙ ташлап.

— Ә хәҙер орден-миҙалға бик иғтибар итеүсе юҡ, Әшрәф. Байрамдарҙа таҡһаң да, һиңә мыҫҡыллы ҡараш ташлап китәләр. Әйтерһең, һин уларҙы ҡан ҡойоп алмағанһың, ә һабан туйында бейегәнгә биргәндәр...

— Бейегән өсөн алыу ҙа юйылып түгел.

— Орден-миҙалдар күбәйеп китте шул. Хәтерләйһеңме, Әшрәф, беҙ «Хасан һуғышынан» Ҡыҙыл Йондоҙ ордены тағып ҡайтҡан слесарь Яппаровты күрһәк, артынан ҡалмай тағылып йөрөй торғайныҡ.

— Мин хатта уның орденлы гимнастеркаһын кейеп карточкаға ла төшкәйнем. Тик ул карточканы кемдер сәлдерҙе, — тине Әшрәф, шат көлөп.

— Ә һин ниндәй фронттарҙа булдың, Әшрәф?

— Тәүҙә Ленинград фронтында. Унан Прибалтийскийҙа. Гитлерҙың муйынын һындырғас, «банзайҙар» менән яғалаштыҡ.

— Бер ҙә яраланманыңмы?

— Сыйылған ерем дә юҡ.

— Бәхетле кеше һин, Әшрәф...

— Яҙмышыма зарланғаным юҡ, — тине Әшрәф, ирәйә төшөп.

Әлфиәнең йөрәге-барометры нимәлер һиҙенде — Әшрәфтә элек күренмәгән яңы һыҙат — үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәтләнеү барлыҡҡа килгән төҫлө тойолдо. Ихтимал ул юрый, Әлфиәне сәмләндереү өсөн генә шулай ҡылана лыр...

— Тимәк... Яҙмышыңа зарланмайһың инде? — тип төпсөндө Әлфиә.

— Минеңсә, яҙмыштарынан тулыһынса, йөҙ проценты менән, ҡәнәғәт кешеләр юҡтыр. Ә бына һин үҙең нисек? — Ул, ҡулын Әлфиәнең усына ҡуйып, уға күңел күҙе менән ҡараны. Был ҡараштан уға рәхәт тә, ҡыйын да булды. Ул әйләнеп ҡайтмаҫҡа киткән бала саҡты, йәш үҫмер ваҡыттарҙы... һалҡынса сиркәүҙә кино ҡараған мәлдәрҙе, Ағиҙел яры башынан боҙ киткәнде ҡарап ултырыуҙарҙы иҫенә төшөрҙө. Ҡапыл уның янында Әшрәф түгел, Иршат ултырған кеүек тойолдо. Иршат... Шундай таҙа, айыу һымаҡ килбәтһеҙ, балалар кеүек, бер ҡатлы, ихлас, саф... Характерҙары, тышҡы ҡиәфәттәре менән аҙ ғына оҡшашлыҡтары булмаһа ла, Әлфиә Иршат менән Әшрәф араһында ниндәйҙер оҡшашлыҡ, уларҙың икеһенә генә хас булған яҡшы яҡты күрергә тырышты. Ә ниндәй яҡтар һуң ул? Ябайлыҡ һәм... бер ҡатлылыҡ. Ихласлыҡ һәм... эскерһеҙлек... Йәнә... йөрәк төптәренә йәшеренгән батырлыҡ, тыйнаҡ ҡыйыулыҡ — ирҙәргә иң кәрәкле һыҙаттар.

Әлфиә, Әшрәфтең һорауын яуапһыҙ ҡалдырғанын иҫенә төшөрөп, уға йылмайҙы.

— Яҙмышымдан ҡәнәғәтме? Үҙең бит, яҙмышынан тулыһынса ҡәнәғәт булған кеше юҡтыр, тиһең...

Әлфиә, Матросовтың нәфис, йәш йөҙөнә ҡарап, уйға сумды. Гранит пьедесталдә, әйтерһең, Саша Матросов түгел, ә ИршатАрдыуанов баҫып тора ине.

— Әшрәф, әйҙә анауы зонтик тотҡан балалар янына барып ултырабыҙ, — тине ул күршеһенең еңенән тотоп.

Улар зонтик тотоп, ялан аяҡ һыуҙа быстырлаусы балалар — фонтан янына барып ултырҙылар. Әлфиәнең шунда уҡ кәйефе күтәрелде.

— Әшрәф, һиңә ул балаларҙың ҡайһыһы оҡшай? Миңә ҡыҙ бала оҡшай.

Был бик ҡулайлы ине. Әшрәф уға боролоп ултырҙы.

— Миңә лә ҡыҙ бала нығыраҡ оҡшай, — тине ул, Әлфиәнең күҙҙәренә тултырып ҡарап, уның ҡулдарына устарын ҡуйып. — Әлфиә... Атай-әсәйемдең иҫтәлеге менән ант итәм, бер ҡасан да мин һинең үткәнеңде хәтереңә төшөрмәм.

Әлфиә ҡулдарын уның устарынан һурып алды.

— Ә минең үткәнем хурланырлыҡ түгел. Мин уны яраттым...

— Ышанам. Ләкин үлгән артынан үлеп булмай. Ә тереләргә йәшәргә кәрәк. Тигеҙ, бәхетле йәшәргә кәрәк... Беҙ бит шул бәхет өсөн дүрт йыл буйы ҡан ҡойҙоҡ.

— Эйе... шул бәхет өсөн...

— Мин хеҙмәт иткән ҡалала мединститут бар. Ҡискегә түгел, көндөҙгө бүлеккә инерһең. Зөфәр менән көн һайын беҙ һине ҡаршы алырға килербеҙ. Һин диплом алғас, мин уҡый башлармын. Генерал булмайынса мин тынысланмаясаҡмын.

— Генерал?.. Ә үҙең күперҙәр һалырға хыялланғайның.

— Күперҙәрҙе емереүсе көстәр барында, һалдаттар ҙа, генералдар ҙа кәрәк буласаҡ әле, Әлфиә...

Бына-бына иң һуңғы, иң ныҡ шикләнеү-икеләнеү ебе өҙөлөр ҙә Әлфиә «риҙамын» тип әйтер. Түҙ, түҙ, Әшрәф. Өгөтләмә. Башҡа бер һүҙ ҙә әйтмә.

— Ә һин бер нәмәнән шикләнмә, Әлфиә. Беҙ йәшәйәсәк ерҙә бер кем, бер йән эйәһе Зөфәрҙең үгәй бала икәнлеген белмәйәсәк. Мин уны, бында уҡ үҙемдең фамилиямды биреп, улым итермен.

Эһ, боҙҙоң шул эште, Әшрәф. Ут шәберәк яныһын өсөн май һибәләр, әммә, һаҡ булмаһаң, ул битеңә, күҙеңә лә сәсрәй... Әлфиәлә бер генә шикләнеү ебе ҡалғайны. Ул да өҙөләм-өҙөләм тип тора ине...

— Эйе, эйе... — тип уның һүҙен ҡеүәтләне Әлфиә, ә үҙе башҡа нәмә хаҡында уйланы. Уның янында һәр ҡыланы-

шы, һәр күҙәнәге таныш һәм ҡайһылыр ере үҙгәргән Әшрәф ултыра ине. Ни нәмәһе үҙгәргән һуң заманында көнөтөнө «мастерскойында» соҡсонған иптәш, тыйнаҡ Әшрәфтең? Таҙарған, сибәрләнгән һәм... һәм тәкәбберләнә төшкән һымаҡ. Эйе, эйе, унда үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәтләнеү, башҡаларға өҫтәнерәк ҡарау һиҙелә. Бәлки, һиҙелмәйҙер, Әлфиәгә шулай тойолғандыр ғына. Сөнки ул бит хәҙер Әшрәфкә элекке Әлфиә күҙе менән ҡарамай, ә... ә уның һәр хәрәкәтен, ҡыланышын Ардыуанов менән сағыштырып күҙәтә. Ә кеше, сағыштырыу менән шөғөлләнгәндә, үҙе лә һиҙмәҫтән, ғәҙәттә, бер яҡты күтәрә, икенсе яҡты кәмһетә төшә. Ихтимал, әле лә шулай булғандыр. Ихтимал, бәхетле яҙмыш (карьера, тип әйтһәң дә хата булмаҫ) Әшрәфтең характерына күләгә төшөргәндер. Дан һәм маҡтауҙар иң баҫалҡы, тотанаҡлы кешеләрҙә лә революция булмаһа ла, эволюция яһай бит.

Әшрәф йәнә Әлфиәнең уға сикһеҙ таныш, яҡын усын үҙ устарына алды. «Их, ҡайҙа уларҙың бейек көмбәҙле сиркәүҙә кинокартина ҡарап ултырған саҡтары!» Ул йылдарҙы кире әйләндереп ҡайтарыр өсөн, һуғышта алған бөтә наградаларын, званиеһын ыһ та итмәй бирер ине Әшрәф...

— Мин һиңә ирең генә түгел, теге мәктәп йылдарындағы кеүек, иң яҡын дуҫың, ә улыңа... Зөфәргә атай булырмын, — тип ҡабатлай ул, сәсәп, янып.

«Дуҫ... Атай...» Әлфиәгә башҡа тағы нимә кәрәк? Ярты донъя ҡулыңда булһын, даһи кеше бул, әгәр һинең иң яҡын кешең, тормош иптәшең булмаһа, яңғыҙ йәшәһәң, үҙеңде «мин бәхетле» тип әйтә алаһыңмы? Боронғо философ (Сафуан ағаһының «хазинаһынан») «Яңғыҙлыҡ йә гениҙар, йә ахмаҡтар тыуҙыра» тигән. Ул да тора-бара йүләрләнмәҫме? Юҡ, Әлфиә яңғыҙ йәшәргә теләмәй. Яңғыҙлыҡ — уның иң әшәке дошманы. Яңғыҙлыҡ — ҡот оҫҡос бәхетһеҙлек. Ул әле комсомол йәшенән дә сыҡмаған...

Бер-ике минут үтәсәк, һәм, Әлфиә, бөтә шикләнеүҙәрҙән, икеләнеүҙәрҙән арынып, «риза...» тип әйтәсәк.

Риза... Күңелдә ҡояш сығасаҡ, ҡапыл донъяһы балҡып китәсәк. Шунан улар тороп, етәкләшеп Әлфиәнең ата-әсәһе янына йүнәләсәктәр, ә иртәгә никахлашасаҡтар...

Их, яҙмаған икән! Әшрәфкә телен тешләргә, ауыҙына һыу ҡабырға, ярһыған йөрәгенең тибешен тыңлап, яуап һүҙе генә көтөп ултырырға кәрәк ине. Юҡ, түҙә алманы. Дөрөҫ әйтмәнем. Ул, баяғы һүҙҙәрем Әлфиәгә тәьҫир итә алманы, Әлфиәне күндерә алманым, тип уйланы. Шуға күрә иң һуңғы дәлилен әйтергә булды. Их Әшрәф, янында булған булһам, ҡулыңдан тотор инем, аңламаһаң, ауыҙыңды

ҡаплап, һуңғы һүҙҙәренде әйттермәҫ инем. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы; мин янында түгел инем шул.

— Ихтимал, һин минең ихласлығыма ышанмайһыңдыр, Әлфиә?

— Ышанам, Әшрәф... һин бер ҡасан да алдаша белмәнең, — Әлфиәнең, башын дуҫының күкрәгенә ҡуйып, ғәфү үтенеп, күңеле бушағансы илағыһы килде.

— Ышанғас, ниңә яуап бирмәйһең, Әлфиә? — тип ныҡышты Әшрәф, инде уның түҙемлеге бөтә башланы.

— Ҡапыл... көтмәгәндә...

— Беҙ бит бөгөн генә танышҡан кешеләр түгел. Беҙ...

— Эйе, беҙ тыуғандан алып бер-беребеҙҙе беләбеҙ.

Әшрәф аңланы: Әлфиәнең йөрәген ниндәйҙер ҡорт кимерә. Йөрәген кимереп бөтөргәнсе, ашығырға, ҡортто алып ташлап, һытырға кәрәк.

— Беләһеңме, Әлфиә, беҙ йәшәгән ерҙә бер кем, бер йән эйәһе Зөфәрҙең минең улым түгеллеген белмәйәсәк. Мин уға үҙемдең фамилияны ғына түгел, исемемде лә бирәсәкмен. Ул минең улым буласаҡ. Үлгәнсе беҙ уға был серҙе сисмәбеҙ, — Әшрәф, Әлфиәнең күҙҙәренә бирелеп, гәҙел ҡараны — инде был һүҙҙәрҙән һуң да шикләнһә?..

Әлфиә ҡапыл ҡулын Әшрәфтең устарынан тартып алды. Торҙо.

— Юҡ, Әшрәф, мин улымды атаһынан мәхрүм итә алмайым. Иршат минең беренсе һәм һуңғы мөхәббәтем, — Әлфиәнең тауышы тәүәккәл, хатта ҡырҡа ине. — Үпкәләмә, Әшрәф, йөрәгемә бойора алмайым, ул һалдат түгел... — Һуңғы һүҙҙәрҙе Әлфиә ғәфү үтенгәндәй әйтте.

Әшрәф тә торҙо. Уның күҙҙәрендә һалҡынлыҡ ине. Тауышы ҡалтырапып сыҡты.

— Үлектәргә тоғро булыуҙың кемгә кәрәге бар? Үлектәр ғәфү итәләр.

Әлфиә, һағышланып, уның һүҙҙәрен ҡабатланы.

— Эйе, үлектәр ғәфү итәләр, ә тереләр?.. Юҡ, Әшрәф, ҡулым, аяғым тартһа ла, күңелем тартмай... Һинең ҡуйынында ятырмын, ә уны күҙ алдына килтерермен. Һинең йөрәгең тибер, ә мин уның йөрәк тибешен һанармын. Ғүмер буйы һин дә, мин дә ғазапланырбыҙ... — Әлфиәнең күҙҙәренән йәштәр атылып сыҡты. Ул уларҙы һөртмәне. — Әйҙә, элеккесә дуҫтар булып ҡалайыҡ. Ғүмергә. Һин — уҡыусы малай Әшрәф, ә мин — пионер Әлфиә... Шулай һиңә лә, миңә лә һәйбәт булыр, Әшрәф. — Әлфиә Әшрәфтең ҡулына ҡулын ҡуйҙы, иләп кенә ҡыҫты. — Оҙо-оп, бәхетле ғүмер һиңә, Әшрәф. — Ул ваҡ-ваҡ баҫып китеп барҙы, ләкин шунда уҡ уны Әшрәф туҡтатты.

— Әлфиә! Тотҡан ерҙән өҙмә! Балаң атаһыҙ үҫә, ә малайҙар, көнбағыш кеүек, атаға тартыла.

— Үҙ атаһынан баш тартҡансы, атаһыҙ үҫеүе хәйерлерәк, Әшрәф.

— Яҡшы, яҡшы, — Әшрәф ашыҡты, Әшрәф был уларҙың һуңғы осрашыуы, һуңғы сәғәте булыр тип ҡурҡты. — Бөтәһе лә һин теләгәнсә булһын. Әйҙә, Зөфәр атаһының фамилияһын йөрөтһөн. Барыбер ул үҙ улым һымаҡ яҡын буласаҡ.

— Рәхмәт... миңә күрһәткән яҡшылыҡтарың... Миңә уҡытҡан университетың өсөн... Саф йөрәгең өсөн рәхмәт һиңә, Әшрәф. Һуғышта ла гел мин һине иҫемә төшөрҙөм... Һин өйрәткән һабаҡ йыш ҡына мине үлемдән ҡотҡарып алып ҡалды, — Әлфиә йәштәрен бала саҡтағы ғәҙәте буйынса йоҙроҡтары менән һөртөп төшөрҙө. Һағышлы йылмайҙы, уттай янып торған тюльпандарҙы Матросов һәйкәле төбөнә һалды ла, артына боролоп та ҡарамай, ашығып арка ҡапҡаға табан йүнәлде.

Әшрәф уны күҙҙәре менән оҙатып ҡалды.

Әлфиә, арка ҡапҡа янына яҡынлашҡас, боролдо. Юҡ, ул Әшрәф уны ҡыуып етер, туҡтатыр тип өмөтләнмәне. Уға бронза Матросов постаментынан төшөп, уны ҡыуып килгән һымаҡ тойолдо. Ләкин... үлектәр беҙҙе ҡыуып етә алмайҙар...

## МЕҢӘР ЙЫЛ ЙӘШӘЙ КЕДР

Шулай итеп, мин Әлфиә Камалованың «ғәмәл дәфтәренең» һуңғы битен ябам. Юҡ, мин хаҡлы түгел. Дәфтәр әле яҙыла, ихтимал, бик оҙаҡ яҙылыр, әммә мин алдан уның бер битен түгел, бер юлын да башымдан уйлап сығарып яҙа алмайым. Теләһәм дә, ҡулымдан килмәйәсәк. Әлфиә кеүек кешеләрҙең йөрәгендә Прометей уты яна. Ә ундай утты бер кем дә, хатта алла ла һүндерә алмай. Ундай кеше үлгәс кенә һүнә. Юҡ, үлгәс тә һүнмәй, бик оҙаҡ янып, маяҡ булып балҡып, башҡаларға юл күрһәтеп тора.

Яҙмыш... Яҙмыш кешегә хужамы әллә кеше үҙ яҙмышын үҙе яҙамы?

Бөйөк афәт килгәндә, һинең Ереңә, һинең Илеңә ҡот осҡос бәлә ишелеп төшкәндә, халыҡтар яҙмышын Марс тигән алла ҡулына ала. Ҡаты, миһырбанһыҙ һуғыш аллаһы. Хәйер... алланың уйын белмәҫһең. Ҡайһы сағында шулай ҙа була — арғымаҡҡа атланған шикелле, яҙмышындың һыртына менеп ултырып, теҙгенде урап тотҡанһың, ә яҙмышың — аҡбуҙатың һикерә, ырғый, тибешә, һәм һин,

эйәрҙән мәтәлләп барып төшөп, аяғыңды йәки ҡабырғаңды һындырғаныңды һиҙмәй ҙә ҡалаһың.

Ә шулай ҙа булғылай. Янындан сабып үтеп барған аттың ялынан эләктереп алып, һикереп атланаһың да... әйҙә!

Юҡ, мин яҙмыштың һуҡыр ҡоло түгел. Донъяла бөтәһе лә буталған, сыуалған, тик һин, түҙемлегең, отҡорлоғоң етеп, ул ептең осон тап та, аҙашмай, юлдан яҙмай, алға бар, юғарыға үрлә... Дөрөҫөн әйткәндә, минең күпме осрашып, бер ҡасан да «БӘХЕТЛЕМЕ ҺИН, ӘЛФИӘ?» тип һорашҡаным юҡ.

Ысынлап та, бәхетлеме һин, Әлфиә? Яһаған хаталарың, яңылыш аҙымдарың, ныҡлап уйламай эшләгән эштәрең өсөн үкенеп әрнемәйһеңме? Бәлки, һин уларҙы хатаға иҫәпләмәйһеңдер? Был донъяла бөтәһе лә сағыштырмаса бит...

* *
*

Ғәмһеҙ Айҙың һалҡын нурҙары һәм уйынсаҡ йондоҙ саткылары менән тулған кис. Йылыраҡ кейенмәһәң, инде өшөтә. Төньяҡ-көнбайыштан һалҡынса ел иҫә — көҙ яҡынлашыуҙың ғәләмәте.

Оҙаҡламай күктә торналар тубы күренәсәк һәм уларҙың йөрәкте семеттерә торған «торройоҡ-торройоҡ...» тигән моңло тауышы ишетеләсәк. Йәше-ҡарты, башын ҡайырып, күккә ҡараясаҡ һәм: «Яҙға саҡлы хушығыҙ, торналар! Яҙын тыуып үҫкән шарлыҡлы күлдәрегеҙгә ураи ҡайтығыҙ...» — тип ҡул болғаясаҡ.

Оҙаҡламай ағастарҙан алтынға манылған, йәшәү дәртен юғалтҡан йәнһеҙ япраҡтар ҡойола башлар. Ужымдар һалҡындан бөрөшөр. Йылғаның яр ситтәрендә селтәрле боҙҙар хасил булыр. Тәбиғәттәге бөтә йән эйәһе: ҡоштар, йәнлектәр, бөжәктәр, ағастар, үҫемлектәр оҙон, ҡаты ҡышҡа әҙерләнер. Тик шыршылар, ҡарағайҙар һәм кедрҙар ғына, бер нәмә булмаған һымаҡ, йәм-йәшел тундарын кейгән килеш, хуш еҫ сәсеп торор.

Ҡедр ағасы төбөндә сикә сәстәренә көҙгө ҡырау төшкән кескәй генә нәфис ҡатын һәм ҡайһы ере менәндер уға оҡшаған, әммә баһадир кәүҙәле йәш ир ултыра. Ҡатын кеше — профессор Әлфиә Ҡамалова, ә йәш ир — инженер Ҡамалов-Ардыуанов Зөфәр. Уның улы.

Улар янына орсоҡ кеүек йылғыр, теремек малай йүгереп килә лә, өләсәһен ҡосаҡлап, көтөлмәгән һорау бирә.

— Өләсәй, дөрөҫмө, кедрҙар мил-лион йыл йәшәй, ти?

Өләсәһе ҡаушап, телһеҙ ҡала. Өләсәһе өсөн малайҙың атаһы яуап бирә.

— Миллион йыл йәшәүен йәшәмәй, әммә меңәр йыл йәшәй.

Әлфиә ауыҙ эсенән генә ҡабатлай: «Ә мөхәббәт кедрҙан да оҙағыраҡ йәшәй...»

Улар янындағы кедр ағасын Алыҫ Көнсығыштан майор (ә хәҙер генерал-майор) Әшрәф ебәргәйне. Башҡортостан ере ят ағасты ситләмәне, тамыр йәйеп үҫте лә китте. Хәҙер ир-егет булып килә инде ул. Хәйер, унда бер генә ус булһа ла Иршат Ардыуанов ҡаны ҡойолған изге ерҙән алып ҡайтып һибелгән тупраҡ та бар бит...

*1969—1975*

### *Ибраһим Абдуллин ижады хаҡында ҡәләмдәше*

*Башҡорт әҙәбиәтенең күренекле вәкиле Ибраһим Абдуллин — драматург булараҡ та, проза әҫәрҙәре менән дә берҙәй танылған яҙыусы. Ул күп һәм емешле яҙа. Әҫәрҙәре проблемалы, уҡымлы, тормошсан, идея-йөкмәтке байлығы, форма төрлөлөгө менән айырылып тора.*

*...И. Абдуллиндың ҙур күләмле, күп жанрлы, тос йөкмәткеле ижады мауыҡтырғыс булыуы менән дә айырылып тора. Әҙиптең хикәйә һәм повестары, романдары тәрән драматик йөкмәткеле, үткер һәм тос деталдәргә бай. Шуға күрә уның проза әҫәрҙәренең күбеһе үҙҙәренең тормош материалының композицион ойошторолошо, сюжет ҡоролошо менән драматик әҫәргә яҡын. Романмы ул повесмы, хикәйәме йәки нәҫерме — мауыҡтырғыс сюжетлы, тормошсан реалистик йөкмәткеле. Яҙыусының үҙ темаһы, тимәк, үҙенең әйтер һүҙе бар. Шуға ла уҡыусы И. Абдуллин әҫәрҙәрен яратып уҡый, күтәп ала.*

**Әнүр Вахитов,** прозаик, филология фәндәре кандидаты



# Ҡош Юлынан барам

Роман

*Ирҙәр китә яуға еңергә,*
*Үлгәндә лә еңеп үлергә.*
*Алһыу таңдар булып атырға,*
*Моңһоу йырҙар булып кайтырға...*

## ФӘТИХОВТЫҢ РУХЫ МЕНӘН ҺӨЙЛӘШЕҮ

*Әгәр капитан Фәтиховтың рухын саҡырып килтереп һөйләшергә ҡөҙрәтем булһа, мин уға шундай һүҙҙәр әйтер инем:*

*— Ҡыҙғаныска ҡаршы, миңә һине күрергә, күҙгә-күҙ ҡарашып серләшергә тура килмәне. Әммә мин күп тапҡырҙар һинең балалыҡ, йәшлек һуҡмаҡтарыңдан үттем. Һин һулаған һауаны һуланым. Таштарҙан таштарға һикереп ағыусы Өрьяҙы йылғаһының моңон тыңланым. Киевта һин йөрөгән урамдарҙан үттем. Һин һуңғы тапҡыр асып япҡан ишек тотҡаһына ҡулымды ҡуйып, һинең йөрәк йылыһын тойорға тырыштым...*

*Бына ун ике йыл инде мин һин булып һөйләшәм, уйлайым, ҡайғырам, шатланам, янам-көйәм, һөйәм, көрәшәм һәм... һин булып үләм...*

*Һәм беҙҙең арала шундай әңгәмә-диалог булыр ине.*

*— Фәтихов, уян мәңгелек йоҡоңдан, һөйлә үҙең һәм ҡоралдаштарың хаҡында.*

*— Мин уяна алмайым инде хәҙер. Мин һүнгән йондоҙ менән бер — яҡтым килһә лә, йылым юҡ.*

*— Юҡ, һин һүнгән йондоҙ түгел, Фәтихов, һин мәңге яныусы йондоҙ.*

*— Ундай йондоҙҙар булмай. Улар ҡасан булһа ла бер атылалар, һүнәләр һәм үләләр.*

*— Ә бына кеше... Әгәр ул халыҡ йөрәгендә шырпы уты саҡлы ғына яҡтылыҡ ҡалдырһа ла, бер ҡасан да үлмәй.*

*— Мин бит ундай яҡтылыҡ ҡалдыра алманым. Минең эшләгән эштәрем тураһында күптәр бер нәмә лә белмәй. Һәр аҙымымды, һәр эшемде шаҡмаҡлы дәфтәргә теркәп барғайным, һуғыштан һуң бөтәһен дә ентекләп һөйләп бирермен йә кескәй генә булһа ла китап яҙырмын, тип хыялланғайным...*

*— Ә ҡайҙа һуң ул дәфтәр?*

*— Уның ҡайҙалығын минән башҡа берәү ҙә белмәй. Ә мин, ҡәберемдән тороп, уны һиңә күрһәтә алмайым — ишектәр теге яҡтан был яҡҡа асылмай... Шулай булғас, минең эштәрем, минең ғазаптарым, минең ғүмерем онотоласаҡ...*

*— Юҡ, Фәтихов, яҡшылыҡ, батырлыҡ ерҙә ятып ҡалмай, ул, ташты тишеп сыҡҡан сәскә кеүек, иртәме-һуңмы, барыбер, бер ҡалҡып сыға.*

*— Үҙем өсөн түгел, хәҙер миңә барыбер, ҡыҙым, туғандарым, ауылдаштарым өсөн... Киләсәк быуындар өсөн кәрәк ул... Халыҡтың именлеге, дәүләттең бөтөнлөгө өсөн...*

*— Фәтихов, рөхсәт ит миңә һинең хыялыңды тормошҡа ашырырға.*

*Фәтихов яуап бирмәне.*

*Беренсе бүлек*

## БЕРЕНСЕ НОВЕЛЛА

Унын күптән инде шулай ҡаты йоҡлағаны юҡ ине. Тимер ишектең ҡолаҡ ярыһын ярырлыҡ итеп йәмһеҙ шығырлауын да, «Фәтихофф! Виходи!» тигән шомло команданы ла ул ишетмәне, күҙгә төшкән ут яҡтыһынан ғына уянып китте. Тәүге секундта ул үҙенең ҡайҙа ятҡанын аңлап етмәне, команданың мәғәнәһенә лә төшөнмәне, әле генә күргән төшөн хәтерләп, йылмайып ҡуйҙы. Ә команда ҡабатланды.

— Фатихофф! Виходи! Шнеллер!

Фәтихов, иҙелгән тәненең ҡот осҡос һыҙлауын, тамағының ут кеүек яныуын һиҙҙермәҫкә тырышып, мөмкин саҡлы еңелерәк ҡыймылдап торҙо. Тирә-яғына ҡаранды — башҡа тотҡондар ҙа тороп ултырғайны. Фәтихов уларҙың һәр береһенең ҡулын ҡыҫып, бәхилләшеп сыҡты, кисә стенаға тырнағы менән сыйып яһаған йондоҙҙо һыйпаны ла ишеккә йүнәлде. Тотҡондар аяҡ үрә баҫты. Фәтихов уларға боролоп ҡараны. Унын йәһәннәм ғазабын кисергән йөҙөндә йылмайыу балҡып китте. Тотҡондар йоҙроҡҡа төйнәлгән ҡулдарын күкрәктәренә терәнеләр: «Маладис, капитан! Йәшәй белгән шикелле, үлә лә беләһең икән...»

Бына хәҙер һалҡын тимер ишек ҡолаҡ ярыһын ярырлыҡ шығырлап ябыласаҡ һәм...

Фәтихов! Тороп тор. Ул ишек тупһаһын атлап сығырға ашыҡма, әле генә күргән төшөңдө хәтерлә...

### Яңы һауған һөт

Йәйен ауылда көтөү ҡайтҡан ваҡыттан да күңеллерәк, шаулырак, ығы-зығылырак тағы ниндәй күренеш бар икән?..

Бына бер саҡ баҫыу ҡапҡаһының артында туҙан болото күтәрелә; көтөүсенең сыбыртҡыһы шарт-шорт итә... Хужабикәләр ҡабалана-ашыға ҡулдарын, биҙрәләрен йыуырға тотона. Һыйырҙар, хужабикәләренә, имеүсе быҙауҙарына хәбәр һалып, тәҡәтһеҙләнеп мөңрәйҙәр — улар, һөт менән

тулған ауыр елендәрен бушатып, еңеләйтергә ашығалар. Ә һарыҡтар, бер нәмәгә иғтибар итмәй, баштарын һалып яй ғына атлай бирә. Ҡәзәләр иһә... кәзәлектәрен итәләр — өтөп алыусы сыбыртҡы осон да һанға һуҡмай, тамаҡтары туҡ, ҡорһаҡтары ике яҡтан бүлтәйеп сығыуға ҡарамаҫтан, көтөүҙән айырылып ҡалырға, юл буйындағы үләнде керт-керт өҙөп, деғәнәк йәбешеп уҡмашҡан һәм боронғо фирғәүендәр һаҡалына оҡшаған һаҡалдарын һелкетә-һелкетә сәйнәйҙәр.

Ә көтөүсе ашыға. Бәй, ниңә ашыҡмаһын ти, уны бөгөн генә һуйған һарыҡ ите һалып бешерелгән ҡуйы туҡмас ашы көтә бит. Әгәр хужалар йомартыраҡ булһа, аштан һуң бәлеш тә киләсәк, ҡыҙыл эремсек менән сәй ҙә эселәсәк. Ҡайһы бер «артыҡ йомарттар» мунса ла яғып ебәрә. Һәм улар дөрөҫ тә эшләй — ни саҡлы һый-хөрмәтең мулыраҡ булһа, малың көтөүҙән шул саҡлы туғыраҡ ҡайта, һыйырыңдың һөтө күберәк, хатта тәмлерәк тә була. Эйе, эйе, күберәк тә, тәмлерәк тә, сөнки көтөүселәр ҡыҫыр аш ашатып сығарған һаран хужаларҙан үс ала беләләр: уларҙың һыйырҙарын әремле, үлән йоҡа ерҙә йөрөтөргә тырышалар, «туплау» ваҡытында ла бахыр һыйырға хәл йыйырға ирек бирмәйҙәр, сыбыртҡы осо әленән-әле уларҙың ҡабырғаһын һанап ҡына тора. Аҙағын аңлатып тораһы юҡ — һыйырҙың тамағы туймай, ә һөтө тәмһеҙ, әремле була. Ғәҙәттә көтөүсе былай эшләй — бөгөн ашарға инәһе кешенең ҡапҡаһы төбөнә етәрәк уның һыйырын көтөүҙән айырып ала, арттараҡ ҡалдыра, шат һөйләнә-һөйләнә ҡапҡанан үҙе менән бергә алып керә: «Эй, еңгә (йәки килен, йәки апай), бөгөн һыйырыңа мас килде, гел клевер ғына ашаттым. Һөтө ике биҙрә булыр инде...»

Бына көтөү ауылға килеп керә. Ауыл башына уҡ сығып торған бала-саға, сәскә күргән бал ҡорттары шикелле, һыйырҙарына ташланалар, бармаҡтарын тырма итеп, ябаға тарарға тотоналар. Күп һыйырҙар быға иғтибар ҙа итмәй, бәкәлдәрен шарт-шорт килтереп йүгерә-атлап бара бирә, ә усалыраҡтары баштарын бороп, күҙҙәрен алартып: «Әй, малай, ҡыҙыҡай, иҫән-имен сағыңда юғал, юҡһа мөгөҙөмә элеп, күккә сөйөрмөн», — тип асыуланып та ҡарай. Ә ауыл балаһы һыйыр мөгөҙөнән шөрләйме ни ул — бер һыйырҙан икенсеһенә күсә, нәҙбегерәктәре гел бер төҫлө һыйыр ябағаһын тарай (туп ала-ҡола булмаһын!), егәрлерәк ҡыҙҙар бер үк ваҡытта ябаға ла тарай, устарына төкөрә-төкөрә туп та әүәләй... Ә кисен, ырҙын артында һыйыр һаҡлағанда, улар был туптар менән арып хәлдән тайғансы уйнаясаҡтар, шаярасаҡтар, йоҡларға ятҡанда, бәләкәй ҡустылары йәки һеңлеләре сәлдермәһен өсөн тупты мендәр

аҫтына йәшерәсәктәр һәм, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, йоҡо аралаш эленән-әле ҡулдарын мендәр аҫтына тығып, тупты ҡапшап ҡараясаҡтар.

Бына мал ишек алдына инеп бөтә. Хужабикәләр биҙрәләрен күңелле итеп сылтырата-сылтырата һыйыр һауырға сығалар. Әсәләре артынан туҫтаҡ тотоп бала-саға йүгерә, һыйыр, хужабикәне күргәс, шатланып мөңрәп ҡуя. Хужабикә бисмилла әйтеп, сүгәләп ултыра, ҡулбашындағы еүеш таҫтамал менән уның имсәктәрен һөртөп ала: «Малҡайым, һәүкәйем...» — тип һөйләнә-һөйләнә, устары менән еленен ыуа, унан имсәктәрҙе услап тотоп, яй ғына тартҡылай башлай — шул секундта уҡ беҙ-беҙҙ итеп биҙрәгә йылы, аҡ ямғыр яуырға тотона, танауға яңы һауған һөттөң татлы еҫе килеп бәрелә. Әгәр ошо минуттарҙа ауылдағы башҡа шау-шыуҙарҙы туҡтатырға мөмкин булһа, йөҙәрләгән биҙрәләргә яуған һөт ямғырының ғына ғәжәйеп симфонияһы яңғырап торор ине.

...Һыйыр һауыусы йәш, һылыу Нәсимә, әле бер, әле икенсе аяғына баҫып, тәҡәтһеҙләнеп торған биш-алты йәшлек малайға табан боролоп, уның туҫтағына үрелә.

— Ҡана, Нур улым, ауыҙ һыуыңды йотоп, мөлдөрәп торма.

Бала әсәһенә яҡынырaҡ килә, туҫтағын һуҙа, буш ҡулы менән һыйырҙың йылы ҡорһағынан һөйөп ала: «Теүәкәәәй...» Һыйыр баланың йомшаҡ ҡулын тойоп, башын бороп ҡарай, рәхмәт әйткәндәй, ҡолаҡтарын һелкетеп ала.

Малай күбекләнеп торған һөт менән тулған туҫтаҡты ике ҡуллап тота, ауыҙына килтерә, тын да алмай эсеп бөтөрөргә уҡтала, әммә кире уйлай, ҡапҡаға йүнәлә. Ҡапҡа төбөндә туҡталғас, танауҙы ҡытыҡлаусы йылы һөттө бер генә йоторға итә, әммә йәнә нәфсеһенә хужа була, тыйыла, бер ҡулын ала, аяҡ остарына баҫып, бәләкәй ҡапҡаның келәһен күтәргәндә, ибәтәйһеҙ хәрәкәтләнеп, туҫтағын ҡыйышайта, йылы һөт ҡулды йыуып ергә түгелә. Ҡапҡа төбөнә һалынған йәлпәк таш буйлап һөт урамға ағып сығып китә, кескәй шишмәнең ярҙарында аҡ күбектәр генә тороп ҡала.

Нур ни эшләргә белмәй — ҡапыл боғаҙға төйөр килеп тығыла, ергә ятып һөттө яларҙай була.

— Әсәй... — ти ул, һыйыр һауып ултырыусы әсәһе янына килеп, илар-иламаҫ тауыш менән. — Мин... Мин... ҡапҡапҡа асайым тигәндә, һөтөмдө түктем....

Әсә эшенән айырылмай ғына ҡарай.

— Ә ниңә уны урамға алып сығып эсергә ине инде һинә, улыҡайым?..

— Мин... Мин уны... Илисәгә эсермәксе булғайным... ул... уның эсе ауырта...

Әсә күңеле — фәрештә күңеле. Бер туҫтаҡ айыртылмаған һөт биш балалы ғаилә өсөн аҙ нәмә түгел, әсә һөттөң тамсыһын да әрәм итмәй, сепаратта айыртып, аҙна буйы ҡаймаҡ йыя ла, баҙар иртәгә тигән көндө көбөлә май яҙып, мөгәрәпкә төшөрөп ҡуя. Шуға күрә Нәсимә, балалары ауыҙынан өҙөп, ҡаймаҡ йыйырға тырыша, ҡатыҡ та шыйыҡ һөттән генә ойотола.

Әсә, ихтимал, башҡа ваҡытта булһа Нурҙы: «Ебегән, фәлән-фәсмәтән», — тип тиргәп тә ташлаған булыр ине, әммә улының шундай шәфҡәтле, миһырбанлы булып үҫеүенә ҡыуанып, ҡапыл йомшарып китә.

— Ҡана, бир туҫтағыңды... Ҡапҡа асҡанда, ергә ҡуйып тор, йә тағы түгерһең.

Юҡ, ул был юлы һөттө түкмәне, хатта сайпылдырып, тамсыһын да тамыҙманы. Илисә һөттө, әжәл дарыуы шикелле, ваҡ-ваҡ йотоп, оҙаҡҡа еткерергә тырышып тәмләп эсте. Аҙаҡ уға рәхмәтле күҙҙәре менән ҡараны ла: «Иһ... Рәхәт булып китте...» — тип йылмайҙы.

Ә икенсе көндө Илисә сатай-ботай оҙон сыбығын тотоп инеш буйына ҡаҙ бәпкәләре һаҡларға китте — эсе ауыртыуы ҡул менән һыйпағандай булған.

Һөт...

Яңы һауған күбекле, шифалы йылы һөт...

Һөт...

Әсә һөтө...

Кешенең яҡты донъяға килгән тәүге сәғәтендә ейгән тәүге тәғәме.

Кешегә яҡшылыҡ та, яманлыҡ та, изгелек тә, уҫаллыҡ та әсә һөтө менән бирелә...

Әле төрмә камераһында Фәтихов күргән иртәнге төш, һуңғы төш бына ошо ине. Төштәр, төштәр... Утыҙ бер йыллыҡ ғүмер, иртәнге төш һымаҡ, матур һәм ҡыҫҡа тойолдо... Ә ҡасан гына әле ул...

## Күктә йондоҙ нисәү икән?..

Тилертеүсе, тилмертеүсе йәйге зәңгәр кис.

Бөтә ауыл, бөтә ғаләм тынлыҡҡа сумған.

Усаҡтағы утлы күмерҙәр һүнеп, көлгә әйләнгән.

Алабайҙар, аҡтырнаҡтар, һалпы ҡолаҡтар, баштарын алғы аяҡтарына ҡуйып, йоҡоға талған.

Көнө буйы концерт биреп йөрөгән сиңерткәләр үлән аҫтына инеп боҫҡан, тик йоҡо аралаш ҡына теште ҡайрап ҡуялар. Ошо тынлыҡҡа аккомпаниатор булып, берәү Әтнәкәй урамындамы, Сөсө күмәс осондамы ойотоп ҡына

гармун тарта. Ул, әйтерһең, кемделер йоҡлатыр өсөн бишек йыры йырлай...

Ашыҡмай ғына, әллә үҙенең тулы булмағанлығына оялып, ярым-ярты ай ҡалҡып килә. Ихтимал, ул гармунсының һағышын тыңларға теләйҙер, ихтимал, йондоҙҙарҙың шаярғанын күҙәтеп йөрөргә самалайҙыр...

Тынлыҡ. Көнө буйы бил яҙмай баҫыуҙа эшләп алйыған кешеләргә ял бирер өсөн, ғашиҡтарҙың йөрәктәрен ашҡындырыр өсөн бирелгән тынлыҡ. Гүзәл тынлыҡ. Шифалы тынлыҡ.

Ошо тынлыҡты тыңлап, туҙанлы баҫыу юлынан һалмаҡ ҡына атлап, ике кеше китеп бара. Береһе алты-ете йәшлек малай, йондоҙ ҡашҡа атҡа атланған, кескәй ҡулдары менән сытырлатып ялды тотҡан. Икенсеһе, аҡ кейеҙ эшләпә кейгәне, ике осо һалынып төшкән мыйыҡлыһы, ат янынан йәйәү атлай. Уның бер ҡулы — малайҙың аяғында. Йондоҙ ҡашҡа эленән-эле бышҡырып ҡуя. Юҡ, уны күгәүендәр ҙә, себендәр ҙә йөҙәтмәй, һыртындағы йөк тә ыңғырсаҡ ауырлығы саҡлы ғына, ул яратып ашай торған ҡуҙғалаҡ, клевер еҫен һиҙеп бышҡыра.

Кейеҙ эшләпәле кеше быны аңлап, аттың ҡабыргаларынан һыйпай.

— Хәҙер, малҡай, хәҙер барып етәбеҙ һинең яратҡан туғайыңа...

Ә малайҙың күҙҙәре ҡарағусҡыл зәңгәр күктә — унан нимәлер эҙләй.

— Атай, — ти ул, күктән күҙҙәрен алмай, — әллә күктең дә йәне бармы?

— Йәне?.. Күктең ниндәй йәне булһын? Унда кешеләр йәшәмәй ҙә.

— Ә улайһа, ниңә ул өҙләкһеҙ емелдәй, ҡыймылдай?

— Йондоҙҙар һиңә күҙ ҡыҫа. Һин дә уларға күҙ ҡыҫ, юғиһә үпкәләрҙәр.

Бер аҙ һүҙһеҙ барғандан һуң, малай йәнә атаһына мөрәжәғәт итә.

— Атай... Ә күктә йондоҙ нисәү икән?

— Нисәү? — Мыйыҡлы кеше юғалыбыраҡ ҡала. — Нисәү, тип, күп инде, күп... — Бала алдында абруйын төшөрмәҫ өсөн, ул эре генә өҫтәп ҡуя. — Миллион, миллион...

Баланың ҡыҙыҡһыныуына сик тә, сама ла юҡ.

— Атай... ә анауы, беҙҙең ҡышҡы Бөрө йылғаһы шикелле, аҡ томан булып ятҡаны нимә икән? Әллә күктә лә йылғалар бармы?

— Ул... Ҡош Юлы, тип атала, Нур улым.

— Ҡош Юлы? Әллә ҡоштар шул юлдан беҙҙең яҡҡа осоп киләме, атай?

— Шул юлдан.
— Шуға күрә улар аҙашмаймы?
— Шуға күрә улар аҙашмай.
Малай яуаптан ҡәнәғәт ҡала, башҡа һорау бирмәй.
Ниһайәт, улар аттың яратҡан туғайлығына етәләр. Мыйыҡлы кеше, уның исеме — Фәтих, улын аттан күтәреп төшөрөргә самалай, әммә малай икенсе яҡҡа үҙе һикереп төшә.
Малай аттың теҙгенен тотоп тора. Атай кеше аттың алғы аяҡтарын тышау менән тышаулай ҙа, йүгәнде һалдырып, усы менән уның муйынына иркәләп һуға: «Иртәнгәсә көс йый, малҡай».
Ат, турғай шикелле, алғы аяҡтары менән һикереп атлай ҙа, ҡомһоҙланып, яратҡан үләндәрен ҡырт-ҡырт өҙөп ашарға тотона.
Туҙанлы юл ситенән ике кеше ашыҡмай ғына китеп бара. Аҡ эшләпәле, остары һалынып төшкән мыйыҡлы кеше кескәй малайҙы етәкләгән. Ә малайҙың күҙҙәре — күктә, шуға күрә ул әленән-әле һөрөнә.
— Атай, — ти Нур, уның ҡулын тарта төшөп, — ә ҡоштарға ул юлды кем һалған?
— Ул юлды кешеләр һалған, улым.
— Кешеләр? Күккә менепме?
Фәтих тынғыһыҙ, саманан тыш ҡыҙыҡһыныусан булып үҫеүсе малайына яуап эҙләп таба алмай. Ҡапыл ҡасандыр ишетелгән кинәйәле һүҙ иҫенә төшә.
— Ул йондоҙҙар түгел, Нур улым, ә... Тыуған ерҙәре, Тыуған илдәре өсөн һуғышта һәләк булған батырҙарҙың йөрәктәре шулай яна.
Ҡапыл малай ҡулын атаһының усынан тартып ала, уның алдына сыға һәм балаларға ғына хас ихласлыҡ менән ант итә:
— Атай! Мин дә үҫкәс батыр булам! Мин дә йондоҙға әйләнәм!

**АВТОР МОНОЛОГЫ**

Ант итеүе еңел, хатта уны боҙоуы ла ҡайһы берәүҙәр өсөн әллә ни ауыр түгел, ә бына ғүмереңбуйы биргән антыңа, идеалыңа тоғро булып йәшәү һәм тоғро булып үлеү...
Ә ҡайҙан килә һуң ул батырлыҡ, ҡурҡаҡлыҡ? Кеше тыуғанда батыр йәки ҡурҡаҡ булып тыумай бит... Батырлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ — кешенең тәбиғәтендәге һәм холҡондағы иң серле һәм ғәжәйеп бер нәмә.
Ҡайҙа һин, изгелек һәм әшәкелек шишмәһе?
Һеҙ Ағиҙел йәки Волга даръяһына һоҡланып ҡарап

торганда, уның тәүге аҙымдарын, сығанағын күҙ алдына килтерәһегеҙме? Ул йылғаның башын күрергә теләйһегеҙме? Ә мин — теләйем. Мин ғүмерем буйы шишмәнең атылып сыҡҡан урынын күрергә ашҡындым. Һәм бына әле лә. Капитан Фәтиховтың батырлығы, иç киткес сыҙамлығы хаҡында һөйләй башлағансы, ул тыуып үçкән төйәккә барғым, мәшһүр француз яҙыусыһы Ромэн Роллан әйткәнсә, «геройҙар һулаған һауаны һулағым килә».

О, батырлыҡ һәм сафлыҡ менән төнәтелгән шифалы һауа... Парижда коммунарҙар стенаһы ҡаршыһында, Мамай ҡурғанында изге ҡылыс тотҡан гранит Ватан-әсә янында сәждәгә барғанда, Салауат батыр йәшен булып үткән тауҙарҙа, Муса Йәлилдең беләктәре сыныҡҡан далаларҙа һинең йөрәгең арыçланға, рухың бөркөткә әйләнә; һинең дә, улар шикелле, үлемһеҙ батырлыҡ эшләгең, кешеләргә гел изгелек кенә күрһәткең килә...

Фәтиховтың тыуған ауылында ла һине ана шундай илаһи хис елкендерә, батырлыҡҡа саҡыра...

## Йылға туңмай бында бер ҡасан да...

«..Миңә утыҙ бер йыллыҡ ғүмерем эсендә күп кенә ауылдарҙа булырға, байтаҡ ҡына ҡалаларҙы күрергә тура килде. Бөрөлә мин педтехникумда уҡыным, Өфө урамдарында йөрөнөм, Мәскәүгә һоҡландым, Ленинградта дүрт йыл белем алдым... Бына Киевта һигеҙ йыл ғүмерем үтте, әммә... һалам түбәле, бер ҡатлы үҙебеҙҙең Өрьяҙыны бер ҡала-ауылға ла алыштырмайым. Ә беләһеңме, беҙҙең Өрьяҙы ниндәй ул? Йырҙы һөйләп аңлатып булмаған шикелле, уны ла һүрәтләп булмай, уны күрергә кәрәк. Ҡайһы сағында тыуған ауылым иçемә төшһә, балаһын өҙөлөп һағынған әсә кеүек, йөрәгем ҡыçылып китә. Алла бойорһа, тип әйтәм, Василь, һуғыштан һуңғы тәүге яҙҙа уҡ бергәләшеп Башҡортостанға, Өрьяҙыға, ҡайтырбыҙ. Бөрө йылғаһында бәрҙе балығы тоторбоҙ. Ә һин беләһеңме, Василь, Бөрө беҙҙең ауыл янында төкөрөк ергә төшмәçлек һалҡында ла туңмай, тик аҡ томан булып ҡына тора. Ни өсөн, тиһеңме? Әәә... Әйтмәйем. Сер. Ҡайтҡас һөйләрмен...»

25 июль, 1942 йыл. Капитан Фәтиховтың көрәштәше Василь Железко менән һуңғы осрашҡанда һөйләгән йөрәк сере.

## АВТОР МОНОЛОГЫ

Өрьяҙы! Ни өсөн капитан Фәтихов һине шулай өҙөлөп яратҡан, йөрәген һулҡылдатып һағынған, ғүмеренең һуңғы көнөндә лә һине төшөндә күреп, йылмайып уянған икән?

Бәлки, һин, Өрьяҙы, башҡа бер ауылға ла оҡшамағанһыңдыр, иҫ киткес матурһыңдыр: бер яғыңда, түбәһенә ҡараһаң, кәпәсең төшөп китерлек мәғрур тауың, икенсе яғыңда башты әйләндерерлеҡ ярһып ағыусы йылғаң барҙыр?..

Бәлки, һиндә Фәтиховтың ергә ятып эскән тоноҡ шишмәһе, гармун моңо, салғыларҙың саң-саң итеүе һәм... тәүге мөхәббәте тороп ҡалғандыр...

Юҡ, һинең ҡар башлы тауҙарың да, бер ярынан икенсе ярына ҡоштар осоп сыға алмаҫлыҡ даръяң да юҡ, әммә һинең үҙеңә генә хас, маңлай күҙе менән түгел, күңел күҙе менән күрә торған тыйнаҡ гүзәллегең бар.

...Ауылды урталайға бүлеп, кескәй генә йылға аға. Ғәҙәттә, ундай йылғаларҙың исеме лә булмай, инеш тип кенә йөрөтәләр.

Уның уң яры шаҡтай бейек, ҙур-ҙур өҫтәл саҡлы шыма, яҫы таштар менән ҡапланған, ул таштар араһынан кескәй генә шишмәләр бүл-бүл-бүл итеп атылып сығып тора. Һәр береһенең үҙ күркәмлеге, үҙ тауышы бар, абайлабыраҡ тыңлаһаң, ул дәртле бейеү көйөнә лә, маршҡа ла оҡшай: «Бүл-бүл-бүл...»

Йәйен үҙ тауышынан үҙе ҡурҡып, әҙәпле генә аҡҡан йылға яҙын, һабан туйында майҙанға сыҡҡан батыр һымаҡ, ғәйрәтен күрһәтергә тырыша, ғашиҡ булған егет кеүек дәртен, дарманын ҡайҙа ҡуйырға белмәй ашҡына, дыуамаллана, ярҙарынан ташып сыға...

Йылғаның ярһыуы кешеләргә лә бирелә: буй еткән ҡыҙҙар, никрут йәшенә яҡынлашҡан егеттәр ата-әсә күҙенән йәшеренеп, осрашыу эҙләй; танауҙарына «еҫ» керә башлаған үҫмерҙәр ҙур боҙ киҫәктәренә ултырып, Бөрө йылғаһына, унан Ағиҙелгә ағып төшөп, диңгеҙгә барып етергә, елкәндәренә тығыҙ елде тултырып, теләгән яҡҡа йөҙөргә ашҡыналар. Йылдар буйы яҫтыҡтан тормай, әжәл көтөп ятҡан сырхауҙар аяҡҡа баҫа, «быйыл, иншалла, һауығырмын инде», тип өмөтләнә, ә бәхет ташлап киткән тол ҡатындарҙың күңелендә сыра уты кеүек кенә булһа ла яҡтылыҡ тоҡана...

Яңы йыл ҡарылай аҡ һаҡаллы бабайҙар ярһыу йылға ярында ҡояшта ҡыҙынып ултыралар. «Беҙҙең йәшлегебеҙ ҙә ана шулай шаулап, ашҡынып бик тиҙ үтте лә китте», — тип һағышланалар, ә аранан берәйһе аҡрын ғына йырлап ебәрә:

Һикереп-һикереп ағалыр ҡар һыуы,
Ник баҫылмай икән йөрәктең ярһыуы...

Тора-бара аңына килеп, дыуамаллығы өсөн оялып, башын эйеп өйөнә ҡайтҡан кешеләй, йылға төндәрен тынысланы төшә, теләр-теләмәҫ кенә ярҙарына ҡайта, «ябыға», инде ул ташыу ваҡытындағы шикелле гөрһөлдәп, геүелдәп аҡмай, ишетелер-ишетелмәҫ итеп кенә сылтырап Бөрө йылғаһы менән ҡауышырға ашыға...

Ерҙе, мүк шикелле, ваҡ, нәфис йәшел келәм ҡаплағас, Бөрө йылғаһы буйҙарынан кәкүк, һандуғас тауыштары ишетелә башлағас, Өрьяҙы йәштәре, Субай егеттәре-ҡыҙҙары «Ҡыҙыл яр» төбәгенә киске уйынға сығалар, ә кесаҙнала, йома көндәрҙә Әтнәкәйгә йыйылалар...

Һөйләйҙәр... атаһы гармун һатып алып биргәс, Фәтих кистәрен, ана шул ҡалҡыулыҡҡа килеп ултырып, «Әтнә» көйөн уйнарға өйрәнгән. Кискә уйынға йыйылғас та, ул уйынды «Әтнә» менән башлап ебәргән һәм шуға күрә был төбәкте Әтнәкәй тип атағандар, имеш.

Ауыл янында аҡ таҡыя кейгән тауҙар, башың әйләнерлек шәп ағыусы даръялар юҡ, әммә тирә-яҡҡа күҙ һалһаң, хозурлыҡтан тын ҡурыла: ҡайҙа ҡарама йүгерә-атлап менерлек ҡалҡыулыҡтар, аҡ тәнле, йәшел шәлле ҡайынлыҡтар, йәй уртаһында иҫерткес сәскә атыусы йүкәлектәр...

Ә болондар ниндәй бында! Башҡа бер ерҙә лә бындағы төҫлө хуш еҫле сәскәләр үҫмәй торғандыр, шуға күрә Өрьяҙы ҡорттары йыйған бал йөҙ төрлө ауырыуҙан сихәтләндерә. Ә шишмәләренең һыуы! Битеңде йыуһаң, йәшәреп, сибәрләнеп китәһең, бер-ике йотһаң, баһадирға әйләнәһең.

Ә йәйҙәрен һауа ниндәй бында! Йөҙ төрлө туғай һәм йүкә сәскәһе менән төнәтелгән шифалы һауаны һулаһаң, күкрәгең киңәйә, тамырҙарыңда ҡан уйнай башлай...

Бөйөк татар шағиры Ғабдулла Туҡай әйтмешләй, бында тауыҡтар ҙа үҙҙәренсә йырлай, һандуғастар үҙҙәренсә һайрай, кәкүктәр үҙҙәренсә саҡыра...

Ә ҡыҙҙар... Бер яҡта булмағанса иркәләй, һөйә белә.

Беҙҙең яҡтарға кил әле,
Өрьяҙыны күр әле.
Әтнәкәй тауына менеп,
Өрьяҙы ҡыҙҙарын күреп,
Ҡанатланып йөрәле...

— тип юҡҡа ғына йырламайҙар шул!

Донъяны арҡырынан-буйға әйләнеп сыҡ, Өрьяҙы һымаҡ ауылды таба алмаҫһың!

Өрьяҙы! Һине бер күргән кеше, ҡуш усына ағыҙып шишмәһенең һыуын эскән кеше ғүмере буйы һине һағынып иҫкә аласаҡ, ҡабат, ҡабат һине күрергә ашҡынасаҡ.

О, Өрьяҙы...

## БЕЛЕШМӘ УРЫНЫНА

Юк, Өрьяҙы шиғри йөҙө менән генә башка ауылдарҙан айырылып тормай, уның, әйтергә яраһа, үҙенә генә хас «граждандылык йөҙө» лә бар. Ул йөҙ — «Кыҙыл партизан Өрьяҙы». Байҙар, Совет власына кырын караусылар: «Әйтәм һин кыҙыл, Кыҙыл партизан Өрьяҙынан икән», — тип мыҫкыллап көлгәндәр, ә Совет власы өсөн йәндәрен фиҙа кылырға тороусылар: «Ә... һин «Кыҙыл партизан Өрьяҙынанмы ни?» — тип һокланғандар.

«Кыҙыл партизан» исеменә Өрьяҙы символик рәүештә генә лайык булмаған. Мең туғыҙ йөҙ ун һигеҙенсе йылда Кашириндың «Тимер ташкыны» Өрьяҙы аша үтә һәм кыркка якын ир-егет, бер кеше кушыуын, бойороуын көтөп тормай, шул ташкынға шишмә булып кушыла.

Юк, был яғы менән генә лә Өрьяҙы тирә-яктағы башка ауылдарҙан айырылып тормай. Өрьяҙы үҙенең укымышлығы, аңы менән дә башка башкорт, татар, мари ауылдарынан өҫтөнөрәк була — ул үҙ волосына, районына ғына түгел, республикаға бик күп педагогтар, докторҙар, летчиктар, офицерҙар, ғалимдар һәм башка бик күп белгестәр биргән. Бөйөк Ватан һугышына Өрьяҙы ике йөҙ егерме һигеҙ ир-егетен ебәргән, шуларҙың йөҙ егерме өсө Тыуған илдәре, тыуған ауылы өсөн һәләк булған. Тиҫтәләгән Өрьяҙы кешеләре төрлө фронттарҙа батырлыктар күрһәткән, ә Заһитов Ғизетдин (мәшһүр Шаталов дивизияһынан) рейхстагка барып еткән.

Ә хәҙер инде мин һеҙҙе Өрьяҙы менән ентекләберәк таныштырайым.

Юлды кайҙан башлайбыҙ? Йылғаның уң як ярындағы урам Тау урамы тип атала. Был, әйтергә яраһа, ауылдың үҙәк урамы. Әгәр инеште таштарҙан ташка һикерә атлап сығып, Бөрө йылғаһына табан караһаң, артында — Мәсет урамы, алдыңда Сөсө күмәс осо буласак. Мәсет урамы аңлашыла инде, заманында бында мәсет булған, һәр көн иртән мәзин аллаға табыныусыларҙы ғибәҙәтханаға сакырған. Ә бына Сөсө күмәс... Был урамда йәшәүсе күпселек хужалык атһыҙ булған, игендәре «яңыға» түгел, кара ергә баҫкансы ла етмәгән, бөтә ашағандары кыҫыр ыумас ашы ла сөсө күмәс, көлсә булған. Ана шуға хәллерәктәр был осто «Сөсө күмәс урамы» тип мыҫкыллап йөрөткәндәр. Ошо урам буйлап, әйҙәгеҙ, иркен Бөрө туғайлығына төшәйек. Заманында Бөрөлә тиҫтәләгән тирмәндәрҙең ҙур агас куласалары ашыкмай-бошмай ғына әйләнә биргән, мөшкәнән төшкән иген ике таш араһына инеп иҙелгән, онталған һәм һоҫконан танауҙы кытыклап йылы он акрын

ғына аҡҡан. Хәҙер инде ул тирмәндәрҙең урындары ла онотолған — тиҫтәләгән һыу тирмәндәрен электр менән эшләүсе бер «фальцовка» алмаштырған. Ә шулай ҙа һыу тирмәндәре йәл. Юҡ, был балалыҡ ностальгияһы түгел, ә һыу тирмәненең оно тәмлерәк, файҙалыраҡ була, тиҙәр...

Фәтихов көрәштәше Василь Железко менән ҡырҡ икенсе йылдың егерме бишенсе июлендә һуңғы тапҡыр осрашҡанда: «Беҙҙең Бөрө йылғаһы ҡышҡы сеңләлә лә туңмай», — тигәйне.

Ысынлап та, Бөрө — был бик үҙенсәлекле йылға — йәйге сеңләлә һалҡынса була, бик «батырҙар» ғына һыу керә. Ҡышҡы сеңләлә туңмай, тик һыу өҫтөнән пар ғына күтәрелеп тора, хатта ҡайһы бер ҡоштар йылы яҡҡа китеп «мәшәҡәтләнмәйҙәр», Бөрөлә тороп ҡалалар.

Ниндәй мөғжизәле көс йылғаны йыл буйы бер йылылыҡта тота һуң?

Шаянырак̧тар: «Беҙҙең Өрьяҙы, Субай кешеләренең йөрәктәре ҡайнар, шуға күрә Бөрө сатлама һыуыҡта ла туңмай», — тиҙәр.

Юҡ-барға, хөрәфәткә ышаныусылар, бигерәк тә мәжүси марщҙар: «Куга юмо — ҙур алла ҡөҙрәте», — тиҙәр һәм июль башында була торған «Шурук юл пайрамында» семҡара һарыҡты Бөрө буйына алып барып салалар, Куга юмоны ололайҙар.

Ә Бөрөнөң йәйен йылынмауының, ҡышын туңмауының сәбәбе бик ябай (ғәфү ит, капитан Фәтихов, мин һинең серенде уҡыусыма сисәм инде!) — был урындарҙа йылға төбөнән йөҙләгән шишмәләр атылып сыға, шуға Бөрө йыл миҙгелдәренең үҙгәреүенә бирешмәй.

Беҙ һинең менән, ҡәҙерле Уҡыусым, Бөрө буйҙарынан да урап ҡайттыҡ, хәҙер, элекке Мәсет урамынан уңға боролоп, ҡыҫҡа ғына, тыныс ҡына тыҡрыҡҡа йүнәләйек. Әллә ҡайҙан «беҙ бында!» тип торған мөһабәт шыршыларҙы күрәһегеҙме? Улар бишәү. Шыршыларҙан бер аҙ ситтә кинәнеп ике тирәк үҫеп ултыра. Барайыҡ шунда. Инәйек шул шыршылар янындағы йортҡа. Изге йорт ул. Капитан Фәтихов Нур тыуып үҫкән, ҡанат сығарған, осоп киткән оя ул. Дөрөҫ, хәҙер инде Нур заманынан биш шыршы ла ике тирәк кенә тороп ҡалған: Фәтих бабай менән Нәсимә инәй, күптән фани донъяны ҡалдырып, ер ҡуйынына инеп ятҡандар, ә балалар... ҡоштар шикелле осоп, таралышып бөткән, хәҙер уларҙың бөтәһен дә бергә бер юлы Ата йортона йыйырға ла мөмкин түгел — күбеһе мәңгелек йоҡоға талған. Хәҙер был ихатала Нурҙың ике туған ҡустыһы тракторист Сәйет йәшәй. Юҡ, Фәтихов тыуып үҫкән йортта түгел, ул йорт егерме алтынсы йылда янып күмергә әйлән-

гән, янғынан һуң һатып алған йорт та иҫкергән һәм һүтелеп, утынға туралған, ә ҡоҙоҡ күмелгән — водопровод булғас, уның ни хәжәте бар! Ә хәҙер мин, әкиәттәгесә, минең теләгем, суртан әмере буйынса, Ерҙе кирегә әйләндерә башлайым һәм Фәтихов Нурҙың ауылына, ата-бабаһына, уның балалыҡ, үҫмер йылдарына әйләнеп ҡайтам...

## ИКЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Гармун саҡыра

Йәй көнө килә шундай илаһи ваҡыт, ундай сәғәт фәҡәт ауылда ғына була. Көнө буйы сикһеҙ күк диңгеҙендә йөҙөп арыған Ҡояш ялға китә. Йоҡларға ятҡанын күрһәтмәҫ өсөн ул үҙе артынан алһыу ҡыҙыл шаршауын төшөрә. Ҡояш йоҡоға тала, ҡыҙыл шаршау — шәфәҡ юғала. «Хәҙер донъя беҙгә ҡалды» тигән һымаҡ ҡарағусҡыл зәңгәр күк сатырының әле бер, әле икенсе осонда йондоҙҙар ҡалҡа, күҙ ҡыҫышып уйнарға, бер-береһен ирештерергә тотона, ә артыҡ шаянырaҡтары, бер-береһен ҡыуышып, «атлы» уйнай — әленән-әле улар артынан утлы сыбыртҡы эҙе күренеп ҡала. Кешеләрҙе һәм ҡоштарҙы ашҡындырып, Ҡош Юлы һуҙылып китә.

Был ваҡыт инде көтөүҙән ҡайтҡан һыйырҙар һауылған була. Иртәнгә елендәренә шифалы һөт йыйылһын өсөн, бала-саға һыйырҙарҙы ырҙын артына ашарға алып сыға. Һыйырҙар бер кемгә иғтибар итмәй, ашыҡмай ғына утлап йөрөй.

Ошо мәл кемдер, инде «башлы-күҙле» булырға ваҡыты еткән, әммә «ҡамыт кейергә» ашыҡмаусы Хәжиәлиме, әллә танауына «еҫ» керә башлаған Заһирмы, иплән кенә, көнө буйы баҫыуҙа эшләп арыған ҡыҙҙарҙың иң нескә ҡылдарына сиртеп хәл кертер өсөн, гармунда һыҙҙырып ебәрә. Ошоно ғына көтөп торған ҡыҙҙарҙың йөрәге леп-леп тибә башлай. Улар ус төптәренә йәшерелгән көҙгөгә ҡарап, биҙәнеп-төҙәнеп алалар ҙа, ҡапҡаны шығырлатмай ғына асып, йәки бөтөнләй артҡы яҡтан, инешкә төшә торған юлдан, сығып, Әтнәкәй тауына йүнәләләр. Аяҡтар ерҙе тоймай, арттан сулпы сылтыр-сылтыр йырлап ашыҡтыра: «Тиҙерәк, йәһәтерәк, ҡыҙыҡай, һинең күҙең төшкән егетте башҡаларҙың эләктереүе бар...»

Ә егеттәр... Болдор баҫҡысына ултырып, сабаталарын сисеп, баҫыу туҙанын ҡагалар, галош йәки итек кейәләр, ә Сөсө күмәс урамы егеттәре эш сабаталарын кешелеккә генә кейә торған сабатаға алмаштыралар, пинжәк ке-

çәләренә мейес башында киптерелгән көнбағыш тултыралар, күрше ауылдан ултырмаға килгән ҡыҙ бүләк иткән (талап алғаны ла була, әлбиттә), ситтәре, мөйөштәре сигелгән ҡулъяулыҡ һалалар ҙа, көнбағыш ярып, урам уртаһынан киске уйынға йүнәләләр: берәй ҡапҡа шығырлаһа, туҡталып, һағайып ҡарап торалар. Бер үк хис, бер үк дәрт өйкәй: «Бөгөн ниндәй ҡыҙ менән йоплашырға? Таң атҡансы кем ҡуйынына сумырға?..»

Ә ырҙын артында һыйыр ашатыусы малайҙар туп һуғып уйнай, ҡыҙҙар йыш ҡына «ете таш» сөйә. Ҡайһы саҡта улар бергәләшеп бәләкәй киске уйын ойошторалар.

Кистәрен ырҙын артында һыйыр һаҡлау бурысы, ғәҙәттә, гел Нур менән Нәсихәгә төшә ине. Дөрөç, ҡасандыр был эште арала иң өлкән бала Варис ағай ҙа башҡарған, ләкин ул быуа нисә йыл инде Сарназ тигән урыç ауылында уҡый, уҡымаһа ла егермегә яҡынлашып килеүсе егеттән һыйыр һаҡлатмаçһың бит инде. Фәниә лә хәҙер буй еткән ҡыҙ, ата-әсәһе юҡта тәҙрә яңағына һағыҙ менән йәбештереп ҡуйылған көҙгөгә әленән-әле ҡаранып ҡына тора, яңғыҙ ҡалһа, йырларға тотона, аулаҡ өйҙәргә лә йөрөргә ярата—уның бөгөн-иртәгә кейәүгә сығып ысҡыныуы бар, йә нисек уны ырҙын артына һыйыр һаҡларға ебәрәһең инде?.. Сания менән Кәримә әле һыйыр һаҡларлыҡ түгел, әсәләре уларға инеш буйында ҡаҙ бәпкәһе һаҡлау эшен генә ышанып тапшыра, төпсөк бала Зәбирә әле бишектә ята. Шулай булғас, ул һыйырҙарҙы (һауын һыйыр, тана) Нәсихә менән Нурҙан башҡа кем һаҡлаһын ти? Дөрөç, оҙаҡламай Нәсихә Нурҙан айырыласаҡ, «эстафетаны» тора-бара Сания менән Кәримә аласаҡ, ә хәҙергә... Хәҙергә улар парлашып оҙон йәй буйы кистәрен һыйырҙарын ырҙын артында ашаталар.

Инде дәрте мөйөшләнгән Нәсихәнең дә, ун өс йәшлек Нурҙың да йөрәге Әтнәкәйҙә. Әгәр Нәсихәне, үҙе лә аңламаған, ниндәйҙер илаһи көс, етлегеү дәрте киске уйынға тартһа, ә Нурҙы Хәжиәлиҙең гармуны тартты.

Хәжиәлиҙең тальянкаһы, Заһирҙың ҡыңғыраулы саратскийы шикелле түгел, уғата моңло тауышлы, талир тәңкәләр сылтыраған һымаҡ, киске уйында ғына түгел, һабан туйындағы тиçтәләгән гармун тауышынан айырылып тора. Ысын булһа, уның телдәре саф көмөштән яһалған, ти.

Хәжиәли — гармунды арҡаһындамы, теләһә кемде илатырлыҡ оçта уйнай белеүе менәнме, Өрьяҙыла ғына түгел, бөтә тирә-яҡта дан тотҡан егет. Йәрминкәлә карусель атына атланып, гармун тартып, халыҡты һуштан яҙҙырҙы, хатта граммофонға ла иғтибар итмәнеләр.

Егеттәр эстәренән янды яныуын, әммә, ни эшләйһең, ҡулыңдан килһә, һин дә гармун һатып ал да бөтә ауыл ҡыҙҙарын үҙеңә ҡарат. Дөрөҫөн әйткәндә, Нурҙар ғаиләһендә лә ғүмер ғүмергә йә тальянка йә саратский (атаһы уйнаған бит) булды, хатта ул хәҙер бер нисә көйҙө лә уйнай белә, әммә Хәживәли кеүек оҫта түгел. Килер бер көн ул да Хәживәли кеүек уйнар, хатта уҙып та китер. Ана шуға күрә Нур киске уйынға, Хәживәлиҙе күрергә ашҡына ла. Ул хатта Хәживәли һымаҡ атлап йөрөргә, көлөргә тырыша. Ә гармун тартыусы егеттәр, беләһегеҙме, ҡайһылай йөрөй? Күкрәк киренке, аҙымдар һалмаҡ, баш ата ҡаҙҙыҡы һымаҡ күтәрелгән, кәүҙә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә әле уңға, әле һулға сайҡала...

— Нәсихәттәй, — ти Нур, туп уйнауынан туҡтап, апайы унан өс кенә йәшкә оло булһа ла, Нур уны, ихтирам итеп, Нәсихәттәй тип йөрөтә. — Нәсихәттәй, — ти ул, донъяһын онотоп ташлы уйнап ултырған апайына мөрәжәғәт итеп, — мин Әтнәкәйгә барып киләм.

Нәсихә таштарын һибеп ебәрә. Һикереп тора.

— Һы-ы! Көн дә көн дә һин генә барырға тигәнме ни? Ҡайҙа шулай яҙылған? Бөгөн минең сират!

Нур хәйләле йылмая.

— Шыбаға шулай сыҡҡас, мин минауатмы ни, Нәсихәттәй.

Ысынлап та, улар көн һайын ырҙын артында: «Кем өҫкә сыға, шул киске уйынға бара», — тип шыбаға тотошалар һәм, ни эшләптер, өҫкә гел Нур сыға. Ә бер ҡатлы, ышаныусан Нәсихә быны аңламай. Нур шыбаға тотаһы таяҡты алдан уҡ самалай: беренсе булып тотһаң, өҫкә сығаһыңмы, икенсе булып тотһаңмы... Таяғына ҡарап, ул йә беренсе булып тота, йә апайына «юл ҡуя» һәм... һәр ваҡыт өҫкә сыға. Дөрөҫ, Нурҙың хәйләһе һәр ваҡыт барып сыҡмай — ҡайһы саҡ Нәсихә шыбаға өсөн үҙе сыбыҡ табып ала. Был саҡ Нур төрлөсә «этләшә»: сыбыҡты йә бармаҡтарын таратып, йә ҡыҫып тоторға тырыша.

Инде лә иҫәп барып сыҡмаһа, аҙаҡ бармаҡтың бер быуыны саҡлы ғына сыбыҡ осо тороп ҡалһа, өҫкә сыҡҡан кеше таяҡты ике бармағы менән тотоп, кеше бейеклеге ырғытырға тейеш. Нур иһә быны уйнап ҡына эшләй, ә Нәсихә, бахырҡайың, таяҡты һелтәп ырғыта ла алмай. Нурҙың ауыҙы йырыла, ул кейеҙ эшләпәһен басыбыраҡ кейә, ыштанының юҡ кеҫәләренә ҡулдарын тыҡҡан була ла марийса хушлашып, ирәйеп, Әтнәкәй осона китеп бара. Ҡайһы сағында уға Нәсихә апаһы йәл дә булып ҡуя — уның да киске уйынға барғыһы, күңел асҡыһы килә бит, әммә Хәживәлигә һәм уның көмөш телле гармунына булған мө-

хәббәт алдашыу, хәйләләшеүҙе лә аҡлай. Киске уйындан ҡайтҡанда ул гел: «Иртәгә Нәсихәттәйҙе ебәрәм», — тип һүҙ ҡуя ла, иртәгә килеп еткәс, Хәживәли гармунын һыҙҙырып ебәреү менән, кисәге вәғәҙәһен онота.

...Бер ваҡыт Өрьяҙы, Субай йәштәре Ҡыҙыл яр башына йәки Әтнәкәй сиҙәмлегенә туплана. Хәживәли, әллә юрый, әллә шулай кәрәк булғанға, тәүҙә гармунын тартмайыраҡ тора, Заһит ҡына ҡыңғырауын сылтырата-сылтырата саратскийында бейеү көйөн уйнай. Кемдер, бигерәк тә Сөсө күмәс осо егете (сөнки Заһит үҙе лә шул урамдан) «Әпипәгә» тыпырлай, әммә ҡыҙҙар ҙа, егеттәр ҙә уға әллә ни иғтибар итмәй. Заһит, йәштәрҙе йәлеп итер өсөн: «Ана шулай, әйт шулай! Баҫ шулай!» — тип ҡысҡырғылап та ҡуя, тик малай-шалай ғына Заһит тирәһенә бер яҡын килеп, бер ситләшеп йөрөй, ә Нур Хәживәлиҙән ҡалмаҫҡа тырыша, уның «Әтнә» көйөнә һыҙҙырып ебәреүен көтә. Бына бер ваҡыт тилмереп көткән минут килеп етә. Нур ул минуттың килеп еткәнлеген тора-бара алдан һиҙенә башланы, ал яулығын сөйөп бәйләгән Сабираның тауышһыҙ ғына атлап килеүен ишетепме, күңел күҙе менән бөтә кешенән дә алдан күрепме, Хәживәли киң күкрәген тағы ла кирә төшөп, бөтә ҡоласына гармунын һуҙып ебәрә һәм гармунына үҙе лә ҡушыла:

> Ҡыҙарып ҡояш сыҡҡанда,
> Уйһыу ерҙә һыу ятмай...

Быны ишетеп, йәштәр бер юлы «Их!» тип елкенеп ҡуя һәм Хәживәли тирәһенә туплана башлай. Ошо ваҡыт, алдан заказ биреп ҡуйғандармы ни, күктә йондоҙ атыла, кемдер «фьюють!» тип һыҙғыра, кемдер: «Күрҙегеҙме? Күктә лә киске уйын башланды!» — тип ҡысҡыра.

Уйын, ғәҙәттәгесә, бейеүҙән башлана һәм уны, ғәҙәттәгесә, Урта урам егете Назиф башлап ебәрә. Ул, йә «Әпипәгә», йә «Барыняға» тыпырларға тотона. Назифтың байрамдарҙа ла киске уйындарҙа ғына кейә торған «хан заманынан» ҡалған күн итеге бар. Назиф уны бик ҡәҙерләп кенә тора, кейер алдынан иренмәй, ашыҡмай дегетләй, еҫе аңҡып тормаһын өсөн, асыҡ һауала тота, аҙаҡ бумазый сепрәк менән ялтырата, кейгәс, ҡуңыстарын аҫҡа төшөрөп, «гармун» яһай. Назиф итек үксәләренә Нурҙың атаһы Фәтих ағайҙан дағалар эшләтеп алып ҡаҡҡан. Әгәр бейей торған урын ҡаты йәки ташлы булһа, Назифтың ритмға туҡ-туҡ-туҡ-туҡ иткән аяҡ тауышы тирә-яҡҡа яңғырап тора.

Назиф түңәрәктә бер нисә тапҡыр әйләнеп сыҡҡандан һуң, берәй ҡыҙҙың алдына килеп баҫа, тегеһе ҡыланғап була, һырланған була, егет ҡулдарын артҡа ҡуйып, ары бейеп китә, урап килеп, йәнә тегенең алдында тыпырлап тора, ҡыҙ, «баҙарын төшөрмәй», һаман наҙлана, шунан кемдер: «Һорайбыҙ! Һорайбыҙ! Зәйтүнә, ялындырма!» тип ҡысҡыра. Зәйтүнә тигән ҡыҙ, сәскәгә ҡунған күбәләк шикелле, аяҡтарын ергә тейҙерер-тейҙермәҫ кенә бейеп алып китә. Ә Назиф ҡыҙҙың буш урынын биләй. Нур, этешеп-төртөшөп булһа ла, түңәрәк эсенә инә, мөмкин саҡлы гармунсыға яҡыныраҡ торорға тырыша.

Оҫта бейеүе һәм сибәрлеге менән дан тотҡан Зәйтүнәнең алдарына килеп тыпырлауын күп кенә егеттәр ашҡынып көтә көтөүен, әммә йыш ҡына ул, әллә үсекләшеп, әллә шаяртып, уйламаған кеше алдына килеп баҫа. Ә бына был юлы ла, беләһегеҙме, кем алдына килеп баш эйҙе? Гармунсы Хәживәли янында ауыҙын асып, әсирләнеп ҡарап торған Нур алдына. Нур, ҡуян шикелле, ялт итеп, кешеләрҙе йырып, түңәрәктән сығып ҡасмаҡсы булғайны, Зәйтүнә уны тотоп алды ла йәнә тыпырлап торҙо.

— Йәле, гармунсы малай!

Нур уның йомшаҡ, йылы ҡулынан ысҡынмаҡсы иткәйне, ҡапыл гармунсыға боролоп: «Мариса уйна», — тине.

Нур эшләпәһен һалып, уртаға бөкләп, ҡулын артына ҡуйҙы ла бейеп китте. Был уның халыҡ алдында тәү тапҡыр бейеүе ине. Хәҙер ул, йә ритмдан сығып, буталып мәсхәрәгә ҡала, йә икенсе көндө бөтә ауылға уның даны тарала: «Тыҡрыҡ Фәтих ағайҙың төпсөк малайы вәт бейей тиһәң дә бейей, икән... Прәме ер һелкетә...»

Бер әйләнеп сыҡҡас, Нур мариса таҡмаҡ әйтеп ебәрҙе:

Шопке лышташ шыр-шыр шокта
Мардежан кече годым.
Пылыш тынгач йынгыр шокта
Олтал шупшалме годым... *

Аҙыраҡ мариса аңлаған йәштәр шарҡылдап көлә, ҡыҙҙар үҙ-ара шыш-быш килә: «Нимә йырланы?..» Нур мари бейеүенә үҙенсә яңылыҡтар ҙа өҫтәргә тырышты, шуға күрә бейеү матур ғына түгел, шаян да килеп сыҡты, гармунсы ҡаршына килеп баҫып, башын эйгәс, йәштәр шаулашып ҡул сапты. Кемдәрҙер: «Һай, йәшә, Нур!», «Иллә малатчи-

---

* Шыр-шыр шаулай көҙгө япраҡ
Елле көн ваҡытында.
Ҡолағымда сыңлап китә,
Һеҙ үбешкән сағында.

на икәнһең!» — тип ҡысҡырҙы. Күптәнге халыҡ мәҡәле: «Йылы һүҙ йән аҙығы», ул кешегә ҡанат бирә, зәғифте лә арыҫлан итә, бөркөткә әйләндерә... Бына әле лә шундай йылы, маҡтау һүҙҙәре ишеткәс, Нур ҡапыл үҫеп-ҙурайып китте һәм: «Хәживәли ағай, биреп тор әле», — тип гармунын һорап алды ла, ашыҡмай ғына, иретеп кенә «Ҡара урманды» һыҙҙыра башланы. Әле генә шау-гөр килгән йәштәрҙең ауыҙы ябылды, тындары ҡурылды. Ҡиске зәңгәр тынлыҡта иҫ киткес моңло, шул уҡ ваҡытта дәртләндереүсе, дуҫ, берҙәм булырға өндәүсе, тәүәккәл булырға әйҙәүсе көй Бөрө туғайлыҡтарына таралды. Нур яй ғына гармунға ҡушылды.

Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн,
Яҡшы аттар кәрәк үтергә...

Ҡемдер Нурға эйәрмәксе булгайны, «Тссс!» тип уның ауыҙын яптылар. Был әле нығып бөтмәгән бала тауышында матурлыҡтан бигерәк киләсәктә үҫәсәк, камиллашасаҡ күкрәк тауышы бар ине. Йылы йәйге кистә Нурҙың боғаҙы түгел, йөрәге йырланы.

Ҡарурманды сыҡҡан саҡта,
Ҡиҫеп алдым пар уҫаҡ,
Ай... айырылмайыҡ дуҫ булһаҡ.
Заманалар ауыр, йылдар ябыҡ,
Дуҫ-иш кәрәк донъя күтәргә.
Ҡарурманга кергән саҡта...

Тора-бара, тыйыуга ҡарамаҫтан, аҡрын ғына, әҙәпле генә итеп ҡыҙҙар ҙа, егеттәр ҙә Нурға ҡушылды һәм ҡара урмандарға бай Өрьяҙы яҡтары моңға күмелде. Юҡ, Өрьяҙы туғайҙары гына түгел, бөтә Ер шары, Йыһан моң менән тулды. Ай, йөҙөүенән туҡтап, һағышлы моңдо тыңлап торҙо, йондоҙҙар шаярышып күҙ ҡыҫышмай башланы.

Моң! Һинән дә матурыраҡ, һинән дә көслөрәк тагы нимә бар икән был донъяла!? Ана шулай, башҡа галактиканан килеп кергән метеор кеүек, Нур ҡапыл, ун өс йәшендә, егеткә әйләнде һәм инде «никрут» булған малайҙар уны тиңдәше һымаҡ күрҙе. Ғәжәйеп нәмә ул дан тигән төшөнсә. Берәүҙәргә, саҡырһа ла, өмөтләнеп көтһә лә, ғүмер буйы килмәй, ялындыра, иңәлдерә, икенселәргә үлгәндән һуң ғына килә, өсөнсөләргә, кистән шәп-шәрә ултырган агас таң атыуға йәм-йәшелгә әйләнгән һымаҡ, көтөлмәгәндә, ҡапыл килә...

Бейеүҙәр тамамлангас, йәштәр әйлән-бәйлән уйнаны. Был уйын байтаҡ ҡына яҡтарҙа ла осрай, әммә бында уның бер үҙенсәлеге бар. Ҡыҙҙар, егеттәр етәкләшеп бал-

даҡ яһағас, уртаға гармунсы сыға, тик ул уртала баҫып тормай, ә түңәрәк менән бергә аҡрын ғына әйләнә. Гармунсы үҙе янына берәй егетте саҡырып килтерә. Ә егет күңеленә оҡшаған ҡыҙҙы алып сыға. Түңәрәк яй ғына йырлай һәм әйләнә, уның менән бергә гармунсы һәм егет менән ҡыҙ ҙа әйләнә. Бер аҙҙан егет үҙенә, ҡыҙ үҙенә алмашсы таба, ә былар түңәрәккә ҡушылып, башҡалар менән бергә әйләнә башлай. «Әйлән-бәйләндән» һуң төрлө уйындар уйнала.

Таң атҡансы күңел асһалар ҙа туймаясаҡ йәштәрҙең кәйефен ҡырып, кемдеңдер тәҡәтһеҙ әтәсе боғаҙын йыртып: «Ҡи-кри-күккк!» тип һөрән һала. Был — таралышырға сигнал була. Хәживәли шул минутта уҡ «Ғәлиәбаныу» көйөн уйнай башлай. Ҡемдер: «Таң әтәстәре ҡысҡыра, таң атыуҙың билдәһе...» — тип өҙҙөрөп ебәрә, үҙенән үҙе түңәрәк хасил була. Был юлы инде уртаға егет менән ҡыҙҙы сығарып тормайҙар, сөнки был — хушлашыу йыры.

Хәживәли бик аҡрын ғына итеп гармунын туҡтата. Ғәҙәттә, гармунсы киске уйындың атаманы була, шуға күрә һәр кистең яҙылмаған программаһын ул алып бара, иртәгәһе көнгә ул «наряд» бирә.

— Иртәгә кесаҙна, — ти ул, яҡ-яғына ҡаранып, — Әтнәкәйгә сығабыҙ. Субай йәштәре лә киләсәк.

Хушлашыу. Таралышыу. Юҡ, бөтәһе лә үҙ өйөнә йүнәлмәй, Нур һымаҡ малай-шалай, ҡыҙ-ҡырҡын ғына өйҙәренә ҡайта, ә буй еткән егеттәр ҡыҙҙар ҡуйынына инеп сумырға тырыша. Киске уйын башланғас та, ҡолаҡтан ҡолаҡҡа шыш-быш китә: «Ҡемдә аулаҡ өй? Ҡем келәттә йоҡлай?.. Ҡем кем янына ҡуна бара?» Бөтәһе лә алдан «планлаштырыла».

«Ҡуна кереү», ғәҙәттә, аулаҡ өйҙәрҙә, ата-әсәһеҙ урында була һәм, ҡағиҙә булараҡ, иҙәндә, һикелә теҙелешеп бер нисә пар ята. Ҡыҙ өҫтөнә байрам күлдәген кейә, битенә кершән яға, хушбуй һөртә. Егет баш кейемен, пинжәген, аяҡ кейемен генә һала. Ҡосаҡлашып яталар ҙа төнө буйы быш-быш килеп һөйләшәләр. Аллам һаҡлаһын, әгәр егет ҡыҙҙы үбергә ынтылһа, ҡулын тейешле-тейешһеҙ урынға һуҙһа, тыйнаҡ ҡыҙ шунда уҡ боролоп ятыр, егетте бороп семтеп алыр, саяраҡтары тороп уҡ китер йә егетте ҡыуып сығарыр. Ә икенсе көндө йәштәр араһында ғәйбәт тарала: «Хисаметдин тик ятмай, үҙен ҡуна кертмәгеҙ». Шуның менән нәфсеһенә хужа була алмаған Хисаметдинга аулаҡ өйҙәрҙең ишеге ябылмаһа ла, ул ҡыҙҙар ҡуйынының йылыһынан мәхрүм була. Егеттәр өсөн йәнә бер ҡаты шарт бар: ул ятыу менән йоҡлап китергә тейеш түгел, ҡыҙына төрлө мажаралар, ҡыҙыҡтар һөйләп көлдөрөргә, күңелен

күрергә мәжбүр. Әгәр егет ятыу менән йоҡлап китһә, йәнә ғәйбәт тарала: «Хөснөтдиндө ҡундырғансы, бесәй балаһын ҡосаҡлап ятыу артыҡ...»

Икенсе көндө инде шишмә буйында, сепаратта һөт айыртҡанда, ырҙын артынан быҙау ҡыуып ҡайтҡанда, тимерлектә ураҡ тешәткәндә, берәүҙәр — һоҡланып, икенселәр, эстәренән янып, Нур хаҡында һөйләнеләр.

— Әйкәйем, ишеттеңме? Тыҡрыҡ Фәтихтең кесе малайы кисә бөтә киске уйынды һуштан яҙҙырған бит...

— Ҡитсе! Нишләгән? Берәйһен сәнскәнме әллә?

— Сәнскән! Хәживәлиҙең гармунында «Ҡара урманды» шул саҡлы моңло уйнаған... иламаған кеше ҡалмаған...

— Алма ағасынан алыҫ төшмәй шул. Фәтих ағай үҙе лә йәшерәк сағында гармун тарта башлаһа, бөтә ауыл, эшен ташлап, урамға сыҡҡан, ти...

— Һәй!.. Моңло кеше бәхетһеҙ була ла ул.

— Һөйләне һүҙ! Хәҙер батша заманымы ни! Нур, Өфөгәме, Ҡазанғамы китәм дә әртис булам, тип әйтә, ти...

— Әртис? Һе-һиии... Ғүмер буйы эт өрҙөрөп, кеше көлдөрөп йөрөй икән...

Эйе, ул замандарҙа гармун бөтә ишектәрҙең дә асҡысы ине: туйҙың түрендә — гармунсы, аулаҡ өйҙөң батшаһы — гармунсы, киске уйында, һабан туйында майҙандың уртаһында — гармунсы һәм... иң сибәр ҡыҙҙар гармунсыныҡы. Бына был юлы ла ун өс йәшлек Нур ҡапыл ҙурайҙы ла китте — киске уйындарҙа хәҙер инде уға бала-саға итеп ҡараманылар. Хәживәли булып Хәживәли үҙе: «Мә әле, туған, мин тиремде ҡатырып алам, һин тарта тор», — тип гармунын бирер ине. Ә өйҙә, буш ваҡыттарында ул атаһының гармунында бер үк көйҙө уйнаны, ун бишәр тапҡыр уйнап, «үҙ асҡысын» табырға тырышты. Сөнки атаһы уға тәү тапҡыр тальянканы һуҙғансы, беренсе әйткән һүҙе шул булды: «Кешегә эйәреп уйнама, үҙеңсә уйнарға тырыш...» Нур тәүҙә был һүҙҙәрҙең төбөнә төшә алманы: «Нисек инде «үҙеңсә?» Бер үк көйҙө төрлө яҡҡа бороп буламы икән ни?» Ул, әйтергә яраһа, тәүҙә «хикмәтләп» ҡараны, бер үк көйҙө ашығып, һуҙып, «аҡыртып», ипләп кенә уйнаны. Бына тыңлап торған атаһы: «Улым, һин мине аңлап бөтмәгәнһең. Үҙеңсә, тигәнем «хикмәтләү» түгел, ә... нисек әйтәйем икән инде? Йөрәгеңде һалып уйна. Һин берәй көй уйнағанда, үҙеңде шул көйҙө сығарыусы кеше урынына ҡуй. Хәҙер аңланыңмы инде?

— Аңлауын аңланым да ул...

— Күҙҙәрең әйтеп тора, аңлап етмәгәнһең. Примирға әйтәйек, ти, мин «Ҡара урманды» уйнайым, ти. Гармунды тубыҡтарыма ҡуйғас та, күҙ алдыма ҡара урманды килте-

рәм. Арыҡ атым арыған... Йөк ауыр... Юл оҙон, соҡорло ла саҡырлы... Ҡояш байып килә... Ә мин әле урмандың уртаһына ла етмәгәнмен... Бер атыма һыҙырам, бер ҡояшҡа ҡарап алам. «Их, берәйһе килеп сыҡһа, юлдаш булыр ине, ярҙамлашыр ине...» — тип көрһөнөп ҡуям... Ана шул ваҡыт, минең ҡулдарым күректе тартҡансы, бармаҡтарым төймәләргә баҫҡансы, йөрәгем йырлай башлаясаҡ:

Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн,
Яҡшы аттар кәрәк үтергә...

Йә әле, тартып ҡара... Ашыҡма, ашыҡма. Яй ғына. Әйтерһең, моң урман эсенән, алыҫтан ишетелә...

Ҡара ла ғына ур-ман... ҡараң-ғы төн...

Артыҡ һыҙланма, урман барыбер бөтәсәк, сәхрә башланасаҡ, йондоҙҙар ҡалҡасаҡ, улар һиңә иптәш буласаҡ... Ә Ҡош Юлы һине оло юлға алып сығыр... Йәле, йә, баштан башла.

Нурҙың күҙ алдына атаһы һөйләгән сиге-ҡырыйы булмаған Ҡариҙел урмандары килеп баҫа. Ул арыған Йондоҙ ҡашҡаһы менән ҡайтып килә... Бер кем, хатта атаһы ла юҡ, төн дөм-ҡараңғы, исмаһам, берәй йондоҙ емелдәһәсе... «Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн...»

Атаһы уны йәнә бүлә.

— Артыҡ моңайма, тинем бит мин һиңә. Һин бит ир-егет. Ә ирҙәр бер ҡасан да, хатта әжәл килеп еткәс тә, ҡойолоп төшмәҫкә тейеш. Бир әле. Бына былай. — Ул гармунды ала, күкрәгенә терәй, күректе тарта башлағансы, төймәләргә баҫҡансы күҙҙәрен йома, фани донъянан айырыла.

Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн,
Әммә килер әле яҡты көн...

— Хәҙер төшөндөңмө?

— Төшөндөм, — тип башын ҡаға Нур.

Әлепте таяҡ тип тә белмәгән, үҙенең имзаһын да ҡуя алмаған Фәтих ағай быңдай нескәлекте ҡайҙан өйрәнгән һуң? Ул бит музыканттар араһында үҫмәгән, бөтә кәсебе иген игеү ҙә мал ҡарау булған...

## Ояһында ни булһа...

Фәтих ун бишенсе бала булып тыуа... Дөрөҫ, тыуған бер бала йәшәмәй, әммә Шәйәхмәттәр ғаиләһе Өрьяҙыла

иң ишле ғаиләләрҙең береһе һанала. Фәтих төпсөк бала булһа ла, айырым иғтибарға кинәнеп, ирәйеп үҫмәй. Һуң, шундай ишле ғаиләлә ҡайҙан иркәләү ҡайғыһы булһын инде! Ҡейем-һалым хаҡында әйтеп тә тораһы юҡ, өс балаға бер пар быйма булһа — бик хуш, йыш ҡына ашарға бөтәһенә лә ҡалаҡ та етешмәй, шуға күрә ике булә ашарға тура килә.

Әммә... халыҡта: «Барлыҡ — татыулаштыра, юҡлыҡ — талаштыра», — тигән мәҡәл йәшәһә лә, Шәйәхмәттәр ғаиләһе бөтә Өрьяҙыға өлгө итерлек берҙәм, татыу ғаилә була, ә балалар береһенән-береһе эш һөйөүсән, кеше өсөн йөрәктәрен ярып бирергә әҙер тороусан ине. Шәйәхмәттәр ғаиләһенә хас йәнә бер үҙенсәлек була: олоһо-кесеһе йыр, музыкаға һәүәҫ булып үҫә. Был һәүәҫлек Фәтихтә лә була.

Ул үҫмер сағында уҡ скрипка яһап, үҙенән-үҙе уйнарға өйрәнә. Аулаҡ урында: ырҙындамы, кистәрен мунсаламы туйғансы уйнай ҙа скрипкаһын йәшереп ҡуя. Ҡөндәрҙең береһендә Шәйәхмәт ҡарт скрипканы табып, төпсөк улын әрләй: «Мине тағы мулланан тиргәттең. Уҙған йомала ғына намаҙҙан һуң вәғәз уҡығанда, Шәйәхмәттең төпсөк улы шәриғәт ҡушмаған эш менән шөғөлләнә икән, тип мине рисуай иткәйне, бөгөн тағы... Шул шайтан уйынсығына башҡа тотонаһы булма!» Ул скрипканы тубығына һуғып һындыра ла утынлыҡҡа ырғыта. Әммә музыкаға булған ялҡын барыбер һүнмәй, Фәтих Уткин тирмәненә барып, ауыр тоҡтар ташый, тинләп аҡса йыя һәм, гармунлыҡ аҡса туплағас, Бөрөгә барып, тальянка һатып алып көнөн урап ҡайта (етмеш ике саҡрым!). Күп тә үтмәй, ул киске уйындарҙың «батшаһына» әйләнә, ә өйгә ҡайтҡанда гармунын күршеләре Шәҙәтйән ағайҙарҙың һаламына йәшерә. Тора-бара был яңылыҡ Шәйәхмәт ағайға ишетелә ишетелеүен, әммә ул тешен ҡыҫа — дәрте, дарманы булғас, ниңә тыйырға, әйҙә уйнаһын.

Бик тиҙ Фәтих исеменә гармунсы тигән һүҙ өҫтәлде һәм ул Өрьяҙы күгендәге иң яҡты йондоҙҙарҙың береһенә әйләнде... Фәтихтең өйләнеүе лә көтөлмәгәндә һәм, әйтергә яраһа, көлкө бер күренештән һуң була.

Ҡөндәрҙең береһендә Фәтих ат менән баҫыуҙан ҡайтып килә. Күрә — ситса лавкаһы янына ҡатын-ҡыҙ йыйылған, күрәһең, сауҙагәр Хисмәтулла Бөрөнән яңы тауар алып ҡайтҡандыр. Фәтих түбәтәйен ҡырынайтыбыраҡ кейә лә аяҡтары менән аттың ҡабырғаларына яй ғына һуғып ала. Ат «аңланым!» тигәндәй күңелле генә юрта башлай. Фәтихтең лавка янында гәпләшеп торған ҡатын-ҡыҙҙарға ла күҙ һалғыһы килә, бер үк ваҡытта, ҡош һымаҡ, осоп та үткеһе килә, шуға күрә ул йәнә атҡа аяҡтары менән сигнал

бирә лә: «Шәберәк, малҡай!» — тип бышылдай һәм тап лавка тураһына еткәндә генә башынан түбәтәйе осоп төшә. Ул, атын туҡтатмай ғына эйелеп, түбәтәйен алмаҡсы була, әммә кемдер: «Фәтих ағай, мәгеҙ түбәтәйегеҙҙе», — тип уға ҡулын һуҙа. Фәтих түбәтәйҙе алғансы ярҙамсыл кешегә баға һәм... саҡ-саҡ атынан ҡолап төшмәй — уның ҡаршыһында бит остарын ҡыҙартып, оялсан йылмайып һушың китерлек сибәр ҡыҙ баҫып тора ине. Кем ул? Кем ҡыҙы?.. Оҙаҡ туҡталып торорға ярамай, лавка янындағы ҡатын-ҡыҙҙар әллә ни уйлар... «Һин кем?» — тип бышылдап һораны ла түбәтәйен кейҙе. «Дәүләт ҡыҙы... Нәсимә...» «Рәхмәт, Нәсимә!» — тип ул теҙгенен тартты: «Киттек, малҡай!»

Ни эшләп ул уны тәүҙә танымай торҙо һуң әле? Сәбәп шул. Нәсимәнең атаһы Дәүләт ағай күпселек ғүмерен Байҡыбаш яғында Ҡоҙғон урманында үткәрә, подрядчик, урман ҡырҡтыра, ташыта, балалары йәй буйы аталары янында була, ә ауыл бәләкәй түгел, бөтә ҡыҙҙарҙы ла белеп бөтөрөп тә булмай, буйға еткәс, улар ир затына бик күренеп йөрөмәйҙәр — шәриғәт ҡушмай.

Ҡыҫҡаһы, күп тә үтмәй, ун ете йәшлек Нәсимә Фәтихтең хәләл ефетенә әйләнде. Һөйләйҙәр, Шәйәхмәт ағай мулланы никах уҡырға саҡыра барғас, хәҙрәт: «Ҡайһы улың өйләнә? Әллә теге гармунсыһымы? Ул булһа, тупһағыҙҙы үтеп керәһем юҡ», — тип ҡырт киҫкән... Мулла «бир» тигәнде түгел, «мәне» ярата тигән мәҡәл борон-борондан килә, Шәйәхмәт ағай никах уҡыған өсөн хәҙрәткә тәкә вәғәҙә иткәс, теге «һыҙланып» булһа ла ризалаша.

Ана шулай Фәтиховтар ғаиләһе барлыҡҡа килә.

Ете бала: ике малай, биш ҡыҙ табып үҫтерәләр улар: Варис, Фәниә, Нәсихә, Нур, Сания, Кәримә, Зәбирә.

Етмеш төрлө һөнәре булған Фәтих ағай иген игеү, мал үҫтереүҙән тыш умарта аҫырай, ҡурай еләге, ҡарағат, алмағастар үҫтерә, күрше-күләндең һабан-тырмаһын төҙәтә, ҡыштарын Өфөгә спиртзаводҡа әрҙәнә ташый... Бына ошо әрҙәнә ташығанда ул үҙенең уҡымай ҡалыуына, тома наҙанлығына бигерәк тә ныҡ әрней. Бер мәл уны килтергән утын өсөн иҫәп-хисап яһарға конторағa саҡыралар: «Знакум, давай деньга получай! — тип ҡағыҙ һуҙалар. — Ита твой фамилия», — тип ҡул ҡуйырға ҡушалар. Ә Фәтих, баҫыу межаһындағы ҡаҙыҡҡа тамға һалыуҙан башҡа бер нәмә яҙа белмәй. Уға урамдан кеше саҡырып, үҙе өсөн ҡул ҡуйҙырырға, тин аҡсаһын әрәм итергә тура килә. Аҡсаһын кеҫәһенә һалып сыҡҡас, ул үҙ-үҙенә һүҙ бирә, юҡ, ант итә: «Ас-яланғас йөрөһәм йөрөрмөн, ауыҙымды асһам, үпкәм күренһә күренер, әммә балаларымдың бөтәһен дә уҡытасаҡмын!»

Фәтих ағай антында торә — бөтә балаларын да кеше итә: урта, юғары белем бирә. Ҡыҙҙарҙың бөтәһе лә тип әйтерлек: Нәсихә, Ҡәримә, Зәбирә педагог була, (Сания ғына медтехникумда уҡый) ғүмерҙәрен мәғарифселек, тәрбиә эшенә сарыф итә, ә малайҙар икеһе лә яҙмыштарын Ҡыҙыл Армия менән бәйләйҙәр: баш бала Варистың утыҙ алты йәшендә үк инде петлицаларында берәр ромб була — бригада комиссары.

Ай, ауырға тура килә етте баланы ла кеше итеүе! Балалар Бөрөлә уҡығанда Фәтих ағай, ауыҙҙарынан өҙөп, уларға аҙыҡ, фатирҙа торған йорттарға утын ташый-ташый йыҡ булып бөтә, Нәсимә еңгәнең тары, һолоно ҙур ағас киләлә төйөп ярма яһай-яһай, ҡулдары һыҙлаусанға әйләнә... Әммә улар һуҡранмайҙар, һыҡранмайҙар, аһ-зарҙарын кешегә һиҙҙермәйҙәр, киреһенсә, күрше-күлән: «Балаларығыҙҙы кеше итәм, тип шул саҡлы интекмәһәгеҙ... Ата-баба уҡымай йәшәгән әле, иншалла, беҙ ҙә йәшәрбеҙ... Етмәһә, хәҙер батша заманы түгел, сәүит власы...» — тип йәлләй башлаһалар, Фәтих ағай: «Ә мин, күрше, балаларымды ата-бабалары йәшәгән һымаҡ йәшәтергә теләмәйем. Беҙ күргәнде улар күрмәһен... ине...» — тип ҡырт киҫә.

Ҡатыны Нәсимә еңгә менән икәү генә ултырғанда, улар ҡартлығыбыҙҙы балаларҙан балаларға ҡунаҡҡа йөрөп үткәрербеҙ, ейәндәребеҙҙе һөйөрбөҙ тип татлы хыялдарға биреләләр ине, әммә һуғыш уй-хыялдарҙы, план-самаларҙы селпәрәмә килтерҙе.

Фәтих ағай менән Нәсимә еңгәгә балаларынан балаларына ҡунаҡтан ҡунаҡҡа йөрөп, шат, бәхетле ҡартлыҡты кисерергә тура килмәне. Балалар, ҡанат сығарып, төрлөһө төрлө яҡҡа таралдылар. Яҙмыштары ла төрлөсә булды.

Тик иңенсе ҡыҙҙары — уҡытыусы Нәсихәгә генә һуғыш ваҡытында иң ауыр йылдарҙа ата-әсәләре менән бергә булырға, ҡулынан килгәнсә уларға ярҙамлашырға тура килде.

Ауырлыҡ — сыныҡтыра, рәхәтлек — боҙа, тиҙәр.

Фәтих ағай ниндәй генә ауырлыҡтар күрмәһен, ҡайғы-хәсрәт кисермәһен, һикһән алты йәшенә етеп вафат була, ә Нәсимә еңгә унан ун ғына йәшкә кәмерәк йәшәй.

Бына минең ҡулымда Фәтих бабайҙың утыҙ туғыҙынсы йылды Мәскәүгә барғас улы Варистың шинелен кейеп төшкән карточкаһы. Петлицаларында берәр ромб. Дүрткелле итеп үҫтерелгән матур һаҡал; ниндәйҙер яҡты йылылыҡ һибеп тороусы күҙҙәр.

Уйланам. Ҡайһы саҡ ҙур белемле, ҙур эштәрҙә эшләгән кешеләрҙең бер, күп тигәндә ике балаһы була, әммә улар шул «икс бөртөктө» лә оло юлға сығара алмай ыҙаланалар,

ә бына имзаһын да яҙа белмәгән наҙан Фәтих ағай ете балаһын да кеше итә алған. Бәлки, шуға күрә уның күҙҙәренән йылы, яҡты нур һибеләләр, бәлки, күҙҙәренең шундай булыуы балаларын ысын Кеше иткәндер... Юҡҡа халыҡ: «Ояһында ни булһа, осҡанда ла шул булыр»,— тимәй бит...

### БЕЛЕШМӘ УРЫНЫНА

Мишкәнән Өрьяҙыға барғанда, ауылға инер алдынан һул яҡта, ҡалҡыулыҡта «теге донъяға» киткәндәрҙең мәңгелек торлағы — зыярат ята. Фәтих бабай менән Нәсимә әбейҙең дә гүрҙәре шунда. Яҙҙарын зыярат сирень сәскәһенә күмелә. Теләр-теләмәҫтән һин туҡтайһың, сәскәләргә ҡарап һоҡланаһың, күкрәгеңде киреп, уларҙың хуш еҫен еҫкәйһең һәм уйланаһың: Ер-әсәбеҙ беҙҙе тыуҙыра, үҙенең күкрәгендә йөрөтә лә кире ҡуйынына ала. Ер аҡыллы, миһырбанлы әсә генә түгел, кисереүсән, ғәфү итеүсән дә. Ҡуйынында ятыусы кешенең уның күкрәгенә баҫып йөрөгәндә ни нәмә эшләүенә ҡарамаҫтан: яҡшылыҡмы, яуызлыҡмы, изгелекме, гонаһымы, барыбер, тикшереп тормай, һөйәктәрен тупраҡҡа әйләндереп, ағастар, гөлдәр, игендәр үҫтерә...

Фәтих бабай менән Нәсимә әбей ҡәберҙәре өҫтөндә мөхәббәт, матурлыҡ сәскәһе үҫә — сирень.

## ӨСӨНСӨ НОВЕЛЛА

### Ир ҡанаты ат була

*Ҡасан ир бала үҙен ир-егет итеп тоя башлай?*

Бөрө йылғаһы өҫтөнән күренер-күренмәҫлек кенә булып аҡ томан күтәрелә. Һалҡынса. Ләкин Йондоҙ ҡашҡаға атланған малай быны һиҙмәй. Ул ат һыртына һалынған иҫке һырмаға баҫа. Төнө буйы һутлы туғай үләне ашап, хәл йыйған ат, «На-а, Йондоҙ ҡашҡа!» — тип ҡыҫҡырыу менән, дәртле юрта башлай. Малайҙы был ғына ҡәнәғәтләндермәй, ул атты тағы ла ҡыҙҙыра төшә: «Әйҙә! Әйҙә! Йондоҙ ҡашҡа!» Ат алғы аяҡтарын бер юлы күтәреп баҫып сабырға тотона. Малай ауыр түгел, тамағы туҡтың күңеле лә көр тигәндәй, ат саң борҡотоп, танау тишектәрен киң асып елдерә генә... Их, Йондоҙ ҡашҡа түгел, Аҡбуҙат булһа икән! Анауы салҡан ятҡан ураҡ айға осоп менеп китер ине... Ә төндәрен Ҡош Юлынан сабыр ине... Ат мышнай башлай. «Ниңә атты шул саҡлы ҡыуҙың? Тирләтеп бөтөргәнһең бит»,— тип, атаһынан әлегеүҙе һи-

рен, малай атты тыя төшә. Малай ултыра һәм, тирә-яҡҡа ҡарының, кинәнеп йырлап ебәрә:

Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй,
Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй...

Был малай, әйтмәһәм дә һиҙенгәнһегеҙҙер инде, — Нур. Ул ат куныргa күмәкләшеп барырға, ә өйгә яңғыҙы ғына ҡайтырға ярата. Ни өсөн?

Ҡайтҡанда ул рәхәтләнеп йырлай, шиғыр «сығара», ат һыртында төрлөсә ҡыланып ултырып: аяҡтарын бер генә яҡҡа һәлендереп, артҡа ҡарап, аяҡтарын ялға табан һуҙып ҡуйып, теҙләнеп, күҙҙәрен йомоп, теҙгенде ебәреп юртырға, сабырға ярата.

Ә ни өсөн ул шулай ҡылана? Шуҡлыҡтанмы? Саялығын күрһәтер, ҡыйыулығын һынап ҡарар өсөнмө? Ихтимал, бөтәһе лә бергәлер, әле уның «тормош ишеген» маңлайы менән төкөп асып, донъяға тәү тапҡыр ҡараған, үҙ һуҡмағын һалған замана бит. Был осорҙа кешелә фантазия менән ысынбарлыҡ, тормошҡа аша алмаҫлыҡ хыял көндәлек мәшәҡәт менән бергә бутала, хатта ҡайһы саҡ уларҙы айырып алып та булмай. Был йылдарҙы балалыҡ тип түгел, ә мажаралар замаңы тип атаһаң да хата булмаҫ.

Атаһы Нурҙы Йондоҙ ҡашҡаға тәү тапҡыр атландырғас, былай тигәйне: «Малай кешенең ирлеге атҡа атланған көндән башлана. Ат эштә — ышаныслы терәк. Яуҙа — тоғро иптәше».

Хәтерләй ул көндө Нур.

Һәйге йылы кис ине. Урамда саң еҫе, күптән түгел генә ҡайтҡан көтөү еҫе. Фәтих ағай бер ҡулы менән Нурҙы етәкләп, икенсеһе менән Йондоҙ ҡашҡаны теҙгененән тотоп, тугайлыҡҡа китеп бара. Баҫыу ҡапҡаһын сыҡҡас, ул, атын туҡтатып, Нурҙан һораны:

— Атланғың киләме?

Һуң, ниндәй ауыл малайының һыбай йөрөгөһө килмәһен инде!

— Би-ик... — тине ул, дәртләнеп, ашҡынып.

Атаһы уны ике ҡуллап биленән тотоп алды ла ат һыртына ултыртты. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ат һырты тәүҙә Нурға бик үк оҡшап етмәне: ул, йомортҡа тәгәрәп төшмәҫлек йомро, шыма булһа ла, ҡаты ине, аяҡтарҙы киң айырып ултырыуы ла уңайһыҙ, ә барыбер рәхәт; ат һыртынан, тауҙан ҡараған һымаҡ, донъя иркенерәк күренә икән.

— Нык ултыр! — тип атаһы уға теҙгенде бирҙе лә аттың осаһына усы менән һуҡты, — елдер әле, Йондоҙ ҡашҡа.

Хужаһын ҡарашынан аңлай торған ат был юлы, ни эшләптер, ҡуҙғалып китмәне, арт яғын һелкетте, Нур шул уҡ секундта осоп барып төштө һәм ҡысҡырып илап ебәрҙе. Атаһы уны күтәреп алманы, йыуатманы.

— Тор! Үҙе йығылған иламаç. Һин бит ир кеше, ә ирҙәр иларға тейеш түгел.

Малай торҙо. Йоҙроҡтары менән күҙ йәштәрен һөртөп алды. Киндер ыштанын ҡаҡҡыланы ла ауылға ҡарай китеп тә барҙы.

— Тороп тор! Тағы атланаһыңмы? — тип ҡысҡырҙы атаһы.

Малай туҡтаны. Ул, күрәһең, был һүҙҙәрҙе түгел, башҡаны көткәндер, боролоп, бер атҡа, бер атаһына ҡарап алды. Сабый йөрәгендә ике тойғо алыша ине: башҡа бер ҡасан да атҡа атланмаçҡа; икенсе тойғо — атлан, башҡа малайҙар кеүек, ҡош шикелле елдерергә өйрән...

Икеләнеү оҙаҡҡа һуҙылманы. «Атланам!» — тине ул. Фәтих ағайға улының ныҡышмалығы оҡшаны. Нур йәнә ерҙән айырылды, йәнә, «бейек тауға» менеп ултырҙы.

— Шуны бер ҡасан да онотма, улым, ир-егет иçән сағында эйәрҙән йығылып төшөргә тейеш түгел!

Нурға был һүҙҙәр ирмәк тойолдо.

— Беҙҙең эйәр юҡ та, атай...

— Эш эйәр булыуҙа, булмауҙа түгел, ә... Был.. арба эҙенән сыҡма тигәнде аңлата. Хәҙер төшөндөңмө?

— Арба эҙенән сығып, юл ситенән барып булмаймы ни?

Фәтих ағай был юлы атын етәкләп алып китте, күрәһең, Нурҙы ҡабат осороп төшөрөргә теләмәгәндер, ни генә тимә, сабый бит, ни генә тимә, балаң бит, йә имгәнеп ҡуйыр. Аҙыраҡ барғас, ул йүгерә башланы, боролоп улына ҡысҡырҙы.

— Ныҡыраҡ тотон! Ҡурҡма! Ҡурҡҡан кеше бер ҡасан да батыр була алмай.

Фәтих ағай ат алдынан бер аҙ йүгереп барҙы ла, Йондоҙ ҡашҡаны дәртләндереп: «Әйҙә, малҡай!» — тип һөрәнләп, юлдан ситкә сыҡты. Ат шәберәк юрта башланы, Нур: «Ай! Ай!» — тип ҡысҡырҙы, ат «миңә әйтәләр» тигән шикелле юртыуын тағы ла шәбәйтте. Нурҙа ҡапыл ҡурҡыу тигән хис осоп китте һәм, үҙе лә һиҙмәçтән: «Һайт, малҡай!» — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Быны ишеткән ата мыйыҡ остарын баш бармағының тырнағы менән һыпырып ҡуйҙы, ат артынан бер аҙ йүгерә-атлап барҙы ла: «Йондоҙ ҡашҡа! Тыррр!» — тип ҡысҡырҙы, хужаһының тауышынан түгел, тын алышынан ни әйтергә теләгәнен аңлауса аҡыллы бейә шып булды. Малай, ауыҙын йырып, артына боро-

ләп, атаһының килеп етеүен, маҡтауын һәм аттан төшөрөүен көттө.

— Малатчина, улым! Үҙеңдән кауалирист сығасаҡ. Ә хәҙер төш!

— Тө-өш?.. Ә мин ҡурҡам...

— Беләһеңме ир бала ҡасан үҙен ир-егет итеп тоя? Атҡа ырғып менеп, һикереп төшә башлағас. Йә әле!

Нур бик аҙға ғына юғалып ҡалды ла, аттың ялына йәбешеп, ергә шыуып төштө.

Атай кеше баш бармағының тырнағы менән (ҡәнәғәт сағындағы яратҡан ғәҙәте) мыйыҡтарын һыпырып алды.

— Малатчина! Үҙеңдән бынамын кауалирист сығасаҡ.

Бәләкәй саҡта Нур атты йә кәртә, кәртә булмаһа, арба янына килтереп атланды, унан бер аяғын теҙгенгә ҡуйып менергә өйрәнде, ә инде үҫмергә әйләнгәс, йәғни бына хәҙер — бөгөн — ул ат һыртына ике ҡуллап йәбешә лә, аяҡтарын ерҙән этәреп, үҙен өҫкә сөйә һәм һә тигәнсе менеп тә атлана. Олораҡ малайҙар атты юрый юрттырып, йүгереп килеп, бер яҡ ситтән атланалар, әммә Нурға әле был «номер» бирелмәй — буйы бәләкәйерәк, ихтимал, берәй йылдан ул да шулай атлана башлар ,ә хәҙергә ул туғай яңғыратып йырлай:

Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй...

Ағаһы Варис күптән ауылдан «башын алып» сығып китте, шуға күрә атты ҡуна барып ашатыу «вазифаһы» Нурға иртә төштө. Дөрөҫ, тәүҙә ул атаһы менән бергә йөрөнө, Фатих ағай улын «төнгө һабантуйға» ылыҡтырыу өсөн ҡуна ҡалғыланы, ә тора-бара йүгәнде Нурға тапшырҙы: «Хәҙер һин ҙур инде, үҙ алдыңа йәшәргә өйрән, улым».

...Ат ҡуна барыуҙар... Хәҙерге ауыл йәштәре уның тәмен дә, йәмен дә белмәй һәм улар халҡыбыҙҙың бик күңелле бер йолаһынан мәхрүм. Юҡ, мин быны үткәнде һағыныуҙан һыҡрап әйтмәйем, хәйер... һағынһам да ғәйепме ни — әкиәтте һағыныу — үҙе бер яҡшы һыҙат бит.

Ат ҡуна барыуҙы юҡҡа ғына «төнгө һабантуй» тип йөрөтмәйҙәр. Бында шаярыуҙың, шуҡлыҡтың сиге булмай, хатта саманы үтеп тә киткеләйҙәр: ҡаты йоҡлаған малайҙы — йоҡо һүлмәгән, яй ғына урынынан күтәреп, ситкә, ҡыуаҡ эсенә, илтеп ташлайҙар, теге өшөп уянып киткәс, үҙенең ҡайҙа ятҡанын, ни эшләп бында килеп ятҡанын аңламай, иҫәңгерәп тора; Нур һымаҡ малайҙарға өлкәнерәктәр күмерҙән һаҡал-мыйыҡ яһайҙар, хатта, ыштандарын төшөрөп, башҡа ерҙәренә лә мыйыҡ эшләп ҡуялар. Шуны ла әйтергә кәрәк, еткән ағайҙары, кәләш булырлыҡ апай-

ҙары булған малайҙар менән артыҡ этләшмәйҙәр, киреһенсә, сибәр апайҙары булған малайҙарҙы «ҡәйнеш» тип кенә йөрөтәләр, ятҡанда усаҡ яныныраҡ урын бирәләр.

Нисек кенә булмаһын, бер малай ҙа ат ҡуна барыуҙан баш тартмай, ул унда имтихан тотоп, «егетлек танытмаһын» ала.

Ат ҡунырға, ғәҙәттә, бер урам малайҙары йыйылышып бергә бара. Малайҙары булмағандар үҙҙәре йөрөй, олоғайған булһалар, аттарын күршеләренеңме, яҡында тороусы туған-тыумасаларыныңмы малайҙарына биреп ебәрәләр. Дөрөҫ, бушҡа түгел, аҙаҡ нисек тә әжерен ҡайтаралар. Бәй! Иртәнге ысыҡта, томанда кеше атын эҙләүе, әгәр ул holoҡhoҙ ҙа булһа, уны тотоп йүгәнләүе (тамағы туҡ аттың һин һуҙған икмәккә бик иҫе китмәй), еүештә тығыҙланып, уҡмашҡан тышауҙы сисеүе еңел эшме ни! Ә ҡайһы бер ат, яҡын-тирәлә тәмле, һутлы үлән булһа ла, тағы ла тәмлерәкте эҙләпме, биләмсе ҡатындар шикелле, йөрөргә яратыуҙанмы, әллә ҡайҙа китеп олаға. Ундай атты эҙләй-эҙләй күҙең тона. Аяҡтарың манма һыу була... «Башҡа бармайым ат һаҡларға» тип сәмләнеп ыҙаланып йөрөйһөң дә киҫкә табан асыуҙарың бөтә, күңел йәнә туғайға тарта.

...Киске аш ашалғас, күҙ бәйләнер ваҡыт еткәндә, урам сатындамы, ауыл осондамы «эскадрон» туплана башлай. «Биләм» сабырға яратыусы ҡайһы бер аттарҙың муйынына йә кескәй генә ҡыңғырау, тимерсе яһаған дүрткелле, йәлпәксә «сигнализатор» * тағалар, шунлыҡтан, «эскадрон» ҡуҙғалып киткәс, ниндәйҙер аңлайышһыҙ, әммә ҡолаҡҡа ягымлы оркестр хасил була.

Малайҙарҙың аҫтында иҫке бишмәт, тун, йылы йәй көндәре булһа ла, баштарында бүрек (төндәрен Бөрө туғайлығында һалҡынса), арҡаларына, яурындарына аҫҡан муҡсала икмәк ҡыйырсығы, бәрәңге.

Бына ун-ун биш һыбайлы бер урында уҡмаша. Аттары баштарын эйеп, бер урында тик кенә торһалар ҙа, малайҙар: «Тррр, малҡай!» — тип уларҙы тыйған булалар, шаян, төртмә һүҙҙәр әйтешеп, бер-береһен ирештерешәләр, аҡһаҡалдар һымаҡ «донъя хәлдәре» менән уртаҡлашалар.

Ә ниңә улар ҡуҙғалырға ашыҡмай һуң? Кемде, нимә көтәләр? Улармы, улар бер кем һайламаған, әммә йәше олораҡ булыу йәки башҡа ниндәйҙер айырым сифаттары арҡаһындамы «атаманға» әйләнгән Мирғасимды көтәләр.

Мирғасим — телгә бөткән, шуҡ, шаян, илгәҙәк егет. Дөрөҫ, уның китек-ҡотоҡ яҡтары ла юҡ түгел. Мәҫәлән, ул

---

* Был ҡулдан, кустарь ысул менән, яһалған ҡыңғырауҙы төрлө яҡта төрлөсә атап йөрөтәләр: даңғырлыҡ, доңғор һ. б.

балараҡ сағында граната детонаторы табып, уны шартлатҡанда, һул ҡулының ике бармағын өҙҙөргән, быны бөтә ауыл белә, әммә башҡа ауылға барһа, Мирғасим: «Ат бирмәгән өсөн аҡтар нагандан атып китте», — тип маҡтана. Ярай, ботаҡһыҙ ағас, сатаҡһыҙ кеше булмаҫ, был йомшаҡлығы өсөн гәфү итәйек. Мирғасим, үҙ ҡәҙерен белепме, әллә йортта ыҙаланыпмы, һәр ваҡыт һуңлабыраҡ килә, килгәс, теге... граждандар һуғышы ваҡытында улар ауылы аша үткән отрядтың командиры кеүек, теҙгенен бер ҡулы менән генә тартып тотоп, башын ғорур күтәреп «эскадронын» әйләнеп сыға ла: «Йә, егеттәр, киттекме?» — тип һорар. Бер юлы: «Киттек! Киттек! Ату Тау урамдары беҙҙең аҡланды алыуы бар...» — тип шаулаша башлайҙар. Тәҙрәнән, ҡапҡа ярығынан атайҙары, ағайҙары күҙәтеп тороуҙан шөрләп, «эскадрон» ауылдан яй ғына сыға. Көнө буйы эшләп арыған аттарҙы юрттырмайҙар, ҡыуаламайҙар, әммә баҫыу ҡапҡаһын сығыу менән «хөрриәт» башлана: Мирғасим кейеҙ эшләпәһен һалып, атының әле уң, әле һул осаһына һуға ла: «Әтрәт! Алға!» — тип ҡысҡырып ебәрә. Бына бер ваҡыт саң күтәрелә, һыҙғырыу, аҡырыу, сыйылдау, һайтылдау башлана... Аттары йүгеректәр ҙә Мирғасимды уҙып китмәҫкә тырышалар, сөнки «атамандың» хәтере ҡаласаҡ, төнө буйы сыбыҡ-сабыҡ, ҡоро-һары йыйҙырып, атын ҡаратып интектерәсәк.

— Сто-оой! Туҡта-а! — тип Мирғасим команда бирә, һыбайлылар теҙгендәрен тарта йәки бушайта төшәләр (ҡайһы бер ат теҙгенде тартҡанға туҡтай, ҡайһы берҙәре теҙгенде бушайтҡанға аҙымын аҡрынайтырға, туҡтарға өйрәтелгән). — Дабай йырлайбыҙ! — тип бойора Мирғасим һәм үҙе матур булмаһа ла көслө тауыш менән башлап ебәрә.

Ағиҙелгә ағып төшә
Беҙҙең Бөрө йылғаһы.
Йәшәһен Совет власы,
Рәхәт уның донъяһы...

Ана шулай улар көн һайын шаулашып, йырлашып, Бөрө туғайлығына килеп етәләр, аттарын тышлаулап ебәргәс, «атаман» күрһәткән урынға туплаһалар. Шуны ла әйтергә кәрәк, гел бер урында ғына ат ашатыу, ҡунлыу юҡ, «лагерь», үләндең ҡалын, йоҡа булыуына ҡарап, үҙгәреп тора.

Бына бер ваҡыт бөтә ҡунасылар ҙа йыйыла. Әлеге лә баяғы Мирғасим (гәҙәттә, уның бер-ике адъютанты тимме, деньщигымы була), хәҙергесә әйткәндә, «планерка» үткә-

рә: кемгә ҡоро-һары йыйырға, кемгә усаҡ яғырға, кемгә бәрәңге бешерергә...

Килә шундай илаһи минут! Уны башҡа бер нәмә менән дә сағыштырып та булмай: сатыр-сотор килеп усаҡ тоҡанып китә, осҡондары, йондоҙҙар янына барып ҡушылырға теләгәндәй, күккә оса ла хәле бөтөп һүнә...

Яҡында ғына, татлы үләнгә кинәнеп, аттар бышҡырып ҡуя; ҡайҙалыр йоҡоһоҙлоҡ менән ыҙаланыпмы, төш күрепме, тәлмәрйендәр баҡылдай, ҡайҙалыр ниндәйҙер ҡош сутылдап ала, тартай, бүҙәнә ҡысҡыра. Күп тә үтмәй, танауҙарҙы ҡытыҡлап, тирә-яҡҡа көлгә күмелгән бәрәңге еҫе тарала. Кемдер таҡмаҡлап ала:

Ағиҙелкәйҙең буйҙарын
Сандал кейеп буйлама,
Үҙең нисек, мин дә шулай,
Ялыныр тип уйлама.

Мирғасим:

— Бөгөн бәрәңге ашағандан һуң әкиәтте Хөснияр башлап ебәрә, — ти. — Ҡарағыҙ, малайҙар, — ул Нур һымаҡ әле танау аҫтарын йүнле-башлы кипмәгәндәргә мөрәжәғәт итә, — әҙер тороғоҙ, кемдең исеме сыға, шуға әкиәт һөйләргә. — Әкиәт оҡшаһа, ул: «Нисауа! Һинән мәғәнә сығасаҡ!» — тип әкиәтсене маҡтаған була ла үҙе һөйләп алып китә: «Борон-борон заманда Әбей батша — минең эстерәпкә, ә мин батша, кәзә генерал, Сөсө күмәс Нуретдин адмирал булған саҡта... булған, ти, шундай мәрәкә...» (Ә Сөсө күмәс урамында йәшәүсе Нуретдин Балтика флотында матрос булып хеҙмәт иткән). — Әкиәт ошо урында өҙөлә, һәм Мирғасимдың оҙон имән бармағы усаҡты тирәләп ултырған малайҙарҙы йөрөп сыға ла берәйһенең күкрәгенә төртөлә: «Шағәли, башла!» «Харис, алып кит...» Әкиәт өҙөлмәй дауам итергә тейеш. Әгәр малай ыҡ-мыҡ итеп торһа, быҒаса һөйләнмәгән яңы әкиәт белмәһә, үҙенең уйлап сығарырға һәүәҫлеге булмаһа, «атаман» уны аттар ҡарарға, ҡоро-һары йыйырға ебәрә.

Ә бына кисә кис Мирғасимдың оҙон бармағы Нурҙың күкрәге ҡаршыһында туҡталды.

— Давай-ка, егет, арала һин иң йәше булһаң да, ушлы малайһың, башла!

Нур был кистең уға ла килеп етәсәген көткәйне һәм ошо көнгә әҙерләнгәйне лә, ул Туҡайҙың, Ғафуриҙың тиҫтәләгән шиғырҙарын яттан белә, ләкин, ни эшләптер, төнгө усаҡ янында ғәҙәттә гел әкиәт, әкиәттең дә гел шомлоһо һөйләнелә торғайны. Тындарын сығарырға ҡурҡып ултыр-

ған малайҙар, әкиәт батырҙарының аҙаҡ еңеп сыҡҡанын ишеткәс, иркенләп һулап ебәрәләр, көлөш-шаярыш китә.

Нур, традицияны боҙоп, әкиәт түгел, ә шиғыр уҡырға булды. Ул торҙо, тулҡынланыуын баҫырға теләп, тамаҡ ҡырып алды. Мирғасим уға.

— Ултырып ҡына һөйлә, — тине.

— Юҡ, шиғырҙы ултырып уҡырға ярамай, — тине Нур, ҡапыл ҡыйыуланып.

— Шиғыр? — тине кемдер, мыҫҡыллы көлөп, — ә кемгә кәрәк ул шиғыр? Нур уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалманы, аҡрын ғына, хисләнеп, дөрләп яныусы усаҡҡа ҡарап уҡый башланы.

Тау башында имән янында
Бар исемһеҙ бер ҡәбер.

Нурҙың тауышы ҡатылана башланы.

Ул ҡәберҙә йоҡлап ята
Ҡыҙыл партизан Кәбир.

Нурҙың тауышына, гармун моңо һымаҡ, лирика сыҡты.

Һандуғастар килеп ҡунып
Кәбирҙе маҡтап һайрай.

Нурҙың тауышында тимер сыңлауы яңғыраны.

Дошмандарҙы бөтөрөргә
Һандуғас та теш ҡайрай.

Нур инде сәхнәнән уҡыусы декламаторға әйләнде.

Кәбир тора йоҡоһонан,
Ҡошсоҡто ярһып тыңлай.
«Ас ҡәберҙе, сығайым», — тип
Ҡоштан ялынып һорай.

Ҡошсоҡ әйтә: «Көсөм етмәй
Ҡәбереңде асырға.
Минең ҡулымдан килә бит
Күктә генә осорға».

Ҡошсоҡ тотондо ҡәберҙе
Суҡыш менән ҡаҙырға,
Йылы яҡҡа осоп китмәй,
Кәбир менән ҡалырға,
Яңы тормош төҙөр өсөн
Оло юлдар һалырға...

Нур уҡып бөткәс, тын алырға ҡурҡып, Мирғасимға табан ҡараны.

— Кем сығарған был шиғырҙы? — тине Мирғасим, урынынан тора төшөп. — Туҡаймы? Ғафуримы?

— Үҙем яҙҙым, — тине Нур, ниңәлер ҡаушап.

— Үҙе-еңме? — тип һораны бер нисә малай берҙәм.

— Ниңә, үҙем шул, — тине Нур, инде батырая төшөп. — Минең ундай шиғырҙар күп ул...

Мирғасим ашыҡмай ғына урынынан торҙо, ниңәлер, өҫбашын ҡағып, усы менән сәсен һыйпап алды, Нур янына килде, шапылдатып уның арҡаһына һуҡты.

— Шә-әп! Һинән ысын шағир сығасаҡ. Давай хәҙер көн һайын кис усаҡ яҡтыһында үҙең сығарған шиғырыңды уҡы. Әкиәт һөйләшергә беҙ малай-шалайлыҡтан сыҡҡан инде. Шулай бит, егеттәр? — Ул тирә-яғына ҡарап алды.

Усаҡ тирәләй ултырған малай-шалай: «Шулай! Шулай!» — тип уны хупланы.

Мирғасим, уны ошо көндән, дөрөҫөрәге, төндән алып «нарядтан» ҡотҡарҙы: «Шағирҙан утын йыйҙырмаҫҡа. Шағирҙан ат ҡаратмаҫҡа. Шағирҙы усаҡ янында төтөнһөҙ яҡҡа ултыртырға», — тип «указ» сығарҙы, әммә Нур был «указға» буйһонманы, башҡалар ни эшләһә, шуны эшләне. Ҡыҫҡа йәйге кистәрҙә элекке кеүек тилереү, саманы онотоп шаярыу, кесерәктәрҙе мыҫҡыллау, йәберләү тора-бара бөттө. Усаҡ янында Нур Ғабдулла Туҡай, Мәжит Ғафури шиғырҙарын уҡыны.

Ә төнгө усаҡ янында шаян йондоҙҙар менән биҙәлгән ҡарағусҡыл зәңгәр күк сатыры аҫтында ни нәмәләр хаҡында ғына һөйләшмәнеләр икән улар! Алла, фәрештәләр, йәһәннәм, ожмах, хур ҡыҙҙары ла ситтә тороп ҡалманы...

Бында «атаман» үҙе айырыуса шәп ине. Ата-әсәһе уҡымышлы булмаһа ла, ул кемдәндер ишеткәндәрен шундай тәмләп, үҙе күргән шикелле итеп оҫта һөйләй, усаҡ янындағы малайҙарҙың күҙҙәре утлы күмергә әйләнә.

— ...Бына бер ваҡыт аллаһы тәғәләнең әмере буйынса мәхшәр көнө башлана. Бөтә үлектәр терелеп, ҡәберҙәренән сығалар.

Малайҙарҙың береһе уны бүлдерә.

— Нисек, шәрә көйгәме?

— Знамы, шәрә көйгә түгел. Юҡҡа үлгән кешеләргә аҡ кәфен кейҙерәләрме ни. Гүрҙәренән тороп сыҡҡан кешеләр тәүҙә үҙҙәренең ҡайҙа икәнлектәрен белмәй аптырарҙар, аҡырырға-баҡырырға тотонорҙар, ата-әсәләр—балаларын, балалар ата-әсәләрен эҙләй башларҙар, ти... Тәүҙә ата — улды, ҡыҙ — әсәһен танымаҫ... Знамы, улар бит мең-мең йылдар буйы бер-береһен күрмәгән .Ошо ваҡыт, утлы суҡмарын тотоп, фәрештәләр кешеләрҙе судҡа ҡыуа башларҙар, ти. Юғары хаким бармағы менән төртөр ҙә, — Мирға-

сим үҙе юғары хаким шикелле оҙон бармағын берәй малайға һуҙа: «Ну-ка, иптәш, ғәмәл дәфтәреңде күрһәт», — тиер. Юғары хакимдың памушниктары ғәмәл дәфтәрен аҡтарып, теге кешенең фани донъяла эшләгән изгелектәрен, гонаһтарын судҡа һалалар, бизмәнгә һалып үлсәйҙәр. Әгәр ҙә мәгәр тегенең аҙ ғына ла изгелеге булмаһа, р-рас, дөрләп янған йәһәннәмгә...

Ә ҡайһы берәүҙәрҙең изгелеге менән гонаһы бер сама була, Юғары хаким елкәһен ҡашый ҙа памушниктарына ҡарап ала: «Был бәндә менән ни эшләргә инде?» Памушниктары: «Иптәш Юғары хаким, давай беҙ уны сират күпере аша үткәрәбеҙ, шунда уның кемлеге билдәле булыр», — тип кәңәш итәләр. Ә сират күпере, беләһегеҙме, ниндәй? Ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер. Шунан теге кеше табандарын яра-яра сират күперен үтә башлай. Инде яртыһына еттем тигәс кенә — «бух!» дөрләп янған утҡа... «Значит тәк, — ти Юғары хаким, — былай булғас, һәр кемдең ғәмәл дәфтәрен тикшереп, изгелектәрен, гонаһтарын бизмәнгә һалып үлсәп маташмайбыҙ, прәме сират күпере арҡыры ғына үткәрәбеҙ, ату, мең йылда ла судты бөтөрөп булмаç, ә беҙгә иртәгә аллаһы тәғәләгә отчет бирергә кәрәк».

Шунан китә этеш-төртөш... тартыш-талаш... Берәүҙәр, тиҙерәк сират күперен кисеп сығып, ожмахтан яҡшыраҡ урын алырға тырыша, икенселәр, фани донъяла эшләгән гонаһтарынан ҡурҡып, артҡараҡ китергә, ҡасырға ынтыла...

Бына минең кеүектәр, — ти Мирғасим, күкрәгенә төртөп, — сират күперен выжт итеп үтеп китә лә ожмах ишеге төбөнә килеп туҡтай. Ә ожмахтың ишеге, беләһегеҙме, ниндәй?

Усаҡ тирәләй ултырған малайҙар берҙәм һорайҙар:

— Ниндәй?

— Саф алтындан. Тәк вәт, мин тәфәкел, шәфәкел тиеү менән, ишек шар асыла, — ул инде хәҙер «теге донъяла» булып ҡайтҡан кешеләй һөйләй башлай. — Ишек төбөндә, етмеш ҡат ебәк келдәк кейгән булһалар ҙа, тәндәре күренеп торған етмеш хур ҡыҙы мине көтөп тора. Шунан мин, уңға-һулға боролоп, сәләм бирәм дә һайланырға тотонам. Ә тегеләр, минең ай-вайыма ҡарамай, мине ҡултыҡлап, ебәк сымылдыҡ эсенә алып кереп китәләр. Ә унда... ни теләйһең шул бар: алма-хөрмә, ҡаҙ ите, һарыҡ ите, аҡ икмәк, ҡара икмәк, бәлеш, ҡоймаҡ... Ә һин: «Минә, давай, ҡыçыр ыумас ашы бирегеҙ», — тип талымһынған булаһың... Шунан хур ҡыҙҙары: «Юҡ, юҡ, Мирғасим, һин теге донъяла ла ыумасты күп ашаның, хәҙер беҙ һине гел итле аш та

бәлеш менән генә һыйлайбыҙ», — тип тотоналар мине хөрмәт итергә. Ҡорһағым ҡаптай була, тегеләр һаман тауыҡ ите, ҡаҙ ите һоғондоралар. Шунан мин уңға-һулға һелтәнәм дә һикереп торам: «Етте, ату шартлайым. Хәҙер урын йәйегеҙ, минең йоҡлағым килә!» — тип бойорам. Хур ҡыҙҙары шырҡ-шырҡ көләләр: «Әй, иптәш Мирғасим, ожмахта йоҡлау юҡ, хәҙер һин беҙҙең менән алмаш-тилмәш ят», — тип бер-береһен этешеп, мине ҡосаҡларға тырышалар... Рәхәт ожмахта, малайҙар, эш юҡ, мәшәҡәт юҡ... Ашап-эс тә хур ҡыҙҙары менән шаяр...

Теге түҙемһеҙ малай йәнә һорау бирә.

— Ә кем һинең өсөн утын әҙерләй, бесән саба, иген игә, мал аҫырай?..

— Кем? — Мирғасим уға мыҫҡыллы ҡарап ала. — Бөтәһе лә алла ҡөҙрәте менән эшләнә. Бер күгәрсен ашайһың икән, йөҙ күгәрсен һинең ауыҙыңдан осоп китә. Бер алма өҙһәң, уның урынына йөҙ алма үҫә.

Ҙурыраҡ малайҙар уны ирештерә башлай:

— Мирғасим, ожмахҡа мине лә эйәртеп алып кер әле.

— Һин бит изге: ураҙа тотаһың, биш тапҡыр намаҙ уҡыйһың...

Китә көлөш, Мирғасимды ирештереү... Әле генә уны мауығып тыңлаған малайҙар ҙа ҡапыл һүреләләр һәм быйның туҙға яҙмаған әкиәт икәнлеген аңлап, усаҡ тирәһенән ҡуҙғалып, аттарын ҡарарға китәләр, урын йәйә башлайҙар.

Юҡ, улар күк менән, хур ҡыҙҙары менән генә мауыҡмайылар, ә ниндәй генә хыял диңгеҙендә йөҙмәнеләр ҙә, аҡбуҙ аттарға атланып, ҡайҙарға ғына елдермәнеләр, ниндәй генә батырлыҡтар эшләмәнеләр...

...Ат ҡуна барыуҙар... Йөҙгә еткән ҡарттар ҙа ул бәхетле саҡтарҙы һағынып һөйләйҙәр.

## ДҮРТЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Ҡарға ла һөйләшә белә

Бөгөн Нурҙың кәйефе уғата шәп ине — ул бит кисә кис тәү тапҡыр үҙенең шиғырын ҡысҡырып уҡып, ат ҡуна килгән малайҙарҙы, малайҙарҙы ғына түгел, олораҡтарҙы ла шаҡ ҡатырҙы, ана, шуға күрә лә Бөрө туғайлығын яңғыратып йырлай, атын муйынынан ҡосаҡлап иркәләй.

Шул саҡ ул юл аша алпан-толпан атлап сығып барыусы йоҙроҡ саҡлы йән эйәһен күреп ҡалды: атын ҡапыл туҡтатты. Был ҡош — ҡанаты ҡайырылған ала ҡарға балаһы ине. Күрәһең, йә ул ояһынан йығылып төшкәндер, йә берәйһе яңылыш өҫтөнә баҫып, имгәткәндер. Нур, аттан һи-

керсп төшөп, ҡарға балаһы артынан теркелдәне. Ҡошсоҡ упап ҡурҡты, осорға итте, әммә оса алманы, әрекмән аҫтына инеп боҫто. «Ҡар, ҡар... ҡурҡма. Мин һиңә теймәйем, ҡурҡма!»—тип Нур унын артынан ҡалманы. Ҡошсоҡ унын уҫал ниәт менән түгел, яҡшылыҡ эшләргә теләүен аңланы ахыры, башын әрекмән аҫтынан сығарып, Нурға табан боролоп, әле нығып бөтмәгән тауыш менән «ҡарр!» тип ҡысҡырып ҡуйҙы.

«Ҡурҡма, ҡошҡайым, ҡурҡма, мин һиңә теймәйем. Хәҙер өйгә алып ҡайтып, ҡайырылған ҡанатыңды дауалармын, ашарға бирермен...» — Ул ҡошсоҡто йылы усына алды ауыҙына ипләп кенә тын өрҙө. Әле һаман да кешегә ышанмай, дер-дер ҡалтыранып торған ҡошсоҡ тыныслана төштө, инде көрөрәк тауыш менән «ҡарр» тип ҡысҡырҙы — унын был ҡысҡырыуында һағайыу түгел, ә шатлыҡ нотаһы ишетелде.

Нур ҡайтып кергәндә, атаһы умарталарын ҡарарға йыйынып йөрөй ине. Нур аттан һикереп төшөү менән атаһы янына йүгерҙе.

— Атай, ҡара әле, бына мин нимә таптым!

Фәтих ағай улының сикһеҙ шат күҙҙәренә ҡарап уйлап алды: «Моғайын, аҡса тулы янсыҡ тапҡандыр». (Йәйә эсендә әйтеп үтәйем, Фәтих ағай бөтә ауылда ихтирам ителгән тырыш, «етмеш төрлө һөнәрле» кеше булһа ла, башы, ғаиләһе нужанан сыҡманы, шуға күрә, күпселек крәҫтиәндәр кеүек, ул да аҡса, хазина табыу менән хыялланды.)

— Нимә, хазина таптыңмы? Аҡса янсығымы?

— Бына! — Нур ҡуйынынан ҡарға балаһын сығарҙы. — Ҡанаты ҡайырылған бахырҙың. Шундай йәлләтеп ҡысҡыра...

Атай кеше был осраҡта ни әйтергә тейеш? Әллә, бер нәмә лә әйтмәй, ҡул ғына һелтәргәме? Бәлки, юҡ менән булашырға һин бит хәҙер сабый түгел, буйға етеп киләһең, тип орошорғамы? Ҡарға ла булған ҡош. Ана, улар беҙҙең тирәк башында ла көнө буйы ҡарҡылдап туйҙырып бөтөрәләр, тип асыуланырғамы?.. Юҡ, мал яратыусы, тәбиғәтте үлеп яратыусы, ергә ятып, үлән үҫкәнен тыңлаусы Фәтих ағай улай итмәне, эшен ташлап, улы янына килде.

— Ҡана, ҡарайыҡ әле, йүнгә инерлекме?

Ул ҡошсоҡтоң ҡайырылған ҡанатын ипләп кенә ҡапшап, ҡуҙғатып, борғолап ҡараны. Ҡошсоҡ, бахыр, ҡалтыранды, күҙҙәренә ҡурҡыу сыҡты, әммә ҡысҡырманы, күрәһең, ул кешенең уға яманлыҡ түгел, яҡшылыҡ эшләргә теләүен аңлағандыр. Фәтих ағай бармаҡ остары менән ҡарға балаһының ҡанатын ыуҙы, ә үҙе өҙлөкһөҙ йыуатыу һүҙҙәре әйтте.

— Ҡурҡма, ҡурҡма, мәхлүк йән, мин һине йәберләмәйем... Хәҙер тайған ҡанатыңды урынына ултыртырбыҙ... Дегет һөртөрбөҙ... Ашатырбыҙ... Ҡанатың төҙәлгәс, осороп ебәрербеҙ...

Ҡарға балаһы менән Нур бер-береһенә шул саҡлы эйәләштеләр, ҡанаты төҙәлгәс, ул Нурҙың ҡулбашына һикереп менеп, усынан ашай башланы, бесәйҙән дә ҡурҡманы, уның ҡаршыһына килеп, үҙенсә нимәлер әйтте, бесәй һыртын ҡабартып, ҡойроғон күтәрҙе, әммә янынан китмәне, тәпәйе менән уны сысҡан шикелле шаяртмаҡсы булды, ҡошсоҡ шаҡтай ҡәтғи тауыш менән: «Ҡарр!» — тип ҡуйҙы, бесәй китеп барҙы, йәнә йүгерә-атлап уның янына килде, был юлы инде: «Әйҙә шаярайыҡ», — тигән тауыш менән яғымлы ғына итеп: «Ҡарр» — тине. Бесәйҙең күҙҙәре уйнаны: «Мыяуу», — тип иркәләнеп яуап бирҙе. Ана шул көндән алып улар араһында дуҫлыҡ башланды. Ҡар-ҡарҙы (Нур уға шундай исем ҡушты) зирәклеге, илгәҙәклеге өсөн Мыяубикә генә түгел, кешеләр ҙә, хатта күршеләр ҙә яратты. Нур уны: «Ҡар-ҡар! Ҡашыҡты килтер! Ҡар-ҡар! Ҡашыҡты урынына илтеп ҡуй!» — тигән командаларҙы үтәргә генә түгел, бер нисә һүҙ әйтергә лә өйрәтте: «Баррр», «Шаррр», «Маррр». Ул, Нур берәй ергә китеп, оҙағыраҡ торһа, күңелһеҙләнде, ҡунаҡлаған урынынан ҡуҙғалмай, күҙҙәрен йомоп, йоҡомһорап ултырҙы. Ишек тауышына күҙҙәрен асып, кем ингәнлекте ҡараны ла, Нур булмаһа, йәнә йомдо. Әгәр тыштан кергән кеше Нур булһа, шунда уҡ осоп килеп уның яурынына ҡуныр ҙа бөтә белгән лексиконын «түгергә» тотонор: «Баррр... Шаррр... Маррр». Ә көндәрҙең береһендә ул «Нур-р!» тип ҡысҡырып, өйҙәгеләрҙең һушын алды. Шул көндән алып ул ғаиләнең тулы хоҡуҡлы ағзаһына әйләнде.

...Көндәр үтте, ҡарғаның ҡанаттары алыҫҡа, бейеккә осорлоҡ булып нығыны, асыҡ тәҙрә төбөнә ултырып, тирәктә ығы-зығы килеүсе үҙенең тоҡомдаштарын күҙәтеп торҙо, ҡайһы сағында «ҡарр» тип ҡысҡырғыланы ла. Ни нәмә уйлағандыр ошо минутта ҡарға балаһы? Бәлки, ул беҙҙең һымаҡ уйлай белмәйҙер? Юҡ, белмәһә, яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирмәҫ, Нурҙың бойороҡтарын теүәл үтәй алмаҫ ине. Ул бит: «Ҡар-ҡар, минең ҡашыҡты килтер!» — тигәс, шаршау эсенән теләһә ниндәй ҡашыҡты түгел, ә гел Нур ашай торған, аҙ ғына сите кителгән ҡашыҡты алып килә, башҡа ҡашыҡтар менән бутамай. Асыуланып ҡысҡырыу менән иркәләп әйтеүҙе лә айыра. Хәйер, уның «ҡарр» тигән, ҡолаҡҡа йәмһеҙ тойолған бер төрлө тауышында ла тиҫтәләгән сағылыш бар.

Көндәрҙең береһендә, тәҙрә төбөндә мөлдөрәп баҫып торған ҡошсоҡто күреп, Фәтих ағай Нурға әйтә һалды.

— Улым, осор һин уны. Ул бит ирек өсөн, осор өсөн яратылған.

— Ә мин уны әллә нисә тапҡыр осороп ҡараным инде, атай, үҙе кире килеп инә, ҡулбашыма ҡунып нимәлер һөйләнә...

— Ә һин уны осорғас, ишек-тәҙрәләрҙе ябып ҡуй.

— Ҡуйғыланым. Тәҙрә яңағына килеп ултыра ла иплэп кенә быялаға суҡышы менән ҡаға...

Фәтих ағай Ҡар-ҡарҙы ҡулына ала, һыйпай.

— Һәй, мәхлүк, мәхлүк. Телең булмаһа ла, аңлайһың. Миһырбанлы кешеләрҙе ярата беләһең. — Ҡарға ләззәтләнеп күҙҙәрен йома. — Әйҙә әле мин һине тиңдәштәрең янына алып сығам... Иректә тыуған йән эйәһе иректә йәшәргә тейеш.

Атаһына эйәреп, Нур ҙа тышҡа сыҡты. Йәшермәй әйткәндә, уға Ҡар-ҡар менән хушлашыуы ауыр ине: ҡарға — уға, ул ҡарғаға эйәләште. Ҡар-ҡар быны һиҙенгәндәй, башын аҫҡа эйеп, шым ғына ултырҙы. Баҡсалағы тирәккә аталы-инәле ҡарға килеп ҡунып, бәхәсләшергәме, серләшергәме (ир менән ҡатын һүҙ көрәштермәй, серләшмәй йәшәйме ни!) тотонғас, Фәтих ағай: «Ос, ҡошҡай.... Беҙҙе яман һүҙ менән иҫкә алма», — тип ҡулын һуҙҙы. Ҡарға бер генә секундҡа урынынан ҡуҙғалмай шым ғына торҙо ла, ҡанаттарын йәйә төшөп, аяҡтары менән этәренде һәм тирәккә ҡарап осоп китте. Аталы-инәле ҡарғанан бер нисә ботаҡҡа түбәнерәк ҡунды. Тегеләр уға иғтибар итмәнеләр. Ҡар-ҡар бер ботаҡҡа юғарыраҡ һикерҙе, ҡарғаларҙың береһе (атаһымы, инәһеме, алыҫтан әйтеп булмай) «карр» итеп алды. Был нимәне аңлатҡандыр: «Ҡурҡма, яҡыныраҡ кил», — тигәндеме, әллә: «Пацан, бында нишләп беҙҙең янда буталып йөрөйһөң?» — тигәндеме, билдәһеҙ. Бер аҙҙан аталы-инәле пар осоп китте. Ҡар-ҡар улар ултырған ботаҡҡа ҡунып, бер нисә тапҡыр ҡысҡырып алды, кемделер саҡырҙымы, әллә: «Бына мин тағы үҙ донъямда», — тип шатландымы...

— Атай, ә ниңә тегеләр Ҡар-ҡарҙы эйәртмәне? — тип үртәнеп һораны Нур.

— Тегеләр парҙар, кешесә әйтһәк, ирле-ҡатынлы, ә беҙҙең ҡарға — яңғыҙ. Улар донъяһында ла «өсөнсө кеше артыҡ» тигән нәмә барҙыр. Ярай, әйҙә киттек лапаҫка. Миңә булыш, күршеләр ураҡ төшәтергә килтергәйне, ваҡытым юҡ, тип әйтеп булмай бит инде...

Ана шул көндән һуң Ҡар-ҡар башҡа күренмәне. Юҡ, бер нисә көндән һуң күренде, асыҡ тәҙрәнән килеп инде лә

шатланып «ҡарр!» тип ҡысҡырҙы, Нурҙың ҡулбашына ҡунды.

Был ваҡыт Нурҙар өҫтәл тирәһенә теҙелешеп ултырып, «бисмилла» итеп, тәүге ҡалаҡтарын ҡулдарына ғына алғайнылар. Нур ҡоштоң ала костюмынан һыпырып алды.

— Маҡтап ҡына йөрөйһөң икән, Ҡар-ҡар. — Ул, алдындағы икмәкте ыуып, валсыҡтарын усына һалды ла ҡулын ҡарға ауыҙына яҡын килтерҙе. Был табында Фәтих ағай ғаиләһенән башҡа йәнә бер кеше бар инс — Нипачум Низами.

Ул кешенең усағынан төтөн сығып бөткәнде генә һағалап тора. Туҡмас һалыр алдынан усаҡҡа ҡоро сыбыҡ-сабыҡ яғалар ҙа, һурпа бығыр-бығыр килә башлағас, туҡмасты һалып ҡабартып алалар. Ана шул төтөн юғалыу менән, Нипачум Низами, юҡ йомошто бар итеп, килер ҙә керер.

— Әссәләмәғәләйкүм, мосолмандар!

— Ә... Низами. Вәғәләйкүм. Әйҙә уҙ, маҡтап ҡына йөрөйһөң икән, — тип сәләмен алыр Фәтих ағай.

Табаҡ битле, яҫмыҡ күҙле (ул ауылда бер үҙе башҡа кешеләрҙән ҡыҫыҡ күҙлелеге менән айырылып тора) Низамиҙың ауыҙында һеләгәйе йыйыла, йүгереп өҫтәл янына ултырғыһы, «Ҡарға бутҡаһы» уйынындағы шикелле* табаҡты табын уртаһынан ике ҡуллап күтәреп алып, сығып йүгергеһе килә, әммә әрһеҙ күренмәҫ өсөн ҡыҫтатҡан була.

— Рәхмәтегеҙ, мин әле генә өҫтәл янынан ҡуҙғалдым. Ғөбәйҙә бик тәмле итеп тауыҡ һурпаһынан туҡмас бешергәйне...

Фәтих ағайҙар Нипачум Низамиҙың ғәҙәтен беләләр, ихлас булмаһа ла, ҡыҫтайҙар.

— Аш ашҡа, урыны башҡа. Өйҙә тауыҡ һурпаһы ашаһаң, был һарыҡ ите менән бешерелгән өйрә...

— Әллә бер-ике ҡалаҡ ҡабып, ауыҙ итеп ҡарайым микән?..

Ул ашаған ваҡытта, мин уның ни өсөн «Нипачум Низами» икәнлеген һөйләп бирәйем.

Ул замандарҙа Сөсө күмәс урамындағы халыҡтың күбеһе ярлы-янтағай була торғайны. Ә фәҡирлеккә ике нәмә сәбәпсе була: йә ялҡаулыҡ, йә тормоштоң гел тиҫкәрегә

---

* *«Ҡарға бутҡаһы»* — яҙ көнө, ҡара ергә баҫҡас, йәштәр үткәрә торған уйын. Өйҙән өйгә йөрөп, ярма йыялар ҙа, ҡырға сығып, бутҡа бешерәләр. Теҙелешеп ашап ултырғанда, берәү ҡаҙанды (биҙрәне) ала ла тороп йүгерә. Үҙе йүгерә, үҙе ашай. Уны баҫтыра китәләр. Ҡыуып еткән кеше ҡаҙанды эләктерә лә йәнә тороп йүгерә. «Ҡарға бутҡаһы» күңелле халыҡ уйындары менән тамамлана.

килеүенән: мал-тыуарың әленән-әле ҡазаға юлығып тора; ялҡын ялмап китә; балалары гел ҡыҙ була...

Нипачум Низамиҙар, инде ҡара ергә баҫҡансы уҡ, «ҡыҫыр ашҡа» күсһәләр ҙә, уның күҙҙәре эскә батҡан, оҙон, сандыр Ғөбәйҙәһе, үс иткәндәй, йыл һайынураҡҡа төшөр алдынан бала таба, һәм, гонаһ шомлоғона ҡаршы, гел ҡыҙ була. Низами, йөҙ процентлы мосолман булараҡ, бөтә ғәйепте ҡатынына яңы: «Йүнһеҙ! Ҡем инде ураҡ өҫтөндә бала таба! Тфү! Өҫтәүенә, әпәт ҡыҙ бала...» Ҡатын, бахырҡай, ғәйепле кешеләй, аҡлана: «Хоҙай шулай яратҡас, мин нишләйем инде...»

Ҡыҫҡаһы, Низамиҙа фәҡирлек өсөн булған ике «компонент» та бар: ялҡаулыҡ һәм өй тулы лаҫбыр ҡыҙҙар. Шуға күрә уларҙың малы иң бай ваҡытта ла ике кәзәнән, биш тауыҡтан артманы, ерен тулыһынса булмаһа ла яртыһын Мәсет, Тау урамындағы хәллерәк кешегә арендаға бирреп торҙо. Берҙән-бер йылды Низами яҙ көнө урыҫ араһына сығып китте һәм көҙ көнө генә әйләнеп ҡайтты. Низамиҙы танырлыҡ түгел ине: башында йылтыр козыреклы картуз, аяҡтарында тула ойоҡ урынына ыштыр, билендә тар яҫы ҡайыш, ауыҙында ике һүҙҙең береһендә «нипачум» — оҙон йәй буйы өйрәнгән урыҫса һүҙ, күрәһең, шунан артмағандыр. Ул үҙе «нипачумдың» мәғәнәһен аңлағанмы, юҡмы, билдәһеҙ, әммә урынлымы-урынһыҙмы, «нипачум» яуып ҡына тора. «Үткән баҙарҙа мал нипачум ине...» «Ҡатын тағы нипачум ҡыҙ тапҡан...» «Инеште сыҡҡанда, нипачум тайып киттем дә, аяҡты ҡаймыҡтырҙым...»

Оҙаҡламай халыҡ уны «Нипачум Низами» тип йөрөтә башланы, ә «нипачумдың» ҡушамат икәнлеген аңламаған бала-сага йыш ҡына «иҫәнме, Нипачум абзый!» тип иҫәнләшеп тә китәләр ине. Низамиҙың ҡаны ҡапыл утҡа әйләнә, бот буйы малайҙы таш алып ҡыуырға тотона. Тора-бара ул был ҡушаматҡа күнекте, күрәһең, ҡаны ҡыҙмай, пыр туҙмай башланы.

Ҡыҫҡаһы, ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та кеше ул Нипачум Низами.

Бына ул йәйге селләлә лә башынан төшмәгән «меҫкен бүркен» һалып, ҡайышҡа әйләнеп бөткән таҡыяһын яйлап кейҙе лә ғығылдап көлә-көлә түргә өҫтәл янына уҙҙы.

— Бөгөн нипачум иртәнән бирле морон ҡысытып торғайны, һыйланырға икән... Бисмилла... — Ул, балалар усы саҡлы ҙур, тәрән һоҫколо ҡашыҡты батырып, табаҡтан аш ала, бейәләй саҡлы ауыҙын киреп асып, телен сығара төшә һәм ашты ауыҙына түгеү менән «а» тип усы менән ауыҙын ҡаплай. Нурҙың елкәһендә ултырған ҡарға уны ирештергәндәй шат тауыш менән «ҡар-рр!» тип ҡысҡырып ала.

Нипачум Низами асыуынан шартлар хәлгә килә һәм шул минутта, башҡалар иҫ йыйып өлгөргәнсе, ҡарғаның ауыҙына эҫе һурпа ҡоя. Ҡарға «ҡарр!» тип тә әйтергә өлгөрмәй, «ҡаа» ғына ти ҙә Нурҙың алдына ҡолап төшә.

Нипачум Низами диуана шикелле ғығылдап көлә.

— Ғ-ғы-ғы... Эҫеме әллә?

Нур ашарҙай итеп Низамиға ҡарай ҙа: «Нишләйһең һин, Нипа... Низами ағай?..» — тип һикереп тора.

Ҡашыҡҡа өрә-өрә, шапыр-шопор аш ашаған һылыуҙары Сания ла, Кәримә лә, хатта инде буй етеп килгән Нәсихә апаһы ла Нур янына киләләр, ҡарғаға йылы һүҙ әйтәләр, һыйпайҙар, ярҙам итмәк булалар. Кемдер һалҡын һыу алып килеп уның ауыҙына ҡоя, әммә ҡарға хәлләнмәй, ауыҙын асып, бөтә һауаны бер юлы йотоп бөтөрөрҙәй булып йыш-йыш һулай, күҙ алдында бәләкәйләнә....

Ғәҙәттә бик сабыр, илтифатлы Фәтих ағай был юлы түҙә алманы.

— Шулай миһырбанһыҙ булырға ярамай инде, Низами, ул да бит йән эйәһе, — тине, шаҡтай ҡаты итеп.

Уйламай шаярыуының уҫаллыҡҡа әйләнеүен аңлапмы, үҙенә текәлгән зәһәр күҙҙәрҙән шөрләпме, Нипачум Низами ауыҙ эсендә бутҡа бешерҙе:

— Эй... Кәзә мал булмаған кеүек, ҡарға — ҡош түгел. Уны эйәләштерергә генә түгел, яҡын ебәрергә лә ярамай — ул бәлә-ҡаза ғына килтерә.

— Һәр йән эйәһен аллаһы тәғәлә яратҡан, — тине Фәтих ағай, мөнбәрҙә вәғәз уҡыған мулла һымаҡ. — Кәрәк булһа, аллаһы тәғәлә үҙе йәнен ала.

— Һиненсә, Фәтих ағай, бөрөне лә нипачум үлтерергә ярамаймы ни? Уны ла алла яратҡан бит.

— Бөрө... йыртҡыс ул, — тине Фәтих ағай, Нипачум Низамиҙың был мәкерле һорауына тиҙ генә яуап таба алмай.— Ул башҡа йәнлектәрҙе быуа...

— Ә ҡарға ... ашай ... ашаған йән эйәһе — нипачум харам, — Низами һүҙҙәрен ҡеүәтләр өсөн: «Хәҙрәт шулай әйтә», — тип өҫтәп ҡуйҙы.

Фәтих ағайҙың иҫе китте — ҡарап тороуға бер ҡатлы, еңелтәйерәк Низами, ғүмере эсендә бер тапҡыр тәһәрәт алмаған, мәсет тупһаһын атлап үтмәгән кеше, ни һөйләп торған була бит. Уның Низамиҙы, арт яғына тибеп, ҡыуып сығарғыһы килде, ләкин килешмәй, күрше урамдан ғына килгән булһа ла, ҡунаҡ бит.

Ошо ваҡыт ете-һигеҙ йәшлек Кәримә «үлде!» тип ҡысҡырып ебәрҙе һәм уның күҙҙәренән ике тамсы йәш атылып сығып, кескәй генә бите буйлап тәгәрләп төшөп китте.

— Бүре! — тип ҡысҡырғанын Нур үҙе лә һиҙмәне һәм шул минутта уҡ йүгереп сығып китте.

Өйҙәгеләр бөтәһе лә Нипачум Низамиға күтәрелеп ҡараны. Ә Низами, бер нәмәгә иғтибар итмәй, оҙон, осло телен сығарып, туҫтаҡ ситенә буялған өрөнө яланы. Ялап бөткәс, «бисмилланан» башҡаны белмәһә лә, оҙаҡ ҡына уҡып, доға ҡылған булды.

— Рәхмәт, Нәсимәттәй, ашың ашап туйғыһыҙ тәмле.

— Баланы рәнйеттең, — тине Нәсимә апай, «һау бул», тип яуаплайһы урынға.

— Эйй... Бер ҡарға балаһы үлгәндән донъяның сите кителәме... Ана тирәктәрегеҙ тулы ҡарға, тауыштарынан ҡолаҡтарығыҙ тоноп бөтәлер. Мин булһам күптән, уларҙың ояларын туҙҙырып, сыбыҡтарын усаҡҡа яҡҡан булыр инем.

Һүҙгә Фәтих ағай ҙа ҡушылды.

— Хайуан йәнле булмаған кеше — ҡанһыҙ була ул, Низами, ә ҡанһыҙ кеше — иманһыҙ кеше. Мәңге йәһәннәмдә яныр, ти.

Нипачум Низамиҙың мәсеткә йөрөмәгәнлеген, бер көн дә ураҙа тотмағанлығын бөтә ауыл белә, «дәһрилеген» ул үҙе лә йәшермәй, ә бына өйәнәге тотоп, тәгәрәп ятҡанда: «Уф аллаҡайым, үләм бит... Ҡотҡарып ҡалһаң, биш намаҙҙың береһен дә ҡалдырмаҫ инем...» — тип ялына ла, сире ебәргәс, мәсетте лә, намаҙҙы ла онота. Хәйер, уға бер кем дин өйрәтмәгән, дин, шәриғәт менән ҡурҡытмаған, шуның өсөн уға бөтәһе лә непочем, йәғни бер ни түгел... Ә шулай ҙа әле ул, йәһәннәм һүҙен ишеткәс, ҡурылып китте. Аҡланмаҡсы булды.

— Инде бик ҡош-ҡорт яратһа, үҙенә аҡ күгәрсен тотоп бирермен. — Уның яҫмыҡ күҙҙәре йылтыраны. — Күгәрсен — ожмах ҡошо бит...

Ул иҫәнләшеп сығып китте. Берәү ҙә уға: «Һау бул», — тимәне.

Нур ҡарға балаһын бәрәңге баҡсаһы артына күмде. Ҡәберен тапап китмәһендәр өсөн, кескәй генә ҡурғанға таяҡ тығып ҡуйҙы.

Ошо ваҡиғанан һуң Нур, тәрбиәһеҙлек булһа ла, Нипачум Низамиға сәләм бирмәне, уның сәләмен алманы, дөрөҫөрәге, ул килгәнде күрһә, урамдың икенсе яғына сыҡты, әгәр инде ҡапыл маңлайҙар маңлайға текәшһә, ауыҙын асмай ғына баш ҡағып иҫәнләште. Шундай осрашыуҙарҙың береһендә Нипачум Низами уны еңенән тотоп алды:

— Энекәш, һин бер йүнһеҙ ҡарға балаһы өсөн һаман миңә асыу тотоп йөрөйһөң, ахыры. Әйҙә, үҙеңә аҡ күгәрсен тотоп бирәм.

Нур еңен уның ҡулынан ысҡындырҙы.

— Мин иҫән ҡоштарҙы тотмайым. Мин ғәриптәрҙе генә эйәләштерәм, — тип китеп барҙы.

Нипачум Низами, аҙна буйына ҡырылмаған яңағын һыйпап, башын ҡағып ҡарап ҡалды.

— Нипачум... тиҫкәре малай икән...

Йылдар үтер, Нур үҫеп буйға етер, тора-бара ҡыҙыл командир булыр, дошман тылында аяуһыҙ һуғышып йөрөр һәм ғазапланып үлтерелер, ә быны бала сағында Нипачум Низами ҡулынан һәләк булған ҡарға балаһын иҫенә төшөрөп, көрһөнөп ҡуйыр...

Ә әсәһе Нәсимә әбей улының йәһәннәм ғазаптары күреп һәләк булыуын ишеткәс, башын Нур йоҡлаған мендәргә һалып, үкһеп илар һәм сеңләр: «Хоҙайым... Яраббыйым... Ниңә һин уны һаҡлап ҡалманың, ул бит кешеләрҙе генә түгел, ҡарға балаларын да йәлләй торғайны... Хоҙайым, яраббыйым, ниңә һин уны йәлләмәнең?..»

Нур дөрөҫөн әйтте, ул йә көтөүсе малайынан ҡанаты ҡайырылған торна балаһы һатып алып, уны дауалап үҫтерҙе, йә ни эшләптер әсәһеҙ ҡалған өйрәк бәпкәләрен күл буйынан алып ҡайтып, «кеше» булғас, кире күлгә ебәрҙе. Улар өйөндә терпе, һыу ҡомағы йәшәне; ул ояһынан ҡолап төшкән һайыҫҡан балаһын алып ҡайтып, һөйләшергә өйрәтергә тырышты... Инде Бөрөлә уҡығанда, һүрәт төшөрөргә һәүәҫлеге артҡас, ул үҙе аҫраған, эйәләштергән ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе төшөрҙө.

## БИШЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Шыршылар ҡартая белмәй

Ат, ҡайтыу яғына булғас, ҡыумаһаң да үҙ яйына юрта. Ҡаты юлда тәгәрмәстәр ҡылтыр-ҡылтыр итә. Аяҡтарын һуҙып, атҡа ҡарап ултырған Фәтих ағай, ҡанға һеңгән ғәҙәт буйынсамы, атты дәртләндерер өсөнмө, әленән-әле: «На-а, малҡай», — тип ирендәрен сутылдатып, дилбегәһен тартып ҡуя. Уның артында яңы сабылған туғай бесәненә ултырған балалар, ни эшләптер, тынып ҡалдылар, һөйләшмәйҙәр. Ни Нур, ни Нәсихә, ни Сания. Нур, ғәҙәттә, гел үҙенең уй-пландары, хыялдары менән уртаҡлашырға ярата, Нәсихәнең ауыҙы бер ҡасан да ябылмай ине, ул бик илгәҙәк, һүҙсән ҡыҙ; арбалағы иң кесе бала — Сания йырһыҙ йәшәй алмай, ул да әле, ни эшләптер, ауыҙына һыу ҡапҡан, әйтерһең, баштарына ҡайғы төшкән. Һуң, ул саҡта кеше ҡайғыра беләме ни әле ул!

Ысынлап та, Нурға ун биш йәш, Нәсихә ун етегә сыҡҡан, ә Сания ун берен генә тултырып, ун икенсе йәшкә аяғын баҫҡан. Ҡәримәһе бәләкәй әле...

Фәтих ағайға ат ҡойроғона ғына ҡарап, ирендәрен сутылдатып барыуы күңелһеҙ — ул балаларының юҡ-барға ла һүҙ көрәштереүҙәрен ярата, ҡайһы сағында, үҙе лә һиҙмәй, бәхәскә ҡушылып китә: «консультант» булараҡ, һүҙҙе дөрөҫ юлға бороп ебәрә, ә ҡайһы ваҡыт, иллегә етеп килһә лә, уларҙан аҡылға өйрәнә. Ни генә тимә, улар уҡыған халыҡ бит, ә уға — Фәтихкә, их, уҡыу теймәне шул... Аллаға шөкөр, әйткән һүҙендә тора әле, балаларына белем бирә, кеше итә. Ете баланың бишеһе уҡый. Өсөһө: Нур, Нәсихә, Сания — Бөрөлә, Ҡәримә ауылда уҡый, ә баш бала Варис ҡыҙыл командир — билендә киң яҫы ҡайыш, петлицаларында өсмөйөш — взвод командиры ярҙамсыһы, алла бойорһа, ихтимал, ҙур командир ҙа булыр, ә Фәниәләре Ташкентта университетта уҡый...

— Балалар, — ти ул, башын артҡа бороп, — ниңә телегеҙҙе йоттоғоҙ?.. Гармунды алаһы ҡалған икән, Нур һыҙҙырып ҡайтыр ине... — Һәм ул балаларының «телгә килеүен» көтөп тормай, талғын ғына, бер аҙ ҡарлыҡҡан, әммә әле һаман матурлығын юғалтмаған тауыш менән йырлап ебәрә.

Ағиҙелкәй ҡайҙа? Ай, туғайҙа,
Ағиҙелкәй һымаҡ һыу ҡайҙа?

Уға Нур менән Сания ла ҡушылды.

Ағым һыу, Ағиҙел буйҙары...
Ағиҙелкәй һыуының, ай, буйҙары
Йәмле сағы уның яҙғы айҙа.
Ағым һыу, Ағиҙел буйҙары...

Улар тап ошо ваҡытта урманға килеп етеп киләләр ине, шуға күрә йыр айырыуса тәьҫоратлы яңғыраны.

Йондоҙҡашҡа, йырҙы тыңларға теләпме, юртыуын аҡрынайтты — атлап ҡына бара башланы, Фәтих ағай эсенән генә йылмайып ҡуйҙы. «Хоҙайҙың хикмәте, хайуан да йырҙы, мондо ярата бит...»

Урман ҙур ҙа, ҡуйы ла түгел ине, тиҙ үтелде. Йыр тел асҡысын бирҙе, хәҙер инде арбалағылар бөтәһе лә бер юлы һөйләшә, бәхәсләшә, көлөшә башланы, бигерәк тә Сания бәхәсләшергә ярата, ул, белһә лә, белмәһә лә, «үҙ яғына» ҡайырып алып китергә, өҫтөн сығырға тырыша, ә бына Нур улай түгел, ул фәҡәт үҙенең йөҙ процентҡа хаҡлылығын белһә генә бәхәскә керә, башын бирһә лә, һүҙен бирмәй, иҫбатлай һәм еңеп сыға.

— Нур ағай, — тине тел биҫтәһе Сания, — һин бына шиғыр яҙаһың...

Нур ҡул ғына һелтәне.

— Эй... шаярып ҡына яҙғанды телгә алып маташма әле...

— Ә ниңә шаярып ҡына? Һинең талантың бар. Бәлки, һин ысын шағир булырһың...

— Талантым булһа ла, мин ысын шағир булмаҫ инем...— Нурҙың тауышында һағыш һиҙелеп китте, һеңлеһенең яурынына ҡулын ҡуйҙы. — Шағир булғас, Туҡай, Ғафури, Пушкин, Лермонтов кеүек мәшһүр шағир булырға кәрәк, ә былай... таҡмаҡ сығарыу... кеше көлдөрөү генә ул.

Сания тынысланмай.

— Улайһа, художник бул, һин бит кешеләрҙе, аттарҙы ҡояһың да ҡуяһың...

— Художник та булмайым...

Сания уны ирештерә.

— Художник та булмайым... Ә кем булаһың һуң?

Бәхәскә Нәсихә ҡатнаша.

— Һы, кем булаһы билдәле түгелме ни? Педтехникумда уҡый ҙа. Уҡытыусы була.

Сания апаһын ирештерә, уларҙан ишеткән һүҙҙәрҙе ҡабатлай.

— А плюс В... Икс-игрек... — Инде ололар кеүек ул көрһөнөп ҡуя. — Күңелһеҙ эш!

Фәтих ағай ҙа бәхәстән ситтә ҡалырға теләмәй.

— Һинең башыңда ел әле, Сания ҡыҙым, һин әле аҡ менән ҡараны ла айыра алмайһың.

Сания гөлт итеп ҡабынып китә.

— Ел... Миңә хәҙер ун ике йәш...

Был һүҙҙәрҙән һуң Нур ҙа, Нәсихә лә, көлөүҙәрен күрһәтмәҫкә тырышып, устары менән ауыҙҙарын ҡаплайҙар. Күреп ҡалһа, Сания шунда уҡ арбанан һикереп төшөп тороп ҡаласаҡ — уның тәртәһе еректән, тиҙ үпкәләй, әммә шул яғы яҡшы — бик тиҙ үпкәһен онота.

— Ә һин үҙең кем булырға йыйынаһың һуң, «еткән ҡыҙ»? — ти Нәсихә, уның сәс толомонан тартып.

— Минме? — Санияның ҡарашы күккә йүнәлә, яуапты ул, әйтерһең, күҙҙе сағылдырырлыҡ йылы зәңгәр күктән эҙләй. Унан апаһына ҡарап йылмая ла етди яуап ҡайтара.

— Минме? Мин... мин хәҙергә үҙемдең кем буласағымды белмәйем әле. Түлке уҡытыусы булмайым. Икс-игрек, плюс-минус — күңелһеҙ эш.

Фәтих ағай уға башын бора.

— Изге эш ул, ҡыҙым, уҡытыусы булыу. Ана, беҙҙең Өрьяҙы тирә-яҡҡа күпме уҡытыусы бирҙе! Юҡҡа беҙҙең

ауылды элек «Ҡыҙыл партизан ауылы», ә хәҙер «Мөғәллимдәр ауылы» тип йөрөтмәйҙәр...

— Өгөтләмәгеҙ ҙә, ҡыҫтамағыҙ ҙа, барыбер уҡытыусы булмайым. Бул-ма-йым!

Нур ипләп кенә уның яурынына ҡулын ҡуя.

— Кем генә булһаң да, Сания, эшеңде ярат. Иң күңелле эш — яратҡан эшең ул.

Алға китеп шуны әйтәйем — «уҡытыусы» һүҙенән сәсе үрә торған Сания, Бөрөлә уҡыуын тамамлағас, Өфөгә медтехникумға уҡырға китә, әммә уға А плюс В, икс-игректарҙы балаларға өйрәтергә тура килмәй, ул техникумдың һуңғы курсында саҡта, үпкәһенә һалҡын тейҙереп, ҡапыл вафат була.

Бәхәсте ошо урында бөтөрөр өсөн, Нур атаһынан һорай:

— Болондарҙы бүлдегеҙме әле?

— Иртәгә бүлешәбеҙ.

— Йәрәбәгә былтырғы урын сыҡһа ярар ине... — Уның кирелеп бесән сапҡыһы килә.

Ошо ваҡыт Бөрөгә барыусы Тау урамы Мостафа бабай осрай. Ул атын туҡтатып иҫәнләшә. Фәтих ағай уның күҙҙәрендә ниндәйҙер шомлолоҡ күреп ҡала. Фәтих ағайҙың йөрәге ҡыҫып ала. Ни өсөн? Кисә Бөрөлә ул ауылдан алып килгән икмәк менән тәмләп сәй эсеп ултырғанда, насослы арбаларға егелгән янғын аттарының, тояҡтары менән таштан ут сығарып, үтеп киткәндәрен күрҙе. Имеш, яҡындағы Куткино ауылы яна. Хәбәр ялған булып сыҡты, янғынсылар бер аҙҙан кире әйләнеп ҡайтты. Фәтих ағай, урамға сығып, янғынсыларҙан ҡысҡырып һораны.

— Ҡайһы ауыл яна, йәмәғәт?

Осло башлы еҙ каска кейгән оҙон мыйыҡлы берәү ҡул һелтәне.

— Билдәһеҙ. Утыҙ-ҡырҡ саҡрымдан да яҡын түгел.

«Утыҙ-ҡырҡ, — тип борсолоп ҡуйҙы Фәтих ағай. — Улар ауылы ла Бөрөгә тураға утыҙ биш саҡрым бит...» Ни ҙә булһа килеп сығып ҡына тора шул, крәҫтиән тормошо үҙенә генә түгел, аллаға ла бәйле бит: йә ай буйы ҡояш, кемдәндер үс алырға теләп, самаһын онотоп ҡыҙҙыра, ер ярғылана, утлы табаға әйләнә, йә аҙна буйы ямғыр ҡоя ла ҡоя... Ә ҡайһы сағында игендәр бынамын күренә, мул уңыш көтөлә, әммә ҡапыл ҡайҙандыр аҡһыл болоттар килеп сыға ла боҙ ҡойоп китә... Ай, мәшәҡәтле, ай, тынғыһыҙ, хәүефле ул крәҫтиән тормошо...

Фәтих ағай сәпсәлән кеше түгел, юҡ-барға, белер-белмәҫ нәмә өсөн алдан уҡ янып-көйөп бармай, әммә янғын-

сылар менән һөйләшкәндән һуң нимәлер уның йөрәген көйҙөрөп торҙо. Шуға күрә ул балаларының ғәмһеҙ лығырлауын, эстәрен бушатып йырлауын теләне. Ярай әле, хоҙайҙың хикмәте, бәхеткә ҡаршы, Мостафа бабай осраны, унан һорашып күңелде тынысландырырға кәрәк.

— Мостафа бабай, кисә беҙҙең яҡта пожар булған, тип ишеттем, белмәнеңме, ҡайһы ауыл янды икән?

— Их, кисә ҡайтырға кәрәк ине һеҙгә... — тине Мостафа бабай, әсенеп.

Фәтих ағайҙың йөрәге жыу-у итеп китте.

— Әллә беҙҙең ауыл яндымы?

— Беҙҙең ауыл шул... Мәсет осо...

Инде тын алыуы ауырлашты.

— Беҙгә килеп етмәгәндер бит?

Мостафа бабай шунда уҡ яуап бирергә ашыҡманы.

— Мин... янғын бөткәнсе, өйҙән сығып киткәйнем... — тине ул, иңәлер һүҙҙәрен һуҙып. — Һеҙгә барып еткәнме, юҡмы... өҙөп кенә әйтә алмайым... Әммә... атыңды ҡыуа төш ни кем, Фәтих туған.

Мостафа бабай «на-а» тине лә китеп барҙы.

Нимәлер һиҙенгәндәй Йондоҙҡашҡа бышҡырып ҡуйҙы; юлды киҫеп, бик түбәндән ала ҡарға ҡарҡылдап осоп үтеп китте. Бығa саҡлы юҡ-барға, төрлө хөрәфәттәргә ышанмаған Фәтих ағайҙың йөрәге һулҡылдап һыҙлай башланы.

— Йөрәккә шом һалды бит был ҡарт, — тине ул, атын ҡуҙғатып, — на-ааа, малҡай! Мостафа ҡарт үҙеңде ҡыуа төшөргә ҡушты бит...

Әле уттың уларҙы ялмап алыуы билдәле булмаһа ла, ҡалған юлды йырһыҙ, көлөү-шаярыуһыҙ ғына үттеләр. Хатта туғандарын ҡаршыларға, Бөрөнө күрергә атаһына эйәреп барған туғыҙ-ун йәшлек Кәримә лә тын ғына ултырҙы. Фәтих ағайға был тынлыҡ оҡшаманы, ул йәшенле ямғыр алдынан була торған шомло тынлыҡ һымаҡ йөрәкте иҙҙе.

— Балалар, — тине ул, артына боролоп, — ниңә телдән яҙҙығыҙ? Ихтимал, сабыйҙар хаҡына хоҙай беҙҙе һаҡлап ҡалғандыр әле. Нур, йәле, берәй йыр һыҙҙыр...

Был ишле ғаиләлә бер ҡасан да ата-әсәгә ҡаршы төшөү, ҡаршы әйтеү генә түгел, ике тапҡыр әйттереү ҙә ғәҙәткә инмәгән ине. Шуға күрә Өрьяҙыла улар ғаиләһен: «Апа, Фәтих ағайҙың балалары кеүек булығыҙ» — тип гел өлгө итеп ҡуйҙылар. Әле лә Нур атаһының бойороғон ишетеү менән йырлай башланы, тик уның тауышында баяғы дәрт тә, илһам да юҡ ине. Бәләкәйҙән үк кешеләрҙе генә түгел, ҡоштарҙы ла тауыштарынан аңларға өйрәнгән Нур

Мостафа агайҙың күҙҙәренә ҡарау менән бөтәһен дә аңлағайны — янғын уларҙы ла ялмап киткән, ләкин ул быны атаһына ла, туғандарына ла һиҙҙерергә теләмәне, хәйер... өмөтһөҙ шайтан булыр, ти, ихтимал, ҡаралтылары ғына янғандыр, ихтимал... йорт түбәләре генәлер... Кеше, хатта иң пессимист булған кеше лә, үҙ-үҙен алдап, нимәлер көтә, әжәл боғаҙынан алғас та, ҡулын муйынына ҡуйып, Ғазраилды ҡыуып ебәрергә тырыша бит. Ә Нур — оптимист, етмәһә, ата-әсәһе лә уны иң ауыр минуттарҙа танауҙы һалындырмаҫҡа, ҡашты емереп, сырайҙы һытмаҫҡа, яҡшылыҡ өмөт итергә өйрәтеп үҫтерҙе. «Һин ҡайғырыуҙан, — ти торғайны уға атаһы, — улым, донъя яҡшырмай, үҙгәрмәй. Тайһаң, турай, йығылһаң, һикереп тор, берәй ерең ауыртһа, илама, һыҙланһаң да һиҙҙермә».

Нурҙың тауышы инде көрөрәк, дәртлерәк сыҡты, хатта уга Сания ла ҡушылды. Ә шулай ҙа Өрьяҙы мәсетенең манараһы күренгәс, йыр һүнде, ярһыу көсәйҙе. Ауылға яҡынлашҡас, Нур атаһына атты туҡтатырға ҡушты, ат һыртына баҫып, алға ҡараны һәм шунда уҡ аттан һикереп төштө. Фәтих ағай, түҙемһеҙләнеп: «Йә, күренәме?» — тип һораны.

— Күренәәә... — тине Нур, ауыр һулап...

Янғын башланғанда, Нурҙың әсәһе Нәсимә апай өйҙә ҡалған төпсөк баланы — дүрт йәшлек Зәбирәне етәкләп күрше ауылға — Субайға киткәйне, ә инде янғын башланғас, балаһын бер күтәреп, бер етәкләп тыны-көнө бөтөп ҡайтып ингәндә, өйҙәре, ҡоро утын шикелле, сатыр-сотор яна ине. Нәсимә апай ҡыҙын янғын юҡ ергә ҡыуып ебәрҙе лә үҙе өйгә ташланды: «Исмаһам, сепарат менән гармунды ғына булһа ла сығарып ҡалайым...» Ул ашыҡты, ҡаушаны, өй ишеген бикләгән йоҙаҡты аса алмай ыҙаланды. Өйгә инеү менән, гармунды табалмай йөҙәне — ә сигелгән салфеткага төрөлгән гармун, ғәҙәттәгесә, шүрлектә тора ине. Гармунды, эскәмйәһе менән былтыр ғына һатып алған сепаратты урамға сығарыуға, ут түшәмгә лә ҡапты, ярҙамлашыусы, янғынды һүндереүсе кеше лә юҡ тип әйтерлек — һәр кемдең үҙ ҡайғыһы көслө — берәүҙәр ут ҡапҡан өйҙәрен, ҡаралтыларын һүндерергә тырыша, ут ҡапмағандар, өй ҡыйығына менеп, үҙ йорттарын һаҡлай, ә бер нисә ҡул насосы кем йортондағы янғынды ғына һүндерергә өлгөрһөн инде... Шулай итеп ауылда байтаҡ өй янды.

Нурҙарҙы әсәһе менән уның итәгенә йәбешкән Зәбирә һеңлеһе ҡан-йәш түгеп ҡаршы алды. Быны күреп, Кәримә менән Сания ла үкһергә керешкәйне, Фәтих ағай, бәлки, ғүмерендә тәү тапҡырҙыр, балаларына екереп ҡысҡырҙы.

— Туҡтағыҙ! Ул ниндәй бүре шикелле олоу? Баш иҫән булһа, бүрек табылыр. Ирле ғаилә, атлы хужалыҡ таралмаҫ, ти. Батша замани түгел, власть үҙебеҙҙеке, алла бойорһа, ташламаҫ әле, страховка ла сығыр...

Һәм ташламаны. Страховка аҡсаһы килде, ауыл Советы, йорт, бура, бүрәнә һатып алыусыларға бөтә ауылдың аттарын йыйып, өмә ойошторҙо. Ул арала Бохарала командир булып хеҙмәт итеүсе Варистан байтаҡ ҡына аҡса килеп төштө. Ташкент университетында уҡыусы Фәнилә лә тинләп йыйған стипендияһын һалды, үтескә аҡса алынды һәм Фәтих ағай ҙа Покровка тигән ауылдан бура һатып алды. Дөрөҫөрәге, бура Покровканың үҙендә түгел, ә ауыл янындағы шыршы урманында ине. Фәтих ағай бураны аҙымлап үлсәп ҡарағандан һуң: «Был беҙҙең кеүек ишле ғаиләгә бәләкәйерәк булыр, балалар, — тине, кейеҙ эшләпәһен маңлайына этәрә төшөп, башын ҡашып, — бәжәли, быны яна өсмөйөш һуғырға тура килер...»

Шундай «өсмөйөш», ябайыраҡ әйткәндә, өй алды, Покровканың үҙендә табылды.

Покровка Өрьяҙыға бик үк яҡын ауыл түгел, батҡаҡ, соҡор-саҡырлы ун ике саҡрым урман юлынан бер ураһаң, көн бөтә. Ә шулай ҙа «оҙон арба» менән бүрәнәләр ташыу Нур, уның атаһы, дуҫы Хәләф өсөн күңелле бер эшкә әйләнде — кешенең тәбиғәте шулай бит — иң ауыр ҡайғыларҙы ла еңә һәм, бөтөнләйгә булмаһа ла, ваҡытлыса оноттора.

Нур йәйге каникулды бөтөнләй башҡаса үткәрергә хыялланһа ла, бура ташыу, йорт һалыу уны башы менән ылыҡтырҙы.

Бына улар һуңғы бүрәнәләрҙе тейәп ҡайтып киләләр. Оҙон арба тәгәрмәстәре әленән-әле соҡор-саҡырға төшөп ала, соҡор тәрәнерәк булғанда, Нур арттан этеп, атҡа ярҙамлаша, мөмкин булғанда, соҡор-саҡырҙы урабыраҡ үтергә тырыша. Инде урмандан сыҡтыҡ тигәндә, авангардта барыусы Нур (Варис ағаһы хәрби кешегә әйләнгәс, ул хәрби терминдарҙы, хәрби кейемде ярата башланы): «Тррр, малҡай!» — тип Йондоҙкашҡаһын туҡтатты. Уның артынан килеүсе атаһы: «Ни булды? Атың арынымы? Түбән табан бит, әйҙә, талғын ғына ҡыу!» — тип ҡысҡырҙы.

Нур бүрәнәләргә шаҡарып бәйләнгән тимер көрәген сисә башланы.

— Нимә, әллә юлдағы соҡорҙарҙы күмеп, тигеҙләмәксе булаһыңмы? — тип ҡысҡырҙы Фәтих ағай артынан килеүсе ҡоба ат еккән Хәләф Мостафин — Нурҙың һабаҡташы, дуҫы.

Нур көрәген күтәрҙе.

— Хәләф, кәрәк алғайныңмы? Алһаң, шагом марш минең арттан, — тине Нур.

Ул арала Нур янына атаһы килеп бағты.

— Ни ҡырмаҡсы булаһың? Ҡөтөү ҡайтҡансы, Өрьяҙыға етергә кәрәк.

— Атай, — тине Нур фәҡәт унда ғына булған ихлас һәм бер аҙ серле ҡараш менән. — Янғын яндырыусы ғына түгел, яңыртыусы ла ул...

— Һы!

— Ҡарағат, ҡурай еләкте ут көйҙөрөп китте...

Ул арала Хәләф тә килеп етте.

— Бында ҡарағат, ҡурай еләге үҫмәй ҙә, иптәш Фәтихов, — тине ул, шаяртып, — әллә һин шыршынан емеш-еләк алмаҡсы булаһыңмы?

— Тап өҫтөнә баҫтың, — тине Нур, — әйҙә, шыршы үҫентеләре төпләп алабыҙ.

— Һуң, кем йәй уртаһында ағас ултырта инде? — тине Фәтих ағай. — Йә яҙ, йә көҙ ултыртырбыҙ.

— Ҡарағат, ҡурай еләген көҙ ултыртырбыҙ, ә шыршыларҙы... Киттек, Хәләф. — Ул атаһына боролоп йылмайҙы. — Беҙ ике ҡарыш оҙонлоғо булғандарын ғына төпләп алабыҙ. Тупрағы менән. Улар күсеп китеүҙәрен дә һиҙенмәйәсәктәр.

— Ә ниңә ҡайын да, йүкә лә түгел, ә шыршы ултыртмаҡсы булаһың? — тине Фәтих ағай һаман да улы менән килешеп етмәйме, уның уй-планын аңлап етмәйме. — Йүкәнән умарта ҡорттары бал ала...

— Ниңә, тиһеңме?— Нур йәнә серле йылмайҙы. — Шыршы, беләһеңме, атай, нисә йыл йәшәй?

— Улай ҡараһаң, имән шыршынан да оҙағыраҡ йәшәй...

— Имән, урман батшаһы булһа ла, ҡаты һалҡындарға бирешә, көҙөн япрағын ҡоя, ҡайһы йылды, ҡорт ашап, бөтөнләй яланғас тороп ҡала, ә шыршы... мәңге йәшел... Яратам мин шыршы ағасын, атай... Шыршыға ҡараһам, ҡартая белмәүсе кешене күргән һымаҡ булам... — Нур инде һағышланып әйтте. — Һин... мин... беҙ был фани донъянан китербеҙ, ә шыршылар беҙгә һәйкәл булып үҫеп ултырыр...

Фәтих ағайҙың күңеле тулды, тамағына төйөр тығылды. Юҡ, улы үлемде иҫкә алғанлыҡтан түгел, ә уның, ун биш йәштә генә булһа ла, илле йәшлек атаһынан төплөрәк булыуы болоҡторҙо. Алла бойорһа, үҙенән ҙур кеше сығасаҡ.

— Әләйһә, — тине Фәтих ағай, йәһәт атлап, — мин дә көрәгемде алып киләм. — Ул боролдо. — Ә нисәне ултыртабыҙ?

— Ә беҙ нисә йән?

— Азиялағыларҙы ла иҫәпләһәк, туғыҙ...

Шыршыларҙы ултырта башлағас, ҡыҙҙар сырлашып шыршыларҙы бүлешә башланы.

— Был ағас минеке була.

— Ә быныһы — минә!

Хатта дүрт йәшлек Зәбирә лә, бер ағастан икенсеһенә күсеп, наҙланып үҙенә ағас һайланы.

— Ә был сылсы үҙекәйемдеке...

Һур ҡәтғи ҡаршы төштө.

— Береһен дә атап ултыртмайбыҙ! — Ул йылмайҙы. — Юҡһа өйҙәгеләр ағастарын иркәләп үҫтерер, ә беҙҙең һымаҡ «берәҙәктәрҙеке» ситкә тибелер.

Ҡыҙҙар: «Юҡ, ситкә типмәбеҙ, ҡарап үҫтерербеҙ», — тип ҡаршы төшһәләр ҙә, Нурҙың тәҡдимен ата-әсә хупланы.

Шыршыларҙы, сафта барыусы ҡыҙыл армеецтар шикелле, бер рәткә теҙеп ултырттылар. Бөтә туғыҙ ағас та, яңы урынға күсеп ултырғандарын һиҙмәй, үҫеп киткәйнеләр ҙә, дүртеһе ят тупраҡты ситләтте, яҙ көнө энәләре һарғая башланы һәм тора-бара, һағышҡа сумған кеше һымаҡ, һапһарыға әйләнде. Нур ҡороған ағастар урынына яңыларҙы ултыртмаҡсы булғайны ла, Бохаранан бер аҙнаға ялға ҡайтҡан Варис ағаһы бер яҡ ситкәрәк ике тирәк таяғы тығып китте.

Йылдар үтте, балалар-ҡошсоҡтар таралышып бөттө, ә шыршылар буйға үҫеп, мөһабәт ағастарға әйләнделәр — хәҙер ауылдың ҡайһы осонан, йылдың ниндәй миҙгелендә ҡарама, улар, разведкаға барыусы һалдаттар шикелле, йәп-йәшел булып, ғорур баҫып торалар.

Нур Фәтихов Ленинградта хәрби инженерҙар мәктәбендә уҡығанда, Киевта хеҙмәт иткәндә лә хат һайын: «Минең шыршыларға сәләм һәм мең йыл ғүмер», — тип яҙа торғайны. Ҡырҡ икенсе йылдың егерме дүртенсе июлендә Василь Железко менән һуңғы тапҡыр осрашҡанда ла, ул шыршыларын һағынып иҫкә ала. Бәлки, ғүмеренең һуңғы секундында ла уның күҙ алдына шул мөһабәт шыршылар килеп баҫҡандыр...

Шыршылар, шыршылар...

Был юлдарҙы яҙғанда, Фәтиховтарҙың ишле ғаиләһенән ни бары өс кенә ҡыҙ тороп ҡалғайны: етмеште үткән Нәсихә апай, етмеште ҡыуыусы Кәримә һәм ете бала әсәһе — уҡытыусы (хәтерләйһегеҙме, шыршылар ултыртҡанда ул әле бер, әле икенсе ағасты һайлап наҙланғайны) Зәбирә...

Ә шыршылар ҡартая белмәй үҫәләр ҙә үҫәләр...

# АЛТЫНСЫ НОВЕЛЛА

## Ҡариҙел ҡаты аға...

Көнө буйы Йыһан океанында йөҙөп, ирkә балаһы — Ерҙе йылытып, шуға үҙ йылыһын кәметкән ҡояш йоҡларға китеп бара, ул ҡаялы яр өҫтөндә үҫкән шыршы-ҡарағайҙар аша һоҡланып туймаҫлыҡ гүзәл ҡыҙҙы хәтерләтә.

Ошо сихри минуттарҙа Ҡариҙел айырыуса матур, айырыуса серле була. Әгәр инде уның уртаһынан һал да китеп барһа, һал өҫтөндә, төтөнөн йылан һымаҡ бөрғөләп, усаҡ та янһа, ә усаҡ янында гармун моңо һәм боронғо халыҡ йыры ишетелһә, үлгән кешеләр гүрҙәренән һикереп торор һымаҡ...

> Агиҙелкәйҙәрҙе, ай, кискәндә,
> Бер йырларһың, ишкәк ишкәндә...

Ә... һал ҡыуыу — иҫ киткес ҡыҙыҡлы, романтикалы эш, тип уйлағандарҙыр Нур һәм уның менән бергә Бөрө педтехникумында уҡыусы һабаҡташтары.

Юҡ, һал ҡыуыуҙың романтикаһы ғына ҡыҙыҡтырманы Нурҙы. Ул нескә күңелле, шиғри тәбиғәтле бала булһа ла, уның уй-пландарында бөтә кешеләргә лә хас практик мәсьәләләр ҙә бар ине. Хәҙер ул ун етегә еткән егет, ә өҫтөндә... Атаһы, — Фәтих ағай, бахырҡай, тарта, һуҙа, әммә ул саҡтағы крәҫтиәнгә ҡайҙан, ниндәй сығанаҡтан аҡса килһен инде?.. Бөрөлә генә өс бала уҡый, ауылда икәү. Бер ғаиләнән ике кеше бер техникумда уҡығанлыҡтан, стипендияны ла иҫәпләп бирәләр: Нур тулыһынса — ун ике һум алһа, Нәсихәгә яртыһы ғына тейә.

Ун ике һум... Йә, был аҡсаға күпме йәшәргә мөмкин инде? Квартираға түләргә кәрәк, һирәк-мирәк булһа ла «томанлы картина» — кино ҡарарға, өҫтәүенә, Нур радио менән ҡыҙыҡһына, ә радио частары арзан түгел, ҡулдан алырға тура килә...

«Быйыл йәйге каникул ваҡытында, — тип ҡыштан уҡ планлаштырып ҡуйҙы Нур, — Ҡариҙелдән Өфөгә һал ҡыуабыҙ. Һал ҡыуыусылар аҡсаны шәп төшөрә, ти. Ышаныслы малайҙарҙан һалсылар бригадаһы ойошторорға кәрәк...»

Ҡыҙыҡ бит кеше тәбиғәте, уның уй-теләктәре, хыялдары, йыһандағы йондоҙҙар шикелле, буталсыҡ, сикһеҙ... Бына Нур бик бәләкәйҙән үк ҡоштар менән мауыҡты, уҡытыусылары уны, ботаник булыр был, тип күрәҙә итте. Үҫә төшкәс, шиғыр яҙҙы. Уның һабаҡташтары: «Нур шағир

булырға самалай», — тип юраны. Һүрәтте оҫта төшөргәнлеге асыҡланғас, өйҙә: «Беҙҙең Нур рәссам була», — тип өмөтләнделәр. Бөрөлә техникумда уҡығанда ла, ул немец телен ныҡлап өйрәнергә кереште, детектор радиоалғыстар ҡорҙо, фотография менән мауыҡты, төндәрен, йоҡламай, көндөҙ төшөргәндәрен эшкәртте, ҡағыҙға күсерҙе... Шулай булғас, кем булырға йыйына һуң Нур Фәтихов? Ә уның бер кеше белмәгән хыялы бар ине. Ул бала саҡта улар ауылы аша үткән ҡыҙыл командирҙарҙың кейеменә һоҡланды, ялға ҡайтҡан Варис ағаһының мундирына, галифе салбарына, портупеялы киң ҡайышына күҙен ҡыҙыҙырҙы. «Их, ана шулай кейенеп, урамдан бер үтеп китергә, киске уйынға сығып, иң һылыу ҡыҙҙы ҡултыҡлап бейеп йөрөргә!..» Бына ошо хыял уны аҡса эшләргә әйҙәне. Ә уны нисек эшләргә? Бәлки, ул йәйге каникул ваҡытында ауылдаштарын карточкаға төшөрөп тә, өҫ-башын бөтәйтерлек аҡса йыйыр ине, тик... беренсенән, фотоаппараты юҡ, икенсенән... нисек инде карточкаға төшөргән өсөн аҡса алаһың? Ситт халыҡ булһа башҡа эш, ә ауылдаштарыңдан... Килешмәй. Әллә ни һөйләрҙәр.

Бына ашҡынып, елкенеп көтөлгән яҙ етте. Һиҙҙермәй генә яҙҙы йәй алмаштырҙы һәм каникулдар башланырға ла күп ҡалманы. Нур һалсылар бригадаһын ҡыш көнө үк ойоштороп ҡуйғайны инде. Башта теләүселәр күп кенә булды, әммә дәрт бер, дарман икенсе — һалсылар таҙа, көслө булырға тейеш. Уларҙың һалы артыҡ ҙур булмаясаҡ, шулай булғас, күп тигәндә, дүрт кеше етә: алда — бер рулевой, артта — кормала «ҡойроҡто» борғолаусы, ике яҡта — берәр һалсы.

Бына ул экипаж: Арыҫлан, Хәжи, Тажи һәм Нур саңлы юлдан Текә ярға табан китеп баралар. Ауыҙҙарында уйын да көлкө; дарья сәфәренең мажаралары; атмаған ҡуяндың да тиреһен бүлешәләр: Өфөлә ҡайҙа барырға, нимәләр һатып алырға пландар ҡоралар. Арыҫлан арала иң баҙыҡ, көслө егет — бөҙрә сәс, йәмшек танау, ҙур ҡара күҙҙәр — бите лә ҡара булһа, бына хас Африка кешеһе инде. Ҡариҙел яҡтарында тыуып үҫкән. Төрлө ҡоштарға оҡшатып, бигерәк тә һандуғас булып, оҫта һыҙғырғаны өсөн уны Һандуғас Арыҫлан тип йөрөтәләр. Ул Нурҙан бер курсҡа алда уҡый — йәренгә техникумды тамамлай. Рус теле уҡытыусыһы булырға хыяллана. Бәлки, шуға күрәлер, башҡорттар, татарҙар менән дә гел русса һөйләшә. Башҡортса һораһаң да, русса яуап бирә. Унан һабаҡташтары: «Арыҫлан, һин әллә өс-дүрт йыл эсендә тыуған телеңде бөтөнләй оноттоң инде?» — тип көләләр. Ә теге асыуланмай, киреһенсә, үҙе аҡыл һатырға тотона: «Сит телдә әсә телең

hымаҡ яҡшы белергә теләһәң, гел ул телдә генә һөйләшергә түгел, хатта шул телдә уйларға ла кәрәк...»

— Ә ауылға ҡайтҡас? — тип һорайҙар унан.

— Нимә — ауылға ҡайтҡас?

— Әсәйең менән дә урыҫса һөйләшерһеңме? Ҡарттар менән дә?

— Это еще я не знаю, — тип хәтәр генә яуаплай Арыҫлан.

Ошо һөйләшеүҙең шаһиты булған Нур уйға ҡала. «Ә Арыҫлан, ысынлап та, дөрөҫ әйтә бит. Немец теле уҡытыусыһы ҡылыс танау Фридрих Иоганович та (ул үҙе үҙен, Федор Иванович, тип әйтергә ҡуша), немец телен ныҡлап өйрәнергә теләһәгеҙ, өнөгөҙҙә генә түгел, төшөгөҙҙә лә немецса һөйләшергә тырышығыҙ, тип кәңәш бирә.

Юҡ, Нур Арыҫланды таҙа, көслө булғаны, оҫта һыҙғырғаны өсөн генә бригадаһына алманы. Арыҫландың атаһының ағаһы — бабайы ғүмер буйы Ҡариҙелдән һал ҡыуған. Илбирҙе ағай уларға һал бәйләргә, уны нисек ҡыуырға өйрәтәсәк, Ҡариҙелдең «серҙәрен» һөйләйәсәк. Һәр ҙур йылғаның үҙ сере, үҙ холҡо була ул.

Тимәк, бригаданың бер һалсыһы — Ҡариҙел малайы, егете тиһәң дә хата булмаҫ; ул саҡта ун алты-ун ете йәшлек малайҙар еткән егеттәр рәтенә инә торғайны. Икенсеһе — Борай егете Тажи. Ул тиңдәштәренә ҡарағанда ике тапҡыр күберәк ашаһа ла, ни эшләптер, ашағаны тәненә йоҡмай — сандыр: йөҙө, түбәһе аҫҡа ҡуйылған өсмөйөштө хәтерләтә, танауы осланған ҡәләм шикелле, зәңгәр күҙҙәре йылмайғанда ла уйсан ҡала. Ул, Нур менән йәштәш булһа ла, унан ярты аршынға оҙонораҡ, бәлки, йыйған тәғәме һөйәктәрен үҫтерергә генә китәлер. Шуға Селән тиҙәр уға. Тажи тешеккән кеше, өндәшмәһәң, оҙон көн буйына ла ауыҙын асып бер һүҙ әйтмәҫ, хәйер, бөтә математиктарҙы ла шулай була, тиҙәр, ә ул математиканы һыу кеүек эсә, бал кеүек ярата. Башҡа студенттар дәрестәрен әҙерләп бөтөргәс, туп тибә, шахмат, шашка уйнай, әҙәби китаптар уҡый, ҡыҙҙар менән ләстит һата, ә ул яңаҡтарын устары менән ҡыҫыр ҙа математика китабына «күмелер».

Юҡ, Нур уны математика яратҡаны өсөн генә бригадаһына алманы, Тажи мал йәнле, ә мал яратҡан кеше, уның атаһы әйтмешләй, нескә күңелле, миһырбанлы була. Нур үҙе лә мал йәнле бит...

Ниһайәт, бригаданың өсөнсө ағзаһы Мәсәғүт кантонынан йәйәү килгән, Арыҫлан менән бер курста уҡыусы Хәжи. Һирәк-мирәк шаҙралы, бөркөт танаулы, ялбыр ҡашлы, тәгәрәп төшөргә торған ҙур ҡара күҙле егет. Ул музыка ярата, әммә ҡурайҙан башҡа музыка инструменты юҡ, ә

үҙе гармунда, скрипкала уйнарға ҡыҙыға. Нур тальянкала һыҙҙырғанда, ул башын ҡырын һала ла, үҙе лә һиҙмәҫтән ауыҙын асып, эре тығыҙ аҡ тештәрен йылтыратып, гармунсының бармаҡтары бейеүен күҙәтеп ултыра һәм аҙаҡ, гармунды алып, шул көйҙө уйнап ебәрә. Уның хыялы — эшләй башлағас, беренсе хеҙмәт хаҡтарына уҡ гармун һатып алыу.

Юҡ, Нур Хәжиҙе музыка яратҡанлығы өсөн генә бригадаһына алманы — ул ҡарап тороуға әллә ни таҙа кәүҙәле булмаһа ла, бик ныҡыш, көслө егет — ике ботло герҙе, резина туп кеүек, һауала уйната.

— Алдан уҡ һөйләшеп ҡуяйыҡ, — ти ауыҙы бер ҡасан да ябылмаусы Мәсәғүт егете, — төнгөлөккә ярга туҡтамайбыҙ, йөҙәбеҙ ҙә йөҙәбеҙ. Һалды тапшырғас, кино ҡарап, күңел асып, Өфөлә ике-өс көн йәшәйбеҙ ҙә, ҡайтып, йәнә тағы һал ҡыуа китәбеҙ. Ҡаникул бөткәнсе, кәм тигәндә, өс һал ҡыуабыҙ.

— Өфөлә рестorandар иҫ китерлек, тиҙәр, — ти арттан башын күтәреп, күккә ҡарап һыҙғырып барыусы Арыҫлан.

Нур, иптәштәре һөйләшкәнгә ҡолаҡ һалмай, бөтөнләй башҡа нәмә тураһында уйлап барыусы Хәжиҙең яурынына шапылдатып һуға.

— Ә һин Өфөлә ҡайҙа барырға самалайһың? Хәжи-Ғәли дуҫ?

— Әлләсе... Минең Өфөнө күргәс, ҡапыл башым әйләнеп китер төҫлө тойола. Ҙур ҡала бит...

— Ә мин, бер ергә лә инеп тормай, Осоавиахим клубына һыпыртам, — ти Нур, иптәштәрен ҡултыҡлап. — Унда Америка, Австралия менән һөйләшеүсе «коротковолновик» яһаған радист эшләй ти, шуның менән танышам.

Һәм шунда уҡ яратҡан йырын йырлай башлай ҙа ҡапыл туҡтай, Хәжигә мөрәжәғәт итә:

— Хәжи-Ғәли, һин йөрөгәндә лә ҡурай тартаһыңмы?

— Ә ниңә тартмаҫҡа, һин бит барғанда гармун уйнайһың, — ул ҡулын арҡаһына һуҙып, биштәрләп аҫылған тоғонан ҡурайын тартып ала һәм «Ҡара тауыҡты» һыҙҙырып ебәрә. Һандуғас Арыҫлан, ҡулдарын сәбәкәй итеп, таҡмаҡлап бейеп китә.

Дуҫым саҡырҙы ҡунаҡҡа,
Тауыҡ бирҙе бүләккә,
Һайлап алдым оҡшағанын
Үҙем менеп төнәккә...

Арыҫланға башҡалар ҙа ҡушыла...

«Бындай егеттәр менән донъя ситенә барһаң да, йәһән-

нәм төбөнә төшһәң дә, кәм-хур булмаҫһың», — тип һөйөнә Нур.

Сәйәхәттең тәүге көнө еңел, күңелле үтте: уйын да көлкө, йыр ҙа таҡмаҡ. Ә бына икенсе көндө йәшен йәшнәп, күк күкрәп, ҡойоп ямғыр яуҙы. Ямғыр ваҡытында улар һал өҫтөндәге ҡыуышта ышыҡланып яттылар. Дөрөҫ, бында «архитектура яғынан» хата беленде — ҡыуыш ҡойоп яуған ямғырҙан тулыһынса һаҡлай алманы, уларҙы ғына түгел, аҙыҡты ла сылатты, ярай әле аҙыҡтың төп рационы картуф ине, ә картуф өсөн ямғыр нипачум. Улар ҡыуыш аҫтында лығырлап ятҡанда, һал боролмала ярға табан «һалыулай» башланы. Нур, быны һиҙеп, һәр кемгә үҙ посына баҫырға ҡушты. Егеттәр бойороҡто теләр-теләмәҫ кенә үтәне — һуң кемдең, ҡойоп ямғыр яуғанда, баҙ кеүек ҡараңғы күкте көтөүсенең утлы сыбыртҡыһы телгеләгәндә, һал өҫтөндә баҫып торғоho килһен инде...

Һалды нисек кәрәк шулай, йән-фарманға төшөп, төп ағымға сығарғас, улар аһ-уһ килеп, манма һыу булып, ҡыуыш эсенә инеп тәгәрәнеләр һәм бер аҙҙан ғырылдау тауыштары ла ишетелде. Ә Нур тубыҡтарын ҡосаҡлап уйланып ултырҙы. «Былай ярамай, төндә һалдың башында һәм «ҡойроғонда» берәр кеше вахтала торорға тейеш, юғиһә беҙ ун көн урынына ике аҙна йөҙәсәкбеҙ, ә һал ярға килеп терәлһә, һай урында төпкә ултырһа?» Нур ҡыуыш алдында костер яғырға тырышты, әммә йәнә бер хата асыҡланды — ҡоро утын аҙ әҙерләнгән, әҙерләнгәне лә ямғыр аҫтында ҡалған...

Иртәнгә табан ямғыр баҫылды, ә ҡояш сыҡҡанда, бөтөнләй туҡтаны, әммә был ваҡыт улар дүртеһе лә иҙрәп йоҡлай ине һәм һал да... Ул йылға яры буйына килеп һуғылған да ғырылдамай ғына йоҡоға талған. Нур, әллә шомло төш күреп, әллә иртәнге һыуыҡҡа өшөп, уянып китте. Тәүҙә үҙенең ҡайҙалығын аңламайыраҡ ятты, унан һикереп тороп, башын ҡыуыштың осло түбәһенә бәрҙе. «Туҡта, туҡта, беҙ аҡмайбыҙ түгелме һуң?..» Ул тышҡа сыҡты. Дөрөҫ, улар аҡмайҙар. Нисә сәғәт шулай бер урында торалар икән? Берәүҙең дә сәғәте юҡ... Малайҙарҙы уятырғамы, юҡмы? Тәүҙә ул үҙе генә һалды ярҙан ситкә этәреп ҡараны, көсө етмәне, шунан, ни эшләйһең инде, малайҙарҙың татлы таң йоҡоларын бүлергә тура килде.

— Егеттәр! Егеттәр!.. Һал туҡтаған...

Кемдер «ә...» тине лә бер яҡтан икенсе яҡҡа әйләнеп ятты, кемдер башынан бөркәнеп ябынды. — Малайҙар! Аврал! Тревога! — Юҡ шул, улар әле «тревога!» һүҙенә һикереп торорға өйрәнгән һаҡ йоҡлаусы ҡыҙыл армеецтар түгел...

— Хәҙер нишләргә? Йоҡонан торғандарын күтәргәме? Ә студент халҡы ял көндәрендә ғәҙәттә төшкә саҡлы йоҡлай... Хәҙер улар үҙҙәрен ялда тоялар...

Нур йәнә барып, һалды ярҙан этергә тырышты, көсө етмәне. Ул ҡыуыш алдына килеп ултырҙы. Иртәнге ҡояштың нурҙары яр буйында үҫкән шыршы, ҡарағай ағастары аша уның йөҙөнә төшөп иркәләй... Нурҙың күҙе Хәжиҙең тоғона төшә. Ҡурай... Туҡта әле... Ғүмерендә бер тапҡыр уйнағаны булмаһа ла, әллә тартып ҡарарғамы?.. Ул ҡурайҙы ала, ике башын да, Хәжи һымаҡ, еңе менән һөртә, өрөп ҡуя, ауыҙ ситенә ҡабып, өҫкө тештәренә терәй ҙә өрә башлай, һәм тауыш сыға. Ныҡыраҡ өрә, ҡурай көслөрәк тауыш сығара. Нур аҫтағы тишектәргә баҫа, көйгә оҡшаған моң ағыла башлай... һәм ошо уҡ минутта Хәжи һикереп тороп ултыра. Тәүҙә бер ни аңламай. Һушына килгәс, үрмәләп ҡыуыштан сыға.

— Әй... Кем унда минең ҡурайҙы тарта? Ә... һинме ни, Нур...

— Тауышын таныныңмы?

— Төшөмдә ишеттем. Имеш, атайым өй нигеҙенә ултырған да ҡурай тарта икән...

Ул арала тауышҡа башҡалар ҙа ҡушылды.

Байтаҡ ҡына этләнгәндән һуң, һалды ярҙан этәреп, йылғаның уртаһына сығарҙылар, һал ҡуҙғалып киткәс, Нур, хәҙергесә әйткәндә, «пятиминутка» үткәрҙе.

— Былай ярамай, иптәштәр, беҙгә алмашлап тәүлек буйы вахтала торорға кәрәк, юҡһа беҙ Өфөгә йәй уртаһында ғына барып етәсәкбеҙ, ә үҙебеҙ ике юлларға һүҙ бирештек. Кем бөгөн минең менән төндә вахтала торорга риза?

— Кем тип ни? — тине Нурҙың һәр һүҙен тыңлаусы, инициативаһын хуплаусы Хәжи. — Алдан уҡ һүҙ көрәштермәҫкә, бригадир ни әйтһә, шуны эшләргә һүҙ ҡуйыштыҡ бит. Кемгә ҡушаһың, шул дежур торорға тейеш. Мәҫәлән, мин бөгөн төндә дежур итәм.

— Яҡшы, беҙ һинең менән дежур булабыҙ, ә хәҙер тамаҡ ялғайбыҙ ҙа эшкә тотонабыҙ.

Усаҡ яғылды. Ике яҡтан бейек, текә ҡая ярҙар менән ҡыҫылған Ҡариҙел өҫтөнән талғын ғына төтөн күтәрелде, оҙаҡламай быҡыр-быҡыр килеп һыу ҡайнап сыҡты, танауға тыуғандан бирле таныш, татлы картуф еҫе килеп бәрелде.

Аш янында төнгө йәшенле ямғыр ҙа, һалды ярҙан ситкә этәреү ауырлығы ла онотолдо, йәнә уйын-көлкө башланды, Хәжи ҡурайын алды.

— Нимә уйнарға бойораһығыҙ, һалсылар? — тине ул, карттар һымаҡ һуҙып, тауышына олпатлыҡ сығарып. — Оҙон көймө? Бейеү таҡмағымы...

— «Әрме», — тине Арыҫлан.

— Һә! Армияла йөрөгөң киләме! — тип төрттөрҙө Тажи.

— Теләгең ҡабул, — тип яуапланы шул уҡ тауыш менән Хәжи һәм «Әрмене» һыҙҙырып ебәрҙе. Һандуғас Арыҫлан һыу өҫтөн яңғыратып йырлай башланы.

Әрмеләрҙә йөрөп, сәс үҫтерҙем,
Сәскенәйем етте лә үрмәгә...

Эй, иртән һыу өҫтөнән ишетелгән моң! Уны нимә менән сағыштырып була икән? Ҡешеләр генә түгел, ҡоштар ҙа, һыу эсергә төшкән йәнлектәр ҙә, хатта остары күккә тейеп торған йөҙәр йәшлек ҡарағайҙар, шыршылар ҙа был моңдо тыңлай төҫлө. Нур эсенән генә үкенеп ҡуя: «Гармунды алаһы ҡалған икән, бына ҡурай менән бергә уйнағанда ниндәй йәтеш булыр ине».

Хәжи уйнауҙан туҡтағас, Арыҫлан һорау бирҙе.

— Егеттәр, ә беҙҙең Ҡариҙел Ағиҙелдән дә матурыраҡ бит. Ниңә уның хаҡында бер йыр ҙа юҡ икән, ә?

— Шулай шул...

— Ғәҙеллек түгел. Ағиҙел һүҙе ҡатнашмаған йыр юҡ, ә Ҡариҙел — етем бала һымаҡ ситтә ҡала.

— Арыҫлан, һин бит төрлө ҡоштар булып һыҙғыра беләһең, шулай булғас, йыр ҙа сығара алырһың, — тине Нур.

Арыҫлан уйға ҡалды.

— Может сығарыр ҙа инем, шиғыры юҡ бит.

— Ә мин шиғыр яҙам! — тине дәртләнеп Нур.

— Булды, — тине Арыҫлан тәүәккәл. — Һинән — һүҙҙәр, минән — моң...

Тәжрибәһеҙ дүрт егеткә тәү тапҡыр һал ҡыуыу еңелгә тура килмәне: йә ҡуйы томандар, көтөлмәгән боролмалар уларҙың эшен ҡатмарлаштырҙы, ауырлаштырҙы, ҡулдарҙа инде ҡанлы һөйәлдәр хасил булды, аҙыҡ та таҡы-тоҡо ғына ҡалды, улар планлаштырғанса бөтәһе лә уң булып тормаһы, «графиктан» сыҡтылар, ә көндәрҙең береһендә төнгө вахтала торған Арыҫлан менән Тажи, абайламаймы, йоҡлап китепме, һалды ҡомға ултырттылар, уны ҡуҙғатып ебәреү өсөн оҙон көн үтте, һалсылар эт булып арыны, ә ашарға картуф та ҡара икмәк кенә, ни ит, ни май юҡ, тоҙҙо ла Хәжи яңылыш һыуға төшөрөп ебәрҙе. Һалсылар араһында шыңшыу, мығырланыу башланды. Нурҙың уҡығаны бар: ун-

дай саҡта ҡәнәғәтһеҙлек, бигерәк тә насар ашау, тора-бара капитанға ҡаршы бунтҡа әйләнгән. Нур план ҡорҙо.

— Егеттәр, —«тине ул, тоҙһоҙ картуф менән икмәк һуҡтырып ултырғанда. — Бер нисә көнгә һунлап барып еткәндән донъяның сите кителмәҫ, минең уйымса, оҙаҡламай беҙ Түбән Иҙәк тигән ауылға барып етергә тейешбеҙ. Ул ярҙан алыҫ түгел. Һалды туҡтатабыҙ ҙа ике кешене ауылдан тоҙ, май һатып алырға ебәрәбеҙ.

— Итле һурпа ашағанда ла эсте тишмәҫ ине, — тине Арыҫлан.

— Тишмәҫ ине лә бит, итте ҡаш һикерткәнгә бирмәйҙәр.

— Малайҙар, беҙҙең биҙрә икәү бит!

— Булһа?

— Минекен иткә алмаштырабыҙ. Өр яңы! Цинковый.

— Белмәйем шул...

— Ятып ҡалғансы, атып ҡал, ти.

— Их, мылтыҡ булһа, һыу эсергә төшкән берәй кейекте атып ҡына алыр инек...

Нур Арыҫланға табан боролдо.

— Йәлләмәй атыр инеңме?

— Ә ниңә йәлләргә? Башҡорт ғүмер-ғүмергә һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән.

— Мин йәлләр инем, — тине Нур.

— Эй, бигерәк нескә күңелле кеше һин, Фәтихов.

— А как же, шиғыр яҙа бит. Шағирҙар нескә күңелле булырға тейеш.

— Ҡуйығыҙ әле, малайҙар, шаярып ҡәләм тибрәткәнде ҙурға алмағыҙ.

— Йә, кем минең менән ауылдан урап килергә теләй? — тип һикереп торҙо Арыҫлан.

— Ҡара әле, Арыҫлан, кем һинең шул ҡалай биҙрәңә ит бирһен инде, — тип мыҫҡыллы көлдө СеЛән Тажи.

— Был, — тине тиҙ тоҡаныусан Арыҫлан, — был, во-первых, не железное ведро... — тип рус теленә күскәйне, уны: «Үҙебеҙсә, үҙебеҙсә!» — тип бүлдерҙеләр. — Беренсенән, был ҡалай түгел, цинковый биҙрә, былдай биҙрә Өфөнөң үҙендә лә юҡтыр. Икенсенән, мин уға минимум өс тауыҡ, йә һарыҡ бото алып киләм. — Ул инде олпат ҡына өҫтәп ҡуйҙы. — Балыҡ, картуф ашап ҡына һал ҡыуып булмай, ауыл ишкәкте биш-ун тапҡыр ишһәң, ашаған ҡойола ла бөтә. Ҡара эш эшләгәндә, ике ҡуллап тотоп ашарлыҡ ит кәрәк ул. — Ул йоҙроҡтарын йомарлап, уларҙы ауыҙына килтереп, сәйнәп алды.

Ниңәлер, бер кем дә Арыҫланға эйәрергә теләмәне, ул кәйефе ҡырылыбыраҡ ярға күтәрелде, артына боролоп ҡараны.

— Ҡояш анауында еткәндә, әйләнеп ҡайтырмын, һыуығыҙ ҡайнап торһон, картуфығыҙ әрселгән булһын, — тине әре генә.

Нур, ул киткән яҡҡа ҡарап, һоҡланып, йылмайып ҡарап торҙо: «Тәүәккәл егет! Ундай кеше бер ерҙә лә әрәм булмай ул!..»

Ҡояш Арыҫлан күрһәткән ергә килеп етте, үтеп тә китте, өсаяҡҡа аҫылған биҙрәләге һыу ҡайнай-ҡайнай биҙрә төбөндә генә ҡалды. Улар түҙмәнеләр, ҡоро картуф ҡына булһа ла бешереп ашанылар, аҙаҡ балыҡ ҡаптырҙылар. Көн кискә ауышты, ә Арыҫлан юҡ та юҡ... Башҡа төрлө уйҙар килде.

— Ултыртты был беҙҙе, — тине Селән Тажи.

Һәр эште, мөмкин тиклем яҡшылыҡҡа юрарға яратыусы («Нисек юраһаң, шулай була», — тип өйрәтте уның әсәһе Нәсимә апай) Нур Тажи менән килешмәне.

— Бәлки, ул көтөү ҡайтҡанды көтөп торалыр...

Ҡурайсы Хәжи уның фекеренә ҡушылды.

— Ихтимал, яҡындағы ауылда юлы уңмағас, күрше ауылға киткәндер...

— Көн әрәмгә китте, — тине көрһөнөп Нур. — Картуф, балыҡ ашаһаҡ та, үлмәҫ инек әле, өс көнгә ҡуян тиреһе лә сыҙаған, ти, беҙ ҡуяндар түгел, йәнә берәй аҙна ғына түҙер инек.

— Ә мин әйтәм, ул беҙҙе ултыртты, — тип үҙенекен итте Селән Тажи. — Уны көтөп тороуҙа файҙа юҡ, лутсы ҡуҙғалайыҡ.

— Юҡ, юлдашыңды ташлап китеү егетлек түгел. Көткән көтәйек.

— Әллә үҙен эҙләп китергәме? — тине ҡурайсы Хәжи.

— Һе-һе-һе... — тип ауыҙын асыр-асмаҫ ҡына көлдө Селән Тажи.

— Ниңә һәһелдәйһең?

— Теге... Ғабдулла Туҡай әкиәтендәге кеүек була бит: «Ми-ки-ки, ми-ки-ки, ҡапсыҡтағы бүре башы бит ун ики...» Лутсы ҡуҙғалайыҡ, ҡараңғы төшкәнсе, бер аҙ юл үтербеҙ.

— Юҡ, егеттәр, улай килешмәй. Яҡшы түгел. Был, әйтерһегеҙ килһә, хыянат итеү була, — тине Нур, ҡыҙа төшөп.

Арыҫланды төнө буйы көттөләр. Ҡояш сығып, дилбегә буйы күтәрелгәнсе көттөләр, әммә... егет, һыуға ташланған таш һымаҡ, юҡ булды ла ҡуйҙы.

— Хәжи, эҙләп кит үҙең. Ихтимал, Арыҫланға ул-был булғандыр.

— Ә һеҙ?

— Беҙ китә торабыҙ. Арыҫлан менән бер ни ҙә булмаған булһа, беҙҙе Теләш пристане ҡаршыһында көтөрһөгөҙ. Ул алыҫ түгел, күп тигәндә, биш-алты саҡрымдыр.

— Әгәр ул сирләп-нитеп киткән булһа?

— Ул сағында...

— Ул сағында, — тип Тажи Нурҙың фекерен дауам итте, — үҙең генә килерһең.

— Юҡ! — тине Нур ҡырҡа, — сирле кешене ташлап китергә ярамай. Һин Арыҫлан янында ҡалырһың.

Тажиҙың күҙҙәре тәгәрәп төшөрҙәй булды.

— Беҙ икәү генә һалды ҡыуа алмайбыҙ бит, Фәтихов.

— Ҡайғырма, ҡыуырбыҙ: беребеҙ — башында, икенсебеҙ ҡойроғонда торор. Хәҙер Өфө алыҫ түгел инде. Өс-дүрт көндән барып етербеҙ.

— Ә боролмаларҙа? — тине Тажи, ризаһыҙланып. — Ҡомға ултырһаҡ? Юҡ, мин риза түгел. Хәжи бер ергә лә бармай. Арыҫланға бер ни ҙә булмаған, ә просто ул ҡасҡан. Дезертир.

— Иптәшең хаҡында улай насар уйларға ярамай, — тине Нур. — Бәлә ағас башынан түгел, кеше башынан йөрөй. Йә берәй өйәнәге барҙыр.

— Ә-ә... Ул миңә тәүҙә үк оҡшамағайны. Имеш, гел урыҫса һөйләшергә, урыҫса уйларға... Беҙҙең ауылда тоже берәү, армиянан ҡайтҡас, гел урыҫса ғына һөйләшеп йөрөгәйне, хатта әсәһенә: «Мама, подай то, подай это...» — тип өндәшә ине... Мин, әлбиттә, бер телгә лә ҡаршы түгелмен, әммә туған телеңде башҡа телгә алмаштырырға ярамай.

— Яҡшы, улайһа, һин Арыҫланды эҙләп кит, Тажи.

— Бик! Ҡайтырлыҡ булһа, ҡайтыр ине. Донъя ситенә китмәне бит.

Тажиҙың ай-вайына ҡарамаҫтан, Нур мәсьәләне тауышҡа ҡуйҙы: Хәжи уны яҡлап сыҡты һәм, кәрәк булһа-нитһә тип, Тажи тоғон алып, Арыҫланды юллап китергә булды.

Ул ярға күтәрелеү менән, һалды ҡуҙғатып ебәрҙеләр. Нур, Хәжиҙең күңелен күтәрер өсөн, яратҡан «Фирҙәүескәйен» йырлай башланы: «Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй, Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй...»

Инде ҡараңғы төшкәс, йондоҙҙар ҡарағусҡыл күкте шаҙралағас, Нур Хәжигә ҡысҡырҙы:

— Ә-әй... арыманыңмы? Арыһаң, төнгөлөккә ҡунаҡлайбыҙ.

— Ю-у-ҡ... Ҡөнө буйы ҡыҙынып яттыҡ бит.

Нурҙың йөрәген шикләнеүҙәр, әрнеүҙәр өйкәне: «Ни булды был Арыҫланға? Ҡапыл сирләп китте тиһәң? Ул — арала иң таҙа, баҙыҡ егет... Ауырлыҡтан шөрләне тиһәң, үҙе теләп бригадаға ҡушылды. Илбирҙе ағаһы һал ҡыуыу-

ым уйын эш түгеллеген һөйләгәндер... Сеәлн Тажи хаҡмы икән әллә?.. Юҡ, юҡ, тағы бер тапҡыр юҡ! Кеше хаҡында нәҙер уйларға ярамай. Хатта насарлыҡ эшләһә лә...»

Ана шулай уйланып, икеләнеп бара-бара ул туҡтарға тейешле урынды үтеп киткәнде һиҙмәй ҙә ҡала, иҫенә килгәндә инде һуң ине — һалды ағышҡа ҡаршы алып барып булмай. Ярай, ҡояш сыҡҡансы ағырға ла, ҡояш сыҡҡас, туҡтарға — Арыҫлан минрәү кеше түгел, беҙҙе тейешле урында күрмәһә, ағыш буйлап түбән төшөр — дөрөҫ, был еңел эш түгел, йылғаның яры буйлап ҡына юл һалынмаған, уның кәҙә үтә алмаҫлыҡ урындары ла бар.

Көнө буйы көттөләр улар Арыҫлан менән Тажиҙы, әммә көтөп ала алманылар. Хәҙер ни эшләргә? Көтөргәме, китергәме? Өҫтәүенә, төндә мамыҡ юрған һымаҡ ауыр, ҡуйы томан төштө, — ун-ун биш аҙымдан да бер нәмә күренмәй.

— Бындай томанда ҡуҙғалып булмай, ҡомға ултырыуыбыҙ бар, — тине һөйәлләнгән ҡулдарын ыуып Хәжи.

— Томан күтәрелгәнде көтөргә тура килер... — тип уның һүҙен хупланы Нур, ә үҙе уйланды: Арыҫлан менән Тажи уның хаҡында ни уйлар? «Ташлап киткәндәр, көтмәгәндәр, — тип уны һүгерҙәр, осрашҡас, ҡул да бирмәҫтәр».

Иртән, томан күтәрелгәс, Хәжиҙе уларҙы эҙләргә ебәрергә кәрәк, йә аҙашып йөрөүҙәре бар...

Көн бик матур башланды, ҡояш сығып күп тә үтмәне, уларҙың теләген аңлағандай, ауыр, ҡуйы томан таралып бөттө, ҡапыл донъя яҡтырып китте, һулыш иркенәйҙе. Улар кистән тотҡан балыҡты бешереп, эштер-өштөр генә ашанылар ҙа бөгөнгө көндөң программаһын төҙөнөләр.

— Әле ҡояш ҡайҙа?.. Һин, ҡояш анауы төшкә еткәнсе, уларҙы эҙләп, юғарыға табан күтәреләһең. Әленән-әле ҡысҡыр, һөрән һал. Таба алмаһаң, әйләнеп ҡайт.

— Ә был тирәлә ауыл-фәлән бармы?

— Булырға тейеш. Йылға буйында ауыл булмай буламы ни.

— Әллә уларҙы эҙләп йөрөгәнсе, ауылға барып аҙыҡ-түлек кенә алып килергәме? Улар бит аҙашырға бала түгел...

— Тәжрибәле кешеләр ҙә аҙаша, Хәжи дуҫҡай. Ә һин шулай ҙа тәүҙә, яр буйлап, юғарыға күтәрел, әгәр уларҙы тапмаһаң, ауылдан урарһың. Тоҡҡа һалып, кисә тотҡан балыҡты ал, икмәккә, майға алмаштырырһың.

— Әй! Иҙел буйы халҡының балыҡҡа иҫе китәме ни. Лутсы мин бынауы алмаш күлдәгемде алам.

Нур Хәжиҙең тауышында нимәнәндер ҡәнәғәтһеҙлек һиҙҙе, ул Нурға тура ҡарамаҫҡа тырышты... Тимәк... һал ҡыуып төшөргә риза булыуына үкенә.

— Һин сирләмәйһендер бит, Хәжи? — тине ул, ҡапыл шундай һәйбәт егет хаҡында насар уйлауына асыуы килеп.

— Аҙыраҡ тамаҡ ауыртып тора тороуын... Нисауа, сыҙап түҙерлек.

— Улайһа, мин үҙем урап киләйем.

Хәжи ашығып ҡаршы төштө:

— Юҡ, юҡ, һин капитан... — Хәжи йылмайҙы, — һиңә карапты ташлап китергә ярамай. — Ул, алмаш күлдәген ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, ярға һикерҙе.

— Балыҡты алманың инде?

— Юҡ... Әйттем бит инде, был яҡ халҡының балыҡҡа иҫе китмәй, — Хәжи, ҡыуаҡтарға тотоноп, шаҡтай текә ярҙан күтәрелгәс, уға табан боролоп, ҡул болғаны ла күҙҙән юғалды.

Бөгөн көн башҡа көндәргә ҡарағанда ла эҫерәк булды. Ҡояш төш ваҡытына еткәндә, инде сыҙап торорлоҡ түгел ине. Нур трусиктан ғына ҡалды, тик тормаҫ өсөн һалды ҡарап, тикшереп сыҡты, бушайған бауҙарҙы тарта төштө, биҙрә тулы балыҡ булһа ла, ҡармаҡ һалып, аяҡтарын һыуға тығып, ҡыҙынып ултырҙы. Хәжиҙең ҡурайын алып, көй сығарырға маташты. «Их, гармунды алмағанмын...» — тип йәнә үкенеп ҡуйҙы. Әллә көткәнгә, былай ҙа оҙон йәйге көн сикһеҙ оҙон тойолдо, ә ҡояш бер урында тик торҙо, әйтерһең, бер үк маршруттан йөрөй-йөрөй туйған, яңы юл эҙләй... Ә бына Ҡариҙел улай түгел, мең, миллион йылдар бер юлдан аҡһа ла, үҙ юлынан туймаған, ашығып аға ла аға... Хәйер, ниндәй йылға шундай юлдан туйһын инде? Ярҙар береһенән-береһе матур, гүзәл. Гел текә ҡаялар, ҡая өҫтөндә һыуға ауырға торған шыршылар, ҡарағайҙар... Ә ҡоштар... уларҙың концертын йөҙ йыл тыңлаһаң да ялҡмаҫһың. Әгәр унан, донъя ожмахы ҡайҙа, тип һораһалар, икеләнмәй, Ҡариҙел буйҙарында, тип әйтер ине.

Ожмахлыҡҡа ожмах, ә Хәжи һаман юҡ та юҡ, ҡояш бит инде байыу яғына юл тотто. Ҡорһаҡ асты. Ул тоҙһоҙ ғына балыҡ бешереп ашаны — тамаҡ туйғандай итте.

Ҡояш, хушлашыу нурҙарын һибеп, яр башындағы шыршы ағастары артына, һарғылт ҡыҙыл шаршау артына, инеп йәшеренде. Ә Хәжи юҡ та юҡ. Нур Арыҫлан менән Тажиҙың урап килеүенә өмөтөн өҙгәйне инде. Ә бына Хәжи...

Нур, бәлки, ғүмере эсендә тәү тапҡырҙыр, төшөнкөлөккә бирелде. Ә бит өсәһө лә шундай ышаныслы, утҡа-һыуға инергә әҙер торған егеттәр ине... Береһенә лә ике тапҡыр әйтеп, өгөтләп торманы, «һал» һүҙен ишеткәс тә, ике ҡуллап ризалаштылар, инициатива өсөн уны маҡтанылар. Һәм бына уны яңғыҙын ғына ҙур һал өҫтөндә ҡалдырып киттеләр...

Нур хәҙер уларҙың һәр береһенең тәүге ҡараште күренмәгән тиҫкәре яҡтарын эҙләргә тотондо. Арыҫлан — үҙенең русса оҫта белеүе, оҫта һыҙғырыуы менән маһая... Тажи — кешенән көлөргә, кешенең «китек-ҡотоҡ» яғын эҙләргә ярата... Ә Хәжи, ни әйтһәң дә, бик тиҙ килешә, бер ҡасан да һүҙ көрәштермәй, бәхәс башланһа, ситкә китә, «алыштан» сыға... Нинә һин, Нур, бригада ойошторғанда, уларҙың был һыҙаттарына иғтибар итмәнең икән? Ауыр минуттарҙа ҡаты һынау ваҡытында кешенең күренер-күренмәҫлек тиҫкәре яғы ла, ҡот осҡос әшәкелеккә әйләнеп, күңелһеҙлеккә, хатта бәхетһеҙлеккә алып бара бит...

Их Нур, Нур... Ә һинең һуң «китек-ҡотоҡ» яғың юҡмы ни? Әйҙә, үҙеңә ҡарап ҡарайыҡ. Донъяла шар һымаҡ түптүңәрәк кеше бармы? Шулай булғас, тырнаҡ аҫтынан кер эҙләмә һәм, сәбәбен белмәй тороп, иптәштәреңде ғәйепләмә. Кешене ғәйепләү, кешенең етешһеҙлеген эҙләү — ҙур эш түгел, һин бына үҙ етешһеҙлектәреңде күреп, үҙеңә дөрөҫ баһа бирергә, кәрәк булһа, үҙеңде аяуһыҙ хөкөм итергә өйрән — бына шул сағында ысын кеше булырһың...

Ә шулай ҙа, юлға дүртәү сығып, тора-бара яңғыҙың ғына тороп ҡалыу — аяныслы хәл. Юҡҡа, кешене һынайһың килһә, алыҫ юлға сыҡ, тимәйҙәр... Ашыҡма, тим бит, Нур, юлдаштарыңды ғәйепләргә, хөкөм итергә, ихтимал, аҙаҡ һиңә уларҙан ғәфү үтенергә тура килер әле.

Хәҙер ни эшләргә? Ни эшләргә, тип төнгә ҡаршы ҡуҙғалып булмай инде, таң атҡанды көтөргә тура киләсәк... Их, күпме ваҡыт әрәм булды... Ике-өс юлларға план ҡорғайнылар бит...

Буталсыҡ, йәмһеҙ төштәр күреп, Нур әллә нисә тапҡыр өнөн уянды. Береһендә Арыҫланды күрҙе, имеш, ул биҙрәһен бер көтөү һарыҡҡа алмаштырған икән дә, шул көтөүен ҡыуып, Ҡариҙелдән килә... Таң алдынан, ни эшләптер, күрше ҡыҙы Илисәне күрҙе... Уларға һыуға ингән икән... Ҡоҙоҡтан биҙрәһен тарта, тарта, һис тә тартып сығара алмай. Нур, йүгереп килеп, уның биҙрәһен тартып сығарҙы ла, биҙрәне ҡоҙоҡ ситенә ҡуйып түңкәйтеп, һыу эсмәксе булғайны, биҙрә ҡоҙоҡҡа төштө лә батты. Нур тертләп уянып китте. Бер ҡасан да төшкә ышанмаған Нур был юлы әле күргән төшөн юрай башланы. Арыҫлан... Бер көтөү һарыҡ... Ярай инде, уйлап ятҡанға ингән, ә бына Илисә... уны уйламаны бит ул... Илисә... Ҡапыл йөрәк һулҡылдап китте, Илисәне күргеһе килде. Уның бит әле ошо йәшенә етеп бер ҡыҙҙы үбеү түгел, ҡосаҡлағаны ла юҡ. Әлеге лә баяғы гел буш сәғәттәрен детектор радиоалғыс менән булаша, ашағанда ла, йөрөгәндә лә, хатта йоҡлағанда ла немец һүҙҙәрен ятлай, үҙ-үҙе менән немец телендә һөйләшә. Өс йәшкә

өлкән апаһы Нәсихә унан көлә: «Һин әллә буйҙаҡ йәшәргә уйлайһың инде, Нур? Ҡупме ҡыҙҙар үҙеңә ымһынып ҡарай, ә ҡайһы берҙәре, оялып-нитеп тормай, һинең менән танышырға теләүҙәрен миңә әйтәләр, ә һин... мүк йөрәк... Радио ла фотография, битте лә данкеше...»

Нур апаһының ярым шаярып әйтелгән һүҙҙәренә ысынлап яуап бирә: «Егерменсе быуат — радио быуаты. Һәр ир заты радионы, фотографияны, бер сит телде белергә тейеш. Ә ҡыҙҙар... ҡыҙҙар ҡасмаç...»

Ә бына бөгөн уның төшөнә күрше ҡыҙы Илисә инде. Бала саҡта Нур уны, ике йәшкә кесе булғанлыҡтанмы, әллә үҙенең нескә күңеллелегенәнме, ҡанат аçтында йөрөтөргә, «ел-ямғырҙан» һаҡларға тырышты, үçә төшкәс, дәрес әҙерләргә булышты. Бөрөлә уҡығанда, каникул ваҡыттарында ғына күрештеләр. Нур уны Бөрө татар-дәүләт педтехникумына өндәне, әммә Илисә арыраҡ китте — Өфө педтехникумына уҡырға керҙе. Хәҙер инде улар тағы ла һирәгерәк осрашалар һәм, осрашҡан һайын, ни эшләптер, бер-береһенән тартынғандай итәләр... Бына әле һал өçтөндә ҡыуышта томан күтәрелгәнде ҡарап ятҡанда, төшкә ингәнлектәнме, ҡапыл Илисәне күргеһе килде һәм, үҙе лә һиҙмәçтән, уға арнап йыр сығара башланы:

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исемдәре Илисә.
Илисә йөрөгән һуҡмаҡтан
Талғын ғына ел иçә.

«Өфөлә үҙенә кескәй генә булһа ла бүләк алырға кәрәк», — тине ул һәм үрмәләп ҡыуыштан сыҡты, сисенеп, һал ситенән Ҡариҙелгә сумды, һалҡынса һыуҙа (Ҡариҙел иң эçе көндәрҙә лә нык йылынмай) рәхәтләнеп йөҙҙө, тәрән итеп һулыш алды ла, сумып, һыу аçтынан йөҙҙө, һыуҙан сыҡҡас, тәне уттай булғансы киндер таçтамал менән ышҡып һөртөндө.

Ул балыҡ, картуф бешереп ашағансы, томан күтәрелеп бөттө, ҡояш ҡыҙҙыра башланы, әммә тау башында берәүҙә күренмәне... «Башҡа көтөп булмай... — тип уйланы ул,— ә көтмәй ни эшләйһең? Һалды бер үҙең алып бара алмайһың бит инде... Ә ниңә алып бармаçҡа?! Дөрөç, тәүлектең егерме дүрт сәғәтен дә аяҡ үрә үткәрергә, боролмаларҙа һаҡ булырға тура киләсәк. Ни булһа ла була... Тәүәккәл таш ярған, ти, атай әйтмешләй, «аллаға тапшырам...» Ул тәүҙә, бик көсәнеп булһа ла, һалдың «ҡойроғон» ярҙан эскә этәрҙе, унан бүрәнәләр өçтөнән һикерә-һикерә, һалдың «моронона» йүгерҙе. Ниһайәт, оҙон, ауыр һал талғын ғына ҡуҙғалып китте. Иҙел борғоланмай, тигеҙ аҡҡан ерҙә лә «ҡой-

рок» янынан китергә ярамай, ҡарап тороуға тураға аҡҡан һымаҡ тойолһа ла, ул ағышын үҙгәртеп кенә тора. Тәүҙә Нур: «Бер үҙеңә лә әллә ни ауыр түгел икән», — тип уйланы, юлдаштарын көтөп, ваҡытты әрәм итеүенә үкенеп ҡуйҙы, ләкин... яҡшылыҡ менән яманлыҡ, шатлыҡ менән ҡайғы алмаш-тилмәш йөрөгән шикелле, уға «ҡойроҡ» ишкәгенең ауыр башын тотоп барырға ғына түгел, аяҡтарын ауырттыра-ауырттыра, бүрәнәнән бүрәнәгә һикереп, алға — моронға йүгерергә лә, ярға килеп бәрелмәҫ, ҡомға ултырмаҫ өсөн, әле һул яҡтан, әле уң яҡтан этергә лә тура килде. Күкрәк аҫты һулҡылдай башлаһа ла, Нур төшкөлөккә туҡталманы, картуфты, балыҡты «ҡойроҡҡа» алып килеп, аяҡ үрә генә ашаны, тамаҡ ялғап алғас, күңел күтәрелеп китте һәм ул Иҙел яңғыратып яратҡан «Фирҙәүескәйен» йырлап ебәрҙе.

Яр буйында осраған һирәк-мирәк кешеләр, уның матур тауышына һоҡланып, ҡул болғанылар. «Былай булғас, Нур дуҫҡай, һин йырлап ҡына Өфөгә барып етәһең...» — тип үҙен йыуатты ул.

Нур, ҡараңғы төшә башлағас, һалдың ике башы ла күренерлек итеп, усаҡ яғып ебәрҙе, йоҡо баҫмаһын өсөн өҙләкһеҙ ҡарағай энәләре сәйнәне, берәй ерен семтеп алды, ә шулай ҙа арыу үҙенекен итте, ул таң алдынан ойоп китте һәм шунда уҡ тертләп уянды. Йоҡо нисә минутмы, секундмы дауам иткәндер, әммә төш күрергә лә өлгөрҙө. Һәм, шуныһы ғәжәп, әлеге лә баяғы кисә күргән төш: Арыҫлан бер көтөү һарыҡ ҡыуып, Иҙел өҫтөнән китеп бара, оҙон сыбыртҡыһын һелтәй, шартлатмаҡсы була, тик тауышы сыҡмай...

Көн башҡа көндәр һымаҡ аяҙ, эҫе булмаҡсы. Күктә юрый ҙа болот күренмәне. Яр буйында үҫкән ҡарағай, шыршылар һыуҙа шул саҡлы матур булып сағыла, ҡайһы саҡта шикләнеп ҡуяһың — ҡайһыһы быларҙың ысын ағастар ҙа, ҡайһылары — сағылыш... Ҡапыл йәнә Илисә иҫкә килеп төштө... Туҡта, туҡта, бығаса булмаған хәл, ни эшләп ул бик йыш иҫкә төшә башланы әле? Илисә лә каникулға ҡайтһа... «Ғәлиәбаныу» пьесаһын ҡуйырға кәрәк. Хәлилде үҙе уйнар, Ғәлиәбаныуҙы — Илисә. Уның тауышы матур, моңло...

Ҡояш аяуһыҙ ҡыҙҙыра, тамаҡ аслы-туҡлы, әммә кәйеф шәп: һал ага, Өфө көнләп түгел, сәғәтләп яҡыная, дөрөҫ, әле барып етергә, кәм тигәндә, ике көн кәрәктер... Ике көн ни ул беҙҙең өсөн. Иң мөһиме — күңелде төшөрмәҫкә, өмөттө өҙмәҫкә.

Бына шулай һағышҡа бирелеп, дәртләнеп, ҡанатланып та барғанда, ҡапыл күктең ҡайһылыр ситенән аҡ болоттар килеп сыҡты, һүҙ ҡуйышҡан кеүек, улар бик тиҙ уҡмашты

һәм, ҡояшты ныҡлап ҡаплап та тормай, боҙ ҡатыш ямғыр ҡойорға тотондо. Нур хатта ҡыуышҡа йүгереп барып етергә лә өлгөрмәне, эре, бармаҡ башы саҡлы боҙҙар уны дөмбәҫләне. Нур устары менән башын ҡапланы ла, абынып йығылып, тубығын сыйҙы. Боҙло ямғыр, йәшенеп килгән ҡараҡ шикелле, ни саҡлы тиҙ, һиҙҙермәй килһә, шул саҡлы тиҙ үтеп тә китте, йәнә ҡояш ерҙе иркәләй башланы. Ә һал был ваҡыт эсендә бөтөнләй ярға терәлер-терәлмәҫ кенә аға ине. Нур ашығып торҙо, бәрелгән тубыҡтың ауыртыуына ла иғтибар итмәй, һалды ярға «йәбештермәҫ» өсөн ағыш уртаһына йүнәлтергә ашыҡты.

Икенсе көндө ул ойоп киткән арала (тимәк, ойоп ҡына китмәгән, ә шаҡтай оҙаҡ йоҡлаған була), һал ҡомға ултырғайны. Нур һалды ҡуҙғатырға тырышты, сәмләнеп иренен сәйнәне, әммә көсәнеү юҡҡа ғына китте — ауыр һал «ыжламаны ла».

Хәҙер ни эшләргә? Ни ҡылмаҡ кәрәк?.. Кемде ярҙамға саҡырырға? Ниндәй хәйлә уйлап табып, һалды ҡуҙғатып ебәрергә?.. Баш етмәне, хәйер, был осраҡта бик аҡыллы баш та әллә ни ҡыра алмаҫ ине.

Нур алға, артҡа ҡарап торҙо, берәй катер килеп сыҡмаҫмы тип өмөтләнде, яр башына менеп тирә-яғына ҡараны, ары һуғылды, бире һуғылды, юҡ кешене саҡырып, һөрән һалды, әммә Ҡариҙел ярҙары яңғыраҡ менән генә яуап ҡайтарҙы. Ул йәнә Иҙелгә төшөп, һалын ҡуҙғатырға маташты, эттәй арыны, өҫтәүенә, бәрелгән тубыҡ елһенде, баш та ауыртҡандай итә, әллә ямғыр аҫтында ҡалып һалҡын тейҙергән...

Һынағанығыҙ бармы икән? Әгәр кеше иренһә, башлаған эшен еренә еткерергә теләмәһә, юҡ сәбәпте бар итә, үҙ-үҙен алдап, аҡланыу юлын эҙләй башлай... Бына был осраҡта ла Нур елгә арҡаһын ҡуйҙы, үҙенең еңеп сығыуына шикләнә башланы, шикләнеү ҡорто иң эшәке, хәтәр микроб, йөрәкте һиҙҙермәй генә ашай, хәлһеҙләндерә һәм еңә... «Хәҙер ни эшләргә? Ни ҡылырға? Былай булғас... йығылып үл, бер ни эшләп булмай инде... Өфөгә барып етергә бер-ике көн ҡалғас, һалды ташлап китергәме? Хурлыҡ та, ғәрлек тә, үкенесле лә. Ә «Сплавпунктта» нисек яуап бирер? Хөкөмгә тарттырыуҙары бар. Асыуым да килмәгәйе, һалды һүт тә бүрәнәләрҙе берәмтекләп ағыҙ...

Оҙон көн үтте, әммә, гонаһ шомлоғона ҡаршы, Нур өмөтләнеп көткән һал да, катер ҙа килеп сығып, уны ҡотҡарманы, ул заманда Ҡариҙел хәҙерге кеүек «ҡайнап» торған йылға түгел ине шул...

Оҙон көн әсенеү, ҡыҫыр көтөү менән, бик аҡрын булһа ла, үтеп китте. Ул, әленән-әле тороп, һалды әтәреп ҡараны,

әммә теге юрый ҙа Нурҙың хәлен аңларға теләмәне. «Исмаһим, оҙаҡ итеп ҡойоп ямғыр ҙа яумай бит, һыу күтәрелер ине...»

Өмөтһөҙ шайтан булыр, тип ул төндө лә һалда үткәрергә булды һәм, йоҡоға һалышып, эргәһенән һал үтеп киткәнен дә күрмәй ҡалды, тик боролмала уның «ҡойроғон» ғына күрҙе Их, иртә уңмаған кис уңмаҫ, ти... Юлдаштары ҡасмаған булһа (эйе, эйе, ул хәҙер уларҙың ауырлыҡтан ҡурҡып ҡасыуҙарына шикләнмәй ине), хәҙер инде улар, ихтимал, Өфөгә барып еткән булырҙар ине.

Билдәле, шикләнеүҙәр, шөбһәләнеүҙәр артынан компромисс, ә унан ҡурҡаҡлыҡ килә. Бына әле лә... ҡурҡаҡлыҡ тип әйтергә ярамай, ә... нисек атарға инде, ул бит ҡурҡыуҙан түгел, ә башҡа сара ҡалмағанлыҡтан, һалды урынынан ҡуҙғата алмағанлыҡтан... һалды ташлап китергә булды. Һәм ошо фекергә килеп, йыйына башлағас, ул бер нәмәне күрҙе: аҙыҡ-түлеккә тип киткән уның юлдаштары үҙҙәренең барлы-юҡлы мөлкәттәрен уға күрһәтмәй генә алғандар икән, тик шаҙра Хәжиҙең ҡурайы ғына тороп ҡалған, тимәк, улар башҡа аяҡ баҫмаҫҡа тигән уй менән һалдан төшкәндәр... Тимәк, ул иштәр һайлағанда ныҡ яңылышҡан булып сыға... Ә кемгә ышанырға һуң? Ниндәй кешегә? Ауыр минуттарҙа, яңғыҙыңды ташлап ҡалдырырлыҡ, хатта хыянатҡа барып, һине һатырлыҡ кешене нисек, ниндәй һыҙаттарынан алдан белеп, күреп була һуң? «Һал ваҡиғаһынан» һуң ул бик күп уйланды һәм был һорауға асыҡ ҡына яуап таба алманы.

Нур ҡыш көнө лә, көҙ көнө лә кейелә торған еңелсә бишмәтен, тоғон, биҙрәһен, балтаһын, көрәген, Хәжиҙең ҡурайын алып ярға сыҡты. Үҙ ҡулдары менән ойошторған, нисә көндәр буйы ҡыуған, хәҙер инде яҡын нәмәгә әйләнгән һалды ташлап китеү уға ҡыҙғаныс ине. Нур ярға ултырҙы. Ҡитәһе килмәй ҙә ҡуя... Ә китмәй ни эшләйһең? Урынһыҙға, юҡҡа көсәнеүҙән ни файҙа?.. Шуға күрә халыҡ юҡҡа «Ора алмаған оло күҫәк күтәргән» тигән мәҡәл уйлап сығармаған инде. Һал хәҙер уның өсөн ора алмаҫлыҡ күҫәк кеүек тойола ине.

Нур торҙо, һалға тағы бер тапҡыр әсенеп ҡараны ла, үҙен «авантюрист» тип тиргәп, китеп барҙы. Иҙелдән алыҫлашҡан һайын, ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар уның йөрәген шығыраҡ телгеләне. Ә ундай минуттарҙа кеше айлап түгел, көнләп, сәғәтләп аҡыллана, үҫә икән. Нур менән дә, ихтимал, шундай үҫеш булғандыр — бынан һуң ул кешеләргә маңлай күҙе менән генә ҡарамаясаҡ, ә күңел күҙҙәре менән ғәмәлдәренә төшеп инергә тырышасаҡ. Бынан һуң ул... Туҡ-

та, туҡта, ә нисек һуң кешенең ауыр минуттарҙа үҙен ҡайһылай тотоуын алдан тоя белергә?

Яҡындағы ауыл да бик үк яҡын түгел ине. Ауылға еткәнсе, ул асыҡ ҡына бер фекергә килә алманы. Урам аша сығып барған ике тиҫтерҙе күреү менән, ҡапыл «күк ҡабағы» асылып китте. «Әгәр уларҙы ярҙамға саҡырһаң?»

— Егеттәр, туҡтағыҙ әле!

Тегеләр ғәмһеҙ генә туҡтанылар.

— Һаумыһығыҙ, егеттәр!

— Һаумы!

— Бынан Иҙелгә нисә саҡрым?

Икәүҙең береһе, кисәле-бөгөнлө генә бәке менән ҡырылған ҙур, ялан башлы егет, яуап бирҙе.

— Тураға өс булыр, урап барһаң, бишкә баҫыр.

— Ә ниңә? — тине теш араһынан серт-серт төкөрөп торғаны.

— Тәмәкең бармы?

— Тартмайым шул мин.

— Үҙең ҡала егетенә оҡшағанһың, үҙең тартмайһың, — тип көлдө ул.

— Минең һал ҡомға ултырҙы, егеттәр, шуны сығарышыр инегеҙ.

— Фью-юю... — тип һыҙғырҙы тәмәке һорағаны.

— Ә иптәштәрең ҡайҙа һуң? — тине ҙур таҡыр башлыһы.

— Иптәштәр... — Ҡасып бөттөләр тип әйтергә уның теле барманы. — Сирләп киттеләр... Пристандә ҡалдырырға тура килде...

— Ә һин үҙең ҡайҙан?

— Үҙем мин Бөрө яғынан.

— Әләй... Бик барыр инек тә...

Нур уларҙың бер-береһенә ҡарашып алыуын, икеләнеүен аңлап, әйтә һалды.

— Бушҡа түгел. Минең аҙыраҡ аҡса бар, ә Өфөнән ҡайтышлайй күберәк тә бирермен.

— Ә сүтеки күпме бирерһең? — тине төкөрөгө булмаһа ла төкөрөргә яратыусыһы.

— Туҡта әле, эш аҡсаламы ни, — тине ҙур, ҡырылған баш, — һиңә әбәзәтелне бөгөн, хәҙерме?

Нур аңланы — таҡыр баш ярҙамлашырға әҙер, әммә уны нимәлер тыя ине.

— Хәҙер, тип ни... бөгөн булһа, шәп булыр ине лә...—

— Минең дә, — ул таҡыр башын иптәше яғына һелкеп алды, — Хәсәндең дә ашығыс эше бар, ә бына төштән һуң урап килергә була...

— Ә ниндәй эш ул? — тине Нур, дәртләнеп, — бәлки, минең ярҙамым да кәрәктер.

Таҡыр баш икеләнде.

— Юҡ... ул һин эшләй торған эш түгел... Һин лутсы, әйҙә, хәл йыя тор, ә беҙ төштән һуң урап ҡайтырбыҙ. Ана-а... тыҡрыҡтан икенсе йорт. Минең исемем Әбделмән.

Нур нишләргә белмәне, ике ҡуллап уның ҡулын ҡыҫты.

— Рәхмәт, Әбделмән.

Әбделмән ауыҙын йырҙы.

— Эшләнмәгән эш өсөн рәхмәт әйтмәйҙәр... Ә һинең исемең нисек?

— Нур. Фәтихов Нур. Бөрө татар-башҡорт педтехникумының студенты.

— О-о, студент, — тине төкөрөргә яратыусы егет.

— Ярай, беҙ киттек, ә һин беҙҙе көт.

— Әбделмән, ә һеҙҙең өйөгөҙҙә кеше бармы һуң?

— Бар... — тине ул, ҡул болғап, — әсәй... өй тулы баласаға...

Әбделмәндәрҙең хужалығы шаҡтай хәлле ине, әммә иң төҙөк хужалыҡта ла ниндәйҙер етешмәгән, ҡул етмәгән урындар була, шундай яҡтарҙың береһе — картуф баҡсаһына йөрөй торған ҡапҡа ине. Ул һалынып төшкән, ике таҡтаһы һынған... Бала саҡтан уҡ бер генә минутын да әрәм итмәүсе, бушҡа үткәрмәүсе Нур әле лә оҙаҡ сыҙап ултыра алманы, Әбделмәндең әсәһе Мәғрифә еңгә үҙен сәй, ҡыҙыл эремсек менән һыйлағандан һуң, ишек алдына сыҡты, ҡаранды, эш эҙләне һәм тапты — картуф баҡсаһына йөрөй торған ҡапҡа. Әбделмәндең әсәһе: «Ҡуй, ҡуй, ҡунаҡты эшләтәләрме ни. Туҙға яҙмағанды...» — тип ҡараһа ла, Нур балта, ҡул бысҡыһы алып эшкә тотондо. Эш менән мауығып, ул төш еткәнде лә һиҙмәй ҡалды. Мәғрифә еңгә әтәс тотоп килде.

Нур «минең ҡош-ҡорт һуйғаным юҡ» тип ҡарағайны ла, мал һуя белмәгән ир ирме ни ул, тип ғәрләндергәс, ул әтәстең ҡанаттарын ҡайырып, аяғы менән баҫты ла, күҙҙәрен сытырлатып йомоп, бысағын бахырҙың муйыны яныңа килтерҙе һәм муйын өҙөлөп сыҡҡансы ышҡыны.

Нурҙың байтаҡтан өй ҡаҙанында бешерелгән тауыҡ һурпаһы эскәне юҡ ине, ҡапыл күңеле күтәрелеп китте... Тик, ни эшләпер, һаман Әбделмән юҡ — төш күптән ауҙы бит инде.

Мәғрифә еңгә ишек алдында сағында ул ишетелерлек итеп әйтә һалды:

— Көн дә кисегәйеп бара, нишләптер, Әбделмән һаман ҡайтып етмәй...

— Ҡайтыр, ҡайтыр, балам, яҡын ер түгел бит...

Нур түҙмәне, һораны:

— Ә ҡайҙа киттеләр һуң улар?

— Перовка ауылына таҡта алырға. Бабайым өй түбәһен таҡта менән ябырға итә. Мин, ярай, ата-баба ҡабыҡ түбә менән йәшәгән, беҙ ҙә йәшәрбеҙ әле, тип ҡарағайным да, ауыҙ ҙа астырманы. «Ата-баба йәшәгән икән, байдет, ә мин улай йәшәргә теләмәйем. Хәҙер сәүит власы, таҡта, ҡалай түбәле йорттарҙа байҙар ғына йәшәргә тейеш түгел, беҙҙең һымаҡ крәҫтиәнгә лә таҡта кәпәс кейергә ваҡыт», — тип үҙенекен итә. Эй-и... Беҙҙең Муллабаев зәрә үҙ һүҙле кеше ул. Йәренгә сабыш айғыры һатып алып, Өфө һабантуйында беренселекте алам, тип елкенеп йөрөй әле... Түлке бына баш балабыҙҙы — Әбделмәнде генә уҡыта алманыҡ, дүрт ҡыш мәктәпкә йөрөнө лә ҡул ғына һелтәне.

— Ә нисә йәштә ул?

— Күп инде. Ун етеһен тултырып килә. Ҡәләш әйттерергә ваҡыт.

— Уҡырға бер ваҡытта ла һуң түгел, Мәғрифә еңгә. Өфө яҡын. Теләһә, үҙен Бөрөгә алып китәйем. Мин дә булышырмын...

— Ҡуй. Ата-баба уҡымай йәшәгән әле, ул да йәшәр. Былай ул эшкә бик тырышсан. Хас атаһы.

— Эшкә тырыш кеше уҡыуға ла тырыш булырға тейеш, Мәғрифә еңгә. Бына минең атайым да әлепте таяҡ тип тә белмәй, ҡултамғаһын яҙырлыҡ та грамотаһы юҡ. Бына беҙ хәҙер алты бала, төпсөк баланан башҡа бөтәбеҙ ҙә уҡый. Ә Варис ағайым — Урта Азияла ҡыҙыл командир!

Мәғрифә еңгә көрһөнөп ҡуйҙы.

— Әллә нишләп беҙҙекеләр уҡыуға һәүәҫ булманы инде. Ҡыҙым да бер ҡыш ҡына уҡырға йөрөнө лә ташланы. Ун алтыла кейәүгә сығып китте...

— Әле бер ҙә һуң түгел, Мәғрифә еңгә, һеҙҙең бит мәктәп йәшендәге балаларығыҙ өй тулы. Иптәш Ленин: «Уҡырға, уҡырға, уҡырға», — тип васыят әйтеп ҡалдырған.

— Ул әйткәндер ҙә бит...

— Ул беҙҙең файҙаға әйткән, Мәғрифә еңгә. Етте, башҡорт халҡы быуаттар буйы ярым ҡырағай хәлдә йәшәп ғазапланды. Башҡортҡа ла, тау бөркөтө шикелле, алыҫҡа, бейеккә осорға ваҡыт. Салауат батыр юҡҡа, үҙ бәхетенән баш тартып, халыҡ бәхете өсөн көрәшмәгән бит.

Мәғрифә еңгә уйға ҡалды. Ҡояшта уңып, төҫөн юғалтҡан яулыҡ ситтәрен төҙәтеп ҡуйҙы, алъяпҡысын ҡыҫыбыраҡ бәйләне.

— Әләйһә, Әбделмән менән һөйләшеп ҡара әле, дәрте булһа, мин ни ҡаршы түгел, ә атайҙары уҡытырға атлығып тора...

Кис килеп етте. Ҡөтөү ҡайтты. Ҡояш батты. Йондоҙҙар берәм-һәрәм ҡалҡып, кемделер ирештерә башланы... Ниһайәт, ике оҙон арбаға таҡта тейәгән Әбделмән, уның атаһы Сирай ағай ҡайтып етте.

— Ҡөтә-көтә көтөк булып бөттөңмө? — тине Әбделмән ҡапҡа асыусы Нурға. Ярылған таҡта юҡ ине, беҙгә тигәнен икенсе кеше тартҡылашып алып киткән. Ыҙғышып бөттөк... Иртәгә иртән барып, һинең һалыңды «пләндан» ҡотҡарырбыҙ. Хәҙер һуң инде...

Ә иртән... Был яҡтарҙа, әллә йылға, урмандар тарта, башҡа, яланлы урында яумаһа ла, әленән-әле ямғыр ҡойоп ҡына тора. Был төндө лә шулай: сатыр-сотор йәшен йәшнәне, дөбәр-шатыр күк күкрәне һәм таң атҡансы ҡойоп ямғыр яуҙы, ә иртән... йәнә йылмайып ҡояш сыҡты.

Нурҙың һалын «пләндан» ҡотҡарырға атта барырға булдылар. Әбделмән кисәге иптәше Хәсәнгә, ниңәлер, әйтергә теләмәне, «Әй, шуны...» — тип ҡул ғына һелтәне. Әбделмәндең әсәһе Мәғрифә еңгә Нурға ҙур карауай икмәк, картуф, бер йомарлам май һалды. Нур аҡса һуҙғайны, Мәғрифә еңгәнең ҡашы емерелде:

— Ҡуйсы, унан бөлмәбеҙ әле, ике һыйыр һауабыҙ. Өфөнән ҡайтышлай ин. Мужыт, Әбделмән һиңә эйәреп Бөрөгә барып килер.

Ат юртҡан яйға Нур хыяллана барҙы: «Ә барыбер донъяла яҡшы, игелекле, хуш күңелле кешеләр күберәк... Бына бит, бөтөнләй сит кешене нисек ҡунаҡ иттеләр, үҙҙәренең эштәре булһа ла, уға ярҙамлашырға баралар...»

Ләкин шатлыҡ оҙон ғүмерле булманы. Төнө буйы ҡойоп яуған ямғыр Иҙел һыуын күтәргән һәм... һалды алып киткән. Ыһ!

— Һы! Һы! — тип һаҡалын һыпырып торҙо Сирай ағай.

— Былай булғас, һалыңдан ҡолаҡ ҡаҡтың инде, — тине Әбделмән.

— Миңә уны ташлап китмәҫкә кәрәк булған... — тип үкенде Нур. — Хәҙер ни эшләргә инде?

Ни эшләргә?.. Аҙым һайын, минут һайын башҡа килә торған һорау: ни эшләргә? Кешенең бөтә ғүмере ошо һорауға бәйле: уңыштары, еңелештәре, шатлыҡтары, ҡайғылары, бәхете, бәхетһеҙлеге... «ни эшләргә?» тигән һорауға дөрөҫ яуап биреү һәм уны тормошҡа ашырыуҙан тора. Хәҙер һиңә ни эшләргә, Нур Фәтихов?

— Фәтихов, йә, хәҙер ни эшләмәк булаһың? — тине Әбделмән.

Ул тертләп китте.

— Үҙем дә белмәйем... Һалды юллап китергәме?..

— Ҡуй, баҫыуҙағы елде тотоп булмаған һымаҡ, ағым һыуҙағы һалды ла ҡыуып етә алмаҫһың. Әйҙә, ваҡытың булһа, беҙгә өй ҡыйығы ябырға булыш, барыбер оҫта ярҙарға кәрәк...

Был ҡыҙыҡтырғыс тәҡдим ине, әммә...

— Юҡ, — тине Нур, әле үҙ һүҙҙәренә үҙе ышанып етмәй, — барыбер мин ул һалды ҡыуып етергә тейешмен.

— Әгәр уны башҡа һалсылар «муйынсаҡлап» алып киткән булһа? — тине Нурҙы янынан ебәрергә теләмәгән Әбделмән.

— Муйынсаҡлаған булһалар, тартып аласаҡмын. Мин кеше өсөн уны аҙна-ун көн буйы ҡыуа килмәгән.

Сирай ағай һаҡалын һыйпап ҡуйҙы.

— Малатчина был егет... Бынан кеше сығасаҡ. — Инде улына боролоп, бойорғандай әйтте. — Һиңә лә шулай булырға кәрәк, Әбделмән. Баҫыу эштәре бөткәс, үҙен юллап Бөрөгә бар...

Улар арбаға ултырып ауылдарына табан китте, ә Нур яр буйлап һыу ағышына табан түбәнгә йүнәлде.

Ярҙан алыҫ китергә ярамай, Иҙел күренмәй, ҡайһы бер урында яр буйлап барыуы ауыр — ҡуйы урман, сытыр-сатыр, уларҙы йырып, урап үтеү ваҡытты күп ала, шуға күрә Нур яр уңайлыраҡ урында йүгерә-атлай барҙы, хәле бөткәс, туҡтап ҡулдарын күтәрә-күтәрә, бер нисә тапҡыр тәрән итеп һуланы ла йәнә юлын дауам итте, ә һал юҡ та юҡ...

Ул шулай күпме йүгерә-атлай барғандыр, сәғәте юҡ, әйтә алмай, ҡорһағы асҡас ҡына, ҡояшҡа күтәрелеп ҡараны — төш етеп килә икән. Тоғон сисеп, иртән бешерелгән арыш икмәген һындырып алды ла, ашауға ваҡыт әрәм итмәҫ өсөн сәйнәй-сәйнәй, юлын дауам итте.

— Урра!.. — тип ҡысҡырғанын ул үҙе лә һиҙмәй ҡалды, алда уның һалы күренде, ләкин... һал Иҙелдең ҡаршы яҡ ярында боролмала туҡталып тора ине. Йәнә «ни эшләргә?» тигән һорау үҙенән-үҙе хасил булды. Ләкин был юлы һорауға яуап тиҙ табылды — ул аяҡ йыуанлығы ҡоро-һары ағастарҙы йыйҙы, йүкә ағасының тиреһен ҡайырып, уларҙы бергә беркетеп, кескәй генә һал яһаны, кейемен, тоғон, биҙрәһен шул һалға бәйләп, ҡаршы яҡҡа йөҙә башланы. Нур, балыҡтан кәм йөҙмәй ине — ул бик бәләкәйҙән һаҡынса Бөрө йылғаһында йөҙөргә өйрәнде, Бөрө ҡалаһында иртә яҙҙан алып каникул башланғансы Ағиҙелдә йөҙҙө, тын алмайынса һыу аҫтында торорға, һыу аҫтынан йөҙөргә күнекте. Шуға күрә уға Ҡариҙелдең ҡаршы ярына йөҙөп сығыуы бер ни торманы. Бына ул һалдың шыма, шылғаҡ бүрәнәһе-

нә һәбенитә, ҡалҡынып, кәүҙәһен һыуҙан сығара төштө һәм һалғы менде, тоғон эйелеп алды.

— Ҡасҡын! — тине ул, һалына мөрәжәғәт итеп. — Ҡыуып етә алмаç, тип уйланыңмы ни? Һә-ә... Хәҙер һин минән бер ҡайҙа ла китә алмаçһың, туған. Барыбер үҙенде Өфөгә алып барып еткереп, биржаға тапшырам...

Кем белә, ихтимал, бына ошо көндө, ошо сәғәттә ул кешегә батырлыҡ, тәүәккәллек, тырышлыҡ менән бергә түземлек, сыҙамлыҡ та кәрәклеген бөтә тәрәнлеге менән аңлағандыр.

Бер тәүлектән ул һалын биржаға тапшырҙы.

Күпте күргән, күпте ишеткән биржа кешеләре, тәжрибәле һалсылар Нурҙың шундай ҙур һалды яңғыҙы ғына алып килеүенә тәүҙә ышанмай торҙолар, «Да-а...», «Улай»... — тип баштарын ҡашынылар...

Биржала Нурға байтаҡ ҡына аҡса бирҙеләр. Был аҡсаға өç-башты бөтәйтергә, ваҡ-төйәктән булһа ла бүләктәр алырға мөмкин ине, әммә Нур, уның менән аҙна буйы һал ҡыуышып килгән иптәштәренә тейешле аҡсаны иçәпләп, айырым һалып ҡуйҙы.

Ул йылдар нэптың шаулаған сағы ине, шуға күрә ҡайҙа ҡарама магазиндар, кибеттәр, ларектар, киоскылар, аҙым һайын ресторандар, сәйханалар... Сауҙа иртәнге ҡараңғынан алып киске ҡараңғыға саҡлы гөрләп тора, хатта ике һүҙҙең береһендә алланы иçкә алыусы мосолмандар йома көндө лә мәсеткә бармай, үҙ эштәре менән мәж киләләр, кеçәләрен ҡалынайтыр, бүçәйтер өсөн клиенттарын йылайҙар, майлайҙар, алдашалар, алданалар, бөләләр, һуңғы ыштандарын һатып, бурыстан ҡотолорға тырышалар, әммә нәфселәренә хужа була алмайҙар, ҡомһоҙлоҡтан, еңел табыштан уларҙың күҙҙәре аларған, ауыҙҙары һеләгәйләнгән, тауыштары ҡарлыҡҡан — йәндәрен-тәндәрен хосуси милекселек көйәһе ашай ине: аҡса, аҡса, аҡса... Көндөҙ — өндә, төндә төштә аҡса муйынға йәш ҡыҙҙар беләге, быуар йылан булып урала: мөмкин саҡлы тиҙерәк күршеңде, көндәшеңде, бажаңды, хатта туғаныңды уҙып китергә...

Нур түҙә алманы, «Универсальный кибет Янгуразова» тигән кескәй генә магазин ҡаршыһында туҡталды. Вывеска аçтына ғәрәп хәрефтәре менән йәшел ҡалайға «Йәнеңә ни кәрәк, шул бар. Бөтәһе лә арзан» тип яҙылған. Иғлан үҙенекен итте — Нур кибеткә инде. Кереү менән күҙгә ташланған нәмә... йәйеп элеп ҡуйылған шәльяулыҡ ине. Күҙең сағылырлыҡ ҡыҙыл розалар төшкән зәңгәр яулыҡ Нурҙың һушын алды. Ун ете йыл йәшәп уның был төçлө матур яулыҡты күргәне юҡ ине. Түҙмәне, суҡтарын тотоп ҡараны һәм ҡыйыр-ҡыймаç ҡына һораны.

— Абзый... бынауы яулыҡ күпме тора?

Йылтыр битле, майлы күҙле, шаҙра булһа ла, ифрат һөйкөмлө ағай етеҙ хәрәкәт менән яулыҡты ептән тартып алып, бер уңын, бер һулын әйләндереп күрһәтте лә бал сәсә башланы.

— Ике яғы ла бер! Уңы-һулы юҡ! Йөҙ йыл бәйлә, уңмаясаҡ та, туҙмаясаҡ та! Арҡырыһы чистый шерсть, буйы чистый ебәк! Һиндостандың үҙенән дөйә менән килтерелгән. Настоящий кешмирский шәл! Кемгә алаһың? Әсәйеңәме? Кәләшеңәме? — Һатыусы әле бер, әле икенсе күҙен ҡыҫып алды. — Әллә һөйгән йәреңәме?

Нур ҡыҙара төштө.

— Әсәйемә...

— Ә-ә... Изге эш. Әсәйең нисә йәштә?

— Иллегә яҡынлашып килә...

— Ә-ә... Ҡакрас! Ҡеше ни саҡлы оло булһа, шул саҡлы матур, ҡупшы кейенергә тейеш. Йәш сағында любой кейем дә пойдет, йәшлек — үҙе матурлыҡ. Бына минең әсәйем, собханалла машалла, һикһән тулып һикһән бергә китте, урамға сыға башлаһа, килен булып төшкәндәге кейемдәрен кейергә ярата.. Дажы... — Һатыусы Нурға яҡыныраҡ килеп, сер итеп әйтте, — битенә кершән яға, күҙҙәренә һөрмә тарта...

Нур күреп тора, был кешенең ауыҙы ябылмаясаҡ, шуға күрә түҙемһеҙләнеп һораны.

— Хаҡы?

— Хаҡы? Хаҡы һинең өсөн, сибәр егеткәйем, нуль. Әсә бер генә була. Әсә донъялағы иң ғәзиз вә дарогой кеше. Әсә өсөн берҙән-бер йөрәгеңде лә ярып бирергә мөмкин. — Ул яулыҡты профессиональ оҫталыҡ менән яурынына һалды, бер татар-башҡорт ҡарсыҡтары һымаҡ, бер сиған ҡыҙҙары, бер мәрйәләр кеүек урап ябынып ҡараны һәм өҙлөкһөҙ: «Йә? Килешәме? Шәпме?» — тип Нурҙан хуплау талап итте.

— Хаҡы?!

— Кисә көнө буйы берәр червонецҡа һатҡайным. Ә һин ауылдан килгәнһең, ә ауыл ерендә аҡса ағаста үҫмәй... Кстати, тип әйткәндәй, үҙең ҡайһы яҡтан?

Нур алдашты.

— Бөрөнән...

— Бөрөнән? — Һатыусының былай ҙа ҙур ауыҙы ҡолаҡтарына етеп уҙып киткәндәй булды. — Мин үҙем дә шул яҡтан бит, туғанҡайым. Правды, мине унан сабый саҡта уҡ алып киткәндәр.

Нурға ҡапыл рәхәт булып китте, ситтә яҡташыңды осратыу — үҙе бер байрам бит.

— Ҡайһы ауылдан?
— Минме? Ҙур Шаҙы. Мишкә волосы.
«Алдай!» тип уйланы Нур. Шаҙылар, Өрьяҙы кешеләре һымаҡ, «ч»ны ҡаты итеп, мишәрҙәрсә әйтә, ә был «ҡ»ны «к» тип һөйләшә, моғайын, төмәндер. Улар техникумында Еникеев тигән малай шулай һөйләшә.
— Былай булғас, сибәр егет, яулыҡты мин һиңә почти ярты хаҡына бирәм — биш тәңкә.
Нур ауылдан сығып тәү тапҡыр ҡалаға килгән бер ҡатлы, хәйләһеҙ малай түгел, уның Бөрө йәрминкәләрендә сауҙагәрҙәрҙең, алыпһатарҙарҙың һатыулашҡанын күргәне, күҙәтеп торғаны бар. Ғәҙәттә, алыусы һатыусы һорағандың яртыһын бирә, шунан китә тартышыу: береһе тештәрен ҡыҫып тинләп төшә, икенсеһе яңағын һура-һура тинләп арттыра, ниһайәт, ниндәйҙер суммала килешәләр, тауар бер ҡулдан икенсе ҡулға күсә...
— Йә, сибәр егет, алаһыңмы? Бындай яулыҡты Өфөлә генә түгел, Ҡазанда, дажы Мәскәүҙә таба алмайһың. Был бит Һиндостандың үҙенән, дөйәгә тейәп...
— Бирер хаҡым ике тәңкә.
— Шту һин! — Ул, үпкәләгән булып, яулыҡты стойка аҫтына йомарлап ташланы. — Лутсы мин уны кибетемдә серетәм. Үҙем дүрт тәңкәгә алдым...
— Ярай улайһа, ике һум да утыҙ тин.
— Өс һум илле тин!
— Ике лә илле тин!
— Өс һум ҡырҡ тин!
— Ике лә алтмыш тиндән бер тин дә артыҡ бирә алмайым, сөнки... — Нур, бәлки, ғүмерендә тәү тапҡырҙыр алдашты, — сөнки минең барлығы өс тәңкә аҡсам бар, ә миңә әле ашарға, юлға кәрәк...
— Ярай, бир аҡсаңды. Әсәйең бәйләгән һайын миңә рәхмәт әйтер. Йылы тәнендә туҙһын, игелеген күрһен.
Урамға сыҡҡас, Нур яулыҡты кеҫәһенән алып, йәйеп ҡарап торҙо... Маҡтарлыҡ та шул... Әсәйем һөйөнөп бөтмәйәсәк. Их... аҡса күберәк булһа, Илисәгә лә алырға булыр ине...
Был һүҙҙәренән ул оялып ҡуйҙы, уйҙарын ишетмәнеләрме икән тигәндәй, тирә-яғына ҡаранып алды. Ә ниңә Илисәгә? Уның бит ҡыҙ ҡәрендәштәре лә етерлек: Ташкенттағы Фәниә апаһын иҫәпләмәгәндә лә, дүртәү... Ә шулай ҙа Илисәгә берәй бүләк алғанда йәтеш булыр ине.
Көнө буйы магазиндан магазинға йөрөп, күптән хыялланған әйберҙәрен һатып алып, кеҫәһен йоҡартҡас ул ҡайтыр юлға йүнәлде. Дөрөҫ, уның күңелен бер нәмә өйкәп алды — ә ниңә әле ул үҙен ташлап киткән малайҙарға аҡ-

саны икенсе кеçәһенә һалып ҡуйҙы? Хыянаттары өсөнмө? Һин уларға бер тин дә бирергә тейеш түгел, Нур, уларҙы тотоп һүгергә, ғәрләндерергә, хатта комсомол йыйылышына ҡуйып, әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдырырға кәрәк. Аҙ ғына ауырлыҡ елкәләренә төшкәйне, ҡойроҡтарын һырттарына һалдылар. Әгәр һуғышта шундай хәл булһа?..

Нур кире боролоп, магазинға инмәксе, тегеләргә тигән аҡсаны тиненә саҡлы тотоп бөтөрмәксе булғайны, магазин ишеге төбөндә үҙен ҡулға алды, үҙен-үҙе енде. Ҡайтҡас, бер нәмә һорашмай, бер шелтә һүҙе әйтмәй, уларҙың усына аҡса һалыу үҙе бер һабаҡ буласаҡ, тип уйланы ул.

Өс-дүрт көндән ул, өр-яңы булмаһа ла, йәшел гимнастерка, йәшел галифе, күн итек кейеп, билен киң ҡайыш менән ҡыçып быуып, Бөрөгә ҡайтып төштө. Ә тоғонда радиодеталдәр һәм күптән ауыҙ һыуын ағыҙып йөрөгән нәмә — шаҡтай донъя күргән булһа ла эшкә ярарлыҡ фотоаппарат ине.

Пароходтан төшөү менән, ул туп-тура техникумға йүнәлде. Техникумда ремонт башланған икән, бер таныш студент та осраманы. Дөйөм ятаҡта ла ремонт ине, шулай итеп, ул үҙен ташлап ҡасҡан юлдаштарын күреп, получканы тапшыра алманы. Хәрби кейемдә Бөрөнөң үҙәк урамдарын ҡыҙырып йөрөнө лә, ҡуныпта тормай, Өрьяҙыға йүнәлде һәм ҡараңғы төшкәндә ҡайтып етте. Өйҙә әле ут алмағайнылар, шуға күрә Нур тауышын үҙгәртеп ҡысҡырҙы: «Бында һалсыларҙы ҡабул итәләрме?»

— Кем унда? — тине ҡаушаған тауыш менән әсәһе. — Атаҡайым! Нур ҡайтҡан да баһа! — ул Нурҙы ҡосаҡлап алды. — Аллаға шөкөр, иçән-һау! Киткәнеңә ике аҙна үтте бит...

— Ә миңә ни булырға тейеш? — Нур тиҙ генә Өфөлә һатып алған сейә көрәнгә буялған фанер сумаҙанын асты, кешмир яулыҡты алып, теге һатыусы һымаҡ таратып һелкте лә әсәһенең яурынына һалды, гармун алып йырлап ебәрҙе.

Әсәкәйем яулығыңды
Иртә-кисен ҡаплаһын,
Мин ситтәрҙә йөрөгәндә,
Төçөм итеп һаҡлаһын...

Ә әсә башын улының күкрәгенә ҡуйып, лышыҡ-лышыҡ иланы. Нурға рәхәт ине — был уның тәүге хеҙмәт хаҡы ғына түгел, ә тәүге еңеүе лә ине. Ә еңеү... Иң күңелле, иң көслө музыка — еңеү музыкаһы.

Еңеү... Нурға ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә еңеү музыкаһын да татырға, еңелеү әсеһен дә эсергә тура килде. Хәйер, еңелеү һүҙен нисек аңлайһың бит...

Беләм, уҡыусы түҙемһеҙләнеп көтә һәм, әгәр мин аңлатма бирмәһәм, был мәсьәләлә аптырашта ҡалыр: ысынлап та Арыҫлан, Тажи һәм Хәжи, Нур шикләнгәнсә, ауырлыҡтан ҡурҡып, ҡасып киткәндәрме әллә көтмәгән бәләгә юлығып, һалға әйләнеп ҡайта алмағандармы?

Көҙ көнө, уҡырға йыйынғас, беренсе эше итеп, Нур уларҙы күрергә булды.

Ҡоштарға оҡшатып ҡыҙғырырға яратыусы Арыҫлан Нурҙы күреү менән ҡосаҡлап алды һәм, ғәҙәттәгесә, русса түгел, башҡортса һөйләргә, дөрөҫөрәге, аҡланырға тотондо...

— Фәтихов... Беләм, аңлайым минең турала нимә уйлауыңды. Юҡ, комсомол булһам да ант итәм, биллаһиваллаһи, һин уйлағанса түгел. Иҙелгә яҡын тәүге ауылда мин теге цинк биҙрәне тауыҡҡа алмаштыра алманым. Шулай икенсе ауылға киттем. Унда «операцияны» уңышлы тамамлап, кире юлға сыҡҡайным, ҡапыл урталай бөгөлдөм дә төштөм — уң яҡтан бауыр аҫтынан эсте ҡатыу алды. Сәғәт буйы тәгәрәп яттым. Ярай әле бер миһырбанлы ҡарт осраны, ауылғаса ултыртып алып ҡайтты. Төнө буйы һалҡын һыу тултырылған шешәне эсемә ҡуйып яттым да икенсе көндө волость үҙәгенә докторға киттем. Бына, ышанмаһаң, операция йөйөн ҡара — һуҡыр эсәгемде ҡырҡып алып ташланылар, — ул пинжәген ысҡындырып, сикһеҙ күп, ынйы кеүек аҡ, ваҡ төймәле, ҡыйыҡ яғалы зәңгәр сатин күлдәген күтәрә башланы.

— Кәрәкмәй, былай ҙа ышанам. — Нур уның усына өлөшөн һалды.

— Нимә ул? — тине Арыҫлан, аптырап.

— Аҡса. Иҫәпләнем. Һиңә шул саҡлы тейә.

— Юҡ, юҡ, юҡ... — Ул аҡсаны кире Нурға бирмәксе булды. — Мин һинән ғәфү үтенергә тейеш, Фәтихов.

— Һуҡыр эсәгең тотҡанға һин ғәйепләме ни...

— Шулайын шулай ҙа...

— Ал! — тине Нур ҡырҡа. — Сир һинән һорап тормай.

— Улай бик көсләгәс ни... — Арыҫлан аҡсаны теләр-теләмәҫ кенә алып кеҫәһенә һалды. — Минән һуң былай иҫән-имен генә барып еттегеҙме? Теге-был булманымы?

— Юҡ, — тине Нур, мыҫҡыллы йылмайып. — Ғабдулла Туҡай әкиәтендәге шикелле, тәүҙә Тажи һине эҙләп китеп олаҡты, унан Хәжи уны юллап юҡ булды...

— Ну-у?.. Аҙаҡ үҙҙәрен күрҙеңме?

— Юҡ. Мин урап ҡайтҡанда, техникумда бер студент та ҡалмаҒайны.

— Улайһа, әйҙәле үҙҙәрен юллап табайыҡ...

— Ҡәрәкмәй. Үҙҙәре мине эҙләп тапһын.

Дәрестәр башланыуҒа биш көн, бер аҙна үтте, ни Тажи, ни Хәжи Нурҙы эҙләп килмәне, ә Арыҫлан көн аралаш уны осратып: «Йә, күрештегеҙме?» — тип төпсөнөп торҙо. «Юҡ әле» һүҙен ишеткәс, ул түҙмәне, Нурҙы етәкләне лә: «Әйҙә әле, мин ул сволочтарҙы...» — тип тәнәфес ваҡытында тегеләрҙе эҙләргә тотондо. Тажи, уҡыу башланыуҒа бер аҙна үтһә лә, ни эшләптер, техникумҒа һаман килмәгәйне, ә Хәжи... түшендәге «КИМ» билдәһен усы менән ҡаплап, ант итергә тотондо.

— Бына йөрәгем... Бына комсомол билетым... Мин аҙаштым... Ике көн буйы урманда буталып йөрөнөм. Асыҡтым, арыным-алйыным...

— Ҡарнҙелде лә тапманыңмы? — тине Арыҫлан, уның яҒаһынан тотоп.

Арыҫлан дары һымаҡ гөлт итеп ҡабынырҒа әҙер ине, ә ҡарап тороуҒа Ғәмһеҙ, бошмаҫ йән — күк ишелеп төшһә лә, иҫе китмәҫ, урынынан ҡыймылдамаҫ төҫлө — бына шунан «мин кешенең кемлеген бер күреүҙә үк аңлайым» тип маһай инде...

Хәжи ҡыҙыл сөгөлдөргә әйләнде, тирә-яҡҡа ҡаранды.

— Ә һин... һин үҙең ҡайҙа ҡастың һуң?

— Ул ҡасмаҒан, — тине Нур, Арыҫландың ҡулын уның яҒаһынан ысҡындырып. — Уның һуҡыр эсәге тотҡан...

— Һе-һе-һи... Һуҡыр эсәге... Кеше ышандырырлыҒыраҡ сәбәп табалар уны, өҫтәүенә, өр-яңы биҙрәне алып ҡасты...

Арыҫлан йәнә уның яҒаһына үрелде, әммә был юлы Нурҙың ҡаҡса, көслө бармаҡтары уны тимер ҡыҫҡыс кеүек эләктереп алды.

— Тот, — тине ул, икенсе ҡулы менән Хәжигә аҡса һоноп, — ә мин һине гармунда уйнарҒа өйрәтмәксе инем...

Хәжи бер һүҙһеҙ аҡсаны алды ла усына ҡарап ҡуйҙы.

— Нисә һум?

— Күпме тейеш булһа, шул саҡлы, Фәтиховҡа һинең слепой копейкаң да кәрәкмәй, — тине Арыҫлан ҡырҡа һәм, Нурҙы ҡултыҡлап, коридор буйлап алып китте.

Ә Тажиҙы Нур техникумда ике-өс аҙна үткәс күрҙе, ләкин теге күрмәмешкә һалышып үтеп китте, «Тажи, туҡта әле!» — тигәнде ишетмәнеме, ишетмәмешкә һалыштымы.

Тора-бара Нур был күңелһеҙ ваҡиҒаны онотторҒа тырышты һәм онотто ла буҒай, тик хыянаттың әсеһе барыбер Ғүмерлеккә күңел төбөндә ҡалды һәм, инде күп йылдар үт-

кәс тә, Днепрҙың текә яр башында ултырғанда, алыҫта калған студент йылдарын хәтерләп, көрәштәше Василь Железкоға һөйләне. Юҡ, әсенеп түгел, ә мыҫҡыллы итеп, хатта ирмәк итеп.

Эйе, Василь, бәләкәй генә хыянатты ла ғәфү итергә ярамай, бәләкәй генә хыянат та ҙур хыянатҡа, енәйәткә алып бара ул...

Нур Әбделмәндәргә лә ҡабат инә алманы...

## ЕТЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Нәжәғәйҙең ғүмере ҡыҫҡа

Улар, Илисә шишмәнән ҡайтҡанда, йылға яры буйында осраштылар. Юҡ, осраҡлы түгел. Нур Илисәнең шишмәгә киткәнен күреп ҡалды ла, фотоаппаратын алып, шишмә яғына йүнәлде. Ғәжәп, ғүмер буйы улар өс-дүрт йорт аша ғына йәшәнеләр, бала саҡта көн һайын бергә уйнанылар, бер-береһен үртәштеләр, үсекләштеләр, үпкәләштеләр, хатта күҙ йәштәренә тиклем барып еткән саҡтар ҙа булды, әммә күп тә үтмәне, йәнә «ҡояш» сыҡты, бүленгән уйын дауам итте. Ә бына бөгөн... Илисәне күргәс, Нурҙың йөрәге ҡапыл көслөрәк, йышыраҡ дөпөлдәй башланы. Илисә лә, уны күргәс, ҡыҙарып киткәндәй булды, бит остары алмаланды, аллы-гөллө көйәнтәнең тимер ырғаҡтарына эленгән һыу биҙрәләре сайпылып ҡуйҙы.

— Ҡасан ҡайттың? — тине Илисә ултырма ҡыҙы кеүек оялсан тауыш менән.

— Төндә... — Нур абайлап алды, Илисә, ғәҙәттәгесә, көн дә кейә торған күлдәген генә киймәгән, ә биҙәнгән, алҡалар таҡҡан, юҡҡа түгел, ул: «Ҡасан ҡайттың?» — тип һораған булһа ла, уның ҡайтыуын йә күреп ҡалғандыр, йә кемдәндер ишеткәндер. — Үҙеңде карточкаға төшөрәйемме, Илисә? — Ул тәү тапҡыр Илисәнең талдай нескә зифа буйына, оялып ҡына ҡалҡып торған күкрәгенә иғтибар итте һәм тәне буйлап токка оҡшаған аңлайышһыҙ нәмә йүгерҙе.

— Ҡитсе, кеше күреп ҡалһа...

— Ҡалһа, карточкаға төшөү ғәйепме ни.

— Уныһы шулай ҙа, әллә ни һөйләүҙәре бар.

— Һөйләмәгәйҙәре тағы... Баҫ анауы ташҡа.

— Биҙрәләремде ҡуяйыммы?

— Юҡ, юҡ, ҡуйма. Мин һине Айҙағы Зөһрә ҡыҙ кеүек көйәнтәң менән төшөрәм...

Фотоаппарат «серт» итте һәм Илисәнең һыны ғүмерлеккә кәүҙәләндерелде. Үтер йылдар, Илисә кейәүгә сығыр, балалары булыр, тора-бара ҡарсыҡҡа әйләнер, һирәк-мирәк альбомын аҡтарып, йөҙләгән фоторәсемдәр араһынан көйәнтәһен аҫып төшкән ошо карточканы табып алып, һағышлы йылмайып, боғаҙына ултырған төйөрҙө йота алмай торор... Алыҫта ҡалған йәшлеге, Өрьяҙы йылғаһы иҫенә төшөр...

— Бөгөн киске уйынға сығаһыңмы? — тине Нур, фотоаппаратын йыйып.

— Әлләсе. Ә һин?

— Һине бейеткем килә, Илисә...

— Ҡуйсы... — Илисәнең йәнә бит остары алланды.

— Унан һөйләшәһе һүҙ ҙә бар...

— Ниндәй һүҙ икән ул?.. — Ах, хәйләләшә Илисә, ниндәй һүҙ икәнлеген оҙон керпектәр аша ҡараусы күҙҙәре әйтеп тора бит. Ул был һүҙҙе көткән, зарығып, ғазапланып, өмөтләнеп.

— Киске уйында әйтермен, Илисә.

Илисә уға һирпеп ҡарап йылмайҙы ла, кәүҙәһен аҙғына ла һелкетмәй, ваҡ-ваҡ атлап китеп барҙы.

Ә был йылмайыуҙан Нурҙың күкрәгендә яңы ҡояш хасил булды. Ул ташҡа ултырҙы. Их, гармуны янында булһа, өҙҙөрөп уйнап ебәрер ине... Ғәжәп, үтә ғәжәп... Нисә йылдар бер урамда йәшәп... бер ҡасан да күрмәгәнен күрҙе. Моғайын, астрономдар ҙа йөҙ, мең тапҡыр күккә ҡарап та, мең дә беренсе ҡарауҙарында быға саҡлы күренмәгән йондоҙҙо табаларҙыр...

Ул, ҡары ереп бөтмәгән һалҡынса мөгәрәпкә төшөп, сәғәт буйы фото эше менән мәшғүл булды, өшөп бөттө. Рәсемдәр төшөрөлгән ҡағыҙҙы быялаға йәбештереп, ҡояшта киптерҙе. Илисәнең карточкаһының артына «1928 йыл. Июль. Өрьяҙы буйында», ә үҙ һүрәтенең артына: «Бик һағынһаң, айға ҡара, ай ҙа яңғыҙ минең кеүек...» — тип яҙҙы ла мәктәп дәфтәрен урталайға киҫеп тегелгән блокнотына тығып ҡуйҙы.

Бөгөн ҡояш, уға үс иткәндәй, ни эшләптер, башҡа көндәргә ҡарағанда тиҙлеген кәметкәйне — кис булмай ҙа булмай. Дөрөҫ, ул карточканы Илисәнең өйөнә индереп тә бирә ала, әммә быға саҡлы уларға ҡағылып-һуғылып йөрөгән Нур бөгөн ҡапыл инергә ҡыйынһынды, Илисәнең ата-әсәһе уның уйҙарын һиҙенер кеүек тойолдо. Ә ҡояш... аҡһыл зәңгәр күккә йәбештереп ҡуйғандармы ни, бер урында тик тора. Нур ваҡытты үткәрер өсөн ишек алдында буталды, юҡ эште бар итте, арбаның күсәрҙәрен тикшерҙе — дегетләнгәнме, мал өйөнә күҙ һалды — тиреҫ йыйылмаған-

мы, салгыларҙың йөҙөн бармаҡ бите менән тикшереп сыҡ-ты — хәстәрлекле Фәтих ағай уларҙы күптән сүкеп ҡуй-ғайны инде — тот та бөгөн үк бесәнгә төш.

— Атай, болонлоҡто бүлештегеҙме әле? — тине ул ла-паҫта ыңғырсаҡ менән булашыусы атаһына.

— Иртәнән һуңға, алла бойорһа, бүлешәбеҙ.

Нурҙың устары ҡысытып китте: ике көндән бесәнгә...

Ярата ул бесән өҫтөн. Бесән сабыу — ауыр эш, әммә ирҙәрҙең көсөн, таҫыллығын һынай торған эш. Бесән өҫтөн-дә тәкәләр салына; йәш килендәр, ҡыҙҙар, һабан туйына әҙерләнгән һымаҡ, байрамдарҙа кейә торған кейемдәрен әҙерләйҙәр, өйҙәрен йыйыштыралар; йәш-елкенсәк дуға-ларға таҫтамалдар урай, ҡыңғырауҙар таға... Әйтерһең, ҡара тиренде ағыҙыусы ауыр эшкә түгел, күңел асырға бәйгегә, һабан туйына баралар...

Нур ҙа Өфөлә һатып алған кейемдәрен кейеп барасаҡ, атаһының, күршеләренең бесән сабыуын карточкаға төшө-рәсәк, улар ҙа күп йылдар үткәс, тамам ҡартайғас, шул рәсемдәренә ҡарап, аҡ һаҡалдарын һыпырып: «Их, бар ине йәш саҡтар... Ғүмер яҙғы ташҡын менән бер — шау-лай-шаулай ҙа үтә лә китә», — тип моңаясаҡтар...

Бөгөн ул, бәлки, киске уйындың «батшаһы» булыр — ҡыҙҙарҙы тилертеүсе Хәживәли күптән өйләнгән, икенсе балаһы үҫеп килә. Өйләнгән йылды әле ул орсоҡ кеүек кескәй генә йор Сабираһын етәкләп, киске уйынға килге-ләй торғайны, әммә икенсе йыл Әтнәкәй буйынан Хәживә-лиҙең гармун моңо ишетелмәй башланы, ә Нур Бөрөлә уҡый ине... Бына бөгөн ул арығансы, хәлдән тайып йығыл-ғансы йәштәрҙе бейетәсәк, йырлатасаҡ... һәм... Илисәне янынан ебәрмәйәсәк.

Ҡояш ни саҡлы Нурға үсекләшмәһен, барыбер түбәнәй-ҙе, һүрелде һәм йоҡо бүлмәһенә инеп юғалды. Шәфәҡ һү-нергә лә өлгөрмәне, Нур, тыҡрыҡ башына сығып, аҡрын ғына «Фирҙәүескәйен» һыҙҙырып алды ла, гармунын ҡул-тыҡ аҫтына ҡыҫтырып, Әтнәкәй тауына китте. Сыбыҡһыҙ телефон өйҙән өйгә Нурҙың Өфөгә барыуы, танымаҫлыҡ булып кейенеп-яһанып ҡайтыуы тураһында хәбәр тарат-ҡайны...

Сирек сәғәт тә үтмәгәндер, йәштәр Нурҙы һырып алды, ә ул баш ҡағып, йылмайып ҡына йә «Фирҙәүескәй», йә «Иркәмде» һыҙҙырҙы. Ниһайәт, Илисә лә күренде. Ул ауы-ҙын асмай ғына, йылмайып ҡына уның менән иҫәнләште лә әхирәттәре янына китте. Йәштәрҙе туплар өсөн, бейеү ойоштороп ебәрергә кәрәк ине. Нур бейеү көйө уйнай баш-ланы, әле һаман өйләнмәгән ҡарт буйҙаҡ Мирғасим (ул

заманда егет кеше егермеләрҙе атлап үтеп сыҡһа, «ҡарт буйҙаҡҡа» әйләнә ине) таҡмаҡлай-таҡмаҡлай бейеп алып китте. Нур ҡараны, әммә Илисәне күрмәне. «Ҡайҙа булды һуң әле ул? Әллә ҡайтып та киттеме? Юҡ, китергә тейеш түгел, ул бит Илисәгә: «Әйтәһе һүҙем бар», — тине. Бер-икс кешене бейеткәс, Нур иғтибарҙы үҙенә йүнәлтмәҫ өсөн, гармунын бейеү көйөн аҙыраҡ «һупалаусы» Хәйбрахманға тоттороп, түңәрәктән сыҡты һәм... уның артында шым ғына баҫып торған Илисә менән саҡ төкөшмәнеләр.

— Киттек, — тине ул, бышылдап.

— Ҡайҙа? — Илисәнең тауышы ҡалтыранып сыҡты.

— Көндөҙ төшөргән карточканы бирәм.

— Ай! Әҙер ҙәме ни?

— Әҙер. Һин шундай матур сыҡҡанһың, ҡарап туйғыһыҙ. Хас бына теге... Айҙағы Зөһрә ҡыҙ...

— Ҡана, күрһәт әле...

Улар ситкәрәк киттеләр. Нур кеҫәһенән карточкаларҙы алды, шырпы һыҙҙы.

— Танын319ңмы үҙеңде? Ә быныһы — минең рәсемем. Һин киткәс, үҙемде үҙем төшөрҙөм.

— Китсе! Үҙеңде үҙең?

— Илисә...

— Ә...

— Илисә... Бер аҙ ситкәрәк китәйек әле...

— Уңайһыҙ, Нур... Кеше әллә ни әйтер...

— Элекке заман түгел хәҙер, Илисә, кеше һүҙенән, шәриғәттән ҡурҡа торған ваҡыттар үткән.— Ул Илисәне етәкләп ситкәрәк алып китте, әммә улар биш-ун аҙым да атларға өлгөрмәнеләр, кемдер: «Нур, ҡайҙа юғалдың? Давай йырлап әйләнәбеҙ!» — тип ҡысҡырҙы.

— Минең янымдан китмә, — тип бышылданы Нур Илисәгә.

Башҡа киске уйындарҙа бер ҙә бейемәгән Илисә бөгөн шундай итеп бейене, башҡалар уның тырнағына ла тормайҙар ине. Ҡайҙан, кемдән өйрәнгән ул шундай оҫта бейергә?.. Ул берсә ултырма ҡыҙҙарының орсоғо һымаҡ бөтөрөлдө, берсә Бөрөгә төшкән аҡҡош һымаҡ һомғол «йөҙөп» йөрөнө, берсә гармунсы алдында һабан туйында алдан килеп, таҫтамал тотҡан кеше ҡаршыһында тыпырлаған сабыш аты һымаҡ тыпырлап торҙо, ә аҙаҡ... һуңғы «па»ны нисек бөтөрҙө һуң?!

Тальянский гармундың
Телдәре көмөш икән.
Шул гармунда уйнаусының
Уйҙары ниндәй икән? —

тип Нур алдына баҫты ла түңәрәкте йырып сығып китте. Тәүҙә йәштәр тынып ҡалды, шунан, алдан һөйләшеп ҡуйған шикелле, бөтәһе лә бер юлы ҡул саба башланы.

— Вәт, исмаһа-ам!

— Аҡҡошмо ни!

— Әртискәме ни!

Нур! Аңланыңмы, ул бит һинең өсөн, фәҡәт һинең өсөн, бейене. Юҡ, аяҡтары менән генә түгел, йәне-тәне менән бейене ул, әгәр туй ваҡытында бер-береһенән уҙҙырышып бейеүсе торналар Илисәнең бөгөнгө бейеүен күргән булһалар, көнләшеүҙәренән башҡа күлгә осоп киткән булырҙар ине...

Юҡ, Нур миңрәү түгел, Нур, бәлки, Әтнәкәйгә йыйылған бөтә йәштәргә ҡарағанда ла зирәгерәк, һиҙгерерәк егеттер, ул Илисәнең уның өсөн, фәҡәт уның өсөн генә бейеүен аңланы һәм, Илисә түңәрәктән сығып киткәс тә, уның артынан ташланмаҡсы булғайны, тик нимәлер: «Нур, сабырлы бул!» — тип уның аяҡтарын тышауланы.

Бынан һуң ул байтаҡ ҡына бейеү көйҙәре, күңелле, оҙон көйҙәр уйнаны, әммә күңеле гел генә Илисә янында булды, әтәстең тиҙерәк һөрән һалыуын көттө. Ниһайәт, кемдеңдер әтәсе, рәхмәт төшкөрө, уның ашҡыныуын аңланы һәм «кики-ги-кү-үк»... тип ауылды яңғыратып ебәрҙе. Нур башлаған көйөн дә тамамламай, «Ғәлиәбаныуға» күсте.

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Ғәлиәбаныу, һылыуым, иркәм...

Йырҙан һуң йәштәр йоплаша башланы, ә Нур, исемдәрен әйтеп, үҙе ҡуйырға уйлаған пьесала уйнаясаҡ егеттәрҙе, ҡыҙҙарҙы саҡырҙы.

— Мәхҙүмә! Илисә! Мирғәсим! Хәйбрахман! Лотфый... Биш кенә минутҡа ҡалығыҙ.

Тәүҙә исемдәре сыҡмағандар ҙа туҡтап нимәлер көтөп торғайны, Нур әле һанап сыҡҡан йәштәрҙе бер яҡҡа алып киткәс, тегеләр үҙ юлдарына йүнәлделәр.

— Егеттәр, — тине ул, үҙен уратып алған ҡыҙҙарға, егеттәргә мөрәжәғәт итеп. — Әйҙәгеҙ, каникул бөткәнсе, берәй пьеса, әйтәйек «Ғәлиәбаныуҙы», әҙерләп ҡуябыҙ.

Йәштәр шаулашып алды.

— Пьеса ифрат ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та, — тине Нур. — Әйҙәгеҙ, һөйләшәйек, ҡасан уҡыйбыҙ?

— Ҡасан, тип ни... Бесәнгә төшкәнсе уҡырға кәрәк инде...

— Улайһа, иртәгә мәктәп янында йыйылышабыҙ.

— Килештек. Иртәгә... сәғәт биштә.

— Биштә...

— Улайһа, таралыштыҡ...

Нур гармунын күкрәгенә ҡуйҙы һәм бик аҡрын ғына уйнап ебәрҙе, ауылдың данлыҡлы йырсыһы Мәхҙүмә йыр башланы. Улар ауыл башына саҡлы йырлашып ҡайттылар ҙа хушлашып таралыштылар. Нур, гармунының ҡайыштарын эләктереп, артта ҡалған булды, Илисә аҙымдарын аҡрынайтты, эйелеп ботинкаһының бауын әленән-әле рәтләне. «Уфф!.. Аяғымды ҡыҫты», — тип зарланды. Ҡыҙҙар аңһыҙ түгелдәр инде, уны яңғыҙын ҡалдырып, ҡайһыһы ҡайҙа таралышып бөттө. Шул минутта уҡ уның янына Нур йүгереп килеп етте.

— Илисә...

Илисә башын уның күкрәгенә ҡуйҙы ла үкһеп иларға тотондо.

— Илисә... һиңә ни булды?

— Белмәйем...

— Белмәгәс, илайҙармы ни?

— Нур... Нур... Эйем... әйтмәйем... — Ул башын ситкә борҙо.

— Илисә... Мин бит юҡҡа «Ғәлиәбаныуҙы» ҡуйыйыҡ тимәнем... Хәлилде мин үҙем уйнайым, ә Ғәлиәбаныуҙы — һин...

— Мин?.. Мин бит оҫта йырлай белмәйем. Ана Мәхҙүмә... исмаһам, йырлай тиһәң дә йырлай...

— Ә һин йөрәгең менән йырларһың, Илисә...

— Нур... ә беләһеңме, минең әсәйем, моңло кеше бәхетһеҙ була ул, ти...

— Боронғолар һүҙе. Мин оҫта йырлай белһәм әле, валлаһи, артислыҡҡа уҡыған булыр инем...

— Һин бик оҫта йырлайһың, Нур... Һин йырлағанда, мин иламай ҡалмайым. — Илисә йәнә үкһергә тотондо.

— Һинә ни булды, Илисә? Балауыҙ һығаһың да балауыҙ һығаһың...

— Үҙем дә белмәйем... Көн һайын күҙемде... Бөрө юлынан алманым. Ҡайтҡансы күрә алмам тип ҡайғырып иланым... ә бына күргәс... тағы илайым да илайым...

Нур устары менән иплəп кенә Илисәнең биттәренән тотто, башын күтәреп, үҙенә ҡаратты, бармаҡ биттәре менән уның күҙ йәштәрен һөрттө.

— Илисә... Беҙ мәңге бергә булырбыҙ, йәме?..

— Мәңге... Мәңге!.. — Ул Нурҙың ҡосағынан арынып, тороп йүгерҙе. Юлда ҡаласа бәйләгән яулығы сиселеп төшөп ҡалды. Нур уны барып алды, Илисәгә ҡысҡырмаҡсы булды. Тыйылды. Яулыҡты тотоп торҙо, ауыҙы янына килтерҙе, унан донъялағы бер еҫкә лә оҡшамаған тәмле еҫ килә ине. Был зәңгәр кистән һуң Нур донъяла ун дүрт йыл

йәшәр, әммә ундай еҫте башҡа тоймаҫ — ниндәй хушбуй еҫе булғандыр был, билдәһеҙ, бәлки, хушбуй еҫе түгел, ә Илисәнең үҙ еҫе шундай татлы, иҫерткестер. Юҡ, ул мәлдә яулыҡ ҡына түгел, ер, күк, бөтә донъя ла шундай татлы еҫкә тулғайны...

Ул төндө Илисә, башын ике мендәр эсенә тығып, илап, хыялланып ятты. Нур аҙбар түбәһендә, атаһы урмандан сабып алып ҡайтҡан бесән өҫтөндә, төнө буйы аҡрын ғына гармун тартты. Ҡайҙалыр алыҫта, Бөрө яғында, нәжәғәй уйнаны... Ҡарттар: «Арыш һеркә осорғанда уйнай ул», — тиҙәр. Бәлки, шулайҙыр.

Нур гармунын иҥенән һалды, йылмайып ҡуйҙы. Ул, таҥ әтәстәре көндө уятҡанда, гармунын ҡосаҡлап, йоҡлап китте. Был ваҡытта нәжәғәй уйнамай инде. Уның ғүмере бик ҡыҫҡа була бит...

## ҺИГЕҘЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Ирҙәр ҡайҙа һынала?

Бына Бабай ауылы янындағы аҡлан, болонлоҡтар йәрәбә һалынып бүленде, һәр кемдең өлөшөнә көмөшө сыҡты, дөрөҫ, бында бесәнгә ҡытлыҡ юҡ, яҙын һыу баҫа торған туғайҙарҙа үлән билдән була, сабырға, ямғырға эләктермәй, киптерергә, кәбән ҡойорға көсөң етһен дә, ваҡыт булһын. Шуға күрә бесән сапҡанда, ураҡ урғандағы кеүек, тәүлегенә биш-алтышар сәғәт кенә йоҡлап, бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға саҡлы эшләйҙәр.

Шулай итеп, бесәнлек бүленгән, иртәгә ауыл халҡы дәррәү бесәнгә төшәсәк...

Иртәнге аш бик ҡыҫҡа ваҡытты ала: нисек тә башҡаларҙан алданыраҡ барып, эш башларға кәрәк, сөнки ауыр аяҡлы кеше башлаһа, эшендең уңмауы бар... Әммә һәр кем үҙенең аяғын еңел һанай, шуға күрә бөтә бесәнселәр ҙә бер үк ваҡытта тип әйтерлек бесәнлеккә килеп етә.

Фәтих ағайҙар ғаиләһенән быйыл бесәнгә Нәсимә апайҙан башҡа бөтәһе лә барасаҡ. Ҡыҙҙар: Фәниә (ул да быйыл каникул ваҡытында Ташкенттан ҡайтты. Көҙөн ул университеттың һуңғы курсына китәсәк), Нур менән бергә педтехникумда уҡыусы Нәсихә, Бөрөлә туғыҙынсы мәктәптә уҡыусы Сания менән Ҡәримә һәм төпсөк бала биш-алты йәшлек Зәбирә болонға төшкә табаныраҡ, бесән кибеүгәрәк, барып етәсәктәр, ә хәҙергә уларға эш юҡ. Фәниә менән Нәсихә: «Атай, беҙ ҙә бесән сабышайыҡ әле», — тип әйтеп

ҡараһалар ҙа, Фәтих ағай: «Бесән сабыу — ҡыҙҙар эше түгел, һеҙҙең үҙегеҙҙең дә эшегеҙ етерлек», — тип ҡырт киҫте.

Ни саҡлы ашыҡмаһындар, улар болонлоҡҡа килеп еткәндә, бер нисә кеше аттарын туғарып маташа ине инде.

Ҡатын-ҡыҙ бесән әйләндерергә, күбә йыйырға килгәнсе, егеттәр, йәш ирҙәр күлдәктәрен һалып, арҡаларын ҡояшҡа ҡуйып, кинәнеп сабалар. Нур быйыл икенсе тапҡыр ҙурҙар менән бер сафта саба, шуға саҡлы атаһы уның үҙенә айырым ал бүлеп бирҙе — йәшләй көсәндертмәне. Ул һирәкмирәк бер уңға — атаһына, бер һулға — Илисәнең атаһы Ғайса ағайға (алдан һөйләшеп ҡуйған кеүек, уларҙың болонлоҡтары күрше тура килде) ҡарап ала — тегеләр, йәшкә унан ике-өс тапҡырға олораҡ булһалар ҙа, оҫтараҡ, еңеләрәк сабалар. Атаһы ҡайһы саҡ, үҙе лә һиҙмәҫтән, уны бер нисә сажинға уҙып китә, әммә улының артта ҡалғанын елкәһе менән күреп, аҡрыныраҡ һелтәнә башлай, ә Нурҙың быға асыуы килә, сәмләнә, атаһын ҡыуып етергә тырыша. Салғы саж да сож итә, ысыҡлы үлән, ҡыҙҙар өмәһендә ҡарға йәйелгән киндер һымаҡ, тигеҙ булып һуҙылып ҡала. Бөрө буйына төшкәнсе, улар ике тапҡыр салғыларын янып алалар ҙа, яныуыстарын салбар-ыштан бөрмәһенә тығып, йәнә үләнде ҡыйратырға тотоналар. Ер башына еткәс, бер аҙ хәл йыялар, тамаҡ кипһә лә, һыу, айран эсергә ярамай, унан гел эсерә. Ә Бөрө күңелде ҡытыҡлап тауышһыҙ ғына аға бирә, үҙең дә һиҙмәҫтән иреңеңде ялмап алаһың.

— Ҡибектеңме? — ти Фәтих ағай, Нурға ҡарап.

— Бар аҙыраҡ, — ти ул сер бирмәй, — әммә түҙерлек.

— Мә, аҙау тештәрең артына тоҙ ҡуй, — ти һәм Нурға сәтәкәй бармаҡ башы саҡлы тоҙ киҫәге бирә. Нур баш сайҡай.—Өйрән, олатайың һөйләй торғайны: йәйге манёврҙар ваҡытында ротный командир һалдаттарға үҙ ҡулы менән тоҙ өләшер булған...

— Былтыр һурып ҡарагайным, угата һыу эске килде.

— Өйрән. Армияла кәрәк булыр... Йә, хәл алдыңмы? Ҡуҙғалдыҡ, ҡояш ҡыҙҙыра башлағансы, анауы ереккә саҡлы сабып ташларға кәрәк.

Был юлы улар инде Бөрөнән Өрьяҙыға табан сабып киттеләр, һәм Нур биш-алты һелтәнергә өлгөрмәне, күҙенә алы-гөллө яулыҡтар сағылып китте — ауыл яғынан тырма, һәнәк күтәргән ҡатын-ҡыҙ төркөмө күренде. Оҙаҡламай уларҙың көлөшкәне, йырлағаны ишетелде. Нурҙың былай ҙа тибешен йышлатҡан йөрәге тағы ла ярһый башланы, улар араһында, моғайын, Илисә лә барҙыр... Барҙыр, әлбиттә. Илисә, ауылдағы иң сибәр ҡыҙ булмаһа ла, иң уңған ҡыҙҙарҙан һанала — ул — ҡул эшенә, ул — уҡыуға... Хәйер, алма ағасынан алыҫ төшәме ни. Уның атаһын да

бит: «Ғайса ағай күлдәктә тыуған», — тип бирәүҙәр — маҡтап, икенселәр көнләшеп әйтә. Көндө — төнгә, төндө көнгә тоташтырып, биленде бөкмәһәң, ҡара тиреңде түкмәһәң, күлдәктә түгел, бишмәттә тыуһаң да, һиңә бәхетте килтереп бирмәйәсәктәр...

Нәсихә Нурҙың Илисәгә күҙе төшөүен эсенән хуплап ҡына ҡалманы, кәңәш тә бирҙе: «Илисәне ҡулыңдан ысҡындырма. Техникум бөтөргәс тә өйлән...» «Өйлән! — тине Нур, мыҫҡыллы йылмайып, — техникумды бөтөргәс, мин бер-ике йыл эшләйем дә, йә Өфөгә, йә Ҡазанға институтҡа китәм». «Ә ҡасан өйләнергә уйлайһың?» «Һәй, ҡамыт кейергә өлгөрөрмөн әле», — тине ул, иртә өйләнгәндәренә үкенеп, ҡатынды ҡамыт менән сағыштырыусы ирҙәрсә.

Ауыл яғынан килеүсе ҡатын-ҡыҙҙар яҡынлашты. Нур ҡайһы ере менәндер: буйы-һыны менәнме, өҫ-башы менәнме (Илисә ауыл ҡыҙҙары араһында иң ҡупшы кейенгән ҡыҙҙарҙың береһе ине) башҡа ҡыҙҙарҙан айырылып торған Илисәне танып алды, салғыһын үләнгә ташлап, арба янына йүгерҙе, Өфөлә һатып алған зәңгәр күлдәген кейеп, итәген салбар эсенә тыҡты, таҫтамалға тирен һөрттө. Атаһы, улына ҡарап, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуйҙы.

Нур эш ҡала тип торманы, Зәбирә һылыуын күтәреп, әйләндереп алды.

Ҡыҙҙарҙың береһе нескә тауыш менән йырлап ебәрҙе:

Беҙҙең Бөрө буйҡайҙары
Ҡамыш ҡына, таш ҡына.
Ташыу ташҡан ваҡыттарҙа
Йөрәккәйем ашҡына...

Салғысылар билдәрен яҙҙылар, йыр ишетелгән яҡҡа боролдолар.

Ҡояш самаһын онотоп ҡыҙҙыра башлағас, зәңгәр күк утлы табаға әйләнгәс, бесәнселәр күлемгә туҡтанылар — арба тәртәләренә тарттырылып ҡоролған сатыр аҫтына барып яттылар; йәштәр Бөрө буйына төшөп, күлдәктәрен һалып, һалҡынса һыу менән йыуындылар, юҡ йомошто бар итеп, бесән әйләндереүсе ҡыҙҙарға күҙ һалыр өсөн башҡа участоктарға барып, тиҫтерҙәренең хәлен, бесәндәренең ҡалынлығын белешкән булдылар...

Эш ҡояш байығас ҡына туҡтала. Оло йәштәге ағайҙар ат егәләр, ә йәштәр, кеше күҙенән ҡасып, ҡыуаҡлыҡҡа инеп сисенеп, шыр яланғас ҡалалар ҙа Бөрөгә һикерәләр, сабаҡ һымаҡ йөҙәләр, сумалар, бер-береһен батырышалар, һыу сәсрәтеп уйнайҙар... Һалҡынса Бөрө һыуы арыған тәндәргә хәл кертә, йәнә салғыға тотонғо килә, әммә төндә сабыуҙың

файҙаһы юҡ, бесән кипмәйәсәк, ә иртән томан төшәсәк. Бесәндең иң һәйбәте — көнөндә сабылып өйөлгәне.

Өйгә ҡайтып, ашап-эсеп алғас, йәштәр, берәм-һәрәмләп, парлашып Әтнәкәйгә сыға башлай, ә Нур мәктәпкә йүнәлә. Бөгөн беренсе репетиция буласаҡ. Ул мәктәпкә беренсе булып килә, ҡарауылсы мәктәп асҡысын юғалтҡанлыҡтан, йоҙаҡты кәкре ҡаҙаҡ менән аса, класҡа инеп, аҫылмалы лампаны тоҡандыра, парталарҙан, эскәмйәләрҙән «декорация» ҡора.

Дөрөҫөн әйткәндә, йәше инер-инмәҫтән үк комсомолға яҙылған Нурҙың революцион пьеса ҡуйғыһы килде, әммә ундай сәхнә әҫәрен ҡайҙан табаһың?.. Һал ҡыуып барғанда, йылға тураға аҡҡан урындарҙа, ул эсенән генә үҙе лә пьеса өсөн сюжет ҡороп ҡараны, тик, әллә нисек, кеше ышанмаҫлыҡ килеп сыҡты, шуға күрә Илисә менән бергә уйнар өсөн «Ғәлиәбаныу» пьесаһын һайланы.

Алдан һөйләшеп ҡуйыу буйынса, икенсе булып Илисә килеп етте. Нур лампаны ҡыҫа төшә, Илисәне ҡосаҡлап парта артына ултырта, Илисәнең нескә, ҡыҫҡа бармаҡлы йомро ҡулдарын усына ала. Һөйләшмәйҙәр. Һүҙ тапмайҙар. Илисәнең кофтаһын йыртырҙай булып бүлтәйеп торған күкрәге йыш-йыш күтәрелә.

— Илисә, Өфөлә мәктәбеңде тамамлағас, ни эшләмәксе булаһың?

— Әлләсе. Минең бит әле ике йыл уҡыйһым бар.

— Ике йыл... Үлмәгәнгә үтә лә китә. Бына мин кисә генә техникумға ингән төҫлөмөн, ә инде өсөнсө курсҡа ла барып еттем.

— Ә һин? — ти Илисә, уның ҡуңыр күҙҙәренә мөлдөрәп ҡарап.

— Минме? Минең программа йөҙ йылға алдан төҙөлгән, — ти Нур, ҡыҙҙың ҡаршыһына күсеп ултырып, уны бер ҡулы менән ҡосаҡлап. — Техникумды бөтөргәс, ике йыл эшләйем дә Ташкентҡа китәм.

— Ташкентҡа? Унда сыҙай алмаҫлыҡ эҫе ти бит.

— Үҙең беләһең бит, йәренгә Фәниә апайым Ташкент университетын тамамлай, ә Варис ағайым Бохарала армияла хеҙмәт итә. — Ҡапыл Нур һикереп тора. Нур, Ташкентта йәшәгән кеше шикелле янып, Илисәнең ҡулдарын тота.

— Илисә, әйҙә һин дә Ташкентҡа кил. Мин һине ҡайтып алырмын. Икебеҙ ҙә университетҡа инербеҙ.

Илисә башын сайҡай.

— Атмаған ҡуян тигәндәй, алдан уҡ планлаштырмайыҡ, Нур, йә теге кәкүктеке шикелле башыбыҙ ауыртыр.

— Юҡ, юҡ! — ти Нур, уны торғоҙоп. Күкрәгенә ҡыҫа төшөп, үбергә итә, әммә Илисә башын ситкә бора. — Беҙ

нисек тиһәк, шулай буласаҡ, Илисә. Хәҙер боронғо заман түгел. Хәҙер һәр кемдең яҙмышы үҙенең ҡулында.

— Уныһы шулайын шулай ҙа...

— Илисә! — ти ул, Илисәнең ҡулын ҡыҫып. — Әйҙә ант итешәйек, вәғәҙә ҡуйышайыҡ.

— Ә ни өсөн ант итешәбеҙ? Ташкентҡа китергәме? — ти ул, Нурҙы ирештергәндәй.

— Ғүмергә... Мәңгегә бергә булырға... Бер ҡасан да айырылышмаҫҡа!

— Ҡурҡам мин ант итешергә, Нур...

— Ҡурҡаһың? Нимәнән?

— Йә Хәлил менән Ғәлиәбануы кеүек булырбыҙ.

— Булмабыҙ, булмабыҙ! — ти Нур, уны йәнә үбергә итеп, әммә Илисә башын ситкә бора. — Хәҙер Совет власы. Хәҙер беҙ шәриғәт ҡолдары түгел. Хәҙер беҙ үҙебеҙгә үҙебеҙ хужа! — Нур был һүҙҙәрҙе трибунанан доклад һөйләгән кеше һымаҡ тантаналы, хатта бер аҙ яһалмараҡ итеп әйтте.

Ҡапыл көтөлмәгән хәл булды — Илисә аяҡ остарына баҫты ла, Нурҙың башын әйә төшөп, уның әле бер, әле икенсе яңағынан сутылдатып үбеп алды һәм ултырып, партаға башын ҡуйып иларға тотондо. Нур ҡаушап ҡалды.

Ә тышта ҡараңғы төшкәйне инде...

Улар һүҙһеҙ ултырҙылар.

Нурҙың репетицияны иртәгәгә күсергеһе, Илисәне алып сығып китеп, төпһөҙ күккә, ундағы йондоҙҙарға ҡарап торғоһо, Ҡош Юлынан Илисәне етәкләп йүгергеһе килде...

— Илисә, йүгерәбеҙ, — тине ул көтмәгәндә.

Илисә башын күтәрҙе.

— Ҡайҙа? Әтнәкәйгәме? Кәрәкмәй. Минең һинең менән генә булғым килә, Нур...

— Ҡош Юлынан йүгерәбеҙ...

— Ҡанаттарыбыҙ юҡ шул...

— Ә һин Ҡош Юлының серен беләһеңме, Илисә?

— Физика уҡытыусыһы әйтте — алыҫ галактикалағы йондоҙҙар төркөмө.

— Түгел. Тыуған илдәре, тыуған ерҙәре өсөн һәләк булған батырҙарҙың йөрәктәре йондоҙға әйләнеп яна. Атайым миңә быны әле алты-ете йәштә сағымда уҡ һөйләгәйне... Шул саҡ ҡапыл минең дә йондоҙға әйләнгем килгәйне...

— Һин әйләнерһең дә, Нур... Һин... Ауылда һинән дә аҡыллыраҡ кеше юҡ бит... Урыҫса, марыйса, немецса беләһең... Гармунда уйнайһың, матур йырлайһың, һүрәткә оҫтаһың... Карточкаға төшөрә беләһең, радиоалғыстар яһайһың... Ә мин... минең бер һөнәрем дә юҡ...

— Һинең иң ҙур һөнәрең, Илисә — миңә мөхәббәтең. Миңә һинең башҡа бер һөнәрең дә кәрәкмәй, Илисә... — Уларҙың ирендәре яҡынлашты...

Тышта кемдеңдер, кемдең булһын, Мирғасимдыҡылыр инде, уның тауышы бит биш саҡрымдан ишетелә, ҡысҡырып көлгәне, һөйләшкәне яңғыраны. Илисә, ҡорт саҡҡан һымаҡ, һикереп торҙо, башҡа парта артына барып ултырҙы, ә Нур, лапманың филтәһен күтәрә төшөп, гармунын алды.

Ә алыҫта, Өфө яғында, нәжәғәй уйнаны...

Ни нәмә хаҡында уйлағандыр ошо минуттарҙа Илисә — билдәһеҙ. Уҡыуын бөтөргәс, Ташкентҡа барып, Нур менән бер парта артында ултырып, университетта уҡыу тураһындамы... Ихтимал, уйҙары тағы ла алыҫыраҡ киткәндер...

Ихтимал, бик ихтимал, уйҙар — йүгәнһеҙ ат...

## ТУҒЫҘЫНСЫ НОВЕЛЛА

### Зәңгәр төн

Спектаклдә улар августың һуңғы аҙнаһында уйнанылар. Мәктәп халыҡ менән төйгөсләп тултырылған ине. Нурҙың әсәһе Нәсимә апай спектаклгә бара алманы — ҡапыл хәлһеҙләнеп, сырхаулап китте. Ул, театр бөтөүгә, самауыр ҡуйҙы. Спектаклгә барған ҡыҙҙар оҙаҡламай ҡайтһалар ҙа, Нур күренмәне.

— И-их, күрһәгеҙ икән һеҙ Нур ағайым менән Илисә апайҙың уйнағанын! — тип ишектән үк һөйләнә-һөйләнә керҙе Кәримә. — Шундай килештереп уйнанылар... Халыҡ илай... Әсәй, минең үлтереп ҡорһағым асты.

Кәримә арала иркәрәк һәм хәйләкәрерәк ҡыҙ ине, шуға күрә ғаиләлә ул ни теләһә, шуны эшләргә тырыштылар. Күрәһең, һәр ғаиләлә лә шундай бала була торғандыр иңде. Ундай балалар йыш ҡына тора-бара боҙолоп та китәләр, әммә Кәримәгә боҙолорға тура килмәне, ул ғүмерен аҡыллы йәшәне: һуғыштың тәүге айҙарында ВКП(б) ағзаһы булды, ғүмере буйы оло юлдан һалыулаған балаларҙы дөрөҫ юлға индереү — педагог-тәрбиәсе хеҙмәтен атҡарҙы.

— Кем булыр икән беҙҙең Нур? — тине ғорурланып Сания. — Юҡ, ул Варис ағайымды ла ҡыуып китәсәк. Бына күрегеҙ ҙә тороғоҙ.

Ғаилә шаулашып сәй эсте. Инде күптән мышнай-мышнай йоҡлап ятҡан Зәбирә лә күҙҙәрен йоҙроҡтары менән ыуа-ыуа өҫтәл янына килеп ултырҙы:

— Мин дә ҡыҙыл эремсек менән сәй эсәм, әсәй...

— Йоҡлап киткәс, балыҡ тотмаҫһыңмы?

— Балыҡты Бөрөлә тоталар...

Ә Нур һаман ҡайтманы...

Спектаклдән һуң Илисә башҡа уйнаусылар алдында спектаклдә үҙенең яурынына һалынған шәльяулыҡты Нурға тотторҙо. Әлеге лә баяғы, заманында «атаман» исемен йөрөткән Мирғасим шаяртты: «Ул шәл хәҙер бөтөнләйгә һинеке инде, Илисә».

Теге, ниңәлер, ҡыҙарып ҡуйҙы. Ә Нур Илисәгә: «Тыҡрыҡ башында мине көт», — тине.

Был йондоҙҙарға бай зәңгәр август төнө — уларҙың һуңғы төнө ине. Бәлки, быны улар һиҙенептер, таң әтәстәре ҡысҡырғансы бергә булдылар.

Бөрө яғынан иртәнге еләҫ ел иҫте, бер-береһен ҡыуышып уйнаған йондоҙҙар һирәгәйҙе — кемдер уларҙы берәмберәм өрөп һүндерә башланы, ә Нур менән Илисә һаман бер-береһенән айырылыша алманы.

— Ҡайтайыҡ, бөгөн һуңғы төн түгел дә, — тине Илисә, уның ҡосағынан айырылып.

— Илисә... — Нур әсәһенең шәльяулығын уның яурынына һалды. — Ал. Төҫөм итеп тоторһоң.

— Ҡуйсы... Әсәйеңә ни тип әйтерһең?

— Мин уға икенсене алырмын. Йәренгә йәйге каникул ваҡытында йәнә һал ҡыуа китәм.

— Ә мин уны нисек... Ҡайҙа һаҡлармын? Атай-әсәйем күреп ҡалһа...

— Ә һин йәшермә, асыҡтан-асыҡ әйт — Нур Өфөнән миңә бүләк итеп алып ҡайтты, тиң...

— Оялам...

— Оялма, Илисә... Мөхәббәт оят түгел...

— Нур... — Ул Нурҙы ҡосаҡлап тәү тапҡыр иренен үпте лә тороп йүгерҙе.

— Иртәгә... ырҙын артында... Ҡараңғы төшкәс... Йәме?

— Йәме!

...Икенсе көндө Нәсимә апай күрше ауылға — Субайға йомош менән барырға булды, һандығынан Нур Өфөнән алып ҡайтҡан шәльяулыҡты эҙләргә тотондо.

Нур йылмайып та, бер аҙ шөрләп тә күҙәтеп торҙо.

— Нур... һин әллә кисә театрҙан минең яулығымды алып ҡайтманыңмы?

— Ул яулығың юҡ инде, әсәкәйем. — Нур әсәһен барып ҡосаҡланы.

— Атаҡ, юғалттыңмы әллә?

— Юғалтманым, ә... бүләк иттем.

Нәсимә апай ғәжәпләнеп уға ҡараны.

— Кемгә? Илисәгәме?

Нур ҡыҙарып китте.

— Ә һин уны ҡайҙан белдең?
— Эй, балаҡайым, әсә йөрәге һиҙмәгән нәмә бармы ни ул...
— Йәренгә мин һиңә тағы ла матурыраҡын алып ҡайтырмын, әсәкәйем. Асыуланма мине... Шулай тура килде инде...
Әсә ауыр көрһөндө.
— Һәйбәт ҡыҙ ул Илисә. Ата-әсәһе лә һәйбәт...
Был инде фатиха биреү менән бер ине. Нур ҡапыл дәртләнеп китте, әсәһенең йыйырсыҡлана башлаған яңағынан үбеп сығып китте. Юҡ, ул Илисәне ташлап Ташкентҡа китмәйәсәк, ул, Илисә мәктәбен тамамлағансы, ошо тирәяҡта уҡытып көтәсәк тә, унан Ташкентҡа парлашып китәсәктәр...
Юҡ, юҡ, был уй-хыялдарҙың береһе лә тормошҡа ашманы. Сөнки яҙмыш һинең ҡулыңда ғына түгел, яҙмыш һыпырғанға мырлап йоҡлаусы, буйһоноусы бесәй балаһы түгел, яҙмыш — бер ҡасан да эйәрләнмәгән, ҡамытланмаған ҡырағай ат менән бер. Тәүҙә ул һине һыртына мендермәҫкә, атланһаң, артын һикертеп, сөйөп ырғытырға тырыша, тыпырсына, тибенә, һин теҙгенде ныҡ тотаһың, ә ул һаман үҙенекен итә һәм йыш ҡына моратына ирешмәй тынысланмай. Юҡ, юҡ, яҙмыш аты Илисәне лә, Нурҙы ла ҡаты ергә күтәреп бәрмәне, әммә үҙе теләгән яҡҡа борҙо...

1929 йыл.
Бөтә ил ауыл хужалығын коллективлаштырыу осоронда инде, бөйөк тарих ҡуласаһы туҡтамаҫлыҡ, кирегә әйләнмәҫлек булып алға, үргә тәгәрәне. Капитал донъяһы ҡот осҡос депрессия кисергәндә, Ленин илендә, беренсе һәм берҙән-бер эшсе-крәҫтиән дәүләтендә, бөйөк илһам һәм энтузиазм менән илде индустриялаштырыу, коллективлаштырыу өсөн ауыр ижади хеҙмәт башланды. «Биш йыллыҡты — дүрт йылда!», «Алдынғы капиталистик илдәрҙе ҡыуып етеп, уҙып китергә!» — тигән лозунгылар кешеләргә көс-дәрт бирҙе.
Ошондай ваҡытта дәртле йөрәк менән донъяға килгән Нур Фәтихов тынысланып парта артында ултыра аламы һуң инде! Уны урғылған ташыу үҙенә тартты, ул көрәш майҙанына ашҡынды һәм, диплом алырға бер йыл ҡалғас, техникумды ташлап, яңы тормоштоң актив көрәшсеһенә әйләнде. Дөрөҫ, уның ата-әсәһе, уҡытыусылары: «Түҙгән йәнә бер йыл түҙ, әле ҙур эштәр башлана ғына», — тип өгөтләп тә ҡаранылар, әммә ул уйлаған уйынан баш тартманы. Үҙ һүҙлелек, уның үҙгәрмәҫлек принцибы бар ине.

Ул, тейешле ойошмаларға инеп: «Мине иң ҡараңғы ауыр районға ебәрегеҙ», — тип үтенде. Ул заманда кадрҙар мәсьәләһе сиктән тыш ауыр ине һәм Фәтиховтың был үтенесен шатланып ҡына түгел, дүрт ҡуллап ҡаршы алдылар.

Бына уның анкетаһынан бер нисә юл:

1929 йыл, август. Нуриман районына, Оло Тиләк ауылына үҙе теләп уҡытыусы булып китә. Ауылда колхоз, комсомол ячейкаһы төҙөүҙә ҡатнаша, ликбез ойоштора.

1930 йылдың йәйендә, уҡыуҙар бәткәс, тыуған яғына — Мишкәгә ҡайта. Район мәғариф бүлегендә инспектор булып эшләй.

1931 йыл. Август. Комсомолдың өлкә комитеты путевкаһы менән Ленинградҡа хәрби мәктәпкә уҡырға китә.

## УНЫНСЫ НОВЕЛЛА

### «Нисек ташлап китәһең?..»

Утыҙынсы йылдың йәйендә Урта Азиянан Ленинградҡа Ҡыҙыл байраҡлы берләшкән хәрби инженерҙар мәктәбенә хеҙмәткә күсерелгән Варис Фәтихов ауылға ялға ҡайта. Инде уның петлицаларында өс кубик ине. Ағаһы ҡайтҡан көндө үк Нур Мишкәнән, ат-фәлән көтөп тормай, йәйәү йүгерә-атлай ҡайтып етә. Варистың Өрьяҙыға ҡайтмағанына байтаҡ ваҡыт үткәйне инде, шуға күрә ата-әсәһе, туғандары, бигерәк тә Нур, уға ҡарап һоҡланып туя алманылар — зәңгәр диагональ галифе, йәшкелт һоро френч, портупеялы киң ҡайыш, баҫҡан һайып йырлап тороусы хром итек уға шул саҡлы килешә ине, Нур, түҙә алмай, иртән ағаһының кейемен кейеп ҡараны.

Нурҙың йөрәгендә бала саҡтан уҡ хәрби рух йәшәй ине. Ул һигеҙенсе йылда, ҡыҙыл командирҙың атына атланып, урам буйлап үткәндән бирле...

— Ә үҙеңә хәрби форма килешә! — тине Варис, Нурға һоҡланып ҡарап. — Ҡапыл кәүҙәгә олпатланып, матурланып киттең.

«Их, ошо кейемдә мине Илисә күрһә икән...» — тип уфтанып ҡуйҙы ул, ағаһының кейемдәрен һала-һала.

— Нур, әйҙә минең яңға, — тине ҡапыл Варис.

— Нисек һинең яңға?

— Уҡырға. Хәрби техник булып сығырһың.

Ағаһының ҡапыл әйтелгән тәкдименән Нур ҡаушап китте, юғалып ҡалды, сөнки ул, хәрби кейемде яратһа ла, бер ҡасан да, ағаһы кеүек, ғүмерен хәрби хеҙмәткә бағышлар-

ға йыйынмай ине. Кейем — бер, хеҙмәт — икенсе.

— Ниңә уйға сумдың? Һинән шәп командир сығасаҡ. Радио эшен яҡшы беләһең, немецса бынамын һөйләшәһең. Спортсмен... Ҡыҙыл Армияға бына тап шундай командирҙар кәрәк тә. Капитализм ҡулын ҡаушырып ултырмай, беҙгә ҡаршы гел тешен ҡайрап ҡына тора. Ана КВЖД-ла ни эшләнеләр?

Нур уйға сумды. Ул бит ғүмерен уҡытыу эшенә сарыф итергә хыялланғайны: тәү тапҡыр баланың ҡулына ҡәләм тоттороу, ике икең нисә икәнлекте өйрәтеү... Хәрефтәр яҙырға, шул хәрефтәрҙе бергә ҡушып, тәүге һүҙҙәр төҙөргә күнектереү... Йә, бынан да изгерәк, файҙалыраҡ тағы ниндәй эш булырға мөмкин?.. Нур был һүҙҙәрҙе ағаһына ҡыҫҡырып әйтте.

— Ана шул балаларҙың ирекле, бәхетле тормошон һаҡлар өсөн, — тине ағаһы, — беҙгә бик ҡеүәтле, көслө армия кәрәк, юҡһа капиталистар беҙҙе йотасаҡтар... Беҙ бит яңғыҙбыҙ.

— Йотоп ҡына ҡараһындар! — тине Нур, һикереп тороп. — Ә һеҙҙең ул инженерҙар мәктәбендә нисә йыл уҡырға кәрәк? — тип һораны, әле бер төрлө ҡарарға килмәһә лә.

— Өс йыл.

— Ә унан нисә йыл хеҙмәт итергә?

— Отставкаға сыҡҡансы.

— Ағай... — Ул Варисҡа терәлеп ултырҙы.— Армия тормошо ауырмы? Дөрөҫөн генә әйт.

— Еңел түгел. Бигерәк тә тәүге йылда. Ә унан... Күнегәһең, өйрәнеп китәһең, хатта отпускынан казарманы, борғосо сигналдарын һағынып ҡайтаһың. Бына мин хәҙер... иҫәпләйек, нисә йыл армияла? Ете йыл буламы? Хәҙер үҙемдең тормошомдо армиянан башҡа күҙ алдына килтерә лә алмайым. Армия тормошо ул, беләһеңме, ни саҡлы ауыр, ҡаты булһа ла, кешене ҡалыпҡа һала, аҡыллы йәшәргә өйрәтә, беләктәренә көс, йөрәгенә рух бирә. Ҡыҙыл Армия — бөйөк мәктәп ул, Нур. Уйла. Көсләмәйем, әммә һинән бынамын командир сығырына ышанам.

Уларҙың әңгәмәһен тыңлап торған ата-әсә лә һүҙгә ҡатнаша.

— Ә беҙ кем менән ҡалырбыҙ? — ти сәстәре ағара башлаған Фәтих ағай. — Хәҙер алтынсы тиҫтәне ҡыуып барам бит...

Нәсимә апай ирен ҡеүәтләне.

— Ҡыҙҙар улар, ҡош балалары һымаҡ, ҡанат үҫтерергә лә өлгөрмәй, төрлөһө төрлө яҡҡа осоп, таралышып бөтә... Өҫтәүенә, ваҡытһыҙ һәләк булған Фәниәбеҙҙең игелеген күрергә лә өлгөрмәнек... — Нәсимә апай Фәниәне иҫкә

алғас, яулыҡ осон күҙ төптәренә тейҙереп алды. — Ә Кәримә менән Зәбирә... Әле балиғ та булмаған...

Нур йәнә уйға ҡалды. Ул үҙен Ленин ҡалаһында мәшһүр хәрби мәктәп курсанты тип кенә хис итә башлағайны... «Эйе, ата-әсә хаҡлы. Уларҙың хәҙер берҙән-бер өмөтө, ышанысы — Нур. Ул ата өйөндә ҡалырға, уларҙың күҙҙәрен йомдорорға тейешле бала. Юҡ, уға ҡыҙыл командир булырға яҙмаған...»

— Атай... әсәй, — тине Варис, уларҙың уртаһына инеп ултырып, яурындарына ҡулын ҡуйып. — Беҙ һеҙҙе бер ҡасан да онотмабыҙ, гел ярҙам итеп торорбоҙ, отпуск ваҡыттарында гел ауылға ҡайтырбыҙ. Бесән сабышырбыҙ, утын әҙерләшербеҙ...

— Юҡ! — тине Нур, ҡырҡа ғына тороп, — мин атайәсәйҙе... кескәй һеңлеләремде ҡалдырып китә алмайым. Яҙмыш үҙе миңә ул йөктө йөкмәткән. Быйыл экстрен менән техникумды тамамлап диплом алам да Өрьяҙығамы, Яңағыуышҡамы уҡытырға ҡайтам.

Ләкин... Минең был романымда «ләкиндәр» шаҡтай күп буласаҡ. Ләкин... Икенсе йәйҙе ул комсомолдың өлкә комитеты путевкаһы менән Ленинградҡа, Варис ағаһы «ҡоҙалаған» хәрби мәктәпкә, уҡырға китте. Юҡ, бында Featureстың «ҡотҡоһо», Нурҙың теләге генә өҫтөнлөк алманы. Көндәрҙең береһендә Нур Мишкәнән Өрьяҙыға ялға ҡайтҡас, Фәтих ағай уның янына килеп ултырҙы ла хәрби хеҙмәт хаҡында һүҙ ҡуҙғатты.

— Нур... әсәйең менән беҙ ҡартайыу яғына йүнәлһәк тә, донъялар яҡшырыуға табан бара, кешенән кәм-хур йәшәмәбеҙ әле... Кит һин ағайың янына... — Атаһы ярым шаяртып өҫтәп ҡуйҙы. — Бәлки, ҙур командир... Боронғоса әйткәндә, генерал булырһың. Теге ваҡытта... араҡы заводына утын ташығандан һуң, урамдан кеше алып кереп, имзамды яҙҙырғанда әйткән антым боҙолмаһын...

Комсомолдың өлкә комитетынан путевка килеү менән, Нур район мәғариф бүлеге мөдире Шамшиевҡа инде һәм өҫтәлгә ике бит ҡағыҙ ҡуйҙы.

— Нимә ул? — тине бер ҡасан да бер нәмәгә лә иҫе китмәүсән районо мөдире.

— Уҡығыҙ, Аркадий Шаяхметович!

— Китәһең? Уҡырға?.. — Шамшиев һикереп тороп, күҙлеген маңлайына күтәрҙе. — Ә мин? Мин ни эшләйем?

Нур уның ҡаршыһына килеп ултырҙы.

— Ронола минән башҡа ла кешеләр етерлек.

— Етмәй шул, һинең кеүектәр башҡа юҡ, — Шамшиев өҫтәл артынан сыҡты, ултырғыс алып килеп, уның ҡаршыһына ултырҙы.

— Ә һин ныҡлап уйланыңмы? Хәрби мәктәпкә китеү — действительныйға китеү түгел, ғүмерлеккә башыңды армия менән бәйләү...

— Уйланым, Аркадий Шаяхметович, — тине Нур, йылмайып, ғаризаһын Шамшиевҡа һуҙып. — Эштән бушатығыҙ мине, иптәш Шамшиев.

— Һуң... уҡыуҙар башланырға ай ярым ваҡыт бар бит әле...

— Минең һуңғы тапҡыр баҫыуҙа эшләгем килә...

— Һ-һа-а... — Шамшиев ауыр һуланы ла, ултырғысын алып, үҙенең «түрәлек» урынына барып ултырҙы. — Жалкы, жалкы. Ағайың эҙенән китергә булдың инде?

Һәр ваҡыт ихлас, эскерһеҙ булған Нур был юлы:

— Ҡыҙыл Армияға белемле командирҙар кәрәк, иптәш Шамшиев, — тип ебәрҙе. — Беҙҙең илебеҙ, иптәш Сталин әйтмешләй, диңгеҙ уртаһындағы ҡая һымаҡ, капиталистар менән ҡамалып алынған. Армия ҡеүәтле, көслө булырға тейеш.

Был һүҙҙәргә кем ҡаршы әйтә алһын инде. Районо мөдире көрһөнөп ҡуйҙы ла Нурҙың ғаризаһына: «Разрешаю», — тип резолюция һалды.

Нур, Шамшиев ат бирһә лә, Мишкәнән Өрьяҙыға йәйәү ҡайтырға булды — йөк ауыр түгел, шуға күрә тыуған яҡтар менән хушлашып, ашыҡмай ғына ҡайтырға кәрәк. Шамшиев әйтмешләй, ул бит «действительныйға» ғына китмәй, ә ғүмерлеккә тыуған яҡтары менән хушлаша. Мишкә юлы тигеҙ, тура юл түгел — ҡалҡыулыҡтар, кескәй генә урмандар янынан уҙа, урай, бер нисә ауыл аша үтә. Нурҙың был юлдан нисә тапҡыр йәйәү, һыбай, арбала үткәне булды, әммә быға саҡлы уның бөтә гүзәллеген иҫкә алғаны булмаған икән... Бына ауыл. Ҡәкре-бөкрө урамдар, урман ишелергә торһа ла, баҫтырыҡ йыуанлығындағы бүрәнәләрҙән һалынған кескәй генә өс тәҙрәле һалам түбәле өйҙәр... Бына Бөрө йылғаһы аша һалынған мәңге ватыҡ ағас күпер... Элек ул йорттарҙың шул саҡлы тәпәшлегенә, бәләкәйлегенә, күперҙең бер ҡасан да төҙөк булмауына әсенеп, көйәләнеп йөрөй торғайны, эшләй башлағас, Өрьяҙыла таш нигеҙле, ҙур тәҙрәле, бейек алты мөйөшлө йорт һалырға хыялланып йөрөй ине, ә бына был юлы.. шул кескәй генә өйҙәр ҙә, тотонғосо емерелгән күпер ҙә яҡын, яғымлы ине. Яҡындағы йорттан йылан булып күккә күтәрелгән һоро төтөндөң еҫе яҡшы тәмәке еҫеләй тәмле тойолдо. Ул күпер өҫтөндә туҡтап, һынған тотонғосҡа таянып, тын ғына аҡҡан йылғаға ҡарап торҙо. Эйелеп алып, һыуға сыбыҡ киҫәге ташланы. Сыбыҡ, тиҙ генә ағып китергә теләмәй, тәүҙә өйрөлөп торҙо ла күпер аҫтына инеп китте. Нур, кү-

нерҙең икенсе яғына сығып, сыбыҡты күҙәтте, сыбыҡ туҡталып тормай түбән табан ағып китте. Нур: «Ҡем элек Өрьяҙына ҡайтып етер икән, минме, сыбыҡмы?» — тип уйлап һылмайҙы.

Ул ҡайтҡанда, инде кис яҡынлашып килә ине. Ауылға ингәндә һул яҡта ҡалҡыулыҡта зыярат. Яҙын уның янынан үтеп булмай, — тирә-яҡҡа таралған сирень сәскәһенең куйы еҫе һине иҫертә, был мәлдә һин «теге донъя» хаҡында уйламайһың, сирень еҫенә кинәнеп, туҡтап, Бөрө тугайлыҡтарына ҡарап, сәйерләнеп тораһың. Ә бына сирень сәскәһе һулығанда, йәшел ҡанатлы ҡорттар төшөп, ауыр еҫ тарала башлағас, ҡәберҙәргә иғтибар итәһең, был донъяның үтә ҡыҫҡа, фани икәнлеген аңлайһың. Юҡ, Нур әле был хаҡта уйламаны. Үлем бит шундай нәмә — яҡындарыңа, дуҫтарыңа килһә лә, һиңә бер ҡасан да килеп етмәҫтәй тойола.

Ҡапҡаны асып кергәндә, әсәһе ҡоҙоҡтан һыу алып маташа ине. Нур, йүгереп килеп, уның ҡулынан һиртмә бауын алып, һыулы биҙрәне сығарырға тотондо.

— Һин ни эшләп... ял түгел... йомош менәнме?

— Роно менән «бәхилләшеп» ҡайттым, әсәй.

— Бөтөнләй ҡайттыңмы? — Әсәнең күҙҙәрендә шатлыҡ нурҙары күренде.

— Бөтөнләй китергә ҡайттым, әсәй...

— Нисек? Бөрөгә китәһеңме?

— Варис ағай янына, Ленинградҡа...

Тимерлектән ҡайтып кергән атаһы (колхоз ойошҡас, Фәтих ағай урғыс, сәскес машиналарын төҙәтеп, тимерлектә эшләй ине) уның янына килде, кәйефе булған ваҡыттағы ғәҙәтен ҡабатланы — баш бармағының тырнағы менән мыйыҡтарын һыйпап алды, унан усы менән һаҡалын тотҡолап, аҫҡа һыпырҙы.

— Ҡит, улым. Яҙған булһа, мужыт, үҙеңдең ҙур ҡыҙыл командир булғанлығыңды ла күрербеҙ...

— Рәхмәт, һинән башҡа һүҙ көтмәгәйнем.

— Ҡана, ҡарсыҡ, ҡатыҡ сығар әле, Нур менән тәмләп, айран эсәйек. Бер һыу ҙа үҙебеҙҙең ҡойо һыуына етмәй. Ҡасан китергә самалайһың? — Ул айран һыуланған туҫтаҡты Нурға һуҙҙы. — Правлениенан ат алып, Бөрөгә үҙем илтеп ҡуйырмын.

— Әле тиҙ түгел. Мин ураҡ урышыр өсөн иртәрәк ҡайттым...

Нур ай буйы тип әйтерлек лобогрейкала урҙы, нормаһын икешәр йөҙ процентҡа үтәне.

Иртәгә китәһе көндө лә ул баҫыуға барҙы, ҡояш байығансы эшләне, өҫтөн-башын ҡағып, битендәге туҙанды кул-

дәк итәген әйләндереп һөрттө лә, гармунын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, ауылға табан йүнәлде. Күп тә үтмәй, уны күршеләре Фәғилә апайҙар ултырған ат ҡыуып етте. Нур арбаға һикереп менеп ултырҙы, уңға, һулға боролоп, ураҡсылар менән иҫәнләште, ғәҙәт буйынса, «бөгөн нисә трудодень эшләнегеҙ?» тип һорашып алды ла гармун ҡайыштарын кейҙе, ат тотҡан кешегә «юртма, атлатып ҡына ҡайт» тип бойорҙо һәм йөрәктәрҙе өҙҙөрөп уйнап, йырлап ебәрҙе.

Ап-аҡ еләктең сәскәһен
Нисек тапап китәһең,
Тыуған-үҫкән илдәреңде
Нисек ташлап китәһең...

— Шулай бит, Фәғиләттәй? — тип Фәғилә апайға һағышлы йылмайып ҡарай ҙа тағы ла ярһыбыраҡ йырлап ебәрә.

— Һин бөгөн әллә нисек... — тине Фәғилә апай уның шат, әммә бер аҙ һағышлы күҙҙәренә ҡарап.

— Нисек «әллә нисек?», Фәғиләттәй?

— Гармуның йырлай, күңелең илай.

— Юҡ, иламай, Фәғиләттәй, күңелем дә йырлай... Тик бына быйыл ҡаҙ өмәһенә генә ҡайтып булмаҫ инде... Бөгөн һуңғы кис, Фәғиләттәй, иртәгә таң менән Бөрөгә китәм, ә унан... — Ул устарын ҡыуыш итеп ауыҙына ҡуйҙы ла пароход ҡысҡырған тауыш сығарҙы, — Өфөгә... унан... — Ул паровоз булып һыҙғырҙы, — поезд менән — Ленинградҡа.

— Ауылды һағынырһыңмы икән, Нур? — тине Фәғилә апай, уға бер туған ҡустыһына ҡараған һымаҡ яғымлы йылмайып. — Хәйер... һин ситтә йөрөргә өйрәнгәнһең инде...

Нур яуап бирмәне. Уның өсөн гармуны һөйләне.

Аҙаҡ ул, Фәғилә апайға табан боролоп, шыбырланы:

— Үҙемдә шундай нескә күңеллелер тип уйламағайным, Фәғиләттәй. Әллә нисек... Ғүмергә киткән һымаҡ яманһыу...

Ҡайтып еткәс, ул, атты туҡтатып та тормай, арбанан һикереп төштө.

— Ярай, хушығыҙ. Иртәгә һаубуллашырға инермен әле.

Фәғилә апай күҙҙәрен һөртөп алды...

Был хәлдәрҙән һуң ҡырҡ биш йыл үткәндән һуң мин Фәғилә апайҙы әбейҙәр сыуағы ваҡытында картуф алып йөрөгәндә осраттым. Ул минең Өрьяҙыға ниңә килеүемде белгәс, эшен онотоп, йәштәренә быуыла-быуыла Нур хаҡында һөйләп алып китте...

— Була шундай кешеләр — улар бер ҡасан да күңел төбөнән, күҙ алдынан китмәй һәм ғүмер буйы йөрәкте елкендереп, һулҡылдатып йәшәй бирәләр, әйтерһең, бөтәһе

ы кисә генә булған хәл, әйтерһең, ул кеше һинең янында баҫып тора...

Ураҡсылар эштән ҡайтыуға, Нәсимә апай мунса яғып тора ине. Нур тәүге парға барҙы. Сисенгәнсе, мунса ишеген асып, уның еҫен еҫкәп алды һәм: «Әһ, ауыл мунсаһының еҫенән дә тәмлерәк тағы ниндәй еҫ бар икән!» — тип шатланып ҡысҡырҙы. Ысынлап та, бер ҡарағанда, ҡара мунса боронғонан ҡалған примитив ҡоролма, әммә уның, ак мунса менән сағыштырғанда, өҫтөнлөгө, үҙенсәлеге, тәме һәм йәме бар: төтөн еҫе һеңгән бүрәнәләр, ыҫланған түшәм, тынды ҡурырлыҡ ҡоро эҫе һауа, ә инде мәтрүшкәле миндек ебетелгән һыуҙы ташҡа һалһаң... Таштар шатыр-шотор килә, пар тәпәш түшәм таҡталарын күтәрерҙәй булып өҫкә урғыла ла ишекте асып ебәрә, мунса эсенә ҡайын, мәтрүшкә еҫе тарала, ә һин, миндеккә башыңды ҡуйып, эләүкәлә иҙерәп ятаһың, тәнеңдән шыбырлап тир аға, тир менән бергә арыу-талыу сыға, донъя мәшәҡәттәре онотола. О, ҡара ауыл мунсаһын бер төрлө «цивилизационный» мунсалар ҙа алыштыра алмай ул...

Нур тәне Бөрө буйында бешерелгән ҡыҫала төҫөнә ингәнсе сабынды-сабынды ла, ҡоҙоҡ һыуы менән ҡойоноп, йырлай-йырлай өйгә ҡайтып китте.

— Әсәй! — ти ул ишекте асҡансы уҡ, — ожмахта мунса буламы икән? Булмаһа, хоҙайға әйтергә кәрәк, обязательно һалдырһын...

Әсәһе асыуһыҙ ғына һуҡрана.

— Китсе, көфөр һүҙ һөйләнмә. Ана, быйылғы ҡурай еләге вареньеһы менән тәмләп сәй эс.

— Юҡ, әсәй, һин миңә үҙебеҙҙең ҡоҙоҡ һыуынан айран яһап бир. Сәйҙе мин башҡа ерҙә лә эсә алам, ә бына үҙебеҙҙең ҡоҙоҡ һыуынан һин яһаған айранды бер ерҙә лә эсеп булмай. — Ул әсәһен бер ҡулы менән ҡосаҡлап, иркәләп ала. — Һин бит донъяла иң яҡшы әсә, әсәкәйем...

Нәсимә апай бер балаһын яҡын итеп, икенсеһен ситкә тибмәне — бөтәһе лә бауыр иттәре, бөтәһен дә йөрәк янында йөрөтөп газаплаиып тапҡан, күкрәк һөтөн имеҙеп үҫтергән, әммә, ни эшләптер, Нурҙы башҡаларҙан яҡыныраҡ күрҙе, ныҡыраҡ һағынды, инде егет булып еткәс тә, уны сабый бала һымаҡ иркәләп һөйҙө.

Нур, Нур... Исемең дә Нур, үҙең дә нур... Һине уйлаһам, таң ҡояшын күргәндәй булам...

## НУРҘЫҢ АПАҺЫ НӘСИХӘНЕҢ ҺҮҘҘӘРЕ

Әсәйемә ғүмере эсендә башынан күп ҡайғылар кисерергә тура килде: янғын, юғалтыуҙар... Ташкенттағы Фә-

нмә апайым, кейәүгә сыҡҡас, егерме дүрт йәшендә ире менән бергә фажиғәле рәүештә һәләк булды.

Өфөлә медтехникумда уҡыусы Сания һеңлем, һалҡын тейҙереп, үпкә сире алды һәм ун һигеҙ йәшендә майы бөткән лампа һымаҡ һүнде... Бөтәһе лә бигерәк тә әсә йөрәген өйкәй...

Нурҙың хәбәрһеҙ юғалды тигән хәбәрен алғас, әсәйем, уның хәрби формала төшкән карточкаһына ҡарар ҙа йәштәренә быуыла-быуыла илар ине: «Нур... балаҡайым-бәпескәйем... Ниңә бер һүҙ ҙә әйтмәйһең?»

Түҙемле, эсе тулы ут булһа ла «уф» тимәүсе атайым уны йыуатты. «Ҡарсыҡ... бик бөтөрөнмә, сабыр ит, мужыт, иҫәндер... Мужыт, пленға эләккәндер... Алла бойорһа, һуғыш бөткәс, әйләнеп ҡайтыр...»

Юҡ, Нур әйләнеп ҡайтманы. Оҙаҡ йылдар үткәс, уның көрәштәше Желедконың ныҡышмалылығы арҡаһында Нурҙың нисек һәләк булыуы асыҡланды. Быны ишеткәс, әсәйем уғата әрнене. «Балаҡайым, һин бит ҡарға балаларын да йәлләй торғайның... Һуң шунда ҡоштар килеп үҙеңде ҡотҡара алманымы ни?..» — тип сеңләне.

Үтер йылдар, Өрьяҙы йылғаһы нисәмә тапҡыр ярҙарынан ярһып сығып тулар-тулар ҙа йәнә ярҙарына ҡайтыр... Нур һәләк булғандан һуң, ун-ун биш йыл үтер һәм Нәсимә инәй, янып көлгә әйләнмәгән ҡайғыһын алып, фани донъянан китеп барыр.

Һуңғы һулышын алғанда ла әсә, кипкән ирендәрен теле осо менән еүешләтеп, Нурымды күрә алманым инде... Хоҙай әхирәттә осраштырһын, тип әрнер...

Әгәр әсәләр ҡайғыһын бергә йыйһаң, яҡты көн ҡараңғы төнгә әйләнер ине...

Тирен ҡатырғандан һуң, Нур тышҡа сыҡты. Ғәжәйеп, сихри август төнө ине. Ул ҡарап, Ҡош Юлын күҙәтеп торҙо. Ҡапыл ул Юл йәнләнгәндәй, һулағандай тойолдо. Ғәжәп, Ҡош Юлына ҡараған һайын, уға бала саҡта атаһының әйткән һүҙҙәре иҫенә төштө.

Урамға сығыу менән, аяҡтар үҙҙәренән-үҙҙәре Әтнәкәй яғына йүнәлде.

Илисәләр йорто янында туҡталып торҙо. Өрьяҙы яры башындағы ташҡа ултырып, аҡрын ғына «Илисәкәй, һылыуым иркәм» тип йырланы. Ҡапыл, йырын бүлеп, һикереп торҙо. «Барыбер мин уны юллап табам!» — тине ул, ҡысҡырып.

Тора-бара ауыл тынды. Ураҡ өҫтөндә киске уйындар туҡтала, тик бала-саға ғына ырҙын артына һыйыр һаҡларға сыға — улар ҙа инде, һыйырҙарын ҡайтарып, йоҡоға талған.

Ҡарагусҡыл зәңгәр тынлыҡ. Хатта йоҡо аралаш эт шыңшыған да, ат кешнәгәне лә ишетелмәй. Нур ашығып ҡайтып гармунын ала ла Әтнәкәй яғына китә. Ҡырҡылған ағас төбөнә ултырып, төнө буйы баҫыуҙа эшләп йоҡоға талған кешеләрҙе уятмаҫ өсөн бик аҡрын ҡына «Ҡара урманды» уйнай, унан һал ҡыуып барғанда Хәжиҙән өйрәнгән «Азаматты» һыҙҙыра...

Юҡ, бәтә ауыл да йоҡламаған икән. Кемдәрҙер Әтнәкәй яғынан килгән гармун моңон ишетеп, тәҙрәләрен асып, ҡолаҡ һалып торалар; мең йоҡо аралаш ҡолаҡҡа йыр инә...

Алыҫтарҙан, ай, күренгән
Ирәндекkәй тауының аҡ ташы;
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы...

Ир-аҙамат менгән аттың
Бәкәлдәре уның аҡ булыр.
Аҫыл егет ҡайҙа йөрөһә лә,
Ҡылған эше уның хаҡ булыр...

О, моң...

Кеше, аңлы йән эйәһенә әүерелгәс, һандуғастарға эйәреп — йырларға, торналарҙың туй алдынан бейегәндәрен күреп бейергә өйрәнгән, тәбиғәт күренештәрен ташҡа, тора-бара ҡағыҙға һүрәт итеп төшөрөргә өйрәнгән, ҡағыҙ һәм баҫма яҙма менән бергә, бәлки элегерәк тәлер, матур әҙәбиәт барлыҡҡа килгән. Ҡыҫҡаһы, кеше үҙенең эске һәм тышҡы донъяһын теге йәки был саралар менән һынландырырға тырышҡан...

Әммә бына ошо һынландырыуҙа, кәүҙәләндереүҙә һәм йәнләндереүҙә иң нескәһе, иң тәрәне һәм кешенең кем генә булыуына ҡарамаҫтан тәрән тәьҫир итә торғаны моңдор.

Моң... Билдәле, кеше моңдо һайраусы ҡоштарға эйәреп, улар тәьҫирендә яҙа башлаған, әммә кеше иң оҫта һайраусы ҡоштарҙы ла уҙып китkән, ул диңгеҙ шаулауын һәм уның ритмик тулҡынланыуын, күк күкрәүен һәм ташыу ташыуын, гөрләүектәр гөрөлдәүен, сабыйҙарҙың ихлас, ғәмһеҙ көлөүен, ҡайғынан баштарын ҡайҙа ҡуйырға белмәгән әсәләрҙең, мөхәббәттән күккә күтәрелгән йәки йәндәрен фиҙа ҡылырға әҙер булған егеттәрҙең-ҡыҙҙарҙың шатлыҡтарын, ҡайғыларын, илһамдарын, йондоҙло сәғәттәрен һәм һуңғы һулыштарын моң — музыка — йыр аша бирергә өйрәнгән.

Моң... илдәр, сиктәр, телдәр айырмаһын белмәй, ул ҡояш һымаҡ бөтә кешегә лә тәьҫир итә, ҡанатландыра һәм илһамландыра, уйландыра һәм аҡыллы итә...

Моң — музыка — йыр... Кеше уйлап сығарған иң гүзәл һәм иң көслө ижад емеше...

Бына әле кемдәр генә Нурҙың аҡрын ғына гармунда уйнап, йырлап ултырғанын тыңламайҙыр, кемдәр генә, оло йәштәге кеше булһа, йәшлегенә сәйәхәт яһамайҙыр, ә йәш-елкенсәк булһа, йөрәген ҡайҙа ҡуйырға белмәй ашҡынып, ярһып яталыр...

## УН БЕРЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Һуңғы бал

Хушлашыу кисәһе...

Бер көндәп: «Хуш, Ленинград!» һәм... «Исәнме, Киев!»

Киев... Уның Киевҡа барғаны булмаһа ла, күп ишеткәне, уҡығаны бар. Киевты, Ленинградтан, Мәскәүҙән ҡала, иң гүзәл ҡала, тиҙәр.

Киев, Киев... Фәтиховтың ете йылдан артыҡ ғүмере һиндә үтәсәк, ә шуның туғыҙ айы — ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер сират күпере өҫтөндә.

Кеше күрәсәген алдан һиҙенә, тиҙәр, әммә әле Фәтихов ул саҡта бер нәмә лә тойманы. Ана шуға күрә Нур ашҡыныи, дәртләнеп «Хушлашыу балына» әҙерләнде. Бер йырҙы башланы, икенсеһен ташланы. Ул Ленинградта «Кармен» операһын бер нисә тапҡыр ҡараны һәм тыңланы. Ул «Тореодор, тореодор, помни, что тебя ждет любовь» тигән арияны айырыуса яратты һәм йыш ҡына киске уйын йыры «Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәйҙе» «Тореодор» менән алыштырҙы...

Ул әленән-әле ҙур көҙгөгә ҡарап ала. Өҫтә буйға-һынға самалап киҫелеп тегелгән йәшел буҫтау гимнастерка, зәңгәр диагональ галифе, портупеялы киң яҫы ҡайыш. Петлицаларҙа икешәр кубик. Ә ниндәй килешә уға хәрби кейем! Күрһә икән үҙен ошо минутта Илисә... Юҡ, ниңә уны Илисә күрергә тейеш әле?.. Улар бер ҡасан да күрешергә тейеш түгел. Улар мәңге бергә булырға ант итештеләр. Зәңгәр күк сатыры аҫтында ул Илисәнең яурынына зәңгәр шәл япты... Хәҙер онот, онот, үҙен, Нур. «Тореодор, тореодор, тебя ждет любовь». Хәйер, хәҙер инде ул Илисәне онотоп та бара — байтаҡ үтте бит. Нисә йыл? Биш, алтынсы... «Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй...» Нур көҙгө ҡаршыһына килә, үҙ-үҙенә честь бирә: «Здравствуй, товарищ взводный командир!» — Ҡазармаға ингәс, ул ҡыҙыл армеецтар менән шулай исәнләшәсәк, ә уға дәррәү «Здрась» тип яуап бирәсәктәр. Ул саҡта, йәғни утыҙ дүртенсе йылда, хәҙерге шикелле хәрби званиелар юҡ ине әле, командирға, петлица-

ларындағы билдәләргә ҡарап: «взвод командиры», «рота командиры», «батальон командиры», «комдив» тип өндәшәләр ине.

Ишек ҡағып тормай, Нурҙың һабаҡташы Себер егете Шашнев килеп керҙе. Ул да көҙгө һымаҡ ялтырай, күҙҙәре яна, хәрәкәттәрендә бәйгелә ашҡынып торған сабыш атының ярһыуы һиҙелә, әленән-әле устарына һуғып, ышҡып ала.

— Мәктәп начальнигы балға мединститут студенткаларын да саҡыртҡан, ти. Һайлайбыҙмы? — Йәнә устар шапылдап ҡуя. — Һин ярай ҙа Киевҡа китәһең, ә мин бит Алыҫ Көнсығыштың да иң алыҫ сигенә... Уссури юлбарыҫтары янына...

— Ә мин һиңә көнләшәм, Шашнев. Алыҫ Көнсығыш, Сахалин, Камчатка бала саҡтағы уҡ хыялым.

— Шулай инде, — тине көйәҙләнергә яратыусы, ҡатынҡыҙ затына талымһыҙ Шашнев, шаярта төшөп. — Һинең ҡатын — миңә, минеке — һиңә оҡшай тигәндәй, һин — Алыҫ Көнсығышҡа, мин Киевҡа ҡыҙығам. Хохлушкаларҙы йоморҡҡаға баҫҡан күмәс шикелле күпереп тора, тиҙәр бит.— Ул, көҙгө ҡаршыһына килеп, «ҡанат» сығара башлаған мыйығын һыпырып алды.

— Шашнев, — тине Нур, уны ҡулбашынан ҡултыҡлап. — Өйләнгәс, аҙыраҡ баҫылырһың микән?

— Баҫылыуҙы ниндәй мәғәнәлә әйтәһең?

— Күпереп торған күмәс мәғәнәһендә.

— Һа-һа-һаа... — Ул, башын артҡа һалып, рәхәтләнеп көлдө. — Ниндәй ҡатынға юлығаһың бит. Әгәр һәр аҙымыңды фиксировать итеп торһа... — Шашневтың йәнә бер ғәҙәте бар: ул һөйләшкәндә «матур», сит һүҙҙәрҙе ҡыҫтырырға ярата.

— Әгәр «фиксировать» итмәһә?

— Ул сағында... — Шашнев йәнә мыйығын һыйпап алды. Ул һыҙғыра башланы. — Ҡойроҡто ҡыҫырға тура киләсәк. Мин ҡатындарын рәнйетеп, асыҡтан-асыҡ йөрөгән аҙғын ирҙәрҙе ратмайым. Ҡатындар ҙа кеше бит. Уларҙың да, между прочим, йөрәге бар.

— Ә мин, ғөмүмән, ир өҫтөнән йөрөгән ҡатындарҙы, ҡатын өҫтөнән йөрөгән ирҙәрҙе күрә алмайым. Бысраҡлыҡ был!

— Һәй... — тине Шашнев, уны бер ҡулы менән ҡосаҡлап, — ирҙәргә аҙыраҡ ярай инде ул... Ғүмер-ғүмерҙән шулай килгән бит...

— Эйе, һин — минең ҡатыным менән, мин — һинең ҡатының менән, шулай бит?

— Эээ... — Шашнев ҡулын ҡырҡа тартып алды. — Улай битмәй, егеткәй.

— Һуң, донъя шулай ҡоролған бит, — тине Нур, уны ирештереп.

— Донъя... Аңлайышһыҙ ребус ул...

— Беҙ уны үҙебеҙ ребусҡа әйләндерәбеҙ, Шашнев. Кешеләге иң әшәке етешһеҙлектәрҙең береһе — ҡомһоҙлоҡ, нәфсеңә хужа була алмау.

— Ҡиттекме?

— Ҡиттек! — Нур галифе кеҫәһенән исемле көмөш сәғәтен алып ҡараны (хәрби мәктәпте «отличноға» тамамлағаны өсөн бирелгән).

— Беҙ һинең менән ҡапма-ҡаршы ике полюс, Фәтихов.

— Минең бер үҙемдә генә бер нисә полюс бар, — тине Нур, Шашневты таң ҡалдырып.

— Ә мин һине монолит тип йөрөй инем, Фәтихов. Һинең характерың бит шундай кристаллашҡан... Күпме бергә уҡып, бер туған ағайыңдың ошо мәктәптә эшләгәнен дә әйтмәнең.

— Ә ниңә миңә ағайым менән маһайырға?

— Шулай ҙа... Бер туған ағай бит...

— Мәшһүр ата-әсә, туғандар менән маҡтаныуҙы мин пустәк кешеләр эше, тип уйлайым. Кеше үҙ хеҙмәте, үҙ батырлығы менән ғорурланһын, ә сит ҡояшҡа ҡыҙынмаһын.

— Йәл, икебеҙ ҙә бер часҡа китмәйбеҙ... Һинән өс йыл эсендә мин немец теленә генә түгел, бик күп нәмәгә өйрәндем.

— Мин дә һинән күп нәмәгә өйрәндем.

— Минән? — Шашневтың аҡһыл зәңгәр күҙҙәре ҙурайҙы, шат йылмайҙы. — Минән нимәгә өйрәнергә мөмкин? Мин бит... «еңелтәй»... баламут...

— Үҙеңде баһалап бөтмәйһең, Шашнев. Һин эскерһеҙ, дуҫың өсөн һуңғы ыштаныңды ла һалып бирергә әҙер кеше. Һинең янында ҡашыңды емереп, сырайыңды һытып ултырып булмай. Һин һәр ваҡыт яҙғы ҡояш шикелле йылы, яғымлы...

— Юҡ, барыбер мин «еңелтәйерәк» әле, — тине ул, ҡапыл күңелһеҙләнеп. — Был холҡом үҙгәрмәһә, бер ҡатын да миңә сыҙап тора алмаясаҡ.

— Сыҙаясаҡ, Шаш-нев. Һин бит тыштан ғына ҡыланаһың, ә былай... йөрәгең... саф, матур.

— Уныһы шулай... Минең егерме дүрт йыл ошо фани донъяла йәшәп, себен дә үлтергәнем, эт балаһын да рәнйеткәнем юҡ...

Улар балға барғанда ла шулай бер-береһен ярым шаяртып, «семеткеләп», маҡташып барҙылар, өс йыл бергә уҡып әйтелмәгән һүҙҙәрҙе әйтештеләр. Ысынлап та, хушлашҡанда кешеләр эскерһеҙерәк, ихласыраҡ була бит... Бәлки, был ғүмерлеккә хушлашыуҙыр...

Улар ингәндә, клуб инде геү килә ине. Клубта йәш командирҙарҙан башҡа уҡытыусылар, подразделение командирҙары, уларҙың ҡатындары, инде буй еткән ҡыҙҙары, күрше хәрби мәктәптән килгән ҡунаҡтар һәм, Шашнев әйткәнсә, бер мөйөштә — оялыбыраҡ торған мединститут студенткалары бар ине. Сыбарланып биҙәлгән бейек түшәм уртаһына аҫылған ҙур, ауыр бронза люстраның йөҙләгән хрусталь тамсылары емелдәй, ҡайһы сағында иштелер-иштелмәҫлек кенә сыңлағандай итеп ҡуя, был — клубҡа айырыуса тантана төҫө бирә. Эстрадала — тынлы оркестр. Әле ул уйнамай, музыканттар үҙ-ара һөйләшәләр, инструменттарын тикшереп, өрөп ҡарайҙар, пюпитрҙағы ноталарын аҡтарғылайҙар. Кисәге курсанттар, бөгөнгө ҡыҙыл командирҙар, студенткалар менән әле аралашып, «йоплашмағандар», бер маҡсатһыҙ буталып йөрөйҙәр, өс йыл бергә уҡығандан һуң улар бер көндән илдең төрлө мөйөштәренә тараласаҡтар. Нурҙың Бөрөлә техникумда уҡығанда сығарылыш кисәһендә булғаны бар ине. Унда ла күңелле, тулҡынландырғыс була торғайны, әммә әле бөтөнләй башҡаса: үҙең шул кисәнең бер «геройы» булғанғамы, хәрби мәктәп менән педтехникум, мөғәллимлек менән хәрби хеҙмәт араһында айырма сағыштырмаҫлыҡ ҙурлыҡтанмы, тантана ла башҡаса...

Нур ҡарана. Кисә генә отделение командиры алдында уҡлау йотҡан кешегә әйләнгән курсанттар — бөгөн йәш командирҙар — күкрәктәрен кирә, баштарын күтәрә төшөп, ҡуҡрайып йөрөйҙәр; әленән-әле портупеяларын төҙәтеп ҡуялар, һыпырыналар... Нур йылмая. «Мин дә башҡаларға шулай күренәмме икән?..»

Кемдең ҡайҙа китәһе билдәле булһа ла, бөгөн барасаҡ урындарын йәнә асыҡлайҙар, төпсөнәләр, элемтәне өҙмәҫ өсөн, өй адрестарын бирешәләр...

Бына бер ваҡыт түшенә ике Ҡыҙыл Байраҡ ордены, петлицаларына икешәр ромб таҡҡан мәктәп начальнигы — сандыр йөҙлө, инде сәсе салланған булһа ла, взводный шикелле теремек, етеҙ Дубровников эстрадаға ҡарап ишара яһаны, бөркөт танаулы капельмейстер йылтыр башын ҡаҡты һәм, осорға йыйынған ҡош һымаҡ, ҡулдарын күтәреп, болғап ебәрҙе, залға «Амур тулҡындарының» хисләндереүсе, дәртләндереүсе һәм һағышландырыусы таныш моңо таралды. Дубровников, барып, ҡыҙының яурынына ҡулын

һалды һәм йәш-елкенсәктәргә хас етеҙлек менән бейеп китте. Һәр балды «Амур тулҡындары» менән башлау һәм «Краковяк» менән ослау бында традицияға әйләнгәйне һәм ул традиция «авторы» бейергә, йырларға, баянда уйнарға яратыусы Дон казагы Дубровников үҙе ине. Начальниктарының күреп, башҡалар ҙа, үҙҙәренә пар эҙләп, алан-йолан ҡарандылар, кисәге курсанттарҙың күҙҙәрс берҙәм булып тип әйтерлек мөйөштә уҡмашып торған мединститут студенткаларына төштө, әлбиттә. Улар студенткалар ҡаршыһына килеп баҫалар ҙа, итек үксәләрен шыҡылдатып: «Һеҙҙең менән бейергә мөмкинме?» — тип эйәктәрен ҡағалар. Нур әле Бөрөлә техникумда уҡығанда уҡ яҡшы бейергә өйрәнгәйне, хатта ул ваҡытта бик модала булған «Чарлстонға» бейеп, бүләк тә алғаны булды, ә бында бейеү һөнәрен тағы ла камиллаштырҙы. Бына ул иптәштәре артынан, студенткалар ҡаршыһына баҫҡас, аҙ ғына юғалып ҡалды, кәүҙәгә йыйнаҡ ҡына, оялсан ғына ҡыҙыҡай янына атлап, үксәләрен шыҡылдатып, башын эйҙе: «Рөхсәт итегеҙ...» Оялсан ҡыҙ унын әйтеп бөтөргәнен көтөп тә тормай ҡулын һуҙҙы. Тәүге танса бөттө, Нур партнершаһын, беләгенән тотоп, һабаҡташтары янына илтеп ҡуйып, йәнә үксәләрен шыҡылдатып башын эйҙе, рәхмәт әйтте. «Мөмкин булһа, алдағы тансала ла бергә бейербеҙ». Студентка биттәрен соҡорайтып йылмайҙы, керпек ҡаҡты. («Оҡшай уға был оялсан ҡыҙыҡай. Моғайын, ауылдан килгәндер...») Өсөнсө тансанан һуң кемдер иләп кенә унын еңенән тартты һәм боролғас... саҡ-саҡ аҡын юғалтманы, теләһә кемде, ата-әсәһен, хатта Айҙағы Зөһрә ҡыҙҙың көйәнтәһен күтәреп, уның ҡаршыһында баҫып тороуын көтөргә мөмкин ине, әммә... Илисәне түгел. Ҡайҙан килеп сыҡты ул? Ни эшләп бында ул?!

— Һин?! — Нурҙың тауышы ҡалтыранып сыҡты.

— Мин-н, — тине Илисә, күҙең сағылырлыҡ аҡ тештәрен емелдәтеп. — Ә мин һине, танса башланғас та, күреп ҡалдым...

— Юҡ, ысынлап та, был һинме? Әллә... мин төш күрәмме?

— Төш түгел, өн, Нур... Фәтихов, — тине Илисә, уның ҡулын ике ҡуллап тотоп.

— Өн... — тине Нур ҡапыл һүрелеп, күңелһеҙләнеп, һәм шунда уҡ гөлт итеп. — Өн булһа, киттек!

— Ҡайҙа?

— Тышҡа. Бөтәһен дә һөйләп бир. Ниңә... Ни өсөн вәғәҙәңде боҙҙоң?

— Үткәнде кире ҡайтарып булмай, Нур. Әйҙә, мин һине ирем менән таныштырам.

— Ирец менән? Ул да бындамы ни?

— Эйе, ана, беҙгә ҡарап йылмайып тора. Хәрби академияла уҡый ул.

Нур оҙон ҡолаҡтарҙан Илисәнең яңға ҡайтҡан командирға кейәүгә сығып, әллә ҡайҙа китеп барғанын ишеткәс, башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй сәмләнеп, үҙен эҙләп табып, өҙгөләп ташларҙай булып, зәһәрләнеп йөрөнө, ләкин... йөрәге төбөндә, баҙлауыҡ уты һымаҡ, өмөт уты һүнер-һүнмәй лепелдәп торҙо. «Бәлки, дөрөҫ түгелдер, ғәйбәттер... Бәлки, Илисә хәҙер үҙе лә үкенәлер, Нурҙы күреү менән, уның муйынына ташланырға әҙерҙер...» Эйе, кеше ғүмере буйы өмөт менән, үҙен-үҙен алдап йәшәй, хатта үҙе уйлап сығарған алдауға ла ҡайһы саҡта ышана... Хәҙер бына ул өмөттөң үрмәксе ебе шикелле ебе лә өҙөлдө, әммә Нур һаман да яҙмышына баш эйергә теләмәй.

— Илисә... — тине ул, бышылдап, тыны менән уны бешереп, — иртәнән һуңға мин Киевҡа китәм...

— Хәйерле юл, — тине Илисә, яһалма йылмайып, ирено табан боролоп, бармаҡтарын ҡыбырлатты: «Хәҙер, Муса!»

— Икәүләп... Мин һине лә алып китәм...

— Тилекәй, — Илисә инде башҡасараҡ йылмайҙы, уның был йылмайыуында бер бизмән менән дә үлсәй алмаҫлыҡ һағыш, әрнеү, үкенеү бар ине. Нур был йылмайыуҙан бәләкәйләнеп, ҡурылып киткәндәй булды. — Минең бит балам бар...

Нур ашыҡты, уны бүлдерҙе.

— Миңә тимәгәйе бишәү булһын, барыбер мин һине...

— Һуң инде, Нур...

— Юҡ, һуң түгел! Ниңә антыңды боҙҙоң? Был бит...

— Аҡланмайыҡ, Нур... — Ул йәнә йылы, ҡасандыр бик таныш һәм яҡын булған усын уның ҡул һыртына ҡуйып алды... — Аҡланмайыҡ... Бәлки... икебеҙ ҙә ғәйеплелер... — Илисә йәнә һағышлы йылмайҙы. — Ә теге шәлде... мин һаҡлайым. — Ул Нурҙы ҡултыҡланы. — Һәм ғүмерем буйына һаҡлаясаҡмын.

— Рәхмәт, — тине Нур ишетелер-ишетелмәҫ кенә.

— Нур... әйҙә... ирем менән таныштырам...

Нур Илисәнең ире күҙҙәрендә һағайыу, көнсөллөк күрмәне, киреһенсә, уларҙы ихлас йылмайып ҡаршыланы, ҡулын дуҫтарса һуҙҙы.

— Ҡарамышев. Яҡташ менән осрашыуыма шатмын. Илисә, һеҙҙе күргәс, саҡ-саҡ һушынан яҙманы.

— Яҙһа ла ғәйеп түгел, — тине Илисә, иренең ҡултығынан алып, — бала саҡтан алып бергә уйнап үҫтек. Мин сирләгәндә, уның миңә яңы һауған һөт керткәне әле лә иҫемдә...

— Иртәгә беҙгә рәхим итегеҙ. Илисә һеҙҙе, ауылда беренсе гармунсы ине, тип маҡтаны. Минең күршелә баян бар.

— Рәхмәт, мин баянда уйнай белмәйем.

Бер ҡулы менән ирен ҡултыҡлаған Илисә икенсе ҡулын Нурҙың беләгенә һалды.

— Һин белмәгән һөнәр юҡ, Нур. Обязательно киләһең. Өрьяҙылағыса бәлеш бешерербеҙ... — Ул үҙҙәренең адресын әйтте. — Иҫеңдә ҡалдырҙыңмы? Ҡабатлайым...

Ул арала былар янына, ҡатыны Полинаны ҡултыҡлап, Фәтихов Варис килеп етте. Уның петлицаларында икешәр шпал ине — йәғни батальонный комиссар. Варистың килеүе Нурҙы уңайһыҙ хәлдән ҡотҡарҙы.

— Ағай, — тине ул, Варисты ҡултыҡлап. — Хәҙер землячество ойоштороурға мөмкин.

— Бәлки, бындай көтөлмәгән шатлыҡлы осрашыуҙы «билдәләп» үтергәлер?

Уның тәҡдименә Нурҙан башҡа бөтәһе лә шатланып риза булды.

— Иртәгә ял, — тине Ҡарамышев, — өсөгөҙҙө лә төшкөләккә бәлешкә саҡырабыҙ... Минең Илисә бәлеште теләҡде йоторлоҡ итеп бешерә.

— Бәлеште генәме ни?— тине Илисә, юрамал үпкәләгән булып.

— Бигерәк тә бәлеште! — тип төҙәтте һүҙен Ҡарамышев.

Нур, ни эшләптер, ҡапыл башым ауырта башланы, тип хәйләләште, тегеләр менән буфетҡа барманы. Илисәнең ирен ҡултыҡлап, уның ауыҙынан сыҡҡан бер һүҙен тотоп алып, йылмайып ҡарап тороуы Нур өсөн ғазап ине...

Ул кейенеп урамға сыҡты. Ҡайҙа барырға белмәй торғандан һуң, Марсово полены киҫеп сығып, Йәйге баҡса аша Нева буйына китте. Гранит парапетҡа арҡаһын терәп, өс йыл ғүмере үткән «Инженерҙар замогына» ҡарап торҙо. Өс йыл гүмер өс көн һымаҡ ҡына булып ҡалды... Үткән ғүмер — иҫкән ел, иҫкәнен күреп булмай... Туҡта, туҡта, ниңә ул шул саҡлы моңая, күңелһеҙләнә әле? Хушлашыу балы күңелдең нескә ҡылдарын шул саҡлы тибрәттеме? Юҡ, әлеге лә баяғы Илисә... Шундай тантаналы, тулҡынландырғыс көндө осраш инде... Онот, онот һин уны, Нур Фәтихов. Барыбер Ерҙе кирегә әйләндерә, үткәнде ҡайтара алмайһың, аҡыллы, көслө кеше булһаң, һин Илисәгә бәхетле тормош телә лә үҙеңә унан да һылыуыраҡ, унан да уңғаныраҡ кәләш тап...

Нурҙа ҡапыл ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар тыуҙы: ғүмерен армия менән бәйләп, ул яңылышманымы? Гел-гел ка-

зарма, гел-гел бер төрлө кейем, гел-гел командалар... Ялҡытмаҫмы? Туйҙырмаҫмы?

Дөрөҫ, ул яратҡан эшенә — радиослыҡҡа уҡыны һәм артабан хеҙмәте лә радио менән бәйләнгән буласаҡ. Әммә... фу... бик иртә туя башланың әле армиянан, иптәш Фәтихов. Һине бер кеше лә ҡотортманы, өгөтләмәне, үҙең теләп хәрби мәктәпкә киттең, шулай булғас... Шулай булғас, үкенеүҙәр менән йәшәмә... Бөтәһенә лә, әлеге лә баяғы, Илисә менән көтөлмәгән осрашыу ғәйепле. Ҡапыл боҙ ҡуҙғалып, ташыу ташҡандағы шикелле, ауыл, киске уйындар, Ҡыҙыл яр, Әтнәкәй, бесән, ураҡ өҫтәре иҫкә килеп төшөп, күкрәкте ҡаплап алды, йөрәкте һулҡылдатты... Онот, онот, Илисәңде! Онот, онот ауылыңды! Хәҙер улар бөтәһе лә Бөрө өҫтөнән күтәрелгән томан артында ҡалды инде. Киренә әйләнеп ҡайтыу юҡ — ишек шапылдатып ябылған, бикләнгән...

Ағаһы квартираһына Васильев утрауына киткәндә инде? Һуңғы төндө бергә үткәрергә кәрәк. Тағы ҡасан осрашаһың... Ана, Варис... Инде нисә йыл армияла, бер ҡасан да ул ғүмерен армия менән бәйләүенә үкенмәй...

Ул ағаларына юл тотто.

Һалҡынса, елле октябрь төнөндә Нева яры буйлап йәш командир, ҡулдарын арҡаһына ҡуйып, ауыҙ эсенән генә йырлап бара. Ҡала ҡаты йоҡоға талған. Тик Фәтиховтың ғына йоҡлағыһы килмәй. Илисә менән көтөлмәгән осрашыу уны бөтөнләй сығырынан сығарҙы, ҡапыл ул егерме дүрт йәшлек батыр командирҙан киске уйындарға йөрөүсе йәшелкенсәккә әйләнде лә китте.

Их, мөхәббәт!.. Иҫ киткес гүзәл хис тә һин, ҡот осҡос ғазап та һин...

Алһыу, алһыу, алһыу, алһыу,
Алһыуға мандың мәллә?
Йөрәккәйең ярһыу, ярһыу,
Ярһыуға ҡалдың мәллә?..

Их, ҡайҙа уның көмөш телле тальянкаһы?..

Ҡасандыр Бөрө туғайлыҡтарын яңғыратҡан шикелле, Нева буйҙарын гармун моңона күмер ине...

«Өфө, тиһең дә ҡарайһың,
Өфө күренәме ни?»

Иртәгә баянда һыҙҙырып, Илисәне үкертеп илатайым әле!..

«Айырылып йәшәү менән
Күңел һүреләме ни?»

Ул бөтә гәйепте Илисәгә япты. Ярай, уның Өфөнән уҡыуын ташлап китеүенә гәфү итерлек сәбәптәр ҙә булһын, ти, ләкин ниңә ул Силәбегә киткәс, хат яҙмаған? Нур, ҡырҡ эшен ҡырҡ яҡҡа ташлап, донъя ситенән уның янына осоп барып етер ине бит... Юҡ, ул хыянатты гәфү итә алмай, хыянат — иң ауыр енәйәт. Иртәгә үк тәүге тансала бергә бейегән студентканы эҙләп табыр ҙа етәкләп загсҡа алып китер. Теләһә, уның менән бергә Киевҡа барыр, Киев тиклем Киевта мединститут барҙыр әле, иңде институтты Ленинградта тамамлайым, тиһә, ҡаршы килмәç — йыл ярым ғүмер үтер ҙә китер. Ә иртәгә ул Илисәләргә ҡунаҡҡа буласаҡ кәләше менән киләсәк. Янһын әле тегенең йөрәге. Күмергә ҡалһын. Көлгә әйләнһен. Хәйер... янырлыҡ булһа, ул, Нурҙы ташлап, башҡа кеше ҡуйынына суммаç ине, тимәк, янмай ҙа, көймәй ҙә... Ә теге ваҡытта? Зәңгәр август төнөндә... Күктә йондоҙҙар уйнағанда... Бөтәһе лә әле ныҡып, ултырып етмәгән йәш-үçмерлек ҡылыҡтары, ҡыланыуҙары ғына булдымы икән ни?

Әгәр Илисәне иренән тартып алып киткәндә?.. Ә нинә, мөхәббәт — көслөләр тойғоһо, ҡурҡаҡ йәндәр һөйөргә лә, һөйөлөргә лә хаҡлы түгел. Тимәк... һәр кем мөхәббәте өсөн үҙенсә көрәшергә тейеш, кем шикләнеп, икеләнеп тора, шул ауыҙын асып тороп ҡала. Хәл иттек, иптәш взводный, иртәгә Илисәләргә бараһың, бөтә уй-планыңды уртаға һалаһың. Ире лә ишетһен, урлашып эш итеү юҡ. Ә шулай ҙа иренә әйтергә ярамай, ғауға күтәрелеүе бар. Бар... бар... Әгәр бөтәһен дә математик иçәптәр менән уңға, һулға теҙеп һала башлаһаң, һин бер ҡасан да батырлыҡ эшләмәйәсәкһең, Нур Фәтихов. Хәтерләйһеңме, теге йылды, һал ҡыуғанда? Түҙемлегең бөтөп, һалды ташлап киткәс, саҡсаҡ ахмаҡлыҡ эшләмәнең бит, ярай әле һушыңа тиҙ килдең. Әгәр Полина еңгә менән кәңәшләшкәндә? Ул, әллә ни уҡыған ҡатын булмаһа ла, хоҙай биргән белеме бар... Варис ағаһына әйтһә, ул: «Не сметь!» — тип ҡырт киçәсәк... Бөтәһенә лә төкөрөргә лә, теге студентканы алып, Киевҡа китергә. Илисәләргә лә барып тормаçҡа... Әйҙә, оя ҡорғандар икән, ояларын боҙмайыҡ, Ҡарамышев насар кешегә оҡшамаған, күҙҙәре ихлас ҡарай, йылмайыуы ла «кешенең күңелен күрер» өсөн генә йылмайыу түгел. Етмәһә, яҡташтар икән — күрше ауылдан ғына. Балалары бар... Уға ата, әсә кәрәк, ә һин, мин-минләнеп, бер ғәйепһеҙ сабыйҙы етем итмәксе булаһың. Бының өсөн һине ата-әсәйең дә, туғандарың да ғәфү итмәç. Һәм, иң мөһиме, үҙ-үҙеңде ғәфү итмәçһең...

Шулай итеп... Хуш, Илисә! Тәүге һәм үкенесле мөхәббәтем! Беҙ башҡаса күрешергә тейеш түгел. Һиңә лә, миңә лә шулай һәйбәтерәк булыр...

Ошо урында мин хронологияға күсәм. Был хәрби телдә **«Послужный список»** тип атала.

1931. Сентябрь — 1934 йыл. Октябрь Ҡыҙыл Байраҡлы Берләшкән хәрби инженерҙар мәктәбе. Ленинград.

1934. 5 октябрь — 1940. 21 октябрь. 12-е айырым радиорота. Киев.

1940. 21 октябрь — 1941. 20 март. 360-сы айырым сапер батальоны. 360-сы дивизия. Батальон командиры урынбаҫары. Киев.

1941. 20 март — 1941. 26 август. Ҡыҙыл Армияның Генеральный штабы ҡарамағында. Махсус резервта.

1941 йылдың 26 августынан алып Көньяҡ-Көнбайыш фронты разведка бүлегенең начальнигы ярҙамсыһы.

1941 йылды Фәтиховҡа «Капитан» тигән хәрби звание бирелә.

Ә 1941 йылдың 22 сентябрендә... хәбәрһеҙ юғала.

## УН ИКЕНСЕ НОВЕЛЛА

### «Взвод, смирно-о!»

Кеше, «бәхет» тигән төшөнсәне уйлап сығарғандан бирле, «Бәхет формулаһын» табырға, уның бизмәнен билдәләргә тырышҡан һәм, минеңсә, ул әле һаман да эталон булырлыҡ формула табылмаған. Бәхет, бер ҡараһаң, сикһеҙ океан, юҡ, Йыһан, икенсе ҡараһаң, һыуһағанда ауыҙға тамған тамсы кеүек кенә.

Нисек кенә булмаһын, Нур Фәтихов егерме өс йыллыҡ ғүмерендә үҙен өс тапҡыр сикһеҙ бәхетле һананы. Беренсеһе — яңғыҙы Ҡариҙелдән һал ҡыуып, уны Өфөләге бир-жаға илтеп тапшырғас; икенсеһе — «Ғәлиәбаныу» спектакленән һуң, зәңгәр төндә Илисәнең яурынына зәңгәр шәльяулыҡты һалғас; өсөнсөһө — ауылдан килгән кейемде һалып ташлап, өҫкә курсант кейеме кейгәс һәм бына дүртенсеһе бөгөн... Киевта, казарма ишеген тәү тапҡыр асып ингәс.. Дөрөҫ, ул Бөрө педтехникумына ингәс тә, Ленинградта хәрби инженерҙар мәктәбенең казармаһына тәү тапҡыр кергәндә лә үҙен бәхетле һанағайны, ләкин ул саҡта әле, әйтергә яраһа, аңлап етелмәгән бәхет булғандыр — алда башланмаған өс йыл, ябай өс йыл ғына түгел, ҡаты хәрби хеҙмәт, йәнә бөтә һәләтенде, тырышлығыңды егеп уҡыу. Ярай ҙа сыҙап түҙә алһаң, ярай ҙа ул-был булып, мәктәптән «атылып» сыҡмаһаң... Сыҡманы. Түҙҙе. Тырышты. Мәктәп-

те иң алдынгылар булып тамамланы, көмөш сәғәт менән бүләкләнде.

Нур, хәрби мәктәпте бөтөрөп, петлицаһына ике кубик тағылған гимнастерка кейгәс тә, үҙен бәхетле тойҙо, әммә бөгөн — бөтөнләй башҡаса. Бөгөндән алып ул утыҙлап кешегә команда биреүсе командир ғына түгел, уларға ата ла, педагог та, дуҫ һәм кәңәшсе лә.

— Иптәш Фәтихов, киттек! — тине петлицаларына берәр шпал таҡҡан кеше — айырым рота командиры Яремченко. Ул, күпселек украиндар шикелле, эре һөйәкле, таҙа кәүҙәле, киң тулы битле кеше, русса яҡшы һөйләшһә лә, «г» өнөн үҙҙәренсә «һ» тип әйтә. Былай тәүге тәьҫир наҫар түгел, хуш күңелле, уйын-көлкөнө ярата торған кешегә оҡшаған. Фәтихов инеп рапорт биргәс, уға баштан-аяҡ ҡарап сыҡты ла: «Миңә бына тап һеҙҙең һымаҡ командир кәрәк ине, командование ҡайҙан минең уйымды белеп һеҙҙе ебәргән... — тип йылмайҙы, дуҫтарса уның ҡулын ҡыҫты. «Тәүге һалдат бутҡаһын начсостав пищеблогында ашайһығыҙ, ә кисен минең ғаиләлә. Ҡаршы төшмәҫкә! Был мин индергән традиция!»

— Иптәш ротный, тәүге бутҡаны ҡыҙыл армеецтар менән ашарға рөхсәт итегеҙ?

Ротный киң, көслө тештәрен күрһәтеп йылмайҙы.

— Отлично! Мин үҙем дә командир хеҙмәтен шулай башлағайным. — Ротный уның яурынына һуғып алды. — Рәхим итеп ултыр. Ултыр, тигәнгә үпкәләмә, устав буйынса мин командирҙарыма ғына түгел, рядовойҙарға ла «һеҙ» тип өндәшергә тейеш, әммә... Тартаһыңмы? Рәхим ит! Әммә мин, уставты боҙоп, подчиненныйҙарыма, һин, тип өндәшәм. Аңлайҙар, үпкәләмәйҙәр. Беҙ — радистар — армияның интеллигенцияһы. Шуға күрә беҙҙең подразделение дивизияла иң алдынғы һәм иң матур подразделение булырға тейеш. Эйе, эйе, һин көлмә, матур ҙа шул. Киев ҡыҙҙары беҙҙең радистарҙы башҡа ҡыҙыл армеецтарҙан биш саҡрымдан айырһындар. Йә, һөйлә биографиянды. Төҫөңә, һөйләшеүеңә ҡарағанда, ниндәй милләт икәнлегеңде әйтеүе ҡыйын — интернационал, ә фамилияң һәм исемең...

— Мин Уралдан, иптәш ротный. Ҡанымда, үҙемдең белеүемә ҡарағанда, ике состав бар: атайым яғынан мин татар, әсәйемдең бабалары башҡорт булған...

— Метис! — тине ротный, киң, көслө тештәрен күрһәтеп йылмайып. — Метистар талантлы була. Бына минең ҡанымда ла Ҡырым халҡыныңмы, төрөктәрҙеңме ҡаны бар, тиҙәр, әммә мин үҙем уны һиҙмәйем...

Яремченко Фәтиховтың биографияһынан үтә ҡәнәғәт ҡалды.

— Һин настоящий интеллигент, Фәтихов!

Оҡшаны, валлаһи, оҡшаны уға был, тыштан ҡарағанда, һалмаҡ холоҡло, әммә динамит менән тултырылған кеше. Яремченко айырым радиорота командиры ғына булһа ла, бик масштаблы һәм тәрән уйлай белә. Фәтихов үҙенең шундай командирға юлығыуына шат.

— Ҡатының юҡ, тинең бит әле? Үҙеңә бынамын тигән хохлушканы табырбыҙ. Хохлушкалар хуш күңелле һәм... һы-һы-һы... Сибәр була. Ҡиттекме?

Ҡазармаға яҡынлашҡан һайын, Фәтиховтың йөрәге ярһый төштө. Ҡыҙыл армеецтар уны нисек ҡаршы алыр? Улар бит һинең атлап йөрөүеңдән, кейенеүеңдән, честь биреүеңдән, иҫәнләшеүеңдән үк ниндәй командир икәнлегеңде билдәләйҙәр. Ҡаушамаһам ярар ине... Был тәү тапҡыр боҙло һыуға инеп, сирҡансыҡ алыу менән бер... Улар дүртенсе взвод урынлашҡан бүлеккә ингәс, взвод берҙәм һикереп торҙо.

— Взводты сафҡа теҙ! — тине Яремченко петлицаларына өсәр өс мөйөш таҡҡан, граниттан һуғып эшләгән шикелле таҙа, баҙыҡ кесе командирға.

Күҙ асып йомғансы взвод сафҡа баҫты — бер төрлө шау-шыу, ығы-зығы булманы. «Яҡшы-ы!» — тип ҡуйҙы Фәтихов, — ә улар араһында көҙөн генә армияға килгәндәр ҙә барҙыр бит...»

— Ҡыҙыл армеец иптәштәр! — тине Яремченко, саф алдына сығып баҫып. — Мин һеҙгә яңы взвод командиры алып килдем. Фамилияһы — Фәтихов. Ленинградта Ҡыҙыл Байраҡлы Берләшкән хәрби инженерҙар мәктәбен «отличноға» тамамлаған. — Яремченко, Фәтиховҡа ҡарап, ишара яһаны. Нур ротный янына килде, ҡаушамаҫҡа тырышып, честь бирергә ҡулын күтәрҙе һәм бер үк ваҡытта: «Здравствуйте, товарищи красноармейцы!» — тине. Взвод дәррәү «Здрась!» тип яуап бирҙе.

Яремченко киткәс, Фәтихов таралышырға, шөғөлләнгән эштәрен дауам итергә ҡушты.

— Һеҙ... (ул, Яремченко өйрәткәнсә, «һин» тип әйтергә баҙнат итмәне) минең ярҙамсым булаһығыҙмы? — тине ул граниттан сүкеп эшләнгән кесе командирға.

— Так точно! Помкомвзвода Сероглазов!

— Ә үҙендең күҙҙәрең ҡуңырт, — тине ул, йылмайып, иҫәнләшергә ҡулын бирҙе, «һингә» күскәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалып.

— Әсәйемә оҡшағанмын, — тине ул, йылмайып.

— Эште нимән башлайбыҙ, иптәш Сероглазов?

Ысынлап та, нимән башларға? Хәрби инженерҙар мәктәбендә уҡығанда бөтәһен дә өйрәттеләр шикелле: ҡыҙыл

армеецтар менән нисек мөғәләмә итергә? Занятиелар, ял вакытында үҙенде нисек тоторға? Учениеларҙа, маршта, һуғышта... Яраланғас... Оборонала, һөжүм вакытында, һуғыша-һуғыша сигенгәндә... Әммә хәрби мәктәптә тәүге осрашыуҙа, тәүге көндә кыҙыл армеецтар, командирҙар менән үҙенде нисек тотоу хакында һөйләмәнеләр шикелле... Ә йыш кына тәүге осрашыу, тәүге минуттар иҫтә кала, фекер тыуҙыра бит... Бына хәҙер уға тәүге һүҙҙе нимәнән башларға? Бәлки, кыҙыл армеецтарҙың постелдәрен йәки мылтыктарын карап сығырғалыр? Юк, улай ярамай. Кыҙыл армеецтар: «Был эште тикшереүҙән, төпсөнөүҙән башланы», — тип уйларҙар...

— Иптәш Сероглазов, взводты Ленин бүлмәһенә алып инегеҙ, — тине ул әле ныклы ғына бер карарға килер-килмәй.

Ленин бүлмәһенә үҙе алдан китте. Кыҙыл армеецтар инеп, бер аҙ тартынып, стена буйлап теҙелгән артлы эскәмйәләргә ултырҙылар.

— Инеп бөттөләр, иптәш взвод командиры, — тине Сероглазов.

— Минең янproblems ултырығыҙ. Отделение командирҙары ла минең янıма ултырһын.

Уларҙың һәр береһе килеп, честь биреп, үҙенең фамилияһын әйтте. Фәтихов һәр кайһыһының кулын кыҫып, күҙҙәренә текләп караны, иҫендә калдырырға һәм холоктарын самалап белергә тырышты.

— Беренсе отделение командиры Чириков!

— Һаумыһығыҙ, иптәш Чириков! («Исеме есеменә аҙ ғына ла йәбешмәй — Чириковтың буйы ике метрға якын, тауышы — бас, ә фамилияһы... Былай хуш күңелле, бошмаҫ йәнгә окшаған».)

— Икенсе отделение командиры Непейвода!

— Һаумыһығыҙ, иптәш Непейвода! (Нур сак-сак көләп ебәрмәне — ниндәй генә фамилия юк был украиндарҙа! Үткер, шаян егет кеүек күренә.)

— Өсөнсө отделение командиры Санфиров! (Фамилияһына карап та, йөҙөнә карап та ниндәй милләт икәнен тиҙ генә әйтеүе ауыр: киң кара каш, ҙур куңыр күҙҙәр, куңыр йөҙ... Музыка яратмаймы икән? Күҙҙәре улар ауылындағы гармунсы Хәжиғәли күҙҙәренә окшаған — нур һибеп тора.)

— Дүртенсе отделение командиры Азиров!

— Һаумыһығыҙ, иптәш Азиров! (Өҫкө иренен каплап торған матур кара мыйык, ҙур кара күҙҙәр, куңыр йөҙ... Теле лә, киәфәте лә уның Кавказ кешеһе икәнлеген әйтеп тора, азербайжан түгелме икән?..)

— Иптәштәр, — тине Фәтихов, мөмкин саклы тыныс

һәм «үҙ кеше» булырға тырышып, — рота командиры иптәш Яремченко минең фамилиямды әйтте. Иҫегеҙҙә ҡалмаған булһа, ҡабатлайым: Фәтихов Нур. 1911 йылда тыуғанмын. Тыуған ерем — Башҡортостан. Ата-әсәм игенселек менән шөғөлләнә. Белемем — педтехникум һәм Ҡыҙыл Байраҡлы Берләшкән инженерҙар мәктәбе.

Техникумдың өсөнсө курсын тамамлағандан һуң, ике йыл уҡытыу эше менән шөғөлләндем, комсомол ячейкалары ойоштороуҙа, колхоз төҙөүҙә ҡатнаштым. Беҙҙең ғаиләлә ете бала, шуның икеһе — ирҙәр затынан. Икебеҙ ҙә — хәрбиҙәр. Агайым мин уҡыған мәктәптә эшләй, батальон комиссары.

Тәүге һәм төп үтенесем: уставса йәшәйек. Шул сағында беҙҙең эштәр ал да гөл булыр. Әйтәһе һүҙем бына шул. Хәҙер һеҙҙе тыңлайым.

Тәүҙә ҡыҙыл армеецтар бер-берсһенә ҡарашып, бышылдашып шым ғына ултырҙылар.

— Мөмкинме? — тине башҡаларға ҡарағанда кескәйерәк кәүҙәле ҡаҡса ҡыҙыл армеец. Ул, үҙен тотоуына, кейеменә ҡарағанда, армияға быйыл ғына алынғандыр, тороу менән ҡайыш аҫтына бармаҡтарын тығып, гимнастеркаһының йыйырсыҡтарын артҡа һыпырҙы, төймәләрен барлап сыҡты. — Иптәш командир, хәрби мәктәптә уҡығанда, башҡа планеталар менән элемтәгә инә алманығыҙмы?

Ҡыҙыл армеецтар әҙәпле генә көлөштөләр.

— Макийвчук һаман башҡа планеталар менән һаташа...

— Һин тәүҙә үҙең йәшәгән планета тураһында уйла...

Ҡыҙыл армеец ҡып-ҡыҙыл булды, ниңә һорау бирҙем икән тигәндәй, урынына ултырҙы.

— Ул бит марсианкаға өйләнмәксе була...

— Мин, иптәштәр, — тине Фәтихов, — мәктәптә уҡығанда уҡ радио менән ҡыҙыҡһындым. Айға, Марсҡа сигналдар ебәреп ҡараным, әммә... — Ул ягымлы ғына йылмайҙы, — береһе лә әллә мине ишетмәне, әллә ишетмәмешкә һалышты, яуап бирмәне... — Ә эсенән уйлап ҡуйҙы: «Был егетте иҫтә ҡалдырырға кәрәк. Радио менән ныҡлап һаташалыр...»

— Тагы ниндәй һорауҙар? Тартынмагыҙ, ҡыйыуыраҡ булығыҙ, иптәштәр.

— Қосолапов. Ысынмы, беҙҙә лә хәрби званиелар сыға икән тигән һүҙ йөрөй.

— Хәҙергә мин Оборона наркомы түгел, — тине Фәтихов, шаяртып. — Шуға күрә асыҡ ҡына әйтә алмайым, әммә шундай һүҙ йөрөгәнен ишеткәнем бар.

— Косолапов, званиелар сыҡһа, армияла бөтөнләй ҡалмаҡсы була...

— Йәнә һорауҙар бармы?

— Иптәш командир, — был баяғы радио һөйөүсе ҡаҡса сгет ине. — Тағы ла камилыраҡ радиоаппаратура булаcаҡмы?

— Тәки был Макийвчук башҡа планеталар менән хәбәрләшергә самалай...

— Унда ҡыҙҙар Ерҙәге ише генә түгел, иҫ киткес сибәр, ти.

Тағы дәррәү көлөү.

— Радио һәр саҡ камиллашасаҡ, — тине Фәтихов, көлөү тынғас. — Уның роле киләсәктә ифрат мөһим буласаҡ, иптәштәр, сөнки техникаға бәйле һуғыш яҡшы ойошторолған элемтәһеҙ мөмкин түгел. Эш хатта һуғышта ғына ла түгел, радио — егерменсе быуат тыуҙырған бала ғына түгел, ә егерменсе быуаттың баш балаһы ла ул. Шуға һеҙ радио эшенә хәрби профессия тип кенә ҡарамағыҙ, радионы белеү һеҙгә һәр ҡайҙа кәрәк булыр, ихтимал, күбегеҙ үҙенең ғүмерен радио эшенә бағышлар. Ә хәҙер, башҡа һорауҙар булмаһа, кемдең ҡайһы яҡтан килгәнлеген белеп сығайыҡ...

Күпселек ҡыҙыл армеецтар Украинанан, Украина тирәһендәге өлкәләрҙән ине. «Уралдан, Башҡортостандан берәү ҙә юҡ икән...» — тип ҡуйҙы Фәтихов. Ни генә тимә, ситтә яҡташты осратыу — үҙе бер байрам бит ул.

Взвод менән тәүге осрашыуҙан Фәтихов ҡәнәғәт ҡалды. Ҡыҙыл армеецтар ҙа унан ҡәнәғәт ҡалды шикелле. Рота командиры Яремченко ла (ул әңгәмә барғанда һиҙҙермәй генә инеп, шым ғына тыңлап ултырған икән) үҙен маҡтаны.

Ә бына бер аҙнанан ул Фәтиховҡа киҫәтеү яһаны. Ҡыҙыл армеец Макийвчук, увольнительный записка алып, ҡалаға киткәйне. Ниндәйҙер туғанының тыуған көнө икән. Макийвчук ҡағыҙҙа күрһәтелгән ваҡытҡа ҡайтып етә алманы — бер сәғәткә һуңланы. «Трамвай ватылып торҙо», — тип аҡланды ул. Фәтихов асыуланманы, тик: «Башҡа улай эшләмәгеҙ, был беренсеһе һәм һуңғыһы булһын», — тип киҫәтеп кенә ҡуйҙы. Әммә быны рота командиры ла һиҙеп ҡалған икән.

— Макийвчук кисә нисәлә ҡайтты? — тине Яремченко.

— Ул... — Фәтихов ике ут араһында ҡалды: «Макийвчукты яҡлаһаң, командирҙы алдау була, яҡламаһаң, егетеңә әләгәсәк, сөнки ротный командир дисциплинаны ярата. — Трамвай ватылып торған, шуға аҙыраҡ һуңлаған.

— Уларҙың, һуңға ҡалһа, мотлаҡ аҡланырлыҡ дәлилдәре табыла: йә трамвай һуңлай, йә аяҡтары саҡ-саҡ ҡаймыҡмай... Ә Макийвчукка сираттан тыш наряд бирҙеңме?

— Юҡ, иптәш командир, мин уны ҡаты киҫәттем генә.

Яремченконың күҙҙәрендә асыулы шайтандар уйнаны.

— Ҡиҫәтеү генә аҙ. Ҡыҙыл армеец, беләһеңме, командирын ҡасан ярата? Ҡаты булһа. Унан ҡурҡһа.

— Ленин: «Беҙҙең армия — аңлы дисциплинаһы менән көслө», — тигән, иптәш ротный.

— Аңлы дисциплина плюс тимер дисциплина. Әгәр подчиненныйҙарың һинең йомшаҡ ҡуллы икәнеңде белеп ҡалһалар, һыртыңа менеп атланасаҡтар.

— Рөхсәт итегеҙ, иптәш рота командиры...

— Рөхсәт, рөхсәт, беҙ бит бында сафта түгел, «рөхсәт итегеҙһеҙ» ҙә һорарға мөмкин.

— Командир — педагог та булырға тейеш, — тип өйрәттеләр беҙҙе Ленинградта.

— Дөрөҫ өйрәткәндәр, — тине Яремченко, килешкәндәй итеп, — әммә командир, беренсе сиратта, командир, унан педагог, әйттерәһең килһә, педагогтан да былайыраҡ — ата! — Ул тороп йөрөй башланы. — Командир иң элек командир булырға тейеш! Бер төрлө иркәләү, осондороу! Бер ниндәй яҡлашыу, ташлама! Был минең принцибым! Аңлашылғандыр, тип уйлайым, иптәш Фәтихов?

— Аңлашылды, иптәш командир, әммә ҡыҙыл армеец та кеше бит...

— Кеше, әммә ул казарма кешеһе! Ә уларҙы беҙ һуғышлы уйнар өсөн түгел, һуғышыр өсөн әҙерләйбеҙ.— Яремченко инде, кемгәлер оҡшарға тырышып, пафосҡа күсте. — Беҙҙе һәр яҡтан капиталистар солғап алған. Беҙ океандағы яңғыҙ ҡая кеүек торабыҙ. Шуға күрә беҙҙең армия донъяла иң көслө, иң дисциплиналы армия булырға тейеш! — Уның тауышы ҡапыл йомшарҙы. — Ә хәҙер киттек. Мин һиңә беҙҙең Киевты күрһәтәм.

Фәтихов командиры менән килеште лә, килешмәне лә... Армияла тимер тәртип булырга тейеш. Дөрөҫ, ләкин ҡыҙыл армеец та кеше бит, ул батша һалдаты ла, «минең өсөн командирым уйлай, һалдат уйламаҫҡа тейеш» тигән немең һалдаты ла түгел. Уйлай белмәгән һалдат — көтөүҙәге мал, көтөүсе сыбыртҡыны ҡайһы яҡҡа шартлатһа, башын эйеп, шул яҡҡа йүнәлә. Яремченкола, граждандар һуғышында ҡатнашһа ла, күрәһең, иҫке һалдат сыныҡыуы ҡалғандыр — уны бит батша армияһында ефрейтормы, фельдфебелме булған тиҙәр...

Был турала әле улар күп тапҡырҙар һүҙ көрәштерҙеләр, Яремченко, уны шаяртып: «Их һин, интеллигенция!» — тип оялтырға, украиндарға хас үҙ һүҙлелек менән өскә сығырға тырышыр һәм һәр бәхәсте: «Атаһынан аҙыраҡ ҡурҡҡан бала булдыҡлы, тәртипле булып үҫә ул», — тип тамамлар.

Ә бына Нурҙың атаһы — Фәтих ағай бер ҡасан да уларҙы туҡмап, ҡурҡытып түгел, хатта ҡаты һүҙ әйтеп тә үҫ-

термәне, ә бит ете бала инеләр... Тормош ауыр... Тимәк, катылыҡ бер ерҙә лә берҙән-бер сара түгел, әммә... бөтә кешене лә йомшаҡлыҡ, ышаныу менән генә лә алдырып булмай икән шул. Нур быларҙы тора-бара аңлар...

Улар Крещатик буйлап ашыҡмай ғына йәйәү киттеләр.

Яремченко Ҡиевты ярата ғына түгел, яҡшы белә лә икән — тарихи әһәмиәте булған һәр бер йорт хаҡында мауығып, ентекләп һөйләне. Крещатиктың арғы осона еткәндә, Фәтихов һул яҡтағы көмбәҙле түңәрәк, ҙур, матур бинаға ҡулын төртөп һораны:

— Был нимә? Храм тиһәң, тәреһе юҡ...

— Былмы? Был «Бессарабка» тип аталған баҙар. Ундай баҙар бөтә Украинала ғына түгел, Союзда ла юҡ. Инәбеҙме?

«Бессарабка», ысынлап та, һоҡландырырлыҡ бина ине. Өс яҡта икешәр ҡатлы тимер ҡапҡалар, тышҡы ҡапҡа рәшәткәле, өҫтөнә осоусы өйрәктәр төшөрөлгән; көмбәҙ түшәм ун алты ҡеүәтле балкаларға «таянған»; ер аҫтында — хужалыҡ бүлмәләре. Тиҫтәләгән өҫтәлдәр артында Тарас Бульбаныҡы шикелле мыйыҡлы ирҙәр, ситтән ҡан сәсрәп сығырлыҡ ҡыҙыл сырайлы, ҙур күкрәкле йыуан ҡатындар. Ә өҫтәлдә нимә генә юҡ! Уңдырышлы украин ере биргән емеш, йәшелсә, һөт-май, ряженка, тимер ырғаҡтарға суҫҡа, һарыҡ түшкәләре, һыйыр, тана боттары эленгән...

— Йә, нисек? — тине Яремченко, ғорурлығын йәшерә алмай.

— Эйе, бындай баҙар Ленинградта ла, Мәскәүҙә лә юҡ.

Теге осоноборап китте.

— Бөтә донъяла ундай баҙар юҡ! Ә еҫе ниндәй? Аромат! Ас көйө инеп, бер аҙ еҫкәп торһаң, тамағың туя. Валлаһи!

«Бессарабкала» бигерәк тә ҙур пуля рәүешендәге янып торған ҡыҙыл борос өйөмдәре, бәйләмдәре күҙгә ташлана. «Эйе, украиндар борос ярата...» — тип ҡуйҙы эстән генә Фәтихов, — ә беҙҙең яҡта боросто өйҙә тәҙрә төбөндә генә үҫтерәләр.

— Бөгөн етеп торор, — тине Яремченко, бер аҙҙан йылмайып. — Яратам мин Ҡиевты. Ата-әсә баш балаһын яратҡан шикелле. Һин уны яҙ көнө — каштандар сәскә атҡан ваҡытта күрһәң икән әле... — Яремченко Фәтиховты ҡултыҡлап алды. — Ә хәҙер киттек беҙгә. Мин һине донъялағы иң тәмле аш менән — украин борщы менән һыйлайым. Әй! Иң яҡшы рестарандарҙа ла уны минең Һаля һымаҡ бешерә алмайҙар. Һаляның үҙ рецебы, үҙ ҡул тәме бар. — Ул Фәтиховҡа ҡарап йылмайып алды. — Ә беҙҙең һорилканы эскәнең бармы? Донъяла унан да ҡеүәтлерәк һәм



Ибраһим Абдуллин Киевта, Днепр ярында. 1978 йыл.

тәмлерәк эсемлек юҡ. Закускаға мариновать ителгән ҡыҙыл борос, сало-шпиг.

Нурҙың күҙҙәре маңлайына менде.

— Ҡыҙыл борос? — Бәләкәй саҡта ҡыштарын йүтәл төшһә, әсәһе ҡыҙыл борос ҡуҙағын сәйгә тығып ала ине лә көсләп эсерә ине, ауыҙ ут кеүек яна, күҙҙән йәштәр аға... Ә Яремченко... «закускаға ҡыҙыл борос» ти... Моғайын, шаярта торғандыр, ҡыҙыл боросто нисек ашайһың инде?..

— Ниңә уйға ҡалдың? — тине Яремченко, ҡапыл телдән ҡалған Фәтиховҡа ҡарап.

— Ә... Юҡ... Киевҡа һоҡланып бөтә алмайым...

— Бәхетле кеше һин, Фәтихов.

— Ниңә улай тиһегеҙ?

— Киевта хеҙмәт итәсәкһең бит.

Яремченконың ҡатыны Галя ҡыҙыл боростай янып торған, күпселек украинкалар шикелле шаҡтай йыуан, мөләйем ҡатын ине.

— Һалочка, таныш бул: яңы взводный. Ә, беләһеңме, ул ҡайҙан? Юҡ, белмәйһең. Башкирия тигән ерҙән. Шундай республиканы ишеткәнең бармы?

Галя юрамал ғына үпкәләгән булды.

— Һин мине кемгә һанайһың? Белеү генә түгел, Злобиндың «Салават Юлаев» романын уҡып сыҡҡандан һуң башҡорттарға... Башҡортостанға ғашиҡмын.

Яремченко шаяртып бармаҡ янаны.

— Кара, Фәтиховҡа ла ғашиҡ булып ҡуйма!

Галя йылмайҙы. Аҡ ваҡ тығыҙ тештәре йылтырап китте, бит остарында, балаларҙыҡы һымаҡ, соҡорҙар пәйҙа булды.

— Ғашиҡ булһам, нишләтерһең, иптәш ротный? Йөрәккә бойороп булмай бит.

— Яҡшы, яҡшы, ихтирам ит, ғашиҡ бул, тик һин беҙҙе үҙеңдең фирменный борщың менән һыйла. Юҡһа мин һинең борщыңды, шифалы ҡулдарыңды маҡтай-маҡтай асығып бөттөм.

— Әгәр борщым иптәш Фәтиховҡа оҡшамаһа?

— Һинең тәмһеҙ аш бешергәнең юҡ, минең Һалочкам.

Галя, күпселек командир ҡатындары шикелле, уңған, етеҙ ҡатын ине. Байтаҡ йылдар командир ҡатыны булып йәшәү уға, хәрби телдә әйткәндә, оперативлыҡ һыҙаты биргән. Ул төн уртаһындамы, таң менәнме һикереп тороп, тревога менән күтәрелгән ирен, кәрәк-яраҡ нәмәләрҙе күҙ асып йомғансы йыйыштырып, казармаға оҙатырға өйрәнгән.

Фәтихов үҙе лә бала саҡтан уҡ ут булды һәм ут һымаҡ янып торған кешеләрҙе яратты ла.

Бына өҫтәлгә закускалар, эсендә ҡыҙыл борос йөҙөп йөрөгән горилка килеп ултырҙы.

— Борщты хәҙер үк килтерәйемме әллә аҙағыраҡмы?— тине Галя, рюмкалар ҡуйып.

— Килтер. Һыуына торһон, — Яремченко Фәтиховҡа ҡарап алды. — Хәҙер мин һине украин халҡының милли эсемлеге менән һыйлайым. Закускаға — мариновать ителгән ҡыҙыл борос... Бәләкәй генә инструктаж. Боросто йотҡас, ауыҙыңды ҙур асып, тәрән итеп тын ал да һыу ҡап. Аңлашылдымы? Аңлашылһа... Һалочка, ултыр. Дуҫлыҡ ошо һорилка һымаҡ ҡеүәтле булһын. Ҡиттек!

— Дөрөҫөн әйткәндә, — тине Фәтихов, ҡулына рюмкаһын алып, — минең, ошо йәшемә етеп, портвейндан башҡа нәмә эскәнем юҡ.

Яремченко бармаҡ янаны.

— Бынан һуң төрлө портвейн, винолярҙы онот. Эсһәң, аҡты ғына эс, эсмәһәң төрлө винолар менән шаярма. Зарарынан башҡа нәмәһе юҡ. Ә хәҙер, ҡапла.

Йылдар үтер, Фәтихов урман юлдары аша Киевҡа ҡасабоҫа барғанда лесничий кардонында Яремченко менән тәүге күнде, тәүге мәжлесте хәтерләп, һағышлы йылмайыр, командирын йөрәктә һулҡылдатырлыҡ һағыныу менән иҫкә алыр. Ул йәнә уның: «Бәхетле кеше һин, Фәтихов, Киевта хеҙмәт итәсәкһең», — тигән һүҙҙәрен хәтерләр.

Юҡ, Киевта хеҙмәт итеп кенә ҡалманы ул, Киев өсөн аяуһыҙ һуғышты һәм йәнен фиҙа ҡылды...

## УН ӨСӨНСӨ НОВЕЛЛА

### «Ҡайҙа мин?»

Капитан Фәтихов һушына бик аҡрын килде...

Баш, төйгөсләп таш тултырылған шикелле, ауыр, умарта күсе һымаҡ геүләй. Тел аңҡауға йәбешкән. Ауыҙ тәмһеҙ... Ул, иренен ялап, йыш-йыш һуланы, әммә уны төрөп алған ниндәйҙер тығыҙ, ауыр нәмә уға тәрән һуларға ирек бирмәй ине. Иплэп кенә, кемдәндер ҡурҡҡандай, әле бер, әле икенсе ҡулын ҡыймылдатып ҡараны — иҫәндәр, ауыртмайҙар; аяҡтарын яҙып бөктө, улар ҙа иҫән, ауыртмай... Шулай булғас, ни эшләп ята ул бында! Торорға итте — баш әйләнде, әммә ҡапыл тын алыуы еңеләйеп китте — уны төрөп алған тығыҙ нәмә юҡ булды. Нимә һуң ул? Кәфен тиһәң, һуғышта кешене кәфенгә төрөп күммәйҙәр... Ҡапшап ҡараны. Нимәлер шыштырланы. Плащ-палатка икән. Плащ-палатканы аса төштө, бармаҡтарға нимәлер сәнселде — плащ-палатка өҫтөнә ҙур-ҙур ҡарағай ботаҡтары ташланған...

Ул, ниһайәт, тороп ултырҙы. Тирә-яғына ҡараны. Тәүҙә бер нәмә лә күрмәне. Күҙҙәрен йомоп асты, ярым ҡараңғылыҡҡа күнекте һәм үҙенең мөһабәт ҡарағай сатыры аҫтында ятҡанлығын аңланы. Баш бармаҡтарын ҡолаҡ тишектәренә тығып ҡыбырлатты — уң ҡолаҡ асылып киткәндәй итте, ә һулы, элеккесә, һаман шаулай ине... Ул үҙе лә аңламаҫтан ҡапшанды: кобура буш, полевой сумка бөтөнләй юҡ ине. Устар гимнастерка кеҫәләрен барланы: ике кеҫә лә буш. Ҡул салбарының медальон һалыр өсөн эшләнгән йәшерен кеҫәһен эҙләне — ул да буш ине. Аңлашыла. Иптәштәре уны үлеккә һанағандар һәм, ағас төбөнә һалып, плащ-палатка менән ҡаплағандар ҙа ҡарағай ботаҡтары өйөп ерләгәндәр.

Рәхмәт үҙҙәренә — теләһә нисек ташлап китмәгәндәр.

Ул ҡарағай ботағына таяныу торорға итте, көсө етмәне, баш аҫҡа тартты. Ҡулға нимәлер йәбеште — ул ҡарағай сайыры ине. Фәтихов, тештәрен ҡыҫып, ағасҡа таянды, көсһәл менән аяҡтарына баҫты һәм шул минутта ҡайҙалыр

ҡарға: «Каррр!» — тип ҡысҡырып ҡуйҙы. Ҡапыл бала саҡ иҫкә төштө: «Әгәр ниначум Низами ҡарға балаһының ауыҙына ҡайнар һурпа һалмаған булһа, моғайын, ул әле лә иҫән булыр ине. Ҡаргалар оҙаҡ йәшәй бит...» Фәтихов ҡарағай энәләрен өҙөп алып ҡапты, сәйнәне — ауыҙҙағы тәмһеҙ тәм юҡ булғандай тойолдо, аҙ ғына хәл кергәндәй итте.

Оҙаҡ баҫып торорлоҡ әмәл юҡ ине — ул ағас төбөнә ултырҙы.

Ҡарағай төбө ҡоро, ҡойолоп төшөп киткән энәләр менән ҡапланған. Ул тырыша-тырыша аҙ ғына әскелтем хуш еҫле сайыр, ҡарағай энәләрен сәйнәп төкөрҙө...

Туҡта, нисек булды һуң әле?

Көньяҡ-Көнбайыш фронтының разведка бүлеге уны етенсе сентябрҙә Ҡиевты яҡын рубеждарҙа һаҡлаусы 37-се армия штабына махсус задание менән ебәрҙе. Әйләнеп ҡайтмаясағын алдан белгән кеүек, унда китер алдынан ҡатынына хат яҙҙы. Хат йылы, өмөтлө юлдар менән тулы ине:

...«Минең сәләмәтлегем өсөн борсолма, Рима, мине хәҙергә үлем алдыра алмай — бөтәһе лә яйлы бара һәм, Гитлерҙың муйынын һындырып, Еңеү таңына барып еткәнсе шулай иҫән-имен булырмын төҫлө тойола. Һуғышта бөтә кешегә лә үлергә тимәгән бит...»

Һәм бына шул хат адресатына барып та етә алманы (был ваҡытта инде Фәтиховтың ҡатыны өс йәшлек ҡыҙы Ида менән тыуған ҡалаһы Елецтан бер туған апаһы янына Алтай крайына эвакуацияланып китеп бара ине), ул икенсе тапҡыр контузия алды.

Беренсеһендә, август урталарында ул, әйтергә яраһа, еңел генә ҡотолғайны — мейеһе бер аҙ һелкенде лә, һул ҡулы тайҙы, ә бына был юлы уны үлек һанап, ерләп киткәндәр...

Ҡиев өсөн ике айҙан артыҡ көнө-төнө тынмаған аяуһыҙ һуғыштар барҙы. Гитлер 8 августа Крещатикта парад планлаштырҙы һәм, парадты үҙем ҡабул итәсәкмен, тип һөрән һалды.

Август килеп етеп, үтеп тә китте, сентябрь башланды, фюрер үҙе, Украинаға килеп, «мөһим күрһәтмәләр» биреп тә ҡараны... Әммә «рус ҡалаларының әсәһе» — Ҡиев бирелергә теләмәне. Фәҡәт Ставканың бойороғо буйынса беҙҙең ғәскәрҙәребеҙ Ҡиевты ҡалдырырға мәжбүр булды.

## АВТОРҘАН

Ә Гитлерга бик ҡиммәткә төштө «рус ҡалаларының әсәһе». Ҡиевҡа алып барыусы һәр бер аҙым юл — «зәңгәр арий

ҡаны» менән һуғарылды, Украина далалары баштарына тәрән каска кейҙерелгән тәреле һалдат ҡәберҙәре менән тулды...

Ул көндәрҙәге ваҡиғаларҙы, геройҙарымдың ниндәй шарттарҙа эшләүен тулыраҡ күҙ алдына баҫтырыу өсөн, мин һүҙҙе мәшһүр полководец Советтар Союзы Геройы маршал Иван Христофорович Баграмянға бирәм. Иван Христофорович «Һуғыш шулай башланды» тигән китабында (Мәскәү, Хәрби нәшриәт, 1971 йыл) шулай яҙа. Ул Киев өсөн барған һуғыштарҙа ҡатнашҡан — Көньяҡ-Көнбайыш фронт штабының оператив бүлеге начальнигы булған.

«...Киев тирәһендәге фашист атакалары айырыуса ныҡышмалы, аяуһыҙ булды. 95-се пехота дивизияһының әсиргә алынған офицеры, ниңә һеҙ, шул тиклем юғалтыуҙарга ҡарамаҫтан, һаман һөжүм итәһегеҙ, тигән һорауға былай тип яуап ҡайтара: «Фюрер яҡын көндәрҙә беҙгә Киевтың ҡапҡаһын асырға бойорҙо. Һәм беҙ уны, бер төрлө югалтыуҙарга ҡарамаҫтан, асасаҡбыҙ!»

Дошмандың ҡоралы, техникаһы, көсө биш, ун тапҡырға артығыраҡ булыуға ҡарамҫтан, ниндәй батырлыҡ, фиҙакәрлек, ғәйрәт менән һаҡланы ул ҡапҡаны Ҡыҙыл ғәскәр!..

Капитан Фәтиховтың һуғышсан эҙҙәрен эҙләп Киевҡа килгән һайын, Днепрҙың бейек текә яры башында урынлашҡан гүзәл, моңһоу паркка барам. Унда мәңгелек дан уты яна һәм парк та Мәңгелек дан паркы тип атала. Бында Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында Киев өсөн, Киевты азат итеү өсөн булған һуғыштарҙа үлгән ҡайһы бер һалдаттар, офицерҙар, генералдар ерләнгән. Һәр береһенең ҡәбере өҫтөнә ҡыйыҡ түбәле ябай ғына мәрмәр йәки гранит тумбочка ҡуйылған, ташҡа соҡоп мәңгелек йоҡоға талған батырҙың хәрби званиеһы, исеме, фамилияһы, тыуған, һәләк булған даталары яҙылған.

Паркты йөрөп сыҡҡас, туҡтап торам һәм башыма шундай өмөтлө уй килә. Бәлки... Алыҫ Ағиҙел ярҙарынан Днепр ярҙарына килеп, туғыҙ ай ҡыл өҫтөндә йөрөп, Киевты, тыуған ҡалаһы шикелле, дошмандан һаҡлап, иҫ киткес батырлыҡтар эшләгән, үлгәндә лә еңелмәй үлгән Башҡортостан егете капитан Фәтиховҡа ла ана шул Мәңгелек дан паркында кескәй генә мөйөш табылыр, тип уйлайым. Һәм ышанам. Украина халҡы изгелекте онота торған халыҡ түгел бит ул...

## Ҡош Юлы буйлап

Төн тынғыһыҙ үтте. Аҙ ғына йоҡлап китһә, йә упҡынға тәгәрәп төшөп, йә танк аҫтында ҡалып, үҙен үҙе атып уянды.

Ҡалтырата. Тамаҡ төбөндә нимәләр ҡыймырлай, йүткергеһе килә, әммә ярамай — ул, усы менән ауыҙын ҡаплап, йөҙ түбән ята. Бронхит — уның күптәнге, педтехникумда уҡығанда уҡ ҡалған, әрһеҙ эйәрсене. Бөрө ҡалаһынан көҙөн йәйәү ҡайтҡанда ҡопма ямғыр аҫтында ҡалып, һалҡын тейҙереп, аҙна буйы ут эсендә һаташып ятҡайны. Ана шунан һуң Фәтиховтың бронхыларында тығыҙ, ҡаты төйөрҙәр тороп ҡалды. Ул ни саҡлы үҙен сыныҡтырырға тырышмаһын: иртән — биленә саҡлы тәнен һалҡын һыу менән йыумаһын, командир булғас — Ҡырымдың эҫе ҡомдарында бер нисә йыл рәттән арҡаһын, күкрәген ҡыҙҙырмаһын, барыбер... ташҡа әйләнгән тыгыҙ төйөрҙәр таралырға, юғалырға теләмәне, гүмерлеккә «иҫтәлек» булып ҡалды.

Тороп йүгерер, һикергеләр ине — хәл юҡ, өҫтәүенә, баш әйләнә, уҡшыта, алыҫта сиркәү ҡаҡҡан кеүек, ҡолаҡ сыңлай.

Ул һөрмәнеп, тирә-яҡтан ҡороған ҡарағай ботаҡтарын, энәләрен йыйып, аҫтына түшәне, плащ-палаткаһына төрөндө, мускулдарын көсөргәнешләндереп, йылынырға тырышты. Таң ата башлағас, урман ҡараңғылығына инеп йәшенергә кәрәк. Йә немецтарҙың трофей командаһына тап булырһың... Юҡ, юҡ, ул теләһә нимәгә риза, ошонда атып китһендәр, тик плен ғына түгел — ниндәй генә шарттарҙа төшмә, плен плен инде...

Ни эшләргә? Ҡайҙа йүнәлергә?..

Уның фани донъяла утыҙ йыл йәшәп быңдай билдәһеҙлектә һәм мөшкөл хәлдә ҡалғаны юҡ ине. Был йөҙә белмәгән кешенең өйөрөлмәлеккә эләгеүе менән бер.

Туҡта, туҡта, ә ниңә йөҙә белмәүсе? Уның бит аяҡ-ҡулы иҫән, тик хәҙергә хәле юҡ та ҡоралы юҡ. Хәл керер, ҡорал табылыр, ҡойолоп төшмә. Өмөтһөҙлөккә бирелмә. Хәтерлә. Хушлашыу барғанда хәрби инженерҙар мәктәбе начальнигы комдив Дубровников һүҙен нисек тамамлағайны? «Һуғышта һис бер уйламаған, башҡа һыймаған ситуацияларға эләгергә мөмкин. Әммә бер ҡасан да, ҡабатлайым, бер ҡасан да, бер ерҙә лә, ҡабатлайым, бер ерҙә лә һеҙ үҙегеҙҙең ҡыҙыл командир икәнлегегеҙҙе онотмағыҙ, юғалып ҡалмағыҙ. Батырлыҡ. Тапҡырлыҡ. Тотанаҡлылыҡ».

Аҡыллы һүҙҙәр.

Ифрат яуаплы һүҙҙәр.

Хәҙер уға иң мөһиме — дөрөҫ ҡарарға килеү. Дөрөҫ... ҡарарға килеү өсөн янында кәңәшсең, һине тәнҡитләүсе кеше булырға тейеш, шунһыҙ йыш ҡына кеше үҙенсә дөрөҫ ҡарарҙы ғөмүмән дөрөҫ тип уйлай һәм хаталана. Ул ярҙамға комдив Дубровниковты, разведка бүлексәһенең начальнигы Шкоданы кәңәшкә саҡырырға булды.

Ф ә т и х о в: Беренсе вариант Көнсығышҡа йүнәлеү. Фронт һыҙығын үтеп сығыу һәм фронт идаралығын эҙләп табыу.

О п п о н е н т т а р: Ә һин фронттың бынан нисә километрҙа икәнлеген беләһеңме? Был хәлеңдә һин бер нисә йөҙ километр үтә алырһыңмы? Яҡшы, үттең дә, ти. Юлда дошман ғына түгел, бик күп тәрән, киң йылғалар бар, һин уларҙы нисек кисеп сығырһың?

Ярай, һин яҡшы йөҙәһең, Днепрҙы ла йөҙөп сығырһың, әммә хәҙер, онотма, сентябрь аҙағы, көҙ. Һинең бронхыларың насар, бөтөнләй йығылыуың һәм тора алмауың бар.

Ф ә т и х о в: Ул сағында көнбайышҡа китергә. Хәҙер ҡамауҙан берәмтекләп, төркөм-төркөм сығыусы ҡыҙыл армеецтар, командирҙар йыш осрай, шуларҙан партизан отряды ойошторормон. Документтарым булмаһа ла, өҫтөмдә командир кейеме, петлицаларымда... — ул бармаҡтарын петлицаларына тейҙереп алды — шпалдар. — Һуғыш башланғас, комсостав тыныс ваҡытта йөрөткән эмаль кубиктарын, шпалдарын йәшкелт һары ҡалайҙан эшләнгән билдәләргә алмаштырҙы, әммә Фәтихов, ниңәлер, хәҙер әйтә алмай инде, пуля һинең петлицаларыңды тикшермәй, яҙған булһа тейә, яҙмаған булһа, янындан үтеп китә, тип төкөрөп ҡарауҙанмы, әллә «йөрәкле» булып күренергә тырышыуҙанмы, шпалдарын ғына түгел, петлицаларын да алмаштырманы.

О п п о н е н т т а р: Ә кадровый командирға, фронт штабы идаралығында эшләгән разведчикка былай эшләү дөрөҫ булырмы? Һин тегендә, фронт штабында, ныҒыраҡ кәрәк түгелме? Һинең файҙаң унда күберәк теймәҫме?

Фәтихов һуңғы дәлилдәр менән килешә төштө. Был дәлилдәр уға көс биргәндәй булды, баш шаулауы кәмегән һымаҡ тойолдо, тын алыуы еңеләйҙе.

Тороп ултырҙы, әммә шунда уҡ күҙ алды ҡараңғыланып китте, тирә-яҡҡа меңләгән зәңгәр йондоҙҙар — осҡондар һибелеп һүнде.

Алға, фронт һыҙығына, табан юл тотҡанда Киевты ҡайһы яҡтан урап үтергә? Төньяҡтанмы? Көньяҡтанмы? Әлбиттә, төньяҡтан. Ни өсөн? Сөнки немец Киевтың көньяғынан айырыуса нык алға үтте — Кременчукты үтеп, һаман алға бара. Көньяҡ-Көнбайыш фронты штаб идаралығы Пирятин ҡалаһы тирәһендә тупланырға тейеш, ә Пирятинға Киевтан, кәм тигәндә, ике йөҙ, ике йөҙ утыҙ километр юл үтергә. Ябай юлдан түгел, дошман тылынан.

Дошман тылы... Әйтергә генә анһат, дөрөҫөрәге, оят, хурлыҡ, күптән түгел генә үҙ ереӊ булған, башыңды күтәреп, күкрәгеңде киреп йөрөгән урындар ҡапыл дошман тылына әйләнә. Һәм һин хәҙер шул ерҙән, төнгө ҡараҡ шикелле, ҡа-

ла боҫа, күләгә һымаҡ, тауышһыҙ-тынһыҙ үтергә тейешһең... Дошман тылы — фашистик Германия ере түгел, ә тыуған илең дошман тылына әйләнгән... Был һүҙ йөрәккә ҡайнар ҡурғаш булып ҡойола, тынды ҡура, ҡанды ҡайната.

Нисек... Нисек былай килеп сыҡты һуң әле? Ҡыҙыл ситсаға аҡбур менән яҙылған лозунгыларыбыҙҙа: «Бер ҡарыш еребеҙҙе лә дошманға бирмәбеҙ», — тип яҙҙыҡ, һуғыш булһа, дошман ерендә һуғышасаҡбыҙ, тип күкрәк ҡаҡтыҡ, хәрби училищеларҙа, академияларҙа гел «һөжүм итеү» тактикаһын өйрәндек һәм ғәскәребеҙҙе, әйтергә яраһа, фәҡәт һөжүм итергә генә өйрәттек, ә бына асылда ике-өс ай эсендә дошман Днепрҙы үтеп китте, Мәскәүгә яҡынлашып бара.

Нисек... Нисек былай килеп сыҡты һуң әле?..

Фәтихов ябай командир ғына түгел, илебеҙҙең иң ҙур һәм ҡеүәтле хәрби округтарының береһендә, уның штабында эшләгән разведчик, бөтәһен дә аңлай, белә, әммә күңеле ҡабул итергә теләмәй, әрнетә, хурландыра...

Ул оҙон ҡолаҡтарҙан ишетеп түгел, ә документтар, һандар — цифрҙар аша белә. Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ илебеҙҙең оборона ҡеүәтен көсәйтер өсөн бөтә көсөн һалды, ленинсы дипломатияның иң аҡыллы һәм нескә варианттарын файҙаланып, агрессияны мөмкин саҡлы кисектерергә тырышты.

Яңы мото-мехчастар төҙөлдө, улар өсөн яңы марка танкылар, самолеттар конвейерға ҡуйыла башланы... Мөмкин саҡлы күберәк автомашиналар, тракторҙар, пушкалар!..

Алдағы һуғыш — моторҙар һуғышы буласағы асыҡ ине, әммә беҙҙең ул моторҙарыбыҙ бик аҙ ине әле, шуға күрә беҙгә тере моторҙарыбыҙҙы — йөрәктәребеҙҙе сикһеҙ күп яндырырға тура килде...

Быларҙың бөтәһен дә капитан Фәтихов белә, аңлай, әммә, астма тотҡанда кислород етешмәгән кеүек, тын ҡыҫыла, һулауы ауыр ине. Сикһеҙ ауыр...

Ауыр булһа ла, тор, аяҡ үрә баҫ, капитан Фәтихов, һинең әле һуғышаһың бар, һинең әле дошмандан үс алаһың бар...

Ул, янында үҫеп ултырған ҡарағайға таянып, көс-хәл менән аяҡ үрә баҫты. Сайҡалып китте, әммә йығылманы, ағасты ике ҡуллап ҡосаҡланы, моронон ҡарағай олононa терәне, тәрән итеп һуланы — ярата ул ҡарағай, шыршы еҫен бала саҡтан уҡ. Ауылы иҫенә төшкән һайын, янғын булған йылды бәрәңге баҡсаһының ситенә ултыртылған биш шыршы күҙ алдына килде. Ҙур, бейек булғандарҙыр инде улар, теге йылды, утыҙ етенсе йылды, һуңғы тапҡыр ауылға ҡайтҡанда уҡ ҡайһылай мөһабәт баҫып торалар ине. Һуғыштан һуң мотлаҡ ҡайтырға кәрәк. Ҡырым, Ҡав-

каз ҡасмаç, ә бына тыуған ауылыңды һин онотмаһаң да, ул һине онота башлаясаҡ...

Фәтихов ҡарағай сайыры буялған бармаҡтарын еçкәп, ялап ала, йәшел энәләрҙе һыҙырып ала ла ҡабып сәйнәй, хәлләнгәндәй була, ҡулдарын ағастан ала, ағас сатыры аша күккә ҡарай һәм ҡапыл уға рәхәт булып китә — сикһеҙ алыçлыҡтағы сикһеҙ һандағы йондоҙҙар, бала саҡтағы шикелле, шаярып күҙ ҡыçышалар һәм: «Ҡапитан, беҙ һине кисәнән бирле күҙәтеп торабыҙ, һин яңғыҙ, ярҙамсыһыҙ түгел, ҡойолоп төшмә, туғарылма», — тип уны рухландыралар, дәртләндерәләр ине. Фәтихов: «Аңланым һеҙҙе», — тип йылмайғандай итте.

Йондоҙҙар, йондоҙҙар, күптән һеҙҙең менән аралашырға, уртаҡ тел табырға хыялланған ғәҙел дуçығыҙҙы ташламағыҙ, уға дөрөç, тура юл күрһәтегеҙ...

Фәтихов алпан-толпан атлап, бер нисә аҙым китте, хәлһеҙләнеп, йәнә ағасҡа барып тотондо — быныһы йәш, әле «биле» лә нығынмаған ҡарағай ине, ул ҙур ғына ботаҡты һындырып алды — юлда энәләре кәрәк буласаҡ.

Ана шулай, яңы тәпәй йөрөй башлаған бала һымаҡ ауатүнә атлап, ул кескәй генә аҡланға барып сыҡты. Ултырҙы. Йәнә күккә күҙ ташланы. Шаян, ғәмһеҙ йондоҙҙар... Күрәһең, йондоҙҙар донъяһында һуғыш та үлтереш тә юҡтыр, ә бына Йыһан киңлегендә юғалып ҡалған кескәй генә планетала — Ерҙә кешеләр тыныша, һыйыша алмайҙар, өҙләкһеҙ боғаҙлашалар, ҡан ҡойошалар, бер-береһен үлтерешәләр, башҡа илдәр, башҡа халыҡтар иçәбенә еңел тормош эҙләйҙәр...

Фәтихов Ҡош Юлын эҙләп тапты.

Йәнә бала саҡ, сикһеҙ бәхетле саҡ, хәтергә килә.

...Туҙан еçе аңҡып торған йылы йәйге баçыу юлы. Нур ат менгән. Көнө буйы эшләп арыған ат башын эйеп талғын ғына атлай, тик, «бараһы ергә барып етәбеҙме әле?» тигәндәй, һирәк-мирәк бышҡырып ҡына ҡуя. Ә Нурҙың күҙҙәре күктә. Уның шаян йондоҙҙар менән серләшкеһе, уларға әкиәт һөйләгеһе килә. «Атай, — ти ул бороломай ғына, ат янынан атлап килеүсе кешегә, — күктә нисә йондоҙ бар икән?» «Күп, улым, күп, — ти атаһы ғәмһеҙ генә, бөтөнләй башҡа нәмә тураһында уйлап, — млиун, млиун...» Нурҙы был яуап ҡәнәғәтләндермәй. «Атай, ә анауы ҡыш көнө Бөрә өçтөнән күтәрелгән аҡ томан шикеллеһе нимә ул?» «Улмы? Ул Ҡош Юлы тип атала». «Ә ниңә уны Ҡош Юлы тип йөрөтәләр? Ҡоштар шул юлдан йылы яҡҡа китеп, урап ҡайталармы ни?» Атай кеше тиҙ генә яуап бирмәй. «Ул былай... халыҡ телендә генә Ҡош Юлы тип йөрөтөлә, ә, дөрөçөрәге, Батырҙар юлы ул...» Нур ҡапыл атын туҡтата:

«Ҡрр...» Атаһына боролоп ҡарай. «Батырҙар юлы?» Атаһы уға төшөндөрә. «Кем дә кем Тыуған иле, туған халҡы өсөн һәләк була, шуларҙың йөрәктәре, күкрәктән ҡош булып осоп китеп, күккә аша, йондоҙ булып балҡып тора...» Нур был матур әкиәткә ышана ине...

Ҡош Юлы — билдәһеҙ галактиканан килгән йондоҙҙар балҡышы! Киев тирәһендәге ҡара урманда яңғыҙы тороп ҡалған Фәтиховҡа юл күрһәтегеҙ... Аҙашмаҫлыҡ юл. Яңылышмаҫлыҡ юл. Берҙән-бер дөрөҫ юл...

Ҡапыл ошо минутта Фәтиховтың башына үтә тәүәккәл һәм үтә хәтәр уй килде: әгәр... туп-тура Киевҡа юл тотҡанда? Дошман тырнағынамы? Юҡ, тырнағына түгел, тырнаҡтарын һурып алырға.

Был уй уның күңелен балҡытып ебәргәндәй булды, әйтерһең, ул өйрөлтмәктән ҡалҡып сыҡты ла һыу ағышына ҡаршы йөҙә башланы — ә һыу ағышына ҡаршы йөҙөү ауыр ғына түгел, йөҙөүсе кешегә көс һәм ғәйрәт тә бирә.

Хәл иттек...

Аныҡма, капитан Фәтихов, ныҡлап, бөтә плюстарҙы, минустарҙы иҫкә алып уйланыңмы?

Уйланым!

Фәтихов, әйтергә яраһа, тыумыштан уҡ сит телдәр өйрәнергә һәүәҫ булды һәм телдәр, быны аңлағандай, уға еңел бирелделәр. Мари ауылдары яҡын булһа ла, ул заманда, хәҙерге шикелле, тығыҙ бәйләнеш, аралашыу юҡ ине, әммә Нур бик иртә мариса һупалай башланы, ә торабара еңел һөйләшергә өйрәнде. Бөрөлә ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул рус телен генә түгел, сит немец телен дә «йүгәнләне».

Немец теле уҡытыусыһы: «Геноссе Фәтихов, һин Берлин диалектында һөйләшәһең, Берлинда тыуып үҫмәгәнһеңдер бит?» — тип шаярта торғайны. Шаян һүҙгә Фәтихов та шаярып яуап ҡайтарҙы.[1] «Юҡ, геноссе Федор Иванович, мин Берлиндан саҡ ҡына бирерәк, Мишкә яғында, тыуып үҫтем».

Фәтихов немец телен техникумдан киткәс тә өҙлөкһөҙ камиллаштырырға тырышты, ә Ленинградта хәрби мәктәптә уҡығанда инде, ул үҙе иптәштәренә лә немец телен өйрәтте.

Уның немец телен бик яҡшы белеүе, юғары класс радислығы, фотографлығы күҙситендә тороп ҡалманы, юғарғы командованиеға ла барып етте. Уны үҙәк аппараттан килгән белгестәр «энә күҙенән» үткәрҙеләр. Өлкән лейтенант Фәтихов бөтә яҡтан да килә ине: күҙгә ташланып тормаусы Урта Европа кешеһенә оҡшаған ҡиәфәт — тиҙ генә уның ниндәй милләт вәкиле икәнлеген билдәләп тә бул-

май, немец телен һыу кеүек эсә, тик ҡайһы бер һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә тырышып «көсәнә», ә был контрразведчиктарҙы ғына түгел, «шымсылыҡ психозы» менән ағыуланған рядовой немецты ла һағайтыуы, шикләндереүе бар. Уға бер нисә ай ваҡыт бирҙеләр — немец милләтенән булған белгес менән немец телен тағы ла камиллаштырырға, ә асығыраҡ әйткәндә, «боҙа» төшөргә. Фәтихов нимәлер һиҙенде, оҙаҡламай үҙенең биографияһында ҡырҡа боролош буласағын аңланы шикелле, әммә ул имтихан алыусыларға аҙ ғына ла белдермәне. Кәрәк тапһалар, үҙҙәре әйтерҙәр, әйтмәһәләр, ваҡыты еткәс, билдәле булыр.

Фәтихов был имтихандан һуң немец телен, әйтергә яраһа, бөтә күҙәнәктәре менән өйрәнә башланы, Римаға ла гел немецса өндәште, теле асылып, һүҙҙәрҙе көлмәй түҙә алмаҫлыҡ итеп ватып-емереп һөйләшкән Иданы ла немецса өйрәтте. Рима: «Нур, ташла әле шул эт ырылдауына оҡшаған фашист телен, улай иткәнсе, ҡыҙыңа йә инглиз, йә француз телен өйрәт», — тип иләп тә, асыуланып та әйтеп ҡараны, әммә Нур үҙенекен итте: «Фашистар килер ҙә китер, ә немец халҡы, немец теле ҡалыр».

Дөрөҫ, уҡытыусы булған булһа, Фәтихов инглиз йәки француз телен дә шулай ихлас өйрәнер ине.

Һәм бына уның ун биш йәшенән бирле түҙемлеге етеп, мауығып үҙләштергән һөнәрҙәре юҡҡа сыҡманы, бер нисә ай һәм, кем белә...

Был уйҙар Фәтиховҡа дәрт һәм дарман бирҙе: ул аҙымдарын йышайтты, башта геүләү түгел, еңеү маршы иштелә башланы: «Тореодор, тореодор, помни, что тебя ждет любовь и... победа...» Ул эленән-әле бая һындырып алған ҡарағай ботағының энәләрен өҙөп ала ла ашыҡмай ғына сәйнәй — был асығыуҙы ла бөтөргәндәй итә, көс тә бирә һымаҡ. «Тореодор, тореодор, помни, что тебя ждет любовь...»

Ул күккә ҡарап ала. Әле һыуынырға өлгөрөп етмәгән сентябрь күге, алыҫтан күренгән төнгө ҡала уттары һымаҡ үҙенә йәлеп итеп тора ине.

Киттек, йондоҙҙар, миңә юлдаш булығыҙ, миңә эйәрсен булығыҙ...

«Тореодор, тореодор, помни, что тебя ждет любовь...»

Ә мөхәббәте уның бәхетле булды. Дөрөҫ, күпселек тәүге мөхәббәттәр шикелле, уның да беренсе мөхәббәте һағышлы һәм үкенесле бөттө, әммә ул Римаға өйләнеүенә үкенмәй. Рима уны бәхетле итте. Рима уның бөтә яҡшы-насар яҡтарын дөрөҫ аңлай һәм дөрөҫ баһа бирә белде. Дөрөҫ, әле һаман да, инде нисә йылдар үткәндән һуң да, «Ғәлиәбаныу» пьесаһын ҡуйыу, ҡарағусҡыл зәңгәр август төнө

күңелдән барып етә алмаҫлыҡ сикһеҙ алыҫ мөйөшөндә, Орлары йылғаһының төбөнән бул-бул итеп торған кескәй генә шишмәләр шикелле, йөрәкте елкендереп ҡуйғылай. Ғәҙәттә, тәүге мөхәббәтте яҙ күркә менән сағыштыралар. Был дөрөҫ тә, түгел дә. Яҙ күрке үҙенең тәүге сәскә булыуы менән кешеләрҙе ни саҡлы шатландырмаһын, иҫертмәһен, әммә башҡа, унан күп күркәмерәк, оҙонораҡ ғүмерле сәс-кәләр барлыҡҡа килгәс, онотола, хәтерҙән юғала, ә тәүге мөхәббәт... аҙаҡ йәһәннәм ғазаптары килтергән мөхәббәт утында ян, ғүмергә тигеҙ, бәхетле йәшә, ә беренсе мөхәб-бәт, анауы алыҫ йондоҙҙар шикелле, һине сәйерләндереп, ашҡындырып, йәшәртеп йәшәй бирә. Бәлки, беренсе мөхәб-бәттең ҡыҫҡа ғүмерле һәм үкенесле булыуы ла хәйерле-лер...

## УН ДҮРТЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Ҡайҙа юл тоторға?..

Ул көндөҙөн урманда йәшенеп ултырҙы. Тирә-яҡ тын булһа, емеш-еләк эҙләп, буш ҡорһағын тултырырға тырышты. Тамаҡ туйманы, әммә хәл кергәндәй итте. Төндәрен, йондоҙҙарға ҡарап, ориентир алып, бер генә арба һыйырлыҡ тар, соҡор-саҡырлы урман юлынан көнсығышҡа ынтылды.

Ике көн, дөрөҫөрәге, ике төн шулай барғандан һуң, ҡараңғы төшкәс, ағастар араһынан шырпы уты һымаҡ яҡтылыҡ күренеп китте, һәм шунда уҡ йөрәктә лә өмөт уты тоҡанды. «Бәлки, уның шикелле ҡамауҙан сығыусы кеше тәмәке көйрәткәндер? Юҡ, булмаҫ, ҡамауҙан сығыусы улай һаҡһыҙ ҡыланмаҫ...» Ул ут күренгән яҡҡа йүнәлде. Туҡтап, тыңлап торҙо. Тауыш-тын юҡ. Ут йәнә күренде. Юҡ, был тәмәке көйрәтеүсе уты түгел ине.

Бер аҙҙан Фәтихов кескәй генә аҡланға барып сыҡты һәм аҡлан уртаһында яңғыҙ торған бейек, ҙур ағас йортто күрҙе. Тәҙрәләр ҡаҡҡас менән ҡапланған, тик ниндәйҙер ярыҡтан ғына һарғылт яҡтылыҡ ергә төшә.

Йорт шаҡтай бейек ҡойма менән әйләндереп алынған. Шик юҡ, был урман кордоны ине...

Ни эшләргә? Инергәме, юҡмы? Кем йәшәй был яңғыҙ йортта? Уны нисек ҡаршы алырҙар?..

Шым ғына килеп, ҡоймаға ҡолағын ҡуйып торҙо — тынлыҡтан башҡа нәмә ишетелмәне... Ни эшләргә? Инергәме, юҡмы? Ә нимәй ни эшләйһең, был кейемдә Киевка

кереп булмай бит... Ул бәләкәй ҡапҡаның ауыр тимер божраһын уңға-һулға борғолап ҡараны, ҡапҡа асылманы, тик эстән ҡалын эт тауышы ғына ишетелде: «Һоу-һоу!..» «Овчарка!» тип уйланы Фәтихов. Өйҙәге ут шунда уҡ юҡ булды. Фәтихов йорт ҡаршыһына килеп: «Әй, өйҙә кем бар? Асығыҙ әле!..» тип һаҡ ҡына һораны. Өй тынлыҡ менән яуап бирҙе. Фәтихов үтенесен ҡабатланы. «Иптәштәр... Асығыҙ әле... Мин окружениенан сығып киләм... Контужен...» Ут йәнә күренде. Бер аҙҙан болдор ишеге ашыҡмай ғына асылды. «Пират! Туҡта!» — тигән ҡарлыҡҡан тауыш ишетелде. Эт, хужаһының бойороғона буйһоноп, тынды. Аяҡ тауыштары ҡапҡа янына яҡынлашты. «Һеҙ нисәү?» — «Яңғыҙым ғына». — «Алдамайһыңмы?» — «Алдаһам, индермәҫһегеҙ». Бәләкәй ҡапҡа асылды. «Ин!» — «Рәхмәт! Хәйерле кис...» — «Ҡайҙан хәйерле булһын инде...» — тип мығырланды ҡапҡа асыусы. Бәләкәй ҡапҡа ябылды, шалт-шолт бикләнде. Фәтихов, үҙе лә аңламаҫтан, өҫтөнә ҡаплаған плащпалаткаһын төҙәтеберәк ҡуйҙы, усы менән яңағын һыйпап алды — ҡырынмағанға нисә көн үткәндер, битте һаҡал баҫҡан. «Ҡыҙыл командир, ә ниндәй ҡиәфәттә кеше күҙенә күренәһең...» Болдорҙан күтәрелгәс, ул йәнә төҙәтенеп алды. «Нисек тә меҫкен, йәлләткес булып күренмәҫкә...»

Хужа өй ишеген асты һәм: «Просимо!» — тине. Инеү менән күҙгә ташланған нәмә иҙәнгә ҡуйылған аяҡлы лампа ине.

— Именлек был йортҡа! — тине Фәтихов инеү менән.

— Шулай булһын, — тине ҡарт күңелһеҙ генә.

Фәтихов хужаға ҡарап алды. Украиндарға хас оҙон кәүҙә, киң күкрәк, аҡыллы ҙур һоро күҙҙәр. Юҡ, былары әллә ни иҫтә ҡалырлыҡ түгел, ә бына остары аҫҡа һалынып торған мыйығы хас Тарас Шевченконыҡы...

Фәтихов плащ-палаткаһын систе. Хужа, уның петлицаларындағы шпалдарҙы күреп, турая төшкәндәй итте.

— Аҫһыҙмы, иптәш командир?

— Тәүҙә ҡырынам.

— Ҡырыныу ҡасмаҫ, бында ҡыҙҙар юҡ, тәүҙә тамаҡ ялғағыҙ... Яңаҡтарығыҙ яңаҡҡа йәбешкән бит. — Ул кухняға инеп китте.

Фәтихов ҡайышын сисеп, итектәрен, гимнастеркаһын һалыуға, хужа һабын, кескәй генә ҡыл бумала, бритва һәм һыулы көрөшкә килтерҙе, лампаның филтәһен күтәрә төштө, комод өҫтөнән алып, аяҡлы түңәрәк көҙгө ҡуйҙы. Ул быларҙың бәтәһен дә һүҙһеҙ генә эшләне. Күренеп тора — көтөлмәгән төнгө ҡунаҡ уны әллә ни шатландырмай ине. Фәтихов йылы һыуға бумаланы манып алды ла битен сылатты, бритваны футлярынан алды. Был шаҡтай ныҡ

ынылған, һары һөйәк һаплы бритва ине. Бритваға крокодил төшөрөлгән, ниҙер яҙылған. Фәтиховтың бритваға иғтибар итеүен күҙәтеп торған хужа өндәшмәй түҙә алманы.

— Былярҙыҡы, — тине ул, Киев яғына башын ҡыйыштайтып. — Ун бишенсе йылда «тел» итеп алып ҡайтҡан немец офицерының «бүләге»...

— Һеҙгә лә улар менән боғаҙлашырға тура килдеме ни?

— Был юлы ла боғаҙлашырға ине лә, ҡарсыҡ... Икенсе йыл инде ята-тора ғына йөрөй...

— Ә ҡайҙа һуң әле ул?

— Йоҡо бүлмәһендә. Йылы һөт эскәс, бөгөн иртә йоҡлап китте...

Фәтихов шытыр-шытыр ҡырынғанда, хужа өҫтәлгә, һарымһаҡ еҫе аңҡып торған сало-шпиг, ҡыҙыл борос, һуған, һалҡын бәрәңге һәм эсендә бер нисә ҡыҙыл борос йөҙөп йөрөгән араҡы килтереп ҡуйҙы.

Ҡырынып, йылы һыуға манып сылатылған таҫтамалды битенә тотоп алғас, Фәтихов үҙен бөтөнләй башҡаса тойҙо — хәҙер ул ҡамауҙан сығыусы, дөрөҫөрәге, теге донъянан ҡайтып килеүсе меҫкен бер кешегә түгел, һуғышсан командирға оҡшай ине.

Хужа араҡыны ике йөҙ грамлы ҡырлы стакандарға мөлдөрәмә итеп һалды ла үҙенекен ҡулына алды.

— Просимо! Үҙемдеке.

Фәтиховтың, ете йыл Украинала йәшәп, быңдайҙы эскәне юҡ ине.

— Ғәфү итегеҙ, һеҙгә нисек ололап өндәшергә?

— Батя, тиегеҙ. Мин бит һеҙгә атай булырлыҡ кеше.

— Яҡшы, мин һеҙгә, Тарас Григорьевич, тиермен, — тип йылмайҙы Фәтихов.

Хужаның мыйыҡтары һелкенеп ҡуйҙы, ялбыр ҡаштар астындағы күҙҙәре йылтыраны.

— Ә ниңә Тарас Григорьевич?

— Мыйығығыҙ Шевченко мыйығына бигерәк ныҡ оҡшаған бит.

Был сағыштырыу уға оҡшаны ахыры, һоро күҙҙәр тағы ла йылырак йылмайҙы.

— Шул мыйыҡ ҡына оҡшамаһа... — Ул стаканлы ҡулын Фәтиховҡа табан һуҙҙы.— Хай живе наша батківщина!

— Хай живе!

Улар сәкәштереләр ҙә эсә башланылар. Буравичка шунда уҡ тамаҡты ҡурып алды — ул, кәм тигәндә, илле градуслы ине. Фәтихов бер аҙ йотто ла стаканын өҫтәлгә ҡуйҙы. Хужа риза булманы.

— Эсеп бөтөрөгөҙ ҙә ныҡлап ашағыҙ.

Фәтихов һиҙеп тора: быны эсеп бөтөрһә, иҫерәсәк, әммә хужаның хәтерен ҡалдырырға теләмәне, тәрән һулап алды ла стаканды ҡаплап ҡуйҙы.

— Һууу... Ҡаты... — Ул маринованный ителгән борос сәйнәргә тотондо. Ҡапыл ауыҙ утҡа әйләнде, маңлайға тир бәреп сыҡты... — Минең бер ҡасан да шул саҡлы эскәнем юҡ ине...

— Ныҡлап ашағыҙ ҙа ятып йоҡлағыҙ, иртәнгә яңынан тыуғандай булырһығыҙ. Ай, онотоп торам, тоҙланған ҡыяр ҡуймағанмын да...

— Рәхмәт, рәхмәт, бында ашарға етерлек.

— Сало тоҙлаған ҡыярһыҙ аш түгел ул... — Хужа соланға сығып китте.

Буравичка үҙенекен эшләне — кәйеф күтәрелеп китте, ул үҙен дошман тылында, яңғыҙ урмансы йортонда түгел, Өрьяҙыла атаһы янындағы шикелле хис итте, өҫтәүенә, йорт хужаһы үҙен «батя» тип әйтергә ҡушты...

Хужа өҫтәлгә бер эмаль тәрилкә ҡыяр килтереп ҡуйҙы. Улар бөтәһе лә бер калибрлы — ПТР патроны саҡлы, бөрсөклөләр ине. Ҡайһы береһенә укроп, ҡарағат япрағы йәбешкән — ашамаҫ ерендән ашарһың.

— Просимо! Ашағыҙ.

— Ә үҙегеҙ?

— Ә мин һеҙ килер алдынан ғына ашағайным.

«Таҙа ҡарт. Бер стаканды ҡаплап ҡуйҙы, ә бер күҙенә лә сыҡманы... Үҙенә нисә йәш икән? Атайымдан өлкәнерәкме, кесеме? Туҡта әле, ә уның атаһына нисә йәш һуң? Етмеш алтынсы йылды тыуған... Тимәк... алтмыш биш...»

— Батя, ә һеҙгә нисә йәш? — тине ул, эсендәгеһен тышына сығарып.

— Аҙаҡ, аҙаҡ... Ныҡлап ашағыҙ ҙа ятып йоҡлағыҙ. Урынды мейес башына йәйәйемме?

— Мейес башына? — Фәтихов йылмайҙы. Уның бик күптән, бала сағынан бирле, мейес башында йоҡлағаны юҡ ине. Бер нисә төндө көҙгө урманда үткәргәндән һуң мейес башы уның өсөн иң йомшаҡ түшәктәрҙән дә ҡәҙерлерәк тойолдо.

— Ҡайҙа теләһәгеҙ, шунда йәйегеҙ, батя... Әллә иҫерҙем инде?..

— Сәй бирәйемме? Әле һыуынырға өлгөрмәгән...

— Рәхмәт, мәшәҡәтләнмәгеҙ... Һалҡын һыуығыҙ булһа... эсәм дә ятам...

Ул, ни саҡлы арымаһын, буравичка парҙары башын томаландырмаһын, таң һарыһы менән һиҫкәнеп уянып китте. Тәүҙә ҡайҙа икәнлеген аңламайыраҡ ятты, ҡулы йомшаҡ, йылы нәмәгә тейҙе — был бесәй ине. Фәтихов ипләп

нөнә уны һыйпаны ла тороп ултырҙы. Әсе тәмәке — самосад төтөнө танауға бәрелде, кемдер быуылып йүтәлләне, кемдер һукранды: «Шул төрөпкәнде таң тишеге менән һурмаһаң...» Был — ҡатын-ҡыҙ тауышы ине. Фәтихов мейес башынан мөмкин саҡлы шым ғына төшөргә тырышһа ла, һиҙҙеләр.

— Ниңә шулай иртә торҙоң, иптәш командир?

— Йоҡо туйҙы, батя.

— Тартаһыңмы? Дөрөҫ, самосад.

— Тартам. Тик тышҡа сығып...

— Ултыр, ултыр. Ҡарсыҡ тәмәке төтөнөнә күнеккән инде. Тартҡанымды белеп миңә кейәүгә сыҡты бит.

Фәтихов, тәҙрә ҡапҡасы ярығынан төшкән яҡтылыҡта газета ситен ҡыйпып алып, тәмәке төрөп көйрәтте.

— Ҡаты...

— Ә мин йомшаҡ нәмәләрҙе яратмайым.

— Шулай ҙа мин сығайым әле.

— Әләйһә, әйҙә, икәүләп. Пират уянып өрә башлар...

Сентябрь таңы иҫ киткес тын ине. Ҡоштар ҙа, урман да таң йоҡоһона талған, хатта ҡороған ботаҡтың һынып төшкән тауышы ла ишетелмәй.

— Ғәжәйеп тынлыҡ...

Күрәһең, хужа ла тынлыҡҡа һоҡланып торғандыр.

— Әйтерһең, һуғыш та юҡ, үлеш тә юҡ... — тине ул, көрһөнөп.

— Батя, бынан Киевҡа нисә километр?

— Киевҡамы... Оло юлдан барһаң, егерме биш, урман юлынан артығы менән утыҙ булыр...

— Батя... — Фәтихов уның беләгенән тотто. — Юҡмы иҫке-моҫҡо кейемең?

— Минеке һиңә ҙурыраҡ булыр, ә бына улымдыҡы...

— Ә ул ҡайҙа?

— Ә ҡайҙа булырға тейеш... Берҙән-бер малай... Ике ай инде хаты-хәбәре юҡ...

— Ә бында почта киләме ни?

— Һуғышҡа саҡлы юл уңайында аҙнаға бер-ике һуғылып китә торғайнылар...

— Инәбеҙме? Һалҡынса ел иҫеп китте. Октябрь етеп килә шул...

Улар башҡа ятманылар, залда шым ғына гәпләштеләр.

— Үҙең ҡайһы яҡтан?

— Уралдан. Башкириянан.

— А-а... Башҡортмо ни?

— Шулай тип әйтерлек...

— Теге һуғышта беҙҙең ротала Өфө губернаһынан бер һалдат бар ине... — Хужа төрөпкәһенә йәнә тәмәке тулты-

ра башланы. — Ә һин ниңә Киевҡа... аждаһа ауыҙына бармаҡсы булаһың әле?

Фәтихов тиҙ генә яуап бирмәне. Осраҡлы бер кешегә серен сисә алмай бит инде.

— Шулай кәрәк, батя, шулай...

Хужа төпсөнмәне.

— Улайһа, ике-өс көн ял итеп ныҡын да, үҙенде ат менән илтеп ҡуйырмын.

— Ике-өс көн торорға ярамай, батя. Киевты алыу шатлығынан иҫергән немецтар айнығансы, миңә ҡалаға инеп, халыҡ араһында «юғалырға» кәрәк.

— Уныһы ла дөрөҫ...

Улар шул көндө иртән бричкаға пар ат егеп, һоло, уның өҫтөнә, кешегә күренерлек итеп, һуған, борос тейәп юлға сыҡтылар. Хәҙер Фәтиховты таныштары түгел, Римаһы ла тиҙ генә танымаҫ ине: башында күҙҙәренә төшөрөп кейелгән билдәһеҙ төҫтәге иҫке фитр эшләпә, ең остарынан мамығы күренеп торған фуфайка; кизе-мамыҡ салбар; үксәләре ашалып, ҡыйығая төшкән ботинка. Ул был кейемгә төрөнөп алғас, ишек алдында йөрөп тә ҡараны — нисек кенә булмаһын, армияла оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән кешенең атлап йөрөшө, ҡиәфәте хәрби булмаған кешеләрҙән айырылып тора, ә тишеп ҡараусы гестапо эттәренең һиҙенеүе бар, шуға күрә Фәтихов йөрөшөн дә үҙгәртергә тырышты — ауыл кешеләренсә тубыҡтарын бөгә төшөп, киң-киң атланы, ҡулбаштарын бәүелдерҙе, өҫкә йәки ситкә ҡарағанда бер күҙен ҡыҫа төшөп, ауыҙын асты, ҡолаҡ артын, ҡорһағын ҡашып алды — бына хас «утыҙ туғыҙлы» кеше инде. Быны күҙәтеп торған батя ла түҙмәй: «Ну, артист!» — тип көлөп ҡуйҙы.

Батяға көнөн урап ҡайтырға кәрәк ине, шуға күрә ул оло юлға сыҡҡансы (ә ул мөмкин саҡлы оло юлға сығырға тырышманы) аттарын ҡыуҙы ла ҡыуҙы; һикәлтәле тар урман юлында дыңғыр-дыңғыр барыуы еңел түгел ине, бәлки, шунлыҡтандыр, улар әллә ни һөйләшмәнеләр. Батя бер-береһенә бәйләнмәгән төрлө һорауҙар бирҙе. «Да-а... Та-ак», — тип кенә яуапланы. Ә Фәтихов урман юлынан барғанда үҙенә легенда — ялған биография уйлап барҙы. Легенда дөрөҫлөккә яҡын булырға тейеш, шул сағында башҡалар ғына түгел, үҙең дә уға ышанаһың... Исеме Николай. Башҡортостанда йәшәүсе немецтар хәҙер балаларына йыш ҡына рус исемдәре ҡушалар. Атаһы Фридрих, фамилияһы... Бранд — Бөрө педтехникумында немец телен уҡытҡан уҡытыусының фамилияһы. Башҡортостандың Благовар районында тыуған, әммә атаһы ул бала саҡта уҡ Ағиҙел ярында урынлашҡан боронғо сауҙагәрҙәр ҡалаһы

Һөнәргә күсеп киткән. Техникумда немец телен уҡытҡан. Атаһы уны ла уҡытыусы итергә теләгән, Николайҙың бөтә ҡыҙыҡлы машина, техника булған, Өфөгә китеп механиклыҡҡа уҡыған. Аҙаҡ Свердловскиға барып, инженерлыҡҡа уҡырға дәрте булһа ла, ҡапыл атаһын ултырталар, «халыҡ дошманы» тигән ярлыҡ тағалар. Николайҙы, диплом алырға бер нисә ай ҡалғас, техникумдан һөрәләр. Өфөлә үҙенә урын таба алмаҫлығын аңлап, ул башҡа өлкәгә — Силәбегә китә. Заводҡа эшкә урынлаша. Сәмләнеп, йәнен-тәнен биреп эшләй, әммә милләтенең немец булыуы уға күп кенә ишектәрҙе шапылдатып яптыра. Уның йөрәгендә Совет хөкүмәтенә көндән-көн асыу йыйыла; ни өсөн бер ғәйепһеҙ атаһын Себергә ебәргәндәр? Ни өсөн бер ғәйепһеҙгә уны ситкә тибәләр, гел шикләнеп, ҡырын күҙ менән ҡарайҙар?..

Ул Сталинға хат яҙа. Яуап килмәй. Бәхеткә ҡаршы, Гитлер һуғыш башлай. Николай һуғыштың беренсе көнендә үк фронтҡа ебәреүҙе һорап ғариза яҙа. Ҡайҙа... «Эшләгән ерендә эшләй бир», — тип кенә яуап бирәләр. Шунан ул хәйлә эҙләй башлай һәм таба. Уның ҡанында әсәһе яҡлап татар ҡаны ла бар, етмәһә, ул бала саҡта татар малайҙары менән аралашып үҫте, шуға күрә татарса яҡшы белә. Бер оло ғына танышына ул аһ-зарын һөйләй (бәхеткә ҡаршы, ул да татармы, башҡортмо булып сыға). Теге оҙаҡ ҡына уйланып ултыра: «Бранд, ә һин паспортыңды юғалта алаһыңмы?» Николай аптырап ҡала. «Ниңә?» — «Паспортыңды йәшер ҙә вокзалға бар. Хәрби комендантҡа әйт: «Мин фәлән ваҡытта киткән эшелондан тороп ҡалдым, зинһар, миңә үҙ эшелонымды ҡыуып етергә, бер ҙә ҡыуып етеп булмаһа, башҡа берәй хәрби эшелонға «тығып» ебәрегеҙ, тип ялын». — «Әгәр комендант быға ышанмаһа? Дезертир йәки... унан да насарыраҡ, шпион тип уйлаһа?» Танышы йәнә уйға ҡалды. «Яҡшы, вокзалға мин дә барырмын. Ул минең менән күрешеп, хушлашып китер өсөн рөхсәт һорап төшөп ҡалғайны, тип әйтермен. Ә инде яңы урында үҙеңде нисек теләйһең, шулай яҙҙыр. Урыҫ, татар, башҡорт, сыуаш...»

Шулай итеп, ул фронтҡа эләгә. Киев өсөн барған оборона һуғыштарында, ҡамалыуҙан файҙаланып, ҡойроғон һыртына һала — үҙ часынан ҡасып, урманда тороп ҡала һәм бына — ул Киевта.

Фәтихов үҙе уйлап сығарған биографияһынан үҙе ҡурҡып китте, әйтерһең, уны дегеткә буяп ташланылар, әммә... башҡа сара юҡ ине.

Ниһайәт, улар асфальт шоссеға килеп еттеләр.

Ул боҙ киткән ваҡыттағы яҙғы йылғаны хәтерләтә ине: көнсығышҡа ағылыусы автомашиналар, танкылар, пушка-

лар, бричкалар һәм башҡа техника менән тулғайны. Уларға юл ситенән генә барырға мөмкин булды. «Күпме техника уларҙа, — тип әрнеп ҡуйҙы Фәтихов, — бөтә Европаны таланылар шул...»

Киевты алыу шатлығынан, рус ҡышы еткәнсе, «блицкригтың» тантаналы тамамланыуына ышанған немецтар еңеү хәмеренән иҫергәйнеләр — уларға әллә ни иғтибар ҙа итмәнеләр, тик һирәк-мирәк кенә ауыр йөк машиналарына тейәлгән һалдаттарҙың ҡайһы берҙәре, баҫа төшөп, эткә һөйәк ташлағандай, колбаса һыныҡтары, икмәк ҡатыһымы ырғытып, һаһылдап көлдөләр...

Фәтихов, шартлар хәлгә етһә лә, асыуын тыйҙы, үҙен мөмкин саҡлы тыныс тотто, хатта һалдаттар ташлаған «күстәнәстәрҙе» ҡулдарын һуҙып һауала тоторға тырышты, башын һелккән булды, ҡул болғаны. Был үтә түбәнселек ине, әммә шунһыҙ мөмкин түгел — разведчик яҡшы артист та булырға тейеш.

Батя мығырланды, аты-юлы менән һүгенде: «Ҡешнәгеҙ, кешнәгеҙ, беселгән айғырҙар... Һеҙ ун һигеҙенсе йылда ла үҙегеҙҙе Украинаға ғүмерлеккә килгән яулаусылар шикелле тотҡайнығыҙ, ә табанығыҙҙы ялтыратҡанығыҙҙы һиҙмәй ҙә ҡалдығыҙ...»

Фәтиховтың йөрәген йәнә шикләнеүҙәр, икеләнеүҙәр өйкәй башланы: Киевта ҡалырға булып, һин төҙәтә алмаҫлыҡ хата эшләмәйһеңме? Был берҙән-бер дөрөҫ юлмы? Һин бит унда алты йылдан артыҡ хеҙмәт иткән кеше. Дөрөҫ, хәрби кешеләр, ғәҙәттә, штатскийҙар менән бик аҙ аралаштылар, әммә миллионға яҡын халыҡ йәшәгән ҡалала бер генә кешенең булһа ла танып ҡалыуы бар... Әгәр ул кеше хыянатсы булып, гестапоға саҡһа?..»

Бричка тәгәрмәстәренең ҡылтыр-ҡылтыр тәгәрәүе уның шикләнеүҙәрен-икеләнеүҙәрен тапап-иҙеп киткәндәй була. Бүренән ҡурҡҡан урманға бармаҫ, ти... Фронтта ла аҙым һайын, минут һайын үлем һағалап тора бит... Юҡҡа борсоғолар, ҡайҙа үләһемде белһәм, түшәк йәйеп ҡуйыр инем, тимәгән. Хәл ителгән, икеләнергә ярамай. Икеләнеү — тәүәкәллектең дошманы...

Дошман тылында, подпольела, һуғышыр өсөн батырлыҡ, ҡыйыулыҡ ҡына етмәй, һалҡын ҡанлылыҡ, тапҡырлыҡ, хәйлә, маска, сикһеҙ түҙемлелек тә кәрәк. Был ғына ла түгел. Иң хәтәре... дошман ҡулына эләгергә тура килһә, бөтә ғазаптарҙы кисереп, ир-егет булып ҡала белеү...

«Һиндә бармы ул һыҙаттар, капитан Фәтихов? Гестапо ҡулына ҡапһаң, аҙаҡ үкенмәҫһеңме?..» «Ҡит, китегеҙ, икеләнеүҙәр, шикләнеүҙәр. Хәл ителгән. Ни булһа ла яҙғанын күрермен...»

Фәтихов, кисә кис лесник өйөнә ингәс тә, ҡараңғылы-яҡтылы лампа уты яҡтыһында китап кәштәләренә иғтибар иткәйне, әммә ҡарттың һирәк-мирәк әйтелгән һүҙҙәренә ҡарап, әле уның интеллектуаль кимәлен аңлап булмай ине, ә бына иртән тәмәке тартырға сыҡҡас, ул көтөлмәгәндә бер нисә һорау бирҙе һәм Фәтихов уның ағас-үҫемлектәрҙән, йәнлектәрҙән башҡа нәмәләр менән ҡыҙыҡһынмаусы урман бүреһе түгеллеген аңланы. «Ишетеүемә ҡарағанда, беҙҙең ғалимдар һеҙҙең Өфөгә күсеп киткән, ти...» Йәнә бер аҙҙан: «Яҙыусылар ҙа, шул иҫәптән минең яратҡан шағирым Максим Рыльский ҙа, Өфөлә икән...», «Ә һеҙҙең Каневта, Гарас Григорьевич Шевченко ерләнгән урында, булғанығыҙ бармы?».. Ҡапыл профессионал һорау. «Башҡортостанда нисә миллион гектар урман бар?» Фәтихов белгәненсә яуап бирҙе. «Урман... алты миллион гектарҙан артыҡ булырға тейеш... Хәтеремдә шулай ҡалған...» — Ә айыуҙар күпме?», — «Күп, тиҙәр, әммә беҙҙең яҡта осратҡаным булманы. Ҡариҙел (уны картаға Уфимка тип яҙалар) тирәһендә бар, унда тайга...»

Ә бына немец һалдаттары тейәлгән автомашиналар үтеп киткәс, батя көрһөндө лә Фәтиховты аптыраушта ҡалдырырлыҡ һорау бирҙе.

— Бына һеҙ капитан... ҙур начальник...

Фәтихов ҡулбаштарын йыйырҙы.

— Ҡайҙа инде — генерал!

— Миңә шуны аңлатып бирегеҙ...

Ҡалғаны аңлашыла: ул батяның ни һораясағын белеп тора. «Ни эшләп әле беҙ был көнгә төштөк? Ҡыҙыл Армияны донъялағы иң көслө, еңелмәҫ армия, тип йөрөй торғайныҡ бит...»

Һуғыш башланғандан бирле Фәтиховҡа был һорауҙы хәрби булмаған кешеләр ауыҙынан ғына түгел, ҡыҙыл армеецтарҙан, командирҙарҙан да күп ишетергә тура килде. Хатта өсөнсө июлдә радионан Сталин сығыш яһап, Гитлерҙың ни өсөн ваҡытлыса уңыштарға ирешеүен аңлатып биргәндән һуң да бик күптәрҙең күңеле тынысланманы — ниндәй генә аҡланыу һүҙҙәре эҙләмә, сигенеү барыбер сигенеү ине инде...

Ә батя иһә бөтөнләй көтөлмәгән һорау бирҙе.

— Бына һеҙ әйтегеҙ әле — немец ниндәй халыҡ?

Фәтихов, көтөлгән һорау булмағас, иркен һулап ҡуйҙы.

— Ниндәй... тип герман милләте кеүек ҙур, боронғо халыҡ тураһында бер һүҙ менән генә баһа биреп булмай... — тине ул, шаҡтай аумаҡай яуаплап.

Батя ҡәнәғәтләнмәне.

— Уныһы шулайын шулай... Ә бына дөйөм алғанда... һәр халыҡтың да үҙенә генә хас милли сифаты була бит...

— Дөйөм алғанда... герман халҡы донъя цивилизацияһына бик күп бөйөк ғалимдар, философтар, шағирҙар, композиторҙар биргән боронғо ҙур милләт...

— Тырыш милләт, уңған милләт тә... — тине батя. — Әле революцияға саҡлы минә немецтар колонияһында эшләргә тура килде. Ә... Улар эшләргә яраталар. Тәртип, тәүәккәллек, йыйнаҡлыҡ — уларҙың ҡанына һеңеп үтеп сыҡҡан. Төшкө аш ваҡыты етһә, сәғәтенә күҙ һала ла, ергә тыҡҡан көрәген тартып алмай, эшен ташлап китеп бара. Ә ниндәй һаҡсыл, ваҡсыл һәм... нисек әйтергә инде? Иҫәп-хисап яратхан халыҡ! Һәр тине иҫәптә, бер ҡап шырпы алһа ла яҙып ҡуйыр, мал тиҙәген генә түгел, кешенекен дә әрәм итмәҫтәр...

Беҙҙең хохолдар, бөтөнләй сит кеше килеп керһә лә, өҫтәлгә горилка, тоҙлаған ҡыяр килтереп ултыртыр, горилкаһы булмаһа, мөгәрәнтән һалҡын һөт ҡуйыр, ашаған ваҡытҡа тура килһәң, һинең ай-вайыңа ҡарамай, өҫтәл артына етәкләп ултыртыр. Ә немец... «Беҙ ашап бөткәнсе, ана шунда газета-журнал ҡарап ултырығыҙ», — тип ашауын дауам итер. Аллам һаҡлаһын, улар беҙҙең шикелле, таныш булмаған кешенән берәй папирос йәки шырпы һораһа! Немец бер тин өсөн иманын һатырға әҙер. Бер йотом һыу өсөн дә һуңғы тинендә тартып алыр... — Батя аттарын ҡыуаланы. — На-а, малҡайҙар, беҙгә бит әле урап ҡайтаһы ла бар. Ә былай, — тип фекерен дауам итте ул, — беҙҙең украин ауылдары менән сағыштырғанда, уларҙың местечколары, әйтергә яраһа, ожмах: урамдар, ишек алдары тел менән ялап алғандай, таҙа, һәр ерҙә бөхтәлек, ә баҫыуҙарында бер ҡый үләне күрмәҫһең... Урожайҙы беҙгә ҡарағанда икешәр тапҡырға күберәк ала торғайнылар...

Ә бына шул эшлекле, культуралы, тәртипле, әйтергә яраһа, бик аҡыллы халыҡҡа ни етмәй? Ниңә ул халыҡ, ҡоторған эт шикелле, күршеләрен тешләргә генә тора? Ярты Европаны ҡанға батырҙы бит. Ә беҙҙең илгә бер ғүмер эсендә генә икенсе тапҡыр ташланды. Ярай, элек төрлө Македонскийҙар, Ганнибалдар, Сыңғыҙ хандар, чорт с ними, әйҙә һуғышһындар ҙа ти инде, заманы тип әйтәйемме, шулай булған — ул саҡта хәҙерге шикелле дәүләттәр ҙә, ил сиктәре лә шартлы булған, ә хәҙер... Неужели, был Гитлер, беҙҙең һыртҡа менеп атланып, беҙҙе ҡол итеп аҫрарға самалай икән? Хрен! Нимә, ул беҙҙе Бельгияға, Францияға тиңләйме? Хрен!..

Фәтихов тарих менән бик иртә мауыҡты — мәктәптә уҡығанда тарих китаптарын, ниндәй генә ҡалынлыҡта бул-

маһын, уҡыманы, һыу шикелле «эсте», ә техникумда, Ленинградта уҡығанда, башы китапханаларҙан сыҡманы. Гитлер власка килгәс, бигерәк тә «Георгий Дмитров процесынан һуң», Германияның «биографияһын» боронғо замандарҙан — Рим империяһына ҡаршы һуғыша башлаған осорҙан алып ентекләп, ҡайһы сағында конспектлап, өйрәнде һәм ныш ҡына үҙ-үҙенә һорау бирә торған булды: «Ни етмәй был халыҡҡа?»

О был һорауға бер һүҙ менән генә яуап биреүе еңел түгел. Ысынлап та, бәлки, уларға ер етмәгәндер? Улай тиһәң, борон-борон замандарҙа немецтар, һиндтар, ҡытайҙар шикелле, күп һанлы халыҡ булмаган һәм уларға үҙ ерҙәре кинәнеп йәшәргә мөмкинлек биргән. Шулай булғас?.. Бәлки, һуғыш, кеше үлтереү немец халҡының ҡанындалыр?.. Юҡ, юҡ, был ҡот осҡос сифатты бөтә халыҡҡа ла япмайыҡ.

Батя Фәтиховты йыуатҡандай итә.

— Фриц ун һигеҙенсе йылда ла Хрещатикта хужа булып, ата ҡаҙ һымаҡ ҡуҡырайып йөрөгәйне, аҙаҡ табанын инсек ялтыратҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. — Батя йәнә Фәтиховтың уйҙар теҙмәһен дауам итте. — Их, иптәш Тельман иректә булһа... Ихтимал, Гитлер былай ҡотора ла алмаҫ ине... — Ә һин, иптәш капитан, — тине батя, Киевҡа яҡынлашҡанда, — ҡойолоп төшмә. Яңы йылға беҙ фрицты Берлинға саҡлы ышырып алып китәсәкбеҙ.

Фәтихов һуғыштың улай тиҙ бөтмәйәсәген аңлай, белә, ләкин иртәме-һуңмы еңеүҙең барыбер беҙҙең яҡта буласағына тамам ышана ине.

— Ә мине ата-әсәйем бер ҡасан да ҡойолоп төшмәҫкә, өмөттө өҙмәҫкә өйрәтте, батя, — тине ул, ышаныслы итеп.

— Во! Ата-әсәйең аҡыллы кешеләр икән. Мин үҙем дә теге һуғышта, граждандар һугышында, ниндәй генә хәлдәргә эләкмәнем... Ике тапҡыр дошман ҡулына ҡаптым, әммә барыбер танауымды һалындырманым, күшеккән тауыҡҡа әйләнмәнем. Ҡастым. Тотолдом. Эттәй туҡмалдым, хатта бер рәт фриц мине аяҡтарымдан аҫып та тотто, ләкин барыбер бирешмәнем, тағы ҡастым... Бына, күреп тораһың, аллаға шөкөр, етмешкә етеп киләм. Ҡарсыҡ сирле булмаһа, был һуғышта ла фриц менән боғаҙлаша инем...

Алыҫҡа атыусы пушка таҡҡан тракторға ултырған баҡыр сәсле, күҙлекле бүкән боролоп, рус һүҙҙәрен вата-емерә: «Эй, старик, мой игрушка твой лошадка привяжи!» — тип ҡысҡырҙы һәм үҙ «тапҡырлығынан» үҙе иһаһайлап көлдө.

Батя яуапһыҙ ҡалманы.

— Ә һин минең бричканы... теге ереңә тағырһыңмы?

Күҙлекле бүкән аңламағанымы, асыуланмағы, тағы ла ныҒырак ақырып көлдө.

— Һеҙ артыҡ ҡыйыу, — тине Фәтихов батяға.

— Ә мин үҙ өйөмдә. Хужа бер ҡасан да ҡунағынан ҡурҡмай. Улар саҡырылмаған ҡунаҡтар. — Батя Фәтиховҡа табан боролоп әйтте. — Башымды киҫмәгә бирәм, барыбер Гитлер Сталинды еңә алмаясаҡ. Улар теге һуғышта газ да ҡулланып ҡаранылар. Йөҙ егерме километрға атыусы «Берта» тигән пушка уйлап сығарҙылар, ә һөҙөмтә? Барыбер үҙҙәрен өңдәренә ҡыуып ҡайтарҙылар. Әле лә шулай буласаҡ, — ул баяғы һүҙҙәрен ҡабатланы.— Сталин Гитлерҙың муйынын бороп ырғытасаҡ. Беҙҙең эшебеҙ хаҡ, һуғышабыҙ — ғәҙел, изге һуғыш. Ә донъяла, иртәме-һуңмы, барыбер хаҡлыҡ, ғәҙеллек еңеп сыға. Быны һеҙгә иҫбат итәһе юҡ, һеҙ тарихты яҡшы белергә тейеш. Кешелек тарихында бер генә агрессор ҙа мәңгелек еңеүгә ирешмәгән, ун, йөҙ, биш йөҙ йылдан һуң булһа ла, хурлыҡлы еңелгән.

Фәтихов һоҡланыуын йәшерә алманы.

— Һеҙ, батя, лесник ҡына түгел, философ та.

— Ә ниңә лесник философ булмаҫҡа тейеш әле? — Ул аттарын ҡыуа төштө. — На-а, малҡайҙар. Беҙгә урап ҡайтырға ла кәрәк бит әле...

Улар ҡалаға Пуша-Бодица яҡлап керҙеләр.

Киев... Киев... «Рус ҡалаларының әсәһе»... Һинең Крещатигың, Тарас Шевченко бульвары, София соборың, Андрей сиркәүең, Богдан Хмельницкий майҙандарың ғына түгел, синһеҙ боронғо шәжәрәңдең башы — Подол, уның ус төбөндәге һырҙар шикелле урамдары ла күңелгә яғымлы... Ә текә ярҙарыңды, утрауҙарыңды, Дарницаның аҡһыл һары пляждарын йыуып ағыусы «һирәк ҡош осоп сығырлыҡ» Днепрың...

О, Киев! Россияла гүзәл урындарға, яр баштарына, диңгеҙ буйҙарына ултырған ҡалалар аҙ түгел, әммә Киев һымаҡ тағы башҡа ҡала юҡтыр...

Ә хәҙер ниндәй икән һин, Киев?

Ҡала сите башланды.

Украиндарға ғына хас бөхтә бер ҡатлы кескәй генә ағас, саман йорттар теҙмәһе. Күбеһенең стеналары аҡбурға буялған. Һәр ишек алдында — емеш баҡсаһы. Ҡөҙгө алмалар ҡыҙарып бешеп, тирә-яҡҡа хуш еҫ аңҡытып тора. Шул секундта уҡ Фәтиховҡа алыҫ Бөрө ҡалаһы, Башҡортостанда дан тотҡан алма баҡсалары иҫенә төшө.

Күп кенә йорттарҙың тәҙрә ҡапҡастары ябыҡ, әллә хужалары дошмандан ҡасып күсеп киткән, әллә «саҡырыл-

мағаи ҡунаҡтарҙы» күрергә теләмәй, «күҙҙәрен йомғандар».

— Тррр... Ҡайҙа, ниндәй урамға йүнәлмәксе булаһың? — тине батя, аттарын туҡтата төшөп.

— Һаман да уйлап бөтөрә алмайым әле...

— Һин бит, ғаиләм Киевта, тигәйнең.

— Алданым мин һеҙҙе, батя, ғәфү итегеҙ. Киевта минең бер кемем дә юҡ. Ғаиләм июль башында уҡ күсеп киткән.

— Ула-ай... — Батя бойорған шикелле әйтте. — Киттек «Бессарабкаға».

Фәтихов тәүҙә аңламайыраҡ торҙо, әллә уйҙарына бирелеп, ишетеп етмәне.

— Ҡайҙа?

— «Бессарабка» баҙарына. Ихтимал, унда минең таныштарым осрар. Борос, һуғанды юҡҡа алдыммы ни мин...

«Бессарабка...» Фәтиховты бынан ете йыл элек рота командиры Яремченко (ҡайҙа икән ул?..) алып килгәйне. Баҙар шау-шыуынан бигерәк (шау-шыуһыҙ баҙар буламы ни!) үҙенә генә хас еҫе, прилавкаларға тау-тау итеп өйөлгән емеш-йәшелсәһе, айырыуса ҡыҙыл борос сүмәләләре, бейек көмбәҙ аҫтында осоп йөрөүсе, тимер балкаларға ҡунып гөрөлдәүсе күгәрсендәре, һатыусыларҙың алдына килеп ултырыусы әрһеҙ сиған балаларын хәтәрләтеүсе турғайҙары менән уны һоҡландырғайны. «Бессарабка» башҡа баҙарҙарға ҡарағанда иң «киммәт» баҙар булһа ла, Фәтихов ял көндәрендә Римаһы менән гел ошо баҙарға йөрөнө...

— Ә ул баҙар эшләйме һуң? — тине Фәтихов, батяның тәҡдиме менән килешеп.

— Һы! — Батяның күкрәгенән һөрөм сыҡҡандай булды. — Тараҡан, ҡырғаяҡ ҡасан ярыҡтан сыға? Төндә. Ә хәҙер Украина өсөн төн килде. Беҙҙең украин халҡы — горур халыҡ. Үҙ ере, үҙ теле өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Әммә һәр халыҡта ла ҡәбәхәттәр була. Ишетеүемә ҡарағанда, Степан Бандера, фрицтың ылауына ултырып, Киевҡа килеп тә еткән, ти. Әлеге лә баяғы «Самостийна Украина». Россиянан айырылып, Германияға ҡушылғас, самостийна буламы? Бына күр ҙә тор, батя әйткән ине тиерһегеҙ. Бандера ла кеше ҡапҡаһы төбөндә ҡатҡан эт һымаҡ дөмөгәсәк...

Баҙар янындағы майҙанға килеп еткәс, батя аттарын туҡтатты.

— Һин ултырып тор, мин баҙарҙы әйләнеп сығам.

— Ҡәрәкмәй, — тине Фәтихов, бричканан һикереп төшөп. — Баш төртөр урын таптым инде.

Батя ла бричканан төштө.

— Ихтыярың... Әйтмәһәң дә, Киевҡа ниңә килгәнеңде һиҙеп торам. Киевты азат иткәс, мине юллап тап. Ә минең исемем, ысынлап та, Тарас, тик Григорьевич түгел, ә Остапович, ә фамилия... — Ул йылмайҙы. — Молибога. Алланан иҫән-һау ҡалыуыңды ялбарам.

— Рәхмәт, Тарас Остапович. Һеҙ минең атайым шикелле... Иҫ киткес кеше, — ул ҡулын һуҙҙы.

— Фрицҡа бер көн дә, бер сәғәт тә тыныслыҡ бирмәгеҙ.

— Тырышырбыҙ, — тине Фәтихов, йылмайып.

— Хуш, — тине Фәтихов башҡортса.

— Ә ни тигән һүҙ ул?

— Һеҙҙеңсә, до побачения.

— До побачения! Һуғыштан һуң кейемеңде килеп алырға онотма. Һаҡлармын.

— Онотмам.

Улар дүрт ҡуллап хушлаштылар.

Фәтихов, ниһайәт, хәл итте — ул Поздняктарҙың ишеген ҡағасаҡ. Яңылышмаһа, Крещатиктың башында, дүртенсе һанлы өс ҡатлы йорттоң... икенсе ҡатында йәшәйҙәр. Индерергә тейештәр. Ваҡытлы булһа ла, мөйөш бирергә тейештәр...

Июль урталарында Фәтиховты фронттан ҡапыл Киевҡа ҡайтарҙылар (уның ғаиләһе Елецҡа — Риманың тыуған ҡалаһына күсеп киткәйне инде). Махсус группаға ул Оборона йортонда лекциялар уҡыны: дошман лазутчиктарына, парашютистарына ҡаршы көрәшеү, шпиондарҙы танырға, тоторға өйрәнеү һәм, тура килһә, дошман тылында эш итеү, шулар араһында әле егермеһе яңы ғына тулған Даша Поздняк та бар ине. Ул Сталин исемендәге судоверфтә медсестра булып эшләй икән. Буласаҡ партизандар араһында дошманды сәйнәп ташларға әҙер торған үткер, сая, ут ҡыҙҙар аҙ түгел ине, әммә Даша Поздняк шул «ут ҡыҙҙар» араһында ла зәңгәр нур һибеп тороусы ҙур ягымлы күҙҙәре, ер кешеләренә хас булмаган сибәрлеге менән айырылып тора ине. Өйләнгәндән бирле башҡа ҡатын-ҡыҙға бер ҡасан да күҙе төшмәгән Фәтиховтың йөрәге ҡапыл ҡурылып китте. (О, ҡатын-ҡыҙ сибәрлеге! Таштарҙы — ҡамырға, турғайҙы бөркөткә әйләндереүсе илаһи көс!) Лекциянан һуң (ә лекциялар эштән һуң, кис менән, була торғайны) ул Дашаны оҙата китте һәм ҡайтҡанда үҙен үҙе битәрләп барҙы: иблес батыр ирҙәрҙе дөрөҫ юлдан сығарып боҙорға теләһә, һылыу ҡыҙҙар һүрәтенә инер, ти. Дөрөҫ, Даша һылыу һүрәтенә ингән иблес түгел, ә изге эш өсөн башын балта аҫтына ҡуйырға әҙер торған комсомолка, әммә...

Ә Даша Киевтамы икән? Завод менән бергә көнсығышка күсеп китмәгәнме? Хәйер, күсеп китһә лә, уның апаһы Юля һәм үҫмер ҡустыһы Петя өйҙә булырға тейеш...

Бынан ете йыл элек ул тәү тапҡыр Киевҡа ашҡынып, ирһып килеп кергәйне; өҫтөндә энәнән-ептән сыҡҡан яңы шинель, шығырлап торған портупеялы киң ҡайыш, ҡара петлицаларҙа арҡыры-торҡоро ҡуйылған сүкеш менән көрәк төшкән эмблема һәм икешәр кубик: һул яурында — командирҙар сумкаһы, плашетка, уңда — кобура.

Ә хәҙер... ул клоун ҡиәфәтендә, ҡоралһыҙ, документһыҙ. Билдәһеҙ бер кеше... Уға шундай күңелһеҙ, әсе тойолдо был донъя, юҡ, әсе генә түгел, хурлыҡлы. Бәлки, теге мөһабәт ҡарағай аҫтында мәңгелеккә ятып ҡалған булһаң, яҡшыраҡ булған булыр ине. Ашыҡма, үлергә ашыҡма, ашыҡма, капитан Фәтихов, үлергә бер ҡасан да һуң түгел. Үлгәнсе, мөмкин саҡлы күберәк дошманды үлтерергә кәрәк.

Уның юлда осраған бер немец офицерын быуып үлтергеһе килде... Хатта ул турая төштө, йөрөшөн үҙгәртте һәм... эмоцияға бирелеүенә сәмләнеп, аҫҡы иренен тешләп алды. Ашыҡма, ашыҡма, капитан Фәтихов, бөтәһенә лә сират етер. Тотанаҡлылыҡ — подпольщик өсөн иң мөһим һыҙаттарҙың береһе.

Бассейн урамын үткәс, ул туҡтап торҙо. Башына ғәҙәттән тыш ҡыйыу, дөрөҫөрәге, сая уй килде. Уйҙар, уйҙар...

Карл Либкнехт урамында йәшәгәндә, ул эшкә йыш ҡына Бассейн урамынан йөрөй торғайны, шуға күрә аяҡтар унға йүнәлде.

Париж коммунаһы урамында кескәй генә бүлмәлә бер нисә йыл йәшәгәндән һуң, уларҙы «киңәйттеләр» — Киевтың иң гүзәл мөйөштәренең береһенә — Карл Либкнехт урамына күсерҙеләр. Дөрөҫ, ун бер квадрат метр өс кешегә «ҡола ялан» түгел ине, әммә йорттоң, урамдың, баҡсаның гүзәллеге кескәй бүлмәне лә ҙур итеп күрһәтте. Командование уға ике бүлмәле квартира вәғәҙә иткәйне, ләкин... Гитлер ҡаршы төштө.

Фәтихов урамдың икенсе яғынан ғына булһа ла үҙҙәренең тәҙрәһенә ҡарарға теләне, әйтерһең, тәҙрә төбөндәге гөлдәргә уның Римаһы һыу һибеп йөрөй, ә ҡошсоғо Ида тәҙрә төбөнә баҫҡан да кескәй генә бармаҡтарын йәйеп, быялаға йәбешкән — уның ҡайтҡанын һағынып көтөп тора.

...Улар «осраҡлы» таныштылар. Юҡ, осраҡлы түгел. Юҡҡа, яратҡан йөрәктәр ғүмер буйы бер-береһен эҙләйҙәр һәм иртәме, һуңмы табышалар, тимәйҙәр бит.

Рима Борисоглебскиҙа автодорожный техникумды тамамланғандан һуң, армияла хеҙмәт итеүсе ағаһы янына

Кингисеппҡа барғайны. Был ваҡытта Фәтиховтың ағаһы Варис менән Риманың ағаһы бер часта хеҙмәт итәләр ине. Нур отпуск ваҡытында бер нисә көнгә ағаһы янына килгәйне. Элек яусылар ҡыҙға — кейәү, егеткә кәләш эҙләгәндә, һиндә көмөш булһа, миндә алтын бар, тип «тауарҙарын» маҡтағандар. Риманың ағаһы менән Нурҙың ағаһы уларҙы алтын-көмөшкә тиңләп маҡтанышманылар, ә: «Әйҙә йәштәрҙе таныштырабыҙ!» «Әйҙә, бәлки...» — тинеләр ҙә көндәрҙең береһендә уларҙы осраштырҙылар. Аҙаҡ Варис менән Поля еңгә Нурҙан һорашты. «Йә, нисек? Оҡшанымы?» Нур һүҙһеҙ генә йылмайҙы. «Ниңә йылмаяһың? Оҡшаманымы ни?» — «Ҡакрас», — тине Нур. «Нимә какрас? Ниңә борғаланаһың? Оҡшамаһа, һиңә бәйләп таҡмайҙар ҙа». — «Хәрби халыҡ йыш күсеп йөрөүсән була бит, — тине Нур, — ә Рима кеҫәгә һалып йөрөтөрлөк ыҡсым ҡатын буласаҡ». Тегеләр һаман төшөнөп етмәнеләр: «Был хуплаумы?» — «Былмы, — тине Нур, серле йылмайып, — какрас...»

Бер йылдан утыҙ бишенсе йылдың октябрендә Киевта улар яҙмыштарын бәйләнеләр. Туй яһап торманылар. Юҡ, взвод командиры Фәтиховтың, техник Пешехонованың туйлыҡ ҡына аҡсалары бар ине, әммә... «Яратмайым шаулы туйҙарҙы. Эш туйҙа түгел, туйҙан һуңғы тормошта»,— тине Фәтихов. Рима, мин дә шулай уйлайым, тип башын уның күкрәгенә ҡуйҙы. Ә шулай ҙа туғыҙ метрлы кескәй генә бүлмәгә өс-дүрт пар бер-береһенә терәлешеп, ҡыҫылышып ултырҙы. Бөтәһе лә Нурҙың хеҙмәттәштәре ине. Тәүҙә символ өсөн «кояш эсемлеге» — шампанский эселде, унан ҡанды уйнатыр өсөн горилка йотолдо һәм төн уртаһына саҡлы йырланылды: русса, украинса. Аҙаҡ Нурҙың йырлауын һоранылар. Нимә йырларға икән, тип аҙ ғына уйланып торҙо ла, «Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәйҙе» дәртләнеп, ашҡынып йырланы. Хатта йыр аҙағында, һүҙҙәрен әйтмәй генә, уға башҡалар ҙа ҡушылды. Йырлап бөткәс, кемдер тост әйтте. «Йыр өсөн! Ғүмерегеҙ йыр кеүек матур үтһен!..»

Тәмәке тартырға баҫҡыс майҙансығына сыҡтылар. Нурға ҡапыл яманһыу булып китте, кемдер йөрәкте ҡыҫып алды. «Фирҙәүескәй» уны тыуған ауылына, тәүге мөхәббәтенә, «киске уйындарға» алып ҡайтты... Иртәме, һуңмы, был сәғәт килергә тейеш ине — хәҙер уға егерме биш... хатта егерме алтыға сыҡты, ә шулай ҙа йәшлек менән хушлашыу кояш байығанды ҡарап тороу менән бер икән... Хәйер, өйләнеү әле йәшлек менән ғүмерлеккә хушлашыу тигән һүҙ түгел, яҙ артынан һиҙҙермәй генә йәй килә, ә йәйҙең үҙ йәме, үҙ күркәмлеге бар... Тик көҙө генә ашығып килмәһен... Һағыштар тәмәке төтөнө менән бергә осоп кит-

телар ҙа бөттөләр, тәнәфестән һуң улар йәнә рәхәтләнеп йырлашылар, шаян тостар әйтештеләр. Күктәр һәм күңелләр болотһоҙ ине...

Фәтихов, үҙенә иғтибарҙы йәлеп итергә тырышмай, тәжрибәле, зирәк күҙҙәре менән күҙәтеп бара. Киев шул уҡ та шикелле, бөтөнләй таныш булмаған ҡала кеүек тә... Бигерәк тә Крещатик һуғыш нужаһын күп күргән — йорт аралаш харабалар, теге йәки был стенаһы ишелеп төшкән, түбәләре ҡайырылып осоп киткән йорттар. Иҫән ҡалғандары ла күҙҙәрен соҡоп алған кешеләрҙе хәтерләтәләр — йылмайып тороусы тәҙрәләр урынына быялаһыҙ, рамһыҙ уйымдар ғына. Урам кирбес ватыҡтары, штукатурка ярсыҡтары, цемент, саң менән тулған. Мөһабәт каштандар, платандар, йүкәләр урталайға һынған, ҡабыҡтары һуйылған, ә бер каштан, һуғышҡа, яуызлыҡҡа үс иткәндәй, икенсе тапҡырға сәскә ата башлаған... Бындай күренеш бик һирәк була.

Ғәҙәттә, бындай ваҡытта Киевта саф, «әбейҙәр сыуағы» һауаһы була торғайны, ә әле ул күңелде болғатҡыс төтөнөҫ, көйөк, саң еҫтәре менән тулған. Бәлки, йорттарҙан, ағастарҙан да бигерәк кешеләрҙең үҙгәреүе йөрәкте айырыуса әрнетәлер — улар бер-береһенә күтәрелеп ҡарамайҙар, һуғышҡа саҡлы булғанға ҡарағанда шәберәк йөрөйҙәр: йөҙҙәрен күҙгә күренмәҫлек ҡара һөрөм ҡаплап алған. Ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә оло йәштәгеләр, ҡоймаларга, стеналарға, тумбаларға йәбештерелгән белдереүҙәр ҡаршыһында туҡтап торалар ҙа, баштарын сайҡап, көрһөнөп, ауыҙ эстәренән мығырланып, юлдарын дауам итәләр. Урам уртаһынан һалдаттар тейәгән, кузовтары брезент менән ҡапланған ҙур автомашиналар өҙләкһеҙ үтә. Һалдаттар боғаҙҙарын йыртырҙай итеп аҡырып йырлайҙар. Күбеһе сержант Хорст тураһындағы йырҙы аҡыра. Фәтиховтың сержант Хорст хаҡында ишеткәне бар. Аҙғын, иҫерек баш, уйнашсы, әхлаҡ нормаларына төкөрөп биргән тип ул, ә Гитлер армияһы шул әҙәм аҡтығы хаҡындағы йырҙы, әйтергә яраһа, «Һалдат гимны» итеп алған...

Крещатик. Киев хаҡында һөйләгәндә, Крещатикты иҫкә алмай мөмкин түгел. Киевта тәү тапҡыр булған кешенән беренсе һорау итеп: «Ә Крещатикта булдыңмы?» — тип һорайҙар.

Крещатик әллә ни оҙон да түгел — күп тигәндә, бер километр булыр, иҫ киткес бейек йорттар ҙа юҡ: урамдың ике яғы буйлап төрлө төҫтәге брезент козыреклы магазиндар, кафелар, ресторандар, кино-театрҙар урынлашҡан.

Урам иртә таңдан алып төн уртаһына саҡлы шау-гөр килеп тора. Буш ваҡыты булһа, Киев кешеһе нисек тә Крещатик буйлап ҡыҙырынып йөрөргә, уның шау-шыуына ҡолаҡ һалырға, магазин витриналарына күҙ йүгертергә, кафеһына инеп, берәй шәшке кофемы, ҡатыраҡтымы эсеп сығырға тырыша. Ҡыҫҡаһы, Крещатик Киевтың көндәге ине.

Ә әле... Танырға мөмкин түгел һине, Крещатик. Һин Сорочинск йәрминкәһенә йыйынған украин ҡыҙы түгел, зыяратҡа барырға әҙерләнгән ҡарт хохлушканы хәтерләтәһең. Юҡ, харабаларың менән генә түгел, һулышың менән, ҡарашың менән, йөрәк тибешең менән...

Крещатик, Крещатик... Бына егерме өс йыл тигәндә, йәнә немец һалдатының итеге һинең урамыңды тапай...

Ҡапыл Фәтиховтың йөрәге ҡыҫылып китә, әйтерһең, немецтың дағалы итеге Крещатиктан түгел, уның күкрәген тапап үтә һәм... башҡа ҡот осҡос уй килә: «Әллә улар кирбес менән түшәлгән Ҡыҙыл майҙанды ла тапап йөрөрҙәрме икән?.. Юҡ, юҡ! Сталин Мәскәүҙе бирмәҫкә тейеш. Дөрөҫ, Кутузов, Мәскәүҙе юғалтыу — ул әле Россияны юғалтыу тигән һүҙ түгел, тигән, әммә... Юҡ, юҡ! Сталин Мәскәүҙе бирмәҫкә тейеш. Был — изге храмға вәхшиҙе бысраҡ аяғы, ҡанлы ҡулы менән индереү менән бер булыр ине...»

Уйҙарына мауығып, әрнеп, янып, үҙен-үҙе ашап, Фәтихов Крещатиктың башына килеп еткәнен дә һиҙмәй ҡалды һәм уң яҡта бушлыҡ күреп тертләп китте — дүрт ҡатлы мөһабәт Оборона йорто харабаға әйләнгән. Ни эшләптер, был йорт уға, кеше һымаҡ, атаһы-әсәһе һымаҡ айырыуса йәл тойолдо.

Әле июль айында ғына ул ошо мөһабәт һарайҙа махсус группаға лекциялар уҡығайны һәм Даша Поздняк менән дә ошо йорттоң парад ишеге баҫҡысында танышҡайны. «Ғәфү итегеҙ, иптәш капитан, — тине ул оялып ҡына, — немец Киевҡа килеп етерме икән ни?» Нисек яуап ҡайтарырға? «Юҡ, етмәйәсәк!» — тип өҙөп, ышаныслы итеп әйтергәме, тура яуаптан ҡасырғамы... «Һуғыш хәлен белеп булмай, һеңлекәш, немец хәҙергә үтә көслө...» — тине ул асыҡ ҡына яуапламай. Даша көрһөндө, ихтимал, ул Фәтиховтан башҡа яуап көткәндер. «Эйе, эйе, һуғыш хәлен белеп булмай», — тине Даша, Фәтиховтың яуабына ҡушылып. Бына шул йорт хәҙер харабаға әйләнгән...

Фәтихов, хәрәкәттең кәмеүенән файҙаланып, урамдың икенсе яғына сыҡты һәм иҫән ҡалған йортҡа күтәрелеп ҡараны. «Крещатик» тигән үтә таныш, үтә яҡын һүҙ урынында «Эйхенгорнштрассе» тип немецса һәм русса яҙылғайны. Фәтихов ҡапыл утҡа әйләнде. «Ҡәбәхәттәр, Киевты

алырға өлгөрмәгәндәр, урам исемен дә алмаштырғандар...» Ә шулай ул, Киевка инеп тә, иғтибар итмәне, бәлки, башҡа урам исемдәрен дә алмаштырғандарҙыр...

Эйхенгорн... штрассе... Граждандар һуғышы тарихынан ул белә: фельдмаршал Эйхенгорн — ун һигеҙенсе йылды Киевты алған һәм Ҡиевта әжәлен тапҡан кеше... Тимәк, фельдмаршалдарының исемен мәңгеләштерәләр...

Фәтихов былай ҙа төшөнкө күңелен тағы ла төшөрмәҫ өсөн иғландарға, төрлө плакаттарға иғибар итмәҫкә тырышты, әммә Поздняктар йәшәй торған йортҡа инеп киткәнсе, уның күҙе Сталин исемендәге майҙандағы бинаһая ҙур рамаға тарттырылып, өс аяҡҡа ҡуйылған стендҡа төштө. Шик юҡ, был карта ине. Фәтиховтың картаға яҡынырак барғыһы килде, ...батырсылығы етмәне: «Иртәгә. Хәйер, ул картаға ҡарап барыбер ысын фронт линияһын белеп булмаясаҡ, моғайын, Мәскәүҙе күптән утлы ҡулса эсендә ҡалған итеп күрһәтәләрҙер».

Ул, эйелеп, ботинка бауын бәйләгән булды, кеҫәһенән кулъяулыҡ эҙләне, артта, яҡында, шикле кеше күренмәгәс, дүртенсе һанлы йортҡа инеп китте.

## УН БИШЕНСЕ НОВЕЛЛА

### «Даша, ярҙам ит!..»

Бер нисә тапҡыр һаҡ ҡына ҡаҡҡандан һуң (электр ҡыңғырауы эшләмәй ине) кемдер ашыҡмай ғына ишек янына килде һәм ҡәнәғәтһеҙ тауыш менән: «Ҡем унда?» — тип һораны. Фәтихов Петяның тауышын таныны — июль айында Дашаны оҙата барғас, ул уның менән байтаҡ ҡына гәпләшеп ултырғайны.

— Петя, ас әле.

— Ә һеҙ кем?

— Һәйбәт кеше. — Ул фамилияһын әйтергә теләмәне.

— Ә кем ул «һәйбәт кеше?»

— Апайың Даша өйҙәме?

Был һүҙ Петяға пароль һымаҡ тәьҫир итте — ишектең сынйыры сылтыраны, йоҙағы боролдо.

Петя, әлбиттә, тәүҙә уны таныманы — күҙҙәре ҙурайҙы, һағайҙы һәм «бер ҙә һәйбәт кешегә оҡшамағанһың шул» тигәнде аңлатты.

Фәтихов батырып кейгән эшләпәһен һалды һәм Петяның шунда уҡ күҙҙәрендә шатлыҡ осҡондары хасил булды.

— У-у... Һеҙ бит...

Фәтихов баш бармағын ауыҙына арҡыры ҡуйҙы.
— Тсс! Даша өйҙәме?
— Өйҙә. Даша! — тип ҡысҡырҙы ул.

Ә Даша кухня ишеге төбөндә баҫып тора ине инде. Ул тәүҙә көләп ебәрҙе, унан Фәтиховҡа ташланды ла, башын күкрәгенә ҡуйып, үкһергә тотондо.

— Иҫән... Иҫән... — Үҙ шатлығынан үҙе оялып, шунда уҡ башын Фәтиховтың күкрәгенән алды, күҙ йәштәрен һөртә-һөртә һорашырға тотондо. — Ҡайҙан? Ҡамауҙанмы?

— Теге донъянан.

— Ысыны?

— Ысыны... — Фәтихов үҙе менән булған мажараны бер нисә һүҙ менән һөйләп бирҙе.

Даша, әле һаман үҙ күҙҙәренә ышанмай, Фәтиховтың фуфайкаһын, ҡулын тотоп ҡараны.

— Теләһә кемде көтөргә мөмкин ине, ә... бына һеҙҙе... Ашайһығыҙмы? Әле элекке запас бөтмәгән...

Фәтихов сисенгәндә лә, йыуынғанда ла, өҫтәл янына ултырғас та, бер генә һүҙҙе ҡабатланы: «Һөйләгеҙ, һөйләгеҙ. Хәлдәр, эштәр нисек?»

— Тәүҙә ашағыҙ, иптәш капитан, — тине Даша, барлы-юҡлы һыйын өҫтәлгә ҡуйып: сало-шпиг, тоҙло ҡыяр, мариновать ителгән ҡыҙыл борос.

— Капитан Фәтихов юҡ. Ваҡытлыса үлде. Һеҙҙең өсөн мин дядя Борис. Борис... — ул уйланыбыраҡ торҙо. — Борис Федорович Федоров. Әйтәйек... Әсәйегеҙ яғынан алыҫ ҡына туған... — Ул һүҙ уңайында үҙенә легенда уйланы. — Курск тирәһенән... Ниндәйҙер заводта механик булып эшләгән... Элек бер ҙә күрешкәндәре булмаған... Әсәйҙәр иҫән сағында һирәк-мирәк кенә хат алышҡандар... Хатта нимә өсөндөр... авария яһағанмы... үҙөң кенә әйтә алмайһығыҙ, башҡа берәй «этлеге» өсөнмө төрмәлә ултырған... Һуғыш башланғас, үҙе теләп фронтҡа киткән... Ҡамауға эләккән. Шунан... — Фәтихов йылмайҙы. — Бына һеҙҙе юллап килеп сыҡҡан...

Даша түҙмәне.

— Ниңә инде үҙеңә шул саҡлы ҡара яғырға?

— Дашенька, мине бүлдермәгеҙ. Һеҙ, әлбиттә, минең күктән килеп төшкән шикелле пәйҙа булыуыма риза түгелһегеҙ, әммә, ни эшләйһең, сит кеше түгел бит, туған... — ул Петяның йомшаҡ аҡһыл сәсенән (хас Даша сәсе!) һыйпап алды. — Хәҙер минең кемлегем аңлашылдымы? Ҡалғанын бергәләп уйлашырбыҙ.

Зирәк аҡыллы Петя «ясно!» тигәнде аңлатып, күҙ ҡыҫты.

— Ә хәҙер һеҙ һөйләгеҙ.

Улар бер береһен бүлдерә-бүлдерә шомло яңылыҡтарҙы һөйләй башланылар. Бигерәк тә Петя ашыҡты. Сәсәне. Бер темаһан икенсеһенә күсте, хәйер, тема бер генә ине — һуғыш, оккупация. Даша ҡулдарын ҡауыштырып, кейем шкафына һөйәлеп, Фәтиховҡа һағышлы ҡарап торҙо һәм ваҡыт-ваҡыт Петяның һүҙҙәрен асыҡланы, төҙәтте. Шуныһы ҡыҙыҡлы: Петя мөмкин саҡлы гитлерсыларға ҡаршы булған акциялар хаҡында һөйләргә тырышты, уның күҙҙәре утлы күмергә әйләнде, әле ирҙәр ҡулына әйләнеп бөтмәгән, әммә урам малайҙары менән сәкәшеп шаҡтай сыныҡҡан йоҙроҡтары гел төйнәүле булды. Ә Даша иһә оккупанттарҙың ҡылыҡтарын, ҡыланыштарын, «яңы тәртиптәре» тураһында нигеҙле мәғлүмәттәр бирҙе. Теге ваҡытта, июль кисендә, сәй эсеп, гәпләшеп ултырғанда, ул әле Петя менән Даша араһындағы холоҡтар айырмаһын әллә ни һиҙмәгәйне — Петя, унан тартыныпмы, әллә Фәтиховтың ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәрҙе мөмкин саҡлы һеңдереп ҡалырға тырышыпмы, эйәген устарына ҡуйып, шым ғына ултырғайны. Ә бына был юлы... Петя төҫө-башы менән апаһына шаҡтай ныҡ оҡшаһа ла (дөрөҫ, Дашала ҡатын-ҡыҙҙарға хас нәфислек күберәк) холоҡтар менән Дашаға ҡапма-ҡаршы ине: Петя һүҙҙәрҙе береһе өҫтөнә икенсеһен «өйөп», янып һөйләй, йыш ҡына ҡайһы бер һүҙҙәрҙе үҙе лә һиҙмәҫтән ҡабатлай; ут ҡанлы, сапсан кеше. Дөрөҫөрәге, үҫмер. Ә Даша һәр һүҙен уйлап, бизмәнгә һалып, яй ғына һөйләргә ярата. Сабыр. Түгелеп, сиселеп бармай. «Петяны связной иткәндә...» — тип уйлап алды Фәтихов һәм уйҙарының ваҡытһыҙ, иртә икәнлеген шунда уҡ аңланы. — Беренсенән, кем менән связной була? Ул бит әле япа-яңғыҙ. Әгәр подпольщиктар менән бәйләнешкә керә алмаһа, нисек тә Киевтан сығып, фронт һыҙығын эҙләп китергә тура киләсәк, икенсенән, Петя артыҡ ҡыҙыу, бик тиҙ яныуы бар...»

— Һеҙ, Борис ағай, — ти Петя ашыға-ашыға, — Крещатикта бигерәк тә Оборона йорто йәлке булды, тинегеҙ. Һа! Ә беләһегеҙме, беләһегеҙме уны кем шартлатты? Немецтар тип уйлайһығыҙмы? Ха! Фриц Киевты алып бер-ике көн үткәс, ҡапыл ҡот оскос шартлау. Даже беҙҙең тәҙрәгә балсыҡ шалт-шолт килеп бәрелде. Үҙебеҙҙекеләр мина ҡуйып киткәндәр ҙә радионан р-раз! кнопкаға баҫып шартлатҡандар. Беләһегеҙме, күпме офицер теге донъяға китте? Ха-а! Йөҙләгән. Ниндәйҙер кәңәшмәгә йыйылғандар икән...

Петя сәй эсергә яратмай ине, уның иң яратҡан эсемлеге — һалҡын һыу. Әле лә ул, өҫтәл янынан тороп, эмалләнгән көрөшкә алды ла, уны, тулыһынса биҙрәгә батырып, тултырып һыу алып, тын да алмай эсеп бөтөрҙө. Был паузанан файҙаланып, Даша һүҙен дауам итте.

— Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, оккупанттарҙы асыу, нәфрәт менән генә түгел, таҫтамал-рушникка тау шикелле күпереп торған икмәк, тоҙ ҡуйып ҡаршы алыусылар ҙа аҙ булманы. Шуныһы аяныслы ғына түгел, аптыраҡта, немецтарҙы ҡаршы алыусылар араһында Гитлерҙың ҡан дошманы — еврейҙар ҙа байтаҡ булған.

Петя түҙмәне, апаһын бүлдерҙе.

— Һуң еврейҙың ниндәйе булмай! Ана минең менән уҡыған Шмуль (ул үҙен Саша тип йөрөтә) Гитлерҙың боғаҙын сәйнәргә әҙер.

— Дөрөҫ, Петя, — тине Фәтихов, — һәр халыҡта ғына түгел, һәр ғаиләлә төрлө кешеләр була, шуға күрә бер ҡасан да кешене милләтенә ҡарап хөкөм итергә ярамай.

Даша һүҙен дауам итте.

— Иғтибар итмәнегеҙме? Һәр иғлан, приказ, распоряжение аҫтында генерал Эбергардтың имзаһы тора.

— Кем ул Эбергард? *

— Комендант. Ә бургомистр — Форостивский тигән кеше. Ниндәйҙер заводта инженер булып эшләгән, ти. Тәүге көндәрҙән үк ике телдә газета сыға башланы. Бына, ҡарағыҙ. — Даша Фәтиховҡа район газетаһы форматындағы ике газетаны һуҙҙы.

Рус телендәге газета «Последние новости» тип атала ине. Газетаның исеме аҫтында «Дүшәмбе көндәрҙә сыға» тип яҙылған. Фәтихов газетаның һуңғы битенә күҙ һалды. «Редакторы Дудин».

— Кем ул? Бындағы кешеме?

— Ниндәйҙер институтта уҡытҡан. Доцент, ти.

Украин телендәге газета «Нове украiньске слово» тип атала икән. Аҙнаға биш тапҡыр сыға. Редакторы К. Штепа.

— Штепаһы кем тағы? Ул да берәй доцентмы?

Дашаның йөҙөндә әсе йылмайыу күренеп ҡалды.

— Доцент түгел, профессор. Киев университетында уҡытҡан.

— Моғайын, партбилет та йөрөткәндер әле?

— Уныһын әйтә алмайым...

— Ә комендатура ҡайҙа?

— Крещатиктағы «Шансер кинотеатрында» ине.

— Ниңә — ине?

Йәнә Петя түҙмәне.

— Сөнки егерме бишенсе сентябрҙә подпольщиктар

---

* Тәүге комендант Путткармерҙы патриоттар 25 сентябрҙә атып үлтерәләр. Шунан 1942 йылдың июленә саҡлы генерал Эбергард комендант була.

уны... бух-бух! Комендатура менән бергә комендант генерал Путткамер ҙа күккә... дөрөҫөрәге, йәһәннәмгә осҡан.

Фәтиховтың күңелендә кескәй генә ҡояш тоҡанды, тимәк, Киев тынмаған, башын эймәгән, оккупацияның тәүге көндәренән үк көрәшә.

— Ә хәҙер комендатура ҡайҙа?

— ДКА-ла.

— Ә һеҙ эшләйһегеҙме, Даша?

Даша ғәфү үтенгәндәй итте — йөҙөнә ҡыҙыл тимгелдәр ҡалҡты.

— Астан үлгә килмәй бит инде... Эшләгән кешеләргә астан үлмәҫлек булһа ла паек бирәләр...

— Ҡайҙа?

— Шул элекке урында — караптар төҙөү заводында.

— Заводты тулыһынса эвакуировать итә алманылармы ни?

— Иттеләр. Күпселек катерҙарҙы, пароходтарҙы батырҙылар, әммә немецтар Днепр туңғансы йылға буйлап Германияға иген оҙатырға ашығалар, шуға күрә рейхтан белгестәр килтерҙеләр, төрлө оборудование ташыйҙар, элек судоверфтә эшләгән белгестәрҙе эҙләйҙәр... Йәкшәмбе көндө лә ял юҡ...

— Ә завод директоры кем?

— Найденко тигән инженер — хыянатсы, ә Днепр пароходствоһының шефы немец — майор Рентель...

Фәтиховтың башына әле ойошҡан ҡәтғи бер ҡарар килмәгәйне, әммә ул завод тураһында ентекләберәк һорашты.

— Нимә, заводта эшләүселәргә пропуск бирҙеләрме? Ғөмүмән, ҡалала ниндәй тәртип?

Петр йәнә һикереп торҙо.

— Аусвайс!

— Бына, — Даша аусвайсын күрһәтте.

Был ус төбөнә һыйырлыҡ сейә көрән ҡатырға ине. Ҡатырғаның өҫкө мөйөшөнән аҫҡы мөйөшөнә диагональ рәүешендә сәтәкәй бармаҡ киңлегендә ҡыҙыл полоса үтә. Аҫта ҡыҙыл мисәт, ҡояшты ҡапларға теләп, ҡанаттарын йәйгән бөркөт свастикалы түңәрәкте үткер тырнаҡтары менән тотҡан — фашизм үҙе генә түгел, уның символы, гербы ла ҡурҡытҡыс һәм әшәке.

— Был — көндөҙ йөрөй торған пропуск. Төндә, тәүлек буйы йөрөргә ярай торғандары ла бар, ти.

— Уларын кемгә бирәләр?

— Эпидемиологтарға, һыу-канализация слесарҙарына, электриктарға, транспорт йөрөтөүселәргә...

— Ҡалала ниндәй транспорт йөрөй?

— Күбеһенсә ат, бричка. Трамвайҙа немецтар ғына йөрөй, ә вагондың артҡы майҙансығында бая мин һанап киткән махсус пропускылы кешеләр йөрөй.
— Ә... аҡса? Ниндәй аҡса ходта?
— Ленин һүрәте төшөрөлмәгән бөтә аҡса ла йөрөй. Ваҡ аҡса ла, ҡағыҙ аҡса ла. Рейхсмарка немецтар өсөн генә. Ярай, һеҙ юлдан килгән кеше, — тине Даша, оялып ҡына йылмайып, — арығанһығыҙҙыр. Петя, Борис ағайыңа анауы карауатҡа урын йәй.
— Юҡ, юҡ. Минең бер ҡасан да кеше урынына ятҡаным юҡ. Тегендә диванға йәйегеҙ.
Төндә, ут яндырмай ғына (ут тигәнең шәм инде), улар шыпырт-шыпырт ҡына һөйләштеләр.
— Дашенька... Минең һеҙҙән йәшерен серем юҡ...
— Аңлайым, Борис ағай...
— Борис ҡына тиһәгеҙ ҙә үпкәләмәм, — ул шаяртты. — Бабайҙар ҙа ҡатын-ҡыҙҙың, бабай, тип өндәшкәнен яратмай, ә мин әле бабай уҡ түгел...
— Борис... ағай... ә һеҙ нисә йәштә?
— Утыҙҙа.
— Минән туғыҙ йәшкә өлкән икәнһегеҙ...
— Нимә, был күпме, аҙмы?
— Минең апайым Юля, ирҙәр биш-ун йәшкә өлкәнерәк булырға тейеш, ти. — Һәм ҡапыл һорау: — Ә һеҙҙең ҡатынығыҙ нисә йәшкә кесе?
— Дүрт.
— Һеҙҙең ҡатынығыҙ бәхетлелер...
— Ниңә улай тиһегеҙ?
— Сөнки һеҙ... — Фәтихов Дашаның йөҙөн, күҙҙәрен күрмәне, әммә тәрән итеп тын алыуынан һиҙенде — ул йөрәк серен сисергә уйлай ине.
— Беҙ ситкә киттек, — тине Фәтихов, был һөйләшеүҙең бөтөнләй икенсе боролош алыуын аңлап. — Миңә заводҡа эшкә урынлашырға кәрәк, Даша...
— Эшкә? Кем булып?..
— Мин бит механик. Электрҙы ла яҡшы беләм.
— Ә мин эвакуацияланa алмауыма үкенеп бөтә алмайым...
— Шулай кәрәк, Даша...
— Аңлайым... да, һеҙҙең өсөн ҡурҡам да... Әгәр берәйһе белеп, һиҙеп ҡалһа...
Фәтихов был һүҙҙәрҙе ишетмәмешкә һалышты.
— Судоверфтә элек эшләгән эшселәр күпме?
— Бар... Тик мин уларҙы ныҡлап белмәйем. Бер цех начальнигын яҡшы беләм дә...
— Кем ул?

— Мануевич. Немецтарҙың арт яғын яларҙай булып йөрөй.

— Бәлки, тыштан ғыналыр?

— Белмәйем. Тыштан ғына түгелдер. Күҙҙәрендә өмөт юк.

— Ярай, Дашенька, тыныс йоҡо.

— Һеҙҙе күргәс, ҡапыл ҡанаттар үҫкән кеүек булды, — тине ул, урынынан тороп. Инде сығып киттем тигәс, килеп Фәтиховтың битенән үбеп алды. — Рәхмәт килеүегеҙгә, дядя Борис. — Даша ашығып икенсе бүлмәгә сығып китте.

Көн ғәҙәттән тыш көсөргәнешле булһа ла, Фәтихов йоҡлай алманы. Судоверфтә уның версияһына ышанырҙармы? Әгәр ышанмаһалар?.. Бәлки, эшкә урынлашып, легаль хәлгә күскәнсе, подпольщиктар менән бәйләнеш эҙләргәлер? Ә уларҙы нисек табаһың? Ҡайҙа ла булһа эшкә урынлашмай, подпольщиктар менән элемтәгә инеү тураһында ла уйларға ярамай. Урамда осраған кешене туҡтатып: «Һин подпольщик түгелме?» — тип һорап булмай бит инде. Подол — Киевтың иң боронғо һәм революцион биҫтәһе. Бында затон, судоверфь... караптар төҙөү һәм ремонтлау заводы... Райком подполье өсөн кешеләр ҡалдырған булырға тейеш... Ә нисек улар менән бәйләнешкә керергә?..

Икенсе көндө ул Дашаға көтөлмәгән һорау бирҙе.

— Дашенька, ә һеҙҙең иҫке тәреләрегеҙ бармы?

Даша аптырап йылмайҙы.

— Әллә Владимир Креститель булырға уйлайһығыҙмы?

— «Бессарабкаға» барып, халыҡ һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмаҡсы булам.

«Бессарабканан» ул көтөлгән информацияны ала алманы.

Дөрөҫ, баҙар ҙа һуғышҡа тиклем булған кеүек шаулап-гөрләп тормай ине, әммә... бөтөнләй үк һүнмәгән: берәүҙәр һыу болғансыҡ саҡта эрерәк балыҡ тоторға тырыша, икенселәрҙе нужа бабай килтергән, өсөнсөләр... Хәйер, кемдең кемлеге янғын һәм яу ваҡытында һынала бит...

Баҙарсылар теләһә нәмә хаҡында һөйләшәләр, һатыулашалар, һуғыш, оккупация темаһын телгә алмайҙар ине. Өлкән быуын Киев халҡының хәтерендә был икенсе оккупация. Ун һигеҙенсе йылғы оккупация ла татлы булманы, әммә бынаһы бит, ун тапҡырға әсерәк, хәтәрерәк ине. Подпольщиктар бер нисә ҙур, ҡыйыу акциялар, диверсиялар эшләргә өлгөрһәләр ҙә, әле тәүге көндәрҙең шауҡымы бөтмәгәйне, етмәһә, немец радиоһы, хыянатсылар сығара торған «Последние новости», «Нове украиньске слово» газеталары былай ҙа көсөргәнешле, аяныслы хәлдәрҙе тағы ла ҡуйыртып тараталар, халыҡ күңелен шомландыралар,

ә Сталин исемендәге майҙандағы брезент картала Мәскәү, Ленинград (немецтар уны Петербург тип яҙғандар) — утлы ҡулса эсендә.

Фәтихов сепрәккә төрөлгән, баштары күренеп торған тәреләрен тотоп урамға сыҡты, бер генә минутҡа уйланып торҙо ла «Ҡош баҙарына» йүнәлде. Байтаҡ йылдар Киевта йәшәһә лә, «Ҡош баҙарында» булғаны юҡ ине. Ҡыҙы, күршеләрҙән күреп: «Атай-й... миңә тутыйғош һатып ал», — тип һырышһа ла, ул: «Алырбыҙ, ҡыҙым, алырбыҙ. Бына алдағы йәкшәмбелә өсәүләп «Ҡош баҙарына» барырбыҙ», — тип һүҙ бирҙе лә һүҙендә тора алманы — донъя мәшәҡәте. Ә һуғыш алды йәкшәмбеләре уғата көсөргәнешле булды... Бына ул тәүге тапҡыр «Ҡош баҙарына» йүнәлде, тик ҡыҙыҡайына тутыйғош алырға түгел, ә...

Фәтиховтың һирәк кешеләрҙә була торған яҡшы ғәҙәте бар: ул бала саҡтан уҡ бөтә нәмәне күцел күҙе менән күрергә, иҫендә ҡалдырырға, күҙҙәрен йомоп, күргәндәрен хәтерләргә өйрәнгәйне. Ауылда мәктәптә уҡығанда уҡ ул Нәсихә апаһы менән шундай уйын уйнай торғайны — улар ишек алдына сығалар, ә кемдер өҫтәлгә төрлө әйбер теҙә: ҡашыҡ, сынаяҡ, ҡәләм, ҡара һауыты, шырпы, ҡауырый, кәтүк... Улар күҙҙәрен йомоп өйгә инәләр. Команда булыу менән, күҙҙәрен асып, бер... ике... өс... тигәнсе өҫтәлгә ҡарап алалар ҙа шунда уҡ өҫтәлгә арттары менән боролалар һәм өҫтәл өҫтөндәге әйберҙәрҙе һанап сығалар. Ябай һанау ғына етмәй, ә уларҙың ҡайҙа, нимә менән йәнәш ятҡанын да әйтергә кәрәк. Тора-бара Нурҙың хәтере шундай яҡшырҙы, берәйһенә килеп инеү менән, өй эсендәге әйберҙәрҙе тәүге ҡараш та уҡ хәтеренә һендерә ала торғайны.

Бына әле лә ул башын уңға-һулға бормай, һирпеп ҡарап ҡына бөтә нәмәне «күцел карточкаһына» төшөрөп бара. Әһә, Шевченко урамының элекке исемен ҡалдырғандар (украиндарға «ярамһаҡланалар» сволочтар!).

Туҡта! Был ниндәй флаг? Фашистарса «һайль!» тип тәбрикләүҙе талап иткән һарылы зәңгәр ситса... Фәтихов, үҙе лә һиҙмәҫтән, йорт мәйешенә ҡаҙаҡланған ҡалайға күтәрелеп ҡараны — 18.

Бөтәһен дә белеүсе Петя дөрөҫ әйткән икән, ул, Степан Бандераның «контораһы» Шевченко бульварындағы ун һигеҙенсе һанлы йортта урынлашҡан тигәйне. Ошо секундта уҡ лесник Тарас Осиповичтың һүҙҙәре иҫкә килде: «Бөтә хыянатсыларҙың да яҙмыштары бер төрлө була. Бына күр ҙә тор, Бандера-бандит та кеше ҡапҡаһы төбөндә ҡатҡан хужаһыҙ эт шикелле дөмөгәсәк...»

Фәтихов, иғландар, белдереүҙәр, приказдар ҡаршыһында туҡтап, тәмәке көйрәтә. Ә приказдар, белдереүҙәр бик

еүп: комендант, ҡала управаһы, полиция идаралығынан, хеҙмәт биржаһы, бургомистр, төрлө ведомстволар... — һәр береһе үҙ бойороҡтарын йәбештергән.

«...Ун алты йәштән алып алтмыш йәшкә саҡлы булған бөтә ирҙәр бөйөк Германияға көстәрен аямай ярҙам итергә тейеш. Шуның өсөн уларға хеҙмәт биржаһына барып (һәр районның үҙ биржаһы бар, ә дөйөм ҡала биржаһы Мельников урамындағы... мәктәптә урынлашҡан) регистрация үтеү мәжбүри! Айырыуса мейес сығарыусылар, өй түбәһе ябыусылар, быяла ҡуйыусылар, сантехниктар, электриктар биржаға ашығыс рәүештә килергә тейеш...»

«...Көмөшкә ҡайнатыу ҡәтғи тыйыла. Был бойороҡто боҙоусылар... Комендант сәғәтен (18-00 дән 7-00 сәғәткә тиклем) боҙоусылар... Ҡала транспорты менән фәҡәт вермахт офицерҙары һәм һалдаттары ғына файҙалана ала...»

«...Башҡа ҡалаларға, ауылдарға барыу өсөн ҡала управаһы махсус плацкарта бирә. Шунһыҙ бер кем Киевтан бер ҡайҙа сыға алмай...»

«...Һыйырҙы, һарыҡты, сусҡаны рөхсәтһеҙ һуйыу ҡәтғи тыйыла...»

Эйе, гитлерсылар бөтәһен дә: квартира өсөн түләүҙе, налогты, самообложениены... хеҙмәт минимумын... — бөтәһен, бөтәһен дә бухгалтерҙарға хас тәүәккәллек һәм ваҡсыллыҡ менән иҫәпләгәйнеләр. Күпселек приказдар «саботаж өсөн...», «герман командованиеһының бойороҡтарын үтәмәгән өсөн... «атырға!» тигән һүҙ менән тамамлана.

— Ҡурҡыталар, — тине Фәтихов, ирендәрен ҡымтып, тештәрен шығырлатып.

Ҡаршылағы йорттан ҡыҙмаса бер нисә офицер сыҡты. Фәтихов йортҡа күҙ һалды. Ишек янына немецса

«РЕСТОРАН

*Тик немецтар өсөн»*

тип яҙылғайны. «Тимәк, союздаш офицерҙарға ла ишек ябыҡ...»

Йәнә йөрәкте ҡара ялҡын ялмап алды. Үҙ илендә ошо килмешәктәр һине үгәй бала итеп йөрөтһөндәр ниде... Юҡ, әлегә хужа була алмаясаҡһығыҙ, һерр офицерҙар...» Башҡа дәүамал уй килә: офицерҙар йыйылғас, атылып инергә ине лә гранаталар бәйләме ташларға ине. Һәм шунда уҡ: «Утыҙ йәшлек малай һин, капитан Фәтихов», — тип үҙен битәрләп алды.

Немец һалдаттары араһында һирәк-мирәк мадьяр формаһы кейгән һалдаттар ҙа күренә. Петя ҡалала словак һалдаттары ла бар, тигәйне, әммә улар Фәтиховтың күҙе-

нә сағылманы — әллә ҡала ситендә урынлашҡандар, әллә бик аҙҙар...

Оккупанттарҙан тыш ҡара, йәшел мундир кейгән, еңдәренә аҡ повязка таҡҡан, яурындарына карабин аҫҡан ярым хәрби кешеләр ҙә әленән-әле осрай. Былар полицайҙар: ҡара мундир кейгәндәре — дөйөм полиция, йәшел мундирлылары — Киев ҡала полицияһы — был да Петя информацияһы.

Округ штабында эшләй башлағас, Фәтихов йыш ҡына хеҙмәткә йәйелгән дуғаны хәтерләтеүсе ҡыҫҡа бөхтә генә Дарвин урамы аша бара торғайны ла Крутой спускынан «Бессарабка» баҙары яғына төшә ине. Шевченко бульварынан бер аҙ барғас, Короленко урамына сығып, үргә күтәреләһең. Яратты ул был маршрутты. Иртән эшкә барған саҡта, «Бессарабкаға» яңы йән керә башлай — емеш-йәшелсә, он, ярма, картуф, ит-май тейәгән арбалар, автомашиналар килеп туҡтай, «Тррр!» «Һай ҙа гай!» тигән ауаздар ишетелә... Сабып барған атты туҡтатырлыҡ таҙа хохлушкалар, оҙон мыйыҡлы, төрөпкәле ирҙәр шаулашып, ҡысҡырышып, көлөшөп йөктәрен бейек көмбәҙле баҙар эсенә ташыйҙар... Ә Короленко урамы, әйтергә яраһа, һәйкәлдәр урамы. Унда уҙған йөҙҙөң башында һалынған бөтә донъяға данлыҡлы опера театры, бер аҙ күтәрелгәс, ошо уҡ яҡта даһи кобзарь Тарас Шевченкоға ҡойолған һәйкәл, ә Большая Подвальная урамында ун беренсе йөҙҙөң һулымаҫ ҡомартҡыһы — «Алтын ҡапҡа». Йәнә бер аҙ барғандан һуң бөтә донъяға билдәле София соборы...

Тарас Шевченко исемендәге опера театры янынан үткәндә, Фәтиховтың ҡолағына Потаржинскийҙың тауышы ишетелгәндәй була (улар, мөмкинлек булған һайын, был театрға йөрөнө), ә Тарас Шевченко һәйкәле янынан үткәндә, Бөрөлә техникумда уҡығанда уҡ ятлаған һүҙҙәр башына килә.

Мин үлгәс, мине күмегеҙ<br>
Украинам еренә,<br>
Икһеҙ-сикһеҙ киңлектәге<br>
Убаларҙың беренә...

«Алтын ҡапҡа» бик алыҫта ҡалған ауыр, ҡараңғы, фажиғәле йылдарҙы, украин халҡының төрлө яҡтан килеп баҫҡан ас күҙле, миһырбанһыҙ дошмандарға ҡаршы көрәшен күҙ алдына баҫтыра: ҡылыстар сыңлай, уҡтар сыжлай, һөңгөләр шарт-шорт һына, аттар кешнәй, командалар, ыңғырашыуҙар, дәртләндереү һәм паника ауаздары ишетелгәндәй була.

Һәм бына, ниһайәт, Богдан Хмельницкий... Төрлө баҫҡынсыларҙан, илбаҫарҙарҙан ҡотҡарып, халҡына именлек һәм бойондороҡһоҙлоҡ бирер өсөн украин халҡын рус дәүләте менән бәйләүсе, туғанлаштырыусы бөйөк гетман.

Фәтихов, ғәҙәттә, ут-атҡа атланған, ҡулына власть һәм ҡөҙрәт символы — булава тотҡан Хмельницкийҙы үткәндән һуң, майҙандан бер аҙ түбән төшә лә Чкалов урамына йүнәлә... торғайны.

Бына ул әле лә София соборының алтын көмбәҙҙәрен күрергә теләпме (Иҫәндәрме икән? Һуғыш уларҙың да башына етмәнеме икән? — Ҡешеләрҙә ғүмер буйы балаларға хас ҡыҙыҡһыныусанлыҡ йәшәй бит!) уңға, Короленко урамына, боролдо һәм мөйөштәге тәүге йортҡа күҙ һалды — йорт шул уҡ ине, хатта тәҙрәләренең бер генә өлгөһө лә ватылмаған (бәлки, яңынан ҡуйғандарҙыр), әммә уның исеме үҙгәртелгәйне — Володимирская вулицаға әйләндерелгән.

Фәтихов кенәз Владимирҙың Киев Русы өсөн генә түгел, тотош Русь өсөн булған тарихи хеҙмәтен белә — ул 988—989 йылдарҙа тарҡау, үҙ-ара өҙлөкһөҙ ыҙғышып, һуғышып, ер бүлешеп, малдарын талашып, ҡатын-ҡыҙҙарын урлашып йәшәгән күп аллалы мәжүсиҙәрҙе бер аллаға ғына табындырыр, берләштерер, дуҫлаштырыр өсөн христиан динен ҡабул иттерә һәм уны дәүләт диненә әйләндерә.

Владимир-Креститель иҫтәлеге Киевта аҙым һайын тип әйтерлек: Владимирская горка; Владимирский спуск; Днепрҙың бейек текә яры башында һәйкәл; Владимир урамы һәм, ниһайәт, Тарас Шевченко бульварындағы һоҡланып туймаҫлыҡ Владимир соборы.

Әле капитан Фәтихов туғыҙ айҙан һуң ошо урамда үҙен ни көтәһен башына ла килтермәй, дошманға булған нәфрәт утында янып «Ҡош баҙарынан» китеп бара.

«Ҡош баҙарында» кеше әллә ни күп түгел ине, әммә баҙарҙың башҡа баҙарҙарға хас булмаған үҙ «йөҙө», үҙ «тауышы» бар ине; аҡ, күк, күгелйем, ала, ҡыҙғылт һары, ҙур күкрәкле, сатлы ҡанатлы күгәрсендәр гөрөлдәй, попугайҙар ҡыштырлай, үҙҙәренсә лығырлай; ә ҡыҙыл түшле бер попугай бер үк һүҙҙе ҡабатлай ҙа ҡабатлай: «Пъшел! Пъшел! Пъшел!» Баҙарҙа затлы, һайраусы ҡоштар ғына түгел, ҡойроҡһоҙ һайыҫҡан, ҡара, ала ҡарғалар ҙа бар ине. Фәтиховтың йөрәге тертләп китте, бала сағы иҫенә төштө — ул да бит ниндәй генә ҡоштарҙы аҫраманы ла ҡулға эйәләштермәне... Бигерәк «Ҡар-ҡар» тигән ҡарға балаһы йөрәктә өҙөп китте...

Һөйләшеүселәргә, һатыулашыусыларға ҡолаҡ һалып, баҙарҙы арҡырыға-буйға урап сыҡты ла ниәтенең ғәмәлгә

ашмаçлығын аңланы — уның тәреләрене күтәрелеп тә ҡараманылар, уның менән оҙаҡлап тел сарларға теләмәнеләр, бәлки, баҙарҙың ике башында ике «йәшел тәлмәрйен» — полицай ары-бире йөрөгәнлектәндер, бәлки, бында килеүселәрҙең мәнфәғәттәре фәҡәт ҡош менән сауҙа итеүҙән генә торалыр...

Баҙарҙан сыҡҡас, ул үҙ-үҙен битәрләне: һуң, аҙыҡ-түлек, ҡош һата торған баҙарҙарға кем тәреләр күтәреп бара инде?.. Тәреләрҙе сиркәүгә алып барырға кәрәк. Ысынлап та... юл ыңғайында Андрей сиркәүе бар бит... Һис шикһеҙ, немецтар уны астырғандыр...

Андрей яры башында (Андреев ток) урынлашҡан Андрей сиркәүе Ҡиевтағы иң ҡиммәтле һәм гүзәл архитектура ҡомартҡыларының береһе һанала.

Фәтихов Ҡиевҡа тәү тапҡыр килгәндең беренсе аҙнаһында уҡ ул соборға барғайны һәм бында булған һайын, архитекторҙарҙың, художниктарҙың, мастерҙарҙың, ташсыларҙың оçталығына хайран ҡалып ҡайта торғайны: кеше гениййы ниндәй генә бөйөк һәм гүзәл эштәргә һәләтле түгел...

Ә бына шул гүзәллектең һәм даһилыҡтың ҡапма-ҡаршы яғы — ҡырыу, емереү, яндырыу, үлтереү, йыртҡыслыҡ һәм вандализм. Ошо вәхшилектең башында кем тора? Үҙҙәрен иң бөйөк милләт — элита раса тип танытырға теләгән фашистар.

Сиркәү ғибәҙәт ҡылырға килеүселәрҙең бөтәһен дә эсенә һыйҙырып бөтөрә алмаған — байтаҡ халыҡ тышта тора. Ғибәҙәт ҡылырға килеүселәр араһында ҡарттар, ҡарсыҡтар ғына түгел, урта йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар, ирҙәр ҙә күренә. Ҡайһы берҙәре, бигерәк тә оло йәштәгеләр, байрамса кейенгәндәр, муйындарына аçҡан тәреләрен ҡомгамы, теш порошогынамы ышҡып ялтыратҡандар. Был нимә? Улар, ысынлап та, аллаға ышаналармы, әллә халыҡ араһында донъя хәбәрҙәрен ишетергә, өмөт, ышаныс вәғәздәре тыңларға килгәндәрме? Хәйер, хәҙер быны тикшереп тора торған заманамы ни? Әйҙә, ышана бирһендәр, тик беҙҙең еңеүебеҙгә генә ышаныстарын юғалтмаһындар: иң хәтәр нәмә — өмөтһеҙлек...

Фәтихов, уңға-һулға башын эйеп, ауыҙын асмай ғына ғәфү үтенеп, көс-хәлгә сиркәү эсенә инде. Суҡынған булды. Уңға-һулға ҡараны һәм, ни эшләптер күҙе йәш, күп тигәндә егерме ике-егерме өс булыр, таҙа кәүҙәле егеткә төштө. Ҡылыс танау. Түпкәрәк урынлашҡан һоро күҙҙәр. Уң яҡтан һул яҡҡа ҡырынырак итеп артҡа таралған аҡһыл ҡара сәс... Ҡарашында һағайыу һәм эҙләнеү. Егет тә уны шәйләп алды, һирпеп ҡарап ҡуйҙы. Ҡай ере менәндер ул Фәтиховҡа оҡшап ҡуйҙы, уға яҡынырак барғыһы килде,

[illegible] тыйылды. Йыш ҡына кеше ауыр, хәтәр сәғәттәрҙә ал-ланы иҫенә төшөрә, унан таяныс эҙләй бит. Фәтихов егеттең иғтибарын үҙенә йәлеп итмәҫкә тырышып, ҡырын-ҡырын ғына күҙәтте — ул, башҡалар шикелле, ирендәрен ҡыбырлатып, ихлас суҡынмай, һүҙ ысынлығы өсөн генә өс бармағын маңлайына, күкрәгенә тейҙереп ала. Әленән-әле ялан-йолан ҡарана. Ҡем ул? Уның һымаҡ элемтәгә мохтаж фашистик подпольщикмы? Әллә...

Ука менән сигелгән ряса кейгән мөһабәт поп аллаға баш эйеүҙе һәм уның яңы пәйғәмбәре Гитлерға теләктәш булыуҙы, ғәҙел хеҙмәт итеүҙе алға ҡуйып, вәғәҙ уҡыны, кадилоһын уңға-һулға һелкеп, сиркәүҙәге халыҡты хуш еҫле ыҫмалы төтөнө менән «рухландырҙы».

Ҡылыс танаулы егет менән күҙҙәр йәнә осрашты. Теге шунан уҡ башын ситкә борҙо. «Нимә? Таныймы? Танырға теләйме? Изге ниәт менәнме? Яуызлыҡ уйлапмы?..» Фәтихов, ғибәҙәт ҡылыу бөткәнде көтөп тормай, сиркәүҙән сығып китте: «Бәләнән баш-аяҡ...»

## УН АЛТЫНСЫ НОВЕЛЛА

### Капитан Фәтихов — фольксдойч

Фельдшер Даша Поздняк ярҙамында бер нисә көндән Фәтихов Даша эшләгән судоверфкә механик булып эшкә урынлашты. Цех начальнигы Мануевич, немец сигаретын өҙлөкһөҙ төтәтә-төтәтә, уның биографияһын тыңлап ултырҙы ла, дәфтәр битен йыртып алып: «Яҙ. Церемониться итеп торорға ваҡыт юҡ. Белгестәр бына былай кәрәк! — Ул усының һыртын боғаҙынан үткәрҙе. — Майор Рентель тиҙерәк регуляр навигация асырға ашыҡтыра. Большевиктар-сволочтар файҙаланырлыҡ бер йүнле судно ла ҡалдырмағандар: йә батырғандар, йә шартлатҡандар...»

Фәтихов ғаризаһын цех начальнигына һуҙҙы. Теге күҙ йүгертеп алды ла: «Федоров... Хохол түгелме ни?» — тип һораны. Фәтихов әҙәпле генә йылмайҙы.

— Әйтергә яраһа, миндә өс төрлө ҡан бар: украин, урыҫ һәм немец ҡандары.

Мануевичтың бер ҡашы һикереп алды.

— Немец?

— Эйе. Әсәйем яҡлап, өләсәйем немка булған.

— Улайһа, һин үҙеңде, фольксдойч, тип йөрөт.

Фәтихов белмәмешкә һалышты.

— Фольксдойч? Ни тигән һүҙ ул?

— Йәғни Германиянан ситтә йәшәүсе немец. Улар, — Мануевич башын артҡа табан һелкеп алды, — фольксдойчтарға бөтөнләй башҡаса ҡарайҙар. — Мануевич йылғасылар кейә торған китель кеҫәһенән шаҡтай йыуан авторучка алып, ҙур начальниктарса, ҡағыҙға йүнле-башлы ҡарамай, иғтибарһыҙ ғына резолюция һалды. Аҙаҡ ручканың пероһын ат ҡойроғонан эшләнгән түңәрәк щеткаға һөртөп алды ла, һөнгө һымаҡ, Фәтихов-Федоровҡа һуҙҙы.

— Пероһы алтын! Майор Рентель бүләге!

Йәнә Фәтихов белмәмешкә һалышты.

— Кем ул майор Рентель?

— А-а!.. Бөтә Днепр пароходствоһына хужа! Ике автоматчикһыҙ йөрөмәй. О-о, ужас строгий. Әммә мине тәүге көндән үк яратты. Йәшәгән урының бармы?

— Йыраҡ ҡына туғандарҙа урынлаштым.

— Квартира бирергә мөмкин. Хәҙер бөтәһе лә беҙҙең ҡулда.

— Рәхмәт, пан Мануевич. Мин яңғыҙ бит, баш төртөргә урын табыуы ауыр түгел.

— Бисәң тегеләр яғындамы? Ничауа, оҙаҡламай теге яҡ, был яҡ булмаясаҡ, бөтәһе лә был яҡҡа әйләнәсәк. Ә хәҙергә, — уның киң, шаҡтай туң йөҙөндә оятһыҙ йылмайыу хасил булды, — ничауа. Хәҙер бисәләр эт теҙенән, — ул эйелеп өҫтәл тумбочкаһынан болғансыҡ һыулы шешә алды, киң, көслө тештәре менән (тап урталағы өҫкө теше кителгәйне) пробка бөкөнө асты. — Хохол коньягын эскәнең бармы? Шаҡтай һаҫы, но... градусы ничауа, бер ике стакан түңкәрһәң, баш шаулай башлай.

— Бар, — тине Фәтихов иғтибарһыҙ ғына, — әммә... мөмкин саҡлы эсмәҫкә тырышам. Ашҡаҙаны этләй.

— Ә-ә... Хрен с ним. Мин бына ун биш йыл инде бауыр менән этләнәм. Сирҙе иркәләргә ярамай. — Ул ҡырлы стакандарға көмөшкә ҡойҙо һәм бер үк ваҡытта өҫтәлдәге ҡыңғырауға ус төбө менән һуҡты. Ишек шул минутта уҡ асылды, бөҙрә сәсле билдәһеҙ йәштәге ҡатын пәйҙа булды. Мануевич Фәтиховтың ғаризаһын уға һуҙҙы. — Аусвайсҡа заказ бир.

— Ниндәйгә, пан начальник? Көндөҙ, тәүлек буйына йөрөй торғанғамы?

— Көндөҙгөгә.

Бөҙрә сәсле ҡатын юҡ булды.

— Киттек! Фюрер өсөн!

Фәтихов юрамал һүҙҙе ситкә борҙо, Мануевичтың күтәрелгән стаканын күрмәмешкә һалышты.

— Аусвайсты полиция идаралығынан башҡа һеҙ үҙегеҙ ҙә бирә алаһығыҙмы ни, пан начальник?

Мануевичтың ауыҙы иҫке сабаталай йәйелде.

— Мин... Беҙ бөтәһен дә булдыра алабыҙ. Майор Рентелгә беҙгә полный право бирҙе, тик тиҙерәк караптарҙы стройға индерергә кәрәк. Рейх украин бойҙайына, салоһына мистаж. — Был урында Мануевичтың тауышында ирония һиҙелде, күрәһең, хыянатсы булһа ла, уның ҡара йөрәгенең ҡарашы төбөндә үҙ еренә булған мөхәббәт юғалып бөтмәгәндәр әле. — Йә, киттек! — Ул бая әйткән тосын онотто аҡыры. — Танышыу өсөн!

— Танышыу өсөн!

Бер стаканды түңкәргәндән һуң, Мануевич йомшарып, «һәйбәтләнеп» китте.

— Федоров... Давай фамилияңды Федоренкоға әйләндерәбеҙ? Ярым хохол башың менән ниңә кацап фамилияһы йөрөтөргә... Улар былай ҙа нисә йөҙ йыл буйы хохолдарҙы иҙеп киләләр...

— Хәҙер һуң инде, пан начальник.

— Һә... һиңә нисә йәш?

— Уң дүртенсе июлдә утыҙым тулды.

— Һә! Алтмыш йыл йәшәһәң дә, ярты ғүмерең алда әле. — Мануевич устарын өҫтәл уртаһына ҡуйып, күкрәген өҫтәл ситенә терәне. — Ә оҙаҡ йәшәр өсөн ни эшләргә кәрәк, Федоренко? Йәшәй белергә. Ә йәшәй белеү өсөн ни эшләргә? Яраҡлашырға... Шуға күрә, Федоренко, һиңә шефтың йөрәген яулап алырға кәрәк.

Фәтихов ихлас ғәжәпләнгән булды.

— Нисек?

— Нисек? Билдәле, намыҫлы хеҙмәт менән. Йәғни стахановса эшләргә. — Мануевич, киң, көслө тештәрен күрһәтеп, иһаһайлап көлдө. — Һо-һо-һо.

— Уныһы беҙҙән ҡалмаҫ, пан начальник.

— Ташла әле шул һүҙҙе — пан... Бынамын украин һүҙе бар — добродей. Добродей начальник! Здорово бит, ә! — Мануевич күҙ ҡыҫып алды. — Майор Рентель менән һине мин таныштырырмын әле, тик һин үҙеңде күрһәт, — ул күкрәген кереп алды ла йоҙроҡтарын һелкетеп ҡуйҙы, — немец халҡы эш һөйгән кешене ярата.

— Ә ниндәйерәк кеше һуң ул майор Рентель?

— Улмы, — Мануевич тейешле һүҙ эҙләп һуҡ бармағын бөтөрөп торҙо, — шә-әп кеше! Эшләй ҙә, эшләтә лә белә, — Мануевич һиһылдап көлдө. — Бабник высшего класса. Ҙур күкрәкле, йомро... — Ул ҡулдары менән билдән түбән урынды күрһәтте, — йәш хохлушкаларҙы күрһә, ҡалтырана башлай. Дөрөҫ, немец һалдаттарына, офицерҙарына урыҫ, украин ҡатын-ҡыҙҙары менән сыуалыу тыйыла, әммә... Майор Рентель теләһә алланың үҙен дә алдай ала.

Фәтихов Мануевич менән башҡаса һөйләшеүҙең хәжәте юҡлығын аңланы.

— Миңә китергә яраймы, добродей начальник?

— Тағы берәрҙе ебәрәбеҙме? Һаҫы, әммә...

— Рәхмәт. Етте. Быныһы ла ашҡаҙанына йәбеште.

— Төкөр! Һуғыш ваҡытында ашҡаҙаны түгел, баш ҡаҙаны, — ул дүрткелле маңлайына төртөп алды, — ҡәҙерле. — Мануевич ҡапыл айныны һәм эшлекле кешегә әйләнде. — Ә һин немецса беләһеңме?

— Фольксдойч бул да...

— Ә бына мин шул телде һис егә алмайым, ауыҙым килешмәй. Немецса һөйләшә башлаһам, немецтар тәгәрәп көлә.

— Ауфвидерзеен, һерр Мануевич!

— Ауф-ауф-дэр-зайн... Телеңде һындырырһың. Ә бына сәләмләшеүҙәре оҡшай, — ул уң ҡулын алға, өҫкә ырғытты. — Һайль! — Мануевич Фәтиховты ишек төбөнә саҡлы оҙата килде лә уның еңенән сытырлатып тотто. — Ә Гитлер башлы кеше булып сыҡты бит. Биш-ун йылда сереп ауырға торған Германияны бөйөк державаға әйләндерҙе. И самое главное, — Мануевич йоҙроҡтарын төйнәне. — Мыйығы бәләкәй булһа ла, беҙҙең ҙур мыйыҡты төп башына ултыртты. Договор. Шури-мури и Мәскәү — Гитлер ҡулында.

Фәтихов Мәскәү, Ленинград, фронт хаҡында дөрөҫ кенә мәғлүмәтте белмәй әле. Шуға күрә Мануевичтың һүҙе уны һағайтты.

— Нимә, Мәскәүҙе... — Уның «алғандармы ни?» тигән һүҙҙе әйтергә теле барманы.

— Алыуын алмағандар, әммә... — Ул ҡулдарынан ҡоршау яһаны. — Утлы ҡулса эсендә. Аҙна-ун көндән — Мәскәүгә, ә унан һуң Россияға капут. Ул сағында һиңә лә, фольксдойч, ҡапҡа шар асыласаҡ...

— Китәйем әле, пан начальник...

— Ингеләп йөрө. Беҙҙең һинең менән бутҡа бешерәсәкбеҙ... төҫлө...

Коридорға сыҡҡас, Фәтихов ҡулдарын салбарына һөртөп алды. «Хәшәрәт! Лайла! Һатлыҡ йән! Түҙ, Фәтихов, түҙ, һиңә улар менән йыш осрашырға, тығыҙ бәйләнештә булырға тура киләсәк әле. Ни эшләйһең бит, подпольщиктың эше шулай...»

Бер нисә көндән судоверфтә көтөлмәгән осрашыу булды. Механика цехының ҡалай менән ҡапланған ишеген асыу менән, коридорҙа теге көндө Андрей сиркәүендә күргән йәш, таҙа егет менән саҡ-саҡ маңлайҙары төкәшмәне. Тәүге минутта икеһе лә ҡаушап ҡалды. Егеттең ҡулында ниндәйҙер ҡағыҙ ине.

Фәтихов үҙе лә аңламаҫтан ялт итеп «Иғландар. Белдереүҙәр. Приказдар» таҡтаһына күҙ ташланы. Бая ғына эленеп торған свастикалы бер бойороҡ уртанан умырылып алынғайны — свастикаға ҡунаҡлаған бөркөттөң ҡанат осторо ғына тороп ҡалған. Фәтихов оҙон кәүҙәле таҙа егеттең ҡулына ҡарап алды.

— Ҡулыңда нимә? — тине ул ҡырҡа ғына.

— Унда һинең ни эшең бар? — тип тешләште егет.

— Һәле күрһәт!

— Яҡын килеп кенә ҡара, гад! Бер һуғыуҙа ергә һеңдерермен! — Егет ҡаршыһында торған урта кәүҙәле ҡаҡса кешегә көйҙөрөрҙәй итеп ҡараны ла ишеккә йүнәлде.

Фәтихов күҙ асып йомғансы тимер ҡыҫҡыстай бармаҡтары менән уның беләгенән эләктерҙе — егет сытырлатып ҡыҫылған йоҙроғоноң яҙылыуын һиҙмәй ҡалды. Фәтихов ҡағыҙҙы алды. Был, ысынлап та, майор Рентелдең ҡанат остары өҙөлгән бөркөт төшкән приказы ине. Егет ишеккә ташланды. Фәтихов ишекте арҡаһы менән терәне һәм асыуланыуҙан бигерәк мыҫҡыллап һораны.

— Һиңә нисә йәш?

Егет тешләшеүен дауам итте.

— Унда һинең ни эшең бар? — Ул икенсе яҡҡа китмәксе булды, тимер ҡыҫҡыс йәнә уның беләгенән эләктерҙе.

— Ебәр, гад! Юғиһә...

— Ни эшләтерһең?

— Уныһы — минең эш... — Егет теҙе менән Фәтиховтың сатына тибергә итте. Фәтихов ялт итеп уның аяғын тотоп алды, егет иҙәнгә барып төштөм тигәндә, Фәтихов йығылырға ирек бирмәне.

— Ә шулай ҙа һиңә нисә йәш?

Егет был юлы Фәтиховтың тауышында асыу ҙа, мыҫҡыл да түгел, хуш күңеллелек, хатта йәлләү һиҙҙе.

— Ну, әйтәйек, егерме өс, ти. Ә һиңә минең метрикам ниңә кәрәк булды?

— Егерме өс... Шаҡтай күп, ә бына бала-сағалығың һаман бөтмәгән, — ишеккә күрһәтеп башын һелкте. Егет аңланы. Улар тышҡа сыҡтылар. Алан-йолан ҡарандылар ҙа яр буйында тутығып ятҡан якорға ултырҙылар.

— Тартаһыңмы? — Был һүҙ күптән таныш булған кешегә әйтелгән һымаҡ әйтелде.

— Мөмкин... — Егеттең тауышында һаман да һағайыу, асыу бөтмәгәйне әле.

Улар һөйләшмәй генә тәмәке төрҙөләр. Фәтихов үҙ тәмәкеһен тоҡандырҙы ла шырпыһын сиртеп осороп ебәрҙе. Егет, уға асыулы ғына ҡарап алғас, салбар кеҫәләренә

һуҡҡылап, шырпы эҙләй башланы. Фәтихов янған тәмәкеһен уға һуҙып, егеттең һорғолт зәңгәр күҙҙәренә тишеп ҡараны.

— Ә минең бит һине күргәнем бар.

Егет тынды.

— Ә минең — юҡ.

— Ә Андрей сиркәүендә? Һул ҡулыңда бынауы кепкаң ине...

Егет киреләнеүен дауам итте.

— Ә мин аллаға ышанмайым... — Егет сиселеп бармай ине, бындай осраҡта иң дөрөҫө һырышҡаҡ булмау.

Улар әленән-әле аҡһыл һары Днепр ҡомона төкөрә-төкөрә тәмәке һурҙылар. Былайға китһә, Фәтихов «буш ҡул» менән китәсәк, «якорҙы» алыҫҡараҡ ташлап ҡарарға кәрәк.

— Егет, исемеңде белергә булалыр бит? Былай һөйләшеүе уңайһыҙ. Мин, мәҫәлән, Федоров.

Егет башын күтәрмәй генә яуап бирҙе.

— Инкогнито түгелмен. Василь.

— Ҡайһы цехта эшләйһең?

— Электр цехында.

— Электрикмы?

— Эйе.

— Яҡшы профессия. Судоверфтә күптәнме?

— Күптән...

Фәтихов «якорҙы» үҙенә табан тарта башланы.

— Улайһа, таныштарың күптер...

— Элек ярты судоверфь таныш ине, ә хәҙер... күбеһе завод менән эвакуироваться итеп киткән.

— Ә һин ниңә эвакуироваться итмәнең?

Василгә уның төпсөнөүе оҡшамай башланы ахыры.

— Немецтарға судоверфте тиҙерәк торғоҙоп, Германияға украин икмәген, салоһын оҙатырға ашығам...

Василь был мыҫҡыллы яуабы менән, әйтергә яраһа, үҙенең кемлеген асып һалды, әммә Фәтихов быға иғтибар итмәне.

— Алыҫ йәшәйһеңме?

— Бөтә речниктар шикелле, Подолда.

— Подол... Бер йүнле-башлы ҙур, матур йорттары булмаһа ла, яратам мин Подолды... Киев башланған урын бит...

Тәү тапҡыр Василь Фәтиховҡа һорау бирҙе.

— Һеҙ ҙә Киев кешеһеме?

— Түгел, әммә Киевта күп булғаным бар.

Инициативаны Василь ҡулға алмаҡсы булды.

— Ә әле Киевҡа нисек килеп эләктегеҙ?

Фәтихов күңелһеҙ генә йылмайҙы.

— Немецтарға судоверфте тиҙерәк торғоҙоп, Германияға уңрайын бойҙайын, салоһын оҙатыр өсөн.

Василь рәхәтләнеп көлдө. Ниһайәт, ышанмаусанлыҡ томаны таралып бөттө шикелле.

— Ғаиләң бармы?

— Бар... ине.

— Нисә — ине?

— Эвакуацияла.

Был һүҙ ҡапыл Фәтиховтың йөрәген семтеп алды. Ә уның ғаиләһе ҡайҙа икән? Немец Орелды алған, тиҙәр, тимәк, Рима менән Ида күсеп киткән Елец ҡалаһы ла улар ҡулындалыр... Ҡөнсығышҡа күсеп китә алдылармы, әллә... (Был ваҡытта Фәтиховтың ғаиләһе Алтай крайында Ҡарасуп тигән станцияла йәшәй ине инде.)

Уның уйҙарын Василь бүлде.

— Ярай, мин киттем. Тәмәке өсөн рәхмәт!

Фәтихов та торҙо. Бая Василдән тартып алған ҡағыҙҙы ваҡ киҫәктәргә йыртҡыланы ла үксәһе менән соҡоған ҡом аҫтына күмде.

— Ә был эш менән, Василь, шаярырға ярамай. Башһыҙ тороп ҡалыуың бар.

Василь өмөтһөҙ генә ҡулын һелтәне.

— Һә-әй...

— Нимә — һә-әй?

— Эш минең башта ғынамы ни...

— Уныһы шулай, әммә.... башты бер ҡырҡып ташлаһалар, кире ялғап булмай.

Василдең һорғолт зәңгәр күҙҙәрендә таштарҙы иретерлек осҡон тоҡанды.

— Иң еңеле һәм... хәүефһеҙе — ҡыуаҡ аҫтында боҫоп ятыу. Башың түгел, бер бөртөк сәсең дә өҙөлөп төшмәйәсәк. До побачения! — Ул китә башланы.

— Тороп тор, Василь. Ә ни эшләмәксе булаһың?

— Ни ҡушһалар, шуны эшләрмен, мин бит бәләкәй кеше — рядовой электрик.

— Мин ул хаҡта түгел...

— Ә нимә хаҡында?

— Кисен ни эшләйһең?

— Ни эшләйем?.. Комендант сәғәте. Ҡойроҡто ҡыҫып өйҙә ултырырға тура килә...

— Минең бер шешә первач бар (алдай, уның первачы түгел, көмөшкә әсеткеһе лә юҡ), лығырлап ултырырға ине...

Пауза. Көтөлмәгән тәҡдимдән Василь ҡаушабыраҡ ҡалды шикелле.

— Миндә ярамай... Әсәйем ҡаты сирләй...

— Ни булған? Ҡартлыҡ сиреме, ҡайғы сиреме?

— Белмәйем... Ҡартлыҡ, тиһәң, уға әле алтмыш ҡына йәш...

— Йә, улайһа, ярай. До побачения!

— До побачения!

Улар айырылыштылар һәм икенсе көндө йәнә осраштылар. Был юлы Василь уны үҙе эҙләп тапты.

Подпольела көрәшергә теләүселәрҙең дәлилдәре төрлөсә була.

Берәүҙәрҙең маҡсаттары, аяҙ көн шикелле асыҡ — мөмкин саҡлы дошманды күберәк ҡырып, мөмкин саҡлы Тыуған илебеҙҙе тиҙерәк азат итергә.

Икенселәрҙе, бигерәк тә йәштәрҙе, подвиг романтикаһы әйҙәй...

Өсөнсөләре: «Мин башҡаларҙан ҡай ерем менән кәм?» — тип үҙҙәренең ир-егетлеген иҫбат итергә ынтылалар.

Дүртенселәре иһә...

Эйе, батырлыҡ эшләүҙең сәбәптәре һәм категориялары күп: берәүҙәр дөйөм эш өсөн, тыуған ере өсөн күрәләтә үлемгә баралар, икенселәр, үлемдән ҡурҡып, осраҡлы рәүештә батырлыҡ күрһәтәләр.

Ә минең романымдың геройҙары — Фәтихов менән бер сафта көрәшкән **выждан** һалдаттары. Уларҙы подполье өсөн айырым әҙерләмәнеләр, махсус ҡоралдар менән ҡораллаңдырманылар. Улар, нәфрәт утында көйөп, кеҫәләренән генә дошманға йоҙроҡ төйнәп йөрөү менән ҡәнәғәтләнергә теләмәнеләр, улар нәфрәттәренән дошманды яндырып көлгә әйләндерергә үҙ иректәре менән подпольеға килделәр, подвигка һәм үлемгә барҙылар.

Хәҙер мин батырлыҡ һәм үлем тураһындағы новеллаларымды хикәйәләй башлайым.

Беренсе һүҙ Василь Железко хаҡында.

Ни өсөн уның хаҡында? Василь, хәҙер инде Василий Иванович Железко, подпольела байтаҡ батырлыҡтар эшләгән ҡыйыу, сая кеше генә түгел, һуғыштан һуң граждан лыҡ батырлығы эшләгән һалдат та. Подол группаһы подпольщиктарының эштәрен халыҡлаштырыу, иҫтәлектәрен мәңгеләштереү өсөн оҙаҡ йылдар ғүмерен сарыф иткән рыяһыҙ кеше лә. «Билдәһеҙ юғалған» капитан Фәтихов Нур, байтаҡ йылдар үткәндән һуң, тыуған яҡтарына — Башҡортостанға йыр һәм легенда булып ҡайтыуына ла Василий Иванович Железко сәбәпсе. Шуға күрә мин капитан Фәтиховтың көрәштәштәре хаҡындағы новелламды Железконан башлайым.

# УН ЕТЕНСЕ НОВЕЛЛА

## Матрос. Электрик. Музыкант

— ...Һеҙ миңә, тормош юлығыҙҙы ентекләп, ҡыҙыҡлы һәм ғибрәтле деталдәрҙе төшөрөп ҡалдырмай һөйләп бирегеҙ, тиһегеҙ. Минең биографиям — минең замандаштарымдың биографияһы. Минең тормош юлымда, дөрөҫөрәге тормош һуҡмағымда, шаҡ ҡатырлыҡ, иҫ китерлек боролмалар юҡ шикелле. Әммә ике осраҡлы тура килгән хәл менән ғүмергә ғорурланам. Мин кешелек тарихы бөйөк боролош яһаған йылда — ун етенсе йылдың етенсе ноябрендә (ул саҡта әле 25 октябрь) — Киевта Тарас Шевченко бульварының беренсе һанлы йортонда донъяға килгәнмен. Дөрөҫ, «Аврора» залпын — мин, минең тәү тапҡыр һөрән һалып ҡысҡырыуымды «Аврора» ишетмәгән.

Икенсе осраҡлы тура килеү — капитан Фәтихов. Ул булмаһа, уны күрмәгән булһам, бәлки, мин әле һинең менән һөйләшеп тә ултырмаған булыр инем.

Миңә бер ҡасан да атайымдың теҙенә ултырып шаярырға ғына түгел, уның тауышын ишетергә лә тура килмәне — миңә ике-өс ай тигәндә, ул аҡ бандиттар менән алышҡанда һәләк булған. Бер ярҙамсыһыҙ тороп ҡалған әсәйем, мине астан үлтермәҫ өсөн, Киевтан алыҫ булмаған ауылға — Великая Вельшанкаға апаһы янына күсеп киткән. Әсәйемдең апаһы ла бик ҡыҫынҡы йәшәгән — аяҡһыҙҙан-ҡулһыҙ һигеҙ бала, әммә үҙ һөйәге бит, беҙҙе һыйҙырған, кескәй генә хатаһынан бер мөйөш биргән. Әсәйем көнө-төнө куркулдарға бил бөккән. Ә мин, ҡытлыҡҡа, нужаға үс иткәндәй, таҙа булып үҫкәнмен — армиянан ҡайтҡанда буйым 187 сантиметр, ауырлығым 95 кило ине. Минән: «Бына, исмаһам, баһадир, ҡайҙа, ниндәй һыу эсеп шулай үҫтең?» — тип һораһалар: «Нужа һыуын ҡуш услап эсеп үҫтем», — тип тегеләрҙе көлдөрҙөм.

Утыҙынсы йылға саҡлы Великая Вельшанкала уҡыным. Ихтимал, шуның менән минең «белем гранитын» кимереүем тамамланған да булыр ине, яҙмышыма рәхмәт, тормош юлында Гушло Андрей Александрович тигән изге күңелле кеше осраны. Ул Киевтағы 136-сы полкта тынлы оркестрҙа старшина булып хеҙмәт итә ине.

Хәтерләйем. Апрель баштары. Мин муҡсамды болғай-болғай һыҙғырып мәктәптән ҡайтып киләм. Хәрби кейем кейгән бер ағай мине туҡтатты. «Матур һыҙғыраһың, порубка. Музыкальный малайға оҡшағанһың», — тип мине маҡтаны. Мин ҡыҙарҙым. Бер һүҙ ҙә әйтмәнем. Теге: «Давай мин һине Киевҡа үҙебеҙҙең полкка алып китәм. Музы-

кант булырһың», — ти. Мин ни — гөлт, шунда уҡ тоҡандым. «Ҡитәм!» Әсәйем бер һүҙһеҙ риза булды — утыҙынсы йыл ифрат ауыр йыл ине.

Миңә, кәүҙәмә ҡарап, полк тегеүсеһе гимнастерка, галифе тегеп бирҙе, итексе бынамын күндән итек әтмәләне. Тик минең башыма ярарлыҡ фуражка табыуы ғына еңел булманы. Баштан-аяҡ хәрби кейемгә төрөнгәс, түбәм күккә тейҙе — минең бит ошо йәшемә етеп әле әҙәм рәтле кейем кейгәнем юҡ ине, старшинанан өйгә ҡайтып килергә рөхсәт һораным. Изге күңелле Андрей Александрович: «Юҡ, Василь, тәүҙә һин һалдатса йөрөргә өйрән, унан Вельшанкаға ҡайтып күренерһең», — тине. Мин көнө-төнө һалдаттарса йөрөргә, честь, рапорт бирергә өйрәндем. Ауылға ҡайтҡас та, әсәйем янына тыҡ-тыҡ баҫып атлап килеп, честь бирҙем: «Евдокия Ивановна, — тим, — сын полка Василь Желедко в краткосрочный отпуск прибыл!» Әсәйемдең тәүҙә күҙҙәре бермә-бер ҙурайҙы, унан мине ҡосаҡлап иларға тотондо. «Василек... ҡалай үҫеп киткәнһең... Атайың күрһә, нишләргә лә белмәҫ ине...» Унан мине орсоҡ һымаҡ бөтөргөләне, бер алдыма, биш артыма төштө, строй аҙымдары менән йөрөтөп ҡаратты, рапорт бирҙерҙе, унан мөгәрәптән алып сығып, һалҡын һөт менән һыйланы...

Ете йыл буйы музвзводта торбаға өргәндән һуң, мине өйгә ҡайтарҙылар. Типһә тимер өҙөрлөк егерме йәшлек егетте ҡайҙа барһаң, шунда дүрт ҡуллап ҡаршы алалар ине, әммә Днепр буйында тыуып, ете йыл Киевта хеҙмәт иткән кешене Днепр үҙе янынан ебәрмәне — караптар төҙөү һәм ремонтлау заводында электрик булып эшкә индем. Бик тиҙҙән үҙемде комсомол-йәштәр бригадаһының башлығы итеп ҡуйҙылар. Эш ҡыҙыҡлы ғына түгел, үтә яуаплы ла ине — хәрби йылға караптарын: мониторҙарҙы, канонир кәмәләрен, бронекатерҙарҙы электр менән йыһазландырыу. Төп эштән башҡа музыка менән шөғөлләнәм — ҡала тынлы оркестрына етәкселек итәм. Ҡышҡы кистәрҙә шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә завод клубында, йәйге кистәрҙә Владимир горкаһындағы оркестрҙа уйнап, йәштәрҙе бейеттек, йырлаттыҡ.

Утыҙ һигеҙенсе йылда беҙҙең тынлы оркестр, йылғасыларҙың бөтә Союз конкурсында беренсе урынды алып, лауреат булды. Мине магнитофон менән бүләкләнеләр. Сочиға буш путевка бирҙеләр. Мин шул шатлыҡтанмы икән, ваҡыты еткәнлектәнме (хәйер, миңә бит әле егерме бер йәш тә юҡ ине...), өйләнергә булдым Беҙҙең заводта эшләүсе потомственный карапсы Черкосовтың тал һымаҡ нәҙек, зифа ҡыҙыҡайы Оленька йыш ҡына завод клубына тансаға килә торғайны. Тромбонымды Тадеуш Касинскийға тапшырып

(Ул тромбонда ла, торбала та уйнай торғайны), Оляны бер нисә тапҡыр тансаға саҡырҙым. Тора-бар үҙен оҙата бара башланым. Шулай итеп, утыҙ һигеҙенсе йылда мин уға ҡулымды һәм йөрәгемде тәҡдим иттем. Оля ла, ата-әсәһе лә бер һүҙһеҙ риза булдылар. Үҙем тыуған көндә — етенсе ноябрҙә: «Горько!» — тип ҡысҡырҙылар. Ҡырҡынсы йылдың мартында Сережа тыуҙы. Ҡыҫҡаһы, беҙ үҙебеҙсә (ә, минеңсә, һәр кем бәхетте үҙенсә аңлай һәм үҙ бизмәне менән үлсәйҙер) бәхетле инек, һәм ул бәхетте бер кем дә бер ҡасан да емерә алмаҫ төҫлө ине... Ә бына ҡырҡ беренсе йылдың егерме икенсе июнендә Ер үҙ күсәренән сыҡты һәм бөтә донъяла тетрәү башланды...

Ул көнгә ҡаршы кистә беҙ Владимир тауындағы баҡсала оркестрҙа уйнаныҡ һәм, танса бөткәс, ғәҙәттәгесә: «До побачения!» — тип, ҡулдарыбыҙҙы ҡыҫышып, өйҙәребеҙгә таралышманыҡ, ә йөрәк һиҙгәндәй, күмәкләшеп беҙгә киттек: трубач Тадеуш Касинский, флейтист Юра Помирковский, барабансы Ничепоренко. Ул саҡта беҙ Днепр аша һалынған «Петровский» күперенә алыҫ түгел Рыбальский ярымутрауында тора инек. Кәйеф шәп, төн йылы, матур: йырлашабыҙ, көлөшәбеҙ. Ольга, ғәҙәттәгесә, мине көтөп, үҙенең һандарына күмелеп (бухгалтерҙарҙың эше тауыҡ сүпләһә лә бөтмәй бит ул!), яҙышып ултыра ине. Беҙ этешә-төртөшә бер юлы бүлмәгә индек, кеҫәләребеҙҙән ике шешә портвейн сығарып, өҫтәлгә баҫтырҙыҡ (ул саҡта ҡатырағын ауыҙ итеп тә ҡарамай инек). Оля көтөлмәгән ҡунаҡтарҙы ҡуш ҡуллап ҡаршы алды, өҫтәлгә кәнфит, печенье килтереп ҡуйҙы. Тәүге рюмканы, беҙҙең оркестрҙағы традиция буйынса, бер кемгә лә арнамай, тост әйтмәй, «Хай живе!» тип кенә түңкәрҙек тә, Сережаны уятмаҫ, күршеләрҙе борсомаҫ өсөн, аҡрын ғына йырларға тотондоҡ. Мин башланым, миңә Оля ҡушылды, уға башҡалар эйәрҙе. Мин ул йырҙы әле лә хәтерләйем...

Железко терһәктәрен тубығына ҡуйҙы, эйәген йоҙроҡтарына терәне лә моңло күкрәк тауышы менән йырларға тотондо.

Розпрягайте, хлопці, коні,
Та лягайте самі спать.
А я піду в сад зелений,
В сад криниченку копать...

Василь украин булғанлыҡтан ғына түгел, ә... был йырға үҫмер саҡта музвзводта хеҙмәт иткәндә үк ғашиҡ ине.

Шулай, полк походтанмы, манёврҙанмы арып, асығып ҡайтып килә. Һалдаттарҙың уй-хистәре бер генә — винтовкаларҙы таҙартырға ла тиҙерәк карауатҡа тәгәрәргә һәм

төшһөҙ ҡаты һалдат йоҡоһона талырға... Колонна башында килеүсе взвод арка янына яҡынлашҡас, уларҙы ҡаршыларға сыҡҡан музвзводтың капельмейстеры Гушло музыканттарға күҙ ҡыҫып ала ла ҡулдарын өҫкә күтәрә. Был: «Ҡойо ҡаҙырға киттек», — тигәнде аңлата. Оркестр дәртләнеп уйнап ебәрә, тирә-яҡҡа баҡыр инструменттарҙан сыҡҡан көслө моң тарала. Ҡыҙыл армеецтарҙың баштары күтәрелә төшә, йөҙҙәренә йылмайыу, дәрт сыға, аяҡтар ҡатыраҡ баҫа башлай, винтовкалар арҡаға нығыраҡ йәбешә. Ул арала запевала көслө күкрәк тауышы менән йырлап ебәрә.

Розпрягайте, хлопці, коні,
Та лягайте спочивать...

Железко биттәрен ҡаплап, һүҙһеҙ ултырҙы. Бәлки, ул һуғыш алдынан булған һуңғы тыныс, зәңгәр кисте, дуҫтарын — музыканттарҙы (уларҙың береһе лә һуғыштан әйләнеп ҡайтмаған), Ольгаһын (күптән түгел йөрәк сире уны иренең йылы ҡуйынынан тартып алып, һалҡын ер ҡуйынына илтеп һалғайны) күҙ алдына килтергәндер...

Ниһайәт, Железко ҡулдарын битенән алды, ғәйепле кеше һымаҡ йылмайҙы...

— Онота алмайым ул кисте. Бәлки, һуңғы һулышыма саҡлы онота алмам, — ул тирә-яҡтағы бөтә һауаны һулап бөтөрөрҙәй итеп тын алды ла һауаны күкрәгенән бер юлы ҡыуып сығарҙы. — Йыр менән, һүҙ менән мауығып, таң атҡанды ла һиҙмәй ҡалғанбыҙ. Кемдер, таң да атҡан бит! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, кемдер барып утты һүндерҙе. Бөтәбеҙ ҙә тәҙрәгә ябырылдыҡ. Таң атҡанда (ә беҙҙең тәҙрәнән Днепр йәйрәп ята!), Днепр айырыуса күркәм — һыу өҫтөнән теләр-теләмәҫ кенә шыйыҡ һөт төҫлө аҡ томан күтәрелә, томан эсенән һирәк-мирәк аҡсарлаҡтар сырылдашып оса, улар был саҡта ниндәйҙер әкиәт ҡошона, төштә күргән ҡошҡа оҡшайҙар... Шул мәл ҡайҙалыр көслө шартлау ишетелде, самолет геүләгәндәй итте, шунан икенсе, өсөнсө шартлау, гөрһөлдәү... Яҡынайғандан-яҡыная... Беҙ аптырап (әле ҡаушау юҡ ине), тәҙрә янынан киттек. Өҫтәлдәге рюмкалар ауған, кемдеңдер эсеп бөтөрмәгән виноһы түгелеп, ап-аҡ ашъяулыҡта ҡыҙғылт сейә төҫөндәге ҙур тап хасил булған. Мин әллә ни эшләп киттем — был тап, иңәлер, миңә ҡан табын хәтерләтте.

— Был нимә булырға мөмкин? — тине Оля.

— Нимә булһын, манёврҙыр, — тине кемдер.

Ул арала күрше ҡатын Лида Малышева атылып керҙе (ишек бикле түгел ине). Сәсәй-сәсәй: «Егеттәр! Һуғыш!» — тип һөрән һалды.

Беҙ уға ташландыҡ.

— Ул ниткән һүҙ? Аҡылың табаныңа төштөмө әллә?

— Мин ысынлап әйтәм, егеттәр...

— Кит... Юҡһа.... Германия менән беҙҙең договор бар...

Лида үпкәләп сығып китте.

Ә Лида хаҡ ине. Егерме икенсе июнь таңында Германия беҙҙең ил сиген һәм күк сиген боҙоп инде, байтаҡ ҡына калаларҙы, шул иҫәптән Киевты ла, бомбаға тотто.

Ашыҡ-бошоҡ кейенеп, мин заводка саптым. Ни саҡлы ашыкһам да, завод ярһыу, асыулы кешеләр менән тулғайны. Митинг. Завод директоры Аким Зиновьевич Бабенко, партком секретары Федор Михайлович Кушнир, йоҙроҡтары менән һауаны яра-яра, намыҫһыҙ, әшәке, вәхши дошманға нәфрәттәрен белдерҙе, беҙҙе Гитлерҙың муйынын борон ырғытыр өсөн тағы ла тырышыбыраҡ эшләргә өндәне.

Мин митингынан һуң уҡ фронтҡа ебәреүҙе һорап ғариза яҙҙым. Дүрт көндән мине армияға, дөрөҫөрәге, йылға флотилияһына матрос итеп алдылар (алғанда: «Күпкә түгел, фашистарҙы, ҡандала кеүек, һытып үлтергәс тә, әйләнеп ҡайтырһың», — тинеләр). Өсөнсө июлдә Оля Сережа менән баржаға ултырып эвакуироваться иткән, уларҙың карабы беҙҙең канонир кәмәһе янынан ғына үткән, әммә беҙ бер-беребеҙҙе күрмәнек. Был хаҡта һуғыштан һуң осрашҡас ҡына белдек.

Тәүҙә «Кременчуг» исемендәге канонир кәмәһендә электрик булып хеҙмәт иттем, унан... һуғыш... Дошманды Киевҡа ебәрмәү... Өс ай эсендә һуғышта ( ә беҙ бит ерҙә түгел, һыуҙа һуғыштыҡ) күргәндәрҙе ентекләп һөйләп тормайым, ваҡытты күп аласаҡ, һеҙ минең хаҡта түгел, капитан Фәтихов хаҡында яҙаһығыҙ бит, яйы килгәндә, берәй һөйләрмен әле йә яҙып ебәрермен. Ҡыҫҡаһы, яндыҡ та, көйҙөк тә. Көндөҙ Киев тирәһендәге Днепр төтөн эсендә, төндә ялҡын эсендә булды. Тыныс ваҡытта «һирәк ҡош осоп сығырлыҡ йылға» бик тар тойолдо, төрлө маневрҙар яһарға ауыр булды. Ярга сығып штык атакаһына ла барҙыҡ, ватылған кәмәбеҙҙе ут эсендә ремонтланыҡ та, яр буйлап, бурлактар һымаҡ, канат менән һөйрәнек тә... Тик мин ике һуңғы һуғышты ғына хәтерләп китәм, береһе — һыу өҫтөндә, икенсеһе — ерҙә. Һәм... нисек итеп Киевҡа әйләнеп ҡайтыуым тураһында әйтеп үтермен. Үкенескә ҡаршы, еңеүсе булып түгел, еңелеүсе булып...

Дошман снаряды рубкаға килеп төшөп, уны селпәрәмә итте, динамомашина һәм электроэнергияны таратыусы щит эштән сыҡты, биш кеше ҡаты яраланды. Карап электрһыҙ тороп ҡалды, әммә экипаж бирешергә теләмәне.

«Карапта һуңғы кеше, һуңғы патрон, һуңғы снаряд ҡалғансы көрәшербеҙ!» — тип ҡысҡырҙы ла карап командиры лейтенант Подгорный, артиллерист лейтенант Житомирский янына килеп, пушка көбәгенә үҙе снаряд тыҡты. Немецтар караптың бирелергә, тынырға теләмәүен күреп ҡоторҙолар, яндыра торған снарядтар яуҙыра башланылар. Бер снаряд капитан күперсегендә ярылды. Янғын башланды.

Боцман Борисейко, утҡа, үлемгә төкөрөп тә бирмәй, командаһы менән янғынды һүндерергә тотондо. Янғын һүндерелде, әммә ул үҙе ҡаты яраланды.

Сираттағы снаряд штурвал рубкаһын юнысҡыға әйләндерҙе. Хәҙер инде беҙҙең «Кременчуг» һыу өҫтөндәге гробҡа әйләнде.

Эш харап ине, былай булһа, беҙ немец ҡулына ҡабасаҡбыҙ, сөнки «Кременчуг» Днепрҙағы караптар сафында иң артта — арьергардта бара ине. Командование, беҙҙең карапты дошманға бирмәҫ өсөн, буксирға алырға булды, әммә «Кременчуг» һай урынға килеп ултырҙы һәм уны буксирға алған бронекатерҙың беҙҙе ҡуҙғатырға, алып китергә көсө етмәне. Дошмандың ҡотороп ут яуҙырыуына ҡарамаҫтан, беҙ һыуға һикереп төштөк тә, бронекатерға ярҙам итешеп, «Кременчугты» ҡуҙғатып ебәрҙек һәм буксир ярҙамында бер ҙур ауыл янындағы ҡултыҡҡа, ҡоластарын тирә-яҡҡа йәйеп ултырған бейек, мөһабәт груша ағастары төбөнә, йәшерҙек. Хәҙер инде «Кременчуг» үҙе пушкаһы, пулеметтары менән сигенеүсе пехотаны, артиллерияны ҡаплап, дошманға ут яуҙырҙы. Бына бер ваҡыт боеприпас бөттө, ә дошман, ҡул һуҙһаң, ҡул етерлек кенә — яҡын. Командование карапты шартлатырға приказ бирҙе. Шулай итеп, өсөнсө сентябрҙә беҙгә шул саҡлы ғәҙел, фиҙакәр хеҙмәт иткән боевой дуҫыбыҙ «Кременчуг» һәләк булды — Днепр төбөнә төшөп ятты. Ә беҙ лейтенант Подгорный етәкселегендә 21-се армияның һуңғы частарына ҡушылып һуғыша-һуғыша алға киттек.

Пехота ғына беҙҙе еңә алмағас, дошман мотомехчасын ярҙамға саҡырҙы. Немецтың көсө бер нисә тапҡырға артығыраҡ ине. Беҙ юҡҡа ҡан ҡоймаҫ өсөн урманға индек һәм моменттан файҙаланып, йырып сығырға тырыштыҡ, дошман быны һиҙеп ҡалып, беҙҙе ҡамап алды. Өс көн, өс төн һуғыштыҡ. Аҙаҡ, һыу, боеприпас бөттө. Хәҙер берҙәнбер сара — штыктар менән юл ярып, ҡамауҙан сығыу. Һигеҙенсе сентябрҙең томанлы таңында атакаға ташландыҡ. Моряктар бушлаттарын сисеп, тельняшкаларын асып ебәрҙеләр, каскаларын ырғытып, бескозыркаларын кейҙеләр ҙә беренсе булып атакаға ташландылар. Беҙҙең арт-

ған ярилыларҙы күтәреп алып киттеләр. Немец ни саҡлы үҙен көслө һанамаһын, беҙҙең штыҡтан, бигерәк тә матростарҙан, шөрләй ине — йырып сыҡтыҡ һәм, тын да алмай, Днепрҙың һай урынынан кисеп, Киевҡа табан юл тоттоҡ.

Киевта флотилия штабында яңынан формироваться итер өсөн беҙгә бер тәүлек срок бирҙеләр. Мин, был мөмкинлектән файҙаланып, заводҡа саптым. Завод танырлыҡ та түгел ине. Элек, һуғышҡа саҡлы, завод аҡҡош һымаҡ аҡ пассажир пароходтары, катерҙар, хәрби караптар эшләп сығарған булһа, хәҙер ишек алды тулы «яраланған» танкылар, хәрби техника менән тулғайны. Судоверфь директоры Бабенко завод менән бергә Мари АССР-ына эвакуироваться итеп киткән, уның урынына партком секретары, элекке баҡырсы, заводта утыҙ йылға яҡын эшләгән, сығыны менән йылғасы Федор Михайлович Кушнир ҡалған. Баш инженер вазифаһын элекке өлкән конструктор Яков Николаевич Зайцев үтәй икән. Комсомол комитеты секретары итеп техник-конструктор Рая Буяненкоһы тәғәйенләгәндәр.

Мин завод менән икенсе тапҡыр хушлаштым. Башҡа күрә аламмы, юҡмы — билдәһеҙ. Һуғыш бирәүҙе лә аямай... Бер тәүлек бер сәғәт кеүек кенә үтеп китте. Бына беҙ ун икенсе сентябрҙә йылға флотилияһының штабы территорияһындағы Ҡыҙыл майҙанда ҡамауҙан сыҡҡан моряктар, ике төркөмгә бүленеп, йөҙгә-йөҙ баҫып теҙелдек. Ҡыҫҡаса телмәр менән йылға флотилия командующийы контр-адмирал Рогачев һәм флотилия комиссары Кузнецов сығыш яһаны. Билдәле булды: беҙҙең төркөм Голосеев урманына Киевты һаҡларға ебәрелә. Шул сәғәттә үк беҙ йүгерә-атлап Голосеев урманына йүнәлдек. Ауыл хужалығы академияһы тирәһендә оборонаға урынлашырға өлгөрмәнек, ополченецтар менән берлектә дошман атакаларын кире ҡаға ла башланыҡ. Немецтарҙың ҡорос машиналары — танкылары көнө-төнө беҙҙе атакаланылар, әммә моряктар бер аҙым да артҡа сикмәне, тик приказ килгәс кенә ун туғыҙынсы сентябрҙән егерменсе сентябргә ҡаршы төндә Днепрҙың көнсығыш яғына сигендек. Шул көндө немец Киевҡа керҙе. Минең өсөн, Киев кешеләре өсөн (моряктарҙың күбеһе Киев кешеләре ине), бының ниндәй ауыр икәнлеген һөйләп тороуҙың хәжәте бармы икән? Был йөрәктең яртыһын ҡырҡып алыу менән бер ине. Тәүҙә ышанғы килмәне — нисек инде дошман мин йөрөгән урамдарҙан йөрөй, мин эскән һыуҙы эсә, мин һулаған һауаны һулай?.. Һуғыша-һуғыша, дошман авиацияһының бомбалары аҫтында ҡалмаҫҡа тырышып, Полтаваға табан сигенәбеҙ. Ә башы-аҙағы булмаған, билдәле бер командованиеға ғына

буйһонмаған колоннала кемдәр генә юҡ... Пехота, пехотаға әйләнгән моряктар (ә бер моряк эйәрһеҙ атҡа атланғайны, кемдер уға: «Әй, морская кавалерия!» — тип мыҫҡыллап ҡысҡырҙы), танкистар, артиллеристар, НКВД частарының ҡалдыҡтары, обоз, ополченецтар, һуңғы сәғәткә саҡлы фронт ихтыяжы өсөн эшләгән завод-фабрикаларҙың ҡоралды эшселәре... Барлы-юҡлы мөлкәттәрен бричкаларга, бәләкәй арбаларға, тачкаларға тейәгән ғәскәри булмаған халыҡ. Мал-тыуар: һыйыр, һарыҡ, кәзә, эт... Әле мәктәп йәшенә етмәгән ҡыҙыҡай бер ҡулына — үҙе теккән ҡурсағын, икенсеһенә аҡ маңлайлы бесәй балаһын тотҡан...

Ә дошман самолеттары күренһә, мәхшәр... Хәйер, киноларҙа күргәнегеҙ барҙыр инде, тик айырма шунда: кинофильмда режиссер ҡушҡанса тараламар, ергә яталар, торалар, «яраланалар», «үләләр», ә ул саҡта...

Көндәрҙең береһендә, яңылышмаһам, егерме өсөнсө сентябрь төнөндә, Борщи тигән һаҙлыҡтар янына етеп килгәндә, төрлө тауыштар араһынан таныш тауыш ҡолаҡҡа салынды. Шул яҡҡа киттем. Атаҡайым! Был бит беҙҙең партком секретары, аҙаҡ директор вазифаһын үтәгән Федор Михайлович Кушнир... Бәхетһеҙ осрашыу булһа ла, шатланып ҡосаҡлаштыҡ. Кушнир менән бергә заводтың башҡа етәкселәре лә бар ине: баш инженер Зайцев, инженер Отсель, ҡойоу цехы начальнигы Якименко, баҡырсы Рыкалов һәм башҡалар... Бөтәһе лә яҡшы ҡоралланған: винтовка, автомат, гранаталар... әммә өҫтәрендә еңелсә ине, минең һуғышсан дуҫым II статья старшина Исаев: «Ниңә шулай еңелсә кейендегеҙ? Тансаға йыйынмағанһығыҙҙыр бит...» — тип көлгәс, Кушнир көрһөнөп ҡуйҙы ла һөйләп алып китте. «Беҙ һуңғы көндәргә саҡлы ватылған танкыларҙы, пушкаларҙы ремонтланыҡ, сигенергә приказ булғас, заводтың электр станцияһын, насос станцияһын шартлаттыҡ, эллингылағы * ҡорос арҡандарҙы-тростарҙы өҙгөләп йылғаға ташланыҡ, моторҙарын эштән сығарҙыҡ, ә эшкә ярарлыҡ йыһаздарҙы, станоктарҙы, моторҙарҙы, мөһим инструменттарҙы билдәле урынға йылғаға батырҙыҡ. Аҙаҡ заводҡа ҡарауы ла ҡыҙғаныс булып ҡалды.

Шунан Кушнир мине бер яҡҡараҡ алып китте лә уға ғына хас асыҡ һәм ябай тел менән төшөндөрөп бирҙе. «Желедко, — тине ул, — һуғыш, былай булғас, тиҙ генә бөтөргә оҡшамай. Әммә Гитлер беҙҙе бер ҡасан да теҙ сүктерә алмаясаҡ. Бөтә ил, бөтә халыҡ изге һуғышҡа күтәрелде. Әгәр ҙә кемгә булһа ла дошман тылында ҡалырға тура килһә,

---

* *Эллинг* — караптың корпусы эшләнә, ремонтлана торған урында уны һыуҙан күтәргәндә йәки төшөргәндә ҡулланыла торған ҡоролма.

Башты әйеп, төшөнкөлөккә бирелеп, дошманға буйһоноп бирешергә ярамай. Ҡайҙа ғына булһаң да, нисек кенә булһа ла, дошман менән көрәшергә кәрәк. Һуңғы һулышҡа саҡла! Әгәр ҙә, — тине ул, ҡолаҡ төбөмдә шыбырлап, — ҡамауҙан сығырға тура килмәһә, Киевҡа үтеп инергә тырыш. Һин беҙҙең заводтың парикмахершаһы Мария Васильевна Куницаны беләһеңме?» — «Әлбиттә. Оҙон, зифа кәүҙәле, киң маңлайлы, бөҙрә сәсле ҡатын». — «Бына, тап үҙе. Ул Юрковский менән Туровский урамдары мөйөшөндәге дүрт катлы водниктар йортонда йәшәй. Шуға барырһың да: «Михайловичтан водниктар сәләме!» — тиерһең. Был — пароль булыр. Ә ул һине тейешле кешеләр менән таныштырыр. — «Әгәр был һүҙҙәргә генә ышанып етмәһә?» — «Ул сағында...» — Кушнир салбар кеҫәһенән нимәлер алып, миңә һондо. «Нимә ул?» — «Портсигар. Баҡырҙан үҙем эшләгәйнем. Бер яғына тулҡындарҙан барыусы катер һуғып төшөрөлгән, икенсе яғына минең инициалдарым яҙылған: *К. Ф. М.* Мария Васильевнаның портсигарҙы алып, «ювелирный эш» тип һоҡланғаны ла бар ине».

Ошо ваҡыт яҡында ғына бер-бер артлы ике мина ярылды һәм беҙҙең һүҙҙе бүлдерҙе. Беҙ инеп барған ауылда немецтар икән. Беҙҙең «Кременчугтың» ҡурҡыу, үлем белмәүсе командиры Подгорный: «Моряктар! Минең арттан алға! Ватан өсөн!» — тип ҡысҡырып, беҙҙе атакаға алып китте. Ауылдан немецтарҙы бәреп сығарҙыҡ. Ләкин беҙҙең сафтар ҙа һирәгәйҙе. Шунан һуң мин үҙебеҙҙең завод кешеләрен башҡа күрә алманым.

Ҙур төркөмдәр менән ҡамауҙан сығып булмаҫлыҡты аңлап, ваҡ-ваҡ төркөмдәргә бүлендек. Көндөҙ йырындарҙа, осраһа урманда, бесән кәбәндәрендә йәшенәбеҙ, төндә йүгерә-атлап көнсығышҡа һыпыртабыҙ. Ни саҡлы һаҡ ҡыланһаҡ та, барыбер, ике тапҡыр немецтарға эләгергә тура килде. Икеһендә лә уңайын тура килтереп ҡастым.

Шулай, Борисполь тирәһендә (Киевтан ҡырҡ километрҙар самаһы көньяҡ-көнсығышта), аҡланда бесән эҫкертендә йәшенеп ятам. Уйланам. Былай булһа, мин әйтәм, миңә ҡамауҙан сығырға яҙмаған. Өҫтәүенә, фронт һыҙығының ҡайҙалығын, ҡайҙа дошман, ҡайҙа үҙебеҙҙекеләр икәнлеген дә белмәйем. Төн килде. Эҫкерт өңөнән сығып, ҡайҙа барырға белмәй торғандан һуң, Киевҡа табан йүнәлдем. Бер нисә сәғәттән кескәй генә бер ауылға барып сыҡтым. Ауыл башындағы өйҙөң тәҙрәһенә сирттем. Яуап юҡ. Ауылға инмәй, урап үтмәксе булдым... Ер аҫтынан ҡалҡып сыҡҡан шикелле бер нисә автоматчик: «Һәнде һох!» — тип ҡысҡырҙы. Тороп йүгерһәң, шунда уҡ бәреп йығасаҡтар. Ҡулдарҙы күтәрергә мәжбүр булдым.

Ул саҡта Дарница аҡһыл һары ҡомдан, урмандарҙан торған ярым бушлыҡ ине. Немецтар әсирҙәр өсөн бында ҙур лагерь ойошторғандар икән. Мине лә шунда алып киттеләр. Дөрөҫ, уларға бер кеше менән ыҙаланып тормаҫҡа ла мөмкин ине, күрәһең, минең йәш, таҙа булыуым мине үлемдән алып ҡалғандыр. Лагерҙа беҙҙең заводта электрик булып эшләгән Степан Пикузаны осраттым. Ул миңә үҙенең справкаһын бирҙе. Ә справкала: «Пикуза С. В. окоп ҡаҙыр өсөн эшкә ебәрелә», — тип яҙылғайны. Яйын табып мин моряктар кейемен штатский кейемгә алмаштым. Шунан тәржемәсе украинец янына киттем. «Әгәр миңә бынан ҡотолорға булышһаң, — тинем тегегә, — бынауы сәғәтемде бирәм. Боронғо швейцар сәғәте «Пауль-Буре». Ҡөмөш. (Уныһын алданым инде.) Тәржемәсенең күҙҙәре маңлайына һикереп менде. «Киттек комендантҡа», — тине. Ул көндәрҙә әле немецтар либерал булып ҡыланырға тырышалар ине. Бигерәк тә украиндарға. Шуға күрә документың булһа, ҡала управаһы үтенеп юллаһа (эшсе ҡулы бик дефицит ине), лагерь начальствоһы Киев кешеләрен өйҙәренә ҡайтарып ебәрә торғайны. Ә лагерҙан сығарғанда, комендантмы, уның ярҙамсыһымы, азат ителеүсе кешеләрҙең ҡулбашынан ҡағып: «Немецтар — хуш күңелле халыҡ, уҫаллыҡ һаҡламай. Шуға күрә беҙ һеҙҙе өйҙәрегеҙгә ҡайтарабыҙ, ә һеҙ бының өсөн фюрерға рәхмәт әйтергә һәм Германия командованиеһына бөтә көсөгөҙҙө һалып ярҙам итергә тейешһегеҙ», — тип «фатиха» бирәләр. Күптәр фюрерга «рәхмәтте» бик тиҙ яуҙыра башланылар — урмандарға, партизан отрядтарына ҡушылып, подпольеға йәшенеп, оккупанттарға тынғылыҡ бирмәнеләр.

Шулай итеп, мин Степан Пикуза документы менән, әллә ни мажаралар күрмәй, Киевҡа әйләнеп ҡайттым. Дөрөҫ, был ҡайтыу маҡтанырлыҡ вариант түгел ине, әммә лагерҙан тиҙ һәм еңел ҡотолоу кескәй генә булһа ла шатлыҡ ине. Йәнә ирекмәмен. Фашистар менән һуңғы һулышыма саҡлы көрәшәсәкмен... Өйгә ҡайтып та тормай, туп-тура Подолға парикмахер Мария Васильевна янына киттем.

Мария Васильевна мине күреү менән тан786ны. Күҙҙәрендә аптырау, һағайыу ҙа сағылды, әммә тыштан бер ни ҙә белгертмәне, ҡайсыһын сиҡылдата-сиҡылдата клиентын ҡарауын дауам итте. Мин: «Сәс алдырырға мөмкинме?» — тип һораған булдым. Ул боролмай ғына: «Ниңә мөмкин булмаһын? Мөмкин!» — тип яуапланы. Клиенттар көтөп ултыра торған кескәй генә өҫтәл янында биттәренең мөйөштәре ҡарайып, ашалып, мунсалаға әйләнеп бөткән ниндәйҙер мода журналы һәм... район газетаһы форматындағы газета ята ине. Әллә беҙҙең «Водник» газетаһымы тип

алып ҡараһам, ҡулым бешеп китте — был немецтар Киевта яңынан сыға башлаған «Нове украиньске слово» газетаһы ине. Нәфрәтемде һиҙҙертмәҫкә тырышып, газетаны аҡтарған, күҙ йүгерткән булдым, әммә бер һөйләм дә уҡый алманым — күҙҙәрем томаланды — беҙҙең быуын, үҙең беләһең, Тыуған иле, тыуған ере өсөн йәнен-тәнен фиҙа ҡылырға әҙер булып үҫкән патриотик быуын ине, шуға күрә һуғыш булып ҡалһа, бер генә хыянатсы ла булыр төҫлө тойолмай ине, баҡһаң...

Ул арала Мария Васильевна клиентын «эшкәртеп» бөтөрҙө, танауға «тройной» одеколон еҫе килеп бәрелде, мин шунда уҡ сөскөрөп ебәрҙем — ни эшләптер, мин «тройной» одеколон еҫенән гел сөскөрәм. Клиент сығып китте. Мария Васильевна дерматины шаҡтай ашалған креслоға салфетка менән елпенде, швабра алып, иҙәнгә ҡойолған ерән сәсте һепереп, плитка мейесенә түкте лә: «Рәхим итегеҙ!» — тине. Креслоға ултырғас, көҙгөгә күҙ һалдым һәм.. үҙ-үҙемде таныманым: яңаҡтар яңаҡҡа йәбешкән, күҙҙәр эскә батып, юғалып ҡалған, битте һаҡал-мыйыҡ баҫҡан... Мария Васильевна: «Нисек ҡырҡырға? Подполькамы, боксмы, полубоксмы?» — тип һораны. Мин, яуап урынына: «Михайловичтан водниктар сәләме!» — тинем. Мария Васильевнаның артыҡ иҫе китмәне: «Рәхмәт», — тине лә минең сәсте ала башланы. Эшен бөтөргәс, ул пульверизаторлы түңәрәк шешә алып, одеколон һиптермәксе булғайны, унын ҡулын этәрҙем. «Кәрәкмәй. Беренсенән, минең бер тин дә аҡсам юҡ, икенсенән, унаһын әйтеп бөтөрмәнем, улай иткәнсе компресс», — тинем. Битемә эҫе салфетка ҡаплағас, Мария Васильевна: «Ҡайҙан, ҡамауҙанмы?» — тип һораны. «Ҡамауҙа ла, Дарницала ике-өс көн пленда ла булдым, — тинем. — Аҡсам юҡ, Мария Васильевна, һуғыштан һуң иҫәпләшербеҙ», — тип мин кеҫәмдән Кушнир биргән баҡыр портсигарҙы сығарҙым. Мария Васильевна, портсигарҙы күргәс, гөлт итте, әммә ялҡынын күрһәтмәне. «Унықымы?» — «Унықы». — «Ҡайҙа ул? Иҫәнме?» Мин Кушнир менән һуңғы ҡат осрашыуым тураһында һөйләп бирҙем. Мария Васильевна көрһөнөп ҡуйҙы. «Һәйбәт кеше ул Михайлович», — тине. Мине сәй менән һыйланы. Ул көндө мин өйҙә, Рыбальский ярымутрауында түгел, ҡайнымдың яҡын дуҫы Аким Анисимович Росстарҙа ҡундым.

Дөрөҫөрәге, йоҡо булманы тип әйтерлек — төнө буйы быш-быш һөйләшеп сыҡтыҡ. Росс һуғышҡа саҡлы үҙәк фотоательела ретушер булып эшләй ине, ә буш сәғәттәрендә радио менән мауыҡты. «Их, хәҙер берәй радиоприемник булһа, Мәскәүҙе тыңлап, фронт хәлдәрен аңлар

инек...» — тинем мин әсенеп. Росс: «Уйларға кәрәк, миндә ҡайһы бер радио деталдәре бар», — тип мине өмөтләндерҙе. Беренсе октябрь көнө мин йәнә Куница янына киттем. Креслола ултырған кеше минә таныш һымаҡ тойолдо — Мария Васильевна клиентының япмаһын алғас, мин саҡ ҡысҡырып ебәрмәнем — был беҙҙең заводта художество үҙешмәкәре менән етәкселек иткән Шульман ине. Моше Израилович шатлығынан ни эшләргә белмәне. Мария Васильевна, клиенттар инеп ҡамасауламаһын өсөн, «Тәнәфес» тигән табличка элеп, ишегеп тышҡы яҡтан бикләп ҡуйҙы ла үҙе ишек алдынан — «арт яҡтан» инде.

Немецтар ҡайҙа ҡарама приказдар, распоряжениелар, мөрәжәғәттәр яҙып йәбештереп, ҡурҡытып, өркөтөп, «алтын тауҙар» вәғәҙә итеп, халыҡты вермахтҡа булышырға өндәйҙәр ине. «Әйҙәгеҙ, беҙ был бойороҡтарға ҡаршы үҙебеҙҙең мөрәжәғәтте яҙып йәбештерәйек», — тине Мария Васильевна. Шульман да, мин дә риза булдыҡ. Мария Васильевна ҡайҙандыр улының яҙыла башлаған дәфтәрен, ябай ҡара ҡәләмен табып алып килде. Шульман эре баҫма хәрефтәр менән яҙҙы, беҙ Мария Васильевна менән әйтеп торҙоҡ. Листовка тигәнебеҙ туғыҙ биткә һуҙылды. Нимә генә юҡ ине бында! Гитлерҙы, кеше ашаусы, маньяк, шизофреник, тип һүктек, Геббельсты, Герингты тиҙәк менән бутаныҡ... «Берегеҙ ҙә фашистарға ярҙам итмәгеҙ, ҡайҙа кем булып ҡына эшләһәгеҙ ҙә, Германияға зыян итегеҙ. Һәр ерҙә немец һалдаттарын, офицерҙарын ҡырығыҙ...»

...Листовкаларҙы «Немец оккупанттарына үлем! Беҙҙең эшебеҙ хаҡ эш, дошман юҡ ителер, еңеү беҙҙең яҡта булыр!» тип тамамланыҡ.

Аҙаҡ Шульман листовканы ҡысҡырып уҡып сыҡты. Мария Васильевнаның приговоры аяуһыҙ булды: «Юҡ, былай булмай! Һүҙ буҡкаһы. Бер кем дә уны аҙағына саҡлы уҡып бөтөрмәйәсәк...»

Ә шулай ҙа яҙылғанды йыртырға теләмәнек, өйҙә башҡа ҡағыҙ юҡ ине. Ете төн уртаһында, ҡала шомло йоҡоға талғас, мин туғыҙ битле листовканы халыҡ күп йөрөй торған урынға, кинотеатр афишалары йәбештерелә торған таҡтаға, йәбештереп киттем. Төнөм йоҡоһоҙ үтте. Үҙемде ҙур эш эшләгән кеше һымаҡ тойҙом. Тулҡынландым. Һөйөндөм. Икенсе көндө листовканың яҙмышын белергә Межигорский урамына киттем һәм шатлығымдан саҡ ҡысҡырып ебәрмәнем — афишалар таҡтаһы янында бер нисә кеше баҫып тора ине. Улар нимә уҡығандарҙыр — беҙҙең листовканымы, оккупацион властарҙың бойороҡтарынмы, әйтә алмайым, әммә мин был ваҡытта бәхетле инем!

Тора-бара беҙ листовкалар яҙып таратырға ғына түгел,

дошманға ҡаршы төрлө акциялар эшләргә лә өйрәндек, әммә тәүге аҙым беҙгә рух һәм көс бирҙе. Ә шулай ҙа мине подпольщик булырға капитан Фәтихов өйрәтте. Уның менән осрашҡанға саҡлы булған минең эштәрем, әйтергә ярайһа, малай-шалайлыҡ шаярыуы ғына ине. Фәтихов миңә подпольеның юғары математикаһын өйрәтте. Минең иҫән-имен ҡалыуыма ла уның миңә биргән һабаҡтары ярҙам итте.

Ул миңә табан боролоп, тыйнаҡ ҡына йылмайҙы.

— Беләһегеҙме, уның яратҡан йыры ниндәй йыр ине? «Тореодор, тореодор, помнишь, что тебя ждет любовь...»

Любовь... мөхәббәт. Ә Фәтиховты белгән, уның менән ирлалашҡан кеше уны яратмай булдыра алмағандыр. Әйтә алмайым, бәлки, уның да китек-ҡотоҡ, ҡытыршы яҡтары булғандыр, әммә ул бәтә барлығы менән, һәр күҙәнәге менән, һәр тамсы ҡаны менән... ысын патриот ине.

Василь Железко тәмәке һурғанда, мин уға шундай һорау бирҙем.

— Тимәк, уның бер ҡасан да дошманы булмаған?

— Улай тип әйтмәйем. Минеңсә, иң яҡшы кешенең дә дошманы булалыр. Бына әле беҙ һеҙҙең менән ултырған шикелле, Днепр яры башында ултырғанда, ул үҙе менән булған бер күңелһеҙ хәлде һөйләгәне иҫемдә.

...Киевҡа килеп ике-өс йыл эшләгәс (утыҙ етенсе йылда түгелме икән?), ул партияға инергә була. Ни эшләптер, парткомиссия Фәтиховтың анкетаһына, автобиографияһына ғына ышанып етмәй, уның тыуған ауылына хат яҙып, социаль сығышы хаҡында документ һорай. Белмәйем, ул саҡтағы ауыл Советы председателенең Фәтиховта ни үсе булғандыр (ә ул бит ауылынан бөтөнләй малай саҡта уҡ сығып киткән), Фәтиховтың атаһы кулак, батрак тотто, кеше көсөнән файҙаланды, тип справка һалған. Фәтиховты парткомиссияға саҡыралар, ниңә партияны алдайһың, тип уның «яғаһына» йәбешәләр. Фәтиховтың сәстәре үрә тора. Үҙенең ниндәй нужа күреп үҫеүе, уҡыуы тураһында һөйләп бирә һәм, әгәр кулак балаһы булһаҡ, минең ағайым комиссар булыр инеме ни, тип аҡлана. Уның һүҙҙәренә ышаналар ҙа, ышанмайҙар ҙа — алда мисәтле ҡағыҙ ята бит. Фәтихов, бер аҙнаға отпуск алып, тыуған ауылына ҡайтып китә. Уның ҡайтыуын ишеткән председатель, сиргә һабышып, тиҙ генә больницаға китеп ята. Фәтихов коммунистарҙы, активистарҙы йыя һәм уларҙың күҙҙәренә ҡарап бер генә һорау бирә: «Иптәштәр! Яҡташтар! Әйтегеҙ, минең атайым кем? Кулакмы әллә ғүмер баҡый ете ҡат тирен түгеп көн күргән хеҙмәт кешеһеме?» Халыҡ хайран ҡала. Шаулаша башлай. Шунан Фәтихов Киевҡа ебәрелгән

справканың эстәлеген һөйләп бирә. Тағы шау-шыу күтәрелә. Ауыл Советы секретары ҡыҙара-бүртенә, ундай справкаға мин ҡул ҡуйманым, моғайын, Мөтәй ағай минең имзаны үҙе ҡуйғандыр, тип аҡлана. Ҡыҫҡаһы, бер аҙнанан Фәтихов парткомиссияға ялт итеп торған саф документ килтереп һала һәм уны бер тауыштан партияға алалар...

Минең күңелһеҙ уйҙарымды Железконың шат тауышы өҙҙө — рәхмәт уға!

— Килә! Килә! — тип ҡысҡырҙы ул, аяҡ үрә баҫып.

Мин Василь Иванович ҡараған яҡҡа боролдом.

— Кем килә?

— «Рая» килә.

— Ҡайҙа, ниндәй Рая?

— Ана... Днепрҙан килә... — Ул ағымға ҡаршы йөҙөп килеүсе дизельэлектроходҡа бармаҡ төртөп күрһәтте. — Ниндәй шәп, матур бара...

— Ә һин уны ҡайҙан таныйһың? Уларҙың күбеһе бер төҫлө бит, ә бынан бортындағы яҙыуҙы айырып булмай...

— Һы... «Раяны» мин йөҙләгән караптар араһынан да таный алам... Уның йөҙөүе... йөрөшө бөтөнләй башҡа... Аҡҡошмо ни...

## УН ҺИГЕҘЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Аҡҡош та ине ул, бөркөт тә...

— Василь Иванович, — тим, — Рая хаҡында тағы һөйләгеҙ әле. Бәлки, ниндәйҙер һыҙаттарҙы төшөрөп ҡалдырғанһығыҙҙыр...

Железко тынып ҡалды. Күрһәндә. Аңлайым, был күңелле хәтирә түгел. Һағыш. Әрнеү. Бөтәшмәҫлек йөрәк яраһы.

— Рая Буяненко... Дөрөҫөн әйткәндә, уның подвигы хәҙер легендарға әйләнгән Ульяна Громова, Зоя Космодемьянская, Лиза Чайкиналарҙыҡы кеүегерәк. Ныҡлап уйлап ҡараһаң, бер ҙә кәм түгел. Тик айырма шунда: берәүҙәргә дан ҡапыл килә, һәм улар бөтә халыҡҡа билдәле шәхескә әйләнә, ә икенселәргә... — Железко миңә ҡарап алды. — Әйткәндәй, бында яҙыусылар, кино, театр эшелдәренең дә роле ҙур.

— Нисек?

— Геройҙарҙың, теге йәки был шәхестәрҙең данын халыҡҡа еткереүсе, уларҙың күңеленә һеңдереүсе кешеләр — әҙиптәр, кино, театр әһелдәре. Әйтәйек, әгәр Фурмановтың

«Чапаев» тигән повесы, Васильевтарҙың шул исемдәге кинофильмы булмаһа, Василий Иванович легендар геройға әүәләнер инеме икән? Ә Краснодон подпольщиктарын Герой исеме биреү тураһындағы Указ ғына түгел, Фадеевтың «Йәш гвардия» романы ла кинофильм халыҡсан итте бит.

— Һеҙ хаҡ, Василь Иванович, китаптарҙың, кинофильмдарҙың роле, йоғонтоһо ғәйәт ҙур. Хатта урамдарға, майҙандарға бирелгән исемдәргә, мәрмәр, бронза һәйкәлдәргә ҡарағанда ла әҙәбиәт, сәнғәт һәйкәле оҙонораҡ ғүмерле һәм тәьҫир итеүсәнерәк була.

— Рая исемендә урам бар, мәктәп бар, ана Днепрҙа дизельэлектроход йөҙөп йөрөй, ә бына... — тетрәткес китап та, кинофильм да юҡ. Шуға күрә Рая исеме бая һанап үткән героиняларҙыҡы шикелле популяр түгел.

— Һеҙ хаҡ, Василий Иванович, Фәтихов исемен дә Башҡортостанда күптәр белмәй. Сөнки уның хаҡында мауыҡтырғыс, һоҡландырғыс әҙәби әҫәр ҙә, телефильм да юҡ.

— Яҙаһығыҙ бит...

— Яҙыуын яҙам... Дөрөҫ, мин был әҫәремде мажаралы роман итеп тә яҙа алыр инем, әммә... ундай еңел юл менән китмәҫкә булдым.

— Еңел? — Василий Иванович миңә ғәжәпләнеберәк ҡарап алды. — Мажаралы әҫәрҙәрҙе күберәк уҡыйҙар бит, бигерәк тә йәштәр ярата, ундағы геройҙарға оҡшарға тырышалар. Үҙегеҙ беләһегеҙ, мәшһүр француз яҙыусыһы Александр Дюма был жанрҙы ныҡ «еккән».

— Нисек аңлатырға инде?.. Беренсенән, уның үҙе уйлап сығарған геройҙары авантюристик планда яҙылған...

Железко мине бүлдерҙе.

— Ә тарихи шәхестәр?

— Тарихи шәхестәр тураһында Дюма, кардиналдарҙы, королдәрҙе мин нисек яҙһам, нисек һүрәтләһәм, уҡыусы шулай күҙ алдына килтерәсәк, тигән. Был... нисек әйтергә инде?.. Ҡулым бармай. Тыуған илдәре, халҡыбыҙҙың ирке, бәхете өсөн баштарын балта аҫтына ҡуйған, йәһәннәм ғазаптары кисергән батырҙарҙы мин мажаралы геройҙар итеп һүрәтләй алмайым. Тормошта, иҫән сағында, улар нисек булғандар, мин улар хаҡында шулай яҙыр инем, «әҙәби эшкәртеү» яһамаҫ инем. Улар һуғыш башланғанда инде күптән формалашҡан шәхестәр — граждандар булғандар. Тик подполье уларҙың ҡайһы бер һыҙаттарын, йәшенле ямғырҙан һуң күк зәңгәрерәк күренгән һымаҡ, тағы ла нығыраҡ асыҡлаған. Мин уларҙы бер төрлө лә «матурламай», ситтән ҡарап тороусы кеше һымаҡ һөйләп бирәм.

«Раяны» ағастар ҡаплағас, беҙ юғарыраҡ күтәреләбеҙ.

Ҡасандыр баҫҡанда ут сәсрәткән, тотһа тимер өҙгән моряк, Киев ҡыҙҙарын, егеттәрен орсоҡ һымаҡ бөтөрөлдөрөүсе дәртле музыкант, ҡурҡыу-икеләнеү белмәүсе подпольщик Василь Ивановичты заман йөгө баҫа төшкән: аҙымдары һалмаҡ; әленән-әле туҡтап тын ала, кеҫәһенән нимәлер эҙләй, һағышланып Днепрға ҡарап тора.

Бәлки, ул ошо минуттарҙа шәмбе, йәкшәмбе көндәрҙең йәйге зәңгәр кистәрендә, Владимир тауындағы баҡсала тынлы оркестрҙа уйнап, йәштәрҙе бейетеүен хәтерләгәндер, ҡолағына алыҫ музыка ишетелгәндер...

Бәлки, Киевты дошмандан һаҡлап, өс айға яҡын «Кременчуг» канонирками һында һуғышыуын, яныуын, һыуға батыуын күҙ алдына килтергәндер...

Бәлки... Ә ул «бәлкиҙәр» сикһеҙ күп — Железконың бөтә ғүмере Киев, Днепр менән бәйләнгән...

Мин дә, үҙем дә һиҙмәҫтән, хискә бирелəм һәм башыма ошондай шиғри юлдар килә.

Инде ветерандың сәсе күптән ағарған,
Шәп йөрөһә арый, туҡтап тын ала.
Әллә ер шәп әйләнә, әллә баш сайҡала,
Ярһыу аттай сапҡан йөрәк тиҙ тала.
Ҡайҙа ашығаһың һин, ветеран?
Туҡтап тормай гел-гел үргә менәһең.
Әллә тау башынан, бейеклектән,
Үткән утлы, данлы юлың күрәһең...

— «Рая» пристангә табан боролдо. Әйҙә, түбән төшәбеҙ.

Әленән-әле йылғаның тәпәш һул ярына, аҡһыл һары ҡомло пляжына ҡарап алам. Ҡайҙа ҡарама, береһенән-береһе мөһабәт бейек йорттар, «Славутич» тигән ун алты ҡатлы һотель — ҡунаҡ йорто. Һуңғы ун-ун биш йыл эсендә был урын үҙе бер гүзәл, ҙур ҡалаға әйләнгән. Ә һуғышҡа саҡлы бында ебәк комбинаты ла тимер юл станцияһы һәм ваҡ-ваҡ йорттар ғына булған...

Ниһайәт, Днепр яры буйына төшөп етәбеҙ.

Днепр, Днепр... Россияны Волганан, Башҡортостанды Ағиҙелдән башҡа күҙ алдына килтереп булмаған шикелле, Украинаны ла Днепрҙан башҡа күҙ алдына килтереүе мөмкин түгелдер.

Был киң, тәрән, ҡеүәтле даръя боронғо Русь ере — Валдай ҡалҡыулығында үҙенең ике мең километрҙан артыҡҡа һуҙылған данлыҡлы юлын-сәфәрен башлай, Белоруссияны ярып үтә, Украинаны төньяҡ сигенән алып көньяҡ сигенә саҡлы икегә бүлеп аға.

О Днепр, украин халҡы, Киев Русы ни күрһә, һин дә шуны күргәнһең, халыҡтарҙың яҙмыштарын уртаҡлашҡан-

Һиң — уларҙың күҙ йәшенән һыуың тоҙлолана төшкән, ҡандарынан ҡыҙғылтланған...

Әгәр телең булһа һинең, Днепр, миллион йыллыҡ ғүмерең тураһында ниҙәр генә һөйләмәҫ инең икән... Һуңғы бөйөк һуғышта һине кисеп, Киевты һәм Украинаны азат итер өсөн нисәмә мең ир-арыҫландар һинең төбөңә китмәгән...

Әле ул үҙенең дәрәжәһен һәм ҡеүәтен аңлағандай, йәйелеп, ашыҡмай ғына кинәнеп ағып ята. Арттарынан аҡ бураҙналар ҡалдырып, катерҙар, моторкалар ары-бире йөрөй...

Беҙ пристангә барып еткәндә, гранит парапетҡа беләктәрен ҡуйып, сибек кенә, кескәй генә ҡатын Днепрға ҡарап тора ине. Желедко уны күреү менән минең беләгемдән ҡыҫып тотоп алды. «Бәй! Был бит Раяның әсәһе Вера Макаровна ла баһа!»

— Ә беҙ һеҙгә барырға йыйынғайныҡ, Вера Макаровна, — тине Василь Иванович, ҡарсыҡтың зәғиф яурынынан ҡосаҡлап.

— Һаумы, Василь, һаумы, Василек! — тине ҡарсыҡ, йәшләнеп торған күҙҙәренә йылмайыу нуры сығарып, ҡалтыранған тауыш менән.

— Ә был кешене танырһыңмы, Вера Макаровна? — тине Желедко, минә бармағы менән төртөп.

— Ни эшләп танымай ти. Аллаға шөкөр, склероз юҡ әле.

...Вера Макаровна... Әйтергә яраһа, үҙе бер романлыҡ шәхес. Ул донъяның әсеһен ҡуш услап эсеп тә, бөтә ауырлыҡтарға, ҡайғы-хәсрәттәргә үс итеп, туғыҙынсы тиҫтәне ҡыуып барыусы ҡарсыҡ.

Вера Макаровна Галата (ҡыҙ фамилияһы) 1893 йылда Киевта тыуған. Атаһы Макар Захарович профессияһы менән ҡалала дан тотҡан тегенсе булған. Ул теккән ирҙәр костюмдары башҡа тегенселәрҙекенән әллә ҡайҙан айырылып торған. Макар Захарович ҡыҙы Вераны ла бик иртә тегенселек һөнәренә өйрәткән, Вераның аяҡтары «Зингерҙың» педаленә етә башлағас уҡ. Тәүҙә бәләкәй Верочкаға тегеүгә ҡарағанда машинаның келтер-келтер эшләүе, энәнең күҙ эйәрмәҫлек хәрәкәт менән бер күтәрелеп, бер төшөүе ҡыҙыҡ тойола. Атаһы, уның ҡаршыһына ултырып, Верочканы етдилеккә өйрәтә, теккән йөйҙөң тигеҙ, тура булыуын ҡәтғи талап итә. Верочка тәүҙә тыңламаҫҡа итә, иренә, әммә атаһының һүҙҙәре уға бер ҡасан да онотолмаҫлыҡ булып тәьҫир итә. «Ҡыҙым, онотма, тегеү тегә белгән кеше бер ҡасан да ашыҡмай ҙа, ялҡауланмай ҙа, яланғас та булмай. Тегенсе бул-

маһам, мин ана шундай ике ҡатлы һарай һымаҡ йорт һала алған булыр инемме? Тегенсе һөнәре ул, ҡыҙым, иң почетлы, иң кәрәкле һөнәрҙәрҙең береһе. Кеше ас сағында ла шәрә йөрөй алмай...» Яҡшы, аҡыллы кәңәш өсөн атаһына рәхмәт. Тегенселек иң ауыр ваҡыттарҙа, дошман Киевты баҫып алғас, Буяненколар ғаиләһен аслыҡтан ҡотҡарып алып ҡалды. Хәйер, улар ғаиләһен генә лә түгел...

Ул, күпселек украинкалар шикелле, сабып барған атты туҡтатырлыҡ таҙа, көслө кәүҙәле ҡатын булмаған, әммә тәбиғәт уға зирәк аҡыл, тырышлыҡ, түҙемлек биргән. Ул инде йомарлап кеҫәгә һалырлыҡ булып ҡына ҡалһа ла, һаман ҡартлыҡ менән көрәште туҡтатмай.

Һирәк-мирәк булһа ла миңә оҙон-оҙон хаттар яҙышты-ра. Дөрөҫ, почеркы йәштәрҙеке кеүек ныҡлы түгел, хә-рефтәр бер яҡҡа бик ныҡ ҡыйығайғандар, ҡалтыранып төш-кәндәр — һиҙелеп тора, еңел ручка ла уның көсһөҙ ҡулына буйһонорға теләмәй, ә шулай ҙа хаттары төплө, аҡыллы. Бер хатында ла ул зарланмаҫ, киреһенсә, капитан Фәти-ховтың иҫтәлеген нисек мәңгеләштереү тураһында ҡайғыр-тыр, юлдар өйрәтер, оҙаҡ һәм актив йәшәр өсөн халыҡ медицинаһы тураһында бәйнә-бәйнә яҙыр. Бер хатында ул миңә утыҙ ете үлән исемен яҙған. «Әгәр, тигән, минең йә-шемә етергә теләһәгеҙ, минең йәшемдә лә донъяға йылма-йып ҡарарға уй-иҫәп тотһағыҙ, ана шул сәскә-үләндәрҙе ҡайнатып эсегеҙ. Ифрат шифалы. Бынан тыш мин бына ун ике йыл инде элеутерококк экстракты эсәм. Көнөнә өс тап-ҡыр. Утыҙар тамсы. Аҙаҡ бал ҡабып ҡуям. Ә бал, үҙегеҙ беләһегеҙ, тәбиғәт ятаҡан иң шифалы, иң файҙалы аҙыҡ. Ана шуға күрә мин бирешмәйем дә. Былтыр Винница яны-дағы ял йортонда самодеятельноста ҡатнаштым. «Пряха» тигән йырҙы башҡарған өсөн приз бирҙеләр. Ял йорто ди-ректоры минең тауышымды магнитофонға яҙып алды. Киев-ҡа килгәс, тыңлатырмын әле...»

...Рая ҡулға алынғас, кемдер Вера Макаровнаға үҙенсә аҡыллы кәңәш бирә. «Һин, — ти ул, — ейәндәреңде етәклә лә гестапоға бар. Ялын. Ялбар. Сабыйҙар хаҡына ҡыҙым-ды һәләк итмәгеҙ, тип теҙләнеп ила. Улар ҙа эттән тыума-ған бит, кешенән тыуған, ихтимал, йомшарырҙар, миһыр-банланырҙар...»

Вера Макаровна икеләнеп тора ла алты йәшлек Олегты, өс йәшлек Василде етәкләп, Владимир урамына китә. Олежка, алан-йолан ҡаранып, ҡаштарын емереп, өндәш-мәй генә бара, ул инде немецтарҙың кемлеген аңлай, әсә-һенең ҡулға алыныуын да белә. Әле күкрәгендә ҡояш ҡы-

[illegible] йөрәгендә сабыйҙа дошманға нәфрәт уты дөрләп яна. «Әле, ҡулынан килһә, ул бөтә немецтарҙың муйындарына [illegible] бәйләп, Днепрға батырып бөтөрөр ине...» Ах, иртә, бик иртә әле уға нәфрәттең ни икәнлеген аңлау. Әммә, ни эшләйһең, һуғыш кешеләрҙе айлап, көнләп түгел, сәғәтләп үҫтерә, ә Василек шыңшып ҡуя, арыным, тип туҡтай ҙа йығылып ултыра. Өләсәһе уны ҡулына ала. «Хәҙер, хәҙер барып етәбеҙ, бәләкәсем...» — тип йыуата.

Ҡарап тороуға башҡа йорттарҙан бер яғы менән дә айырылмаған алты ҡатлы йортҡа яҡынлашҡан һайын, Вера Макаровнаның йөрәге ҡатыраҡ, йышыраҡ типте. Колашина ҡыҙының ярҙам һорап ҡысҡырған тауышы ишетелгәндәй булды. «Нисек тә, нисек тә Раечкамды ҡотҡарырға. Кәрәк булһа, үҙемде ғазаплаһындар, үлтерһендәр, тик Раечканы ғына ҡотҡарһындар...»

Гестапоға барып етергә бер нисә йорт ҡалғас, ҡулбашына карабин аҫҡан, йәшел мундир кейгән бик етди йөҙлө, ас яңаҡлы полицай улар ҡаршыһында туҡтап торҙо ла Вера Макаровнаға мөрәжәғәт итте.

— Ҡайҙа йүнәлдегеҙ?

Вера Макаровна полицайға ҡаты итеп әйтмәксе булғайны, уның күҙҙәрендә ҡыҙғаныусанлыҡ күреп, тыйылды.

— Гестапоға.

— Ә был бөжәктәрҙе ниңә эйәрттегеҙ?

Вера Макаровна аһ-зарын һөйләп бирә. Полицай тиҙ генә уларҙы килгән яҡҡа бора.

— Иҫән-имен саҡта бынан тайығыҙ. Ҡыҙыңды ла ҡотҡара алмаҫһың, ейәндәреңде лә һәләк итерһең.

— Һуң, улар ҙа бит кешеләр...

— Кешеләр... — тине полицай, был һүҙгә кинәйәле мәғәнә һалып.

— Хәҙер миңә ни эшләргә, ҡайҙа барып бәрелергә инде, улым?

— Ҡайҙа йәшәйһең, — тине полицай, уның ҡайғыһын уртаҡлашып. — Киевтамы?

— Киевта.

— Бөгөн үк ейәндәреңде ал да берәй яҡҡа ыҫҡын. Юҡһа...

Бында килгәндә Вера Макаровнаның йөрәгендә сыҡҡан күҙендәй ут саҡлы ғына булһа ла өмөтө бар ине. Хәҙер ул да һүнде — күңелдә һалҡын, ҡараңғы бушлыҡ ҡына тороп ҡалды...

«Ҡайҙа барырға?.. Кагарлык районына Черняхово ауылынамы?» Былтыр көҙөн, быйыл ҡышын, яҙын Кушнирҙың ҡушыуы буйынса Черняхово ауылына китеп, Соловей тигән кешеләргә ауыл халҡына кейем-һалым теген, бойҙай,

сало, көнбағыш майы эшләп алып, ғаиләһен, Федор Михайловичты аҙыҡ менән тәьмин итеп торғайны ул.

Аяҡлы тегеү машинаһын келтерәтеп, моңло тауыш менән йырлай-йырлай күлдәк-ыштан тегеүсе Киев ҡатынын ауыл халҡы бик тиҙ үҙ итте. Хәйер, ул йыр менән генә алдырманы, Вера Макаровна үҙ эшенең художнигы ине. Салбар текһә, салбар ҡойоп ҡуйғандай булды, ҡатын-ҡыҙға күлдәк текһә, күлдәк тәнгә һылашып торҙо. Шуныһы яҡшы: халыҡтың һуғышҡа саҡлы алып ҡуйған һаҡлыҡ материалдары бөтмәгәйне әле... Һәр шәмбе көн һайын ул йә кеше артынан, кеше тура килмәһә, үҙе эшләп алған аҙыҡ-түлеген Киевҡа килтереп китте. Бойҙайҙы тартырға тирмән юҡ ине, шуға күрә уны ит турағыста, бер уңға, бер һулға әйләндереп, он иттеләр.

«Юҡ, тип уйлана ул, хәҙер Черняховоға барырға ярамай. Эҙләп табасаҡтар... Ә ҡайҙа барырға? Житомир өлкәһендә Малое Деревичкола «сыбыҡ остары» йәшәй, бәлки, шунда...»

Вера Макаровнаның ҡала управаһынан алған йөрөү документы ла иҫкерә төшкәйне, әммә ике сабыйҙы етәкләгән кескәй генә ҡатындың ҡағыҙын әллә ни тикшереп торманылар, тупаҫ ҡына итеп: «Проходи, проходи, старая...» * — тип үткәреп ебәрҙеләр, поезға ултырттылар һәм ул әллә ни мажараһыҙ ғына Печановка станцияһына барып етте лә станцияға килгән йөксөләргә, ейәндәрен ултыртып, тегеү машинаһын тейәп, Малое Деревичкоға йүнәлде. Ауылға барып еткәс, аттың хужаһына — юл буйы бер ауыҙ һүҙ әйтмәгән бабайға аҡса һонғас, теге: «Һин мине кемгә һанайһың?» — тип үпкәләберәк әйтте. Шулай итеп, Вера Макаровнаның оҫта, етеҙ ҡулдары һәм аяҡлы тегеү машинаһы Олежка менән Василекты үлемдән һаҡлап алып ҡалды...

— Вера Макаровна, — тим мин, уйҙарымдан арынып,— әллә «Раяға» ултырып, Днепр буйлап йөрөп киләбеҙме? Желедко ла минең теләгемә ҡушылды.

— Ысынлап та. Хәҙер мин барып, капитан менән һөйләшеп ҡарайым, бәлки, мөмкинлеге барҙыр...

Дизельэлектроходҡа ултырғас, ҡапыл Вера Макаровна йәшәреп киткәндәй булды: кәүҙәгә үҫеберәк китте, тауышы көр сыға башланы.

— Ишетәһегеҙме?.. Минең Раечкамдың йөрәге ниндәй тибә... — Ысынлап та, дизель моторының ритм менән эшләүе йөрәк тибешен хәтерләтә ине. Эйе, ҡурҡыу, ҡаушау бел-

---

* Ә ул саҡта «старая»ға илле йәш тә юҡ ине, әммә Вера Макаровна төҫөн-башын шундай үҙгәртә, яулығын күҙҙәренә төшөрөп бәйләй— бына хас алтмышты үптән уҙған ҡарсыҡ инде.

[illegible] уйында һаман һуҡмаусы Рая Буяненко үҙе үлһә лә, йөрәге был оҙаҡ йылдар тибер: ҡарап моторы булып, уның исемен йөрөткән мәктәптең уҡыусылары булып, уның исемен алған урамдарҙа йөрөүсе кешеләр булып...

Гәфәйен матур, ҡарап һоҡланып туймаҫлыҡ үҙенсәлекле ул Киев, Днепр буйлап барғанда. Ә күпме тарихи урындар, архитектура ҡомартҡылары...

Ана, Аскольд ҡәбере.

Ана, Владимир тауы һәм Киев Русын суҡындырып, христиан динен дәүләт диненә әйләндереүсе Владимир Святославичҡа ҡуйылған һәйкәл.

...Ана, фуникулер... Аҫтан, алыҫтан ҡарағанда, вагондар бер шырпы ҡабы шикелле генә тойола. Улар, ҡуныҙ шикелле, ашыҡмай ғына өҫкә үрмәләйҙәр, аҫҡа шыуып төшәләр...

...Ана, София монастырының алтын ялатылған көмбәҙҙәре ҡояшта ялтырай, уйнай...

...Андрей тауы һәм мәшһүр Андрей сиркәүе...

...Ана, ҡасандыр Буяненколар йәшәгән Трухан утрауы...

Рыбальский ярымутрауы янынан кире боролоп, ағым ыңғайына йөҙәбеҙ. Желедко ла минең яныма килә.

— Василь Иванович, — тим мин, Киев урынлашҡан текә ярға теклəп ҡарап, — теге... ҡырҡ икенсе йылдың июлендә төбөндә документтарығыҙҙы күмгән каштан бынан күренмәйме?

— Юҡ. Күренмәй. Ул саҡта әллә ҡайҙан күренеп тора торғайны. Һуғышҡа тиклем унда ағастар һирәк ине, ә хәҙер тотош урман...

Вера Макаровна, кәкре башлы аптека таяғына башын ҡуйып, әллә ойоп киткән, әллә «Раяның» «йөрәк» тибешен тыңлап тәрән уйға сумған — һүҙһеҙ, хәрәкәтһеҙ тал креслола ултыра. Былай ҙа бәләкәй ҡарсыҡ хәҙер ун ике-ун өс йәшлек бала шикелле генә булып ҡалған.

— Әллә немец офицерын сисендергән урында төшөп ҡалабыҙмы? — ти Желедко шыпырт ҡына, Вера Макаровнаның уйҙарынан айырмаҫ өсөн. — Унан беҙгә — Боричев токка күтәрелербеҙ. Үҙемә генә билдәле рецепт менән эшләгән шәрбәтем бар. Белгестәр, мәшһүр Рига бальзамынан ҡайтыш түгел, тиҙәр.

Мин Вера Макаровна яғына ишара яһайым: «Ә уны? Арығандыр?»

Зирәк ҡарсыҡ минең иплəп кенә әйткән һүҙҙәремде лә ишетеп ҡалды, шунда уҡ башын күтәрҙе, күҙҙәрен асты.

— Бая һеҙ, беҙгә барабыҙ, тигәйнегеҙ түгелме һуң, Василь Иванович? Мин һеҙгә Винница янындағы ял йортонда йырлап приз алған «Пряха» йырын тыңлатырмын. Василь

ейәнемдең стереомагнитофоны бар — тауыш бөтә квартираға тарала. Минең Раечкам да, үҙемә оҡшап, оҫта йырлай торғайны. — Йәнә Вера Макаровнаның тауышында һағыш ишетелеп ҡалды. Ҡүрәһең, әсәләрҙең балаларына булған һағыштары, бигерәк тә һуғышта һәләк булғандарына, бер ҡасан да һүнмәйҙер, ғүмер буйына йөрәк төбөндә быҫҡып торалыр, ә ҡайһы саҡта ул, урман янғыны һымаҡ, тотоп тыйғыһыҙ ялҡынға әйләнәләр һәм күҙ йәштәре булып ағалыр. Ә был юлы ул һағыш йыр булып аҡты. Вера Макаровна ҡасандыр моңло, матур булған, әммә йылдар аяуһыҙ урлап алып киткән ҡарлыҡҡан тауышы менән аҡрын ғына йырлап ебәрҙе лә, ҡапыл ул үҙ тауышынан үҙе оялған һымаҡ, йырлауынан туҡтаны, йыйырсыҡтар буйлап йүгереп төшкән йәштәрен һөртөп алды ла йәшлек дәрте менән һөйләп алып китте.

— Була торғайны шулай — йәйге йылы кистәрҙә Раечкам менән ҡапҡа төбөнә сығып, эскәмйәгә ултырабыҙ ҙа парлашып йырлап ебәрәбеҙ. Күрше-күлән, ҡатын-ҡыҙ йыйыла, үҙенән-үҙе хор хасил була. Беҙҙең йырыбыҙға ҡушылғандай һирәк-мирәк пароход тауыштары ишетелеп ҡала. Ҡайҙа китте икән ул бәхетле, йондоҙло йылы кистәр?.. — Һағыш томаны йәнә Вера Макаровнаның күҙҙәренә, тауышына сыҡты. — Ҡайһы сағында Раечкам мине ҡосаҡлар ине лә: «Их, әсәй, тормош йыр шикелле матур булһа икән ул», — тип көлөр ҙә, илар ҙа ине.

Ә уның тормошо йыр һымаҡ булманы шул. Артистка... йырсы булырға хыялланды, ә үҙе заводҡа эшкә керҙе. Ғаилә тормошо ла бик бәхетле булманы... Бөтә шатлығы эштә лә Олежка менән Василек булды...

Рая... Рая... Аҙаҡ йырға, пароходҡа, легендаға әйләнәсәк Рая...

Раиса Васильевна Бояненко 1916 йылдың унынсы веренендә-сентябрендә Трухан утрауында тыуған *. Атаһы Василий Архипович ҡатмарлы биҙәктәр-орнаменттар ху-

---

* Трухан утрауында, тулыһынса булмаһа ла, күбеһенсә йылға менән бәйле кешеләр: судоверфтә, караптар төҙөү һәм ремонтлау заводында, пристандә эшләүселәр йәшәй. Уларҙың һаны өс меңгә етә. Йорттар, икешәр метрлы бағаналарға ултыртылып, бүрәнәнән һалынған. Сөнки һәр йылды яҙ утрауҙы һыу баҫа. Утрауҙа урта мәктәп, клуб, йәйге һәм ҡышҡы танса майҙансыҡтары, магазиндар, парашют вышкаһы һәм ғибәҙәтхана — сиркәү була.

Гитлерсылар Киевты алғас, ҡалала оккупанттарға ҡаршы төрлө акциялар, диверсиялар башланғас, немецтар подпольщиктар Трухан утрауында йәшенә тип шикләнәләр һәм, үлем язаһы менән ҡурҡытып, халыҡтың күбеһен ҡалаға күсерәләр. Шул иҫәптән Бояненколар ҙа Киевҡа күсәләр.

осталы була. Ул Раяны бик иртә, әле башланғыс мәктәптә уҡығанда уҡ, һыҙым, копировка эшенә ылыҡтыра. Ҙур планшетка йәбештерелгән ватманға тушь менән тигеҙ, тура һыҙыҡтар һыҙырға, мөйөштәр, түңәрәктәр һыҙырға өйрәтә. Һыҙыҡтар башта бик үк тигеҙ, мөйөштәр дөрөҫ үк булмай, әлбиттә. Йырларға, бейергә яратыусы ҡыпан Раяның был эшкә түҙемлеге етмәй, күңеле лә ятмай, әммә Василий Архипович уны әрләмәй, вәғәз уҡымай, ҙур такт һәм түҙемлелек менән ҡыҙын һыҙым эшенә ылыҡтыра. Тора-бара Рая ҡатмарлы фигуралар һыҙырға өйрәнә, һәм шунһыһы ҡыҙыҡ, задание ҡатмарланған һайын, Раяны һыҙым нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра, ул буш ваҡыттарын йырлай-йырлай планшет янында үткәрә: ватманға, миллиметровкаға, калькага машина деталдәре, йорт проекттары һыҙа; күсермә эшләй, ә тора-бара инде ул үҙ алдына һыҙа башлай. Атаһы көндән-көн уның уңыштарына шатлана, маҡтай, һинән бынамын тигән конструктор сығасаҡ, тип дәртләндерә. 1934 йылда 100-сө һанлы мәктәпте тамамлағас, ул икеләнеп тормай, караптар төҙөй торған заводҡа эшкә керә һәм, һуғыш башланғансы, дөрөҫөрәге, завод эвакуацияланғансы, конструктор-техник бүлектә һыҙымсы-копировщица, техник-конструктор булып эшләй. Ә заводтың төп көстәре һәм йыһаздары эвакуацияланғас, комскомитет секретары вазифаһын үтәй. Рая Буяненконың биографияһын яҙғанда йәнә шуны ла өҫтәргә кәрәк — ул сит телдәргә бик һәүәҫ була һәм мәктәпте тамамлағанда инде немецсә бик еңел һөйләшә.

Вера Макаровна дауам итә.

— Һиҙеүемсә, кемдәрҙер үҙен ҡоҙалап та йөрөгәйне. Минең Раечкам, ике бала әсәһе булһа ла, ни етте ҡыҙҙарға бирелеҫ ине бит ул. Төҫкә-башҡа иҫ китерлек сибәр түгел ине, әммә бер ир ҙә, янынан үткәндә, боролоп ҡарамай ҡалмай торғайны. Ә холҡо... Биш минут үҙе менән һөйләшеп торһалар, Раечка уларҙың күптәнге таныштарына, яҡын дуҫтарына, әхирәттәренә әйләнә ине. Шуға күрә уны заводта яратмаған кеше булмағандыр. Олоһо-кесеһе, түрәләр, эшселәр үҙен гел «Раечка» тип кенә йөрөттөләр. Раечкам иштергә лә теләмәне: «Етте. Икс тапҡыр бәхетемде һынап ҡараным, өсөнсө тапҡыр һынарга теләмәйем. Берәһенән-береһе яҡшы ике улым — ике ҡулым бар. Шуларҙы үҫтерәм. Кеше итәм. Өйләндерәм, тора-бара, һинең шикелле, өләсәй булам...»

Вера Макаровнаның былай ҙа ҡалтыранып сыҡҡан тауышы тағы ла нығыраҡ ҡалтыранды, һағыш уты, күрәһең, уның бөтә күкрәген ялмап алды.

— Өләсәй булыу түгел, балаларының үҫеп, егет булғанын да күрергә яҙмаған икән Раечкама... Үлгәндә лә һуңғы һүҙем Гитлерға, яңы гитлерҙарға ләғнәт, бәддоға уҡыу буласаҡ...

— Һеҙгә рәхмәт, — тине Железко, унын ҡаҡса яурынына ҡулын иплэп кенә һалып. — Вера Макаровна, һеҙ булмаһағыҙ, Олег менән Василгә еңелгә тура килмәҫ ине...

Ул арала дизельэлектроходтың капитаны беҙҙең яныбыҙға килде.

— Һеҙҙе ҡайҙа төшөрөргә, Вера Макаровна?

Ҡарсыҡ торҙо. Йәшле күҙҙәре менән капитанға аҫтан өҫкә ҡараны.

— Ә һин беҙҙе төшөрмә, Николай Васильевич, Ҡара диңгеҙгәсә алып кит.

Капитан йылмайҙы.

— Ә унан ҡайҙа? Урта ер диңгеҙенәме?

— Ә унан океанға. Раечкамдың рухы океанда яңғыҙ елкән булып аҙашып йөрөй шикелле...

Капитан яуап урынына Лермонтовтың шиғырын уҡый.

По синим волнам океана
Лишь звезды блеснут в небесах,
Корабль одинокий несется,
Несется на всех парусах...

Капитан Вера Макаровнаны арҡаһынан һөйөп ала.

— Аҙашып йөрөмәй ул, Вера Макаровна, Днепр тулҡындарында аҡҡош булып йөҙөп йөрөй.

— Аҡҡош ҡына түгел, — ти Вера Макаровна, ғорурлығын йәшерә алмай, — бөркөт тә ине ул минең Раечкам...

Рая тыны-көнө бөтөп өйгә ҡайтып керә. Уның нур һибеп тороусы шаян ҡара күҙҙәренән оскондар оса ине.

— Әсәй, йыйын! Заводты эвакуациялайҙар.

«Зингере» менән һөйләшә-һөйләшә ейәндәренә ҡыҫҡа салбар тегеп ултырған Вера Макаровнаның аяҡтарын көҙән йыйырғандай итте, машинаның педале туҡтап ҡалды.

— Һин ни һөйләйһең? Киевты немчураға бирмәксе булалармы икән ни?

— Белмәйем. Әйтә алмайым. Әммә станоктарҙы, төрлө йыһаздарҙы һүтә башланылар. Тәүге эшелон бөгөн-иртәгә көнсығышҡа китергә тейеш. Начальство миңә йыйынырға ҡушты. — Ул, шкафты асып, кейемдәрен аҡтара башланы.

Вера Макаровна машинаһы янынан торҙо.

— Юҡ, ҡыҙым, мин бер ергә лә китмәйем. Киевта тыуғанмын, Киевта үләсәкмен.

— Әсәй... — Рая ҡыҫҡа йыуан аяҡтары менән яртыһы ҡыҙыл, яртыһы зәңгәр резин туп тибеп йөрөүсе өс йәшлек [illegible], мышнай-мышнай нимәлер «ҡороп ултырыусы [illegible] Олежкаға ҡарап алды, ҡапыл күңеле сайпылып китте. — Һуң, мин был аяҡһыҙҙан-ҡулһыҙ ике бала менән унда ни эшләйем? Ярай ҙа детсад, ясле булһа. Ә булмаһа? Минең бит башым заводтан сыҡмаясаҡ.

Вера Макаровна йомшара төшкәндәй булды.

— О заводты ҡайҙа күсерәләр?

— Асыҡ ҡына әйтмәйҙәр. Тел төптәренә ҡарағанда, Волга буйына... Мари республикаһына булырға тейеш.

Өсәһе йәнә тиҫкәреләнде.

— Ҡуй, шундай алыҫ юлға сығырға минең сәләмәтлегем дә шәптән түгел... — Ул «Зингере» янына ултырҙы. Аяғы менән педалгә бер-ике баҫты ла йәнә торҙо. — Ә һин ейәндәрҙе бында ҡалдыр, Раечка. Көҙгә барыбер әйләнеп ҡайтырһығыҙ.

Рая карауатҡа ултырҙы. Панцирь матрас күңелле итеп шығырлап ҡуйҙы (иртәгә, иртәгә ремонтҡа бирәм, тип «иртәгәләп» йөрөһә лә, барыбер төҙәттереп ала алманы, һуғыш башланды).

— Белмәйем шул, — тине ул күңелһеҙ генә. — Немец ташҡын һымаҡ ҡотороп килә...

— Килһен. Ул ун һигеҙенсе йылда ла шулай ҡотороп килгәйне, ә бына нисек китер, уныһын алла белә.

Ул көндө әсә менән ҡыҙ асыҡ ҡына бер ҡарарға ла килә алманылар — һәр кем үҙ яғына тартты, үҙен хаҡ һананы. Рая икенсе көндө судоверфтең партком секретары Федор Михайлович Кушнир менән кәңәшләшергә булды.

Рая уның кабинетына кергәндә, Кушнир асыҡ тәҙрәнән кемдәргәлер ниндәйҙер күрһәтмәләр бирә ине: «Юҡ, юҡ, улай һыймаясаҡ, буйға, буйға һалығыҙ...» Ул Раяға табан боролдо.

Кушнир ата-бабанан килгән эшсе-йылғасыға ҡарағанда экскерһеҙ, бер ҡатлы ауыл кешеһен хәтерләтә ине: артҡа таралған ҡарағусҡыл ҡуйы йомшаҡ сәс, һәр ваҡыт тура, әммә әҙәпле ҡараусы һоро күҙҙәр, бер аҙ аҫҡа һалынып торған ҡалын ирен, байтаҡ йылдар етәкселек эшендә эшләһә лә, бойорорға, «күрһәтмәләр бирергә» өйрәнмәгән яғымлы тауыш... Ете йыл эсендә Раяға уның менән, тәүҙә уны завком председателе, ә унан партком секретары итеп һайлағас, йыш осрашырға тура килде. Федор Михайлович бер ҡасан да бер кешенең дә үтенесен кире ҡағырға тырышманы, зарын, үтенесен һөйләүсе кешене башын бер аҙ эйә төшөп тыңланы ла: «Ҡулдан килгәнде эшләргә тырышырбыҙ, борсолмағыҙ», — тип йыуатты, ә кәңәш менән кер-

ғән кешеләрҙе иғтибар менән тыңлағандан һуң: «Аҡыллы, файҙалы кәңәш», — тип дәртләндерҙе. Кәңәш-тәкдим урынһыҙ, уйҙырма булһа ла, теге кешенең күңелен төшөрмәй, ә: «Һин был тәкдимде ныҡлап уйланыңмы? Бар, йәнә бер тапҡыр уйлап ҡара әле», — тип сығарҙы. Заводта байрам, тантана кисәләре булғанда, унан да ашҡынып бейеүсе, унан да ихлас йырлаусы булмағандыр. Шуға күрә уны «заводтың комиссары» тип йөрөттөләр.

Әле был комиссарҙың һоро күҙҙәре эскә батҡайны, яңаҡтары яңаҡҡа йәбешкән — һуғыш башланғандан бирле уның заводтан сыҡҡаны ла юҡ тиһәң, хата булмаç.

— Күҙҙәрендә ҡаушау, борсолоу күрәм, — тине ул, Раяның ҡулын ҡыçып. — Ни булды? Әллә ғашиҡ булдыңмы?

Раяның иçе китте — шундай көсөргәнешле ваҡытта ла ул үҙен тыныс тота, етмәһә, шаярта.

Рая уға кисә кис әсәһе менән булған бәхәстең эстәлеген һөйләп бирҙе. Кушнир, ғәҙәттәгесә, башын эйеберәк тыңлап торҙо.

— Ә һин нисек уйлайһың? Тик дөрөçөн әйт, ура-патриот булма.

Рая ҡулбаштарын һелкетеп алды.

— Өҙөп кенә әйтә алмайым, Федор Михайлович. Заводтан да айырылғы килмәй, Киевты ла ҡалдырып китке килмәй. Ике ут эсендә ҡалдым...

Кушнир, тыштағы шау-шыуҙы ишетеп, йәнә тәҙрә янына барҙы.

— Йә, һыйҙырып булдымы? — Ул йәнә шаяртып алды. — Бер олоно, бер кесене, бер аҡыллыны, бер ахмаҡты тыңла, тип халыҡ юҡҡа әйтмәгән. — Ул Рая ҡаршыһына килеп баçты. — Бына нәмә, Рая, директор завод менән бергә күсеп китә, ә заводтың бында ҡалған өлөшөнә мине директор итеп тәғәйенләйҙәр. Теләһәң, ҡал. — Ул бер аҙ тынып торҙо. — Унан күҙ күрер...

«Күҙ күрер...» Раяның ҡапыл йөҙө асылып китте. Ахмаҡ түгел бит, «күҙ күрерҙең» мәғәнәһен аңлай. Кушнир быны иçләп алды.

— Ниңә йылмайҙың?

— Юҡсы... — тип аҡланды Рая.

— Күҙҙәрең йылмаймаһа ла, күңелең йылмайҙы.

Эйе, уның күңеле йылмайҙы. Һуғыш башланған көндө үк Рая төшкө тәнәфес ваҡытында райкомсомолға йүгерҙе. Райкомда баш тығырлыҡ та түгел ине. Ул терһәктәре менән этә-төртә беренсе секретарь кабинетына йүнәлде. Кемдер һуҡранды, кемдер: «Нимә, һинең генә фронтҡа китәһең киләме ни?» — тип уны үткәрмәçкә тырышты. Ә ул ал-

әйтте: «Иптәштәр, мин эш менән. Эш менән. Заводтан...»— Ә беҙ уйнап йөрөйбөҙмө?»

Ниһайәт, ул беренсе секретарь ҡаршыһына килеп баҫты. Беренсе секретарь уға үпкә ҡатыш яғымлы йылмайҙы (судоверфь комскомитетының ағзаһы Буяненконы ул яҡшы белә ине).

— Һин дә фронтҡа китергә теләйһеңме?

— Ә мин башҡаларҙан ҡай ерем менән кәм? — тине Рая, сәмләнеп.

— Рая, ғариза яҙырға хаҡың бар, әммә мин бер нәмә лә эшләй алмайым. Мобилизация менән военкомат шөғөлләнә.

Буяненко военкоматҡа сапты. Ә унда: «Эшләгән ерегеҙҙә эшләгеҙ, кәрәк булһағыҙ, хәбәр итербеҙ», — тип өҙөп кенә әйтмәй, ҡайтарып ебәрҙеләр. Һуғыш башланыуға нисәмә көндәр үтеп китте, әммә военкоматтан тауыш та, тын да юҡ. Ә бына бөгөн Кушнир уның күңеленә өмөт уты һалды: «Күҙ күрер...» Тимәк... подполье... Шунда уҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы фекер: «Киевты бирерҙәрме икән ни? Юҡ, юҡ, бирмәйәсәктәр. Был мөмкин түгел. Нисек инде Киевты бирергә ти?..»

Дошман көндән-көн Киевҡа яҡынлашты. Заводтың төп йыһаздары менән белгестәр, инженер-техник персонал, квалификациялы эшселәр күсеп китте. Коллектив менән бергә комскомитет секретары ла китеп барҙы. Рая Буяненконы уның урынына секретарь итеп һайланылар, дөрөҫөрәге, тәғәйенләнеләр, йыйылыш яһап, демократияны һаҡлап торорға ваҡыт юҡ ине. Хәҙер Рая, Кушнир шикелле (ул директор вазифаһын үтәй), көндәрен-төндәрен судоверфтә үткәрҙе. Аҙналар буйы өйҙә күренмәне, арыны, ултырған ерендә ойоп китте лә, тертләп уянып, һикереп торҙо, тәнен яҙып алды, йәнә эшкә күмелде...

Улар шулай бөтәһе лә Киевта ҡалды.

Август үтеп китте. Сентябрь башланды. Гитлер ғәскәрҙәре Киевты уң һәм һул флангынан урап, Днепрҙы кисеп, көнсығышҡа ынтылды. Киев әйләнәһе йөҙәр километрға һуҙылған утлы ҡулса эсендә тороп ҡалды, әммә Киевты һаҡлаусы совет ғәскәрҙәре ҡаланы дошманға бирергә теләмәне — һуңғы ҡыҙыл армеецҡа, һуңғы патронға саҡлы һуғыштылар, дошманды хәлһеҙләндерҙеләр, вермахт генштабының карттәрен бутанылар. Һуңғы көндәргә саҡлы завод та көнө-төнө эшләй бирҙе.

Ставканан Киевты ҡалдырыу тураһында приказ алынғас, заводта ҡалған станоктар, агрегаттар, машиналар, катерҙар юҡҡа сығарылды, билдәле урындарҙа Днепр төбөнә батырылды.

Һәм һис тә көтөлмәгән хәл булды. Аҙна буйына өйөнә ҡайтмаған Рая моторкаға ултырҙы, Трухан утрауына йүнәлде. Йорт янына килеп еткәс (ә уларҙың йорто ярға яҡын ғына тора ине), мотористы кисәтте: «Мин, күп тигәндә, ун-ун биш минут торормон, хәл-әхүәлде beләм дә сығам». Әммә уға тиҙ генә сығырға тура килмәне. Өйгә инеү менән, Олежка менән Василек уға һырылды: өлкәне уның муйынына һикерҙе, кесеһе аяғын ҡосаҡлап алды: «Ура-а! Әсәй ҡайтты, әсәй!..» — тип шатлыҡтарынан ни эшләргә белмәй ҡысҡырыштылар улар. Әсәһе Вера Макаровна ла яулыҡ осон күҙҙәренә тейҙереп алды. «Иншалла, исән икәнһең. Ә мин ут йотоп йәшәйем. Балалар ҙа: «Әсәй ниңә ҡайтмай ҙа әсәй ниңә ҡайтмай?» — тип мыжыйҙар. Сисен, ҡайтырыңды белгән шикелле, галушки бешергәйнем...»

— Юҡ, әсәй, мин сисенеп тормайым. Яр буйында мине моторка көтә.

— Сисенәһең! — тине әсәһе, бойороп. — Заводҡа кендегең бәйләнмәгән. Һинең балаларың да бар.

— Үҙең беләһең, әсәй, мин унда комскомитет секретары урынына...

Олежка, әсәһенең китергә йыйынғанын һиҙеп, ишеккә арҡыры төштө.

— Вась, кил минең янға, тот ҡулымдан. Әсәйҙе сығармайыҡ.

Василек, йүгереп килеп, Олежканың ҡулынан тотто һәм уға ҡушылып бытылданы.

— Ебәлмәйбеҙ. Ебәлмәйбеҙ. Юҡ, ебәлмәйбеҙ.

Рая йылмайып уны күтәреп алды.

— Яҡшы. Улайһа, мин моторисҡа әйтәм — иртәгә иртүк мине килеп алһын.

Әммә моторист иртүк тә, һуңғараҡ та уны килеп алманы. Рая борсола, йомшаҡлыҡ күрһәтеп, ҡунырға ҡалыуына үҙен тиргәй башланы. Бәхетенә ҡаршы, ниндәйҙер «аҙашҡан» моторка утрау янынан үтеп бара ине. Рая уға косынкаһын һалып болғаны. Рәхмәт төшкөрө, күрҙе лә, тыңланы ла — моторка, баш әйләнерлек боролма яһап, уның янына килеп туҡтаны.

— Үтенәм, мине, зинһар, караптар төҙөү заводына илтеп ташлағыҙ.

Башҡа ваҡыт булһа, кәмәсе, бәлки, тыңламаҫ та ине — ҡапма-ҡаршы яҡҡа китеп бара бит, ә әле ул бер һүҙһеҙ риза булды. Рая, рәхмәт әйтеп, кәмәгә һикерҙе. Аҡ бураҙна ҡалдырып, кәмә судоверфкә елдерҙе. Рая уйланды. Һуғыш башланған сәғәттә үк кешеләр ҡапыл үҙгәрҙеләр: бербереһенә иғибарлыраҡ, миһырбанлыраҡ булып киттеләр, һорағанды көтөп тә тормай, ярҙамға килергә ашыҡтылар.

Эйе, совет халыктарының берҙәмлеге, газеталарҙың баш [illegible] яҙылган, докладтарҙа һөйләнгән рәсми про-[illegible] түгел, ә реаль ысынбарлыҡ ине. Дөрөҫ, та-[illegible] ташҡанда яр ситенә сүп-сар сығарылып ташланған [illegible], дошман тылында ҡурҡаҡтар, һатлыҡ йәндәр, хыя-[illegible] ҙа булды, әммә Рая әле был хаҡта белмәй, бел-[illegible] түгел, ундай кешеләрҙең булыуына ышанмай ҙа ине.

Завод уны зыярат тынлығы менән ҡаршы алды. Халыҡ ҡайҙа? Ниңә станоктар, машиналар эшләмәй? Ул ары йү-[illegible], бирс сапты, бер ҡайҙа: ни конторала, ни цехтарҙа кеше заты күренмәне.

— Әй! Кем бар бында? Кем бар? — тип ҡысҡырҙы ул, [illegible], сәсәп.

Уның тауышын ишетепме, үҙ йомошо менәнме, тимер капка янындағы будканың ишеге асылды. Йүтәлләй-йүтәл-ләй кемдер сыҡты. Был «мәңгелек вахтер» Трофим бабай ине. Уны күргәс, Раяның эсенә йылы кереп китте — Трофим картҡа ташланды.

— Трофим бабай, ә халыҡ ҡайҙа? Ниңә береһе лә күренмәй?..

Трофим ағай — был заводта илле йылға яҡын эшләгән ветеран. Ул судоверфкә малай сағында уҡ килә. Трошка матрос тора-бара капитан булырға хыяллана, әммә бер ҡолағының насар ишетеүе арҡаһында (көҙөн, боҙ ватылып, Днепрға бата, бер ҡолағына һыу кереп ҡалып, тора-бара шул ҡолағы аға), уны карапҡа юнга итеп алмайҙар. Тәүҙә ул конторала «кем ҡайҙа ебәрә» — йомошсо вазифаһын үтәй. Был эш уны ҡәнәғәтләндермәй, әлбиттә. Матрос бу-лып булмаһа ла, токармы, слесармы булғыһы килә. Ул токарь өйрәнсеге булып эшләй. Токарь станогының ҡаты, үткер бысаҡтары тимерҙе, ҡоросто «ашағанын» күҙәтеү, үҙенде тимерҙән дә ҡатыраҡ тойоу — мауыҡтырғыс нәмә, әммә Трошканың күңеленә был эш тә ятып бөтмәй, ул слесарлыҡ эшенә күсә. Слесарлыҡ эшен ул ниндәйҙер серле, нескә эш тип уйлай, әммә тора-бара был һөнәрҙе лә алмаштыра. Баҡырсы һөнәрен өйрәнә һәм ғүмерен ошо эшкә сарыф итә. Ни өсөн баҡырсылыҡ һөнәре ылыҡтыра — әйтеүе ҡыйын. Ихтимал, караптарҙағы ялтырап торған бөтә деталдәрҙең, мөһим частарҙың баҡырҙан эшләнеүенәндер? Ихтимал, баҡырҙың башҡа металдарға ҡарағанда аҫылыраҡ булыуында, еңелерәк эшкәртелеүенәндер...

Пенсия йәшенә еткәс, уға ялға китеү тураһында ситләтеп әйтеп ҡарайҙар, әммә Трофим Яковлевич: «Йәнә берәй биш йыл эшләйем әле, унан күҙ күрер», — ти. Начальство уны «тиражға» сығарырға ашыҡмай — Трофим Яковлевич

һымаҡ мастерҙар канауҙа аунап ятмай, дәрте, дарманы бар икән, эйҙә эшләй бирһен. Алтмыш биштә лә ул «отставкаға» сығырға ашыҡмай. Начальство аңлай: был йәштә уға нескә эштәр эшләүе еңел түгел, шуға күрә йәнә пенсия хаҡында яйлап ҡына һүҙ ҡуҙғаталар. Трофим Яковлевичтың күҙҙәренән мөлдөрәп йәштәр тәгәрәп төшә. «Иптәштәр, мин заводтан китһәм, бер көн дә йәшәй алмаясаҡмын. Ҡыумағыҙ мине бынан. Бер ҙә булмаһа, вахтер итеп күсерегеҙ. Мин заводтың эшенә, коллективына ғына түгел, уның еҫенә, һауаһына күнектем...»

Завод директоры яғымлы йылмайҙы. Өҫтәл артынан тороп, ултырғыс алып, уның янына килеп ултырҙы.

— Аңлайым мин һеҙҙе, Трофим Яковлевич, — тине ул, бармаҡтарын аралаштырып, һағышланып ултырған ҡарттың яурынына ҡулын һалып. — Минең дә ата-бабам — йылғасы. Әйтергә яраһа, беҙҙең тамырҙарыбыҙҙа ҡан менән бергә Днепр һыуы ла тибеп аға. Яҡшы. — Директор торҙо. Йәнә эш креслоһына барып ултырҙы. — Яҡшы. Беҙ һине, Трофим Яковлевич, «мәңгелек вахтер» итеп тәғәйенләйбеҙ.

Трофим Яковлевич «мәңгелек» тигән һүҙҙең мәғәнәһен аңлап етмәне, күрәһең, башын күтәрә төшөп һораны.

— Нисек — мәңгелек?

— Күпме теләйһең, шул саҡлы эшлә. Буш ваҡыттарыңда йәш эшселәргә өйрәтеүсе-наставник та булырһың. Уныһы өсөн өҫтәмә түләрбеҙ.

Трофим Яковлевичтың күҙҙәре томаланды, тамағына төйөр тығылды.

— Минең әжәлем ошонда... заводта буласаҡ, иптәш директор, — тине ул, мөмкин саҡлы тантаналыраҡ итеп.

— Ә әжәлгә иртә әле, Трофим Яковлевич. Беҙ әле һинең етмеш, һикһән, туҡһан йәшеңде лә ошонда байрам итәсәкбеҙ.

...Киевты немецтар алғандың икенсе көнөндә үк, майор Рентель бер нисә офицер-белгес һәм украин хыянатсылар менән заводҡа килде. Трофим Яковлевич уларҙың киләсәген аңлай ине — судоверфтең герман командованиеһы өсөн айырыуса әһәмиәтле икәнен төшөнә. Ни эшләргә? Дошман менән күҙгә-күҙ осрашмаҫ өсөн күренмәҫкә, йәшенеп кенә заводтан шылырғамы?.. Әллә... Юҡ, шыла алманы.

Немецтар көткәндән дә элегерәк килеп төштөләр. Проходной ишеген ҡотороп шаҡынылар. Кемдер уға исеме менән украинса өндәште. «Әй, Трофим, ас!» Асмай ни эшләй алаһың инде? Барыбер ватып керәсәктәр... План күҙ асып йомғансы башҡа килде. Ул, һике аҫтында ятҡан ауыр балтаны алып, ишеккә йүнәлде.

— Хәҙер, хәҙер...

Ул ишектән ингән тәүге немецҡа балтаһы менән киҙәнде. Шунда ук автомат тырылданы. Балта немецтың башын киҫмәне, юҡмы, уныһын Трофим Яковлевич күрә лә, ишетә лә алманы...

— Халыҡ.. — тине Трофим ағай, төрөпкәһен һурып, — халыҡ таң менән ополченецтарға ҡушылып, ғәскәр менән китеп барҙы.

— Ә ... Кушнир... Федор Михайлович? Ул да киттеме ни?

— Михаил Федорович уларҙы ойоштороп алып китте лә инде.

Раяның йөрәге өҙөлөп төшкәндәй булды.

— Ә... ул миңә бер төрлө яҙыу ҙа ҡалдырманымы? Бер һүҙ ҙә әйтмәнеме?

Вахтер башын сайҡаны.

— Һинең ҡайғың булманы шул, Раиса Васильевна. — Вахтер, бәлки, тәү тапҡырҙыр уға исеме, атаһының исеме менән өндәште. — Приказ көтөлмәгәндә булды. Немец ҡалаға керә башлаған ти бит...

Рая директор, партком секретары кабинеттарының ишектәрен тартҡылап ҡараны. «Нисек? Ни эшләп бер яҙыу ҙа ҡалдырмаған ул?.. Үҙе бит, үҙе...» Ул илар хәлгә етте. Ихтимал, уның бер ҡасан да бындай өмөтһөҙ хәлдә ҡалғаны булмағандыр.... Ул үҙ кабинетына ташланды. Туҡта! Дерматин менән көпләнгән ишеккә аҡбур менән: «Р. кисер, приказ. Үҙ яйынды ҡара. К.», — тип яҙылғайны. Рая ашығып яҙылған был һүҙҙәрҙе йәнә бер тапҡыр уҡып сыҡты. Усы менән ишекте һөрттө. Ҡабинетын асты. Инеп, өҫтәл артына барып ултырҙы. Башын устары менән ҡаплап, күҙҙәрен йомдо. «Хәҙер ни эшләргә? Ни?.. Ниңә өйҙә ҡуна ҡалды икән ул?.. Ниңә, әсәһен тыңлап, завод менән күсеп китмәне икән?..» Үкенеүҙәр, үкенеүҙәр... Ҡыҫыр, файҙаһыҙ үкенеүҙәр...

Рая ҡапыл һикереп торҙо, өҫтәл тартмаларын, сейфты асып, ҡағыҙҙарҙы иҙәнгә һыпырып төшөрҙө, кәрзингә төйгөсләп тултырҙы ла ишек алдына сыҡты.

— Трофим ағай, мәле, бынауы ҡағыҙҙарҙы ҡомға күм... Юҡ, яндыр. Көлө лә ҡалмаһын.

Һуңғы ҡағыҙ янып көлгә әйләнгәнсе, ул күҙен уттан алмай, ҡулдарын ҡаушарып ҡарап торҙо. Ҡайһы бер ҡағыҙҙар, янып көлгә әйләнгәс, осоп китергә теләгәндәй, өҫкә күтәрелә лә, бер аҙ ситкә китеп, ҡомға төшә. Әйтерһең, ҡағыҙҙар менән бергә уның тыныс тормошо ла, йәшлеге лә көлгә әйләнә ине...

Ҡағыҙҙар янып бөткәс, Рая башын Трофим ағайҙың ҡулбашына ҡуйып, тауышһыҙ ғына иларға тотондо. «Хәҙер ни булыр? Нисек йәшәргә? Нисек?.. Ҡайғы-хәсрәт башыңа

төшмәгәндә, уны алып ташлау еңел һымаҡ тойола, ә бына ҡапыл ут өҫтөңә ишелеп төшһә...»

Трофим Яковлевич уны йыуатырға тырышты.

— Ҡыҙым... Артыҡ бөтөрөнмә... Бөтәһе лә беҙ тигәнсә булыр...

«Ә нисек ул — «беҙ тигәнсә?» Күпме йырланыҡ, дошманды нисек «ҡаршыларға», уның менән нисек «һөйләшергә» өйрәндек, ә бына дошман менән күҙгә-күҙ осрашырға тура килгәс... Ай, ауыр, ауыр... Хәҙер ҡайҙа барырға? Кем менән кәңәшергә?.. Был һорауҙы дошман тылында ҡалған һәм дошманға нәфрәт уты менән янған нисәмә мең, миллион кеше бирҙе икән?..

Рая башын вахтерҙың ҡулбашынан алды, бармаҡ битҭәре менән күҙҙәрен һөрттө. Йылмайғандай итте.

— Ҡисерегеҙ мине, Трофим ағай... Ҡапыл юғалып ҡалдым. Эйе, һеҙ хаҡ. Бөтәһе лә беҙ тигәнсә буласаҡ... — Ул ҡарттың баҡыр оно һеңеп бөткән ҡулдарына ҡулдарын терәп алды ла китеп барҙы. — Хәйерле осрашҡанға тиклем...

Урамда, үҙе лә аңламаҫтан, ни эшләптер аяҡтар Юрковский урамына йүнәлде. Юрковский менән Туровский урамдары мөйөшөндә дүрт ҡатлы йорт бар. Унда йылғасылар, шул иҫәптән Куница Мария Васильевна ла, йәшәй...

Подол... Киевтың иң боронғо биҫтәһе, йылғасылар районы, дауыл алдынан булған ауыр тынлыҡты хәтерләтеп, тынып ҡалғайны. Магазиндар, танса майҙансыҡтары, клубтар ябыҡ, үлгән. Тик бер ҡасан да тынғылыҡ, ҡурҡыуөркөү белмәүсе малайҙар ғына һирәк-мирәк осрай, ҡайҙалыр ашығыс, кисектермәҫлек йомош менәндер инде, китеп барыусы оло йәштәге ҡатындар, ҡарттар осраштыра. Бер генә лә ир-егет, йәш ҡатын-ҡыҙ күҙгә салынмай, әйтерһең, ҡалала бер генә йәш ир заты, ҡатын-ҡыҙ юҡ... Днепрҙан иҫкән ел урамда ҡағыҙ киҫәктәрен, иртә һарғайып өҙөлөп төшкән япраҡтарҙы ҡыуып йөрөй... Быға саҡлы шундай яҡшы, яғымлы тойолған Подол урамдары, яғылмаған йорт шикелле, күңелһеҙ, ышыҡһыҙ — өшөтә.

Һәм бына ошо ышыҡһыҙлыҡты бөтөрөргә теләгәндә, Раяға Мария Васильевна Куница осраны.

Мария Васильевнаның нур һибеп тороусы һоро күҙҙәрендә шатлыҡ та, ҡаушау ҙа күренде.

— Раечка... Һеҙ... Һин... Ни эшләп бында?.. Күптән күренгәнең булмағас, мин һине эвакуироваться иткәнһеңдер тип уйлағайным...

— Эвакуироваться итеп булманы шул, Мария Васильевна...

Ул тирә-яғына ҡаранып алды.

— Әйҙә әле парикмахерскийға инеп һөйләшәйек. Үҙеңә прическа ла яһармын.

— Хәҙер уның ни кәрәге бар...

## УН ТУҒЫҘЫНСЫ НОВЕЛЛА

### Аристократка Маша

Мария Васильевна Куница ул саҡта утыҙға етеп килгән, шыны торган сырайлы мөһабәт ҡатын ине.

Оҙон, зифа кәүҙә, корсаж менән ҡыҫылған шикелле, нескә бил; токарь станогында ҡырып яһалған кеүек оҙон, төҙ аяҡтар. Ирҙәр йөрәген ярһытыусы ғына түгел, ҡатын-ҡыҙҙар күҙен дә ҡыҙҙырыусы йөҙ; киң маңлай, яғымлы, иркәләп ҡараусы оҙон керпекле ҙур һоро күҙҙәр, шул йөҙҙө биҙәп, тағы ла күркәмләндереүсе күпереп торған йомшаҡ ҡарағусҡыл сәс зауыҡ белеп таралған. Уның атлап йөрөшө, батша ҡатындарыныҡы төҫлө, ғорур; ҡулдары, йөҙгән кешенеке һымаҡ, яй ғына хәрәкәтләнә. Көлгәндә ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, башын аҙ ғына ҡырын һала. Бер ҡасан да ҡысҡырып көлмәҫ, ә күгәрсен гөрөлдәүен генә сығарыр. Арзанлы кейемде лә килештереп, кәүҙәһенә «һылатып» кейер... Бына ошо һыҙаттары өсөн уны «аристократка Маша» тип йөрөтәләр. Маша быға үпкәләмәй, асыуланмай, киреһенсә, ғорурлана ғына. Ә ниңә ғорурланмаҫҡа! Әйҙә, «ҡырҡ тартмасы» ҡыҙы парикмахер Куницаны «аристократка Маша» тип йөрөтһөндәр, ғәрлек түгел, был уның өсөн почет ҡына...

Эйе. Мария Васильевна судоверфтә парикмахер булып эшләй ине. Төп эше ирҙәр сәсен ҡырҡыу, һаҡал-мыйығын ҡырыу булһа ла, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла буш ебәрмәне. Ҡатын-ҡыҙ битенең рәүешенә ҡарап, прическа яһай, матурлыҡ өҫтәй белә торғайны. Шуға күрә байрам алдынан ҡатын-ҡыҙҙар ҡала өҫтөндәге мәшһүр «дамский мастерҙарға» бармайынса, уның «хужалығына» ябырылдылар. Мария Куницаның абруйы ирҙәр донъяһында ғына түгел, ҡатын-ҡыҙ араһында ла шаҡтай ҙур ине.

Һуғыш башланғанда, уның туғыҙ һәм биш йәшлек ике малайы, ни тотһа, шул ҡулынан килгән (төп профессияһы агас эштәре модельщигы, унан тыш слесарлыҡ, электрик эшен дә яҡшы белә) ире бар ине.

Немец ҡаланы уң һәм һул яҡтан урап, тылда ҡалдырып киткәс, Киевты һаҡлап алып ҡала алмау асыҡланғас, Подол райкомының беренсе секретары Мироненко Григорий Анисимович Кушнирҙы саҡырта. Икәүҙән-икәү генә фронт

хәлдәре, завод хаҡында һөйләшәләр һәм секретарь Кушнирҙың күҙҙәренә ҡарап һорай.

— Федор Михайлович, подполье өсөн беҙгә йәшерен осрашыу, элемтә өсөн ышаныслы кеше, ышаныслы квартира кәрәк буласаҡ.

Кушнир күңеленән үҙе лә был хаҡта уйлағайны инде. Ул, икеләнеп, һуҙып тормай, Куницаны атаны.

— Парихмахер. Кереүсе, сығыусы күп, тимәк, шикләнергә лә урын юҡ.

Мироненко уйға ҡалды.

— Уның ирен эсергә ярата тиҙәр...

— Ул яғы бар, әммә былай зыянлы кеше түгел ул. Эсһә, ята ла йоҡлай — донъяһының аҫты өҫкә килһен, унда ҡайғыһы юҡ.

— Әгәр Куница риза булмаһа?

— Ул... — Кушнир ни әйтергә белмәй, ике-өс секундҡа тыныш яһаны, Мария Васильевнаны күҙ алдына килтереп: «Йә, Маша, ризаһыңмы?» — тип һорағандай итте. — Риза буласаҡ», — тине ул икеләнмәй, — мин уға ышанам, Григорий Анисимович.

— Яҡшы. Тик был хаҡта, Федор Михайлович, һинең менән минән башҡа бер кем белергә тейеш түгел. Ғөмүмән, конспирация талабы буйынса, һәр кем үҙенән башҡа бер, күп тигәндә, ике кешене белергә тейеш.

— Аңлашыла, Григорий Анисимович.

Алға китеп шуны ла әйтергә кәрәк. Мария Васильевнаның парикмахерскийы йәшерен осрашыу урыны, элемтә пункты икәнлеген тора-бара байтаҡ ҡына кеше белде һәм уларҙың бер нисәһе гестапо ҡулына эләкте. Гестапо уларҙан ике нәмәне талап итте: йәшерен осрашыу урынын һәм «енәйәттәштәрҙе». Ниндәй ғазаптар кисермәнеләр икән улар, әммә ауыҙҙарынан бер һүҙ тартып ала алманылар. Киевты азат иткәнсе, был йортҡа немецтың шиге төшмәне. Мария Васильевна клиенттарының һаҡал-мыйыҡтарын ҡырҙы, сәсен ҡырҡты һәм... элемтәсе вазифаһын үтәп килде. Ә Подол өсөн был айырыуса хәтәр эш ине — был район «ябыҡ зона» һаналды һәм һәр йорт, һәр кеше гестапо һәм полицайҙар күҙәтеүе аҫтында торҙо.

Юҡ, ике йыл буйына бөтәһе лә ал да гөл генә булманы, әлбиттә. Ҡырҡ беренсе йылдың октябрь аҙаҡтарында Орел тигән кеше (ул йылғасылар йорто ингән участкала управдом булып эшләй ине) парихмахерскийға килеп керҙе. Шаҡтай көр тауыш менән иҫәнләште.

Мария Куница уны, ни эшләптер (була бит шундай кешеләр, һиңә бер насарлыҡ эшләмәһә лә, күңелгә ятмайҙар), уны элек тә яратып бөтмәй ине, ә немецтарға эшләй

Аңлашылғас, күрә алмау нәфрәткә әйләнде. Ул клиентына Һалҡын ғына яуап бирҙе.

— Һиумыһығыҙ. Уҙығыҙ.

Орел шаяртмаҡсы булды.

— Әллә тешең һыҙлаймы, Маша?

Куница уның тел төбөн аңланы.

— Һыҙлаһа, дарыуың бармы ни?

— Кәрәк булһа, табырға мөмкин, — тип Орел креслоға ултырҙы. — Ә-ә һиндә, элеккесә, тәртип. Ҡар һымаҡ аҡ нимә... Одеколондар ҙа һуғышҡа саҡлы булған кеүек...

Мария уның лығырлауына иғтибар итмәне.

— Ҡырынаһығыҙ ғынамы әллә сәсте лә ҡырҡтыраһығыҙмы, добродей Орел?

— Мин һиңә ниндәй добродей! — тине Орел, ихлас үпкәләп. — Һы!

— Немецтарға хеҙмәт иткәс, добродей булмай, кем булаһың ти.

— Ә һин үҙең? — тине Орел, башын күтәреп, хәйләле, юк, дөрөҫөрәге, мыҫҡыллы йылмайып.

— Мин немецтарҙы ғына түгел, совет кешеләрен дә хеҙмәтләндерәм...

— Ә мин? Минең ҡул аҫтындағы йорттарҙа кемдәр йәшәй? Совет кешеләре түгелме ни?

Ошо урында Мария хаҡ булмағанлығын аңланы.

— Сәсегеҙҙе нисек ҡырҡырға? «Подполькамы?» «Боксмы?..»

— Теләһәң нисек ал, — тине Орел, хуш күңелләнеп. — Мин бында матурланырға кермәнем. Һеҙҙең өҫтә йәшәүсе кәнтәй Зика кисә ошаҡлашырға керҙе. Имеш, һеҙгә әллә ниндәйҙер шикле кешеләр кереп-сығып йөрөй. Береһен иҫләп тә ҡалған. Һуғышҡа саҡлы тынлы оркестрҙа уйнағайны, ти.

Мария Васильевнаның иҫе китмәгәндәй булды. Кем белә, бәлки, Орел уны мушкаға алалыр. Провокациялыр....

— Ә миңә йөрөмәгән кеше юк. Немец офицерҙары ла инә...

— Минең эш, Мария Васильевна, һеҙҙе иҫкәртеү. Аҙаҡ үкенергә тура килмәһен. Ул кәнтәйҙең ире лә немецтарға һатылды, ә үҙе, ире юҡта, немец һалдаттары менән типтерә.

— Беләм... — тине Мария, ҡайсыны сиҡ-сиҡ итеп. — Ул, машинкаһы булһа ла, ҡайсы менән ҡырҡырға ярата торғайны — был эштән айырым ләззәт таба. Һәм, эсен бушатыр өсөн, уны ашыҡмай ғына, тыныс ваҡыттағыса, ентекләп ҡырҙы, күбекте йәлләмәй ике тапҡыр ҡырҙы. Одеколон һиптерҙе, салфеткаһын эҫе һыуға сылатып, компресс яһа-

ны, ниндәйҙер бик тәмле еҫле крем яғып, битенә массаж яһаны. Орел иреп, ләззәтләнеп ултырҙы.

— Булды, — тине Мария, уның муйынына бәйләнгән япманы алып.

— Әһ! — тине Орел ихлас. — Тыныс ваҡыттағы шикелле булып китте...

Ә Мария уйланды: «Ни эшләп мин уны быға саҡлы яратмай йөрөнөм икән? Бер ҙә улай йәмһеҙ, әшәке түгел кеүек тә баһа... Провокатор ҙа түгелдер...»

— Күпме? — тине Орел, кеҫәһен аҡтарып.

— Рәхмәт, бер тин дә кәрәкмәй.

— Рәхмәттән тамаҡ туймай, Мария Васильевна, ә һинең ике малайың бар, ирең иһә тапҡанын... — Ул Марияның күңелен китмәҫ өсөн әйтеп бөтөрмәне. Пудра-одеколондар торған өҫтәлгә ун һум һалды. — Ә мин әйткәнгә ҡолаҡ һал. Һаҡланғанды алла һаҡлар, ти. — Ул хушлашып сығып китте.

Куница был хаҡта Железко һәм башҡа ышаныслы кешеләр менән кәңәште лә яңы квартира эҙләй башланы. Квартира мөмкин саҡлы халыҡ күп йөрөй торған урында, кәм тигәндә, ике ишекле булырға тейеш: урамдан керә торған һәм артҡа, ишек алдына, сыға торған. Бәхеткә ҡаршы, ундай йорт тиҙ табылды. (Ул саҡта Киевта буш квартиралар ғына түгел, буш йорттар ҙа етерлек ине.) Урам сатындағы ике ҡатлы ағас йорт. Һәр урамға ла алтышар тәҙрә сыға. Өс бүлмә. Кухня. Өйҙө йылытыр өсөн «рус мейесе».

Мария Васильевна ҙурыраҡ бүлмәне парикмахерский итте, ә ике кескәй генә бүлмәгә үҙҙәре урынлашты.

## АВТОРҘАН

1968 йылдың ямғырлы, һалҡынса октябрь аҙағында, капитан Фәтиховтың эҙҙәрен эҙләп, Киевҡа тәү тапҡыр килгәс, Мария Васильевна менән мин бына ошо парикмахерскийҙа осраштым. Дөрөҫ, «аристократка Мария» хәҙер инде алтмышҡа яҡынлашып килгән, әммә әле һаман төҫ ташламаған, матур, артистик хәрәкәттәрен юғалтмаған олпат ҡатын ине. Ул, мине күргәс: «Капитан Фәтиховты күргәндәй булдым», — тип болоҡһоп алды, күҙ йәштәрен һөрттө, сәғәттәр буйы мауығып, көлөп тә, илап та, йәлләп тә, һоҡланып та Фәтихов хаҡында һөйләне. «Ә ниндәй кеше ине ул! Ниндәй! Һалҡын ҡанлы, бер ҡасан да ҡаушап, юғалып ҡалмай торған ҙур ихтыярлы кеше тип кенә әйтһәм, әллә ни аңлата алмам. Ул... Бына бер генә миҫал. Бер ваҡыт... Яңылышмаһам, ҡырҡ икенсе йылдың мартында

Лә бер сибәр ҡыҙ менән килеп керҙе. Мин ни, беҙ бит ҡатындар ботобеҙ ҙә бер сыбыҡтан ҡыуылған, әллә ни уйлап та өлгөрмәнем. Ә Фәтихов: «Маша, һеҙ үҙ эшегеҙҙә булығыҙ, ә мин яраланған бер подпольщикка аҙыраҡ ҡанымды бирәм», — тип ширма артына инеп китте. Медсестра (теге сибәр ҡыҙ медсестра икән) уны ултыртып, тамырынан ҡан ала башларға өлгөрмәне, өс немец офицеры килеп керҙе. Өсөһө лә бер аҙ эскән, ҡысҡырып һөйләшәләр, үҙҙәрен шаҡтай әҙәпһеҙ тоталар... Бәхеткә ҡаршы, береһе генә ҡырынды. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә нисә тапҡыр үлеп терелгәнмендер, хәҙер әйтә алмайым, ә тегендә, ширма артында, Фәтихов ҡанын биреп ултыра...

Аҙна-ун көндән йәнә кереп: «Теге подпольщикты ҡотҡарып ҡалдыҡ бит, һеҙгә рәхмәт, Машенька!» (Беҙ бит уның менән йәштәштәр инек), — тип яңағымдан үбеп сығып китте.

Куница тынып торған арала, мин дә уның хаҡында бер нисә йылы һүҙ әйтеп алдым. «Һеҙ ҙә бит, Мария Васильевна, ҡурҡаҡ заттарҙан булмағанһығыҙ...» Куница: «Мин нимә, осрашыу квартираһының хужабикәһе генә булдым», — тип ҡул һелтәмәксе булғайны, мин уға уның иҫ киткес бер батырлығын иҫенә төшөрҙөм. «Ә теге саҡта, ҡырҡ беренсе йылдың көҙөндә, облава ваҡытында немец һалдаты бер еврейҙы атырға йыйынғас, кем, немецҡа ташланып, уның боғаҙынан быуып алды? Ул бит ыһ та итмәй икегеҙҙе лә атып китә ала ине...» Мария Васильевнаға был эпизодты хәтерләү рәхәт булып китте, күрәһең. Йылмайҙы. «Ә ул шундай таҙа немец ине, йоҙроғо менән генә һуҡһа ла мине ергә һеңдерә ала ине. Ә ул һуҡманы. Ҡаушап ҡалды. «Фрау! Цюрүк! Цюрүк!» — тип минең ҡулдарымды ысҡындырҙы».

Хушлашыр алдынан Куница миңә миҙалдарын һәм партизан билетын күрһәтте. Ҡыҙғылт сейә төҫөндәге кеҫкәй генә ҡатырға кенәгә. «Партизанский квиток. 813». Рәхмәт һиңә, «сабып барған атты туҡтатырлыҡ һәм дөрләп янған өйгә инерлек» батыр украин ҡыҙы Мария Васильевна Куница. Капитан Фәтиховтың туғандары, ҡыҙы, ҡатыны, Башҡортостан исеменән рәхмәт. Нәфис, оҫта ҡулдарың, батыр йөрәгең өсөн рәхмәт...

## ЕГЕРМЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Завод комиссары Кушнир

Йүнле кеше урамға этеп дә сығармаҫлыҡ һалҡын, ямғырлы көндәрҙең береһендә — тышта ҡара көҙ ине — па-

рикмахерскийға ят кеше килеп инде, әҙәпле генә итеп өндәште. Куницаға был кеше, бигерәк тә уның тауышы, таныш һымаҡ тойолдо, текләберәк ҡараны. «Ярабби! Был бит Зайцев. Заводтың инженеры. Һәр ваҡыт шат, һәр ваҡыт шаян һүҙҙәр әйтеп көлдөрөргә һәм көлөргә яратыусы Зайцев. Ай ярым эсендә ниндәй үҙгәргән: ҡартайған, ябыҡҡан, күҙҙәре һыуы бөткән күлде хәтерләтә — эскә батҡан.

— Мария Васильевна, тышта ямғыр булһа ла, һеҙгә кейенергә, минең менән бергә атларға тура киләсәк.

Куница, ҡайҙа, тип һорамаңы, һүҙһеҙ генә кейенде. Балалары яғына, эске бүлмәгә инеп, ниҙер әйтеп сыҡты. Ире эштән ҡайтмағайны әле.

— Инструменттарҙы ла алырғалыр инде?

— Алығыҙ, Мария Васильевна.

— Йәшерен булмаһа, кемде эшкәртергә барабыҙ, Яков Николаевич?

— Һеҙҙән йәшерен нәмә юҡ, Мария. Кушнирҙы.

— Кушнирҙы? — тине лә Куница тирә-яғына ҡарап алды. Артта ла бер кем дә юҡ ине — һуң, ындай көндө кем урамда йөрөһөн инде...

— Эйе. Мин әле, ярай, фронтты йырып сығып, үҙебеҙҙекеләргә ҡушылыр өсөн ай буйы урмандарҙа, соҡорҙарҙа, йырындарҙа ҡунып йөрөһәм дә, немец ҡулына эләкмәнем, ә бына Федор Михайлович... Ә ул күргән... һуғыша-һуғыша сигенгән беҙҙең ғәскәрҙәребеҙ менән барғанда, немецтар ҡулына эләккән, әммә, күп тә үтмәй, ҡасҡан. Йәнә көнсығышҡа йүнәлгән. Ләкин бер нисә көндән, һис көтмәгән-уйламаған урында, тәрән соҡорҙа, ятып шишмә һыуы эскәндә, йәнә дошман ҡулына ҡапҡан. Йәнә ҡасҡан һәм был юлы инде көнсығышҡа түгел, ә төньяҡҡа, Чернигов урмандарына, юл тотҡан. Унда мотлаҡ партизандар булырға тейеш тип уйлаған. Үҙенең кемлеген һәм маҡсатын һиҙҙермәҫ өсөн, ул ауылдарҙан үткәндә хужабикәләргә кәстрүлдәр, примустар, самауырҙар төҙәткән, әммә... барыбер ниәтенә ирешә алмаған — Чернигов урмандарына юлдар бикле булған. Немецтар һәм полицайҙар Чернигов урмандарына табан барыусы һәр кешене туҡтатып, документтарын тикшергәндәр, документы булмаһа, шик тыуҙырһа, ҡулға алғандар, лагерға оҙатҡандар. Кушнир өсөнсө тапҡыр бәхетен һынап ҡарарға теләмәй, маршрутын көнбайышҡа — Житомирға табан үҙгәртә. Бында ла яҙмыш уға шәфҡәтле булмай, шул уҡ хәл: Житомир урмандарына юл бикле, ә ерле халыҡ таныш булмаған кешегә асылып бармай: «Партизандар хаҡында беҙ бер нәмә лә белмәйбеҙ», — тип кенә яуап бирә. Шулай итеп, юл бөтә — ул Киевҡа әйләнеп ҡайта һәм Гончарная урамында ҡатынының атаһы йәшәгән

Йортҡа инәтләй. Ҡараңғы төшкәнсе ситтә, кеше иғтибарын [illegible] итмәҫлек урындарҙа, буталып йөрөй һәм, инде тәҙрәләргә утгар һүнгәс, һаҡ ҡына ҡайныһы ишеген ҡаға. Кейәүен күргән ҡайны саҡ ҡысҡырып ебәрмәй — Кушнир шул саклы үҙгәргән...

Әйе, Федор Михайлович шул саҡлы ныҡ үҙгәргәйне, Куница ла уны тиҙ генә таный алманы, ә ул профессиональ ғәҙәт буйынса, кешеләрҙең йөҙөн тиҙ ятлай һәм икенсе күргәндә уны шунда уҡ танып ала торғайны. Кушнирҙың иһә ул нисәмә йылдар сәсен алды, ҡырҙы, ә шулай ҙа... Йөҙөн-башын йөн баҫҡан: йәш поптарҙыҡы һымаҡ бөҙрә һаҡал, яғаһына төшөп торған һалбыр сәс. Йөнтәҫ ҡаш аҫтынан бик арыған, һағышлы күҙҙәр генә йылтырап күренә. Ул Мария Васильевнаны күргәс, шатланды ла, тартынды ла — Куница бит уны һәр ваҡыт бөхтә кейенгән, һәр ваҡыт эшлекле һәм иғтибарлы итеп күрергә өйрәнгән, ә бына әле...

— Шундай ҡиәфәттә күренеүем өсөн ғәфү ит инде, Маша, — тине ул, уның ҡулын ике ҡуллап ҡыҫып.

Мария инструменттарын әҙерләй башланы.

— Бөтә артыҡ-бортоҡ йөндө ҡырҡып, ҡырып ташлайбыҙмы, Федор Михайлович, әллә аҙыраҡ ҡалдырабыҙмы?

— Һаҡал-мыйыҡты ҡалдырырға тура килер, Маша. Ни генә тимә, кемлегемде аҙыраҡ йәшерер...

Мария уның ашыҡмай ғына сәсен алды, ҡырҙы, һәм улар иплəп кенә һөйләштеләр. Кушнир Киевтағы хәлдәр тураһында һорашты. Киев тыштан ғына бирелгән һымаҡ тойолһа ла, подпольщиктар оккупанттарға аҙ ғына ла тынıслыҡ бирмәйҙәр ине — көн һайын тип әйтерлек берәй ерҙә диверсия...

— Һәм уларға, — ти Кушнир, ишетелер-ишетелмәҫлек итеп, — табандарын ялтыратҡансы тынıслыҡ булмаясаҡ, Машенька. Бик һаҡ ҡына таныш-белештәрҙең ҡылдарын тартырға тырыш. Үҙеңдең маҡсатыңды әйтмә, кешеләрҙән ишеткән хәбәрҙәрҙе генә һөйләгән бул, тегеләр ни әйтерҙәр, быға ҡараштары ниндәй булыр... Әгәр берәйһе дошман менән көрәшергә әҙер булыуын һиҙҙертһә лә үҙең бер яҡҡа ла әйтмә, гестапоның ҡолаҡтары ярғанаттыҡы шикелле, ә танауы немец овчаркаһыныҡы менән бер.

Шунан һуң Мария Васильевна уға Бабий яр фажиғәһен һөйләп бирҙе.

...Октябрь аҙаҡтарында немецтар приказ сығара: «Бөтә еврейҙарға яҡшы кейем-һалымдарын, алтын-көмөштәрен алып, фәлән-фәлән урамдарға, майҙандарға йыйылырға. Һеҙҙе бәләкәй ҡалаларға оҙатабыҙ, Киевта бер генә еврей ҙа йәшәргә тейеш түгел». Подпольщиктар, немецтарҙың аҫтыртын һәм яуыз маҡсатын белеп ҡалып, еврей ғаиләлә-

ренә хәбәр итәләр: «Немецтарға ышанмағыҙ, улар һеҙҙе Бабий ярға алып китәләр. Провокацияға ышанмағыҙ, мөмкин саҡлы йәшенергә, ҡаланан сығып китергә тырышығыҙ...» Ләкин, ни өсөндөр, еврейҙар подпольщиктарҙың киҫәтеүҙәренә ҡолаҡ һалмайҙар, әллә ышанып етмәйҙәр, әллә үҙҙәренең башҡа уй-пландары була — билдәһеҙ. Бына егерме һигеҙенсе октябрҙә тиҫтәләгән мең еврей ғаиләләре күн сумаҙандарын, бесәйҙәрен тотоп, хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙҙарын эйәртеп (ә улар бөтәһе лә украин һәм рус милләттәренән булалар), төрлө урамдарҙа, майҙандарҙа йыйылалар. Ике яҡта, шпалер һымаҡ, автоматчиктар һәм быҙау саҡлы овчаркалар (арала иң йыртҡыс, уҫал ҡара овчаркалар — ротвейлерҙар ҙа бар ине) көстәрен һәм асыуҙарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, муйынсаҡ бауын өҙөргә тырышып, еврейҙарға табан ынтылалар, бүре тауышы менән өрәләр, ырылдайҙар. Ә һалдаттар, бер нәмә булмаған шикелле, көлөшөп тәмәке тарталар, әленән-әле билдәренә тағылған фляжкаларын сисеп, ауыҙҙарына тейҙереп алалар. Кешеләр урамға сығыу түгел, танауҙарын күрһәтергә лә батырсылыҡ итмәйҙәр, тик тәҙрәләргә генә йәбешкәндәр. Бына бер ваҡыт ҡуҙғалырға тигән команда була. Колонналар ҡуҙғала. Ошо ҡот осҡос күренеш ваҡытында ла ҡыйыу кешеләр табыла. Кемдер ҡайҙандыр: «Ҡасығыҙ! Төрлө яҡҡа һибелегеҙ! Улар бит һеҙҙе Бабий ярға ҡырырға алып баралар...» — тип ҡысҡыра. Ошо ҡыйыу кешеләр араһында подъезд аркаһы аҫтынан ҡарап тороусы үҫмер Петя Поздняк та була. Ул да еврейҙарҙы баш эймәҫкә, буйһонмаҫҡа өндәй. Әммә... Бер генә еврей ҙа тәүәккәлләп, колоннанан сығып, подъездарға, аркаларға, ишектәргә ташланмай. Улар баштарын эйеп, буйһоноп атлай бирәләр...

Өс көн эсендә, 28—30 октябрҙәрҙә, Бабий яр мәйеттәр менән ҡаплана. Унда аҡ һаҡаллы ҡарттар ҙа, сабый балалар ҙа була.

Был ҡот осҡос йыртҡыслыҡ, ҡанһыҙлыҡ Киев халҡын тетрәтә, бер аҙға йәндәрен паралич һуға, ә подпольщиктар тағы ла саяраҡ, тағы ла аяуһыҙыраҡ көрәш башлайҙар...

Мария Васильевна Бабий яр фажиғәһен һөйләп бөтөргәс, өйҙә шомло, ауыр тынлыҡ урынлаша, һиҙелер-һиҙелмәҫлек һелкенгән шәм теленең яҡтыһы түшәмдә, стеналарҙа сағыла, бынан тағы ла шомлораҡ булып китә. Кушнир тора. Көҙгөгә ҡарап ала.

— Бына хәҙер аҙыраҡ кешегә оҡшап киттем, юҡһа бөтөнләй неандерталец ҡиәфәтенә кергәйнем бит...

Аҙаҡ улар сәй эстеләр. Шул саҡ Кушнир бер ҡасан да онотолмаҫлыҡ һүҙ әйтте.

— Бына һеҙ шаһит. Һуңғы һулышыма саҡлы мин фашистар менән көрәшәсәкмен. Үҙем генә түгел, башҡаларҙы ла йәлеп итәсәкмен. — Ул янында ултырыусыларға йылмайып ҡарап ала. — Беҙ хәҙергә аҙ әле, әммә, моряктар әйтмешләй, тельняшка кейгәнбеҙ.

Бер тәүлектән Кушнир Черняк янына күсеп китте. Павел Черняк — уның балалыҡ дуҫы. Дөрөҫ, уның ҡытыршы яҡтары, биографияһында хатта тап та бар (Черняк, дәүләт милкәте менән «һаҡһыҙыраҡ» эш итеп, төрмәлә ултырып сыға), әммә Кушнир уны ситкә типмәне, ташламаны һәм хәҙерге көндә, иң мөһиме, уға ышана. Һатмаясаҡ. Ул шарттарҙа кешегә бер генә төрлө үлсәү менән ҡарай торғайнылар — ышаныслымы, түгелме? Кисен улар икәүҙән-икәү генә һөйләштеләр.

— Павло, артабан нишләргә уйлайһың? Һинең кеүек кешегә йөк ташыусы эше бик батып бөтмәй...

— Ә һин нимә тәкдим итмәксе булаһың?

— Үҙең беләһең, һинең биографияңда тап бар. (Яҡты булһа, Кушнир Черняктың сөгөлдөр төҫөнә инеүен күргән булыр ине, ә улар иһә ҡараңғыла гәпләштеләр.)

— Ахмаҡлыҡ булды инде, Федя, иҫкә төшөрөп, һарыуҙы ҡайнатма.

— Бына шул «тапты» беҙ файҙаланырға тейешбеҙ, Павло.

— Нисек?

— Полицияға эшкә кер.

— Юҡ, юҡ. Тик полицияға түгел. Аҙаҡ битемә төкөрһөндәрме...

— Павло, — Кушнир ҡулын уның ҡулына ҡуйҙы. — Был бик мөһим. Бик кәрәк. Ватан бының өсөн үҙеңә рәхмәт әйтәсәк.

Гестапо, Черняктың һүҙҙәренә генә ышанмай, үҙ каналдарынан тикшерҙе һәм уның ысынлап та «бысранған» кеше икәнлегенә ышанып, полиция идаралығына эшкә алды. Был үҙенә күрә кескәй генә еңеү ине.

Биш-алты көн Черняктa «ҡунаҡ» булғандан һуң, Кушнир Трухан утрауында йәшәүсе дуҫы янына күсә, ә бер аҙҙан Боричев токка, Буяненколар йәшәгән йортҡа, оялай.

Эш шулай тора. Трухан утрауынан күпселек халыҡты көсләп күсергәндә, Раялар ҙа, олатаһы Галата һалдырған ике ҡатлы бик иркен йорттарын, ҡаралтыларын, мөлкәттәрен ҡалдырып, Подолға күсергә мәжбүр булалар. Иғтибарҙы Боричев токтағы уның ысынса һанлы йорт йәлеп итә.

Был ике ҡатлы ағас йорт ине. Аҫта ике, өҫтә өс квартира. Подъезд ишек алдына сыға. Йорт шаҡтай текә тау итәгенә һалынған. Бер яҡтан ҡараһаң, Подол ус төбөндәге

шикелле: Андрей тауы, уның башына һалынған Андрей көмбәҙе күренә. Икенсе яҡтан аҫҡа күҙ һалһаң, киңәнеп ағыусы киң, мөһабәт даръя — Днепр; «Наталка» күпере, Трухан утрауы, аҡһыл һары ҡомло Дарница пляжы, «әнә-нән-ептән сыҡҡан» яңы, бейек йорттары күренә. Һулда электр станцияһы, элеватор, судоверфь... Матур урын. Конспирация, йәшерен осрашыуҙар өсөн дә ҡулайлы урын. Ошо йорттоң икенсе ҡатында Железко әсәһе менән урынлаша. Буяненколар беренсе ҡатты һайлайҙар, ә Кушнир Киевта пәйҙа булғас, уның өсөн (үҙенең теләге буйынса) цоколь ҡатындағы ярым ташландыҡ бүлмәне йәшәрлек хәлгә килтерәләр: йыуалар, йыйыштыралар, бер кешелек караuат урынлаштыралар, өҫтәл, артһыҙ ике-өс ултырғыс ҡуялар. «Етте, — ти Кушнир, — башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй. Бешеренергә кәстрүл, таба, бер биҙрә, бер көрөшкә булһа, шул еткән». Ошо «бункерҙа» ул туғыҙ айға яҡын йәшәй. Ошо «бункерҙан» ул береһенән-береһе ҡыйыу, батыр егерме бер подпольщик менән етәкселек итә. Ошо «бункерҙан» ул ҡырҡ икенсе йылдың егерме бишенсе июлендә, һыҙылып ҡояш сығып килгәндә, үҙенең һуңғы, фажиғәле һәм үлемһеҙлек юлына китә.

## БЕЛЕШМӘ

Федор Михайлович Кушнир 1904 йылда йылғасы ғаиләһендә тыуған. Революциянан һуң караптар ремонтлай торған мастерскойға өйрәнсек булып эшкә урынлашҡан. Унан баҡырсы булған. Аҙаҡ мастерскойҙы 2-се затонға әйләндерәләр, ә 1930 йылда уны караптар ремонтлау заводы итәләр. 1934 йылда ул Киев караптар төҙөү һәм ремонтлау заводы тип атала башлай.

Кушнир затонда тәүге комсомолецтарҙың береһе була, тора-бара заводтың комсомол комитеты секретары итеп һайлана, бер үк ваҡытта баҡыр цехының мастеры булып эшләй. 1925 йылда партия сафына инә. Завком председателе итеп һайлана, ә һуғыш башланғанда, партком секретары булып эшләй.

Шулай итеп, минең күпселек геройҙарым Подолда тыуып үҫкән, йәшәгән, эшләгән һәм ошонан һуңғы сәфәрҙәренә сыҡҡандар...

## ПОДОЛ

Әле хәҙерге Киев барлыҡҡа килгәнсе үк, бында тормош ҡайнап торған. Археологик ҡаҙылмаларҙың һөйләүенә ҡа-

районда. Почайна тигән легендар йылға буйында беҙҙең эраға саҡлы мең йыл элек үк кешеләр йәшәгән булған. Киев метроһын төҙөгәндә иллегә яҡын бер, ике, хатта өс ҡатлы ағас йорттарҙың бураалары — һөлдәләре табыла. Бынан тыш браслеттар, балсыҡтан эшләнгән көршәктәр, баҡыр иреткәндә ҡуллана торған теглдәр һәм башҡа төрлө һөнәр ҡоралдары, һауыт-һабалар сыға. Был Подол халҡының ул ваҡытта уҡ инде цивилизацияның шаҡтай юғары баҫҡыста тороуы хаҡында һөйләй. Подолда (Ильинский урамында) Россиялағы һәм Украиналағы иң боронғо сирҡәү бар. Ул әле кенәз Владимир христиан динен рәсми дәүләт дине итеп ҡабул иткәнсе үк — 945 йылдарҙа һалынған.

Подолда бик борон заманда уҡ күн эшләү, көршәкселек производствоһы, ювелир эштәре киң таралған була. Шуға күрә бында Гончарная, Дегтярная, Кожемяцкая тигән урамдар бар.

Константиновская урамындағы ун бишенсе һанлы йортта Россиялағы тәүге революцион союздың — «Эшсе синыфын азат итеү өсөн көрәш союзының» йәшерен типографияһы булған, ә Брковская урамында РСДРП-ның конспиратив типографияһы урынлашҡан...

1919 йылда бында Лениндың инициативаһы буйынса Днепр хәрби флотилияһы ойошторолған.

Етмешенсе йылдарҙың уртаһында Подолда ике йөҙ меңгә яҡын кеше йәшәй ине.

Һәм һуңғыһы. Подол районының музейында революционерҙарға, Бөйөк Ватан һуғышының һәм Киев подпольеһының геройҙарына бағышланған бүлмәләр, мөйөштәр, стендтар бар. Бер стенд Подол подпольщиктарына бағышланған. Унда капитан Фәтиховтың фоторәсеме һәм шәхси ҡоралы — «ТТ» пистолеты ҡуйылған.

Бына ниндәй ул Днепр яры буйлап көньяҡ-көнбайыштан көнсығышҡа табан, унан төньяҡҡа Пуша-Водицаға саҡлы, бер нисә километрға һуҙылған Киевтың әсәһе, Русь башланған ер — Подол.

## *Дүртенсе бүлек*

### ҠЫЛДАН НЕСКӘ, ҠЫЛЫСТАН ҮТКЕР КҮНЕРҘӘН ЙӨРӨҮ

Киевтың иң ҡупшы һәм тыныс урамдарының береһе — Орджоникидзе урамы, Цоколь этажды иҫәпләмәгәндә, бер ҡатлы матур йорт.

Киевты алған көндә үк был йортта генерал-комиссар Магуния «батшалыҡ» итә ине.

— Һерр генерал, һеҙҙең саҡырыуығыҙ буйынса майор Рентель.

Генерал Магуния, Днепр пароходство начальнигының рапортын тыңлап бөтөрмәй, өҫтәл аша уға ҡағыҙ һуҙа.

— Уҡығыҙ, майор.

Рентель башына «Ашығыс. Йәшерен» грифы ҡуйылған телеграмманы уҡый. «Днепрҙа ни өсөн регуляр навигация башланмай? Йылға туңғансы, рейхҡа мөмкин саҡлы күберәк бойҙай, ит, май, сало оҙатыуҙы форсировать итергә. Был эште шәхси контролегеҙ аҫтына алырға бойорам...»

Генерал, Рентель телеграмма менән танышҡансы, ҡулындағы ҡыҙыл-зәңгәр башлы йыуан ҡәләм менән уйнап, тишеп ҡарап тора.

— Һорауҙар бармы, майор?

— Юҡ, һерр генерал.

— Ул сағында минең һорауым бар, майор.

— Тыңлайым, һерр генерал.

— Ҡасан Днепрҙа навигация башлайһығыҙ?

— Бөтә оборудование юҡҡа сығарылған, Днепр төбөнә батырылған, белгестәрҙе бөтә ҡаланы бөтөрөп эҙләйбеҙ...

— Мин аҡланыу түгел, немецтарға хас теүәл яуап көтәм, майор.

— Бөгөн Берлиндан ҡатмарлы сварка агрегаты алдыҡ.

— Беләм. Конкретно.

— Күп тигәндә, ике аҙнанан, һерр генерал...

— Бөгөн нисәһе әле? 11 октябрь. Тимәк, — ул календарь биттәрен аҡтарҙы. — Тимәк, 29 октябрҙә... Рейхҡа бойҙай, ит, май менән тәүге карап китәсәк...

## ЕГЕРМЕ БЕРЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Активист Федоров

Майор Рентель генерал-комиссар янынан туп-тура судоверфкә китте. Завод директоры Беденконың кабинетына килеп инеү менән, уның сәләменә яуап та бирмәй: «Эшселәрҙе йый!» — тип команда бирҙе.

Заводта һуғышҡа саҡлы булған штат юҡ ине, әлбиттә. Бының булыуы ла мөмкин түгел ине — кадровый эшселәрҙең, белгестәрҙең күбеһе завод менән бергә эвакуацияланды, Киевта ҡалғандарының күпселеге сигенеүсе ғәскәргә эйәреп китеп барҙы. Ә шулай ҙа немецтар ҡала бөтөрөп элекке йылғасыларҙы: слесарҙарҙы, токарҙарҙы, электриктарҙы, столярҙарҙы, механиктарҙы, мотористарҙы, такелажниктарҙы, баҡырсыларҙы, ҡаҙан яһаусыларҙы — сварщиктарҙы... ҡыҫҡаһы, караптарҙы ремонтлағанда кәрәк буласаҡ бөтә белгестәрҙе эҙләнеләр, үлем менән ҡурҡытып, заводҡа ҡыуҙылар. Унан шуны ла әйтергә кәрәк, герман командованиеһының Киевты алған көндө үк йәбештерелгән әмерҙәрендә һәм иғландарында: «Аңлы рәүештә эшкә сыҡмай, Германия ҡораллы көстәренә зыян итергә тырышыусылар, бигерәк тә белгестәр, яуапҡа тарттырыласаҡтар», — тип яҙылғайны.

Һүҙ ҙә юҡ, был бойороҡтарға буйһонып, эшкә килгән бөтә халыҡты ла ғәйепләргә беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ. Уларҙың күбеһе балаларын, ҡарт ата-әсәләрен асҡа үлтермәҫ өсөн, баш эйеп булһа ла, вермахтҡа хеҙмәт иттеләр. Әммә улар араһында дошманға зыян итеүселәр, саботажниктар ҙа аҙ булманы.

Хыянатсы Беденко ултырғысҡа баҫты һәм бер-береһенең күҙҙәренә тура ҡарарға тартынып баҫып торған эшселәрҙе барлап сыҡты. «Былар менән генә алыҫ китеп булмаҫ», — тип уйланы ахыры ул.

— Бына нәмә, ип... (Ул саҡ-саҡ «иптәштәр» тип ысҡындырманы.) Бына нәмә, дуҫтар...

Кемдер бышылдап ҡына: «Сволочь», — тип ҡуйҙы, әммә уны Беденко түгел, янында торған кешеләр ҙә ишетмәне буғай.

— Бына нәмә, дуҫтар. Берлин беҙҙең эшебеҙҙе еңеләйтер һәм тиҙләтер өсөн ҡатмарлы сварка агрегаты һәм башҡа станоктар ебәргән. Беҙҙең бурыс, дуҫтар, большевиктар юҡҡа сығарған, батырған караптарҙы күтәреү, ремонтлау һәм сафҡа баҫтырыу. Майор Рентель бының өсөн һеҙгә... беҙгә ике аҙна срок бирә. Эште тәүлек буйына алып барырға. Ял көнө бөтөрөлә...

Эшселәр араһында ҡәнәғәтһеҙләнеү, һуҡраныу башланды.

— Дуҫтар, — тине Беденко, ҡулын фашистарса сәләмләгәндәге шикелле күтәреп. — Мин әле һөйләп бөтмәнем. Бының өсөн герман командованиеһы һеҙгә өҫтәмә паек, премия бирәсәк. Ә хәҙер һөйләгеҙ. Кемдең ниндәй һүҙе бар.

Һөйләргә теләүсе булманы.

— Ул сағында таралырға һәм, — Беденко мыҫҡыллы йылмайҙы, — большевиктар әйткәнсә, удар эшкә!

Эшселәр теләр-теләмәҫ кенә ҡуҙғала башланы. Беденко ултырғыстан төштө. Ошо ваҡыт халыҡ араһынан өҫтөнә шаҡтай донъя күргән зәңгәр комбинезон, һаҙлыҡ төҫөндәге брезент куртка кейгән кеше Беденко янына килде.

— Пан директор, минең әйтәһе һүҙем бар.

— Рәхим итегеҙ, рәхим итегеҙ, беҙҙә демократия, кем ни теләй, шуны әйтә.

— Пан директор, — комбинезон кейгән кеше Беденкоға мөрәжәғәт итте. — Ә ниңә беҙгә эште ике аҙнаға һуҙырға? Һеҙ әле большевиктарҙы телгә алдығыҙ...

Беденко аҡланғандай итте.

— Мин бит шаяртып ҡына...

— Ә мин шаярмай әйтәм, — тине комбинезон кейгән кеше. — Большевиктарҙың социалистик йөкләмә ала торған ғәҙәте бар. Ә ниңә беҙгә өҫтәмә йөкләмә алып, ун биш көнлөк эште ун көндә тамамламаҫҡа?

Был юлы инде бая «сволочь» тип шыжылдаған кеше шул һүҙҙе күршеләре ишетерлек итеп әйтте.

Беденконың ауыҙы йырылды. Майор Рентель уға яҡыныраҡ килеп: «Нимә, нимә?» — тип һораны. Беденко аңлатып бирҙе һәм, комбинезон кейгән кеше янына килеп, русса һораны.

— Фамилия?

— Федоров.

— О... Федорофф корош гут... ман. — Рентель Федоровтың ҡулын ҡыҫты һәм Беденкоға: «Федоровҡа тәүлек буйына йөрөрлөк аусвайс бирергә», — тип бойорҙо.

Федоров-Фәтихов менән эш бөткәнсе һөйләшеүсе кеше булманы тип әйтерлек. Тик бик кәрәк булғанда ғына, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа һүҙ ҡуштылар. Тәҡдим ителгән тәмәкенән баш тарттылар: йә, мин тартмайым, йә, әле генә тарттым, тип хәйләләштеләр. Федоров-Фәтиховтың күңелендә байрам ине...

Асыуы һөрөм булып йөҙөнә сыҡҡан Желедко йомош тапҡан булып Фәтихов янына керҙе. Фәтихов уны митингыла күреп, ауыҙын асмай ғына баш ҡағып иҫәнләшһә лә, әле: «Ә, сәләм, Василь!» — тип ҡул биреп күреште. Желед-



Ибраһим Абдуллин «Ҡош Юлынан барам» романында һүрәтләнгән образ прототиптарының береһе — Киев подпольщигы И. В. Жеребко менән. 1978 йыл.

конуң ҡул ҡыҫыуынан уҡ һиҙелеп тора: ул Фәтиховҡа асыулы ине.

— Тартабыҙмы? — тине Фәтихов, комбинезон кеҫәһенә кереп.

— Юҡ. Әле генә тарттым.

— Ниңә улай күңелһеҙ? Әсәйең ҡатыраҡ сирләп киттеме әллә?

Яуап урынына Железко:

— Давай, тартам, — тине.

Фәтихов уға махорка, ҡағыҙ бирҙе.

— Тик торма, эш менән кергән булып ҡылан. Анауы сүкеште бир, ә бынауы аҫҡысты тегендә ҡуй...

— Аңламайым мин һине, Федоров, — тине Железко, һүҙҙәре һәм күҙҙәре менән көйҙөрөп. — Һеҙ кем? Немец халуйымы? Провокатормы?

Фәтихов яҡында эшләүселәргә ишетелмәҫлек итеп бышылданы.

— Бар, бәҙрәфкә ин. Мине көт, — ә инде ҡысҡырып әйтә һалды: — Мин һинән бит ун алтынсы һанлы аҫҡысты һораным, ә һин егерменсене һондоң...

Железко уға тишеп ҡараны ла, эсе махорка төтөнө бо-лотон ҡалдырып, сығып китте.

«Түҙемлек, түҙемлек етмәй егеткә», — тип уйланы Фәтихов.

Бер аҙҙан ул универсал аҫҡысты тотоп сығып китте һәм бәҙрәфтә Железконы эҙләп тапты.

— Иртәгә йәкшәмбе. Төшкә саҡлы ғына эшләйбеҙ, ә мин бер-ике сәғәткә ҡалам. Ослайһы эшем бар.

Железко, ауыҙ сите менән генә йылмайып, төрттөрҙө.

— Ну да, һин бит «социалистик йөкләмә» алдың.

— Вася, теләһәң һин дә ҡал, ҡалмаһаң, минең эш бөтөүгә кил.

Инде йылына башлаған араға баяғы митингынан һуң йәнә һалҡын ел үтте.

— Ә килмәһәм?

— Уныһы — һинең эш... Ә... шулай ҙа мин һинең урында булһам, киреләнмәҫ инем...

— Ярай. Ҡарармын.

— Тороп тор. Завод ҡапҡаһы төбөндә торма, ситтәрәк көт. Берәйһен көткәнеңде һиҙҙермә.

Железко заводтан китмәне. Эшселәр таралғас та, нимәләр соҡондо, аҡтарҙы, төҙәткән булды, ҡыҫҡаһы, Фәтихов әйткән ике сәғәтте эш менән үткәрергә тырышты һәм, өс тулырға ун минут ҡалғас, ишек алдына, унан проходнойҙан урамға сығып, ҡапҡа тирәһендә буталып йөрөнө. Фәтихов теп-теүәл өстә (һуң «фольксдойч» бит, ә немецтар теүәл халыҡ) урамға сыҡты. Шунда уҡ Железконы күреп ҡалды, ләкин уның янында туҡталманы, үтеп киткәндә иҫләп кенә: «Бер аҙҙан минең арттан бар», — тине.

Заводтан шаҡтай ары киткәс, Почта майҙанына еткәндә генә, ул аҙымдарын аҡрынайтты, Василде көтөп алды. Фәтиховтың тәүге һүҙе шелтә булды.

— Василь, туғанҡайым, һин һаман да һаҡһыҙ ҡыланаһың, насар конспираторһың. Мин бит һиңә, ҡапҡа төбөндә торма, ситкәрәк кит, тинем. Бөтә эшселәр сыҡҡанда — башҡа эш, ә әле завод тирәһе буш бит. Шымсылар иҫләмәй тип уйлайһыңмы?

— Ә һеҙгә ниңә шикләнергә?— тине Железко, мыҫҡыллы йылмайып, ҡулбаштарын йыйырып. — Һеҙ бит активист.

— Ә мин һиңә лә «активист» булырға кәңәш итер инем, Вася.

— Үлгәндә лә! — тине Железко, усының ҡыры менән һауаны киҫеп.

— Әтәсләнмә, Василь, әтәсләнмә. Подпольела хәйлә фронттағыға ҡарағанда ла күберәк кәрәк.

Железко был һүҙҙәр менән килешкәндәй итте.

— Уныһы һәр бер пионерға билдәле.

— Билдәле булғас, ниңә һаман әтәсләнәһең?

— Ә нишә «социалистик йөкләмә» алдың? Германияға тиҙерәк беҙҙең бойҙайҙы, итте оҙатырға ашығаһыңмы?

— Ашығам...

Улар, Почта майҙанын үтеп, ҡала үҙәгенә табан күтәрелә башланылар.

— Беҙ ҡайҙа барабыҙ? — тип аптырап һораны Железко.

— Йөрөйөк әле урам ҡыҙырып. Майҙандағы киндер картаға күҙ һалайыҡ...

— Мин ул карта янынан үтергә ҡурҡам, — тине Железко, тәү тапҡыр эсендә тәрән йәшеренгән серен сисеп. — Әгәр улар Мәскәүҙе ҡамап алған булһалар, әгәр...

— Ҡурҡма, Василь, ҡурҡма, беҙ уларға Мәскәүҙе бер ҡасан да бирәсәк түгелбеҙ...

— Һеҙ быға ышанаһығыҙмы әллә шулай теләйһегеҙ генәме?

— Икеһе лә бергә...

Был урамда емерелгән йорттар әллә ни күренмәй ине, тик ҡайһы берәүҙәренең тәҙрә быялалары ватылған һәм уның урынына фанер, таҡта ҡаҙаҡланған, ә ҡайһы берҙәре «һуҡыр» көйгә, күрәһең, унда йәшәүсе юҡтыр. Урам, ял алды булыуға ҡарамаҫтан, буш тип әйтерлек ине. Ә һуғышҡа саҡлы йәкшәмбе көндәрҙә был урамға халыҡ һыйыша алмай торғайны. Днепрҙа катерҙарҙа, кәмәләрҙә йөрөр, Дарницаға сығып, уның аҡһыл һары ҡомонда ҡыҙынып, һыу ҡойонор өсөн Киев халҡы йәйәүләп, автобустарға, трамвайҙарға тейәлеп түбән төшә ине. Ә бөгөн урам буш. Бөгөн урам күңелһеҙ, әйтергә яраһа, етем. Көн болотло, һалҡынса булыуҙан ғына түгел, ҡалаға, бөтә илгә ҡот осҡос афәт килеүҙән тән ҡалтырай, йөрәк өшөй.

Ә немец һалдаттары, ҡайҙа баҫҡандарын белмәй, киң, тар ҡуңыслы, дағалы итектәр менән тротуарға туҡ-туҡ баҫып, ҡуҡрайып йөрөйҙәр. Яндарынан үтеп киткәндә, бөтәһенең дә ауыҙҙарынан шнапс — араҡы еҫе аңҡып тора. Ә кем, ниндәй хужа, өйөнә ҡараҡ кергәс, йылмайып, кинәнеп торһон инде! Әгәр Киев кешеләренең нәфрәттәре утҡа әйләнһә, ул йәһәннәм утынан да эҫерәк булыр һәм оккупанттарҙы көлгә әйләндереп бөтөрөр ине. Париж коммунарҙары урамы башына еткәс, Фәтихов, туҡтап, аҫҡа табан ҡарап торҙо. Көрһөнөп ҡуйҙы. Железко быны һиҙеп ҡалды.

— Нимә, танышураммы әллә? — Фәтихов ҡасандыр (хәҙер һуғышҡа саҡлы булған тормош әллә ҡайҙа, сикһеҙ алыҫлыҡта, тау артында ҡалған һымаҡ тойола) ошо урамдың икенсе һанлы йортонда, тәүҙә икенсе ҡатта, унан алтынсы ҡатта дүрт йылға яҡын йәшәгәйне. Квартира бәләкәй генә ине, бәҙрәфе, кухняһы бер нисә квартираға уртаҡ...

Әммә ул йылдарҙың һәр көнө генә түгел, һәр сәғәте сикһеҙ ҡәҙерле булып иҫкә төшә, йөрәкте һағыш уты ҡурып ала... Уның кемлеген Поздняктарҙан башҡа берәү ҙә белмәй — Фәтихов киҫәтеп ҡуйҙы, бигерәк тә Петяны. «Мин Федоров. Һеҙҙең «сыбыҡ осоғоҙ». Башҡаны белмәйһегеҙ».

Инде Железко менән уҡмашырлыҡ итеп ҡулдар ҡыҫышылғас, «һуңғы һулышҡа саҡлы Ватанға һәм көрәштәштәренә тоғро булырға» тип ант итешкәс тә, Фәтихов «сиселеп» барманы, байтаҡ ҡына акцияларҙың нисек эшләнгәнен, кемдәр башҡарғанлығын асып бирмәне. «Ваҡыты еткәс, бөтәһе лә билдәле булыр...» — тип кенә йылмайҙы.

— Йә, картаны барып ҡарайбыҙмы? — тине Фәтихов, тәмәке көйрәткәс.

— Һеҙ барығыҙ, мин бармайым, — тип тиҫкәреләнде Железко.

— Ҡарарға кәрәк, Василь, ҡарарға. Иң хәтәр, ҡурҡыныс кешеләргә, күренештәргә лә ҡурҡмай тура ҡарарға кәрәк. Икенсенән, радиоприемниклы булғас, беҙ герман командованиеһы менән беҙҙең Совинформбюроның хәбәрҙәрен сағыштырып, уларҙың алдашыуын фашлап, листовкалар таратырбыҙ.

Железко был дәлилдәргә ҡаршы тора алманы.

Улар рамкаға тарттырылып, өс аяҡҡа ҡуйылған киндер карта янына килделәр. Шуныһы характерлы — беҙҙең ғәскәрҙәрҙе аңлатҡан ҡыҙыл һыҙыҡтар тоноҡ буяу менән билдәләнгән, ә немец ғәскәрҙәренең уҡтары әллә ҡайҙан күренеп торған көрән буяу менән һыҙылғайны.

...Ул көндәрҙә бөтә совет халҡының күҙҙәре Мәскәүгә текәлгән, уйҙары Сталинға йүнәлгәйне. Һәр бер патриот, үҙ илен яратыусы һәр кеше, дүрт-биш йәшлек баланан алып бер аяғы ерҙә, икенсеһе гүрҙә торған ҡарттарға саҡлы, шомланып һәм борсолоп: «Сталин Мәскәүҙе Гитлерға бирер микән ни?»— тип үҙ-үҙенә һәм яҡындарына һорау бирҙе, дөрөҫ, быны шулай булмаясағына, икенсе көндө ҡояш сығасағына ышанған кеүек, ышаныусылар ҙа күп булды, ә ҡайһы берәүҙәр 1812 йылғы Ватан һуғышында фельдмаршал Кутузов һүҙен иҫкә төшөрҙөләр: «Мәскәүҙе биреү — ул әле Рәсәйҙе биреү, еңелеү тигән һүҙ түгел...»

Ә шулай ҙа йөрәк ут менән тулғайны... Карта ҡаршыһында тиҫтәгә яҡын кеше баҫып тора. Кемдер өҙлөкһөҙ әле — асҡы, әле өҫкө иренен сәйнәй, кемдер, картаға тиҙ генә күҙ ташлай ҙа, йөҙөнә аҙ ғына ла үҙгәреш сығармай, ашығып китеп бара; кемдер көрһөнөп ҡуя; ә башына ҡарсыҡтарса итеп шәльяулыҡ бәйләгән йәш, һылыу ҡатын баш бармағының бөкләнгән быуынын тешләй, саҡ-саҡ иламай тора.

Ә быны бераү ҡәнәғәт тауыш менән: «Былай булғас, октябрҙең егерме дүрт йыллығы һуңғы «байрам» буласаҡ,— тине. Был һүҙҙәрҙе Железко ла ишетеп ҡалды, күрәһең. Ул тауыш килгән яҡҡа ынтылмаҡсы булғайны, Фәтихов уны еңенән тотоп ҡалды, һәм, һул ҡулы менән уң ҡолаҡ һөйәген ҡашыған булып, Совет власына йыназа уҡыған кешегә күҙ ташланы. Бер ҡараштa уҡ Фәтихов, профессиональ гәзәт буйынса, тегене «хәтер карточкаһына» төшөрөп алды: башында бобрик бүрек; көл төҫөнә кергән кәзә һаҡал. Ул бер ҡулы менән көмөш инкрустация яһалған самшит таяҡҡа таянған, икенсеһенең баш һәм имән бармағы менән мыйығын ике яҡҡа һыпыра. Ул йә «үҙенең көнөн» көтөп ярыҡта ятҡан ҡандалалыр (хәйер, утыҙ етенсе йылда улар менән иҫәпләшеп бөттөләр буғай), йә немец ғәскәренең ылауында килгән нафталинланған эмигранттыр...

Ҡарта янынан китеп, Крещатикка табан боролғансы, улар һүҙһеҙ барҙылар. Ҡарталағы уҡтар уларҙы ярһыткайны. Герман командованиеһы берҙе — ике, икене биш итеп күрһәтһә лә, фронттағы хәлдәр йыуаныслыҡ ине.

Болоҡһоп барыусы Железконы ауыр уйҙарынан арындырыр өсөн, Фәтихов уның еңенән тотоп алды.

— Василь, ә һин карта янында баҫып тороусыларҙың ҡайһыһына айырыуса иғтибар иттең?

— Ҡайһыһына? — тине ирекһеҙҙән тоҡанып китеүсе Железко, — әлбиттә, ҡул таяғы тотҡан буржуйға. Үҙен сак-саҡ ергә һендерәмәнем хәшәрәттең, — Василдең ҡулдары йоҙроҡҡа төйнәлде, тештәре шығырлап алды.

— Уның кемлеге асыҡтан-асыҡ күренеп тора, унда маңлай күҙенә тиҙ генә ташланмаған бер кеше бар ине. Шуны абайланыңмы?

— Кем ул? — тине Василь, һораулы ҡараш ташлап.

— Ҡара фетр эшләпәһен батырып кейгән, йоҡа ҡара пальтоһының яғаһын күтәрә төшкән кешегә иғтибар итмәнеңме?

— Күреүен күрҙем мин уны... — тине Железко, аҡланғандай, — әммә... абайлап ҡараманым. Ниңә, танышығыҙмы әллә?

— Ул шпик. Гестапо агенты.

— Ә һеҙ уны ҡайҙан белдегеҙ?

— Ул әлеген-әле картаға ҡарап алған була, шул уҡ ваҡытта карта янына килеүселәргә күҙ ташлап ала, уларҙың реакцияһын күҙәтә. Ә бармағын тешләп, сак-саҡ иламай торған ҡатынға ул бер нисә тапҡыр ҡаш аҫтынан, «юл уңайында» ҡарап алып, хәтерендә ҡалдырырға тырышты.

Желедко Фәтиховтың зирәклегенә һокланып ҡуйҙы, иғтибарһыҙ булыуына үҙен эсенән генә шелтәләне.

Фәтихов «инструкцияһын» дауам итте.

— Шуны күңеленә һеңдер, Василь, разведчик-подпольщик һәр бер кешегә, һәр бер күренешкә, һәр бер деталгә иғтибар итергә тейеш. Уның өсөн ваҡ, кәрәкмәгән деталдәр, штрихтар юҡ. Разведчик-подпольщиктың маңлай күҙенән алдараҡ күңел күҙе күрергә тейеш.

Желедко ҡулбаштары аша артына ҡаранып алды. Фәтихов быны иҫләне.

— Кемде ҡарайһың?

— Арттан беҙҙе тыңлаусы юҡмы, тип ҡарайым.

— Дөрөҫ эшләмәйһең. Һин алдан килеүсене күҙҙәрең менән күрһәң, арттан килеүсене арҡаң менән күр, той.

— Әгәр минең ундай һәләтем булмаһа?

— Ул сағында... — Фәтихов, эйелеп, ботинка бауын тартыбыраҡ бәйләгән булды, — ошо ваҡыт аяҡтарың араһынан артыңа ҡарап ал. Һинең был ҡыланышың бер кемдең дә иғтибарын йәлеп итмәҫ, шикләндермәҫ.

— Әгәр минең аяғымда ботинка түгел, итек булһа? — тине Желедко Фәтиховты тоторға тырышыуҙан бигерәк уның был ҡыланышын асыҡлар өсөн.

— Ул сағында... маңлайыңа усың менән һуғып алған бул да, артыңа боролоп, йә бағанаға йәбештерелгән ҡағыҙҙы барып уҡы, ҡулыңда тәмәке төпсөгө булһа, уны сүп һауытына ташла...

— Әгәр уларҙың береһе лә булмаһа?

— Тәүге боролмаға саҡлы, бер нәмә булмаған һымаҡ, барғанса бара бир, аҙымдарыңды аҡрынайтма ла, шәбәйтмә лә, ә боролғанда күҙ эйәрмәҫлек хәрәкәт менән артыңа күҙ һалып ал... Әгәр инде һиңә шикләнгән кешең менән осрашырға тура килһә, күҙҙәренә тура ҡара, һинән күҙҙәрен алғансы, тишеп ҡара. Уның һорауҙарына алдан өйрәнеп, ятлап ҡуйған кеүек, татылдап торма, уйлабыраҡ яуап бир, ләкин алдашыу эҙләгән һымаҡ, оҙаҡ та уйланма.

Желедко йылмайып ҡуйҙы, ҡулын кеҫәһенә тығып алды. Был хәрәкәт тә Фәтиховтың күҙ уңынан китмәне.

— Ә ниңә кеҫәңә керҙең?

— Әллә керҙем? Үҙем дә һиҙмәнем...

— Ә һин һиҙергә һәм һәр хәрәкәтеңдә аҡларға тейешһең. Ҡулыңды кеҫәңә тыҡһаң, йә ҡулъяулығыңды, йә тәмәке янсығыңды ал. Буш хәрәкәт һинең борсолоуың, нервыларыңдың шаярыуы хаҡында һөйләй. Артыҡ күп аҡыл һата был кеше, тип мине тиргәмә, Василь, ни эшләйһең бит, мин һинән байтаҡ өлкәнерәк тә, унан... Һине өйрәтергә минең мораль хаҡым да бар.

— Һөйләгеҙ, өйрәтегеҙ, мин бит был эштә тома наҙан әле, һуңыр ҙа, — тине Желедко, үҙенең әле подпольеның әлифбаһын да белмәүенә үкенеп һәм бер үк ваҡытта шундай тәжрибәле, аҡыллы кеше менән осрашыуына, танышыуына шатланып та.

— Һинең йөҙөңдә һәр ваҡыт маска булырға тейеш...

— Маска?..

— Эйе, маска. Кеше һинең йөҙөңә ҡарап ни нәмә уйлағаныңды, шатланғаныңдымы, ҡайғырғаныңдымы белергә тейеш түгел. Һин бөтә нәмәгә лә иғтибарһыҙ, вайымһыҙ ҡарайһың. Һинең өсөн диңгеҙ тубыҡтан. Бер төрлө эмоцияға бирелмәҫкә! Быныһы инде, әйтергә яраһа, бойороҡ, әмер.

— Улай мөмкинме икән һуң?..

— Нисек, ниндәй холоҡ менән тыуыу мөһим түгел, ә тәбиғәт биргән холоҡто үҙгәртеү, уға төҙәтмә индереү мөһим.

— Ҡыҫҡаһы, хамелеон булырға инде?.. — тине Василь, әсе йылмайып.

— Дошман һыртлан булғас, ниңә беҙгә хамелеон булмаҫҡа. Йәнә шуны онотма. Бер генә минутҡа ла. Бер генә секундтҡа ла. Гестапоның күҙҙәре үткер, ҡолаҡтары зирәк, шуға күрә бер кеше булмаған ерҙә лә, дүрт яҡты таш стена ҡаплап торғанда ла, һаҡ ҡылан. Беҙҙең халыҡ, һаҡланғандың һағы ятыр, ти, ә һеҙҙә береженого бог бережет тигән мәҡәл бар.

— Эйе, эйе, — тине ул һүҙ ыңғайында, ә үҙе бөтөнләй башҡа нәмә хаҡында уйланы. Фәтихов быны ла һиҙенде, әммә төпсөнмәне. Иң яҡын кешеңә түгел, үҙ-үҙеңә әйтергә ҡыйынһынған уйҙар, серҙәр ҙә була бит. Дөрөҫ, әле Желедко уйлаған фекер әллә ниндәй сер түгел ине. Ул шулай уйланы: «Юҡ, Федоров-Фәтихов, үҙе әйткәнсә, ябай механик та, фольксдойч та түгел. Ул йә махсус задание менән тылда ҡалдырылған профессиональ разведчик, йә кадровый офицер. Һораһаң, әйтмәйәсәк. Ярай, түҙ, Василь, бәлки, тора-бара үҙе «асылыр».

Фәтихов йәнә теманы үҙгәртте.

— Василь, һин Киевта күптәнме?

— Ошонда тыуып үҫтем. Ә ниңә?

— Беҙгә нисек тә, нисек тә радиоприемник кәрәк. Бәлки, һинең берәй таныштың приемнигын йәшереп ҡалдырғандыр, бәлки, детектор приемниктар менән мауыҡҡан берәй һәүәҫкәрҙе беләһеңдер. Хәҙер халыҡҡа дөрөҫ информация еткереү теге йәки был диверсия, акттарҙан да мөһимерәк. Немец пропагандаһы көнө-төнө Ҡыҙыл Армияның оҙаҡламай юҡҡа сығыуы хаҡында тәкөрөгөн сәсә. Бындай ауыр көндәрҙә хаҡ һүҙ — иң көслө ҡоралдарҙың береһе ул.

Хәҙер инде Железко Федоров-Фәтиховтың кемлегенә шикләнмәй ине. Шуға күрә ул «асылырға» булды.

— Минең бер таныштың (ул ҡайныһының дуҫы, фотографияла ретушер булып эшләүсе Россты күҙ алдында тотто) байтаҡ ҡына радиодеталдәре булырға тейеш.

Фәтихов шунда уҡ эләктереп алды.

— Шулай булғас? Мин бит профессиональ радист. Әле техникумда уҡығанда уҡ детектор приемниктар йыя торғайным. Василь, һис кисектермәй, нисек тә һин ул деталдәрҙе миңә килтер...

— Ҡайҙа? — тине Василь, — заводҡамы?

«Ысынлап та, ҡайҙа? Заводҡа ярамай. Ул йәшәгән Поздняктар квартираһына ярамай... Ысынлап та, ҡайҙа?»

— Ә һинең ышаныслы квартираң юҡмы, Василь?

Бер аҙ һүҙһеҙ барғандан һуң: «Беҙҙә мөмкин», — тине Железко. — Мин торған урам тыныс, йорт та шикләнерлек түгел.

— Ә һин ҡайҙа тораһың?

Был юлы инде Василь Фәтиховты һынарға булды.

— Ә һеҙ Киевты яҡшы беләһегеҙме?

— Былай... Аҙыраҡ...

«Юҡ, аҙыраҡ түгел, күберәк беләһең һин...» — тип уйлап алды Железко.

— Боричев ток. Беҙҙең менән бер ишек алдындағы йортта заводта минең менән бергә эшләгән бик сая, ҡыйыу ҡыҙ йәшәй. Ҡыҙ тип, ҡыҙ түгел инде, ике балаһы бар. Немец телен яҡшы белә... Партияға кандидат. Комскомитет секретары вазифаһын да үтәгән кеше. Хәҙер ул да, минең шикелле, судоверфтә эшләй.

— Ә һин уға минең хаҡта һөйләмәнеңме?

— Юҡ. Унан... мин һеҙҙең менән ныҡ таныш та түгел бит әле.

— Яҡшы. Бик яҡшы. Подпольеның беренсе талаптарының береһе — конспирация. Шунһыҙ бик ныҡ, ентекләп әҙерләнгән подпольеның да емерелеүе, юҡҡа сығыуы бар. Һин ул деталдәрҙе өйөңә ташыу менән, миңә әйтерһең. Шунда мин теге ике балалы «ҡыҙ» менән дә танышырмын. Октябрь байрамына беҙ нисек тә радиолы булырға һәм Сталиндың сығышын тыңлап, халыҡҡа еткерергә тейешбеҙ.

— Һеҙҙеңсә, иптәш Сталин үҙе сығыш яһармы?

— Минеңсә түгел, ә ул сығыш яһаясаҡ. Уның һәр һүҙе — халыҡ өсөн өмөт һәм ышаныс. Программа һәм приказ.

Фәтихов менән Железко харабаларға әйләнгән Крещатик буйлап, урамдың әле бер, әле икенсе яғына сығып, «Бессарабкаға» саҡлы барҙылар. Хистәрен йәшерә белмәү-

Желедко, бер уңға, бер һулға күҙ һалып, ишетелер-ишетелмәҫлек кенә һүгенде: «Сволочтар... Фашистар... Варварҙар... Ни эшләткәндәр гүзәл Крещатикты... Ә һуғышҡа саҡлы, беләһегеҙме, ул ниндәй ине? (Фәтихов, Желедконың тулҡынына бирелеп, саҡ-саҡ: «Беләм», — тип әйтеп ташламаны.) Ә бынауы хараба урынында, беләһегеҙме, нимә ине? Ике заллы иҫ киткес матур кинотеатр. Оля менән мин ошо кинотеатрҙа таныштым...

— Ә кем ул Оля?

— Ҡатыным. Их... ҡайҙарҙа йөрөйҙәр икән улар?..

Желедко ҡапыл тоҡанып китеүсе, ҡыҙыу ҡанлы, саманан тыш тәүәккәл, хатта ҡайһы саҡта дыуамал, ифрат нескә күңелле, хисле кеше лә ине. Фәтихов та: «Ә минекеләр ҡайҙа йөрөй икән?» — тип уйлап ҡуйҙы ла бөтөнләй башҡа нәмә хаҡында һүҙ ҡуҙғатты.

— Беҙгә радиоприемник менән бергә, Василь, яҙыу машинкаһы ла кәрәк. Стеклограф булһа тағы ла шәберәк. Ләкин уны ҡайҙан табаһың?

— Машинка табыу ҡыйыныраҡ, — тине Желедко, Фәтиховтың уйын аңлап. — Завод контораһында берме, икеме машинка бар, әммә уны нисек урлап алып сығаһың?

— Ә самалап ҡарағанда? — тине Фәтихов, бер аҙ һүҙһеҙ барғандан һуң.

— Белмәйем шул... Барып сығыр микән...

Ниһайәт, улар «Бессарабкаға» барып еттеләр.

— Ә баҙарға керәбеҙме? — тине Василь.

— Хәҙер баҙар таралғандыр инде...

— Хәйер, һуң шул инде хәҙер. Оҙаҡламай комендант сәғәте башланасаҡ *. Ул киң, бейек ишектең ике яғына эленеп ҡуйылған вывесканы уҡыны. Улар немец һәм украин телендә яҙылғайны. «Кафе Шато» **. Ҡыҙыҡ... Инеп ҡарағанда инде? Һуғышҡа саҡлы минең унда бер нисә тапҡыр булғаным бар ине. Сусҡа итенән телеңде йоторлоҡ ҡурҙаҡ — жаркое әҙерләй торғайнылар...

— Минең дә ингем килә, Василь, әммә ярамай. Белеүемсә, һәр бер кафе, ресторан гестапоның прицелына алынған. Тиҙерәк киттек.

Желедко йәнә һүгенеп алды.

— Сволочтар... Һинең иленда... Һинең ҡаланда хужа булып йөрөһөндәр инде... Юҡ, һәләк булһам булам, берәй тиҫтә фрицты теге донъяға оҙатмай үсем ҡанмаясаҡ...

---

* Көҙөн һәм ҡышын комендант сәғәте киске алтынан иртәнге етегә саҡлы, яҙын-йәйен һигеҙҙән етегә тиклем була ине.

** Оккупация ваҡытында Киевта өс кафе эшләне: Васильковский урамында — «Гай», Лыбедь йылғаһы янында — «Струмок», Бессарабкала — «Шато».

— Һәләк булырға ашыҡмайыҡ, Василь дуҫҡай, ә бына оккупанттарға мөмкин саҡлы күберәк зыян итергә тырышайыҡ. Улар бит, беҙҙең еребеҙҙе алып, байлығыбыҙҙы талар өсөн генә һуғышмайҙар, ә беҙҙең халыҡты ҡырып бөтөрөп, «мең йыллыҡ» рейх төҙөү хаҡында хыялланалар. Совет активистарын юҡҡа сығарыр өсөн уларҙың ҡулында махсус исемлектәр бар.

Желедко түҙмәне: «Быларҙы һеҙ ҡайҙан беләһегеҙ?» — тип һораны. Фәтихов уға ғына хас йылмайыу менән (хәйер, бер төрлө йылмайыусы ике кеше буламы икән?..) йылмайҙы.

— Конспирацияның йәнә бер яҙылмаған ҡағиҙәһе бар, Василь дуҫҡай, бер ҡасан да үҙеңә тейешле булмаған нәмә менән ҡыҙыҡһынмаҫҡа һәм заданиеға бәйләнмәгән һорауҙы бирмәҫкә. Түҙеп көт. Тора-бара бөтәһе лә асыҡланыр.

Желедко Федоров-Фәтихов менән йөрөгәндә аҙым һайын, минут һайын подпольеның башланғыс мәғлүмәттәрен үҙләштерә барыуын аңланы.

—Ә бына шундай һорау бирергә мөмкинме?

— Һин тағы уҡытыусы алдына баҫҡан уҡыусыға әйләнмә, һора, тик һәр һорауҙы үҙеңдең бизмәнеңә һалып, үлсәп һора: был һорауҙы бирергә мөмкинме, юҡмы?

— Әгәр бизмән бик ышаныслы булмаһа?

— Беҙ беребеҙ ҙә һалдат булып та, подпольщик булып та тыумағанбыҙ, Василь. Донъя өйрәтә, ә дөрөҫөрәге, дошман өйрәтә. Һуғыш булмаһа, һин бөгөн клубта, тынлы оркестрға етәкселек итеп, йәштәрҙе бейетер инең...

Егерме дүрт йыл буйына ҡанға һеңгән ғәҙәтте, дөрөҫөрәге, әсә һөтө менән һеңгән һыҙатты, бер нисә сәғәт эсендә генә үҙгәртеп буламы ни, шуға күрә Василь түҙмәй: «Һуғыш булмаған булһа, һеҙ ни эшләгән булыр инегеҙ?» — тип һораны һәм түҙемһеҙлеге өсөн үҙен шелтәләп тә алды.

Әммә Федоров-Фәтихов уға асыуланманы, йылмайып ҡына яуапланы: «Ә мин ҡыҙым менән уйнап ултырыр инем, йә ҡатыным менән опера театрына барған булыр инем...»

— Һеҙ ҙә музыка яратаһығыҙмы?

— Музыканы кем яратмай икән, Василь...

— Бар, ундай кешеләр ҙә бар шул. Дуҫтарым беҙгә килеп, йырлай башлаһаҡ, күршебеҙ ишек шаҡыр ине лә: «Пажалысты, оломағыҙ, бында һеҙ генә йәшәмәйһегеҙ», — тип беҙҙе тыйыр ине.

— Бәлки, ул ҡарт кеше булғандыр?..

— Юҡ, күп тигәндә, ҡырҡ-ҡырҡ биштә ине...

— Ихтимал, ул ауырыу булғандыр?

— Юк, бер ултырғанда ярты литрҙы түңкәреп ҡуя ине, бер күҙенә лә сыҡмаç ине.

— Ғәжәп, гәҙәттә, кеше эсһә, йырлай белмәһә лә, йырларға тотона...

Ошо һүҙҙәрҙе раçлағандай, уларға ҡыҙмаса немец ефрейторы осраны. Ул һигеҙле яһап атлай, барып бағанаға бәрелә, ә үҙе «йәшкелт» тауыш менән мөңрәй. Инде бағанаға барып бәрелдем тигәндә, Фәтихов уны тотоп алды, немецса нимәлер әйтте, теге, уларған күҙҙәре менән йылмайып: «Да-анке-шэн», — тине. Ә Железко эсенән: «Их, төндә аулаҡ урында осраған булһа, мин уны...» — тип тештәрен шығырлатты.

Улар Крещатик бөткән ерҙәрәк айырылыштылар.

— Хәҙер һин минең ни өсөн эйәртеп алып сыҡҡанды аңланыңмы инде? — тине Фәтихов, уның ҡулын ҡыçып.

— Аңланым буғай, — тине Железко, йылмая төшөп. — Минең кеүек тәҡәтһеҙ ахмаҡты аҡылға ултыртырға.

— Һин ахмаҡ түгел, Василь. Һин батыр, ҡыйыу кеше, әммә, бая әйттем инде, подполье өсөн был ғына аҙ, юҡһа бер дошманды ла үлтермәй үҙенден һәләк булыуың бар. Ә беҙ һәләк булмаçҡа тейеш. Беҙ Еңеү таңын бергәләп ҡаршы алырға тейеш. Ә хәҙер бар сап, һиңә бит әле яҡын түгел, ә тиҙҙән комендант сәғәте башланасаҡ.

— Ә һеҙ... һеҙгә комендант сәғәте ҡағылмаймы ни?

Фәтихов курткаһының түш кеçәһенән ҡатырғы аусвайс алды.

— Тәүлек буйына йөрөһәң дә, этем дә тыя алмай. Кисә, «социалистик йөкләмә» алғандан һуң, ярты сәғәттән был пропускыны үҙҙәре килтереп бирҙе. Һиңә лә «активист» булырға кәрәк, Василь.

— Юҡ, үлгәндә лә...

— Тағы шул уҡ һүҙ. Үлем һүҙен иçкә төшөрөргә мин һиңә, өлкән туғаның, беҙҙеңсә әйткәндә, ағайың булараҡ, ҡәтғи тыям. Йәнә шул, Вася: заводта беҙ бер-беребеҙгә баш ҡағып ҡына иçәнләшәбеҙ. Осрашмайбыҙ.

Ә әйтәһе һүҙҙе, йомошто нисек еткерергә?

— Һәр көн иртән уңда бәҙрәфтә осрашырбыҙ. Көтөлмәгән ситуациялар килеп сыҡҡанда, ашығыс хәбәр итергә кәрәк булғанда, бер-беребеҙ янына керәбеҙ, әммә кереү менән осрашмайбыҙ, тәүҙә, башҡалар янына барып, тәмәке һораған булабыҙ, нимәлер әйтәбеҙ һәм үтеп киткәндә генә тамаҡ ҡырабыҙ. Аңланыңмы?

— Мин музыкант та, Федоров, ә музыканттарҙың хәтере яҡшы була.

— Улайһа, до побачення.

— До побачения.

Ул көндө Фәтихов шаҡтай оҙаҡ йоҡлай алмай ятты. Ҡулдарын баш аҫтына һалып, салҡан ятҡан Нур янына кемдер шым ғына килеп ултырҙы. Нур күҙҙәрен асты.

— Петя? Ә һин ниңә йоҡламайһың? Иртән байрам түгел дә, әллә һеҙҙең агас эшкәртеү цехы забастовка иғлан итмеме?

Петя үҫмерҙәргә генә хас йөрәк ялҡыны менән ашығыпсәсәп һөйләп алып китте.

— Иптәш капитан...

— Тсс! Әйттем бит инде, мин капитан түгел, ә механик Федоров. Фольксдойч.

— Ярай, шулай булһын да ти.

— Ярай түгел, ә мәжбүри. Әгәр тағы миңә шулай өндәшһәң, дуҫлыҡ бөттө — бер-беребеҙҙе белмәйбеҙ.

— Яҡшы. Өндәшмәм, пан Федоров. Ҡисә һеҙ һуң ҡайттығыҙ, һорай алманым. Бөтә завод һеҙҙең хаҡта һөйләй. Ни өсөн һеҙ...

Нур, уның ни әйтәһен белеп, һүҙен дауам итте.

— Ни өсөн мин «социалистик йөкләмә» алдым? Шулаймы?

— Шулай.

— Үҙем дә белмәйем, Петенька. Оккупанттарға ярарға тырышыптыр инде, — тип хәйләләште Фәтихов.

— Пан Федоров, һеҙ мине һаман балаға һанайһығыҙ. Минең дә һеҙҙең кеүек «активист» булғым килә.

— Ваҡыты килеп еткәс, булырһың, Петенька. Бар, ят, ят, иртәгә байрам түгел. Тиҙерәк немецтарға карапты ремонтларға кәрәк.

— Ҡулымдан килһә, мин Днепрҙы хәҙер үк боҙға әйләндерер инем...

— Әйләндерербеҙ, Петенька, әйләндерербеҙ, ә хәҙер бар, йоҡла.

— Һеҙ нимә мине йоҡларға ҡыуаһығыҙ? Хәҙер йоҡлай торған заман түгел...

Нур, уның ни әйтергә теләгәнен һиҙенһә лә, һораған булды.

— Ә ниндәй заман һуң хәҙер?

— Оккупанттарҙы ҡыра торған заман. Иптәш Сталин ана ни әйтте! «Оккупанттарға бер генә минут та тынғы бирмәҫкә».

— Бирмәбеҙ, Петенька, бирмәбеҙ. Улар аяғы аҫтында ер янасаҡ.

Петя инде бөтөнләй оло кешеләрсә өҫтәп ҡуйҙы.

— Ҡул ҡысыта, ҡул, Борис ағай...

Петя, ширма артына кереп, карауатына ятты һәм шунда уҡ йоҡлап китте. «Арыған», — тине Фәтихов. Ә уны йоҡо иҙмәгәйне...

Ун алтыға ғына сыҡҡан Петя йәшенә ҡарағанда иртә өлгөргән ифрат зирәк, тапҡыр, саманы белмәүсе сая малай ине. Ул инде өс-дүрт йәшендә үк ишек алдындағы иштәре менән бергәләшеп, йә танауын ҡанатып, йә битен сыйып йөрө торғайны. Ҡыйналамы, үҙе ҡыйнаймы, әммә бер ҡасан да бер кемгә зарланманы, ошаҡламаны, яҡлау һорап шыңшыманы. Уның әсәһе Александра Алексеевна һуҡрана-һуҡрана улының ҡанға буялған битен йыуа: «Ҡемгә оҡшап шулай һуғыш суҡмары булып үҫәһең икән?.. Ана, апайҙарың берсһенән-берәһе ипле, тәртипле... Һоҡланмаған кеше юҡ...»

Әсәһе Петяны «тәрбиәләгәндә», атаһы Харитон Семенович өйҙә булһа, мыйыҡтарын бөтөрөп йылмайып ултырыр ҙа яй ғына һүҙгә ҡатнашыр. «Сашенька, һин Петяны әрләмә. Малайҙар кәнфит һурып, бесәй балаһын иркәләп кенә үҫергә тейеш түгел. Малайҙар ҡара икмәк, сало, һуған ашап, беләктәре сыныҡып үҫергә тейеш». Әсә үҙенекен итә. «Көн һайын ҡанға батып ҡереү, һинеңсә, «беләк сыныҡтырыу буламы?» Харитон Семенович та ҡатыны һайт тигәнгә тайт тип тороусы ир түгел ине — үҙенекен яҡланы, һүҙен бирмәҫкә тырышты. «Малайҙарҙың йоҙроғо суйын һымаҡ булырға тейеш. Ҡем белә, ихтимал, уға...»

Александра Алексеевна улына таҫтамал бирә лә журнал аҡтарып ултырған иренә күҙ ташлай. «Нимә «ихтимал»? Нимә юрайһың?»

Харитон Семенович журналын яба. «Германияла власҡа кем килгәнен белмәйһеңме ни? Ҡоммунистарҙы ҡыра ғына бит. Тельманды «таш ҡапсыҡҡа» тыҡты. Иртәме, һуңмы, күр ҙә тор, ул беҙгә лә ташланыр әле... Ҡоторған эт ни эшләгәнен, кемде тешләгәнен белмәй бит ул...» — «Ташланып ҡына ҡараһын! — тине Александра Алексеевна, плитәнән таба алырға әҙерләгән табағасын мылтыҡ һымаҡ күтәреп. — Ташланып ҡына ҡараһын... Беҙ уны...»

Гестапо йәһәннәменә эләккәс, әле йүнле-башлы балиғ та булып өлгөрмәгән Петяны палачтар нисек кенә язаламайҙар... Ҡурғаш башлы ҡамсы менән һуштан яҙғансы яралар ҙа һалҡын һыу һибеп һушына килтереп, ике ҡулынан тотоп, артһыҙ ултырғысҡа ултырталар һәм бер генә һүҙҙән торған ике һорауҙы ҡабатлайҙар: «Явка? Сообщники?» Петя допрос алыусыларҙы күрмәй — улар ҡараңғы мөйөштә ултыралар, ә уның күҙҙәренә ҡояштан да яҡтыраҡ электр лампаһы йүнәлтелгән. Петя йә өндәшмәй, йә:

«Мин бер нәмә лә белмәйем. Ни ҡушһалар, шуны эшләнем. Һорашманым. Һорашһам, бер һүҙ ҙә әйтмәнеләр!» — тип кенә яуапланы. Уны тағы туҡмарға тотондолар. Ләкин уның ауыҙынан бер һүҙҙе ҡыпһыуыр менән дә тартып ала алманылар. Ниһайәт, меҫкен Петя күрмәй башлай. Гестапо «был тере мәйетте ашатып яҡтырғансы» тип уны урамға сығарып ташлай. Петя төнөн һушына килә. Бер нәмә күрмәй, тик яҡтылыҡты ғына тоя — гестапо ҡапҡаһы өҫтөндә ҙур лампочка яна ине — аңламай — ҡайҙа ул? Һәрмәнеп ҡарай, юҡ, был гестапо камераһы түгел, иҙәне бетон ине, ә был... Ул еҫкәп ҡарай, был асфальт булырға тейеш... Ҡайҙа сығарып ташлағандар уны? Шығырлап нимәлер асыла. Үҙен гестапоға килтергәндә, ҡапҡа шулай шығырлап асылғайны, тимәк, ул йә гестапо ишек алдында, йә урамда ята... Үрмәләй башлай. «Ишек алдында булһа, ҡайҙа булһа ла барып төртөлөргә тейеш...» Әммә ул бер ергә лә төртөлмәй... «Бәлки, урамға сығарып ырғытҡандарҙыр?.. Ул йәнә үрмәләй. Тәүҙә уң яҡҡа... Шунан уйлап ала — уң яҡҡа булһа, Владимир урамынан өҫкә күтәреләсәк... Тимәк, һул яҡҡа үрмәләргә кәрәк... Ул һулға борола һәм шул саҡ ҙур тиҙлектә килгән еңел машина уны саҡ-саҡ иҙеп китмәй — танауға, ауыҙға бензин газының еҫе килеп тула, һәм был еҫ уны аңына килтергәндәй итә. Ул йәнә үрмәләй башлай һәм шул саҡ берәү уның беләгенән эләктереп ала. Баштан йәшен үтеп китә: «Тағы гестапоға алып керәләрме? Лутсы ошонда атып китһендәр... Былай ғазапланғансы, үлемең йөҙ тапҡыр артығыраҡ...»

— Атығыҙ... Ошонда ғына үлтерегеҙ... — ти ул, ҡаты ыңғырашып. Ләкин уны атмайҙар һәм... гестапоға ла алып кермәйҙәр. Был һис уйламаған осраҡлылыҡ була (бәлки, осраҡлылыҡ та түгелдер, кем уны хәҙер әйтә ала) — теге ваҡытта Раяның әсәһе Вера Макаровна, ике ейәнен етәкләп алып, гестапоға китеп барғанда, уларҙы туҡтатып, кире бороп ебәргән шәфҡәтле полицай була.

— Тора алаһыңмы? Йөрөй алаһыңмы? — ти теге кеше.

— Ә һеҙ... кем?..

— Уныһы мөһим түгел. Йөрөй алаһыңмы? — Тауыш ҡурҡынысла түгел, ә шәфҡәтле ине.

— Мин... бер нәмә лә күрмәйем...

— Ярай, улайһа, мин һине берәй ишек алдынамы илтеп ташлайым, ә көндөҙөң, йөрөй алһаң, ҡайтып китерһең.

— Мин күрмәйем бит... Улар мине һуҡырайттылар...

— Ярай, улайһа, дежурҙан ҡотолғас, мин һине нисек тә йәшерермен дә берәйһен ебәрермен...

Һалҡынданмы (улай тиһәң, әле август башы ғына), ҡан күп ағыҙыуҙанмы, ҡалтыранып, бөрөшөп, сүп-сар һала тор-

ҙур йәшник эсендә ятҡан Петяны, күпмелер ваҡыт үткәс, береү күтәреп торғоҙмаҡсы була. «Кем был?» — тип Петя шатланып та, бер үк ваҡытта ҡурҡып та һорай. Гестапо үҙен шунан эҙләп тапмағанмы? «Уныһы мөһим түгел», — ти теге кеше. Юҡ, был теге мәрхәмәтле кешенең тауышына оҡшамағайны. «Мине ҡайҙа алып бармаҡсы булаһығыҙ? Гестапоғамы?» — «Шаулама. Өйөңә илтергә ҡуштылар. Ҡайҙа йәшәйһең?» Ниһайәт, эскә йылы инә. «Ә... ә миңә өйгә ҡайтырға ярамай. Йә тағы гестапо эҙләп килер...» — «Ул сағында мин һине үҙебеҙгә алып ҡайтам. Һорашһалар, иҫерек компанияла һуғышып, шундай хәлгә төштөм», — тип алдашырһың...

Петя аҙаҡ үҙен ҡотҡарған кешене эҙләп ҡарай, әммә таба алмай. Ихтимал, ул Киевта йәшәмәйҙер, ихтимал, гестапо, уның ысын йөҙөн белеп, ҡулға алғандыр, йә беҙҙең ғәскәргә эйәреп, көнсығышҡа китеп барғандыр, йә ҡайҙалыр тормаҫлыҡ булып ятып ҡалғандыр. Ихтимал, ихтимал... Ә... һуғыш ваҡытында ул «ихтималдар» бихисап күп булды.

Ике көндән гестапо, Петяны ҡулға алырға тип, йәнә ул йәшәгән йортҡа килә.

Бормалы баҫҡыстан таҡ-тоҡ баҫып менгән аяҡ тауыштарын ишеткәс, Юляның йөрәге өҙөлөп төшкәндәй була.

«Немецтар!» Ашығып, бойороп ишек ҡағалар. «Кем унда?» — «Асығыҙ. Асҡас күрерһегеҙ». Икеһе лә бер төҫтәге, бер фасонлы штатский костюм кейгән (гестапосылар беҙҙең кешеләрҙе ҡулға алырға килгәндә һәр ваҡыт тип әйтерлек штатский кейемдә булалар ине), ике оҙон, таҙа кеше атылып квартираға керә. Береһе шунда уҡ бүлмәне барлап сыға, кухняға үтә лә Юля ҡаршыһына килеп баҫа. «Һеҙ кем?» — «Юлия Поздняк». — «Әһә, Петр Поздняктың апаһы». Юля баш ҡаға. «Петр Поздняк ҡайҙа?» Арыш һаламы төҫлө ҡуйы, йомшаҡ сәсле, шалҡан кеүек аҡ йөҙлө, бер ҡарауҙа ирҙәрҙе һуштан яҙҙырыусы ҙур һоро күҙле Юля немецҡа шундай итеп ҡарай, таш бәғерле, ҡанһыҙ, миһырбанһыҙ гестапо эте лә түҙә алмай, башын ситкә бора. «Йә?» — «Һеҙ бит уны ҡулға алғанһығыҙ. Мин һеҙҙән, минең ҡустым Петя Поздняк ҡайҙа, тип һорарға тейешмен. Әйтегеҙ, ҡайҙа ул? Уның тамсы ла ғәйебе юҡ. Ул көнө-төнө судоверфтә һеҙгә эшләне...»

Егерме биш йәшлек Юляның сибәрлегеме, ҡурҡып-өркөп тормай атакаға ташланыуымы, немецтарҙы бер генә минутҡа ҡаушатып ебәрә. Улар бер-береһенә ҡарашалар ҙа, ике бармаҡтарын сикәләренә тейҙереп, «ауфведерзеен, медхен!» тип сығып китәләр.

Дөрөҫ, улар Юляны үҙҙәре менән бергә алып та китә алалар ине. Әммә, ниңәлер, быны эшләмәнеләр. Бәлки, башҡа подпольщиктар, Фәтихов менән Петяның ҡулға алыныуын белмәйенсә, килеп, ҡапҡанға ҡабырҙар, тип уйлағандарҙыр, бәлки, башҡа берәй уйҙары булғандыр.

Ике-өс көндән һуң, Петя бер аҙ хәлләнгәс, теге миһырбанлы кеше ун бер-ун ике йәшлек ҡыҙын уларға ебәрҙе, ул Поздняктарҙың ишеген һаҡ ҡына ҡаҡты. Алан-йолан ҡаранды. Юляның йөрәге ниҙер һиҙҙе, ләкин болоҡһоуын күрһәтмәҫкә тырышты. Ҡыҙыҡай, атаһының өйрәтеүе буйынса, бышылдап ҡына: «Һеҙ Петяның апаһымы?» — тип һораны. «Эйе, мин». — «Ә һеҙ ни исемле?» — «Юлия. Ә инә?» «Петя беҙҙә. Килеп алығыҙ».

Юля, извозчик яллап, Петяны ҡала ситендәге таныштарына илтеп ҡуя, унан ауылға оҙата.

Киевты азат иткән ғәскәр менән Петя, үҙе теләп, фронтҡа китә. Бик күп һуғыштарҙа ҡатнаша. Ул хеҙмәт иткән зенит батареяһы дошмандың байтаҡ ҡына самолеттарын бәреп төшөрә.

Һуғышты дошман ерендә — Одерҙың аръяғында тамамлай, «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордены һәм бер нисә миҙал кавалеры булыуға ирешә. Ҡырҡ етенсе йылда армиянан ҡайтҡас, Мәскәү финанс-экономик институтын ситтән тороп тамамлай.

Мин 1969 йылдың июлендә Желедко менән Петр Харитонович Поздняkты юллап таптым. Ул мәшһүр «Бессарабка» баҙары янында, Бассейн урамының бишенсе һанлы йортонда, йәшәй ине. Заманында капитан Фәтихов та был урамдан йыш йөрөгән.

Профессияһына хас (ул Финанс министерствоһында бухгалтер-ревизор булып эшләй ине) иҫ киткес ипле холоҡ, ҡыҙҙарҙыҡы һымаҡ матур, асыҡ йөҙ, йылы, яғымлы һоро күҙҙәр. Ҡарашында, ҡыланышында, һүҙҙәрендә иплелек. Эсемдән уйлап ҡуям: кем бөгөнгө Петр Поздякка ҡарап, был кеше ҡасандыр иҫ киткес сая, тәүәккәл баш киҫәр үҫмер батыр подпольщик булған тип уйлар инде. Юҡ, май көршәге һәр ваҡыт тышынан билдәле булмай ул. Яҡшы эшләнгән көршәккә һөт һалаһыңмы, иниомы — беленмәй, белеп булмай; Петр Харитонович та ана шундай тиҙ генә белеп булмаған серле шәхес ине.

Сәй һәм мәй эсеп ултырғанда, Петр Харитонович бала саҡта сираттағы «баталиянан» һуң ата-әсәһенең һүҙ көрәштереүҙәрен, хатта ҡайһы саҡта әләгешеп китеүҙәрен хәтерләй, әсәһенә һүҙ тейҙерергә теләмәһә лә, атаһын маҡтап ҡуя: «Пәйғәмбәр булған бит беҙҙең атай, фашистар, Гитлер менән алышыуҙы алдан күрә белгән».

Ул беҙҙе оҙата сыға. Мәшһүр «Бессарабка» баҙары янынан үтәбеҙ. Емеш-йәшелсә, ашаған торған үләндәрҙең еҫтәре килеп бәрелеп, танауҙы ҡытыҡлай.

Ышанам, Фәтихов иҫән булһа, ул инде күптән генерал йондоҙҙары йөрөтөр ине һәм, Киевҡа килеп сыҡһа, һис шикһеҙ «Бессарабкаға» ла һуғылмай ҡалмаҫ ине. Баҙарҙың йөҙ төрлө еҫтәр менән тәнәтелгән һауаһын еҫкәп, өҫтәлдәргә сүмәлә-сүмәлә итеп өйөлгән алма, слива, боростарына һоҡланып, ҡорос балкаларға ҡунған күгәрсендәрҙең гөрөлдәүен тыңлап, йәшлек йылдарын хәтерләп, һағышлы йылмайып ҡарап торор ине...

Мин ҡапыл Железкоға: «Әйҙә баҙарға инеп сығабыҙ», — тинем. Ул: «Был Киевтағы иң ҡиммәт баҙар. Улай иткәнсе, «Колхоз баҙарына барайыҡ», — тип тәҡдим итте. «Юҡ, — тинем мин, — был баҙарға инәйек. Капитан Фәтихов «Бессарабканы» айырыуса яратҡан».

— Улайһа, әйҙә...

Фәтиховты йоҡо алмай. Ҡулдарын баш аҫтына ҡуйып салҡан ята бирә. Бына Киевҡа килеүенә айға яҡын ваҡыт үтте инде, ә дошманға ҡаршы бер нәмә эшләй алғаны юҡ. Подполье группаһын да һаман туплай алмай, ә яңғыҙың, ҡулыңда ҡоралың булһа ла, әллә ни ҡырып булмай... Ул әле үҙенең «активислыҡҡа яҙылыуының» да нисек тамамланасағын белеп еткермәне. Ҡиммәтле агрегатты эштән сығарып, немецтарҙың планын өҙөргә кәрәк. Ә бына ул агрегатты нисек юҡҡа сығарырға?.. Дөрөҫ, был бүрегә энә менән ҡаҙау шикелле генә буласаҡ. Хәҙер, бәлки, иң мөһиме күңеле төшөнкө халыҡҡа дөрөҫлөктө еткереп, уның рухын күтәреүҙер? Быthe өсөн ашығыс рәүештә радиоприемник һәм яҙыу машинаһы табырға кәрәк... Железко вәғәҙә итте итеүен, әммә вәғәҙә итеү — бер, уны тормошҡа ашырыу — икенсе... Мөмкин саҡлы ерле халыҡ менән нығыраҡ контактҡа кереү мөһим. Мөмкин саҡлы тиҙерәк... «Йәшәһен Совет власы!» — тип ҡысҡырыу ғына аҙ, уны йәшәтер өсөн йәнеңде-тәнеңде аямаҫҡа кәрәк... Фәтихов был һүҙҙәрҙе алдағы көндәрҙә лә йыш ҡына ҡабатлаясаҡ һәм, һуңғы сәғәте килеп еткәс, Тыуған илем алдында минең намыҫым саф, мин уның өсөн йәнемде-тәнемде аяманым, тип әйтә аласаҡ...

Ә әле... Йоҡо алмай... Уның күҙ алдына Сталин майҙанындағы ҡот осҡос ҙур киндер карта килеп баҫа. Мәскәүгә һуҙылған ҡыҙыл уҡтар уның йөрәгенә ҡаҙалған һымаҡ тойола. Ҡолаҡҡа бомбалар шартлағаны, снарядтар ярылғаны, танк гусеницаларының сыңғырауы ишетелә һәм ул

һикереп тороп ултырғанын үҙе лә һиҙмәй ҡала. «Юҡ!.. Ул тәмәке төрә, форточка янына барып көйрәтә. Күҙ алдына башҡа күренеш пәйҙа була — Сталин һүнгән төрөпкәһен һура-һура ары-бире йөрөй ҙә уның күҙ алдына килеп баҫа, бик тыныс, ышаныслы тауыш менән: «Иптәш капитан, тыныс бул... Бар, ятып йоҡла... Мин Мәскәүҙе Гитлерға бер ҡасан да бирәсәк түгелмен...» — тип уны йыуата. Фәтихов тыныслана төшә. Үрелеп тышҡа ҡарай. Күк аяҙыған, һирәк-мирәк йондоҙҙар яна...

«Беҙҙең йондоҙ ҙа ҡабынасаҡ...» — ти ул, төпсөгөн форточканан ташлап.

## ЕГЕРМЕ ИКЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Тәре аҫтында осрашыу

Федоров-Фәтихов: «Тореодор, тореодор, помнишь, что тебя ждет любовь», — тип ауыҙ эсенән генә йырлап, бил яҙмай эшләгән саҡта (ни эшләйһең бит — актив булғас, егәрле эшләргә кәрәк инде!») кемдер иплэп кенә уның еңенән тартты. Федоров-Фәтихов башын ҡалҡытты — Желедко баҫып тора ине. Ғәҙәттән тыш ваҡытта килгәс, ниндәй ҙә булһа ашығыс хәбәр барҙыр. Ниндәй хәбәр көтә уны: яҡшымы, яманмы?

— Тартырға бармы? — тине Желедко иғтибарһыҙ ғына.

Федоров-Фәтихов һуҡрана-һуҡрана комбинезон кеҫәһенә керҙе.

— Бында бөтә кешегә лә тәмәке тарата башлаһаң, башыңдағы сәсең дә етмәҫ, хәҙер тыныс ваҡыт түгел, һуғыш...

— Ярар, ярар, һуҡранма (ул юрамал, үҙ кеше итеп, «һин» тип өндәште), салбар алыштырғанда янсыҡты һалырға онотҡанмын. Иртәгә әжерен икеләтә ҡайтарырмын.

— Иртәгә, иртәгә... Иртәгә, ихтимал, минең ҡатыным ла булыр. Миңә бөгөнгөһө хәжәт...

Желедко тел осо менән сылатып, газета ситенән ҡыйпып алынған ҡағыҙҙы йәбештергәндә бышылданы: «Бәҙрәфкә килегеҙ».

Улар «осраҡлы рәүештә» унда бергә тура килделәр.

— Владимир-креститель һәйкәленең ҡайҙа икәнлеген беләһегеҙме? — тине Желедко ишетелер-ишетелмәҫлек итеп. Фәтихов «беләм» тигәнде аңлатып баш ҡаҡты. — Киске һигеҙгә килә алаһығыҙмы? — Фәтихов баш ҡаҡты. — Һәйкәлгә стәрәк ике тапҡыр тамаҡ ҡырығыҙ. Мин дә шулай яуап бирермен. — Фәтихов баш ҡаҡты.

Федоренко салбар төймәләрен ҡаптыра-ҡаптыра бәҙрәфтән сығып китте. Уның ут сәсеп торған күҙҙәренә ҡарағанда хәбәр насар булырға тейеш түгел... Ә ниндәй хәбәр? Радиоприемник тапҡанмы? Яҙыу машинаһымы?.. Бәлки... Немецтар Мәскәү тирәһенән ҡыуып, беҙҙекеләр һөжүмгә күскәндер... Их, шул көндәрҙе күрергә яҙғанмы икән?.. Фәтихов үҙ-үҙен шелтәләп ҡуйҙы: ә ниңә яҙмаған булһын? Мотлаҡ күрәбеҙ уны...

Был көндө Ергә әллә ни булды — Ҡояш тирәләй шундай әкрен әйләнде, йырҙағы шикелле, сәғәте — ай, минуты көн һымаҡ тойолдо.

Ниһайәт, эшселәр ҡулдарын сепрәккә, сүбәккә һөртә-һөртә ишеккә йүнәлделәр, тәмәке төрҙөләр. Кемдер: «Федоров, ә һин цехта ҡунырға булдыңмы ни?» — тип төрттөрҙө. «Хәҙер ҡайтам. Бынауы реостат кәтүгенең эшен бөтөрәм дә...» — тине ул аҡланғандай.

Теге көндө митингыла сығыш яһағандан һуң күптәр, оккупанттарға мөхәббәттәрен йәки нәфрәттәрен белдермәй, ғәмһеҙ һәм һалҡын йөрөүселәр ҙә мөмкин саҡлы уның менән аралашмаҫҡа тырыштылар. Күҙ ситтәре менән ҡаранылар, төрттөрөп кенә һөйләштеләр, ә инде цех начальнигы Мануевич, арҡаһынан ҡағып: «Һин минең маладис кешем, Федоренко!» — тип маҡтап киткәндә күрһәләр, Фәтиховтан йәшермәй төкөрөндөләр. Был уға ҡыйын да, рәхәт тә ине. Тимәк, дошманға караштарын асыҡтан-асыҡ һиҙҙермәһәләр ҙә, уларҙың йөрәктәрендә лә нәфрәт уты яна. Янһын, янһын, ул ут күкрәктән тышҡа сығып, дошманды ялмап ала алмаһа ла, нәфрәт нәфрәт инде, вайымһыҙлыҡ та, ҡурҡаҡлыҡ та түгел.

Эш Фәтихов күрһәткән реостат кәтүгендә түгел ине, әлбиттә. Ул, заводтан сыҡҡас, Владимир һәйкәле янына нисә минутта барып етәсәген сама менән иҫәпләне, шуға күрә юлға етерлек кенә ваҡыт ҡалғас, эштән китергә тейеш. Дөрөҫ, уның тәүлек әйләнәһенә йөрөрлөк аусвайсы бар, әммә патруль күҙенә күренгеһе, кәрәкмәгәндә лә документын күрһәтеп, тегеләрҙең хәтерендә ҡалғыһы килмәй. Ашыҡмай ғына барғанда, күп тигәндә, егерме-егерме биш минутлыҡ юл. Ә хәҙер... ул беләгенә ҡарай (рәхмәт, теге ваҡытта уны «ерләп» китеүселәр сәғәтенә ҡағылмағандар: ашыҡҡандармы, абайламағандармы...). Ә, ваҡыт. Цехта бер кеше булмаһа ла, ул, инструменттарҙы һөртөп, тәртип менән урынлаштырҙы. Тирә-яғына күҙ һалды. Ҡысҡыра төшөп: «Булды буғай», — тине лә ишеккә табан китте.

Ете йыл Киевта йәшәп тә, Фәтиховтың Подолдың был тирәһендә йөрөгәне юҡ ине. Бында урамдар тар, кәкре-бөкрө, асфальт урынына ҡуш йоҙроҡ саҡлы суйыр таш тү-

шәлгән, йорттар иҫке, ҙур түгел, ике, күп тигәндә, өс ҡатлы...

Ҡараңғы төшөп килә. Урамдар буш. Йәнһеҙ. Оҙаҡламай комендант сәғәте башланасаҡ — халыҡ, бәләнән баш-аяҡ тип, өйҙәренә кереп боҫҡан. Фәтихов, бер нәмә булмағандай, һыҙғыра-һыҙғыра бара бирә. Ҡыл иләктән үткәргән кеүек, ваҡ ҡына ямғыр һибәләй... Башҡа мең төрлө уй килә, — Мәскәү янындағы һуғыш... Ғаилә... Алыҫ Өрьяҙы... Әммә бөтә уйҙарҙы ла күмеп, киләсәк осрашыу уны борсой.

Бейек постаментҡа баҫҡан, ҙур тәре тотҡан бронза кенәз янына барып еткәндә, инде ҡараңғы төшкәйне. Фәтихов, әленән-әле туҡтап, аяҡ тауыштарын йәки һаҡ ҡына һөйләшеүҙе ишетергә тырышты. Ләкин үҙ йөрәгенең тибеүенән башҡа (беренсенән, ул тауға күтәрелде, икенсенән, ни генә тимә, ул тәү тапҡыр бындай осрашыуға бара — тыныс булырға тырышһаң да, йөрәк ярһыбыраҡ тибә), бер нәмә лә ишетмәне. Инде һәйкәл янына барып еттем тигәс, ул рәттән ике тапҡыр тамаҡ ҡырҙы. Шунда уҡ яуап сигналы ишетелде. Ул арала Железко пәйҙа булды .Ҡулдарын ҡыҫыштылар.

— Ниңә саҡырҙың?

— Шатлыҡ һөйләргә. Радиоприемник таптыҡ. «Пионер».

— Эй-й... Был, ысынлап та, шатлыҡ!

«Пионерҙы» Григорий Васильевич Светлин көпә-көндөҙ ҙур, тәрән балалар арбаһына һалып, өҫтөнә бала кейемдәре ҡуйып, уйынсыҡтар-сыңғырлауыҡтар аҫып, Железкоға килтерә. Ҡаршыһына немецтар осраһа, ситкәрәк китә, береһендә саҡ-саҡ колясканы ауҙармай, уйынсыҡтар төрлө тауыш сығарып шылтырап ала. Һалдаттар иһаһайлап көлә.

— Был ҙур шатлыҡ... — тине Фәтихов, фекерен дауам итеп, — әммә «Пионерға» электр энергияһы кәрәк бит*.

— Беҙҙең йортҡа ингән электр линияһын өҙгәндәр. Төнөн бағанаға менеп, Совинформбюроны тыңлағансы тоташтырып торорға тура килер.

Ул арала һәйкәл янына барып еттеләр. Рәттән ике тапҡыр тамаҡ ҡырыу. Яуап. Ике шәүлә пәйҙа була. Береһе — оҙон, киң яурынлы ир кеше, икенсеһе — ыҡсым кәүҙәле ҡатын-ҡыҙ ине.

— Таныш булығыҙ, — тине Железко.

---

* Ул саҡта электр немецтар эшләгән, йәшәгән һәм уларга хеҙмәт иткән хыянатсылар торған йорттарҙа ғына яна ине. Ҡаланың башҡа халҡына кәрәсин лампаһы, шәм, каганец, сыра утының яҡтыһы менән ҡәнәғәтләнергә тура килде.

Озон көүҙәле ир кеше алғараҡ сыҡты.
— Кушнир. Федор Михайлович. — Оҙон, көслө бармаҡтар Фәтиховтың ҡулын ҡыҫты.
— Федоров.
— Буяненко. Раиса Васильевна. Просто Рая тиһәң дә була. — Нескә, нәфис бармаҡтар Фәтиховтың усында юғалып ҡалды.
— Федоров Борис. Просто Борис тиһәң дә була, — тине Фәтихов, Рая «тулҡынына» күсеп.
— Әйҙәгеҙ, постаментҡа ышыҡланайыҡ, — тине Кушнир. — Унан, кенәздең ҡулында — тәре бит, изге эшкә беҙгә фатиха бирһен.
Кушнирҙың тауышында аҙ ғына ла хәүеф, борсолоу юҡ ине, әйтерһең, улар ҡот осҡос ауыр көндәрҙә дошмандан ҡасып-боҫоп түгел, ә һыу буйында, пляжда, осрашҡандар.
— Эште нимәнән башлайбыҙ? — тине ул, постаментҡа барып ышыҡланғас. — Төрөпкәнәнме? Ә беҙҙең йылғасылар, моряктар шикелле, төрөпкә тартырға ярата...
Тора-бара күк йөҙө асыла төштө, йондоҙҙар «беҙ бында!» тигәндәй күҙ ҡыҫа башланылар, төн яҡтырғандай булды.
Кушнир төрөпкәһенә тәмәке тултырып көйрәткәнсе, Железко, улар хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп, кем булыуҙарын аңлатты.
— Рәхим итегеҙ! — тип Кушнир Фәтиховҡа төрөпкәһен һуҙҙы.
— Рәхмәт.
Әлеге тыныс һәм ышаныслы тауыш яй ғына аҡты.
— Василь миңә һеҙҙең хаҡта байтаҡ һөйләне. Дөрөҫөн әйткәндә, ул һеҙгә ғашиҡ, әммә... — Кушнир психологик тынлыш яһап алды. — Әммә һеҙҙең ғәҙәти механик булыуығыҙға ышанып етмәй. Беҙҙе алда ҙур эштәр һәм, кем белә, ҡаты экзамендар ҙа көтәләр. Шуға күрә... — йәнә тынлыш. — Шуға күрә, бәлки, үҙегеҙ хаҡында дөрөҫөн әйтерһегеҙ.
— Хәҙер әйтергә мөмкин. Званием — капитан. Утыҙ дүртенсе йылда Ленинградта хәрби инженерҙар мәктәбен тамамланым. Һуғыш башланғанға тиклем Киевта хеҙмәт иттем. (Һуғыш алдынан Генштабта махсус иҫәптә тороуы хаҡында ул «урап» үтеп китте.) Актив разведка бүлеге начальнигының ярҙамсыһы инем. Киевты яҡлап һуғыша-һуғыша сигенгәндә, Көньяҡ-көнбайыш штабы идаралығы икегә бүленде. Киевҡа утыҙ-ҡырҡ километр ҡалғас, контужен булдым. Иптәштәрем мине, үле һанап, «ерләп» киттеләр, әммә мин, дошманға үс итеп, үлмәҫкә булдым һәм,

ҡамауҙан иҫән-имен сығыуыма ышанмай, Киевҡа әйләнеп ҡайттым.

Железко түҙмәне.

— Әйттем бит, Федор Михайлович, әйттем бит, ул рядовой механик ҡына түгел, тип...

— Бик яҡшы, — тине Кушнир, көрәк кеүек һаҡалын һыйпап. — Мин Киевта тыуып үҫкәнмен. Подолдың һәр тыҡрығын беләм, ә һеҙ хәрби белгес. Шулай булғас, беҙҙең эштәр ходҡа китәсәк. Подпольела бер кеше лә — кеше, ә беҙ хәҙер нисәү, Василь?

— Байтаҡ, Федор Михайлович. Әле дүртәүбеҙ.

— Петя Поздняк... уның бер туған апайҙары Юля менән Даша, — тине Фәтихов, эштең ҡайһы яҡҡа боролош яһағанына һөйөнөп. — Туранан-тура подпольела ҡатнашмаһалар ҙа, связной булырға әҙерҙәр.

— Хәҙер беҙ көс! — тине Железко, йоҙроҡтарын төйнәп.

— Әйҙәгеҙ уйлашайыҡ, иптәштәр. — Төрөпкә тартылып бөткәс, Кушнир уны ҡағып, кеҫәһенә һалды. — Хәҙер шул көстө нисек аҡыллы итеп файҙаланырға? Беҙҙең программа-минимум, программа-максимум булырға тейеш.

— Ә минимумы ниңә уның? — тине ярһыу йөрәк Железко. — Сразы максимумдан башлайбыҙ. Акция! Диверсия! Хыянатсыларҙы — ҡых! — Ул һәр һүҙ һайын йоҙроғо менән һауаны ярҙы.

— Ашыҡма, ашыҡма, — тине Кушнир, уның йоҙроғон тотоп. — Эшкә керешкәнсе, беҙ үҙебеҙгә ҡушаматтар табайыҡ һәм беҙҙең ысын исем, фамилиябыҙҙы беҙҙе күреп белеүселәрҙән башҡа бер кем дә белергә тейеш түгел. Мин... мәҫәлән... «Борода», һаҡал. Ни өсөн икәнлеген үҙегеҙ күреп тораһығыҙ. Бынан һуң икәүҙән-икәү генә булғанда ла ҡушамат менән өндәшергә. Юҡһа буталыуыбыҙ бар.

— Мин — «Тромбон», — тине Железко. Ул байтаҡ тынлы инструменттарҙа уйнаны, әммә айырыуса тромбонды ярата ине.

— Ә мин, — тине Фәтихов, — «Ворона» — ҡарға.

— Ҡарға? — тине баянан бирле бер һүҙ ҡатыштырмай тыңлап торған Рая. — Ниңә шундай йәмһеҙ исем?

— Ә минең бәләкәй саҡта бик аҡыллы, ни әйтһәң, шуны аңлай һәм тыңлай торған ала ҡарғам бар ине, — тине Фәтихов, һағышлы йылмайып, бала сағын, зирәк ҡарға балаһын иҫенә төшөрөп.

— Ә мине «Бабушка» — әбей тип йөрөтөгөҙ, — тине Рая.

Өс ауыҙҙан бер юлы «әбей?» тигән ғәжәпләнеү һүҙе ишетелде.

— Әбей булырға һинең әсәйең иллегә етмәгән бит әле, ә үҙең... комсомол йәшен дә үтмәгәнһең, — тине Желедко Раяның шундай ҡушамат алырға теләүенә аптырап.

— Дөрөҫ, Рая, аҡыллы, — тип уны хупланы Фәтихов. — Немецтар һиҙенә башлап, эҙгә төшһәләр, оло йәштәге ҡатындарҙы эҙләрҙәр, ә һеҙ яңы ҡыҙарып бешкән алма һымаҡ йәш, сибәр ҡатын.

Рая комплиментҡа бер аҙ ирәйепме әллә был һүҙҙәрҙең ихлас әйтелеүенә шикләнепме: «Йәш, сибәр...» — тип ҡуйҙы.

Желедко Фәтиховты яҡланы.

— О инцә, дөрөҫ түгелме ни? Подолда һеҙ минең Оляпан ҡала иң һылыу ҡатын инегеҙ...

— Ярай, һүҙҙе дауам итәбеҙ, — тине Кушнир, эшлекле тауыш менән эсендәгеһен тышына сығарып. — Кем уйлаған... Кем уйлаған шулай булыр тип... Киевтан ҡапыл китеп барыу кәрттәрҙе бутаны ла ҡуйҙы бит... Хәҙер беҙгә эште әлифбанан — алфавиттың тәүге хәрефтәренән башларға тура киләсәк. Иптәш Федоров, һеҙ программа-минимумға нимәләр тәҡдим итер инегеҙ?

— Мин теләгемде Василгә әйткән инем инде. Хәҙергә хәтәр, шомло көндәрҙә, халыҡҡа дөрөҫлөктө еткереү — иң мөһим сараларҙың береһе. Әгәр Василь «пионерға» электричество тоташтыра алһа, иртәгәнән үк Совинформбюро хәбәрҙәрен тыңлай башлар инек. Ә ул хәбәрҙәрҙе халыҡҡа еткерер өсөн стеклограф, стеклограф булмағанда, яҙыу машинаһы кәрәк.

— Эйе... эйе, — тине Кушнир, төрөпкәһен кеҫәһенән алып һәм һуҡранып, — шайтан, шайтан, былай килеп сығыр тип кем уйлаған...

Ә һуҡранырға сәбәп бар ине. Директор урынына ҡалғас, ул парткомдағы яҙыу машинкаһын директор кабинетына алып керҙе (директор секретарын да, машинканы ла үҙе менән алып киткәйне), һуңғы көнгә саҡлы бөтә приказдарҙы, күрһәтмәләрҙе ул тәүҙә бер, унан ике бармағы менән үҙе яҙҙы. Машинканы, копировка ҡағыҙын ҡайҙа йәшерергә лә уйлап ҡуйғайны, ә бына ҡапыл Киевтан китеп барыу эште боҙҙо ла ҡуйҙы...

— Яҡшы, дауам итегеҙ, иптәш Федоров, — тине ул төрөпкәһен плащ итәге аҫтында йәшереп көйрәтеп.

Ул арала Рая тауыш бирҙе.

— Беләһегеҙме, судоверфь директоры Беденконың секретарының ике машинкаһы бар. Дөрөҫ, береһе ватыҡ шикелле...

Рая әйтәһен әйтеп бөтөрмәне, Желедко эләктереп тә алды.

— Ә ниңә, уның береһен урлайбыҙ ҙа ҡуябыҙ. — Василь быны шундай еңел әйтте, әйтерһең, төнөн күршеләргә шалҡан-ҡыяр урларға инә. Кушнир уның характерын яҡшы белә, шуға күрә кәйефен төшөрөргә теләмәй генә төрттөрөп һораны.

— Машинканы урлау бәрәңге ашау менән берме ни? Желедко иронияны аңланы.

— Уныһын әйтә алмайым... әммә... теләгәндә...

— Василь дуҫҡай, тәүҙә уйларға, унан әйтергә кәрәк. Әгәр тотолһаң, немецтар башыңдан һыйпамаясаҡтар бит.

Ысынлап та. Тәүҙә улар саҡ-саҡ ҡапманылар. Рая күҙәтте: Беденконың секретары төшкө ашҡа киткәндә һәр ваҡыт туалетҡа барып йыуынып килә. Был ваҡытта ул кабинетын бикләп тормай. Ошо моменттан файҙаланып, машинканы урларға булалар. Рая коридорҙа секретарҙың сыҡҡанын һағалап тора. Светлин, кабинетҡа инеп, ҡара буҫтау ҡапланған машинканы ала. Уның урынына өҫтәл янында торған фанер урнаны ҡуя һәм буҫтау менән ҡаплай. Плащ итәге аҫтына йәшереп алып сығып китә. Янған карап корпусы артында йәшенеп, Желедко уны кәмәлә көтөп тора. Бөтәһе лә ентекләп уйланылған...

Уйланыуын уйланылған, ләкин йыш ҡына уйлағанса барып сыҡмай шул. Светлин шым ғына кабинеттан сығып, беренсе ҡатҡа төшә башлағас, аҫтан менеүсе кешенең аяҡ тауыштарын ишетә. Ни эшләргә? Хәҙер секундтар хәл итәсәк. Светлин мөйөштә торған һыулы янғын мискәһенә машинканы батыра. (Светлин уны аҙаҡ ала....)

Төшкө аштан һуң шау-шыу күтәрелә. Секретарь ҡыҙҙы ҡулға алалар. Беденко уның ғәйепһеҙлеген иҫбатлағас (секретарь уның ҡәрендәше була), бер-ике аҙнанан тегене сығаралар, завхоз Акушконы гестапоға алып китәләр һәм ул шунан башҡа әйләнеп ҡайтмай.

«Кременчуг» канонер кәмәһендә дошман менән күҙгә-күҙ осрашҡанда ла ҡаушап ҡалмаған, ҡойолоп төшмәгән Желедконың тауышында ирония ишетелә.

— Бүренән ҡурҡҡан...

Кушнир уның арҡаһына ҡулын һала.

— Василь, дуҫҡайым, туғанҡайым, эш бүренән ҡурҡыуҙа түгел, ә...

Желедко уны бүлдерә.

— Ә нимәлә?

— Беҙгә һәр бер совет кешеһе генә түгел, һәр тамсы ҡан да ҡәҙерле. Дошман ана ҡайҙа барып етте. Ә уны кире

ҡыуыуы еңел булыр тип уйлайһыңмы? Миллиондар ятып ҡалһаҡ әле...

Артабан улар программа-максимум хаҡында һөйләштеләр.

Быға керҙе:

а) шартлатҡыс табыу;

б) саботаж, диверсия...

Өсөнсө пунктты Фәтихов өҫтәне.

— Киев гарнизонында немецтарҙан башҡа мадьярҙар, словактар ҙа бар. Нисек тә улар менән контактҡа кәрәгә. Уларҙың Германияға иң тоғро тигәндәре лә фюрер өсөн ҡан ҡойорға теләмәйҙер, тип уйлайым. Бәлки, улар ярҙамында кәрәкле документтар, информациялар алып булыр. Ихтимал, ҡорал да, шартлатҡыс та...

— Бик аҡыллы тәҡдим, — тине Кушнир, — интернациональ дуҫлыҡ — бөйөк көс. Словактарҙы аңлап булыр, ә бына мадьярҙар менән нисек аңлашырға?..

— Мадьярҙарҙың күбеһе, бигерәк тә офицерҙары, немец телен яҡшы белә. Венгрия — бик оҙаҡ йылдар Австрия ҡул аҫтында йәшәгән дәүләт.

Фәтихов Кушнирҙың һәр һүҙҙе бизмәнгә һалып, үлсәп әйтергә яратҡанын аңланы. Был подпольщик өсөн иң мөһим һыҙаттарҙың береһе ине.

— Былай булғас, — тине ул, — һеҙҙең менән ат урлап буласаҡ, Федор Михайлович.

— Ат урлап? — тине Кушнир, татар-башҡорт мәҡәленең «елеген» аңлап етмәй.

Фәтихов төшөндөрөп бирҙе.

— Борон заманда беҙҙең халыҡ ҡараҡтары араһында ат урлау «юғары» класлы бурлыҡ һаналған һәм иң ышанyслы кешегә «уның менән ат урлап була» тигән иң юғары баһа бирелгән.

— Рәхмәт. Шул уҡ комплиментты һеҙгә ҡарата ла әйтергә мөмкиндер, тип уйлайым, иптәш Федоров. — Кушнир өҫкә ҡарап алды. — Шулаймы, кенәз Володимир? Их, күңел бушағансы бер йырлап ебәрергә! Киевҡа әйләнеп ҡайтҡандан бирле тәү тапҡыр күңелем күтәрелеп китте.

— Йырларбыҙ әле, Федор Михайлович, йырларбыҙ, — Фәтихов ҡулын уның ҡулбашына ҡуйҙы. — Һеҙ — украинса, ә мин... — татарса, башҡортса. Беҙҙең халыҡ йырҙары бик оҙон, бик моңло ул.

— Яратам халыҡ йырҙарын. Бигерәк тә боронғо йырҙарҙы. Ярай, лирикаға бирелеп китеп, йомшап ҡуймайыҡ. Ә беҙгә йомшаҡ түгел, аяуһыҙ булырға кәрәк, — тине Кушнир, ҡулын Фәтиховтың арҡаһына һалып — был инде ирҙәр союзы ине. — Мин Василь менән бер ишек алдында,

Рая менән бер йортта йәшәйем. Бөтә хәбәрҙәрҙе Василь... дөрөҫөрәге Тромбон, аша хәбәр итегеҙ һәм ул әйткән һүҙҙәр минең исемдән әйтелер. Ә, Тромбон, мин һине ҡәтғи киҫәтәм, беҙҙең инструкциянан тыш бер нәмә эшләмәҫкә! Һин саманы онотоп ташлайһың... — Фәтиховҡа ул ҡулын һуҙҙы. — Был беҙҙең подполье тыуған көн булһын.

— Амин!

Был дүртәү: йәше һәм партия стажы яғынан, эше һәм етәкселек итеү тәжрибәһе менән арала өлкәнерәге, ҡапҡа бағанаһын хәтерләтеүҙе таҙа, оҙон кәүҙәле, малайҙарға хас «шалапай» ауыҙлы, аҡыллы һоро күҙле Кушнир Федор Михайлович; ғүмерен мәңге тынғыһыҙ һәм ауыр эшкә — армия хеҙмәтенә арнаған капитан Фәтихов Нур; һәр ваҡыт дәрт һибеп тороусы һәм шуның арҡаһында кешеләрҙе лә дәртләндереүсе, рухландырыусы ҙур ҡара күҙле, шаян, үткер телле, сая һәм сибәр Рая Буяненко; шартлатҡыс матдәне күҙ алдына килтереүсе Василий Желедко туғыҙ ай буйы ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер күпер өҫтөндә йөрөрҙәр һәм шуларҙың өсөһө ул күперҙән ҡолап төшөп, ғазапланып үлтерелерҙәр, әммә улар һуңғы һулыштарына саҡлы совет кешеһе һәм коммунист булып ҡалырҙар. Ә әле улар үҙҙәренең яҙмыштары хаҡында уйламайҙар ҙа. Уларҙы бер генә яҙмыш — ил яҙмышы ҡыҙыҡһындыра.

Ихтимал, был романды уҡып сыҡҡандан һуң ҡайһы берәүҙәр: «Риторика, пафос менән мауыға, романтикаға бирелә. Ә һуғыш — романтика түгел, аяуһыҙ күренеш...» — тиерҙәр. Әммә пафостан, романтиканан ҡурҡырға ла, оялырға ла ярамай. Пафосһыҙ, романтикаһыҙ кеше йәшәй алмай. Хатта иң «күңелһеҙ кешеләр» ҙә. Хатта иң ауыр минуттарҙа ла. Сөнки йәшәү — өҙлөкһөҙ көрәш, ә көрәш бөтә драмалары, фажиғәләре менән булһа ла романтика. Пафос...

Һәр көн иртән Ҡояш сығыу, төндәрен йондоҙҙар ҡалҡыу — романтика, пафос. Яҙын ярҙарынан ташып аҡҡан даръялар емереүҙәр, мәшәҡәт-аҙаптар килтерһә лә, пафос, романтика, хатта һағышлы көҙҙөң дә үҙ пафосы, үҙ романтикаһы бар.

Үлем дә — ул пафос, тик ҡасан, ҡайҙа һәм ни өсөн үлеү...

## ЕГЕРМЕ ӨСӨНСӨ НОВЕЛЛА

### Ноябрь, 1941 йыл

Кенәз Владимир һәйкәле янында тарихи осрашыуға (эйе, эйе, был Подол подпольщиктары өсөн тарихи ине)

нке ос көн үткәндән һуң, күҙеңә төртһәң күренмәҫлек ямғырлы ҡараңғы төн уртаһында Василь ишек алдындағы электр бағанаһына күтәрелде, үҙ йорттарына инә торған сымды тоташтырҙы. Василь еүеш бағананан шыуып төштө лә йүгерә-атлап өйөнә кереп китте. Икенсе ҡат. Эстәге кескәй генә йоҡо бүлмәһе. Ҡарауат аҫтына ҡуйылған приемник... Йәшел күҙе тоҡанырмы, юҡмы? Тоҡанырмы, юҡмы?.. Ул антеннаны тиҙ генә түшәмгә ҡағылған ҡаҙауға һуҙып, элəктереп ҡуйҙы Стеналағы розеткаға приемниктың штепселен тыҡты, панелдәге түңәрәк рычагтарҙың береһен уңға борҙо һәм шул секундта уҡ приемниктың үҙенсәлекле геүләүе, шытырлауы ишетелде, эскә йылы инеп китте, ә хром балдаҡ менән әйләндереп алынған түңәрәк күҙ йәшелләнеп янырмы, юҡмы? Бына бер ваҡыт күҙ аҡһыл йәшкелт төҫкә керә башланы, йәшеллек ҡуйырҙы һәм оҙаҡламай йәм-йәшелгә әйләнде һәм шунда уҡ йөрәкте ҡыҫып алырлыҡ таныш музыка ишетелде. Был — Чайковскийҙың Алтынсы симфонияһы — приемник бында килтергәндә үк Мәскәү диапазонына ҡуйылғайны. Железко рычагты һулға борҙо, приемник һүнде. Ул өҫтөнә лә кейеп тормай, күкрәктән урғылып торған шатлығы менән уртаҡлашырға күрше йортҡа — Кушнир янына сығып йүгерҙе. Уның цоколь ҡатындағы бүлмәһенең тәҙрәһенә шартлы сиртте: ике тапҡыр оҙон итеп, бер тапҡыр ҡыҫҡа итеп: тире, тире, точка. Сигнал шунда уҡ ишетелде, карауат шығырланы. Ун икенән һуң тышҡы ишектәрҙе лә бикләй торғайнылар, шуға күрә Василь Кушнирҙың сыҡҡанын көттө. Һаҡ ҡына: «Кем?» — тип һоранылар. «Был мин, Василь», — тине ул. Ишектең келәһе күтәрелде. Асылды. «Ни булды?» — «Әйҙәгеҙ. «Пионерҙың» йәшел күҙе тоҡанды». — «Ә-ә... Хәҙер».

Улар инеп приемникты асҡанда ла әле Чайковскийҙың даһи музыкаһы ағыла ине.

Железко күрше бүлмәгә инеп, шырпы һыҙып, стеналағы сәғәткә күҙ һалды.

— Оҙаҡламай Совинформбюро хәбәре буласаҡ.

Улар аяҡтарын һуҙып иҙәнгә ултырып, таныш дикторҙың тауышын көттөләр. Айҙан артыҡ бер төрлө радио ишетмәгәндән һуң Мәскәүҙең үҙен тыңла әле? Бының ниндәй тулҡынландырғыс икәнлеген аңлау өсөн үҙеңә шул хәлгә төшөргә кәрәк!..

Диктор шатланырлыҡ яңылыҡ әйтмәне — Гитлер, ҙур юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, һаман Мәскәүгә ынтыла ине...

— Ҡасан туҡтаталар инде быларҙы? — тине тын алырға ҡурҡып тыңлап ултырған Железко

— Барыбер бер туҡтатырҙар... — тине Кушнир, шомло һорауға яуап таба алмай. — Туҡтатырҙар... тик хәҙергеһе

ауыр... Берлинды тот әле, унда ни лығырлайҙар икән?.. Хәйер, беҙ барыбер немецса аңламайбыҙ...

— Раяны саҡырайыммы? — тине Железко, урынынан тороп.

— Һуң бит инде... Хәйер, бар. Беҙгә бит радионы барыбер иртәрәк тыңлап булмаясаҡ. Тик, ҡара, береһен дә уятма.

Бер нисә минуттан өҫтөнә халат кейгән, сәсен бармаҡтары менән генә тараған Рая менән Василь инде.

— Йә, Мәскәү янында эштәр нисек? — булды уның беренсе һорауы.

— Ҡаты һуғыштар, Раечка, үтә ҡаты һуғыштар бара.

— Немецты туҡтатмағандармы?

— Туҡтатмағандар, әммә туҡтатасаҡтар, Раечка. Йә әле, Василь, Берлинды тот. Дошман ни һөйләй икән?..

Берлин эфирға үҙенең барабан ҡағыуҙары, тынлы оркестрҙың марштары, дикторҙың тамаҡ йыртыуҙары менән эфирҙы тултырғайны.

— Улар сводканы ҡасан бирәләр икән?

Василь залға инеп, йәнә сәғәтте ҡарап инде.

— Сәғәт һайын булһа, яңынан утыҙ биш минуттан, ярты сәғәт һайын булһа, биш минуттан.

— Улайһа үҙебеҙҙең станцияларға күс.

Йәнә музыка. Был юлы Чайковскийҙың сихырлаусы лирик музыкаһы түгел, ә үҙенең эмоциональ көсө менән йөрәкте тетрәтеүсе скрипка концерты яңғырай ине.

— Ниндәй музыка был? — тине Кушнир.

— Миненсә... Бетховен. Эйе, эйе, Бетховен. «Айлы соната».

— Тыңлаһындар ине фашистар, — тине Рая йән асыуы менән. — Улар беҙҙе дәүләт һәм милләт булараҡ юҡ итергә тырышалар, ә беҙ Бетховен музыкаһын тапшырабыҙ...

Көтөлмәгән, ҡайһы сағында уйламаған һорауҙар биреүсе Железко был юлы ла әйтә һалды.

— Ә Бетховен беҙҙең заманда йәшәһә, кем яҡлы булыр ине икән? Ул бит заманында Наполеонды яҡлаған кеше, тиҙәр...

— Башта, — тине, уны төҙәтеп, Кушнир. — Наполеондың кемлеген аңлап еткәнсе. Ә аҙаҡ уға бағышланған симфонияһынан Бонапарттың исемен һыҙып ташлаған. Шулай булғас, ул Гитлерҙың агрессияһы түгел, бер генә эшен, акцияһын да хупламаç ине. Бетховен — бер ниндәй ҙә узурпаторҙарға, монархтарға буйһонмаусы бөйөк бунтарь, музыканың Прометейы...

Железко һоҡланыуын йәшерә алманы.

— Федор Михайлович... мин һеҙҙе музыковед талыр тип уйламай инем. Һеҙ бит...

— Ярар, ярар, комплименттар аҙаҡ, — тине Кушнир, уны бүлдереп. — Берлинды тот әле.

Тапшырыу тамамланғандан һуң, Рая тәржемә итте.

...Диктор, оперсводканы тапшырғандан һуң, большевиктарҙың баш ҡалаһы Мәскәүҙең һанаулы көндәре генә ҡалыуы, етенсе ноябрь көнөндә Ҡыҙыл майҙанда герман ғәскәрҙәренең парады буласағы, парадта ҡатнашыусыларға саҡырыу билеттары таратылыу хаҡында тиреһенән сығырҙай булып шатланып, ярһып, сәсәй-сәсәй һөйләне...

— Һүндер! — тине Кушнир.

Йәшел ут аҡрынлап һүнде. Бер нисә минут улар ҡараңғыла һүҙһеҙ ултырҙылар. «Парад... Саҡырыу билеттары...»

— Бар, сымды ысҡындырып кер, — тине Кушнир, ауыр тынлыҡты бөтөрөр өсөн.

— Эйе, эйе... Резина бирсәткәләр алайым әле. Бая ток үҙемде бағананан саҡ-саҡ осороп төшөрмәне.

— Мин дә ҡайтайым инде...

— Иптәштәр, — тине Кушнир, улар ҡуҙғала башлағас. — Бер кемгә бер нәмә һөйләмәҫкә.

— Фәтиховҡа ламы? — тип һораны Желедко.

— Уға әйт. Дөрөҫлөктө белеп торһон. Иң әсе дөрөҫлөк тә матур алдашыуҙан файҙалыраҡ. Күптәнге хәҡиҡәт.

...Юҡ, етенсе ноябрҙә Гитлерға Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында парад үткәрергә тура килмәне. Парадты Сталин үткәрҙе. Һәм, ошо шатлыҡҡа яуап иткәндәй, Киев судоверфендә, донъя масштабында бик кескенә, хатта телгә алырлыҡ булмаһа ла, диверсия булды.

Хыянатсы Беденко, ғәйрәтле герман ғәскәрҙәренең Мәскәүгә уңышлы һөжүм итеүенә яуап итеп, судоверфте мөмкин саҡлы тиҙерәк сафҡа индерергә ашыҡты. Әммә көндәрҙең береһендә цех начальнигы Мануевич янына Федоров-Фәтихов тыны-көнө бөтөп йүгереп килде.

— Бәлә, добродей начальник, бәлә. Теге Берлиндан килгән ҡиммәтле универсал агрегат юҡҡа сыҡты...

Һаҫы горилканан күҙҙәре гел шешенгән Мануевич ҡапыл айнып киткәндәй булды. Һикереп торҙо.

— Нисек юҡҡа сыҡты?

— Һынар өсөн беҙ агрегатты ходҡа ебәрҙек. Тәүҙә мөһабәт, тигеҙ генә эшләгәйне, бер аҙҙан шатыр-шотор итте, осҡондар сәсрәне, унан яна башланы.

Мануевич өҫтәл артынан сыҡты.

— Киттек! Ә һүндерергә өлгөрҙөгөҙмө?

— Өлгөрөүен өлгөрҙөк тә, әммә зыян ҙур бит, добродей начальник.

— Зыяны шайтаныма әле уның... Беҙгә түгел, фрицҡа зыян. Ә бына майор Рентель мине теге еремдән аҫып ҡуяsaҡ. — Ул ҡапыл туҡтаны. Фәтиховҡа табан боролдо. Ауыҙынан аңҡып торған һаҫы еҫ уны саҡ-саҡ укшытманы. — Һиненсә, был осраҡлы аварнямы, диверсиямы? Диверсия булһа, кемдән шикләнәһең? Йәшермә! Әйт. Бер кем дә белмәҫ. Ант итәм!

— Добродей начальник, агрегат ҡатмарлы, былай ғына әйтеп булмай. Комиссия төҙөргә тура килер. Диверсия булһа, ғәйеплеләрҙе эҙләрбеҙ. Минең бер шикләнгәм кешем бар.

Мануевич уның яғаһын ике ҡуллап тотто.

— Кем? Йәшермә! Бер кем белмәҫ! Ант итәм!

Фәтихов бармағы менән үҙенең күкрәгенә төрттө.

— Мин.

— Һин? Һа-һа-һааа... — Мануевич шарҡылдап көлдө.— Мин һиңә үҙемә ышанған шикелле ышанам, Федоренко.

Комиссия төҙөлдө. Комиссияға Беденконың шәхси тәкдиме менән механик Федоров-Фәтихов та инде. Агрегаттың һәр шөрөбөн, төйөнөн тикшереп сыҡтылар һәм «завод брагы» тигән йомғаҡ яһанылар. «Ҡәнтәйҙәр, — тип һүкте майор Рентель шведтарҙы. — Валютаға брак һаталар. Һәр марка, һәр көн иҫәпле саҡта...»

Ҡарап тороуға кескәй генә авария бик мөһим эштәрҙе аҙна-ун көнгә һуҙҙы. Диверсияның авторы «активист» Федоров-Фәтихов ине. Мөһиме шул: фронтта снайперҙар үлтергән дошмандарына иҫәп-хисап асҡан кеүек, Фәтихов та подпольелағы акция-диверсияларына счет асты.

Комиссия һығымта яһағансы: «Эҙемә төшмәҫтәрме?»— тип һағайып, шикләнеп йөрөгән Фәтихов, актты юғары инстанциялар раҫлағас, иркенләп тын алды. Төндә ҡаты итеп йоҡланы. Төшөндә өс йәшлек Идаһын күрҙе. Ул штабтан хеҙмәттән ҡайтып килә, имеш, ә ҡыҙы, тәҙрә төпһаһына баҫып: «Әттә ҡайта, әттә ҡайта», — тип ҡысҡыра.

Уның кескәй генә йомшаҡ танау осо быялаға төйөп, бөтөнләй йәлпәкләнгән, — көлмәй түҙерлек түгел.

Һәм Фәтихов йоҡоһонан көлөп уянды. Күҙҙәрен асһа, яҙғы күкте хәтерләтеүсе күҙҙәренән зәңгәр нур һибеп Даша уның ҡаршыһында баҫып тора ине.

— Хәйерле иртә, добродей Федоров!

— Хәйерле иртә, пани Поздняк! — Улар һәр көн иртән бер-береһен шулай сәләмләйҙәр.

— Ниндәй төш күреүегеҙҙе әйтәйемме, Борис? — тине Даша, уның янындағы артһыҙ ултырғысҡа ултырып, уның йомшаҡ, ҡуңыр сәсен һыйпап.

— Әйтегеҙ, — ул Дашаның фарфорҙан эшләнгән кеүек

нк, нәфис ҡулын тотто. Дашаның былай ҙа йылы ҡулы кинпыл эҫеләнеп китте.
— Ҡыҙығыҙҙы күргәнһегеҙ.
— Һеҙ фәрештәме әллә, Даша?
— Илһамлы йөҙөгөҙ әйтеп тора.
— Ә бәлки, Риманы... ҡатынымды, күргәнмендер?..
— Юҡ, ҡыҙығыҙҙы...
— Ә шулай ҙа һин уны ҡайҙан белдең, Дашенька?
— Сөнки мин... — Ул ҡапыл ҡып-ҡыҙыл булды, тағы ла матурайып китте һәм был минутта уға ғашиҡ булмаған ир кешенең йөрәгенә паралич булған булыр ине... — Сөнки мин... һинең өнөңдә генә түгел, төшөңдә лә сит... башҡа ҡатын-ҡыҙҙың булыуын теләмәйем, Нур...
Фәтихов уның аҡҡош муйынын эйеп, йомшаҡ һалам сәсен иыҙы.
— Ә Рима бит сит кеше түгел, минең законлы ҡатыным, Дашенька...
Даша ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтмәне. Битендәге алһыу нур кәмей төштө. Торҙо.
— Хәҙер бәрәңге ҡыҙҙырам...
Фәтиховтың уны кире ултыртҡыһы, ҡосаҡлап иркәләгеһе килде. Ниңә, бының өсөн уларҙы кем ғәйепләй алыр? Даша уны ярата, Даша ла уға оҡшай... Ҡатыны әллә ҡайҙа... Етмәһә, һуғыш, бөгөн барһың, иртәгә юҡһың... Иҫән ҡалғанда ла, аҙаҡ һуғыш бөтәһен дә ярлыҡар... «Даша...» — тине ул, бышылдап, үҙ һүҙенән үҙе янып.
Даша боролдо. Уның зәңгәр күҙҙәрендә сикһеҙ һағыш ине. «Кәрәкмәй, Нур, — тине ул, — кәрәкмәй. Саф булып ҡалайыҡ...» — һәм боролоп бүлмәнән сығып китте.
Фәтихов бер нисә секунд ҡына дауам иткән йомшаҡлығы өсөн үҙен тиргәй-тиргәй, һикереп тороп, кейенә башланы.
Ә бына судоверфтә уны бөтөнләй башҡа хәбәр көтә ине.
Ныҡлап эшкә тотонорға өлгөрмәнеләр, ике немец офицеры менән директор Беденко цехҡа килеп инде. Офицерҙарҙың береһе обер-лейтенант ине, ул, бер кемгә лә иғтибар итмәй яңаҡ итеп сәйнәй-сәйнәй, сиселгән ҡара күн бирсәткәһен икенсе ҡулына әленән-әле һуғып тора; икенсе офицер — ул хәрби инженер формаһында ине — һәр бер эшсенең хәрәкәтенә иғтибар итеп, профессиональ ҡараш менән баһа бирә. Ә Беденко иһә иртән кәртәгә менгән әтәс һымаҡ ҡуҡырайған: күкрәге кирелгән, тауышы тантаналы.
— Йәһәтерәк, йәһәтерәк ҡыланығыҙ, егеттәр, фюрер Мәскәүҙе алыуға яуап итеп, судоверфте тиҙерәк аяҡҡа баҫтырып, бөйөк Германияның еңеүенә өлөш индерәйек...

Цехта ауыр, шомло тынлыҡ урынлашты, тик моторҙар ғына бер нәмәгә иғтибар итмәй һәм аңламай үҙ яйына геүләне. «Был нимә? Геббельстың сираттағы төкөрөк сәсеүеме әллә... Нисек дөрөҫөн белергә? Нисек?..»

Мәскәү, Мәскәү... Бәлки, кешелек тарихында бер баш ҡаланың да яҙмышы бөтә донъяны шулай ҡыҙыҡһындырмағандыр, тулҡынландырмағандыр... Мәскәү, Мәскәү... Иҫәнме һин? Әллә һинең урамдарыңды, теге ваҡытта Наполеон һалдаттары тапаған һымаҡ, Гитлер илбаҫарҙарының дағалы итеге бысратамы?..

Төшкә саҡлы Василь күренмәне — тимәк, ашығыс хәбәр юҡ, күңел тыныслана төштө. Төшкө ашҡа туҡталырға берниҙе минут ҡала, ул, әсе тәмәке төтөнөн борхотоп, Фәтихов янынан үтеп китте.

Ике-өс минуттан улар бәҙрәфтә осраштылар.

— «Пионерҙан» хәбәр бар. Һигеҙгә тәре аҫтына, — тине Железко, уға ҡарамай ғына.

— Ниндәй хәбәр?

Ул арала бәҙрәфкә башҡалар керә башланы. «Ниндәй хәбәр? Ниндәй хәбәр?..» тигән эҫе ҡурғаштан ҡойолған һүҙҙәр Фәтиховтың йөрәген өйкәне. «Ниндәй хәбәр? Ниндәй?..»

Владимир-креститель һәйкәле янында улар: Фәтихов, Кушнир, Железко, Рая ҡулдарын һүҙһеҙ ҡыҫып иҫәнләштеләр. Кушнир, ғәҙәттәгесә, төрөпкәһен көйрәтте. Совинформбюро хәбәрен һүҙмә-һүҙ һөйләп сыҡты. Уның тауышы, сираттағы партком ултырышы үткәргәндәге шикелле, тыныс, эшлекле ине.

— Ә Берлин ни һөйләй? — тине Фәтихов, яңылыҡты тыңлағас.

— Ә Берлиндың беҙгә ни кәрәге бар? — тине ярһыу Железко. — Геббельстың ни һөйләйһе билдәле инде.

Фәтихов яй ғына уның ҡулынан тотто.

— Бар, Тромбон. Һуғыш ваҡытында һәр ике яҡ та үҙенең уңыштарын арттырырға, юғалтыуҙарын кәметергә тырыша...

Железко түҙмәне.

— Беҙҙекеләр ҙәме?

— Һүҙ беҙҙекеләр хаҡында түгел, ғөмүмән бара... — Фәтихов тыныш яһап алды. — Бәлки, беҙҙекеләр ҙә, кәрәкле-кәрәкһеҙҙе халыҡҡа еткереп, уның рухын төшөрөргә теләмәйҙер. Шуға күрә беҙгә ике яҡтың да информацияһын тыңларға кәрәк.

Железко урынына Кушнир яуап бирҙе.

— Берлин, ғәҙәттәгесә, барабан ҡаға, шапырына... —

Кушнир һүҙен дауам итте. — «Мәскәүҙең яҙмышы ҡыл өҫтөндә. Көнләп түгел, сәғәтләп хәл ителә. Мәскәү алыныу менән, Сталин аҡ флаг ташлаясаҡ һәм шуның менән «Көнсығыш походы» вәссәләм», — тип донъяға иғлан итәләр.— Беҙҙең бурыс, — тине Кушнир ҡәтғи һәм тәүәккәл тауыш менән, — Геббельс пропагандаһына үҙебеҙҙең контрпропаганданы ҡаршы ҡуйыу. Дөрөҫ, был еңел эш түгел. Беҙҙең хәҙергә типография ла, хатта стеклограф та юҡ, ни бары бер яҙыу машинкаһы ғына бар...

Был юлы инде тимер һымаҡ сыҙамлы һәм түҙемле Фәтиховтың да тәҡәте бөттө.

— Машинка таптығыҙмы әллә? — тине ул, шатланып.

— Таптыҡ. Теге ваҡытта судоверфтән урлап та, урлай алмаған машинканы Железко менән Светлин заводтан алып сыҡҡандар.

— Беҙҙең халыҡ, ҡорал эшләр, ир маҡтаныр, ти, әммә ҡоралды эшләтер өсөн ир ҙә кәрәк бит. Машинкала яҙа белеүсе бармы? Мин үҙем яҙа беләм белеүен, ләкин быны өсөн квартира кәрәк, — тине Фәтихов, уйланып.

— Хәҙергә минең үҙемә яҙырға тура килер, — тине Кушнир, — дөрөҫ, минең тиҙлек иҫ китерлек түгел, ике бармаҡ менән генә баҫам...

— Тәүҙә ике, унан дүрт бармаҡ... — тип уны дәртләндерҙе Железко. — Һиңә ҡарап, мин дә яҙырға өйрәнермен...

— Йәнә шундай тәҡдим, иптәштәр. Миңә, хеҙмәтем буйынса, немец листовкаларын шаҡтай күп уҡырға тура килде. Уларҙың листовкаларында һәр бер һүҙ алдашыу булһа ла, бер ыңғай яҡ бар ине — ҡыҫҡалар, күҙгә ташланып торалар, шулай булғас, кешене йәлеп итәләр тигән һүҙ. Тимәк, листовкаларҙа бер генә лә артыҡ һүҙ, бер генә лә кеше ышанмаҫлыҡ хәбәр булырға тейеш түгел. Һәр һүҙ йөрәккә үтеп керергә тейеш. Йәнә, һәр листовканың аҫтында имза булырға тейеш, йәғни кем листовканы тарата.

Дошманға нәфрәт уты менән генә түгел, дан уты менән дә янған Железко, Фәтихов әйтеп бөтөргәнсе үк, үҙенең тәҡдимен индерҙе.

— Мин листовкалар аҫтына «Подол» тип тамға һалырға тәҡдим итәм.

— «Подол»... — тине Кушнир, ашыҡмаусы, һәр нәмәне төплө уйлаусы. — Юҡ, Тромбон, бармай. Был имза гестапоға эҙ күрһәтеү буласаҡ.

— Ул сағында...

— Ә беләһегеҙме... — Ғәҙәттә метеор кеүек теремек Рая, ни эшләптер, бындай осрашыуҙарҙа гел һүҙһеҙ генә тыңлап торорға ярата ине. — Отрядты «Днепр» тип атайбыҙ. Днепр оҙон, уның ҡайҙа икәнлеген өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын.

Был тәкдим ҡабул ителде.

«Днепр» тигән подполье группаһы бер ерҙә лә рәсми рәүештә «иҫәптә» тормаһа ла, ул йәшәне, ул көрәште һәм ҡулынан килгәнсе дошманға зыян итте *.

Хушлашҡанда Кушнир Фәтиховтың ҡулын иҫәнләшкәндәгегә ҡарағанда нығыраҡ ҡыҫты.

— Ә теге... Берлиндан килгән агрегат менән һеҙ сос эшләгәнһегеҙ. Маладис!

Кушнирҙың был маҡтау һүҙе Фәтиховты шатландырҙы ла, һағайтты ла — ул бит агрегатты юҡҡа сығарыу тураһында бер кемгә лә йөй белгертмәгәйне. Ҡайҙан һиҙенгәндер? Шуға күрә ул маҡтау һүҙенә һорау менән яуап ҡайтарҙы.

— Ә, бәлки, мин түгелдер?..

— Һеҙ, — тине Кушнир, уның ҡулын ебәрмәй. — Тромбон һеҙҙән башҡа бер кешенең дә был эшкә башы етмәҫ ине, ти. Тәүҙә «активислыҡҡа» яҙылғанһығыҙ, шәберәк, яҡшыраҡ эшләргә башҡаларҙы өндәгәнһегеҙ, ә аҙаҡ... Маладис, маладис, дошманды шулай бутарға, алдарға кәрәк.

— Ә был насар, — тине Фәтихов.

— Дошманды алдаумы?

— Кем нимә эшләгәнде бер генә сит кеше лә белергә тейеш түгел.

— Ә мин сит кешеме ни? — тине Василь үпкәләгән һымаҡ.

— Ә шулай ҙа... яҡшы разведчиктың... яҡшы подпольщиктың эшен үҙенән башҡа бер кем белергә тейеш түгел.

— Уныһы шулай... — тине Кушнир, һуҙып. — Беренсенән, интуиция тигән бик серле нәмә бар, икенсенән... Беҙ бер-беребеҙҙең подвигын белергә тейешбеҙ, юҡһа подвиг эҙһеҙ юғалып ҡаласаҡ.

## ЕГЕРМЕ ДҮРТЕНСЕ НОВЕЛЛА

### «Днепр» хәрәкәт итә

Тора-бара йәнә бер машинка, хатта стеклограф та табылды.

Һуғышҡа саҡлы хәрби порт мастерскойҙарында цех начальнигы булып эшләгән коммунист Василий Павлович

---

* Киевта һәм Киев өлкәһендә оккупация ваҡытында подпольела 83 партия, 37 комсомол ойошмаларынан тыш, 76 партизан отрядтары һәм диверсион группа хәрәкәт итте. Шул иҫәптән Кушнир—Фәтихов группаһы. Группа башҡа ойошмалар менән бәйләнешкә инергә тырышып ҡараһа ла, йәшеренеү көслө булганга, быны эшләй алмай (*автор иҫкәрмәһе*).

Краснов, ҡамауҙы йырып сыға алмай, Киевка ҡайта һәм ялған фамилия менән таҡта ярыу заводына эшкә урынлаша. Күптәнге дуҫы Светлин менән осрашҡас, улар бер-береһен һынашып, кинәйәле һөйләшеп тормайҙар, ә туп-тура: «Дошманға нисек зыян килтерергә?» — тигән һорау ҡуялар. Светлин бөгөндән яҙыу машинкаһы һәм машинистка кәрәклеген әйтә. «Табам, — ти Краснов, шатланып. — Минең Лена Матещенко тигән таныш машинисткам бар. Машинкаға ҡарамай яҙа. Ҡулдарына күҙ ҙә эйәрмәй. Етмәһә, уның иҫке генә «ундервуды» ла бар ине. Ә запас ҡағыҙ, копировка машинисткаларҙа һәр саҡ була ул... Иртәгә үк үҙен юллап барам...»

Оҙаҡламай Подол урамдарында листовкалар пәйҙа булды. Унда «Днепр» подполье группаһы немецтарҙың алдашыуы, Мәскәүҙең беҙҙең ҡулда булыуы һәм буласағы, Октябрь байрамы айҡанлы тантаналы кисә уҙғарылыуы, Ҡыҙыл майҙанда парад булыуы, Сталиндың телмәр менән сығыш яһауы хаҡында белдерелә ине.

Капитан Фәтихов фронтта беҙҙең яугирҙарыбыҙҙың һоҡландырғыс батырлыҡтары тураһында ишетте лә, үҙ күҙҙәре менән күрҙе лә, был уның шартлатҡыс көсөн бермә-бер арттыра төштө. Нисек ҙурыраҡ, бөтә Киев шауларлыҡ, халыҡты елкендererлек, ашҡындырырлыҡ һәм рухландырырлыҡ акциялар эшләргә? Быны өсөн, тип хыялланды ул, йоҡоһоҙ ятҡан төндәрҙә түшәмгә ҡарап, немец офицерының формаһы һәм ысын документ кәрәк. Форма һәм документ... Капитан Фәтихов, инде утыҙға еткән булһа ла, подвигтың әһәмиәте менән генә түгел, уның романтикаһы, мауыҡтырғыс булыуы, мажараһы менән дә ҡыҙыҡһына ине. Форма һәм документ...

Тора-бара ул моратына ирешәсәк, әммә уға тиклем әле бер нисә ай үтәсәк, ә хәҙергә листовкалар яҙып таратыу һәм ваҡ диверсиялар менән ҡәнәғәтләнергә тура киләсәк: моторҙарҙы, станоктарҙы юҡҡа сығарыу, дефицит деталдәрҙе, частарҙы Днепрға батырыу.

Бына шундай «ваҡ» диверсияның береһе. Ноябрь аҙаҡтары, әле йылға туңмаған, тик һалҡын һыу ҡара ҡурғаш төҫөнә генә кергән. Ул хәҙер ҡурҡыныс, шомло. Аҡсарлаҡтар ҙа һирәк оса...

Төшкө ашҡа туҡталған ваҡытта улар Желедко менән бәҙрәфтә осрашалар. «Тәнәфес бөткәс тә, сумкаңа сүкеш, тешәүес һал да, кеше күҙенә күренмәй, йылға буйына,

эллинг янына, кил», — ти Железко. «Ни эшләмәксе булаһың?» — «Светлин шәп эш тапҡан». — «Яҡшы».

Фәтихов эллингыға килгәндә, Железко унда мыштырлап маташа ине. Ул арала эшлекле атлап Светлин да килеп етте.

— Ә Рая ҡайҙа? — тине ул, Фәтиховҡа баш ҡағып.

— Анауында, — тине Железко, эллингының юғары башындағы пароходтың тимер корпусына күрһәтеп. — Ул унда йәшенеп, күҙәтеп тора. Ҡурҡыныс була ҡалһа, сигнал бирәсәк: тимергә ике тапҡыр тимер менән һуғасаҡ.

— Ә беҙ ни эшләйбеҙ? — тине Фәтихов, әле һаман тегеләрҙең уйҙарын аңлап етмәй.

— Эллингының тростарын ҡырҡабыҙ.

— Һеҙ нимә, ошонан туп-тураға гестапоға китмәксе булаһығыҙмы?

Железко «Бүренән ҡурҡҡан...» тип яратҡан мәҡәлен әйтә башлағайны, Фәтихов уны бүлдерҙе:

— Яҡшы. Ул сағында беҙ уларҙы ҡырҡып бөтөрмәйбеҙ. Ҡарапты күтәргән йәки төшөргән ваҡытта өҙөләрлек итеп кенә ҡырҡабыҙ.

— Дөрөҫ, — тип уны ҡеүәтләне Светлин, — һәр тростың бер нисә жилаһын ҡырҡабыҙ ҙа күҙгә бәрелеп тормаҫлыҡ итеп йәшерәбеҙ. Ә трос — хәҙер алтын бәрәбәренә тиң.

Железко рельс киҫәге алып килеп, уны трос аҫтына ҡуйҙы, ә Светлин иһә ситтәрәк, юрамал тимергә тимер менән һуғып, саң-соң итте, тауыш сығарҙы.

Эш менән мауығып, улар тыны-көнө бөткән Раяны шәйләмәнеләр ҙә.

— Минең сигналды ишетмәнегеҙме ни? Майор Рентель, Беденко, өс немец офицеры бында килә... — Үҙе шунда уҡ тороп йүгерҙе.

Былар күҙ асып йомғансы эллингыла торған пароходтың тишелгән төбөнән пароходҡа инеп ҡастылар. Рентель һәм уның эйәрсендәре беҙҙекеләр батырып киткән, аҙаҡ немецтар күтәргән пароходты әйләнеп сыҡтылар. Береһе палубаға күтәрелде. Ҡемдер кемгәлер мөрәжәғәт итте. (Аҙаҡ Фәтихов аңланы: яуап биреүсе кеше майор Рентель ине, Фәтиховтың уның тауышын ишеткәне бар.) Железко: «Ни һөйләшәләр?» — тип һораны. Фәтихов тәржемә итеп торҙо: «Пароходтың эсен хәҙер ҡарайбыҙмы?» — тип һорайҙар. Рентель: «Юҡ, иртәгә ентекләп ҡарарбыҙ, хәҙер ваҡыт юҡ, мине шеф саҡыра», — ти.

Аяҡ тауыштары алыҫлашты. Пароход эсендәгеләр иркенерәк һуланылар, әммә улар эштәре менән бөтөнләй үк ҡәнәғәт түгелдәр ине. Өс тростың береһе ҡырҡылмай ҡалды...

Икенсе көндө көслө электр лебедкалар эшләй башланы. Ҡорос тростар скрипка ҡылындай тартылды һәм ҙур пассажир пароходы йылғанан ярға, өҫкә, шыуыша башланы. Күп тә үтмәне, ҡапыл нимәлер сытыр-шатыр итте, унан металдың металға тейеп шығырлағаны ишетелде. Трос өҙөлөп, йылан һымаҡ йомарланып, пароходтың тимер корпусына барып бәрелде, эшселәр, ҡоттары осоп, тирә-яҡҡа һибелделәр. Шунда уҡ икенсе трос та өҙөлдө һәм ҙур, ауыр пароход күҙ эйәрмәҫлек арала эллингынан шыуып йылғаға төштө, һәм кисә улар инеп йәшеренгән ҙур тишектән пароходҡа һыу ташҡыны урғылды, карап аҡрынлап бата башланы...

Ғәҙәттәгесә, комиссия төҙөлә. Комиссияға инженер Светлин да инә. Бик ентекле тикшергәндән һуң, «тростар иҫкергән, эшкә яраҡһыҙға әйләнгән, шуға күрә өҙөлгән» тигән һығымта яһала.

Ҡарап тороуға был «ваҡ» диверсия, әммә ҡайһы саҡта бармаҡҡа шырау кергәндән дә бармаҡ шешә, һыҙлай, кәйефте боҙа, ныҡлап эшләргә ҡамасаулай бит.

Был осраҡта ла батҡан пароходты күтәреү, ярға менгереп, ремонт эштәренә тотоноу байтаҡ ваҡытты ала.

Был көндәрҙә Мәскәү янындағы хәлдәр ауыр ине. «Беҙҙең һалдаттарыбыҙ Мәскәүҙе биноклдән күрә, бына-бына уларҙың итектәре большевиктарҙың Ҡыҙыл майҙанын тапап йөрөйәсәктәр», — тип ҡоторона Берлин радиоһы.

Әммә алтынсы декабрҙә Совет ғәскәрҙәре контрһөжүмгә күсә: Мәскәүҙе утлы ҡоршауҙан ҡотҡарып, бик күп ауыл-ҡалаларҙы дошмандан азат итә, немец-фашист ғәскәрҙәре тәү тапҡыр ошондай тар-марға дусар ителә.

Был шатлыҡлы-тулҡынландырғыс хәбәрҙәр менән «Днепр» группаһы, листовкалар таратып, Подол халҡын әленән-әле таныштырып тора. Листовкалар тора-бара, ҡулға бланкылар һәм мисәт килеп ингәс, Киев тирәһендәге районлдарға ла таратыла. Рая Буяненко ҡышҡы һалҡындарҙа санаға өс йәшлек Василекты ултыртып, уның аҫтына листовкалар тейәп, Васильково районына, Фастов, Белая Церковь тирәһендәге ауылдарға барып етә. Ҡулдарын, аяҡтарын туңдыра, арый, асыға, әммә төшөнкөлөккә бирелмәй, зарланмай. Йөрөп ҡайтҡас, хәрби кешеләрсә честь биреп: «Задание арттырып үтәлде, иптәш Борода!» — тип Кудирҙа шатланып рапорт бирә...

Листовкалар таратыуҙа подпольщиктарҙың күбеһе ҡатнаша һәм ҡаса-боҫа түгел, ә «законлы» рәүештә. Кудирҙың тәҡдиме буйынса, уның балалыҡ дуҫы Черняк, поли-

ция идаралығына эшкә урынлашҡас, уларҙы кәрәкле «законлы» бланкылар менән тәьмин итә лә...

## Рая асҡыстар урлай

Кушнир үксәләренә ныҡ һәм йыш баҫып атлаусы кешенең аяҡ тауыштарын ишетте. Ул, кемдең шулай атлап йөрөгәнен белһә лә, аҡтарып ултырған ҡағыҙҙарын клеенка аҫтына йәшерҙе. Ишеккә шартлы ҡаҡтылар. Кушнир, барып, ишектең келәһен күтәрҙе.

— Рәхим итегеҙ.

— Хәйерле кис, Федор Михайлович!

Был — Рая ине.

— Һөйлә. Судоверфтә ниндәй яңылыҡтар бар?

— Юҡ тиһәң дә була. Беденко бил яҙҙырмай эшләтә. «Яҙға навигацияны тулы әҙерлек менән асырға кәрәк», — тип ашыҡтыра.

— Һеҙҙең диверсияларҙы һиҙенмәйҙәрме?

— Улай асыҡтан-асыҡ әйтеүсе юҡ, әммә судоверфтә бығаса таныш булмаған кешеләр күренә башланы. Кемлектәрен хәҙергә әйтеүе ҡыйын.

— Һаҡ булығыҙ. Гестапоның ҡолаҡтары — оҙон, күҙҙәре — үткер. Ә Черняк был юлы бына нәмә ебәргән... — Кушнир клеенка аҫтынан бая ҡараштырып ултырған ҡағыҙҙарын алып Рая алдына ҡуйҙы.

— Ә-ә... командировка бланкылары... Ә быныһы... ниндәй исемлек?

— Махсус иҫәптә торған кешеләр.

— Таныштар юҡмы?

— Юҡ шикелле. Һин дә ҡарап сыҡ. — Кушнир төрөпкәһен көйрәтте. — Чернякты был эшкә ебәреүемә хәҙер үкенеп тә ҡуям. Ул бит ике ут эсендә: беҙҙекеләр «немец халуйы» тип күрә алмай, ә немецтар «рус шпионы түгелме икән?» тип уның һәр аҙымын күҙәтеп тора. Аҙ ғына шикләнеү һиҙенһәң дә, эҙенде юғалт, тип үҙен киҫәттем.

— Бер таныш фамилия ла юҡ, — тине Рая, «ҡара исемлекте» уҡып сыҡҡас.

— Раечка, — Кушнир уның ҡулына үҙенең көслө, киң усын ҡуйҙы. — Буш бланкылар — бәҙрәф ҡағыҙы ғына. Беҙгә инсек тә мисәт табырға кәрәк. Ул сағында беҙ листовкаларҙы Подолға ғына түгел, тирә-яҡ райондарҙа ла таратыр инек. Хәҙер бит немец ғәскәрҙәренә йылы кейем әҙерләү кампанияһы башланды. Командировкаға Фәләнов Фәлән «Герман армияһы өсөн йылы кейем һәм аҙыҡ-түлек әҙерләргә командировкаға ебәрелә» тип яҙыр инек тә, әй-

— Бәлки, урмандағы партизан отрядтары менән дә конһидтка керер инек, шартлатҡыс табыр инек...

Рая уйланды. Һүҙһеҙ ултырҙы. Ҡапыл уның ҙур ҡара күҙҙәрендә сая осҡондар тоҡанды.

— Федор Михайлович, әгәр мин был эшкә тәүәккәлләп ҡараһам?..

— Ниндәй эшкә?

— Мисәт табырға.

— Ә һин уны нисек табаһың?

— Ошо көндәрҙә мин парикмахерскийҙа Подол район управаһының башлығы Хворостинскийҙың секретары менән таныштым. Төҫкә-башҡа сибәр...

— Ундай эшкә йәмһеҙҙәрҙе алмайҙар, — тип ҡыҫтырҙы Кушнир.

— Бик биҙәнергә, ҡыланырға, көрпә һибергә ярата. Хворостинскийҙы бына мин ҡайҙа ғына тотам, тип шүрәленеке һымаҡ оҙон ҡыҙыл тырнаҡлы бармаҡтарын ҡыҫып күрһәтте.

— Эйе, эйе... — тине Кушнир, ғәҙәттә хистәрен, уй-пландарын бик тиҙ асып һалмай торған кеше, был юлы янып ишыҡтырҙы. — Шунан, шунан?..

— «Ҡереп йөрө. Үҙеңде берәй «офицерик» менән таныштырырмын. Һуғыш, тип йәш ғүмерҙе заяға үткәрергә ярамай. Бөгөн барбыҙ, иртәгә юҡ», — тип мине «ләззәт юлына» өгөтләне.

— Ә һин... ни тинең?..

— Ярай, керермен. Һинең менән һөйләшеүе күңелле, тинем.

— Аҡыллы әйткәнһең. Һин уның «әхирәтенә» әйлән. Тик...

— Аңлашыла. Аңлайым. Уның елбәҙәк ҡыҙыҡай ғына түгел, гестапо агенты булыуы ла бар.

Ул арала йәнә ишек ҡаҡтылар. Был юлы Железко ине. Яңылыҡтарҙы унан йәшермәнеләр.

Зирәк аҡыллы, ашығып уйлаусы тәҡәтһеҙ Василь Раяның хикәйәһенән һығымта яһап та өлгөрҙө.

— Рая, был бит табыш! Һин һис кисектермәй берәй офицер менән танышып ал. Тик ул офицер артыҡ ҙур ҙа, бәләкәй ҙә булмаһын. Мәҫәлән, беҙҙең Ҡарға һымағыраҡ...

— Һин һүҙҙе ҡайһы яҡҡа бөгәһең? — тине Рая, уға дуҫтарса мыҫҡыллы йылмайып.

— Уныһын аҙаҡ әйтермен. Хәйер, беҙҙең арала сер юҡ. Немец офицерының кейеме һәм документы Ҡарғаға кәрәк.

Яйһа ла, яймаһа ла, төрөпкәһен һурып ултырған Кушнир һүҙгә ҡатнашты.

— Ҡарғаға? Ниңә ул?
— Нисек — ниңә? Ул немецса немецтар шикелле белә.
— Был үтә хәтәр эш... — тине Кушнир. — Раяны һәләк итеүебеҙ бар. Хатта ул әләкмәһә лә... Приказды беләһең — үлтерелгән бер немец һалдаты өсөн — ун, бер офицер өсөн йөҙ кеше яҙаланасаҡ.
— Бүренән ҡурҡҡан...
— Ҡайһы саҡта бүренән дә ҡурҡырға кәрәк, Василь. Шикле авантюра өсөн беҙ йөҙләгән ғәйепһеҙ кешенең муйынын балта аҫтына ҡуя алмайбыҙ.
Василь ҡыҙа төштө.
— Ә ниңә «шикле авантюра»? Мин үҙемә ышанмаһам да, Ҡарғаға ышанам. Башымды киҫмәгә бирәм, ул ябай капитан ғына түгел, ул профессиональ разведчик та. Ана судоверфтә ниндәй генә хәтәр акциялар эшләмәне, ә немецтар уны һаман үҙҙәренең «активисы» тип йөрөйҙәр. Әгәр ул «немец офицеры» булып алһа, беләһегеҙме, беҙ нимәләр генә эшләмәҫ инек! Эһ! — Железконың ҙур, көслө йоҙроҡтары төйнәлде, күҙҙәренән осҡондар осто.
— Хәҙергә һауалағы торнаға ҡыҙыҡмайыҡ, — тине Кушнир, уның йөрәгендә ҡайнап торған утына һалҡын һыу һибеп. — Беҙгә хәҙер иң мөһим нәмә — мисәт. Мисәт булһа, беҙ...
Железко торҙо.
— Листовка — яҡшы эш, файҙалы эш, әммә ябай агитация. Ҡоро һүҙ. Ә беҙгә...
Кушнир ҙа торҙо. Василде ҡултыҡланы.
— Минең дә, Тромбон дуҫҡай, әллә нәмәләр эшләгем килә: судоверфте электр менән тәьмин итеүсе подстанцияны, комендатураны, генерал-комиссар Вольдемар резиденцияһын... хатта, күренмәй осоп барып, Гитлерҙың канцелярияһын күккә осоргом килә, әммә... дәрт бар, дарман юҡ. Беҙ реаль мөмкинлектәрҙән сығып уй йөрөтөргә тейешбеҙ.
Бәхәстә Железконы еңеүсе еңел түгел ине. Был, бер ҡарағанда, яҡшы һыҙат та — кеше үҙенең һүҙен, ҡарашын хаҡ тип һанай. Бирелмәй. Икенсе яҡтан, насар ҙа. Үҙенден хаҡ түгеллегенде аңлап та, бирелмәһәң, был инде тиҫкәрелек тип атала. Әммә был осраҡта, ихтимал, Железко хаҡ булғандыр.
— Шуға күрә Ҡарғаға немец формаһы кәрәк тә, — ти ул янып, ышандырырға тырышып. — Ҡарға немецтар, мадьярҙар, словактар менән аралашырға теләй. Ярай, немецтарға ышанмайыҡ та, улар фашистар, ә словактар, мадьярҙар?.. Һәр бер икенсе булмаһа ла, өсөнсө словак, өсөнсө булмаһа ла, дүртенсе мадьяр Гитлер өсөн ҡан ҡойорға, йәнен фиҙа ҡылырға теләмәй.

Күшпир икеләнә башланы. Ул, оҙаҡ ҡына етәксе булып эшләгән һәйһы бер етәкселәр шикелле, фәҡәт үҙ һүҙен генә хаҡ һүҙ тип уйлаусы кеше түгел ине.

— Яҡшы. Форма хаҡында уйлашырбыҙ. Бәлки, һарыҡ та теүәл, бүре лә туҡ ҡала торған вариант эҙләп табырбыҙ. Ә хәҙер мисәт табыу тураһында уйлашайыҡ...

## РАЯНЫҢ ХИКӘЙӘҺЕ

...Ҡот һайын булмаһа ла, әленән-әле Хворостинскийҙың секретары Эльза (уның ысын исеме шулай инеме әллә немецтарға ярамһаҡланып украин исемен шулай үҙгәрткәнме, белмәйем, ҡыҙыҡһынманым) янына керҙем. Эльза һөйләшергә яратыусы, бер ҡатлы, бөгөнгө көн менән генә йәшәүсе бер көнлөк күбәләк ине. Ә күп һөйләүсе кеше, үҙе лә һиҙмәҫтән, ни әйткәнен онотоп ташлай, серен асып һала. Эльза ла ғәйбәт, юҡ-бар һөйләгәндә мөһим хәбәрҙәр, бик кәрәкле мәғлүмәттәр лығырлап ташлаштырғыланы. Ул лығырлағанда һиҙҙермәй генә күҙәттем. Ғәҙәттә, мисәт һәм төрлө штампылар Хворостинскийҙың үҙендә һаҡлана икән. Әммә ҡайһы саҡта Хворостинский: «Бөгөн тиҙ генә килмәйем. Иртәгә мин булмайым», — тип мисәтте Эльзаға ҡалдырып сығып китә. Эльза: «Яҡшы, пан начальник!» — тип ҡаштарын һикертеп ала ла, мисәт-штампыларҙы өҫтәл тумбочкаһына һалып, асҡысты ике рәт бороп бикләп ҡуя.

Быны белгәндең икенсе көнөндә үк мин ридикюлемдә балауыҙ йөрөтә башланым. Тотолһам-нитһәм, тип үҙем балауыҙ сәйнәгән булдым, имеш, үҙәк көйә...

Шик тыуҙырмаҫ өсөн, бер нисә көн Эльза янына кермәй торҙом. Ундай саҡта Эльза мине шатланып та, шелтәләп тә ҡаршы алды.

— Һин донъяла бармы ни әле? Мин һине, иң яҡын әхирәтем, тип йөрөгән булам, ә ул... кереп хәлемде лә белмәй.

— Ҡисер, — тинем мин, уның пудра, кершән менән бик ҡалын итеп биҙәлгән яңағынан үбеп, — һиңә сиремде йоҡтороорға теләмәнем, тымау менән ыҙалапдым. Эштәр нисек? Миңә берәй «офицерик» тапманыңмы?

— Эштәр — во! — Ул усын бысаҡ итеп, муйынын ышҡып алды. — Эш муйындан, шеф дүрт көн эшкә килмәне. Тау саҡлы ҡағыҙ йыйылған...

Ул арала шеф сигнал бирҙе, Эльза, тышына свастикаға үткер тырнаҡтары менән йәбешкән ҡарагош төшөрөлгән сейә көрән ледерин папкаһын алып, ишеккә йүнәлде.

— Китмә, мин хәҙер сығам, — тине ул, күҙең сағылырлыҡ итеп йылмайып.

Т̆әүҙә бер ни уйламай тәҙрә янына барҙым. Тәҙрә бер ҡасан да ҡояш төшмәй торған, дүрт яҡтан да кирбес стеналар менән әйләндереп алынған ҡараңғы ишек алдына сыға ине. Ишек алдында төпһөҙ мисҡәләр, ватыҡ йәшниктәр, картон ҡаптар ята. Бер нисә сейә ағасы моңайып ултыра... Тәҙрәнән боролһам, йөрәгем жыу итеп китте. Нескә сынйырға кейҙерелгән бер нисә асҡыс өҫтәл тумбочкаһының скважинаһында аҫылып тора. Ҡуҙ асып йомғансы ридикюлемдән балауыҙҙы алдым да, асҡыстарҙы тумбочка йоҙағынан тартып сығарып, оттиск эшләнем. Һуңғы асҡысты балауыҙға ҡуйып, бармаҡтарым менән баҫҡанда, кабинеттың эске ишеге асылды. Мин ялт итеп асҡыстарҙы урынына тыҡтым. Ултырғысҡа ултырып, кирелгән, иҫнәнгән кеше булдым һәм, Эльза урынына ултырыу менән, уны өтөп алдым.

— Эльзуша, һине күпме көтөргә була? Минең инде йоҡом килә башланы. Ҡитмәксе лә булғайным, тумбочка йоҙағына ҡыҫылған асҡыстарыңды күргәс, кире ултырҙым. Йә берәйһе кереп, алып сығып китер, хәҙер бер кемгә лә ышаныс юҡ бит.

— Тсс! — тине Эльза, ағара төшөп. — Һин бер нәмә лә күрмәнең. Юҡһа... — Ул шефы ултырған кабинетҡа күрһәтте лә асҡыстарҙы кофта кеҫәһенә һалды...

Бер нисә көндән судоверфтә баҡырсы булып эшләгән Рыкалов миңә өс асҡыс тапшырҙы. Хәҙер... иң хәтәре. Аҙ ғына абайһыҙлыҡ, һаҡһыҙлыҡ — дар ағасы. Ни эшләйһең, тәүәккәлләргә тура килә. Листовкалар таратыу хәтәр эш түгелме ни...

Райуправа сотрудниктары немецтарға хас теүәллек менән сәғәт берҙә төшкө ашҡа таралалар. Эльза, ғәҙәттә, управанан иңғыҙы ғына сығып китә. Бер тулырға биш минут ҡала управа каршыһындараҡ үҫкән мөһабәт каштан олоно артына йәшенеп, Эльза биргән мода журналын ҡараштырам һәм күҙәтәм. Управаның парад ишеге төбөнә ҡара «оппель» килеп туҡтаны. Үҙенән алда Эльзаның шырҡ-шырҡ көлгәне ишетелде. Уның артынан Хворостинский кәм тигәндә немец полковнигы һымаҡ атлап килеп сыҡты. Икеһе лә машинаның артҡы диванына ултырҙы. «Әһә, тим, былай булғас, төшкө аштың киске ашҡа тиклем һуҙылыуы бар...» «Оппель» Крещатик яғына боролғас, йүгерә-атлап управаға йүнәлдем. Ғәҙәттә, төшкө аш ваҡытында сит кешене кертмәйҙәр. Был юлы мине күреүсе, туҡтатыусы булманы — ҡарт швейцар лифт янында ойоп ултыра ине. Уның күрмәй ҡалыуы үҙе бер уңыш әле. Приемный бүлмә асыҡ. Бер кем дә юҡ. Иҙәнгә саҡлы төшөп торған ҡалын тәҙрә пәрҙәһе бер аҙ ябылған, шуға күрә бүлмә

[illegible] ыҡтылы ине. Ҡапыл башыма ҡот осҡос уй кил-де: әгәр мисәт Хворостинский кабинетындағы сейфта бул-һа? Асҡыстарҙы алдым да тәүҙә өҫтәл тумбочкаһын асып ҡарамаҡсы булдым. Йәнә ҡот осҡос уй: асҡыстар ярармы, юҡмы?.. Йоҙаҡҡа тыҡҡан тәүге асҡыс уҡ дөрөҫ булып сыҡты. Бер борҙом, ике... Тумбочканың ишеген тарттым. Асылды. Һәрмәйем. Мисәт, штамп-фәлән юҡ. Шунда уҡ тумбочканы бикләп, мөйөштә артһыҙ ултырғысҡа ҡуйыл-ған ҙур булмаған сейф янына барам. Йоҙаҡ тишеген ҡап-лап торған ҡапҡасты этәреп, иң ҙур асҡысты тығам. Бо-рам. Әһә, тыцлай. Борола. Йәнә борам. Эстә нимәлер шылт итте. Сейфтың тимер ишегенең түңәрәк тотҡаһын баҫа тө-шөм, һәм ауыр ишек тауышһыҙ ғына асыла. Һәрмәнәм. Ҡу-лыма кескәй генә ҡалай тартма тейә. «Әһә, бында!» тигән шатлыҡлы уй мейемде ярып үтеп китә. Сейфты бикләргә өлгөрмәйем, коридорҙа аяҡ тауыштары ишетелә. Асҡыс-тарҙы сейф ишегенән алыу-алмауымды ла иҫләмәй, уң ҡулым плащ кеҫәһенә керә — унда минең кескәй генә брау-нинг ята ине. Аяҡ тауыштары яҡынлаша. Ауыр тәҙрә пәр-ҙәһе артына йәшенәм. Ул арала коридорҙа биҙрә тотҡаһы-ның сылтырағаны ишетелә һәм кемдер: «Шайтан, тағы швабрамды онотҡанмын...» — тип һуҡрана. «Уфф... иҙән йыйыштырыусы ҡатын икән...» Коридорҙа аяҡ тауыштары тынғас, артҡы ишектән ишек алдына төштөм...

Икеме, өсмө көндән һуң Эльза янына керҙем. Ҡыҙыҡай ҡан-йәш түгеп илап ултыра ине.

— Раечка, ни эшләргә, ни эшләргә? Мисәт юғалған. Мин шефҡа, мисәтте һеҙгә керттем, тип барам, ә ул, юҡ, керт-мәнең, ти. Комендатураға, гестапоға шылтыратам, тип янай. Шылтыратһа, башым китә бит, Раечка. Уф, ни эш-ләргә, ни эшләргә?..

— Ә һин бер һүҙҙе өҙмә лә ҡуйма: «Мисәтте, штампы-ларҙы мин шунда уҡ һеҙгә кире кертеп бирҙем, ҡалғанын белмәйем», — тип тик тор.

— Мин шулай тим дә бит, ышанмай.

— Ә дөрөҫө нисек?

— Дөрөҫөн әйткәндә, хәтерләмәйем. Ул көндө бит Хво-ростинский мине, әллә ниндәй ҙур офицер менән танышты-рам тип, ресторанға ашыҡтырҙы.

— Ярай, киттем. Тешем һыҙлай, врачҡа күренәм. Ныҡ тор. Бирешмә. Һинең гәйебең юҡ. Бер ни ҙә булмаҫ.

Ишек төбөндә Эльзаға боролоп ҡараным. Ул ҡапыл ябығып, олоғайып киткәйне. Күҙ йәштәре уның биҙәнгән бите буйлап юлыҡ-юлыҡ ағып төшкәйне. Ошо минутта был бер ҡатлы, гәмһеҙ көнләк күбәләк миңә йәл булып китте.

Әммә шунһыҙ мөмкин түгел ине...

# ЕГЕРМЕ БИШЕНСЕ НОВЕЛЛА

## Фәтихов эҙен юғалта

Ғәҙәттә Фәтихов-Федоров үҙе ватҡан, юҡҡа сығарған моторҙарҙы, станоктарҙы ҙур инициатива менән, срогынан алдан торғоҙорға йөкләмә алып, үҙе күҙ буяр өсөн «төҙәтте». Бының өсөн ул цех начальнигы Мануевичтан ғына түгел, судоверфь директоры Беденконың үҙенән дә рәхмәт һүҙе ишетте, бер-ике тапҡыр рейхсмарка менән премия ла алды. Немецтар өс тинлек нәмәне лә ун тин итеп күрһәтә беләләр — бәләкәй генә премияны ла улар ат башы саҡлы алтын биргән һымаҡ тантаналы итеп, бөтә цех эшселәре алдында тапшырҙылар. Беденко «йылы» һүҙҙәрен йәлләмәне.

— Үҙегеҙ беләһегеҙ, большевиктар, һандуғасты йыр менән туйҙырған шикелле, эшселәрҙе «Почет таҡтаһына» яҙып, «ударник», «стахановсы» тигән исемдәр ҡушып йыуандыра, алдай торғайнылар. Ә бэйөк Германия һеҙҙе йыр менән туҡландырырға теләмәй. Ул намыҫ менән эшләгән һәр кешене, ул немецмы, башҡа милләт вәкилеме, тейешенсә баһалай белә. Бөгөн мин, майор Рентелдең туранан-тура әмере буйынса, механик Федоровты йөҙ рейхсмарка менән бүләкләйем. Шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: рейхсмарканы фәҡәт немецтар ғына йөрәтә ала. Кем дә кем механик Федоров һымаҡ намыҫ менән бэйөк Германия өсөн тиреп түгә, шул кеше беҙҙең рәхмәтебеҙҙе аласаҡ һәм рейхсмарка менән бүләкләнәсәк. — Беденко күрәһең, Гитлерҙың сығыштарын кинохроникаларҙа күреп, ҡыланыштарын ныҡ үҙләштергәндер — ул ҡулдарын фюрер шикелле йә кендегенән түбәнгә ҡуя, йә уң ҡулын өҫкә сәйәп ебәрә, күҙҙәрен аларта, төкөрөктәрен сәсә.

— Һерр Федоров, мин, һис икеләнмәй, һеҙгә шулай өндәшә алам, эшселәр һеҙҙең ауыҙығыҙҙан йылы һүҙ көтәләр.

Ниндәй һүҙ әйтергә? Былай ҙа күптәр уны ашарҙай булып йөрөйҙәр. Әгәр көндәрҙең береһендә, ҡараңғы төшкәс, аулаҡ урында лепкәһенә лом менән тондороп, Днепрға ташлаһалар, берәү ҙә быға ғәжәпләнмәйәсәк һәм: «Эткә эт үлеме», — тип кенә шатланасаҡтар. Шуға күрә хәҙер уға ниндәй һүҙ әйтергә?.. Иң дөрөҫө, бер яҡ та аңламаҫлыҡ итеп, уратып-суратып, бутап һөйләргә...

Ул, Беденко янына килгәс, тирә-яҡҡа ҡараған булды. Тамаҡ ҡырҙы. Ҡулъяулығын алып ауыҙ-моронон һөрттө.

— Бер философ әйткән, ы... Уның ниндәй милләттән икәнлеген хәҙер хәтерләмәйем инде: немецмы, ғәрәпме әллә

[illegible]... Юк, һиндус buғай... Ул әйткән... Тукта, ни [illegible] әле ул? Әһә, түгел бер инглиз...

— Инглиздың һүҙе беҙҙең өсөн авторитет түгел, — тип кырт киҫте Беденко.

Федоров-Фәтихов уға карап йылмайып, башын эйеп алды.

— Эйе, эйе, закон түгел. Минең әйтәһе һүҙем шул ине: корһак буш булмаһын өсөн ни эшләргә кәрәк? Уны тултырырға йәки ашарға кәрәк. Ә ашау өсөн ни эшләргә кәрәк? Эшләргә. Эшләргә һәм эшләргә кәрәк, — тип йылмайҙы ул, эшселәргә карап.

Башы булған кеше уның тел төбөн аңлағандыр — ул намыҫ менән эшләү, тырышып эшләү хакында түгел, ә астан үлмәҫ өсөн нисек етте шулай эшләү хакында әйтте. Ә Беденко иһә үҙенсә аңланы.

— Ишеттегеҙме? Эшләргә! — тип кыскырҙы ул.

Шул ук көндә, эш тамамланырға бер сәғәт самаһы калғас, Беденко цех начальнигы Мануевич менән бынан бер аҙна элек Днепр төбөнән күтәрелгән баржаны ремонтлау хакында һөйләшеп ултырғанда, бер төрлө шакыуһыҙ ишек асылды һәм башы ишек башына тейеп торорлок ике метрлап буйлы ашкак пәйҙа булды. Уны күргәс, кабинеттағылар, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, аяк үрә баҫтылар. Ашкак кеше рөхсәтһеҙ-ниһеҙ өҫтәл каршыһындағы тәрән күн креслоға сумып ултырҙы. Плащын сисеп, пинжәк кеҫәһенән сигарет алды. Беденко ялт итеп уға зажигалка һуҙҙы. Теге баш кағып кына рәхмәт әйтте. Ләззәләнеп сигаретын һурҙы. Ауыҙын бөрөп, зәңгәр төтөнөн түшәмгә өрҙө. Ниһайәт, ул телгә килде.

— Һүҙ бар, һерр директор.

— Һөйләгеҙ.

Колға Мануевич яғына ишара яһаны.

— Һөйләгеҙ, һөйләгеҙ, һерр Урбах, ул минең уң кулым... Иң ышанысһы ярҙамсым...

Ерән колға түш кеҫәһенән фоторәсем алып Беденкоға һондо.

— Был кешегә карашығыҙ нисек?

Мануевич күреп калды: был Федоровтың карточкаһы ине.

— О, ул судоверфтә иң актив эшсе. Өҫтәүенә, фольксдойч.

Ерән колға карточканы кеҫәһенә тыкты.

— Фольксдойч...тар араһында ғына түгел, Германияның үҙендә лә һатлык йәндәр бар, һерр директор.

— Бәлки... һәр милләттә лә... — Ә мейеһен бөтөнләй башка нәмә быраууланы. «Ысынлап та, Федоров та шикле

кешеме әллә?.. Юҡ, юҡ, булмаç... Береһенә ышанмағанда ла, мин уға ышанам... Башҡа эшселәр һуҡрана, илке-һалҡы эшләй, хатта ҡаршы әйтеүселәр ҙә бар, ә был... Юҡ, юҡ...» — Ул инде ҡысҡырып әйтте: — Федоровтың репутацияһы саф, һерр Урбах.

— Ә шулай ҙа уға күҙ-колаҡ булығыҙ. Аҙаҡ төп башына ултырып ҡалмайыҡ.

Ул, кергән шикелле, хушлашмай сығып китте. Тик алғы яҡта ултырған секретарға арзанлы кәнфит һондо. Хатта йылмайҙы.

Хроник алкоголиктарҙың да айыҡ көндәре, аяҙ күктәре булған шикелле, һатлыҡ йән Мануевич та ҡайһы саҡ иртәгеһе көнө хаҡында уйлап ҡуя торғайны. Был бигерәк тә эсеп алғас була ине. Әле лә кабинетынан сыҡҡас, ни эшләптер тамағы ҡытыҡлана башланы, һул яҡтағы аҡыл теше һыҙлағандай итте (һынағаны бар, эскеһе килә башлаһа, уның гел теше һыҙлай), танауы араҡы еçен тойҙо. Ул кабинетына инде, ишеген бикләне. Ҡалын ҡалайҙан эшләнгән шкафын асып, башланып, бер-ике генә йотолған шешәне алды. Ҡапыл теше үҙенән-үҙе һыҙлауынан туҡтаны. Ул сисенмәй, йылғасылар кейә торған «кәбеçтәле» фуражкаһын һалмай ғына өçтәле янына ултырҙы. Шешәнең бәкеһен теше менән асты, тәрән итеп һулыш алды ла шешәнең боғаҙын ауыҙына килтерҙе һәм ҡомһоҙланып, ғотғолдатып эсә башланы. Шул секундта уҡ аш юлы буйлап ут йылан төшөп китте. Шешәне күҙе янына килтереп ҡараны ла йәнә, йәнә йотто. Ниһайәт, эсемлек шешәнең төбөндә генә ҡалды. Баш шаулай башланы. Шешәне эйелеп иҙәнгә ҡуйҙы ла, йоҙроғона таянып, эсеп алғас йырлай торған берҙәнбер йырын йырлап ебәрҙе. Ҡушымтаны йырлағанда, ул тағы ла иçерә төштө.

Йөҙ бесәй тауышы сығарып шығырлай торған диванға ятып йоҡлайым ғына тигәндә, ишек шаҡыйылар. Ул башын күтәрҙе. «Ниндәй шайтан йөрөй унда?» — тип ярым иçерек тауыш менән ҡысҡырҙы. Ишек артынан: «Мин, Федоренко», — тип яуапланылар.

— Ә һинме ни, фольксдойч. Давай, ин!

Федоров-Фәтихов керергә өлгөрмәне, ул ҡалай шкафын аса башланы.

— Эсәһеңме, Федоренко?

— Яҡшы кеше тәҡдим иткәндә, ниңә эсмәçкә? — тине Федоров-Фәтихов, йылмайып.

— Вәт рәхмәт. — Ул шкафтан башланмаған шешә, ҡул менән һындырып ашалған икмәк киçәге, сало-шпиг сығарҙы. — Давай төнө буйы гулять итәйек әле, Федоренко. Суҡынып китһен донъяһы! Фронтта һуғышһындар, ә бында



**Ибраһим Абдуллин уҡыусылар менән осрашыуҙа.**

беҙ... беҙҙең эш нисек тә иҫән-имен ҡалыу. Ҡалғаны — трын-трава.

Сәкәшергә ҡырлы стакандарын һуҙғас, Мануевич ярым иҫерек күҙҙәрен Федоров-Фәтиховҡа йүнәлтте.

— Федоренко, әйт әле... һин кем?

Федоров-Фәтихов әҙәпле йылмайҙы.

— Күреп тораһығыҙ, добродей начальник.

— Юҡ... мин күргәне түгел... ә мин күрмәгәне...

— Мин ике битле кеше түгел, добродей начальник. Алдығыҙҙа ниндәй булһам, артығыҙҙа ла шундаймын.

— Мин дә шулай уйлайым. Мин генә түгел, пан директор Беденко ла шулай уйлай.

— Шулай булғас, ниңә сәйер һорау бирәһегеҙ, добродей начальник?

— Ниңә?.. Әйҙә эсәйек әле... — Ул стакандың төбө күренгәнсе эсте лә ҡалған тамсыларын лепкәһенә тамыҙҙы.

— Добродей начальник, һеҙ ашағыҙ әле, ашағыҙ..

Әммә ул башын өҫтәлгә ҡуйҙы ла ғырылдай башланы. Фәтихов хәҙер унан бер һүҙ ҙә ала алмаясағын аңлап сығып китте.

Шикләнергә аҙ ғына ла һылтау булмаһа ла, һәр бер сираттағы «этлектән» һуң (Фәтихов үҙенең диверсияларын, саботаждарын шулай тип атай ине) күренмәгән күҙҙәрҙең уға текәлгәнен тойҙо. Юҡ, юҡ, хәҙергә уға бер кем дә бәйләнмәне, әммә күңеле: «Нур, һаҡ бул, һине күҙәтәләр», — тип киҫәтте. Бына бөгөнгө сығыш ваҡытында ла башҡа

кешеләрҙән бер башҡа оҙонораҡ кеше юҡ-юҡ та уға күҙ ташлап алды, хатта ул трибунаға, артһыҙ ултырғысҡа, күтәрелгәс тә, халыҡ араһынан уның тишеп ҡараусы күҙҙәренә иғтибар итеп алды. Эшселәрҙән: «Кем ул?» — тип һорашты, әммә әйтә алманылар. Бәлки, был «Бурҙың бүрке яна» тигән мәҡәл ғәләмәте генәлер? Юҡ, түгелдер. Теге кешенең завод канцелярияһына ингәнен күреп ҡалды ул. Шикләнеү артты һәм Фәтихов йәнә үҙен йыуатырға тырышты. «Ә кем канцелярияға кермәй... Ә шулай ҙа... Ә шулай ҙа... Мануевичтың ҡылдарын тартып ҡараһаң инде?.. Эсеп алғас, уның теле оҙонайа бит... Ни эшләптер, ул һуңғы ваҡытта гел айыҡ күренә...»

Бәхеткә ҡаршы, ул ингәндә, Мануевич иҫерек ине һәм ҡылдарын тартҡылауҙы көттөрмәй үҙе «сиселә» башланы: «Һин кем, Федоренко?..» Тимәк, уның ҡолағына ла барып еткән... Иртәгә үк ғариза яҙырға ла... Ә иптәштәре? Желедко? Рая? Светлин, Кушнир менән кәңәшмәй китеү килешерме? Ә ниңә килешмәһен? Ә шулай ҙа.. Улар бергә эш алып баралар... Өйҙә ул Дашаға асыҡтан-асыҡ әйтә һалды.

— Даша, мин арҡам менән гестапоның күҙҙәрен тоям. Миңә тиҙерәк эҙ юғалтырға кәрәк.

— Ә нисек эҙ юғалтаһың? Улар һине эштән сығармаясаҡтар. Һин уларҙың күҙ уңында. — Даша, үҙе лә һиҙмәҫтән күптән «һингә» күскәйне инде. Тәүҙә ул ғәфү үтенгеләне, Фәтихов: «Былай миңә яҡынораҡ та, рәхәтерәк тә», — тигәс, Даша уға башҡа «һеҙ» тип өндәшмәне.

— Миңә сирләргә кәрәк һәм мин эшкә йөрөмәгән ваҡытта ла судоверфтә берәй «ЧП» булырға тейеш... Юҡ, батмай. Гестапо ахмаҡ түгел. Ул минең квартиранан да сәхселек итеүемде аңлаясаҡ... Ә Киевтан сығып китеп, урман партизандарына ҡушылыр өсөн, ышаныслы документ кәрәк...

Улар был кисте, дөрөҫөрәге, төндә, төплө генә бер ҡарарға ла килә алманылар. Тиҙ арала Кушнир менән күрешеп кәңәшергә кәрәк ине.

Был юлы кеше күп йөрөгән паркта осраштылар. Ғәҙәттәгесә, өсәү: Желедко, Кушнир һәм ул.

Ғәҙәттәгесә, хәл белешкәндән һуң, Фәтихов үҙенең теләген белдерҙе.

— Сәбәпһеҙ генә, һыуға төшкән таш кеүек, юғалырға ярамай, шикләнеп, эҙләүҙәре бар, — тине Кушнир, ғәҙәттәгесә, төрөпкәһен һурып.

— Беләһегеҙме, мин гестапоның күренмәгән күҙенән дә ҡурҡмайым, — тине Фәтихов. — Уларҙың миңә бәйләнерлек бер генә дәлилдәре, сәбәптәре лә юҡ. Аңлағыҙ, мине был эш кенә ҡәнәғәтләндермәй. Мин аҙаҡ, юҡҡа ҡамауҙан

тыкмай, Киевка килгәнмен, тип үкенермен. Мин бит кадровый командир.

— О судоверфтә һеҙҙең ҡайҙа йәшәгәнлегегеҙҙе беләләрме?

— Асыҡ ҡына әйтә алмайым, әммә күршеләр һуҡыр түгел бит, ят кеше йәшәгәнде күреп торалар. Дөрөҫ, хәҙер ят кешеләр аҙ түгел...

— Һеҙгә йәнә бер-ике квартира табырға кәрәк, Ҡарпа, — тине Кушнир. — Тромбон, һин таба алаһыңмы?

— Ә ниңә, беҙгә күсеп килһен. Беҙ бит әсәйем менән икәү генә йәшәйбеҙ.

— Юҡ, былай ҙа бер ишек алдында өс подпольщик йәшәй...

— Ярай, был хаҡта мин Даша менән һөйләшермен, — тине Фәтихов. — Хәҙер буш квартиралар күп. Минең беренсе эшем судоверфтән шыма ғына китеү.

— Даша яңы квартира табыу менән... — тине Кушнир, ҡысҡырып уйлап, — һеҙ сирләйһегеҙ...

— Мин ул хаҡта уйлағайным, Федор Михайлович...

— Юҡ, ябай сир менән түгел, ә... тиф менән. Немецтар тифтан шайтан уттан ҡурҡҡан шикелле ҡурҡа. Һеҙҙе йогошло сирҙәр больницаһына алып китәләр. Һеҙ яңы квартирала йәшәй бирәһегеҙ...

— Унда нисек йәшәр һуң ул? Аҙыҡ-түлек карточкаһы булмаясаҡ бит, — тине Железко, Кушнирҙың тел төбөн аңлап.

— Раяның әсәһе Вера Макаровна аҙна һайын сало, бойҙай ебәреп тора, шунан өлөш сығарырбыҙ...

— Яҡшы. Ә минең сирләүем хаҡында кем хәбәр итә? Кушнир уйланып торҙо.

— Бер кем дә хәбәр итмәҫ. Һеҙ медпунктҡа инәһегеҙ, температурағыҙ булыу, хәлһеҙләнеү тураһында Дашаға һөйләйһегеҙ... Даша Мануевичҡа үҙенең шигеп еткерә: «Механик Федоровта тиф булыуы бар». Теге: «Иртәгә үк больницаға ятһын», — тип бойора.

— Бойормаһа? — тине Фәтихов. — Һәр ваҡыт теге йәки был ҡарар ҡабул иткәндә уның ыңғай һәм кире яғын уйларға кәрәк.

— Үҙенең сирләгеһе килмәһә, бойорор. Ә артабан ҡайҙа баш төртмәксе булаһығыҙ?

— Печерскийҙағы Түңәрәк башняның эсендә немецтарҙың гараждары урынлашҡан. Ремонт мастерскойында эшләүселәрҙең күбеһе — мадьярҙар. Ерле халыҡ кешеләрен дә эшкә алалар икән. Иғланды үҙем уҡыным. Бәлки, мадьярҙар менән контактҡа кереп булыр. Уларға фюрер

өсөн ҡан ҡойоу ҡыҙыҡ түгел бит, арала был һуғыш менән риза булмаусылар һис шикһеҙ булырға тейеш...

Василь Кушнирға: «Күрҙегеҙме, теге көндө мин ни әйткәйнем?» — тигән һымаҡ ғорур ғына ҡарап алды.

Желедко түҙмәне.

— Их, шулар аша немец телендәге машинка ла табып булһа... Бланкылар бар, мисәт бар, ә кешеләрҙе «герман армияһына йылы кейем әҙерләргә» командировкаға ебәрә алмайбыҙ бит.

— Ниңә? — тине Фәтихов.

— Командировка ҡағыҙының бер яғында украин телендә, икенсе яғында немецса яҙылырға тейеш.

— Ул сағында миңә мөмкин саҡлы тиҙерәк Печерскийҙа эшкә урынлашырға кәрәк...

— Изге сәғәттә! — тине Кушнир, уның ҡулын ҡыҫып.
— Бер нисә көндән сиргә һабышам да...

— Ә ниңә иртәгә үк түгел? — тине тәҡәтһеҙ Желедко.

— Ярамай. Улар минең шикләнеүемде һиҙмәһендәр. Хәҙергә бөтәһе лә элеккесә ҡала. Һеҙ ҙә бер нәмә лә эшләмәйһегеҙ. Бөтәһе лә тынысланғас, мин ҡапыл сирләп китәм.

— Мин һеҙҙе оҙата барам, — тине Желедко, бер ҡарағанда «һеҙ», икенсе ҡарағанда «һин» тип өндәшеп.

— Оҙаҡ бармайһың, Василь. Тиҙҙән комендант сәғәте башланасаҡ. Һиңә һаман тәүлек буйына ярай торған аусвайс ала алмайым. Мануевич кергән һайын вәғәҙә итә. Ниңә уның өсөн шул саҡлы тырышаһың, тип төпсөнә. Беренсенән, ул минең алыҫ булһа ла туған тейешле кеше, мин әйтәм, икенсенән, ул яҡшы электрик, уны теләгән ваҡытта төн уртаһында ла саҡыртырға, «егергә» мөмкин. Иртәгә тағы керәм әле. Дөрөҫ, һиңә ундай аусвайс биреү ҙә хәтәр. Сығырҙан сығып китеп, ахмаҡлыҡ эшләп ҡуйыуың бар.

— Эшләмәм. Һинең рөхсәттән, Федор Михайлович рөхсәтенән башҡа бер нәмә лә эшләмәм.

— Юҡ, ситуацияһына ҡарап, рөхсәт һорап тормай ҙа эшләргә мөмкин, әммә ҡыҙмай, ярһымай, уйлап эш итергә кәрәк.

— Борис Федорович, әгәр мин дә һеҙҙең янға күсһәм? — тине Желедко.

— Кәрәкмәй. Хәйер... Тора-бара күҙ күрер. Йә, ярай, борол.

— Борис Федорович, ҡара әле, — тине Василь, Почта майҙанында төрлө төҫтәге электр лампочкалары менән биҙәлгән ҙур шыршыға күрһәтеп. Лампочкалар бер яналар, бер һүнәләр ине. — Сволочтар, рождествоға әҙерләнәләр. Төндә шыршыларын турап киткәндә инде?..

— Бала-сағаланма, Василь. Уның менән һин бер нәмә лә кыра алмайһың, тик уларҙың асыуын ғына ҡабартаһың. Ә беҙ уларҙың асыуын ҙурыраҡ эштәр менән ҡабартырға тейеш. Борол, борол.

— Борис Федорович, һеҙ булмаһағыҙ, ихтимал, мин күптән теге донъяла булыр инем.

— Шуға күрә теге донъяға ашыҡмайыҡ, Василь дуҫкай. Ярай, мә бište.

— Уп булһын.

Улар ҡаты итеп ҡулдарын ҡыҫыштылар.

Фәтихов, Желедко күҙҙән юғалғансы, боролоп ҡарап торҙо. Унан төрлө төҫтәге йондоҙҙар-лампочкалар емелдәгән шыршыға табан боролдо. «Оҙаҡламай Яңы йыл башланасаҡ... Уның ғаиләһе был минуттарҙа ҡайҙа икән? Яңы йылды ҡаршы алырға йыйыналармы? Әллә уның ҡайғыһы юҡмы? Уны иҫкә алалармы икән? Хәйер, ни эшләп алмаһындар инде. Улар бит алты йылға яҡын ике йөрәк бер булып йәшәнеләр... Ҡыҙы һуғыштан һуң уны танырмы икән? Хәйер... Рима уға көн һайын атаһының карточкаһын күрһәтә торғандыр...» Ҡапыл уның, әкиәт батырына әйләнеп, ғаиләһе янына осоп ҡайтҡыһы, икеһен ҡосаҡлап, урталарында ултырғыһы, һөйгөһө, иркәләгеһе килде...

Ә Почта майҙанындағы шыршы уттары бер яна, бер һүнә, әйтерһең, уны үсекләйҙәр...

Бөтәһе лә улар уйлағанса барып сыҡты. Бер нисә көндән судоверфтең медпунктында медсестра булып эшләүсе Даша Поздняк, тыны-көнө бөтөп, цех начальнигы Мануевичтың янына йүгереп килде.

— Пан начальник, механик Федоров ауырый, тәне янып бара. Тиф түгелме икән, тип шикләнәбеҙ. Уны һис кисектермәй больницаға һалырға кәрәк.

Мануевичтың баш күтәрмәй аҙна буйы эскәндән һуң һыуҙа оҙаҡ ятҡан бүрәнә шикелле бүртенгән күҙ ҡабаҡтары шешенгән. Күренеп тора — кәйефе юҡ. Олоғайған, таушалған. Күҙҙәрендә донъяға ғәмһеҙ, иғтибарһыҙ ҡарау тойола.

— Яҡшы, — тине ул, башын күтәрмәй генә.

— Ни эшләргә бойораһығыҙ, пан начальник? — тине Даша, уның «яҡшы» тигән һүҙенең мәғәнәһенә төшөнмәй. Был нимә аңлата икән? Больницаға һалыуҙымы, Федоровтың ҡапыл ауырып китеүенме?

— Янында спиртың юҡмы, Даша?

Даша Мануевич янына һирәк инә, әммә уның араҡы менән дуҫ булғанлығын белеп, кергәндә халат кеҫәһенә спирт һалынған кескәй генә йәлпәк шешә һалып инә.

— Аҙырак бар ине, пан начальник...— Ҡеҫәләрен аҡтарған була. — Медпунктта ҡалмаған булһа. Әһә, бында.

— Ә-ә... Былай булғас... — Ул, йәлпәк шешәне асып, һыу ҙа ҡатыштырмай эсмәксе булғайны, иңәлер тыйылды. — Бөгөн үк, хәҙер үк Федоренконы больницаға оҙатығыҙ.

Даша ишеккә боролдо.

— Һальт! — тине Мануевич немецса. — Федоренкоға тиҙерәк һауығыуын теләүемде әйт. Яраттым мин ул хохолды.

— Әйтермен, пан начальник.

Даша сығып киткәс, Мануевич спиртлы шешәне тотоп уйға ҡалды. Немец Мәскәүҙе лә, Ленинградты ла ала алмай, ҡышҡы оборонаға күскәс, баштарында аҙ ғына мейеләре булған кешеләрҙең, хатта ҡайһы бер хыянатсыларҙың, йөрәк төптәрендә шикләнеү көйәһе ҡыймылдай башланы. «Былай булғас, Гитлерҙың блицкригы барып сыҡманы бит...» Эскесе, принципһыҙ, хөкүмәт малын урлаған өсөн ике тапҡыр төрмәлә ултырып сыҡҡан Мануевичтың ҡара йөрәгендә лә, ихтимал, шундай осҡон хасил булғандыр, ихтимал, ул, ысынлап та, Федоров-Фәтиховты яратҡандыр һәм уның гестапо тәпеһе аҫтында ҡалыуын теләмәгәндер һәм ана шуға күрә уның ҡапыл китеү хәбәрен «яҡшы» һүҙе менән ҡаршы алғандыр. Мануевич йәлпәк шешәләге спиртты һыу ҡатыштырмай, тын алмай эсеп бөтөрҙө лә үҙенең яратҡан йырын йырлап ебәрҙе.

Фәтихов шул көндө үк, күршеләр керә-сыға йөрөгәндә, ҡултыҡ аҫтына төйөнсөк ҡыҫтырып, Дашалар квартираһынан сығып китте һәм Дашаның әхирәте йәшәгән Бассейн урамындағы йортта урынлашты.

Даша уны оҙата сыҡты. Фәтихов уның бер ҡасан да, хатта ҡайғырғанда ла, матурлығын юғалтмаусы асыҡ, мөләйем күҙҙәренә тултырып ҡараны. Уның был ҡарашында Дашаға сикһеҙ рәхмәт кенә түгел, бәлки әйтелмәгән мөхәббәт тойғоһо ла булғандыр. Әйтелмәгән мөхәббәт ҡайһы сағында ҡысҡырып әйткән «яратам» һүҙенән дә көслөрәк һәм ғүмерлерәк була бит ул.

— Яңы йылға кил, Даша.

Иламаҫ өсөн аҫҡы иренен тешләгән Даша баш ҡаҡты.

Фәтихов, төрлө төҫтәге күңелле шыршыларға ҡарамаҫҡа тырышып, шәберәк атланы. Әммә башҡа йылдарҙа үткәрелгән аҙ ғына һағышлы, ғәмһеҙ шаян Яңы йыл байрамы күңелдән китмәне...

Яңы йыл... Фәтиховтың иң яратҡан байрамы. Алты тапҡыр Яңы йылды Киевта ҡаршы алды ул. Ҡайһы йылдарҙа

Улар иртәнге дүрткә, бишкә тиклем ҡала ҡыҙырып йөрәйҙәр. Улар ғына түгел, был көндө бөтә Киев йоҡламай ине. Крещатик урамы шат, аҙ ғына иҫерек, бала-саға һымаҡ ғәмһеҙ халыҡ менән тулған була торғайны. Танышы ла, таныш булмағаны ла бер-береһен Яңы йыл менән, яңы бәхет менән ҡотлай. Ҡыйыуыраҡ, йәшерәк ҡатын-ҡыҙҙар компанияларынан айырылып, командирҙарҙы ҡосаҡлайҙар, үбәләр: «Яңы йыл менән, иптәш командир! Алдағы йылда ла илебеҙ имен булһын!» Был һүҙҙәрҙән, был үбеүҙән һин үҙеңде тағы ла ғорурыраҡ, яуаплыраҡ тояһың — ил, халыҡ һиңә, үҙенең ҡоралды көсөнә ышана, таяна.

Киевтан үҙен ваҡытлыса Тернополь өлкәһенә күсергәс, ул Яңы йылды ҡатыны һәм ҡыҙы менән өйҙә генә ҡаршыланы. Ике йәшлек Ида йоҡлап киткәс, улар, баланы уятмаҫ өсөн, шампанский һалынған ябай стакандарҙы саҡ ҡына сәкәштеләр, эстеләр, үбештеләр, бер-береһенә оҙон, матур ғүмер теләнеләр. Барыбер күңел тыныс түгел ине. Германиянан дары еҫе аңҡыған һуғыш еле танауға бәрелеп тора. Ә шулай ҙа ҡырҡ беренсе йылдың һуңғы тыныс йыл буласағына ышанғыһы килмәй. Ни эшләйһең бит, кеше өмөт менән йәшәй, хатта өмөт менән үлә... «Рима, — тине Нур, ҡатынын алдына ултыртып, — хәҙер мин һиңә яратҡан йырымды йырлайыммы...» Һәм ул ирендәрен сутылдатып йоҡлап ятыусы ҡыҙына йылмайып ҡарап алды ла һаҡ ҡына йырлап алып китте: «Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй, Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй, ай тыуғанда тыуҙың мәллә, ай нуры бар үҙеңдә...» Риманың был йырҙы күп тапҡырҙар ишеткәне бар, моңо йөрәгенә һеңгән — һүҙҙәрҙе әйтмәй генә ул да иренә ҡушылып йырланы.

Нур стакандарға шампанский ҡойҙо.

— Беҙҙә, Өрьяҙыла, Яңы йыл тыуҙы, Рима. Әйҙә, Өрьяҙы Яңы йылы өсөн! Башҡортостан Яңы йылы өсөн ошо ҡояш эсемлеген йотайыҡ. Йыл имен булһа, йәренгә, юҡ, инде быйыл, отпускыны мотлаҡ тыуған ауылымда үткәрербеҙ...

— Һин йыл һайын шулай тиһең, Нур, ә үҙең алып ҡайтмайһың. Минең ата-әсәңде, һин тыуып үҫкән ауылды күргем килә. Һин уны шул саҡлы матур итеп һүрәтләйһең...

— Был юлы об-яза-тель-но ҡайтабыҙ, Римаҡай!..

Фәтихов, үҙе лә һиҙмәҫтән: «Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәй...» — тип йырлай башланы. Уға ҡаршы осраған патруль һалдаттары: «Русь эскән», — тип көлөшөп үттеләр. Был һүҙҙәрҙән һуң уның ҡапыл иҫергеһе килеп китте. Уның бит, ошо йәшенә етеп, эсеп иҫергәне юҡ.

Железко: «Дошманға үс итеп, Яңы йылды элекке кеүек күңелле итеп ҡаршылайыҡ. Беҙгә, Боричев токка кил», —

тип саҡырҙы. Әллә барырғамы?.. Юҡ, өйҙән бер ергә лә сыҡмаясаҡ. Алыҫ Өрьяҙыны, Бөрө педтехникумында уҡығанда Яңы йылдарҙы ҡаршылағанды хәтерләп, яңғыҙы ғына ҡырҡ икенсе йылды ҡаршы аласаҡ. Миллионлаған совет балалары был көндө төрлө уйынсыҡтар менән биҙәлгән шыршы тирәһендә шат бейей алмаясаҡ, Ҡыш бабай уларға бүләктәр килтермәйәсәк. Гитлер Германияһы уларға ҡанға мансылған ут энәле шыршылар килтерҙе...

Икенсе көндө иртүк Даша менән Петя уны Яңы йыл менән ҡотларға килде. Петя, ишектән инеү менән, уға ташланды: «Борис ағай...» — тине лә быуылды. Ул Петяның ут йөрәкле генә түгел, ҡыҙҙар һымаҡ нескә күңелле икәнлеген дә белә.

— Ничауа, Петенька, беҙҙең Яңы йылдарыбыҙ күп әле.— Ул инде ҡустыһы һымаҡ яҡын кешегә әйләнгән Петяның йомшаҡ сәсенән һыйпаны, үҙенең дә күңеле тулды, әммә һиҙҙермәҫкә тырышты, ситкә боролоп, тамағына тығылған төйөрҙө йотто.

Даша, төйөнсөгөн һүтеп, өҫтәлгә шампанский һәм бер ус кәнфит ҡуйҙы.

— Шампанский?.. Мәскәү кәнфите?! — тине Дашаның әхирәте, йорт хужаһының ҡыҙы, оҙон, нескә кәүҙәле, нескә тауышлы Нина.

— Борис, ас шампанскийҙы, — тине Даша, команда биреп. — Минең әсәйем: «Утын ярыу, вино шешәһе асыу — ирҙәр эше», — ти ине. — Ул шампанскийҙы Нурға һуҙҙы. — Беҙҙә шундай ғәҙәт бар ине: һәр яңы йылды ҡаршылағанда, алдағы Яңы йыл өсөн берәй шампанский ҡалдырыу. — Ул ғәйепле кеше һымаҡ йылмайҙы. — Ә бына 1943 йылға шампанский ҡалмай инде.

— Беҙҙең халыҡ, баш иҫән булһа, бүрек табылыр, ти, Дашенька. Ниночка, бокалдар әҙерләгеҙ.

Шампанский асылды, хрусталь бокалдарга ҡойолдо. Һәр кем Фәтиховҡа ҡараны. Унан аҡыллы һүҙ көтәләр ине.

— Дуҫтар, моғайын, беребеҙ ҙә ҡырҡ икенсе йылды шулай ҡаршыларга тура килер тип уйламағандыр... Ғәҙәттә, Яңы йылда яңы бәхет теләйҙәр. Традицияны боҙоп шуны әйтәм. Ҡырҡ өсөнсө йылды ҡаршылағанда, илебеҙҙә бер генә оккупант та ҡалмаһын ине. Был бөтә совет халҡы өсөн уртаҡ бәхет буласаҡ.

Яй ғына ура ҡысҡырҙылар. Сәкәштеләр. Эстеләр. Аҙаҡ аҡрын ғына йырланылар. Фәтиховтан татарса, башҡортса йырлауҙы үтенделәр.

Ул ашыҡмай ғына, ауыҙы менән түгел, әйтерһең, йөрәге менән йырлап алып китте.

Кара ла гына урман, ҡараңғы төн,
Яҡшы аттар кәрәк үтергә...

Ул йырын ярты юлда туҡтатты.

— Туҡта әле, ниңә беҙ моңаябыҙ? Аҫырға алып китеп бармайҙар ҙа беҙҙе. Әйҙәгеҙ, бөтәбеҙгә лә аңлайышлы, икенсе йырҙы... — Һәм ул күкрәк тауышы менән Бөйөк Ватан һуғышының рәсми булмаған гимнына әйләнгән «Изге һуғышты» башлап ебәрҙе.

Вставай, страна огромная,
Вставай на смертный бой...

Йыр бөтәһен дә ярһытты, ашҡындырҙы. Ошо минутта уҡ урамға атылып сығып, тәүге осраған фашисты дөмөктөргә, мөғжизәүи көс менән осоп барып, Гитлерҙың муйынын һындырғы, илебеҙҙе, бысраҡ иҙәнде сыра бысағы менән ҡырып йыуған һымаҡ, дошмандан таҙартып, элеккесә ирекле, бәхетле илгә әйләндерге килде.

## ЕГЕРМЕ АЛТЫНСЫ НОВЕЛЛА

### Ун алты матрос

Күп тә үтмәне, Фәтихов Печерскийҙағы түңәрәк башняла урынлашҡан немецтар гаражына электрик-механик булып эшкә урынлашты. Хәҙер ул Федоров түгел, Борисов Борис ине.

Гараж ике ҡатлы түңәрәк бинаның ишек алдында урынлашҡан. Өҫкө ҡатта казармалар, немецтар, мадьярҙар йәшәй, ә аҫҡы ҡатта төрлө мастерскойҙар. Днепр яғына арка рәүешендәге берҙән-бер киң, бейек ҡапҡа сыға. Урам аша һалынған өсәр, дүртәр ҡатлы йорттарҙа — казармаларҙа һуғышҡа саҡлы Ҡаменев исемендәге хәрби-пехота училищеһы булған, ә хәҙер бында немецтарҙың ниндәйҙер штабы. Һаҡ көслө — яҡын барырлыҡ та түгел.

Фәтихов-Борисов тактикаһын үҙгәртте: бер кеше менән һөйләшмәй, башын эйеп, ни ҡушһаң, шуны эшләп йөрөүсе йыуаш кешегә әйләнде.

Ул бер һүҙгә ҡушылмай, ҡыҫылмай, ««ә»-гә — «ә», «йә»-гә — «йә», шуның менән эш теүәлләнә. Мастерскойҙа эшләүселәрҙең күбеһе мадьяр һалдаттары ине, әммә үҙ ихтыяры менән ялланған кешеләр ҙә байтаҡ ҡына. Улар был йыуаш, баҫалҡы электрикка, механикка ҡарап быш-быш килделәр: «Был бәндә йә гестапо агентылыр, йә плендан ҡасҡан һалдаттыр, йә аҡылын юя башлаған иҫәүәндер...»

Ҡыҫҡаһы, вольнонаемныйҙар уны яҡын ебәрмәҫкә, уның

менән аралашмаҫҡа тырыштылар, ә мадьярҙар рус телен белмәйҙәр...

Немецтарға иһә шундай кешеләр кәрәк тә ине. Гестапо актив булған, күҙгә кереп барған кешеләргә ҡарағанда ана шундай бисара мәхлүҡтәргә ныҕыраҡ ышана торғайны. Немецтар ни әйтһә, Фәтихов-Борисов ғәйепле кеше һымаҡ йылмайҙы, «яволь» тип баш эйҙе. Шуға күрә немецтар ҙа, беҙҙекеләр ҙә уны «Яволь» тип йөрөттөләр.

Телдәргә һәүәҫ, сит телде тиҙ үҙләштереүсе Фәтихов-Борисов бик тиҙ арала мадьярса төшөнә башланы. Етмәһә, мадьяр теленең төҙөлөшө, һүҙҙәре ниндәйҙер дәрәжәлә уның туған теленә яҡын ине һәм еңел ятланды. Өҫтәүенә, ул мадьяр һалдаттарынан «Немец-мадьяр теле һүҙлеген» ҡулға төшөрҙө һәм көн һайын егерме-утыҙ мадьяр һүҙен ятлауҙы бурыс итеп ҡуйҙы. Бер ай тигәндә, ул мадьярса икмәклек-тоҙлоҡ аңлай башланы. Ысынлап та, мадьярҙарҙың береһе лә Гитлер өсөн, «мең йыллыҡ рейх» өсөн ҡан ҡойорға атлығып тормай ине. Алан-йолан ҡаранып, һаҡ ҡына булһа ла швабтарҙы һүгәләр. Быға сәбәп тә бар ине шул: немецтар, асыҡтан-асыҡ әйтмәһәләр ҙә, мадьярҙарға хужа көтөүсегә ҡараған шикелле ҡарайҙар, иң ауыр, бысраҡ эштәрҙе уларҙан эшләтәләр, ә үҙ-ара «мадьяр сусҡалар» тип кенә йөрөтәләр. Венгрҙар аңра халыҡ түгел, быны аңлайҙар, милләтен Гитлерға һатҡан Хортиҙы ла рәхмәт һүҙе менән иҫкә алмайҙар.

Фәтихов-Борисов тиҙ генә мадьярҙар менән контактҡа керергә тырышманы, халыҡ юҡҡа, ашыҡҡан ашҡа бешкән, тимәгән. Күҙәтте. Һынаны. Көттө. Әммә ике осраҡ уға этәргес булды.

Ғинуар аҙаҡтарында ул ҡот осҡос, бер үк ваҡытта иҫ киткес күренешкә шаһит булды. Бында ғинуар һалҡындары ул тыуып үҫкән яҡтарҙыҡы һымаҡ булмаһа ла, терегөмөш бағанаһы, кәм тигәндә, ун биш градусты күрһәткәндер. Фәтихов, ғәҙәттә, эшкә — бер, эштән икенсе юл менән йөрөнө. Көн һайын ул киндер картаға күҙ ташланы — немецтар, бик ирекһеҙҙән, беҙҙең Мәскәү янындағы контрһөжүмебеҙҙең һөҙөмтәһен картаға төшөрәләр ине. Улар быны «фронтты тигеҙләү», «ҡышҡы уңайлы позицияларға күсеү манёвры» тип баһаланылар.

Бер көн ана шулай ашыҡмай ғына эштән ҡайтып барғанда Фәтиховтың ҡолағына йөрәкте ҡыҫып алырлыҡ таныш моң ишетелде.

> Раскинулось море широко,
> А волны бушуют вдали,
> Товарищ, мы едем далеко,
> Подальше от нашей земли...

Фәтихов туктаны: «Ҡайҙан ишетелә был йөрәктең аҫтан өҫкә килтереүсе үлемһеҙ матрос йыры?..» Ул арала икеһе малай: «Севастополь моряктарын атырга алып китеп баралар», — тип ҡысҡырышып, Крещатикка табан йүгерҙеләр. Фәтихов та аҙымдарын шәбәйтте. Йүгерә-атлай башланы. Крещатикка сыҡҡас, уңга, һулга ҡараиды. Ана улар... Автоматчиктар һәм бүрене сәйнәп ташларлыҡ овчаркалар уртаһында китеп баралар. Бөтәһе лә ялан аяҡ, өҫтәрендә диңгеҙ тулҡындарын хәтерләтеүсе тельняшка, баштарында таҫмалары һалҡын ғинуар елендә елберләүсе матроскалар... Берәү, икәү... Бишәү... Ун бер... Ун биш... Ун алты... Ә ниндәй горур баралар улар, әйтерһең, үлемгә түгел, карингарынан парадҡа төшәләр... Ул арала йыр үҙгәрҙе.

Наверх, товарищи! Все по местам!
Последний парад наступает.
Врагу не сдается наш гордый «Варяг»,
Пощады никто не желает...

Был күренештән таш йөрәкле, юҡ, бөтөнләй йөрәктәре булмаган кешеләр ҙә ирер ине, ә автоматчиктар, таштан да йәнһеҙерәк ҡиәфәттә дағалы итектәре менән таҡ-тоҡ баҫып, бер нәмә булмаған кеүек бара бирәләр.

Тротуарҙан ҡарап тороусы берәү ҡарлыҡкан тауыш менән моряктарга ҡушылып йырлай башланы. Автоматчик, тауыш килгән яҡҡа борола төшөп, автоматтан һауаға атты һәм «швейген!» тип ҡысҡырҙы, әммә теге ҡурҡманы, тагы ла ҡысҡырыбыраҡ йырларға тотондо. Моряктарҙың береһе, быны ишетеп, тауыш килгән яҡҡа боролоп, матроскаһын һалып болғаны һәм: «Беҙҙе йыр менән иҫкә алығыҙ, туғандар!» — тип ҡысҡырҙы...

Фәтихов бик оҙаҡ йоҡлай алмай ятты. Бер яҡтан икенсе яҡҡа боролдо, күҙен йомһа, ун алты матрос күренде, улар тора-бара ишәйҙе, бөтә Крещатикты ҡаплап алды, тотош колоннаға әйләнде, ә ҡолаҡҡа таныш йыр диңгеҙ штормы һымаҡ яңғыраны. Был штормды һүндерергә лә, еңергә лә мөмкин түгел ине. Был — Йәшәү, Ирек һәм Еңеү штормы ине.

«Етте. Күпме көтөп ятырга мөмкин? Эш итергә, хәрәкәт итергә кәрәк. Үлем берәүгә лә ике килмәй. Ана, моряктар үлемгә нисек киттеләр...»

## Автомашиналар фронтҡа китә алмай...

Ә икенсе көндө ул Имре Киш тигән мадьяр лейтенанты менән танышты. Фәтихов-Борисов был ыҫпай кейемле, сандыр йөҙлө, Австро-Венгрия короле Франц-Иосиф һымаҡ

мыйыҡлы йәш лейтенантҡа мастерскойға килгән көндәрҙә үк иғтибар иткәйне. Тышҡы ҡиәфәте менән хеҙмәт итергә яратыусы офицерға оҡшаһа ла, ул ҡайһы ере менәндер Фәтиховтың күңеленә ятты: һалдаттарға аҡырмай, екермәй, яурындарына ҡулын ҡуйып ҡына бойора, немец офицерҙары алдында үҙен шаҡтай иркен тота, «аршын йотоп» төҙ ҡатмай, улар киткәс «шваб» тип ысҡындыра. Йыш ҡына ниндәйҙер шиғыр уҡый. Шиғырҙың ҡайһы бер һүҙҙәрен Фәтихов аңлаһа ла, уның ни нәмә хаҡында, кем әҫәре икәнен белә алманы. Ишеткәне бар, мадьярҙар — Шандор Петефиҙы, рустар—Пушкинды, Лермонтовты, украиндар—Тарас Шевченконы, татар-башҡорттар Ғабдулла Туҡайҙы, Мәжит Ғафуриҙы яратҡан һымаҡ яраталар, ти. Шуға күрә көндәрҙең береһендә блокнотына ниҙер төрткөләп, Фәтиховҡа таныш шиғырҙы көйләп ултырған офицер янына килде. Йылмайып: «Шандор Петефимы?» — тип русса һораны. Офицерҙың ауыҙы йырылды. Ҡапыл ул тәкәббер офицерҙан ябай, яғымлы егеткә әйләнеп китте. «Хат. Хат. Петефи. Петефи», — тине ул, урынынан тороп. Венгр телендә тағы ниҙер әйтте. Фәтихов: «Аңламайым», — тигәнде белгертеп, яурынын һелкетте. Офицер немец теленә күсте, Фәтихов бармағын ирененә тейҙереп алды. Офицер аңланы. Улар мастерскойҙан тышҡа сыҡтылар. Фәтихов немецса уға: «Эштән ҡайтҡанда, мине ҡыуып етегеҙ», — тине. Теге һүҙһеҙ генә баш ҡаҡты...

Тәүге көндө улар политика, һуғыш хаҡында һүҙ ҡуҙғатманылар. Ә һуңынан...

Фәтихов Имре Киштан Петефиҙың шиғырҙарын уҡытты, мәғәнәһен аңламаһа ла, шиғырҙың музыкаль яңғырауына һоҡланды. Хәйер, йәш лейтенант һәр шиғырҙың эстәлеген немесса аңлата барҙы һәм аҙаҡ әсенеп әйтә һалды.

— Ә немецтар Петефиҙы яратмайҙар...

— Ниңә? Минең белеүемсә, Петефи — бик халыҡсан шағир. Ул тыуған илен үлеп яратҡан һәм үҙен Венгрия өсөн фиҙа ҡылған.

— Ана шуның өсөн уны яратмайҙар ҙа инде, — тине Киш ниндәйҙер бойоғоу менән. — Ул бөйөк патриот. Революционер.

Был фраза Киштың эсендә ниндәй ут яныуы хаҡында асыҡтан-асыҡ әйтмәһә лә, нимәлер һиҙҙертә ине инде.

Бер аҙ һүҙһеҙ барғас, Фәтихов һыҙгыра башланы. Киш ҡапыл туҡтаны. Уның беләгенән сытырлатып тотто. Фәтихов ҡараны: Киштың ҡуңыр күҙҙәрендә ут яна ине.

— Был бит «Сильва»! Һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ?

— Уны мин генә түгел, бөтә донъя белә. Венгр халҡы һан яғынан әллә ни күп түгел, әммә донъя культураһына,

бигерәк тә музыка бинаһына, ул алтын кирбестәрҙе аҙ һалманы. Лист, Легар, Кальман...

Был һүҙҙәр Киштың күңел ҡапҡаһын шар астылар.

— О, Венгрия... Ниҙәр генә күрмәне ул үҙенең мең йыллыҡ тарихында... Кемдәр генә уны иҙмәне, кемдәр генә ҡол итергә тырышманы. Ә ул барыбер бирешмәне; телебеҙҙе лә, культурабыҙҙы ла онотманыҡ, юғалтманыҡ, инде унын тауышында тәүәккәллек, ҡәтғилек ишетелде.

Фәтихов иһә майға ут һипте.

— Шулайын шулай ҙа... Ә бына Хорти үҙе теләп Гитлерға хеҙмәт итә. Венгр халҡын һуғышҡа йәлеп итеп, ғәйепһеҙгә уның ҡанын ҡойҙора.

Киш дарыға әйләнде.

— Хорти шваль. Хорти мадьяр түгел. Гитлер лакейы.

Киш был һүҙҙәрҙе шундай асыу менән әйтте, уның нәфрәте яһалма түгел ине. Һис шикһеҙ, ул фашизмды, Гитлерҙы йәне-тәне менән күрә алмай.

— Шулай булғас?..

— Нимә — шулай булғас? — тип һораны Киш.

— Ирек яратыусы венгр халҡы ниңә Хортиға түҙеп йәшәй һуң?

— Һә-әй... — Киштың был «һәйендә» шул саҡлы әрнеү, әсенеү ине, Фәтихов һүҙҙе башҡа дауам итергә теләмәне — хәҙер мадьярҙың кемлеге уға аңлашыла ине. Хушлашырға ҡулын бирҙе.

— Висонтлошра *.

— Висонтлошра.

— Беҙҙе бик алыҫ ҡәрҙәштәр тиҙәр!

— Нисек? Рустар һәм мадьярҙармы?

— Мадьярҙарҙы ҡасандыр беҙҙең яҡта, Ағиҙел буйҙарында, йәшәгән, тиҙәр.

— Ә ул яҡтан... — Киштың тауышында һағыш һиҙелде. — Бәләкәй саҡта, гимназияла уҡығанда уҡ, мадьярҙарҙың тарихын өйрәнгәндән һуң уҡ, Ағиҙел буйҙарынан гиҙеп килергә хыялландым, бына хәҙер яҡынлашып киләм, ә һаман да «барам»...

— Һуғыштан һуң... Алла бойорһа...

Ошо урында улар айырылыштылар.

Бер нисә көндән Фәтиховҡа Киш менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә сәбәп табылды.

Ғәҙәттә, һалҡын ҡанлы, ипле лейтенант, шартлар хәлгә етеп, уның янына килде лә немецса һөйләнә башланы. Фәтихов, ғәйепле кешеләй йылмайып: «Я... по-немецски нихт говорю...» — тине. Киш үҙенең хаталаныуын аңланы. Теге

---

* Һау булығыҙ (*венгерса*).

көнгө шикелле, эштән һуң Киш Фәтиховты юлда ҡыуып етте.

— Сэрвус, Борисов! *

— Сэрвус, лейтенант! Йә, хәҙер һөйләгеҙ, — тине Фәтихов, йылмайып.

— Сволочь, шваб. Фашист. Мадьярҙар бейергә лә себеш ашарға ғына оҫталар, башҡа нәмә ҡулдарынан килмәй, тип беҙҙән көлә. Дисно! **

— Кем шулай талантлы, тырыш мадьяр халҡынан көлә? — тине Фәтихов, уның нәфрәтен уртаҡлашып.

— Мастерской начальнигы Штайн. Сволочь. Фашист. Күрһәтер инем мин уларға себеш ашағанды...

Фәтихов! Бына хәҙер ваҡыт! Хәҙер моменттан файҙаланып ҡал! Һәм ул файҙаланды.

— Һеҙ яңғыҙығыҙ ғына уға бер нәмә лә күрһәтә алмайһығыҙ, пан Киш.

— Ә ниңә яңғыҙым ғына? Һәр икенсе мадьяр һалдаты швабтарҙы күрә алмай.

— Ә рустарҙың... украиндарҙың береһе лә уларҙы күрә алмай, — тине Фәтихов, уның һүҙҙәрен ҡеүәтләп.

— Их... Берәй рус партизан менән танышырға... Киевта уларҙы байтаҡ, тиҙәр...

Фәтихов яуап бирмәне. Һүҙһеҙ барҙылар. Бер аҙҙан ул туҡтаны ла Киштың күҙҙәренә тура ҡарап һораны.

— Киш, миңә яҙыу машинкаһы кәрәк! Немец шрифы менән.

Киш тәүҙә ҡурҡып киткәндәй булды. Унан аҡрын ғына йылмая башланы.

— Машинка?.. Ниңә ул?

— Шандор Петефиҙың шиғырҙарын яҙырға.

Киш аңланы. Бәлки, ул күптән ана шундай кешене эҙләп тә йөрөгәндер.

— Табырға мөмкин, әммә немец шрифы түгел, ә мадьяр телендә...

— Һуң, һеҙҙең хәрефтәр уртаҡ бит — латинса.

— Уныһы шулай...

Ана шул көндәрҙән алып Фәтихов ҡулға алынғанға саҡлы уларҙың элемтәләре өҙөлмәне. Киш үҙе туранан-тура диверсияларҙа, акцияларҙа ҡатнаша алмаһа ла, бөтә көсөнә Фәтиховҡа ярҙам итеште: машинка, һалдат мундирҙары, хатта шартлатҡыстар менән тәьмин итте. Немец телендәге машинка ҡулға төшөүе тураһында Фәтихов — Дашаға, Даша — Желедкоға, ул Кушнирға хәбәр иттерҙе. Ма-

---

* Сәләм *(венгерса).*

** Суҫҡа *(венгерса).*

шинканы һүтеп, Петя бер нисә юллап Куницаның парикмахерскийына илтеп ҡуйҙы. Ғәҙәттә, парикмахерскийға килтерелгән нәмәләр, листовкалар алғы яҡтағы сисенә торған бүлектә ҡалдырыла торғайны. Ул-был булһа, Куница, мин бер нәмә лә белмәйем, ҡырынырға кергән кешенең нимә алып кергәнен күҙәтмәйем, тикшермәйем, тип аяҡ-ҡулдары менән ҡаршы торасаҡ.

Петя машинканың бер өлөшөн килтереп ҡалдырып китеү менән, Куницаға бөтөнләй таныш булмаған кеше килде. Үҙенең сит кеше түгеллеген белдерер өсөн, паролде әйтте. «Баш йыуырға эҫе һыу бармы?» Яуап: «Хәҙер йылытам. Бер аҙ көтөп тороғоҙ». Теге: «Көтөп торорға минең ваҡытым юҡ, башҡа ваҡытта керермен». Мария Васильевна, креслола клиенты булғанға, «Был ҡайсы ни эшләптер, бик тиҙ үтмәҫләнә», — тип залдан сығып китеп, связнойға мөйөштә ятҡан төргәккә эйәге менән күрһәтте лә, башҡа ҡайсы алып кереп, эшен дауам итте.

Шулай итеп, немец телендәге машинка Боричев тоҡтағы йорттарҙың береһендә пәйҙа булды һәм эштәр башланды. Черняк ебәргән бланкыларҙың бер яғына Кушнир машинкала — украин телендә, икенсе яғына Фәтихов немецса баҫты.

Был командировкалар ярҙамында Киев тирә-яғындағы районедарҙың ауылдарында, листовкалар таратып, халыҡтарға хәҡиҡәтте еткерҙеләр, рухтарын күтәрҙеләр. Юҡ, листовкалар ғына таратманылар, мөмкин булғанда, диверсиялар ҙа эшләнеләр. Мәҫәлән, берәү Стайки пристане тирәһендә «командировкала» йөрөгәндә, тәрән соҡор аша һалынған ике ағас күперҙе яндырып, Стайки пристаненә бара торған берҙән-бер юлды бер нисә көнгә өҙөп тора.

Хаҡ һүҙ иң көслө ҡоралдарҙан да көслөрәк булһа ла, күҙгә күренә торған, «тотоп» һөйләрлек акциялар, диверсиялар кәрәк ине.

Фәтихов-Борисов немецтарға судоверфтәгесә активлығы менән түгел, пассивлығы, «яволлеге» менән тулыһынса ышанысҡа кергәс, уйлаған эшен тормошҡа ашырырға булды.

Көндәрҙең береһендә Фәтихов, ғәҙәттәгесә, береһе менән дә һөйләшмәй, үҙ эшен эшләп йөрөгәндә, арҡаһы менән кемдеңдер үҙен күҙәтеп тороуҙы «күрҙе», әммә, күреүен һиҙҙермәй, тағы ла тырышыбыраҡ эшләргә булды. Артта торған кешенең ҡулы уның яурынына ятты. Фәтихов билен яҙып, тегегә ҡараны — уйлағаны дөрөҫ булды — был мастерскойҙар начальнигы хәрби инженер Штайн ине. Ул ҡапма-ҡаршылыҡлы, бер ҡарағанда, боҙ һымаҡ һалҡын, икенсе ҡарағанда, дары кеүек шартларға тороусы йөҙ процент-

лы арнецҡа оҡшамаған немец ине. Ихтимал, саф немец та түгелдер: ҡарағусҡыл сәсле, ҡуңыр күҙле, киңсә битле. Штайн, бер ҡарағанда, эшселәрҙе маҡтай, арҡаларынан һөйгән була, икенсе ҡарағанда, әсе буран булып үтеп китә. Ҡайҙандыр, ни эшләптер рус телен яҡшы ғына «һупалай». Теге көндө Ҡишты мыҫҡыл иткән ошо шваб әле Фәтиховты маҡтап алып китте.

— Гут. Маладис, Борисофф. Һин миңә оҡшайһың. Ысын немец кеүек тырышып, теүәл эшләйһең. Бөгөн һуңғы машинаны ремонтлап бөтәбеҙ ҙә иртәгә бөтә егерме бишен дә фронтҡа оҙатабыҙ. Ә мин һеҙҙе шуның өсөн шнапс менән һыйлармын. Дөрөҫ, «рус водка» зер гут. Хәйер, рустарҙың берҙән-бер яҡшы нәмәһе — водка. Ха-ха-ха... Найн. Найн, тоже яҡшы кешеләре бар. Кем гросс дойтшланд... Бөйөк Германияға ғәҙел хеҙмәт итә, шул кеше яҡшы. Мәҫәлән, һин...

«Йә бөгөн, йә... яңы партия машиналар килгәнсе... Ә улар ҡасан килә әле. Хәҙер фронттың күпселек участкаларында позицион һуғыштар ғына бара. Ә шулай ҙа, был машиналарға тейәп, алғы һыҙыҡҡа боеприпас, ҡорал илтәсәктәр... Ул ҡоралдан беҙҙекеләргә атасаҡтар, ҡан ҡояҫаҡтар, үлтерәсәктәр... Юҡ, бөгөн, фәҡәт бөгөн эшләргә...»

Ғәмһеҙ, йыуаш, хатта бахыр Борисов тәүге көндән алып мастерскойҙарҙы, гараждағы хәлде күҙәтеп йөрөнө. Тәжрибәле разведчик күҙенән кескәй генә деталь дә, штрих та ситтә ҡалманы, бөтәһе лә күңел фотоаппараты менән төшөрөлөп, теркәлеп барҙы.

...Электр энергияһы менән тәьмин ителеү өсөн гараждың үҙ рубильнигы бар. Ә уға сымдар ток бүлеү (распределительный) щитынан килә. Ул щит гараж янындағы контораның коридорында. Щиттың йәшниге бикләнһә лә, асыуы бик еңел ине — ҡаҙаҡ тығып бер борҙоң, келт итә лә китә. Төнгөлөккә гаража ток бирә торған выключатель боролоп ҡуйыла...

Эшселәр менән бергә Фәтихов-Борисов, майлы ҡулдарын һөртә-һөртә, гараждан сыҡты. Башҡалар иҫләмәгәндә бәҙрәфкә инеп китте. Эшселәр ҡапҡанан сығып, таралып бөткәс, ул күләгә булып кире гаражға керҙе һәм алдан уйлапиҫәпләп ҡуйған эшенә тотондо: рубильникты тартып айыра; штепсель розеткаһын асып (көндөҙ уның шөрөбөн бороп, ҡапҡасын асырға әҙерләп ҡуйғайны), эсенә ескә сым тыға, розетканың ҡапҡасын яба. Шөрөбөн бора. Уға алдан уҡ бензин һибелгән сүбек урай. Штепсель розеткаһы тирәһенә майланған, бензин һеңгән сепрәктәр ташлай, элеп ҡуя. Бер сепрәкте яҡындағы машинаның моторы эсенә тыға. Ул арала ишектәрҙе-ҡапҡаларҙы ябып, үҙ-үҙе менән һөйләнеп кил-

гән ҡарауылсының тауышы ишетелә. Фәтихов-Борисов себен булып гараждан сығып китә. Хәҙер иң хәтәре. Конторыға инеп щиттың йоҙағын асырға ла... Бер секунд — йоҙаҡ асыла. Гаражға ут бирә торған сым юлы ҡайҙа? Әһә, бына. Ул рубильниктың рычагын бора. Ҡарауылсылар рубильникты тоташтырғас, гараждан башҡа бөтә ерҙә ут тоҡана. Бер нисә секунд дауам иткән «операция» тамамлана һәм Фәтихов-Борисов, бер кемгә күренмәй, контора коридорынан сығып, үҙ юлына китә. Тороп тор. Һин бит гараждағы рубильникты кире тоташтырманың. Былай булғас, бөтәһе лә юҡҡа сығасаҡ. Өҫтәүенә, иртән бензинлы сүбек уралған розетканы, тейешле бер тәртип менән ташланған майлы сепрәктәрҙе күрәсәктәр...

Бәхеткә ҡаршы, ҡарауылсы алыҫтағы машиналар араһында йүтәлләй-йүтәлләй йөрөй ине. Ҡарауылсының бер ҡасан да бөтмәй торған ҡоро йүтәле был юлы Фәтиховҡа файҙаға ғына булды. Уның яҡында булмауынан файҙаланып, Фәтихов рубильникты тоташтырҙы ла йәшен тиҙлегендә сығып китте. Хәҙер дөйөм щит рубильнигын тоташтырғанда гаражда ла ут ҡабынасаҡ һәм ул уйлағанса барып сыҡһа... Ул тәрән һулап алды — бөтәһе лә уныңса булды шикелле...

Ҡараңғы төшөп, төн килгәс, немецтар гараж рубильнигына ҡул тейҙермәй, башҡа рубильниктарҙы тоташтыралар. Гаражда Фәтихов «сихырлаған» розеткаға ҡыҫҡа замыкание була, шундуҡ бензинлы пакля гөлт итә. Ут майлы, бензинлы сепрәктәргә күсә... Бер аҙҙан гараж яғынан әсе төтөн еҫе килә башлай. Немецтар һиҙенеп, урамға йүгереп сығалар. Ялҡын инде машиналарҙы сығара торған ҡапҡаны ялмап алған була. Немецтар шаулашып, һүгенеп ары һуғылалар, бире һуғылалар ҙа, гаражға керергә мөмкинлек булмағас, контораны ҡотҡарып ҡалырға тырышалар.

Һөҙөмтә немецтар өсөн шаҡтай күңелһеҙ, Фәтихов өсөн шаҡтай күңелле була: фронтҡа ебәрелергә әҙерләнгән егерме ике ауыр йөк машинаһы, ете мотор һәм бик күп запас частар, инструменттар янып юҡҡа сыға.

Печерский гаражындағы янғындың яҡтылығы Киевтың төрлө мөйөштәренән күренә, һаҫы төтөн еҫе бер нисә көн танауға бәрелеп тора. Ә иң мөһиме — был янғын хаҡында бөтә Киев һөйләй.

Фәтиховтың һәм гаражда, мастерскойҙарҙа эшләүсе Киев кешеләренең бәхеттәренә ҡаршы, немецтар янғындың сәбәбен бик ентекләп һәм бик оҙаҡ тикшерһәләр ҙә, эҙенә төшә алманылар — ҡыҫҡа замыкание арҡаһында янғын килеп сыҡҡан тигән ҡарарға килделәр.

Мастерскойҙар начальнигы Штайн әлеге лә баяғы мадьярҙарҙы һүкте, уларҙы һаҡһыҙлыҡта, ялҡаулыҡта ғәйепләне. Киш быға асыуланманы, күрәһең, ул янғындың һаҡһыҙлыҡ бәләһе генә түгеллеген аңлағандыр.

Ошо көндәрҙә ҡала урамдарында яңы бойороҡ-иғлан күренде.

«Һуңғы ваҡытта Киев ҡалаһында ут төртөп яндырыуҙар, немец һалдаттарын һәм офицерҙарын үлтереүҙәр, саботаждар күбәйә башлау мине ҡәтғи саралар күрергә мәжбүр итә. Шуға күрә, ошо көндәрҙә 250 Киев кешеһе атып үлтерелде. Һәр бер саботаж, ут төртөп яндырыу һәм герман ҡоралды көстәренә һөжүм итеүгә шундай сара күрәсәкмен.

Э б е р г а р д,

Киев коменданты, генерал-майор».

Ҡурҡытыуҙар, янауҙар, атыуҙар дошманға булған нәфрәт утын һүндерә алманы — ҡаланың әле бер, әле икенсе районында акциялар, диверсиялар, саботаждар булып ҡына торҙо.

## ЕГЕРМЕ ЕТЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Фәтихов обер-лейтенантҡа әүерелә

Ҡырҡ икенсе йылдың яҙы Киевҡа иртә килде һәм йылы булды. Днепр боҙҙан ғәҙәттәгенән тиҙерәк әрселде, Дарницаның аҡһыл һары пляждарын, Трухан утрауының уйһыу ерҙәрен һыу күмеп китте — былай ҙа мөһабәт даръя, халыҡтың көсөн, ҡеүәтен күрһәтергә теләгәндәй, диңгеҙгә оҡшап китте: «Ай-яй-яй-яй... Днепрҙың күптән былай йәйелгәне юҡ ине, хәйерлегә булһын...» — тип ҡарттар йылғаға һоҡланып та, хәүефләнеп тә ҡарап алдылар.

Ҡаштандарҙың, тирәктәрҙең, йүкәләрҙең бәрөләре көнләп түгел, сәғәтләп бүртте, тауышһыҙ ғына ярылды, аҡһыл йәшкелт нәфис япраҡсыҡтар, йомортҡаны тишеп морон төрткән бәбкәләр шикелле, күренә башланы.

Ҡала тел менән аңлатып бирә алмаҫлыҡ, һиҙелер-һиҙелмәҫлек яҙғы еҫ менән тулды.

Һуғыш хаҡында белмәйме, белеп тә уға төкөрөп тә бирмәйме, йыраҡ ерҙе яҡын итеп Африка ярҙарынан килгән сыйырсыҡтар, һуғышҡа саҡлы яһалған ояларҙы һайлап, уларҙы тәртипкә килтерҙеләр: былтырғы сүп-сарҙы, еҫләнгән мамыҡтарҙы сығарып ташлап, буласаҡ балаларына өр-яңы түшәк әҙерләнеләр. Үҙҙәренә иш таба алмай ҡал-

ған ҡарғалар йәлләтеп: «Ҡар-ҡар...» — тип Подол буйҙарын яңғыраттылар.

Йыл ниндәй генә шәфҡәтһеҙ булмаһын, яңыртыусы, йәшәртеүсе һәм йәшелләндереүсе бөйөк көс — яҙ үҙенекен итте, бер кемгә буйһонмай, ышаныслы аҙымдар-сәғәттәр менән атлай бирҙе.

Кешеләр ҙә яҙға өмөт бағланылар — бәлки, был тәүге һәм һуңғы һуғышлы яҙ булыр, сатлама һыуыҡтарҙы еңгән шикелле, һуғыштың да һалҡын һулышын еңеп, ҡыуып ебәрер...

Өмөтләнеү — яҡшы эш, әммә был яҙ тәүге һәм һуңғы һуғышлы яҙ ғына булмаясаҡ әле... Йәнә, йәнә сәскәле һәм ҡанлы, һандуғастар сутылдаған һәм туптар гөрһөлдәгән яҙҙар килеп китер әле...

Күптәр, бик күптәр өсөн, шул иҫәптән минең байтаҡ геройҙарым өсөн, был һуңғы яҙ булыр...

Ауыҙ эсенән йырлай-йырлай, Рая Буяненко, Владимир тауына табан күтәрелә. Ул байрамса кейенгән; зәңгәрһыу ерлеккә ваҡ ҡына ҡәнәфер сәскәләре төшкән ебәк күлдәк; ҡыҙыл йөн кофта, ҡырын кейелгән алһыу берет...

Ҡыҙыҡ, ниңә ул шулай байрамса кейенгән икән? Тыуған көнө тиһәң... ул көҙ көнө тыуған, ғөмүмән, хәҙер тыуған көндәр байрам итә торған заманмы ни...

Рая әленән-әле үрелеп, ағас бөрөһөн өҙөп ала, уны устарына һалып ыуа ла еҫкәй, йылмая, күрәһең, нимәләр хәтерләйҙер, йә яҙ килеүгә шатланалыр...

Әммә Раяның бөгөн бер ниндәй ҙә байрамы юҡ, ул «мөхәббәт осрашыуына» бара. Был мөхәббәт осрашыуы ифрат яуаплы ғына түгел, ифрат хәтәр ҙә, хатта үлемесле хәүефле лә. Уны фуникулер төбөндә обер-лейтенант Гофлингер көтә.

Судоверфтә Рая «Белдерсүҙәр һәм иғландар» таҡтаһына Совинформбюроның сираттағы сводкаһын йәбештереп торғанда, саҡ янманы. Аяҡ тауыштарын ишетеп, ул листовканы йәбештермәй, киреһенсә, йыртып ала ла, ярым украинса, ярым русса тиргәнеп, листовканы ваҡ киҫәктәргә йыртырға тотона. Теге кеше: «Ниңә йыртаһың, ниңә йыртаһың?» — тип төпсөнә башлай. Рая күрә, был ябай эшсе түгел, йә шымсы, йә хыянатсы. Алан-йолан ҡараныусы күҙҙәре әйтеп тора. «Листовка, — ти Рая, — башҡалар уҡығансы, тиҙерәк йыртып ташлайым». Теге бәндә: «Һы! Ха!» — тине лә китеп барҙы.

Шул көндән һуң үҙенең сәпкә алынғанын һиҙҙе һәм Кушнирҙың кәңәше буйынса, судоверфтән китте. Бына ошо көн-

дәрҙә полиция идаралығында эшләүсе (ул саҡта әле шик аҫтына алынған ғына түгел, «өлгөлө») өлкән полицай Черняк Кушнирға яҙыу ебәрҙе. *«Бик төшөмлө» урын бар. Шунда Р. Б.-ны урынлаштырырға кәрәк».*

«Төшөмлө урын» — Печерскийҙа урынлашҡан хужалыҡ эштәре часының штабына иҙән йыуыусы. Рая Кушнирҙың өгөтләүен дә көтөп тормай, шунда уҡ ризалыҡ бирҙе — ул күптән шундай урын хаҡында хыялланып йөрөй ине.

Эшләй башлағандың тәүге көндәрендә үк шаян һүҙле, үткер телле (ә ул үҙенең немецса аңлауын йәшермәне, шулай кәрәк ине), йәш, сибәр Рая менән писарҙар ғына түгел, офицерҙар ҙа яҡынлашырға тырышты. Дөрөҫ, «еңелгән халыҡтың ҡатын-ҡыҙҙары менән енси элемтәгә кермәҫкә» тигән күрһәтмә бар, әммә үҙен еңеүсе һанаған һалдат һинең күрһәтмәләреңә төкөрөп бирә.

Рая тәүҙә ҡырыҫ ҡыланған булды, хатта, эсеп, унтер уға бәйләнә башлағас, шаярғандай итеп уның яңағына һуғып та алды.

— Һерр фельдфебель, мин сәнскеле.

Теге асыуланманы, иһаһайлап көлдө.

— Юҡ, һин сәнскеле генә түгел, һин...

— Ә мин әсе лә.

— Ул сағында беҙ һине баллайбыҙ.

— Мин бал бик яратам, — тине лә Рая көлә-көлә китеп барҙы. Фельдфебель бал ҡапҡан шикелле ялманып ҡалды.

Ниһайәт, көндәрҙең береһендә уға «ярарлыҡ» кеше сиртте. Был обер-лейтенант Гофлингер ине. Уның ике яғы Раяға оҡшаны. Беренсенән, ул кәүҙәгә Фәтихов менән бер сама, тимәк, кейемде тарайтмайынса, киңәйтмәйенсә лә кейеп буласаҡ, икенсенән, ул, башҡа офицерҙар шикелле, ҡулдарына ирек бирмәй, күкрәккә, билгә үрелмәй, ә, ҡаймаҡ күргән ата бесәй шикелле, күҙҙәрен майландырып, комплимент әйтә, башҡалар ишетмәнеме икән тигәндәй, алан-йолан ҡарана, көрһөнә, тештәрен шыҡылдатып ала ла китеп бара. Рая аңланы. Тегеләр, әҙәпһеҙ ҡыланғандар, әллә ни ҡурҡыныс түгел, уларҙың күбеһе майҙарына сыҙаша алмай шуҡлана, этләшә, ә был... Быны ҡулына эләкһәң, ысҡынам тимә.

Гофлингер бик аҫтыртын һәм ҡурҡыныс тип ине. Ишеткәне бар, уны һалдаттар, кесерәк офицерҙар ҙа яратмай: «Хамелеон», — тип көләләр, төкөрөнәләр. Эйе, аҫтыртын, ауыҙын асмай ғына көлөүсе кешенән дә ҡурҡынысыраҡ кеше юҡ ул.

Рая нисек тә Гофлингер менән икәүҙән-икәү генә осрашырға тырышты һәм шундай момент табылды ла. Ул юра-

мал итәктәрен күтәрә төшөп иҙән йыуғанда, Гофлингер килеп кереп, уның төҙ, зифа аяҡтарына, бер генә ир затын да тыныс ҡалдырмаçлыҡ аҡрын ғына түңәрәкләнгән осаларына ауыҙ һыуын ағыҙып ҡарап торҙо, уйҙары менән генә Раяны сисендерҙе. Рая быны һиҙенеп боролдо, күлдәк итәген тартты, ҡыҙара төштө. Ғәфү үтенде. Гофлингер, бышылдап: «Ҡасан? Ҡайҙа?» — тине, тыны менән көйҙөрөп, Рая аңламаған булды. «Нимә, ҡасан, ҡайҙа?» «Ҡасан, ҡайҙа осрашабыҙ? Мин башҡа түҙә алмайым...» Рая ишеккә ҡарап алды. Бармағын иренөнә ҡуйҙы. «Тссс... Һеҙгә бит беҙҙең халыҡ менән булырға ярамай». Офицер быны ишетергә лә теләмәне, ә һорауын ҡабатланы: «Ҡасан?» «Ҡайҙа?» — «Әгәр белеп ҡалһалар?»—«Икәүебеҙҙән башҡа бер кем белмәйәсәк». — «Ҡарағыҙ уны, миңә бер ни ҙә булмаç, ә һеҙгә...» — «Төкөрҙөм приказдарына. Йәкшәмбе көн мин көнө буйы һәм... төнө буйы буш...» Ул шундай йылмайҙы, Рая саҡ-саҡ уҡшыманы, әйтерһең, селәүсен йотто. «Яҡшы, шәмбе көн әйтермен».

Раяның тын алышынан, күҙҙәренән, һөйләшеүенән үк әсәһе лә, Кушнир ҙа ниҙер һиҙенде. Әсәһенә ул бер нәмә лә әйтмәне. «Эй, шул нәçел үгеҙҙәрен, бәйләнеүҙән башҡа эштәре юҡ, береһенең саҡ-саҡ яңағына сапманым», — тип алдашты. Ә Кушнирға дөрөçөн һөйләне. Түҙемле, төптән уйланыусан Кушнир ҙа түҙмәне, устарын ыуып алды: «Тәүәккәлләйбеҙ».

Һәм бына улар тәүәккәлләнеләр.

Рая бөрәләрҙе усында еçкәй-еçкәй Владимир тауына күтәрелде.

Бейек мөһабәт пьедесталгә баçҡан, ҙур тәре күтәргән кенәз Владимирға күҙ һалып ала. Күптән алланан йәйәүләп ҡасҡан булһа ла, суҡынып алған була. (Күреп ҡалыусылар һәйкәл янына, ғибәҙәт ҡылырға бара икән тип уйлаһындар.) Кушнир һымаҡ, шаяртып «Изге Владимир, изге эшкә фатиха бир», — тип шыбырлай.

Рая, немецтарҙың теүәл, пунктуаль халыҡ икәнлеген белһә лә, юрамал бер аҙ һуңға ҡалды. Фуникулер төбөндә уны көтөп торған офицерҙы күргәс, бик ҡыланып йылмайҙы, ғәфү үтенде.

— Ай, был һуғыш, — тине ул, ҡулын офицерға үптерергә һуҙып. — Халыҡты шундай тупаçландырҙы... Үҙҙәре «опелдәрҙә» йөрөйҙәр, ә Рая бахырҙы береһе бер туҡтап ултыртманы...

— О, фрейлейн, беҙ әле һеҙҙең менән «оппель-адмиралда» йөрөрбөҙ.

— Ҡасан? Мин — ҡарсыҡҡа, һеҙ бабайға әйләнгәсме? — тине Рая, ирендәрен ҡымтайтып.

— О, юҡ, тиҙҙән. Йәй көнө рустарҙы... — Ул дағы бөккән шикелле хәрәкәт яһаны, — тәкә мөгөҙөнә әйләндерәбеҙ. Мин Днепрҙың иң гүзәл урынынан поместье алам... Сабыш аттары булдырам... Һеҙҙе баш гувернантка итәм...

— Әгәр тағы «Икенсе Мәскәү» килеп сыҡһа? — тине Рая, уны ирештереп.

— О, юҡ, тарих ҡабатланмай. Фюрер йәйге һөжүмгә капитально әҙерләнә. Быныһы хәл иткес һәм грандиоз буласаҡ...

Улар лығырлай-лығырлай аҫҡа төштөләр.

— Ҡайҙа юл тотабыҙ, фрейлейн? Бәлки, йәшерен «резиденциягыҙ» барҙыр? Бында бит...

— Бар, — тине Рая. — Тик аҙыраҡ яр буйында йөрөйөк. Мин яҙҙың бигерәк тә ошо... әйтергә яраһа, ун алты йәшлек сағын яратам.

Улар юҡ-барҙы лығырлап (ә шулай ҙа Рая Гофлингерҙан ниндәй булһа ла мәғлүмәт алырға тырышты, әммә тегенең теле ете йоҙаҡ менән бикләнгәйне. Ауыҙында уның поместье ла сабыш аттары, сөгөлдөр плантацияһы ла спирт заводы булды), «Беренсе май» паркына табан йүнәлделәр. Рая әлеҙән-әле ғәмһеҙ көлдө. Уларға осраусыларҙың күбеһе Раяға асыулы, ҡайһы саҡта ашарҙай итеп ҡараны. Бына уларға таяҡ таянған, күптән ҡырынмаған ҡарт осраны. Инде йылы, халыҡ күптән йәйге кейемгә күскән булһа ла, уның башында — бүрек, өҫтөндә буҫтау пальто ине. Күҙҙәре эскә батҡан, яңаҡтары яңаҡҡа йәбешкән. Йә ул ҡаты сирләгәндер, йә бер телем икмәккә тилмереп йәшәйҙер. Ҡарт былар янына килеп еткәс, аҙымдарын тағы ла әкренәйтте, туҡталып бер офицерға, бер Раяға күтәрелеп ҡараны. Офицер, Рая булғанғамы, уның менән исәнләште.

— Гутен таг, гроссфатер! (Хәйерле көн, олатай!)

Ҡарт яуап бирмәне, китеп барҙы һәм өс-дүрт аҙым киткәс, шундай «тәмле» итеп һүгенде, һүгенгән кешеләрҙе ене һөймәгән Рая ҡапыл йәнләнеп китте. Ата-әсәләрҙе иҫкә алған был әсе һүгенеү уға иң матур маҡтау һүҙҙәре шикелле тойолдо — ҡарт оккупанттарҙы һәм уларҙың арт ягын ялаусыларҙы, әлеге осраҡта Раяны, ҡатлы-ҡатлы итеп ҡәһәрләп һүкте.

Рая: «Рәхмәт, олатай, бер аяғың — ерҙә, икенсеһе гүрҙә торһа ла, дошманға баш эйергә, бирелергә теләмәйһең», — тип эсенән уға рәхмәт уҡыны. Офицер, Раяның шат йөҙөнә ҡарап, һораны.

— Вас? Вас? *

---

* *Вас* — немецса нимә?

— Вас, вас, — тине ул, офицерҙы ирештереп һәм «вас, вас* һүҙенең мәғәнәһен үҙенсә бороп. — Ул ҡарт беҙгә күцелле итеп күңел асыуҙы теләне.

— О, бик һөйкөмлө ҡарт ул. — Офицер артына боролмай ғына ҡул болғаны. — Данке шён, гроссфатер! Данке шён! — Раяның, эйелеп, ҡулын үпте. — Ҡарт телэгәнсә булаСаҡ та. О, мин бик талантлы һәм көслө ир кеше.

— Алдан маҡтанмайыҡ, һерр Гофлингер, ирҙәрҙең көслө, көсһөҙ булыуын ҡатындар баһалай.

— Һеҙ миңә үҙ итеп Зигмунд тип кенә өндәшегеҙ.

— Зигмунд... Зиги... Ниндәй матур исем...

Улар бына-бына Аскольд ҡәбере янына барып етәсәктәр.

Йөрәк йышыраҡ тибә башланы, хатта уның тибеүе Раяны ҡултыҡлап барған немецҡа ишетелә төҫлө тойолдо. Болоҡһоуын һиҙҙермәҫ өсөн, ул күп һөйләнде, йыш көлдө.

— Зигмунд, ә һеҙ Аскольдтың кем икәнлеген беләһегеҙме? Юҡ? О! Киевты буйһондорған офицерға был ғәфү итерлек түгел. Аскольд һәм Дир мәшһүр Киев принцтары. Легендаға ҡарағанда, кенәз Олег 882 йылда Аскольд менән Дирҙы үлтергән...

— О, нейн, нейн, үлтереү хаҡында бөгөн һөйләшмәйек,— тине офицер, эйелеп, уның беләгенән үбеп. — Бөгөн беҙ фәҡәт ғишыҡ аллаһы Амур тураһында һөйләшәйек.

Рая инде япраҡҡа төрөнгән ҡыуаҡлыҡтарға күҙ ташлай: «Килгәндәрме, юҡмы?» Бына улар алдан репетиция яһалған ҡыуаҡлыҡ янына барып еттеләр. Рая уны ҡосаҡлап алды.

— О, Зиги, кил әле мин һеҙҙе бер үбәйем, — тип ҡосаҡланы һәм шул минутта ҡыуаҡ араһынан һикереп сыҡҡан Фәтиховтың кескәй генә ломы немецтың лепкәһенә тейеп алды. «Тейеп алды», тип мин юрый яҙмайым, сөнки, план буйынса, ул офицерҙы үлтерергә түгел, һуштан ғына яҙҙырырға тейеш. — Һин нинә шул саҡлы оҙаҡланың? — тине Фәтихов, немецты Рая менән ҡыуаҡлыҡҡа һөйрәгәндә.

— Аҙаҡ, аҙаҡ.

Немец күҙҙәрен аса башлағас та, уның ауыҙына сепрәк тыҡтылар.

— Блокнотыңды, авторучкаңды ал. Аҡ битте ас. Мин әйткәнде яҙ, — тине Фәтихов, хәнйәргә оҡшаған бысаҡты уның йөрәгенә терәп.

Немец был күренештән шул саҡлы тетрәне, йәнә һушын юғалтты. Сепрәкте уның ауыҙынан алып торорға тура килде. Һушына килә башлағас, сепрәкте йәнә тыҡтылар.

---

* Рус теленә әйләндергәс, «һеҙҙе, һеҙҙе» тигәнде аңлата.

— Яҙ, — тине Фәтихов саф немец теләндә.— *«Гитлер беҙҙе алданы. Мин герман ғәскәрҙәренең еңеүенә башҡа ышанмайым. Мине әҙләмәгеҙ. Мин партизандарга киттем. Зигмунд Гофлингер. Обер-лейтенант».*

Немец нисектер ауыҙындағы сепрәкте этеп сығарҙы һәм: «Найн!» — тип бышылданы. Сепрәк уның ауыҙына тәрәнерәк итеп төйгөсләп тығылды. Ул арала ситтәрәк, ағас башында, күҙәтеп тороусы Петя шартлы сигнал бирҙе: сыйырсыҡ булып һайрап алды. Былар шым булдылар. Яҡында ғына аяҡ тауыштары ишетелде. Аяҡ тауыштары алыҫлашҡас, Фәтихов баяғы һүҙҙәрҙе ҡабатланы.

— Ашыҡмай, ҡаушамай, һәр хәрефте еренә еткереп, яҙ. Ҡурҡытып яҙҙырған тип уйламаһындар.

Немец яҙҙы. Ҡулы ҡалтыранһа ла, ҡушҡанса, беренсе класс уҡыусыһы шикелле, һәр хәрефте еренә еткереп яҙҙы.

— Зер гут, — тине Фәтихов, — блокнотты, авторучканы бынауы газета эсенә ҡуй. Шулай. Ә хәҙер сисен...

Немец ҡалтырана башланы.

— Сисен, сисен, юҡһа... — Ул йәнә бысаҡ менән уның күкрәгенә төрттө.

Немец трусикта ғына ҡалғас, Фәтихов шартлы сигнал бирҙе — һандуғас булып сутылдап алды. Бер нисә секундтан Петя менән Желедко пәйҙа булды. Желедконың ҡултыҡ аҫтында төйөнсөк ине.

— Тоғондағы кейемдәрҙе алмаштыр, — тине Фәтихов.

Тоҡтан иҫке генә салбар, пинжәк, күлдәк, күптән крем күрмәгән, шнурҙары ике-өс урындан төйнәлгән ботинкалар төштө һәм шул уҡ минутта немецтың кейемдәре тоҡҡа тултырылды.

— Кейен, — тине Фәтихов офицерға.

Немец ашыға-ашыға кейенә башланы. Немец сисенгәндә ситкә ҡарап торған Рая боролдо һәм «һөйәркәһенең» тотош йөн баҫҡан ҡыҙғылт ерән һимеҙ тәнен күреп, йәнә ситкә боролдо һәм башына ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас уй килде: «Ҡатыны уның менән нисек йоҡлай икән...»

Фәтихов немецҡа йәнә үҙенең бойороғон ҡабатланы.

— Төнгә саҡлы беҙ һине йәшереп ятҡырабыҙ ҙа төнөн кәмә менән утрауға сығарабыҙ, ә унан үҙеңдә теге ярға сығарып ҡуйырҙар. Унан һуң инде үҙ яйыңды үҙең ҡараһың.

Немец башын ҡағып тыңлап торҙо, ауыҙынан сепрәкте алыуҙы һораны. Фәтихов Петяға ишара яһаны. Теге аңланы: күҙәтеү урынына китте.

Бер аҙҙан сыйырсыҡ һайрауы ишетелде, әммә теге ваҡыттағы кеүек ярһып түгел, ә яй ғына, һуҙып ҡына — был бер кем дә юҡ тигәнде аңлата ине. Фәтихов немецты ки-

ҫотте: «Әгәр ҡысҡырырға теләһәң, хәнйәр һабына саҡлы йөрәгеңә батырыласаҡ». Немец риза булды һәм, сепрәкте алғас, йылан шикелле ыҫылданы: «Бында һеҙ түгел, беҙ еңеүселәр. Һеҙ түгел, мин бойорам. Хәҙер үк минең мундирымды бирегеҙ һәм...» Уның ауыҙына сепрәк йәнә төйгөсләп тығылды. Фәтихов Раяға, Желедкоға ҡарап алды. Был: «Быны ни эшләтәбеҙ?» — тигәнде аңлата ине. Тегеләр: «Ни эшләтәйек, билдәле», — тип ҡулдарын йәйҙеләр. Ә шулай ҙа Фәтихов өсөнсө тапҡыр баяғы бойороғон ҡабатланы. Немец бүре күҙҙәренә оҡшаған ҡырағай күҙҙәре менән шундай итеп ҡараны, Фәтихов ҡапыл өшөп китте, йөрәге боҙға әйләнде. Ҡышҡы салтама һыуыҡта ялан аяҡ, ялан өҫ китеп барыусы ун алты моряк күҙ алдына килеп баҫты. Бабий ярҙа ғазаплап үлтерелгән бер ғәйепһеҙ кешеләрҙең ҡарғыштары, һыҡрауҙары, яҡты донъя менән бәхилләшеүҙәре ишетелде. Арала бигерәк тә йәш бер баланың: «Атай! Атай! Атай! Үс ал! Үс ал! Үс... ал...» — тип ялбарыуы йөрәкте ярып китте. Был бала тауышы уның ҡыҙы Иданың тауышына оҡшағайны...

Төндә немецты сүп-сар менән бергә Днепр ағыҙып алып китте...

Икенсе көндө Рая иртән, бер кем юҡ саҡта, иҙән һепереп, йыуып йөрөгәндә, Гофлингер кабинетындағы өҫтәлгә ул яҙып ҡалдырған «васыят хатын» индереп һалды.

Бер көн, ике көн, өс көн Гофлингер эшкә килмәгәс (аҙаҡ беленде: уның бер нисә көн айнымай эсә торған ғәҙәте булған икән), начальство уны юллай башланы һәм кабинетының ишеген асҡас, Рая һалған хатҡа тап булды, һәм шуныһы ҡыҙыҡ, начальствоның иҫе китмәне. Иҫерек башы менән Днепрға батып үлгән, тип өйөнә һәм юғарыраҡ инстанцияларға хәбәр ителде.

Шулай итеп, Фәтиховтың тапҡырлығы, батырлығы, Раяның артислығы арҡаһында йөҙләгән ғәйепһеҙ кешеләр иҫән ҡалды.

Гофлингерҙың мундирын елләткәндән һуң (Фәтиховтың һынағаны бар, ни эшләптер немец һалдаттарының мундирҙарының беҙҙең ҡыҙыл армеец кейемдәрендә булмаған үҙенсәлекле еҫе бар, бәлки, был дошман һалдаты булғанғалыр, бәлки, мундир тегелгән материалдың үҙенсәлекле еҫе булғандыр), кейеп ҡараны. Салбар ҙа, мундир ҙа үлсәп тектергән шикелле, уға һылашып тора ине, тик итектәр генә бер аҙ ҙурыраҡ, уныһы инде ҙур эш түгел, ойоҡбашҡа газета урап кейергә лә мөмкин. Иң мөһиме, мундир таман. Хәҙер Гофлингер исеменә яҙылған документты төҙәтергә йәки башҡа офицер исеменә документ табырға кәрәк, унан һуң уға «бағаналы юл» асыла.

Был эштә уға мадьяр офицеры Имре Ҡиш ярҙам итте. Әле йөҙ проценты менән йыртҡысҡа әйләнмәгән, выжданын һатып, Гитлер роботы булып етмәгән немецтар нескә күңелле, шиғриәт һәм музыка яратыусы Ҡишҡа ихтирам менән ҡаранылар, уны «ваҡ милләт», «түбән раса» тип кәмһетмәнеләр. Шундай немецтарҙың береһе штабист Кукхоф булды.

## Стайки пристане

Штабист Кукхоф лейтенант Имре Ҡишҡа ниндәйҙер юл менән тултырылмаған бланк — офицерҙар танытмаһы табып бирә. Тиҙҙән унда обер-лейтенант формаһындағы Фәтиховтың фоторәсеме йәбештерелә, Фольринг Ганс Фридрих тип яҙыла.

Форманы кейгәс, Фәтихов көҙгөгә ҡарай һәм бер аҙ ҡурҡып та китә — ул, ике тамсы һыу һымаҡ, немец офицерына оҡшағайны. Юҡ, бынан ҡурҡманы ул, ә... әгәр үҙебеҙҙекеләр уны немец тип дөмөктөрөп китһә? Бер кем, бер ҡасан уның ысын йөҙөн, исемен белә алмаясаҡ. Ни эшләйһең, уйын башланған икән, аҙағына саҡлы уйнарға кәрәк — үлем ике килмәй.

Көндәрҙең береһендә эштән һуң ул «немец булып» Куницаның парикмахерскийына китте — хәҙер бөтә элемтә уның аша башҡарыла ине.

Фәтихов Куницаның заведениеһында бер-ике тапҡыр ғына булғайны, бәлки, шуға күрәлер, бәлки, уның ҡапыл ныҡ үҙгәреүенәндер, Мария Васильевна уны тәүҙә таныманы. Креслоға ултырғас: «Баш йыуырға ҡайнар һыу бармы?» — тип һорағас ҡына, аптырап китте. Былай ҙа ҙур күҙҙәре тағы ла ҙурайҙы, аптырау — һоҡланыу менән, һоҡланыу шатланыу менән алмашынды.

— Хоҙайым... Был бит һеҙ... Федоров... Ә мин тағы...

— Фриц тип уйланығыҙмы. Мин, мин, Мария Васильевна.

— Урамда күргән булһам, валлаһи...

— Яңылыҡтар юҡмы?

— «Һаҡалдан» яҙыу бар. «Әбей» сәс араһына тығып алып килгән.

Маша мейес юллығынан газета киҫәгенә төрөлгән йоҡа ҡағыҙ алып бирҙе.

*«Стайки. Баржа. Бойҙай. Ҡыҙҙар. Йыртҡыс өңө. Ике көндән».* Был Стайки пристанендәге баржаға Германияға оҙатыласаҡ бойҙай һәм ҡыҙҙар тейәлгән. Баржа ике көн-

дән ҡуҙғаласаҡ. Баржаны юҡҡа сығарырға кәрәк тигәнде аңлата ине.

— Стайки, Стайки... Ҡайҙа әле ул? Киевтан өҫтәме, аҫтамы?

— Аҫтараҡ. Ҡырҡ биш-илле километр самаһы булыр.

Зажигалканың кескәй генә теле ҡағыҙҙы көлгә әйләндерҙе. «Бына хәҙер уға обер-лейтенант кейеме ярҙам итергә тейеш. Ә нисек? Лейтенант Киштың бишекле өс кешелек мотоциклы бар. Рулгә уны ултыртҡанда? Юҡ, уны бутарға ярамай. Мадьяр һалдаттары итеп Железко менән Светлинды кейендерергә. Әгәр яраҡлы мундирҙар табып булмаһа? Ул сағында уларҙы полицай итергә. Черняк ебәргән бер нисә повязка Железконың йәшерен урынында һаҡлана... Документтар эшләргә мөмкин. Ә ҡорал? Винтовкаһыҙ йәки карабинһыҙ полицай ниндәй полицай була ти? Әлеге лә баяғы лейтенант Киш ярҙам итергә тейеш — мотоцикл бишегенә, брезент аҫтына, ике карабин ҡуйырға кәрәк... Ҡарауылда тороусы һалдаттарҙы һыйларға бер нисә шешә араҡы табырға... Яҡшы, бәтәһе лә һин уйлағанса барып сыға, ти... Әгәр унда ҡарауыл көслө булһа, ҡарауыл начальнигын бер төрлө лә бөгөп булмаһа? Кеҫәлә: «Обер-лейтенант Фольрингтың бойороҡтарын һис һүҙһеҙ үтәргә», —тигән ҡағыҙ булырға тейеш. Пристангә эштән һуң китергә лә, ҡараңғы төшкәнсе, яҡында ғына ҡыуаҡлыҡта боҫоп ятырға...

Фәтихов Киштан бер нәмәне лә йәшермәне. Киш уйға ҡалды. «Мотоциклды ла бирергә, карабиндар ҙа табырға мөмкин... Әммә эш барып сығырмы? Тотолһағыҙ, икебеҙҙең дә баш китәсәк бит...» «Ә мин, мотоциклды рөхсәтһеҙ урлап киттем, тиермен». «Ә карабиндарҙы? Уларҙы урлап булмай бит...» «Тимәк?.. Шикләнәһең?» Киш ҡул һелтәне. «Яҡшы. Ни булһа ла була. Ҡасан мотоциклды урлайһың?».

Икенсе көндө сәғәт дүрттә лейтенант Киш «Бессарабканың» көнсығыш ҡапҡаһы янына барып туҡтаны ла, бишектән сепрәк муҡса алып, баҙарға инеп китте. «Сирләп» эштән иртә киткән Фәтихов немец офицеры кейемендә мотоцикл янына килде, баҙарға инеп (имеш, рөхсәт һорай) сыҡты ла, мотоциклға атланды. Подолда, Почта майҙаны янында, уны беләктәренә полицай таҫмалары бәйләгән Железко менән Светлин көтөп тора ине. Фәтихов мотоциклды уларҙың янына килтереп үк туҡтатты. Тегеләр честь бирҙеләр. Фәтихов теләр-теләмәҫ кенә ҡулын күтәреп алды ла, урынынан тороп, Светлинға: «Минең урынға ултыр», — тип ишараланы. Железко уның артына атланды, ә үҙе, арыған кеше һымаҡ ирени кенә, бишеккә ултырҙы.

Ҡаланан сығыр алдынан «полицайҙар» икеһе лә арҡаларына карабин аҫтылар. Ҡырҡ минуттан улар күҙенә немецса һәм украинса *«Стайки — 1 клм»* тип яҙылған юл күрһәткес сағылды. Фәтихов юлдан ситтәрәк үҫкән ҡуйы ҡыуаҡлыҡтарға күрһәтте. Ҡыуаҡлыҡтар аҫтына мотоциклды йәшерҙеләр.

— Ә хәҙер, патруль булып, пристандән урап килегеҙ. Күҙәтегеҙ: кем, нисә кеше ҡарауыллай? Баржа ҡасан ҡуҙғаласаҡ. Ҡыҙҙар ҡайҙа? Баржаламы?.. Берәй шешә араҡы ла алығыҙ. Кәрәк булыуы бар.

Сәғәт ярымдан разведчиктар пристандәге хәл хаҡында һөйләп бирҙеләр; баржаға тейәләһе йөктө тейәгәндәр, ҡыҙҙарҙы палубаға кертеп тултырғандар. Иртәгә таң менән баржа ҡуҙғаласаҡ. Ҡарауылда алты һалдат, төҫ-баштарына, кейемдәренә ҡарағанда, строевой һалдаттарға оҡшамағандар. Ҡарауыл ротаһынандыр.

Фәтихов разведка мәғлүмәтенән ҡәнәғәт ҡалды, акция барып сығырға тейеш.

Ҡараңғы төшкәс, улар пристангә яҡын ғына килеп туҡтанылар. Ҡарауылда торған һалдаттар иренеп кенә унан пропуск һоранылар. Фәтихов, погондарына төртөп: «Ә был пропуск түгелме ни, болван?» — тип ҡысҡырҙы. Һалдат юл бирҙе. «Ҡарауыл начальнигы ҡайҙа?» — «Ул...» — «Нимә— ул? Ниңә тотлоғаһың?» — «Ул аҙыраҡ иҫерек, һерр обер-лейтенант» — «Мин һинән, иҫерекме, айыҡмы, тип һорамайым, ҡайҙа, тип һорайым, күҙле бүкән!» — «Анауында, пристань контораһында».

Фәтихов һүгенә-һүгенә ҡарауыл начальнигын эҙләп китте. Начальник фельдфебель булып сыҡты. Уны күреү менән һикереп торҙо, рапорт бирә башланы. Фәтихов: «Болван!» — тип уның яңағына сапты. «Һеҙҙе талап кит, баржаны батыр, бер кем бер нәмә күрмәйәсәк тә, белмәйәсәк тә... Киттек баржаны тикшерергә».

— Ғәфү итегеҙ... һеҙ кем булаһығыҙ?

— Обер-лейтенант Фольринг. Баш интендантствонан. Документым да кәрәкме?

— К-кәрәкмәй, һерр обер-лейтенант. Киттек.

— Баржала нисә тонна бойҙай? Нисә ҡыҙ?

— Өс йөҙ тонна бойҙай. Алтмыш ҡыҙ, һерр обер-лейтенант.

— Документтар ҡайҙа? Кемдә?

— Копияһы миндә лә бар.

— Яҡшы. Аҙаҡ танышырмын. Ә хәҙер киттек.

Тыуған ерҙәренән оҙаҡҡа, бәлки, ғүмергәлер хушлашыусы ҡыҙҙар, тоҡтарын баш аҫтарына ҡуйып, шомлс

нуыр йоҡоға талғайнылар. Тик бер-ике ҡыҙ ғына палуба ситендә йылғаға ҡарап тора...

Баржаны ҡарап сығыу күп ваҡытты алманы.

— Яҡшы. Ә хәҙер поста торған һәм ял иткән һалдаттарҙы саҡырығыҙ.

— Постағыларҙы ламы? — тип асыҡларға тырышты фельдфебель.

— Һин һаңғырау түгелме, фельдфебель? Мин уларға инструктаж яһайым да ҡайтып китәм. Унда мине баш интендант көтә.

Һаҡсылар йыйылғас, Фәтихов уларҙың карабиндарын ҡарап сыҡты. «Ҡоралды шулай йөрөтәләрме ни... фәлән-фәсмәтән», — тип һүгенде. Ҡарауыл начальнигы аҡланды, ғәфү үтенде, ә Фәтихов карабиндарҙы бер урынға йыя башлағас, әллә шикләнә башланы, борсолдо. Ошо ваҡыт Железко менән Светлин атылып керҙе. Немецса белгән Светлин: «Бөтәгеҙгә лә иҙәнгә ятырға!» — тип ҡысҡырҙы.

Фәтихов: «Партизандар!» — тип парабеллумын тартып алды һәм... фельдфебельдең сикәһенә тондорҙо. Теге гөрһөлдәп иҙәнгә ҡоланы. Ошо арала Железко менән Светлин карабиндарҙы каюта ишегенән тышҡа ырғытты. «Йәшәгегеҙ килһә, урынығыҙҙан ҡуҙғалмағыҙ, тынығыҙ ҙа сыҡмаһын! — тип Светлин бойорҙо ла фельдфебелде һөйрәп алып сыҡты.

— Тромбон, ҡыҙҙарҙы уят, шауламай ғына баржанан төшөп таралһындар. Тура өйҙәренә ҡайтмаһындар. Ҡасһындар.

Һушына килә башлаған фельдфебель, эштең нимәлә икәнен аңлап, тауыш күтәрмәксе булғайны, парабеллум һабы йәнә уның сикәһенә төштө һәм был юлы ул инде тора алмаçлыҡ булып ҡоланы.

Ҡыҙҙарҙың тып-тып аяҡ тауыштары ишетелгәндә, Свётлин ҡайҙандыр бензин табып алып килде (юҡҡа ул хәрби диңгеҙ флоты инженерымы ни!), палубаға, трюмдағы бойҙайға бензин һипте. Фәтихов ут төртөр алдынан: «Их, ниндәй байлыҡ әрәм була бит!» — тип көрһөнөп алды.

Стайкиҙан сығып бер аҙ киткәс, баржаның ялҡыны күренде.

Икенсе көндө иҫән ҡалған һаҡсылар баржаға партизандарҙың һөжүм итеүе, фельдфебелде, обер-лейтенантты үлтереүҙәре хаҡында һөйләнеләр. Ә Фәтихов хәрби мундирын комбинезонға алмаштырып, бер минутҡа ла һуңға ҡалмай, эшкә килде.

Кушнир Куница аша: «Һеҙҙең был подвигығыҙ орденға лайыҡ», — тип хәбәр итте...

## ЕГЕРМЕ ҺИГЕҘЕНСЕ НОВЕЛЛА

### Рот-фронт!

1942 йылдың мартында Белая Церковта хәрәкәт итеүсе диверсия подполье группаһы (Фәтихов улар менән элемтәлә була, информациялар менән генә түгел, лейтенант Киш арҡыры шартлатҡыс, ҡорал, боеприпас менән дә тәьмин итеп тора) Фәтиховҡа ашығыс һәм шомло хәбәр ебәрә: «Фашистар колхоздың мал аҙбарына алтмыш Ҡыҙыл Армия командирын бикләп ҡуйғандар. Бер нисә көндән уларҙы Германияға концлагерға оҙатасаҡтар. Төндә әсирҙәр аҙбар аҫтын соҡоп, ҡасырға маташҡандар, әммә, полицайҙар һиҙеп ҡалып, ут асҡандар: ике кешене үлтергәндәр, өс кешене ҡаты яралағандар. Ҡалғандарына бер нисә көн бер һыныҡ икмәк, бер йотом һыу бирмәй интектергәндәр. Ҡасан оҙатылыуҙары хаҡында өҫтәмә хәбәр итербеҙ. Кәңәш итегеҙ — ни эшләргә? Нисек үҙҙәрен ҡотҡарырға?»

Икенсе көндө сәғәт ун икеләргә Белая Церковь бургомистры резиденцияһы янына мотоцикл килеп туҡтай. Рулдә мадьяр һалдаты тотҡан, ә бишектә обер-лейтенант ултыра. Обер-лейтенант ашыҡмай ғына тора, ҡағына һәм, олпат атлап, парад ишегенә йүнәлә. Һаҡсы бер аҙым ситкә китә: «Һайль Һитлер!» — тип уны сәләмләй. Офицер ҡулын күтәрер-күтәрмәҫ кенә «һайль...» ти ҙә: «Бургомистр үҙендәме?» — тип һорай. «Үҙендә, пан офицер!» — тип яуаплай полицай.

Бургомистр кабинетының алғы яғында ултырған секретарь, обер-лейтенантты күргәс, йәһәт кенә тора.

— Бургомистр әфәндене күрергә мөмкинме, фрейлейн? — ти офицер.

— Айн момэнт! — Секретарь ялт итеп кабинетҡа инеп китте һәм шул минутта уҡ ишектә күҙлеген маңлайына күтәргән, һимеҙ, сөгөлдөр сырайлы бургомистр үҙе пәйҙа булды.

— Рәхим итегеҙ, рәхим итегеҙ, пан офицер! — тип уны кабинетына саҡырҙы.

Бер нисә минуттан, хәл-әхүәл һорашҡандан һуң (бургомистр немецса шаҡтай оҫта, еңел һөйләшә ине), шул асыҡлана: Германияға оҙатыласаҡ совет офицерҙары юлға сыҡҡан. Белая Церковта уларҙы вокзалға яҡын эшселәр клубына ябып торасаҡтар.

— Вагондар әҙер, паровоз бар, уларҙы лично мин үҙем оҙатасаҡмын, — ти офицер. — Шуға күрә миңә ҡурҡыуы-

пап түгел, фюрерға намыҫ менән хеҙмәт итеүсе ышаныслы тәржемәсе бирегеҙ.

Ундай тәржемәсе бик тиҙ табылды.

— Һеҙ, — тине бургомистр тәржемәсегә немецса, — ошо һерр офицер менән Пылыпчи ауылына китәсәкһегеҙ. Ул, яңылышмаһам, бынан ун һигеҙ километр.

Мадьяр һалдаты артына ултырған «ышаныслы тәржемәсе», Фәтиховҡа табан эйелә төшөп, юл буйы үҙе хаҡында лығырланы. Ул йәне-тәне менән бөйөк Германияға, фюрерға хеҙмәт итә. Ул, һерр офицер ни ҡушһа, шуны эшләргә әҙер. Ул... — Тәржемәсенең йөҙөндә тәлмәрйен йылмайыуы хасил булды. — Әле күптән түгел ҡыҙыл диверсанттарҙан допрос алғанда тәржемә иткән. Береһе бер һүҙ әйтмәгән, бер кешене һатмаған. Ә икенсеһе: «Хәшәрәт, хыянатсы!» — тип уның йөҙөнә төкөргән.— Тәржемәсенең йөҙөнә ғорурлыҡ сыҡты. — «Следователдән рөхсәт алып, икеһен дә ошо ҡулдарым менән атып үлтерҙем. Халыҡтың ҡотон алыр өсөн уларҙы күберәк ҡырырға кәрәк, шулай бит, һерр офицер?.. Бөгөн дә, ҡаршы тора башлаһалар, бер-икеһен бәрә йығам...» — тип әтәсләнде ул.

Офицер, ризалашып, баш ҡаҡты, ә аҙаҡ: «Бөгөн һеҙ миңә яҡшы ярҙамлашырға тейешһегеҙ. Әммә минең рөхсәттән башҡа бер кемгә бармаҡ менән дә сиртмәҫкә. Бөйөк Германияға бик күп көслө ирҙәр кәрәк. Йәнә шуны киҫәтеп ҡуям: уларҙы ҡайҙа алып барыуҙы бер кем дә белергә тейеш түгел.

— Ә мин? Мин белергә тейеш бит, — тине тәржемәсе, ярамһаҡланып йылмайып.

— Ә һеҙ... аҙаҡтан белерһегеҙ, — тине офицер, уның шикелле үк йылмайып.

Бына Белая Церковтың һуғышҡа саҡлы төҙөлгән аэродромын үтеп киттеләр. Ана, колонна ла килә ята.

Офицер мадьярҙы ашыҡтырҙы. Мотоцикл колонна янына килеп туҡтағас, офицер тәржемәсе аша бойорҙо.

— Бер кем урынынан ҡуҙғалмай. Ә конвой минең янға.

Унтер-офицер килеп честь бирҙе.

— Һерр обер-лейтенант, мин бында бөтәһе өсөн яуаплы. Миңә биш полицай ярҙамлаша.

— Ахтунг! — тип башланы офицер һүҙен. — Беҙ Белая Церковҡа табан барасаҡбыҙ. Унда беҙҙе вагондар көтә. Маршрутты мин үҙем күрһәтермен. Ә барып еткәс, кемгә ни эшләргә кәрәклеген яңынан әйтермен. Ә хәҙер... минең арттан шагом-марш!

Оло юлдан ситкә сығып, ауыл юлдарынан, баҫыу аша тураға киттеләр.

Дүрт сәғәттән колонна туҡтатыла. Алда шундай ҙур урман. Күбеһе япраҡлы ағастар. Арала ҡарағай, шыршы ла йәшелләнеп күренә. Офицер был әсирҙәргә лә бергә тығыҙ итеп уҡмашырға бойорҙо. Ашыҡмай төркөмдө әйләнеп сыҡты. Әсирҙәрҙең уға үлтергес ҡараштарын күреп, өшөп китте — хәҙер былар өсөн бер нәмә лә ҡурҡыныс түгел, улар иң хәтәр һәм сая подвигҡа ла әҙер ине. Арала ҡыйыуырағымы, тәҡәтһеҙерәгеме: «Әй, фриц, беҙҙе ҡайҙа ҡыуып алып бараһығыҙ?» — тине. Тәржемәсенән ул: «Әсир ни әйтте?» — тип һораны. Теге тәржемә итте. Офицер яуап бирҙе: «Һеҙ бараһын барып еттегеҙ инде, хәҙер үҙегеҙ күрерһегеҙ...» Әсирҙәр бер-береһенә ҡараштылар: был нимәне аңлата?

Ошо ваҡыт былар янына тимер юл кейеме кейгән биш кешенең килгәне күренде. Офицер колоннанан ун-ун биш аҙымға ситкәрәк китте лә конвойҙы кәңәшмәгә саҡырҙы, ә әсирҙәргә бер аҙым да ситкә китмәҫкә бойорҙо. Тәржемәсене теге тимер юлсыларҙы ҡаршыларға ебәрҙе. «Белегеҙ, улар бында нимә килә икән? Беҙҙе алырға түгелме?»

Офицер конвойға «күрһәтмәләр» биргән арала, тәржемәсе һәм тимер юлсылар килеп тә етте. Беленде: улар әсирҙәрҙе вагондарға урынлаштырырға ярҙамлашырға килгән. Составта тауар вагондары менән бергә пассажир вагондары ла бар икән. Унда ниндәйҙер бик мөһим кешеләр бара, шуға күрә посадка ваҡытында йә конвой ситтә торһон, йә карабиндарын йәшерһендәр, тип бойорғандар. Имеш, был совет офицерҙары Германияға үҙҙәре теләп китәләр.

— Дөрөҫ. Аҡыллы, — тип уларҙың һүҙен хупланы офицер һәм карабиндарҙы бер урынға йыйырға бойорҙо.

Карабиндар ергә өйөлөү менән, офицер полицайҙарға сафҡа теҙелергә команда бирҙе. Тәржемәсене саф башына баҫтырҙы.

— Бөтәгеҙ ҙә ҡоралдарығыҙҙы, патрондарығыҙҙы ташланығыҙмы? — тип офицер берәмтекләп тикшереп сыҡты.

Тәржемәсе кеҫәһенән пистолет алды.

— Миңә лә ҡоралды ташларғамы, һерр офицер?

— Ә һин кем ул саҡлы? — тип офицер уның ҡулынан пистолетты тартып алды ла тимер юлсыларға ишара яһаны.

Тегеләр бишеһе бер юлы пистолеттарын сығарып, конвойҙы әйләндереп алдылар. Офицер урманға табан күрһәтте. Тимер юлсылар конвойҙы һәм тәржемәсене урманға алып киттеләр. Офицер бер тимер юлсыға ҡалырға ҡушты. Офицер һөйләне, тимер юлсы тәржемә итте. (Аҙаҡ шуныһы асыҡлана: теге тимер юлсы немецса «айн-цвай-драйҙан» башҡа бер һүҙ белмәгән икән. Тик алдан әҙерләнгән тексты «тәржемә» иткән).

— Мин, — тип тимер юлсы офицер исеменән, — немец коммунисы-тельмансы. Һуғышты күрә алмайым. Гитлер һәм уның бандиттарҙан торған партияһы менән һуңғы фашист бөткәнсе көрәшәсәкмен. Кем ҡорал тотоп дошман менән көрәшергә теләй, — тип тимер юлсы, — шул минең менән китһен. Әгәр теләмәүселәр булһа, ҡасһындар, ҡорал тотоп көрәшмәһәләр ҙә, дошманға ҡаршылыҡ күрһәтһендәр, зыян итһендәр, ватһындар, емерһендәр...

Ҡешеләр шатлыҡтарынан бер-береһен ҡосаҡлай, күҙ йәштәре аралаш көлә, офицерҙың ҡулын ҡыҫа башланылар. Ҡоманданы ла көтөп тормай, ҡоралға үрелделәр. «Киттек! Киттек!» — тип тимер юлсыны ашыҡтырҙылар.

— Һеҙ хәҙер ирекле һалдаттар. Хәйерле осрашҡанғаса, дуҫтар. Рот-фронт! — Офицер йомарланған һул ҡулын өҫкә күтәрҙе.

Алтмыш әсир һәм тимер юлсы бер юлы: «Рот-фронт!» — тип ҡысҡырҙы.

Офицер мотоциклына ултырҙы ла Фастов ҡалаһы яғына елдерҙе.

## АВТОРҘАН

Был хаҡта миңә Желедко яҙып ебәрҙе. Аҙаҡта шундай һүҙҙәр бар ине:

*«Белая Церковта Фәтихов азат иткән кешеләрҙең береһе әле лә иҫән. Ул — инвалид. Исеме Денис, фамилияһы Шевченко. Ә теге тимер юлсыларҙы аҙаҡ гестапо ҡаптыра һәм 1943 йылда язалап үлтерә.*

*16 февраль, 1973 йыл. Киев».*

## Хыянатсыға — үлем

Рая сәс араһына ҡыҫтырып, Фәтихов өсөн Кушнирҙың хәбәрен килтерҙе: «Маркуша алыҫ сәйәхәткә сығырға тейеш».

Маркуша башҡаларҙан бер яғы менән дә айырылмай ине. Тыңлаусан. Ипле. Әҙәпле. Үҙ предметын белә һәм ярата ла буғай. Уҡыусыларға шаҡтай яғымлы, «икеле» ҡуйырға ашыҡмай, инде «икеленән» юғарыраҡ билдә ҡуйып булмаһа, яңынан һорап, хурлыҡлы билдәне төҙәттерҙе. Бер кем, бер ҡасан уның иҫерек түгел, ҡыҙмаса сағын да күрмәне. Ҡыҫҡаһы, ундай кешеләрҙе «һәйбәт, айыҡ кеше» тип йөрөтәләр. Бына шул кешенең йөрәгендә ағыуына сыҙаша алмаған йылан ятҡан икән.

Немецтар Киевты алгас, үҙҙәренең программаларын тәкдим итеп, ҡайһы бер мәктәптәрҙе астырҙылар. Шул иҫәптән Трухан утрауындағы йөҙөнсө (унда үҙ ваҡытында Рая Буяненко ла уҡыған булған) урта мәктәпте лә. Маркушаны тейешле ергә саҡырып: «Директор булаһығыҙмы?» — тип һорапылар. Теге бер һүҙһеҙ ризалыҡ бирҙе. Юҡ, бының өсөн уны ғәйепләп булмай әле. Әммә директор булып алғас, немецтарға ярар өсөн ул тиреһенән сығырға әҙер булды. Оккупанттарҙың бойороғо буйынса, өмәгә тип ул өлкән класс уҡыусыларын мәктәп ишек алдына йыя. Бер нәмә һиҙенмәй, көрәк, тырма тотоп килгән балаларҙы, өйҙәренә ҡайтармай, станцияға алып китәләр һәм, тауар вагондарына тултырып бикләп, Германияға оҙаталар.

Был «изгелеге» өсөн Маркушаны немецтар Трухан утрауының старостаһы итеп билдәләй. Хыянатсы тағы ла ныҡыраҡ ҡотора башлай, аҙ ғына шик тыуҙырған совет кешеләрен ошаҡлап, гестапога оҙаттыра. Халыҡ Маркушаны күргәс кенә түгел, исемен ишетһә лә ҡан ҡалтырай башлай, юҡ итеү тураһында ла уйлаусылар була, әммә ул бер ҡасан да бер үҙе генә йөрөмәй, етмәһә, Трухан утрауының старостаһы булһа ла, унда йәшәмәй, ә Подолда, Триполье геройҙары урамында, тора. Бына ошо хыянатсыны Фәтихов юҡ итергә тейеш! Улар (иптәше Ниценко тигән разведчик була. Ул да немец офицеры кейемендә йөрөй) Маркушаның ҡайҙан нисек йөрөгәнен, ҡасан ашағанын, ял иткәнен ентекләп өйрәнәләр һәм... ун дүртенсе июлдә яҙылмаған приговорҙы еренә еткерәләр.

Ишек алдында бер нисә ҡарсыҡ күләгәлә бейәләй, ойоҡбаш бәйләп, тел сарлап ултыра. Бала-саға туп тибә. Сәғәт ике. Был ваҡытта Маркуша ҡорһағы ҡабарып сыҡҡансы ашай ҙа аш һендерергә диванға ята. Ишек алдына ике немец офицеры килеп инә. Уларҙың береһе обер-лейтенант Фольринг-Фәтихов, икенсеһе гауптман-капитан. Икеһе лә ҡупшы кейенгән, салбарҙары үтекләнгән, ҡулдарында лайка бирсәткәләр, әленән-әле ҡул таяҡтары менән көҙгөләй ялтырап торған итек ҡуңыстарына һуғып алалар. Обер-лейтенант һүҙҙәрҙе вата-емерә ҡарсыҡтарҙан русса һорай: «Маркуша әфәнде ҡайҙа йәшәй? Унда нисек керә?» Ҡарсыҡтар Маркушаның кемлеген, ниндәй яуызлыҡтар эшләгәнен белһәләр ҙә, нәфрәттәрен һиҙҙермәй, ул йәшәгән йортто күрһәтәләр, квартира һанын әйтәләр. «Бынауы ике ҡатлы йортта, өсөнсө квартирала». Офицерҙар йылмайып рәхмәт әйтәләр ҙә ике ҡатлы ағас йортҡа инеп китәләр. «Тағы эсеп, типтерергә кереп киттеләр», — тип арттарынан шыбырлап ҡалалар — сөнки көн һайын тип әйтерлек кисен Маркушаның йортонда ҡатын-ҡыҙҙар була, немец офи-

церҙары йыйыла, йырлайҙар, аҡырып көлөшәләр, сыр-сыу киләләр. Әммә был офицерҙар оҙаҡ тормайҙар, ун-ун биш минуттан көлөшә-көлөшә сығып та китәләр...

Быуып үлтерелгән Маркушаны немецтарҙың криминаль полицияһы ентекләп тикшереп ҡараһа ла, эҙенә төшөнә алмай: йә партизандар эшелер, йә берәй көндәше ҡатын-ҡыҙ өсөн быуып үлтергәндер тигән һығымтаға килә.

Хыянатсыны, немец офицерын ерләгән шикелле, ҙур почет менән Фролов зыяратына ерләйҙәр. Ерләгәндә Желедко менән Фәтихов та була. Фәтихов: «Ниндәй кешене, ниндәй кешене харап иткәндәр бит, сволочтар. Ул бит украин халҡының Эйнштейны ине», — тип ҡайғырған була. Аҙаҡ, зыяраттан сығып, бер аҙ киткәс: «Аллага шөкөр, ер бер хәшәрәттән арынды», — тип көлә.

Немец һөжүмен артабан йәйелдерер алдынан үҙенең тылын партизандарҙан, подпольщиктарҙан тулыһынса таҙартырға тырыша. Шул иҫәптән Киев подпольщиктарынан да ҡотолорға ынтыла. Берлиндан гестапосылар ебәрелә. Оло ерҙән информация алыу ауырлаша. Йәй көнө ҡараңғы ун берҙәрҙә генә төшһә лә, комендант сәғәте киске ундан һигеҙгә күсерелә. Аҙым һайын облавалар, тентеүҙәр. Әгәр һин йә эшеңә, йә өйөңә китеп бармаһаң, тикшереп тә тормай, ябыҡ ҡара машинаға һалып, полиция идаралығына оҙаталар. Хәҙер айырыуса обер-лейтенант Фольрингка-Фәтиховҡа ауырға төшә. Былай ҙа ифрат «һайыҡҡан» Киев (1940 йылда ҡалала 930 мең кеше йәшәһә, ҡырҡ икенсе йылда һан 180 меңгә тиклем кәмей) үҙ тарихының иң хәтәр, шомло көндәрен кисерә, төндә урамдар, майҙандар тына, бер тәҙрәнән ут күренмәй. Ҡалала йәшенле ямғыр алдынан булған ауыр тынсыулыҡ урынлаша. Йәшәүе генә түгел, һулауы ла ауыр. Тимер ҡоршауҙың көндән-көн ҡыҫылғанын подпольщиктар һиҙһә лә, осрашҡанда был хаҡта һүҙ ҡуҙғатмаҫҡа тырыштылар. Оккупанттарға ҡаршы диверсиялар дауам итә. Мәҫәлән, Рая башҡа эшкә күсеп, бик мөһим немец штабына иҙән йыуыусы булып урынлашҡас, ифрат ҡиммәтле документ — Киевты обороналау схемаһын урлай. Светлин майор Рентель өсөн махсус эшләнгән бронекатерҙы юҡҡа сығара. Хатта гестапо: «Киевта бер подпольщик та ҡалманы», — тип шапырынған көндәрҙә подпольщиктар иҫ киткес ҡыйыу ҡаһарманлыҡ эшләйҙәр: Киевтың төньяҡ ситендәге «Пуща Водица» санаторийында немец офицерҙары ял итәләр, яңы енәйәттәр өсөн көс йыялар. Июль аҙағында подпольщиктар курзалға сәғәт механизмы менән шартлатҡыс ҡуялар һәм төшкө аш ваҡытында өс йөҙгә яҡын дошман офицерының көлөн күккә осоралар.

## «Каштан, онотма беҙҙе!»

Уң туғыҙынсы июль кисендә, патруль күҙенә салынмаҫҡа тырышып, конспирация шарттарын боҙоп булһа ла, подпольщиктар был юлы ғәҙәттәгенән күберәк булып бергә йыйыла: Кушнир, Фәтихов, Рая, Желедко, Светлин.

Осрашыу Андрей тауы башында, ҡоластарын йәйеп киңәйеп үҫкән ҡарт каштан төбәндә була.

Ғәҙәттәгесә, Фәтихов фронт хәлдәре менән таныштыра, подполье эштәренә йомғаҡ яһай, ҡайһы бер иптәштәрҙең уйлап уҡ бөтмәйенсә, һаҡланмай эш итеүҙәрен, шуның арҡаһында уңышһыҙлыҡтарға төшөүҙәрен, хатта ҡулға алыныуҙарын билдәләп үтә, аяуһыҙ тәнҡитләй.

— Подпольщик, — ти Фәтихов, — ярһыу йөрәк менән түгел, һалҡын баш менән эш итергә тейеш. Бына ул яҡтан мин «Тромбондың» ысын подпольщик булып өлгөрөүен әйтер инем. Ул тәүҙә ни эшләгәнен, ни әйткәнен белмәй ине. Тик мөмкин саҡлы дошманға зыян килтерергә, аяҡ салырға, ҡырырға... Дошманға аяҡ салыу, уны ҡолатыу — яҡшы эш, әлбиттә, ә бына уны үҙеңде тотолмаҫлыҡ итеп эшләү — тағы ла яҡшыраҡ эш... — Артабан Фәтихов үҙе белгән һәр подпольщиктың эшенә баһа бирә, маҡтай, тәнҡитләй, башҡа подпольщиктарҙың ни өсөн эләгеүҙәрен, харап булыуҙарын дәлилдәр килтереп һөйләп бирә. — Киев дошман агенттары, шпиктары менән тулған. Был һеҙгә билдәле, — ти ул, һүҙен йомғаҡлап, — әммә беҙ шуға ҡарап эшебеҙҙе туҡтатырға тейеш түгелбеҙ. Беҙҙең сираттағы акция судоверфте, цемент заводын шартлатыу һәм... конспирация һәм һаҡлылыҡ, һаҡлылыҡ һәм конспирация. — Ул, подпольщиктарҙы тәү тапҡыр күргәндәй, диҡҡәт менән ҡарап сыҡты. Раяның күҙҙәре, ғәҙәттәгесә, сая һәм ҡыйыу ҡарайҙар ине, Кушнир бик ныҡ үҙгәргән, йөҙө көл төҫлө, яңаҡтары эскә батҡан (ул бит төндә генә үҙенең өңөнән тышҡа сығып, үпкәһендәге подвал һауаһын саф һауа менән алыштыра, ә ашау... аҫҡа үлмәҫлек кенә...). Светлиндың ҡарашында йәшерен эске көс һиҙелә. Желедко... Желедко инде ул һәр ваҡыт динамит тултырылған механизмды хәтерләтә.

Фәтихов артынан Рая һүҙ алды.

— Немецтар әленән-әле беҙҙең халыҡтың ғына түгел, үҙҙәренең офицерҙарының да документтарын тикшерәләр.

— Ә... — ти Светлин, — мин әле быны ишетмәгәйнем. Ни булған?

— Хәҙер ентекләберәк һөйләйем, — тип һүҙен дауам итте Рая. — Кисә шулай Московский урамы буйлап немец офицеры — летчик менән көлөшә-көлөшә һөйләшеп китеп барам. «Беренсе май» паркына ингәндә, эсэс формаһында-

ғы офицер туҡтатты, минең «кавалерымдан» документ талап итте. Теге, ни эшләһен, танытмаһын бирҙе. Эсэс офицеры летчиктың документын ныҡлап ҡараны, бер фотоһына, бер летчиктың үҙенә ҡарап алды, быының менән генә ҡәнәғәтләнмәгәс, кеҫәһенән лупа алып, һәр хәрефте тикшереп сыҡты. Документты хужаһына ҡайтарып биргәс, мин сумкама тығылып, паспортымды һуҙҙым һәм рус теләндә: «Минең документымды ла тикшерәһегеҙме?» — тинем. Теге: «Найн, найн», — тип баш тартты. Летчикка киҫәтеп әйтте: «Офицерҙарға иғтибар итеберәк йөрөгөҙ. Киевта, Киев тирәһендә немец офицеры булып кейенгән рус диверсанты йөрөй». Һәм ул «диверсанттың» төҫ-башын, буйын-һынын һүрәтләй башланы. «Туҡта, туҡта, — тим эсемдән генә, — был бит беҙҙең Борис хаҡында һөйләй. Ҡаушауымды һиҙҙермәҫкә тырышып, ситкәрәк китеп, ағастан япраҡ өҙөп алған булдым, усымда ыуҙым... Эсэс офицеры летчикты яңынан киҫәтте. — «Ҡарағыҙ, һаҡ булығыҙ, улар бигерәк тә фронтовиктарҙы «яраталар». Диверсант ябай диверсант ҡына түгел, махсус мәктәп бөткән разведчик булырға тейеш. Беҙҙең бер нисә офицер уны тотам тип харап булды инде...» Минең башымда хәҙер бер генә уй ине: тиҙерәк был летчиктан ҡотолорға ла Борисҡа хәбәр итергә. Летчиктан арынып, сит ишек алдары аша өйгә сыҡтым. Нисек тә тиҙерәк Василде күрергә. Ул бит һеҙ йәшәгән квартираларҙы белә.

— Бөтәһен дә түгел шул, — тине Василь, ғәйепле йылмайып.

Раяның хикәйәһен бер нәмә булмаған шикелле тыңлап ултырған Фәтихов йылмайып алды.

— Беләм. Минең баш өсөн нисә мең марка аҡса вәғәҙә ителгәнен дә беләм. Хатта үҙемде үҙем тоторға ярҙам итешкәнем дә бар.

— Нисек үҙеңде үҙең тоторға? — тип дүртәү бер юлы уға ҡараны.

— Күптән түгел мин осраҡлы рәүештә бер гауптштурмфюрер (армия теләндә — капитан) менән танышҡайным. Ошо көндәрҙә мин урамдан китеп барам. Минең янымда ғына «оппелдең» тормоздары шығырланы. Ҡараһам, әлеге капитан. «Киттек, Ганс!» — ти берәү немец теләндә, машина ишеген асып. «Ҡайҙа?» — тим. «Ресторанға!» — «Эске килмәй», — мин әйтәм. «Ә беҙ эсергә түгел, бер кешене тоторға барабыҙ», — ти. «Кемде?» — тим. «Ултырығыҙ, аҙаҡ һөйләрмен», — ти.

Ресторанда ширма артынан урын һайлап алды. Ширма ярығынан һәр бер кергән-сыҡҡан кеше күренеп тора. Немец бик мул итеп ашарға, рус араҡыһы килтертте. «Уф-ф...

бөгөн эш шундай күп булды, арытты...» — тип бер нәмә ҡапмай рәттән бер нисә рюмканы ҡаплап ҡуйҙы. Күрәһең, ас булғандыр, иҫерә төштө һәм теле асылды.

— Теге русь, беләһегеҙме, ниндәй формала йөрөй? Эсэс офицеры булып. Эсэс... Вэт сволочь... Бар, тот һин уны... Эсэс офицерҙарын тикшерергә лә ярамай...

Мин әйтәм:

— Ә фотоһы бармы? Күрһәтегеҙ әле.

— Фотоһы булһа ул күптән... — Ул ҡулы менән муйынға муйынсаҡ кейҙереүҙе аңлатты. — Фотоһы юҡ шул.

— Ә ниндәйерәк ул? Шатенмы? Брюнетмы? Оҙонмо, ҡыҫҡамы? Йәшме, ҡартмы... тигәндәй...

Теге һүрәтләй башланы. Тура килә бит — мин. Һиҙҙермәй генә кобурамды кендеккә яҡынайттым, сисәм. Дөрөҫ, мин уның менән танышҡанда, өҫтөмә эсэс формаһы түгел, хәрби инженер мундирын кейгәйнем. Немец өҙлөкһөҙ эсте, ҡатын-ҡыҙ хаҡында оятһыҙ анекдоттар һөйләне, йомошо булмаһа ла, официанткаларҙы саҡырып, уларҙың ал һәм арт яҡтарын тотҡоланы. Ә ресторан ябылыуға, ләх булды. Мин уны етәкләп алып сыҡтым. Теге рулгә ултырмаҡсы була бит. Ирек бирмәнем. Машинаның тәҙрәләрен асып, үҙен шаҡтай оҙаҡ елләтеп йөрөнөм. Бер аҙ айный төшкәс, рулде тотторop, кәрәкле урында төшөп ҡалдым. Теге, ҡулын тәҙрәнән тығып: «Рәхмәт, рәхмәт!» — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра китеп барҙы.

— Шәп! — тине Фәтиховҡа табынған Железко.

— Шәплеккә шәп тә, — тине Кушнир, уйланып, — ә төптәнерәк уйлап ҡараһаң, хөрт. Иртәме, һуңмы улар беҙҙең эҙгә төшәсәк. Провалдар күп. Мин беҙҙең кешеләргә ышанам. Һатмаясаҡтар. Әммә... Иптәштәр, шуны тәҡдим итәм. Беҙ нисек тә Киевтан сығып китәйек тә Чернигов урмандарына барып етәйек. Шундай ҙур урмандар партизанһыҙ булмаҫ.

Светлин һүҙ алды.

— Яҡшы. Мин риза. Ә Чернигов урмандарына нисек барып етәбеҙ? Унда саҡлы, кәм тигәндә, ике йөҙ илле саҡрым бит. Үҙең беләһең, Федор Михайлович, былтыр көҙ Чернигов урмандарына йырып сығырға тырышып ҡарағанһың, булдыра алмағанһың. Ул саҡта әле фронт та билдәләнеп етмәгәйне, ә хәҙер... Хәҙер урмандарға барыусы юлдарҙы немецтар, полицайҙар һаҡлай. Ирҙәрҙе түгел, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, бала-сағаларҙы ла тентейҙәр, тикшерәләр, аҙ ғына шикле булһа, ҡулға алалар...

Төрлө варианттарҙы тикшергәндән һуң, улар Киевтан сығып китеүҙең мөмкин булмауын аңлайҙар. Шуға күрә

Кушнир, Фәтихов янына яҡыныраҡ ултырып, уға кәңәш итә.

— Борис... Федорович, бойормайым, бойорорға хаҡым юҡ, мин бит группаның раҫланған етәксеһе түгел, ә үтенәм, һин иртәгә үк Киевтан сығып кит. Һинең ышаныслы документың, немец офицерының формаһы бар. Һин партизандар зонаһына барып етергә тейеш. Һин нисек тә йәшәргә, иҫән ҡалырға тейеш. Беҙгә һинән башҡа ауыр булыр, әммә башҡа сара юҡ. Шундай киҫкен момент килеп етте, Борис Федорович, һин Киевта бер генә көн дә, хатта бер генә сәғәт тә ҡалырға тейеш түгел.

Хәрби инженер-капитан Светлин характеры менән кешегә ярамһаҡланырға, комплимент әйтергә ярата торған кеше түгел ине, әммә был юлы ул Кушнирға ҡушылды.

— Борис, мин һеҙҙе икенсе тапҡыр ғына күрәм. Ә Василь аша һеҙҙең хаҡта бик күп ишеткәйнем. Тәбиғәт һеҙгә йомарт булған. Әгәр тигеҙ бүлеп бирһәң, ун кешегә етерлек һеҙҙең бынамын сифаттарығыҙ бар. Шуға күрә беҙ һеҙҙең ғүмерегеҙ менән уйнарға тейеш түгелбеҙ. Китегеҙ Киевтан.

Был һүҙҙәргә Рая ла, ауыр көрһөнөп булһа ла, Желедко ла ҡушылды — уның Фәтиховтан айырылғыһы килмәй ине. Дүрт пар күҙ Фәтиховҡа текәлде.

— Иптәштәр... Был бит дезертирлыҡ, — тине Фәтихов бик ипле, ышаныслы тауыш менән. — Мин бит шуның өсөн Киевҡа кире урап килмәнем. Киев һеҙҙең өсөн нисек яҡын булһа, минең өсөн дә шундай яҡын. Бына ошонда, Днепр ярҙары буйында, мин үҙемдең Ағиҙел, Ҡариҙел, Бөрө йылғаларының да ярҙарын һаҡлайым. Үтенмәгеҙ, өгөтләмәгеҙ, мин һеҙҙе ташлап китә алмайым. Ни күрһәк тә, бергә күрербеҙ, һуңғы һулышыбыҙға саҡлы бергә булырбыҙ... — Уның был һүҙҙәрендә тантана ғына түгел, ант та бар ине. Ошоно аңлап булһа кәрәк, ул инде шаярта төшөп өҫтәп ҡуйҙы. — Цемент заводы мине һағынған бит әле. Цемент саңының күккә күтәрелгәнен күргем килә...

Тынлыҡ. Хәҙер подпольщиктар аңланылар — өгөтләп түгел, бойороп та Фәтиховты Киевтан сығарып ебәреп булмаясаҡ.

— Ул сағында, — тине Кушнир, тынлыҡты боҙоп, — ошо каштан аҫтына документтарыбыҙҙы күмәйек һәм ант итәйек: кем иҫән ҡала, документтарҙы соҡоп алып, тейешле органдарға тапшыра. Ҡаршы килеүсе юҡмы? Был эште... Василгә һәм Светлинға тапшырайыҡ. Ҡаршы килеүсе юҡмы?

Был осрашыу, һуңғы осрашыу, 1942 йылдың 19 июлендә булды.

Икенсе көндө кисен Светлин билдәләнгән урынға ҡырҡ биш миллиметрлы пушканың ярым яртылай ҡырҡылған бронза гильзаһын алып килә. Һәр кем үҙенең шәхси документын тапшыра. Документтарҙы перғаментҡа һәйбәтләп төрәләр, унан клеенка менән урайҙар, гильза төбәнә һалалар, төйгөсләп ҡағыҙ тултыралар, гильзаның өҫтөн һәм аҫтын шыйыҡ ыҫмала менән һылайҙар.

Гильзаны плащ кеҫәһенә һалып, кескәй сапер көрәген күлдәк аҫтына йәшереп, Железко менән Светлин әлеге каштан янына күтәреләләр.

Кисә һөйләшеп килешкән урынға (каштандан өс аҙым төньяҡҡа) гильзаны күмәләр. Күмелгән урын күҙгә ташланмаһын өсөн тирә-яҡтағы ерҙе лә соҡошторалар — балыҡсылар селәүсен эҙләгәндәр, имеш. Эш бөткәс, ҡуҙғалып киткәс, Светлин боролоп, каштанға ҡул болғай: «Каштан, онотма беҙҙе!»

Железко уның ҡулынан тота.

— Василий Григорьевич, үлергә йыйынмайбыҙ ҙа.

— Әллә нисек булып китте, әйтерһең, партбилеттарыбыҙҙы түгел, үҙебеҙҙе күмдек. Партбилетһыҙ ҡапыл үҙемде етем, көсһөҙ тоя башланым.

— Ҡуй, Киевты азат иткәс, бергәләшеп килеп соҡоп алырбыҙ.

## АВТОРҘАН

Юҡ, уларҙы һуңынан бергәләшеп соҡоп алырға тура килмәне. Киев дошмандан азат ителгәс, 1943 йылдың 9 ноябрендә Андрей тауына Железко яңғыҙы ғына килде. Ғәйепле кеше һымаҡ, каштан менән иҫәнләште. Теҙләнеп, әлеге таныш көрәк менән ерҙе соҡоно. Көрәк металға тейеп, сыңлап китте. Василь көрәкте атып бәрҙе — көрәк, әйтерһең, гильзаға түгел, һәләк булғандарҙың һөйәгенә тейҙе. Артабан дымлы ерҙе ҡулдары менән соҡоно, гильзаны һаҡ ҡына тартып алды, бушлат итәге менән балсыҡтан таҙартты. Көрәкте алып, ыҫмаланы ҡуптарҙы. Төйгөсләп тултырылған ҡағыҙҙы ағас ботағы менән тартып сығарҙы.

Бына ул бөтә нәмәләрҙән дә ҡәҙерле документтар — реликвиялар. Ул, әйтерһең, Кушнирҙың, Фәтиховтың, Раяның, Светлиндың йөрәк янында йөрөткән иң ҡәҙерле документтарын ғына түгел, үҙҙәрен гүрҙән соҡоп алды...

Василь Железконың күҙҙәренән өҙлөкһөҙ йәштәр тәгәрәп төшөп, ошо документтарға тамғанын үҙе лә һиҙмәне.

Өс көндән, йәғни 13 ноябрҙә, ул документтарҙы ВКП(б)-ның Подол райкомына тапшырҙы.

Киевҡа барған һайын мин Василий Иванович Железко менән был ҡарт каштан янына киләм. Ағас йәнһеҙ. Бер нәмә һөйләй алмай, тик яҙҙарын сәскә ата ла күҙҙәрен сәтләүеген ергә ташлай. Ҡаштан сәтләүеге ҡаты ергә төшөп шартлаған һайын, мин тертләп китәм, әйтерһең, Фәтихов, уның көрәштәштәре дошманға граната ырғыта...

Кәңәшмә бөткәс, таралышырға ҡуҙғалғас, Фәтихов кәйефте күтәрер өсөнмө, әллә күптән уйлаған уйынмы әйтә һалды.

— Үлһәк тә музыка менән үләйек, иптәштәр. Әгәр гестапо берәйебеҙҙе эләктерһә, балта менән тураҡлаһындар, әммә телһеҙ, күҙһеҙ булып үлегеҙ. Ә кем иҫән ҡала, шул башҡалар өсөн үс ала. Василь, беҙ тиҙерәк цемент заводын күккә күтәрергә тейеш, ә унан судоверфкә ток бирә торған подстанцияны юҡҡа сығарырға. Шартлатҡыс әҙер, тик заводҡа индерергә генә кәрәк.

— Кешеһе бар, — тине Железко.

Цемент заводы шартлатылды, ә бына подстанцияға ҡул етмәне. Дөрөҫөрәге, ваҡыт етмәне.

## ЕГЕРМЕ ТУҒЫҘЫНСЫ НОВЕЛЛА

### Колбаса ярҙам ҡулын һуҙа

Ҡайтҡас, көйҙөрөлгән кишерҙән яһалған шәкәрһеҙ сәйҙе эскәндә, Кушнир Рая менән Василгә күптән тынғылыҡ бирмәгән уйын һөйләне.

— Беҙ бит бер кеше тарафынан планлаштырылмаған һәм ойошторолмаған «ҡырағай» группа, шуға күрә беҙгә көрәшеүе бигерәк тә ауыр. Миңә нисек тә Киевтан сығып, Чернигов партизандары менән контактҡа инергә кәрәк. Бәлки, партизандарға килгән самолет менән Мәскәүгә лә барып етермен. Группабыҙ хаҡында һөйләрмен, ҡорал, боеприпас менән ярҙам итеүҙәрен һорармын.

— Ә нисек Киевтан сығырға? — тине Рая. — Ҡалала һеҙҙең бында икәнлегегеҙ хаҡында һүҙ йөрөй бит. Моғайын, гестапоның ҡара исемлегендә тораһығыҙҙыр.

— Днепрҙан. Һыу транспорты менән, — тине Кушнир, көрәк һаҡалын һыйпап, хәйләле йылмайып.

— Ә кем һеҙҙе карапҡа ултыртып алып китә? — тине Железко менән Рая бер юлы. — Ундай кешене табыуы еңел түгел бит.

— Бар ундай кеше, бар, — тине Ҡушнир, ышаныслы итеп.

— Кем? — тинеләр йәнә Железко менән Рая берҙәм, бер-береһенә ҡарашып.

— Сергей. Ҡолбаса.

— Юҡ, юҡ, юҡ. Мин уны һуғышҡа саҡлы ла яратып бөтмәй инем, ә хәҙер бигерәк тә. Оккупанттарҙың табанын яларға әҙер, ти. Бер көндө үҙен урамда осраттым — шундай ҡәнәғәт атлап, башын күтәреп хәтәр генә итеп бара, әйтерһең, үҙен генерал иткәндәр.

— Ә ниңә һеҙ Ҡолбасала (фамилияһы ниндәй бит!) туҡталдығыҙ, Федор Михайлович? — ти Железко, Раяны хуплағандай.

— Ниңә, тиһегеҙме? Уның биографияһы таҙа: эшсе ғаиләһендә тыуып үҫкән, бик иртә ҡулына сүкеш, слесарҙар асҡысы алған. Оҙаҡ йылдар беҙ уның менән бергә эшләйбеҙ. Тәүҙә гаражда шофер булды, унан төрлө караптарҙа механик булып йөҙҙө. Ни ҡушһаң, шуны эшләне, һуҡранманы, һынатманы. Нисә йылдар эшләп, үҙен бер тапҡыр профкомда ла тикшермәнек. Ә былтыр йыл башында партияға кандидат итеп алдыҡ.

— Бер рекомендацияны һеҙ үҙегеҙ биргәнһегеҙ, — тине Рая, аҫтыртын төрттөрөп.

— Бирҙем инде, коммунист булырга лайыҡ тип иҫәпләнем.

Рая бирешергә теләмәне.

— Ә хәҙер? Ә хәҙер? Пароходта немецтарға йөк ташый.

— Улайһа, һин дә.... Василь дә немецтарға эшләй. Был әле уның репутацияһына күләгә төшөрмәй. Ғаиләһе эвакуацияланғас, ҡайһы бер ирҙәр һымаҡ, «кәзә һуҡмағынан» йөрөй башламаны, ә ҡайныһы менән ҡәйнәһе квартираһына күсеп китте.

Эйе, Ҡушнирҙың Ҡолбасаға шикләнергә нигеҙе юҡ ине. Ә бына Рая... уның да шикләнергә нигеҙе юҡ, шулай булғас, ниңә ул ҡаршы? Ниңә уның күңеле Ҡолбасаға ятмай?.. Була бит шундай кешеләр: һинә, һиңә генә түгел, башҡаларға ла бер насарлығы теймәй, әммә уны барыбер яҡын итеп, яратып булмай. Бәлки, һөйкөмлөлөктәре... әйтергә яраһа, йөрәк нурҙары юҡлыҡтандыр. Һуң, быныһы бит инде кешенең үҙенән түгел, ә тәбиғәттән.

Ай-һай, тәбиғәттән генәме икән?..

— Раечка, — тине Ҡушнир, — иртәгә һин Ҡолбасаның өйөнә бар. Имеш, һине Ҡушнир хаҡында белә, тиҙәр, имеш, ул Киевта, тиҙәр — шул дөрөҫмө? Уның менән күрешеп

булмаçмы? Әсәйемдең дә Кушнирҙы бик күрәһе килә... Фәлән-фәсмәтән...

— Һис аяғым тартмай, Федор Михайлович, — тине Рая, көрһөнөп.

— Хистәргә бирелмәйек, Раечка. Шикләнергә мин бер сәбәп тә күрмәйем.

— Яҡшы. Бойороҡ тикшерелмәй, үтәлә...

Колбаса Раяны ауыҙын йырып, ҡуш ҡуллап ҡаршы алды.

— Әсәй, әсәй, — тип ҡәйнәһен саҡырҙы. — Ҡара әле, беҙгә кем килгән? Был бит беҙҙең Рая. Заводтың беренсе йырсыһы, беренсе һылыуы... Йә, нисек йәшәйһегеҙ? Балалар ҡайҙа? Эвакуацияламы әллә бындамы?..

Улар шәкәрләп ысын сәй эстеләр. Сәй эскәндә, әңгәмә кисә һөйләшкәнсә барҙы.

Колбаса, Кушнир исемен ишеткәс, бөтөнләй үҙгәреп китте. Унан һүрелде.

— Ҡайҙалығын белмәйем шул, белмәйем, Раечка. Киевта икәнлеген ишеткәнем бар, ә бына... ҡайҙа йәшәгәнен белмәйем...

— Әгәр белһәгеҙ, ни эшләр инегеҙ? — тип Рая уға тишеп ҡараны.

— Белһәмме? Шунда уҡ үҙен эҙләп тороп йүгерер инем.

— Ҡурҡмаç инегеҙме ни?

— Ә кемдән, нимәнән ҡурҡырға? Мин бит үҙем, кеше күҙенә күренмәç өсөн, гел йөҙәм дә йөҙәм, һыуҙан сыҡмайым. Халыҡ, моғайын, мине немец ялсыһы тип һүгәлер әле. Их, Федя менән осрашырға! Беҙ уның менән фрицтың кәрәген бирер инек. Мин ул ни ҡушһа, шуны эшләргә әҙермен, Раечка. Мин уның өсөн... — Йәнә уның күҙҙәрендә ут тоҡанды ла шунда уҡ һүнде. — Ә һин, Раечка, уның ҡайҙалығын сама менән дә белмәйһеңме?

— Юҡ, белмәйем, — тине Рая. — Күптән былдай тәмле ысын сәй эскәнем юҡ ине, рәхмәт, — тине ул, урынынан тороп.

Колбаса ҡыйынһынды.

— Гел немецтарҙы йөрөтәм бит. Ә улар араһында һәйбәттәре лә килеп сыға. Зинһар, Федя хаҡында ишетә-нитә ҡалһаң, хәбәр итә күрсе.

Рая уйланып, борсолоп ҡайтты. Ни саҡлы ғына Колбаса уны яҡшы ҡаршы алмаһын, тәмле сәй менән һыйламаһын, барыбер, йөрәгенә ятманы. «Ниңә уның күҙҙәрендә ҡапыл ут тоҡана ла шунда уҡ һүнә? Был нимә: ул артыҡ ҡыҙыу, нервылы кешеме, әллә эсе тулы ҡапма-ҡаршылыҡ-

тармы?..» «Ә ниңә ул бик тиҙ, аҙ ғына ла икеләнмәй, шикләнмәй, Федя ни ҡушһа, шуны эшләргә әҙермен», — тине әле? Ниңә аҙ ғына ла уйланып торманы?.. Юҡ, юҡ, Рая, кеше булараҡ, ир кеше булараҡ, ул һиңә оҡшамай, шуға күрә һин уның һәр һүҙенән, һәр ҡарашынан ғәйеп эҙләйһең. Кушнир — тәжрибәле кеше, завком председателе, партком секретары булып эшләгән... Ә шулай ҙа... Ә шулай ҙа... Ниңә... Кушнир Колбаса хаҡында каштан төбөндә осрашҡанда, Фәтихов барында әйтмәне икән?.. Фәтихов бит кешеләрҙе үтәнән-үтә күрә, бер осрашҡанда уҡ холоҡтарын аңлай...

Кушнир Раяның «рапортынан» бик ҡәнәғәт ҡалды һәм, шелтәләгән һымаҡ, аҙаҡ әйтеп ҡуйҙы: «Ә һин, Раечка, шикләнгәйнең. Кеше бит ул иң ҡатмарлы машиналарҙан да ҡатмарлыраҡ. Иртәгә кисен Колбасаны минең янға алып киләһең, һуҙырға ярамай».

— Ҡайҙа, теге каштан аҫтынамы? Кенәз Владимир һәйкәле янынамы?

— Юҡ, бында, минең өңөмә.

Рая ҡаршы әйтмәксе булғайны, «барыбер мине тыңламаясаҡ, үҙенсә эшләйәсәк», — тип телен тешләне.

— Светлинға ла әйт. Ул да килһен.

Рая Кушнир янынан сығыу менән Желедко йәшәгән йортҡа керә. Кушнирҙың Колбаса менән осрашырға теләүе хаҡында ярһып һөйләй. Желедконың да йөрәге әллә ни эшләп китә, хәҙер үк Фәтихов янына тороп йүгерерҙәй була, әммә комендант сәғәте күптән башланғайны инде.

Икенсе көндө ул Фәтиховты күрҙе. Кушнирҙың уй-планын һөйләп бирҙе. Фәтихов уйланып ары-бире йөрөнө.

— Был аҡыллы аҙым түгел, Василь. Был бик хәтәр аҙым. Ә инде конспиратив квартираға саҡырыу... нисек әйтергә лә белмәйем. Һуң, аҡыллы кеше бит ул... Хатта Кушнир Киевтан киткән осраҡта ла, бер кем дә уның ҡайҙа йәшәгәнен белергә тейеш түгел. Подпольеның законы шулай. Осрашҡанға саҡлы Колбасаны бер аҙ һынарға, ваҡтөйәк заданиелар биреп ҡарарға кәрәк ине. Беҙҙең эштә яңылышыу — үлем менән бәрәбәр. Уның пароходта Киевтан сығып китеү идеяһы һәйбәт, әлбиттә, әммә... Әйт һин уға, Колбаса менән ул осрашмаҫҡа тейеш. Элемтә тотҡанда ла, икенсе, өсөнсө кешеләр аша ғына тотһон. Зинһар, ашыҡмаһын. Бөтәһен дә бергәләп уйлашырбыҙ.

Эш бөтөү менән, Желедко өйөнә сабып ҡайта. Фәтиховтың һүҙҙәрен тапшыра. Кушнир: «Юҡҡа борсола, мин был аҙымды атлар алдынан эсемдән генә йөҙ тапҡыр атлап, үлсәп ҡараным, — ти тыныс ҡына. — Унан... элекһәк, Колбасаның да башынан һыйпамаясаҡтар бит, икебеҙгә

лә элмәк. Раяны мин бер йомош менән ебәрҙем, ҡайтышлай ул, Ҡолбаса янына кереп, уны бында алып киләсәк».

— Ә мин киттем, уны күрергә теләмәйем, — тине Желедко.

— Юҡ, ҡал. Светлин да киләсәк. Бергәләп план ҡорорбоҙ.

Кушнирҙың планы Желедкоға билдәле булһа ла, ул ҡалырға була — ҡыҙыҡ, Ҡолбаса планды нисек ҡабул итер икән?..

Ул арала ишеккә шартлы ҡағалар. Кушнир шатланып китә.

— Әһә, беҙҙең пароль. Моғайын, Светлиндыр. Уның ҡағыуына оҡшаған.

Исәнләшеп, ултырып, хәл-әхүәл һорашырға өлгөрмәнеләр, йәнә ишек ҡаҡтылар: тире-тире, точка.

— Рая! — тине Кушнир, урынынан тороп.

Алдан Ҡолбаса керҙе, унан — Рая. Ҡараңғылы-яҡтылы бүлмәлә тәүҙә Ҡолбаса Кушнирҙы танымай торҙо, тик ул: «Рәхим ит, Сережа!» — тигәс кенә, тауышынан танып, барып ҡосаҡлап алды.

— Федя... Ә мин һине поп тип торам.... Федя, ҡәҙерлем... — Ул ҡулъяулығын алып, күҙҙәрен һөрттө. — Был һинме, Василь? — Ул Желедконың ҡулын ҡыҫты. — Ә был... Светлин иптәш бит? Хәтерләйем, хәтерләйем инженер-капитан третьего ранга... Беҙҙән хәрби караптарҙы ҡабул итә торғайнығыҙ... — Ул Кушнир «өңөн» ҡарап алды. — Бына ниндәй подвалда йәшенеп ятаһың икән һин, бахырҡайым. — Шунда уҡ теманы үҙгәртте. — Яҡшы түгел, Федя, яҡшы түгел, һеҙ дошман менән көрәшәһегеҙ, ә мин...

— Ярай, үпкәләмә, Сережа, — тине Кушнир, уның яурынына ҡулын ҡуйып. — Һинең көндәрең алда әле. Йә, нисек йәшәйһең?

— Нисек булһын? — Уның тауышында ирония ишетелде. — Дошманға хеҙмәт итәм. Буксир пароходында механик. Тыңламай ни эшләйһең, юҡһа Германияға һөрәсәктәр. Ике насарлыҡтың береһен һайланым.

— Ә немецтар һинең партияға кандидат икәнлегеңде беләме?

Рая абайлап алды: Ҡолбасаның күҙҙәрендә ут тоҡанды ла шунда уҡ һүнде.

— Ул хаҡта һүҙ ҡуҙғатҡандары юҡ. Беләләрме, белмәйҙәрме, — белмәйем.

— Ә кандидатлыҡ билетың ҡайҙа?

— Йәшерҙем. Овчарка менән эҙләһәң дә табырлыҡ түгел.

— Ҡара, һаҡла. Һуғыштан һуң ағза итеп алырбыҙ.

— Тиҙерәк килһен ине ул көн.

— Пароходта ҡайҙарға саҡлы йөрөйһөгөҙ?

— Төрлөсә була. Өсәр йөҙ километр түбәнгә лә, юғарыға ла йөҙөргә тура килә.

— Әһә. Ә команда?

— Командамы? Командала командир, ун алты матрос (күбеһе — тәжрибәһеҙ ауыл малайҙары. Германияға ебәреүҙән ҡасып килгәндәр). Механик, уның ярҙамсылары. Ә... Онота яҙғанмын, өс автоматчик.

— Чернигов яғына ҡасан рейсығыҙ була?

— Бөгөн ниндәй көн әле? Әһә, шәмбе. Егерме алтыһында, дүшәмбе көн. Ә ниңә?

— Мине Чернигов тирәһендәге урмандарға саҡлы алып барып, ташлап китергә кәрәк.

— Була ул! Ә ниңә?

— Партизандарға ҡушылырға!

— Федя, дуҫҡайым, туғанҡайым, һин ни ҡушһаң, мин шуны түшем менән шыуып эшләргә әҙермен. Тик быны нисек эшләргә? Автоматчиктар һәр кешене энә күҙенән үткәрәләр.

— Бөтәһе лә уйланылған, Сергей. Йәкшәмбе көндө команда ҡайҙа була?

— Таралалар. Ҡарапта ерәү ҙә ҡалмай.

— Бик яҡшы, иртәгә төндә мине инвентарҙар ҡуя торған артҡы кубрикка кертеп бикләп ҡуяһың. Ҡасан йөк ала торған пунктҡа барып етәһегеҙ?

— Икенсе көндө таң атҡанда. Черниговтан ун-ун ике километр арыраҡ.

— Бик яҡшы. Төндә һин мине кубриктан сығараһың. Беҙ автоматчиктарҙы тауышһыҙ ғына юҡ итәбеҙ ҙә, суйын плиталәр бәйләп, Днепрға ырғытабыҙ. Яр буйына туҡтайбыҙ. Һине битеңдә күмгәктәр ҡалдырырлыҡ итеп бәргеләйбеҙ ҙә бәйләп ташлайбыҙ. Түшеңә яҙыу ҡаҙап китәбеҙ: «Ҡем дошманға хеҙмәт итә, уны шундай яҙмыш көтә. Немец-фашист оккупанттарына үлем! Чернигов партизандары». Йә, батамы?

— Батыуын бата, тик... — Ул йылмайҙы. — Матростар мине бөтөнләй үлтереп ташламаһындар. Улар миңә асыулылар, күҙ артымда: «Халуй», — тип кенә йөрөтәләр.

— Үлтермәҫтәр. Дуҫтарса үҙем бер-икене тондорормон.

— Добро! — тине Колбаса. — Эшләйбеҙ уны.

— Ә... — тип борсолдо Кушнир, — комендант сәғәте күптән башланды. Бәлки, бында ғына ҡунып китерһең. Василдең өйө иркен.

— Борсолмағыҙ, минең тәүлек буйына йөрөй торған пропускым бар.

— Ә... — тине Василь, аптырап та, ҡыҙығып та. — Немецтар уны бик һирәк кешегә бирәләр.

— Төрлө саҡ була бит, рейстаһ бик һуң ҡайтырға ла тура килә. — Инде ишек төбөнә еткәс, дуҫтарса һораны. — Федя, бөтә подпольщиктарығыҙ ошо ғынамы ни?

— Минең урынға Светлин ҡала. Һин уның аша элемтә тоторһоң, ә ҡалғандарын... һиңә белеүҙең хәжәте юҡ. Подполье бит.

— Эйе, эйе, унынһы шулай. Ярай, киттем. Һиңә өс тапҡыр шаҡырға бит әле?

— Эйе. Ике тапҡыр ҡаты итеп, оҙаҡ итеп, бер тапҡыр ҡулды тейҙереп кенә алырға.

Улар ҡосаҡлашып үбешеп алдылар, айырылыштылар.

Ҡолбаса сығып киткәс, Кушнир башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, ары-бире йөрөнө.

— Оҙаҡламай был «өңдән» ҡотолам, дуҫтар. Яҡты донъя һағындырҙы... Урамда, урманда рәхәтләнеп йөрөгөм килә. Мин бит йөҙөргә генә түгел, йөрөргә лә ифрат яратам... — Ул барып Раяны ҡосаҡлап алды. — Хәҙер ни әйтерһең, минең батыр, сая разведчигым?

— Бер һүҙ ҙә әйтмәҫкә мөмкинме? — тине Рая, һағышлы йылмайып.

— Яҡшы, яҡшы, һәр кем үҙ фекерендә ҡалһын.

— Беҙ киттек, Федор Михайлович, — тине Василь, урынынан тороп, — иртәгә, юҡ, бөгөн беҙ иртүк Пироговоға юл тотабыҙ.

— Хәйерле юл. Василий Григорьевич, һин бер аҙға ҡал әле. Һөйләшәһе һүҙҙәр бар, — тине ул, Светлиндың ҡулын тотоп.

Коридорға сыҡҡас, Рая әрнеп әйтеп алды: «Их, бигерәк кешеләргә ышаныусан шул беҙҙең Федор Михайлович». «Нишләйһең бит, шулай тәрбиәләнгән», — тине Железко, әллә уның менән килешеп, әллә килешмәй.

25 июлдә иртән ишек ҡаҡтылар: тире, тире, точка. Иртәнге татлы йоҡоға талған Кушнир ашыҡмай ғына тора, еҫкәнеп ала. Ишеккә ҡағыу ҡабатлана. «Хәҙер, хәҙер, салбарҙы ғына кейәм... Бәлки, Раялыр...» Ул яй ғына ишекте аса һәм шул секундта уҡ ике бәһлеүән уның ҡулдарын бороп ала. Шул уҡ йорттоң икенсе ҡатында йәшәүсе Рая магазиндан ҡайтыуы менән гестапо ҡулына эләгә.

Пирогово ауылына Фәтихов менән Железко төш етеүгә генә барып керҙеләр. Кирбес заводына яҡынлашҡас, Железкоға таныш булмаған кеше ҡаршы сыға. «Сәләм!» — «Сәләм!» тип кенә иҫәнләшәләр. Фәтихов уға листовкалар бирә һәм шартлатҡысты ҡасан алыу хаҡында һүҙ ҡуйыша-

лар ҙа «Пока!» — «Пока!» тип хушлашалар һәм, хәл йыйып та тормай, ҡайтырға сығалар. Железко:

«Ниндәй кешеләр улар?» — тип һорай. Фәтихов көлөп яуаплай: «Киевты азат иткәндең икенсе көнөндә үк әйтермен». Железко башҡа төпсөнмәй.

Киевҡа етәрәк, Фәтихов үҙенең хәлһеҙләнгәнен һиҙҙе. «Мин әллә сирләп киттем инде, маңлайымды тотоп ҡара әле, эҫе түгелме?» — ти. Железко уның маңлайына усын ҡуйып ҡарай. Ысынлап та, маңлай ут кеүек яна ине. Фәтихов Крещатиктағы квартираһына ҡайтырға булды. Ни генә тимә, Даша — медсестра, температураны төшөрә торған дарыуы барҙыр...

Железко уны Планетарийҙан Крещатикка саҡлы оҙата барҙы. «Ярай, хуш! — тине Фәтихов, — ҡул бирмәй генә айырылышайыҡ, — ул йылмайҙы, — ни генә тимә, мин сирле кеше бит!» — Фәтихов, ғәҙәттәгесә, егәрле итеп түгел, һүлпән генә атлап китеп барҙы. Һәм ул, бер аҙ киткәс, бер ҡасан да эшләмәгән эште эшләне — боролдо ла Железкоға ҡул болғаны.

Железко Андрей сиркәүе янынан өйөнә ҡайтып китте. Өйҙәре күренеү менән, күҙгә ташланған нәмә — тулыһынса асылған форточка була...

## ЖЕЛЕДКО ҺӨЙЛӘЙ

Ҡапыл йөрәгем әллә ни эшләп китте. Кемдер ҡыҫып алғандай булды. Һуғышта үлем менән күпме осраштым, ҡаушаманым, ни эшләптер был юлы бер нисә секундҡа юғалып ҡалдым. «Тимәк, мин юҡта ни ҙә булһа булған...» Урамда уйнап йөрөгән ике малайҙың береһен иҙләп кенә саҡырып алдым. «Бынауы бәкене күрәһеңме?» — тим тегегә. «Күрәм», — ти малай, күҙҙәрен йылтыратып. «Оҡшаймы?» — «Оҡшай». — «Минең йомошомдо тыңлаһаң, бәкè һинеке булыр». — «Әйт кенә. Ни ҡушһаң, шуны эшләшермен». — «Бар, анауы йорттоң ишек алдына кер ҙә берәй малайҙан һора: «Бөгөн был йорттан береһен дә ҡулға алмағандармы?» Тик иҙләп кенә һора. Бер кем ишетмәһен». Бер аҙҙан малай йүгереп килде. Күҙҙәре маңлайына менгән. «Бөгөн иртән анауы йорттан бер һаҡаллы бабай менән бер апайҙы алып киткәндәр. Үҙ күҙҙәре менән күргәндәр». «Тимәк... Федор Михайлович менән Раяны...» Тәүге теләк — был хәтәр урындан тороп йүгереү булды. Яҡшы, ә унда — минең эсәй. Унда — иҙән аҫтына йәшерелгән радиоприемник, мөйөштәге тәреләр артында — кәрәкле ҡағыҙҙар, минең документтарым. Уларҙы тапһалар, әсәйемде, һис һүҙһеҙ, ҡулға аласаҡтар, язалаясаҡтар... Йәнә ҡот оҫҡос уй:

о Фәтихов? Уны ла ҡулға алыуҙары бар бит. Дөрөҫ, ул бер урында ғына йәшәмәне, уның бер нисә квартираһы булды, әммә ул бит Крещатикка ҡайтып китте. Бөтәһе күҙ алдында...

Шулай уйланып, таң атҡансы ағастар араһында боҫоп ултырҙым да, комендант сәғәте бөткәс, Крещатикка саптым. Юлда осраған иҫке «газикты» туҡтаттым. «Күпме һораһаң, шул саҡлы бирәм, зинһар, Крещатикка илтеп ташла», — тип ялындым. Шофер мыҫҡыллы йылмайҙы. «Нимә, берәйһе үләме әллә?» «Үлә шул», — мин әйтәм. Париж коммунаһы урамының башына барып сыҡҡас, иҫке костел янында машинаны туҡтаттым: «Хәҙер сығам», — тип дүртенсе һанлы йортҡа йүгереп кереп киттем. Боролмалы баҫҡыстан нисек күтәрелгәнемде лә хәтерләмәйем. Яңылыш өсөнсө ҡатҡа менеп киткәнмен. Туҡта әле, уларҙың квартираһы 2-а бит. Ҡире төшөп, кәрәкле ишекте ҡаҡтым. Ул арала күрше ишек асылды һәм ябыҡ бер ҡатындың башы күренде. «Улым, тиҙерәк ысҡын. Күптән түгел Бористы алып киттеләр». Мин, баш ҡағып, рәхмәт әйттем дә осоп төшөп киттем... Ул көндө мин көнө буйы Днепр яры буйында, патрулдәр һәм шымсылар күҙенән ситтә, аҙашып йөрөнөм. Мейене бер генә һорау ярып, яндырып үтә: «Кем, кем һатҡан?» Төн уртаһы еткәс, күләгә булып үҙебеҙҙең урамға килдем. Бер-ике аҙым атлайым да туҡтап тыңлап торам. Улай бер кем күренмәй шикелле, тауыш-тын да ишетелмәй... Өйгә атылып керҙем. Әсәй, мин ҡайтырҙы белгән кеүек, ишекте бикләмәгән. Ул мине ҡосаҡлап үкһей башланы. Мин унан тиҙ генә арынып, иконалар артындағы ҡағыҙҙарҙы алып, плитә алдында яндырып, көлөн сүп биҙрәһенә ташланым, иҙән аҫтындағы приемникты алып, иҙән таҡтаһын ҡапларға ла өлгөрмәнем, ишек ҡаҡтылар. Тәҙрәгә ташландым, аҫта мөйөндарына автоматтарын аҫҡан ике немец ашыҡмай ғына йөрөй ине. Ишеккә ҡағыу көсәйҙе. «Асығыҙ, юҡһа өйөгөҙгә ут төртәм», — тине ишек артындағы кешеләрҙең береһе русса. Мин кухняға кереп, сарҙаҡҡа менә торған ҡапҡас аша өй түбәһенә сыҡтым. Ерҙәгеләр мине күрепме, шатыр-шотор иткән тауышымды ишетепме: «Ана, ана, өй түбәһендә ул», — тип ҡысҡырыштылар. Мин немецса: «Таралығыҙ! Юҡһа граната ташлайым!» — тип ҡысҡырҙым. Тегеләр шунда уҡ йығылдылар. Мин, өйгә терәлеп үҫкән каштан ботаҡтарына тотоноп, күрше йорттоң ишек алдына һикереп төштөм дә тороп саптым. Төндә баҡсала, ҡарт тирәк ботағына атланып ултырып сыҡтым. Икенсе көндө Саликовский шәкәр заводына йүнәлдем. Унда минең ышаныслы кешеләрем бар ине. Ҡыумаҫтар, йәшерерҙәр, тип өмөтләндем. Һәм йәшерҙеләр ҙә.

## Һуңғы һөйләшеү

Ғәҙәттә бер юлы ике баҫҡыс аша йүгереп менгән Фәтихов икенсе ҡатҡа менеп еткәнсе ике-өс тапҡыр хәл йыйып торҙо. «Ни эшләп, ошондай эҫе көндә... селләлә ҡапыл сирләп киттеме һуң? Дөрөҫ, уның бала саҡтан ҡалған бронхиты бар, ләкин... әле... бөгөн сирләргә сәбәп юҡ бит».

Ишекте Даша асты. Шунда уҡ күҙҙәрендә шатлыҡ нурҙары хасил булды.

— Ай! Һине күрер көн дә бар икән. Юғалдың, Борис, оноттоң беҙҙе. Ярай әле бөгөн килдең. Иртәгә иртүк мин ауылға китәм. Юля ла, Петя ла ауылда.

— Мин сирләп киттем, Дашенька, — тине Нур, диванға ултырып. — Ҡана, температураны төшөрә торған ниндәй дарыуың бар?

— Бәлки, аҙыраҡ спирт йоторһоң?

— Юҡ, юҡ, температура ныҡ күтәрелде...

Эйе, ысынлап та, температураһы ҡырҡ тирәһендә ине. Даша уға аспирин бирҙе, күкрәгенә, арҡаһына горчичник ҡуйҙы һәм Нур бер аҙҙан ойоп китте. Уянғанда, ул һыу эсендә ята ине. Баш ауыртыуы кәмегән, температура шаҡтай нык төшкән, әммә хәл юҡ ине. Ул тороп ултырҙы. Шунда уҡ Даша килеп етте.

— Нимә, дарыуҙарым аҙыраҡ файҙа иттеме?

— Миңә йыуынып алырға кәрәк, Дашенька, тиргә баттым, үҙемә үҙем оҡшамайым.

Ул йыуынып һөртәнгән арала, Даша диванға таҙа простыня йәйҙе.

— Берәй сәғәттән тағы аспирин бирермен.

— Даша, яныма ултыр әле. Шулай. Даша... Бая һеҙҙең боролмалы баҫҡыстан туҡтала-туҡтала күтәрелгәндә шуны уйланым. Был ҡот осҡос афәттән иҫән-һау ҡалһаҡ, шундай бәхетле йәшәр инек... Мин үткән ғүмеремә лә үкенмәйем — утыҙ бер йыл ғүмеремдең аңлы ваҡытын халҡым өсөн... дөйөм эш өсөн бирҙем. Әммә... Барыбер һуғыштан һуң аҡыллыраҡ йәшәр инем. Бөтә хыялым — хәрби академия...

— Генерал булырға хыялланаһың икән? — тине Даша, яратып йылмайып.

— Генерал булырға хыялланмаған һалдат — насар һалдат, тиҙәр армияла. Ана минең ағайым утыҙ туғыҙынсы йылда уҡ ромб таҡты...

— Һин был тырышлығың... был һәләтең менән маршал да булырһың әле, Борис...

— Маршал... Беҙҙең халыҡ, ора алмаған оло күҫәк күтәрер, ти. Уныһын уйламайым да. Ә beләһеңме, Дашенька, ҡайһы сағында һуғыштан һуң армиянан китергә тигән те-

лок тә тыуып ҡуя. Юҡ... хәҙер китә алмам инде. Хәрби кейемгә генә түгел, хәрби дисциплинаға, хәрби тәртипкә лә күнектем мин. Ә тәртип, дисциплина кешене маҡсатына ирешеүсе итә.

— Шундай ире булған ҡатындарҙан көнләшәм мин... — тине Даша, усын уның маңлайына терәп алып.

— Көнләшмә, Дашенька, һинең ирең минең кеүек генә булмаясаҡ. Һин иң һәйбәт ирга лайыҡһың. Тик онотма — түйыңыҙға саҡыр. Ҡайҙа булһам да килергә тырышырмын һәм кейәүеңә киҫәтермен: «Ҡара, егет, бындай ҡыҙҙарҙы хоҙай бәхет өсөн ярата. Ғүмереҫ буйы күтәреп кенә йөрөт...»

— Ә һинең Риманы...

— Туҡта, уйлап ҡарайым әле... Хәҙер хәтерҙән сыҡҡан инде. Айырылышып тороу — табиб ул, бөтә күңелһеҙ минуттарҙы ла дауалай, оноттора. Ә минең Рима менән айырылышыуыбыҙға... йылдан артыҡ...

— Айырылышыуҙың икенсе яғы ла бар бит, Борис.

— Ниндәй — икенсе яҡ ул?

— Күңелде һүрелдерә торған.

— Ә, юҡ, ысын мөхәббәтте йылдар ҙа, юлдар ҙа һүрелтә алмай...

— Ярай, Борис, мин һине ялҡыттым. Хәҙер дарыу эс.

— Даша, ә һин миңә ҡарама, бараһы ереңә бар. Унда һине көтәләр бит.

— Уныһы шулайын шулай ҙа... Ә һин?

— Ә мин... Нимә мин, үлмәм әле, немец үлтерә алмағанды ошондай сирҙән дә үлә башлаһаң... Ул сағында мин ниндәй ҡыҙыл командир...

— Яҡшы. Петя иртәнән һуңға, егерме етеһендә, ҡайтасаҡ, ә мин Юля менән өс көндән ҡайтырмын.

— Ә эш?

— Ә мин үткән аҙнала алмашсым өсөн өс көн дежур булдым. Тыныс йоҡо, Борис. Иртән мин һине уятып тормам. Асҡыс өҫтәлдә булыр.

— Даша...

— Әйе...

— Ни әйтергә инем әле? Йә, ярай, иҫкә төшкәс әйтермен әле.

Иртән Даша ни саҡлы ипләп йөрөргә тырышһа ла, һаҡ йоҡлаусы Нур уянды. Һикереп торҙо. Баш ауыртмай ине, әммә хәл юҡ. Ул тиҙ генә салбарын кейҙе.

— Мин һине оҙата сығам, Даша.

— Мәшәҡәтләнмә. Оҙаҡҡа... алыҫҡа китмәйем бит. Өс көнгә генә...

Ул ишек төбөндә уға шул саҡлы мөлдөрәп ҡараны, Нур ҡурылып китте — уның бик күптән шул саҡлы һағышлы,

мөхәббәт менән тулған күҙҙәрҙе күргәне юҡ ине. Нур уны ҡосаҡланы һәм аҡрын ғына «Фирҙәүескәй, ҡара күҙкәйен» йырланы.

Улар тәү тапҡыр һәм һуңғы тапҡыр үбештеләр.

Даша сығып киткәс, ул салбарын һалмай ғына караватҡа ятты. Яҙыу ҡалдырырға ла башҡа килмәҫкә кәрәк был йортҡа... Юҡһа Римаға хыянат эшләүем бар... Күңелде даръя, тиҙәр... Уның иң ҙур эштән алып бик бәләкәй, ваҡ эшкә саҡлы ғәҙел, саф булып ҡалғыһы килә. Әжәл килеп боғаҙындан алғас, аҙ ғына ла үкенерлек, әрнерлек булмаһын һәм булмаясаҡ та!

Ошо ваҡыт ишек ҡаҡтылар. Ипле, әҙәпле итеп түгел, талап итеп, бойороп. Был таныш кешенең шаҡыуы түгел ине. Желедко бөтөнләй башҡаса ҡаға...

— Хәҙер, хәҙер, — тине ул тороп, устары менән сәсен артҡа һыпырып. Ишекте асыу менән, саҡырғанды көтөп тормай, штатский кейемдәге ике йәш, таҙа кеше бүлмәгә атылып керҙе һәм тимер бармаҡтары менән уның ҡулдарын ҡайырып алды ла артҡа борҙо — ғәҙәти гестапо алымы — Фәтиховтың был хаҡта ишеткәне лә, уҡығаны ла бар ине.

— Эш ниҙә? — тине Фәтихов ҡырҡа тауыш менән. — Сит кеше йортона керәһегеҙ һәм...

— Ҡалғанын тегендә аңлатырһығыҙ, — тине икәүҙең береһе саф рус телендә. Икенсеһе ишара яһаны. Русса һөйләшкәне бүлмәне, кухняны ҡарап сыҡты, немецса: «Бер кем дә юҡ», — тине. Теге: «Барыбер алыҫ китә алмаҫ», — тине.

Ысынлап та, икенсе көндө, бер нәмә һиҙенмәй ауылдан аҙыҡ-түлек алып, шаҡтай шат ҡайтҡан Петяны тупһаны атлап килеү менән эләктерҙеләр. Шул уҡ көндө Светлинды ҡулға алдылар.

Подпольщиктарҙың ғүмерендә яңы бит асылды — ғазаплы, ҡанлы үлемһеҙлек бите.

*Бишенсе бүлек*

## УТЫҘЫНСЫ НОВЕЛЛА

*(Иң оҙон новелла)*

«Ҡоҙғондоң» (халыҡ гестапоның ҡара машинаһын шулай атағайны) артҡы ишеге асылыуы булды, Фәтиховты ике автоматчик, беләктәренән тотоп, кузовҡа ла мендерҙе. Ул арала машинаға штатский кейгән кешеләр һикереп менде.

Крещатик башынан Владимир урамына саҡлы машинала бер нисә минутлыҡ юл ине. Ошо ваҡыт эсендә ниндәй генә уй-фекерҙәр Нурҙың башынан утлы өйөрмә булып үтмәне! Шулар араһында иң аяныслыһы — уның ҡапыл сирләп китеүе һәм әле хәлләнеп етмәҫ элек ҡулға алыныуы. Ул, теләмәһә лә, йыш ҡына уйлап ҡуя торғайны: кеше йәшәй белергә генә түгел, үлә лә белергә тейеш. Уның уҡығаны, ишеткәне булды: иҫән сағында үҙҙәрен иҫ киткес батыр тотҡан, донъяны тетрәткән кешеләр ҙә, әжәл килеп еткәс, юғалып ҡалғандар, меҫкенгә, лайлаға әйләнгәндәр. Юҡ, ул бер ҡасан да юғалып ҡалмаясаҡ, тик дошман уның көсһөҙләгән күреп һөйөнмәҫкә, тантана итмәҫкә тейеш. Һуңғы минутҡаса көрәшергә кәрәк...

Машина уңға боролдо. Тимәк, Шевченко бульвары. Йәнә бер тапҡыр уңға боролһа, Владимир урамы буласаҡ, унан йәнә уңға. Машинаның тормоздары шытырлаясаҡ һәм ауыр тимер ҡапҡа йөрәкте ярып шығырлап асыласаҡ. Ә башҡалар ҡайҙа? Кушнир? Рая? Желедко? Светлин? Петя ауылдан ҡайтып ҡына етмәһә ярар ине, бигерәк йәш бит әле, ғазаплауҙарға түҙә алмауы бар... Ихтимал, уны ғына эләктергәндәрҙер?! Гестапо күптән уның эҙенә төшөргә йөрөнө бит... Уның ҡулға алынғанын белеп ҡасып өлгөрһәләр, ниндәй яҡшы булыр ине...

Ғәҙәттә разведчикты, подпольщикты өс нәмә харап итә: һаҡһыҙлыҡ, контрразведка, провокатор йәки хыянатсы... Ә ҡасан, ҡайҙа һаҡһыҙ ҡыланды ул?.. Сая, саманан тыш тәүәккәл ҡыланды, әммә һаҡһыҙ булманы...

Тиҫтәләгән үлемесле акцияларҙан ниңәлер ҡапыл Белая Церковҡа барыу иҫенә төштө. Һигеҙенсе июндә ул йөк ма-

шинаһына ултырып (рулдә мадьяр һалдаты ине) ҡаланың көньяғына йүнәлде. Голосеев урманына ингәндә, алдан һөйләшеп ҡуйыу буйынса, уларҙы Железко көтөп тора ине.

Машинаны туҡтатыу менән, ул ишекте асты ла, Василгә ҡарап, ҡырҡа тауыш менән: «Аусвайс?» — тип һораны. Теге тертләп китте. Эсэс офицеры формаһындағы Фәтиховты күргәс, көләп ебәрҙе. «Кузовта, — тине ул, — ҡуйыртылған һөт йәшниге эсендә гранаталар, ә немец газеталары төргәге эсендә листовкалар. Нимә өҫтөнә ултырғаныңды белеп ултыр, бар, мен», — тип Железконы кузовҡа мендереп ебәрҙе.

Юл саманан тыш көсөргәнешле ине: биш километр һайын полевой жандармерия постары тора. Һәр бер машинаны туҡтаталар, йөктө, кешеләрҙе ентекләп ҡарайҙар. Өс посты «шыма» ғына үтеп киттеләр, ә бына ун туғыҙынсы километрҙа, Почтовая Вита янында, өс автоматчик менән баҫып торған офицер унан документ талап итте, төпсөнә башланы: «Ҡайҙа бараһығыҙ? Ниңә бараһығыҙ? Нимә алып бараһығыҙ?» Ул офицерға йүнле-башлы ҡарамай ҙа хәтәр генә итеп командировка һәм шәхес танытмаһын һуҙҙы: «Битте!» Офицер документтарға тиҙ генә күҙ һалды ла, ситкә китеп, честь бирҙе. Гребенки район үҙәгендә йәнә патруль уларҙы туҡтата. Алда байтаҡ ҡына машиналар туҡталып тора ине, патруль шоферҙарҙы, йөктәрҙе тикшерә. Шоферҙар һуҡраналар, һүгенәләр. Бына офицер автоматчиктар менән улар янына ла килә. Автоматчик машинаның ишеген аса ла мадьяр һалдатын һөйрәп сығара. Үҙе һүгенә: «Документтар тикшереү һиңә ҡағылмаймы ни?» Ул шунда уҡ үҙ яғындағы ишекте асып, машинанан һикереп төшә лә теге һалдатты һалып ебәрә. «Һин нимә, болван, уның кем янында ултырғанын күрмәйһеңме ни?..» Офицер ғәфү үтенә башлай. Ул былар янына килгән офицерҙан документ талап итә. Теге ҡаушай-ҡаушай мундир кеҫәһенә керә. Фәтихов, документҡа күҙ һалып тормай, үҙ кеҫәһенә һала ла машинаһына йүнәлә: «Документығыҙҙы Белая Церковта гестапола алырһығыҙ..» Офицер: «Зинһар, кәрәкмәй, обер-лейтенант әфәнде...» — тип уның артынан ҡалмай бара. Ул тегенең танытмаһын ергә ташлай. «Бынан һуң аҡты ҡаранан айырырға өйрән, лейтенант...»

Ах, былдай операциялар аҙ булманы: тик йәл, электр станцияһын да юҡҡа сығара алманы...

Машина өсөнсө, һуңғы боролошто яһаны, һәм шунда уҡ ауыр тимер ҡапҡа йөрәкте ярып шығырлай башланы... Һуғышҡа саҡлы штабҡа эшкә йөрөгәндә ошо алты ҡатлы йорт янынан (өс ҡаты күптән һалынған, йәнә өс ҡаты аҙаҡ, биҙәмәй генә өҫтәлеп ҡуйылған) үтеп киткеләгәне бар ине.

Капҡа шығырлап асыла башлаһа, ниңәлер, тәненә һалҡын ток йүгерә торғайны...

Фәтиховты камераға ла ябып тормай, туп-тура допросҡа алып инеп киттеләр.

### Беренсе осрашыу

Фәтихов инеү менән ҡола ялан кабинеттың эске күренешен «карточкаға төшөрөп» алды: һылап биҙәлгән бейек, кәм тигәндә дүрт, хатта дүрт метр ярым булыр, түшәм. Стеналар буш тип әйтерлек. Ырҙын табағы саҡлы ҙур, ауыр имән өҫтәл артындағы стенала ҡыҙыл ситсаға ҡара готик хәрефтәр менән немецса яҙылған лозунг: «Беҙҙең намыҫ — тоғролоҡ». Унан аҫтараҡ Гитлерҙың яратҡан эте менән төшкән ҙур фото рәсеме. Уң яҡ мөйөштә ҡара свастикалы ҡыҙыл флаг һәм шул уҡ яҡтағы стенала һуғыш хәрәкәттәре картаһы. Ҡалған стеналар шәп-шәрә. Был кабинеттың хужаһы йә аскеттыр, йә... Ул арала ҡаршылағы стена икегә айырылды һәм ҡара тараҡанды хәтерләтеүсе гестапосы пәйҙа була. «Оһо, бәләкәй шишка түгел — штандартенфюрер, йәғни полковник!»

Күпселек немецтар шикелле, оҙон кәүҙә, Гитлер идеаллаштырған, Геббельс пропагандалаған «йөҙ процентлы ариец» — аҡһыл һары сәс, аҡһыл зәңгәр күҙҙәр, оҙонса йөҙ. Ҡарап тороуға биҙҙергес, ҡурҡыныс ҡиәфәт түгел, әммә ҡайһы ере менәндер ул, юҡ, Гитлерға түгел, ә уның этенә оҡшаған ине. Стенаға «Беҙҙең намыҫ — тоғролоҡ» тигән лозунгыны юҡҡа элмәгән ул — овчарка һымаҡ, фюрерына ғәҙел булырға ант иткән...

Гестапосы йоҡа ирендәрен аса төшөп йылмайҙы.

— Күптән һеҙҙе күрергә хыяллана инем, капитан Фәтихофф.

«Тимәк, уның кемлеге уларға билдәле. Уйынды асыҡтан-асыҡ алып барырға кәрәк».

Фәтихов та йылмайғандай итте.

— Ә миндә ундай теләк булманы, штандартенфюрер.

— Уныһы аңлашыла, — гестапосы өҫтәл шикелле үк ауыр, боронғо креслоға ултырҙы, бер яғына ята төштө. — Күҙгә күҙ ҡарашып, эскерһеҙ генә һөйләшәйек, капитан. Допрос түгел, диалог.

— Мөмкин түгел, штандартенфюрер.

— О?

— Минең ҡулдарым бығаулы.

Гестапосы бармаҡтарын шартлатып алды. Ишек төбөндә баҫып торған ике автоматчиктың береһе ялт итеп килеп уның быҒауын сисеп алды һәм кире урынына баҫты. Фәтихов, баш ҡағып, рәхмәт әйтте, гестапосы ҡаршыһына ултырҙы.

— Һүҙҙе ниҙән башлайбыҙ, капитан?

Фәтихов стеналағы яҙыуға күрһәтте.

— Анауы лозунгының аҫтына «Пакта сунт сервандо» * тип тә яҙырға кәрәк ине.

— О, һеҙ латин телен дә беләһегеҙме ни? — Гестапосы креслоның икенсе яғына ҡыйшайып ултырҙы. — Договорҙар — ҡағыҙ, ә ҡағыҙҙы йыртыу өсөн күп көс кәрәкмәй.

— Ә әхлаҡи яғы?

— Еңеп сыҡҡас, нисек еңеүең хаҡында кем һораясаҡ? — Ул ҡулдарын өҫтәлгә ҡуйҙы. — Бөгөн йәкшәмбе көн булһа ла, мин бер нисә сәғәтемде һеҙгә бүлергә булдым. Юҡ! Һеҙҙең серҙәрегеҙҙе алыу өсөн түгел. Гестапоға улар билдәле. Коммунист икәнлегегеҙ ҙә. Генерал Кирпонос штабында хеҙмәт иткәнлегегеҙ ҙә . Милләтегеҙ ҙә беҙгә асыҡ. Йәшегеҙ хаҡында әйтеп тә тормайым — ул күренеп тора. Мин һеҙҙең психологияғыҙҙы аңларға теләйем, капитан. Дошмандың көсөн генә түгел, психологияһын да белергә кәрәк бит.

«Оһо, был ябай гестапосы ғына түгел, психоаналитик та ахыры...»

— Коммунистарҙың психологияһы күптән билдәле, штандартенфюрер.

— Эйе, эйе. Һеҙҙең маҡсатығыҙ — бөтә кешене лә тигеҙ итеү. Бөтә кешене лә бәхетле итеү. — Ул бармаҡтарын күрһәтте. — Тигеҙме? Тәбиғәт — гений һәр бармаҡты үҙ эше өсөн яратҡан. Ә кешеләр...

— Беләм, — тине Фәтихов, уны әҙәпле генә бүлдереп, уга ла был гестапосы менән һөйләшеү ҡыҙыҡ була башланы. Ул гитлерсыларҙың идеологияһын, философияһын күптән белә. — Һеҙ кешеләрҙе супермэн һәм меншмэнға ** бүләһегеҙ.

— Һеҙҙеңсә, бөтә кешеләр бер төрлөмө ни? Һәр кем Бисмарк... Достоевский... батша, генерал... була ала инде? (Гестапосының йөҙөндә — ирония.) Шулай булғас, бөтә кешеләрҙе лә «тигеҙләргә» тигән идея — фантазия, уйҙырма. — Ул торҙо, ҡулдарын ҡара галифе кеҫәләренә тығып, аяҡ остарына баҫты. — Йәғни халыҡты алдау.

---

* «Договорҙы хөрмәт итергә кәрәк».

** *Супермэн*— башҡаларҙан өҫтөн кеше, кешенең кешеһе, *меншмэн*— бәләкәй, ваҡ, түбән кеше.

— Ә коммунизмға һеҙҙең ватандашығыҙ Маркс нигеҙ һалған бит.

— Маркс немец түгел. Маркс — еврей. Ул ғүмер буйы Энгельстың елкәһен кимереп, үҙенең «Капиталын» яҙған һәм Энгельсты үҙенең иманына әүрәткән.

— Энгельс үҙе Марксты эҙләп тапмағанмы ни? Энгельс, Маркс үлгәс, ун йылдан артыҡ ғүмерен Маркстың ҡулъяҙмаларын тәртипкә килтереүгә, редакторлауға арнамағанмы ни?..

Гестапосы үҙенең еңелгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Йәнә креслоһына ултырҙы.

— Беҙ ситкәрәк киттек, капитан. Белеүемсә, һеҙҙең милләтегеҙ...

— Минең милләтем — Совет кешеһе.

Гестапосы йоҡа ирендәрен асыр-асмаҫ йылмайҙы.

— Ундай милләт юҡ. Ул Америка Ҡушма Штаттарында ғына винегрет — бөтә халыҡтарҙың да паспорттарына «американлы» тип яҙалар. Ә һеҙҙә бит халыҡтарҙың тиҫтәләгән союз, автономиялы республикалары, өлкәләре, округтары бар. Тимәк, милләттәр ҙә бар булып сыға?

— Яҡшы. Мин атайым яғынан татар, әсәйем яғынан башҡорт. Әммә ҡанымда, бәлки, мари, сыуаш ҡаны ла барҙыр — бергә аралашып, туғанлашып йәшәйбеҙ беҙ.

Гестапосының йөҙө асылып китте.

— О, ул сағында бигерәк тә. Башҡорттар рустарға ҡаршы нисә тапҡыр баш күтәргәндәр? Теләһәгеҙ, һанап китәм...

— Рустарға ҡаршы түгел, царизмға, уның сатраптарына, алпауыттарына, заводчиктарына ҡаршы.

— Ә батша кем булған? Русмы? Ә помещиктар, заводчиктар кем булған? Рустармы?

— Шуның менән ни әйтергә теләйһегеҙ, штандартенфюрер?

— Ә шуны әйтергә теләйем, капитан. Татарҙар йөҙәр йылдар буйы Рус дәүләтенә баш һалмаған. Ә хәҙер? Волга буйына ҡыҫырыҡланған, кәмһетелгән, иҙелгән меҫкен бер милләт. Йә, ҡаршы әйтергә дәлилегеҙ бармы? Бәлки, мин яңылышамдыр?

— Ике белешмә, штандартенфюрер. Беренсенән, һеҙ тарихты бутайһығыҙ. Һеҙ һөйләгән замандарҙа татар исемен хәҙерге татарҙар ғына йөрөтмәгән. Төрки телдә һөйләшеүселәрҙең бөтәһен дә рустар, рустар ғына түгел, Европа халҡы ла, татар тигән. Ә хәҙерге Татарстан татарҙары бынан мең йылдар элек Иҙел буйына күсеп килгән.

— Хәҙер һеҙ рустарға ярарға тырышып, тарихты төрлө яҡҡа бораһығыҙ инде. Ә, улай булғас, монголдар ҡайҙа булған?

— Шул уҡ һеҙҙең Энгельс: әгәр еңеүсе милләт цивилизацияһы яғынан еңелеүсе халыҡтан түбән баҫҡыста торған булһа, ул тора-бара еңелеүсе араһында... һыуға һалған тоҙ шикелле бөтә, тигән. Монголдар ҙа шулай булған. Бер аҙы үҙ далаларына ҡайтып киткән, ә ҡалғандары цивилизация яғынан уларҙан күп өҫтөн торған халыҡ араһына һеңеп-юғалып бөткән.

— Тимәк, барыбер татарҙар хакимлыҡ иткән булып сыға?

— Мин, штандартенфюрер, бынан әллә нисә йөҙ йыл элек булған ваҡиғалар, хәлдәр өсөн яуап бирмәйем, һәм һеҙ ҙә быуаттар буйы үҙ-ара ыҙғышып, һуғышып йәшәгән герман герцогстволары өсөн яуап бирә алмайһығыҙ. Бәлки, яуап бирә торғанһығыҙҙыр?

Гестапосы йәнә юғалып ҡалды. Ә Фәтихов һүҙен дауам итте.

— Икенсенән, штандартенфюрер, минең халҡым меҫкен түгел. Ғөмүмән, беҙҙә бер милләт тә меҫкен түгел. Беҙҙең үҙ Конституциябыҙ, үҙ флагыбыҙ, үҙ культурабыҙ, үҙ әҙәбиәтебеҙ бар.

Гестапосы реванш алырға ынтылды.

— Конституция... флаг... Былар бөтәһе лә ҡағыҙҙа ғына. Һеҙҙең алфавитығыҙҙы ла ун йыл эсендә ике тапҡыр үҙгәрттеләр. Ғәрәп шрифын — латин шрифына, унан рус графикаһына.

— Беҙ уны үҙебеҙ теләп эшләнек. Аралашыу, рус культураһын үҙләштереү еңелерәк булһын өсөн.

— Үҙегеҙ теләп! Мәскәү ни бойорһа, һеҙ шуны «үҙегеҙ теләп» эшләйһегеҙ. Россияла рус диктаты хакимлыҡ итә. — Гестапосы сигаретын тоҡандырҙы ла зажигалкаһының утын бер аҙ һүндермәй торҙо. Шунан ғына һүндерҙе. — Бына һеҙҙең ирегегеҙ. Бәйһеҙлегегеҙ. Сталин нисек теләһә, шулай буласаҡ. Ә ул үҙе тирәһенә грузиндарҙы, еврейҙарҙы йыйҙы.

— Дәүләт эшмәкәрҙәрен беҙҙә халыҡ үҙе һайлап ҡуя. Был һеҙ аңларлыҡ нәмә түгел. Шуға күрә һүҙҙе ошо урында ослайыҡ. Приговор сығарығыҙ ҙа...

— Уныһы ҙур эш түгел. Миңә байтаҡ ҡына әсир командирҙар, подпольщиктар менән һөйләшергә тура килде. Уларҙың бөтәһе лә тип әйтерлек йә рустар, йә украиндар ине. Ҡыҫҡаһы, славяндар. Ә бына һеҙҙең милләт кешеһе менән тәү тапҡыр осрашам. Шуға күрә мин һеҙҙең ни өсөн һеҙҙе иҙеп йәшәгән рустар өсөн ҡан ҡойоуығыҙҙы аңларға теләйем.

— Рустар өсөн түгел, штандартенфюрер, Россия өсөн. Был ер нисек кенә аталмаһын, эш уның исемендә түгел, был ер минең халҡым донъяға килеп, милләт булып фор-

малаша башлағандан бирле, йәғни бишегенән алып, минең халҡымдың ере булған. Шулай булғас, ниңә мин ата-бабам ере өсөн һуғышмаҫҡа, ҡан ҡоймаҫҡа, кәрәк булһа, һәләк булмаҫҡа тейеш? Ә һеҙ, штандартенфюрер, немец халҡының иленә дошман ябырылһа, уны яҡламаҫ инегеҙме ни? Ә?

Гестапосы был һүҙҙәрҙе йылмайып та, ҡаштарын емереп тә, һағайып та тыңланы.

— Һеҙ супермэн, капитан Фәтихофф. Найн! — Гестапосы торҙо — һеҙ күптән оберст... полковник булырға лайыҡ кеше. Хатта — генерал. Алла һеҙҙе ҙур эштәр өсөн яратҡан. Һеҙ халҡығыҙға элекке бөйөклөктө ҡайтарыусыларҙың береһе булырға тейеш.

Фәтихов мыҫҡыллы йылмайҙы.

— Һеҙ мине үҙегеҙгә эшкә саҡырмайһығыҙҙыр бит, штандартенфюрер?

— Минең ундай ниәтем юҡ. Әммә... Беҙҙең яҡҡа капитан, полковниктар ғына сыҡмай һәм генералдарҙың да ниеттеләре түгел, армия командующийы ла сыға. Юҡ, был провокация түгел. Генерал Власов хаҡында ишеткәнегеҙ бармы? Барҙыр, әлбиттә, һеҙ бит штабист. Ул да коммунист. Шул коммунист коммунистик режимға ҡаршы армия ойоштора. Юҡ! Был провокация түгел, — ул өҫтәл тартмаһынан ҡағыҙҙар тартып алды. — Бына немец газеталары. Бына һеҙҙең һалдаттар өсөн русса яҙылған листовкалар. Генералдың фотоһы һәм факсимилеһы ла бар.

Фәтиховты ҡайнар һыу менән ҡойондорғандай булдылар, ҡапыл баш нығыраҡ ауырта башланы. Ысынмы был? Генерал Власов — яҡшы боевой һәм политик әҙерлек өсөн һуғышҡа саҡлы уҡ Ленин ордены менән наградланған кеше... Әммә аптырауҙы, ҡаушауҙы һиҙҙермәҫкә кәрәк. Ул йылмайғандай итте.

— Һәр көтөүҙә берәй бысраҡ һыйыр була, штандартенфюрер.

— Ә ниңә герман армияһында юҡ?

— Булыр. Ашыҡмағыҙ. Һеҙ бит әле триумфтан айнып етмәгәнһегеҙ. Һеҙ әле һөрөм эсендә йәшәйһегеҙ. Халыҡтың берҙәмлеген, йөрәген аңлар өсөн еңеүсе булып ҡына түгел, еңелеүсе булып та ҡарарға кәрәк.

Гестапосы креслоға йәйелеп ултырҙы, уның арҡаһына арҡаһын терәне.

— Ә беҙ еңелеүсе булырға теләмәйбеҙ, капитан. Һеҙ — разведчик, фронт хәлдәрен яҡшы беләһегеҙҙер. Ана, картаға күҙ һалығыҙ. Быйыл былтырғы Мәскәү янындағы эпизод ҡабатланмаясаҡ. Был һуңғы йәйге кампания. Һеҙ бығa



Ибраһим Абдуллин эш өҫтөндә. 1976 йыл.

ышанаһығыҙмы, әллә һаман фанатик рәүештә үҙегеҙҙең Сталинығыҙға ышанаһығыҙмы?

— Ғәфү итегеҙ, штандартенфюрер, бая һеҙ иҫкә алған Бисмарк, беләһегеҙме, ни тигән? — Ул былтыр сентябрь таңында лесничий менән булған әңгәмәне хәтерләне. — «Россия менән һуғышыу файҙаһыҙ, барыбер уны еңеп булмай, ере икһеҙ-сикһеҙ, халҡы, терегөмөш шикелле, һин таратаһың, улар ҡушылалар, ишәйәләр». Быны бит ефрейтор түгел, «тимер канцлер» Бисмарк әйткән.

«Ефрейтор» тип төрттөрөүҙе гестапосы аңланы. Битенә аҙ ғына тимгелдәр ҡалҡты һәм шунда уҡ юғалды, күрәһең, ул үҙен тиҙ ҡулға ала белә торғандыр.

— Ә был юлы еңәсәкбеҙ. Герман халҡының тарихында бер ҡасан да фюрер һымаҡ бөйөк аҡыл эйәһе — дәүләт эшмәкәре һәм полководец булмаған. Фюрер — уникаль күренеш.

— Тарих үҙ һүҙен әйтер.

— Тарих әйтте инде. Ярты Европа, ярты Россия фюрер аяғы аҫтында.

— Әммә бәтәһе лә түгел. Наполеон яулаған илдәр-ерҙәр тағы ла күберәк ине, ә һуңы нисек булды? Рус казактары Сена йылғаһында аттарын эсерҙеләр. Шул иҫәптән башҡорттар ҙа.

Гестапосы рәхәтләнеп, башын креслоһының бейек күн арҡаһына терәп көлдө.

— Әйтерһең, беҙҙең батыр ғәскәрҙәребеҙ Волгаға яҡынлашып бармай, әйтерһең, Ҡавказ ҡапҡаһы төбөнә барып етмәгән, Мәскәүгә 200—300 километрҙа тормай, ә Ҡыҙыл Армия Одерҙы кискән, Берлин биҫтәләренә барып еткән.— Ул рус теленә күсте. — Күпселек коммунистар шикелле, һеҙ ҙә фанатик икәнһегеҙ, капитан.

Һәр күҙәнәге фашистик идеология менән тулған, һәр тамсы ҡаны фашистик рух менән һуғарылған был гестапосыны бер төрлө тарихи дәлилдәр, факттар, миҫалдар менән дә алдырып булмаясағын Фәтихов аңланы, шуға күрә телен әрәм итмәҫкә булды һәм уға мыҫҡыллы комплимент әйтте.

— Һеҙ Россияны... рустарҙы шул саҡлы яратмайһығыҙ, ә үҙегеҙ русса шундай яҡшы беләһегеҙ, штандартенфюрер...

— Мин Ригала тыуып үҫкәнмен. Рус гимназияһында уҡыным. Заманында Толстой, Достоевский романдары менән мауыҡтым. Әле лә йорт китапханамда уларҙың рус телендәге томдары бар. Мин бит заманында тел һәм әҙәбиәт уҡытҡан кеше, — ул терһәктәрен өҫтәлгә ҡуйҙы. — Ә һеҙ немец телен ниңә өйрәндегеҙ? Беҙҙе яулап алыр өсөнмө?

— Юҡ, беҙгә кеше ере кәрәкмәй, беҙҙең үҙ еребеҙ ҙә етерлек.

— Әммә һеҙ үҙ ерегеҙҙе файҙалана белмәйһегеҙ. Украина, Белоруссия ауылдары боронғо заман кешеләренең торлаҡтарын хәтерләтә. Ә беҙ уларҙы ер ожмахына әйләндерәсәкбеҙ. Беҙ эшләй ҙә беләбеҙ, эшләтә лә беләбеҙ. Немец халҡы бөтәһенә лә һәләтле!

— Эйе, бөтәһенә лә һәләтле. Быны Киев өлгөһөндә генә лә күрергә мөмкин.

— Ни эшләйһең бит — һуғыш.

— Һуғышырға һеҙҙе бер кем дә көсләп ҡушманы. Күрәһең, немец халҡы һуғышмай йәшәй алмайҙыр.

— Һеҙ бая Бисмаркты миҫалға килтерҙегеҙ, ә хәҙер мин бөйөк философ Ницшены миҫалға килтерергә теләйем. Һуғыш булмаһа, кеше үҙенең иң яҡшы сифаттарын: ныҡышмалылығын, ихтыярын, егәрлелеген һәм активлығын юғалта, шуға күрә һуғыш халыҡтарға, ауырыуҙың ҡанын алған кеүек, файҙалы, тигән ул.

— Һеҙ, әйтеүегеҙсә, тел һәм әҙәбиәт уҡытҡан кеше ошо ҡот осҡос теория менән килешәһегеҙме?

Гестапосы яуаптан йәнә баш тартты.

— Һәр аҡыллы һүҙҙең дә аҡылһыҙ яҡтары була. Мәҫәлән, шул уҡ Бисмарктың әле һеҙ әйткән һүҙҙәрен мин аҡыллы тип әйтә алмайым, — ул кирелеп алды. — Мин һеҙҙе ялҡыттым ахыры, капитан. Арыу йөҙөгөҙгә сыҡты. Әллә ауырыйһығыҙмы? Сырайығыҙ ҡасҡан. Бәлки, берәй дарыу

кәрәктер? Һеҙҙең пропаганда гестапоны йәһәннәм менән сағыштырһа ла, беҙ ғәйепһеҙ кешеләргә... һәм һеҙҙең кеүектәргә тырнаҡ менән дә сиртмәйбеҙ. Әйткәндәй, һеҙҙең НКВД ла тотҡондары менән аҡ бирсәткә кейеп һөйләшмәй.

— Рәхмәт, минең бер ерем дә ауыртмай.

Гестапосы, немецса хушлашып, артына боролорға өлгөрмәне, ишек төбөндәге автоматчиктар тып итеп уның ике яғына килеп баҫтылар.

Фәтиховты бер кешелек камераға яптылар. Ҡисәге ауырыуҙан айнып бөтмәгән баш йәнә бик ныҡ ауырта башланы, температура күтәрелде... Ул таҡта йәйелгән тар тимер карауатҡа һуҙылып ятты. Бына хәҙер уйланырға мөмкин... Юҡ, йәшәгән ғүмер хаҡында түгел, ул ғүмерен заяға үткәрмәне. Хәҙер уға ҡалған көндәр хаҡында уйларға кәрәк. Тимер ишек алдында уны ғазраил көтөп, һағалап тора. Ҡемдеңдер, бер инглиздың буғай, һүҙҙәре хәтергә килә: «Бөтәһе лә мине ташлап китһә китһен, тик ғәйрәтлелек кенә ташлап китмәһен...» Ҡитмәҫ... Ҡитмәҫкә тейеш...

Ул үҙе лә һиҙмәҫтән йоҡлап китте һәм шундай матур төш күрҙе. Бала саҡтағы Һарбайҙы һәм уның дүрт балаһын: Пират, Партизан, Аҡҡолаҡ һәм Ихласты. Пиратҡа — күҙе асылғас та, ул тирә-яҡты байҡап йөрөгән өсөн шундай исем ҡушты. Партизанға — ҡайҙалыр китеп, йәшенеп ятып, иҫләмәгәндә туғандарына ташланған өсөн, Аҡҡолаҡҡа — кәүҙәһе ҡара, ҡолаҡтары ғына ап-аҡ булған өсөн, ә Ихласҡа әйткән бер команданы ихлас тыңлағаны өсөн ҡушҡайны. Ай... ниндәй күңелле ине улар менән шаярыу, уларҙы өйрәтеү. Эт булһалар ҙа, дүртеһе дүрт төҫлө генә түгел, дүрт холоҡло ине.

Гестаполағы беренсе төндә ул ана шул көсөктәрҙе күреп, йылмайып уянды. Тәүҙә үҙенең ҡайҙа ятҡанын аңламай торҙо. Атаһының һүҙҙәре иҫенә төштө: «Ғүмер буйы малдарҙы ярат, улым. Телдәре булмаһа ла, уларҙы ла алла яралтҡан. Мал ятҡан кеше миһырбанлы, нескә күңелле була, яуызлыҡ эшләргә ҡулы күтәрелмәй», — тип өйрәтә торғайны. Ай-һай, дөрөҫмө икән был, атай?.. Ана, Европаны ҡанға батырған Гитлер ҙа гел эте менән карточкаға төшөргә ярата...

Ауыр ишек шығырлап асылды. Уға аш килтерҙеләр. Аш бер ҙә төрмә ашына оҡшамағайны: өрөлө борщ, бәрәңге бутҡаһы менән ҙур кәтлит, өсөнсөгә — компот... Ҡыҙыҡ, уның хаҡында нимә уйлайҙар, ниәтләйҙәр икән улар? Әллә, ысынлап та, үҙ яҡтарына ауҙарырға, хыянатсы итергә самалайҙармы? Штандартенфюрер, минең ундай ниәтем юҡ,

тигән булды. Бәлки, үҙҙәренсә «психологик тәжрибәлер?..»

Биш көн уны допросҡа саҡырманылар. Биш көн уны шулай ашаттылар, әммә бер тапҡыр ҙа һауаға сығарманылар. Көн һайын хыянатсы Штепа редакторлаған «Нове українське слово» газетаһын килтерҙеләр, хатта ике тапҡыр фашистарҙың «баш» газетаһы «Фёлькшер беобахтерҙы» ла керттеләр.

«Әллә минең хаҡта онотолар инде?» — тип мыҫҡыллы уйлай башланы ул.

Бәхеткә ҡаршы, нервыларҙың артыҡ тартылған булыуынанмы, баш ауыртыуы бөттө — ул үҙен таҙа ғына түгел, әлеккесә көслө тоя башланы, бик оҙаҡ итеп зарядка яһаны, алдағы тигеҙ булмаған көрәшкә әҙерләнде.

## Икенсе осрашыу

Юҡ, онотмағандар икән. Алтынсы көндө тимер ишек көтмәгәндә шығырлап асылды һәм уны ике автоматчик юғарыға алып менеп китте.

Был юлы, ул кергәндә, штандартенфюрер ҙур, ауыр өҫтәл артында ҡағыҙҙар ҡарап ултыра ине. Фәтихов инеү менән, ул башын ҡалҡытты, йоҡа ирендәрен асыр-асмай ғына йылмайҙы.

— Гутен морген, капитан Фәтихофф!

Фәтихов русса яуап бирҙе.

— Хәйерле иртә, штандартенфюрер!

— Ултырығыҙ. Тартығыҙ. Мине ашығыс рәүештә рейхсфюрер Гиммлер Берлинга саҡыртып алды, шуға күрә диалогты дауам итә алманыҡ. Йә, был көндәрҙе нисек үткәрҙегеҙ? Йәберләүсе булманымы?

— Хәҙергә юҡ. (Ирония.)

— Бынан һуң да йәберләмәйәсәктәр. Гестапо фәҡәт дошмандары менән генә аяуһыҙ ул.

— Ә мин дошманығыҙ түгелме ни?

— Быға саҡлы булғаны ишек артында ҡалған, капитан Фәтихофф. Беҙ тәүге осрашыуҙа уҡ бер-беребеҙҙең кемлеген аңланыҡ шикелле. Беҙ икебеҙ — ике дин кешеләре.

— Марксизм-ленинизм дин түгел, фән һәм иң революцион, иң дөрөҫ, ғәҙел фән.

— Беҙ ҙә үҙебеҙҙең фәнебеҙҙе иң дөрөҫ һәм ғәҙел фән, тибеҙ, капитан.

— Бер ғәйепһеҙ халыҡтарҙы миллионлап ҡырыу, кеше ерҙәрен баҫыуҙы ла ғәҙел эш тиһегеҙме?

— Юҡ, юҡ, тағы бәхәсләшмәйек. Барыбер беҙ беребеҙ ҙә һүҙен бирмәйәсәк һәм үҙен хаҡ һанаясаҡ.

— Беҙ һеҙҙең ерегеҙгә баҫып керməнек һəм һеҙҙең халҡығыҙға ҡот осҡос афəт алып килмəнек, штандартенфюрер.

— Яҡшы. Ə рустар? Заманында улар Ҡазан, Əстрхан, Ҡырым, Себер ханлыҡтарын баҫып алмағандармы ни? Ə Ҡавказ? Урта Азия?.. Хəйер, былар бөтəһе лə рус историяграфияһы буйынса «берлəштереү» йəки «ирекле рəүештə ҡушылыу» тип атала шикелле.

— Һеҙ тарихты насар белмəйһегеҙ, штандартенфюрер... Комплимент гестапосыға оҡшаны.

— Мин бит бөтə Европаға мəшһүр университет тамамлаған кеше.

— ...Əммə тарихи факттарҙы, ваҡиғаларҙы бергə һалып бутайһығыҙ. Дөрөҫ, яулап алыуҙар ҙа булған. Əммə эле милләт булып формалашмаған, дəүлəт булып ойошмаған ваҡ халыҡтарға артыҡ һуғышсан күршелəренəн һаҡланыр өсөн ҙур халыҡҡа, ҙур милләткə һыйынырға, яҡлау эҙлəргə тура килгəн һəм шуға күрə улар рус батшаһына үҙ телəктəре менəн барғандар...

Гестапосы, уң ҡулын күтəрə төшөп, Фəтиховты туҡтатты, мыҫҡыллы йылмайҙы.

— Əлбиттə, əлбиттə, үҙҙəре телəп рустарға ҡушылғандар. Рустарҙыҡы колониаль политика ла, яулап алыу ҙа түгел, ə «ирекле берлəштереү», «туған» итеү. Əммə, нимəгəлер, был «туғандар» рус батшаһының «йылы» ҡанаты аҫтында иҙрəп йəшəргə телəмəгəндəр, əленəн-əле ҡанлы көрəшкə күтəрелгəндəр. — Гестапосы ҡулдарын һелкеп алды. — Яҡшы, теге көндө һеҙ əйткəнсə булһын, тарих төпкөлөнə төшөп китмəйек. Əйҙə, уны тарихсылар өйрəнһендəр һəм үҙҙəренсə алдашһындар. Бөгөнгө көн, дөрөҫөрəге, иртəгеһе көн хаҡында һөйлəшəйек, үткəн бөткəн инде ул. Һеҙҙең йəшəгегеҙ килəме?

— Кемдең йəшəгеһе килмəһен. Хатта бөжəктəрҙең дə йəшəгеһе килə.

— Яуабығыҙ оҡшай. Ул ваҡытта бына, уҡығыҙ. — Гестапосы уға фашистик герблы ҡағыҙ һуҙҙы.

Фəтихов ҡағыҙға ҡулын һуҙманы. Кем белə, бəлки, ошо минутта, йəшенеп, уларҙы карточкаға төшөрөрҙəр һəм ул рəсемде провокацион махсатта файҙаланырҙар.

— Яҡшы. Ул сағында үҙем уҡыйым. Фюрер татар-башҡорттарҙан «Иҙел — Урал» легионы төҙөү тураһында приказға ҡул ҡуйҙы. Легиондар менəн етəкселек итеү өсөн Вермахттың вəкиле итеп генерал-майор Хейкендорф тəғəйенлəнгəн. — Гестапосы, күҙен ҡағыҙҙан алып, өҫтəп ҡуйҙы. — Бының өсөн фюрер генерал Хейкендорфты Көнсығыш фронтынан ҡайтартҡан. Тимəк, фюрер был эшкə ҙур əһəмиəт бирə. Был инде, капитан, теге көндө һеҙ əйткəн бер

бысраҡ һыйыр ғына түгел, ҙур бер легион. Меңәрләгән кеше...

— Һеҙ минән: «йәшәгегеҙ киләме?» — тип һоранығыҙ, штандартенфюрер. Хәҙер һеҙҙән һорарға рөхсәт итегеҙ: ә һеҙ үҙегеҙ хыянатсыларҙы яратаһығыҙмы?

Гестапосы, ерәнеп, башын ҡаҡты.

— Юҡ.

— Шулай булғас, ниңә һеҙ минең хыянатсы булыуымды теләйһегеҙ?

— Юҡ, теләмәйем. Мин һеҙҙе рустарға, большевизмға ҡаршы бергәләп көрәшергә саҡырам, капитан.

— Әгәр мин большевизмға, рус халҡына ҡаршы көрәшергә теләмәһәм? — Фәтихов гестапосыға тишеп ҡараны һәм был филолог-гестапосының күҙҙәренең ғәҙәти күҙҙәр түгел, ә быяланан яһалғанлығын аңланы — уларҙа аҙ ғына нур, йылылыҡ юҡ ине.

— Киләсәктә донъя менән бөйөк немец халҡы... Германия етәкселек итәсәк. Россияны теҙ сүктереү менән Англия аҡ флаг ташлаясаҡ. Һоро шайтан иле Америка фюрер өсөн закуска ғына. Һиндостан хаҡында әйтеп тә тормайым — беҙҙең өсөн күңелле прогулка ғына буласаҡ. Дөрөҫ, Алыҫ Көнсығышта беҙҙең союзнигыбыҙ Япония ҡаласаҡ һәм ул Ҡытай, Көньяҡ-Көнсығыш Азия илдәре менән етәкселек итәсәк. Шулай итеп, кешелек тарихы бер ҡасан да белмәгән «Мең йыллыҡ рейх» тыуасаҡ!

Фәтихов йәнә уның күҙҙәренә ҡараны. Юҡ, улар һалҡын быяланан яһалмағайны, улар ҡан еҫенә ҡоторған ас бүре күҙҙәре ине.

— Йә, капитан? Мин һеҙҙе көсләмәйем. Мин һеҙгә тарихтың яҙыласаҡ битен генә асып һалдым.

Фәтихов ҡапыл уйламаған һорау бирҙе.

— Ә теге... «Иҙел — Урал» легионы ҡайҙа төҙөлә? Беҙҙәме, һеҙҙәме?

— Миненсә... — Гестапо өҫтәл тартмаһын асып, ҡағыҙҙы алмай ғына нимәлер ҡарап алды. — Елдино тимер юл станцияһында.

«Елдино... Елдино... Ҡайҙа әле ул?..»

Фәтихов ниңә был һорауҙы бирҙе? Сөнки уның башына көтөлмәгән уй-план килде.

— Штандартенфюрер... мин донъяла утыҙ бер йыл йәшәнем... һәм әсә һөтө менән үҙ илемә... совет стройына ғәҙел булып тәрбиәләндем...

Был һүҙҙәрҙе ул гестапосының күҙҙәренә ҡарап әйтте, тегенең күҙҙәре уйнаҡланы, Фәтиховтың ни әйтергә теләгәнен аңламаны.

— Шуға күрә бына ошо минутта ғына һеҙҙең тәҡдимегеҙҙе ҡабул итә алмайым. Шунда уҡ: «Риза», — тиһәм, һеҙ үҙегеҙ ҙә миңә ышанмаған булыр инегеҙ. Был бәндә үҙ йәнен һаҡлар өсөн легионға яҙылырға булды, тип баһаларһығыҙ. Ә мин улай эшләргә теләмәйем. Дөрөҫ, миңә йәнем дә йәл, әммә бөтәһен дә ныҡлап уйлап хәл итергә кәрәк.

Гестапосының күҙҙәренә йән кергәндәй булды, хатта ул йылмайҙы.

— Бына был ысын разведчик һүҙҙәре. Юҡҡа мин һеҙҙе тәү ҡараштан уҡ юғары баһаламаным. — Ул ишек төбөндәге автоматчиктарға бармаҡ шартлатты.

Фәтихов сығып киткәс, эске телефондан бойорҙо.

— Утыҙ беренсе камера тотҡонона ром бирегеҙ һәм парикмахер ебәрегеҙ. — Трубканы ҡуйғас, ул устарын ыуып алды. Берлин шундай разведчикты ҡулға төшөргән өсөн уны буш ҡалдырмаясаҡ: уға был башы, был белеме, был тырышлығы менән күптән бригаденфюрер (генерал-майор) булырға ваҡыт...

## Өсөнсө осрашыу

Фәтиховтың башы бер ҡасан да шул саҡлы көсөргәнешле эшләмәгәндер. Штандартенфюрерҙың кабинетынан үҙенең бер кешелек камераһына барып еткәнсе нимә хаҡында ғына уйламаны ул? Бала саҡта Өрьяҙыла һуғышлы уйнау... Разведчик булып, «дошман» тылына үтеп кереү... (улары тормошҡа ашты)... Уҡытыусы булырға теләү... (Теләгенә иреште)... Ҡыҙыл командир булырға ашҡыныу... (Булды)... Яратҡан ҡыҙға өйләнеү (Өйләнде)... Киевҡа ҡайтып, подпольенан дошман менән көрәшеү... Бөтәһе лә тормошҡа ашты шикелле, ә бына быныһы барып сығырмы? Легионерҙарҙың ерәнгес кейемдәрен кейгәнсе, Елдино станцияһына барып еткәнсе ҡаса алырмы? Ә ҡайҙа һуң әле ул Елдино станцияһы? Белоруссиялалмы? Украиналамы?.. Әгәр ҡаса алмаһа? Әгәр немецтар уны легионерҙар алдына баҫтырып: «Бына һеҙҙең ҡаршығыҙҙа Ҡыҙыл Армияның кадровый командиры, коммунист капитан Фәтихов үҙе теләп большевистик режимға ҡаршы көрәшергә булды», — тип иғлан итһәләр? Әгәр уның һымаҡ ҡасыу яғын ҡарап ҡына легионға яҙылған берәй патриот төндә уны быуып китһә? Бер кем уның изге ниәтен белмәҫ, һуғыштан һуң уның һатлыҡ Фәтихов исеме тыуған яҡтарына, ғаиләһенә әйләнеп ҡайтыр... Үҙе менән бергә хеҙмәт иткән командирҙарға ишетелер. Әсәһе, ҡара гүргә кергәнсе, изге күкрәк һөттәрен йәлләп ҡарғар, ҡатыны кеше күҙенә күренергә ғәрләнер, төндәрен мендәргә ҡапланып үкһер, ҡыҙы хыянатсының

фамилияһын йөрөтмәç өсөн Фәтихованан әсәһенең фамилияһына күсер, һәм шунының менән уның был донъяла булыу булмауы онотолор...

Фәтиховтың кире боролоп кереп, гестапосыға: «Мин бөтәһенә лә әҙер, тик хыянатсы буласағым юҡ»,—тип әйткәһе килде... Әммә ул арала 31 һанлы камераға килеп еттеләр. Ул хәҙер генә камераһының һанын абайланы һәм номер менән уның йәшенең осраҡлы тура килгәнен аңлап, әсе йылмайҙы. Күптән түгел, ун дүртенсе июлдә, уға утыҙ бер тулып, утыҙ ике китте. Тыуған көнөн ул көрәштәше Нищенко (ул да Фәтихов шикелле немец офицеры кейемендә йөрөй ине һәм немец телен үҙ теле шикелле яҡшы белә ине) менән хыянатсы Маркушаны юҡҡа сығарғас, айырылышырға ҡулын һуҙғас ҡына, иҫенә төшөрҙө. «Ә бит бөгөн минең тыуған көнөм...» Нищенко уны ҡотланы: «Тағы шул саҡлы йәшә, унан йәнә шул саҡлы», — тине лә, аҙаҡ йылмайып өҫтәп ҡуйҙы: «Бөгөнгө эш — һинең тыуған көнөңә бүләк». Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның теләктәренең бер процентына ғына ла тормошҡа ашырға яҙмаған икән...

Фәтихов таҡта йәйелгән тар тимер карауатҡа һуҙылып ятты.

Уйҙар, уйҙар... Ауыр ҡара болоттар... Йәшендәй ялт иткән, ҡургаш кеүек ауыр, уттай әҫе, боҙҙай һалҡын, яҙғы таңдай матур, көҙгө ҡояштай һағышлы уйҙар... Әгәр кеше ғүмере эсендә уйлаған уйҙарҙы бер епкә теҙеп булһа, ул еп менән Ерҙе иң, иң аҡыл етмәçлек алыҫтағы йондоҙҙар менән тоташтырып булыр ине...

Уйҙар, уйҙар... Ярай әле һеҙ күренмәйһегеҙ, ярай әле һеҙҙе күреп булмай... Ә бит һеҙ тәбиғәт яратҡан иң ҙур, иң бөйөк ҡаҙаныш...

Уйҙар, уйҙар... сикһеҙ-ҡырыйһыҙ, бер кемгә баш бирмәүсе, бер кемгә буйһонмаусы дыуамал һәм аҡыллы уйҙар... Йыһанға һыймаçлыҡ уйҙар, бәләкәй генә бер башҡа нисек һыяһығыҙ һеҙ?..

Ауыр тимер ишек асылды.

Аҡ халат кейгән кеше керҙе. Был парикмахер ине. Надзиратель ишек төбөндә баçып торҙо. Парикмахер, бер һүҙ әйтмәй, уны ҡырҙы, хатта одеколон һиптерҙе һәм бер һүҙ әйтмәй сығып китте. Һуҙылып ятырға өлгөрмәне, ишек йәнә асылды, батмус тотҡан кеше стенаға беркетелгән тимер өҫтәлгә шыйыҡса һалынған ҡырлы стакан һәм сыр киçәге ҡалдырып сығып китте. Фәтихов еçкәп ҡараны — ром еçе килә ине. Эсергәме, юҡмы? Ә ниңә эсмәçкә? Был бит уның һуңғы тапҡыр «шайтан һыуын» эсеүе буласаҡ. Туҡта, ә ниңә һуңғы тапҡыр? Легионға китмәçкә булдыңмы? Ҡалала немец формаһында йөрөгәндә үлтерерҙәр тип ҡурҡма-

ғайныңмы ни, ниңә хәҙер ҡурҡаһың? Ул саҡта үлтерһәләр ҙә, һинең кемлегенде һәм нисек үлеүенде белмәйәсәктәр ине түгелме? Юҡ, уны бит ҡоралдаштары Киев янындағы урманда ҡарағай ботаҡтары менән ерләп киткәйнеләр, тимәк, ул һуғыш яланында намыҫ менән үлгән. Уйла, уйла, капитан Фәтихов, аҙаҡ бер генә минутҡа ла, бер генә секундҡа ла үкенерлек булмаһын...

Ул ойоп китте. Саф айыҡ баш менән уянды. Һикереп торҙо. Ишеккә йоҙроғо менән һуҡмаҡсы булды, туҡталды. Ә ниңә ашығырға? Иртәгә үҙҙәре саҡырасаҡ бит... Ул йәнә карауатына барып ятты. Иң күңелле, иң матур нәмәләр хаҡында ғына уйлағыһы килде... Ундай уйҙар килеү менән, шунда уҡ уларҙы ҡара уйҙар ҡыуып ебәрҙе... Унан офицер мундирҙарын ҡайҙан таптығыҙ? Ҡайҙа һаҡланығыҙ? Кемдәр менән эш иттегеҙ? Көрәштәштәрегеҙ кем булды? тип талап итәсәктәр... Гестапоға ғына хас методтарҙы ҡулланып язалаясаҡтар... Күпмегә һуҙылыр һуң ул йәһәннәм ғазаптары? Түҙә алырмы? Түҙеүен түҙер... Әммә ниңә ул ғазаптарҙан ҡотолорға мөмкин булғанда ҡотолмаҫҡа? Легионға китергә. Мөмкин булһа, юлда уҡ ҡасырға, мөмкин булмаһа, барып еткәс... Ул шул ҡарар менән ишек ҡаға. Надзиратель ишектең «күҙен» асып ҡарай.

— Мине штандартенфюрер янына илтһендәр.

— Яҡшы.

Был ҡарарҙан һуң ул үҙен иркенерәк тоя башлай. Тын алыуы еңеләйә — әйтерһең, иреккә сыҡҡан.

Штандартенфюрерҙың кабинетына инеү менән, Гитлерҙың һүрәте күҙгә ташлана һәм ул ҡапыл икенсе уйға килә.

— Приговор сығарығыҙ... әгәр һеҙҙә шундай тәртип булһа, булмаһа инде былай ғына...

Штандартенфюрер уны ҡыҙғанғандай көрһөнөп ҡуйҙы.

— Юҡ, капитан Фәтихофф, приговор сығарғансы, һеҙ беҙгә беҙ талап иткәндәрҙе һөйләрһегеҙ әле.

— Ә быныһы инде юҡҡа ваҡыт әрәм итеү буласаҡ. Һеҙ үҙегеҙ бит мине, профессиональ разведчик, тинегеҙ.

— Беҙ профессиональ разведчиктарҙың да ауыҙҙарын аса беләбеҙ.

Ана шул көндән, дөрөҫөрәге, сәғәттән, Фәтихов өсөн йәһәннәм ғазаптары башланды. Юҡ, йәһәннәмдә ғазап бер генә төрлө була тиҙәр — ыҫмалала ҡайнай, ә гестапола... О, инквизицияның ниндәй «юғарылығына» күтәрелгәндәр был үҙҙәрен донъялағы иң «юғары раса һәм талантлы» халыҡ һанаған милләт...

Һорауҙар Фәтихов уйлағанса булды: офицер мундирҙарын ҡайҙан таптығыҙ һәм ҡайҙа, кемдә һаҡланығыҙ? Хәҙер улар ҡайҙа? Документтарҙы нисек ҡулға төшөрҙөгөҙ?

Көрәштәштәрегеҙ кемдәр? Йәшерен осрашыу урындары? Коралды һәм боеприпасты ҡайҙан таптығыҙ? Кемдәр һеҙгә ярҙам итеште?

Был следователь штандартенфюрер Штраафтың (Фәтихов тора-бара уның фамилияһын белде) ҡапма-ҡаршыһы ине: һуйырға һимертелгән үгеҙҙе хәтерләтеүсе ҡиәфәт: тәгәрәп төшөргә торған ҡыҙыл күҙҙәр, ҡарлыҡҡан тупаҫ тауыш; әҙәпһеҙ, оятһыҙ ҡараш. Ул үҙенән сикһеҙ ҡәнәғәт: «Эй, һин миңә шуны әйт, юҡһа, ергә һеңдерермен», — тип һорау бирә лә бармағындағы бриллиант ҡашлы йөҙөгө менән һоҡланырға тотона: уға өрөп ала ла мундирына һөртә, ҡулын ситкәрәк ҡуйып, бриллианттың «уйнағанын» күҙәтә, тотҡан яуап бирмәһә: «Эй, һин, хайуан, теленде йоттонмо әллә?» — тип һүгенергә тотона. Ҡайһы саҡта өҫтәл артынан тороп, Фәтиховтың башына ҡул таяғы менән төртә: «Һин, монгол, сираттағы өлөшөндө алғың киләме? Палачтар тотҡондо ҡыйнағанда, ситкәрәк китеп, ҡулдарын ҡаушарып, ләззәтләнеп, һыҙғырып тора, әшәке һүҙҙәр әйтеп, һалдаттарға аяуһыҙыраҡ ҡыланырға ҡуша, үҙе «үрнәк» күрһәтеп ала...

Ҡамерала яңғыҙ ҡалғас, Фәтихов ҡайһы сағында уйлана ине: был палачтарҙың йөрәгендә берәй изге нәмә бармы? Мәҫәлән, ата-әсә, балалар... Әллә улар, бүреләр шикелле, тыуғанда уҡ ҡанға һыуһап тыуалармы? Бәлки, Гитлер һәм уның бандаһы уларҙы шундай ҡот осҡос кешеләргә әйләндергәндер? Үҙенән-үҙе шундай һорау тыуа: яҡшы кешене насар итеп буламы? Һәм киреһенсә. Хәйер, фашистар һис тә үҙҙәрен насар, әшәке, яуыз кешеләр тип һанамайҙар. Улар үҙҙәренә оҡшамаған, улар яҡлы булмаған кешеләрҙе йөҙләп, меңләп кенә түгел, миллионлап ҡырыуҙы ла ғәҙәти бер эш итеп ҡарайҙар. Фашистарҙы тар-мар итмәйенсә, донъяға тыныслыҡ, ирек, дуҫлыҡ, туғанлыҡ, шулай булғас бәхет тә килмәйәсәк.

## АНДАЛУЦКАЯНЫҢ РАЯ ӘСӘҺЕНӘ ҺӨЙЛӘГӘН ҺҮҘҘӘРЕ

Татьяна Павловна Андалуцкаяны Германияның ниндәйҙер байрамында балконына немец флагын элергә рөхсәт итмәгәне һәм ике улы Ҡыҙыл Армия командиры булғаны өсөн бер нисә ай ябып тоталар. Ул Рая Буяненко менән бер камерала ултыра.

...Сираттағы һорау алыуҙан һуң ҡанға батҡан Раяны камераға һөйрәп кертеп ташлайҙар. Ул бик оҙаҡ әллә ҡайҙан, ете ҡат ер аҫтынан ишетелгән шикелле, ауыр ыңғыра-

шып ята ла, хәл кергәс, тороп ултыра. Минән күҙгә һорай. Мин ус төбөндәй генә күҙгөм булһа ла, юҡ, тигән булам. Күгәргән, ҡанға буялған йөҙөн күреүен теләмәйем.

Рая әле бер, әле икенсе ҡулы менән сәсен артҡа һыйпай ҙа ғәйепле кеше һымаҡ йылмая. «Мин ҡот осҡос ҡиәфәткә керҙемме, Татьяна Павловна?» «Юҡ, юҡ, Раечка, — тим, — туйға саҡлы бөтәһе лә төҙәлер, бөтөр». «Туйға...» — ти ул, һағышлы йылмайып. Унан ҡулдары менән тубыҡтарын ҡосаҡлай ҙа аҡрын ғына йырлай башлай. Ай, нисек матур йырлай ине ул...

Бер көндө ул миңә үҙенең ҡайһылай ҡулға алыныуы хаҡында һөйләне. ...Һуңғы ваҡытта арестар йышайһа ла, мин үҙемде эләгермен тип уйламай инем — документым да, эшләгән ерем дә ышанысли. Артымдан күҙәтеүҙе һиҙмәнем, элеккесә, немец офицерҙары һағыҙаҡ кеүек йәбешергә генә торҙолар. Мин улар менән ҡыланған, шаярған булдым, был миңә маскировка өсөн кәрәк ине.

Егерме дүртенсе июлдә иртән иртүк тороп, эшкә барғансы, икмәк карточкамды алдым, магазинға саптым. Байтаҡ сират тороп, бармаҡ менән баҫһаң һыуы сығырлыҡ паегымды алып, өйгә йүнәлдем. Балалар йоҡлап ҡалғайны, уяныу менән ашарға һорап шыңшый башлаясаҡтар. Бигерәк тә кесеһе — Василегым. Ашығам. Йүгерә-атлайым. Тыным бөтә. Үргә табан бит. Туҡтап тын алам да тағы йүгерә-атлайым. Эшкә һуңламаҫҡа кәрәк — немецтар теүәллекте ярата. Ә бына йорт янына еткәс, ни эшләптер, йөрәгем һулҡылдай башланы, атларға итәм, аяҡтарым тартмай ҙа ҡуя. Үҙемде тынысландырыр өсөн эсемдән генә көйләгән булам. Ә инде йортҡа кереп, юғарыға күтәрелә башлағас, аяҡтарымды көҙән йыйырғандай итте. Аҙаҡ күңел һиҙә тигән нәмә шул булалыр инде тип ҡуйҙым. Ишекте беҙ бикләмәй торғайныҡ — урлап сығыр нәмә юҡ. Ишекте асып кереү менән, күҙемә ултырғыс арҡаһына һалынған ирҙәр плащы ташланды. Йөрәгем өҙөлөп төшкәндәй итте. Әммә, шикләнеүемде һиҙҙермәҫкә тырышып, шат тауыш менән һораным: «Әсәй, әллә ҡунаҡтар бармы?» Ул арала эске бүлмәнән егерме биш-утыҙ йәштәрҙәге ике ир кеше килеп сыҡты. Улар игеҙ балалар шикелле бер-береһенә оҡшағандар ине. Икеһе лә суйындан ҡойоп яһаған кеүек мыҡты кәүҙәле, икеһе лә сандыр. Тик айырма шунда ғына: береһе янып торған баҡыр сәсле, икенсеһе бөҙрә сәсле брюнет. Ҡапыл, ни эшләптер, ҡурҡыуым ҡул менән һыйпағандай булды. «Һаумыһығыҙ!»— тип иҫәнләштем, ултырырға урындар күрһәттем. Баҡыр сәс тә йылмайҙы. Минең иҫәнләшеүемә баш ҡаҡты. Ултырғыс арҡаһына эленгән плащын алып кейҙе лә ултырғысты миңә табан этәрҙе.

— Ултырығыҙ, фрау.

Мин рәхмәт әйтеп ултырҙым. Уларға ла ултырырға тәҡдим иттем. Әле һаман уларҙың гестапосылар икәнлегенә ышанып етмәй инем, дөрөҫөрәге, ышанырға теләмәй инем. Көндөң һәр сәғәтендә мин уларҙың мине ҡаптырасаҡтарын көтһәм дә, бәлки, һыуҙан ҡоро сығып булыр тигән өмөт менән йәшәнем.

— Һеҙ Кушнирҙы беләһегеҙме, фрау?— тине баҡыр сәс. Бына ошо ваҡыт мин уларҙың гестапосылар икәнлеген аңланым, һәм ҡапыл донъя ҡараңғыланып киткәндәй булды, әйтерһең, ҡояш тотолдо.

— Әлбиттә,— тинем дә рус теленә күстем, ниңә әле мин уларға немецса яуап бирергә тейешмен.— Һуғыш башланғанға саҡлы беҙ бер заводта эшләнек.

Бөҙрә сәсле брюнет имән бармағын һелкетеп алды. (Иҫләнем, ул бармағының бер быуыны юҡ ине, шуға күрә уны күрһәтмәҫкә тырышып, усы аҫтына йәшерә лә бер аҙҙан йыш-йыш һелкетеп ҡуя.)

— Уныһы билдәле (ул русса аңлай икән). Ә бына беҙҙең ғәскәр Киевты алғас күргәнегеҙ булманымы ни?

— Ул заводтың төп массаһы менән бергә эвакуироваться итте. Шунан һуң күргәнем булманы.

Брюнет ауыҙын ҡыйығайтып йылмайҙы.

— Хатта бер йортта йәшәп тәме?

— Беҙҙең йортта ундай кеше йәшәмәне.

— Яҡшы, ул хаҡта тегендә һөйләшербеҙ. — Брюнет быуынһыҙ бармағы менән яурыны артына төртөп күрһәтте.

— Ҡайҙа? — тинем уға, ғәжәпләнгән булып.

Брюнет йәнә ауыҙын ҡыйшайтты.

— Владимир урамында ҡунаҡта.

Мин уларҙың бер һүҙемә лә ышанмағанлыҡтарын аңлаһам да, фажиғәле минуттарҙы мөмкин саҡлы артҡа һуҙырға тырыштым.

— Әфәнделәр, мин ант итәм, мин Кушнирҙы һуңғы тапҡыр былтыр июль аҙағында күрҙем...

Баҡыр баш, әллә беҙҙең ни нәмә хаҡында һөйләшкәнде аңламай, әллә минең өсөн барыбер тигәндәй, бер аяғының башы менән иҙәнгә тыпылдатып һыҙғырып торҙо. Көй таныш ине. Тәүҙә мин иҫкә алманым, аҙаҡ машинала барғанда иҫкә төштө: Штраустың «Вена урманы әкиәте» вальсы ине. Бәлки, ул ысын немец түгел, австряк булғандыр.

— Хәтерегеҙ тарҡалһа, — тине брюнет, — уны яңыртырға тура килер. Киттек, — тине, мыҫҡыллы йылмайып.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп, әсәйем брюнетты беләгенән тотоп алды.

— Пандар, уның бер ғәйебе лә юҡ, бер ғәйебе лә юҡ...

Олежка, эштең нимәлә икәнлеген аңлап (етенсе йәш бит инде. Ә ул бик зирәк бала), илай башланы. Ул илағас, Василек та уға ҡушылды. Ә баҡыр сәс һыҙғырыуын дауам итте.

— Ғәйебе булмаһа, бер минут та артыҡ тотмабыҙ, — тине брюнет, ишекте асып. — По-жа-луй-ста! — Ул йәнә йылмайҙы һәм уның йылмайыуы миңә йәһәннәм ишеге төбөндә утлы суҡмар тотоп баҫып торған зобанийҙар йылмайыуын хәтерләтте...

...Сираттағы ҡанлы допростан һуң Раяны бетон идәнгә ташлап киттеләр. Мин уны торғоҙоп ҡарауатҡа һалдым. Бер аҙҙан Рая тороп ултырҙы. Йәнә көҙгө һораны. Һәм шул саҡ мин уның йомшаҡ ҡарағусҡыл сәстәрендә сал бөртөктәре күрҙем. «Ярабби, уға бит әле егерме ете лә юҡ».

— Татьяна апай, ә мин бит үҙемде шундай йәшәүсән, түҙемле, тип уйламай инем, — тине Рая, мине ҡосаҡлап. Уның ҡулдары шундай бәләкәй, нәфис ине. — Татьяна Павловна, әйҙә йырлайыҡ. — Һәм ул минең ризалығымды ла көтөп тормай йырлай башланы. Ә мин уйлайым: ҡарап тороуға, ҡурсаҡ кеүек, кескәй генә, сибек кенә был ҡатынға күп кенә ирҙәрҙә булмаған батырлыҡ, түҙемлек, йәшәүсәнлек ҡайҙан килгән икән?..»

Рая иһә аҡрын ғына, бер нәмә булмаған кеүек, әйтерһең, уның бер ағзаһы ла һыҙламай, шешкән, күгәргән ерҙәре һулҡылдамай, йөрәген ялҡын ялмап алмаған, йырлай. Моңаймай, бойоҡмай, шаян, дәртле йыр йырлай.

Раяның, үлергә бер-ике көн ҡалғас, әйткән һүҙҙәре шул булды.

— Татьяна Павловна... Һеҙҙе иртәме, һуңмы, барыбер сығарасаҡтар. Һеҙҙең бер ғәйебегеҙ ҙә юҡ. Сыҡҡас, Татьяна апай.. Хәҙер үк булмаһа, Киевты азат иткәс, минең әсәйемде эҙләп табығыҙ. Вера Макаровна... Ҡабатлайым, Вера Макаровна. Фамилияһы — минеке кеүек — Буяненко. Адресы — Подолда. Боричев ток. Фуникулерҙан алыҫ түгел. Унынсы номер. Ҡабатлайым. Ҡабатлайым, унынсы. Ун бармаҡ, йортто тапһағыҙ, квартираны әйтерҙәр. «Тегенсе Вераны» бөтә урам белә. Әсәйемә минең васыятымды әйтегеҙ? Ҡыҙығыҙ Рая үтенде, тиегеҙ, нисек тә Олежка менән Василекты кеше итергә тырышһын *. Үҫкәс, әсәләренең ни өсөн уларҙы етем ҡалдырыуҙарын аңларҙар һәм... мине ғәфү итерҙәр...

---

* Рәхмәт Вера Макаровнаға, ул Раяның улдарын ысын гражданин — патриот итеп үҫтерҙе. Олег Александрович Шульяжко Киев университетының юридик факультетын тамамлай, ә Василий Ефимович Чечко, мин ошо юлдарҙы яҙғанда, подполковник ине.

Тәү тапҡыр мин шунда Раяның башын тубыҡтарына ҡуйып үкһегәнен күрҙем. Үҙен йыуатмаҡсы булдым. «Ниңә шул саҡлы төшөнкөлөккә бирелергә, Раечка, улар һине сығармаһалар ҙа концлагерға оҙатырҙар...» Рая башын күтәрҙе, мин уның күҙ йәштәрен һөрттөм. «Юҡ, Татьяна апай, улар мине ғәфү итмәйәсәктәр. Мин уларға байтаҡ «изгелектәр» эшләнем. Ә гестапо үҙенә ҡул күтәргән бер кешене лә аямай. Хатта үҙ халыҡтарынан булһа ла. Мин үлемдән ҡурҡмайым, үлемдән ҡурҡҡан булһам, был эшкә аяҡ баҫмаған да булыр инем. Балаларым йәл».

Ул аҡрын ғына: «Реве та стогне Днипр широкий», — тип йырлай башланы...

Һуңғы куплеттың һуңғы юлын ул йырлап түгел, һүҙ менән генә әйтте лә аяҡ үрә баҫты. Турайҙы. Уның йөҙө ҡапыл йәшәреп, матурайып китте.

— Татьяна Павловна... Мине үлтерһәләр ҙә, улар минең рухымды үлтерә алмаясаҡтар. Мин балаларым, ейәндәрем... халыҡ күңелендә мәңге ҡаласаҡмын...

Гестапо, «методтарын» ҡулланып та, Раяны «һындыра» алмағас, һуңғы сараға — провокацияға барырға булды.

Сираттағы допросҡа алып барғас, Рая хәтерләй, инде был нисәнсе допрос булғандыр, унынсымы, ун икенсеме, следователь, свастика төшкән ялтырауыҡ ҡара папкаһын асып, бер нисә бит ҡағыҙ алды.

— Был һеҙҙең иптәштәрегеҙҙең күрһәтмәләре. Бөтәһе лә эшләгән эштәрен ентекләп һөйләп бирҙеләр. Үкенделәр. Тәүбә иттеләр. Мәрхәмәт һорап, прошение яҙҙылар. Гестапо ундай кешеләргә ҡарата шәфҡәтле булырға тырыша. Хәҙер һүҙ һеҙҙә. Ышанмайһығыҙмы? Мәгеҙ, ҡарағыҙ. Бөтәһенең дә имзаһы бар. Фәтихов. Кушнир. Светлин. Желедко... — Ул өҫтәл аша машинкала баҫылған бер нисә бит ҡағыҙ һондо.

Рая Фәтиховтың, Светлиндың имзаһын түгел, почерығын да күргәне юҡ ине, ә бына Желедко менән Кушнирҙың имзалары... оҡшаған... Уларҙың береһенең дә был түбәнлеккә бармаясағын Рая белһә лә, секундтың йөҙҙән бер өлөшөндә башына шикләнеү уты тоҡанды һәм шунда уҡ һүнде.

— Ә улар менән күҙгә-күҙ осрашырға мөмкинме? — Унда һуңғы тапҡыр иптәштәрен күреү теләге тыуҙы.

Следователь яуап бирергә ашыҡманы. Йөҙөгө менән уйнаны: ҡашына өрөп мундирына һөрттө лә, ҡулын ситкә ҡуйып, ҡыбырлатып торҙо — бриллиант нурҙар сәсте.

— Бер шарт, — следователь торҙо. — Һеҙ ауыҙ асып бер һүҙ әйтмәйһегеҙ. Фәҡәт минең һорауҙарыма ғына яуап бирәһегеҙ. Ризаһығыҙмы?

Рая ризалыҡ бирҙе.

Рая янына тәүҙә Кушнирҙы керттеләр. Бик оҙаҡ ваҡыт ярым подвалда йәшенеп йәшәгән, ябыҡҡан, сырайһыҙланған Кушнир хәҙер бөтөнләй таный алмаҫлыҡ хәлгә кергәйне. Күҙҙәр осрашты. Был ҡараштарҙа әйтеп бөтә алмаҫлыҡ әрнеү ҙә, нәфрәт тә бар ине. Рая: «Федор Михайлович, дөрөҫмө?» — тип һорамаҡсы булғайны, тыйылды. Кушнир, Фәтихов әйткәнсә, ҡырҡҡа тураҡланһа ла, иптәштәрен һата торған кеше түгел. Шуға күрә ундай һорау биреп, көрәштәшен һәм өлкән иптәшен кәмһетергә теләмәне.

Следователь Раянан һораны.

— Һеҙгә танышмы был кеше?

— Таныш. Беҙ һуғышҡа саҡлы байтаҡ йылдар бер заводта эшләнек, әммә завод эвакуацияланып киткәндән бирле минең уны күргәнем булманы.

— Гут, — следователь Кушнирға мөрәжәғәт итә. — Ә һеҙ ни әйтергә уйлайһығыҙ?

— Буяненконың һүҙҙәрен раҫлайым.

Следователь ауыр гранит пресс-папье менән өҫтәлгә тондорҙо.

— Һеҙ, нимә, беҙҙе диуанаға һанайһығыҙмы? Бер йортта йәшәйҙәр, бер-береһен күрмәйҙәр. Алып китегеҙ!

Кушнирҙы Фәтихов алмаштыра.

Шаҡтай нығ үҙгәргән булһа ла, ап-аҡ күлдәк, таҙа төрмә курткаһы кейгән Фәтиховты күргәс, Рая әллә ни эшләп китте, башына ҡот осҡос уй килде: «Әллә, ысынлап та... Үҙе бит, ҡырҡҡа тураҡлаһалар ҙа... тигәйне».

Тәүҙә Фәтихов Раяны танымайыраҡ торҙо: күҙе-башы күгәргән, сәсе ағарып, көл төҫөнә кергән. Хәҙер уға, кәм тигәндә, ҡырҡ-ҡырҡ биш йәш бирергә булыр ине.

Ул арала следователь Раяға һорау бирҙе.

— Был кеше һеҙгә танышмы?

— Тәү тапҡыр күрәм.

— Ә һеҙгә, капитан Фәтихофф?

Ул, «белмәйем» тигәнде аңлатып, баш ҡаҡты.

Следователь Фәтиховты ҡалдырып, Раяны алып сығырға бойорҙо.

Шул минутта уҡ Петя Позднякты керттеләр. Балаҡай! Тегеләр ҡыйнап эштән сығарылған булһалар ҙа, үҙ аяҡтары менән керҙеләр, үҙ аяҡтары менән сығып киттеләр, ә Петя бахырҡайҙы ике һалдат һөйрәп алып инде — уның атлап йөрөрлөк түгел, баҫып торорлоҡ та хәле юҡ ине.

Следователь мыҫҡыллы тауыш менән һораны.

— Һеҙ ҙә бер-берегеҙҙе белмәйһегеҙме? Хатта бер ҡасан да күрешкәнегеҙ ҙә юҡмы?

Петя ауыҙын асҡансы, Фәтихов яуап бирергә ашыҡты.

— Юҡ. Ни эшләп? Беләбеҙ. Мин улар квартираһында ҡунғылағаным булды. Ҡайһы саҡта мин уға ваҡ-төйәк йомоштар ҙа ҡушҡыланым. Әммә ул ни эшләгәнен бер ҡасан да белмәне. Механик рәүештә. өлкән кешенең һүҙен кире ҡаҡмаҫ өсөн, теләр-теләмәҫ кенә үтәне. Малайҙың бер гәйебе лә юҡ. Уны ғазапламағыҙ. Бөтә яуаплылыҡ минең өҫтә. (Фәтиховтың был һүҙҙәрен мәңгә Петр Харитонович Поздняк 1969 йылдың июлендә үҙенең Бассейн урамындағы квартираһында һөйләне.)

## Һуңғы подвиг

Петяны ике автоматчик һөйрәп алып сығып киткәс, следователь:

— Шунын менән беҙҙең диалог тамам... Бәлки, һинең һуңғы һүҙең барҙыр, капитан Фәтихофф? — тип һораны. — Беҙ, гестапо булһа ла, юриспруденцияны боҙмайбыҙ.

Фәтихов аңланы — был унын һуңғы көнө. Һәм нисек уны «йондоҙло сәғәткә әйләндерергә? Унын мейеһенең нервы күҙәнәктәре бер ҡасан да шул саҡлы ашығып эшләмәгәндер. Ҡапыл көтөлмәгән уй килде.

Ул тамаҡ ҡырҙы.

— Әйтәһе һүҙем бар, — тине ул, ишетелер-ишетелмәҫлек итеп.

Следователь башын күтәрә төштө.

— Тыңлайым. Тик... ҡысҡырыбыраҡ һөйләгеҙ.

— Ни эшләптер ҡапыл тамағым ҡарлыҡты. Әйтергә... мөһим һүҙем бар.

— Ә-ә... Ул сағында... Следователдең йөҙө асылып китте. Үҙен психоаналитик тип маҡтанған Штрааф ирешә алмаған уңышҡа ирешһә, унын танауына сиртәсәк һәм, ихтимал, берәй баҫҡысҡа юғарыға ла күтәреләсәк. Дөрөҫ, уға допрос алыуы, тотҡондоң тора-бара бөгөлөү, һыныу процесын күҙәтеүе ҡыҙыҡ, әммә күпме ябай следователь булып ултырырға мөмкин?.. Ул төҙәтенә-төҙәтенә урынынан тороп, Фәтихов янына килә.

— Йә-ә... һөйләәә...

Ара бер аҙым ғына ҡалғас, Фәтихов башы менән унын яңағына шундай тондора, теге, таш һын шикелле, гөрһөлдәп иҙәнгә ҡолай, һәм ауыҙынан урғылып ҡан аға башлай. Ошо уҡ секундта ишек төбөндә торған һаҡсылар уға ташланалар һәм, аяғынан йығып, иҙә башлайҙар.

Следователь һынған яңағын тотоп тормаҡсы итә. Һаҡсыларҙың береһе уға ярҙамға килә. Следователь уға ниҙер әйтә. Ул арала бүлмәгә башҡа гестапосылар атылып инәләр.

Бер нисә көндән Штепаның «Нове украиньске слово» газетаһы «Ун бишенсе августа гестапола ни булды?» тигән информация баҫып сығара. Газета гестапосыға симпатияһын белдерһә лә, үҙе лә, һиҙмәҫтән, совет разведчигына маҡтау йырлай.

Һушына килгәс, Фәтиховтың беренсе тойған нәмәһе тамаҡ төбө булды — ул ут кеүек яна ине. Баш суйын һымаҡ ауыр, күҙҙәр бына-бына атылып сығып, иҙәнгә тәгәрәп төшәсәктәр... Тәүҙә ул следователь бүлмәһенән һөйрәп алып сыҡҡас ни булғанын хәтерләмәйерәк торҙо. Эйе, кемдер: «Телен, телен ҡырҡып эткә ташлағыҙ!» — тип ҡысҡырғайны. Ул һынырлыҡ итеп тештәрен ҡыҫты, ләкин көслө ҡулдар уның ауыҙын ҡайырып асты һәм шул секундта уҡ теле һалҡын тимерҙе тойҙо... Ул бармағын ауыҙына тыҡты — теле юҡ ине. Ҡулы менән иҙәнде һәрмәне... Ҡулы һылашҡаҡ шыйыҡсаға тейҙе... Усын танауына яҡын килтерҙе — сөсө ҡан еҫе күңелде болғатты, уҡшыта башланы, ауыҙҙан йәнә ҡан китте. Ҡалғанын хәтерләмәй...

Фәтихов салҡан ятты. Ҡан тамаҡҡа тулды. Юҡ, былай сәсәп үлеүең бар... Ул ҡырын ятты... Тиҙерәк... атһындар ине... Тиҙерәк... һәм ҡапыл уның шундай йәшәгеһе килә башланы.... Телһеҙ булһа ла... һуҡыр булһа ла... Яҡындарын... Ҡыҙын... Ҡатынын... Ата-әсәһен... Туғандарын... Балалыҡ дуҫтарын күргеһе, Низами үлтергән ҡарға балаһын усына алғыһы килде...

Ошо ваҡыт ишек асылды. «Бөттө. Шуның менән бөтәһе лә бөттө...» тип уйланы ул. Төрмәселәр уны, аяғынан һөйрәп алып, камеранан алып сыҡтылар, ауыҙҙан йәнә ҡан китә башланы — арттан ҡыҙыл таҫмалай ҡан һуҙылып ҡалды...

Юҡ, уны атырға алып сыҡманылар, дөйөм камераға кертеп ташланылар.

Ниңә атманылар уны? Ниңә дөйөм камераға кертеп ташланылар? Башҡа тотҡондарға ғибрәт булһын типме, бер кешелек камераһының башҡа берәй мөһим тотҡонға кәрәк булыуынанмы?.. — Фәтихов аңламаны.

Бер аҙҙан камералағы тотҡондар, уның янына килеп, фашистарҙың ҡот осҡос йыртҡыслыҡтарын күрҙеләр. Үҙара быш-быш һөйләштеләр. Уны күтәреп карауатҡа һалдылар. Төрмә шундай урын: камералар бер-береһенән ҡалын стеналар, тимер ишектәр менән айырылып торһалар ҙа, тотҡондар ундағы хәлдәргә хәбәрҙар булып торалар. Әле лә улар үҙҙәренең камераһына кемде кертеп ташлағанды шунда уҡ аңланылар. Ул ғына ла түгел, капитан Фәтиховтың һуңғы алышы бер нисә минуттан һалҡын под-

валда ятыусы тотҡондарға билдәле булды. Күптәр, капитан Фәтихов шикелле, һуңғы минуттарына саҡлы көрәшергә ант итте...

Юҡ, Фәтиховты шул көндө иртән дә, икенсе көндө лә алып сығып китмәнеләр. Улар нимәлер көттөләр... Улар немецтарға ғына хас теүәллек менән үлем язаһына дусар ителгәндәрҙе атыр өсөн һәр аҙнаның дүшәмбе йәки йома көнөнөң таңы етеүен генә көттөләр...

Дүшәмбе көндөң таңында уларҙы берәм-берәм подвалға алып төштөләр.

Рая, үҙен алырға кергәс, Андалуцкаянан көҙгө һораны. Был юлы ул, юҡ, тип алдай алманы. Рая ус төбө саҡлы ғына көҙгөгә ҡарап төҙәтенде, ағара башлаған сәсен матур итеп тараны. «Ҡыҙҙар, берәйегеҙҙең ирен помадаһы юҡмы?» — тип һораны. Помадалы кеше булманы. Ул көҙгөнө Андалуцкаяға һуҙҙы.

— Ни саҡлы ғазаплаһалар ҙа, ҡот осҡос түгелмен икән әле. Матур, йәш булып үләм. Бәхил булығыҙ... Оҙон, бәхетле ғүмер һеҙгә! — Ул тотҡондар менән ҡосаҡлашып бәхилләшеп сыҡты. Андалуцкаяны ҡосаҡлағас, ебәрмәйерәк торҙо.

— Татьяна апай, беҙҙекеләргә әйтегеҙ... Коммунист Рая коммунистарса үлде, тиегеҙ...

Уның күптән инде шундай ҡаты йоҡлағаны юҡ ине. Тимер ишектең тешкә тейеп йәмһеҙ шығырлауын да, «Фәтихофф! Вихади!» тигән шомло команданы ла ул ишетмәне, күҙгә төшкән ут яҡтыһына уянып китте. Тәүге мәлдә ул үҙенең ҡайҙа ятҡанын аңламаны. Команданың мәғәнәһенә төшөнмәне, әле генә күргән төшөн хәтерләп, йылмайып ҡуйҙы. Ә команда ҡабатланды: «Фәтихофф! Вихади. Шнеллер!»

Фәтихов, иҙелгән тәненең ҡот осҡос һыҙлауын, тамағының ут кеүек яныуын һиҙҙермәҫкә тырышып, мөмкин саҡлы еңелерәк ҡыймылдап торҙо. Тирә-яғына ҡаранды — башҡа тотҡондар тороп ултырғайны инде. Фәтихов уларҙың һәр береһенең ҡулын ҡыҫып, бәхилләшеп сыҡты, кисә стенаға тырнағы менән һыҙып, сыйып яһаған йондоҙҙо һыйпаны ла ишеккә йүнәлде. Бына ошо минутта ул бер генә һүҙ ҙә әйтә алмауына үкенде, әммә сырайын һытманы, йөҙөндә йылмайыу нуры балҡып китте. Тотҡондар йоҙроҡтарын күтәрҙеләр...

Ауыр һалҡын тимер ишек тешкә тейеп шығырлап ябылды.

Ҡеше иҫән-һау сағында, йәш ваҡытта үлем хаҡында уйламай. Дөрөҫ, ул һуғышта йөҙләгән үлемдәр күрҙе, әммә

ул саҡта Фәтихов, ни эшләптер, үлемдән әллә ни ҡурҡманы һәм, һуғышҡа кергән һәр яугир шикелле, ә ниңә мин үлергә тейеш әле? Мотлаҡ мин үлергә тейеш тимәгән бит, мин иҫән ҡаласаҡмын, тип өмөтләнде. Ихтимал, шулай кәрәк тә булғандыр — һуғышҡа кеше: «Мин үләсәкмен», — тип керһә, һис шикһеҙ, үләсәк. Дөрөҫ, һуғышта осраҡлылыҡ тигән нәмәнең дә роле ифрат ҙур — үлем һине-мине һайлап тормай. Ә шулай ҙа үлемдең килгәнен күрмәү, ҡапыл үлеү хәйерлерәктер. Боронғо грек философы әйткәнсә. «Үлемдән ҡурҡырға ярамай, һин бар — ул юҡ, ул килде — һин юҡ».

Был уйҙарҙан уға еңел булып китте. Тик шуныһы аяныс: уны «билдәһеҙ юғалған» кешегә һанап көтәсәктәр.

Көтәсәктәр.

Ҡапҡа шығырлап асылғанда ла...

Баҫҡыстан аяҡ тауыштары ишетелгәндә лә...

Ҡоштар килгәндә, ҡоштар киткәндә лә...

Ҡыштар килгәндә лә, ташыуҙар киткәндә лә...

Умырзаялар, ҡарҙы тишеп, баш ҡалҡытҡанда ла, һуңғы һары япраҡтар өҙөлөп, теләр-теләмәҫ кенә бәүелеп ергә төшкәндә лә...

Матур төштәр күргәндә лә, байрам табынына йыйылғанда ла...

Көтәсәктәр...

Һағынып...

Зарығып...

Өмөтләнеп....

Һуңғы һулыштарына саҡлы...

Көтһөндәр. Өмөтһөҙ йәшәп, өмөтһөҙ үлгәнсе, өмөт менән йәшәп, өмөт менән үлеү хәйерлерәк.

Бына ул өмөт менән үлә. Бер заман уның исеме лә, уның даны ла тыуған яҡтарына ҡайтыр әле. Йә рәсми хат булып, йә йыр булып, йә Ҡош Юлына бер йондоҙ булып өҫтәлеп...

Был уй-хыялдарҙан донъя яҡтырыбыраҡ киткәндәй булды, һәм үлемде ул шундай еңелдер тип уйламағайны. Хатта подвал ишегенең йөрәкте ярып шығырлап асылыуы ла уны өркөтмәне. Ул, команданы көтөп тормай, йәшәү менән үлем тупһаһы аша үҙе атлап инде...

Подвалға кергәс тә, күҙгә ташланған күренеш: цемент иҙәндә төрлө ҡиәфәттә аунап ятҡан уның иптәштәре — туғыҙ ай буйы ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер сират күперенән бергә йөрөгән көрәштәштәре ине.

Фәтихов уларға ҡарамаҫҡа тырышты, көлөшә-көлөшә тәмәке тартып торған автоматчиктарға ҡарашын йүнәлтте. Арала береһе, күрәһең, өлкәнелер: «Әһә, главный бандит та килде», — тине лә ауыҙындағы тәмәкеһен иҙәнгә ташланы.

— Быны тиҙ генә үлтермәйбеҙ, — тине ул автоматын муйынынан һалып, тәүҙә аяҡтарына атабыҙ, унан юғарырак... Ул Киевта иң хәтәр бандит булған... Беҙҙең офицерҙарҙы аҙ ҡырмаған...

Берәү килеп Фәтиховтың күҙҙәрен бәйләмәксе булғайны, ул: «Ҡит!» — тип ҡул һелтәне һәм ҡапыл ауыҙынан, юк, тамаҡ төбөнән «юҡ!» тигән һүҙгә оҡшаш тауыш сыҡты. Был уның һуңғы минутта әйткән һуңғы һүҙе ине.

Уны мәйеттәр ятҡан стенаға килтереп баҫтырҙылар, үҙҙәре ҡаршы стенаға баҫтылар. Өлкәне: «Ахтунг!» — тип команда бирҙе, автоматтарҙың предохранителе алынды.

— Файер! (Ут асырға!)

Был фашист эттәре араһында ла миһырбанлы кеше табылды. Ул Фәтиховтың йөрәгенә тоҫҡап атты. Көбәктәрҙән бәргән ут ялт итеп китте... ялы әләм булып елберләгән аҡбуҙ ат пәйҙа булды...

Аҡбуҙ ат уны һыртына атландырып, күккә, йондоҙҙарға... Ҡош Юлына елдерҙе...

Ирҙәр китә яуға еңергә,
Үлгәндә лә еңеп үлергә,
Алһыу таңдар булып атырға,
Ҡош Юлдары булып ҡайтырға...

(Капитан Фәтихов язаланып үлтерелгәндән һуң да, Киевта халыҡ араһында гестапо тота алмай торған батыр разведчик — «немец офицеры» хаҡында легенда йөрөнө.)

## УТЫҘ БЕРЕНСЕ НОВЕЛЛА

*(Иң ҡыҫҡа һәм бер ҡасан да бөтмәйәсәк новелла)*

### Әсәләр һиҙәләр...

Ошо көндө Киевтан бик алыҫта урынлашҡан Өрьяҙы ауылында Нурҙың әсәһе Нәсимә апай тертләп уянып китә. Тороп ултыра. Белгәнен уҡый башлай: «Ярабби, бир, хоҙайым, Нур улыма иҫәнлек-иминлек бир... Ярабби, бир, хоҙайым...»

Уның бышылдауына ҡарты Фәтих ағай ҙа уяна.

— Һин нимә, ҡарсыҡ, таң менән уҡынаһың?.. Алама төш күрҙеңме әллә?

— Нурҙың текә ярҙан йығылып төшкәнен күрҙем... Ярҙағы ҡыуаҡтарға тотона... Ағастар тамыры менән йолҡона... Үләндәргә йәбешә, үләндәр умырылып сыға... Инде һыуға

төштөм тигәндә, осоп барып үҙен тотоп алғайным, икебеҙ ҙә... — Нәсимә апай төшөн һөйләп бөтөрә алманы, күҙ йәштәренә быуылды...

— Ҡуй, ҡарсыҡ, бөтөрөнмә. Алланың ҡөҙрәте киң, иҫән булһа, бер әйләнеп ҡайтыр әле... Хәбәрһеҙ юғалыу ул үлде тигән һүҙ түгел. Уң яғыңа ят та белгәнеңде уҡын.

Нәсимә апай уң яғына ла, һул яғына ла ятып ҡараны, белгән бөтә доғаларын, сүрәләрен ҡат-ҡат уҡыны, әммә башҡа йоҡлай алманы. Йоҡо килмәне. Нур улының рухы уға тынғылыҡ бирмәне...

Әгәр Нур иҫән-һау ҡайтҡан булһа, ихтимал, ул был төштө иҫкә лә алмаҫ ине, әммә һәләк булыуы раҫланғас, төш йәнә күп йылдар үткәндән һуң иҫенә төштө. Бик оҙаҡ ваҡыт әсәгә тынғылыҡ бирмәне. Ул улының рәсеменә ҡараны ла: «Һин бит ҡарға балаларын да йәлләй торғайның, балаҡайым, ә улар... иманһыҙҙар... ҡанһыҙҙар бер ғәйепһеҙ кеше балаларын ғазаплап үлтергәндәр... Үҙҙәре генә түгел, уларҙы тапҡан әсәләре йәһәннәмдә мәңге үрле-ҡырлы янһа ине.... Мәңге тамуҡта ғазап сикһә ине», — тип теләне ә с ә.

### АВТОРҘАН

Бына мин романымдың һуңғы битен яҙып бөттөм. 1982 йыл, егерме беренсе, юҡ, егерме икенсе июнь, хәҙер сәғәт ике. Туҡта, туҡта, был бит Ватан һуғышы башланған көн. Ҡешелек тарихы белгән иң ауыр, иң күп юғалтыулы Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн.

Был һуғышта егерме миллион ир арыҫландары ятып ҡалды. Шул иҫәптән минең геройым капитан Фәтхинуров Ғәбделбәр ҙә. Эйе, эйе, уның ысын фамилияһы, исеме шулай. Ғөмүмән, мин бөтә геройҙарымдың да исемдәрен, фамилияларын бер, ике хәрефкә үҙгәртеп алдым.

## Роман сюжетына һыймаған главалар

### РАЯНЫҢ УЛЫ ВАСИЛЬ ЧЕЧКОНЫҢ ХИКӘЙӘҺЕ

Ҡомсомол путевкаһы менән мин Ҡарағандыға эшкә киттем. Эшләйем дә, автомобиль-юл институтында ситтән тороп уҡыйым да.

Ҡөндәрҙең береһендә 1-се һанлы автобазаның директоры мине өйөнә ашҡа саҡырҙы. Билдәле, аш алдынан һәм ашағанда аҙыраҡ эстек. Теге ҡыҙып китте, теле асылды: «Вася, ти теге кеше, һинең фамилияң украинсаға оҡшаған. Хохолмы әллә?» — тип һорай. «Эйе, ысынлап та, мин — укра-

ни. Һеҙҙең фамилия ла украинса бит — Колбаса. «Эйе, — ти теге, — мин саф украин. Киевтан. Элек Ковбаса тип йөрөй инем».

Мин шатланып киттем.

— Ә Киевта ҡайҙа эшләнегеҙ?

— Әйҙә, йәнә берәй рюмка төшөрәбеҙ ҙә, унан һөйләрмен. Караптар төҙөү һәм ремонтлау заводында.

Мин тағы ла нығыраҡ шатландым.

— Улай булғас, һеҙ минең әсәйемде белергә тейешһегеҙ.

— Кем ул? Фамилияһы нисек?

— Раиса Васильевна Букина.

— Рая? Ул һинең әсәйеңме ни?

— Эйе, — тим, шаярта төшөп, — бер туған әсәйем.

Абайланым. Ҡапыл ул бер ағарҙы, бер күгәрҙе, маңлайына тир бәреп сыҡты, хатта ирендәре ҡалтырана башланы. Йөрәген тотоп торҙо. Ҡурҡа башланым: «Быға ни булды? Әллә врач саҡырырғамы?» Бер аҙҙан ул тынысланды, хәлләнде. Мин уға һорау бирҙем.

— Сергей Петрович, — тим, — әсәйем хаҡында һөйләгеҙ әле. Мин бит уны бөтөнләй хәтерләмәйем. Белеүселәр уны бик батыр подпольщик булған, тиҙәр. Гестапо үҙен ғазаплап үлтергән.

— Бар, Вася, ҡайт. Мине яңғыҙ ҡалдыр. Бер ике көндән килгәс, әсәйең хаҡында һәйбәтләп һөйләрмен.

Сыҡҡас уйланам. Ниңә, әсәйем хаҡында һүҙ сыҡҡас, ул шулай тетрәнде? Ике көндө көтөп ала алмай ялҡтым. Килдем. Колбаса мине дүрт ҡуллап ҡаршы алды.

— Ә... Вася... Уҙ, уҙ, туғанҡайым... Мин һине һағынып бөттөм инде. Юҡ, юҡ, унда түгел, унда ҡаты, бынауында, диванға ултыр. Эйе... Бына һиңә осрашыу тиһәң дә осрашыу! Донъя тар шул, тар... Тау менән тау осрашмаһа ла, кеше менән кеше осраша... — Ул тәмәке көйрәтте һәм Василь уның ҡулының ҡалтыраныуын күреп ҡалды. — Һин теге көндө әсәйең хаҡында һөйләмәгән өсөн ғәфү ит инде, Василь, күреп торҙоң бит, әсәйеңде иҫкә төшөрөү менән йөрәк әллә ни эшләп китте. Подполье эҙһеҙ үтмәне шул... Ә беҙ әсәйең менән дошманға аҙ зыян килтермәнек...

Шунан китә ул теҙеп... Һөйләүенә ҡарағанда, уға тот та указһыҙ-ниһеҙ түшенә Алтын Йондоҙ таҡ.

Василь уны тыңлай һәм уйлана. Ул бит Подол подпольеһы, әсәһе хаҡында Вера Макаровна ебәргән газеталар аша шаҡтай күп белә. Шуға күрә ул Колбасаның хикәйәһен шикләнеберәк тыңланы, ә аҙаҡҡа табан бөтөнләй ышанмай башланы, әммә: «Эйе, эйе», — тип, баш ҡағып, ни уйлағанын һиҙҙермәй ултырырға тырышты.

— Беҙ бөтәбеҙ ҙә группа менән пароходҡа ултырып, Днепр буйлап партизандар янына китергә пристангә барғанда, немецтар беҙҙе күреп, кемлегебеҙҙе беләләр. Тере көйө ҡаптырырға тырышып, ҡыҫрыҡлай башланылар. Беҙ ҡотороп ут астыҡ. Ә шулай ҙа немецтар беҙҙән күп тапҡыр шшлерәк ине. Тере көйгә бирелмәҫ өсөн гранаталар ташланыҡ. Немецтар ҙа беҙҙе тере көйгә ала алмаясаҡтарын аңлап, ут астылар. Әсәйеңде, Кушнировты һәм Жеребконы тәүге минутта уҡ бәрә йыҡтылар. Бөтә группанан мин генә иҫән ҡалдым, ҡасып ҡотолдом. Эйе... батыр кешеләр ине улар, — тине ул, — хикәйәһен ослағандан һуң көрһөнөп. — Ә һинең әсәйең просто экиәт геройы ине!

Бер аҙ һүҙһеҙ ултырғандан һуң үҙенән һораным.

— Ә ниңә һеҙ бында, Ҡарағандыла, Киевта түгел! Тыуған ер бит.

— Ә унда ни бар? Киев емерелгән, туғандарым һәләк булып бөткән. — Ул өҫтәлгә башланмаған шешә ултырта.— Әйҙә, бер үҙебеҙсә йырлап ултырайыҡ әле...

Минең бынан тиҙерәк сығып киткем, ҡайтып, өләсәй ебәргән газеталарҙы ҡабат уҡып сыҡҡым килде. Һәр деталгә, эпизодҡа туҡтала-туҡтала, газеталарҙы уҡып сыҡтым. Кем алдаша? Газеталар алдашырға тейеш түгел, тикшерелмәгән материалдарҙы баҫмаясаҡтар. Һөйләргә, шикләнеүҙәрем менән уртаҡлашырға теләмәнем. Әгәр Колбасаның һүҙҙәрендә лә хаҡлыҡ булһа? Ахмаҡ хәлдә ҡаласаҡмын. Ул, ни тимә, бында абруйлы кеше, ә мин ни бары бер йәш кеше... Ни эшләргә? Киевҡа ҡайтһаң, хәҡиҡәттең төбөнә төшөр инем, әммә Киев — Ҡарағанды яҡын ара түгел, отпуск график буйынса ике-өс айһыҙ теймәйәсәк, уға тиклем ни йәнең менән түҙеп торaһың... Үҙ иҫәбемә отпуск алып ҡайтып килгәндә инде?..

Һәм шулай эшләнем дә. Ҡайтыу менән ағайым Олегка һәм өләсәйгә Колбаса хаҡында һөйләп бирҙем. Өләсәй мине шул сәғәттә үк Жеребко янына ебәрҙе. Ҡыҙыу ҡанлы Жеребко саҡ шартламай тыңлап торҙо.

— Йылан! Ҡәбәхәт! Беҙҙе һатыуы ғына етмәгән, өҫтәүенә, үҙен герой-подпольщик итеп күрһәтә икән...

Шул көндө үк мин Ҡарағандыға шылтыраттым. Колбасаны күҙҙән ебәрмәүҙәрен үтендем. Кисен Жеребко менән икәүләп Колбасаның хыянаты хаҡында яҙып, икенсе көндө тейешле урынға барҙыҡ. Унда беҙҙең ҡағыҙ менән таныштылар: «Яҡшы, бөтәһен дә ентекләп тикшерербеҙ», — тинеләр. Мин эшләгән еремә китеп барҙым. Әммә һуң ине инде — Колбаса ҡапыл сирләп киткән дә йөрәк ауырыуынан үлгән. Шулай итеп, үлем хыянатсыны хөкөмдән ҡотҡарҙы...

## Ә кем булған һуң ул Колбаса?

Юк, Сергей Колбасаның күҙгә ташланып торған ҡара һыҙаттары булмаған. Ул 1910 йылда эшсе ғаиләһендә тыуып үҫкән. Ҡулына бик иртә сүкеш, слесарь асҡысы алған. Тора-бара шоферлыҡҡа уҡыған, унан механиклыҡҡа өйрәнеп, төрлө караптарҙа Днепрҙы гиҙеп йөрөгән. Ҡушҡан эштән баш тартмаған, хәмер һәм «харам эш» — бисә-сәсә менән мауыҡмаған. Заводта ла, ғаиләһендә лә профкомға ҡуйып тикшерерлек хилафлыҡ эшләмәгән. Һуғыш сығаһы йылда ул, Кушниров янына кереп, үҙенең хыялын әйтә — ҡалған ғүмеремде партия сафында үткәрергә теләйем. Партком секретары быны бик хуплай һәм, бер рекомендацияны үҙем бирермен, тип вәғәҙә итә. Һәм бирә лә. Әгәр һуғыш булмаһа, ихтимал, ул ҡалған ғүмерен дә шулай йәшәр ине.

Завод Волга буйына, Мари АССР-ына эвакуацияланып киткәс (завод менән бергә уның ҡатыны, ике ҡыҙы ла күсеп китә), уны Киевта ҡалдыралар. Ә инде дошман Киевты уң һәм һул флангыларҙан әйләнеп үткәс, заводта ҡалған инженер-техник персонал, квалификациялы эшселәр, кем нисек етте шулай ҡоралланып, сигенеүсе частарға эйәреп, көнсығышҡа йүнәләләр. Ә бына Колбаса ҡуҙғалырға уйламай. Сәбәп?

Ихтимал, барыбер фронт линияһын йырып сығып булмаҫ, тип уйлағандыр, ихтимал... күп тә үтмәҫ, немецты кире ҡыуа башларҙар, шулай булғас, ниңә ут аҫтына керергә, тип уй-иҫәп тотҡандыр...

Ҡыҫҡаһы, Колбаса китмәй, Киевта ҡала. Немец Киевҡа кергәндең икенсе көнөндә үк уларҙың төрлө бойороҡтары, күрһәтмәләре менән таныша. Бер күрһәтмәлә шундай юлдар бар ине: «Судоверфь, караптар төҙөү һәм ремонтлау заводы эшселәренә, бигерәк тә белгестәренә, һис кисекмәҫтән эшләгән урындарына кире ҡайтырға бойорола һәм махсус аҙыҡ карточкаһы вәғәҙә ителә».

Колбаса икеләнеп тормай, заводҡа китә. Берәй аҙна эшләгәндән һуң, цех начальнигы уны үҙенә саҡырта.

— Колбаса, һин бит коммунист икәнһең, — ти теге, мыҫҡыллы көлөп.

— Стахановсы инем. Көсләп тип әйтерлек индерҙеләр.

— Иртәгә партбилетыңды килтер.

— Ә мин уны утҡа яҡтым.

Цех начальнигы уға тишеп ҡарап тора. Әллә ышана, әллә юҡ.

— Утҡа яҡтың инде?

— Биллаһи! — Колбаса суҡынып ала.

Цех начальнигы ҡәнәғәт ҡала.

— Хәҙер ышандым. Форма өсөн түгел, ихлас суҡындың. Ҡара уны, беҙҙә лә «стахановсы» бул.

— Е! Так и буде!

Юҡ, был һөйләшеү уны сығырҙан сығарманы. Унын партияға кандидат икәнлеген барыбер иртәме-һуңмы беләсәктәрен аңлаһа ла, ҡурҡмай Киевта ҡалды, элекке эшенә ҡайтты. Ғаиләһе юҡлыҡтанмы, ул элеккегә ҡарағанда йышыраҡ эсте, начальство көн һайын ҡырынып килергә ҡушһа ла, икешәр-өсәр көн ҡырынмай, терпе һымаҡ йөрөнө. Әгәр уны йәнә цех начальнигы саҡырмаһа, тормошо нисек дауам итер ине — билдәһеҙ.

Был юлы цех начальнигы үҙе генә түгел, ҡара мундир кейгән гестапо офицеры ла бар ине. Ҡолбасаның йөрәге табанына төштө. Цех начальнигы унын сәләмен алып та тормай, ҡырҡа һораны.

— Һин Кушнировты яҡшы беләһеңме?

«Нисек әйтергә инде?.. Белмәйем, тиһәң, барыбер ышанмаясаҡтар, ихтимал, уларға Кушнировтың уға рекомендация биреүе лә билдәлелер...»

— Беләм инем, пан начальник.

— Ә уны бит, Киевта, тиҙәр...

— Ишеткәнем юҡ, пан начальник.

— Ә беҙҙең ишеткәнебеҙ бар. Ул ҡайҙалыр ҡасып ята, Подолдағы подполье менән етәкселек итә, тиҙәр.

— Әйтә алмайым, пан начальник...

— Ә бына гестапо әйтә ала! — тине офицер русса, өҫтәлгә һуғып. — Әгәр һеҙ беҙгә Кушнировтың эҙенә төшөргә ярҙам итһәгеҙ, беҙ һеҙҙең коммунист һәм «стахановсы» икәнлегегеҙҙе онотасаҡбыҙ, әгәр итмәһәгеҙ, башҡа урында башҡасараҡ һөйләшербеҙ. Бөттө!

Ул көндө Ҡолбаса ҡайныһы янына түгел, үҙенең квартираһына ҡайтты. Эсте. Өҙлөкһөҙ тартты! Быға саҡлы, башҡалар нисек йәшәһә, ул да шулай йәшәй бирҙе. Дөрөҫ, байыраҡ йәшәгәндә, эсте тишмәҫ ине... Әммә, ни эшләйһең бит, юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙырға тура килә. Замандында уҡырға иренде, ә хәҙер һуң инде... Һәм бына ҡапыл көтөлмәгәндә шундай тәҡдим... Ә ул, унын коммунислығын онотҡандарҙыр, тип уйлап йөрөй ине... Ҡыҙыл Армия оҙаҡламай юҡҡа сығасаҡ, тимәк, Совет власына ла капут... Тимәк, моментты дөрөҫ файҙаланып ҡалырға кәрәк... Ул һикереп торҙо, тәмәкеһен һүндермәй иҙәнгә атып бәрҙе лә, тараҡан иҙгән һымаҡ, оҙаҡ иҙеп һүндерҙе. Араҡы йотоп алды. Әгәр ул ошо минутта көҙгөгә баҡһа, күҙ ҡараларының бесәйҙеке һымаҡ ҙурайған, зәһәр ут менән янғанын күрер ине... Бына ошо йылы, йондоҙҙарға бай йәй-

ге көндө ул ҡот осҡос ҡарарға килде: үҙен маҡтап партияға алған кешене һатырға...

## ЖЕРЕБКО АУЫҘЫНАН

...Мин ул саҡта Саликовский шәкәр заводында таныштарымда йәшенеп ята инем. Хәҙер көнөн өҙөп кенә әйтә алмайым инде, сентябрь аҙаҡтары ине. Сталинградта ҡаты һуғыштар барыуы хаҡында беләбеҙ, шуға күрә немец радиоһы әҙәм ышанмаҫтай итеп алдашһа ла, һирәк-мирәк тыңларға тура килә. Репродукторҙы астым. Ниндәйҙер ирҙәр тауышы. Украин телендә һөйләй. Германияны үлтереп маҡтай, Совет власын һүгә, яманлай... Радионы япмаҡсы булғайным, тауыш таныш һымаҡ тойолдо. Сығыш ерәнгес булһа ла, түҙеп, аҙағына саҡлы тыңларға булдым. Ни генә тимә, мин музыкант кеше бит, ҡолаҡтарым алдамаған, әлеге беҙҙең илебеҙҙе, ҡоролошобоҙҙо бысраҡ менән бутап, «Бөйөк Германияны» һәм уның «бөйөк фюрерын» үлтереп маҡтаған кеше Сергей Ҡолбаса булып сыҡты. Мин ирендәремде ҡанатҡансы сәйнәнем, әйтерһең, ирендәремде түгел, Ҡолбасаны шулай сәйнәйем. Быға саҡлы беҙҙең группаның ҡыйратылыуының сәбәптәрен төрлөсә эҙләп ҡарағайным, әммә Ҡолбасаның был сығышынан һуң шигем бөттө — ул ғына беҙҙе һатҡан.

Киевты азат иткәс, мин ҡатыныма Звенигово поселогына оҙон итеп хат яҙҙым. Үҙебеҙҙең подполье группаһының эшен, уның нисек, кем арҡаһында һәләк булыуын һөйләп бирҙем. Тәүҙә Ольга күҙҙәренә ышанмай торған. — Мин бит ҡырҡ беренсе йылдың сентябрендә «хәбәрһеҙ юғалған» кеше, шунан хатты әхирәттәренә ҡысҡырып уҡыған. Шаушыу киткән. Ҡолбасаның ҡатыны тауыш күтәргән. «Ғәйбәт, яла», — тип завод дирекцияһына ялыу менән барған.

Минең хатым КГБ ҡолағынан ситтә ҡалмаған. Көндәрҙең береһендә немец ғәскәрҙәре менән бергә сигенеп тә союзниктар яғына сыға алмаған Ҡолбаса кире көнсығышҡа борола. Хәҙер ҡайҙа аяҡтарҙы йүнәлтергә? Киевҡа ҡайтырға ярамай... Әһә, уның ғаиләһе Мари республикаһында эвакуацияла бит. Унда уны белеүсе кеше юҡ... Шунда юл тоторға. Унан күҙ күрер. Күҙ күрмәй, уны ҡайтҡан көндә үк ҡулға алалар һәм этап менән Киевҡа оҙаталар.

Шуны ла әйтеп үтәйем. Ҡолбасаның эше менән шөғөлләнгәндә әле беҙҙең подполье группаһы рәсмиләштерелеп регистрацияланмағайны. Шуға күрә прокурор Ҡолбасаны тикшергәндә уның беҙҙе һатыуынан бигерәк, Германияны маҡтап, Совет власын яманлап сығыш яһауына баҫым яһай.

Ҡолбаса менән мине күҙгә-күҙ осраштырырға булалар. Прокурор мине киҫәтә: осрашҡанда үҙегеҙҙе ипле, әҙәпле тотоғоҙ. Тоторһоң! Бәлки, Ҡолбаса башын эйеп кенә прокурор янына керһә, үҙемде әҙәпле тотор инем, ә ул мине күреү менән: «Ваня! Туғанҡайым... Дуҫҡайым...» — тип мине ҡосаҡларға килә башланы. Мин: «Сволочь, һатлыҡ йән. Хыянатсы», — тип тегенең йөҙөнә төкөрҙөм.

Судта Ҡолбаса радионан сығыш яһауын танманы. Имеш, пистолет тоҫҡап, ҡурҡытып һөйләттеләр, ә беҙҙе һатыуын шыр танды. Үҙен статья менән хөкөм итһәләр ҙә, үлем язаһынан ҡотолоп ҡалды.

Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да сыға тигән шикелле, барыбер ул үҙ башына үҙе етте.

Хәйер, бөтә хыянатсыларҙың, енәйәтселәрҙең дә яҙмыштары йыш ҡына бер төрлө: хурлыҡлы һәм ғибрәтле булып тамамлана бит.

## АВТОРҘЫҢ ҺУҢҒЫ ҺҮҘЕ

Әгәр мин капитан Фәтхинуровтың ҡайҙа ерләнгәнен белһәм, Башҡортостандан Киевҡа барып, уның ҡәберенә тыуған тупрағын һалыр, ул яратҡан ағасты — шыршы ултыртыр инем. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул ҡәберҙе бер кем дә белмәй. Хәйер, эш унда түгел. Эш — капитан Фәтхинуровтың батырлығы ерҙә ятып ҡалмауҙа, яҡты образы халыҡ күңелендә һаҡланыуҙа.

Мишкә районының Өрьяҙы тигән ауылында Фәтхинуров исемендәге колхозда мөһабәт биш шыршы үҫеп ултыра. Оҙондар улар. Береһенән береһе зифалар, матурҙар. Улар өсөн ҡыш та юҡ, көҙ ҙә юҡ — мәңге йәшелдәр. Һәм йәштәр. Шыршыларҙың ғүмере бик оҙон бит...

Үҫегеҙ, шыршылар, күккә еткәнсе. Ҡош Юлдарына терәлгәнсе, капитан Фәтхинуровтың йондоҙға әйләнгән йөрәгенә еткәнсе...

Үҫегеҙ, үҫегеҙ, шыршылар...

Аяҙ көндәрҙә күккә ҡарағыҙ.

Аҡ томанды — даръяны хәтерләтеүсе Ҡош Юлына иғтибар итегеҙ. Ентекләберәк ҡараһаң, шунда аҡбуҙ атҡа атланып елдереүсе һыбайлыны күрерһегеҙ. Ул беҙҙең яҡташыбыҙ арыҫлан йөрәкле Фәтхинуров булыр.

Юҡ, ул яңғыҙы ғына елдермәй. Уның менән бергә генералдар Карбышев һәм Шайморатов, шағир Муса Йәлил һәм драматург Сәғит Мифтахов, рядовой Матросов һәм

лейтенант Ғөбәйҙуллин, летчиктар Талалихин, Гастелло һәм... тағы күптәр бар. Улар мендәр. Улар миллиондар. Уларҙың йөрәктәре, йондоҙға әүерелеп, башы-аҙағы булмаған Кош Юлына әйләнгән.

Улар мәңге янасаҡтар...

Улар мәңге яҡтыртып торасаҡтар...

Улар тыуған ерен, Тыуған илен һөйгән кешеләргә илһам һәм көс биреп торасаҡтар...

Мәңге. Мәңге...

*1970—1982 йылдар*

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ҮҘЕМ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘЕМ
5
ТОЛ ҠАТЫНДАР ИЛАМАЙ
17
ҠОШ ЮЛЫНАН БАРАМ
293

**Ибрагим Ахметович Абдуллин**

*Сочинения в двух томах*

*Том I*

**ВДОВЫ НЕ ПЛАЧУТ**
**ИДУ ПО МЛЕЧНОМУ ПУТИ**

**Романы**

*(на башкирском языке)*

Редакторы
*Х. Т. Бикҡолов*
Рәссамы
*Х. Ғ. Насиров*
Художество редакторы
*И. С. Файрушин*
Техник редакторы
*Г. Ә. Дауытова*
Ҡорректоры
*Н. Ғ. Әминев*

ИБ № 2980

Наборға бирелде 24. 09. 85. Баçырға ҡул ҡуйылды 03. 03. 86. П10162. Ҡағыҙ форматы 84×108¹/₃₂. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баçылды. Тип. ҡағыҙы № 1. Шартлы баçма таб. 34,02+0,10 йәбештермә. Шартлы буяу оттискыһы 34,54. Учет.-изд. таб. 37,96+0,04 йәбештермә. Тиражы 15 000 экз. Заказ № 480.
Хаҡы 2 һум 90 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18.
Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты.
Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.

**Абдуллин Ибраһим**

А 12 Әҫәрҙәр. Ике томда. 1-се том. «Тол ҡатындар иламай», «Ҡош Юлынан барам» — романдар. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте. 1986. — 648 бит.

БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре И. Абдуллиндың был томына әҙиптең «Тол ҡатындар иламай» һәм «Ҡош Юлынан барам» тигән романдары индерелде.

А $\frac{4702110000-267}{М 121 (03)-86}$ 57—86 84 Баш

**БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ**
**1986 ЙЫЛДА**
**БАҪТЫРЫП СЫҒАРА:**

Ибраһим Абдуллин. Әҫәрҙәр. Ике томда. 2-се том.

Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре И. Абдуллиндың был томына тамашасылар араһында киң популярлыҡ яулаған «Тәрән һулыш», «Бажалар», «Урман ҡыҙы», «Тиле йәшлек», «Их, Өфө ҡыҙҙары», «Яратам, яратам» кеүек драма әҫәрҙәре индерелде.

Был китапты Башкниготорг һәм потребсоюз магазиндарынан һатып алырға мөмкин. Урындағы магазиндарҙа булмаһа, түбәндәге адрес буйынса һоратып алдырырға мөмкин:

*450058 г. Уфа, ул. 50 лет СССР, 12*
*Магазин № 7, «Книга-почтой».*

